САБИР ШӘРИПОВ

# Зәңгәр катер





САБИР ШӘРИПОВ

# Зәңгәр кәтер



**Роман, хикәйәләр**
**һәм хикмәттәр**

Зәйнәб
Биишева
исемендәге
"КИТАП"
нәшриәте

ӨФӨ·2008

УДК 821.512.141-3
ББК 84-4 (2 Рос=Баш)
Ш 94

**Шәрипов Сабир**

Ш 94 Зәңгәр катер: роман, хикәйәләр һәм хикмәттәр. – Өфө: Китап, 2008. – 544 бит.

ISBN 978-5-295-04572-1

Күп планлы «Зәңгәр катер» романынан заман һулышы бөркөлөп тора: укыусы социаль мәсьәләләрҙең уртаһында кайнаяҫак, кемдәрҙер өсөн шатланыр, кемдәр өсөндөр уфтаныр, һөҙөмтәлә йәшәү айышы хакында төптәнерәк уйланыр. Китапта шулай ук әҙиптең һуңғы йылдарҙа яҙған иң укымлы хикәйәләре, юл хикмәттәре урын алды. Уларға юморлы һәм хисле тел-стиль сараларын хас.

Китап авторға алтмыш йәш тулыу уңайы менән нәшер ителде.

УДК 821.512.141-3
ТП — 128/08 ББК 84-4 (2 Рос=Баш)
ISBN 978-5-295-04572-1
© Шәрипов С. Н., 2008

## Тауҙарҙағы шаңдау

*(баш һүҙ урынына)*

Замандашым, ҡорҙашым Сабир Нәғим улы Шәрипов 1948 йылдың сыуаҡ март айында Белорет районының иң төпкөл төбәктәренең береһе – тирә-яғы тау-ҡаялар, ҡалын урмандар менән уратып алынған Баҡый ауылында тыуа. Кирәй-ҡыпсаҡ ырыуына ҡараған Шәриповтар нәҫеле бында борон-борондан урман-һунар кәсебе менән көн иткән. Сабирға ла бәләкәйҙән ҡағыла урман ене һәм тыуған тәбиғәткә булған һөйөү хисе уны ғүмер буйы айырылғыһыҙ оҙатып килә. Ижадында ла был хис ҙур сағылыш таба.

1963 йылда ауылда һигеҙ йыллыҡ мәктәпте, аҙаҡ Белоретта педучилище тамамлағас, һәүәҫкәр спортсы һәм баянсы булараҡ, ул ике йыл кескәй яҡташтарына физик культуранан һәм йыр-музыканан һабаҡ бирә, йәмәғәт эштәрендә әүҙем ҡатнаша.

Башҡорт дәүләт университетында уҡыған осорҙа С. Шәрипов тәүге хикәйәләрен, очерктарын яҙа, төрлө редакцияларҙа журналистика буйынса практика үтә, ҡәләмен «Шоңҡар» берекмәһендә шымарта. Университетты тамамлағас, «Совет Башҡортостаны» редакцияһында эш башлай. БАМ-да хәрби хеҙмәтен үтәй, йәнә «Башҡортостан» гәзитенә эшкә саҡырыла. Тәүҙә хәбәрсе була, һуңыраҡ әҙәбиәт һәм сәнғәт бүлеге мөдире итеп үрләтелә.

Күпмелер ваҡыт журналистика йөгөн тартҡандан һуң Мәскәүҙәге юғары әҙәби курстарҙа уҡый. Танылған әҙәбиәтселәрҙән белем алыу, төрлө милләттең һәләтле әҙиптәре менән аралашыу С. Шәриповтың ғилемен үҫтереп кенә ҡалмай, ә әҙәби ижадҡа талапсанлығын да күтәрә.

Сабир Шәрипов тиҫтә йылдан ашыу Башҡортостан «Китап» нәшриәтендә нәфис һәм балалар әҙәбиәте бүлегенең етәк-

ләне. Ошо осорҙа ул «Әҙәби мирастан», «Кәрҙәшлек кәштәһе», «Танышайыҡ – тәүге китабым», «Арҙаҡлы шәхестәр тормошонан» һ.б. күркәм сериялар булдырыуҙа, «Башҡорт халыҡ ижады» күп томлығын (башҡортса һәм русса), «Роман-гәзит», «Бельские просторы» тигән баҫмалар сығарыуҙа, изге «Ҡөрьән»дең башҡортсаһын әҙерләүҙә әүҙем ҡатнашты, шулай уҡ йөҙҙәрсә китаптарҙы төҙөнө һәм редакторланы. Проза яҙыуҙан тыш, тарихсы Виктор Сидоровтың Салауат Юлаев тураһындағы бер нисә китабын башҡортсаға ауҙарҙы. Хәҙер иһә әҙип – башҡорт прозаһының төп йөгөн тартып килеүселәрҙең береһе. Ул «Тауҙарҙағы эҙ» (1982), «Ҡайынлы артылыш» (1985), «Хушлашмайым...» (1992), руссаға тәржемәлә «Старозимовье» (1996), «Аҡ ҡулсатыр» (1998), сыуаш телендә «Костер на снегу» (Чебоксар, 2002), татарса «Хушлашмыйм» (Казань, 2003) тигән китаптар авторы. Айырым очерктары, хикәйәләре, хикмәттәре тиҫтәләгән йыйынтыҡтарҙа, альманахтарҙа һәм шулай уҡ үҙәк журналдарҙа баҫылды.

* * *

Әҙип булараҡ С. Шәрипов стиленә ниндәй һыҙаттар, сифаттар хас? Уның ижадының үҙенсәлектәре нимәлә? Ошо һорауҙарға ҡыҫҡаса яуап эҙләп ҡарайыҡ.

Яҙыусы әҫәрҙәрендәге иң төп һыҙаттар, минеңсә, тормошсанлыҡ һәм халыҡсанлыҡ. Әҙип башлыса үҙе күргән, үҙе яҡшы белгән хәл-ваҡиғалар, үҙенең йөрәге аша хис-тойғолар хаҡында яҙа. Шуға ла уның әҫәрҙәрендә һис тә яһалмалыҡ, ысынбарлыҡ менән булмаҫтайҙың диссонансы юҡ. Уның ижады үҙе һымаҡ ябай ҙа, уйсан да, холҡо һымаҡ баҫалҡы ла, ирәүән дә. Күпселек образдары ла уйлап табылған түгел, ә тормоштан алынған. Шуға ла улар бар ҡатмарлылығында, бар нескәлектәрендә тере һымаҡ ҡылыҡһырлана. Геройҙарҙың ҡылған эш-хәрәкәттәре лә, холоҡ-фиғелдәре лә – барыһы ла ҡәҙимгесә, кешеләрсә. Был иһә яҙыусының тормошто ғына түгел, ә кеше психологияһын, рухиәтен яҡшы белеүе тураһында һөйләй. Йәнә лә Сабир Шәриповтың картиналар тыуҙыра белеүенә һоҡланмау мөмкин түгел. Әйткәнебеҙсә, ул – тәбиғәт балаһы. Тәбиғәт күренештәрен һәм шуға бәйле хәл-ваҡиғаларҙы – һунар булһынмы ул, бесән әҙерләү, һал ағыҙыу, балыҡ тотоу булһынмы – шундай оҫталыҡ менән еткерә ки, уларҙы кинокадрҙан ҡараған ише, бар теүәллегендә күҙ алдына баҫтыраһың. Шулай ҙа автор өсөн тәбиғәт – һоҡландырғыс, күҙ ҡамаштырыр ябай картина ғына түгел, ә геройҙарҙың характерын асыуға булышлыҡ итеүсе мөһим художестволы деталь дә.

Образдарҙы асыуға персонаждарҙың һөйләш теле лә ҙур әһәмиәткә эйә. Яҙыусы иһә телде төптән өйрәнгән, яҡшы белә һәм әҫәрҙәрендә диалектизмдар ҙа, архаизмдар ҙа, профессионализмдар ҙа бик урынлы ҡулланыла. Хатта ҡайһы берҙәрен тәү ҡарашта аңлап та булмағандай, әммә контекста улар барыбер асыҡлана.

Кемдәр һәм ниҙәр тураһында күберәк яҙа?

Башта уҡ шуны билдәләп үтергә кәрәк: яҙыусы еңел-елпе мауыҡтырғыс сюжеттар артынан ҡыумай, ә ябай ғына хәлвәҡиғаны мауыҡтырғыс итеп һүрәтләй белә. Бына, әйтәйек, «Имән бағана» повесы ябай ғына картинанан — ағалы-ҡустылы Хәким менән Сәлимдең күрекле санала станциянан ҡайтышлай һөйләшеүҙәренән башланып китә... Имән бағана янында туҡтап һөйләшкәндә ағаһы был урындың Пугачев яуына бәйле булыуын, хәҙер утар ғына булып ҡалған элекке ауылдың тарихын ҡыҫҡаса бәйән итә, үҙенең һағышлы тойғоларын аса. «Имән бағана... Етем бағана... Дыуамалдар, ана, күмер менән дүңгәләктәр һыҙып, сәпкә атҡандар, дороп, картеч, хатта пуля менән», — тип әсенә ул. Был һүҙҙәргә авторҙың лирик сигенеше лә ҡушыла: «Имән бағана... Артта имән бағана... Мәңгелек кире ҡайтмаҫ бала саҡ билгеһе. Бәхетле бала саҡ билгеһе. Әсә мөхәббәтен, ата мөхәббәтен татыҡҡан, йөрәккә һағышлы моң булып һеңгән тыуған тупраҡ, изге төйәк билгеһе».

Әҙиптең «Айыу ҡоҙа» повесы ла фани донъяларҙа йәшәү мәғәнәһе, кешелеклелек, тоғролоҡ тураһындағы тәрән уйланыуҙарға, фәлсәфәүи дөйөмләштереүҙәргә ҡоролған. Әҫәрҙә урмансылар һәм һунарсылар донъяһы, уларҙың хәтәр кәсебе тағы ла яңы, уҡыусыға әле таныш булмаған яҡтары менән асыла. Бында ла геройҙарҙың ҡылыҡтары, рухиәте. Урал тәбиғәте менән айырылғыһыҙ берлектә һүрәтләнә.

Ә «Осрашыйыҡ кисә, айлы кистә...» повесы, исеменән үк аңлашылыуынса, тәү ҡарашҡа мөхәббәт темаһына арналған, йәштәрҙең үҙ-ара мөнәсәбәттәрен, хис-тойғоларын ғына сағылдырған һымаҡ... Яҙыусы, башҡа әҫәрҙәрендәге һымаҡ, был повесында ла әйтер һүҙен тура бәреп әйтмәй, тортоп күрһәтмәй, уй йомоу һәм кинәйә аша үҙ фекерен белдереп тә ҡуя. Һиҙгер уҡыусыға кинәйәне тотоп алырға, уйланырға, тейешле һығымталарға килергә ҙур мөмкинлектәр ҡалдыра.

Ҡәләмдәшемдең «Хушлашмайым...» тигән романы (БАМ төҙөүсе хәрбиҙәр тураһында) һәм үрҙә һаналған повестарынан тыш, ҡырҡтан ашыу хикәйәләре, новеллалары, хикмәттәре бар. Был кесе жанрҙарға айырым туҡталмай, шуны ғына әйтеп китергә кәрәк: уларҙа ла әҙип үҙе булып ҡала. Һәммә геройҙары — ерем, илем тип йәшәгән, тыуған төйәктәренә мөкиббән ғашиҡ булған, саф йөрәкле, сабыр холоҡло һоҡланғыс кешеләр. Улар-

зың эш-хәрәкәттәре, уй-ниәттәре, хис-тойғолары аша яҙыусы оло әхлаҡи-этик проблемаларҙы күтәреп сыға, ата-бабаларҙан ҡалған күркәм традицияларҙы һаҡларға саҡыра. Халҡының көнкүрешен, милли һыҙаттарын, ғөрөф-ғәҙәттәрен, тел-лөғәтен, рухиәтен яҡшы белеү һәм уларҙы оҫта файҙаланыу Сабир Шәрипов әҫәрҙәрен халыҡсан һәм тормошсан итә лә инде.

Эйе, күренекле прозаик, Башҡортостандың атҡаҙанған мәҙәниәт хеҙмәткәре Сабир Шәрипов тыумышы һәм бар булмышы менән тәбиғәт балаһы, урман-тау кешеһе. Күңеле лә, тау кешеләренә хас булғанса, иркен, ҡараштары киң, холҡонда ла ғорурлыҡ, ныҡышмалылыҡ сифаттары ярылып ята. Ижадына килгәндә иһә, уның тауҙарҙағы шаңдау кеүек алыҫ араларға яңғырар, күңелдәрҙе арбар үҙ тауышы, үҙ моңо бар.

*Берйән* БАЙЫМОВ,
филология фәндәре кандидаты

**Редакциянан:** Баш һүҙ өсөн Берйән Байымовтың (1946–2005) «Сабир Шәрипов ижадына бер ҡараш» тигән мәҡәләһенән өҙөктәр файҙаланылды.



# ЗӘҢГӘР КАТЕР

РОМАН

## *Беренсе киҫәк*

*Һаулыҡ — кешенең иң ҙур бәхете.*
*Һатылмай торған байлыҡ ул.*
*Алыр ҙа инең — һатыусыһы ғына юҡ.*

**Замана афоризмы**

### 1

Йылға арьяғында ят машина өҙөп-өҙөп бипелдәне. Кабинаһы өҫтөнә фара беркетелгән ҡарағусҡыл йәшел оҙонса «буханка»нан төшкән яланбаш шофер ҙа, күк халаты өҫтөнә тағы шәлдәр ҡатлап кейеп алған ҡатынҡай ҙа ҡул болғай, һөрәнләй — күрәһең, уларға йылға аша сығырға кәрәктер. Телефондың өҙөк сағы.

Көн эҫе булғанғамы, яр буйында ял итеүселәр ҙә, балыҡсылар ҙа күҙгә салынмай, хәйер, улары төштән һуң килеп тула торған йәйенке ятыуға.

Мунсаға утын ташып йөрөгән Тимур һыу яғынан ҡарашын алды ла өй солаһын йыуып бөтөп кенә барған еткән ҡыҙға өндәште:

— Лира апай, «санитарка» килгән, берәйһе ауырый микән?

— Булыр, әбей-һәбей байтаҡ ауылда. Бөгөн дә кәмәне Фазыл ағай сығарамы?

— Юҡ, Фасилы... Лосман*, тибеҙ уны! Фазыл бабай нимәлер ремонтлай.

---

**Лосман (лоцман). Артабан ҡайһы бер һүҙҙәрҙең дөрөҫ яҙылышы, диалектизмдарҙың варианты йәйә эсендә биреләсәк.*

Лира ғәмһеҙ генә уйлап ҡуйҙы: «Фасилы... Фасил... һаман кәләш алмай. Армиянан ҡайтыуына ике-өс йыл барҙыр. Миңә ымһынып маташҡан һымаҡ ине былтырҙары...»

Мунсаға утын әҙер, ихата уртаһындағы колонканан һыу ташылды, өйҙөң дә, соландың да иҙәндәре ялтлап тора. Хәҙер сәй эсеп алғас, ыҡсым ғына баҡсаның сүп-сарын утарҙар, шунан – ял... Һыу буйында йөрөштөрөргә, «Фазыл лавкаһы»н ҡарап килергә мөмкин... Өфөлә бергә уҡыған һабаҡташы, дөрөҫөрәге, аспирант – исеме Данир – «тачка»лы дуҫым менән ошо тирәгә балыҡҡа килермен, һине күреп китермен, тигәйне, кем белә, килде-төштө өйҙәренә.

Бәй, Фасил тигәне бетон күперҙән сығып, үҙе яҡынлап килә ләһә. Әҙәпле, ҡыйыуһыҙыраҡ егет олораҡ йәштәге шәфҡәт туташына Лираларҙың йортон эйәге менән генә ымлап күрһәтте лә үҙе типһәндән кире түбәнләскә айыуҙан ҡасҡандай ашыҡты.

– «2006 год, апрель. Каримова Лира Бареевна, 20 лет, студентка...» – уҡыу йортон күҙлекһеҙ йүнләп уҡый алмағас, усындағы ҡағыҙҙы кире папкаһына тыҡты, шунан ғына һаулыҡ һорашҡандай башын ҡаға-ҡаға, башҡортсаға күсеп, типһәндән ауыл, йылға яғына бағып һөйләнеп ҡуйҙы. – Бураштa өйҙәр кәмей, тиҙәр ине, дөрөҫ икән. Онотоп та бөтөлгән... Кәримов абыйҙың внучкаһылыр әле һин, эйеме? Элгәре йыл донъя ҡуйҙымы әле дәү атаң?

– Әйе, – үҙҙәренең һөйләшенсә «әйе» тине лә Лира, олатайымды ла белгәсһең, әйҙүк, тигән һымаҡ, буяуы уңған ауыр таҡталарҙан ҡағылған, шар асыуғамы тутыҡҡан күгәндәре бала илаған кеүек сыйылдаған бәләкәй ҡапҡаны – атайы электрогазосварщик сағында йыуан торба бағанаға турғай үтмәле генә йым ҡалдырып, дүрт күгәнгә бармаҡ йыуанлығы тимер сымдан селтәр иретеп йәбештергәйне – киңерәк ҡайырҙы. Бәләкәй сағында – Лира, аҙағыраҡ Тимур ошо ҡапҡаға үрмәләп, цирк уйнап үҫтеләр ҙәһә. Оолар орошмағанда.

– Ә мин – райбольницанан... Клара Булатовна тутәйең булам, фтизиатр ярҙамсыһы, – тине вазифаһын бер аҙ күтәреберәк шәфҡәт туташы, яҡын килергә ҡурҡҡандай, ҡырҙараҡ тапанып. – Ниндәй матур ауыл бөтөп барһынсы!

Һо-о-п... Ҡапҡаға маймылдай нисек етте тотоноп атынаһың – ул әйләнеп барып ҡоймаға бәрелә, шунан кире этенеп ҡайтаһың – ә шул ярым әйләнештә ярты донъяны өҫтәнерәк күргәндәй булаһың: ауыл ҙур ғына, төп урамда ғына ҡырҡлап өй; мәктәп, фельдшер пункты, түбән остан йылға ярындағы иң ситтәге иҫкерәк өй – олатайҙыҡы, сулаҡ булһа ла, ғәжәп оҫта балыҡсы, ана, кәмәһенән бейек тирәктәр ҡулағаһендәге зәңгәр сөмәкәйҙә ҡармаҡсылай, буғай. Ә хәҙер... өйҙәр һирәкләнеп ҡалған, тирәк ауған. Мәктәп тә, идара йорто ла юҡ, нимәгәлер

һүтеп алып киткәндәр. Дәү атай (олатай) ҙа юҡ, өйө буш, кеше йәшәмәй. «Йәштәр тыҡрығы» тип аталған Лираларҙың урамында унлап өйҙән дүртәү генә ҡалған. Ҡалғандары йә буш тора, йә яҡын-тирә заводтыҡылар, өфөнөкөләр — ошо төбәктән сыҡҡандар, сыҡмағандары ла бар — дача итеп тота. Шуларҙан берәүҙең «Жигули»йына ултырып ҡайтты ла инде Лира кисә Черниковканан.

— Әйҙәгеҙ, түтәй, сәй ҙә ҡайнаған... — Быны яғымлы әйтте Лира.

— Тәк, тәк, Лирочка, ҡасан ҡайттың? — Абау, «түтәйкә» әллә ялан аяҡлы Лираның уйҙарын үтә күрә. — Кисәме?

— Эйе... Бөгөн бына энекәш менән донъя таҙартабыҙ.

— Яҡшы, таҙалыҡ бик кәрәк. Ялан аяҡ йөрөү ҙә файҙалы. — Ханым күҙлеген кейеп алды, баҡсаға, тирә-яғына ҡаранды. — Ҡалай матур булып алмалар, сейәләр төйөрләнә. Иҙел ята күгәреп... Ихатала — йәшел сирәм. Ә һин, Лирочка, нисек йоҡланың тәүге кистә... үҙ өйөңдә?

Быңдай ҙа һорау булыр икән?!

— Һәйбәт йоҡланым!

Ю-у-ҡ, быны менән генә бөтмәне, имеш, әле. Ҡатынҡай ихата уртаһына, колонка эргәһенәрәк, ирәйеберәк баҫып алды ла һорау артынан һорау яуҙырҙы:

— Нисек йоҡланың, тием? — Әллә ишетмәгән яуапты.

— Туйғансы йоҡланым.

— Төндә температураң тойолманымы?

— Юҡсы...

— Тирләмәнең дәме?

— Ы-ы! — Ҡыҙ башын сайҡаны.

— Ә-ә, йүткермәйһең дә шикелле.

Лира ирендәрен ҡымтып, ҡулдарын йәйҙе: бына бит, һин дә мин хәлкәйҙәрем.

— Аппетитың нисегерәк һуң?

— Во-о! — тине Лира, инде асыуланғандай итеп. Нәк шул саҡ эргәләренән ҡапҡа яғына Тимур үҙҙы. — Бына хәҙер ҡустым менән бер көрпәк бәрәңгене, бер таба майлы ҡоймаҡты төйәбеҙ ҙә шылабыҙ һыу инмәгә!

— Яҡшы, бик яҡшы. Тик мин һеҙҙең менән сәй эсеп тормайым, ветерандарға дарыу ҡалдырырға тейешмен. Тә-әк, аҫҡы урамдамы әле ҡарт... Кавалерист? Ә Сания әбекәй зыярат яғында, эйе бит?

— Лосман... әй, Фасил ағай өйрәтмәнеме ни? Ҡарт — Хатип быуай яҡында, шәт, — Лира баҡса аша үрелеп, ҡуйы япраҡтар сатыры аша шәйләнгән ҡалай башлы алты мөйөшлө өйҙө бармағы менән «төрткөләне». — Энем Тимурҙы саҡырайыммы?

– Кәрәкмәй, Лирочка, үҙем дә табырмын. Тик һиңә серьезный йомошом бар. Йомош та түгел: профилактик процедура: һине Өфөгә оҙатырға тейешбеҙ. Машина менән. Күрәһеңме? – Ҡатын йылға аръяғына эйәк ҡаҡты, унда шофер егет, аулаҡ типтерме, балаҡтарын төрөп, УАЗ-икты йыуа-сая ине.

– Күрҙек тә, ҡысҡырғанды ла ишеттек. – Лираның төҫө боҙолдо, күңелен еңелсә һиҫкәнеү биләне. – Ә ниңә?

– Ә һин борсолма, бәлки, бер ни ҙә юҡтыр... – Клара Булатовна ебәк ҡулъяулығына күҙлеген һөрткөләп яңынан кейҙе лә, утын түбәлеге куләгәһенәрәк атлай-атлай, сетерекле әңгәмәһен өҙмәне. – Минең аңлауымса, һин ике ай элекме хирургияла ятып сыҡҡанһың, һуҡыр эсәгеңде ҡырҡтырып, эйеме?

– Әйе... бер аҙнала шәбәйттеләр. Хатта сессияға зыяны теймәне.

– Яҡшы, яҡшы, ҡотлайым. Тик бер пациентканың аҙаҡ икенсе диагнозы асыҡлана. Шуға күрә кемдәр уның менән бер палатала дауаланған, шулар тикшереү үтергә тейеш. Шундай тәртип: юғиһә, уның бер йыл эсендә йөҙләгән, ҡабатлайым – йөҙләгән кешегә ҡурҡыныс сир йоҡтороуы ихтимал. – Шәфҡәт туташы Лираның: «Ниндәй сир ти ул?» – тиеүен ишетмәгәндәй, ниңәлер бер-ике һүҙҙе бүлгеләп, баҫым яһап әйтте. – Бына ниндәй мәшәҡәт менән мәшғүл тутәйең. Һиңә, Лирочка, ҡыйын булһа ла, Өфөгә барып ҡайтырға тура килер. Анализдарға бер нисә көн үтә торған. Их, Мәскәүҙә уның һөҙөмтәһен хәҙер бер тәүлектә асыҡлайҙар, ти, тик юл хаҡы – проблема. Значит, Лирочка, һиңә йыйыныуға – буквально бер сәғәт: ашап ал, йыуын, өҫтөңдө алмаштыр, бөтә ошоғаса үҙең ҡағылған өйҙәге кейем-һалымды ҡояшта елләтергә һалып кит. Ярай, уныһын әнкәйеңә ҡушырбыҙ. Ҡайҙа һуң әле Фәнидә?

– Эштә... – Лира быны ярайһы бойоҡ, ләкин күндәм ҡиәфәттә әйтте. Ә ҡатынҡай йоҡа плащын сисеп, күк халатында ҡалғас, үҙенән-үҙе рәсми төҫ алғандай булды, тел сартлатып, ҡарағайлы таш морон яғына төбәлеп борсоулы әйтте: – Бында телефон өҙөлгән, даже «Билайн» да йүнләп тоташмай. Нәк мин тыуып үҫкән таулы Белорет яғындағы һымаҡ. Һеҙгә килгәс, телем дә боҙолоп бөттө ана. Бураштар һымаҡ «әнкәй» тип еппәрәм.

– Әйҙә, энем елдерһен Сасынға велосипедта?

Сасынға – тимәк, яҡындағы ауылға. Унда – кооператив; мәктәп тә, мәҙәниәт йорто ла, фельдшер пункты ла бар; башҡорт, урыҫ, татар, мариҙар татыу ғына йәшәп ята. Һуңғылары күберәк тә. Исеме лә ҡыҙыҡ ҡына ауылдың. Ололар әйтмешләй, борон шундағы башҡорт утарынан сирмештәр «сосун», йәғни оҙаҡ имсәк ташламай йөрөгән ҡолон алып, ике-өс өй һалып инәләр...

– Ней, машина һаҙлыҡтан Сасынға уҙа алмай, эйеме?

– Әйе, был арала барыуы ауыр. Түтәй, әнкәм бөгөн оҙаҡлар, ахырыһы, ҡустымды ебәрәйек.

– Тимурҙымы? – Шатланғандай итте Клара Булатовна. – Һирәк исем, матур исем!

– Һеҙ ҡоймаҡтан ауыҙ итмәҫһегеҙме? – Ҡыҙҙың һынамсыл яңғыраған һорауына иҫкәртеүле һәм ҡәтғиерәк яуап бирелде.

– Һаҡланғанды Хоҙай һаҡлармын тигән. Ишеткәнең бармы?

– Бар, дәү атайым гелән әйтә ине...

Еңелсә ағарһа ла, сәстәрен буямаған шәфҡәт туташы һағышланған ҡараштарын оло һыу буйҙарына йүгертте, гүйә, уйы менән өҫтән аҫҡа һә тигәнсе елдереп уҙҙы. Нәҡ шул саҡ Лира уны сырамытырға маташты.

...Лираға күп тигәндә биш йәш булғандыр. Йылы яҙ аҙағы инеме, йылға йәшелләнеп-күкһелләнеп ятҡан саҡ. Ярҙағы ағастар һыу өҫтөнә лә йәшеллек өҫтәгәндәй... Күмәк ҡыҙыҡайҙар уба һыртында уйнап йөрөй. Бер мәл гөрләп өҫтән аҫҡа зәңгәр кәмә уҙып китте: «Туй, туй!»

Тулҡын ярып, моторлы кәмә гөрөлдәне ағым уртаһынан. Кемдәрҙер яулыҡ болғаны, бар бала-саға ҡулдарын болғай-болғай аҫҡа йүгерешә. Тик зәңгәр кәмә, зәңгәр хыял һымаҡ, туҡтамайса уҙҙы ла китте күҙ алдарынан. Ҡыҙыҡайҙың бәләкәс йөрәгенән, һынамсыл хәтеренән генә китмәне ана шул зәңгәр кәмә, унда баҫып барған бәхетле йәш пар. Бер егет гармун тарта, икенсеһе кәмә ҡойроғон тотҡайны, буғай. Юҡ, улары артыҡ иҫкә һеңмәгән. Ә бына аҡ күлдәк... ҡара костюм онотолмаған. Күкһел аҡ халаты өҫтөнә, бысранмаһын өсөнмө, йоҡа плащ кейеп алған шәфҡәт туташы, дөрөҫөрәге, шәфҡәт «түтәйе», бәй – бураштар әйтмешләй, бәрәмәс! – бала саҡ зиһененән елеп үткән зәңгәр кәмәләге кәләшкә оҡшаған һымаҡсы. Булмаҫ! Төпсөнөүе – йәнһеҙ, кәрәге лә юк...

* * *

Юл сумкаһын яурынына аҫып, ышаныслы, ипле генә баҫып кәмә яғына ыңғайланы Лира. Түтәйе, йыуатыр өсөнмө, бер аҙға эсәһе эргәһендә ҡалды. Әйберҙәрен ҡулына тотҡан килеш, аяҡ аҫтына ҡарап, кәңәштәрен бирҙе, һүҙ ыңғайында һаман уныбыны төпсөндө.

– Минең уйымса, хафаланырлыҡ ҙур сәбәп юҡ кеүек. Борсолмағыҙ, мин Лираны үҙем илтеп ҡайтам. Тағы йәш больнойҙы оҙатабыҙ әле Өфөгә. Бер үҫмер бара, ауырыуы бүтән!..

– Уф, Алла, сәбәп юҡ, тиһең дә, Клараҡайым, ҡолай ғына яҙҙым да бая. – Фәнидә өҙгөләнеп, һыҙланып әйтте быны. –

Тимурым әйткәс, бальнистан килделәр, тип... Мин һеҙгә иртәгә Сасындан шылтыратырмын, яраймы?

— Яҡшы, Фәнидә... Фәнидә матурым, мә... — Шәфҡәт туташы нисек, ҡайҙа шылтыратырға яҙыу бирҙе. — Төштән һуң барырмын эшкә. Төндә ҡайтырмын, моғайын... Ҡыйын булһа ла, тағы һорау: Лираның егете юҡмы ауылда? Йәғни, үбешеп-фәлән йөрөмәнеме, тимәксемен, кистәрен?

— Юҡ та! — Яуап ҡаты ғына тойолдо. — Уның тиҫтерҙәре бик аҙ бит.

— Шулайҙыр. — Күкшел халаты өҫтөнә йоҡараҡ көрән плащын кейеп алды шәфҡәт туташы. — Ярай, беҙгә ваҡыт, кәмә лә көтә. Хуш-һау...

Ысынлап та, кәмәсе ишкәктәрен яурынына һалып, яр аҫтына төшөп бара, ә Лира ҡырсын тапай ине был мәлдә. Үрҙәге күбектәр өйрөлгән тобала Тимур бер көтөү малай-шалай менән һыу инергә тыпырсына.

— Хуш-һау ҙа ул, тик... ямаҡай хәбәр таралмаҫмы? Ауыл ере... — Әсәнең сырайына әрнеү, борсолоу һибелде. Аңланы уның хәлкәйен туташ, уйсанланды:

— Һуҡыр эсәген ҡабат тикшертә, тиегеҙ ҙә ҡуйығыҙ. Уф, томра, ямғыр яуыр микән? Улай тиһәң, болот һирәк...

Кәмә эргәһенә өҫтән Тимур йүгереп килде, Лосманға ниҙер әйтте. Теге бер ишкәген уға һондо. Тимәк, юлаусыларҙы аръяҡҡа ул да сығарышасаҡ. Эшкингән улы, буйтым эшкингән. Олатаһы ла, иҫән саҡта, һорағандарҙы өс-дүрт кеше күтәрмәле, яҫы төплө кәмәһендә бер тегеләй, бер былай ташыштыра торғайны. Яҙғы ташҡындарҙа ла, ҡыраяҡта сыйҙым аҡҡанда ла. Йәйҙәрен Тимур ейәнен дә ултыртып алғылар ине ҡаршыһына.

Фәнидә өйөнә ашыҡты. Йылға яғына ҡарап торҙо ла, йырағайған кәмә нык бәләкәсәйгәс, ҡырт боролоп, ҡапҡаны эстән шарт япты. Бер аҙҙан уның тәҙрәнән ҡарап торғанын һиҙенде Лира, тик әсәһенең субырлап аҡҡан күҙ йәштәре генә күренмәй ине.

Тимур, нимәнелер өндәшмәҫкә кәрәклеген һиҙгән кеүек, Лираны юҡ-бар һорауҙар биреп ҡаңғыртманы. Апайҙары машинаға ултырғансы, Фасилды кәмә башында көтәүләне.

...Өфөгә етешләй ямғыр яуып ебәрҙе. Тиҙ үтте уныһы былай, урамдар ғына шәмәреп ҡалды. Тәүҙә үҫмерҙе ниндәйҙер стационарға илттеләр, эңер яҡынлашыуға уралып-суралып, Өфөнөң ҡапыл-ҡара күҙгә эләгеп бармаған хикмәтле дауаханаһына еттеләр. Шәфҡәт туташы, Лираны артынан өс-дүрт аҙымда эйәртеп, ҡабул итеү бүлегенә инде. «Иртәрәк йөрөһәгеҙ булмаймы», — тип һукранды йыйыштырыусы ҡатынҡай. «Юл эше бит...» — тип кенә ҡуйҙы уға ҡаршы Лираның «түтәйе»...

– Лира, һин ошонда ултырып тор, мин хәҙер, – «Лирочка»нан «Лира»ға күсеп, Клара Булатовна йоҡа ғына папкаһын түшенә терәгән килеш звонокка баҫып, бикле тимер ишекте астырҙы ла, кемгәлер ниҙер әйтеп, дежур табипка йүнәлде. Кирегә ярайһы тиҙ әйләнде.

– Борсолма, Лира, иртәгә анализдар бирерһең, башҡаларын үтерһең. Бер үк тыңлап ҡына йөрө, режимдарын боҙма. Дарыуҙарын эс, тәмһеҙ булһа ла.

Бала түгел дә инде Лира-Лирочка, дауахананың да нимә икәнен белә. Ҡыш, ана, бер аҙна ятып сыҡты. Һәйбәт ине унда персонал. Бында нисектер ҡырыҫыраҡ, хатта тупаҫыраҡ кеүектәр. Тәртип тә ҡатыраҡ тойола.

– Ә беҙ ҡайҙа килдек һуң?.. – Ниңәлер үҙҙәренсә «түтәй» тип әйтергә ҡыймаҫы ҡыҙ был юлы, тегеһе иһә аптырап яуапланы:

– Тышта яҙырайтып яҙылғанды иғтибарға алманыңмы ни? Тубдиспансерҙа беҙ, Лирочка. – Ҡыҙҙың йәмерәйеүен күреп, йәлләгәндәй: – Борсолма, бер-ике аҙнанан ҡайтарырҙар. Анализдарың һәйбәт булыр, мин ышанам. Һин дә ышан. Ышаныс – иң ҙур дауа ул, – тип өҫтәне.

Лира шул саҡта ғына дауахананың исемен-есемен аңлатҡан алъяҙмаға иғтибар итте: бер башҡортсаһына – «...ҡаршы көрәш»; бер урыҫсаһына – «диспансер»... Һәм ул да, иртәнсәк әсәһе әйтмешләй, ҡолап китә яҙҙы. Ләкин үҙен тиҙ үк ҡулға алды. Тәнендә лә, йәнендә лә ул-был тойолмай ҙаһа?!

....Фәниҙәне төнө буйы, йоҡо бирмәй, бәғере һыҙлап ыҙалатты. Нисек була инде был хикмәтле хәл. Ҡыҙың оҙайлы каникулға ҡайтһын да бер кис ҡуныр-ҡунмаҫ кире китеп барһын әле? Өҫтәүенә, үҙ ирке менән дә түгел бит әле. Ниҙелер йәшерә, ниҙелер әйтеп бөтмәй бынау шәфҡәт... туташ һиңә, түтәкәйе. Шәфҡәтһеҙерәк ҡыланды түгелме? Хәйер, ҡушҡанды башҡара инде һәр эшем эйәһе. Ярай, әле сәғәт таңғы ете, яйлап ҡына Сасын яғына йөрөп, эшен бер итеп ҡайтҡас, кәмә менән аръяҡҡа сығыр, унда берәй зат-ботоноң мотоциклына йә «лигкәүәйенә» ултырып, район дауаханаһына барып әйләнер.

Фәниҙәне кәмәсе Фазылдың улы алып сыҡты аръяҡҡа. Әҙәп белә микән, кисә Лираны күк халатлы ҡатын ҡыҙыл тәреле машинаға ултыртып ҡайҙа алып киткәнен әллә генә һораманы. Һораһа, көйгән йәне менән бер ғәйепһеҙ Фасилды әрләп ташлар ине, моғайын. Йүнһеҙ, һаман халастуй йөрөйһөң, тип... Фәниҙә мәүеш кенә ошо егеттең ҡыҙына күҙ атыуын әсә зирәклеге менән һиҙендеме, әллә кемдәндер яҙа-йоҙа ғына ишеттеме? Донъя хәлен белеп булмай, тиҙерәк уҡып бөтөп, бер-бер һоратһалар һәм Лира үҙе ризалыҡ бирһә, нишләргә инде, әллә ни абруйлы нәҫел түгел бит әле, тип маңлайынды

тызырға ла тура килмәҫ тимә. Ни генә тимә, Барыйының урта бармағы үҙенән байтаҡҡа олораҡ мыштыр Фазылдың ғәйебе менән өҙөлгән дәһә. Хәйер, бала сактарындағы хәл бынһы.

Аръяҡта машина тиҙ табылды, сөнки Олотуҙҙән райүҙәккә йөрөп эшләүселәр байтаҡ. Үҙенә ҡәйнеш тейеше тура Клараның йортона ҡыуҙы машинаны. Руль тотҡан егет таный икән ханымды, кисә нишләп йөрөнө һеҙҙең тирәлә, тип ҡыҙыҡһынды. Фәнидә яуап биреп торманы, ҡыҙыл балсыҡлы йырынға яҡын дәү генә өйҙө күрһәткәс тә, оло юлда машинанан төшөп ҡалды һәм, артыҡ һерәндәмәҫ өсөн, урабыраҡ тыҡрыҡтан атланы.

Ысынлап та, төштән һуң ғына бара икән эшенә Клара. Күрешмәй-нитмәй, соландан ғына аяғүрә һөйләште.

— Төнө буйы йоҡламай сығылды, Клара Булатовна...

— Фәнидә туғаным, аңлайым. Кисә һеҙгә асығын әйтмәнем, әйтер инем — үҙем дә асығын белмәйем. Бары шул: ҡыҙығыҙ... туберкулез йоҡторған, шикелле. Бәлки, юҡтыр. Миңә уны алып барырға ҡуштылар.

— Конвоир икәнһеҙ. — Зәһәр генә көләмһерәһә лә, Фәнидәнең күҙе йәшкәҙәне. — Йә, Хоҙай, күрәһеләребеҙ бар икән!

— Сәбәләнмәй тор, бәлки, бер ҡурҡыныс та юҡтыр. Шик кенәләр. Ә-ә... ултырып ҡайтҡан берәйһе инеп йөрөмәйме һеҙгә?

— Нисек... ултырып? Ҡайҙа?

— Төрмәлә, мәҫәлән.

— Юҡсы. Надир ағай... ингәне юҡ. Ул ни, имән кеүек.

— Ярай, борсолма...

— Борсолмаҫҡа! Иртәгә үк эргәһенә барам. Больницаны нисек табырға — өйрәтегеҙ!

— Ҡуй, ауһарланма. Ауһар тиҙәр өтөк, ҡарһалан кешене беҙҙең яҡта. Тынысланып, иртәгәләрҙә барырһығыҙ. Машина табырһығыҙмы? Лирағыҙ һәйбәт кенә ҡалды. Йүткермәй, температураһы нормально. Әнкәйем борсолмаһын, тип сәләм күндерҙе әле. — Һуңғыһын Клара, әлбиттә, әсәне йыуатыу өсөн генә әйтте, әммә сәпкә тейҙе йыуатыуы.

Фәнидә уның кәңәш-төңәштәрен тыңлап та торманы, аңҡытиңке кирегә йәйәүләне. «Нива», хатта арбаһыҙ «Беларусь» туҡтап, таныш тракторисы ултырырға тәҡдим яһаһа ла, һиңмай кешеләй атланы ла атланы һәм шығырҙаҡ ҡомло ярға килеп баҫты. Уны күреү менән — көтөп торған тиерһең — Фазыл иҫке генә кәмәһенә ашыҡты. Ғәҙәттә, кеше-меше ултырышҡансы, сигарет ҡабыҙып ала торғайны, был юлы улай итмәне — тартып туйғандыр аулаҡта. Ыһылдамаҫҡа тырышып, тыныс ҡына иште ара-тирә сыйылдаған ишкәген.

— Ҡыҙыҡайы — Зөпүшкәһе менән Зәриәне бирегә сығарып ҡуйҙым да ағай-еңгәнең хәлдәрен белешеп сыҡтым, — тине шулай ҙа. — Ҡартаялар...

Кемдәр ҡартая? Һүҙ айышын иләҫ-миләҫ зиһененән елгәрҙе Фәнидә. Ишмай ҡайнәткәйенең (ҡайныһы) «өс хәтәр үтте яҙмыштан» тип фәһем өсөн һөйләнгәнен хәтерләне. «Аръяктан полкташым Хәлекәй менән ҡырҡ өстөң егерме өсөндә – Красный Армия көнөндә киткәйнек действительныйға. Японда йөрөнөк, Корейҙа ла булдыҡ, «чистка»ла. Һуғыш бөттө, еңгәнбеҙ. Бер саҡ поста торғанда, тауыш ишетәм: «Коткар, Ишмай, ҡоткар!» Ранаһы асылған да, япон санитарҙары алып китеп бара быны үҙҙәренең лазаретына. Винтовканы һоноп, саптым ылауҙарына. «Не трогать башкира!» – тинем. Алып ҡалдым, кем белә, әпкитерҙәр ине әллә ҡайҙа. Буталсыҡ саҡ... Илап ебәрҙе теге! Ҡосаҡлап-ҡосаҡлап...»

Фәниҙәнең башында буталыш: киреһенсә, әллә Ишмайҙы Хәлекәй ҡотҡарғанмы шул? Һәр хәлдә, йә Бурашта, йә Олотүҙдә ҡуна ятышып ҡупаҡлаша торғайнылар оло байрамдарҙа. Ана шул Хәлекәй, йәғни Хәлим ҡарт – вәт яҙмыш! – ҡәйнәнкәйен ерләгәс, ҡайныһы Ишмайға ла димләнгән үҙе егәрле, үҙе тотапаҡлы бер әбекәй менән бөгөн һин дә мин ғүмер кисерәләр ҙәһә. Бергә ҡартаялар...

Фәнидә, «такса»һына ярашлы, кәмәсегә унлыҡ һондо, теге, ҡуй, юҡты ни, тигәс, Фазыл тороп киткән һәндерәгә ҡалдырҙы.

Кәмәсе үҙе ташыған пассажирҙар түләүенән һирәк баш тарта. Бәғзе ир-ат Фазыл бисәһе Сара лавкаһынан һыра алып, Фазылға бирә, бәғзеләре кәмәлә саҡта уҡ ауыҙынан уртаҡҡа уртлай. Отпускыға-маҙар ҡайтҡан ҡаланыҡылар менән шәп, шәт. «Сәкүшкә»ләрен дә, закускаларын да ҡалдырғылайҙар, ышыҡҡараҡ боҫоп, ҡыйбатлы күстәнәстәрен һемертеүселәр ҙә осрай. Донъя бит. Шул арала яңылыҡтарҙы ла белештереп күтәреләләр йәнтөйәктәре ярына.

Кәмә тигәс тә, кәмәсенең дә расписание һымағыраҡ тәртибе бар: иртәнсәк һигеҙҙән ун берҙәргә – рәхим ит; төштән һуң инде биштәрҙән ҡараңғы төшкәнсә – бажалыста. Фазыл юҡ икән – Фасил бар. Ә-ә, клиенттар мөрәжәғәт итмәгән көндәр ҙә булғылай. Ундай саҡта Фазылға ниҙер етмәгәндәй тойола, гүйә, хәләл өлөштән мәхрүм иткәндәр.

Дөрөҫ, Надир кеүек ныҡлап донъя көткәндәрҙең үҙ кәмәләре бар. Кавалерист ҡарттыҡы, ана, ҡайырҙары ҡуптарылып, төбө дәү дейеү һөйәге һымаҡ ағарып беленгән ҡарт өйәңке тирәһендәрәк. Яр ишелеп барғанға, ул да һыуға иңкәйә, ул да ҡартая, бахырҡай. Түңкәрелеп, ҡырсында ҡарайышып йәнәш ятҡан ике кәмә хас та ярға сығып йән биргән диңгеҙ киттары һымаҡ, имеш тә, әҙер-меңерҙә.

Тауҙар ҙа ҡарағусҡыллана. Тау тигәндәй, уҙған аҙнала Олотүҙдән бөҙрәбаш хакимиәт башлығы менән Зәриәне бер ыңғай

бирегә алып сыҡҡайны. Шәхсән йомош менән әллә кемде күрәһем бар, тинеме Айгөлө. Һуҙҙан һүҙ сығып, үҙенән йәшерәк, килен тейешлерәк ҡатынҡайға өндәште был шаяртыбыраҡ:

– Зәриә, һине кеше көлдөрөргә оҫта, тиҙәр, берәй мәҙәк һөйләп ташла әле, – тине.

– Була ул, Айгөл Карамовна, – тине әсе тел Зәриә. – Тик аръяҡтағы тауға ҡарап ҡына ултыр, йәме.

– Ҡараным, йә: Күлбар ҡаяһы күренә.

– Хәҙер тыңла, әйтәм таҡмаҡ:

*Анау тауҙың башына*
*Төлкө килә лә китә.*
*Әй, түрәм, һине күрһәм,*
*Көлкө килә лә китә...*

Эсен тотоп, Фазыл ишкәген ысҡындырып ебәрҙе ҡулынан, кәмәһе баш бирмәй ыҙалатты бер килке.

Аҙаҡ Фазыл ятлап алды мәҙәкте. Тауға ҡарап...

Фәнидәнең әлегеләй кәйефһеҙ сағын күргәне юҡ Фазылдың. Күңелен күтәрер өсөн әллә ниңә уға «Әй, түрәм...» тигәнде һөйләп ишеттергеһе килде, тик уңайһыҙланды. Еткән ҡыҙын – Лираһын, ҡапыл ғына Өфөгә алып китһендәр әле?!

Бураштағы ҡыҙыҡ хәлдәрҙе лә, ҡыҙғаныс хәлдәрҙе лә кәмәсе тәүҙәрәк ишетә йә күрә. Быныһы раҫ.

## 2

Йәйге сессия алдынан – тәүге имтихан анһат ҡына һабаҡтан ине – Данир Лираны Сипайловолағы Ҡашҡаҙанға саҡырҙы. Яһалма, фонтанлы күлгә. Ятаҡтан эйәртенешеп сығып, мең-мең табан шымартҡан бетон баҫҡыстарҙан төшөп китешләй, быларҙы өсөнсө ҡаттағы шар асыҡ тәҙрәләрҙең береһенән көнсөл вә ғәрсел ҡарашы менән Светлана оҙатып ҡалды. Уны Лира һиҙмәҫ тә ине, әгәр яртылаш асыҡ меҫкен тәҙрәне тегеһе шыңҡырлатып япмаһа. Һалҡын ҡойон еле иҫтеме ни... Ирекһеҙҙән, Лира ҡайырылып өҫкә баҡты: байтаҡ әхирәттәре күҙәтә, имеш, көпә-көндөҙ «свиданка»ға йыйынған егет менән ҡыҙҙы.

Харап күңелле уҙғарҙы ваҡытты йәштәр күл ярында. Данир тәүҙә Лираны кафела туңдырма, йөҙөм һуты менән һыйланы, аҙаҡ катамаранда йөрөнөләр, шук малайҙар ыңғайына аулағыраҡ урында һыу инделәр. Тәрән йылға буйында үҫкәнгәме, ҡыҙ дуҫ егетенән һис тә ҡалышмай йөҙә, тик «брасс» ни, «кроль» ни – айырмай. Шул алымдарҙы өйрәткәндә Данир бер мәл биленән ҡосоп, балыҡ кеүек йылтандап торған һығылмалы, һалҡынса кәүҙәне үҙенә тартты һәм ... өшөгән ирендәрен ҡуша үбеп алды. Тоҙһоҙ һымаҡ икән еүеш килеш үбешеүе.

— Һыуыҡ алдырып ҡуймағыҙ, — тип үтеп китте эргәләренән олораҡ кеше. Сипайловола башҡорттар хәтһеҙ шул.

Күмәк һыу инеү сезоны асылмаған әлегә. Күлдең өҫтө генә йылыраҡ, оҙаҡ мыҙылмай йөҙөргә мөмкин, ә аҫта — өшәндергес. Кибенер-йылыныр өсөн арғы ярҙан төбөндә томбойоҡ-фәлән үҫкән боронғо, ысын күл яғына ашыҡтылар. Унда балыҡсы ҡарттың бармаҡ буйы ғына көмөштәй күкенде ярға һелтәүен шәйләп, Лира:

— Беҙҙә ундай балыҡты кире ебәрәләр, — тине лә үҙҙәрендәге эре-эре балыҡтарҙың төрөн һанап сыҡты. Егет иһә тамшанып ҡуйҙы һәм ышаныслы ғына әйтеп ҡуйҙы:

— Ә мин барам һеҙгә. Һин каникулға ҡайтҡандың иртәгәләренә үк. Азартный күршем бар. Машинаһы, кәмәләре, ҡармаҡтары, ауҙары — юҡ нәмәһе юҡ. Исеме — Александр, Шурик, тием...

— Ау йөрөтмәгеҙ, былай ҙа шәп ҡаба, — тине ҡыҙ, ризалығын белдереп. — Туристар, ғәҙәттә, арьяҡта туҡтай, палатка ҡороп. Өс мәртәбә оҙон-оҙон итеп ҡысҡыртһағыҙ, моғайын, ишетермен дә үҙем сығырмын кәмә менән. Өйөбөҙ яр башында, ҡалҡыуҙа... Сук муйыл үҫә.

— Йәшел «шестерка»ла килербеҙ, моғайын.

Лира шаяртып та алды:

— Йылға аша таныр һыңмы мине? Юҡ, үҙең беҙгә сығырһың Фазыл тигән бәләкәсерәк мужиктың кәмәһенә ултырып. Картуф, ҡаймаҡ һораған бул әнкәйемдән...

— Үҙеңде һораһам?

Яуап биреү урынына ҡыҙҙың һалҡын һыу инеүҙән күкһелләнгән йөҙө еңелсә ҡыҙарынды, ирендәре бултәйҙе.

— Һи-ни, килеп тә йөрөмә!

Бер нисә көндән Лира барлы-юҡлы әйберҙәрен, китаптарын дәү сумаҙанға тултырып һаҡлыҡ бүлмәһенә тапшырҙы ла, әхирәттәре менән хушлашып, төштән һуң еңелсә йөгө-күстәнәсе менән Черниковкаға һыпыртты. Элекке ауылдаштары түгел, күрше ауыл кешеһе Бурашта баҡса тота.

...Нәҡ шул көндө дөйөм ятаҡҡа ике ҡыҙ килеп инде һәм вахтерҙан коменданттың бүлмәһен һорашты.

— Үҙегеҙ кем һуң? Документығыҙ бармы? Беҙҙә — пропуск режимы, бигерәк тә мисс-һылыукайҙар өсөн, — тип хихылданы вахталағы ике эшем эйәһе. Дежур һорауына ҡыҙҙарҙың саяраҡы етди генә яуапланы. «Медуниверситеттан... стажерҙар...»

— О, медичкалар! — тип ауыҙ йырҙы егет, аңын-тоңон төшөнмәйсә. — Әйҙәгеҙ, һылыукайҙар, алып барам мин һеҙҙе комендантҡа, тик ҡайтышлай үҙегеҙҙе оҙатып ҡуйырға ғына рөхсәт итегеҙ.

— Туҡталышҡа тиклем генәме? — тип мыҫҡыллады ҡулына планшет тотҡан ҡыҙ. — Чао!

Кәүҙәгә йоморокас комендант ремонтка кәрәгерҙәй уны-быны тотоп ҡайтырға йыйынып ҡына тора ине, әлеге практиканткалар борсоно үҙен. Борсоно тип, бөгөн генә каникулға ыскынған дүртенсе курс – хәҙер бишенсенән, Кәримованы таптырҙылар, ятакта юклығын белгәс, адресын төпсөндөләр. Әмәлгә таянғандай, Лираларҙың төркөм старостаһы Светлана ни йомош менәндер ишек асып, башын һоноп эскә ҡараны.

– Светочка, әйҙә әле, ярҙам итәйек бынау ҡыҙҙарға... – Ханым быны ҡәҙимге лөғәтендә әйтте.

Лираның тыуған районын белһә лә, ауылын анык әйтеп бирә алмағас, комендант сейфын асып, мөрхәтһенмәй генә кенәгәләрен актарҙы, сөнки стажерҙарҙың сетерекле йомошо һағайтҡайны уны бер аҙ.

Ҡыҙҙар үҙ-ара «республиканскийҙар эҙләһен» типме шыш-быш сығып китеү менән, Светлана, кинәнес ҡатыш ытырғаныс кисергәндәй, ләпелдәне:

– Диспансерҙан? Психтан түгелдер, тубиктанмы? Ай-һай... Венериктан түгелме?

– Светлана! – Комендант старостанан ҡарашын ситкә борҙо. – Ни йомош?

– Миңә бер землячка килде, шуға өс көнгә пропуск бир әле, – тине Светлана әшнәһенә өндәшкәндәй һәм комендант өҫтәленә уска һыймалы ғына затлы хушбый ултыртты. – Ирең еҫкәп туймаҫ үҙеңде!

– Ну-у... Каникулға ҡайтмайһыңмы ни?

– Профком путевка бирҙе спортлагерға. – Һуңғы мәғлүмәт менән төркөм старостаһы Светлана үҙенең һиммәтле генә талибә, әүҙем йәмәғәтсе икәнлеген ҡапаҡланы. — Бушлай...

* * *

Данир Ҡашҡаҙан ҡомлоғондағы һөйләшеүҙе онотманы: «Һи, был балыҡмы ни...» Ҡомарланып мауыҡмаһа ла, һирәк-мирәк дуҫ-иштәре менән, бигерәк тә машиналы Александр – Шурикка эйәреп, тегендә-бында балыҡсылай. Арыу ғына ҡармаҡтар ҙа алып ебәрҙе. Әле быңа үҙе ҡыҫтаны күршеһен алыҫ тәбиғәт ҡосағына, бензин-фәлән минән, тип димләне. Белмәгән ере юк икән, һо-о, мөмкин, ул тирәнән берәү ҙә буш ҡул ҡайтмай, тип елкенде. Тик машинаһына ремонт, ремонт өсөн запчасть кәрәк, имеш. Алыр ине, хеҙмәт хаҡын көттөрәләр. Нишләһен, Данирға барлы-юклы аҡсаһынан өлөш сығарырға, өҫтәүенә, тегенең гаражында әҙ-мәҙ майға буялырға тура килде. Зыянға түгел: атаһы, өр-яңы булмаһа ла, берәй машина алып бирергә вәғәҙәләне. Өйрәнә торғаның яҡшы.

«Паром» тигән исеме генә ҡалған кисеүҙе — кәмә менән генә тегеләй-былай сыҡмалы урынды, тиҙ таптылар һәм машинаны бөгөлдән өҫтәге тирәклеккә ҡуйҙылар. Күләгә, саң юҡ. Дуҫҡайы ашыҡ-бошоҡ ҡапҡыланы ла, тын өрҙөрә һалып, кәмәһенә ҡорамалдарын өймәләм тейәгәс, һыпыртты ятыуға.

Машина радиоалғысынан талғын көй ағыла. Ут яғып, аш яраштырырға кәрәк Данирға. Сәғәт дүрт кенә әле, палатка ҡорорға ла өлгөрөр. Ҡайһы өй Лираларҙыҡы икән? Муйыл тигәйне — муйыллы өйҙәр байтаҡ аръяҡтағы түмәләстә. Әһә, оҫтәрәк, анау ялтас типһәндә, ялбыр муйыллы өй шәйләнә, шулдыр әле. Йәл, бинокль юҡ. Кәрәкмәй, күренә былай ҙа, тик Лира ғына күренмәй.

Ана, бер малай уранғылана ихаталарында. Ҡустыһылыр, моғайын.

Эре тирәктәр һерәйеп ултырыу менәнме, утын тигән нәмә юҡ бында. Ҡайҙан табырһың — аҙым һайын усаҡ урыны. Ҡороһары, ҡайыр йыйыу өсөн егет сабауламай ғына эшен белде, үҙе берсә текләп, берсә алан-йолан нимәһе менәндер үҙенә гәзиз тойолған йорт яғына ҡаранды. Әллә ҡыҙый «киләм» тигән һүҙен ысынға алманымы? Анау ҡыҙғылт яр башына ҡуйылған эскәмйә тирәһенә баҫып көтәүләйәсәк, имеш, берәү Данирҙы. Ябай һабаҡташ булһа, бер асыу... Берәй яҡҡа олаҡһа, һемәйеүең дә бар. Аҙна уртаһындараҡ килергә ине лә Данирҙың ниәте. Ә бөгөн — шәмбе. Айырылышыуҙарына — өс, ә юҡ, дүрт көн. Машина тигәс тә, күршеһе Шурик аҙна араһында эшенән китә алмаҫын алдан уҡ иҫкәртте.

Әһә, яҙынҡы сыбай аша кәмә шыла бирьяҡҡа. Ишкәген яшығыраҡ егет таһыллы ғына ишкән кеүек.

Тиҙҙән кәүҙәгә йәтеш генә ҡатынды ултыртып, кире юлланды кәмә.

Бына йыуантығыраҡ ҡатынкай ҡыраздағы бөгөлсәк һуҡмаҡтан ҡалҡыуҙағы урамға үрләп бара. Бына боролоп, диҡҡәт менән юҡ был тирәгә, машина таҡҡырына, ҡараған кеүексе. Хатта һолмаҡ кенә сумкаһын аяҡ аҫтына ултыртып, ҡулын ҡаш оҫтөнә ҡуйып та баҡты. Бәй, бәй, әлеге ҡарт муйыллы өйгә боролдо. Моғайын, әсәһелер... Башына салт ҡыҙыл баскетка кейгән баяғы малай ҡапҡаны асып, әйберен күтәрешеп индерҙе. Энем бар, тигәйне түгелме Лира? Эйе, әйтте, исемдәрегеҙ оҡшашыраҡ, тигәйне: Тимур, Данир. Ҡайҙа һуң Лира үҙе?

Шурик оҙаҡлай. Бигерәк әүәҫ балыҡҡа, донъяһын онотто. Радионы нығыраҡ аҡыртҡанда инде...

Ағымға ҡаршы ишеүе ауырҙыр, кәмәһен һайҙан баулы шыумандай һөйрәп, Александр туҡталҡаға яҡынлашты. Йүнләп ҡапмай, ти, әлегә. Әммә балыҡ күп икән. Ем һибеп киткән. Үҙе тамаҡ ялғағансы, Данирға кәмәһен биреп тора — әйҙә, сығып

әйләнһен разведкаға. Ишә беләме? Белә. Яҡшы, бар, йөрө, юғиһә, балтаң һыуға төшкән һымаҡ өңшәйгәнһең.

Резина кәмәне һыуалғыска бәйләп, ауыш ярҙан өҫкә күтәрелде Данир, тик муйыллы өйгә яҡынлашырға баҙманы, тегеләй-былай ҡаранып, тапанып торҙо. Әмәлгә таянғандай, яйлап ҡына хужабикә үҙе яҡынлашты эргәһенә. Ошолор ҡыҙы Лира әйткән Өфө егете? Балыҡҡа килеүе ихтимал, тип иҫкәрткәйне ләһә. Төҫкә-башҡа сибәр ҙә, ямаҡ та тимәҫһең, мәгәр һонторораҡ кәүҙәһе, үҙен тотоштары харап йәтеш. Ҡара сәс, ҡара ҡаш, ҡарағусҡыл ҡуңыр күҙ икән үҙендә.

Эйәк ҡағып ҡына иҫәнләштеләр.

– Һеҙ... Һеҙ... – Былай ҙа кеше менән ҡыйынһыныбыраҡ аралашҡан егет ыҡ-мыҡ итте, ярай әле, ханым үҙе һүҙ ҡуйыртты.

– Лираның әнкәһе булам, – артығын ыҫҡындырып ҡуймайым, тигәндәй, әсә күҙ төптәрен һыйпаштырҙы. – Ә һин Данир, эйеме?

– Эйе, Данир мин – Лираның однокашнигы. Вот приехали порыбачить-та, күрергә ине...

– И-их, – Фәнидә көрһөндө. – Уфала Лира. Әле генә эргәһенән ҡайтып индем. Һеҙ килерҙе белгән булһам, рәхәтләнеп бергә ҡайтаһы икән... Лира ни...

Ҡатынҡай ҡабат ләм-мим: Лираһы Өфө егетенә уны-быны һөйләмәҫкә ҡушҡайны ла... Һөйләне инде, һөйләмәйсә ҡайҙа бараһың? Бер вуздан даһа.

Егет күңелкәйен шомло хис ялмап өлгөрҙө.

– Как... китте?

– Вот так! – тине әсә кәзекләүһеҙ генә, гүйә, егеттең ике телде бутап һөйләүе үҙенә күсте. – Странный хәлдәр бывает шул тормошта. Больницаға алып киттеләр, бына бөгөн ятҡан ерен табып, хәлен белеп ҡайттым. Әйҙә, энекәш, өйгә менеп, ишек алдына инеп һөйләшәйек. Кеше әллә нимә уйлар әтеү...

Оҙаҡ торманы. Ҡулына яртлы литрлыҡ ап-аҡ банка тотоп кире бирьяҡҡа сығыуға, Шурик палатка эргәһендә түҙемһеҙләнеп көтөп алды юлдашын.

– Күрҙеңме студентҡаңды? Ах, оҙаҡланың... – Данир өндәшмәгәс, ҡаймаҡ юҫығына күсерҙе хәбәрен. – Хаҡын түләттеме һуң?

– Башҡорт күстәнәс өсөн хаҡ һорамаҫ, – тине Данир, көньяҡ офоҡтағы Өфө тарафтарына ҡарап. – Да-а, студентҡабыҙ... Беҙгә иртәгә иртүк юлланырға тура килер. Үпкәләштән булмаһын, Шурик. Әсәһе, машина барҙа тағы барам ҡыҙым янына, ул-был әйбер, аҙыҡ-түлек апараһы бар, ти.

– Чепуха какая-то, товарищ Тайчин.

– Тайчин түгел, Тайсин вәғәҙә бирҙе! – Фекере ярайһы ҡәтғи Данирҙың. – Шундай хәлдәр...

– Ну дела-а, – тине Александр һуҙып. – Улайһа, ысҡынам балыҡҡа... Һин ятып тор әҙерәк. Нервың ҡаҡшағанға оҡшай.

Лираның йәмле йәнтөйәге, типһәндәге ғәзиз йорто менән арлы-бирле танышып, ҡояш ныҡлап ҡалҡыу менән кире юлланырға тура килде егеттәргә. Балыҡ тотамы-юҡмы, тәбиғәт ҡосағында хәләүәт йөрөүҙән танһығы ҡанмаҫ ҡаҡса Шурик ҡына тағы ла ҡуранысланa төшкәндәй, турһайғандай тойолдо. Данир уны алдан уҡ ипле генә көйләне.

– Яттар алдында кәйефеңде һиҙҙермә, братан. Алыҫ ер түгел, килербеҙ әле. За мой счет! Вот Лира ғына... – Әйтеп бөтмәһә лә, фекере аңлашылды, һәм Шурик, йылға яғына бағып, мығырланы.

– Да-а, берҙән-бер транспорт – кәмә! Стоп, һин әйткән апайка төшөп килә аҫҡы урамға. Ят тигәнең, ҡара уны, һөйөклө ҡәйнәңә әйләнеп китмәгәйе.

Данирҙың сырайында йылмайыу ғәләмәте сағылды.

– Ә атаһын күрҙеңме? Ниндәйерәк мужик?

«Белмәйем» тип баш сайҡарға теләгән ерҙән Данир Лираны күҙ алдына килтерҙе һәм һағышланып әйтте:

– Ул мужик донъяла юҡ икән. Хәбәрһеҙ юғалған...

– Афғандамы, әллә Чечнялaмы?

– Ошо йылғала. Кәмәһе менән киткән – шунан бирле ғәйеп.

– Егерь йә инспектор булмағандыр?

– Юҡ та, өйрәк атырғамы, әллә ау һалырғамы урлағанда. Ҡасандыр яҙ, элекке Пионерия көнө алдынан.

– Браконьерҙарҙың бер-береһен сәпәүе ихтимал... – тине лә Шурик, кәтүкле ҡармағын ипләй-ипләй, иҫтәлеккә бирелде.

– Мине пацан саҡта атайымдар балыҡҡа эйәрткәйне. Ҡорбан күп ине бында, үҙҙәре эре! Катерҙа берәү эргәбеҙгә туҡтап, ыҫкәртеп уҙҙы; офицер накидкаһы һалған яурынына. Ау ҡорманың, ҡармаҡҡа ла етерлек ҡаба, тип, ул-был кәңәштәрен бирен китте, етмәһә. Аҙаҡ ишеттем: үҙе лә юҡ, катеры ла. Күпме эҙләгәндәр – ғәйеп теге рыбнадзор. «З»-ға башлана фамилияһы, Золотаревмы, Золотухинмы. Ә бит катеры бынауҙар ишеме? – Александр арғы ярлауҙағы ағас кәмәләргә ымланы. – Бәләкәйерәк, но ысын судно. Шуны ла тапмағас, үҙең уйлап ҡара! Да-а, күп кешенең башына еткән инде был йылға. Ана бит, аҫтан дөрөп, ишелеп-йомарланып аға. Үҙе һалҡын. Эҫергәнеп сум – йөрәгең сығынлауы бар.

– Ярай, теләһәң – һыпырт балыҡҡа, теләмәһәң – йөрөмә. – Данир нимәгәлер сабырһыҙланды.

Яуап урынына Александр, «сеү» тигән һымаҡ, иренен урта бармағын терәне лә көр ат юртҡандағы ише лырҡ-лырҡ һауа сығарған оҙон итектәренең ҡунысын күтәреп, ҡураныс кәүҙәһе

менән еңелсә генә атлап хәсиәте әйҙәгән тобаға ашыкты. Ярҙан ҡармаҡларға уйы.

Усаҡ ялҡындары киске эңерҙә ҡыҙарып ялпылдауға ғына ҡайтты. Юллыҡлы икән! Төрлөһөнән эре генә байтаҡ балыҡ эләктергән. Иртәгә лә ҡармаҡсылай алмауына үкенергә самалағайны, Данирҙың кәйефен һүрмәҫ өсөн был хаҡта һүҙ ҡуҙғатманы.

Иртәгәһенә Шурик таң ҡараңғыһы аралаш, йыбанмай тороп, тағы байтаҡ сабаҡ-фәлән, оптолар алып ҡайтты. Сиректәй өс бәрҙе ҡаптырғанына айырыуса ҡыуанды, табышын тоғоноң төбөнә тыҡты – инспекторҙар аҫыл балыҡ өсөн «Айгөл» маркалы кәмәһенең ярты хаҡына бәрәбәр штраф түләтеүҙәре ихтимал, ти, бәрҙе өсөн. Данир һыңҡылдап көлөргә маташты.

– Төптән уйлаһаң, дөрөҫ эшләйҙәр. Аптырайым мин, әммә факт: балыҡтың төрҙәре лә, запастары ла йылдан-йыл кәмей Ағиҙел бассейнында. – Ана шулай махсус һүҙҙәр ҡыҫтырып, зарланып торҙо бер килке Шурик.

– Быларҙы ниңә кире ебәрмәнең һуң? – Данир тегенең күҙҙәренә секерәйеберәк баҡты.

– Азарт... йәнә ҡомһоҙлоктор, – тине иптәше, ҡулдарын йәйеп.

– Һуңғыһы хәҡикәткә яҡын, – Данир нөктә ҡуйҙы әрепләшеүгә оҡшаш әңгәмәгә. – Шурик, Өфөлә айырылышырбыҙ. Миңә, әсәһе менән барып, Лираның хәлен белешергә...

– Ә, юҡ, ат күренә, йәнә велосипед... – Шурик, гүйә, уны тыңламай, әллә юрый ирештермәксе. – Барып күр, кем тыя?

– Тыйған кеше юҡ. Ни әйтмә, курсташ булмаһа ла...

– Ярты юлда кешене ташлап китә торған ғәҙәтем юҡ, – тине Шурик, әйберҙәрен төйнәй-төйнәй. Ҡулы ибәтәйле бит әле үҙенең, нимәгә тотонмаһын, йәбе килеп кенә тора. – Бергә йөрөрбөҙ аҙағына тиклем.

– Яҡшы, күрше-брат. Электричкаға станция яҡын унда, үҙе ҡайтыр.

Оскор күҙ икән Александр, өҫтәүенә, телгә апаруҡ йор.

– Смотри-ка, яңы мамочкаң күренде!

## 3

– «Кәримова бармы? Аҫта көтәләр...» Яҡындағы бүлексәнән үҙенә тиңдәшерәк, тик уғата сибек, моңһоу ҡарашлы ауырыуҙың ярым ҡыҫыҡ палата ишегенән көсәнеберәк өндәшеп уҙыуы булды, койкаһында ҡырын ятҡан Лира, үҙе лә һиҙмәҫтән иҫке генә гәзитте елпеүес һымаҡ һелккеләп, яҙылып ултырҙы һәм ни шатланырға, ни хафаланырға белмәне. Кем көтә? Әсәһе кисә генә килеп китте, әлегә ул-был кәрәкмәй. Аҫҡа һағайып атланы.

Бер-бер әсәкәйе лә... Уф, йә Хоҙай... «Йә, Хоҙай» тип аҙым һайын ялбарырға ярата ине олатайы мәрхүм дә. Ҡыҙыҡ был әҙәми зат, дөрөҫөрәге, уларҙың нәҫеле. Ана, олатаһы яңғыҙ ҡартайып, әхирәткә күсте, ә әбейе – өләсәһе унан алдараҡ гүргә инде... Әсәһе ҡартаймай ҡартайыуға, мәгәр олоғая. Яңғыҙ олоғая... Былтырмы кемгәлер һөйләп-хәтерләп торғанын да күңеленә һалып ҡуйғайны әле Лира.

– Ҡайнатама аръяҡтан застуйын ғына әбейүшкәне, ней, бынау Фазылдың апаһын инде, димләгәйнек, ҡарт әйтә: ҡуй, ти, миңә тигән ҡатын минән алда үлә лә ҡуя, лутсы яңғыҙ ғына үләйем, тисе. Фазылдарҙың апайын димләрҙән алда бераүгә ингеләп сыға ине – уныһын көтмәгәндә инсульт харап итте. Ә тегс әбейүшкәне аҙағыраҡ дуҫы Хәлекәй апҡайтты.

Йә, Хоҙай, тип әйтерлек тә бындағы мөхит. Сөнки бисара Лира үҙенең ҡайҙа дауаланырға дусар ителеүен төшөнә, хатта яҙмышына күнә башлағайны.

Беше иштәктәр, талапсан вахта аша үтеп, ым менән генә сәләмләшкән, лабыр-лобор һөйләшкән әҙәмдәрҙән ситкәрәк китешләй, ҡыҙы әсәһенән көйөнгәндәй һорап ҡуйҙы:

– Әллә, әней, һине лә...

– Ю-у-у-к, бәбкәм, борсола күрмә. Юл ыңғайына машина...

Әсә менән ҡыҙ уны-быны байтаҡ һөйләште, гүйә, Фәнидә ниңә, нисек килеүен дә оноткайны. Әгәр Лира унан: «Таныш машина осранымы?» тип инде нисәнсегә ауыл яҡтарын хәтер иләгенән осортмаһа, түбәндәге яуапты ишетмәҫ тә ине:

– Балыҡҡа килгәндәр ҙә, бераү һине һорашҡайны, ултыр ҙа кил бына. Ипле генә... Кем һуң ул знакомың?

– Данирмы? Әй, әней, әйттем бит: бер нәмә лә белгертмә...

– Ҡуй, бәпкәм, белгәне барыбер белер, белмәгәне – юк, яҡын кешеләрҙән барыбер йәшерен булмаҫ, беҙ әллә ниндәй енәйәт ҡылмаған да?! – Әсә кешенең үҙ булмышын ҡыҙыныҡына ҡушып, «беҙ» тип хәбәр сурытыуы таш бәғерҙе лә иретер ине был мәлдә. – Арыу малайға окшаған. Малай тип, егет, шәт, дастүйын. Машинаһы... интәшенеке икән. Күргең киләме үҙен?

Яуап биреү урынына Лира быйылдары итләсләнә төшкән яурындарын ғына йыйырҙы. Шунан, ҡапыл бер ҡарарға килгәндәй, шыптыр пакетка һалынған күстәнәстәрҙе йәлп әләктереп әйтте:

– Килтергәсһең, күрешәбеҙ инде. Әй, әней, берәй аҙнанан, мин сыҡҡас, ҡабат килергә могли. Йә, хуш: һин – ҡайт, ә Данир... Юк, килмәһен, үҙем сығам эргәһенә.

– Туктасы, кисә аҡсаны әҙерәк ҡалдырҙым, шикелле.

– Кәрәкмәҫ тә... – Лира тәүҙә баш тарткайны ла, бындағы гәзит-журнал киоскыһында үҙенең сиренә ҡағылышлы брошю-

ралар барлығын иҫләне.— Әней, артығын расходланма. Тимурик, ана, быйыл күпме китап, кейем таптырасаҡ.

— Уның өсөн ҡайғырма, бәбкәм.— Бая ғәзизенән «хуш» тигәнде ишетеүгә йөрәге әрнегән ханымдың йөҙөнә йылмайыу сатҡылары ҡунды. Мәслихәт, әнеһен ҡайғырта бит ҡыҙ ғынаһы.— Тимур ней, ул да дастуйын.

— Һиңә бөтәһе лә «дастуйын»! — Лира йомарлаҡ аҡсаларҙы халатының киң кеҫәһенә тыҡты ла, ҡул болғап, алданыраҡ атланы.

Ну был әсәһен! Кәрәкмәгәндә, көтмәгәндә Данирҙы эйәртеп, өҫтәүенә, иптәшенең «тачка»һына ултырып килә һалып еткән. Ҡушкандың киреһен эшләр икән оло башы менән. Йә, дауаханаға — уның да ниндәйенә бит әле — эйҙәп килтерерлек ниндәй мөнәсәбәт бар һуң әле Лира менән Данир араһында? Йөрөгән егете, яратҡан егете тип ауыҙ тултырып әйтерлеге булһа — бер асыу. Һүҙ ҙә юҡ, күрмәлекле, илтифатлы ғына. Ҡарағусҡыл күҙҙәре һарап һөймәлекле, серле, нурлы. Күҙҙәренән уның һөйөнәме, көйөнәме икәнен шәйләп була. Күп һөйләшмәй. Быныһы ла һәйбәт. Ярҙамсыл — яҡшы. Итәғәтле — быныһы ла шәп. Ләкин бит әле Данир — ҡала, әйтерең бармы, баш ҡала егете. Ата-әсәләре фән кешеләре. Бүғай. Ә Лира... уты һүнеп, нигеҙе ҡороп барған ауыл ҡыҙы. Тәбиғәте хозур, Өфөгә апарыу яҡын булыу менәнме ни. Клуб ҡынаһы ла ябылып ҡуйҙы ана. Йәштәр ялға ҡайтһа, усаҡ яғып, йә элекке ырҙын табағында, йә ҡалҡыуҙағы эскәмйә эргәһендә дискотека һымағыраҡ шау-гөр ойоштороп маташа, әсе-мәсе эсеп тә, тас-тос һуғышып та алғылайҙар.

Ауылы — ауыл, уныһын ғына «фу, деревня!» тип тә аңлар Данир, тик бына ярты етем үҫкән, унан бигерәк, тиндәрен һанап, эйе, эйе, уҡып йөрөгән ярлы ғына Лираны тиңһенә буламы инде моданан бигүк ҡалышмай кейенеп, факультетты «отлично»ға ғына бөтөп, хәҙер аспирант булып йөрөгән тәтәй егет.

Әлләсе... Атаҡлы «Родина» кинотеатрында тотош Рәсәйгә рекламаланған «Посейдон» тигән фильм ҡаранылар. Океан... Тулҡындар... Меңәрләгән кеше бата... Ҡурҡыныс... Йәл... «Титаник» картинаһы кеүегерәк.

Ярай, Н. ҡалаһында студенттарҙың ғилми конференцияһында ҡатнаштылар. Кафеларға барҙылар, Ҡашҡаҙанда ҡалтыранып һыу инделәр, ярында үбештеләр ҙә, ти. Үпкән-ҡосҡан — елгә осҡан... Данирҙың тикшерелеп-дауаланып ятҡан пациентка эргәһенә, хатта һабаҡташы булған хәлдә лә, килергә хаҡы бармы ла, Лираның уның менән осрашырға баҙнаты етерме? Ярай, башҡортса һупалаһын да, ти. Был да әле иркенләп һөйләшергә ирек бирмәй.

Килешмәҫ!.. Светлана ишеләр ишетеп ҡалһа, күҙен дә астырмаҫтар. Икәүһенекен дә... Бәй, боролор ҙа китер – режим даһа бында. Табиптар ҡушмай – вәссәләм.

Шулай ғәмләнеп, кире инергә укталғанда, берәү ыңғайламаҫмы үҙенә табан. Данир! Харап, йәшкелт спорт костюмында, аҡһыл зәңгәр баскетын батырыбыраҡ кейгән, ҡапыл-ғара танырмын тимә. Боролманы Лира, дөрөҫө, боролорға өлгөрмәне. Өлгөрөр ҙә ине, ниндәйҙер бер аңлайышһыҙ, тән зымбырҙатҡыс, мәгәр ләззәтле, елкендергес көс уны туктарға мәжбүр итте, гүйә, аяҡтарына ауырттырмай торған тышау һалды. Егеттең баҙнатһыҙ ғына эйәк ҡағып сәләмләүе лә ҡыҙҙы ҡыйыуландырып ебәрҙеме, әммә көрһөнөүҙән, иларға етешеп, һыңҡылдабыраҡ зарланыуҙан уҙа алманы ҡыҙый.

– Килмәҫкә кәрәк ине... Врачтар шикләнә...

– Бөтәһен дә аңлайым, Лирочка. Борсолма, ҡурҡҡанға ҡуш күренә, тиҙәрме.

– Әллә инде, әллә... Аптырайым.

Һүҙгә һүҙ ялғанды әкренләп. Факультет, вуз мөхитен, Данирҙың кисәле-бөгөнлө сәфәрен телгә алдылар. Күңелен күрәйем сырхауҙың, тип сөсөләнмәһә, харап окшаткан егеткәй Бураш яҡтарын. Лира үҙен аҙна, уҙа китһә ете-һигеҙ көндән «әсирлек»тән сығарасаҡтарына өмөтөн белгерткәс, Данир, ситкәрәк ҡарап, бер аҙ уйсанланды.

Шөкәтһеҙ халат кейгән төрлө йәштәге, күпселеге иләмһеҙерәк ҡиәфәтле ауырыуҙар. Ала-кола, арыу ғына кейенгәндәре – хәл белешергә килеүселәрҙер. Ауыл кешеләре менән ҡала кешеләре араһында һаман ниндәйҙер айырма төҫмөрләнә. Фәрештәләй аҡтан йә зәңгәрһыуҙан кейенгән персонал айырым-асыҡ салына күҙгә. Ҡупшы ҡалпаҡтары, ай-һай, килешә икән тыҡ-тыҡ баҫып йөрөгән шәфҡәт туташтарына. Ишек зыңҡылдаған тауыштар, лабор-лобор гәпләшеүҙәр, аһ-зарҙар һиҫкәндергес хистәр уята.

– Ожмах түгел бында... – тине ҡыҙ.

– Ә-ә? – тине егет. – Стройотрядка эләгергәме, әллә Өфөлә генә ҡалып, берәй ударныйҙа эшләп алырғамы, тип баш ватам.

– Минең өсөн булһа, зинһар, башыңды ватма... – Лира яҡын күреп өҫтәп ҡуйҙы: – Иптәштәреңдән айырылма, Данир.

– Былтырғы отрядты һеләйтеп ҡайтарҙылар шул. Тауҙай вәғәҙә биреп, ярты хаҡын ғына түләнеләр. Ярай, Өфөлә ҡалам, бер фирма биш кешегә көнөнә бишәр йөҙ һум түләргә риза. Директоры – беҙҙең вузды бөткән эшҡыуар.

Өндәшмәне Лира, минең өсөн барыбер тигәндәй, ҡымшанманы ла.

– Ярай, хуш! Ҡабат килеп ыҙалама.

Буласак аспирант, студентка өсөн ниндәй ҙә булһа якшылык кылырға әҙер икәнлеген раҫларға укталғандай, усындағы ыксым ғына кеҫә телефонын Лираға һуҙҙы.

– Мә, кәрәгер һиңә. Үҙем яңыны алырға теләйем.

– Тағы нимә? – Асырғанып сыкты кыҙ тауышы. – Йәлләүгә мохтаж, тип уйлайһыңмы әллә мине.

Шул сак эргәләренә кара күҙлекле Шурик килеп, күптәнге танышына өндәшкәндәй:

– Хәйерле көн, Лира! – тимәһә, ауырыу үҙенең аянысльі хәленә асыуланған халәттә китеп тә барыр ине, туктарға мәжбүр булды.

– Мамочкаңды автовокзалға илтеп куйҙым. Һеҙҙең гүзәл яктарға ыскынырға ғына тора ине бер «Газель», – Шурик Лираны күптән белгән һымак һөйләнәсе.

– Александр... – ныклап таныштырмаксы ине Данир, ниңәлер телһеҙ калды, телефонды кеҫәһенә һалды. – Он же Шурик, он же Сашок.

Лираның йөҙөнә йылмайыу осмото яҙылды, Данирҙың да караштары ирәбеләнде, күмһеү ирендәре киңәйҙе.

– Хушығыҙ! Мин Бурашта сакта – тағы рәхим итегеҙ!

– Әйт кенә: үҙеңде лә – выжт! – Ләпелдеген сыкмаксы Александр хатта күҙлеген сисеп һелккеләне. – Һеҙҙә икән дә сибәр кыҙҙар һәм... терһәк буйы балыктар!

Лира күкрәгенә каушырған кул суктарын бөккөләп хушлашты ла һин дә мин китеп барҙы. Зәхмәт кағылған әҙәмгә окшамағансы!

* * *

Палаталағы һүрән генә ут яктыһында йоклар-йокламаҫ яткан Лира брошюра караштыра.

Көндәрҙе һанай-һанай, диспансер тормошона ла, дөрөҫөрәге, йылдар дауамында канунлашкан тәртиптәренә лә күнәһең икән. Күнелең менән, бәлки, күнмәҫһең дә, әммә күнегәһең, йәғни буйһонаһың. Башка дауаханаларға карағанда, бында талаптар ифрат каты кеүек тойолдо Лираға тәүҙәрәк. Уға нимә – тейешле анализдарҙы һәүетемсә тапшырып, унынына-быныһына, йәнә якындарының хәл-әхүәленә кағылышлы һорауҙарға энәһенән ебенәсә тикшереү үтте. Шөкөр, атай яклап нәҫелдәрендә булмаған шикелле бындай яман сир. Тифтан, аслыктан кырылғандар, кылыстан үткәндәр, пулянан ауғандар, һыуға баткандар, хатта, ана, атаһы тыныс көндәрҙә лә хәбәрһеҙ юғалды – әммә Хак Тәғәлә сихуттан һаклаған үҙҙәрен. Әсәһе яклап төрлө сырхауҙар, вакытһыҙ үлеүсе уҙамандар булғылаған, уның ырыуы урман төпкөлөндә йәшәй. Әсәйенең комбайнсы кус-

тыһы ғына, үпкә сиренә һабышып, нисектер әжәлдән ҡотолоп ҡалған.

Түҙер, сабыр итер – ике аҙна, уҙа барһа өс аҙна һә тигәнсә уҙыр. Үҙенә лә, туғандарына, Данир менән Шурикка, хатта ки үҙенә ҡырын ҡараған Света кеүектәргә лә һабаҡ булыр уның сырхауы. Ауырымаһын, әйҙә, бераү ҙә! Ҡулға эйәләшкән йорт хайуандары ла, баш бирмәгән ҡырағай йәнлектәр ҙә. Ана бит, сәс үрә торорлоҡ мәғлүмәттәр тупланған бынау сәтәкәй бармаҡ йоҡалыҡ ҡына китапсыҡта.

Байтаҡты төшөндө Лира: туберкулез – социаль бәлә, нисәмә быуын миллиондарҙы борсоған сир, ул – йәмғиәттең көнитмеш кимәлен ап-асыҡ билдәләүсе зәхмәт. Ни өсөн граждандар һуғышы йылдарында халыҡ күп ҡырылған? Аслыҡ, ҡуңалтаҡ тормош, әрпешлек, томаналыҡ хөкөм һөргәнгә. Бөйөк Ватан һуғышы йылдарында һуң? Ә бөгөн? Бөгөн ниңә ошо ямаҡай сирҙең хәтәрлеге хаҡында әленән-әле саң ҡағалар? Сәбәптәре бихисап икән. Фирмачтар, фермерҙар, алыпһатарҙар, эшҡыуарҙар, олигархтар, бизнесмендар һ.б. ишәйгән һайын, алкаштар, асарбаҡтар, фәҡирҙәр, эшһеҙҙәр, енәйәтселәр ҙә күбәйә. Һуңғылары бигерәк тә ҡурҡыныс. Амнистияға эләгеп, һөрлөгөшөп иреккә сыҡтылармы, эш-көш, йәшәү урыны таба алмай унда-бында һуғылып, тегенән-бынан ҡыуылып, тараталар ғына йоғошло микробтарҙы. Абау, әллә затында енәйәт юлына баҫҡан әҙәм юҡ.

...Апрель аҙаҡтары инеме, университет артына күсмә флюорография киләсәк, берегеҙ ҙә ҡалмай үтеү мотлаҡ, тип иҫкәрттеләр, деканаттың иғландар таҡтаһына Лираларҙың факультеты «көндөҙгө сәғәт 12-нән 15-кә тиклем» тигән белдереү элделәр. Тәнәфестә күптәр шунда ағылды. Лираны иһә төркөмдәше Элина, әйҙә, әле кеше күп, тығылышып йөрөмәйек, тип студент ашханаһына инергә ҡыҫтаны. «Мәктәп пирожныйы» менән генә тамаҡ ялғамаҡсы булғайнылар, ашхана, бәхтиһәң, ревизия арҡаһында ваҡытлыса эшләмәй икән. Ҡул һелтәп, Лира кире боролғайны, тегеһе яҡындараҡ яңы асылған кафеға инеп сығырға димләне. Ҡиммәт тәһә унда, тип ҡарышты Лира, тик ашамһаҡ Элина инәлде: һыпырттыҡ – өлгөрәбеҙ... Үҙем һыйлайым, кисә ағайым мул ғына аҡса ҡалдырып ҡайтты, тип тә өҫтәне. Фырт кейенгән, ҡупырым һөйләшкән ветеринар ағайын таный әхирәте. Ҡырҡты ҡыуыуға, өйләнгән булыуына ҡарамаҫтан, Өфөгә килгәнендә ятаҡҡа ингән һайын Лираға ымһынып-тамшанып ҡарағаны, тоҙһоҙ мәҙәктәре менән теңкәгә тейгән саҡтары ла булғылай. Ошоно хәтерләп, Лира көлөмһөрәп ҡуйҙы: әйҙә инде, әйҙә, тик һуңлап ҡуймайыҡ.

Һанаулы ваҡыт ни йүгәнһеҙ тай кеүек. Официант егет мыштырлағансы, арлы-бирле ҡапҡылағансы, йүгереп килгәнсе... уларҙың факультеты үтеп бөтөп, машина тирәһендә башҡа

факультет сыуала ине. Ҡыҙҙарға лекцияға инеүҙән башҡа әмәл ҡалманы. Етмәһә, йәндәрен көйҙөрөп, старосталары Света йоҙроҡ төйөп ҡаршыланы. Ҡыҙ кешегә килешмәгәнде. Ҡара көрәнгә буялған оҙон тырнаҡлы бармағы менән янаһа – бер асыу. Аҙаҡ, май байрамдары уҙғас ҡына, ҡыҙҙарҙың үҙҙәренә генә клиникаға барырға тура килде: бармай икәнһегеҙ, барлы-юҡлы стипендиянан ҡолаҡ ҡағаһығыҙ. Һеҙ түгел, ана, флюорография үтмәһә, педагогтарҙың да хеҙмәт хаҡын тотоп ҡалырға хаҡыбыҙ бар, тип янайҙар ректоратта. Быны Света усләшкән һымағыраҡ киҫәткәйне. Бына хәҙер ҡана үсәүҙәре! Ай-һай, Данирҙан көнләмәйме икән үҙе алабарман, үҙе йылмаяҡ, үҙе ҡупшы Светик.

Тиҙҙән лекциялар, семинарҙар кәмене, тәүге имтиханға әҙерләнергә аҙна самаһы ваҡыт бирелде.

Шул мәлдә Лира ауылына ҡайтты. Тәүҙә бер кис кенә төнәп әйләнергә уйлағайны ла, Тимур әнеһенә ун йәш туласағын иҫләп, оҙағыраҡ торорға ниәтләне. Бер ыңғай һынауҙарға әҙерләнде, әсәһенә лә ярҙамлашты...

Ошоларҙы иҫләп, һағышланып та алды Лира.

...Уф, ҡасан сығаралар инде? Бер ере лә һыҙламай ҙаһа, бары эс бошорғос билдәһеҙлек кенә ыҙалата. Бында әләгеүе генә анһат, тиҙ ҡотолоуың – ай-һай. Ҡайһы берәүҙәрҙә яман сир артыҡ күҙгә бәрелмәй генә аҙа, етмәһә, хәҙер вирустарҙың дарыуҙарға ҡаршы тороу һәләте арта, тиҙәр. Имәнес, микроскоптан ҙурайтып һүрәттә төшөрөлгәнсә, бөгөлөп етмәгән ҡармаҡҡа, ә юҡ, йыландың кәкре ҡаяуына оҡшаған Кох* таяҡсалары...

Кох таяҡсалары. Һин икәнһең дә үләт тартыусы нәмәкәй!

Өҫтән-мөҫтәнерәк булһа ла, Лира был зәхмәт хаҡында байтаҡ фәһемле, әйтергә яраһа, хәтәр мәғлүмәттәрҙе төйнәп ҡуйҙы күңел һандығына.

Бактиһәң, илдә бөтә ауырыуҙарҙың үндан туғыҙы тиерлек үпкә сихуты** менән яфалана. Әҙәми заттың расаһын, милләтен, йәшен, һөнәрен айырмай вә аямай. Иллә ауыр, бысраҡ, туҙанлы эшкә йәлеп ителгәндә, иҙелгән массалар күберәк яфалана.

...Ир-егет ҡатын-ҡыҙға ҡарағанда өс тапҡырға күберәк сирләй. Араҡы, тәмәке, наркота яратыусылар йәһәтерәк ҡорбанға әйләнә.

...Өфөлә көн аша бер, ә Рәсәйҙә йөҙ ҙә илле кешенең ғүмере әлеге ҡороғор йоғошло сир арҡаһында ҡыйыла.

---

*1882 йылда немец докторы Роберт Кох Берлин табиптары алдында туберкулез эпидемияһын таратыусы бактериялар хаҡында шаҡҡыҡтыс доклад менән сығыш яһағандан һуң, ябай күҙгә күренмәгән был бактерия «Кох таяҡсаһы» тип йөрөтөлә.

** Сихут – чахотканың (чахнуть) башҡортсараҡ әйтелеше.

Кешелектең үҙе һымаҡ боронғо зәхмәт. Египет мумияларында бер һөлдәнең умыртҡаһында эҙҙәре һаҡланған, ти.

Нобель премияһы лауреаты, Петербург фәндәр академияһының сит ил ағзаһы Роберт Кох... Бөйөк физиолог, мәшһүр микробиолог. Африка, Һиндостан, Мальта тарафтарына сәфәр ҡылыр алдынан шәхси өй лабораторияһында шөғөлләнә, дәлилдәрен һынап ҡарай. Себер язваһының, малярияның тәбиғәтен асыҡлай. Кох таяҡсаһы әҙ-мәҙ... уф, көфөр уйҙарға тарый... ир енесенең спермаһын сырамыта түгелме? Окшаһа, тәүгеһе – үлем символы, икенсеһе – йәшәү сығанағы.

Ваҡыт-ваҡыт Лира шаулап торған дөйөм ятаҡ тормошон, вуз аудиторияларын, китапхана залдарын күҙалланы, бихисап педагогтар, талиптар араһынан таныш йөҙҙәрҙе хәтерләне.

Кемдәрҙелер һағынамы? Әлләсе... Хәйер, уның аңғармаҫтан дауаханаға эләгеүе группалаштарын артыҡ шаңҡытмағандыр: кем ауырымаҫ, тормош бит. Хатта ки, йырҙағыса, һемәйтә лә, үлтереп тә харап итә ләһә фани донъя. Ана бит, ул юлда, ул һауала, ул һыуҙа, ул шахталарҙа авариялар арҡаһында нисәмә ғәзиз ғүмерҙәр ҡыйыла, бихисап кеше енәйәт ҡорбандары була, цинк табуттарҙа күпме хәрбиҙәр ҡайтарыла... Массовый мәғлүмәт заманы: радиоға баҫ, гәзит-журналға баҡ, телевизорҙы ас, – гүйә, кешелек үҙенә ҡәбер ҡаҙый. Ә бит теләһә, әгәр аңлаһа, кешемен тигән кеше планетаны йәннәт баҡсаһына әйләндерергә булдыҡлы. Ә ул, аҡыллы һаптый, йыртҡыс һаптый, яу ҡоралдарын ишәйтергә, яңыртырға, бер-береһенең илен баҫып алырға ныҡыша. Йә, сир-зәхмәттәрҙе, аслыҡты, аҙғынлыҡты, наҙанлыҡты кәметәһе, экологияны яҡшыртаһы урынға... Ер шарының хәтһеҙ өлөшөндә хәйерселек хөкөм һөргәндә, берәүҙәр туйып һикерә, берәүҙәр зар интегә. Бер Ҡояш аҫтында йәшәп тә. Ҡасан социаль тигеҙлек хөкөм һөрөр тормошта? Әллә утопия ғынамы был?

* * *

Лира бигүк хаҡлы түгел: үҙен иҫләүселәр, «сессия алдынан бит әле» тиеберәк йәлләүселәр ҙә бар ине. Һабаҡташтары араһында ла, уҡытыусылар, хатта деканат һәм дөйөм ятаҡ хеҙмәткәрҙәре араһында ла.

Кәримованың ҡабатлап, инде махсус тикшереү үтергә тейешлеге, дөрөҫөрәге, үмерәшенең аҫҡы өлөшөндәрәк тонок беленгән, әммә керле бармаҡ осонан аҡ ҡағыҙҙа ҡалғандай сыбар эҙ барлығы хаҡында поликлиниканың фтизиатр бүлегенән вуз здравпунктына шылтыратҡастар, пунктта эшләгән Алия факультет деканы урынбаҫарының телефон номерын йыйҙы. Үҙ-ара электән таныш улар. Туған-тыумасаһын уҡырға инде-

решкәндә, йәнә бер әхирәтенең елғыуар малайы нисәнселер курста низәндер зачет бирә алмағанда әлеге урынбаҫарға – кәүҙәгә буйһыу доцентка мөрәжәғәт иткән саҡтары булғыланы. Һонтор әлегә деканатта юҡ ине, ниндәйҙер кәңәшмәнән тиҙҙән ҡайтасаҡ, тинеләр. Ханым Кәримоваға ҡағылышлы баяғы «шик» теркәлгән ҡағыҙ остоғон сумочкаһына һалып алды ла, аҡ халатын сисеп, көҙгө алдында төҙәтенеп-яһанғас, урам ашаһындағы уҡыу корпусына шәхсән барып әйләнергә булды.

Әмәлгә таянғандай, Алия Ғазиевна үҙенә тиңдәшерәк доцентты урамда тап итте. Хәл-әхүәл һорашҡас, йомошона күсте.

– Кәримованы беләһегеҙҙер. Дүртенсе курстан...

– Әллә берәй чэ-пэ бармы?

Бөҙрәбаш әллә яҡын әшнәһенә сер сискәндәй, әллә үҙҙәре һүҙ алып барған талибәне йәлләгәндәй:

– Бар ҙа, юҡ та, – тип уфтанып ҡуйҙы. – Флюорография... бронхыһына шик уята.

– Бүстәк, мин, наркота йә проституция буйынсамы, тип шыртлағайным. – Урынбаҫар, интеллегенттарса әйтмәүен һиҙенепме, өҫтәп ҡуйҙы: – Уларын да күрҙек, шулай бит. Беләһегеҙҙер, Алия... ы-ы... мин бит былтырҙары ятаҡтар буйынса ла яуаплы инем. – Ғалим ы-ылданы, сөнки ҡатындың атайы исеме хәтеренән юйылғайны.

– Һеҙ, Сулпан Байрасович, туберкулез хаҡында еңел-елпе генә уйлайһығыҙ түгелме? – Ханымдың тауышы шелтәле сыҡты.

Юҡ тигәнде аңғартып, башын сайҡағас, доцент затлы ғына күн папкаһын түшенә ҡыҫып, бармаҡтарын тыптырлатты.

– Йәл, әлбиттә, атаһы ла юҡ. Йәл... Сит илгә барып ҡайтмаҡсы ине. Чехияға, буғай. Экзамендарҙы алдан биреп. Яҡшы уҡый. Бынауҙар һымаҡ түгел инде, – урынбаҫар әлегә көндәр йәйгесә үк йылынып бөтмәүгә ҡарамаҫтан, джинсыларын ат дағаһылай ялтыр таралғылы яҫы ҡайыш менән быуып, кендектәрен дә ҡапламаған еңһеҙ блузка кейеп, нәҙек тәмәке көйрәтеп, хихылдай-михылдай эргәләренән уҙған ҡыҙ-ҡырҡын яғына эйәген сөйҙө.

– Йәш булһам, бәлкем, мин дә шулайыраҡ йөрөр инем. Нишләйһең, беҙгә икенсерәк тәрбиә бирҙеләр. – Алия ханым көлөмһөрәне лә хәтерен яңыртты.

– Ә-ә, Чехия, тинегеҙ... Йомроҡас битле, әҙ-мәҙ генә һипкелле ҡыҙ, эйеме? Иҫемә төштө: справка йүнләй башлағайны. Ҡайһы райондан һуң әле ул бала?

Доцент икеләнмәй районды атаны.

– Яҡташ түгел, һыуҙаш беҙ: «Бөркөттәр оя ташламай...» тип йырлайбыҙ. Мин – Ҡариҙелдең үрге, Кәримова урта өлөшөндәрәк тыуған, хаталанмаһам.

— Ә ауылы?

— Әйтә алмайым. — Доцент, шәфкәт туташына юл биреп, уҡыу корпусының һәлмәк һәм бейек ишегенә үрелде. — Деканатта асыҡларбыҙ. Тәнәфес етә, Кәримованы саҡыртып алырбыҙ. Кәрәкме?

— Кәрәк, әлбиттә, кәрәк.

Ҡыҫынҡы кабинетында аҡтарынып та кәрәкле мәғлүмәттәргә юлыҡмағас, доцент коридор ашаһындағы методистканы саҡырып индерҙе: тәнәфестә Лира Кәримованы табыу фарыз... Бына бит, Алия ы-ы...

— Алия Ғазиевна. — Методист ҡыҙ шәфкәт туташы менән иҫәнләште лә тәтелдеген сыҡты.

— Паспорт яңыртып, биш студентка загранкаға әҙерләнә. Сессияны тамамланылар. Декандың, проректорҙың рөхсәте менән... Мине исемлеккә индермәгән булдығыҙ, Сулпан Байрасович.

— Бөтәһен дә бер юлы тәтелдәмәсе, әҙерәк ҡалдыр, — тип әйләнмәле креслонан буйһыу кәүҙә ҡалҡынғас ҡына, ҡыҙҙың бытырҙығы бөттө. — Теләгән берәүҙе, ишеү һинең ише заочниктарҙы ла загранкаға ебәрә башлаһаң, кем уҡыр? Эш — муйындан. Бар әле, примадонна, эҙләп килтер Кәримованы.

Форсат тейгәндә типме, ҡыҙ тағы бумпылдап алды:

— Бара тиһегеҙме Кәримованы Чехияға? Бармай ул, күрерһегеҙ. Сессияны ғына алдан теүәлләргә теләй. Сөнки проводница булып аҡса эшләмәксе.

Инде декан урынбаҫары деканат уртаһына баҫып нотоҡ һөйләп ташланы. Алия Ғазиевна баҫалҡы ғына ултыра бирҙе.

— Чехия, Германия, Италия... Ә беҙ грузчик, дворник булдыҡ, бик кәрәкһә. Мин үҙем, мәҫәлән, туристик компанияларҙан сезонлы эштә — һыу, һут ташыпмы евро алып ҡайтҡан студенттарҙы хөрмәтләйем. Тимәк, меҫкенләнеп, аслы-туҡлы, ата-әсәләрен һауып ҡына диплом эләктерәм әле, тип инмәгәндәр беҙҙең престижный вузға.

Тәнәфескә саҡырып, электрон зыңғырҙаҡ ҡолаҡҡа салынғас, шул сигналды көтөп кенә торғандай, методистка сапҡындай коридорға ташланды. Студент затының ҡойроғо ҡыҫҡа — күҙ менән ҡаш араһында ғәйеп булыусандар.

— Евро... Меҫкенләнеү... Бик дөрөҫ әйттегеҙ.

Был баһаны декан урынбаҫары ҡәнәғәт ҡабул итте, буғай.

— Сулпан... Сулпан тигән һеңлем бар.

— Ҡатын-ҡыҙҙар исеме тимәксеһегеҙ? Мулла ҡушҡан — үҙгәртә алмайым! — Декан урынбаҫары аҙға ғына етдилеген кәметте. — Беләһегеҙме, Алия... Ғазиевна, йондоҙҙарҙың малаймы, ҡыҙмы икәнен астрономдар асыҡламаҫ микән берәй заман?

— Ҡыҙыҡ ҡына. — Алия ла көләкәсләнде.

## 4

Лираның «...йөрөмә» тигән киҫәтеүенә еңелсә ғәрләнгәндәй, ә юк, юк, саҡ-саҡ ҡына сәмләнеп, Данир күңеле менән Лира ятҡан дауахана тарафтарын айҡаны. Күңеле тартҡас ни, аяғы ла тартылды: китте, ҡыуһа ҡыуыр...

Университеттан диспансерға барышлай телеэкранлы автобуста йоҡомһорап та, хәтирәләргә сумып та алды.

...Лира менән, эйе, Светлана эргәһендә танышты. Светлана Данирҙы һыйлар өсөн буфетҡамы, киоскығамы киткәс, икәүара бераулыҡ гәпләшеп алдылар. Старостала ине йомошо Лираның. Әллә ни әһәмиәт бирмәгәйне лә егет мөләйем генә, йомораҡас битле, килешле генә һирәк һипкелле Лираға. Ә бына уйламағанда былтыр икеһенә бергә, икеһенә тип ни, өсөнсө, дүртенсе, бишенсе курстарҙан алты студентҡа Н. ҡалаһына юл төштө: студенттарҙың төбәк-ара ғилми конференцияһында ҡатнаштылар. Экология мәсьәләләренә арналғайны Лираның докллады. Өлкән курстан, йәнә алдынғы студент булараҡ, Данирҙы мисәүгә ектеләр, ул да ошо юҫыҡтараҡ сығыш әҙерләгәйне...

Тукта, тукта, конференциянан ҡайтып, бер нисә көн уҙғас, анау юлы, эйе, эйе, тәүге тапҡыр арлы-бирле гәпләшкән тәҙрә төбөнә нимә уйлап, ниңә ынтылғанын бер ҡасан да аңлата алмаҫтыр Данир. Ҡара күҙҙең ҡыҫҡа сыуағы ине ул мәлдә. Лираны көтәүләһә, Светлана килеп сыҡты бүлмәһенән. Еңелдән, йоҡанан кейенгән, шейпинг күнекмәһенә ҡабалана тип торорһоң. Күрҙе лә был Данирҙы, бойорған һымағыраҡ бүлмәһенә әйҙүкләне. Ихлас ине саҡырыуы, үҙе лә шат ине. Сәйгә ҡыҫтаны ҡыҙый. Һүҙ юк, өҫтәл йәйә белә Светлана. Юғиһә, ана, әйтә бит үҙе: сәй ҡайната ла белмәгән студентҡалар осраштыра. Бигерәк тә «детдомовскийҙар», хәлле ғаиләлә тыуғандар араһында. Студенттарға ла арлы-бирле байрам билдәләргә форсат табылғылай. Шул саҡта Светлана күптәрҙе салат-малат турарға, ҡоймаҡ ҡойорға, хатта бәлеш ҡыҙҙырырға өйрәткеләй икән.

...Данирға уйламағанда тағы Светлананың сәйен, ә юк, ул юлы тәмле кофеһын эсергә насип итте. Данир дипломатынан литрлыҡ ҡаплы һут сығарҙы. «Саҡырайыҡмы Лираны?» – тип һораны ҡыҙ, егеткә хәйлә ҡатыш һынамсыл ҡараш ташлап. Яуап биреү урынына Данир яурынын ғына һелкте.

– Өс-дүрт подружка һуңғы лекциянан ҡайҙалыр тайҙы, – тип юрый алдаҡ хәбәрен еткерергә лә өлгөрҙө Светлана. – Фирмач әзерҙәр* килгәйне ике иномаркала. Хаталанмаһам, «Золотая рыбка»ға һыпырттылар. Кажись, Лираны ла әпкиттеләр. Ә һин мине саҡырмайһың да берәй ергә...

---

*Әзерҙәр – әзербайжандар.*

Йәнә яурыны хәрәкәтләнде егеттең. Оҙаҡ ултырманы Данир, тынсыу һымаҡ булып китте. Мөләйем генә рәхмәт әйтеп, урамға ашыҡты. Хатта дәрестән ҡайтып килеүсе ҡыҙҙар араһында үҙенә боролоп-боролоп ҡараған Лираны ла шәйләмәне.

Аңлаштылар аҙаҡ, һәүетемсә аңлаштылар. Һәр хәлдә, араларынан ҡара бесәйҙең еле генә ҡағылып уҙҙы, ә Светланаға ҡарата икеһендә лә ышаныс кәмей төштө. Инде Данир ятаҡҡа аяҡ баҫмаҫҡа тырышты; Лира менән күберәк республика китапханаһының халыҡ бигүк эркелеп йөрөмәгән фән залында осраштылар, һирәкләп кинотеатрға ингеләнеләр, бер тапҡыр «Һылыуҡай» конкурсын ҡаранылар.

Студент тигәс тә, аҡсаға бигүк мохтажлыҡ кисермәйҙер Данир. Гелән өҫтәлмә стипендия алып уҡыны, былтыр, ана, президент стипендиаты ине. Әсәһе лә, атаһы ла кәрәк кенә нәмәһен алырға, һораһа-һорамаһа ла, үҙҙәре аҡса бирә.

...Иҫтәлектәрҙән тиҙ арынды Данир. Лира тырт-мырт һөйләшһә, ни ҡылыр? Улай ҙа ҡыҙ аҫҡа кәйефле генә атлап төштө. Бәй, һис тә ҡурҡыныс сиргә тарыған кеүек түгелсе. Бирһен Хоҙай...

– Ниңә килдең, Данир? Йөрөмә, тип әйттем дә инде...

– Ә ниңә килмәҫкә?

Сәскәләре тумала башлаған ҡыуаҡтар янындағы эскәмйәгә алдан барып ултырҙы Лира. Ултырҙы ла, ике усын битенә ҡаплап, бармаҡтары аша Данирға текәлде. Быны шәйләп, егет тәүҙә ғәжәпһенде, шунан көләмһерәп ҡуйҙы, ҡыҙ ҙа, йылмайып, усын яҙып ебәрҙе, әйтерһең, ҡоңғорт һипкелдәрен көнгә күрһәтергә ашыҡты.

– Бында йөрөгәнеңде Светлана күреп ҡалһа әле!..

Данир тубығына ҡунған себен кеүегерәк бер мәхлүкте сиртеп осорҙо. Үҙен һаман ҡыйыуһыҙ тота егет күперем сәсле ҡыҙ алдында. Ә бит көфөрөрәк, дөрөҫөрәге, аҙғыныраҡ уйҙар менән аралашырға самалағайны тәүҙәрәк. Уның тиҫтерҙәре, ана, ҡыҙҙырҡынды бирсәткә урынына алыштыра – береһен ала, береһен һала, тигәндәй.

* * *

Методистка ҡушҡанын үтәргә ашҡынып кабинеттан сыҡҡас, доцент ҡатынҡайға көнһелсәгерәк һүҙ ҡатты:

– Хәтергә төштө: бер медосмотрҙа һеҙ – ул саҡта, һай, сибәр медичка! – Беҙҙе инәнән тыума сисендереп ҡаранығыҙ ҙа эсемә шап һуғып: «Чистенький!» – тигәйнегеҙ. Сөнки булмәләш егеткәй ҡысытҡы менән сабаулап йөрөгәйне.

– Ихтимал, – тип көләмһөрәне шәфҡәт туташы, һәм «һин»гә күсте. – Икмәгең шул булғас ни... Ҡайҙа, Сулпан, шул процедураны әле лә ҡабатлай алам.

Бая скверҙа башланған, әле кабинетта дауам иткән сетерекле, нисектер һауала аҫылыныбыраҡ торғандай күңелһеҙ әңгәмәне тиҙерәк осларға теләнеләрме, икәүһе лә рәхәтләнеп көлөштө. Нәҡ шул саҡта, Светлананы эйәртеп, методистка килеп инде. Ғәҙәттәгесә, үҙен урынбаҫар алдында иркен, ҡылансығыраҡ тотмаҡсы Светлана, көлөүенән туктап, ҡапыл етдиләнгән шәфҡәт туташын күргәс, үҙен ҡулға алды, һығылмалы кәүҙәһен турайтты. Доцент бер ултырып, бер тороп, ҡыҙҙарға эш ҡушты: ярҙамсыһына – Кәримованың аныҡ ҡына адресын яҙырға, старостаға – курсташы Лираның әле ҡайҙалығын әйтергә. Лираның ҡайһы райондан икәнлеген, тик ауылының исемен генә онотоуын, кисә, ә юҡ, элекке көн уның үҙ төйәгенә ҡайтып китеүен өҙә-өҙә әйтеп, көнсөллөктәнме, Кәримованың имтихандарҙы алдан биреүен Светлана өндәшмәне, ә бына ике медик ҡыҙҙың уны эҙләп ятаҡҡа инеүҙәрен үсәгәндәй еткерҙе. Әммә Лираның ни өсөн ҡайтып килергә йөрөүен дә телгә алманы. Хәйер, был хаҡта бер һүҙ ҡуҙғатып, ауыҙы бешә яҙғайны инде.

– Уны ни эҙләп, әлеге һымаҡ адресын төпсөнөп киттеләр ҙә инде. Заразаһы...

Сулпан Байрасович уға күҙенә ҡарамай ғына бармаҡ янаны.

– Ашыҡма һығымта яһарға, иптәш староста.

– Дөрөҫ, улай ярамай, – тип йөпләне Алия Ғазиевна доцентты һәм фекерен төйнәп ҡуйҙы. – Беҙ бары уның медкарточкаһын тиҙләтергә генә тейешбеҙ. Ни өсөн икәне һеҙгә билдәле: загранка...

Старостаның ҡапыл ғына төҫө үҙгәрҙе: ҡарағусҡыл күҙҙәрендә зәһәр осҡондар уйнаҡлашты, оҫта ғына ҡыйғаслатылған ҡаштары, оҙонайтылған керпектәре һикереште. Сөнки юҡтан ғына Лираны нисек Данир менән таныштырыуы иҫенә төштө лә ҡуйҙы; ана шул хәтирә бер мәлгә эс-бауырын көйҙөрөп алды.

Таныш Светаға Данир. Беренсе гимназиянан уҡ әҙ-мәҙ һәм вузда – нығыраҡ, икенсе курстан уҡ. Әллә профком ултырышында, әллә старосталар йыйылышында йәнәш ултырғайнылар. Һ-м, күркәм генә егеткә әйләнгән. Өндәшмәҫерәк булыуы ла ҡыҙыҡ. Ҡыҙ артабан унда-бында осратып, егеткә үҙе башлап һүҙ ҡатты, төрлөсә һөйләндерергә, әүрәтергә маташты. Ыҡҡа килмәне тегеһе. Шараптар алып, аулаҡлап тыуған көнөнә саҡырҙы – килде лә теге, ғәфү үтенеп, әҙ генә ултырғас, өйөнә йыйынды. Йәнәһе, әсәһе сирләгән. Ә-ә, шулай ҙа Яңы йылға арналған студенттар балында әҙ-мәҙ икәүләшеп бейенеләр, имеш, әле. Атаһы – ғалим кеше, өҫтәүенә, эшҡыуар. Әйтерең бармы, хәлле, булдыҡлы кешеләр, замана кешеләре. Шуларҙың «килен»

тийеүен ишетеү яҙыҡ булыр инеме ни? Аҫтына ятҡанда, ә-ә? Фу-у, көфөр... Бәй, ундай теләге лә юҡ түгел. Ә ниңә, ана, Дим буйынан яҡташ, яҡташ тип ни, ике туған апайы асыҡтан-асыҡ кәпәренә хәҙер. ...Студенттар – «филологинялар» һәм «сельхозниктар» йыйналған бер мәжлескә. Шунда апаҡайы буласаҡ агрономға диҡҡәт булә: тиҙ үк иҫерә лә теге, болғанмай-нитмәй, ята ла йоҡлай бының койкаһына. Ә үҙенә ҡармаҡ һалған икенсе бер тәтәй ветеринар тәкәтен генә ҡорота: ул йырлаһынмы, ул гармун быҫҡылдатһынмы, ул тәҙрәгә менеп бейеһенме, ул үпәсләшергә маташһынмы... Ҡарап ултыра торғас, өләсәһенең кәңәше иҫенә төшә бының. Кейәүгә барам, тиһәң, егетеңде эсереп һына: иҫергәс болғандағанын түгел, эскәс тә ятып йоҡлағанын һайла, тигәнме... Бәй, был йоҡосо егет минең буласаҡ ир түгелме, үҙе койкаға килеп ятҡан бит, тип мәрәкәләйем үҙемдә. Хатта аҙаҡ, аяҡлаш ятып, сырым итеп алдым, ти, хәҙер. Уйнап әйтелгән һүҙ... тиҙҙән бойомға аша. Хәҙер, күр, матур апайы етеш кенә донъя көтмөш Дәүләкәндә. Кешенең йәшлектәге холҡо үҙгәрмәй микән, хәҙер ҙә еҙнәкәйе – ыҡсым ҡалала апаруҡ түрә – бер-ике рюмка һелтәнеме, башын ҡыйшайтып ҡына бара ла ауа түшәгенә.

Эйе, бынан ике йыл элек үҙе таныштырҙы, йүләр, Данир менән Лираны. Данирҙы Света ятаҡта тап итеп, бүлмәһенә алып ҡайтты. Бүлмәлә Лира ғына, урыҫ ҡыҙы кәсептә – парфюмерия һатырға ятаҡтан ятаҡҡа сығып киткәйне. Света уларҙы таныштырҙы ла, ултырып тор, һөйләшә торолоҙ, тип үҙе тәмтом алырға йүгерҙе ҡаршылағы киоскыға. Ул әйләнеп килгәнсе, әлбиттә, егет менән ҡыҙ, хужаһыҙ бүлмәлә ултырмайынса, Лираларҙың бүлмәһенә ҡаршы фойе һымағыраҡ бер майҙансыҡта, онотҡанда бер емеш биргән дәү лимон эргәһендә, тәҙрәгә таянып, һин дә мин гәпләшеп тормаһындармы. Һирәк йылмайыусы Лираның хатта ауыҙы йәйелгән. Ғәҙәттә ыҡ-мыҡ ҡына гәпләшкән Данир, ҡулдарын йәйгеләп, әллә ниҙер һөйләмәксе. Лира, ну-у маладис, һирәк-мирәк Светлананың бүлмәһе яғына күҙ һалғылай: ҡайтманымы староста, ят кеше инеп ҡуймаһын. Бүлмәһенән берәй флакон затлы хушбыйы юғалһа, тереләй йотор. Хәйер, кем инһен, беләләр бит инде Светаның кем икәнен. Дуҫ итә белә кешене, ә дуҫ булдымы, ҡол итер; ҡолдо һатып ебәреү иһә яҙыҡ һаналмай уға.

Һиҙенде шул саҡ Света, үкенде: ҡайҙан ғына бүлмәһендә ҡалдырҙы икәүһен... Ҡара, бөтә ғәләм алдында нисегерәк сут-сут киләләр! Яҡыная биреү менән, ғүмер буйы аралашҡан кешеһенә өндәшкәндәй, Данирға ҡул иҙәне:

– Сәй ҡуя торһаң ни була? – Үҙе шул арала Лираның гонаһһыҙ сырайына күрәш әҙәмдәй секерәйеп ҡараны. – Лирочка, әйҙә беҙҙең менән сәй эсергә.

Сакырыуҙың ихлас түгеллеген шундук төшөнгән Лира рәхмәт йөҙөнән Светаға, ә Данирға, хушлашкандай, «ат ҡойроғо» һымаҡ үрелгән күперем прическаһын һелкеп, үҙе яңыраҡ күсенгән Элина бүлмәһенә юрғаланы. Данирҙарҙың конференцияға юлланасағын ишетеп, Светлана ярһып-тулап ҡарағайны ла, үҙен яҡшы белгән кафедра мөдире лә, декан урынбаҫары ла, хатта проректор ҙа ярҙам итә алманы. Конференция – үҙенә күрә һабантуй ул, ә һабантуйҙа, гәҙәттә, аттың атын бәйгегә дәғүә итерҙәйен һайлайҙар. Ҡыйынлыҡ менән эсенә йомдо был еңелеүҙе Светлана. Оҙаҡ ҡына кәмһенеп, намыҫланып йөрөнө.

...Волга буйындағы Н. ҡалаһынан ҡайтҡастары, Данир менән Лираның нисек сығыш яһауҙарын, ситләтеп-митләтеп кенә икәү-ара үҙҙәрен нисегерәк тотоуҙарын төпсөндө. Әлбиттә, делегация етәксеһенән түгел, ә күрше факультетта уҡыған, үҙен һәр йәмәғәт эшендә лидер итеп тойған йылмаяҡ украин ҡыҙынан төпсөндө. Бының халәтен һиҙгәндәй, тәмләп-тәмләп, маҡтана биреберәк сутырланы теғеһе. «Сура» тигән ҡунаҡханала йәшәгәндәр, һәр кис күңелле дискотека-шоу ойоштороғандар, боронғо быяла иретеү заводына экскурсия яһағандар. Арыу ашатҡандар. Тағымы? Үҙенә йөкмәткеле докладағы өсөн аҫыл ваза бүләк иткәндәр, Данирға ярты стипендия самаһы аҡсалата премия тоттороғандар; Кәримова бит әле, уға диплом, ниндәйҙер альбом биргәндәр. Данир йомарт икән: ике «Шампанское», ҡиммәтле кәнфит алып, «команда»ны һыйлаған. Ҡунаҡхананан арыраҡ бетон яр башындағы кафела Сура тулҡындары берсә ағарып, берсә киске шәфәҡ нурҙарына ҡыҙарып ары-бире йүгерешкән саҡта... Тағымы? Данир менән Лирамы? Улар ни гелән тиерлек бергәләп йөрөгән. Ана шул аулаҡ кафела иртәгеһенә үк сөкөрҙәшеп туңдырма ялап ултырғандар... Ни хикмәттер, Светлана, беләгендәге затлы сәғәтенә текәлгән булып, тәьҫораттары, йәғни мәғлүмәттәре өсөн рәхмәт әйтергә лә онотоп, тыҡ-тыҡ баҫып китеп барҙы. Атлауҙары ла, төҫө-сырайы ла үҙгәргән бисараның...

Әле бына ике-өс йылғы хәтирәләренән ойоған Светлана ишекте ҡатыраҡ япты ла, кәнфиттән өлөш тәтемәгән бала ише турһайып, шау-шыуы йайлап баҫыла барған коридорҙан атланы. Ҡайһылыр аудиториялар ишегенә «Шымыраҡ! Имтихан бара...» тигәнерәк яҙыуҙарҙы, бөгөн күргәндәй, ҡабатлап уҡыны. Имтихан... Диплом алғансы йөҙҙән ашыу имтихан бирәһең, ә тормошта – көн һайын...

* * *

Алия Ғазиевнаның иһә клиникалағы коллегаларына һарыуы ҡайнаны: үҙҙәре эҙләгәс, ниңә вуз здравпунктына шылтыратып,

башты ҡаңғырталар? Шулай ҙа ул деканат биргән адресты күсереп алды.

Тукта, тукта, «Олотүз ауыл Советы» тиелгән. Бәй, элек шунда йәшәнем, хәҙер райүҙәктә эшләйем, тигәйне ләһә былтыр Өфөлә яҙатайым ғына осраған Клара – бынан егерме өс йыл элек республика медучилищеһында бергә уҡыған Инйәр ҡыҙы, йәшлек әхирәте. Олотүздә йәй бигерәк хозур: еләк, бәшмәк, балыҡ, ғаиләң менән кил, машинала ике сәғәтлек кенә юл, тип ҡунаҡҡа ла саҡырғайны. Ихлас саҡырғайны. Училищенан һуң йүнәлмә менән «отработка»ға киткәйне, кейәүгә сығып тороп ҡалыуын, артабан уҡый алмауын, хәҙер яңғыҙ көн күреүен дә уфтанмай ғына һөйләгәйне. Хәйер, Алия ла уҡый алманы шул врачлыҡҡа, имтиханда балл тигән ҡәһәрҙе тултырманы. Ул да күптән кейәүҙә, күптән балаға батҡан. Үкенәме? Үкенеүҙән ни фәтүә?

Ҡарар күҙгә һөймәлекле генә ханым әллә ҡырыҫыраҡ, әллә шулай эшлекле, олпат күренергә тырышҡан доценттан Кәримова тыуып үҫкән район дауаханаһын телефондан тоташтырыуҙы һораны, бер ыңғайҙан, беҙгә ҡала-ара бәйләнеш өсөн түләмәйҙәр, тип зарланды. Һүҙһеҙ ризалашты ҡыҫынҡы кабинет хужаһы. Район элемтә бүлегендәге телефонисткаларҙы ар-лы-бирле мәрәкәләп, шул арала шәфҡәт туташы блокнотынан яҙа һалып биргән номерҙы таптырҙы. Әмәлгә таянғандай, теге оста кәрәкле кешене – Клара Булатовнаны тиҙ үк саҡырып килтерҙеләр. Ике шәфҡәт туташының әңгәмәһенә ҡамасауламайым тигәндәй, Сулпан Байрасович эскә ҡараған ишекте шар асып, ҡабарынҡы ҡорһаҡлы, ҡалын күҙлекле, фу-у, салбары үтек күрмәгән профессор эргәһенә коридорға ашыҡты. Доцент сыҡҡас, элекке әхирәттәр таныш-тоноштарын барларға, хатта әҙмәҙ ләстит һатырға ла өлгөрҙө.

Дәү эш башҡарғандай, еңел тын алып һалды трубканы Алия. Ана бит, Кәримовтарҙы белә ләһә Клара. Олатаһы, өләсәһе шәп кешеләр ине, әсәһе лә һәйбәт, тик йәл – студентканың атаһы ғына әллә хәбәрһеҙ юғалды, әллә һыуға аҡты, тиме. Ярай, берәй саҡ рәхмәт кенә әйтер үҙен ҡайғыртҡан өсөн меҫкен ҡыҙ. Әйтер ине Лира, шикһеҙ әйтер ине, тик ул ике шәфҡәт туташының әлеге һөйләшеүен ҡайҙан ғына белһен, ти. Хатта, ана, Лираның әсәһенә лә артығын сиселмәне ләһә Клара түтәйҙәре.

* * *

Данирҙың кеҫәһе көй сыңғыратты. Ҡайһыһы тигәндәй, егет кеҫәһенән ике телефон тартып сығарҙы, берәүһен ҡолағына терәне. Үҙе «эйе», «юҡ»тан уҙмай ғына кем менәндер һөйләшкән арала, икенсеһен Лираға һондо. Ҡыҙ уны әйләндереп-

тулғандырып ҡараны, һыйпаштырҙы ла, шикелле. Тимәк, баш тартмай.

– Атайым шылтырата...

– Аҙыҡ-түлек алып ҡайтырға ҡушамы?

– Юҡ, уныһына мамочка өлгөрә. Атам әйтә: әсәңдең тыуған көнө икәнде онотманыңмы, ти.

– Онотманыңмы һуң?

– Иҫкә төшөрҙө бит атай. Ай-һай, сурьез, ул аспирантураға димләне. Бая бер шәп кенә китап осраттым әле. – Данир дипломатынан ҡалын ғына китап алып күрһәтте – тышына «Философия науки» тип яҙылған.

Бер аҙ өнһөҙ ултырғас, Лира уйламаған юҫыҡтан һүҙ ҡатты.

– Ҡыҙыҡ, һин башҡортса минән таҙараҡ һөйләшәһең түгелме?

– Атай ҡуша шул, – тип көлөмһөрәне егет. – Унан бигерәк, Өфөнөң «беренсеһе»ндә өс йыл уҡып индем вузға.

– Беләм, данлы, интернатлы мәктәп. Миңә лә шунда урынлашырға мөмкинлек бар ине, һигеҙҙән һуң. Ҡустымды йәлләнем. – Лира, ауыр һулап, урынынан торҙо. – Ярай, пока.

– Ваҡыт күп бит әле.– Данир сәғәтенә текләй-текләй ҡалҡынды. – Шылтыратырмын, йәме.

Быны ишеткәс, ҡыҙ кире ултырҙы.

– Йә һуң, өйрәтеп ебәр. Палатала бер ҡарсыҡ, ҡыҙым, йүнләп күрмәйем, шунса номерҙы йыйып бир әле, тигәс, белмәйем, тигәйнем, әй, тотондо мине өйрәтергә. Үҙе көлә, күршеләрҙең алты йәшлек малайын илле тәңкә аҡсаға яллап, өйрәнеп алдым, ти.

Данир тәфсирләп телефон буйынса һабаҡ бирергә керешмәксе ине, үҙен Лира тыйҙы.

– Әбекәйҙән өйрәнермен әле. Аппаратың өсөн рәхмәт, байығас түләрмен, тиҙәрме.

– Бүләк тип уйла, Лира.

– Бүләкте байрам уңайынан бирәләр, ғәҙәттә... – Лира бошонҡо ҡиәфәттә яй ғына үҙ корпусы яғына ыңғайланы. – Бынау хозур көндә ошонда ятсы...

– Тиҙерәк төҙәлеп сыҡ та, Ҡашҡаҙанда һыу инербеҙ.

– Шәп булыр ине лә... Сипайлованы Һупайлы, Осоргиноны Үҫәргән тип ҡай берәүҙәр, аңын-тоңон белмәй, үтә башҡортлаштырып ебәрә, тигәйнеңме әле?

– Эйе, элек унда Сипайлова тигән даманың дачаһы булған. Осоргин тигән әҙәм Осоргино имениеһын тотҡан.

Лира ҡапыл туҡтап, борола биреберәк ҡарағусҡыл йәшкелт күҙҙәрен егеттең ҡоңғорт күҙҙәренә иламһырап төбәне.

– Данир... Беҙ Ҡашҡаҙан ярында үбешкәйнек. Иҫеңдәме? Һин дә рентген үт. Йәме! Юғиһә, бүләгеңде кире бирәм...

Аңкы-тиңке калды егетебеҙ, иләҫ-миләҫ кабаланды кыҙыбыҙ.

Төнгө ундар тирәһендә һин дә мин һөйләштеләр шулай ҙа. Лира рентгент мәсьәләһен кабат кабырғаһы менән куйҙы, кала диспансерына юлды өйрәтте, ундағы тәртиптәрҙе аңғартты. «Мобильный» һөйләшеүҙәре урыҫса осланды.

– Лирочка, выздоравливай скорей...

– Я постараюсь... Благодарю за поддержку.

Бая данлы интернат-мәктәпте иҫкә алғанда, Лираның тел осо кысыңкырап, Светлананың унда бер йыл ғына укып, әллә кыуылып китеүен, әллә... асығын белмәгәс, шул вакиғаны куйыртырға теләгәйне лә, әҙәп һакланы. Асығын белмәгәс, яратмаған кеше хакында ла юк-бар һөйләү ғәйбәткә һаналасак. Улай тиһәң дә, Светлананы һөйһөнмәгән әллә кемдән ишеткәйне. Имеш, Светик унда «режим боҙғолаған», унан бигерәк дежурҙа сағында «иҙән йыуырға... мине кемгә һанайһығыҙ» типме, иҙән йыуыуҙан, урам һепереүҙән баш тарткылаған, алдашкан, үҙен тәкәббер тоткан, һөҙөмтәлә бергә укыған синыфташтарын үҙенә каршы куйған. Тәрбиәсе апайҙары ла аумакай-йомшакай булмаған, тиме, кем балаһы булыуына карамаҫтан, интернаттың туғыҙынсымы, унынсымы синыфына кабул иттермәгән. Бығәйбә, бәлки, ләстит кенәлер.

## 5

Фәнидә төндә һаташып-баҫлығып уянды. Куркыныс төш ялтланы зиһенендә, тик тиҙ үк онотто; бар булмышын донъя ысынбарлығы ялмап алды. Кыҙыкай ғынаһы, ғәзизкәйе нисек кенә икән? Ул да йоклай алмай интегәлер, бахыркай.

Катын йәйенке генә бейек карауатынан тороп, ут кабыҙмай ғына бер аҙ ултырғас, алты мөйөшлө өйҙө булгән такта стенаға һөйәүле диванда иҙерәп яткан Тимурҙың юрғанын рәтләне. Төндә лә апарук якты уларҙың өйө. Калкыуҙа һалынғанға түгел, тәҙрәләре күп булғанға. Якты булһын өйөбөҙ, тип тырышкайны ире лә, үҙе лә. Фәнидә, кәрәк икән, Барыйға баҙын да каҙышты, бүрәнәһен дә һөйрәште. Рәхмәт яуһын өмәселәргә – ирҙәр күп ине элек. Кайныһы ла, ожмахка ингер, эскерһеҙ ярҙамлашты. Аҙак мактаныбырак та йөрөнө, буғай. Йәнәһе, «килендән уңған, малайҙың да брамбелаһы (проблемаһы) юк». Кушнаренко техникумын тамамлағас, Фәнидәгә ошо ауылға – колхоз үҙәге элек ошонда ине – юллама тотторҙолар: Бурашка. Тәүҙә үҙҙәренә, урманлы якка, кайтмағанына үкенә биреп тә куйғайны ла, Акшиҙелә һөнәре буйынса эш табылманы, сөнки унда кортсолокка көслөрәк иғтибар. Бына шулай йоморокас битле агроном

ҡыҙҙы, һирәк һипкелле ҡыҙҙы – үҙе матур, үҙе егәрле Фәнидәне егет-елән, айырыуса армиянан ҡайтҡандар, уларынан бигерәк ата-әсәләре, еңгә-еҙнәләре күҙләргә, үҙенекеләргә димләргә тотонмаһынмы! Өлгөрөрәк, етеҙерәк булып сыҡты Барыйы. Бәй, ауыл хужалығы хеҙмәткәрҙәре көнөн байрам итеп күп тә үҙмағайны, ҡырпаҡ ҡар ятты. Көн һорап, Фәнидә ауылына ҡайтып килергә теләне. Понтон күпер бар ине әлек, бары тик яҙғы ташҡындарҙа ғына эшләмәҫ ине. Колхоз рәйесе район үҙәгенә тиклем машина бирҙе, артабан ҡыҙ эләгеп-һарҡып саҡ ҡайтып етте. Бисмилла, иртәгәһенә дуҫының «Урал» мотоциклына ултырып, мул ғына күстәнәс тейәп Барый килеп етмәһенме! Мылтыҡ һалып алғандар... Көлә: «Әйттем бит, яусы ебәрәм йә үҙем киләм, тип». Әйткәйне шул, әйткәйне. Тик бигүк ышанып етмәгәйне Фәнидә. Шаярталыр, тип тә уйлап, үпкәләмәгәйне. Ҡыҫҡаһы, егеттәр мәсьәләне ҡаты ҡуйҙы: һоратырға килдек! Фәниҙәнең әсәһе яңғыҙ ғына тора, ул осор ике апаһы, балаға батып, күрше ауылдарҙа йәшәп ята ине. Мәрхүм атаһы урынына ҡалған ҡорошҡаҡ сырайлы сирләшкә ҡустыһын ғына саҡырып килтерҙеләр. Ул ни ыҡ та мыҡ. Әсәһе шунда:

– Беренсе яусылаған кейәүгә барыу хәйерле. Яҙмышыңды үҙең хәл ит, – тимәһенме. – Тәү һораткан кейәү Хоҙайҙан, тиҙәр.

Ҡыҫҡаһы, арлы-бирле мәжлес ҡороп, никах уҡытып, туйҙы Яңы йылға билдәләп, ике кис ҡауышып, буран борхотоп ҡайтып төштө яңы ғаилә Бурашҡа... Сания әбейгә өйҙәш ине Фәнидә.

Фәнидә, яурынына шәлен ҡаплап, ихатаға сыҡты. Алмағастар, баландар сәскәһен ҡойоп бөтмәгән әле: был тирәгә яҙ йыл да һуңлабыраҡ килә. Һалҡынса шулай ҙа. Ҡапҡа яғына барып, ҡойма ярығынан Иҙелгә күҙ һалды. Ҡәһәр һуҡмағыр! Ҡайҙа иттең Барыйҙы? Сер бөркөп ашҡынып, ялтырап аға, күктә йөҙгән һирәк болоттарҙы, гүйә, өҫтөнә йөкмәгән. Ҡайҙалыр ауыл сәғәте – әтәс кикирикләне. Мин дә бар әле, тигәндәй, Фәнидәнеке лә кетәгендә яр һалды, ҡанаттарын ҡағыштырҙы. Һыйырымы, быҙауымы мөңрәп ҡуйҙы.

Йоҡо алманы Фәнидәне. Барыйы – юҡ, инде Лираһына зәһәр зәхмәт янай. Өйгә инде. Мыяулағас, бесәйенә һөтөн яңыртып бирҙе. Был бесәй түгел, тегеһе, ҡартайып үлгән кәнтәйе, Барый эҙһеҙ-хәбәрһеҙ юғалғас, әлеге ише йоҡлай алмай мейескә терәлеп илап ултырғанда... битенән тамған күҙ йәштәрен ялап алғылай торғайны хатта. Мәхлүк тиһәң дә, ғәжәп зирәк, һиҙгер була бәғзе бесәйҙәр. Оло ҡайғыларға һалды бит Барый. Әсәһе бөксәнләп сеңләне, атаһының сәсендә ҡырауҙар ишәйҙе. Хатта тора-бара өс йәшлек кенә Тимурҙың... уф, Аллаҡайым, йөрәк тибешендә аритмия моронланы, Лираның күңеле болоҡһоно, сырайы йышыраҡ болотланы.

Ярай, түҙергә кәрәк. Түҙ, Фәнидә, һин түҙергә өйрәнгәнһең.

* * *

Колхоз таркалып, мөлкәте осһоҙға ғына бүленеп-таланып бөткәс, Бурашта үҙенә кулай бер эш тә күренмәгәс, Фәнидә Сасынға барып, тәүҙә агрокооператив агрономы булып эшләгәйне, хәҙер уның мәшәкәте киңерәк: малдарға ла, игендәргә лә, емешеләккә лә яуап бирә. Эйе, «сельхозвуздың ике курсын заочно бөткәнһең» тип, Фәниҙәнең теләгенә каршы килмәнеләр. Хеҙмәт хакы акмаһа ла, ите, майы, кәбеҫтә-маҙары тамып тора. Шөкөр, хөкүмәт тә ғаиләһен ярҙамдан мәхрүм итмәй, арлыбирле «атайһыҙлык» пособиеһын биреп тора. Лираһы ғына аякка баҫып, укып бөтһөн дә, мандып китерҙәр әле бер заман. Донъяһы, ана, ир кулына етемһерәгән төҫлө, әммә ауып бармай; һөйөндөрөп, Тимуры ла тыңлаулы, атаһына окшап, тегегәбыға әүәҫ кенә.

Хәҙер Тимурҙың иртәнге тамағына ярыштырыр ҙа, үҙе сәй менән генә хушһынып, иртәрәк куҙғалыр эшенә. Аяҙ бөгөн, юл да короғанға окшай, туғайҙан велосипедта елдерер. Өс сакрымды ни?! Һыу-һүл ташканда, өҫтән яуғанда тау битләп йәйәү йөрөргә ғәҙәтләнгән. Унан турарак та. Кооперативтары кеүәтһеҙерәк шул әлегә, табыштары аҙ, шуға Фәнидәгә тәғәйен машина бирелмәгән әле. Вәғәҙәләре бар ул йәһәттән хужаларҙың. Хужа тигәс тә, «Сасын»да – Николай исемле, Иванай фамилиялы кәүҙәгә тыңкыш ирекәй рәйес. Һораған сакта, бигерәк тә караңғы төшөр алдынан һорамаһа ла, «Нива»һын биреп, кайтартып та куйғылай. Тәтәй кеүек шәхси «Хундай»ы бар, уныһын аяҙҙарҙа һирәкләп үҙе йөрөтә.

Иртәрәк кайтты эшенән Фәнидә: тағы Өфөгә юлланаһы бар. Әйтә лә ул кыҙы, йонсоп йөрөмә, бер ни ҙә кәрәкмәй, тип. Әйтеүе әйтеү, йөрәк түҙәлер шул. Рәхмәт төшкөрө, әҙерәк процентка кредит алырға ярҙамлашам, Өфөгә машина ебәрәм, бер-ике көндән, ултырып барып кайт, тип һөйөндөрҙө әле Николай Тимерәйевич.

Түбән оста ауылға инер алдынан Фәнидә самокатынан төштө лә, руленән этәреп, яр буйына – иң ситке урамға тартылды. Күҙ һалып кайтһын әле кайныһы мәрхүм йортона.

Кеше йәшәмәгән өй барыбер ҙә котһоҙға, караусыһыҙ ояға әйләнә. Ихатаһын үлән баҫырға әҙер, кыйшайған-аушайған каралты күренештерә. Кереп тормаһа ла ярай; оҙакламай берике әхирәтенә өндәшеп, хужалыкты һипләштереп-йыуыштырып алыр. Кемдеке – шуныкы, тимәһендәр. Мираҫ таһа был, иҫкерһә лә, әлегә ныклы йорт-кура. Ултырышы матур урында. Кырк аҙымдан ғына эре тирәктәр, сак кына арырак – мул һыулы йылға. Капыл ғына колағында һикһәнде кыуған кайныһының васыяты салынғандай тойолдо: «Балалар, үҙ хәлемде

беләм – күпкә бармам. Әллә ни малым юҡ, һаҡлыҡ кассаһындағы йыйынтығымды бүлешерһегеҙ. Мишкәләге баш балама, Нөрлөләге кинйәбикәмә – аҡса булыр. Аҙ булһа ла, күп күрегеҙ. Әҙәм көлдөрөп, был өйгә, йәғни нигеҙгә, аслан талашмағыҙ: Тимур ейәнемә мирас итәм. Донъя бер алдын, бер артын күрһәтә торған, кем белә, Бураш та ҡабат мандып китер, бәлкем. Эй, заман, ошо тирәгә олатайҙар, бигерәк йәмле урын тип, һыйынған борон. Тәфтиләү ҡырғынынан ҡасып, бәғзеләребеҙ Әтнәш яҡтарынан күсенгәнбеҙ, тип тә һөйләй торғайнылар. Мине ерләгәндә эсеп-боларып йөрөмәгеҙ, йәме...»

Аҡылы алдан күреп, фәһемле васыят әйткән ҡайны ҡарты – балаларының дәүатаһы. Бер айҙан донъя ҡуйҙы, ҡәҙерләп ер ҡуйынына һалдылар үҙен. Кинйәбикәһе мирас мәсьәләһендә тызандап маташҡайны, Мишкәнән килгән ағаһы ҡабат был хаҡта ауыҙ ҙа асмастай итеп тыйҙы үҙен.

Әле Фәнидә икеләнеп ҡайтып килә... Лираны тиҙерәк һауыҡтырыу өсөн өҫтәмә ҡиммәтле дарыуҙар ҡамасауламас, ти табиптар. Кәрәктер инде. Тик ҡайҙан тапһын бала үҫтергән-уҡытҡан тол ҡатын ҡапылда утыҙ-ҡырҡ меңде? Ундай аҡса урман һуҡмағында сәселеп ятмай, ятҡан хәлдә лә, гонаһҡа батып, оронмас Фәнидә – һәр мөлкәттең шәхсән эйәһе бар фани донъяла. Әле шуға Иванайҙың «машина... ссуда» тигән вәғәҙәһенә елпенеп ҡуя өмөт ҡошсоғо. «Әллә бынау өйҙө, ихатаһы-ние менән егермегә генә елгәрергәме? Ҡуй, дәүатай васыятын боҙоу килешмәс!»

Шик-шөбһәләренән ҡотолорға самалапмы, бисара ҡатын самокатына йәбеште. Урамда кемдәрҙер уның менән ихлас, кемдәрҙер һынамсыл иҫәнләшкән кеүексе. Әллә беләләрме теге сирҙең имәнес серен. Юҡтыр... Һәр сирҙең дә барҙыр үҙ сере... Хәйер, ҡайһы дауаханала ятҡанын йәшереп булмай, шуға ҡарап шыш-быш килеүҙәре ихтимал.

Элекке понтон тапҡырына еткәс, кемдер яр яғынан ҡул болғаны: «Фаечка, постой-ка!» Валя – Валентина икән дә, Сасында әлеге лә баяғы Иванайҙарға ҡаршы ғына йәшәгән тол ҡатын. Уның ире, уф, үҙенә ҡул һалды былтыр. Мәҙәниәт йорто директоры ул Валентина ауылдарында. Ниңә үҙҙәренә тапҡыр паромдан сыҡмағандыр, этем белә. Райүҙәктән ҡайтып килеше икән. Автобус көтөп тормаған, буш машина осраған да, выжт Олотүзгә – аръяҡтағы ауылға. Кәмәлә сыҡҡан Бурашҡа. Тәпәйләргә бер сама Сасынға – тегенән ни, бынан ни.

Фәнидә, йола-әҙәп һаҡлап, юлаусыны өйөнә саҡырҙы, үҙенән биш-алты йәшкә өлкәнерәк Валя шундуҡ ризалашты. Һәлмәк кенә сумкаһын велосипед руленә аҫты ла ҡуҙғала башланы, Фәнидә иһә яр башына барып, Фасилды күреп-һөйләшеп әйләнде. Әйтте:

– Энекәс, берәй көн эшеңдән бушап, аҫтағы өйҙө ҡараштырайыҡ әле. Буш итмәм...

– Хыт бөгөн, апай. – Егеткәй Фәнидә ни ҡушһа ла үтәргә әҙер. – Бушҡа ла...

– Бөгөн-иртәгә түгел, әйтермен. Бәлки, өмә яһарбыҙ.

Юлаусыны ихатаға Тимур асып индерҙе лә, шуны ғына көтөп торғандай, әйберҙәренән бушаған велосипедына текә ултырып, аҫҡа елдерҙе. Әсәһенең һораулы ҡарашына малайҙың бары: «Әҙерәк кататьсә итәм!» – тигәне ел һымаҡ бәрелгәйне, әсә кеше ризалыҡ бирҙе. Йөрөһөн, әйҙә, былай ҙа күңеле китек, уйнап-елеп үҫһен, тик тәртип боҙмаһын, аҙмаһын.

Валентина соланда уҡ муксайынан ҡыҙыл шарап һөйрәп сығарҙы һәм уны өйҙәге өҫтәлгә ҡуйҙы. Эскесе тип әйтеп булмай был ҡатынды, шулай ҙа йә ҡыҙарып-бүртеп, йә самаһыҙыраҡ күңелсәкләнеп йөрөгәне осраштыра. Бөгөн районда илле йәшенә ниндәйҙер наградаға ҡағыҙҙарын теүәлләп бөттө. Фәнидә лә, ул да тол, әҙ-мәҙ сөкөрләшеп ултырһалар, ни зыян? Хужабикә лә ҡаршы килмәне, тиҙ үк барынса табын хәстәрләне.

– Да-а, ирҙәребеҙ – капут, ну беҙ врагам не сдаемся! – Саҡырылмаған ҡунағы тост әйткәс, күҙҙәрен сылт йомоп эсеп ҡуйҙылар, сирканыстары үткәйне – тағы, артабан инде шешәнең төбөнә еттеләр. Буш ҡалмайым, тигәндәй, Фәнидә лә әллә ҡасандан соланда ултырған яртылыҡтың яртыһын, үҙе әйтмешләй, «әсеһе осоп бөтә яҙған» араҡы менән һыйлағас, әхирәттәрҙең теле уғата сиселде.

– Ғәфү ит, Фаенька, һинең ҡыҙың... теге... дауаханала, тиҙәр.

Улар электән икәү-ара ауылса аралаша. Тамырҙаш һүҙҙәр ҙә күп бит телдәрендә: урам – урем, йорт – порт, лапаҫ – липас, умарта – омарта, әүен – овин, мунса – монча, утар – отар, келәт – клат. Былары әле йорт-ҡура һүҙҙәре генә. Боронғораҡ кейемдәрҙең күп нәмәһе уртаҡ. Иҙеүе лә, сәсмәүе лә, яғаһы ла... «Мари сабатаһын күп кейҙек элек» – тигәнде Бурашта аҙым һайын ишетергә була. Улай ғына тиһең, Фәнидә бынау Валя меҫкенкәйҙең ирен ерләүҙә ҡатнашты. Кирәмәтлерәк «пайрам»дарында ҡатышмаһа ла, Фәниҙәнең хатта Валентина ойоштороған мари фольклор ансамбленә ҡушылып йырлағаныбейегәне, ул-был смотрҙарҙа йөрөп, диплом алып ҡайтҡаны ла булды бит. Һабантуйҙарҙа һуң? Ике ауыл гелән бергә ҡайнаша бит. Милли кейемдәге башҡорт Фәнидә менән мари Валентина тирмә хужабикәләре булғылай. Башҡорт көрәшендә мари егеттәре лә бил бирмәй ҡай саҡ, эйе, эйе... Тыптыр-тыптыр бейеүҙәре һуң!

Ошо хаҡта уйланып, яуап бирергә ашыҡмағандай ҡыланды Фәнидә, йәшкә өлкәнерәк әхирәте иһә быны һиҙенде, ҡапыл ҡалаҡ шаҡылдатып, шаян таҡмаҡ йырлап, бейеп ебәрмәһенме:

*Ике тауык, бер курица*
*Конькиҙа катаются.*
*Минем кемне яратканым*
*Вам-то не касается...*

Башҡортостанда мариҙар Марий-эль Республикаһына ҡарағанда күберәк, мари йолаларын, телен өйрәнергә Йошкар-Оланан йыл да ғалимдары килгеләй, тиҙәр.

Валяның ире күптән үлгәйне. Бөҫөргә операциянан ҡурҡыпмы, һыҙланыуға түҙмәйме, үҙенә ҡул һалған, тигән шомло хәбәр ҙә тарала биреп ҡуйғайны. Ҡыш ине, зыяраттарына йыр-музыка менән оҙатып барҙылар, шуны оҡшатмай ҡайтып китте Фәнидә. Баҡһаң, сирмеш уйынса, үлгән кеше теге донъяла ла йәшәүен туктатмай. Етеһенә, ҡырҡына ҡайтып ашап-эсеп китә, гүргә ингәнде «каршылар өсөн» дуҫ-иштәре мәрхүмгә оҡшатып кейенгеләй. Барҙыр инде, әҙме ни донъяның хикмәттәре.

Валя бейеүенән туктағанда, тышта ҡапҡа дыңғырҙаны: Тимуры ҡайткандыр. Фәнидә йәһәт кенә өҫтәл өҫтөндәге һәм аҫтындағы буш шешәләрҙе йәшереп, рюмкаларҙы йыйып, табынды ипләштерҙе; быны әллә оҡшатты, әллә оҡшатманы Валентина, һәр хәлдә, урынынан ҡалҡынды.

Тартынышмы, Тимур өйгә инмәне һаман.

— Валя, эштәр хөрт беҙҙең, — тип иламһыраны Фәнидә. Әхирәте уны яурынынан һыйпаштырып, йыуатырға теләне.

— Ә һин, Фаенька, алып ҡайт ҡыҙыңды. Өйөңдә тәрбиәлә, мин дә дауалашырмын. Минең орматта (нәҫелдә) им-томдо якшы беләләр. Һорашырбыҙ. Пример, ундай ауырыуға терпе итен бешереп ашатыу якшы. Бурһык та якшы. Бәләкәй сакта бер туғаныбыҙҙы...

Шул сак аяныслы бер хәтирә Фәнидәнең бәғерен көйҙөргәндәй итте. Үҫмер сағында әсәһе менән утарҙай ғына ауылдағы туғандарына хәл белешергә барғайнылар. Унда үҙенә тиңдәшерәк ҡыҙ... айырым ашап, айырым йоклап йөрөй ине. Һигеҙенсене бөтөргән дә, артабан укытмағандар. Ябыҡ, ап-аҡ булғанғамы, арыу кейенгәнгәме, төҫкә-башҡа күркәм ине шул бисара. Моңһоу ҙа ине, етмәһә, үҙәк өҙгөс итеп гармун тартырға өйрәнеп алған. Йәштәр клубка сыға, усаҡ яғып, ауыл ситендә уйын ҡора — ул аяҡ та баҫмай икән. Ҡабат ул ауылға һис тә юл төшмәне Фәнидәгә. Аһ-аһ, иҫәнме икән?

— Валюша, әйҙә, тышта һөйләшәйек, йә... Тимурҙы ашатырға ваҡыт.

— Правильно! Миңә лә ыҫҡынырға ваҡыт. Байтаҡ өйрәк, ҡаҙ аҫырайым даһа...

Лираны алып ҡайтырға, тисе... Бәлки, Валя хаҡлылыр.

Кейәүгә сығыр алдынан Сания әбейгә «квартирант» булды Фәнидә. Әбекәй һөйләр ине: «Иванай ҡарт алтмыш тулғанда яңғыҙ ҡалды. Шәп фильшер ине. Мине лә һоратты – барманым. Шунан уға ярлы ғына бер симйә егерме өстәге ҡыҙын үҙҙәре димләп бирҙе. Аслы-туклы йәшәгән заман, тегенең аклады ничауа ғына, өйө бына тигән, якшы ғүмер иттеләр. Вәлитинәне үҫтергәс үлде Иванай...» Иванайҙың энеһе Тимерәй булған, уның улы Николай икәне Фәнидәгә лә мәғлүм.

* * *

Ауылдарҙа хәҙер бешекләп өй йыйыу өмәһе һирәк ойошторола. Донъя йыйыштырыуҙың нимәһе бар инде, ана, исмаһам, бура күтәреү – күңелле эш, аҙаҡ табын да мул була. Шулай ҙа мәрхүм ҡайныһының етемһерәп торған «пәтистәнкә»һен Фәнидә ныклабыраҡ таҙартырға теләне: кем белә, тәүге мәлдәрәк ошо Лираһын әлеге «мираҫ өйө»ндә тәрбиәләргә, йә акса таба алмаһа, һатып ебәрергә тура килмәгәйс. Докторҙары ни әйтер бит? Сукынып китһен Чехияһы, ауырыуы оҙаҡҡа һуҙылһа, Лираның укыуына ғына зыян килмәһә ярар ине.

Ошо уйҙар менән Сасынға йыйынды Фәнидә. Мәрхүм ире өй һалғанда ук бульдозер менән урләскә киң итеп һөрҙөргән юлдан атлағанда, яр башында Фасилды шәйләп ҡалды ла, егеткә өмә хаҡында иҫкәртеп үтер өсөн ҡыҫҡа тыкрыкка боролдо. Лосман арьяктан Зәриә тигән ҡараҡашты сығарған икән бирегә. Утыҙҙы ғына ҡыуған ҡатынкай арьякта йәшәй, ире менән насар тора, тегеһе ҡырға сығып киткән, тиме. Ә Бурашта Зәриәнең олоғайған апаһы Дилбәр донъяһын яңғыҙ көтә. Бөтөнләй сыкмаған кейәүгә, бер-ике тауыкмы, кәзәме аҫыраған була, мәгәр пенсияһы тос ҡына, тиҙәр, сөнки заманында, йәғни Фәнидә белгәне бирле, Дипутат ҡушаматлы маҡтаулы һауынсы ине. Тантаналарҙа ниндәйҙер орденын да таҡкылай. Ауылда бер кеме юк, гүргә инеп йә күсеп бөткәндәр.

Иҫәнлек-һаулыҡ һорашкас, Фәнидә егеткә йомошон әйтте: иртәгә – өмә... Берәй оҫтараҡ иптәш тапһаң да мәслихәт. Өйҙө йыуырҙар, ҡаралтыны ипләрҙәр. Бөгөн үҙе, машина бирһәләр, Өфөгә барып әйләнәсәк.

Быны ишетеп, Зәриә яр башына ҡайкая баҫып үпкәләне:

– Ә мин һуң? Минең эшкә әрһеҙ икәнде кем белмәй? Олотүзскийҙәргә әллә өмәгә ҡатнашыу тыйыламы?

Раҫ, егәрле тигән даны таралған Зәриәнең. Йылмаяк, көмөшкә ҡыуа, тигән аты ла йөрөштөрә... Ник өндәштем, ҡолаҡка һаҡ икән, тигәндәй, Фәнидә уға икеләнеүле ҡарап алды ла ауыҙын баҫкан ҡулын еңелсә аҫҡа һелтәп ебәрҙе.

– Әйҙә һуң. Ҡыҙыңды ла эйәрт. Зөлфиәме әле?

— Ана шул Зәпә артынан киләм. Ике көн буйы ҡайтмай инәкәсенән.

— Бала — бәлә инде, — тип Фәнидә юлын дауам итте. Булыр, инәкәсендә ҡыҙ баланың — алтыһы тулған шикелле — тамағы үҙ өйөнә ҡарағанда һыйлыраҡтыр. Унан бигерәк, күңеленә тынысыраҡтыр. Кем белә, Зәриәгә аҙғыныраҡ ир-ат, уны-быны ярҙам итешәм тип, ингеләп йөрөй, тигән ғәйбәт тә ҡолаҡҡа салынғылай. Утыҙ ике теш араһынан осҡан ләститкә даръялай һыу кәртәлер шул.

Ә үҙе һуң, үҙе? Тимурына дүрт-биш йәш тигәндә... ғәйбәт һаҙлығына бата ғына яҙҙы.

...Бер йәмле йәй көнө, улына эйәреп, олпат ҡына ир пәйҙә булды. Һәүетемсә кейенгән, балыҡсынан бигерәк, ҡырҙаныраҡ килгән ял итеүсе булғандыр. Ипле һөйләшә, сәләмдәр күндерә белә. Аҙағыраҡ уйынлы-ысынлы әйтте лә һалды:

— Бына, улығыҙҙы кәмәлә йөрөткәйнем, миңә атай бул да ҡуй, бүтән малайҙарҙың атаһы бар, минеке юҡ, тигәс, эйәреп, һеҙҙе күрергә теләнем. Шәп егет үҫтерәһегеҙ икән!

Әллә оялышынан, әллә буштан-бушҡа рәнйешенән Фәнидә еләҫ соланда ҡаймаҡ һылап, әрселгән бәрәңге йыпырған улын ботарлап ташларға ҡәһәтләнде. Улай ҙа тиҙ һыуынды. Гонаһһыҙ сабыйҙың ни ғәйебе? Дөрөҫ зарланған: бүтәндәрҙеке — бар, уныҡы — юҡ, тимәк, уға ла ҡыйын... Ә теге һиммәтле генә ир йә малайҙы йәлләп, йә буйҙаҡ йәшәүҙән ялҡып, әллә ҡыҙыҡһынып, уныһы ҡараңғы, бәлки, оҙаҡ өйләнмәгәндер, бәлки, ҡатынҡайы вафат булғандыр, бәлки, ул-был сәбәп арҡаһында айырылышҡандыр, эйе, уныһын бары үҙе генә беләлер — сабый артынан яр башына үрмәләгәнгә оҡшай.

— Ағай тип әйтәйемме, ғәфү итегеҙ: атай бит малайға кәрәк, ә миңә... ир кәрәкмәй. — Ҡыҙарынған-бүртенгән Фәнидә ни эшләргә белмәне. Бер аҙҙан аңына килеп, тағы лығырлығы сыҡты.

— Бында, ағай кеше, ауыл ере — берҙе биш итерҙәр. Тиҙерәк китегеҙ, эрзинкә кәмәгеҙҙән ҡолаҡ ҡағыуығыҙ бар. Бураштар бурлыҡҡа ла барымлы. Берәй услам һуған ҡыяғы тотоп төшөгөҙ, йәме. Хәҙер өҙөп эпирәм...

Аптыранды ирекәй, әммә эптәләнмәне, йылмайыбыраҡ әйтте:

— Һуған кәрәк, һылыу. Бигерәк тә илдә перестройка барғанда...

Эре-эре байтаҡ көмөш аҡсаһына төбө менән иң эре унлап һуған йолҡоп, иҫке гәзиткә төрөп тотторҙо Фәнидә ял итеүсегә. Тотанаҡлы әҙәм хушлашҡанда: «Үпкәләмә инде», — тине бит әле. Ҡай яҡ кешеһе булғандыр, «һылыу» тип тә өҫтәне, буғай. Ҡай яҡтыҡы булһа ла, әҙәпле, уҡымышлы икәне маңлайына яҙылғайны. Тимурҙы тотоп буламы ни, ашап алды ла һыпыртты

ҡабат яр аҫтына. Утрауға сыҡҡандыр, әрһеҙләнеп барғандыр «атайы» эргәһенә. Кискәрәк иһә ҡауырһын кәтүкле, өс быуынлы ҡармағына маһайып бер булды. Орошто улын әсә, тыйҙы: аслан ят кешенең кәмәһенә ултырма, өйгә алкайтма.

«Йортоңа ят ир менеп төштөсө...», «Әллә димсеме?» — тиеүсе шапаҡ ауыҙ бисәләр ҙә табылды аҙаҡ. «Бик һорағас, һуған һатып ебәрҙем... Тимур ҡармағын оҡшатҡайны, балға алмаштырҙым», — тип хәйләһен тапты Фәнидә. Эйе, ул осорҙа өс умартаһының берәүһе көслөрәк күсле, балды мул бирер ине, заготконторағa тапшырһа, йә ҡулдан һатһа, хаҡы тишек-тошоҡҡа ярап ҡуя торғайны. Хәҙер, ана, ике йәшник умартаһы, мәрхүм ҡайныһыныҡы ише, аҙбар башында өңшәйешеп ята. Бәрәңгелек осонда ултырған берәүһе генә һаман балдан өҙмәй.

Бына тағы ҡайныһы йорто эргәһенән уҙып бара. Бына тағы, кисәге ише, мәрхүмдең тауышы ишетелгәндәй: «Кабатлап киҫәтәм: өй-фәлән өсөн аслан талашмағыҙ. Ана, бер йылды... ағалыһеңдеэр лапашып бөткән мунса өсөн судлашып, әҙәм көлдөрҙө... Фәнидә киленкәйем балаларҙы һәйбәт ҡарай, ошоғаса мине лә һис ҡыр типмәне. Уларға хәләл был өй».

## *Икенсе киҫәк*

*Әҙәм һөйләр, яҙмыш көйләр.*

**Фазылдың юрамышы**

### 1

Светлана деканаттан иләҫ-миләҫ кисерештәр менән сыҡты. Бер яҡтан, сәменә тейгән отличница Лираның дауаханаға эләгеүенә, староста булараҡ, көйөнмәне лә, һөйөнмәне лә: белһен үҙенең кем икәнен! Икенсе яҡтан, күптәрҙең уға ярҙам итергә, һис юғы теләктәшлек белдерергә әҙер тороуына асыуы ҡабарҙы. Ярай, аҡ халатлы Алия ханым үҙенең бурысын үтәргә тырыша, ти. Ә бынау замға — Сулпанына ни ҡалған? Әйтте теге юлы: ниңә шаштыраһығыҙ Кәримованы? Ебәрмәгеҙ бер ҡайҙа ла, алдан бирҙертмәгеҙ имтихандарҙы. Ҡолағына ла элмәгән булды. Бая «ниндәй дауахана бит» тип шикләнгәйне, бармаҡ янап тыйҙы... Нисек ғәрләнмәҫһең?! Ә бит... Ә бит ошо вузға инеү имтихандарын биргәндә, оло башын кесе итеп, Светлананың атаҡайы нәҡ әлеге һонтор — ул саҡта диссертацияһын тартыпһуҙып яҡлаған өлкән уҡытыусы йораты ине — менән һөйләшеүҙәр алып барҙы. Йәғни, елле һыйыр хаҡын шуға түкте. Иҫкәрткән теге: имтихандарҙа булышлыҡ итермен, был әжер — миңә түгел, экзаменаторҙарға эләгәсәк, тик... ҡыҙығыҙға ләм-мим!

Уҡырға инеүе – бер этап, оҙаҡ уҡыйһы бар уға, йөҙләгән имтихан бирәсәк тә, тигән. Әммә атаһы ҡыҙына икенсе курста саҡта әйтергә мәжбүр булды, сөнки Светаһы юҡ ҡына зачетта һөрлөгөп, кәйефһеҙ ҡайтып ингәйне ҡасабаға. Батып барған – һаламға йәбешкән, тигән кеүек, Светлана атаһының «Анау ҡара күҙлекле бағана буйы преподавателгә – Сулпан, буғай, – минән сәләм күндер, ярҙам итер. Теләһә, тағы буш итмәм» һымағыраҡ кәңәшен күңеленә һалып, хәйерһеҙ зачеты буйынса, ысынлап та, Сулпан Байрасовичҡа мөрәжәғәт итте. Бәй, зачет ҡуймай ыҙалатҡан теге... салбары төпәрле профессор менән нисектер уртаҡ тел тапты һәм Светлананың да дәртен күтәрҙе. Атайымдан сәләм, фәлән дә төгән, тип тә ҡыялманы. Әллә... ямаҡтыр шул Светлана, һынһыҙ йә модаһыҙҙыр. Эх, өйләнгән ҡәһәрең, игеҙәк малайҙар үҫтерә Сулпан Байрасович, юғиһә, башын әйләндерер ине әле берәй нисек. Һин – миңә, мин – һиңә...

Оҙон-оҙон коридорҙан берсә уңға, берсә һулға юрғалап барышлай бер ғәйепһеҙ төркөмдәшенә талағы ташты: «Күрһәтермен әле мин һиңә, өлгөлө студентка Кәримова! Яйы ғына сыҡһын». Хәйер, Светлана ул тиклем нимә күрһәтһен инде Лираға?! Эсендә генә ҡайнаны көнсөл асыуы.

Баяғы методистка менән килешеп, тегенең берәй «бишле»һен «өслө»гә төҙәттергәндә, исемле стипендиатлығынан һемәйәсәк. Юҡ, быныһы булмаҫ. Инде берәй, ниндәй берәй, үҙенә серле күҙ һалғылаған берәй «препод»ты үҙ яғына ауҙарып, «икеле» сәпәтеүе анһатыраҡ та. Ҡайһы фәндән? Тота килеп, икеле ҡуймауҙары ла ихтимал. Эх-ма...

Ошондай уйҙар менән һуңғы пар лекцияла көс-хәлгә ултырғас, староста аңҡы-тиңке ятағына ҡайтты. Был ни хәл? Комендант:

– Кәримованы һорашты бер ҡыҙ. Загранкаға әҙерме икән, ти, мәйтәм, ҡайҙан беләйем, ауылына ҡайтҡан...

– Ат кеүек албаҫтымы?

– Юҡсы, Светочка, кәүҙәгә ҙур, әммә мөләйем генә. Тағы киләсәк ярты сәғәттән.

– Индермә лә ҡуй – йөрөмәһен темеҫкенеп. Мин белешмә бюроһымы ни? Деканат ҡаңғыртты бая. Тағы килһә, әйт: ундай ауырыуҙы сит илгә түгел, урамға ла сығармайҙар. Ә американдар биклап ҡуя.

Әле генә үҙе «ат кеүек...» тип кәмһеткән ҡыҙҙы әҙ-мәҙ белештерә Светлана. Учалынанмы сығышы, өсөнсө курстан, күрше факультеттан. Урам ашаһындағы иҫке ятаҡта йәшәй, кистәрен көн дә ҡайҙалыр иҙән йыуып ҡайта. Уҡырға «алтын» менән, әңгәмә аша ғына кергән. Ана шуның менән дуҫ, имеш, Лира, теге саҡ Н. ҡалаһына конференцияға барғандарында уҡ Чехияға сәфәр ҡылырға һүҙ беркеткәндәр. Юл хаҡтарын

ҡапларлыҡ спонсор тапҡан, тиме, әлеге әзмәүеркә. Булыр, уҡыусылар быуа быуырлыҡ Өфөлә, эшҡыуарҙары ла, түрә-ғаралары ла етерлек.

Комендант Светлананың «ат кеүек»те индермәҫкә, тиеүенә теләр-теләмәҫ ҡолаҡ һалды. Әрепләшер әмәле юҡ инде Светлана менән. Аҡмаһа ла тамып тора үҙенән: йә рамы менән кәрәҙле бал, тоҡлап гәрәбәләй бәрәңге, тас май һарыҡ боттарымы һона. Шапырына лаһа ҡыҙый, атайым элек колхоз рәйесе ине, хәҙер йүнсел единоличник, тип.

Коменданттың ҡарышмаусан ҡарашынан ҡәнәғәт староста, атлаған еренән оҙонса муйынын ҡайырып, яһиллығын да йәшермәне:

– Йөрөмәһен бында юҡ-бар лесбиянкалар!

– Бәй, башҡортса һөйләшә, шикелле. Сербиянка тиһеңме? – Ҡолаҡҡа ҡатыраҡмы, әллә енси әкәмәттәр буйынса белеме һайыраҡмы, комендант үҙ алдына мөңгөрҙәп ҡуйҙы.

– Да, да, икегеҙ ҙә... – Светлана үҙ бүлмәһенә зәһәр көлөп, ашыҡты. Уның тоҡтомалға эргәһендә булмаған кешеләрҙе лә сирканыс мыҫҡыллай торған ғәҙәтенә күнеккән комендант көрһөнөүле ҡыҙарынып ҡалды.

Бүлмәһенә Света яңғыҙы ғына тиерлек хужа. Өс кешелек ыҡсымыраҡ комнатаһында электән йә яңғыҙаҡ уҡытыусы, йә бер-ике аспирант, йә Светлана һымағыраҡ «блатлы»ҙарҙан ике генә кеше йәшәй. Старостаның бүлмәләше академик отпускыла һанала, ләкин ниндәйҙер ҡөҙрәт менән койкаһынан ҡолаҡ ҡаҡмаған, әйберҙәрен дә ошонда һаҡлай. Бер аҙна – Эстәрлеһендә, бер аҙна – Өфөлә, йөрөй ике арала буталып. Кисә, ана, ҡунды, ә бөгөн – ғәйеп.

Бармағы менән ишек туҡылдатып, төркөмдөң профоргы, кәрәкһә-кәрәкмәһә лә һабаҡташтарынан аҡса йыйырға әүәҫ егет, килеп инде. Торғаны бер һөмһөҙ, төркөмдә улмы, Светланамы лидер – бер кем дә бизмәнгә һалмаған. Әммә икәү-ара низағлашып та бармайҙар. Мәҫәлән, профорг яңыраҡ исемлек төҙөп йөрөнө. Ауыр ғына фәндән имтихан етә, кем теләй – таксаһы шундай – «препод» «дүрт»тән кәм ҡуймаҫҡа вәғәҙәләй. Табыла шылғаяҡтар. Аҙна-ун көн буйы мейе сереткәнсе, ҡайҙа китмәгән мең һум – әйҙә, ас тамағы, тыныс ҡолағы. Дүртенсе курстан төркөмдөң яртыһы ул-был кәсеп табыусан. Ҡыҙҙар сәғәтләп уны-быны йыуа, егет-елән ҡарауылға йөрөй, ер ҡаҙа, бәғзеләр реклама тирәһендә сыуала. Светлана, ана, косметика менән төшөмлө генә сауҙа итә. Профорг сәскә кибетенә таң һарыһынан йүгерә – һулымаһын раузалар, һыу бөркһөн. Кибетсе ҡатын уға шуның өсөн көндә йөҙәрлек тоттора.

– Иптәш староста, – тине профорг, ҡыланһыҡланып, – Лирочка ауырып ята, әҙ-мәҙ аҡса йыйып, хәлен белешергә ине.

Ана, хатта күрше ятаҡтан бер ҡыҙ һорашып йөрөнө бая. Һин булмағас, мине юллаған...

– Ат кеүекме?

– Һо-о, дискоболка кеүек.

«Лирочка» тигәнде ишетеп, Светлананың үте һытыла яҙҙы, буҙарынып, лыпын ултыра төштө ыҫпай йыйыштырылған карауатына.

– Пажалыста, пажалыста! Визит вежливости всех украшает.

– Буш ҡул менән бармаҫка ине лә. Үҙең дә үткәндә, православныйҙар, тип...

Булды ундай ваҡиға. Ҡыш көндәре, әлеге һымаҡ тынғыһыҙ сессия мәлендә, бер урыҫ ҡыҙы ай самаһы ятып сыкты дауаханала. Староста булараҡ, Светлана тәүҙә урыҫ ҡыҙҙарына, бишәр һум ғына йыябыҙ ҙа, барып, хәлен белеп килмәҫһегеҙме, тине. Көн үтте, аҙна үтте, тегеләр – ләм-мим. Светлана бөтә төркөм алдында – теге салбары үтекһеҙ йыуантаҡ профессорҙың лекцияһына һуңлабыраҡ инә торған ғәҙәте бар: йә аудиторияны бутай, йә берәйһен тап итеп, хәл-әхүәл белешә – эйе, бөтә төркөм алдында тотто ла әйтте:

– Әгәр ауырыу иптәшебеҙ эргәһенә православныйҙар бармай икән, правоверныйҙар барыр...

Ана шулай йәтеш кенә баҙарын күтәрә биребераҡ ҡуйғайны староста. Ә-ә, ун һумлығын бынау өңшәйгән эшем эйәһе беренсе булып һалды. Старостаны һөйһөнмәһә лә, Лира ла ырғып торҙо:

– Мин барам больницаға! Кем эйәрә?

Биш-алты ҡул күтәрелде... Әлеге сетерекле хәлгә ишаралай ҙа мут профэшмәкәр. Ошоно иҫләү ниңәлер Светлананың ярһыуын кәметте, ул хатта ырғып торҙо һәм, алсаҡ, йомарт, иземле ҡыланып, ҡупшы сумочкаһынан иллелек һурып, егеттең усына йомдорҙо...

– Күп түгелме?

– Кем күпме йомартлана ала, тигән принциптан сыкһаҡ, күп тә түгел. Һиңә юлға ғына егерме һум кәрәк тәһә.

– Күп тигәнем... башкалар улай бирә алмаҫ, тимәксемен. – Егет ыуаланды.

– Баштан ашкан унар һум. Бөгөн үк бараһыңмы? – Ҡыҙ ғәмләнде.

– Өлгөрһәк... Берәй егет менән барам тигәйнем.

– Өлгөрөргә тырышығыҙ. Ҡайткас, миңә инеп сығырһың. – Әсәһе участка табибы бит әле, уны-быны ҡыҙына ла һеңдергәндер: Светлана ниҙер хәтерләп торғандай итте лә нәзәкәтле генә өҫтәп ҡуйҙы. – Әллә ниндәй күстәнәс һайлап мәшәкәтләнмәгеҙ. Лимон һуты, алоэ, ә юк, иң яҡшыһы – бал, йүкә балы.

...Егеттәр әйләнеп ҡайтҡансы Светлана, бүлмәһенә бикләнеп, ойобораҡ ятты. Киске сәғәт туғыҙҙарҙа ишек туҡылданы. Аскайны, ҙур йомош үтәгән яу сапҡыны ҡиәфәтендә профорг килеп инде. Үҙен староста сәйгә ултыртты, һәммәһен дә төпсөндө. Шуны белде: кәйефе төшөнкө Лирочканың. Күпме дауаланасағын бәрәү ҙә аныҡ әйтмәй, ти. Оҙаҡ һөйләшмәгәндәр. Быяла һауыттағы «Башҡорт балы»н алмаҫҡа маташҡан, группаны үпкәләтәһең, тип инәлгәс кенә алған, ҡабат бер кемдең дә килеп йөрөмәүен, әгәр осратһа, хатта күрше факультеттан буйһыу «учалинская»ға ла — диспансерға аяҡ баҫмауын үтенгән.

— Ә теге... Ҡара сәсле красавчик-выпускник осраманымы? Данир... Тайсин? — Светлана кәрәк-кәрәкмәгәнде лә төпсөндө, шунан вайымһыҙ булып ҡыланды. — Йә, ҡоҫҡо килтергес больницаны сәйнәп ултырмайыҡ. Әллә генә Кәримова экзамендарын алдан тапшырып бөткән...

Егеттең үҙенә ымһыныбыраҡ йөрөгәнен белгәнгә күрә, әллә күңелен һүрерҙән, әллә күңелен күрерҙән, әңгәмәне көтөлмәгәнсә осларға ла йөрьәте етте хужабикәнең.

— Чахоточныйға күҙең төшһә, өйләнер инеңме?

— Әлләсе, любовь зла, полюбишь и козла! — тип һағайҙы егет.

— Дешевая фраза! Һиндостанда «тубик»тарҙы кейәүгә бирмәгәндәр борон.

— Ә-ә... — Егет был юлы ытырғаныпҡуйҙы һәм бүлмәнән тиҙерәк тайыу яғын ҡараны.

* * *

Бергә уҡыған ике егеттең төркөм исеменән визит яһауына Лира берсә һөйөндө, берсә көйөндө. Һөйөнөсө — рәхмәт инде, онотмайҙар, уның өсөн борсолалар; көйөнөсө — уның аяныс хәле хәҙер күптәргә мәғлүм. Араларында дуҫ та бар, дошман да... Ярай, ғазапламаһын әле үҙен: ауырыуын йәшергән — бөлгән, тигән һынамыш та тел осонда бит. Ә ул йәшермәне, боҫманы, тәүге көндән үк һауыҡтырыу процедураларын теүәл үтәй, режимды боҙмай.

Бына ғәжәп: иртәгәһенә үк күңелендәге болғансыҡ юшҡынды ташҡын йыуғандай булдысы. Әллә ул ташҡын — хистәр ташҡынымы?

Данир килеп китте. Ҡабалан ғына. Әсәһенең әшнәһе етәкләгән фирмағамы, компанияғамы эшкә ингән икән. Тиҙҙән, сама менән аҙна-ун көндән, Мәскәүгә машина юллана, ти. Шуға ултырып китә лә Данир, стажер булараҡ бер ай Мәскәүҙә тәжрибә туплаясаҡ, ә ҡайтҡас, апаруҡ хеҙмәт хаҡы менән ысынлап эш башлаясаҡ, имеш. Дипломын ҡасан ала һуң?

Уныһы ҡасмаҫ, ҡайтҡас алыр. Иптәштәре таралышҡас... Йәл дә бит, тик бындай стажировка һирәктәргә тәтей.

– Һинең бындай сағыңда әллә ҡайҙа йөрөгө лә килмәй, Лира.

– Һин унда иҫән-һау, комсомолдарса тәртипле, иплән кенә йөрө. – Ҡыҙ рыяһыҙ, ихластан бүлдерҙе егетте. – «Первым делом – самолеты, а девушки – потом» тип йырлағандар элек.

## 2

Юлы уңды Фәнидәнең. Николай Тимерәйевич утыҙ меңгә әҙ процентҡа кредит алыр өсөн үҙе йәһәтләткән ҡағыҙҙарға мисәт баҫтырҙы, имзаһын һалды, ә төштән һуң райүҙәккә сығып әйләнергә «Нива»һын биреп торҙо. Банкта ла кредитты киләһе аҙна урталарына уҡ «Сасын»ға күсерергә вәғәҙә бирҙеләр. Ҡайҙа ла Ишмай Кәримов «абый»ҙы – былтыр ғына вафат булған һуғыш ветеранын белеп-иҫләп торалар. Байтаҡ йылдар элек хәбәрһеҙ юғалған Барыйҙың фажиғәһен дә ишеткәндәр бар, әммә был хаҡта хәбәр ҡуйыртмайҙар. Уны-быны иҫкә төшөрөү бәғзе саҡта сей яраға тоҙ һипкән кеүек – быны аңлайҙар икән, мәслихәт. Барыбер донъяла боҙоҡ кешеләр аҙыраҡтыр ул. Шулай була күрһен. Ошо арала эргәһенә бармаған өсөн ҡыҙы Лира үпкәләмәҫ, моғайын. Мотлаҡ врачтарҙы күреп һөйләшергә, кәңәшләшергә кәрәк. Ә улар иртәгә ял итә – шәмбе. Ял итһендәр, улар ҙа кеше, уларҙың да ғаиләһе бар, мәшәҡәттәре лә етерлек. Тимәк, иртәгә өмә тигәне үҙ көсөндә ҡала. Ярай әле, ҡасабала ҙур магазинға инеп, ул-был ашамлыҡ, әҙ-мәҙ эсемлек алып ҡайтты ҡатынҡай.

Ҡайныһының өй-ҡураһын таҙартырға теләп, хатта ки дөрөҫ эшләй түгелме? Эйе, эйе. Былтыр эҫе йәйҙә, бесән алдынан гүргә ингәйне мәрхүм. Ана лаһа, йыллығы яҡынлаша, ауылдағы нәҫел-нәсәбен, ҡарт-ҡороно, бәлки, ҡайныһының өйөндә генә саҡырып уҙғарыр. Йәл, хәҙер ауылда мулла юҡ, Сасында – күптән, аръяҡта ғына бар. Ҡорбан аштарына, йыллыҡтар уҙғарыуға әлеге лә баяғы орденлы һауынсы Дилбәр йөрөгән була. Доғаларҙы көйләп уҡымай, бахыр, дәфтәргә күсереп яҙғандарын моңло ғына ҡысҡырып һөйләй. Хас өй эшен ятлап килгән уҡыусы кеүек, рәхмәт төшкөрө. Инанғас, башҡаларҙы инандыра белгәс, улай ҙа бата инде.

Ҡайныһы, бер уйлаһаң, һуғыштың аҙағынараҡ әләгә, мәгәр иңбашынан ҡаты ғына яраланып, ҡырҡ биштең көҙөндә миҙалдар сыңлатып ҡайта Алыҫ Көнсығыштан. Былтыр, ана, Еңеүҙең алтмыш йыллығына саҡырғайнылар райүҙәккә, бара алманы – хәлһеҙләнә башлағайны. Ә районның егермеләп фронтовигы,

дәү генә катерға тейәлеп, ҡурай, гармун тартып, Иҙелдән «боевой сәфәр»гә урләп төштөләр. Фазылдар тапкырында эшләпәһен болғап, бары йәшкәҙәп ҡалды ҡайныһы. Тегеләр ҙә, ҡарт ҡаһармандар, ҡул болғай... Исем-шәрифтәрен атап, ул урыҫса, ул башкортса, ул татарса һөрәнләп сәләмләгәндәр ҙә табылды. Бәхилләшеүҙәре лә булғандыр. Күп тә үтмәне, хәрби формалағы военкомат вәкиленә эйәреп, Фәнидә Хәлекәйҙән тыш бигүк танымаған өс ветеран да килде ерләшеүгә.

Әйтә торғайны ҡайныһы, йыш ҡына әйтә торғайны: «Лира ҡыҙым диплом алғансы йәшәһәм, Алла бирһә, дәү һарык салып, мәжлес йыям». Хоҙай бойормаған икән, дипломға әле теүәл йыл бар. Дипломы ҡасмаҫ, ҡыҙы ғына һау-сәләмәт булһын. Үҙе лә... Улы ла... Һәммәһе лә...

«Нива»ны ҡайтарып ебәргәс, арлы-бирле итер ҙә йомортка, бәрәңге, колбаса турамдары, йәшел һуған ҡушылған ҡыҫтыбый бешерергә керешер – шулай, өмәселәрен аҫтағы өйҙә генә һыйлар ҙа ҡайтарыр. Ҡашығаяк та байтак унда, аҙык-түлекте велосипедта ташыуы анһат. Тимуры ярҙамлашыр. Һәләк тыңлаулы ла улыкайы.

Әллә Дилбәр апайында ғына кунғанмы – Зәпүшкәһен эйәртеп, иң тәүҙә көйәнтә-биҙрәләрен тоткан Зәриә килеп етте. Шунан балта-быскылы Фасил менән Әбдерәш – Рәшит, торарак ярлауға якын һукмактан Валя күренде. Өмә хакында әйткәйне уға әйтеүен Фәнидә, ә сакырмағайны, хәлбуки, үҙ беддеге менән килгән әхирәткәйе. Төшкә табан, тамак ялғар вакыткарак, әсемәсе эләкмәҫме типтер, салғы тоткан Фазыл пәйҙә булды. Ират тегене-быны төҙәткеләне, каккыланы-һукkыланы, кесерткәндәрҙе, әрекмәндәрҙе сапты, сүп-сарҙы яндырҙы. Тимур менән Зөлфиә арығансы һыу ташып торҙо, ҡатын-ҡыҙ бар ҡаралтыны шыяланы, саңын һөрттө, ышкыны, йыуҙы. Эш араһында элекке субботниктарҙа, клубта зык ҡупкандарын иҫкә алдылар, колхоздың таркалыуына зарландылар. Еләҫ соланда термостан сәй эскәндә күршеһе Фәнидәнән, шым ғына теләнселәп, баш төҙәткән Фазыл куберәк ләпелдәне.

– Оҙакламай элекке колхоз ерҙәрен пайға бүләләр, йоклап ҡалмағыҙ, тиеүем.

– Уфанан анау, эттәгенәһе, анау үрге оска ҡайткылап йөрөгән кейәү балакай һарык фермаһы асырға йөрөй, тиҙәр. Ысындырмы, буштырмы?

– Ысындыр. Хәҙер ней, аксаң булһа, әллә нимәңде асырға рөхсәт.

– Элекке фермалар шактай, ремонтлап алһалар, нәйәт инде. Ике йөҙ һыйыр аҫыралған ҡураларҙа фермерский утыҙ һыйыр тора хәҙер.

Төш етеүгә эҫе ныҡлап төштө. Өмәселәрҙең дә дәрте кәмене, мәгәр, уйланған эш тә теүәлләнеп бара. Тиҙҙән Фәнидә тәкдим яһаны:

– Друзья-товарищи, Иҙел буйына төшәйекме?

– Кәнишне. Һыу инеп тороп...

– Барығыҙ, мужиктар, усаҡ яғып ебәрегеҙ, бынауҙы элеп, сәй ҡайнатығыҙ. – Фәнидә соландан ҡайныһының урманға йөрөткән ҡап-ҡара сәйгүнен сығарып, Фасилға тотторҙо. – Ҡом менән ышҡы тәүҙә...

Бала-саға, егеттәр һис ни сәселмәгән баҡса аша ярға ҡарай атланы. Фазыл ғына ашыҡманы.

– Нимә, абыҡай, эсең ҡортлаймы? – тип мәрәкәләне уны шарҙыуан Зәриә. – Эш тигәндә – юкһың, аш тигәндә – шәпһең.

– Шәпһең тип ни, кәмәгә барыр кәрәк. Әллә кемдәр һөрәнләгән кеүек теге яҡтан. Һеҙҙән этәк-һәтәк ишеткәнсе, лутсы таям бынан.

– Фәнидә, һалып бир шуңа минең өлөштө, – тип шым ғына ирәбеләнде Валентина. – Мин бынау эҫелә – пас...

– Фазыл абый, сыбыҡ осо еҙнә лә бит әле һин, кискәрәк мине ҡыҙым менән аръяҡҡа сығарырһың әле, йәме, – һүҙ юкта һүҙ булһын типме әйтте быны иҙән йыуғыстарын рәшәткәгә элгән арала Зәриә.

– Кәнишне, киленкәйем. Мин булмаһам, Фасил сығарыр. Бирәүгә лә отказ биргәнебеҙ юк. – Лосман-кәмәсе һалып биргәнде, ситкәрәк боролоп, сытайып кәкте.

Шунан иһә улы Фасил биргән һалдат салбарына ҡунған саңды һыпырғылап-ҡағыштырып, юл ыңғай берәйһенә һуғылырға теләптерме, оло урамдан ҡайтырға ынтылды, тик ҡуҙғалырҙан алда бер аҙ тапанып, алма телеме көйшәп, һөйләнеп торҙо.

– Шәп кеше ине Имаш абзый! Әбейен ерләшкәс, әйтә ҡуйҙым: алып ебәрһәңсе йәшерәктән берәй кәләш, тип. Ҡуйсәле, уны аҫырарға кәрәк, ә минең пинсейәм үҙем менән бесәйемә саҡ етә, тип кеткелдәгән булды. Шәп кеше булмаһа, былтыр, ана, минең тапҡырҙа гимнастерка, берет кейгән вояҡалар честь биреп, паек, сәскә тотторроп китерҙәр инеме?! Бер ҡарт, катер ары ҡуҙғалғас, ҡуйынынан сәкүшкә сығарып, гранат һымаҡ һелтәй-һелтәй, минең эсте ҡатырҙы, әй.

– Эсеңде ҡатырҙы микән, әллә күҙеңде ҡыҙҙырҙымы?

– Булғандыр инде...

БыҒаса әңгәмәгә әллә ни ҡыҫылмаған Валентина ла төртмәскә апарук.

– Фазыл абый, бер анекдот: ике алкаш осрашкан, ти. Береһе, һин ниңә грустный әле, тип һораған, икенсеһе, я не грустный, а трезвый, тип яуап биргән...

Зәриә, һинд бейеүендәгесә ҡыланып, таҡмаҡ әйтеп ебәрҙе:

*Уң ҡулымда аҡ беләләй,*
*Һулымда ла беләләй.*
*Әллә ниңә Фазыл еҙнәм*
*Әбейҙәргә әйәләй.*

– Ай, әртискә генә булманың. Был таҡмағың ерунда. Үткәндә силсәүит Айгөлгә сығарғаның – во-о! Нисек әле, оноттом...

– Бәр-рәс, ҡайныеҙнәм, силсәүиттән һора. – Зәриә етди генә ситкәрәк ҡайырылды. Гүйә, әле генә таҡмаҡ әйтмәгән, әле генә ҡылансыҡ бейештермәгән.

Эй, Бураш тауыштары!

Кәмәсе көлә-көлә урамға атланы. Ҡатындар бер-береһен етәкләгән көйө, ҡурҡыштарынан ҡыскырыша-ҡыскырыша, ауыл ситендәге текә ярҙан ҡырсынға төштөләр. Зәңгәрһыу шыйыҡ төтөн бөркөлгән таллыҡ ситенә барырҙан алда, Зәриәнең ҡотҡоһона бирелеп, һыу инер өсөн шып туктап, сисенергә керештеләр. Егеттәр ҙә күрмәй, арьяҡта ла, бирьяҡта ла кеше-фәлән тойолмай. Хәйер, селләлә ҡатын-ҡыҙҙың ҡайҙа етте шунда һыу инеүе – был яҡтарҙа ғәҙәти күренеш. Уңарсы Тимур менән Зәриәнең ҡабырғалары беленгән яшыҡ Зөлфиәһе саптырҙашып һыуға ырғынылар. Бер килке күмәкләшеп, эй, кинәнделәр, һыуҙы тулҡындырып та сайҡалдырып. Аптырарһың Зәриәгә – сума ла, йөҙә лә белә. Төҫкә үтә сибәр булмаһа ла, буй-һындары ғәләмәт килешле. Ҡаштары ҡыйғас ҡына. Сикәһендә ҡыҫҡа ғына һыҙыҡ – уңалған яра эҙе беленә. Тондорған, буғай, һуңғы ҡайтыуында Зәбир тигән ир аҡтығы. Зәриә: «Зәпә, кейемдәрҙе усаҡ эргәһенә апар», – тине лә салҡан ятҡан килеш йөҙөр-йөҙмәҫ аҡты ла китте. Бындағылар арлы-бирле кибенеп, кейенешеп, төйөнсөктәрен тотоп барыуға, усаҡ эргәһендә тубыҡтарын ҡосаҡлап, былай ҙа ҡарағусҡыл арҡаһын ҡояшҡа ҡуйып ултыра ине. Ҡыҙыҡ, Зөлфиә менән Тимур, кескәйерәк айырым усаҡ яғып, ана, үҙҙәренсә «донъя көтәләр».

Эштәренә күрә, өмәселәргә һый таман ғына батты. Әсемәсене, улынан тартынып, Фәнидә эсмәне лә, аяҡсы булған Зәриә, йәнә Рәшит кенә кинәнеп йотҡоланы, башҡалар сүпәкәйләп кенә ултырҙы, уның ҡарауы, һемерҙеләр генә сәйҙе. Төрлө юҫыҡта хәбәр сурыттылар. Валентина менән Зәриә томбойоҡло яр буйлап йөрөштөрөп, ҡабат һыу инә һалып килделәр.

Йырлашып алдылар. Ҡара әле, тыңла әле, өндәшмәҫерәк булһа ла, Фасил хаҡында «моңло ғына йырлай» тигәндәре дөрөҫ, имеш тә. «Йә, эсмәгәсһең, исмаһам, оло һыуға ҡарап тороп,

минең көйҙө йырла», тигәйне Рәшит дуҫы, баҫып, йырлап та ебәрҙе егеткәй. «Минең көйҙө» тигәнен тора-бара башкалар ҙа күтәреп алды, ауыҙ эсенән генә мөңрәп, Валентина ла ҡушылды.

*Һиңә килдем, иркәм,*
*Үткән юлдарымдың*
*Һанай-һанай алыҫ сакрымдарын.*
*Килдем, тормошомда*
*Кисеп яҙмышымдың*
*Шатлыҡтарын, һағыш, ялҡындарын.*

Фәнидәнең күҙ алмалары дымһыуланды. Уф, Барыйы, ошо йыр тапшырылһа, тәҙрәнән Иҙелгә текәлеп, радионы ҡеүәтлерәк аса торғайны. Мәжлестәрҙә инәлтеп кенә йырлап та ебәрер ине... Ә Фәнидәгә был йыр хәҙер, киреһенсә, ауыр тәьҫир итә. Ул да яҙғы-көҙгө ташҡындарҙа, тәҙрә аша йә ихатанан, әллә мине лә алаһыңмы ҡуйыныңа, тигәндәй, һағыш, юҡһыныу, яңғыҙлыҡ хистәренә сыҙаша алмаһа, нәк ошо йыр бәғер иттәрен телеп сыңлаған саҡтары аҙмы ни уның? Инде һуңғы осор баҫыла башлаған ҡайғылары, гүйә, ҡабат терелде: Лира бахырҡайы ниҙәр генә уйлап яталыр унда? Ҡуй, ултырмаһын әле бында моңайып, ҡайтһын өйөнә, һыпыртһын Өфөләргә иртүк. И, ял шул, йәкшәмбе лә һә иртәгә. Унан килеп, өмәселәрен ташлап китһә, йәпһеҙ буласаҡ.

*Һиңә килдем, иркәм,*
*Килдем йылдар буйы,*
*Һанай-һанай алыҫ кондәремде.*
*Баҫа алмайынса*
*Ярһып яныуҙарын*
*Әрнеп оҙголәнгән йорәгемдең...*

Бөтәһе лә тынып ҡалды.

— Аҙағын да йырлап ҡуяйыҡ.— Был юлы Зәриә башлап ебәрҙе:

*Һиңә килдем, иркәм,*
*Бик һағынып килдем,*
*Шаулап-гөрләп*
*Йәмле яҙҙар еткәс.*
*Алыҫтарҙан яҙған*
*Сәләм хаттарыңды*
*Котә-котә түҙемлегем боткәс...*

— «Тапшырылмаған хаттар» мы әле был? — Быны бер килке өнһөҙ ултырғастары Рәшит әйтте.

– Юк, юк, спектаклдең исеме шулай, ә йыры – «Һиңә килдем, иркәм». Кушнаренда укыған сакта академтеатр килгәнен һис онотмайым, – тип ҡәҙимге халәтенә ҡайтҡан Фәнидә аныкльпк индерҙе. – Эх, бар ине йәш сактар!..

– Йәш сактар, тиергә, картһындыр шул! – Һәр һүҙгә ҡыҫылмаһа, Зәриә Зәриә булалыр. – Әле һин, түтәйем, бынау кәләш алмай йөрөгән ике тауарışты һуғыштырырһың әле.

– Кит, юкты, – Фәнидә ысынлап асыуланды. – Лирамдан икеөс йәшкә генә олорак таһа Фасил менән Рәшит. Йә, ярҙамығыҙ өсөн рәхмәт, инде хуш итәйек.

Беренсе булып Валентина ҡалкынды. Ул бая ук ҡул сәғәтенә күҙ һалғылай ине. Үтә күренмәле оҙон ак шарфын муйынына урап, бер осон түшенә, бер осон аркаһына һалындырып рәтләне лә өҙөк-йыртык моңланып алды:

*А любовь как сон, а любовь как сон,*
*А любовь, как сон, стороной прошла...*

Егеттәр яр ситләп үргә, Валентина аҫка юлланды, ә Фәнидә менән Зәриә, балаларын эйәртеп, әйберҙәрен төйнәштереп, гәрсә ташландык ук түгел, хәҙер нисектер ҡот-бәрәкәт ҡунған йортто бикләштереп ҡайттылар. Фәниденең эсендә икеле-микеле хис һаман ҡайнаша: берәй һатып алыусы кыҙыкһынып, арыу ғына хак тәкдим итһә, елгәреп тә ҡуйыр – ни яҙык, сырхау Лираһы хакына бит.

* * *

Зәриә Дилбәр апайына ингәйне, уныһы әүәлгесә һеңлеһен күҙенә лә элмәгән һымак ҡылана, Зәпүшкә алдында иһә өтәләнеп өлтөрәнә, әйтерһең, ҡан балаһы. Быға әҙ-мәҙ күңеле ҡытыкланған Зәриә ҡайҙа йөрөгәндәрен, ни аткарғандарын тырт-мырт аңғартты ла мунса яғырға кереште. Әйҙә, кыҙын йыуындырып алкайтһын әле, апаһына ла, үҙенә лә сабыныу зыян итмәҫ. Эх-ма, башы ауыртҡан кеүек, бирмәҫ инде йүнәткесен кәкерәйгән бисура, бирер ҙә ине – юктыр, шайтан һыуын тупһаһы аша ла индертмәй һуңғы осор. Эскән кешене ене һөймәй! Элегерәк тә, утын-бесән ташытһа, ир-атты тактанан әтмәләнгән йәйге утъяккысында ғына һыйлаштыра ине.

Миндек бешекләр алдынан Зәриә апаһының юк-бар мөлкәтен барлап сығырға форсат тапты. Бәй, синнегендә инде нисәмә йыл киндер ток тулы бына тигән һарык йөнө аҫыулы тора. Бирһен шуны, үҙе хәҙер йүнләп энә тота алмай – ғүмер буйы һәүкәш имсәген тартканға бармактары ҡалтырана. Һаранланмаһа апайы, ал әйҙә, түлке тәүҙә ҡыҙыңа, шунан үҙемә

икешәр пар бейәләй, башалтай бәйләп бир, тине. Ризалашты Зәриә. Унса сеймалдан йөҙ үк булмаһа ла, илле пар ойоҡ бәйләргә мөмкин. Бәйләм эштәренә ҡыҙын да өйрәтер бер ыңғай.

Көндөҙ бик эҫе ине, хәҙер ямғыр еле иҫкәндәй.

Мунса төшөп, былтырғы еләк ҡағы менән сәй ҙә эскәс, кәйефе ярайһы күтәрелгән Зәриә, соланда йөн тоғон сепрәк йыртышы менән ҡыҫыбыраҡ сырмап, өйгә инде. Бәй, Зөлфиә бая янтайып ҡына яҫтыҡҡа терәлгәйне, йоҡлап та киткән. Арығандыр, бәләкәс эш тә эләкте үҙенә. Инәкәсе, ҡорттан сәбәләнгәндәй, ҡулын болғаштырып бышылданы: «Уятма, иртәгә үҙем кәмәлә оҙатып ҡалырмын, һин... бар, тай». Тай, ти бит әле, ирҙәр һымаҡ. Тай, тип ғәҙәттә эргәләренән һөймәлекһеҙ кешене ҡыуалар түгелме? Үпкәләмәне быға Зәриә, хуш тигәнде аңлатып, шапылдатмай ғына усын уска һуҡты ла, буйына тиң йөк күтәргән ҡырмыҫҡа кеүек, йөнлө тоҡто терһәге бөгөлөнә еңел генә элеп, урамға йомолдо. Ҡайтырға кәрәк, сусҡаһы торалыр мырҡылдап, бесәйе зарығалыр мыяулап.

Һөйөнөскә күрә, өҫтөнә йоҡа ғына көрән куртка, башына аҡһыл сепрәк кәләпүш кейеп алған Фасил кәмәһенән ишкәктәрен һурып маташа ине, Зәриәне шәйләп ҡалғас, кире ныҡытып, кәмә осон сайҡалдыра-бәүелтә, яр ситенә махсус түшәлгән имән яҫҡаларына баҫты. Йәнәһе, Зәриәнең тоғо ауыр кеүек, ярҙамлашһын әле.

— Ҡабаланма, менәм хәҙер... — Егет текәгә — ҡарар күҙгә аҫтан ишкәк буйы ҡыҙғылт балсыҡ, өҫтән метрға яҡын ҡара тупраҡ һыҙаты асыҡ бәрелеп торған ярға тартылды. Уңарсы Зәриә әлеге текә ярға өңөп-соҡоп һалынған таҡта баҫҡыстарға шап-шоп баҫып төшөп тә етте.

— Бер тоҡ шәкәр минең көскә бүстәк ул. — Ҡатынҡайҙың һөйләшеүе уйынсыл. Мәрәкәнең айышына төшөнмәгән кәмәсе «ә-ә» тип һиңмайланып, һонолоп та өлгөрмәне, йәнәшенән Зәриә тоғон елһерәтеп уҙып та китте. Кәмә сынйыры шалтыр-шолтор тағатылған арала ләпелдәүе лә хикмәтлерәк була барҙы. — Самауынка ҡайнатам да һине һыйлайым, ҡәйнешкәйем. Гелән бушҡа ишкәк иштереү оҡшамай ҙа инде. Түләр инем — мани юк, ағайыңдан онотканда бер перевод килгеләй. Хаты һирәгәйҙе. Күңел һиҙә: яттар менән сыуала ысволыш. Сукынып китһен, айырылам да ҡуям. Илдә сыпсыҡ үлмәй, тиҙәр, дөңкәйеп ятмам әле.

Эңер һиллегендә ишкәктәр сап та соп килә, кәмә йылдам ғына арғы ярға уҡталды. Алыҫта ҡаҙҙар ҡаңғылдашты, ҡайҙалыр эт өрҙө. Зәриә һүҙе-ымы менән түгел, ҡыланышы-хәрәкәте менән дә шаяртырға булдымы, бер заман кәмә берсә уңға, бер-

сә һулға кәшкәндәп алды: ике ҡулын ике бортҡа терәп, еңгәсәйе үҙе бәүелтә икән. Фасил, әлбиттә, әллә ни өркөп бармай, мәгәр етди генә әйткән булды – йомоктан да әҙәмсә һүҙ сыҡҡылай.

– Минең илап ҡалыр балам юҡ...

– Ҡурҡмағасһың, маладис. Һин бестәтәү инеңме икән, ну мин бәкәс кенә саҡта, ошо тирәлә каснуй кәмә түңкәрелгәйне.

– Белә-әм, – Фасил әйәк ҡаҡты.

...Ауылдың гөрләп торған сағы. Йәш-елкенсәк Бураштан Олотүзгә уйынға сыҡҡылай. Ошоноң ише эңерҙә тейәлешеп, Лиралар тапҡырындағы болаҡтан гармун тартып, шар ҙа мар сығып киттеләр бер заман. Понтон күперҙе ваҡытлыса ремонтҡа япҡайнылар, яҙғы ташҡын ҡайтып бөтмәгәйне. Шаярышып, егет-елән урталай теленгән ҡыяр һымаҡ ҙур кәмәне уңғаһулға бәүелтергә керешә. Әл дә генә һайыраҡ ерҙә түңкәрелде оҙонса каснуй, әл дә генә бер кем батманы. Уттан ҡалыр, һыуҙан ҡалмай, тигәндәр, һыу менән шаярырға ярамай. Алҡын, төбө күренмәй был зәһәр йылғаның. Кемдәр генә кисмәгән, кемдәр генә мәйет булып аҡмаған унан... Гәзиттә яҙҙылар ҙаһа яңыраҡ, ана, батыр Салауат та йөрөгән был яҡтарҙа айбарланып. Ҡайҙалыр Елдәкме, Йәлдәкме тигән крепость та булған, ти. Хәҙер һыуһаҡлағыс ҡуйынында микән?

Кәмә осо ҡырсынға һөжөрөлгәс кенә уйҙарынан арынды егет. Ул йәһәт кенә аяғүрә баҫты ла ҡайын һаплы багорына йәбеште. Этенеп, һайғараҡ яҡынайыр өсөн Зәриә шылып ултырғайны, Фасил етеҙ генә һайға төштө – белеп бөткән, бында итек ҡунысына һыу сайпылмай – кәмәне һөйрәргә мөмкин. Зәриә бында ла йылмаяҡланды: «Арҡаңа йөкмәп, ҡырсынға баҫтыр...» Фарманы үтәлгәйне, ашыҡмай ғына ауыҙ-моронон, ҡулдарын сайҡап алды ла яңы йомош ҡушты: «Тоҡто өйгә апар. Егет башың менән ике бот шәкәрҙе ҡыҙҙарҙан күтәртмәҫһең инде...» Бәй, мутлашҡан даһа «ҡыҙҙар» заты! Йөн йә мамыҡ түгелме тоғонда? Ҡабарынҡы булыу менәнме ни, ауырлығы мендәр һымаҡ. Өндәшмәне Фасил, артынан эйәрҙе. Зәриә, ҡараңғы ныҡлап төшкәнен көтәүләгәндәй, ығыш ҡына аҙымлай.

Оло урамдарҙа электр уттары балҡый. Тар тыҡрыҡтан юл сатындағы әбшәүәтле өйгә инделәр. Ҡараулы, буяулы ғына донъя бында. Ыҡсымыраҡ гараждарында өс тәгәрмәсле мотоциклдары була торғайны...

Йәйге өйгә – избенкаға әйҙәне егетте Зәриә. Ана, бына, тип электр сәйнүгенә, һыу бағына ымланы ла үҙе сускаһын ашатырға ашыҡты. Тауыҡтары өсөн бошонмай, емде мул һибеп киткәйне иртәнсәк.

Һыу быгырҙай башлауға оло өйҙән биҙәкле халатын кейеп, Зәриә килеп инмәһенме. Халатының алаптай кеҫәһенән аҡһыл

шыйыкса тултырылған ҡапҡасы бормалы ялпаҡ шешә, паштет консерваһын һурып сығарҙы был, өҫтәлгә һуған-маҙар теҙҙе.

– Эсмәйем дә...

– Недоделанный мәллә һин! Әтеү таҡмаҡ әйтәм:

*Ҡариҙелдең аръяғында*
*Баҡа йөрөй һыу тапмай.*
*Ал яулыҡҡа алма төрөп,*
*Фасил йөрөй ҡыҙ тапмай...*

Ярты сынаяҡ өҫтө зәһәр көмөшкәне арбап-мыҫҡыллап эсерҙе Зәриә. Үҙе, үрнәк күрһәтерҙән, тәүҙә өс кенә һемерҙе. Тора-бара телдәре сиселде йәштәрҙең. Аҙағыраҡ нәфсеһе хәттин ашты хужабикәнең.

– Ҡәйнешкәйем, егеттәрҙең дә «сафлығы» була, һин татыған тәүге бисә булайымсы, – тип тәүҙә тиктормаҫ ҡулдарын егеттең тубыҡтарына һалды, шунан аҫҡараҡ шылдырҙы, һыйпаштырырға, тызырға маташты. – Эсмәүең, тартмауың һәйбәт, тик бына ҡатын-ҡыҙға әүрәмәүең нормально түгел... Сисен...

Һағыҙаҡ саҡҡандай ырғып торҙо Фасил, ишек төбөнәрәк шылды.

– Зәбирең – миңә абый тейеш. Нисек инде... Яратмайса?

– Абыйыңдан айырылам, типем бит. Причем бында яратыу? Йүнһеҙ! Кемде ҡыярлағаныңды белмәй тиһеңме әллә? Туберкулезник студентҡаға эсең ҡайышамы? Һин уға терпе итен ашат, мужыт, шәбәйер. Шәбәйһә лә, һинең ише безграмотныйға әйләнеп тә ҡарамаҫ. Уфанан ҡайта буламы шул, ә?!

Тәүҙәрәк ул-был мыҫҡыллауҙарға бәлтерәмәһә лә, бисара егет туберкулезник, терпе тигәнгә тамам һаңғәҙәне.

– Зә-әр... ҡайтам.

– Тай бынан, йүнһеҙ. Армияла тукмалып йөрөгәнһеңдер әле, немуй булып, голубой булып. Бында ингәнеңде берәйһенә шапылдаһаң, абзыйыңдан үҙем туҡматам, белдеңме? Ана ята курткаң, стиралка өҫтөндә.

– Ә-ә, ә-һә...

– Мин әләкһәм, ыһым, тиер ине берәү! Ысправка килтер тәүҙә, балнуй...

Бая сәғәткә яҡын уҙған араны ун биш минутҡа ла һуҙманы Фасил. Әл дә генә иҫермәне, шәт берәй нәмә ҡылыр ине Зәриә лә тигән нәҫтәкәй. Америка киноларындағы һымаҡ.

Әсәһе көтәүләгән, борсолған. Һукранды.

– Күрҙем бит аръяҡҡа сыҡҡаныңды, ниңә Зәриәне өйөнә тиклем оҙата барҙың? Кеше теленә инеп ҡуйһаң, быуып үлтерәсәк Зәбир! Бар, мунса инеп ят...

Әсәһе, бер уйлаһаң, нигеҙле шөрләй. Булыр ул Зәбирҙән.

Армиянан ҡайтып, һалдат формаһын сисмәй, ауылдан ауылға ике-өс ай сабауланы. Кәмә юҡта хатта Иҙелде йөҙөп сығып, клубка бәреп инер ҙә егеттәрҙе смирноға баҫтырыр, ә ҡыҙҙарҙан кемде теләй, шуны оҙатып ҡуйыр ине аҙаҡ. Зәриәне шулай ҡаптырҙы, шәт. Арлан арыҫлан һымаҡ. Ҡаптыра инде, ауыҙына үҙе инеп барған инә бәрәс булғас...

Йәмһеҙ килеп сыҡты аръяҡка йөрөп әйләнеүе. Хәйер, Зәриә менән ни һөйләшкәнен, ни ҡылғандарын кем күргән дә кем ишеткән? Тик бына... терпе... туберкулез... Анау юлы «санитарка», тимәк, Лираны тиктәҫкә генә ултыртып алып китмәгән Өфө тарафтарына. Ә Фасилдың «эсе ҡайышҡаны» кемдең ләстите икән?

Уҙған бер байрамда, соландан Лираларҙың ҡалҡыуҙағы өйөнә оҙаҡ ҡына ҡарап, хыялланып торғайны. Күргәндер ҡартлас, валлаһи, ҡыҙмаса башы менән һиҙгән. Һиҙмәһә, аныҡ ҡына битәрләр инеме? «Һантый һымаҡ Өҫкө урамға текләйһең дә тораһың. Ай-бай, буйың етмәҫ ботаҡҡа үреләһең түгелме, малай? Ул кем дә һин кем! Былай ғына әйтәм, биғәйбә. Әгәр шул студентка риза икән, иртәгә үк, юҡ, хәҙер үк яусы ебәрәм...» — тип бытырламаҫ ине. Юҡ, юҡ, атаһы был хәбәрен бүтәндәргә таратып йөрөмәгәндер... Ә кем белә, градусы етһә, һөйләнепме һөйләнә. Колхоздың һөрөнтө ерҙәрен, аҙа барған көтөүлектәрен, һирәкләнеп ҡалған урман ишаратын ауылдағы зат-араға башма-баш бүлергә тотонһонмо, шәп кешеләй битләүҙә умартальк асырға йә Күлбарҙа ҡаҙ-өйрәк фермаһы һалырға ҡыҙышһынмы. Тел ни, һөйәкһеҙ... Асыр ҙа ине, әгәр айныҡ сағы күберәк булһа.

Атаһы ауыҙынан сыҡманиһә, кем тараткан һуң? Яман хәбәр түгел дә, яҡшы хәбәр ҙә түгел. Әллә: «...һантый һымаҡ... текләйһең дә тораһың», — тигән битәре урамдан үтеп барған сит-ят кеше ҡолағына салындымы икән? Тыҡрыҡ аша йәшәгән Дилбәр ишетеп ҡалмағандыр ҙа? Ә-һә, ул көндө кис апайының ихатаһында Зәриә уранғылана ине. Эйе, эйе. Ә терпе итенең шифаһы хаҡында бөгөн гәпләшкәндәрҙер. Бәлки... Фәнидә түтәй үҙе зарланып һөйләгәндер ҡатындарға, өмәлә саҡта. Һөйләһә, ни ғәжәп, «санитарка»ны бирьяҡта ла, арьяҡта ла күптәр күрҙе. Райүҙәктәге табиптарҙың да ауыҙына йоҙаҡ элмәгәндәрҙер әле.

Мунсанан таҙарынып сыҡҡас, йүнләп ашап-эсеп тә тормай, Фасил верандалағы йәйге бүлмәһенә инеп ауҙы. Барыбер таңға ҡәҙәр йоҡо алманы үҙен. Төндә шыбыр-шыбыр ямғыр яуып уҙғанды ла һиҙеп ятты. Яуһын әйҙә, юҡһа, ер ҡорғаҡһып бара.

Әллә һыпыртырғамы баш һуккан тарафҡа? Ни фәтүә Бураштта юҡты бушҡа ауҙарыуҙан? Ней эше, ней ашы юҡ... Ауылың йәмле булыуҙанмы, толҡаһы-тоталҡаһы булмағас.

## 3

Эй, тормош һин уйлағанса ғына тәгәрәһә икән... Иртәгәһенә, йәғни дүшәмбелә лә, юллана алманы Фәнидә Өфөгә: райүҙәккә килгән Өфө вәкиленә Сасынды күрһәтергә тейеш икән Николай Тимерәйевич. Күрһәтергә, тигәнсе, ҡунаҡ итергә, тиһәсе – ҡыйыш булмаҫ. Кооперативтың аулаҡ урмандағы умарталығында ыҡсым ғына ҡунаҡ-төшөм өйө, йәтеш кенә сауна бар. Тимер сыбыҡ менән кәртәләп алынған умарталыҡта.

Кескәй генә сөмәкәйҙән – һалҡын һыулы күләүектән баш ала Сасын йылғасығы. Уныһы, бураштар әйтмешләй, түҙҙә (тамаҡта) әҙәм ҡарағыһыҙ йыуынтыға әйләнгән һыуҙарын Иҙелгә ауҙара.

Тимәк, умарталыҡта һыйлап ебәрмәкселәр үткенсе Өфө вәкилен. Ярай ҙа, уныһы төнәргә ҡалмаһа... Ҡалһа, Фәнидә йәнә бара алмаҫ Лираһы янына.

Умарталыҡ иҫенә төштөмө, Фәнидә ытырғаныш ҡуйғылай. Шунда... колхоздың элекке рәйесе йәбешә яҙҙы. Йәшерәк сағы, матурыраҡ сағы ине Фәнидәнең. Барыйын юғалтыуына ике йыл ғына уҙғайнымы. Председатель дә типһә тимер өҙөрҙәй мыҡты ир. Еңел һөйәкле, кәүҙәһе килбәтле. Ана шул бер көн ҡыҙмаса башы менән идаранан Фәнидәне, УАЗ-игына ултыртып, рулен үҙе борғослап, баҫыу ҡарарға әйҙәне. Сәсеү бөткән, яңыраҡ һабантуй ҙа уҙғайны. Баҫыу ҡарау урынына, Сасын ситләп умарталыҡҡа ҡайырмаһынмы машинаһын. Әҙәм заты юҡ ҡалма тулы, һалҡынса умартасы избенкаһында. Ҡайҙалыр эсеп ятҡан умартасы Файрушин. Ҡуналҡа өйө, сауна-мунса ла буралмағайны ул саҡ. Затлы шарап, шоколад-фәлән сығарҙы рәйес, көрөшкәгә мул һалып эсте лә, йәнә оймәләм тултырып, Фәнидәгә һондо. Ҡатынҡай, ниҙер һиҙенеп, баш сайҡаны, ә теге һөйләнепме һөйләнә. Йәнәһе, оҡшата Фәнидәне; уратып-суратып та тормай, һөйәркә итергә иҫәбе барлығын белдерҙе. Шаяртамы? Оҡшамаған. Әзмәүергә ҡаршылашыуҙан фәтүә сыҡмаҫ, айыуҙың да иҙмәһен иҙер. «Йыуынып киләм...» – тине лә Фәнидә, теге шикләнмәһен өсөн ҡулйыуғыстан һабын алып, таллыҡ уратымындағы ҡаран яғына ыңғайланы. Ҡанаты яңы сыҡҡан өкө сепейенә оҡшап, дүрт ишеген дә елләтеүгә асҡан килеш УАЗ-ик тора ел ҡапҡа алдында.

Йөрәге дөп-дөп тибә. Баҫтырып килмәйме? Ҡайҙа ҡасырға? Шырлыҡтан тураға һыпыртыр ине, шөрләтә – бүре күргеләйҙәр Култөбәк тирәһендә. Йүгерҙе Сасынға ҡулдарына бейек кенә үксәле босоножкаларын тотоп. Ауыл күренгәс кенә тынысланып, аҙымлауға күскәйне, әзмәүерҙең ҡалын, әммә баҫынҡы тауышы салынды ҡолағына: «Ултыр машинаға!» Фәнидә икеләнеберәк аҡайып торғанында, – һемәйеүҙән бигерәк ҡиә-

фәтендә акылға килеү, үкенеү ғәләмәте – әйтерен дә әйтеп бөттө: «Минән көлмәҫтәр, һинән көлөрҙәр... Минән бая бер нәмә лә ишетмәнем, тип уйла. Ҡабат ишетмәҫһең дә...» Дөрөҫ әйтә, ғәйбәт һаҙлығына ҡатын-ҡыҙ бата бындай хәлдә. Ярай әле, бер кем күрмәне, бер кем осраманы.

Һүҙендә торҙо рәйес. Ҡыланышынан да, теленән дә ул-был ым-ишара тойолманы ҡабат. Эшмәкәр генә ине үҙе, техниканы якшы белә. Приватизация тигәндәре башланғас, ғариза яҙып, вазифаһынан бушатыуҙы һораны, шунан ғаиләһен, бар мөлкәтен бер генә такта йөк машинаһына тейәп, йәнтөйәгенә һыпыртты. Урман ҡырҡыу кәсебендә уртасарак түрә, тиҙәр, хәҙер. Пенсияға иртәрәктер әле уға, кәмәсе Фазылдан бер-ике йылғамы йәшерәк ине шикелле. Ә бит теге сакта, умарталыкта... Әгәр ҡуян ҡанылай ҡуйы «Кагор» йоткан булһа, кем белә, һалыр ҙа ине ҡак һикегә. Ир көҫәмәҫ тол ҡатындар һирәк донъяла... Фәнидә лә аҙак ҡылтымбикәлегенә үкенгәндәй итте түгелме?

Шундай көфөр хәтирәләргә сума-сума, тегендә-бында сабаулап үткәрҙе хеҙмәт көнөн Фәнидә. Күстәнәстәре иҫкермәгән, һөтө лә әсемәгән. Иртәгә барырбыҙ Өфөгә, тине Гриша, эшем эйәһеләй ҡупайып, ҡара шыптыр менән Николай булмәһендәге һыуыткыстан туңдырылған балык алып сығышлай. Тәңкәләре ҡырылып, таҙартып һалынған, ҡурыуға тәмле яҫы ҡорһаклы дәү ҡорбан. И, Барыйкайы аҙ ашатманы ул аҫыл балыкты! Эрерәктәре дәү табаға сак һыя торған.

Райүҙәктән район башлығы урынбаҫары Сәмерханов та ҡара «Волга»һында килгән. Вәкил тигәндәре ликвидация комиссияһынан – тапкандар исем! – банкротка эләккән Бураш колхозы менән алыш-биреш ҡалмағанмы, шуны тикшерә, имеш. Фырт кейенгән. Йәштәрҙеке замана хәҙер. Район түрәләре лә ҡырк-илленән уҙмай, буғай.

* * *

Фәнидә мәрхүм ҡайныһы утынлығындағы тутык һандал, кесерткәнлектә аунап яткан ат һабаны, келәт башындағы тәгәрмәс шиндары, сана табандары өсөн хак һорамаҫ ине, рөхсәтһеҙ «шылдырғандары» өсөн генә шелтәләр ине Фасил менән Рәшитте. Вәт, ҡәһәр төшмәгерҙәр, һөйләнеп ултырған булалар бит әле усак янында. Имеш, хәҙер ауылда, яр буйҙарында, ферма, ырҙын табағы, иген үлсәгес, элекке гараж, пилорама тирәләрендә тимер-томорҙо көндөҙ шырпы яндырып эҙләһәң дә таба алмаҫһың. Куренгән берен, ергә һеңеп, берәй осо сығып яткан берен әкренләп кенә Рәшиттең «Беларусь» арбаһына тейәп, Сасындағы заготовителгә тапшырып торабыҙ ҙа, тимәй-

ҙәр. Райүҙәккә алып барһалар, икеләтә күберәк хакка елгәрерҙәр ине лә, их, «Беларусь»ка йүнле документтары юк икән. Уны ла, колхоз барлы-юклы мөлкәтен тәләфләгәндә, элекке бригадир Надир ярҙамында ҡәрҙәше Рәшит осһоҙға эләктереп ҡала алды.

Ни тиһәң дә, өс туған Надир ағайы заманында йәйҙәрен механизатор, ҡыштарын механик булды, бөтмөрлөгө өсөн премиялар алғыланы, хатта бер ҡара көҙҙә атаҡлы «Янғантау» курортына путевка ла тәтене. Унда күргән-белгәндәрен кешеләр тыңлап бүккәнсе тәмләп-тәмләп хикәйәләр ине элегерәк. Бригадир ҡамытын кейеп тә арыу ғына эшләне. Тик бер гонаһы өсөн төрмәгә эләкте һәм йыл ярым ултырып ҡайтты. Хәҙер лесхоз разнорабочийы булып йөрөй, етеш кенә йәшәй. Йыш ҡына Рәшитте тракторы менән урман кәсебенә йәлеп иткеләй.

* * *

Фәнидә йәкшәмбе юлға йыйынды. Табиптар рөхсәт иткән, тиҙ боҙолмай торған ризыҡтар барланиһә, улары таҡы-тоҡо ғына булып сыҡты. Шим балды үткән юлы алып барғайны, әҙмәҙ кәрәҙле бал, шыйыҡ ҡаймаҡ, сәк-сәк илтергә булды. Кәрәҙле балды, моғайын, юл ыңғай ике туған апаһына инеп алыр. Уларҙың ауылы трассанан аҙ ғына эстәрәк. «Нива»һын бирерме Николай Тимерәйевич? Бирер, һүҙен елгә осормай торған ир ҙәһә. Бураштыҡылар, ана, мариҙар колхоздың бөтә ҡаралтыһын ташыны, үҙҙәре бригадаһын кооперативка әйләндереп, геүләтеп тормош көтә, тип сүбәк сәйнәй. Берҙән, Сасында башҡорто ла, татары ла, урыҫы ла байтаҡ хәҙер. Мариҙар, эйе, күпселек. Хикмәт милләттә түгел, вайымһыҙлыҡта. Бураштар электән эшкә ығыш, эскегә бирелгән, тип сасындар елғыуарланмаҫ инде. Әллә ни уңмаһа ла, иген, йәшелсә үҫтереп, фураж әҙерләп, һуғым малдарынан умырып тимәгәндә лә, апаруҡ табыш алалар. Элек Бураш бригадаһы гектар артынан ҡыуып киңәйткән баҫыуҙарға баҡ: мал йоғонмаҫ сүп үләне, эт танымаҫ ҡыуаҡтар ялмай. Һарыҡ үрсетеүгә йәтеш тә бит, әллә кемдәр ымһына, тиҙәр, килмешәктәрҙе хужа иткәнсе, Бураш та шуны ла хәстәрләр йүнсел юк, застуйын ирҙәре лә олоғайып-бөкөрәйеп бөттө. Фасил һымаҡ мәүештәрҙең генә ҡулынан килер микән?

Кредит алып, үҙем тотонһам, тип дәртләнеп ҡуйғылай ҙа Фәнидә, ана бит, тормош тигәнең артын күберәк күрһәтергә кереште. Кем әйтмешләй, тормош яҡшырған кеүек тә ул, йәшәүе генә ауырлаша бара.

Шулай, нисә ҡат рәхмәт укыһаң да аҙ инде элекке ҙур колхоздың баш инженеры йөгөн тартҡан Николай Тимерәйевичка. Былтырҙары әлеге лә баяғы Кушнаренко дипломы менән

Сасынға ҡайтҡан Гришаның әлегә эшкә артыҡ барымы юҡлығын төшөнөп, тегене Фәнидәгә мисәүгә тәғәйенләне һәм икеһенең дә хеҙмәт хаҡтарын тигеҙләне. Ә бит тәүҙә киреһенсә ине. Ярай әле, ғәрсел йә кенәсел түгел Фәнидә. Николай ҙа, яҡын күргән кешеләй, Хамматовна тип, ауыҙына ғына ҡарап тора. Дүшәмбе көн, Алла бирһә, йомош-юлға күберәк белгестәргә бүленә торған «Нива» руленә Гриша ултырасаҡ. Сөнки баш ҡалала ул орлоҡ мәсьәләләре менән шөғөлләнәсәк, ә Фәнидә Лира эргәһенә бармаҡсы.

Ҡапылда аҡсаһы етмәҫтер, шуға өйкәләнә. Бурыска батырмы? Батһа ни... Үтескә алыу – борондан йола. Тик кемдән һорарға? Яҡынлата йөҙ һыуын түктермәҫтәй, алыш-бирешкә ҡулы еңел кемгә мөрәжәғәт итергә? Хәллерәктәрҙән иң яҡынырағы Янбаевтар инде. Фазыл аҡса һанап, аҡса тотҡан әҙәмгә оҡшамаған, Фасилы ла тотмайҙыр, унан, әлегәсә йүнле-башлы эшләгәне лә тойолмай. Әсәһендә инде аҡса, лавкасыла. Ашыҡмай ғына атлап йөрөй Сара, үҙ баһаһын белеп, һауалы һөйләшә. Кәүҙәгә иренән ҡалҡыуыраҡ та, ҡалыныраҡ та һымаҡ. Шулайҙыр, юғиһә, шаяртмаҫ ине Фазыл: «Минең Сара һыуға инә күрмәһен, юғиһә, һыуҙар ташып, өйҙәр ағып китер, йә ни...»

Өҫ-башын рәтләп, Тимурына иҙән һепererгә ҡушып, китте йомошҡа Фәнидә. Ҡапҡаларын асып, ихатаға керҙе. Эттәре бәйле икән. Ниҙер зырлай, сытырлай. Бәй, яңы мунса бурайҙармы? Ә-һә, кескәй генә магазин асырға теләйҙәр, ларектан файҙа юҡ, тиҙәр ине. Ларекта ни гелән ҡаплы, шешәле аҙыҡ-түлек кенә инде. Магазин асһалар, йәтеш булыр. Тик ятмағас, дәрттәренә дарман, алыпһатарҙар заманаһы бит.

Фазыл күренмәй, Фасилы электр йышҡыһы менән таҡта шымарта. Бура эсендә үк. Бураның нигеҙе юҡ, тимәк, эше бөткәс, ҡайҙалыр йәтешләп һалмаҡсылар. Еҫе танһыҡ шул ҡарағайҙың.

– Хәзәйкәгеҙ ҡайҙа ул? Сара апай кәрәк ине.

– Хәҙер, түтәй, әнкәй өйҙә.

Ҡапҡа шыҡылдағанын ишетепме, тәҙрәнән кеше барын күрепме, яй ғына сығып, «хәзәйкә» болдорға баҫты.

– Әйҙүк, Фәнидә, верандаға ин.

Ләкин төҫө боҙолған Фәнидә шундуҡ тайшанмаһынмы верандаһан! Ҡапҡа тимер ҙә асыулы шалтыраны. Ни булды? Ҡыйыр-ҡыймаҫ төпсөндө Фасил әсәһенән.

– Биш мең аҡса һорап килгән. Мин ни, расбискы яҙһаң, бирәм, тигәйнем, әллә үсегеп...

– Һин үҙең расбискы! – тип үсекләне әсәһен көтмәгәндә һомһоро ҡойолған улы. Бер аҙҙан егет, өҫтөн-башын ҡағып, бүлмәһенә инеп сыҡты ла Сара күрмәгән арала мал-тыуар

тапаклаған ураурырак һукмактан кабакка күтәрелде. Фәнидә Фасилды аптырабырак каршыланы.

– Бына, түтәй, өс мең булған икән өйҙә. Асыуланма инде әнейгә.

Бер аҙ икеләнеп торғандан һуң, Фәнидә алты бишәр йөҙлөктө халаты кеҫәһенә тыкты һәм йөҙөнә йылмайыу саткылары сәсте.

– Юксы, бушка асыуланып ни... Рәхмәт, энем, аҙна ла үтмәҫ, кайтарырмын. Бурыслы йөрөргә яратмайым мин.

Фасил әшнәһе Әбдерәш менән тимер-томор йыйып тапшырыуҙан йыйылған аксаны биргәнде, әлбиттә, Фәнидә түгел, егеттең әсәһе лә белмәй ине.

* * *

Әсәһен ярайһы кәйефле каршыланы кыҙы. Күнегәлер дауахана тормошона, нишләһен, бәлки, табиптарҙың иғтибарлы карауҙары ла, кимматле дарыуҙары ла килешәлер.

Татыу серҙәштәр ише, оҙак гәпләштеләр. Лира күберәк ауыл яңылыктары, Тимурҙың көнитмеше менән кыҙыкһынды, йылмая-көлә өмә хакында ла һөйләтте. Энеһен һорашыуы әсәгә айырыуса окшаны. Мәслихәт, атайы-олатайы һымак, туғансыл булмаксы кыҙы, кеше хәленә әлүктән инә белә. Тик Лира әсәһенең Сасын машинаһында, өҫтәүенә, бүлмәләш агроном менән килеүенә ыңрағандай итте, гүйә, ниндәй көнгә тарыуына һаман ышанмаған һымак тотто үҙен.

– Беҙ капсыкта ятмай, тиҙәр, барыбер бында ятканыңды беләсәктәр. Юкка көймә, шәбәйеү хакында ғына уйла, – берсә аклланғандай, берсә ноток укығандай һөйләнде Фәнидә. – Беләһеңме, кыҙым, һине апкайтып, өйҙә үҙем карарға, үҙем һауыктырырға ниәтләйем. Акса етмәһә, һыңар бөйөрөмдө... һатам...

Кеше хәбәрен кешегә бағып тыңлай, һис юғы, йөҙөнә карашын һирпеп ала торған йәтеш кенә ғәҙәте бар Лираның. Әле әсәһенең күҙенә карап тораташтай катты ла калды. Бер аҙҙан икеһенең дә битендә әсе йәштәр йылтылданы.

– Берәйһе кәңәш итте әллә, әней?

– Валюша түтәйең... – Бер аҙҙан ошо яуап ишетелде. – Имтомға белемсе уның заты.

– Халык медицинаһына артык ышанып бармағыҙ, тип тә иҫкәртәләр әле бында, – тине кыҙ, көрһөнөп.

– Врачтарға ла ышаныс аҙ хәҙер, тиҙәр халык медиктары. – Әсә һыңкылдабырак әйтте быны. – Врачыңды күрергә ине. Кем әле, теге һарыкай катын?

– Хәҙер төшкө аш етә, шунан тымык сәғәт, өстән – дүрткә. – Лира беләк сәғәтенә күҙ һалды. – Әле беренсе ярты ғына...

– Беләм дә ул. Сәғәт өскә машина килергә тейеш ошонда. Күстәнәстәрҙе алып ин дә врачыңды эҙләп ҡара, бәлки, ҡабул итер.

Лира теге аскаҡ ҡыҙ ярҙамында үҙен дауалаусы табибәне тиҙ тапты. «Әсәйем һеҙҙе күрергә теләй», – тигәс, бая фараз иткәнсә, тымыҡ сәғәт алдынан ҡабул итергә ризалашты аҡ халатлы һарыҡай.

Табибә Фәнидәнең тәкдименә тиҙ генә күнмәне. «Үҙем генә хәл итә алмайым, бындай ситуация йыш түгел», – тиеүе лә хаҡтыр. Әлегә баш табип исеменә «Л. Б. Кәримованы ... фәлән районның фтизиатры күҙәтеүе аҫтында тәрбиәләргә теләйем» тигән юҫыҡта ғариза ҡалдырып, ҡайтып торорға ҡушты. Фәнидәнең ниндәйерәк йортта йәшәүе, айлыҡ килеме, ғаиләлә кеше һаны хаҡында ауыл хакимиәтенән белешмә йүнләү ҙә зыян итмәҫ, тине. «Ҡасан килергә һуң?» – «Сама менән киләһе аҙна урталарына белешергә мөмкин. Заманса препараттарға аҡса йәлләмәүегеҙ – һәйбәт стимул. Пациентканы өр-яңынан тикшереп сығырға тура киләсәк. Фтизиопульмонологтар әйтәсәк һуңғы һүҙҙе. Анализдар патология күрһәтмәһә...» Фәнидәнең йәне көйҙө: «Был врачтар әҙәм телендә ҡасан һөйләшер икән? Әллә юрамал башты ҡатырамы һарыҡай? Пациентка... Анализдар... Патология...» Хәйер, ветеринарияла, агрономияла ниндәй телдә аңлашалар һуң үҙҙәре?

Ҡайтышлай Өфөнөң йылдан-йыл танымаҫлыҡ булып үҙгәреүен, әммә магазин, фирма, салон-фәләндәрҙең алъяҙмалары сит ил һүҙҙәре менән сыбарланыуын, машиналарҙың мыжғып тороуын, аҙым һайын баҙар-маҙарҙарҙың мәж килеүен ни яманларға, ни маҡтарға белмәйерәк ләпелдәп килделәр. Юлдар яҡшыра, раҫ. Фәнидә ҡыҙ сағында, уҡыйым тигән булып, барлыюҡлы автобустарға ҡыҫыла-ҡыҫыла, үткенсе машина борттарында һелкенә-бәрелә, Кенәз кисеүендә паромға сират еткәнен көтә-көтә юл йөрөүҙәрен һөйләп алды, юлдашы иһә кисә умарталыҡта алған тәьҫораттары менән әҙ-мәҙ уртаҡлашты. Бергә эшләгәстәре, ундай-бындай ғына хәлдәрҙән артыҡ сер яһамай улар, әле иһә шикләнергә Николай Тимерәйевичтың «күҙҡолаҡ» шоферы ла юҡ; рулдә үҙе ултырғас, борсаҡты эре яра егетең. Имеш, кисәге түрәгә йәш суска итенән шешлек тә, ҡыҙҙырылған ҡорбан балыҡ та, ыуыҙҙай йомшаҡ мари ҡыҫтыбыйы ла, сауна ла харап оҡшаған. Эсеп алғас, йырлап та ебәргәндәр. Быныһы хаҡтыр, сөнки Тимерәйевич та, бынау маҡтансығыраҡ Гриша ла йырға әүәҫ. Егет, өҫтәүенә, гитараға оҫта. Уға, бер уйлаһаң, артист булырға кәрәккәндер...

Бөтәһен дә белеп бөтмәй икән Фәнидә. Бынан ай самаһы алдараҡ әлеге умарталыҡта йәнә бер вәкилдең күңелен күргәндәр ҙәһә. Һый оҡшағас ни, төҙөлөш тресында эшләгән түрә,

ана, тотонолған, мәгәр сығынламай йөрөп яткан бер КамАЗын, йәнә бензин ташығысын, байтаҡ түбә материалдарын «Сасын» кооперативына бирергә вәғәҙәләп ҡайткан. Арыҡ аттай саҡ тын алған яңы хужалыҡ йоратынан бер нәмә лә артмай артмауын, иллә мәгәр бартерға икән, тимәк, итләтә, һуғанлата, картуфлата иҫәпләшергә тура киләсәк. Уларҙың үҙкимməте, һәр ойошма үҙен генә ҡайғыртҡанда, ай-бай...

Уңда ла, һулда ла эреләнеүҙән бер-береһенә тоташа яҙған ауылдар, баҫыу ситтәрендәге шыйыҡ урмандар, ағасһыҙ түмәләстәр күҙгә салына; насар яғы – бәғзе ауылдарҙың урта урамынан уҙа оло юл. Ҡош-ҡортҡа, бала-сағаға ҡурҡыныс. Яҡында йә алыҫта эреле-ваҡлы йәмле генә күлдәр, гүйә, өҫтәренә күк көмбәҙен ҡаплағандай, балҡып ятып ҡала. Бына Фәнидәнең тыуған яғына юл күрһәткес бағана тора һерәйеп. Их, ваҡыт тар. Шәбәйгәс, Алла бойорһа, өс-дүрт көнгә апкайтыр Лираһын йәнтөйәгенә. Тимур ҙа элекке йылдан бирле шау урман ышығындағы Аҡшиҙе малай-һалайын һағынып иҫкә алғылай. Кемдәндер яҙа-йоҙа ишеткәйне: «шишмә йырҙаһы» тигәнде аңлатҡан борон шиҙе тигәндәре. Шағирәнә атама!

## 4

Машина һеңкетмәй елдерә. Күңелдән моң урғылған кеүексе! Ирекһеҙҙән Фәнидә мөңгөрҙәп алды:

*Ҡайтам эле Әлдермешкә,*
*Әлдермешкә ҡайтам эле.*
*Шишмәгә тошәм эле...*

Көй тамам, бары тик мотор ғына геүләй. Рулдәге Гриша ҡабат илтифатлы әңгәмә ҡорҙо:

– Кәйефегеҙ шәп, Фәнидә Хамматовна... Лира арыуланалыр? Кредитығыҙ ҙа күскән шикелле.

Ҡәнәғәт раҫлау белдереп, эйәк ҡаҡты Фәнидә.

– Һеҙҙең өсөн шатмын, Фәнидә Хамматовна.

Әйтерең бармы, итәғәт менән гелән «һеҙ»ҙән һалдырып һөйләшә Гриша. Олоно оло, кесене кесе итә белгәне яҡшы инде ир-аттың.

Ир-ат тигәндәй... Тәү барғанда уҡ Фәнидә юлайкан киоскынан Лираның сиренә ҡағылышлы йоҡа брошюра алып ҡайтҡайны. Кәрәге тейер әле берәй кәңәш-төңәше, тип. Аҡҡа ҡара менән яҙылған: «Рәсәйҙә тәүлек һайын һикһәнгә яҡын кешене... әлеге яман зәхмәт гүргә тыға... Сиргә тарыусыларҙың һикһән процентын ир-ат тәшкил итә...» Ғәзиз балаҡайы егерме процент

иҫәбенә теркәлһә, нисек йәшәр? Әсәнең эске халәте көтмәгәндә мөштөмләнә биреп ҡуйҙы.

– Көләмәс һөйләйемме, Фәнидә Хамматовна?

– Шаҡы-шоҡо булмаһа тыңлармын.

Ул арала ҡырсын түшәлгән юлға боролоп, паромға яҡынайҙылар. Паром ситендәге ағас киҫкәһенә гәзит түшәп, Валентина, йәнә төҫө-башы үҙенә тартым ят ҡатын катерҙың техник тәнәфесе бөткәнен көтәүләп ултыра. Ә-һә, Мишкәлә пенсионерка апайы йәшәй шикелле.

– Апайкам шылтыраткас, түҙмәнем, килдем ҡаршыларға. Өс километр байтаҡ ара, берәй попутка осрар, тип ултыра инек, бына бит... Сумкаһы ауыр, етмәһә!

Яр күперенең таҡталары дыңғырҙап, һелкенә биреберәк ҡалды машина катер һөйрәйәсәк паромға уҙып урынлашҡанда. Тиҙҙән «Нива» Валентинаның тәҙрә баштары, ҡапҡалары семәрле өйө алдына барып туҡталды. Айырылышыр саҡта Валя, эхирәтенең ҡайҙан ҡайтҡанын белгән кеүек, ситкәрәк әйҙәп, Лираның хәл-әхүәлен һорашты. Ыңғай яуап алғанғамы, ҡыуанысын йәшермәйсә әйҙүкләргә кереште:

– Айда, кунак будем. Түтәй мәмәй килтергән. Да, мин скоро тоже порт чистартырға субботник организую. Захочет, Заришка ла килер. Юбилей пайрамына готовиться надо же! – Валентина һәммәһенә лә ҡапҡаһын шар асты. Фәнидә, өйҙә Тимур көтә, яңғыҙ ҡалғайны, өмәгә – мотлаҡ, Зәриә лә килер, тигәс кенә, артыҡ ҡыҫташманы Валентина.

Бураш осона етәрәк, рулдәге Гриша паром ауыҙында өҙөлгән хәбәрҙе ялғарға маташты. Хәтере лә хәтәр егеткәйҙең.

– Бая анекдот һөйләйем тигәйнем, Валентина Иванаевна осраны ла...

– Берәй саҡ икебеҙгә һөйләрһең. – Фәнидә иһә Зәриәнең лаҡабын иҫләп, үҙен үҙе белештермәй шырҡ-шырҡ көлөргә кереште. Айҙан ашыу ғүмер эсендә ...тәү тапҡыр! Өс көн элек өмәлә көлөргә тейеш ине ләһә.

Агроном тәүҙә аптыранды, аңын-тоңон белмәһә лә, ауыҙын бөршәйтеп, хихылдаған ишерәк ауаздар сығарҙы.

– Тыңлайым... – Гриша хатта һағыҙ сәйнәүенән туҡтап, машина барышын әкренәйтте.

– Уны руссаға әйләндереп булмай.

– Мариса һөйләгеҙ, аңлармын. – Агроном егет оторо ҡыҙыҡһынды. Уңарсы машина ауылға инде.

– Форсат тейһә, эштә һөйләрмен. Валюша ла белә: һин беҙгә, беҙ һиңә – баш на баш берәр анекдот, артығы кәрәкмәй.

...Килештереп, тәмләп һөйләүе Зәриәнең! Өмәлә тәҙрә өлгөләрен ышҡып йөрөгән Валентина, ҡабат һөйләтеп, тамам төшөнгәс кенә, башын сайкап-сайкап, эрерәк тештәре тотош күренгәнсе ауыҙын йырҙы.

– Райцентерҙә элек «р» хәрефенә һаҡауыраҡ коммунисмы, комсомолмы өйләнергә булған, ти. Яусы ебәрергә, никах уҡытырға ярамай – лично ҡоҙалай был кәләшен. Керә, әйтә: миңә тормошка сыҡ, өйөм дә ба(...), кәзәм дә ба(...), донъя көтәйек, ху(...) итмәм үҙеңде...

Ай, сукынсыҡ Зәриә! Үҙе килбәтле, үҙе егәрле, үҙе шәрҙыуан. Абау, күҙ теймәгер, һыу ингес кейемем юҡ, тип тормай, тоҡос ҡына осһоҙло күк плавкийы менән генә даръялай йылғанан өркмәй-ҡурҡмай йөҙә! Ул кәүҙәһе болғандай, ул сәстәре! Кейендереп ебәрһәң кәрәгенсә, әллә кемдәреңде ҡаратыр! Шуны ла әҙәмгә һанамаҫ икән берәҙәк Зәбир. Кәкуккә оя кәрәкмәй – бер ҡырға йөрөп, иркен йәшәп, оҙон аҡсаға өйрәнгән бәндә... Үҙе ҡыҙырас, үҙе ҡупырыш, үҙе ҡупшы... Эйе, кәкуккә оя кәрәкмәй... Баҡһаң, уның төкөрөгөндә ағыулы матдәләр – сепейҙәренә ярамаған элементтар була, имеш, биологтар раҫлауынса. Шуға улар бүтән ҡоштар ояһына һала икән йомортҡаларын.

Бухый Сара, ана, ҡалайтып «расбискы» һораған булды. Кешегә ышанмау – кешене кәмһетеү, улай ғынамы – намыҫына тейеү, выжданына шикләнеү... Быны үҙендә һынаны Фәнидә. Һы, ҡыйыш баҫҡанын мәлендә аңғарып, үтескә тигән аҡсаны малайына тотторол ебәргән. Малай һиңә, дауна ир ҡорона баҫырҙай застуйын егет. Ипле генә, иренсәк тә түгел шикелле, эсеп-тартып йөрөгәне лә тойолмай. Үҙе ише әҙәпле генә кәләш тапһа ярар ине.

...Өндәшмәҫ кенә егет менән һүҙгә һаран ҡыҙ өйләнешкәйне Шиҙелә. Көндәр буйы бер-береһенә ләм-мим һүҙ ҡатмай шулар, тип тә һөйләп сығарҙылар аҙаҡ. Улай тиһәң, яңыраҡ радионан бер ғалим күҙәтеүҙәре менән уртаҡлашты: уныңса, ҡатындар ирҙәренә ҡарағанда өс тапҡырға күберәк бытылдай. Булыр. Йәнә ҡыҙыҡ бер һынамыш яңғыраны: кейәүгә сыҡмаған ҡатын-ҡыҙ оҙонораҡ ғүмерле, сөнки уларҙы... өмөт йәшәтә.

Ҡапка алдында боролоп, машинаһын мороно менән аҫка ҡаратып ултырткас, Гришка, йәһәт ҡыймылдап, Фәнидә ултырған яҡтың ишеген асты. Шәхси шоферымы ни! Асһын! Күрһен, әйҙә, Расбискы Фәнидәнең төшөп ҡалғандарҙан түгел икәнен. Күңеле булып, егетте тамаҡ ялғарға ҡыҫтаны ҡатын, тик тегеһе баш тартты.

– Свиданиеға ашығаһыңдыр... – тип шаяртты Фәнидә. Гриша етди генә дөрөҫләне. Күпме буйҙаҡ йөрөргә мөмкин... Әхирәте Валюшаның: «Тау ашаһындағы урыҫ ҡасабаһына барғылауын йышайтты, шундағы учителькаға өйләнмәксе. Урыҫ урыҫ инде – Гриша мари ҡыҙҙарына ҡыҙыҡмай», – тигәне раҫтыр. Бирһен Хоҙай, егеттәрҙең дә һуҙмаҡайланмай өйләнеүе хәйерле.

– Туйыңа саҡырырға онотма, Гриша.

– О-о, Хамматовна, мотлаҡ! Иртәгәгә тиклем.

Күрәме Фәнидәнең Өфөләрҙән эре генә ҡайтып төшкәнен күршеһе Сара – Фазылдың хәләл ефете? Расбискы! Таҡһаң, үлтергес ҡушамат таһа! Күрәлер, бәрәңге баҡсаһында ҡуңыҙ сүпләп йөрөй, ана. Үтескә биргән аҡсаһын бөгөн кире индереп, ҡулына тотторасаҡ Фәнидә. Ҡабат шул бухый бөхилгә инһәме йомошка...

Тормозы ыҫкыныу менән, «Нива» тауыш-тынһыҙ аҫҡа ыҡталды, күпергә яҡынайғас ҡына, төтәтеп, барышын тиҙләтте. Бәй, иҫәүән кешеләй тора, ҡайҙа һуң Тимуры? Ихатаға инде – күренмәй, велосипеды ла юҡ, моғайын, берәй яры уйынға әүрәгәндер, ана лаһа, йоҙаҡлап тайған солан ишеген.

Өй эштәрен ул-был иткәс, Фәнидә быйаса айырыбыраҡ, тотонмай йөрөткән алты ҡағыҙ үтес аҡсаһын маҡтаулы сәй ҡабына ҡуша тотоп, аҫҡа юлланды. Кредит килгән, ти, иртәгәләрҙә кассанан күпме кәрәк, шунса аласаҡ.

Тәмәке көйрәткән Фазыл менән күҙлек кейеп бәйләм тотҡан Сара көңгөр-ҡаңғыр һөйләшеп ултыра эскәмйәләрендә.

– Иҫәнмеһегеҙ, күршеләр, – тип сәләмләне быларҙы Фәнидә.

– Әйҙүк, Фәнидә, һыйын эргәбеҙгә. Ни хәлдәр бар? – тип алсаҡланды Фазыл, тәмәкеле усына төкөрә-төкөрә, урынынан уҡ ҡалҡынып. Уның кәмә ишкән сағында ла төпсөгөн ҡуҙы һүнгәнсе төкөрөп һыуға бырактыра торған өйрәнеше бар. «Һүндермәй төпсөк ташлап, мунсамды яндырҙым. Шунан бирле һағыраҡ ҡыялам тәмәке менән», ти бит үҙе. – Уфаларға барып әйләндең әллә?

– Эйе... Быйна, өсөнсө көнгө үтесем... – Фәнидә үҙенә ғәжәпһенеп ҡараған һатыусының ҡуш тубығын батмустай ҡаплаған итәгенә яҡшы сәйен ҡуйҙы, ҡағыҙ аҡсаларҙы яҙып һалды.

– Һанап ал, күрше, – саҡ «түтәй» тип ыҫкындырманы. Хәйер, әйтһә лә бата: Сара тиҫтә йылға өлкәнерәк Фәнидәнән.

– Бәсәк, бер ҙә иҫләмәйемсе. Расбискың да юҡ.

Һөмһөрө ҡойолдо Фазылдың. Айыҡ та икән бөгөн, өҙөпөҙөп төпсөндө:

– Ниндәй рас-пис-ка ул?

– Нишауа не знай! – Ҡырт киҫә аҡланды бисәһе, урттарын сәйнәй-сәйнәй.

– Һуң, Фасил аша ебәргәйнең дә, – Фәнидә ҡулдарын йәйҙе лә бынан тиҙерәк тайыу яғын ҡараны. Сумка тотҡан ике ҡатын бирегә, быларҙың ларегына, яҡынайып килә ине.

– Ә-ә, иҫләнем, – ирекһеҙҙән хәйләләште Сара. Юхараҡ тауыш оҙатып ҡалды Фәнидәне. – Күрше хаҡы – тәңре хаҡы...

Аҙ ғына атлағас, Янбаевтарҙың, ир менән ҡатындың, әрепләшкәне салынды Фәнидәнең ҡолағына.

– Фасил ҡайҙа олаҡты әле?

– Ул ни, өс-дүрт малайҙы эйәртеп, ферма аръяғына киткәйне. Тимер-томор ҡарайҙар микән, низнай. Һағыҙға, лиманатка әүрәй бала-саға.

– Низнай ҙа низнай. Ә расписка тигән нәмәне белеп ҡалған берәү! Ете класлы ғына туҡһан туғыҙлы башың этлеккә һәләк шәп! Донъяға һыймай...

– Нимә, Фәнидә алдында рисуай итмәксеһеңме? Бар артынан, йүгер, оҡшатҡасһың; һине кем тота? Әйтәм маҡтайһың Фәнидане. Мәсхәрә! Аталы-уллы ҡабаҡ башына зерә ҡаранаһығыҙ. Шыйыҡ мейе! Һинең дә башың һигеҙ класлы ғына... Герәздән кенәз булдыңмы әллә?

– Ишеү сыпытыуы бөткән, тиң, – тауышы баҫылды ирҙең. – Сеү, покупателдәр килә...

– Расбиски ней, икмәк һорамай. Зәриәбеҙ ҡасандан һуҙып йөрөтә бурысын? Ана бирәм, бына бирәм, Зәбирем аҡсаны көрәп ала, тигән була үҙе... – Сара ла йомшарҙы.

– Бирер, сабыр ит...

Фәнидә ярһығайны: тимәк, бухый бисә Фәниданe... Фазылдан ҡыҙғанып маташа! Тоҡтомалға, бер сәбәпһеҙгә. Ярай, өндәшмәүең мең алтын. Әллә, үс итеп, берәйһен йортҡа индерергәме? Хәҙер ни йыбытҡы ирҙәр быуа быуырлыҡ. Йыуындырып-кейендереп, ашатып-эсереп алаһың да... Ха-ха...

Көндәр оҙая, кистәр оҙаҡлай. Тимуры һаман юҡсы. Малайҙы әрләүҙән, тыйыуҙан фәтүә аҙ, ә инде ҡул күтәреү – яуызлыҡ. Баланың да әрләүгә, ҡайыҙлауға күнегеп, киҙегә, киҫекһеҙгә әйләнеүе ихтимал. Нисауа, ҡайтһын, тамағын туйҙырһын әле, шунан һөйләшер.

Ҡараңғы төшөрҙән алда саҡ ҡайтты Тимур. Тәгәрмәсе тишелгәнме, велосипедын етәкләп алғайны. Арыған кеүек, балаҡтарын, еңдәрен дегәнәк һарыған. Һүҙ әйтмәм, ҡарышҡыға әйләнә күрмәһен, тип көтәүләгән әсә түҙмәне:

– Ҡайҙа йөрөнөң ул тиклем оҙаҡ? Инде һинең өсөн дә ҡайғырырға тейешме мин? Ятып ҡына үләһе... – һыңҡылданы хатта.

– Асыуланма, әнкәй, мин Лосманға терпе эҙләшеп йөрөнөм.

– Терпе? Нимәгә кәрәк уға?

– Зоопаркка тапшырһаҡ, ике йөҙ тәңкә бирәләр, ти, йөҙөн миңә бүлә.– Тимур өҫ-башын ҡағып, ҡулдарын йыуып алды ла һүҙен олпат ҡына дауам итте. – Ежиктар һунарға төнгә ҡарай сыға. Осрамай ҙа ҡуя... Мин, ярай, абый, иртәгә эңерҙә ҡабат эҙләрбеҙ, тинем.

Тәне арыһа ла, йәне арымаған Фәниданe яткас та йоҡо алманы. Бөгәсә ҡайҙарҙа йөрөгәнен, кемдәр менән осрашып, ни хаҡта һөйләшкәнен хәтерләне һәм улының «терпе эҙләшеп...» тигән сәйер кәсебен күҙалланы. Кемгә, нимәгә хәжәт һуң терпе? Фасилға. Әлләсе... Тукта! Терпе ите... Туберкулез... Был хаҡта Валентина менән генә серләшкәйне түгелме? Һуңғы арала әхирәтенең Бурашка килгәне тойолманы. Һәр хәлдә, Тимурҙың

«зоопаркка» тиеүенә ышанғы килмәй. Бисмилла, якын күреп, күрше һанап, изем теләп, Лира өсөн терпе аулай икән, хәлбуки Фасилға кенә тоторға ярамай, киреһенсә, доға ҡылырға кәрәк. Донъя хәлен белеп булмай, әгәр Лираның сырхауы, тфү-тфү, оҙакка һуҙылһа, аҙаҡ бер-бер кейәү табылмаһа, Фасил уны оҡшатып йөрөһә, ғәйепме ни? Оялсан егет йәр тапмаҫ, тиһәләр ҙә, Фасилды ла батырайтыр әле тормош. Унды бөткән, әрменән ҡайтҡан, үҙенә эш-көш табып тора. Итәғәтле...

Унды бөткән... Пырх итеп ебәрмәһенме бер заман биҙәкле простыня ғына ябынып ятҡан Фәнидә. Нимә, иҫәрләнеп барамы? Хәйерлегә юрайыҡ, көсәнмәй-нитмәй, көлә лә ебәрә. Ебәрерһең дә. Йә уны-быны ишетә, йә әллә ҡасанғы хәлдәр иҫенә төшә. Әле «унды бөткән» тигән лаҡап, гүйә, бер тамаша булып яңырҙы хәтерендә. Эйе, Шиҙелә сәйерерәк холоҡло, бәлки, аҡылға ла еңелерәктер, бер әбей йәшәне. Шул ҡарсыҡ берәйһе менән ирешһә: «Минең менән булашма, минең килен унды бөткән әле»,— тип түш киргән, имеш. Йәнәһе, ул — ун класс тамамлаған киленгә ҡәйнә, тимәк, ваҡ-төйәк әҙәм түгел. Бер уйлаһаң, элегерәк Шиҙе ише төпкөл ауылдарҙа урта мәктәп тамамлаусылар һирәгерәк булған, урта белемлеләр ҙә үҙенә күрә хөрмәткә лайыҡ һаналған. Расбискы Сара, яҙатайым ҡоҙағый булып, минең киленем вуз бөткән, тип ыҫҡындырҙымы, юҡ ҡына лаҡаптың яңырыуы ихтимал. Сара бая Фазылға үҙенән дә яманыраҡ ҡаҙарынды: «Һинең дә башың һигеҙ класлы ғына!» Уф, әллә ниндәй еңел-елпе, бураштар әйтмешләй, тукһан туғыҙлы уйҙар быраулай мейеһен. Иртәгә үк Зәриәнең апайы Дилбәргә, йәнә үҙе ваҡытлыса фатирҙа тороп киткән Сания әбейгә хәйерҙән тәм-том индереп сығыр. Кем әйтмешләй, «Уфа күстәнәстәре»нән. Анау ике арала йөрөгән Зөлфиәләре лә йәл... Ошо ниәт менән йоҡоға сумды Фәнидә.

## 5

Әсәһе килеп киткәндән һуң Лира үҙендә йәшәү дәрте, илһам өҫтәлгәнен тойҙо. Тыныс сәғәттә сырым да итмәне. Ни бысағыма таш стеналар ҡоршауында ҡаҡланып ятырға? Рөхсәт итһәләр, иртәнән кискә саҡлы нур уйнаған өйҙәрендә дауаланмаҫка? Тыуған яҡтың һауаһы ла, һыуҙары ла шифа. Икмәге лә дауа. Эйе, эйе, был хаҡта косметика журналынан уҡып фәһемләнгәйне. Имеш, Ҡаф тауҙары күккә олғашкан тарафтарҙа борон олуғ хан ҡаты сиргә һабышҡан. Данлыҡлы табиптар төрлөсә имләп ҡарай — файҙаһыҙ. Йөҙйәшәр аҡһаҡал кәңәш бирә: тыуған төйәгеңдә үҫкән игендән бешерелгән икмәк аша. Һай, мөғжизә: бер ҡабым ғәзиз ризыҡтан шәбәйә лә китә хәлһеҙ ятҡан ҡөҙрәтле хаким.

Иртәгәнән анализдар бирәсәк. Өр-яңынан. Уколды ни әсәһе лә ҡаҙар, белә. Сасындағы амбулаторияға барып әйләнгеләр, йыбанмаҫ, аръяктағы фельдшер пунктына кәмә менән сыҡкылар. Йә, Бурашта бына тигән һаулыҡ һаҡлау пункты бар ине элек, шуны нигеҙенә тиклем һүтеп, әллә ҡайҙа ташыһындарсы! Элекке урта мәктәп бинаһында хәҙер – башланғыс мәктәп, егермеләп кенә уҡыусыға ни бары биш-алты уҡытыусы һабаҡ бирә. Тимур киләһе йылдан, ел-ямғыр, буран ыжғыра тип тормай, Сасын мәктәбенә йүгерекләй башлаясаҡ.

Бураш мәктәбендә «Беҙҙең отличниктар» стендында Лираның да фотоһүрәте эленгәйне элек. Шулай, урта мәктәп ябылаһы йылды уға көмөш миҙал тапҡайнылар. Өлөшөнә төшкән шул көмөш арҡаһында вузға артыҡ ыҙаламай инде. Олимпиадаларҙа уңышлы ярышҡанын да иҫәпкә алдылар, әлбиттә. Бөтәһе лә арыу барғанда... һөрлөкһөнсө тип-тигеҙ ерҙә.

Һауығып сыҡһа, уҡыуын ташлап, ауылда ғына йәшәп ятырғамы әллә? Олатайынан ҡалған йорт йәшәрлек әле; егеттәр ҡарамаҫлыҡ түгел, кейәүгә сығыр – балалар үҫтерер, ә юҡ, тәүҙә Бурашта берәй эш йүнләр, шунан... Ҡуй, әҙәм көлдөрөп, уҡыуҙы ташларға ни? Иң ҡыйын курстарҙы уҙғас бит әле. Бот сабырҙар һөймәлекһеҙ әҙәмдәр: ана, бәләкәйҙән зирәк тип маҡталған ҡыҙығыҙ ... йөрөй хәҙер... Кем булып? Бына ошо һорау сетерекле. Урам аша йәшәгән элекке уҡытыусыһы Солтан Хажиморатович, етмәһә, «районка»ға фотоһын биреп, «Өлгөлө студентка» тип яҙған, ус аяһындай мәҡәлә баҫтырҙы ҡыш.

Зирәклеген һиҙә ҡыҙый. Атаһына оҡшағандыр. Асыҡтан-асыҡ маһайыр ине мәрхүм. Институтта-маҙарҙа уҡыу ғына әләкмәне; ә мәктәптә физмат, химиянан, биология-фәләндән уҡытыусыларҙы ла бөгөп кенә һала инем, тип. Әнкәйем ауырымаһа, тип тә өҫтәр ине. Өләсәһен Лира ла онотмай. Һөйә-һөйә ҡоймаҡлап сәй эсергәне... Һылап-һыйпап мунса индергәне. Үҙе тубыҡтарын аҙым һайын тота һалып, саҡ-саҡ атлап йөрөр ине. Етмәһә, берәҙәк экстрасенс килеп, өләсәйенең аяҡтарын боҙло юрған менән ураған. Йәнәһе, шәбәйтә мөртәт, һыҙланыуын баҫа. Бахыркай аҙаҡ күп тә йәшәмәне – мейеһенә ҡан һауа. Ана шулай аяҡтан йонсоған сағында уҡ аҡһаҡ әсәһен дә, һуғышта йәне-тәне миктәгән атаһын да йәлләп, кинйә улдары Барый ике донъя араһында йәнтәслим бөтөрөлдө. Мейескә – утын, малға бесән кәрәк. Бәрәңге, йәшелсә баҡсаларын ҡаҙ. Йорт-ҡаралтыны ипкә-һапка килтерешеү ҙә фарыз. Кәрәк, кәрәк... Илдең ҡаҡшаған, боларған, тарҡалыуға йөҙ борған сағы. Аҙыҡ-түлек етешмәй, кейем-һалым наҡыҫлана, аҡса осһоҙлана. Шул осор Барый, Валентинаның ире бүләк иткән мылтыҡты алып, төлкө, ҡуян-маҙар ауланы, ҡыр өйрәктәрен атҡыланы, һирәкләп ҡырғараҡ барып, ҡор, һуйыр ҙа апҡайтҡыланы. Ә һунар тыйылған

мәлдә балыкка әүәҫләнде. Тәүҙә кармак менән генә, аҙак ауға оҫтарҙы. Лираның походтарға артмаклап йөрөткән бәләкәйерәк рюкзагын төрлө балык менән лыкка тултырып кайта ине. Хатта әсәһе уйынлы-ысынлы һукрана торғайны: «Нимәгә ул тиклем каныгаһың, алабуғалары, һылалары кулды сәнсә...» Барый аҙак һыу буйында ук табышын кырсып-сайып апкайтыр булды. Әлбиттә, яңғыҙак атаһына өлөш сығарғыланы, райүҙәктән йә кырҙан капыл килеп төшкән командировочныйҙарҙы һыйлар өсөн колхоз түрәләренә йә һаткылап, йә ул-был нәмәгә алмашка биргеләп торҙо. Һыуыткыс түңдырғысында гелән таҙартылған, бәғзеләренең башы-койороғо кыркылған балык ятыр ине: ирет тә кур.

Ятыр ине... Хәҙер үҙенең гәзиз һөйәктәре кайҙа яталыр. Фәнидә ярһып та иҫкә алғылай Барыйын әхирәттәре менән гәпләшкәндә: «Балык тип сукынды бит, шул азарты ғына етте башына!..»

Бына шулай дауахана режимында ныклы көйләнгән «тихий час»ты һыуынған-һыуынмаған хәтирәләргә бирелеп, елкенеп үткәрҙе Лира. Елкенерһең дә! Тиҙҙән уға бынан котолорға насип итер. Ана, һуңғы арала теге акмас кыҙыкай һирәгерәк салына күҙенә – бүтән бүлеккә күсергәндәр. Улай икән, үҙен әжәл һағалай башлағандыр, тип тә уйларға мөмкин. Ә ул яуыздан бер кемдең дә котолғаны юк. Ғазраил тигәндәре һәр йәнгә һуңлабырак, кеше үҙе ризалык биргәс кенә килһәсе... Олатайы әйткән, ти, үлер алдынан: «Фәрештәләр Барыйым урынына мине һайлаһа, Хоҙайға мең доға кылыр инем. Эй, был донъя!..»

Палаталар йәнләнә. Әкрен һөйләшеүҙәр, коридорҙа табансаларҙың иҙәнгә ышкылып шыңкылдауы, кемдәләр процедураға, кемделәр аҫка сакырыуҙар – һәммәһе лә күнегелгән. Ә бына кеҫә телефонының, Башкортостан гимнынан өҙөк уйнап, һөйләшергә сакырыуы бигүк көтөлгән хәл түгел ине.

– Сәләм, Лира! Данир әле был, Мәскәүҙән.

– Рәхмәт шылтыратыуыңа. – Башка ауырыуҙарҙың зитына теймәҫ өсөн Лира одеялын бөркәнеп яткан килеш гәпләшергә керешә, сөнки әҙерәк кыскырмаһаң, егете тәүҙәрәк асык ишетмәне. – Беҙҙә – сәғәт биш...

– Бында өс, шуға шылтыратам да.

– Һин – гений...

– Көлмә, тоесть, арттырма! Хәлдәрең нисек һуң?

– Ал да гөл, тиҙәрме. Шәбәйәм шикелле.

– Һинең өсөн шатмын һәм, рөхсәт итһәң, телефон аша... үбәм.

– Ду-у-рак! Нисек настроенийың?

– Үҙең әйтмешләй, ал да гөл.

– Кайҙа туктаддың?

– МГУ общагында. Бында землактар навалом: студенттар, аспиранттар, слушателдәр, фирмачтар...

– Ҡасан ҡайтаһың?

– Аҙна-ун көндән.– Егеттең тауышы дәртле сыҡты.

– Ә мине күсереүҙәре ихтимал... – Серле генә пауза яһалды һәм Лира шымтайҙы.

– Ҡайҙа? Мәскәүгәме? – Егет төпсөндө.

– Юҡ та... Бурашка. Уңыштар һиңә! – Эскерһеҙ әйтелде был теләк. – Кеҫәңә һуғалыр әле телефоның.

– Унынһына борсолма. Лирочка, үҙең шылтырат миңә...

Һынамаҡҡа әйтәме быны аспирант егеткәй?

Лира отбойҙан һуң аулаҡ ҡалған ҡулйыуғыс бүлмәһенән шылтыратты: әйҙә, Мәскәү һынлы Мәскәүҙә республика гимнының тәүге ноталары Өфө сәләме булып яңғыраһын.

Әллә нимә тылҡыманылар, яҡшы таныштар кеүек, һауа торошштарын, хәл-әхүәлдәрен генә белештеләр.

## 6

Марс Нәбиевич лоджиянан эш бүлмәһенә йүнәлде. Һыҙмалар, махсус китаптар, үҙе генә тотонған приборҙар байтаҡ бында.

Данирға эйәреп өйҙәренә килгән студентка үҙен иркен, «комплексһыҙ» тота, теге-был менән ҡыҙыҡһына. «Тыумышығыҙ ҡай яҡтан, ағай?» Һораһын әйҙә, ни ғәйебе. Һораны, ләкин теүәл генә яуап бирелмәне сибәркәйгә.

– Һаҡмар буйынан... – Һаҡмарҙы нисәмә район һыулай: кәрәкһә, кемгә килгән, шунан төпсөнһөн.

Һаҡмар буйынан... Һаҡмар тулҡындары...

...Марс Нәбиевич – Урал аръяғындағы сиҙәмселәр ҡасабаһында донъяға килгән илле биш йәшлек уҙаман. Бала сағында тормош бигүк иркәләмәгән, был хаҡта үҙе сиселеп тә бармай. Әсәһе көтмәгәндә вафат булып, төпсөк ҡыҙын эйәртеп, атаһы ауыл осондағы, сырайы ҡаҙаҡҡа тартымыраҡ хәлле генә тол һауынсы йортона ингәс, Марс ағайы – атаһының ҡустыһы ғаиләһендә иш янына ҡуш булып ике йыл тәрбиәләнде. Артыҡ тамаҡҡа һанамаһа ла, торараҡ ағайы уны Өфөләге «беренсе» мәктәптең алтынсы синыфына урынлаштырҙы. Шулай, «Интернатым – пар ҡанатым»ды йырлап, биш йыл уҡыуын һиҙмәй ҙә ҡалды. Талапсан тәртип, өҫ бөтөн, тамаҡ туҡ, тигәндәй. Пионер походтары, комсомол марштары, төрлө түңәрәктәр, спорт... Көҙгө-ҡышҡы-яҙғы каникулдарға һирәк юлланды, йәйҙәрен генә, унда ла ял-хеҙмәт лагерында күнекмәләр теүәлләнгәс кенә, ҡайтҡыланы йәнтөйәгенә. Ҡолас йәйеп ҡаршылар яҡындары йылдан-йыл һирәгәйә барҙы. Аҙаҡ ҡына, авиация институтын

бөтөп, мотор заводында хеҙмәт биографияһын һәйбәт кенә башлап ебәргән йәш инженер армияға китер алдынан күстәнәс, бүләктәр тотоп, ауылына ҡайтып, ун көндәй торҙо. Сөнки шул саҡтағы закон буйынса вузда көндөҙ уҡыған егеттәрҙе, әгәр үҙе теләмәһә, һалдатҡа алмайҙар, ә уҡып бөткәс, бигерәк тә вуздың хәрби кафедраһын үтһәң, ҡайҙа эшләп йөрөһәң дә – марш офицерҙар корпусына! – «Двухгодичник» сифатында Марсҡа Рыбинск ҡалаһындағы авиация часына йүнәлтмә тултырыла ине.

Ауылда күңелле, йәмле саҡ. Ағаһы ҡоторткас, икәүләшеп мотоциклда атаһын күрергә елдерҙеләр. Ҡартайған, бирешкән. Таш бәғер түгелдер – илап алды, ғәфү үтенгәндәй итте. Үгәй әсәһе, һеңлекәше өлтөрәп, ҡунаҡсыл ғына табын ҡорҙолар.

– Атай, һиңә һис тә рәнйемәйем. Мине тыуҙырғанһың – рәхмәт, һеңлекәште уҡытаһығыҙ – тағы рәхмәт, – тине Марс атаһына уйсан ғына. Ысынлап та, ул йәйҙә төҫкә-башҡа сибәр, йыр-моңға маһир һеңлекәше Магнитогорск мәҙәниәт институтының тәүге курсын уңышлы тамамлап, каникулға ҡайтҡайны.

Үҙенсә өгөтләгән булды атаһы Марсты. Йәнәһе, нәҫелдәренән офицер юҡ, оҡшаһа, торһон да ҡалһын армияла, моғайын, полковник йә майор булырһың, тимәксе. Өҫтәмә нәсихәтен дә биреп маташты: өйләнһәң, ашыҡма, ҡарабыраҡ өйлән, үҙебеҙҙең милләткә етмәҫ...

Кәңәштәренең тәүгеһен үтәмәне улы, ә бына икенсеһен бойомға ашырҙы. Донъя күреп, һөнәре буйынса тәжрибә туплап, өлкән лейтенант дәрәжәһендә имен-аман запасҡа сыҡҡас, үҙе ете ай самаһы инженер-конструктор вазифаһын атҡарып киткән ҡеүәтле заводҡа кире урынлашты. Йәнә ятаҡтан бүлмә бирҙеләр. Аҡсалы ғына ҡайтҡайны, хәтһеҙен атаһын ерләүгә тотондо, бер өлөшөн өсөнсө курсҡа уҡ һабаҡташына кейәүгә ашыҡҡан һеңлеһенә тотторҙо. Петлица, погондарын һүтеп, хәрби формаһын тотошлай – ул шинелен, ул хром итеген, ул плащ-пальтоһын – тере атайлы була тороп та атайын алыштырған ағайына йомдорҙо. Ярап ҡалды малсыға беше күлдәктәре лә, салбар, кителдәре лә. «Капитан» ҡушаматы менән өсөнсө йыл ғына донъя ҡуйҙы меҫкен. Шул туғансыл ағайы булмаһа, ошоғаса яҙмышы нисек һыҙылыр ине? Улай тиһәң, теге ярым етем саҡта атаһы: «Бараһыңмы минең менән доярка апайыңа? – тип ҡыҙыҡһынды. – Әллә ҡалаһыңмы?» Бала бала инде, «ҡалам», тине малай. Ағайы менән атайы икәү-ара алдан килешкәндер ҙә әле, кем белә. Һауынсының берҙән-бер ҡыҙы менән кейәүе атаһы – элекке атбағар йортонда төпләнде.

Ҡартлас атаһының икенсе өгөтө лә бойомға ашты: егетлек халәте Марсты йәр һайлауға дәртләндерҙе. Үҙе лә, бер уйлаһаң, йомшаҡ затты ымһындырырлыҡ күркле, тотанаҡлы бит. Оҙонса буй, ҡаҡса яңаҡ, ҡуйы ҡара сәс. «Үҙебеҙҙең милләттән» тип

ҡараштырғаны, бәй, хатта бер осор уҡыған интернатский уҡ булып сыҡты: уйламағанда телевизорҙан күреп, танып ҡалды. Миләүшә! Ишеткәйне ике-өс йыл элек, ауыл хужалығы институтының экономика факультетында диплом яҡларға йөрөй, тип. Күрһәнә, хәҙер финанс техникумында төплө һабаҡ биргәнен хатта экрандан маҡтайҙар. Фамилияһы элекке – онотмағайны Марс. Ни тиһәң дә, Миләүшә менән бер килке бейеү түңәрәгендә шөғөлләнделәр. Шунда Миләүшә яңғыҙы ғына бармаҡ шартлатып, эйелеп-һығылып, ипле йылмайып «Зарифа»ны башҡарған мәлдәрҙә үҫмер Марс тотош тәненә рәхәт тулҡыны таралғанын тойғоланы. Инде буй еткергән, заманса кейенгән педагогты телевизорҙан күргәндә лә татлы хис, татлы иҫтәлек ялманы булмышын. Хәйерлегә булһын.

Һай, интернатта атаҡлы артистар, данлы музыканттар йырлатты ла бейетте бит үҙҙәрен. Арҙаҡлы яҙыусылар килһенме осрашыуға, театрҙарға, концерттарға культпоход ойоштороһондармы... Ҡурайға ла апаруҡ өйрәнеп алғайны Марс «беренселә» сағында. Хәҙер ҙә онотҡанда бер дуҫтары биҙәкле ҡыны менән бүләк иткән ағас ҡурайын тартып ебәрә, бик ҡыҫтаһалар, ҡунаҡтарын бейетерлек көйҙәрҙе һыҙғыртҡылай.

Миләүшәнең ҡиәфәте мөләйем, таушалмаған һымаҡ. Тормошта түгелдер. Булһасы, элекке һабаҡташының хәлен-әхүәлен белешеү яҙыҡтыр шул. Сәскә, затлы кәнфит тотоп барһын! Иртәгә үкме? Шәмбене көтөп алыр Марс, моғайын, Миләүшәнең техникумда дәресе барҙыр, юҡ икән, исмаһам, адресын белешер. Аҡсаһы етерме һуң? Ятаҡ тормошо һура ғына... Табыр, аванс та яҡынлай.

Әмәлгә таянғандай, Миләүшәне оҙон тәнәфестә мәшәҡәтһеҙ генә осратты. Кисә генә айырылышҡан яҡын дуҫтарҙай һин дә мин һөйләшеп алды ла киттеләр.

Театрға-маҙар йөрөй, байрамдарҙы бергә уҙғара башланылар. Миләүшә артыҡ инеп барманы егеткә, гәрсә инәлтеп тә торманы. Аҙаҡ көлә биреп һөйләнде: үҙен буйҙаҡ коллегаһы мөкиббән ҡыярлатҡанда... фәрештәләрҙең амин тигән сағында... юлына Алла бабай Марсты баҫтырып ҡуйған. Ышан ҡыҙҡырҡынға, тигән булды Марсы. Үҙе иһә, Миләүшә кемдәр менән буталдың, тип төпсөнһә лә, ыпыҡ кешеләй өндәшмәүҙе, бары тик мут йылмайыуҙы хуп күрҙе. Үпкән-ҡосҡан – елгә осҡан... Һәр хәлдә, почта аша хат алды бер сибәркәйенән: «Илатып мөхәббәтте... Шаңҡыттың мине» тигәнерәк шиғри юлдар ҙа бар ине серле яҙмала.

Йыл үттеме-юҡмы, ҙурҙан ҡупмай, артыҡ шаштырмай ғына ғәҙәти кафела туй үткәрҙеләр. Миләүшәнең алыҫ Силәбе яҡтарында зат-ырыуы ҡойто ғына. Никахҡа һарыҡ түшкәһе һөйрәп ағайы менән еңгәйе, мендәр йөкмәп шаҡтай еңел һөйәкле

әсәһе генә килде, ә кәләшенең атаһы иртәрәк ташлаған икән фани донъяны. Тыумышы Маяк фажиғәһенә яҡын ерҙән булған, шуның шауҡымынандыр; ә Марс яғынан әлеге лә баяғы интернатский дуҫтары, һеңлеһе менән кейәүе генә ҡатнашты.

Йәшәргә тәүҙә ятаҡҡа һыйындылар, ике йыл да үтмәне, Ҡариҙел ярында яп-яңы, һәләк бейек йорттан бер бүлмәле фатир аскысын тотторҙолар. Өс айлыҡ бәпес Данирҙы күтәреп менделәр унынсы ҡатҡа – лифт ҡоролоп та бөтмәгәйне. Их, бар ине дәүләттең йәш ғаиләләрҙе ҡайғыртҡан саҡтары! Бөгөнгө хакимдар боғаҙ ярып ҡыҫыр вәғәҙә биреүҙән уҙа алмай.

...Марстың хәйлә-мутлыҡтарын, аҙғын һукмаҡҡа янтая барыуын тәүләп ҡәйнәһе һиҙенде. Ҡыш үткәрергә килгәндә, аулаҡлап, һеңгәҙәтә бәрелмәһенме: «Һинең таксиҙа ҡайтыуҙарың, кейәүкәйем, һылтау ғына! Инде эсеп ҡайт – йә милиция саҡыртам, йә завод дирекцияһына барам. Йылы ҡуйын, бесплатный ғищыҡ тапҡанға оҡшайһың, шунда һине көтөп кенә торалар... Дөрөҫ бит? Миләүшә меҫкен белмәмешкә һалыша. Ныҡлап ғауғалашмаҫ борон айырыл да ҡуй. Тәмһеҙләшмәй генә. Ҡайныңдан пример ал – өҫтән йөрөгәне беленгәйне, иплэп кенә хушлаштыҡ. Үтәр ғүмер өсөн ниңә йән көйҙөрмәк кәрәк? Миләүшә лә бракауаннай түгел әле...»

Тура сәпәлгән ғәҙел һүҙгә ни әйтерһең? «Айырыл да кил!» – тип иламһыраған һөйәркәһенә Марс: «Айырылыр инем дә, бисәмдең ғәйебен тапмайым бит әле, – тине уйсан ғына. – Ҡабат осрашмаһаҡ – бигәйбә».

Ғаилә тарҡалманы. Былтыр ғына гүргә ингән ҡәйнәһенә рәхмәттәр уҡый хәҙер. Эстән генә... Ысынлап айырылыша яҙғайнылар шул. Цех начальнигы урынбаҫары сағында хеҙмәт хаҡын арыу алды, байтаҡ премиялар ҙа эләкте. Профилакторийҙарға, ял йорттарына путевкалар бирелде. Унда ни, табыла... Өфөситендәге особнякта йәшәгән берәү менән – ҡартайған әсәһе күҙгә һирәк салынды, өйҙәренә Марс барһа, сума ине мейес арьяғындағы сымылдығына – «дуҫлығын» Өфөлә лә дауам иттерҙе. ҠуныП ҡалғылаған, таңға ҡайтҡылаған саҡтары булғыланы. План тулмағас, икенсе сменаға ҡалып, каморкаһында бер аҙ сырым иткән, йәнәһе.

Хәтерләһәң, иң тәүҙә хәмерҙән ваз кисте ләһә. Бер тыйылып, бер ыҫҡынып йөрөй торғас, әлеге интернатский дуҫтарына мөрәжәғәт итте. Ҡәтғи кәңәш: наркологик дауаланырға. Нисек? Иң һәйбәте – укол. Өс йә биш йылға... Берәү ҙә белмәҫ, үҙең мыжып йөрөмәһәң... Горбачев та хуплар...

Хәл итте – хәҙер ун биш йыллап еҫкәп тә ҡарағаны юҡ. Тәүҙә шешәләштәре төрлөсә мыҫҡыллап, ҡыҫтап маташты, әммә айыҡ йәшәүҙең ләззәтен татыған Марс ҡабат хәмер һаҙлы-

ғына тартылманы. Эске арҡаһында ғаиләһен биҙрәтте, шул зәхмәт арҡаһында, припискаларға имза һалып, судҡа эләгә яҙҙы. Бәғзе ултырҙаштар табында ғына һәйбәт, бәлә сыҡҡайны, бөтәһен дә тандылар, бар ғәйепте Марсҡа ауҙарҙылар. Саҡ ҡотолдо, ҙур штраф түләп... Дуҫ тигәндәренең хыянаты айырата ғәрлегенә, сәменә тейҙе, көтәреп кенә һуғып ҙа тайыр ине берәй яры – үкенәсәк, бына-бына иркен фатир алырға сираты яҡыная. Ошо юлы «киңәйеп» ҡалмаһалар, киләсәккә өмөт юҡ. Иллә, ана, «прихватизация» ҡыҙа, уның халыҡты һемәйткес тырнаҡтары тотош илгә ҡаҙалырға әҙер. Әҙәм балаһы, ҡәйнәһе әйтмешләй, хәләлде хәрәмдән айырмай хәҙер.

Мәгәр шәхси юҫыҡта хәл-әхүәлдәре көйләнә барҙы Марстың. Яңы ордер алды – дүрт бүлмәле, парк яҡын, тәҙрәһенән фонтан, түңәрәк таш бассейндағы тимер торналар күренә. Эй, оҡшатты фатирҙы ғаиләһе! Электән пропискалағы ҡәйнәһе бөтөнләйгә күсеп килде.

Марс яңы эш эҙләштерҙе, сөнки предприятиены ҡыҫҡартыуҙар ҡаҡшатты, етмәһә, әшнәләренең хыянатын онотмағайны. Уның кеүек фатирлы, өҫтәүенә, зәм-зәм менән мауыҡмаған юғары категориялы инженер-рационализатор ҡайҙа ла кәрәк, ҡайҙа ла артмай. Металл буйынса заманса тикшеренеүҙәр алып барған ябыҡ учреждениеларҙың береһендә Марсҡа сат йәбешмәһәләр ҙә, ҡуй, тимәнеләр. Теләһә кемде индермәйҙәр, ижади мөхит, тыныс унда. Иш янына ҡуш – төрлө фирмаларҙан төшөмлө заказдар яуа, аҡсаға мохтажлыҡ кисермәйҙәр.

Бә-әй, аға һыуҙар, уҙа йылдар... Хәҙер инде ул – техник фәндәр кандидаты, бүлек мөдире. Ваҡыт-ваҡыт техник вуздарҙың береһендә студенттарға лекциялар ҙа уҡый.

...Асығын әйткәндә, эсеүҙән айныҡҡысҡа эләгә башлағас арынды. Тәү тапҡыр юл' ыңғай магазиндан бер ярты, арлы-бирле ҡабымлыҡ алып, өйөнә яҡынлап бара ине, артынан килеп эләктерҙеләр. Ҡайшан-ҡойшан атлаһа – бер асыу. Төҫө ҡыҙарған, ауыҙынан еҫ борҡоғандыр – алды ла китте униформа кейгән стажер курсанттар. Резинка таяҡтарынан башҡа ул-был нәмәләре лә юҡ. Әй, берәүһенең аҫмалы сумкаһы бар ине, имеш. Егеттәрҙең ни ғәйебе – ҡушылғанды эшләйҙәр, молодцы – «милиция стаканы»на килтерҙе лә тапшырҙылар. Унда оҙаҡ һөйләшеп торманылар, тағы ике-өс иҫерек йыйылғас, айныҡҡысҡа оҙаттылар. Мәхшәр! Ҡаршылашмауың хәйерле. Тиҫкәреләнһәң, арҡаңа ҡара таяҡ эләгеүе йә һыуыҡ душта тотоуҙары ихтимал. Ҡайҙа ул йоҡо! Әрләш-талаш, әтәк-һәтәк һүгенеү, янау... Ә төндә... дөйөм һәндерәлә ятҡанда, берәй мент иҫерек булып ҡыланып, үҙен бикләтә лә, утты шыпырт һүндереп, йоҙроҡ һуғышы ойоштора. Ығы-зығы башланһа, «бузотер»ҙарҙы мент-

тар кинәнеп дөмбәсләй. Былары иртәгәһенә кемгәлер штрафты мулыраҡ сәпәү өсөн юрамал эшләнә икән. Ярай ҙа, Марс дөйөм уҫмаҡлашыуҙа ҡатнашманы. Студент сағында апаруҡ боксер ине, ҡулы ҡысыһа ла, әллә кемдең терһәге танау тирәһен сейләндергәнсе тызып үтһә лә, түҙҙе, һаҫыҡ бизрә ултырған мөйөшкәрәк һыйынды. Иртәнсәк сәрхүш тотҡондар берәм-һәрәм кәмене. Марс иҙән уртаһына ҡуйылған таҙа биҙрәнән һалҡын һыу һоҫоп, сарсауын баҫырға уҡталғайны, һәлмәк ишекте шалтор-шолтор аҙ ғына асып бойорҙо сержант мыҫҡыллы тауышы менән:

– Тайсин, на выход!

Надзиратель Марсҡа тексәйгән, Марс – көрөшкәгә. Эсер һыуыңды ла йота алмай, мөштөмләнеп торсо өшәнес айнытҡыста үҙен әллә кемгә һанаған хәстрүш алдында. Дежурҙағы лейтенант уның кем икәнен асыҡлап, түләү һалғас, сығарып ебәрҙе. Кисәге яртыны, әлбиттә, тапманылар, аҡсаһын да юллыҡ ҡына тотторҙолар. Ожо һалыу файҙаһыҙ: «Иҫерек инегеҙ...» – вәссәләм.

Начальник менән һөйләшеү... Уф, ҙур күҙле, яҫы яңаҡлы майор «солидный» клиенттар менән шәхсән әңгәмә уҙғарғылай, имеш. Баҙарын күтәрә генә! Йәнәһе, эшләгән ерегеҙгә сигнал ебәрергәме, юҡмы? Ебәрмәҫкә лә мөмкин, әгәр... Тәүҙә Марс, ирендәрен ҡымтып, һы-ы, тип кенә ҡуйғайны. Йәнәһе, мәйелең, уның өсөн барыбер.

– Беҙҙә зарплатаны йүнләп түләмәйҙәр, штатты ҡыҫҡартыу бара...

– Вәт шул-шул. – Майор, йәнде көйҙөрөп, һеҙ тип өндәшә. – Ҡағыҙ ебәрҙекме, иң беренсе кандидатура – һеҙ... Фамилиягыҙ компьютерға индеме, милицияға эләккән һәр мәғлүмәт эмвэдэ банкына туплана. Аҙаҡ бер ниндәй етәксе вазифаларға дәғүә итә алмаҫһығыҙ. Икенсенән, коммунист булараҡ, персональ эшегеҙ парткомда тикшереләсәк, быны яҡшы беләһегеҙ. Бәлки, наркологҡа барырға тура килер – алкоголизмдан мәжбүри дауаланыу өсөн.

– Күпме? – Һорауҙы ҡыҫҡа, ярып бәрҙе Марс. Күрәһеләре алда икән әле...

– Ну-у, ярты миллион етә. – Массовый миллионер саҡтары булды шул совет кешеләренең. – Штрафтан тыш. Хужалыҡ иҫәбендә бит медайныткыс. Ремонт яһатаһы бар... Һыуыҡтар алда әле!

– Ҡасан килергә һуң?

– Сәғәт 4-тән 6-ға тиклем. Бөгөн йә иртәгә.

– Яҡшы, иптәш майор. Һеҙ сигналды...

– Килештек... Лично ҡабул итәм үҙегеҙҙе.

Өйҙә борсолоп көткән Миләүшәһе алдында аҡланыу... Улы Данир, ҡәйнәһе алдында үҙен ғәйепле тойоу... Миләүшә шикл-

неберәк биргән, костюм кеҫәләрен туптайткан миллион менән барып, ояттан ҡотолоп ҡайтыу. Ҡыҙык был донъя... Туләнеп, гонаһыларыңдан ҡотолсо. Ҡотолоу ҙа түгел ул, күңелеңде генә йыуатыу. Сәсеңде ҡайсыламағанға шөкөр ит, һармаҡ алкаш... Әл дә Марстар быуынына эләкмәне ундай мәсхәрәләр!

...Ошоларҙы иҫләп, үҙенән-үҙе ярһып, Марс хатта бая лоджияға сығып ултырҙы. Унда кескәй журнал өҫтәлендә яткан гәзиттәрҙе ҡараштырҙы, ҡайҙа ул – башына бер нәмә инмәне.

Ә бер уйлаһаң, маладис, тәки арынды яман ғәҙәтенән. Үҙендә көс тапты, сәм тапты. Эштә лә, өйҙә лә күңеле күтәрелеп ҡалды, хатта Миләүшәһе йәшәрә барғандай тойолдо. Ҡуйығыҙсы, иптәштәр, партияның һуңғы программаһын хупламайым, тип аяҡ терәп ҡарышһа ла Марс, парткомға ағза итеп һайлап ҡуйҙылар. Ләкин приватизация шаукымдары уларҙың производствоһын да урап уҙманы. План кәмене, сеймал етешмәне, бына тигән инженерҙар – юктан бар яһарға оҫталар аска үлмәҫлек кенә хеҙмәт хаҡы ала. Бәләкәй генә вазифа өсөн дә еңмешлек, ыҙғыш. Кеше араһын ошаҡ, ғәйбәт бутаны, ялағайлыҡ, ҡоҙа-ҡоҙағыйлыҡ нығыраҡ тамыр йәйҙе. Ауыр кисерҙе быны Тайсин. Түҙмәне, яңы кәсеп ҡараштырҙы. Эйе, ил ҡеүәтен, дәүләт мәнфәғәтен ҡайғыртҡан, альяҙмаһы эленмәгән ғилми йүнәлештәге институтта табылды уға йәтеш һөнәр.

Үкенмәй Марс Нәбиевич яҙмышындағы боролоштарға. Иң мөһиме, үҙен кәрәк кеше итеп тоя. Башыңды ғына эшләт – фән офоктары сикһеҙ. Уның менән, ябай фән кандидаты менән, хәҙер атҡаҙанған профессорҙар, фән докторҙары иҫәпләшә. Әгәр үҙе лә докторлығын яклап алһамы! Тик һаман осланмай диссертацияһы. Ни хәл итәһең, хәҙер техник фәндәрҙә талаптар айырыуса көсәйә.

Әллә ҡайҙан түбәһен сырамытып була ДОК яғындағы элек йәшәгән йортон. Бер бүлмәле фатирҙар, ай-һай, ҡыҫынҡы унда. Ҡыштарын Миләүшәнең димләүе буйынса ҡәйнәһе оҙаҡкараҡ килгеләй башлағайны. Ауылдағы киленкәйе менән борсактары бешмәйерәк ҡуя икән ҡай саҡ. Кәүҙәгә төйөрөм генә, йорт эштәренә бөтмөр өләсәһе Данирҙы ҡарашырға дан ине былай. «Быҙауҙы өйрәткән кеше әле ҡарсаң, һине лә өйрәтермен, ҡолоҡайым», – тип түшәгенә лә, ыштанына ла бес иттермәне яңы тәпәй баҫкан ейәнен. Әкиәтен дә һөйләне, йомағын да ҡойҙо, ойоҡ-бейәләйҙән өҙмәне. Йәйҙәрен һис йыбанмай, үҙе менән поезға ултыртып, күлдәргә бай Арғаяш яҡтарына алып китә торғайны. Яңы һауылған һөттәй йылы күлдәрҙә ҡолас ташлап йөҙгән Данир хәҙер ҙә һыу инергә ярата. Һүҙ араһында арғаяштарса йәйҙе «жәй», етене «жиде» тип тә ыскындырғылай. Бәләкәй саҡтағы өйрәнеш тәнгә лә, телгә лә нығыраҡ һеңеүсән.

Ошондай уй-кисерештәр менән алыҫтан йәйғорло фонтанды күҙәтеп торғанда, эргәһенә ҡатыны яҡынлашты һәм күҙенә ҡарап өндәште:

– Әллә Тимашевоға барып киләйекме? Әсәйемдең зыяратына. Төшкә ингәйне.

– Әйҙә, әйҙә, ҡалай сауаплы эш. Ә Данир һуң?

– Кеше килгән, ултырһындар әҙерәк һөйләшеп. Сашаны ялдайыҡ та... Йә такси саҡырт. – Миләүшә Ғәлиевнаның Светлана менән Данирҙы аулаҡта ҡалдырғыһы килә ине, буғай. Кем белә, килен тиерлеге бар ҡупшыҡайҙың.

– Яҡшы. Ә кеше тигәнең... әле «тыумышығыҙ ҡайһы яҡтан?» кеүек һорауҙары менән күҙгә инеп бара. Стильная студентка!

– Ҡыҙ-ҡырҡын ҡыҙыҡһыныусан була, – тине баҫалҡы йылмайған ҡатыны. Ире бүтәнсәрәк фекер төйнәне.

– Ҡыҙ-ҡырҡын иң тәүҙә тыйнаҡ булырға тейеш. Косметикаһы килешкән кеүек тә үҙенә.

– Һин инде главный косметолог республики, – Миләүшәһе ара-тирә урыҫса ла ебәрә, бигерәк тә төртмәс әйтергә самалаһа.

## 6

Кәримова ентекләп ҡабат тикшерелде. Был ашыҡмай ғына, ҡалыплашҡан яйға эшләнде. Палата табибәһе Лираны ҡайтарыу буйынса ике аҙна тирәһе ләм-мим һүҙ ҡатманы, бары тик, сабыр ит, консилиум хәл итәсәк, тип кенә йыуатты. Хәйер, ул да аптырай: ҡыҙыйҙың төҫөндә лә, күҙендә лә – гәҙәттә туберкулез менән сирлеләрҙең күҙе дымһыуланып, дөмһәреп балҡый – йоҡоһонда, тәнендә лә ул-был юҡ. Температураһы – нормаль, йүтәлләмәй, ашауға талымһыҙ. Тегендә-бында йөрөштөрә – арыуҙы бар тип тә белмәй. Ә бит бында һалыу менән өс ауырыуҙың икәүһе хәлһеҙлеккә, тирләүгә йә тыны ҡыҫылыуға зарлана. Пациентканың әлеге халәте – ысынлап та, үтә һирәк хәл. Хатта, серле хәл, тип тә әйтергә була. Нисек инде шундай «ауырыу тарихы» менән ҡырҡ көндә һауығырға мөмкин?

Ниһайәт, консилиум «Л. Кәримованы дауалауҙы өйөндә дауам итергә» тигән ҡарарға килде. Кәңәштең оҙаҡҡа һуҙылыуы табиптарҙың отпускылары тура килеүгә лә бәйле ине. Һәр хәлдә, Фәнидә, минең балам, өйҙә үҙем дауалармын, ни булһа ла, үҙем яуап бирермен, тип табиптарҙың теңкәһенә теймәһә, ә ҡағыҙҙарға имза һалғанда булексә мөдире, етди, әммә маһайыбыраҡ, «һеҙ, әсә кеше, ауырыуҙы ҡарарһығыҙ, ләкин беҙ дауаларбыҙ, ана бит, ай ярым эсендә – ниндәй эффект, симптомдар тойолмай» тимәһә; аҙаҡ, ярандарын йыйып, «бөтәһен дә күҙ уңында тоттоғоҙмо, ҡурҡыныс райондыҡылар менән бәйләнешкә индегеҙме, консультация, рецепттар, дарыуҙар

бирҙегеҙме?» һ.б әтнәкәләрҙе энәһенән ебенәсә төпсөнөп, нөктә ҡуймаһа, Лира дауаханала һаман зарығып ята бирер ине. Оҙаҡ ауырыу сирленең яҡындарына ҡыйын... Шуға Фәнидә үҙен бала табыу йортонан имсәк сабыйын алып ҡайтып барған әсә кеүегерәк тә хис итә. Лираһы ла, йәһәннәмдән ҡотолғандай, еңелерәк тын алған кеүек. «Ҡабат бында килмәҫкә яҙһын, артыңа әйләнеп ҡарама», – тигән булды ҡыҙына ҡала транспорты туҡталышы яғына атлағанда. Донъяла ундай ырымдың барлығын йә юҡлығын Фәнидә аңлата ла алмаҫ ине, моғайын. Мәгәр аҡ халатлыларға ҡарата эсенән рәхмәтле тойғолар кисереп килде бераућҡ. Ишетте ләһә: йылына биш-алты йөҙ кешене... теге донъяға китәһе әҙәм балаларын әҙәм рәүешле ҡайтарһындарсы!

Иң тәүҙә тәғәйен дарыу-фәлән, аҙаҡ кейем-һалым, аҙыҡ-түлек ҡараштырғас, «Нива»ла кискә табан ҡайтып төштөләр Бурашҡа. Хәл белешергә һис кем килмәне, хәйер, кешеләр хәҙер ауылда ла бер-береһенә артыҡ ылығып бармай. Өҫтәүенә, бесән ваҡыты, талымһыҙҙар сабынлыҡтарынан һуң ҡайта.

Бер-береһен бик һағынышһалар ҙа, апалы-энеле Лира менән Тимур бер аш өҫтәленә ултырманы. Ауырыуға тәғәйен өҫтәл һәм караватты Фәнидә алдан уҡ шаршау менән ҡаплағайны, әле бына электр яҡтыртҡысын ғына стенаға беркетәһе ҡалған.

Аҙмы-күпме йән тыныслығы менән Фәнидә һуң ғына йоҡларға ятты. Валентина менән сөкөрҙәшеп алғанда килешер ине лә, әллә дауыл, әллә уғрылар өҙгән телефон һаман эшләмәй. Эшләмәһә, ары торһон, Фәнидә әлегә отпускыла, кәрәк икән, «үҙ иҫәбенә» уныһын да оҙайтырҙар.

Таң һарыһынан һыйыр һауырға сыҡты. Лираһына йылы һөт эсеү шифалы – быны үҙе лә ишеткәне бар, Валентина ла әйтә. Бейә ҡымыҙын күптән онотҡандар был тирәлә. Кәзә ҡымыҙы ла сихәтле, тиҙәр. Тәүгә бәрәсләгән кәзәкәйен һауып ҡараны: бәрәкәт, нығыраҡ ашатып-эсереп, һөтөн күбәйтергә мөмкин. Ҡымыҙына башты аръяҡтан алыр, Хәлекәй ҡарт ҡымыҙ әсетә, тиҙәр. Көбө ни, уныһы Ишмай мәрхүмдең соланында элеүле тора. Ҡорғаҡһыған, әлбиттә, төбөн генә бысып, яңыны ҡуяһы. Рәтләргә Фасилды яллар, ҡулы тегегә-быға апарыуҡ тәпей. Ә юҡ, кешегә – кем балаһына бит әле – инәлеп ни, ундай ғына мәшәҡәтте үҙе лә атҡарыр.

Йоҡоһо туйғандырмы, соланда Лира күренде. Әсәле-ҡыҙлы баш ҡағып сәләмләште һәм йылмайышты.

– Ята бирһәңсе, балам. Сәғәт... ете генә тула бит.

– Режим үҙенекен итә – йоҡом туйҙы. Әней, миңә лә берәй эш ҡуш.

– Эш тип, ҡуш тип... Кәзәкәйҙе һауып ҡара, әйҙә. Ҡымыҙ бешергә өйрәнеп алһаҡ, диспансерҙағы анау врачихаң әйтмешләй,

дан булаһы. Бәрәсенә һыйыр һөтө эсер йылылай. Үҙең дә эс, йәме.

Тиҙҙән утынлыкта шат тауыш яңғыраны: һыуалырға әҙерләнгән кәзә ярты литрҙай һөт биргән.

– Йәшел бесән ташырға кәрәк. – Ҡыуанып һөйләнде Фәнидә. – Хәҙер сәй әҙерләгәнсе теге өйҙән дәүатайыңдан ҡалған яндауҙы алып кил. Аскыс шунда, ишек башында ғына...

Шулай, ауылда бәғзе эштәр иртәнге тамаҡка тиклем үк теүәлләнә. Тиҙҙән ҡыҙғылт спорт костюмын, башына салт күрән баскетка кейеп алған Лира велосипедта түбәнләскә елдерҙе. Бакса аша уны күреп ҡалған Фасилдың күҙҙәре упайғандырмы, юктырмы – шаһиттар юк ине был мәлдә.

Үҙҙәренә бесән еткерә яҙған Фасил менән Рәшит бөгөн «Беларусь» менән Дипутатка күбәләрен, әҙ-мәҙ ҡалдык бакуйҙарын ташып бирергә тейештәр. Уныһы ла инде түҙҙермәгән була, йәнәһе, аяҙҙа күңелен тынысландырмаксы. Хаҡы килешелгән, хатта Фазыл мәгәрисен алдан эскән, буғай. Ярҙамға, егеттең йәнен көйҙөрөп, Зәриә лә киләсәк, имеш. Бына шуны аръяктан алып сығыр өсөн иртәрәк уянманы микән атаһы? Иртәрәк, тип, һигеҙ ҙәһә сәғәт.

* * *

Төштән һуң Валентина килеп, киләһе ялға Фәнидәне өй таҙартышырға саҡырып ҡайтып китте. Уның тартынмай-шикләнмәй тиң күреп һөйләшеүе, аҡыллы кәңәштәр биреүе, мәрәкәләре лә оҡшаны Лираға. «Выглядишь здорово! Но... воздухта күберәк бул, – тине ул һәм, тау битләүендә комсомол саҡтарында үҙҙәре ултырткан йәш ҡарағайлыкҡа ымлап, өҫтәп ҡуйҙы. – Нарат исе файҙалы, а солнцепек – сам по себе природный лазер, золушка моя. Больничный режим и дома хорош. Живи по расписанию, и ҡабат ауырыма, и... красивый кияу тап!» Лира, ысынлап та, расписание төҙөп алды һәм төшкө ашка тиклем баяғы урманға барып әйләнергә булды. Унда барыуҙың, йәғни үргәрәк менеүҙең йәнә бер яғы ҡыҙыкһындыра: Өфөнө тотоп булмай микән? Уға Мәскәү кәрәк, шул шөһрәтле баш ҡалала Башкортостан гимнын уйнатыу кәрәк. Лираның әле ауылда икәнен Данир белмәй. Ниңә шылтыратманың, тип үпкәләүе ихтимал. Алама егет түгел... Әсәһе лә бая, шарт та шорт тәпән төҙәткән арала, ҡарасман балыҡсы егетте иҫкә алды. Аҙаҡтан һынамышы менән дә уртаклашты: «Насарға оҡшамаған... Башкортса һөйләшеүен әйтһәнә үҙенең. Нимә, килергә итәме тағы?» Эйе лә, юк та тимәне ҡыҙы, бары тик: «Шылтыратырға кәрәк. Мәскәүҙә йөрөй әле ул», – тип кенә ҡуйҙы.

Телефонын муйынына элеп йөрөргә яратмай Лира. Кисә генә Өфөлә һатып алған спорт костюмы кеçәһенә тығып алды ла һыуы ҡороған үҙәк битләүендәге суғырмаҡлы мал һуҡмағынан урманға ҡарай юлланды. Ошо инде урман. Һаумы, танырһыңмы Лираны? Таный, ул бит сабый сағында бәләкәй балта, туҙ тырыз тотҡан атаһына эйәреп, ошо яҡҡа еләккә килгәндәрен һис онотмай. Нисек онотаһың – тау түбәһенән серле киңлектәр, алыç офоҡтар тәүләп һеңде ҡарар күҙенә.

Сәселгән урман тимәç инең, бәғзе урындарҙа теҙеп ҡуйылған һалдат һымаҡ төп-төҙ ҡарағайҙар сафы осрамаһа. Тәлгәш ҡайындар ҙа шаулай бында, яҙ һутын «илатып» ағыҙғандар – билдәрендәге яралар быжырланып сурайған. Миндеккә тәләфләнгән саукалар ята аунашып. Миләштәр, эт муйылдары осраштыра.

Пип-пип...

Мәскәү тоташмай.

Ҡыҙыҡ, ҡарағайҙар йыш урында үлән үçмәй тиерлек, ер өçтө кипкән энәләр, тубырсыҡтар менән ҡапланған. Ҡоштар сырылдаша. Тын алыуҙары нindәй рәхәт! Үҙеңдең һауыға барыуыңды хис итеү – икеләтә рәхәт! Мәңге йәшәһен доньъя! Мең йәшәһен ғәзиз әсәһе, һөйкөмлө энеһе Тимур, шәфҡәтле аҡ халатлылар, изге күңелле Валя... һәм Данир.

Пип-пип...

Ҡайҙа һин, Данир?

Үргәрәк менергә кәрәк, уңдан салып. Шунда, урман һыҙаты ситендә, бала сағында сук еләктәрен ауыҙ иттергән аҡлан. Дөрөç килә... Аҙашыуы мөмкин түгел... Ҡасандыр сабынлыҡ булған бында, ана, ботағы юнылған ҡыуғал ҡайынға һөйәлгән серек тағандар шәйләнә. Еләк нәҡ ошонда түшәлеп уңа торғайны. Әле лә бар, ләкин күп түгел; йә мал тапаған, йә эреләнеп тә өлгөрмәйсә ҡояшҡа көйгән.

Пип... Пип... Пип... Бәй, әллә үҙе йүнләп баçа белмәй, – сигналдар барған кеүек. Һүндереп торорға кәрәк. Ял да кәрәк оҙон юлды онота төшкән аяҡтарына. Лира ҡырмыçҡаһыҙ төмөз өçтөнә кипкән үлән йәйеп ултырҙы.

Сип... Сип... Сут... Сут... Үҙ телдәрендә серләшә урман ҡоштары. Ҡапыл телефоны, усын зымбырҙатып, тотош тәненә наҙлы ла, ярһыу ҙа тулҡын йүгерткәндәй булды.

Таныш моң... Таныш тауыш.

## 7

Ә был мәлдә... Ә был мәлдә Күлтөбәктә «Беларусь»ҡа бесән тейәйҙәр ине. Йөктәре ярайһы ҡалҡыуланды, насар юлда ҡо-

лап-нитеп ҡуймаһын тип, һыйып бөтмәҫтәй ҙә булғас, килештеләр: Фасил бакуйҙарҙы йыя тора, Рәшит арбаны ҡыйшайтып бушатҡас, Зәриә ҡала, трактор кире килә һәм ҡалған бесәнде апкайтып, түбәлек башына ырғыталар. Унан инде Дипутаттың үҙе салған йәш тауыҡ итен тәмләргә, насип итһә, аласығында берәй эсемлеген һемерергә мөмкин.

Трактор гөрләүе алыҫлашҡас, Фасил күрән ҡатыш бесәнде муйыл күләгәһенә түшәп, арҡа терәгән килеш ял итмәк булды. «Ҡалай матур исем ҡушҡандар аҡланға: Күлтөбәк! Күл төбәге... Ә ҡаяһы – Күлбар. Өс бисә, көнлөк хаҡҡа ялланыптыр, төнәгөн яурындарына салғы һалып атлағайнылар ошо яҡҡа. Ярты көндә хәтһеҙ бесән сапҡандар. Хәҙер аҙған инде был сабынлыҡ, элек ҙур кәбән ҡойҙорта торғайныҡ, ти бит Зәриә. Егәрле Зәриә, күр, бакуйы таҙа, алымлы ғына, етмәһә. Тик анау эңерҙә?.. Шайтан ҡотортҡандыр...»

Килде-китте уйҙарынан арынып өсөнмө, егет ҡараштарын өҫкә, ҡая һыртына йүнәлтте. Күктә, тракторҙың олағыуын ғына көткәндәй, саңҡылдашып, ҡыйғыр ҡоштар тегеләй ҙә былай баҫтырышып, кәйелеп осорға керешкән. Икәүһе, бер-береһен ҡосаҡларға теләгәндәй, әйләнеп-тулғаныш ала хатта. Ҡайҙалыр уҡығайны: ҡыйғырҙар һауала ҡауыша, хатта үбешә. Ысын микән әллә? Их, ҡоштарҙың атаһы Фасил, ә инәһе... Лира булһасы. Юҡҡа ғына терпе эҙләйҙер шул Фасил. Осрамай ҙа ҡуя, сукынғыр мәхлүк. Табыр, тотор, берәй ситлектә аҫырар. Балан һуты ла килешә, тиҙәр. Һи, балан компоты һәр өйҙә бар, былтыр хәтәр уңғайны әсе емеш бынау тау аръяғындағы уяла. Вышка яғында ла күп, упыһын көҙгәрәк Фасил үҙе йыйыр. Баулап-баулап. Әгәр ҙә мәгәр берәй ярыҡ олаҡмаһа... Бөтәһе лә Лираның үҙенә бәйле. Бер генә йылмайһын... ауылда төпләнәсәк. Хатта ки ошонда, күл ярында, өй һалып инер. Мунса, беседка, умарталыҡ... Ҡасандыр ҡыр ҡаҙҙары, аҡҡоштар, һирәк осрар өйрәктәр төшкән күл ярҙарын лапы-лопонан таҙартыр. Лира, Лира... Белмәй ҙәһә ҡыҙый Фасилдың үҙенә баҙнатһыҙ ғына йән атыуын. Белгән хәлдә лә танау сирып ҡына ҡуйыуы бар. Буйың етмәҫ ботаҡҡа үрелеүҙән ни фәтүә?! Ҡайтыр тиһеңме әле вуз бөтәсәк белгес, уға ауылда эш тә табылмаҫ. Ней Фасил үҙе, мәүеш үк булмаһа ла, ҙур уҡыуға инергә ынтылманы, ата-әсәһе лә өгөтләмәне.

Фасил хыялый уйҙарға сумып ойой барҙы һәм сырымға талғанын һиҙмәй ҙә ҡалды. Был арала ҡара эш һамҫыта беләктәрен. Буш арба таҡҡан трактор артыҡ тауышланмай ғына яҡынайған, имеш, эргәһенә.

– Тор, малай, ауыҙыңа йылан инә ләһә! Бакуйҙы ла йыймағанһың.

Ырғып торҙо Фасил. Дуҫының көлөмһөрәп битәрләүенә иғтибар итмәйсә, һушын йыйғас, иң тәүҙә Кулбар ҡаяһына баҡты. Бая ғына ағас баштарына тейә яҙып ҡыуышып уйнаған ҡыйғырҙар күренмәй. Ҡуркаларҙыр ҡыйыу ҡоштар ҙа ят тракторҙың упайып торған тоҙҙай аҡ «күҙҙәр»енән.

– Инһә ни, закуска булыр. Ятып торғайным, йоҡо баҫты ла ҡуйҙы.

– Шәт, малай, бөгөн кәйефең юҡ?.. – Әҙ-мәҙ Дипутаттың әсе-мәсеһен ауыҙ итеп килгәнме, дуҫының күңеле иләҫ-миләҫ. – Әллә берәйһенә күҙең төштөмө? Ышанма һин ҡатын-ҡыҙға: донъяла иң алдаҡсыһы, иң мәкерлеһе – шулар. Ана, мине аръяктағы... ҡалай һемәйтте. Йәлләгән булып тейманем әмүткәгә... Шистый алам, йәнәһе! Ә Динестәгем – во-о!

«Арьяҡтағы» тигәне... Рәшит менән никах көнөн билдәләгәс, буласаҡ кәләше... буласаҡ ҡәйнәһенең өгөтөнә бирелеп, ҡапыл ғына райүҙәктә йәшәгән мебелсегә сыҡһын әле. Өс-дүрт магазин тоталар, ти хәҙер. Быныһы йөрөй шунан бирле ҡаңғырып, юҡ-бар кәсеп табып. Бөгөнгө ише тамаҡ байына ла тир түгергә разый. Ҡатын-ҡыҙға әйләнеп тә ҡарамай, тиер инең, тау ашаһындағы утарҙай ауылға мотоциклында тыр-быр барғылап йөрөй тол ҡатынға. Сибәр уныһы, ҡыҙыҡай үҫтерә, бүғай. Алырҙан түгелдер уйы, ул хаҡта Рәшит артыҡ сиселмәй. Сиселмәһен әйҙә. Рәхәт, иркен йөрөй. Ҡартайған, күҙгә насар әсәһе Камила ла орошмай үҙен.

Фасил иһә бер кемгә лә сисмәйәсәк эс серҙәрен!

– Кемгә ышанырға, әләйгәс?

– Чуртым белһен, – тип шышылданы ла Рәшит, арбаның артҡы бортын шалтор-шолтор төшөргәс, ынтылып, тимер һәнәген тартып алды. – Давай, тауығы бешә Дилбәрушкә әбекәйҙең... Кәзәкәйенә ҡыш сығырлыҡ бесән ҡайтыр.

– Һий, ике күбәлек нәмәне!

Айбарланып кереште буйҙаҡтар.

* * *

Ошо уҡ мәлдә... Юҡ, юҡ, көнө-сәғәте тура килмәйҙер, әммә ауылда бесән бөтөүгә, күпселек ҡала халҡы тегендә-бында ял иткәндә, алыҫ илдәргә сәйәхәт ҡылғанда, дачаларында, коттедждарында, баҡсаларында мәж килгәндә, аяҙлауҙа ҡомло һыу-күл ярлауҙарына, пляждарға, парктарға тартылғанда, Тайсиндарҙың өй телефоны зыңғырланы.

– Алло, хәйерле көн! Ғәфү итегеҙ, исемегеҙҙе...

– Миләүшә апайың булайым.

– Миләүшә Ғәлиевна, эй... Данир менән һөйләшергә мөмкинме?

– Командировкала ул, Мәскәүҙә. – Әсә һиҫкәнеп ҡуйҙы. – Ә һеҙ кем һуң?

– Мин ни... элек бергә уҡығайныҡ. – Яуап көттөрөп бирелде.

– Ҡайҙа: гимназиялмы әллә вуздамы? – Әсә күңелендә шик яралды. Нәзәкәтле, мәгәр әпкәләй, шымаҡый тауыш, таныш та кеүек. Үтә инсафлы һөйләшергә тырышҡан кешелә мәкер ҙә булғылай. Светлана, тиһәң, бәй... Исемде беләләр.

– Эйе, бергә уҡығайныҡ. Мин уны иҫкәртергә теләйем. Дуҫтарса ғына.

– Ҡайҙан шылтыратаһығыҙ?

– Э-е, райондан, Өфөгә килгәйнем, курсташ осраны ла... Шул әйтергә ҡушты Данирға.

– Йә һуң?.. Дуҫтарсамы, башҡасамы – иҫкәртеү яҡшы.

– Әйтһәң дә ҡыйын, әйтмәһәң дә. Йөрөгән ҡыҙы, ы-ы... йоғошло сир менән яфалана. Эйе, аҡыллы, перспективалы улығыҙ хаҡына ғына әйтәм быны.

– Йоғошло?.. – Әсә йөрәге валерьянка таптыра башланы, зиһенен «спид», «сифилис» кеүек әшәке, ҡот осорғос төшөнсәләр дөмбәҫләне. – Ғәфү итегеҙ, һеңлекәш, зинһар, өйгә килеп сығығыҙ әле. Иркенләп һөйләшербеҙ.

– Үҙегеҙ ғәфү итегеҙ: автобуска билетым кеҫәлә. Мөмкин булһа, тағы өҫтәйем: уның тәү оҡшатҡан ҡыҙы во-о тигән! Тик... яратыуын, эйе, Данирға белгертмәй. Күргәнем бар уныһын, ә быныһын – белмәйем, таныш врач әйтте. Ауырға алмағыҙ берүк, иҫән-һау йәшәгеҙ... – Телефон осонан әллә хушлаштылар, әллә Данирға сәләм күндерҙеләр. Трубканы услаған килеш Миләүшә байтаҡ иҫәңгерәп торҙо, шунан ғына аптечка ҡумтаһының ҡайҙа икәнлеген иҫенә төшөрҙө.

* * *

Даниры Мәскәүҙән ҡайтты. Марс ике аҙнаға Талҡаҫ күленә олаҡты. Бер ыңғай туғандарына етеп-һуғылып ҡайтырға иҫәбе. Китеүенә өс көн генә әле. Ә бында... телефон ҡот оскос хәбәр ташый. Тауыш ҡынаһы әллә таныш, таныш булмаған хәлдә лә – фальш, эйе, эйе, мәкер, яһалмалыҡ шаңдауы йәшеренгәндәй. Миләүшәне шик-шөбһәгә һалып.

...Кемдер уға ҡыш, нимәгәлер ҡушып, яңы йылда яһалма сәскә бүләк иткәйне. Тегендә, «малосемейка»ның унынсы ҡатында, торған сакта әле. Матур инеләр, аллы-аҡлы-күкле ысын ҡыңғырауҙар тип торорһоң. Бер мәл ҡыңғырауға баҫтылар. Тышҡы яҡта ҡатын кеше тора, гөл һауыты тотҡан. Асты, индерҙе.

– Һеҙ тәҙрәгеҙ төбөндә бик һирәк гөл үҫтерәһегеҙ. Гел ҡарап һоҡланам үҙебеҙҙең этаждан. Күрше йорттан мин. Берәй остоғон үрсемгә бирмәҫһегеҙме? Мин гөл яратам, һирәктәрен,

иң матурҙарын үҫтерәм. Етмешкә яҡын сортым бар,– тине ят ҡатын.– Алмашырбыҙ, теләһәгеҙ.

– Тәҙрә төбөндәге... яһалма шул,– иҫе китмәйерәк әйтте лә һалды Миләүшә. Ә сәскәсенең ауыҙы бәлшәйҙе, һөмһөрө ҡойолдо. Саҡ тынысландырып, сәй эсереп сығарҙы үҙенә. Гөлөн ҡалдырҙы бахырҡай. Уныһын өшөттө Марс Нәбиевич көҙгө ҡырауҙа балконда нимәнелер ремонтлағанда.

Алдатҡыс сәскәне Миләүшә баҡсаларына алып барып ҡуйғайны. Ҡыш уҙҙы. Яҙ барһалар – әтрәгәләмдәр төшкән баҡсаларына. Эшкинерҙәй сепрәк-сапраҡты, ялтыр тимер-томорҙо, алюминий ҡалаҡтарға тиклем алып киткәндәр. Эскәндәр, йоҡлағандар, ҡаҡашҡан бисәләр күлдәге ята... Уныһына көймәне тәүҙә Марс. Веранданың туалетҡа әйләнгәнен, анау яһалма сәскәнең нәжескә буялғанын күргәс, шырпы алып, баҡса өйөн үртәргә ҡырсынмаһынмы!

– Поджигатель! Төрмәгә ултырғың киләме? – Көскә тыйып ҡалды ҡыҙмаса ирен ҡатыны. Эсеңкерәй ине ул осор Марсы, ярай, тыңланы. Уның ҡарауы, ҡабат бында аяҡ та баҫмайым, тигәйне, һүҙендә торҙо. Таҙартып, һылаштырып-ямаштырып, Миләүшә осһоҙораҡҡа елгәрҙе участогын. «Баҫка, баҫка»,– тип сабый Данир ҙа оҡшата башлағайны ла, ни хәл итәһең, йыйын асарбаҡ мәхрүм итте йәмле генә баҡсаларынан.

Әгәр ҙә баяғы телефондан ишеткән иҫкәртеү... ысын булһа? Миләүшә башын айманы. Ҡайтһын ғына! Асыҡтан-асыҡ һөйләшер. Берҙән-бер улы әле! Ваҡытында икенсе балаға ла уҙғайны, көтмәгәндә башы әйләнеүҙән йығылып, биш айлыҡ ауырын төшөрттө. Малай булған уныһы ла, меҫкенкәй. Табиптар ҡабат ауырға ҡалырға кәңәш бирмәне Миләүшәгә, Марс та был хаҡта һыңҡарламаны.

Баяғы тауыш... Хәҙер ул фәндә, ул бизнеста әллә нindәй юлдар асылырға торғанда, улына, улына ғына түгел, ата-әсәһе абруйына ла хәтәр бысраҡ янай түгелме? Ете ҡат ышҡып йыуынһаң да бөтмәҫ ундай бысраҡ.

Миләүшә быna-быna нервыһы ҡуҙғып, башы әйләнгеләп торғанда, артынса һыу уртлап эсергә лә онотоп, әскелтем таблетка йотоп ебәрҙе.

* * *

Лира кәзә ҡымыҙын бешеп, әсетергә өйрәнде. Шәп! Үҙе, әсәһе эсә, Тимур ғына хушһынмай. Килгән-киткәнгә тәҡдим итергә ҡыймайҙар. Хәйер, кеше һирәк инә үҙҙәренә. Сәбәбе билдәле. Йөрөмәһендәр. Ана, кисә Лира дәү атаһының баҡсаһында арлы-бирле генә өлгөргән ҡурай еләген, ҡарағат-маҙарын йыйып йөрөй ине, урамдан машина бипелдәне. Райҙәк аша да-

чаға килеүселәр икән. Өфөнән үк йөрөштөрәләр, былтыр урам аша арыу ғына йорт-ҡураны һатып алғайнылар. Шулар урамдан гудок ҡыскыртып, Сасында осрап, үҙҙәре аша биреп ебәргән ҡағыҙ остоғо ырғытып үтте юлайҡан. Машиналарының тәҙрәһенән генә. Әллә шикләнәләр Лиранан. Сырхауын улар ҙа ишетте микән? Сукынып ҡына китмәйме донъяһы, кем әйтмешләй. Әсәһенә хат. «Фаниде от Валентины». Бына бит, телефон эшләмәгәс, хат та ҡотҡарып ҡуя йомош төшкәндә.

Лира ҡайтырға булды. Кис якынлаша. Әсәһе күптән керҙәрен йыуып элгәндер, Лираны көтәлер.

– Валя өй йыуырға саҡыра! – тине, хатты укығас, Фәнидә. – Барырмын, үҙе зерә ярҙамсыл бит.

Сасынға Зәриә лә барған. Валентина уға телефон аша Олотүздәге таныштарынан әйттергән. А-ба, мари – бишәү, ике башҡорт, өс татар – йәмғеһе ун ҡатын-ҡыҙ йыйылған өмәгә. Тәүҙә мыжғыбыраҡ алдылар ҙа, шунан, эй, дәррәү тотондолар. Зәриә менән Фәнидә эштең ауырырағын алды: баҙ таҙартып, иҙән аҫтын нигеҙ буйына өйөштөрҙөләр.

Аҙаҡ өмәселәр ихата уртаһына табын ҡороп ултырышты. Йырлап ебәрҙеләр, тыпырҙашып алдылар. Татар менән мари бейеүҙәре апарук оҡшаш, башҡорттоко ярайһы айырыла. Илләмен тип тормай, өс милләт бейеүен дә өйрөләп-сөйрөләп, өҙөк-өҙөк башҡарҙы Валентина.

Фәнидә Валяның күрше райүҙәктән ҡунаҡҡа килгән түтәйе – сей мари, йәғни сукынмаған ике туған апайы менән гәпләште. Етмештән уҙған, им-томға оҫта теремек ҡарсыҡ йомаҡ ҡойғандай әйтеп һалды.

– Сезнең пер егет сурашты: туберкулез менән авырган сеңлекәшкә ниндәй аш дару була? – Һағайҙы Фәнидә, аптыраны. Ҡыҙыҡ, ҡыҙының сир-соро аулаҡ ауылдарында мәғлүм дә, ти, ә һыу аръяғына ул хәбәр ҡасаныраҡ һарҡылып өлгөрҙө икән? Фәнидә ни, яурынын ҡыймылдатып, әбекәйҙең күҙенә ҡараны:

– Ә нимә килешә һуң? Әйт, түтәй, буш итмәм.

– Йәш кешегә калина согы әйвәт. Барсук майы да ярый. Самай әйвәте – терпе ашатыу. Пешкәнен... – Уҡшымаҫҡа тырышып, Фәнидә саҡ тыңлап бөттө сирмеш кәңәштәрен. Ни хәл итәһең, аптыраған өйрәк арты менән сумыр, тиҙәр. Им өсөн дәһә... Мәгәр врачтар менән килешмәйсә, әкәм-төкәм һоноп ултырмаҫ Лираһына. Э-эй, яҙалар, өйрәтәләр, күрһәтәләр: йыланын да, бакаһын да, бөжәген дә йыпыра әҙәм заты.

Фәнидә Валентинаға ҡайтырға йыйынғанын әйтте, иртәгәләрҙә апаһын Бурашка алып килергә үтенде. Тәүҙә күрһен әбекәй, бәлки, Лираның зәхмәтенә ҡарата бүтән кәңәштәрен дә бирер. Өҫтәлдән күстәнәс төрөп, урамғаса оҙатып ҡалды хужа-

бикә әхирәтен. Бүтән өмәселәр таралышырға ашыкманы. Зәриә лә. Аръякка паром катерында сығып, Олотүзгә Каризел ярынан үрләргә самалайҙыр.

* * *

Валентина менән апайы иртәгәһенә Фәниҙәнең әҙер сәйенә килеп етте. Әбекәй утынлыкта әңгәмәләште Лира менән. Аҙак, хушлашыр алдынан, әйтте Фәнидәгә: «Аптыраганский... Авыруга никак ошамаган. Сүйәгендә микән... Шәбәйәме?» – Ахырҙа маңлайын тызып, күлдарын йәйҙе.

Лира, яй атлап, элекке баҫыу ситенән үрләскә ынтылды. Прогулкағамы? Валентина, фото тотоп, Солтан Хажиморатовичка китте. Мәкәлә яҙа шикелле тегеһе уның юбилейына карата.

Им-томсоларға, күрәҙәселәргә мөкиббән түгел-түгеллеккә Фәнидә. Ана, кәйнәһе тубығы бөгөлмәүҙән ике-өс йыл атлай алмай ултырҙы. Сабыр ғына, күңелсәк кенә ине мәрхүмә. Көҙгө һыуыкта ауылға мосафир килде. Күп тиһәң кырк тирәһендәлер. Өшкөрә теге, һылай ҙа һыйпай. Тоҙ тарата – аксаға, кулдарын алға һоноп, башына укалы бәрхәт түбәтәй кейеп, ике усын алға һоноп төшкән рәсемен дә һата: карағыҙ – файҙалы. Әлеге Кашпировский йораты кәйнәһенең тубыктарын... боҙло һыуҙа мансылған юрғанға ураттырҙы. Шифа урынына зыяны күберәк тейҙе микән сырхауға: бер-ике айҙан гүргә инмәҫме! Йә, Хоҙай, «минән алда Барый улыма әжәлеңде ебәрмәһәңсе», тигән сактары булды бит.

...Барыйын юллап, Благзаводтағы таныклы күрәҙәсе әбекәйгә мөрәжәғәт иткәнен дә онотмай Фәнидә. Кайғыһын түкмәйсәсмәй һөйләп бирҙе, ике-өс фотоһын күрһәтте. Берәй йыл көт тә, кайтмаһа, төңөл, тигән булды уныһы. Йәне кыйылған, тип кенә өҙә һукһа – ни дәғүә? Ә юк, өмөтөн һүндермәй, йәнәһе. Йәлләүенәндер. Бик бөтөрөнмәһен, ике балаһын аякка баҫтырһын, тигәндер. Кешеләр, фәлән районға бар, фәлән күрәҙәсене тап, тиһәләр ҙә, Фәнидә кабат экстрасенс-маҙар менән осрашырға маташманы. «Жди меня» телетапшырыуына ла ебәрмәне Барыйҙың фоторәсемен.

Лираны өндәшмәйерәк каршы алды Фәнидә. Валентинаның бая килтергән кукшел сейәләрен түрбашка куйҙы – Тимур һыу буйынан кайткас өсәүләп ауыҙ итерҙәр.

– Әллә ауырыуың йонсотамы, Лира балам?

– Юк, әней, борсолма, хәлем әүәлгесә. Бер ни ҙә юк...

Бер ни ҙә юк... Ә бит ниҙер бар кеүек. Төштән һуң Лира телефон пунктына барып әйләнде. «Шәмбе сәғәт 12-лә шылтыратырмын, аяҙ икән, тауығыҙға мен. Мин шәмбелә кайтам Мәскәүҙән», – тигәйне, юк, ныкығайны лаһа Данир һуңғы һөйләшкәндәрендә.

## 8

Эйе, кеше аптыратып, Лира яйлап ҡына ҡарағайлы тауға менде, яйлап ҡына төштө. Һул яктағы һөҙәк ҡыразда – зыярат. Уртаһында ғәләмәт һонтор шыршылар үҫә. Ҡабат менеп тормаҫ ҡарағайлы түмәләскә... Хәйер, уңдан урабыраҡ та менеп була. Булһа ни? Үҙе килер Данир, бик күрергә ашкынһа. Киҫәтте ләһә Лира һуңғы юлы диспансер ихатаһында: «Һиңә минең менән осрашырға ярамай. Хәлемде ишетһәләр, күр ҙә тор: атай-әсәйең дә тыясаҡ! Аҙаҡ үҙең дә ҡыуанырһың. Донъяла ғашиктарҙың айырылышыуына сырхаулыҡ та сәбәп булғылай...» Шылтыратманы, тимәк, вәғәҙәһендә торманы. Тимәк, йә шикләнә башлаған, йә әсәһе, йә берәй кеме тыйып маташа. Светлананың да араларына һыуындырғыс ел өрөүе ихтимал. Каникулда көйө лә килгеләй Өфөгә, тиҙәр уның хаҡында. Косметика менән үҙ яғында ла һатыу итәлер. Ул... Ул имтихан алыусыларҙы ҡайҙа юхалап, ҡайҙа алдаулап, «хорошистар» ыңғайына эләгеп-һарҡып курстан курска үрләне. Былтыр староста итеп һайланды. Ҡышҡы сессияла элекке староста менән студенттарҙан аҡса йыйып, философия укытыусыларын «һатып алырға» теләгәндәре фашланһа ла. Йәнәһе, мейе серетмәгеҙ, «зачтено»ларҙың башы бәйле. Биш-алты кешенән, шул иҫәптә Лиранан, ришүәт һораманылар. Берҙән, артыҡ һумдары юк, икенсенән, хәрәмләшмәй тапшырып өйрәнгән ул имтихандарҙы. Имтихандар бөткәс кенә шыш-быш таралды: яңы староста менән яңы профорг йыйылған аҡсаның яртыһын үҙләштергән, вәт махинаторҙар! Ғауға сыҡмаҫ борон теге икәү группаны йыйып, арлы-бирле һыйлаған булдылар: йәнәһе, уңышлы сессияны йыуҙырталар. Ниндәйҙер һылтау табып, барманы Лира. Аяғы тартмағанға... Аҙаҡ теге шылғаяҡ үҙ урынына... профорг Светлананы тәкдим итте: урындарын ғына алмаштылар. Кураторҙары хуплағас ни.

Сетерекле генә иҫтәлектәргә биреллдеме, хәл белешкән булып, әсәһе ҡыҫыла ла ҡуя. Әсәләр күңеле һиҙгер була, тиҙәр, әлләсе...

...Дөрөҫтөр. Миләүшә лә, ана, ишектән ингәс үк, Данирға тәүләп күргәндәй оҙаҡ ҡына ҡарап торҙо. Ятһыраған төҫлө, кухняға әйҙүкләне, унда ла ҡайҙан етди һүҙ башларға белмәгән кеше ише әптәләнде. Хатта улының Мәскәүҙән алып ҡайтҡан бүләгенә – яҫы ситле салт һары пляжный эшләпәгә лә иҫе китмәгәндәй ҡыланды. Атаһына тип, Данир ҡупшы халат тотторҙо, саквояжында тағы нимәләр бар кеүек. Бар ине, Лираға бүләге бар ине. Ана бит, стена сәғәтенә күҙ һалғылай.

Педагог ҡатын өтәләнеп кухняға елдерҙе. Тәүҙә юлаусының һыуһынын ҡандырыу, тамағын туйҙырыу фарыз. Уйламай

һөйләгән – ауырымай үлгән: тоҡтомалдан улының күңелен китеүе ихтимал.

Егеттең Мәскәү тәьҫораттары әсәнең бер ҡолағынан инде, икенсеһенән сыҡты. Күптәнге һынамышы буйынса Мәскәү ҙә – баш ҡала, Өфө лә... Тәүгеһендә ығы-зығы күберәк. Бөтә килделе-киттеле реформалар, яҡшы-яман үҙгәрештәр шунда ярала. Унда көнитмеш ҡиммәт, мәгәр хеҙмәткә түләү ҙә, пенсиялар ҙа сағыштырмаса юғары. Әҙәм балаһына артыҡ шашынмай, сама белеп йәшәү хәйерле. Атаһы элек әйткеләне: Данир, бәлки, киләсәктә Мәскәүҙә аспирантура бөтөр, шунда төпләнер. Нимәгә кәрәк был? Быйылмы, икенсе йылмы армияға саҡыртасаҡтар. Ике йылға. Хәрби кафедра, хәрби сбор үткән, запастағы лейтенант таһа. Атаһынығы ишерәк учреждениега урынлашһа, эшенең яугир хеҙмәтенә иҫәпләнеүе ихтимал. Теләһә ниндәй ҡамыт кейһен, бары тик ҡырҙа йәшәмәһен. Әле бында ҡыҙҡырҡын тынғы бирмәгәнде. Ваҡыт икән, өйләнһен улыҡайы, бына тигән өләсәй булыр әсәһе. Бөксәндәгән ҡарсыҡ түгел әлегә Миләүшә.

Киләһе ҡыш уртаһына Миләүшәгә рядовой пенсия менән хаҡлы ялға сығырға мөмкин. Уҡыу йылы аҙағынаса эшләп йөрөр, педколлективта һанлайҙар үҙен. Ғаилә бюджеты арыу, ире байтаҡ ала эш хаҡын. Элек заводтарын ҡулдан ҡулға күсергәндә биргән акцияларынан, ана, дивидент тигәндәре аҡмаһа ла тамғылай. Был хаҡта Данирға белгерткәне юҡ әле. Бәй, туйына кәрәгер, ипотека аша торлаҡ алырға мая булыр. Гелән ата-әсәһе менән йәшәгеһе килмәҫ. Мәгәр ошо уйҙары менән уртаҡлашырға ашыҡманы. Улының юл ыҙаһынанмы ҡыҙара төшкән күҙҙәрен шәйләп, хәстәрлекле тәкдим яһаны.

– Душ ҡойон да әҙерәк ятып тор...

Йыуынып алғас, Данир йоҡа спорт костюмы кейгән килеш бүлмәһенә уҙҙы ла диванына ауҙы. Һуйҙайып ятҡан килеш, пип тә пип кемделер кеҫә телефонынан эҙләне. Кәйефе төшөнкөрәк һымаҡ.

– Эләгә алмайһың? – Әсәһе ярым ҡыҫыҡ ишектән һорашты. – Бик кәрәк кешеме?

– Бер иптәшкә сәғәт икелә шылтыратырға тейеш инем, самолет һуңланы.

– Ул иптәшең, моғайын, ҡыҙ кешелер...

Данир ирендәрен ҡымтыны.

– Ярай, ярай, кемгә шылтыратһаң да ғәйебе юҡ, тик... һаҡ бул. Берүк һаҡ бул! Алама ҡыҙҙар эт тубығынан хәҙер.

Әсә кешенең йәшкелт зәңгәр күҙҙәренән берсә зәһәр осҡондар сәселде, берсә оҙонса керпек остарына гәлсәр бөркөлдө. Ул төнәгөнгө сәйер шылтыратыуҙы бер тынала һөйләп ташланы.

– Былтыр сибәр генә ҡыҙҙы эйәртеп ҡайтҡайның да... Китап биреп торам, тип. Шуның тауышына ла оҡшаңҡыраған.

Светлана... Китап... Тауышы...

* * *

Баш-күҙ алғас, бүлмәһендә бикләнеп, Данир йәнә Лираға шылтыратып маташты. Бушҡа ғына... Тимәк, киләһе аҙнаның шаршамбыһын көтөргә тура киләсәк. Оҙаҡ... Ә ниңә, ниңә иртәгә үк ауылына йөрөп әйләнмәҫкә? Юл таныш. Көн матур. Балыҡ тоторҙар, һыу инерҙәр. Лираға тәғәйен модалы күҙлекте тапшырыр. Һәйбәт made in... дәһә, японлар үтә күренмәле шыптырға төргән.

Ҡайһы яҡтан уңай? Уңдан барһаң – автобустар, «Газел»дәр, шунан катер йөрөп тора, һулдан – йәйәүләргә байтаҡ, тиҙәр, өҫтәүенә, ул тирәнән уҙғаны юҡ Данирҙың. Бары тик теге барыуҙарында ат һуғарған ҡартластан һорашҡайны: ҡаршылағы ауылға бүтән тарафтан юл бармы?

Туҡта, Александр һуң? Һыу буйында йөрөмәһә һәптәндәп. Белешеү зыян итмәҫ, бәлкем, иртәгә, йәкшәмбелә, елдереп кенә йөрөп ҡайтырҙар. Яғыулыҡ хаҡын Данир ҡаплар, ашатып-эсереп кенә йөрөтөр үҙен. Ҡайҙа, шылтыратып ебәрһен әле ут күршеләренә ҡала телефонынан. Әсәһе күтәрҙе трубканы. Тәүҙә ах-вах килде, аҙаҡ көтмәгәндә Данирҙың милицияға барып әйләнеүсе үтенде. Илай, инәлә. Үҙенең, етмеше яҡынайған ҡарсыҡтың, биле һыҙлай, Наташа балалары менән баҡсала ята.

– Мин Шурикты, берәй иптәшендә ҡуна ҡалғандыр, тиһәм... Баяраҡ шылтыратты. Бер эш тә боҙмаған, мобилкаһы арҡаһында аңлашылмаусанлыҡ...

Данир ҡарһаланып кейенә башланы. Ай, был әсәләрҙе! Инде Данирҙыҡы илаулай: ни булды ла ҡайҙа бараһың, нимә ҡарайһың милициянда... Хәҙер, берәй сәғәттән ҡайтам, трамвай йөрөп тора, тип улы етди һәм ышаныслы вәғәҙәләгәс кенә тынысланып ҡалды. Тура килеп тороуын әйт – баяғы һөйләнеүе һыуынмаған да бит.

«Берәй сәғәттән...» тип китһә лә, Данир милицияға барғансы, дежур тәфтишсе Александр менән күҙләштергәнсе, юҡ-бар протоколдарға ҡул ҡуйғансы хәтһеҙ ваҡыт уҙған. Александрҙың гаражына килеп ингәндә, киске сәғәт етеләр ине. Егеттәр өйҙә әсәләрен тынысландырып сыҡтылар ҙа, ялһыҙ эшләгән яҡындағы ларектан һыра алып, ярайһы эре йүкәләр араһына һыйынған гаражда гәпләшеүҙәрен дауам иттеләр.

...Шурик беренсе яртыла туҡталышта шешә ауыҙынан һыра һемереп торған. «Һап» эләктерә үҙен «төнгө һунар» менттары. Автобус унан башҡа ла лыҡа тулы, имеш, иҫерек баштар менән. Бөтәһен бергә алып барып тултыралар «маймыл ситлеге»нә. Сортка айырыу башлана: үҙҙәрен былағай тотҡан, янап-һүгенеп маташҡандар – айныткыска, шәхестәре шик уятҡандар камераға эләгә. Күптәрҙе таңға сығаралар; Шурикты оҙаҡ саҡырт-

майҙар. Бәкһаң, туктальшта һыра йотоп тороуы елтерәтеп алып китеүгә һылтау булһа, төп бәлә анау сыбар йылан ҡабығылай күн тышлы телефонда икән. Номерын тикшереп ҡараһалар – эҙләүҙә, кемдәндер таланған... Нимә әйтһен Саша? Ай элек кенә ике егеттән һатып алдым, осһоҙлоғона ҡыҙыҡтым, урамда, ә юк, скверҙа, тигән, арлы-бирле уғрыларҙың ҡиәфәтен тасуирлаған.

Ялғанламаған. Һатып алғандың иртәгәһенәме, Шурик Данирға хәбәр итте: мобилка алдым, балыкта кәрәгер. Дуҫы шул кисте үк ҡат-ҡат шылтыратты яңы телефонынан.

Данир бына шулай дуҫының яҙмышына өшәндергес елдәр иҫкән мәлдә ашыкты милицияға. Александр менән бер подъезда йәшәүен, бәләле телефонды ҡулдан алыуын раҫланы, үҙенекенә яҙып ҡуйған номерын күрһәтте.

Кем икәнен тикшергәстәре, урыҫ күршеһенә ҡарата аяныслы башҡорт егетенең раҫламаларына таянып, Александрҙы иреккә ебәрҙеләр. Ебәргәндә: «Тағы килергә тура килер, гражданин, сөнки урландыҡ мобилканың элекке эйәһен тапманыҡ әле», – тип иҫкәрткәйнеләр, вәкләнып торманы был: «Минһеҙ генә таба алмаҫһығыҙмы шул ике егетте? Кәрәге генә юк миңә был телефондың, алып ҡалығыҙ... Белгән булһам, оронмаҫ та инем...» Ризалашты формалы оперҙар, әммә уғрылар тотолдо ниһә, сакыртып аласағын белдерҙе. Күҙләштереү мәксатында.

Данирҙың – үҙ хәсрәте. Ҡыҫкаса аңлатты. Бөгөн арлы-бирле йыйынып ятырға ла иртәнсәк көнөнә генә Бураш яғына һыпыртырға килештеләр. Шуриктың поход нәмәләре гаражда – ҡул осонда ғына. «Стресты бөтөрөп, тамакты туйҙырып ҡайтайыҡ. Асыҡтырҙы, браток, каталажкала».

* * *

Ял көнө Лира түшәк-мүшәген ҡояшта еләтеп, ҡаҡҡылапһуҡҡылап индерҙе, иҙәндәрҙе ялтлағансы йыуып алғас, үҙенең сымылдығына инеп, төшкө ашка ултырҙы. Ҡыҙын йылы айҙарҙа аҫтағы өйҙә йәшәтеү хаҡында уйлап та бирмәне әсәһе. Ни выжданы менән айырым өйгә һалып ҡуйһын! Маңкаһы ағып тормай әле Лираның, төҫкә-башка ла һау сағындағы һымаҡ. Йөҙөндә, бигерәк тә ҡарағусҡыл күҙҙәрендә һағыш, уйсанлыҡ бар инде барлыҡка. Улай ғына кем уйланмаҫ. Хәтәр зәхмәт бит, һис тә генә көтөлмәгән зәхмәт.

Бәләкәйерәк сағында, ана, атайҙары, ағайҙары бесәндә ҡуна ятҡанда «йәшүр йоҡторған» ялбыр ҡара ялды туры тайҙы... сытырлы соҡорҙа тәүҙә йөрәгенә атып, шунан өҫтөнә утын өйөп, ҡоро-һары ташып яндырғандарын һис онота алмай Фәнидә.

Оҙак яна икән дәү хайуан. Өс көн янды ла ҡуйҙы, Шиҙе буй-ҙарына ҡойка еҫе аңкытып... Ат яндырыу йолаһы халыҡҡа борондан таныштыр, моғайын. Ауыл хужалығы техникумын бөтөргән Фәнидә лә уны-быны ғына белә. Ҡыҙы ауырығаны бирле күҙенә гәзит-журналда нимә эләгә, шуны ҡырҡып ала ла, ҡат-ҡат уҡығас, тотонолмаған амбар кенәгәһенең буй-буй һыҙыҡлы биттәре араһына ҡыҫтырып һала.

Ваҡыт-ваҡыт аулаҡта ана шул киҫентеләргә йомола. Уйлап ҡара: халыҡ-ара махсус көн бар! «24 март – Бөтә донъя туберкулезға ҡаршы көрәш көнө» тип яҙылған, мәҫәлән, йыртма календарь битендә. Күҙлекле, бакенбардлы, френч кейгән кеше рәсеме аҫтына «Күренекле немец ғалимы – бактериолог, Нобель премияһы лауреаты Роберт Кох» тиелгән. Артабан уның баһалап бөткөһөҙ асышы хаҡында мәғлүмәттәр бирелгән.

Ҡыҙы үҙ бүлмәһенә ингән, ә малайы үҙе менән бергә тамаҡ туйҙырып, һыу буйына һыпыртҡан арала әсә кеше – инде нисәнсегә! – һауыт-һаба йыйыштыра башлағансы уҡ, берсә ҡурҡыбыраҡ, берсә өмөт бағлабыраҡ, ошо ҡағыҙ остоғона тағы күҙ һалды. Әйтерең бармы, фәһемле, аңлайышлы яҙылған.

...Туберкулездың сәбәптәре ун туғыҙынсы быуат аҙағына тиклем асыҡланмай. Ғалимдар төрлөсә фекер йөрөтә. Хатта берәү туберкулездың асылын «бәхетһеҙ мөхәббәт һөҙөмтәһе» тип тә аңлатырға тырыша. Ә рәхимһеҙ зәхмәт йыл һайын меңәрләгән кешеләрҙең ғүмерен ҡыя. Ниһайәт, 1882 йылда туберкулездың тәбиғәте асыҡлана.

...Кох 1843 йылда тыуған. Геттинген ҡалаһы университетының медицина факультетын тамамлай. Ябай практик табип булып эшләгәндә үк Себер язваһын тыуҙырыусы бактерияны өйрәнә, һуңынан, 1883 йылда, Һиндостан менән Мысырҙа холера бик көсәйгәс, ҡурҡыныс эпидемияны өйрәнергә шунда китә һәм ныҡышлығы арҡаһында холераның тәбиғәтен аса. Ғалимдың артабанғы уңышы – туберкулез бактерияһы.

...Уҙған быуаттың туҡһанынсы йылдарында илебеҙҙә туберкулез менән ауырыусылар кәмегәйне. Ләкин һуңғы осор был һан һиҙелерлек арта. Организмдың иммун системаһы ҡаҡшауы, һыуыҡ тейеү был сир өсөн һәйбәт ерлек булып тора. Бактериялар ауырыу сөскөргәндә, йүткергәндә таралыусан.

...Роберт Кох 1910 йылда донъя ҡуя. Әммә уның мәшһүр асышы донъя халыҡтарына мәңге хеҙмәт итәсәк.

Бынауһы – гәзиттән ҡырҡынты. Мәҡәләһен «Туберкулезды дауалап була!» тип атаған икенсе табип. Бирһен Хоҙай, ҡыҙы ла һауыға һымаҡ. Ләкин тынысланырға иртәрәк. Ашау яғын төрләндереү фарыз. Өлгөрһә, бөгөн аръяҡҡа, хатта районҙаҡ магазинына, барып килер. Лимон емештәре, эре һарымһаҡ кәрәк. Баҙарҙарында һыйыр бауыры, алабуға, һыла кеүек балыҡ һаты-

ла торған. Был арала балыҡсылар күренмәй. Ауылдаштарҙан һорапып йә һатып алыу әллә нисек. Дачниктар иһә күберәк ерҙә соҡона.

Иҙел аръяғында тирәк араһынан йәшкелт машина үргә уҙып бара. Бәй, туҡтаны, бер әҙәм төшөп, был яҡҡа ҡаранған кеүексе. Ары киттеләр. Машиналарын ҡай ергә туҡтатырға белмәй аҙапланған балыҡсылар микән?

Их, эшкингән магазиндың булмауы! Ней лосмандар тиҙерәк асмай бурама лавкаларын.

Фәнидә иплән кенә юлға йыйынғанда, ярым ҡыҫыҡ ишек аша ҡыҙының кем менәндер һөйләшкәнен аңғарып ҡалды. Урыҫса ебәрәләр күберәк, ләкин әсә кеше лә төшөп ҡалғандарҙан түгел, телде аңлай – уңайһыҙ булһа ла, ҡан балаһы әле! – бер аҙ ҡолаҡ һалып торҙо. Әрепләшкән һымаҡтар. «Кисә ниңә шылтыратманың? Мендем бит тауға...» Нимә тип яуаплайҙыр теге бәндә – билдәһеҙ. «Не ходи... Мине күрергә вообще ярамай». Аҙағыраҡ ыҡҡа килде: «Ладно, берәй сәғәттән шарлама тирәһенә барырмын... Островокта күрерһең».

Әсә кеше шымбаҫар бесәй ише йылп итеп соланға йомолдо. Ярай, йөрөмәҫ бөгөнгә. Фазылды ла, кәмә тип, эшенән айырыу килешмәҫ. Сасындан аҡҡайтыр аҙыҡ-түлекте.

Лира һауыт-һабаһын йәһәтләберәк йыуырға кереште. Тимәк, шарламаға бармаҡсы. Унығы аҫта түгел, өҫтә. Шарлама тигәс, йылға бер урында бөгөл яһай, ярайһы тарая, шунлыҡтан тулҡынланып, ишелеп-ишелеп аға. Унда барыу өсөн ярымутрау һымағыраҡ ярлауҙан – йәш тирәклек, эре ҡарағура, һирәк таллыҡ араһынан атларға кәрәк. Атлаһын, ҡурҡыныс яр түгел. Аръяҡта ғына ул эҫе көндәрҙә йыйын әтрәгәләм мәж килә. Ул ҡомда ҡыҙыналар, ул кәйеф-сафа ҡоралар. Әле унда кеше аҙыраҡ. Көнө лә әллә ни эҫергәнес түгел. Ни тиһәң дә, август урталары яҡынлай. Егерме биштәрендә, Алла бирһә, өсәүләшеп дауаханаға юлланырҙар. Эйе, эйе, Тимурҙы ла тикшертеү мотлаҡ. Ауырыу бар өйҙәге бала-сағаны табиптарҙан ҡат-ҡат ҡаратыу мотлаҡ, тип иҫкәрткәйне лә Клара.

## 9

Александр рулдә килеш Данирға нисегерәк балыҡҡа әүәҫләнеүен ҡыҫҡаса бәйән итте.

– Атайым арҡаһында... тупрағы мамыҡтай булғыр, – тине көрһөнөп. – Сеструхам Наташа кейәүҙән ике ҡыҙсығы менән айырылып ҡайтты ла, отставкалағы майор Алексей Наумович – атайым була инде – ял көндәре ошо «шестерка»һы менән балыҡҡа йөрөштөрә башланы. Ҡай саҡ мине лә алғылай. Бер мәл

усаҡ янында йөҙ грамланып алғас, дуҫы ҡаршында зарланып ултырҙы был. Өйҙә нервы ҡаҡшай: йә бала-саға илай, йә супруга мыжый... Ҡайҙа ҡарама — йүргәк тә ыштан. Шуға сығам да китәм балыҡ артынан, ти. Ҡайҙарҙа ғына булманыҡ беҙ. Павловка, Ҡандрагул, Асылыгүл... Шәмсетдин күлен дә айҡаныҡ, Татарияның Актаныш дамбаларына ла йөрөштөрҙөк... Әллә старичок фатирҙы ҙурайтып өлгөрҙө. Һинең менән бер подъезға эләгербеҙ, балыҡҡа йөрөрбөҙ, тип кем уйлаған инде?

Данир юлдашын бүлдермәй генә тыңланы. Тегенең «стрессы шәмбе»нән һуң эсен бушатҡыһы килә торғандыр, әйҙә, бытылдаһын. Бәлки, атаһын да юҡһыналыр. Хәтерләй ҙәһә Алексей Наумовичты Данир. Алсаҡ, буйға тәпәшерәк ине. Хәрби комиссариатта хеҙмәт итте. Шуриҡы малай сағында ул алыҫ гарнизондан Өфөгә — йәшлеге үҙған ҡалаға ҡайтып төпләнеүгә өлгәшкән. Дим биҫтәһенән, буғай, тыумышы.

— Йоҡо туймаған һымаҡ, барғас, әҙерәк ятып торормон, — тип тә һөйләнде Александр. — Һин свиданкаға китһәң, матрасты өрәм дә ауам. Каталажкала сырым да тәтемәне.

— Килештек, Александр Алексеевич!

Мәгәр йылғаға етер-етмәҫтән йөрәкһеүен йәшермәне Шурик: нисек түҙһен ҡармаҡламай! Туҡталҡаға ҡулай ерҙе һайланылар. Яры текә, ләкин төшөп-менеп йөрөрлөк, аҫта — өйрөлөп ятҡан тоба. Өҫтә — елгә һарғылт йәшел сырмалсыҡ үлән ыуылйып ятҡандай баҫыуын хәтерләткән шарлама. Урыны менән мүк йогондормаҫ һуйыrташтарҙы, ағып барған әкәм-төкәмде ҡармар өсөн борғоланған эреле-ваҡлы оптоларҙы, сабаҡтарҙы сырамытырға мөмкин. Әйтерең бармы, хәләүәт урын!

— Кәмәңдә ултырып ҡармаҡлайһыңмы? — тип һорағайны Данир дуҫынан, тегеһе мығыр-мығыр яуапланы. — Юҡ, бил тала, бөгөн ҡайтыр булғас. Ә һин аръяҡҡа нисек сығаһың һуң? Тын өрҙөрә беләһеңдер бит «Айгөл»гә?

— Айгөл, Айгөл... Бер әҙәби осрашыуҙа Мостай Кәримгә шаяртып әйткән, ти, ҡәләмдәш дуҫы: Мостай ағай, һеҙ «Айгөл иле» драмаһын яҙғас, Айгөлдәр күбәйҙе Башҡортостанда, бөтәһе лә үҙеңде рухи атайға һанарға хаҡлы, тигән.

— Ә кәмәнең ни ҡыҫылышы бар бында? Ул да хәйер, драма тыуҙыра ала — тотона белмәгәндәрҙе батыра. Кәмәләрҙең енесе була микән? — Шурик ауыҙын йырып һаһылданы ла ҡармаҡтарын барларға, ә Данир, насосты уйынсыҡ гармун тартҡандай быштҡ-быштҡ ҡыҫып, кәмәгә тын тултырырға кереште.

Данир, ишә-ишә, ҡыялатып аръяҡҡа сыҡты, асыҡ йәшкелт кәмәне ҡалдырып, өҫкә атланы. Бер аҙҙан аръяҡта утрау осондағы ҡырсындан салт зәңгәр спорт костюмы кейгән Данир эргәһенә беләгенә ҡыҙғылт-көрән ветровка элгән Лира яҡынлашты. Әйәк ҡағып ҡына иҫәнләштеләр ҙә осо ҡарайып янған

бүрәнә өҫтөнә ултырыштылар. Балыҡсыларҙан ҡалған усаҡ урынылыр, буш шешә-мешә, йәмшәйгән, тутыҡҡан консерва ҡалайҙары ята туҙышып. Егет тороп, шуларҙы көл өҫтөнә өйөштөрҙө лә, ҡулын сайып, ҡыҙ эргәһенә ерәлде.

– Ғәфү итеү... ваҡыт әрәм итеп... нимәгә килеп йөрөйһөңдөр?.. – Һүҙен бүлә-бүлә әйткән һайын, Лира һыу яғына ваҡ таштар бәргесләне.

– Ә ниңә килмәҫкә? Әйҙә, һыу инеп алайыҡ, – тауышынан елкенеү ғәләмәте сағылған егет өҫтөн һалып бүрәнәгә ырғытты. Лира ла ашыҡмай ғына сисенде. Бәй, теге саҡ Ҡашҡаҙанда сәсен һыуламайса арлы-бирле йөҙгән купальнигын өйөнән үк кейеп алған. Аҡмас тәненә һылашҡан күк купальник ҡалай килешә!

– Тауыҡ тип уйлайһыңмы әллә мине? – Ҡыҙ көләкәс һөйләнде. – Врачтар беҙҙең братты һыу инеүҙән тыймай! Даже дауа, тиҙәр, самаһын белһәң...

– Тауыҡ, тауыҡ... Ә мин йөҙә белмәгән тағы бер йән эйәһен беләм.

– Әйт әле, йә?

– Күрһәтәм! Үҙең әйт исемен, әгәр таныта алһам.

Данир япраҡтары һулыған оҙонса тал сыбығын ҡырсынға ҡаҙаны ла тубыҡланды. Шунан, ике усына таянып, муйынын оҙонайтып, башын өҫкә һондо, ауыҙҙарын кәүшәйтеп, телен уңға-һулға сығара-сығара мырх-мырх килде, йәнәһе, япраҡ өҙөп көйшәнә мәхлүк. – Бә-ә! Бә-ә!

– Маймыл! – Лира ҡурсаҡ театрында әкиәт ҡараған кескәй тамашасылай шатланған булды.

– Һин үҙең... Ә мин – жираф!

Инде ҡыҙ ауыҙын томалай-томалай рәхәтләнеп көлдө.

– Циркта уйнарға ине һиңә!

– Булдырабыҙ уны! – Данир ҡапыл ағымға ырғылды һәм, осоусы саңғысылай талпынып тәрәнгә сумды – шарлама артыҡ шаптырларға ла өлгөрмәне. Ә Лира әкрен генә биле күмелгәнсе ағынға атланы һәм, бер генә сумып, тиҙ-тиҙ сайынғас, танһығы ҡанмағандай, яй ғына ярға аҙымланы. Данир иһә йөҙөү-сумыу буйынса бар таһылын күрһәткәндән һуң ғына баҫты ҡырсынға.

– Жираф йөҙә белмәй, тиһең инде... – тип ҡаршыланы ҡыҙ егетен.

– Белмәй, сөнки гелән ҡоро ерҙә, ағас япраҡтары менән генә туклана.

– Ә С-с... жирафиня йөҙә беләме? – Лираның «Светлана» тип кәзекләшергә иҫәбе бар ине, мәгәр тыйылып, «жирафиня» тип ҡотолдо. Данир быны ишетмәгәндер, сөнки һыуын ағыҙыр өсөн алмаш-тилмәш ҡолаҡтарын баҫып, һыңар аяғында һикерәндәй ине.

Тәндәре бер аҙ кибенгәс, егет ҡапыл, ниҙер иҫенә төшкән-

дәй: «Мин хәҙер, бер ҡайҙа ла китмә!» – тип кейемдәрен эләктерҙе лә кәмә яғына йүгерҙе. Иҫәүән, бүләген оноткан... Арьяҡҡа сыҡҡас, кәмә бауын Шурикка тотторҙо ла, машина тирәһендә аҙ ғына булашҡас, күҙлек кейгән килеш өҫкәрәк, бая кәмә төшөргән ярлауға йүгерҙе һәм үҙен һынамсыл да, шөрләберәк тә көтәүләгән Лира тапкырынараҡ ҡолас ташлап йөҙөп сыкты.

– Лира, һиңә – Мәскәү бүләге. – Егет күҙлекте сос ҡына ҡыҙға кейҙерҙе, тегеһе янтайырға ла өлгөрмәне. – О, килешә!

– Рәхмәт инде, килешкәс...

– Үҙеңә рәхмәт! – Бүләген алғанға рәхмәтлеме? Быны аңлата алмаҫ ине егет.

– Миңә ҡайтырға ваҡыт. Пока, Данир!

– Оҙатып барайыммы?

– Ни в коем случае! – Яуап ҡәтғи, етмәһә, ят лөғәттә яңғыраны. – Полуголых деревенские не любят!

– Момент кейенеп киләм... – Данир һыу арьяғына баҡты, дуҫы елле генә балыҡты ялтыратып, муйынына аҫыулы киндер моксайына һалып тора ине. – Вәт Фараон! Суплай генә!

– Фараон тиһеңме? – Ҡыҙ йөҙөнә йылмайыу сығарҙы.

– Үҙе әйтә: балыҡты ҡармаҡ менән тотоу – фирғәүендәр шөғөлө, ә һөҙөп тотоу – ҡолдар эше, ти. Һәр хәлдә, борон шулай иҫәпләнгән.

Лира китте, Данир йәйпәк ташты «кәләш һанарға» кәйелтте. Алҡын шарламала таш та йүнләп елгәрелмәй икән.

* * *

Яңы лавкалары түбәһенә ҡалай йәйеп йөрөгән Фасил ҡыраздан ҡайтып килгән Лираны шәйләп аңшайыбыраҡ ҡалғайны, өҫтәге әшнәһе Рәшит тоҡтомалға кәзекләргә кереште.

– Чуртыма аҡшаяһың, ә? Һөйгән йәрең күренәме?

– Юҡ та...

– Ай-һай, малай, арьяҡта уфимскийҙар йөрөп ята, тигәйне атайың. Лираға килгәндәрҙер, анау саҡта берене Тимурға ҡармаҡ ҡалдырған даһа.

– Белмәйем. Кәрәктәре бер тин. Ярай, төшәйем әле, ял итеп алайыҡ.

Төштө. Әшнәһе, осаһын тупһаға терәп, тәмәкеһен ҡабыҙҙы ла түшен ыуып йүтәлләне.

– Әллә, мәйтәм, сығып, биргеслэп киләйекме?

– Ҡуйсәле, бер ғәйепһеҙ...

– Дә-ә, закун ҡаты. Юҡтан ғына эләгерһең. Буштан бушка таскать итеүҙәренә һаман йән көйә.

Нигеҙле ине закондан ҡурҡыуҙары. Яҙғы ташҡын мәлендәрәк Бураш менән Сасын араһындағы электр линияһынан ярты, йәнә йәйләүгәсә линиянан бер сакрымдай алюминий сымды ҡырҡып алып киткәйнеләр. Томанлы төндә. Нисек, ток һуғыр тип тормай, йөрәктәре еткәндер. Телефон да өҙөлгәйне. Электрҙы, халыҡтан акса йыйып, тоташтырҙылар, телефонға әллә ҡулдары етмәгән, әллә теләмәнеләр. Үҙҙәренең участковыйы менән килгән следователь, эй, бәйләнде генә Фасил менән Рәшиткә. Һеҙ өҙөп алғанһығыҙ, давай күрһәтегеҙ – и все! Шикләнергә хаҡы ла бар ине следователдең, бар ине. Ауылдан эрерәк тимер-томорҙо, хатта серек мунсалағы дәү суйын ҡаҙанды «Беларусь» арбаһында кемдәр шылдырған? Шулар, безработныйҙар... Тимәк, алюминий ҙа ошо икәүҙең генә эше. Протокол тултыра башланы хатта. Әлдә бер малай Күлтөбәк яғында тәүҙә мотор тырылдағанын ишеткән, аҙаҡ ят әҙәмдәрҙе күреп ҡалған. Малай атаһына, атайы следователгә әйткәс, китте был күл, Иҙел буйын байкарға, биш-алты мужик эйәртеп. Ҡаранылар, төшөндөләр: бурҙар сым төргәктәрен моторкаға тейәп апкаскан. Сөнки Бурашта хәҙер берәү ҙә моторлы кәмә менән йөрөмәй. Сасындан да аҫтараҡ яткан ауылдыҡы булып сыкты уғрылар. Аҙаҡ көпә-көндөҙ ташландыҡ ферманың сымын тағатып йөрөгәндә тотолғандар. Йәп-йәш, әрмегә бараһы егеттәр, ти.

Тәмәкеһен һүндерһә лә, Рәшит өфөләргә уйынлы-ысынлы ҡәһәтләнеүен дауам итте.

– Кәмәләрен йә тәгәрмәстәрен тишкеләү зыян итмәç, чуртым. Үҙебеҙ шөрләһәк, берәй боевик яллайыҡ. Ҡайҙа китмәгән ике-өс ҡап сигәрит йә баллон «Шихан».

– Быныһы мөмкин, – тигәс, күкрәге тулғансы алды һулышын Фасил. – Кемде? Түлке Тимурҙы түгел, тыңламаç та.

– Давай Зәриәне яллайбыҙ. Берәй яртыға! Булдыра икән – өсәүләп эсәрбеҙ.

– Ахмаҡ! Лутсы үҙең бар.

– Барам, бынау елле отвертканы үткерләйем дә... – Әшнәһе, ҡыçһын өсөн, Фасилға ҡулын һондо. – Литр! Ладны?

Фасил саҡ-саҡ ҡына башын һелкте. Ысынлап та, уранмаһын әле йәшел машина был тирәлә. Быйыл икенсегә килде, ти бит атайы. Фазылдың ҡырҙан килгән машиналарҙы күҙләп-хәтерләп тороуын әйт. Бәлки, һыуҙағы Хоҙай балығын ҡыҙғаналыр ҙа, кем белә.

– Ладны... Әҙерәк ҡыбырлайыҡ та, кискәрәк... Тик мин йөрөмәм, йәме?

– Йәме, йәме... Ғүмер буйы ҡуян булдың, чуртым.

Әшнәләр бөгәсә ана шулай эштәрен иртәрәк теүәлләне.

Ашап-эсеп алғас та, аръяҡҡа сығып инәбеҙ, унда һыу йылыраҡ тигән һылтау менән кәмәгә төштөләр.

* * *

Фазыл яр башына яҡынлап, ҡәнәғәт кенә баҫып ҡалды. Берәйһе килһә-китһә, йәтеш, йәштәр йөрөһөн әйҙә ишкәктә, батырға ла ял кәрәк, тип уйланы. Дүшәмбелә почтальон сыға торған биргә, уныһы олораҡ ҡатын, эскәнде яратмай. Ҡатынына, Дипутатҡа, Тимурға, йәнә өс-дүрт ҡарт-ҡорога пенсия, пособие килтерер. Ҡайһы берҙә Дипутат ише яңғыҙ әбейҙәрҙең донъяһын ҡарашырға тип, унан бигерәк юҡ ҡына эш хаҡына арлы-бирле аҙыҡ-түлек йөкмәп, Зәриәләрҙең тыҡрығынан иренсәк ҡатын килгеләй торған. Социаль ярҙам тип аталған әкәмәт уйлап тапҡандар ҙаһа. Туйып һикереүҙән түгел, әлбиттә.

Донъя бит, үлем-китем, туй-төшөм дә булғылай. Эйе, эйе, аръяҡтан кемдер, мине атайым йә әсәйем эргәһенә ерләрһегеҙ, тип васыят әйттеме, кәмәгә һалып биргә сығарған көндәр була. Ул саҡта Фазыл ике кәмәне морон-ҡойроҡтарынан ярышлап сырмай ҙа, мәйетле сиңде шулар өҫтөнә һалып, тағы бәйләйҙәр. Бирге яҡта инде йә арбала, йә санала, йә «Беларусь» арбаһында зыяратка илтәләр. Ә зыяраты боронғо, киң генә Бураштың. Иҫкесә яҙыулы таштар ҙа байтаҡ, ҡарағайлы, шыршылы ҡәберҙәр ҙә етерлек. Эсендә үлән күпереп үҫә, уларын Фазыл ипләп кенә сабып, ташып ала. Аҡһаҡалдар һукранмай. Берҙән, үҙе әйтмешләй, үлән артыҡ аҙып үҫмәй, икенсенән, мулла юҡ булмаһа ла, кем һыҙып бирә ҡәбер урындарын ҡәрҙәштәренә? Әлбиттә, Фазыл. Унан олораҡ ир-ат аҙ хәҙер Бурашта. Дачниктарҙың пропискаһы башҡа. Быға ҡарамаҫтан, бәғзеләре ерҙән пай бүлдерергә маташа. Шиш уларға! Шулай инде, шулай, властар – аръяҡта, кооператив идараһы – Сасында. Кәмәһеҙ – ни шағу. Быны лавкаһын ғына әтмәләп бөтөрһөн әле, ҡупшынан, еллерәктән яп-яңы кәмә оҫталаясаҡ. Катер түгел әле, ағас кәмә генә яһарға таһылы етер. Юғиһә, әлеге лә баяғы туй-төшөм, үлем-китем мәлдәрендә эш күбәйә торған. Юҡ-юҡта берәйһенең һатлыҡ аҙыҡ-түлеген, бәэлдәтеп кәзә-мәзәһен, өзөлдәтеп тоҡомло быҙауын, һирәк-мирәк яңы тыуған сабыйҙарҙы ташырға тура килгеләй. Оло һыуҙа кәмәнең ҙурырағы, моторлыһы яҡшы инде. Һине кем тыя, әйҙә, ике сыҡҡансы – бер сыҡ, сонки күберәк күтәрә, артыҡ бәүелсәкләнмәй ҙә. Дәүерәк кәрәк кәмә, моторлы кәмә кәрәк! Күмәкләп йылым менән балыҡ һөҙөргә лә йәтеш булыр. Быға са рыбнадзорҙан өркөп барманы бураштар, артабан да өркмәҫ.

Йәштәрмен Бурашта, инде ҡайҙа бара беләһең, алтмышты уҙһаң, тип тә ғәмләнә Фазыл ваҡыт-ваҡыт. Дә-ә, бар ине ауыл-

дың гөрләп торған сактары, хәҙер, ана, көскә тын ала. Уйлап та куя: лавкаһы ҙурая, зыяраттан өҫтәрәк ун гектар ергә хужа булһа, шунда бал кустәре, кош-корт тәрбиәләһә, йәм өсөн, һуғым өсөн ике-өс ат тотһа, мандып та китер, шәт. Хәҙер ояты юк, эшһеҙ интеккән егет-еләнде батрак итер. Борон дәү атайы биш кусты, йәғни батрак тотканды, таш мөгәзәй һалғанды, бәй, ул кемдән кәм. Тәк... тағы киҫәтер Фасилын. «Хеуәтит, аҙауланма: йә өйләнәһең, йә олағаһың берәй якка!» Әрменән кайтты, холко арыу — ни кәрәк тағы? Ғибрәт, ана, урге остан мыйығы беленгән малай йә укыуын бөтмәй, йә эшкә кермәй, ярты йыл — бында, ярты йылын Уфаларҙа йөрөп, ғүмерен уҙҙыра, ғәрип атаһы эпиргән ыштанды туҙҙыра. Армиянан касып йөрөүе бит инде! Тәмәкенең затлыларын төтәтә, сәпләк. Ул йәһәттән Фасилы маладис — сәпсим дә тартмай, оңкотланып эсеп тә бармай.

«Ярай, егеттәр комлокка терәне кәмәләрен, үҙем һарай артына йәшереп куйған шешәнән бер-ике йотом һемерәйем дә, иртәгәлеккә мунсаға шлангынан һыу ағыҙып, тултыра ягырлык утын ташып куяйым» тип, Фазыл кире ихатаһына ыңғайланы ла капыл туктап калды: аръякта йәшкелт еңел машина күҙенә салынды. Салынмаҫ та ине, еңелсә генә бипелдәне. Бәрәс, Фасил менән Рәшите город егеттәре менән гәпләшеп тора. Торһондар. Бер күрһәң — таныш, ике осратһаң — белеш.

Юк, Фазыл егеттәрҙең үҙ-ара һөйләшеүенә бигүк әһәмиәт бирмәне, машина бипелдәүе уйҙарға тарытты. Шулай, элекке йәй, кеше йөрөмәгән ел-дауыллы көндө, аръяктан шылтыраттылар. Бакһаң, Бураштан йәш сағында аръякка күскән бер пенсионер, әбейе үлгән дә, кәңәш һорамаксы икән Фазылдан. Сакырғас ни, барҙы. Йә, кемде димләр инең? Упсы Фәнидәне кыярлатып маташа, мөртәт, егерме йәшкә өлкәнмен, тимәй... Сыкты ла китте Фазыл. Сыкты ла китте тип, тәүҙә аракыһын мул ғына һемерҙе, имеш. Лакап та бар бит әле: йәштәр «бирер микән» тиһә, карттар «торор микән» ти... Уф, әллә Фазыл кыҙғанып маташамы Барый мәрхүмдең хәләл ефетен?!

Кәмәнең хәжәте айырыуса ташкында беленә. Ниҙәр генә акмай Иҙелдән! Ул бүрәнәһе, ул тактаһы, хатта теп-теүәл туалеты ла. Йыбанма, тот багорлап — һинеке. Эйе, Фазыл хәҙер ир-ат араһында акһакал иҫәбендә йөрөй. Кем ир йыныһынан мәйет йыуғанда йолаларҙың рәтен-сиратын белә? Фазыл. Мал ауырыуҙарын да апарук дауалай ала. Фасилы, әйҙә, утыҙ башка ғына башмак фермаһы асып ебәрһен. Договор төҙөр ҙә калдык-боҫток ферма аламаһын ипкә-һапка килтерер. Ә үлән муйындан якын-тирәлә, зубр һымак, ашамһак мал тиҙ үк көрәйергә тора. Кармауай үләнде лә күпләп үҫтерә сасындар. Харап килештерә кооператив! Элек йөҙләп колхозсы ине Сасында, хәҙер

илләләп кенә эшләй, ҡалған илләләбе договор буйынса тир түгә, тиме. Бер һынаттыңмы, ҡабат эш бирмәүҙәре лә ихтимал. Булыр. Көслөнөкө замана... Көслөнөкөнән бигерәк, аҡсалыныҡы замана. Ана шул кооператив аҡсаға ла мулыға, ти. Итте лә, һөттө лә байтаҡ һаталар, быныһы раҫ. Ике йөҙ һәүкәштән йылына дүртәр мең кило һөт һауһындар әле!

Игенде күп сәсмәйҙәр, уның ҡарауы, гектар төшөмө арыу. Эшләгәндәргә, хеҙмәт хаҡынан тыш, премия ла биргеләйҙәр. Әлек, бер уйлаһаң, колхоз аҙна һайын йыйылыш та кәңәшмә уҙғарыр, көн дә аҡыл һатырҙар йә ялыу тикшерерҙәр ине. Колхоз барыбер мандыманы, крәҫтиәнгә эш хаҡын йүнләп түләй алманы. Килмешәк колхоз рәйесенән, ана, бер мәрәкә ҡалды ауылда. Халыҡ «ҡатын-ҡыҙ» тип әйтеүгә күнеккән, ә теге ҡап ҡорһаҡ көлмәй-нитмәй генә «ҡыҙ-хатындар» тиһә, халыҡ ни рәхәтләнеп көлөшөп ала торғайны. Сабаҡы, колхозды бөлдөрөп, үҙе байып ҡасты... Фәсхетдинов тигән түймаҫ тамаҡ.

Фазыл өйөнә табан ҡыҙыуыраҡ атланы.

## *Өсөнсө киҫәк*

*«Кеше аҡылы — кешәндәге тышау,*
*үҙ аҡылың — үҙәктәге бауыр».*

**Миләүшә һаҡлаған дәфтәрҙән**

### 1

Шурик сәғәт ярымда байтаҡ балыҡ—моҡсайын һәлмәкләтеп сабаҡ, ажау тотоп ташлаған, үҙе лә аптырап тора: «Әйттем бит, аҡ ҡортҡа бөтә балыҡ та ҡаба, өҫтәүенә, атмосфера баҫымы ҡулай — 456 тирәһе...»

— Ну ты даешь, Фараон! — Данир һоҡланғанға, Шуриктың былай ҙа киңерәк ауыҙы ҡолағына етә яҙҙы.

— Идеаль атмосфера бөгөн! — Александр кәтүген сырлатып, ҡармағын йыя, — бына хәҙер ҡапмай, елгә һыу сирыла. Алдына түңкәйеп инәлһәң дә, ҡапмаһа ҡапмай ул балыҡ тигәнең.

Егеттәр машина эсенән ағылған күңелле көйҙәр аҫтында тамаҡ ялғап алдылар ҙа, кәйефләнеп, ҡайтыуға йыйындылар. Арьяҡтан бирьяҡҡа ҡабаланмай ғына йөҙөп килгән кәмә күренде.

— Бураш шпанаһы! — тине Данир ғәмһеҙ генә. — Эш таба алмай ҡаңғыралар.

— Әллә шпана, әллә юҡ. — Шурик быны «белмәгән-күрмәгән кешеләрҙе юҡҡа битәрләргә ярамай» тигәнерәк ҡиәфәттә әйтте. — Әйҙә, таныштарыңа балыҡ биреп ебәрәйек. Үткәндә ҡаймаҡ менән һыйланылар ҙа үҙебеҙҙе.

Данир хуплап та өлгөрмәне, Шурик һәләт кенә балыктарын – бәғзеләре һаман тырпырап, айғолактарын кыбырлатып яткан була – өскә бүлеп тә ташланы. «Берене – миңә, икенсе өйөм – һиңә, әҙерәге, ләкин эрерәктәре – Лирочкаға!»

Тиҙҙән машина өҫтәге комлокка якынлашты һәм, керегеүҙән төҫөн айырмаҫлык лампаслы салбар кейгән ике егет эргәһенә етәрәк, шып туктаны.

– Әс-сәләм, егеттәр!

– Сәләм...

– Тимур тигән малайҙы беләһегеҙме? Кире сығаһығыҙҙыр бит?

– Белә...м ... беҙ... – тине Фасил кыйыуһыҙ ғына, – сығабыҙ...

Данир Фасилға ярты шыптыр моксай-айғолактары баҙрап күренгән балык тотторҙо.

– Улайһа, ошо балыкты Тимурға бирерһегеҙ әле, йәме.

– Вот вам за наше беспокойство, – Александр кабина тәҙрәһенән, тәмәкесе икәнен белгән кеүек, Рәшиткә затлы ғына башланмаған сигәрит кабын һондо. – Спасибо и до свидания!

Өфөләр кайтаһы юлдарына елдерҙе, бураштар бер аҙ албырғап торҙо. Берәүһе – үҙебеҙҙең башкорт, икенсеһе – йомарт урыҫ... Нисек шуларға токтомалға бәйләнәһең, ти? Нисек кәмәләрен тишмәк кәрәк?

...Өфө машинаһы ком-кырсын кыштырҙатып – выжт, ә Фасил менән әшнәһе Рәшит тор ҙа кал яр башында аңшайып. Егеттәрҙең танауы төштө, шулай ҙа яман уй-ниәттәренең барып сыкмауына икеһе лә эстән генә кәнәғәт һымак.

– Чуртым, Зәриәгә һуғылып кайтайык, – тине Рәшит уйынлы-ысынлы. – Һалып бирер, мужыт, әҙерәк.

Фасил, шыптырҙағы балыкты кайҙа куяйым тигәндәй эптәләнеп, барырға риза икәнлеген белдерҙе. Кешенең аманатына хыянат юк, индереп бирер өфөләрҙең балығын Тимурға. Тимурға тиһеңме, Лираға инде. Һы-ы...

– Кәмә төбөнә һал да өҫтөнә үлән йолкоп йәй. Эт ашар, йә ни.

– Эт балык ашамай ҙа инде, Әбдерәш. – Кай сак Рәшит «Әбдерәш» тигәнде лә кабул итә.

– Ашамаҫ! Хәҙерге эттәр бит ул. Уларҙың да «яңылары», бомждары бар. Әллә нәмәңде йыпырып темеҫкенеп йөрөгәндәре.

Шулай итте Фасил, хатта өҫтөн ишкәктәр менән баҫтырыкланы.

Зәриә егеттәрҙе әйҙүкләп каршыламаны. Баксаһында кишер утап йөрөгән еренән йыш кағылған рәшәткә аша ғына йылмаяк һөйләште лә, Фасил яғына һынамсыл күҙ аткылап, кыҙмасарак Рәшиткә баш сайканы: әсе-мәсеһе юк, йәнәһе...

– Һуңғы осор бер ҙә булашканым юк. Йөрөмәгеҙ әле эт өрҙөрөп. Былай ҙа ләститкә батырырға торалар. Ана, Фасил инеп кенә сыккайны...

– Әйҙә, – Фасил Рәшитте бала урынына кулынан маткып алды. – Арыуҙан һыра һемертәм, «Иҙел» ларегынан алып.

– Күптән шулай тиһәң! Әтеү тор мынауҙа, чуртым, Зәриүшкәгә кәмһенеп. Зинһар, арыуҙан тәмәке лә алырһың.

– Кырын сәптерергә ярата ла һуң минең класташ! – тип калды баксаһында Зәриә. – Детсадта ла үсексән инеңме, Әбдерәш?

Тонйорап кояш батканда ғына үҙҙәренең ярына калкынды егеттәр. Кем илтергә тейеш һуң балыкты Кәримовтарға? «Кана, үҙем», – тип Рәшит урләскә талпынды. Уның өйө – типһәндән һулға, «Биргадир (Надир ҙа тиҙәр) урамы»нда, юл ыңғай «куян күстәнәс»ен индереп сығыуы кыйындыр шул. Рәшит һуйҙайып барышлай ук тимер капка алдарында уйнап йөрөгән Тимурҙы кыскырып, кул болғап сакырҙы.

Йүгереп килде малай уның эргәһенә. Егет уға ниҙер аңлатты, Фасил быны ишеткән кешеләй куҙәтеп торҙо һәм үҙен нисектер сәйер, хыянатсы кеүегерәк хис итте.

Фасил ат башындай кәмә йоҙағын бикләп, урта бармак ҙурлығындағы аскысын такта аласыктың ишек башында һерәйгән сөйөнә элде. Тегеләй-былай уранғылап, салбар кеҫәһендә һап төбө менән яткан үткер шөрөп борғосто яңы бураның стенаһына билдәһеҙ асыу менән дөңгөлдәткәнсе казаны, хатта тауышын ишетепме, веранда тәҙрәһенән атаһының алас-йолас ағарған кабарынкы сәсе – айык башы күренде. Һуңғы арала ауырыштырғанғамы, хәмер һемереүен кәметә бара картлас, хәйерлегә булһын. Бая ла ана, киске тамак ялғағанда, Рәшиткә генә һалып бирҙе, ә үҙе йотоп та караманы.

– Иртәгә пайщиктар йыйылышы була. Көндөҙ. Ишеттеңме?

– Әлләсе... – Кыйынһынып яуапланы Фасил.

– Белмәһәң – бел, өйҙә тор. Бая силсәүиттән килеп, әйтеп киттеләр.

* * *

Сход мәктәптең физкультура майҙансығында уҙғарылды. Кеше байтак йыйылғайны, йөҙләп булыр; карт-коро, бала-саға ла күренештерә. Йәштәр ҙә бар, күбеһе кыҙык өсөн генә килгән, сөнки күптән ауыл йыйыны булғаны юк.

Урындағы хакимиәт башлығы Айгөл Карамовна пайсыларға ер элекке Бураш бригадаһы биләмәләренән буленәсәген әйтте. Күп тә түгел – утыҙ биш гектар самаһы. Уныһы ла – сокорсакырлы, сит-мите шыйык урманлы зыяраттан өҫтәге алаңғырт.

– Ә Күлтөбәк кемгә? – түҙмәне, алғарак сыға һораны Дипутат Дилбәр.

– Күл буйы – резерв, киләсәктә унда Ҡарттар йорто һалырға йә турбаза төҙөргә тәкдимдәр бар. – Кооператив рәйесе Николай Тимерәйевич әлегәсә майҙансыктағы берҙән-бер өҫтәл артында һауалы ғына ултырған урта йәштәрҙәге һонтор ир район башлығы урынбаҫары Айрат Саматович яғына ҡараны, тегеһе, оҙон муйынын дуғаландырып, ике рәт эйәген эйҙе: хак һүҙ, йәнәһе, унда киләсәктә пансионат йә турбаза ҡалкыуы ихтимал.

– Ҡакшатаһығыҙ икән донъяны, – тине Фазыл мыҫкыллы ғына. – Ҡарттар йорто, һы-ы. Әле бала-сағаны йүнләп ҡарай алмайбыҙ: оло мәктәп ябылды, дәүерәк балалар Сасынға тәпәй йөрөп укый башларға тора. Детсад та юк. Исмаһам, ферма һымағырак берәй нәмә асмайһығыҙмы?

– Кредит алығыҙ ҙа – пожалыста! – тине «Сасын» кооперативы рәйесе башкортсалап. – Иртәгәнән договор төҙөргә можно. Башмактар навалом.

– Кредит алһак, айырым, сасындарға буйһонмай торған ферма асыр инек тә ул. Мәҫәлән, һарык үрсетергә мөмкин. – Дипутат Дилбәр быны бик етди, белдекле әйтте. – Ә ҡасан телефонды рәтләйһегеҙ? Оят бит, ошонда үлеп ят – бер ҡайҙа шылтыратып булмай.

Ауыл хакимиәтенән килгән ер белгесе – землеустроитель ҡатынҡай:

– Телефонды... беләбеҙ, ошо арала монтерҙар ялғар, – тип тынысландырғас, халык пайсылар теҙмәһен ҡабатлап укыуҙы талап итте. Район вәкиленең ишараһы буйынса әлеге ҡатын, исемлекте укыуҙан алда, бураштарҙан егерме ете ғариза теркәлеүен әйтте. Шунан исемлекте барлау башланды.

– Абдулхакова Дилбәр Исхаковна, 1955–1995 йылдарҙа...

«Оһо, ҡырк йыл икән стажы». «Ордины ла бар уның!» «Ун йыллап дипутат булып йөрөнө Хрущев заманында». «Эшләне инде, бахыр, иргә лә бармай... Зерә тырыш булды». «Кыйынын да күрҙе, рәхәтен дә». «Ниндәй рәхәт күрҙе?» «Премия, бүләктәр... Әйбер килһә, тәүҙә ударниктарға бирелә торғайны».

Ер белгесе бер аҙ лабыр-лоборға юл ҡуйҙы ла нөктә ҡуйырға теләне:

– Йә, ҡаламы исемлектә?

– Ҡала, кәнишне, ҡала...

– Улайһа, ары киттек. Баҙаркаева Баныу...

– Илһамов Хатип... 1926 йылғы.

«Кавалериска ни, ике аршин ер етә...» – тип көләмһерәне Зәриә, фекерен тышка сығармауға һөйөнөп. Исемлек, дөйөм алғанда, һәүетемсә раҫлана барҙы. Тик Фәсхетдинов тигән фа-

милияны ишетеүгә күптәр, бигерәк тә өлкән йәштәгеләр, геүелдәшеп алды.

– Уныһы кем тағы?

– Йөрөнө ләһә «Родина»быҙҙы банкротка ҡалдырып...

– Теге, элекке бесталкауай берсидәтелме? «Ҡыҙ-ҡатындар» тип доклад һөйләгән...

– Кәнде үҙе. Өс пай һораған, етмәһә. Бухгалтер ҡатынына, әҙ-мәҙ учетчик булып йөрөгән малайына...

– Һыҙып ташлағыҙ! – Таяғын һелккеләп сәбәләнде тыумыштан аҡһаҡ бер ҡартлас. Йөрәктәгеһен әйтте, инәлеп тә, утын йә бесән-маҙар алдырта алмағанға хәтере ҡалғандыр берәй саҡ Фәсхетдинов тигән бәндәгә. – Ни өсөн? Знамы, ул беҙҙең территорияла йәшәмәй. Мин уны маҡтарға ла, яманларға ла йыйынмайым. Йәшәмәй – вәссәләм! Законды боҙмайыҡ әле, иптәштәр. Уҡытыусыларҙы грамм да ҡараманы, ана, мәктәпте лә, клубты ла яптырҙы, әй, яптырышты.

Мәктәптә ремонт барғанға халыҡ физкультура майҙансығына йыйылғайны. Фәсхетдиновты һыҙып ташлау өсөн барсаһы тауыш бирҙе, мәсьәләнең аңын-төңөн белмәһә лә, үҙе лә һиҙмәҫтән, сходка юлайкан ғына юлыккан Зәриә лә ҡул күтәрҙе.

Тәкдим хупланды, райүҙәктән ер бүлеге вәкиле генә йәпһеҙләнде, райглава замы Сәмерханов та йәмһеҙ генә сырылғандай итте. Зәриәнең ҡул күтәреүен шәйләп ҡалған баяғы ғәрип – үҙенең тәкдиме ыңғай үткәненә сәме-ҡыуанысы тулышкан баяғы пенсионер ҡабат һүҙ һорап алды.

– Иптәштәр, исемлектә Янбаева Зәриәнең юҡлығы аңлашылмай. Ниңә, һеңлекәш, ғариза бирмәнеңме ни? Ике көнөңдөң бере бында үтә...

Аптырап, ыҡ-мыҡ итте тәүҙә Зәриә. Шулай ҙа:

– Бирмәнем шул. Алдан ныҡлап хәбәр ҙә таралманы, – тине лә, артығын ыскындырып ҡуймайым тигәндәй, ҡуш ҡуллап ауыҙын томаланы. Элекке депутатка – апайына етә ҡалды был хәбәр.

– Аръякта йәшәһә лә, колхоз өсөн йәшләй генә Зәриә лә күп тир түкте. Ул һыйыр һауҙы, ул быҙау ҡараны... Кәнсерттәрҙә лә ҡатнашты. Бер пай тейеш уға. Пропискаһы Бураштa тип, аръякта ла ер бирмәҫтәр әле. Иш-шеү, унда ер аҙ буленә, тигән хәбәр йөрөй.

– Быныһы дөрөҫ, – тип йөпләне Дилбәрҙе бөҙрәбаш Айгөл Карамовна. – Исемлеккә задним числом өҫтәһәк, үҙегеҙ әйтмешләй, законды боҙоу буласаҡ.

Йәштәр көндәлек кейемдәрендә йөрөп ята. Зәриә иһә бөгә-

сә Дилбәр апаһының моданан сыккан жакет һымағырак нәмәһен кейеп алған.

Өлкәнерәк кешеләр сходка арыуҙан кейенеп килгәйне. Уҡытыусы-пенсионер Солтан Хажиморатович түшендә «Мәғариф отличнигы» знагы ялтырай. Шул саҡ Дилбәр Исхаҡовнаның шаҡтай ҡупшы асыҡ зәңгәр бәҙ костюмына беркетелгән орден-миҙалдар сылт-сылт килде.

– Индерегеҙ исемлеккә. Отказ бирһәгеҙ, Мортаза Ғөбәйҙуллин... әй, Рәхимовҡа хат яҙам, йә примйыр Байдәүләтовҡа барам. Миңә наград таҡкан кешеләр әле! – Кемдер сырылды, кемдер йәмерәйҙе, ыңҡылдап көлгәндәр ҙә табылды.

– Зе... Зәриә һеңлекәш, бәлки, үҙе теләмәйҙер бушлай ер алырға? Ниңә көсләшәбеҙ әле?

– Как теләмәй? – Йәнә тоҡанды Дипутат ҡушаматлы Дилбәр. – Ҡыҙы үҫеп килә, ире?.. – Тыйылды әбекәй, юғиһә, көллө мир алдында кейәүкәйен рисуай итмәксе ине. – Дөрөҫөн әйтә Зәриә: ниңәлер ер бүлешеү шымбаҫарланып эшләнгән кеүек.

Киләһе ҡыш пенсия юлларға әҙерләнгән укытыусы Солтан, алғараҡ шылып, үҙенең донъянан артта ҡалмағанлығын раҫларға ҡырсынды. Бурашта иң кәүҙәле Хажиморатыш, гүйә, был мәлдә көрәштә еңеп, инде әйтешкә сыҡкан ир солтаны ине.

– Айға ҡарағыҙ, йәмәғәт, тәк, тәк, – тине ул, осло эйәген тулышып килгән айға бороп. Ҡыҙыҡ, күптәр күҙҙәрен күк йөҙөндә яҙғы боҙ һымағыраҡ шәмәргән аҡһыл айға йүнәлтте. – Американдар ана шул Ай һынлы Айҙан участка алырға список төҙөй. Ғәҙел генә итеп. Ә беҙ... Һаман да: «Урыҫ байы ергә йөгөндөрһә, башҡорт байы ергә яткырҙы» тигән юҫыкта йәшәүҙе дауам итәбеҙ. Ғәрләнәм мин!

Бер килке тынлыҡ урынлашты. Ҡойма ситендә бала-сағаның шаярғаны, ҡайҙалыр һыйырҙар баҡырышканы ғына ишетелә.

– Ай-һай, көфөр һөйләйһең, Солтан, башҡорттоң урыҫка дәбрәүел ҡушылғанына дүрт йөҙ ҙә илле йыл тулыуға әҙерләнгәндә... Әйтәгүр, бәхет Айҙа түгел, Ерҙәлер.

Дипутат ауылдашын әллә ысын, әллә юрый шелтәләп алғас, үҙен «ер кадастры» типме таныштырған ят әҙәмдең ниҙер әйтеүенән һуң сход эшен дауам итте. Зәриә мәсьәләһен ҡабат ҡарарға булдылар, бының өсөн ҡатынкайға теге йәки был документтарын комиссияға теүәлерәк тапшырырға кәңәш бирелде. Бая укытыусы ыңғайына тел сарларға талпынып ҡуйһа ла, Фазыл үҙ фамилияһы яңғырарын көтәүләне. Ни хәл итһен, «я» хәрефле – Янбаев булғастын, мәктәптә лә, әрмелә лә, бүтән исемлектәрҙә лә сираты иң аҙаҡ йөрөүгә күнегеп бөткән. Бына үҙен атанылар, шунан – ҡатынын. Бик хуп. Ләкин пайсылар теҙмәһе шуның менән тамам булып сыҡты.

Йыйылыш ҡыҙған саҡта ғына Солтандың Эстәрлелә уҡып йөрөгән студент малайы Марат, мәктәптең бығаса йүнле эшкинмәгән көсәйткесен көйләп, халыҡты һиҫкәндереп: «Внимание! Раз, раз, ишетеләме?» – тине. «Ишетелә, ҡулыңдан һөйөн!»; «Мәктәптең кәмпүтерҙәрен рәтләй, тиме?»; «Рәтләү генәме, интернетҡа тоташтыра»; «Түләйҙәрме һуң?»; «Арлы-бирле...» тигәнерәк хәбәрҙәр ҡуйырҙы бер килке, йәғни Марат микрофонды Айгөл Карамовнаға тотторғансы.

– Раз, раз... Ниндәй һорауҙар бар? – Инде бөҙрәбаш ханымдың сибегерәк тауышы тотош Бурашҡа ишетелерлек булып яңғыраны.

– Йырларға итәһеңме әллә? – берәүҙәр көлөштө, берәүҙәр уфтанды.

– Алып китерҙәр... Хәлфетдин абый ише рисуай итеп...

– Штраф сәпәрҙәр, йә ни!

Зәриәнең хикмәтле репликаһында, йәғни, «алып китерҙәр...» тиеүендә ысынбарлыҡ ята ине. Элек әле, колхоз иҫәбенә, Фәсхетдиновтың танышлығына күрә концерт бригадаһы һуғылғайны Бурашҡа. Залда ултырған көйө бер йырсыларына ҡушылып, күп балалы көтөүсе ирекәй йырлай ҙа ебәрә, йырлай ҙа ебәрә, ҡороғор. Иҫерек тә түгел ине, тиҙәр. Тауыштарының моңдаш, оҡшаш булыуын әйт. Моңсол булыу менәнме ни, ысын йырсы... көтөүсе йырсыны ҡыуҙыртты тамашасылар араһынан. Сыҡмай аптыраткас, бригадир Надир үҙе тышҡа елтерәтә, кеше юҡта соланда осаһына тибә, елкәһенә тамыҙа. Эш уның менән генә бөтмәй әле. Иртәгәһенә Фәсхетдинов выговор сәпәй, Хәлфетдингә айлыҡ хеҙмәт хаҡынан яртыһын тотоп ҡалырға фарман яҙҙырта... Ана шуны хәтерләп, әле берәүҙәр көлөштө, берәүҙәр көрһөндө. «Барыбер ҙә үҙебеҙҙең йырсыларға етмәй, Өфө әртисе ары торһон» тигән булдылар ҙа бит аҙаҡ.

Микрофон аша иҫкәртеү яңғырамаҫ борон уҡ бураштар тиҙ үк тынысланды. «Аҡыртмағыҙ әле шул нәмәгеҙҙе, һаңғырау түгелбеҙ» – тигәйне нәҡ ана шул ҡушылып йырлауы арҡаһында тиктомалға хурлыҡҡа ҡалған элекке көтөүсе Хәлфетдин, Айгөл Карамовна микрофонды һалып та ҡуйҙы.

Һорауҙар булды, мәгәр уларын да, уларға яуаптарын ҡолағына элмәне Фазыл, сөнки... уны исемлектә Фасилдың юҡлығы шаңҡытҡайны. Был ни хәл? Ниндәй хата? Кем ғәйебе менән? Ғаризаны бергә ултырып яҙҙылар, көҙгө ҡырауҙа, Фасилы һалдаттан ҡайтыу менән... Атаһы йәштәр өймәгеберәк торған яҡҡа зәһәр ҡарашын ташланы. Һай, һиңмай, ыжламай ҙа үҙен тишек шыуманға ултыртҡанға. Өтәләнеп, китте Фазыл Фасил эргәһенә, әйтте шымыраҡ: «Ниңә аяғөҫтө йоҡлайһың? Һора ҡысҡырып: миңә тейеш пай ҡайҙа?» Фасилмы һуң һорар кеше.

Етмәһә, ҡыскырып... «Зәйәвленйе биргәйнем...» — тип кенә ҡотолмаҡсы ине, атаһы улына тигән асыуын тауышына төшөрҙө.

— Туҡтағыҙ әле, пашаму исемлектә Фасил Фазылович Янбаев юҡ? Ниңә, ул айырым участка һатып алһынмы? Әллә олатаһы һымаҡ батрак булырға тейешме? Бер тапҡыр бушҡа бирелә торған ерҙән һемәйтергә килдегеҙме?

— Бындағылар бөтәбеҙ ҙә батрак инде, — тигән булды Рәшит мөштөм генә. Фазылдан уға ла эләкте:

— Тик тор, сәпләк, һинән һорамайҙар бит, комиссиянан һорайым.

Комиссия ағзалары бер-береһенә ҡараштылар.

— Кооперативта почти эшләмәне, — тигән булды кооператив рәйесе Николай Тимерәйевич, аҡланғандай. — Бер аҙна сенажда йөрөнөмө быйыл?.. Договор буйынса...

— Туҡтағыҙ, туҡтағыҙ, — тип ҡыҫылды егеттең әсәһе Сара. — Һалдатка киткәнсе бер йыл колхозник ине лә Фасил. Эйеме — эйе. Колхоздан сығарығыҙ, тип китмәне әрмегә. Ул ҡайтыуға колхозды бөтөрҙөгөҙ. Уның ни ғәйебе?

Халыҡ бер аҙ геүләшеп алды: «Дөрөҫ»; «Эш бирегеҙ, эшләр...»; «Шым йөрөһә лә, зерә оҫта!»; «Берәй яҡҡа олаҡмаһа?..» Атай кеше йәнә улын битәрләне:

— Һәй, инәһеҙ тыуған башмаҡ, әйт: ғариза биргәйнем, тиң? — Был юлы Зәриә ыңғайына күбеһенсә бисә-сәсә хихылдашты.

— Бастуй, бастуй! Теге сабранйыла Фасилдың ғаризаһы бар, тинегеҙ, был юлы — «юҡ», нисек була инде был? Баланың башын ҡатырғансы, һора хакимиәт башлығынан. — Ҡарасы бумпылдаҡ Сара алғараҡ сыҡты. Фазыл иһә хәҙер уғата асыуланды, тура ҡарап, үҙенә ҡоҙаса тейеш хакимиәт башлығына ярһып ҡаҙарынды:

— Йә, ҡайҙа зәйәвленйе?

— Белмәйем, — тине Айгөл дорфа ғына, был инде ирҙең сәменә бермә-бер тейҙе.

— Һәй, ысволыш нәҫтәкәй! Әнкәйең шулай аркыры ине...

Берәүҙәр баш сайҡаны, берәүҙәр көлөштө. Һонтор ир — Айрат Саматович Сәмерханов — ике ас яңағын турһайтып, ҡаты ғына иҫкәртеү яһаны Фазылға.

— Гражданин... Прошу не оскорблять власть представителен! Өҫтәүенә, ҡатын кешене.

— Кәнде һеҙ издеваться итәһегеҙ! Торған булаһың шунда, ҡап ҡорҫаҡ. Быуайыңдың «Лесник» икәнен белмәйҙәр тиҫеңме әллә бында?

Сәмерханов тешләнеп ҡуйҙы, усын уска һуғып алды ла кеҫәһенән кәрәҙле телефон һөйрәп сығарҙы: «Алло... Бураштa...

Наряд ебәрегеҙ әле. ...Хулиган бар, бузотерҙар... Сходка ход бирмәйҙәр... Үтеп була. Ярты сәғәттәнме? Яҡшы...» Шым һөйләшһә лә, һиҙенделәр: бәй, милиция саҡыртамы кәүҙәгә буйһыу түрә? Вәт һиңә, уйындан уймаҡ сығырға тора.

Фазыл үҙ хәлен аңлай ине хәҙер, мәгәр меҫкенләнмәне: «Ярай, кейенеп, әҙер генә торормон», – тип һәлпәнерәк аҙымлап һаркыуға тартылды. Бисәһе лә ҡайтыуға ыңғайланы, шулай ҙа бер боролоп, билдәһеҙ әҙәмдәргә янау яуҙырҙы:

– Яҡын килеп, йоғоноп ҡарағыҙ! Һәнәк тотоп көтәм. Бәсәкбәсәк, Сталин заманылыр шул.

– Ҡурҡма, ауылыбыҙ менән яҡларбыҙ Фазылыңды, – тимәһенме Дипутат.

– Аптырайһы түгел, тә-әк, һәнәк яуы булған ул беҙҙә, – тип һөйләнде элекке уҡытыусы уйсан ғына. Был арала комиссия ағзалары үҙ-ара шыш-быш килде. «Кәрәкмәҫ ине наряд... Сволыч тиһә лә, миңә ошонда йәшәргә бит!» Хакимиәт башлығының тауышы йәлләткесерәк сыға, инде һыуынған райүҙәк вәкиле әйтеп һалды: «Наряд ни, килер ҙә ҡайтыр. Хотя бы штраф сәпәрҙәр». Кемдер асығыраҡ тәкдим индерҙе: «Иптәштәр суды тикшерһен».

– Бик дөрөҫ. – Быны йөпләп, хакимиәт башлығы маһайыбыраҡ өҫтәп ҡуйҙы: – Аҡһаҡалдар ҡоро ла эшләй беҙҙә.

Ер белгесе шунан ғына, бер ни булмағандай, көр тауышы менән халыҡҡа боролдо:

– Иптәштәр, йыйылыш дауам итә. Фасил Янбаевтың ғаризаһын ауыл хакимиәте, бер ыңғай Лосман... э-э Фазыл Янбаевтың тәртибен йә иптәштәр суды, йә аҡһаҡалдар ҡоро ҡараясаҡ. Иртәгә үк...

Элекке тарих уҡытыусыһы Солтан да фекерҙе хуплауын белдерҙе: «Бына мәслихәт!» Бер ыңғай ул үҙенең былтыр аҡһаҡалдар ҡорона һайланыуын да иҫкә төшөрҙө. Ярай, иртәгә аръяҡҡа сығып әйләнер, «бузотер» Фазыл әшнәһенә эйәреп. Йомоштары ла бар Хажиморатыштың магазин, аптека тирәһендә.

– Йыйылыш дауам итә, – тип ҡабатланы бөҙрәбаш хакимиәт башлығы. – Хәҙер ауылдағы санитария мәсьәләһен тикшереп алайыҡ.

– Ауыл ни тап-таҙа инде. Тимер-томор ҡалманы... – тип һөйләнде Солтандың ҡатыны Сәйҙә.

– Донъяны бысратыусылар һаман осрай, – Дипутат эшлеклерәк һүҙен ҡыҫтырҙы. – Бәғзе дачниктар юк-бар түгә ҡойма буйына – штраф һалығыҙ. Ана, Сания әбей тирәһен бигерәк сүп баҫҡан. Ней үҙе йүнләп йөрөй алмай, бисара.

Зыярат яғындағы типһәндә ауыш текмәләргә, ҡарт муйылдарға төрөнөп ултырған иҫке, ҡарлуғас ояһылай бәләкәс күренгән йорт яғына ҡарап уфтаныусылар булды.

— Ҡуй инде, кисә һөт индереп сыҡтым әле.

— Бер бөртөк кенә ир бала үҫтерҙе ыҙалап, уныһы бер килеп ярҙам итеп китмәй. Апаруҡ начальник, ти әле, шуның ҡатыны Ишембайҙа.

— Судҡа бирергә кәрәк! Тыуған йәшлек әсәһен ҡарамаған әшәке...

Йыйылыш бөтөүгәрәк түрәләр машинаһы эргәһенә артыҡ выжламай ғына «ДПС» машинаһы килеп туҡтаны, кабинаһынан, ҡыҫҡа төйҙәле автоматын рәтләй-рәтләй, төпөш сержант килеп төштө. Тик эргәһенә саҡырып ниҙер әйткән Сәмерханов ҡушыуы буйынсамы, кәрлә кире эскә инеп ултыра һалды һәм тиҙҙән түрәләр тейәлгән машиналарға юл күрһәткән ҡиәфәттә иң алдан ҡуҙғалды. Бер күрешеүең — бер ғүмер тигән һымаҡ, бураштар ғына, өсәр-дүртәре өймәкләшеп, яй ғына таралышты. Ҡайҙа ашыҡһын инде эшһеҙ ҡалған ауыл кешеләре? Берәүһененең лыбырлығы сыҡты:

— Ҡара, бынау ГАИ нәҫтәкәйе ярты сәғәттә килә һалған. Былтыр «Скорый» саҡырҙыҡ эсәге бәйләнгән әнкәм өсөн — өс сәғәттән саҡ күренде.

Ғөмүмән, бураштарҙың «бузотерҙар» тигән яманаты электән бар. Ғауғаһыҙ үткән йыйылыш һирәк була — әлеге етешһеҙ донъя касафатылыр. Бураштар күмәкләшеп властарға бәлә һалырға, үҙҙәренә оҡшамағандарын дөрөп алырға ла булдыра. Ана, бөгөн тарих уҡытыусыһы Фазылды яҡлап сыҡты. Ә бит көндәлек тормошта улар юҡ-юҡта сәкәләшеп тә алғылай. Солтан бик өндәшмәй, башлап Фазыл бәйләнеңкерәй.

## 2

Олотүз хакимиәте башлығы Айгөл Карамовна «Волга»ла ҡайтмай, тураға кәмәлә сығырға буламы, кешеләргә сәләм бирә-бирә, Фазылдарға ашыҡты. «Аҡһаҡалдар ҡоронда тикшерһәк — баштан ашҡан. Иртәгә үк... Әҙ-мәҙ штраф сәпәгәндә лә килешер. Ҡара әле, ысволыш, тип битәрләһә лә, уға кенә тотмайым... Ауыл балаһы шулай әрһеҙләнеп, осһоҙланып бөтәлер инде. Бәлкем, уның һүҙендә лә хаҡлыҡ барҙыр. Бынау Николайын әйтер инем. Барыбер ҙә пайҙы сасындарға мулыраҡ ҡайырырға ҡырталаша...»

...Иртәгәһенә сәғәт ун тулмаҫ борон уҡ арыу ғына кейенеп, түшенә знак-фәләндәрен тағып, элекке уҡытыусы үҙе килде Фазылға. Фазыл да ҡырынып-йыуынып, әҙәмсәрәк төҫкә ингән. Кәмәлә лә, ауыл араһында ла әллә ни һөйләшмәнеләр. Фазыл ғына уҡытыусы менән нисегерәк аралашҡандарын иҫләп алды. Ҡырҙан килде, йәшләй генә уҡыта башланы, өйләнде. Зауышны тиҙәрме, Өфөлә диплом алды шикелле. Мәктәптә оҙаҡ эшләп,

«выслуга» буйынса пенсия ала. Ауыл ере бит, донъя күтәргә кәрәк. Тик бына утын-бесән әшләргә, ташырға барымы юк. Инәлә был иплэп кенә Фазыл ише ҡорҙаштарына. Йомарт үҙе: эшен дә эшләтә, ашын да ашата, хаҡын да бирә. Әлегерәк бер йәй аҙағында Солтандың берҙән-бер һыйыры, юлда төшөп ҡалған дәү бәрәңге тамағына тороп, бышлығып һәләк була яҙҙы. Сират буйынса Фазыл күтә ине малдарҙы – һәүкәштең үмерәшен ҡыҫҡылап, тәки ҡоҫторҙо. Бер саҡ яланда һарығы бәрәсләне Солтандың, шуның бәрәсен күтәреп кенә алып ҡайтып бирҙе. Яҡшылыҡ онотолмай, бер уйлаһаң.

Хакимиәт башлығы бүлмәһендә биш-алты ҡартлас йыйылғайны. Ханым, бер буш өҫтәлде ситкә шылдырып, ултырғыс ҡуйҙы ла:

– Үҙегеҙ уҙғарығыҙ был юлы ҡороғоҙҙо, Бураштан уҡытыусы Солтан Хажиморатович алып барыр, мин ярты сәғәт эш менән йөрөп киләм, – тип елһерәп ҡайҙалыр олаҡты.

Теге сығыу менән уҡытыусы көләмһерәп ҡуйҙы:

– Ишеттегеҙме, ярты сәғәттән һыпыртығыҙ бынан, тине Айгөл Карамовна. Ярай, башланыҡ.

Ҡор рәйесе һүҙен ҡыҫҡа, аныҡ тотто, йәғни кисәге хәлде ҡыҫҡаса бәйән итте.

– Дә-ә, силсәүитте урыҫса һүгеүең яҡшы түгел, – тип ҡуйҙы кәүеш ауыҙлы бер ҡарт. Икенсеһе:

– Ну, «Лесник»ты мәргән бәргәнһең! Минеңсә, яҙығы юк – язаһы ла булмаһын.

Уҡытыусы ҡыҙыҡһынды: «Кем һуң... Лесник? Мин асыҡ ҡына белмәйем».

Баяғы кәүеш ауыҙ төшөндөрөп бирҙе.

– Һикһәненсе йылдарҙа «первый» ине райкомда. Урманшин инеме фамилияһы? Райком алдында лесниктарҙан зәңгәрле-йәшелле, хәҙер дәүәйгән анауы шыршыларҙы сәстергәйне. Яңы йыл төнөндә беҙҙең ауыл егете, иптәштәре менән бәхәсләшепме, әллә ятаҡтағы маляр ҡыҙҙарға бүләк булһын типме, берәүһен бәкеһе менән тызып, һындырып ал да кит. Өс көндән теге шыршыны ҡыҙҙар сүплеккә бырактыра бит инде...

– Утка ғына яҡһалар.– Үкенгән төҫлө һүҙ ҡыҫтырҙы кәүеш ауыҙға йәнәш ултырған ҡыҙғылт һимеҙ битле, башкаларҙан арыуыраҡ кейенгән яурынтыҡ ҡартлас. Бәй, һаман ҡомо ҡойолмаған даһа бының! Анау юлы, өс-дүрт йыл элек, эсә, мине йүнләп ҡарамай тип, олоғайған көнөндә бисәһен айырғас, Фазыл аша Фәнидәне яусыларға маташҡан әҙәм, вәт әй! Бирһен Хоҙай, тәки йәшерәктән яңы ҡатын алып, һәүетемсә донъя көтә, тиҙәр.

— Атыу үҙең һөйләп бөт... — Кәүеш ауыҙ тегегә турһайҙы.

— Һөйләп бөт, тип, шул шыршы буйынса милиция эш башлай, башламаҫ ине — райком ҡыҫа, ҡыҫмаҫ ине, «первый» үҙе ҡуша. Табалар егетте, һөйгән ҡыҙы, уны-быны уйламай, әйтә лә бирә. Ике йыл урман ҡырҡып ҡайтты Себерҙә энекәшебеҙ. Бустәк бер шыршы өсөн. Ҡайтыуына кәләше бүтәнгә сығып ҡуйҙы. Ана шуға «первый»ҙың үҙенә «Лесник» яманаты таҡты ла ҡуйҙы халыҡ. Былтыр үлгән әле ул бахыр, оҙаҡ ҡына ауырып ятҡан, тип ишеткәйнем.

— Аңлашылды, — тине Солтан, алдындағы ҡағыҙға ниҙер сыймаҡлаған булып. — Лесник тип мир алдында үлгән властың племянниғын хурлау оҡшамаҫ ине лә, ярай, бының өсөн — общественное порицание. Ә бына хакимиәт башлығын рисуай иткәне өсөн штраф сәпәйек, ағай-эне. Нисә һум таман?

— Әллә... өс йөҙ күп була, йөҙ әҙерәк, әйҙә, уртаһын, — бығаса ләм-мим ултырған ҡарттарҙың иң өлкәне һуҙып, йырлабыраҡ ошо тәҡдимде әйткәйне, башҡалар ҡуш ҡуллап ризалашты.

«Власть менән уйлабыраҡ һөйләшеү зарур инде ул, ҡай заманда ла...» тип теге йәки был ваҡиғаны иҫкә ала башлағайнылар, Айгөл килеп инде.

— Быуайҙар, һеҙ ҡайтһағыҙ ҙа була. Бураш абыйҙар әҙ генә туҡтап тороң, — тине хакимиәт башлығы, ҡорҙоң ҡарары менән ҡыҙыҡһынып та тормайса. Күрәһең, Солтан менән алдан уҡ яза хаҡында һүҙ беркетеп ҡуйғандарҙыр; ҡарарҙы ни уҡытыусының күҙҙәре үк әйтеп тора.

— Беренсенән, киләһе айҙа тағы йыйылабыҙ. Шәжәрә байрамы буйынса. Икенсенән, Бураштa Сания әбей ауыр хәлдә, Дилбәр апаға ла ҡай саҡ уход кәрәк. Кәримоваларҙа насар ауырыу бар, тиҙәр. Һыу аша мәктәптән тимурсылар ебәреүе ҡурҡыныс... Әллә һеҙҙәге инвалидтарға, ветерандарға ярҙам күрһәтерлек үҙегеҙҙән бер соцработник йүнләйекме? Аҙнаға бер аҙыҡ-түлек ташырға, ваҡ-төйәк хужалыҡ ярҙамына... Депутаттар риза, соцстраховойҙар кире һуҡмаһа, мәйтәм, аҙ ғына аҡсаға инде, мең ярыммы шул. Әммә эше стажға иҫәпләнә. Бураштан кеше булһа, бигерәк тә хуп. Элекке работник өҫтөнән ялыу яуа.

— Зәриә инде, улайһа. Риза булыр микән? — тип сырайын балҡытты Солтан. — Үҙе егәрле, үҙе әҙәпле... Барыбер ике арала ыҙалай.

— Әҙәпле икәне, ай-һай?.. — Айгөл Карамовна фекерен осламаны. — Егәрле икәнен беләбеҙ.

— Эшкә бөтмөр ул, — тип ҡуйҙы Фазыл. — Кәрәк икән, ишкәк тә ишә! Ялҡауҙарҙы үҙе ...матлап «алыҫҡа» оҙата!

— Бураштар булдырыр! — Ихластан ыңғайға һыпырҙы ханым ҡапыл ғына. — Ярай, был хаҡта хәбәр таратмай тороғоҙ. Быйылға әллә була, әллә юҡ. Хәҙер әҙ генә аҡсаға ла эш табыуы ауыр. Ки-

леүегеҙгә рәхмәт. Ҡана, ҡулығыҙҙы ҡыҫып, оҙатайым үҙегеҙҙе, сөнки миңә хәҙер районға барып әйләнәһе бар.

Уҡытыусы: «Протокол-маҙар кәрәкмәйме?» – тип белешергә ниәтләгәйне лә, ханым өндәшмәгәс, бая үҙе сыймаҡлап ултырған кәнсәләр ҡағыҙы битен... бәҙрәфтә хәжәте тейер типме, шыпырт ҡына салбар кеҫәһенә тыҡты.

* * *

Данирҙың үҙе генә белгән «балыҡ»тан ҡояшта янып, талсығып, кәйефле генә ҡайтып инеүе ата-әсәһен һөйөндөрҙө, әммә сырайҙарынан улдары шуны ла һиҙемләне: телефондан хикмәтле вә мәкерле шылтыратыу хаҡында былар икәү-ара кинәнеп гәпләшкәнгә оҡшай. Ярай, ни булһа ла була инде.

Әсәһе сәйгә ҡыҫтаһа ла, тәүҙә өҫ-башын алыштырып, йыуынып, атаһына Данир Мәскәү бүләген – бер бүлкәтендә эҫе сәй, икенсеһендә ҡайнар аш йә бутҡа йөрөтмәле ыҡсымыраҡ термос тотторҙо. Атаһы хупланы, хатта: «Шәп! Олоғайған һайын кеше һыу буйҙарына, урман араларына тартыла. Теге аҙна мин дә ауыл яҡтарында бала саҡ урмандарын гиҙҙем. Бик тә сәй эске килгәйне шунда...» – тип һағышланып алды. Әсәһе үҙенсә оҡшатты: «Командировкаға ҡалай йәтеш нәмә. Алмашлап йөрөтөрһөгөҙ...» Миләүшә сығып китте, Марс ниңәлер шым ғына һөйләгән, әммә Африка йәнлектәре көнитмешен сағыу төҫтәрҙә күрһәткән стена телевизорына ҡараштырып, исем өсөн генә сәй һалатып, күн тышлы кухня диванына арҡа терәп ҡалды.

Тәүҙә Мәскәү, стажировка, аспирантура хәлдәрен һорашты. Аҡыллы уҙаман, бер-ике ауыҙ яуап һүҙенән дә аңлап-белеп ултыра. Ҡәнәғәт, буғай.

– Тә-әк, яҡшы быныһы. Ауылса әйтһәк, һәтте юҡ балыҡ тотҡанһың, таҙартып тороп апҡайтҡанһың, маладис. Тик ниндәйҙер звонокка иҫе-аҡылы киткән бит әле әбсәйеңдең?

– Ну, пап...

Яңылыш ҡына «пап» тип ысҡындырһа ла (атаһы йә асыулана, йә «мин һиңә «пап»мы ни?» тип көлә), Данир аныҡ ҡына башламаҡсы һүҙен.

– Атай, ғәфү ит, бер нисек тә аңлата алмайым. Дошмандарым да юҡ кеүек... – Быға Марс Нәбиевич көлөмһөрәп ҡуйҙы.

– Ошо йәшкә етеп, дошмандарың булмауы... һәм кәләшең булмауы бик ҡыҙғаныс. – Атай кеше баҫып уҡ осланы фекерен. – Хыт бөгөн өйлән – ҡаршылығым юҡ. Хыт хәҙерҙән алып ҡайт кәләшкенәңде – ризамын. Ләкин был мәсьәләлә психологик кризис тыуҙырма. Төшөндөңмө?

Данир өндәшмәне, уртын сәйнәп, бер нөктәгә ҡаҙалды. Атаһы нотоҡ ҡатыш һорауын екереберәк ҡабатланы, хатта та-

уышка бисәһе йылп килеп инде – әллә күрән быяла ишек артында ҡолаҡ һалыбыраҡ торған.

– Төшөндөңмө, тим? Кәрәкмәй беҙгә мистик проблема! Берәй көн беҙҙең институтка кил, йәме.

Данир балғалағын сынаяҡ аҫтына сыңҡылдата һалғас, юрамал ҡыскырыбыраҡ: «Рәхмәт!» – тине лә ашыкмайса үҙ бүлмәһенә ыңғайланы. Әсәһенең атаһына ниҙер аңлатыуы салынып ҡалды ҡолағына. Бүлмәһендә Данир сөм креслоға сумды, быныбына атаһы баяғы күңелһеҙ, аңлайышһыҙ һөйләшеүҙе дауам итер өсөн эргәһенә керер тип тә көтәүләне. Әммә бер кем борсоманы егетте. Атаһы ла, аҡыллыға ишара етә, тип уйлағандыр, «кризис», «проблема», «мистика» тип киҫәтеүе лә баштан ашкан. Эй ҙә, ниңә бушка йәне үртәлә әле?

Арығайны Данир, бөгөнгө яҡты иҫтәлектәрҙе барлай-барлай, иртәгә, дүшәмбелә, ямғыр яумай икән, Лира менән элемтәгә сығасағын уйлап, үлтырған килеш йоҡоға иҙрәне, хатта әсәһенең үҙен бала урынына өҫтөрәп карауатка һалғанын да һиҙмәне.

Бәхетенә, көслө ямғыр яуманы, һәм иртәгәһенә Лира менән ҡәҙимге генә һөйләшә алды. Ҡыҙ уға күстәнәс балыҡ өсөн рәхмәт әйтте.

– Таҙартып тороп ҡалдырғанһың. Тәмлекәс!

– О, Шурик ярға ырғытып ҡына торҙо, мин ҡылсыҡтары ҡатмаҫ борон ҡырсый һалдым, – тине егет күңелсән генә. – Ниндәй яңылыҡтар бар?

– Әллә ни юҡ, – тине ҡыҙ. – Йыйылыш булды, тиҙәр, ер бүлеү буйынса.

– Ә һиңә участок эләгәме? Әле шылтыраткан матур ерҙән пай һора.

– Бик теләһәм, эләгә, тиҙәр. Уйлаған юҡ ул хаҡта. Эйе, йәмле бында.

– Лира, ҡасан киләһең? Өфө юкһына үҙеңде!

– О, романтик фекер! Ай аҙағына инде...

Ай аҙағына... Бөтәһе лә яҡшы булһа, Данир ҙа Лираны етәкләп кенә өйгә апҡайтып, ата-әсәһе менән таныштырырға тигән теләк тә бар. Әгәр... Их, «әгәр»ҙәр ҡамасауламаһа! Эйе, әгәр бөтәһе лә, бигерәк тә анализдары «яҡшы булһа». Эйе, әгәр ҡыҙ кәзәләнмәһә. Йә тигәнгә мә тип торған холҡо юҡ һымаҡ Лираның. Кем белә, бәлки, нәҡ шундай ҡырыҫыраҡ холҡо өсөн дә оҡшаталыр әле егет ҡырағай ауылдың ҡырағайыраҡ ҡыҙын? Мәгәр барыбер ҙә Данирҙың күңелендә ҡара болоттарға ҡарағанда аҡ болоттар шөйлә күберәк. Лира ла, ана, көн аша «сеанска сығырға» ризалашты. Әлбиттә, ҡойма ямғырҙа йөрөмәйәсәк, шулай килештеләр.

Шишәмбе һөйләшкәйнеләр, хәҙер сират буйынса Данир кесе йомала – теүәл өстәрҙә шылтыратты. Ихатаға сығып, атаһы

эшләгән институттың аулағырак кыуаклы мөйөшөнә кайырылып. Ләкин кыҙ телефоны яуап бирмәне.

Ғәжәп, көн дә аяҙ ғына. Йәһәннәм аръяғы ер түгел, ул тарафтарҙа әле ямғыр болоттары дөмһәрмәгән. Егет төньяк тарафтарға күҙ һала-һала болдорға менеп барғанда, директор урынбаҫары менән кайҙалыр ашығып үтеп киткән атаһын да күҙенә элмәйерәк калды, тегеһе лә ниҙер әйтергә ауыҙын асмак итте лә, кул һелтәгән төҫлө, юлында булды. Ашығалар ине, күрәһең, берәй базаға кәрәкле генә ул-был килеп яткандыр. Хәйер, атаһының улында йомошо ла юк, бары тик: «Әллә шымафыйланып тәмәке быҫкытып йөрөйһөңмө?» — тип шаяртмаксы ғына булғайны.

Данир менән Лираның һөйләшә алмауына етди сәбәптәр бар ине.

...Пай бүлешеү йыйылышынан тызырайып, йәрәбә һалғанды ла көтөргә сыҙамайса орҙо-бәрҙе кайтып киткән Фазыл, әлбиттә, өйөнә етәрәк, эй, үкенде — терһәген генә тешләй алмай, холкона эт төкөргөр. Кәрәк кенә мәлдә сығырҙан ыскынһынсы! Электрһыҙ калган бәғзе бураштарҙың былай ҙа улына кырын караганы етмәгән, куй инде, куй, хәйерһеҙҙе... Ярай, Фасилдың ғаризаһы юғалған йә юрый юғалтылған да, ти. Ә комиссия карамағында резерв һымағырак ерҙәр ҙә бар һымак ине. Һәр хәлдә, пай бүлешеп йөрөгәндә шуны һиҙемләне нәфселе күңел генәһе. Бына хәҙер йыйылыштан һуң апкайтыр бер-ике комиссия ағзаһын, сәй-мәй эсерер, шунда мәсьәлә хәл ителер ҙә куйыр ине. Хатта өҫтәлгә ризык-әукәт ултыртып та киткәйнеләр. Йөрөмә сходка, тиһә лә бата ине бисәһенә — тыйманы, әйҙә, кеше күреп кайтһын, эт күңеле бер һөйәк — Янбаевтарға өс пай эләгеүенә купайһын, тип тә уйлаған булды шул. Кем көткән бер пай урынына... күкиш эләгерен.

Фазыл тегеләй-былай йөрөндө, эстән стеналарын сутнай башлаған лавка бураһына ла күҙ һалды. Бәй, бынау отвертка ниңә йәпһеҙ урында тора әле? Һ-м, сәнселгән дә бүрәнәгә... Һурып алды — үткерлегенә хайран калды һәм яурындарын һикертте: нимәгә хәжәт бының үткерлеге? Отвертканы корамалдар кумтаһына һалғас, бер аҙ уйланып ултырҙы. «Уйын бер, ... ике була. Ябып куйһалар — кәм тигәндә ун биш тәүлек, уҙа китһә — шартлы бер йылға... Ғәрлегеңдән ят та үл. Йә баяғы үткер нәҫтәкәйҙе бы-ых кәрәк кенә ереңә — и шабаш. Йә бу-ух — Иҙел дә кай сакта ғазраилға әйләнергә, ә юк, уны-быны йоторға әҙер генә яткан ғәләмәт дәү быуар йылан һымак. Ана, кайтманы Барый күршеһе... Үҙе теләп йәбешмәнеме икән Иҙелдең әжәл ялына? Шулай тип тә фаразларға мөмкин бит әле, һәләкәтен күргәнбелгән кеше булмағас. Юктыр, донъясыл ине, эргәһендә артык һырпаланмаһа ла, кәнәғәт ине Фәнидәһенән...»

Уңарсы ҡапҡа дөңкөлдәне, һәм Фазыл ҡолағына ышҡылып атлаған калуш тауышы салынды: ҡайтты бызмырҙаҡ бисәкәй генәһе. «Упсы күмәк кеше араһында, һәнәк күтәрәм, тиме. Һи-и, ҡойто... Хәйер, әйтеп булмай, һыйыр дулаһа, аттан яман, тип тоҡтомалға әйтмәгәндер һыпсыл ҡарттар. Сығайым әле ҡаршыһына. Ҡай тирәгәрәк пай эләкте икән икәүһенең йәрәбәһенә? Семейныйҙар йәнәш эләгергә тейеш».

– Уф, йәтеш булды, әллә кемдең һелкетмәгән машинаһына ултырып төштөм. Әйҙә, өйөңә хәтле, ултыр, тигән була Айгөл ҡоҙаса. Үҙе йәйәү...

– Йә, нисәнсе участкаларҙы һөйрәнең? – Ире быға һөйләнергә ирек бирмәне.

– Һөйрәнем?.. Ҡуш йәрәбә тарттым: ун етенсе, ун һигеҙенсе сыҡты.

– Һ-м, алама ерҙәр түгел. Маладис! – Кешене күңелләндерергә күп тә кәрәкмәй. Ауыҙы йәйелеп, һоро күҙҙәре йылтандап киткән булды хатта Сараның, әйтерһең, йәрәбәне – иренә оҡшарҙай биләмәне беләкүрә тартып сығарған. Бытылдап алды. – Их, элекке беҙҙең ботама сабынлыҡ үҙемә тәтемәне, тип һөйләнде Дилбәр түтәй. Сытырман урын сыҡҡан...

Йәшереп уй-иҫәбе бар Фазылдың, бар. Пайының уртаһынан Бураштың ҡорор-ҡоромаҫ баш яғы ағамы? Аға. Шуны быуып ебәрһә, өйрәк, ҡаҙ үрсетергә йәтеш, йыбанмаһаң, әйҙә, карп ебәр. Ҡош вә балыҡ ите ҡасан да, ҡайҙа ла үтә. Оҡшап китһә, шунда Фасилға өй һалышыр. Өйләнһә әле, ике аяҡлы быҙау... Нимәгә хәжәт ул барылдаҡ һарыҡ йә аснаҡәт мөгөҙлө мал? Күпме мәшәҡәт, күпме кормыһы кәрәк уларҙы ҡарау өсөн. Һай, Кулбар, ә юҡ, Күлтөбәк тирәһе эләкһә! Быуаһы ла кәрәкмәҫ ине, нишләй беләһең, көслөнөкө замана. Ҡарттар йорто, фәлән-төгән тигән төрлө һылтауын табып, түрә-ғара үҙләштерәсәк ул хайран ерҙе, күр ҙә тор. Әллә ҡасан ошонда колхоздың «ликвидаторы» булып эшләп киткән Фәсхетдинов ымһынып ятмаҫ ине, юғиһә, Күлтөбәктең шырлы ярҙары өсөн.

– Нимә тинеләр минең хаҡта? – Фазыл хыял күгенән ғәҙәти ергә төштө.

– Милисейә машинаһы алдан, артынса Сәмерхановтар Сасынға һыпыртты. Әйтмәнемме ни, силсәүит мине Николайҙыҡына ултыртып төшөрттө, рәхмәт яуғыры. Аяҡтарың һыҙлап тора, әйҙә, ҡоҙаса, әҙ булһа ла ултырып ҡайт, ти. Сәйгә инегеҙ, әҙер генә, тигәйнем, икенсе юлы әбәзәтелне, тигән булды әле.

– Икенсе юлы сәвсим икенсе кешеләр сәвсим икенсе эш менән килә инде ул, – тип көлөмһөрәне ире, ҡулдарын бер ҡаушарып, бер яҙып. – Николай умарталыҡта һый әҙерләмәгән тиһеңме ни ҡап ҡорһаҡтарға? Кисә ике марый эсписәльне балыҡтан йөрөп ҡайтты үрҙән. Ярай, һуҙма: ҡасан килә тине канвуйҙары?

– Әс-тә-гим, әйт-мәнеләр-се-е, – тине һуҙып бисәһе. – Иртәгә сәғәт ундарға килеп китһен әле жизнәкәй, тине Айгөл. Еҙнәлегең дә бар. Зәриәнең ҡайныһы Айгөлдөң әнкәһен, йәнә минең әнкәйҙе «дваюродный түтәйҙәрем» ти торғайны. Ә һин – ысволыш та праститутка тип лубой кешене бөтөрәһең.

– Праститын әйтмәнем дә! Ярай, балдыҙ саҡырғас, барырмын, – тип тә өлгөрмәне, ҡапҡа асылды, унан аҫтына ебәргән бала һымаҡ үҙен ғәйепле һиҙгән Фасил күренде. Атаһы уға иғтибар итмәне, дәртле генә, ипле генә өндәште. – Тә-әк, Фасил улым, иртәгә төштән һуң пайҙарҙы ҡарап ҡайтайыҡ. Мужит, фанир ҡағырбыҙ, фамилияны яҙып?

– Кәрәкмәҫ... – Фасил сирылғандай итте.

– Кәрәкмәһә кәрәкмәҫ... – Атаһы уйсан ғына ризалашты. – Ай-һай...

* * *

Лира Данир менән һөйләшер өсөн үҙҙәренең элекке сабынлығына яҡынлағайны, ҡырҙан ғына алаңғыртта Фазыл менән Фасилдың йөрөп ятҡанын шәйләне. Ата Лосман балталы бит әле. Ниҙер әйтә, ҡул иҙәп, тегендә-бында күрһәтә...

Лира, айыу күргәндәй, ҡырт боролоп ҡайтыуға тәпәйләне. Ауырыу көйө урманда һәптәндәй, башы зәғифтер бының, тип уйларҙар йә ни...

Бүтән кешеләр ҙә күренештерә Бураш буйында. Әсәһенең әйтеүенә ҡарағанда, Лираларҙың элекке сабынлығы – һирәк ҡарағайлыҡ ике пай сүрәтендә тарих уҡытыусыһы Солтан өлөшөнә төшкән көмөш хәҙер. Абау, нимә эшләп йөрөйһөң минең законный еремдә, тип һораһа, нимә тип яуап бирер Лира? Уҡытыусы, әҙәпле кеше булараҡ, әлбиттә, ҡапыл-ғара һорамаҫ, ә бүтән кеше, мәҫәлән, оло Лосмандың һорауы ихтимал. Уҡытыусының да, бөгөн һорамаһа, иртәгә һорауы бик мөмкин. Аҡса, власть үҙгәртә әҙәм балаһын. Ә бит мәңгелеккә бүлеп бирелгән аҙмы-күпме ер – шәхси милек, тимәк, кешене ер биләүсе лә итә, күсемһеҙ байлыҡҡа хужа ла яһай. Пошлина һала башламаҫтармы бураштар бер-береһенең биләмәһен ашатлап уҙған өсөн? АҠШ-тағы һымаҡ.

Зыярат эргәһенән ҡайтып барышлай Лираның мейеһендә килде-киттеле тағы бер һынамыш ҡайнашты: бәй, зыяраттың эсендә лә – фамилиялар, зыяраттан арыраҡ шәхси пайҙарына бәғзеләр фамилиялары яҙылған «колышка»лар ҡағып та ҡуйған. Ҡыҙыҡ та, ҡыҙғаныс та...

Ярай, шәмбе көн үргәрәк менеп, Лира үҙе Данирҙың «гимнын уйнатыр» әле. Файҙаһынан башҡа зыяны тейгәне юҡ таһа

бығаса аспирант егеттең. Төҫкә-башҡа ла төшөп ҡалғандарҙан түгел. Юмор ҙа бар телендә.

Әллә мәктәпкә инеп, компьютер ҡарап-уйнап сығырғамы? Саҡырғайны бит Марат. Ҡуй, ауырыу көйө... Килештермәҫтәр. Шул Марат экстремаль спорт менән дә мауыға, тиҙәр. Ҡышҡы каникулда, мәҫәлән, сноуборд менән эскәмйә ҡуйылған текәнән шыуып, халыҡты аптыратҡан. «Һелкәүес һымаҡ яҙынҡы бит әле бер бөртөк кенә саңғыһы», — тип ҡыҙыға хәҙер энеһе Тимур ҙа. «Эшләй башлағас, ҡулыма аҡса керҙениһә, мотлаҡ әпирәм», — тип эстән генә нәҙер ҙә әйткәйне Лира. Һауыҡһын ғына...

Монтерҙар йома төҙәтеп киткән ҡәҙимге телефон элемтәһе эшләй генә башлағайны, Кәримовтарға иртәгәһенә икенсе булып звонокты Валентина «борҙо».

— Әнкәй, һине Валя апай һорай, — тип саҡырҙы әсәһен Лира соландан. Әсәһе тышта ваҡ-төйәк кер элеп йөрөй ине.

Эйе, эйе, Бурашта йыш ҡына «шылтыратты», «звонок бирҙе» тимәйҙәр, ә «борҙо», «борҙом әле» тиҙәр. Иҫкергән төшөнсә, тотҡаһын борғослап оло ауылға ике-өс кенә телефон аша һөйләшкән саҡтарҙан ҡалған һүҙ инде. Шулай, Валентина борҙо Сасындан Бурашҡа. Хәл-әхүәл белештеләр, ярты сәғәт буйы уны-быны һөйләштеләр. Көләштөләр ҙә, илаштылар ҙа. Ирҙәре юҡ. Ә бит улар ҙа, механизаторҙар, бер-береһенә ярҙамсыл ине. Ине...

— Красавица, иртәгә сәғәт өскә көтәм... Ни өсөн икәнде сама знаешь... Егермеләп кенә кеше саҡырҙым — әйткән һүҙ покоя не дает... Напарнигың Гриша, машина менән барып алам, апарып ҡуям, ти...

Белә, белә: һыйсан Валентина тыуған көнөн билдәләргә саҡыра. «Әйткән һүҙ», — ти бит ана. Алдан әйтеңкерәп йөрөнө, Алла бирһә, тип башҡортсалап, өйрәнешенсә, «к» урынына «ҡ»ны ҡыҫтырғылап осондо хатта. Ниңә ҙурлап, мәҙәниәт йортонда уҙғармайҙарҙыр — уныһы ҡараңғы. Үҙенекеләрҙе күтәрә, тип әйтмәһен сасындар, тиҙер әле Николай Тимерәйевич. Шөрләңкерәйҙер. Бер уйлаһаң, сәхнәнән ҙурланың ни, хәҙерге кооператив — элекке колхоз исеменән затлы ғына бүләкте өйөнә илтеп тапшырҙың ни — барыбер ҙаһа.

Күңеле елкенеп, тамағы тамшанып ҡуйһа ла, Фәнидә тәүҙән үк ғәфү үтенеп, саҡырыуҙы кире ҡаҡты. Ғәҙәттә, әхирәте менән ул да «киш-миш» телендә гәпләшә.

— Валюша, һинән алда ғына райбольницанан Клара түтәй шылтыратты. Медсестра, бывший Олотуз килене. Клара әйтә: миндә, ти, Уфанан подружкам отдыхать итеп ята, шул хочет повидать наш Бураш, заодно и Лирочканы. Оказывается, Лирочканы лечить итеү буйынса уфимская тетка бик стараться иткән. Так что, ни шагу ярамай отлучиться от аула.

– Конечно, Фая, аулда бул, сыйлап жибәр. Жалко, ансамбль мине урамда поздравить итәсәк. Кстати, миндә яҡшы вино күп – спецзаказ! Үҙем әсеткән облепиховая настойка ла хороша. Ебәр Тимурчикты велигына мендереп. Хәҙер үк ебәр, мин дома буду, ладно!

– Күпме аҡса кәрәгер?

– Ты что, красавица, мин үпкәләргә лә могу. Исмаһам, после завтра заглянешь, ладно?

– Ладно, Валюша. Тимур балыҡтан ҡайтҡас та барыр.

Һөйләшеүҙән ҡәнәғәт ине Фәнидә. Телефон трубкаһын матурлап, яй ғына һала бит, ана. Бүләкме? Үҙе бәйләгән мамыҡ бирсәткә ебәрһә?..

Эргәлә Лира әңгәмә айышын аңғарыбыраҡ йөрөштөрһә лә, үҙенә тиң күреп, әсә ҡыҙына баштан-аяҡ барыһын да һөйләп бирҙе. Тегеһе ара-тирә йылмайып, ваҡыт-ваҡыт эйәк ҡағыштырып, бәйләме менән булашты: Фәнидә ҡыҙына кәзә дебетенән свитер башлап тотторғайны.

...Сәғәт икеләрҙә Фазыл кәмәһендә бирьяҡҡа сыҡҡан шәфҡәт туташтарын Фәнидә яр башында уҡ ҡаршыланы. Ниңәлер тәүҙә, аҡ халатлы, аҡ ҡалфаҡлы булырҙар былар, тигән уй башына һеңеп ҡалғандырмы, шар ҙа мар һөйләшкән, туристарса ҡара күҙлек, күк салбар, ветровка, сомбрэро – моғайын, әхирәте бүләгелер – кейгән, аҡ футболкаһы үҙен ярайһы ҡупшы күрһәткән Клара балсыҡҡа һеңгән таҡта баҫлыҡтан (баҫҡыс) түштәрен уйнаҡлатып менгәс, иң башта күреште. Әйтәгүр, эшкә сыҡмаған, ялға сыҡҡан былар. Ауыҙ-морондарынан хушбый ҡатыш йөҙөм шарабы еҫтәре лә аңҡығандай. «Бик хуп, кисә Валентина бына тигән виноһын вә настойкаһын ебәрҙе – эстәрен тишмәҫ быларҙың», – тип уйлай һалды Фәнидә.

– Әйҙүк, ҡунаҡтар, – тип әйтеп һалды яр башынан уҡ Фәнидә, үҙе лә һиҙмәҫтән.

– Ҡунаҡ тип ни. – Хихылдабыраҡ, тирә-яҡты байҡабыраҡ һөйләнде Клара. – Ҡунаҡ берәү генә бында: Алия Ғазиевна. Алия инде беҙҙеңсә. Нисәмә йыл саҡырып, саҡ күрештек. Бына ошо була Бураш тигән ташландығыраҡ, но экзотичный ауыл!

Лосман ишкәктәрен асыу менән ярға бырактырҙы, тик быны һиҙгән-күргән кеше булманы. – Йүнле кәсеп юҡ шул ауыл кешеһенә... Аврамович ишеләр, ана, байлыҡтан ҡотороп, орбитаға экскурсия яһарға самалайҙар...

– Өйгә рәхим итегеҙ. – Фәнидә туташтарҙы үргә әйҙүкләне.

...Хәйерлегә булһын: икенсегә һөйләшә алманы Лира Өфө менән. Көн аяҙ ҙа бит... Ни уйлай икән Данир? Берәй ҡылтым, тәкәббер егет булһа, төкөрөр ине... Төкөрһә, баштан уҡ төкөрһөн! Аҡланырлыҡ сәбәбе лә бар Лираның, бар. Был юлы, баяраҡ, әсәһе тоткарланы. «Йөрөмәй тор, Лира ҡыҙым, ҡайҙан

ҡайҙа килгәндәр, затың-туғаның да түгел, отпускыла көйө үҙҙәре һине ҡайғыртып йөрөйҙәр ҙә бер ыңғай... Күренерһең дә, ҡайҙа теләйһең, шунда китерһең», — тип тә өҫтәне, ҡыҙы өндәшмәйерәк торғанда.

Китерһең китмәй ҙә... «Сәғәт берҙәргә килербеҙ» тигән түтәйкәләр саҡ сәғәт икелә арғы ярҙа инеләр, кәмәлә мыҙылып, бында менешләй һуҙмаҡланып, өс тулыуға ғына инделәр ихатаға. Ә сәғәт 3-тә буласаҡ «сеанс»ҡа, тимәк, Лира бара алмаҫ.

— Кәримова, һаумы. — Күптәнге дуҫын күргәндәй, ҡул бирмәй генә сәләмләне туристарса кейенгән Өфө түтәйе — саҡ танырлыҡ үҙен ҡыҙыҡай. Интуристка тип торорһоң! Өңшәйгән Лира өсөн Клара яуап бирҙе:

— Шәбәйәбеҙ, Аллаға шөкөр, тиң, Лирочка.

— Шөкөр, шөкөр, — тип йөпләне хужабикә ҡунаҡтарын ҡул сайҙырған арала. Лира йылмая биреп ситкәрәк атланы, ә туташтар эскөйгә инеп сөкөрҙәште.

...Студентканың айырым бүлмә-сымылдыҡта йоҡлауы һәйбәт, санитария шарттары үтәлә; төҫөндә лә ул-был ҡурҡыныс симптомдар күҙгә бәрелмәй, тимәк, «дауалау курсы нормально» бара.

Тимур был арала ысынлап балыҡҡа әүәҫләнде. Буш ҡул ҡайтмауын әйт әле. Өс-дүрт малай сығып китә төшкә табан, — асығышып, көтөү алдынан саҡ ҡайтып инәләр. Бөгөн әсәһе сбәрмәне улын һыу буйына. Мунса яҡһын, арлы-бирле йомошҡа йүгерер. Әле ҡолаҡҡа һаҡ Тимур ҡысҡырып ебәрҙе:

— Марыйлар барабан ҡаға, ишетәһеңме, әнкәй?

Яҙа-йоҙа ишетелә.... Баян тарталар, дөңгөр ҡағалар, суска ҡарынынан эшләнгән шөгөр быҙҡылдаталар — тимәк, Сасын урамында халыҡ ҡый ҙа сый Валентинаны хөрмәтләй.

Ҡунаҡтар ҡыҫтатмай сәйгә ултырышты, инәлтмәй генә барынса һыйланды. Өй алдында бәйләм менән ултырған Лира бер заман шар асыҡ тәҙрәнән көр тауышлы Клараның хәтирәләрен яҙа-йоҙа абайланы:

— А-анау ауылға килен булып төштөм инте, бер йыл эшләгәс тә. Моторный кәмәлә йөрөттө морягым туй көнө!

Лираның күңел ҡошсоғо алыҫ бала сағына талпынды. Бына ул ҡабаҡ башынан сибек ҡулдарын болғай, әҫәрләнә: шулайтып кейәүгә сыға икән түтәйҙәр! Зәңгәр кәмә Иҙел яра!

* * *

Эҫе йәй ҙә үтеп бара. Күҙ иңләгән ҡалҡыуыраҡ баҫыуҙарҙа гөрләгәне алыҫҡа ишетелмәһә лә, арлы-бирле техника ҡыбырҙашҡаны, унда-бында алтынһыу эҫкерттәр ҡалҡҡаны шәйләнә.

Бураш тирәһендә лә сағыштырмаса йәнлелек. Колхоз йылдарындағы эше өгөт-агитация, «ҡыҙыл шәмбе» рухы, фиҙакәрлек күҙәтелмәй, әммә һәр кемдең үҙенсә донъя күтәргә ныҡышып ятҡан көнө.

Фасил был арала күренмәй. Бәкһәң, Олотүҙдә инәкәстәрендә ҡуна ятып, ваҡытлыса аръяҡтағы бер абзыйына комбайнсы ярҙамсыһы булып йөрөй икән. Комбайндары шәп, «Кейс» маркалы, тиме...

Фәнидәнең дә тынғыһыҙ мәлдәре. Иртә китә, һуң ҡайта. Ярай әле, Лиражайы ҡарар күҙгә бигүк бөлгән түгел, кешегә хәстәһен һиҙҙертмәй, табиптар ҡушҡанды үтәй бирә. Ә бына Тимуры өйҙән ситләшеңкерәне, һаман һыу буйында сабауыллай. Апайың яғына сығып йөрөмә, тигәнгә тәүҙә аптырағайны малай, сөнки әсәһе Лираның сырхауын тәфсилләп аңғартмағайны. Ҡустыһы апаһының айырым, яҡшыраҡ ашауына бер килке ризаһыҙ һымағыраҡ ине. Хатта үҙе юкта ҡайһы бер тәм-томона айыу майы ла һөрткөләне – буйға тартылған сағы бит, ул тиклем ашамһаҡ булмаһа ла, ҡыҙҙар ише ҡылтамаҡ та тимәҫһең.

Бына тиҙҙән эштән, өй мәшәҡәттәренән арлы-бирле арынып, Фәнидә тағы Өфөгә юлланасаҡ. Лира менән. Һәр нәмәнең сиге була... Шәбәйһен генә ҡыҙы – эш ҡасмаҫ. Ураҡ бара, сенаж һалыу тамамлана. Бесән әҙер. Йәл, Тимерәйевич анау «Нива»һын һаман ныҡлап ҡына Григорий менән Фәнидәгә беркетә алмай. Бер уйлаһаң, артыҡ кәрәге лә юк – баҫыуҙары яҡын, фермалары Сасын осонда ғына. Машинаны үҙе йөрөтә белмәгәс, шоферы ла кәрәк бит әле уның, ә хәҙергә, һәр тин иҫәптә заманда, штат биреүҙәре ай-һай. Әллә Гриша форсат тейеү менән иртүк килеп алғылай, кистәрен Бурашка илтеп ҡуйғылай. Әйтәгүр, арыу егет. Кейәү иткәндә лә отолмаҫһың шәт. Башҡорт менән мари – ә юк, Григорий әҙерәк мариса ла һупалаған урыҫ бит әле – аҙым һайын өйләнешеп бармай. Электән тыйғандар шул, ике яҡлап та. Хәҙер әллә ни тыйыусы юк та... Ни генә тимәһендәр, үҙ илеңдә үҙ телеңдә һайрашып оя ҡороуға етәме һуң? Бураштан Сасынға килен булып төшкәндәр булғылаған, улары ла хәҙер тегендә-бында йәшәп ята, тиҙәр. Валентина, ана, көлә биреп хәтерләй ҙәһә. Йәш сағында райкомда эшләгән ыҫпай кейемле комсомол работнигы ҡармаҡ һалғылаған үҙенә. Башҡорт ине, буғай, риза һымаҡ та инем, ти Валя. Тик егет ҡупшағыраҡ булып сыҡҡан: һиҙеп ҡалыу менән әсәһе быжғырҙҡандырмы – Валюшаға шылтыратыуҙан, хат яҙыуҙан туктаған.

Үҙемдеке – үҙәктә тигәндәй, Фәнидә аҙмы-күпме йыйылған ҡағыҙ эштәрен теүәлләне лә кооператив рәйесенә инеп сығырға булды. Бая кәйефле генә кереп бара ине булмәһенә Николай Тимерәйевич.

Асыҡ икән ишеге. Кем менәндер һөйләшә. Өҫтәлмә комбайн ҡайғырта, маладис, телефондан бер ҙә этәк-һәтәк сәйнәп ултырғаны юк хужаның. Күреп тә ҡалды, ғәҙәтенсә, исемен атамай, Хамматовна тип кенә эйәк иҙәп үҙенә саҡырҙы.

– Хәлдәрегеҙ нисек, Хамматовна?

– Арыу әлегә, Николай Тимерәйевич. Йомош бар ине һеҙгә.

– Һиҙеп торам – машина кәрәктер. Гришаны былай ҙа иртәгәләрҙә нефтебазаға ебәрергә торам. Үҙегеҙ килешегеҙ, Хамматовна, яраймы?

Ярамаған ҡайҙа ти! Фәнидә эстән дә, тыштан да күркәмләнә барған элекке идара йортонан сыҡты ла Гриша йәшәгән тыҡрыҡҡа йомолдо. Ниңәлер бөгөн алдараҡ ҡайтҡайны егет, уның менән Өфөгә барыуҙы алдан һөйләшеп ҡуйғанға етмәҫ. Тураһан, Благзавод аша, юл алама, тиҙәр, тимәк, сәғәт һигеҙгә үк борамда катерҙың дығыр-бығыр һыу дөрөп сыҡҡанын көтөү хәйерле. Әйтә лә ул Лира, йөрөмә, әнкәй, үҙем генә барып ятам, тип, гәрсә әсә күңеленә дауа табып буламы? Ыңғай ғына йөрөһәң, ярты көн дә етә Өфөнө урап ҡайтыуға. Уҡыуы башланмаҫ борон тағы бер ятып сыҡһын әле балаҡайы. Үҙе алып барасаҡ дауаханаһына. Кустәнәс тә әҙерләгән, бирер берәйһенә. Бал уңды бит быйыл. Лираның хәлен ишетептер, Фәниданең Шиҙеләге туғандары ла кеше аша өс литрлы банкыла гәрәбәләй шим бал ебәргәндәр, рәхмәт яуғырҙары.

3

Данир менән Александр, бер подъезда йәшәһәләр ҙә, һирәгерәк осраша, йәғни тап булыша, әгәр алдан һөйләшеп ҡуймаһалар, әлбиттә. Ә бына бөгөн, йәкшәмбелә төштән һуң, уйламағанда магазин болдоронда күрештеләр. Шурик сығып килә, ә Данир әсәһе ҡушҡан аҙыҡ-түлекте алырға инеп кенә бара ине.

– Приветик, Фараон!

Күп саҡ Данирҙың үҙе ише өндәшмәҫерәк фиғелле Сашок быңдай еңел-елпе сәләмләүгә көлөмһөрәне лә, шыптыр тоҡсайындағы оло пластмасса шешәһен тубығына дыңғылдата бәргесләп: ««Шихан» алдым, әйҙә, гаражға», – тине. Данир баш сайҡаны, тегеһе, машина ремонтлайым, әҙ генә ярҙамың кәрәк, тигәс кенә, ун-егерме минуттан эргәһенә барырға вәғәҙәләне.

Өйҙәрендә егет шым ғына әйберҙәрен кухня өҫтәленә ҡуйҙы ла әсәһе күрмәҫ, уны-быны төпсөнмәҫ борон типме, киренән урамға шыла һалды. Анауы серле, серле һиңә, мәкерле вә әшәке шылтыратыуҙан аҙаҡ әсәһе Данирҙың һәр аҙымын күҙәтеү аҫтына алған кеүегерәк, ни хәл итә беләһең.

Егеттәр ара-тирә һыра һемергеләп, машинаның руль төптәрен рәтләгәс, тора-бара телдәре апаруҡ сиселде. Шурик ҡапылғара күршеһенең күҙенә ҡарап ҡыҙыҡһынды:

– Һин ниңәлер бойоҡ күренәһең... Әллә Бураштан һаман сигнал килеп етмәйме?

– Етер ине лә, шылтыратмайҙар, – тине Данир бошонҡо тауыш менән һәм сылт ҡыҙыл баскетҡаһы өҫтөнә һалған кеҫә телефонына ҡырын-мырын ҡарап алды.

– Ә һин былай ит: телебашняға мен дә үҙең бәйләнешкә ин, – Александр көлмәй, әммә шаяртҡанын күҙҙәре фашланы. – Йә берәй завод торбаһына... Үпкәләттеңме әллә Лирочканы?

– Юҡ та... Сирләүе... мөхәббәт формулаһын сисергә ҡамасаулай.

– Был, әлбиттә, – етди аргумент, – Александр кемделер аҡларға йә яҡларға белмәне.

Эштәре теүәлләнеүгә, Шурик майлы ҡулдарын, таплы биттанауын ышҡыштырып, гараж урҙаһынан ҡыштырҙатып миндек һайларға кереште.

– Мунсаға бармай булмаҫ. Мамочка танымаҫ, юғиһә. Әйҙә, киттек бергә.

– Була ул, – тип шундуҡ ризалашты Данир. – Ниңә бармаҫҡа? Дөйөм мунса алыҫ түгел. Өйгә инеп кенә сығам да...

Данир кеҫә телефонын өйҙә ҡалдырып сыҡты. Шурик та киҫәткәйне: сәлдерерҙәр, йөрөтмә мобилкаңды...

* * *

Улы ашығыс ҡына йыйынып мунсаға киткәс, әсәһе бүлмәнән бүлмәгә йөрөп керйыуғыска һалыр өсөн сепрәк-сапраҡ ҡараштырып йөрөгәндә, Данирҙың телефонында гимндың тәүге ноталары яңғыраны. Тантаналы түгел, шикләндергес тойолдо был юлы Миләүшәгә ғәйрәтле моң. Алырғамы, юҡмы? Дөрөҫөн әйткәндә, ханым юҫыҡлап тотона ла белмәй кәрәҙле телефонды. Тәүҙән үк, һатып алайым әле, уңайлы бит, тип ашҡынып та барманы. Ҡабатлап яңғыраны көй. Күтәрҙе, кәрәк төймәһенә ике тапҡыр баҫты, ҡолағына терәне – уны ғына белә – ләкин теге оста ла ләм-мим. Үткәндәге «яҡшылыҡ теләгән» ҡыҙ түгелме бер-бер? Үҙе лә һиҙмәҫтән, әсә кеше ҡәтғи генә әрепләшергә әҙерләнде:

– Что же вы не даете покоя моему единственному сыну? Прошу Вас больше не звонить по этому номеру, понятно? Негодница несчастная...

Теге остан бәйләнеште өнһөҙ генә өҙҙөләр. Шылтыратыусы... Лира ине. Эйе, ял көнө төштән һуң ул, аңлайышһыҙ йәпһеҙләнеү, түләнмәгән бурыс һымағыраҡ хис әйҙәүендә элекке сабынлыҡтарына яҡынлап, Данирға шылтыраткайны ла, егеттең мобилкаһы аша аймылыштан Миләүшә Ғәлиевнанан әр алғас, эсенән генә үҙен: «Шул кәрәк һиңә... Негодница несчастная!

һине, ярты йәтим, ҡараңғы ауыл балаһын тиңһенә буламы элитный донъя көткән интеллектуалдар?» — тип битәрләй-битәрләй, бер ғәйепһеҙ бүләк телефонды берәм-һәрәм йылпылдап артта ҡала барған ҡайындарҙың еллерәгенә бәргесләрҙәй булып, урауыраҡ юлдан ҡайтыуға талпынды. Ҡабат аяғын да баҫмаһын был тирәгә Данир-Данирчик! Буйың етмәҫтәй ботаҡҡа аҫылынма, тигән әүәлге бер аҡыл эйәһе. Әҙәмгә һанлар тиһеңме әле уҡымышлы, хәстәрлекле әсәнең «единственный» улыҡайы? Әйҙә, Данир үҙ тиңе, үҙенә асыҡтан-асыҡ ымһынған Светлана ишеләр артынан сапһын. Уның, ана, сумочкаһы йә туфлийы ғына биш-алтышар мең тора, ә Лира осһоҙораҡ, ҡураныс кәүҙәһенә таман булырҙай, күбеһенсә үҫмер балаларға тәғәйен кейем-һалымға ла ҡыуанып бөтә алмай.

Абау, әллә көнсөллөк ҡорто кимерә инде бәғер иткәйен. Юҡ та... Атаһы булған хәлдә лә әллә ни мандый алмаҫтар ине, моғайын. Етеме, һигеҙме йыл буйы йүнләп эш хаҡы алманы колхоздан әсәһе. Игенләтә бирһәләр — ҡайҙа илтергә, тип ҡаңғырҙылар. И, фәҡирлектән, томаналыҡтан бер ҡасан да сыға алмаҫ кеүек бураштар. Йә, вуз бөткәндәр ҙә бармаҡ менән генә һанарлыҡ бит. Бөткәндәре лә ете ят тарафтарҙа морон төртә. Данирчиктар, Светиктар ары торһон — әлегә ике генә мәсьәлә борсой үҙен: тиҙерәк һауығыу һәм нисек тә диплом алыу. Артабан күҙ күрер... Әлегә ҡайта һалып, дарыу йоторға кәрәгер. Сытайып йотор, уның ҡарауы, Лира дарыу эскән һайын әсәһенең йөҙө балҡып киткәндәй. Әсәкәйе уғата баласыл, уғата сабыр аҡыллы. Уның йәнен көйҙөрмәү хәйерле.

Бына лаһа телефон. Ғәҙәти Бураш телефонынан да Өфөнөң Тайсиндар номерын йыйырға мөмкин. Трубкаһын күтәрҙе — эшләй, гүйә, телефон түгел, зыйлафон! Тик ниңә ҡыҙ башы менән егет өйөнә шылтыратырға тейеш Лира? Осһоҙланып, әрһеҙләнеп... Их, «квартирный» номерҙарын оноҡкан. Шылтыратһын Данир үҙе. Эй, ә ул бындағы номерҙы белмәй ҙәһә. Элемтә һаман өҙөк тип уйлай инде егеткәй.

Өйҙә ул-был иткәнсе, күҙ бәйләнә башланы. Был ни хикмәт: Тимур ҡайтмай ҙа ҡайтмай. Ҡапҡа тышына сығып, Лира ла көтәүләне — юҡ та юҡ. Аптырағас әсәһе үҙе сығып китте һәм хәтһеҙ ваҡыттан, ҡараңғы ныҡлап төшкәс, саҡ юллап алып ҡайтты. Киске һиллектә урамда тауыш әллә ҡайҙарға тарала — орошорға теләмәгәндер, ә бына тамаҡ ялғарға ултыртыр алдынан аяҡ-ҡулын сайҙырғанда малайына апаруҡ ҡаҙарынды. Селтәр ҡоролған асыҡ ишек аша барыһы эскә ишетелеп торҙо.

— Ниңә улай кеше ҡурҡытып йөрөйһөңдөр... Лира апайың тышҡа сығып көттө, шулай ярай тиме? Бутҡа һыуынды...

— Ней бит, әнкәй, урман ауыҙынан терпе тотошоп йөрөнөк бер кешегә. Өскайын битләүендә. Вадим менән.

– Кемгә? Кем ул «бер кеше»?

– Бар инде бер абый...

– Әһә, йәшерһәң дә беләм. Вадимдың әсәһе әйткәйне көнәлгәре. Эй, бахыр ғына...

– Вәт сәпләк, сер һаклай белмәй, – тип һукранды Тимур. – Бәләкәйерәк шул минән учителька малайы.

– Үҙең харап оло кеше! Калай малайһыткан булаң иптәшеңде, ә? – Йәмерәйеп көлөмһөрәне әсәһе. – Эй, бахыр ғына... Ярай, капкылап алайык та, телевизор карамайса, йәтешләп кенә төнәрбеҙ.

Әсәләре капыл ғына укшығандай итте. Кыҙы уға, тамак сиртеп, һораулы вә шелтәле караш ташланы: йәнәһе, эсмәнеңме? Фәнидә баш сайканы. «Иртәгә миңә эшкә бит. Оперативка була торған», – тип бүтән сакта ла балаларын иртәрәк йоклата торған ғәҙәте бар Фәнидәнең.

...Бер нисә көндән генә Фәнидә әҙ-мәҙ сиселде Лираға: Тимур менән Вадим терне тотошкан «бер абый» тигәне, бәктиһәң, Фасил икән дә. Бына кыҙык кешекәй, етмәһә, икеһенә урталкка илле һум биргән әле. Тегеләр бая шул аксаға «Кока-Кола» алып эскәндәр һыу буйында. Әсәһенең «эй, бахыр ғына...» тиеүендә лә хикмәт бар кеүек. Кем бахыр икән уның өсөн: әнәле мәхлүкме, әллә баҫынкы ғына йөрөп яткан Фасилмы? Күҙенә салынһаң, Лира яғына ниңәлер карап-карап куя шул егет йораты. Караһа ни, карай бирһен. Ғишык тоткан өсөн хөкөм итмәйҙәр, айырылышып, ғаилә таркатканды ғына хөкөм итәләр, тип ләпелдәй түгелме ләпелдәк катын бер комедияла. Кит, килешмәгәнде! Бер үк ғәйбәте тарала күрмәһен.

* * *

Турист киәфәтендәге ак халатһыҙ шәфкәт туташтары өйҙөң хлор еҫе әсерәк аңкыған бүлкәтенә кабат инеп берауык муйыл капламаған асык тәҙрәнән йылға киңлектәрен күҙәтеп торҙо. Режим буйынса, был мәлдә бер аҙ серем итеп алыр өсөн Лира сымылдык эсендәге күпмә мендәренә һөйәлгәйне; әсәһе түрбашта кыштыр-мыштыр кылә, сакырылмаған кунактарына күстәнәс ярастыра, буғай. Ханымдарҙың йәнә бер мәртәбә ауырыуҙың шәбәйеп барыуына, караулы, дарыуҙары накыҫ булмауға кәнәғәтләк белдереүе Лираның да күңелен үҫтерҙе, уны тынысырак, тәрәнерәк тын алырға мәжбүр итте.

– А-ана, тулкын ярып, катер китеп бара. Үр яккамы? – тип белеште Алия Ғазиевна коллегаһы Клара Булатовнанан.

– Кәнишне, эшкә төшкән ауылым яғына елдерә. Шунан арғы ярға килен булып кайттым, тинем бит. Дәү генә кәмәгә тейәлтек тә... Ак туй күлдәге кейеп алғаным... Килештерҙек кенә

заманына күрә! Өйәңке араһына тиклем күтәреп апарҙы ирем, дальше кырантаска утырып, хан ҡыҙылай барып төшмәмме ҡәйнәм йортона! Гарвун тартып, олошоп, шишмәгә һыуға барҙыҡ.... Күңеллерәк булған та элек. Артығын эскән, ауһарланған, боларған кеше лә юк ине...

Яҙа-йоҙа ғына хәтерләй Лира әлеге «кәмәле» туйҙы. Ошо апай булдымы икән анау сактағы аҡ күлдәкле кәләш, тип теге юлы, йәғни үҙенә насар хәбәр килтергән сакта уҡ, икеләнгәйне. Хәтеренә уйылған һомғол, сибәр ҡыҙ... хәҙер йыуантаҡ, ике түше артыҡ ҡабарынҡы, һимеҙерәк эйәгенә ҡуйы ҡыҙыл яғылған, йоҡа ирендәре нескәргән, сал ҡунған сәстәре саптар ат ялын хәтерләткән һиммәтле ҡатын ҡиәфәтендә. «Шундай шәп, донъяуай ҡатыны өҫтөнән йөрөп... Әрәм булды... Эй, ир-аттың ышанысһыҙлығы!» — тип якын күреп, йәлләңкерәп, нәҡ ошо ҡатындың яҙмышын барлап ултырғайнылар түгелме әсәһе менән Валентина уҙған айҙа. Хәҙер түтәй райүҙәктә ағас особнякта йәшәй, улы ҡырҙа, йәш балалы ҡыҙы эргәләрендә — таш өйҙә донъя көтә икән. Эйе, Клара Булатовна ятыраҡ һүҙҙәр, ҡатайсараҡ өндәр ҡыҫтырғылап һөйләнә, имеш, анта-мынта, тип.

— Килмәһәм тә була ине ошонта, даже Өфөлә ҡалырға бажалыста ине. Юк, ауылдаш апай эшләне райсоветта, шул димләне инте, үҙе үлмәҫ борон. Кейәүгә лә...

Өфө ҡунағы Алия маҡтана биреберәк хәбәрҙе ялғаны:

— Мин дә бирешмәнем, загслы ирем ташлап китһә лә. Аҙаҡ инәлде — кире индермәнем, улым да ҡаршы ине. Ничево минең улым! Автодорожный техникумды бөтөрә. Уже ҡыҙыҡһына үҙе менән ҡыҙ-ҡырҡын. Бабушкаһына ҡайтарҙым әле, каникулда бит. Компьютерға йә китапка әүрәп тик ултыра.

— Компьютерҙан алйыған кешеләр күбәйә хәҙер. Лутсы ҡыҙҙарға ҡараһын, атыу... — Клара түтәйе Лира яғына эйәге менән генә ымлап шыбырланы, шикелле. — Во-о невестушка!

Ризалыҡ йөҙөнәнме, әхирәтенең ҡуңыр күҙҙәре асалаҡ та йомалаҡ нур бөрккәндәй итте. Ҡара, рәхәтләнеп эс серҙәрен сисә тол бисәләр, Лираны бар тип тә белмәйҙәр.

— Бер генә йәшкә олораҡ... — Аҙаҡ Алия Ғазиевна кәйефһеҙ генә өҫтәп ҡуйҙы. — Их, тормош һин теләгәнсә генә барһа!.. Армияһынан баш ҡаткан, призывка ике йыл ғына ҡала.

— Әйҙә, больнойға мишайтламайыҡ, — тине Клара Булатовна. — Фәнидә лә сакыра.

— Прекрасный аул! — тип эйәрҙе Клара артынан элекке һабаҡташы. — Капитал булып, дача һалғанда...

— Инйәр яғын күрһәң — во-о! Бер апкайтырмын үҙеңде, Алла бойорһа.

— Күрҙем дәһә икенсе курста. Онотаһың, подружка...

Ауырыу тиҙҙән, шыпырт ҡына йыйынып, атаһының оҫта ҡулдарын хәтерләткән, элекке йыл әсәһе кеше яллап һипләткән мунсаға һыҙҙы. Әсәһе ҡыҫтаманымы, ҡунаҡтары ла «мунса» тип тәүҙә генә ашҡынған кеүек инеләр, аҙаҡ һыйға, хәбәргә әүрәп, бөтөнләй оноттолармы әллә шикләнделәрме – ҡараңғы. Шикләнгәндәрҙер, ни генә тимә, зәхмәтле Лира сабынған, керҙәрен сайҡаған мунса бит әле. Шикләнәләр икән, йөрөмәһендәр.

Ысын әле! Клара йәй башында Лираны алып киткәс, ауылда хәбәр әллә ни таралмағайны кеүек. Хәҙер юҡ-барҙы сәйнәргә яратҡандарҙың ауыҙын томалап ҡара. «Врачтар ғәмһеҙ ул, ана бит, килеп тә китмәгәндәр. Ней телефон яғы алама икән... Кәнишне, уфимский прописка булғас, ике ятып, бер төштәренә инде, ти, беҙҙекеләрҙең. Ярты яҡ ауылдағы пациентка...» – тип тә һөйләнде бит бая Алия түтәйкә. Нисек тә үҙ баһаһын күтәрергә тырышҡан кеүексе. Йәнәһе, Лираның адресын ул деканаттан белешмәһә, ул шылтыратмаһа Клара әхирәтенә... Һы, кем инҡар итә быны? Шөкөр итһен, ана, литрлыҡ банка менән бал, литрға яҡын йәш ҡаймаҡ әҙерләнеләр. Бүтән нимә тәҡдим итһен былай ҙа муйындан бурыска батҡан әсәһе?

Миндек ебетмәй, мунса ташына эҫе һыу һипмәй, ләүкә йылыһында оҙаҡ ҡына емшеп ултырҙы ҡыҙый. Иҙерәп, ә юҡ, уйланып ултырҙы.

Тимур ҡайҙа икән? Йәнә берәй «кәсеп» таптымы?

Шылтыратыу кәрәк Данирчикка. Бөгөн өлгөрмәҫ... Шәмбе бөгөн, иртәгә – ял, йәкшәмбе. Тәтәй егеткә, тиһәң дә бата. Әллә ниндәй ауыл һүҙҙәре тел осона ҡуна – хәйерлегә булһын, тип ыхмылдап ҡуйҙы хатта Лира. Тәтәй егет... Ә юҡ, юҡ, тәтәй түгел, һәләтле, хатта ки талантлы егет тәһә Данир. Ниндәй ауыр фәндәрҙән «бишле»гә уҡыу талант түгелдер шул?! Раҫ. Быны шулай икәнен Лира үҙ елкәһендә татыған кеше бит әле. «Атайҙан йәш ҡалған – аҡылдан буш ҡалған» тигәндәре бигүк тапҡыр әйтем түгел: бына Лира, исмаһам, һәләтле, тырыш талибә, уны талантлы тиеү – көсәнеп бирелгән ялған баһа буласаҡ. Светлана ишеләр, моғайын, баш тартмаҫтар ине бындай ҡупайтыуҙан. Светлана иҫенә төшкөләй, ҡолағы сеңләмәй микән? Бына кемде һис икеләнмәй «тәтәйкә» тип атарға мөмкин. Фу-у, әллә ҡыҙғанамы Данирҙы? Сәйер уйҙар ялмайсы күңелен...

Яҡшы ниәттә йөрөгән кешеләр хаҡында ла насар уйларға ярамай. Урынлы кәңәш бирә Алия Ғазиевна әсәһенә. «Лираны августың егерме бишенән дә ҡалдырмай обследованиеға алып барырға тырыш. Сентябрҙә больницалар тула башлай торған: ветерандар ҡыбырҙаша, отпуск сезоны бөтә, студенттар, баласаға уҡырға төшә. Кәрәк икән, берәй аймы, ике аймы стационар дауаланыр ҙа имен-аман ғына уҡыуын дауам итер».

Хәлбүки, Лира ла түшәккә ләж яткан ғәрип-ғөрәбә түгел. Әсәһен ҡабат йонсотмаҫҡа, аҡсаһын сарыфлатмаҫҡа тырышыр, үҙе генә ыҫҡыныр баш ҡалаға. Бишенсе курс студентҡаһы әле, ҡайҙан инеп, ҡайҙан сығырға белә; мәрхүм дәүәтайы әйтмешләй, дастуйын бала... «Өс хәтәр»ҙең беренсеһе түгелме, эй, дәүәтай?!

Тыптыр-тыптыр ямғыр һибәләй. Ярай әле, Лира мунсанан таҙарынып сығыуға, түтәйҙәр сыланмайса Олотүзгә ҡайтып өлгөрҙө. Бер яуа башлаһа... Таң ата ла кис була тигәндәй, ауылдағы бер төрлөрәк тормош ялҡыта, дауаханала яткандағы ише, зитына ла тейә башлағайны. Ҡыҙыҡһынһаң, юк-юкта ауылда ул-был хәлдәр ҙә булғылап тора. Ана, баҡса йә дача өйҙәрен хосусилаштырырға рөхсәт итмәгәндәр. Дөрөҫ, ниңә ҡырҡ атаның балаһы – йыйын килмешәк хужа булырға тейеш әле Бурашҡа? Ә бына Лираға – олатайы хужалығын үҙләштерергә рөхсәт. Әсәһе тиҙҙән һойөнөп кенә шуның мәшәкәттәре менән булашмаҡсы. Ә юк, үҙе инеп, үҙе ҡул ҡуйҙырып сығырға тейеш ҡағыҙҙарға ауыл хакимиәтендә. Документация өсөн байтаҡ аҡса оса инде – ни хәл итәһең.

Эйе, эйе, ике көндән әсәле-ҡыҙлы аръяҡҡа юлланды. Аяҡ аҫты дымлы, баш осонда ҡуян баҡтаһы төҫөндәге һорғолт болоттар йөҙә, ара-тирә өшәндергес ел иҫеп ҡуя. Кәмәгә ике-өс кеше йыйынғанын күргәс, әсәле-ҡыҙлы Кәримовалар Тимурҙы уятып, аҫҡа төштөләр. Аръяҡҡа Фазыл алып сыҡҡайны, былар бер-ике сәғәт эсендә йомоштарын йомошлап, магазиндарға ингеләп ярға ҡайтыуҙарына – инде кәмәсе Фасил ине. Ҡырынған, әҙәм рәтле кейенгән, бил ҡайышына ыҡсымыраҡ кеҫә телефонын тағып алған. Кирелеп ишә егет, ҡатын-ҡыҙ күҙҙәренә ҡараштарын тап килтермәҫкә теләгәндәй, берсә уңға, берсә һулға ҡараштыра.

– Ҡай тирәгә барып һөйләшәң ул? – тип ҡыҙыҡһынды Фәнидә Фасилдан.

– Ҡыуҡарағас битләүенә етәрәк... һөйләшеп була.

– Эй, бахыр... – тип ҡуйҙы Фәнидә кемделер йәлләгәндәй, шунан ауыл үрендәге текә генә ҡыразға һонолдо. – Яҡын икән. Беҙҙекеләр элекке сабынлыҡҡа ук менеп етә яҙа. Тик һин, Фасил энем, малай-шалайҙы терпе тотторам тип аслан Иҙелгә яҡын йөрөтмә. Аҡса биргәнһең иш-шеү... – тип битәрләүгә күсте ҡатын.

– Әне-ей! – Быны Лира әйтте турһая биреп. Фасил иһә өндәшмәне, мәгәр еңелсә ҡыҙарынды.

– Терпе итен ҡай бер ауырыуға шифалы, тиҙәр инде былай, – тип йомшағыраҡ һөйләнде хәҙер Фәнидә. – Әллә һатырға уйлайһыңмы?

– Һатмайымсы... – Егеткә ҡәҙимге төҫ ҡунды. – Иванай әбекәй өйрәткәнсә...

– Безгә кәрәкмәй, – тине кинәт Фәнидә ышаныслы ғына. – Хәҙер, берҙән, таблеткалар шәп; икенсенән, врачтар менән һөйләшеп килешмәгәнбеҙ. Күрҙең дә яңырак медсестралар эсписәлне килеп киткәнде: Лира шәбәйеп барғандай, врач ҡушмаған ысул менән һис дауаланырға ярамай, тинеләр.

Юрамал һөйләнә түгелме әсәһе? Һөйләһен, һөйләндерһен – етте Лираға меҫкенләнеп өйҙә ятырға.

Фәнидә егеттән үҙенә пай эләгәме-юҡмы икәнлекте лә белеште. Баҡһаң, Фасил төнәгөн хакимиәткә барып әйләнгән икән. Элек колхозда эшләүе хаҡында ике кешенән шаһитнамә генә алып килергә ҡушҡандар, имеш.

– Быныһы шәп! – тине Фәнидә ихлас күңелдән. – Ана, Лираға ла Ишмай олатайының өйө-баҡсаһын законлаштырып бирәбеҙ, тинеләр. Тимурыбыҙ үҫә бит, әлләниндәй көндәр килер... Ерҙең хаҡы ғәләмәт ҡиммәтләнеүе бар киләсәктә.

– Әлүктән ҡиммәт, – тип ғәм менән үҙ фекерен ҡыҫтырҙы егет. – Безгә өс гектар эләгә бер пайға. Аръякта икешәр генә, ти.

* * *

Лосмандарҙың «Аҡсарлаҡ» тигән алъяҙма элеүле яңы лавкаһына кеше күберәк йөрөй башлаған һымаҡ. Берәүҙәре уныбыны һайлаштыра, икенселәре ҡыҙыҡ күрә, йә, нимә менән генә һатыу итә икән бынау байғоштар, тигән ише, ҡараштырып, һуғылып ҡына уҙа.

Кеше юҡ саҡтарак, төш мәлендә, элекке уҡытыусы Солтан Хажиморатович йәтешләп кенә килеп ҡунаҡланы Фазыл эскәмйәһенә. Йөҙө борсоулы, уйсан. Ҡорҙашы тарткан тәмәке еҫенә хушланғандай, ыһылдап йыш-йыш тын алды ла һөйләнеп ҡуйҙы.

– Уф, бәхетлеһеңдер һин – тәмәке тартаһың...

– Таптың бәхет! Ташлап булмай – үәт бәхетһеҙлек!

– Ә мин ташланым, ай була инде. Хәҙер бик тартҡы килһә, тотонон еҫкәп кенә ләззәтләнәм...

Солтан әллә ниҙә бер хәмер йотоп, үҙе әйтмешләй, «ысҡынып» та алғылай. Мәктәптә элегерәк тарих уҡытыусыһын Палкауадис тип тә ебәргеләйҙәр ине ололап, хәҙер мәктәп кесерәйгәс, онотолдо ҡушаматы.

– Бигерәк алама хәҙерге әсе-мәсе. Күп тә эсмәйһең, тәк, йөнде генә ҡыя.

– Афтаритетыңды төшөрөп, осһоҙло араҡы эсмәһәң, – Фазыл коломһөрәп ҡорҙашын битәрләне, ыңғайҙан үҙен дә аямаеы. – Мин дә, батракка бата, тип төнәгөн Рәшиттең служагынан эспирт алғайным да, таҙартылмаған микән, ауыҙҙан бырх итеп ҡала. Кәгәһеңме, һалып бирәм, йәшереп кенә сығарам да.

– Ҡуй, юҡты ни...

– Юкты тип, йүнләрәгән дә табам мин. Эшкәлик бар, шуны эскәлик!

– Йә һуң, бик ҡыҫтағаһың, тиҙәрме...

– Төшөрбөҙ кәмәгә, аръяҡҡа сыҡҡан кеше булырбыҙ, – шым әйтелде быныһы.

– Ҡуйсәле... Ул ҡәҙәрем ҡурҡмайыҡ. Үҙ еремдә – үҙ иркемдә, тип йәшәмәгәс...

Фазыл йәһәт кенә ҡуйынына тығып килгән ваҡ алмалар, ялпаҡ шешә менән ҡырсында баштарын йүнәткәндә, ике уҙамандың да әңгәмәһе апаруҡ ҡуйырҙы. Фазыл тегене маҡтай, сходта оло бәләнән – ғәрлектән ҡотҡарҙың, тиһә, быныһы да йүкә шынаһы Фазылға майлаған кеүек һеңә:

– Ғүмер буйы миңә утын-бесән мәсьәләһендә ярҙам иттең, мал һуйыштың, ҡалған ғүмерҙәр ҙә бергәрәк уҙһын... Хәҙер ҡайҙа барып төртөләһең, тә-эк? Өй белешеп, күсеремме тигәйнем райцентрға, бер ҙә аяҡ тартмай.

– Шулай, шулай... Минең дә бер ергә барғым килмәй. Бына һиңә, Фазыл, өс бүлмәле дәү квартир, тиһәләр ҙә, Уфаларҙа ла йәшәмәҫ инем. Һыуҙың һыуын һатып алсәле... Ә бында – эйел дә эс.

– Тәк, тәк... Ғалимдар ҡурҡыта: утыҙ-ҡырҡ йылдан һуң эсергә яраҡлы һыуҙың бөтөүе ихтимал...

– Бәт-тәс, Ҡариҙел дәме? – Фазыл, ғәҙәтенсә, тәмәке төпсөгөн төкөрөклө усында һүндереп, мәтегә ырғытты.

– Кәнишне. Тегенән-бынан быуып, унда-бында алаптай торба аша һурҙырып торһаң, нимәһе ҡалыр тиң? Күр, Бураш та йылдан-йыл ҡорой...

Фазыл упайып тирә-йүнгә ҡаранды ла, балаларса бер ҡатлыланып, баш сайҡаны.

– Утыҙ-ҡырҡ йылдан, аб-ба... Туңҡайып булһа ла тукһанға етер кәрәк. Минекеләр күпйәшәрҙәр нәҫеленән бит.

– Әйткәнең килһен! Алда әллә бар, әллә юҡ ғүмер, тип тә уйлайһың ҡай саҡ.

– Тормоштар арыулана барған кеүек. Әҙләп зарпылата, пинсейә, пособиелар арта. Бураш, әйтәгүр, ҡош-ҡорт аҫырарға зерә йәтеш...

Надирҙың гелән йә ауыл тирәләй, йә урам араһында турысай ҡолонсағын эйәртеп үҙ иркенә йөрөгән ялбыр яллы ҡола бейәһе, ҡыңғыраулы тайы төштө һыулауға. Ҡорҙаштарҙың әңгәмәһе кинәт икенсе юҫыҡҡа боролдо.

– Фу-у, японский городовой, кәк рәс һиңә кәңәшкә килгәйнем, тәк. – Солтан аяҡтарын кирә баҫып, эй ҡараны тай-тулаҡ яғына, эй ҡараны, түш кеҫәһенән күҙлеген алып кейеп ебәрҙе, тауыштары нәҙекләнде хатта. – Малай саҡта һыбай елергә хыяллана торғайным мин.

– Аб-ба, менеп тә ҡараманыңмы?
– Һыбай арлы-бирле юрттырҙым да ул. Йүнләп йылҡы аҫыраманылар бит беҙҙә. Поселок ситендәрәк кенә ике-өс алаша тоттолар.
– Кәңәш, тигәйнең дә?..
– Дә-дә-дә, берәй ат аҫырап ҡараһам, нисек булыр икән?
– Уның нимәһе бар? Алаһың да аҫырайһың, аръяҡтағы Хәлекәй абзый һымаҡ. Ҡолонло бейә бигерәк шәп инде. Ҡолон тиҙ үк ябаға була, шунан тайға әйләнә. Тай, ҡолон итен уфалар эҙләп кенә йөрөй. Урыҫ та һыпыртып ашай, ти, хәҙер йылҡыны. Бейәһен һауып, ҡымыҙ бешеп эсерһең, артығын һатырһың. Так шту, расхутын буйтым ҡаплай был шөғөл. Әбей-һәбейгә утын ташырһың. Һалам урлап һатырһың әле ишеү.
Солтан көләмһөрәп ҡул һелтәне:
– Юк та... Йыуаш ҡына, бәләкәйерәк кенәһе ярар тигәйнем, тәк.
– Ундайы ла бар, әпәт аръяҡта. Теге, элекке завферма һата. Көрән генә айғыр малы. Егергә өйрәтешәм, арба-сана табышам. Шылдыҡ, күп уйлама. – Фазыл кәмә төбөндә яткан ишкәктәрҙе тупаҡ итек башы менән дыңғырлатып ҡуйҙы. – Утыҙ күбәләй бесән кәрәгә, берәй центнер һоло; так шту ат һаламды никак хушһынмай.
Шул саҡ яр башында йыуантаҡ Сара пәйҙә булды. Ҡатын бер килке аҫҡа текләп торҙо, шунан эйәк сөйҙө: ҡайт, әллә эш боҙаһыңмы унда? Фазыл шыбырлабыраҡ:
– «Ревизор» йөрөп ята... – тигән булды.
Өндәшмәне Солтан. Ҡапыл ғына донъя һилләнгәндәй тойолдо, ҡырҡмыш тай муйынындағы зыңғыр ғына тыңҡылдап ала. Ара-тирә ямғыр күҙе төшкөләй. Баҡа балалары ярҙа ырғандай, тимәк, төндә ныҡлап яуыуы ихтимал.
– Тә-әк, бөгөнгә йөрөмәйек. – Солтан күҙлеген бөкләп һалырҙан алда, футляры ҡатлауынан иллелек аҡса сығарып, әле генә ултырған һәндерәгә һалды. – Ямғыр яуырға тора, унан бигерәк, телем тотлоға. Оят булыр олотүздәр алдында.
Ҡорҙашы ҡуҙғалды, артынса Фазыл мыҫҡыллағандай бытылдап ҡалды...
– Тәк, тәк, Палкауадис аҡса ҡалдырҙымы? Правильны делаешь, однакы... Ат тигәс тә, низнай, низнай...
Ҡулдарын артҡа ҡаушарып, элекке уҡытыусы Бураш тамағында йәнә йылҡы малҡайҙарын күҙәтеп торҙо. Ҡайҙан ғына кәңәш һораны. Ат алам тип алмай ҡуйһа, уңайһыҙ буласаҡ бит. Фазылдан бигерәк Сараһының ауыҙында һүҙ тормағанын кем белмәй.
Бисәһе, ана, ни йылмайырға, ни әрләшергә белмәй, ҡапҡала-

рынан сығып ҡалды. Бик тә үҙен ҡыҫымға алһа, «бәйләнмәсе, Солтан гадук сикүшкә тотоп кәңәшкә килгән», тиәсәк Фазыл.

Әлдә бая бөтәһен дә һөйләп торманы Солтан. Ат кәрәк, тигән уйҙы кем һалды һуң әле башына? Хәләле һалды. Эстәрлелә йөрөп ҡайтты Сәйҙә яңыраҡ. Шунда тормошланып, ятаҡтан туйып, бер бүлмәле генә фатир һатып алғандар заводта эшләгән уртансы улы менән килене. Техникумда уҡыған төпсөк улдары Маратҡа барғылап йөрөргә йәтеш. Һөйкөмлө ҡыҙыҡай бар, бишен тултыра. Әлфирә исемле. Тик сирләшкәрәк уныһы. Ташҡа үлсәйем үк түгел, шулай ҙа атлауҙары саҡ ҡына килбәтһеҙ. Йә янтая, йә иңкәйә. Врачтар, имеш, ауылға барһағыҙ, һыбай йөрөтөргә тырышығыҙ, шул һәйбәт дауа, тигәндәрме, белмәҫһең. «Имеш» түгел, бер уйлаһаң. Кемдеке – шуныҡы... Күрәләтә ғәрип ҡыҙсыҡ үҫтереп ятырға ни. Бәлки, ысынлап файҙаһы тейер, бында йәйҙәрен һыбай йөрөһә... Ана шуға кәңәшкә төшөп, шул һылтауҙан ыңғай баш төҙәтергә самалағайны Солтан. Бойомға ашты ниәте, хәҙер килгәндәгенән яйыраҡ ҡайтһа ла ярай.

Әҙәмде әҙәп биҙәй. Надирҙың үрәпсеп йөрөгән тайсығы нимәгә хәжәт уға? Хикмәт унда ла түгел. Хайуандың ғәйебе юҡ та, әммә нисек инде Солтан өндәшмәй генә үҙен дошман күргән намыҫһыҙ бәндәнең тауышына, еҫенә өйрәнгән малды үҙенә эйәләштерһен? Юк-юкта теге суллы ваҡиға ла иҫенә төшәсәк.

...Теге ваҡиға, хәтерләһәң, алама шул, ай, алама. Надир ул осор бик егәрле, булдыҡлы ине. Тора-бара нәфсеһенә, дөрөҫөрәге, тамағына баш булмайса, үҙе бригадир була тороп, араҡы хаҡына баҫыуҙан һалам елгәргәнгә, йәйләүгә барып Хәлфетдин көтөүсегә үҙе үк ташышып йөрөгәнгә, эсеп, кемгәлер ҡул күтәргәнгә вазифаһынан бушатылып, ваҡытлыса ферма мөдире итеп тәғәйенләнде. Шул уҡ көҙҙә йәнә яманаты сыҡты бының. Бәй, Солтандарҙың Алаҡайын ...колхоздың ҡартайған һыйырҙарына ҡушып, ит комбинатына тейәтеп ебәргән. Һой, эҙләне Солтан һыйырын, эҙләне. Ҡыҫҡаһы, ауыл көтөүенән айырылып, колхоз көтөүенә барып ҡушылған Солтан Алаҡайын күрмәмеш тә белмәмеш теге. Бер тоҡомдан булғас, күпселек эре мөгөҙлө мал ала-сола ине элегерәк Бурашта. Тоҡтомалға һуктыбай Надирҙан тағы тукмалған икән – кил дә әйт теге күп балалы, йырға шәп меҫкен көтөүсе – ауыл укытыусыһына: эх-ти, әхүәлдәр шулай әле... Китә ярһып Солтан Надирға. Давай һыйырыңды, ә юк, һыйырыңды бирмә, харам мал кәрәкмәй, уныһын да урлағанһыңдыр әле, тигәс, шарт ҡуя: хаҡын түлә, түләһәң, ғәфү итәм. Һәүетемсә килешәһе урынға, ...Надир, ен алмаштырғандай, әпәйгөрәк кутәрә. Ҡас, Хажиморатыш, юғиһә... Ҡасты Солтан. Тик йыраҡҡа түгел, арьяҡҡа сапты, участковый эргәһенә. Балыҡсылап йөрөгән, уныһы ҡуна ятып, иртәгәһенә саҡ

килде. Тикшереү апарыуҙа һуҙылды, суд менән тамамланды. Аҡҡа төшкәнсе буҡҡа төш: уҡытыусы үҙе лә ялҡып бөттө, ғаризаһын кире ала ғына яҙҙы. Ярай әле, Сания ҡортҡа ниндәйҙер күрһәтмә биргән: күреп ҡалғанмы, танып ҡалғанмы көтөү ҡыуғандарын, Алаҡайҙың көтөү ыңғайына китмәҫкә ҡарышыуын. Надир ҙа законды белә: нимә күрмәҫ иҫәр әбей? Етмәһә, уны электән дошман һанай. Тикшереүселәр әбекәйҙе экспертиза һымағыраҡ комиссиянан үткәрҙеләр. Юҡ, аҡты ҡаранан айыра, ул тиклем үк ауырымай. Ҡыҫҡаһы, аҙаҡҡа табан Надир, тамам һынып, үҙенең ҡырын эшен үҙе фашланы. Солтанды аҡсалата «һыйырлы» иттеләр, ә Надирға ике йыл сәпәнеләр. Ҡыйындыр барыбер, амнистияға эләгеп, йылдан ашыу йөрөп ҡайтты. Колхозда аҙаҡ колхоз тарҡалғансы эшләмәне, бары Динестәге лесхоздың үҙе бөтмәҫ, үҙе бөтәйтмәҫ йомоштарына ғына йөрөштөрә... Шунан бирле бейә аҫырай. Аяҙҙа — арбаһының резина тәгәрмәслеһен, бысраҡта тимер тәгәрмәслеһен егә. Баҡһаң, тартыуға еңел тойолһа ла, резина тәгәрмәслеһе батҡаҡта ауырыраҡ икән. Ҡыш ләжәнкәле санаһы менән һорағандарға утын-бесән ташыша. «Урмандан берәй киҫкә йә берәй ҡосаҡ үлән тейәп ҡайтмаһам, йоҡлай алмайым мин», — тип тә ебәрә. Бураште, ташландығыраҡ ауылда, һаулыҡҡа туймағандар, хатта ғәрип-ғөрәбәләр етерлек. Ә Надир — һаман әүәлге Надир. Юҡ ҡына хаҡҡа емертеп эшләй, емертеп ашай, Почет грамотаһы, премия биргеләйҙәр, ти, хатта. Һайлап-һыйлап кеше менән дә аралаша хәҙер, мәжлескә йөрөштөрә, йомартланып, үҙе мәжлес йыя. Бураштар белеп бөткән: Надир барасаҡ табынға Солтанды саҡырмаҫтар, Солтан булаһы ҡунаҡ-төшөмгә Надирҙы ҡатыштырмаҫтар. Ә-ә, ҡатын-ҡыҙ сәй-мәйенә бисәләре генә бергә буталыша, имеш. Йөрөһөндәр әйҙә. Әлдә өйҙәре бер-береһенә бигүк яҡын түгел. Дүрт аяҡлы ат та абына — элекке уҡытыусы элекке бригадирға һис тә үс, осток та кенә тотмай. Тик кем икәнен белә-күрә, нисек һөйләшмәк кәрәк ул әҙәм менән? Йәше лә бара Надирҙың. Киләһе йәйгә алтмышы тула. Быныһы инде, йәғни тыуған йылы, Солтандың хәтеренә ныҡлап һеңгән. Суд ултырыштарынан...

Ярай әле, Солтан үҙе «выслуга» менән сыҡҡайны пенсияға, мәктәптә өлкән синыфтар ябылғансы эшләп йөрөүе лә килеште, хәҙер инде уҡытырға саҡырһалар ҙа, йөрөмәҫ тыртаңдап көн дә ос саҡрымдағы сирмеш ауылына. Кешегә белдермәһә лә, онон бөтмәй ҙәһә Солтан ниңәлер шуларҙы.

Һай, була торғайны элек аттар! Ана, Солтандарға йәнәш йәшәгән, Надирҙан алдараҡ бригадир булған Ғәләүетдиндең Ерәнсәйе тәүҙә үҙ белдегенә боролоп-боролоп арбаны ҡыйшайтыр ҙа түңкәреп китер ине иҫерек хужаһын өйө алдында, аҙаҡ конюшняға барыр ине: туғарығыҙ, ҡайттым әле...

Баҫыуҙа-маҙар йөрөп килһә, Ғәләү «тр-р-р» тимәһә лә, аты магазин алдына ла туктағылағанын хәтерләй Солтан. Йәнәһе, хужаһына махорка йә аракы кәрәкмәй микән? Алһын әйҙә, ә Ерәнсәй сабыр ғына көтөп торасак. Вәт, Ерәнсәй!

...Колхоздар заманында көсләп ойошторолған. Инде халык күнеккәйне күмәк эшкә – уныһын бөтөрҙөләр. Халык ялкауланды, хатта аҙҙы, хәҙер шәхсән мәнфәғәтен генә кайғыртыусылар күбәйә. Эшкә барымһыҙ йәштәр ишәйә.

Атаһы Хажиморат мәрхүм яраткан дөлдөлөн ниндәй уйҙар менән индергәндер колхоз кәртәһенә коллективлаштырыу осоронда? Эйе, аҙак үҙе урмандан йөкмәнеп утын ташып, тегендәбында йәйәү йөрөгән сағында, үкенгәндер ҙә...

## 4

Светлана спортлагерҙан аҙак йәйге ялын үҙ белдегенә үткәрҙе. Йәм аҙ касабала. Тай-тулак ыңғайына мәҙәниәт йортонда кыйшаңдап һикерәндәр йәштә түгел бит инде. Өй эштәре, көн дә һыу инеү, комда кыҙыныу ҙа ялкыта. Етмәһә, маңкалары кипмәгән малайҙар «кармак һалып» маташа. Улай ҙа хәтергә һеңерлек вакиғалар булғыланы. Мәҫәлән, ғәрип ир караған алыпһатар күршеһе менән Аркайымда аҙна тирәһе иләҫ-миләҫ булып кайттылар. Ундағы Мөхәббәт тауына ысын йәрең – мөхәббәттең етәгендә менһәң икән дә! Данирға шылтыратыу ҙа елгә осто. Ах...

Өйҙә юк ине «башлы» егет! Бәлки, Аркайымға эйәртер ине... Миләүшә Ғәлиевна алды трубканы. Йөрәкһеүҙәнме, әллә ниҙәр һөйләп ташланы әсәкәйе. Светлана хәҙер үҙенә үҙе аптырай: ышанды бит Миләүшә ханым, ышанды. Ай-һай! Сәхнәлә лә килештерер ине, валлаһи. Ә ниңә шылтыратмаҫка? Ниндәй әсә ғәзиз балаһына – үҙенә тиң булмаҫтай кәләш, ниндәй кәйнә үҙенә күпме йәшәре билдәһеҙ сирләшкәне килен итергә теләр? Дөрөҫ, ул да ауыл еренән, әммә ауылы хәтәр ҙур, Светлананан «деревенщина»лык та аңкып тормай. Әйтәгүр, ярайһы заманса касабала тыуып үҫкән. Эш унда ла түгел. Хикмәте – уның евразия, глобализация, капитализм, – кыҫкаһы, егерме беренсе быуат кешеһе рәүешендә формалашыуында. Светлана ниңә көрәшмәҫкә тейеш әле үҙ тиңе, үҙ йәре өсөн? Йәшерен-батырыны юк: теге юлы, йәғни китап артынан Тайсиндар фатирына барып, кабарынкы диван өҫтөндә һыйынышып ултырғанда «Касан үбә инде Данир мине?» тип көтәүелләгәйне. Үбешеүҙән дә ауыҙ бешә, тиһәләр ҙә, үбешеүҙән ярала инде һәммә мөнәсәбәттәр. Аҙак нишләргә белер ине Светлана. Эйе, эйе, үҙе иркәләп, үҙе наҙлап һушын алыр, вәғәҙәһен алыр ине егеттең! Алмаҫлыктыр шул. Уның зифа буй-һынына күптәр ымһына

лаһа! Хатта вуз укытыусылары... Йәш кенә, кейеменә иғтибар итмәгән склероз «башковитый» профессор, хатта... доцент Сулпан Байрасович, мәҫәлән.

Аркайым, Аркайым... Бер сыкканда етеп-күреп ҡайтайык тип, Аркайымдан ҡайтышлай Сыбаркүлгә боролдолар. Унда эшкыуар ҡатынкайҙың үҙе һымак модалы кейем-һалым менән һатыу иткән дуҫтары йәшәй икән. Фу, ҡай бер әйберҙәре үҙҙәре ҡиммәт, үҙҙәре зауыкһыҙ, тип эстән көйәләнде Светлана. Ашап-эсеүҙә, әлбиттә, үтә фәстереп ебәрәләр. Ана шундағы мәжлестә йәнәш ултырған бер «крутой кавалер» уйынлы-ысынлы шыбырланы ҡолағына: «Светочка, «Тойота»мды бирәм. Хакы — натуралата...» Аңламаған ҡайҙа ул, аңланы ҡыҙый, тик юрый аңламамышка һалышты һәм уны-быны һораштырған булды.

— Автоһәүәҫкәрҙәр курсында арлы-бирле шөғөлләнһәң, ике айҙан праваң буласаҡ, — тип тә төшөндөрҙө ҡыҙмаса егет. — Ә рулде борғослай белдеңме, праваны ни... һатып та алаһың.

Юк инде, унының ҡалһа, һатып алмаҫ Светлана, хакын түләр һәм һәүетемсә укып сығыр. Иномаркалы булыр. Шунан... Шунан ни, ултырған да шыуған. Бәлки! Данирҙы ултыртыр... Ә уның кәнде машинаһы юк. Аспирант башы менән.

Машина йөрөтөүе бер ни түгел. Һыу ингәндә, ана, ауылдаш егеттәр, шактай ғына «десятка»ларының рулен тотторол, ҡомло сирәмдә тегеләй-былай йөрөттөрөп тә ҡараныдар Светлананы.

...Светлана ҡупырым эшкыуар сакырған аулак кафела — төн, усак, шешлек, затлы шараптар — трассалағы ҡунакханала төшкә тиклем үк һуҙылып ятманы. Былар бер түшәктә ҡунғандармы, юкмы, унының ла иғтибар итмәне юлдашы — сауҙагәр ҡатынҡай: бары «хәҙерге йәштәр...» тип кенә һығымта яһаны, мәгәр күрше ҡыҙыйҙың беләгендә үҙе затлы, үҙе ҡупшы беләҙекле сәғәт күреп, эстән генә көнләште. Аҙналык сәфәрҙә йүнле-башлы ухажер осраманы «бапак»ка. Шуғамы? Шуғалыр, юғиһә, әйҙә, ҡайтайык, тип өткләнмәҫ тә ине.

Күңелендә өмөт быҫкытып, Светлана августа ук Өфөгә барып ҡайтты. Тауар хәстәрләгән алыпһатар күрше ҡатынкайға ултырып... Ул, ана, ҡыркты ҡыуһа ла, төҫкә уртасарак, кәүҙәгә килбәтһеҙерәк булһа ла, үҙенә апарук кеҫәле, ярайһы акыллы ир-ат күҙ һала. Һыпыртып «иномарка» йөрөтә теге, бакһаң, шуға бәғзе егет-елән упсы ҡыҙыға, имеш. Атаһы Светланаға, ҡыҙым, укып бөтөүеңә бүләк — еңел машина әпирәбеҙ, тине. Ҡыҙыулатырға кәрәк ул оло бүләкте. Водитель танытмаһын алыу хәйерле. Йәнә булмәһен рәтләйһе, парфюмерия буйынса кәсебен яйлаштыраһы, етди генә ике фәндән әсбаптар ҡараштыраһы бар. Әлбиттә, «Данирға юлыкмаммы?» ла тигән уйы ла юк түгел. Кем әйтә, ҡыҙҙар егеттәргә «һунар» ойоштормай тип?

Нисегерәк ойошторалар – телесериалдарҙы ҡара әле! Тормошта ла – аҙым һайын.

...Касабала йәнә ялкыткыс көндәр – таң ата ла кис була. Ә Өфөлә... өмөт бар. Аспирант Данир Тайсин бар!

Рейс автобусында тәмле-татлы уйҙар менән Светлана ҡабат Өфөгә ҡуҙғалды. Дөйөм ятаҡта бер кис ҡунғас, «Данир менән нисек бәйләнешкә инергә инде?» тип баш ватты. Данир уға эҫенеп бармай – быныһы билдәле, нисектер шикләнгән, ятһыраған кеүек. Шул быҙау Лираға мөкиббән ғашиҡ түгелдер ҙә. Тәтәй урынына әҙерәк уйнатыр ҙа – бырғатыр, Светлана ише аҫылыраҡ затҡа ҡыҙығыр. Ата-әсәһе лә башлы кешеләр, заманса әҙәмдәр – тота килеп етешһеҙ донъяла ярты етем үҫкән меҫкен бәрәсте хушһынмаҫтар, ә-ә.... Светлана кейәүгә сыкһа, ана, атаһы, иномарка бүләк итәсәк; әсәһе, моғайын, ипотечный фатирҙың тәүге взносын түләр. Һинең өсөн генә тырышабыҙ, балам, һинең өсөн генә донъя йыябыҙ, тигәне булыр. Ағайы ла ярҙамдан өҙмәҫ. Ни тиһәң дә, банк хеҙмәткәре бит әле. Банкирҙар бер-береһен... Тарта... Төртә...

* * *

Марс Нәбиевич был арала йүтәлләп тора ине, тотто ла бөгәсә эшкә бармаҫҡа булды. Поликлиникаға барып әйләнде – һыу буйы сират. Йәне көйөп ҡайтҡас, эшендәгеләрҙе иҫкәртте: «Врач саҡыртам, өйҙә булам, кәрәкһәм, шылтыратығыҙ». Миләүшә Ғәлиевна ла телефонға йәбеште, ул участковый табибә менән якшы таныш, буғай, – тегеһе килеп тә етте. Бынау эҫелә һыуыҡ алдырғанһығыҙ, тип уколын ҡаҙаны, таблеткалар яҙып бирҙе.

– Бассейнда йөҙгәйнем яңыраҡ, – тигән булды Марс Нәбиевич, аҡланғандай ҙа, маҡтанғандай ҙа. – Әллә шунда һыуыҡ алдырҙым инде.

– Шунда, шунда, – тип раҫланы ҡатыны. – Олоғаяң, төшмә хәҙер һыуыҡ һыуға.

Дөрөҫ әйтә. Шараҡланалыр ҙа хәҙер тәне. Әллә ниҙә бер, элекке дуҫтары саҡырһа ғына бара бассейнға. Элек, теге заводта эшләгәндә, аҙна һайын тиерлек йөрөгәс ни, ярайһы сыныгып алғайны. Һирәкләп Миләүшәне эйәрткеләне, йышыраҡ Данирҙы алыр ине. Йөҙөргә-сумырға һәләте бар ине малайының. Белгәненсә, өс-дүрт стилдә йөҙөргә өйрәткән булды әле уны Марс. Хәҙер Данир ҙа Ҡашҡаҙан тирәһенә генә йөрөштөрә, буғай. Һирәкләп балыҡҡа сыҡкылай, әллә, шунда йөҙмәһә?! Шәп нәмә ул йөҙөү, шәп. Беләкте ныҡыта, үпкәне киңәйтә; тәрәнгә тының бығыр-бығыр урғылып батһаң, баштарың әйләнеп китә, шунан атылып килеп сығаһың яҡтыға – донъя ҡәҙерлерәк, гүзәлерәк тойола шул мәлдәрҙә.

Табибәне кофе эсереп оҙатты ла Миләүшә Ғәлиевна, аптекаға барып әйләнәм, ыңғайҙан магазиндарға һуғылам, тип сығып китте.

– Марс, һиңә берәй нәмә кәрәкмәйме?

Ҡатынына яуап биреү урынына, ире танауын ғына сирҙы. Ә бит элегерәк унының, сигәрит ал, минең марканы беләһең; йә, бер-ике шешә һыра алҡайт, тип ҡалған мәлдәре йыш булғыланы. Үткән эшкә салауат тигәндәй, еңелерәк һулап, хикмәтле халат кейгән Марс Нәбиевич эш бүлмәһенә йүнәлде. Һирәк металдар буйынса мәҡәлә яҙыуын дауам итергә тейеш. Ваҡыт ҡыҫа, ә заказды хатта халыҡ-ара фән донъяһында абруйлы баҫма – Мәскәүҙә нәшер ителгән журнал биргәйне.

Әйләнмәле-һөйәнмәле ултырғысын шылдырғайны ғына, ҡала телефоны зыңғырланы. Һәр кемдең кеҫә телефоны булғанға, дөйөм телефонды берәүгә генә ҡалдырып, ишек төбөндәге тумбаға ҡуйғайнылар. Аппараты Совнарком заманындағы ише алтынһыу ялатылған – Марстың илле йәшенә профком бүләк иткәйне. Данир улы, ҡайһы номерҙан шылтыратҡанын күрһәтә торған аппарат алайыҡ тиһә лә, тыңламаны атаһы. Ғөмүмән, ул телефон аша һөйләшергә, бигерәк тә оҙон-яҫы хәбәр сурытырға әүәҫ түгел. Эшендә, ана, итләс кенә ҡатын өҫтәленә һуйҙайып, телгә бөткән әшнәһе әйтмешләй, яртышар ботлоҡ түштәрен терәп, икешәр ботлоҡ осаларын һоноп ләпелдәшмәһә, күңеле булмай. Әшнәһенең әлеге мәрәкәһен иҫләп күтәрҙе ғалим трубканы. Теге оста үҙ лөғәтендәге йәш кеше, йәш тауыш хәйерле көн теләп өндәшкәс, ғәҙәтенсә, «әү әле, әү» тип тыңларға әҙерләнде. «Йә һуң, кем кәрәк?» Марс Нәбиевичтың, дәрәжәләренә ҡарамай, ят кешеләр менән һин дә мин, күптәнге танышылай күреп, мөмкин тиклем башҡортса һөйләшә торған ғәҙәте бар.

– Данир Марсович кәрәк ине.

– Марсович? О-һо-һо, Марсович?! Өйҙә юҡ та Марсович, – Ғалим тамаҡ ҡырып, тәүҙә көлгәндәй итте, аҙаҡ етдиләнде. – Ниндәй йомош? Бәлки, минең файҙам тейер?

– Мин унан бер китап һорап торорға теләгәйнем. Учебное пособиеһын...

– Әһә-һә. Тимәк, һин студентка, эйеме?

– Эйе, аҙаҡҡы курсҡа барам. Данир менән гимназияла уҡ бер осорҙа уҡығайныҡ.

– Бик хуп, бик хуп. Ә һеҙҙең вузда нанотехнологиянан уҡыталармы? – Марс Нәбиевич ҡыҙҙың ҡайһы вуздан икәнлеген тоҫмаллағайны инде, шуға һынамсылап һөйләште. – Әлегә юҡмы? Дөйөм лекцион ғына мәғлүмәт биреләләр. Һеҙҙеңсә, ниндәй дисциплина һуң нанотехнология?

– Ниндәйҙер үлсәм, шикелле.

– Ах, шул «шикелле-микелле»ләрҙе! Һай йөҙәһегеҙ, иптәш студентка, тимәк, һеҙгә укырға ла укырға әле. Ә... Данир юк әлегә. Төшкә ҡайтыр, моғайын.

– Улайһа, һеҙгә бара торһам, рөхсәтме? – Ҡыҙ шундук өҫтәп ҡуйҙы: – Һеҙҙең квартирҙа булғаным бар минең.

– Шулаймы ни? – Берәүгә лә «ҡуй» тип әйтә белмәй Марс Нәбиевич. – Пажалыста! Тик... килде-киттерәк һорауға яуап бирмәҫһегеҙме?

– Әлләсе... – Светлананы ни, ай-вай, әҙәпле әңгәмәсе тиерһең! – Һорағыҙ, Марс... ағай. Тыңлайым.

– Ниндәйерәк кеше һуң Данир Марсович? Арыу егетме шул?

– Мировой егет! – Булды яуап, аҙ ғына көттөргәс. – Иллә...

– «Иллә»һе бар икән дә! Пажалыста, килегеҙ. Ә юк, тағы... Быныһы аҡыллыраҡ һорау: әйтегеҙ әле, рауза төҫөндәге, йәғни розовый помада модаламы һаман?

– Кемгә нисек... Модала...

– Вәт молодчина! Шуның ише, нанотехнология хәҙер айырыуса модала. «Нано» тигән һүҙ «метрҙың миллиардтан бер өлөшө» тигәнде аңлата. Алтындың нанопорошогы һары булмай, ә нәк рауза төҫөндә була. Тимәк, наноматериалдарҙың перспективаһы ғәләмәт киләсәктә, төшөндөңмө, һеңлекәш?..

Марс Нәбиевич илһамланып, эсенән генә үҙе ятраткан «Юлғотто» йырын көйләй-көйләй ҡабат эш бүлмәһенә йомолдо. Бик теләгәс ни, килеп китһен студентка ҡыҙыҡай. Бәлки, яҙҙан «ҡойроғо» ҡалғандыр – була торған хәл. Күрер, һынар – нисегерәк икән улының ҡыҙҙар һайлау буйынса еҫ-төҫ һиҙеме. Матур, ихлас һөйләшкән кеүек тә, тик... нисектер театр сәхнәһендәге кеүек. Унда артист халҡы күбеһенсә яһалмараҡ, үтә әҙәбиләштерелгән телдә аралаша. Һәр хәлдә, китап юллаған әҙәм балаһы алама холоҡло түгелдер.

«Етте һиңә, старомодный... совнаркомский господин-телефон, ваҡытлы-ваҡытһыҙ шылтырап, маҙаны китәрәһең. Әһ-һә, ғәфү ит, бынау шыйыҡ боржина һымаҡ шнурыңды һурып торайым әле бер аҙға...» Марс шнур осон һурҙы.

«Нанокристаллдар...» Бына уның маяғы, яҙмыш ҡиблаһы, ғалим булараҡ абруйының терәге. Ошо тема буйынса докторлыҡ дәрәжәһе алһа, үлһә лә үкенмәҫ. Диссертацияһын яҡлар алдынан Японияға, яйы сыҡһа, АҠШ-ка барып ҡайтырға иҫәбе юҡ түгел Марс Нәбиевичтың. Бөтәһе лә һәйбәт буласаҡ, бары фәнгә ныҡлап егелергә генә кәрәк. Эшләргә ҡамасаулаусы, мейеңде томалаусы, зиһенде томанлаусы телевизор ғали йәнәптәрен ҡарамаҫ өсөн Миләүшәһенә иртәнсәк үк пультын йәшерергә ҡушҡайны, ҡайҙа әле, йәшергән микән, тип зәхмәтле йәшник тирәһенә күҙ һалып алды. Йәшергән, рәхмәт төшкөрө. Сум эшеңә тиҙерәк, Марс әфәнде, исмаһам, ике-өс бит ғилми

фекереңде теркә ҡағыҙға. Танауыңды тарта-тарта, аулаҡта. Бикләнеп тороп...

Бер сәғәт тә үҙманы, эшен бүлдереп, ҡатыны ҡайтып инде. Яңғыҙы түгел, фырт кейенгән, төҫкә-башҡа зәһәр генә ҡыҙ менән. Хәтһеҙ аҙыҡ-түлек күтәргәндәр, ярҙамсы кеше барҙа типме, уны-быны мул ғына ҡармаған Миләүшәһе. Магазинда осрашҡандар студентка менән. Үҙенә күрә түгел, күстәнәскә затлы ҡаплы кәнфит алып торған ҡыҙ, ҡапыл әйләнеп: «Һаумыһығыҙ, Миләүшә Ғәлиевна...» – тип, ҡабат танытҡан үҙен. Тайсиндарға бергә ҡайтҡандар. Был хаҡта, саҡырылмаған ҡунаҡты – Светикты залға уҙҙырғас, үҙе кухняла әйберҙәрен бушатҡан арала бәйән итте хужабикә иренә.

– Элек бер килгәйне ләһә. Хәтерлә әле, – тине Ғәлиевна. Нәбиевич яурындарын ғына һелкетте.

– Хәтерем насарҙыр... Кейеме супер һымаҡ былай, аҡылын әйтә алмайым.

– Әйтерһең... Үҙең саҡырғанһың бит, шуға...

– Киләм, йомошом бар, тигәс, нисек ҡаршы төшәһең инде? Э-э, ладны ла... Ә Данир Марсович ҡайҙа икән? Вәт так, «Данир Марсович» тип кенә ебәрә туташ беҙҙең малайҙы! – тине Нәбиевич минералка эсеп алған ыңғай.

– Данир Саша күрше менәндер, тегеһе шылтыраткайны иртәнсәк... Нимәгә икәнен аңғартып торманы, ҡабалан-ҡарһалан йыйынды ла йүгерҙе. Төш етеп килә, ҡайтыр хәҙер. Эҙлә һуң мобильныйыңдан.

– Кемгә кәрәк, шул эҙләр. – Нәбиевич ҡулын өйҙәренә килгән ҡыҙ кеше яғына ишараланы. – Тағы әҙерәк яҙышайым, кажется, я в творческом ударе!

Сәғәт ярымдай яҙышҡас, Марс Нәбиевич, иҫенә килгәндәй, ҡапыл аяғүрә баҫты. Бәй, ултырыштары, бил тирәһе ойоған, башы ла ҡайнабыраҡ тора. Шылт иткән дә тауыш ишетелмәй. Сикә тамырҙарын ыуғылап, ғалим тәҙрә эргәһенә яҡынланы. Ә юҡ, кемдер дырылдатып стена тишә, подъезд алдында сүп түйәйҙәр, һеперәләр. Өйҙәме Миләүшәһе? Данири ҡайҙа? Бая бер ҡыҙ күренгәйне түгелме? Супер кейемле, ҡыҙғылт иренле...

Залға уҙғайны, бәй, телевизор ялт-йолт килә, тауышын асмай ғына, ҡатыны сериал ҡарап ултыра.

– Аңлашыламы «немой» кино? – тип һораны Марс.

– Һиңә ҡамасау булмаһын, тигәйнем. Әйҙә, һыуһағанһыңдыр, – тип яуапланы Миләүшә.

– Киттеме ни баяғы... принцесса Диана?

Миләүшә Ғәлиевна көләмһерәне лә йомшаҡ креслонан ҡалҡынды.

– Парикмахер кеүек әйтәһең, эйе, прическаһы «Диана» тип атала. Төҫкә лә шуға оҡшағаныраҡ. Һәйбәт ҡыҙ. Светлана исемле, Дәүләкән тирәһенән...

– Ай-һай... Китап һылтау ғына булғандыр, тим.

– Әлләсе. Сәй эсереп ебәрҙем. Киткеһе килмәй, көтәүләгәндәй итә Данирҙы. Мобильнигының номерын бирҙем аптырағас.

Кухняға ингәнсе туктап-туктап һөйләште Тайсиндар икәүара.

– «Данир Марсович» тигәне мәрәкә әле миңә. Дә-ә, бушка ғына йөрөмәйҙер, бушанып йөрөйҙөр беҙҙең холостяк аспирант.

– Быны нисек аңларға?! – Былай ҙа ҙур күҙҙәре нығырак ақайҙы ханымдың, оялыштан хатта кул усындағы таҫтамалы менән битен капланы. – Әйҙә, кулыңды сай ҙа...

– Биофизиологик караштан аңлау фарыз. Әҙме ни хәҙер секс-бомбалар? – Ванна бүлмәһенән хужа тауышы кайтауаз һымағырак яңғыраны.

– Кит, главный сексолог, аш алдынан... Саша эргәһенә йүгергәйне. Әллә мунсала микән?

– Башын берәй серьезный эшкә тығайык, вәт йүгермәҫ.

Түҙмәне әсә кеше, залға сығып, йәйге куртка кеҫәһенән уска һыймалы телефонын алып килде лә төймәләренә баҫа башланы. Берәмтекләп... Әллә ни йыш һөйләшмәгәс, кеҫә телефоны менән һәләт тотонорға күнегеп бөтә алмай Миләүшә һаман. Мәгәр микрофонын асырға башы етте.

– Данир, һин кайҙа, улым?

– Мин кайтып киләм, биш минуттан... – тине бая ваннанан һаркылған һымағырак гөрөлдәүек тауыш. Аталы-уллының тауыштары окшашырак шул.

– Көтәйек, Марс, сәйҙе өсәүләп эсербеҙ. – Миләүшә өҫтәлгә тағы бер пар сынаяк өҫтәне, уны-быны этештерҙе. – Каты бәрелмә балаға, йәме.

– Һаман «бала», ти! – Нәбиевич, ярһып, кухня стенаһына беркетелгән кескәйерәк телевизорҙы кабыҙҙы: Беслан мәктәбендәге донъяны тетрәткән хәлдәргә арналған тапшырыу бара. – Ана кайҙа ул... балалар. Ғәрлегеңдән ят та үл: бер шарлатан, терророҙа һәләк булған балағыҙҙы терелтәм тип, кайғынан илергән ата-әсәләренән акса йыйған. Оятһыҙ алдакка ышанып, һуңғы аксаларын биреүсе кешеләр табылған. Вәт нисек йәшәйбеҙ бөгөн! Игромания, лоторея, пирамида... Мәскәүҙә тәүлек әйләнәһенә сирек миллионлап – целая армия! – красотка уйнаш менән мәшғүл. Ә иддә? Ә Өфөлә? Так что, Данирҙы...

Тамак ялғаған арала, ата-әсәһе Данирҙан тегене-быны төпсөнһә лә, егет артык сиселмәне. Александр мажараларына ғына өҫтән-мөҫтән аңлатма бирҙе.

– Шылтыраткайны Саша – киттең дә баттың...

– Шурик кисә, хоккей карап кайтышлай, тукталышта һыра эсеп торһа, эргәһенә – стоп ментовка машинаһы. Облава... «Обезьянник»ка ябалар бер көтөү егеттәрҙе. Фараон...

– Фараон... Обезьянник... – тине атаһы, улын ирештергәндәй. – Телеңә блатной сүп-сар ҡуна башлаған түгелме? Шурик-мурик... Ментовка?

Тауышын баҫып, һүҙен тағы ла ҡыҫҡараҡ тотто улы.

– Мобильныйын тикшерһәләр – урланған... Аптырағас, допроста свидетель итеп мине яҙҙырған. Аҡылы еткән, сөнки гаражы эргәһендә бер ят мужик һатып киткәнен күргәйнем. Инәлеп, осһоҙға ғына...

– Урлаған да һатҡан уға теге уғры, – тип һүҙ йомғаҡланы Марс Нәбиевич. – Берәй бәләгә генә ҡалаң, моғайын, гараж тирәһендә.

– Әйтмә лә, атаһы, – тине Миләүшәһе.

– Йә, дальше? – Марс улынан анык яуап көттө.

– Мине саҡырҙы, телефонында бер шылтыратырлыҡ аҡсаһы ҡалған. Башҡаларҙың телефонынан мент... милиционерҙар әллә кемдәренә шылтыратып, зарядкаларын да, аҡсаларын да бөтөргән, ти.

– Шунан?.. – Атаһы түҙҙермәй.

– Барҙым, яҙып бирҙем күргәнемде. Шунан ғына сығарҙылар Сашаны.

– Ингәндә – сиратһыҙ, сыҡҡанда сират икән. – Әсенеп көлгәндәй итте лә Нәбиевич урынынан торҙо, ниҙер уйлағандан һуң, киткән еренән боролоп, улы бүләк иткән хикмәтле халатының йоҡа билбауын ҡымтып, бөйөрөнә таянды.

– Бер аҙна ваҡыт: йә Мәскәүгә китеүеңде ҡыҙыулатаһың, йә берәй ергә преподаватель булып бараһың. Аңлашылдымы?

Аңлашылмаған ҡайҙа ул! «Мәскәүгә китеүеңде» тигәне – Данирҙың атаҡлы Мәскәү университеты аспирантураһына имтихандар бирергә әҙерләнеү. «Берәй ергә» тигәне – сентябрь айында уҡ техник вуздарҙың береһенә үҙе белгән теүәл фәндәрҙән уҡытырға барыу. Вакансиялар бар, уныһы ҡасмаҫ. Әлбиттә, ситтән тороп та аспирантураға урынлашырға йә соискатель булырға мөмкин.

– Өфөлә ҡалам, – тине Данир тәүәккәл генә. Һиҙеп тора: был яуапка әсәһенең йөҙө балҡыулана төштө.

– Смотри, егет һүҙе бер булһын. Конкурска әҙерлән, улайһа – иртәгә үк нефтянойға бараһың, – тип ҡабат эш бүлмәһенә йүнәлде атаһы. – Тамағым йүнәлһә, үҙем дә барам...

Данир Александрҙың хәл-әхүәлдәрен артыҡ сурытманы. Тағы ике-өс тәүлек аслы-туклы тоторҙар ине үҙен, әгәр Данир ярҙамға ашыҡмаһа. «Иң уҫал ментовка» тигән яманатлы район милицияһы эләктергән. Алкаштар, наркомандар араһында ҡаҡ һикелә керпек тә ҡаҡмай төн уҙғара. Данир барғас, һимеҙ битле, ҡабарынҡы ҡорһаҡлы тәфтишсе саҡыртты – конвой алып килде Александрҙы. Бала-сағалай һөйөнөс, ғәйепле йылмайыу яҙылды уның йөҙөнә.

Протоколдар тултырылғас, күҙләштереү бөткәс, капитан үҙ баһаһын белеп кенә:

– Нишләргә инде һеҙҙең менән, ребятки? Урланған әйберҙе һатып алғанға ла статья ҡаралған уголовный кодекста. Кем гарантиялай: үлтереп тә алып киткәндәрҙер берәйһененең телефонын?

5

Миләүшә кухняла килешле генә ҡыланып сынаяҡ йыуырға керешкән Светаны тыйманы, уны-быны һораштырып, эргәһендәрәк өйөрөлдө. Абруйлы, сығышлы ғаиләнән икән. Шулай, әгәр бешергәндә ҡуян ҡаныллай ҡыҙарһа, сәйҙе сығышлы, тиҙәр. «Сығышлы ара» тигәнде лә һирәкләп ишеткәне бар. Зат-аранан йүнле әҙәмдәр сыкһа... Светлананың, оһо, олатайы Хеҙмәт Геройы – данлыҡлы колхозға рәйеслек иткән заманында. Атаһы ла һимматле уҙаман, орден-миҙалдары байтаҡ. Колхоздары хәҙер «миллионер» түгел, иллә әҙәмсә йәшәргә мөмкин икән уларҙың ҡасабаһында. Әсәһе кемдер – талибә лә, Миләүшә лә был хаҡта һүҙ ҡуҙғатманы. Ҡайҙа барырға уйлай сибәркәй диплом алғас? Ноу проблем, имеш: әлүктән, мәҫәлән, халыҡ-ара фирмаға һәйбәт вазифаға ҡоҙалайҙар.

Йыһаз-фәләнен бүтәндәргә күрһәтмәҫ, исмаһам, эстән генә булһа ла ҡупаймаҫ ҡатын-ҡыҙҙы табыуы ауырҙыр донъяла. Әлбиттә, күрһәтер ҡаралтыһы булһа. Әле хужабикәнең Светланаға Мәскәүҙән яңыраҡ Данир алып ҡайтҡан бүләктәрҙе күрһәткеһе килде. Шәп тәһә – ялпылдыҡ ситле йәшел эшләпә һәм ебәк халат. Хикмәтле икән уныһы. Кейәһең – ҡәҙимге сөмҡара халат. Арҡаһында алаптай ауыҙлы аждаһа. Әйләндереп кей – йылҡылдап торған сылт зәңгәр халат. Кеҫәләре лә, яҫы яғалары ла бер сама бит әле. Ҡиммәт тә түгел... Миләүшәнең улы менән маһайып нәмәләрен күрһәтеүен аңлапмы, Светлана тел сыртлатып, эй, һокланды. «Яңыраҡ алғайныҡ, нисек?» – залға ингәс, хужабикә мебель яғына ишараланы. «Бик яҡшы», – тине ҡунаҡ ҡыҙ, «бик» тигәнен көсәнеберәк өҫтәне, буғай. Әгәр дөрөҫ кенәһен әйтергә ҡушһалар, Светлана былай тип баһалар ине: «Был өйҙә ҡаралты күп, затлы, ләкин дизайн, заманса стиль етешмәй. Килен булып төшһәмме... ул саҡта һәммәһе лә о'кэй-супер-модерн-шик буласаҡ». Ә-һә, нисауа ҡәйнә сыҡмаҫсы бынау «консерватив» ҡарашлы апаҡайҙан. Ағаҡай элек коммунист булғандыр. Ҙурайтылған фотола, күр, политбюро ағзаһылай һыны-ҡиәфәте. Хәйер, Светиктың атаһы ла шулайыраҡ заттан.

Һөйләшеп ҡуйғандармы былар? Тиҙҙән Марс Нәбиевич та бүлмәһенән нәҡ баяғы ише, тик киңерәк һәм оҙонораҡ халатта килеп сыҡты.

– Марс Нәбиевич, өҫтәл әҙер, әйҙә...

– Ярай, үҙем генә... Эшегеҙҙә булығыҙ.

«Эшегеҙҙә булығыҙ...» – тинемe? Эйе. Тимәк, үҙ күрә, яҡын күрә Светаны хужа кеше. Ә бына ҡатынының уға исем-шәрифтәре менән өндәшеүе нисектер мәҙәк тә, сәйер ҙә. Марс Нәбиевич... Ҡыҙыҡ, Светаның бер танышы арлы-бирле артистка булып китте лә, бисәһен айырттырыпмы, Марс исемле сәхнә әһеленә – үҙенән йәшкә ике тапҡырға өлкән кешегә кейәүгә сыҡҡас, тегеңә «Марс ағай» тип өндәшеүен һаман ташлай алмай интегә. Үҙ ҡолағы менән ишетте, быйыл яҙ баҡсаларына эйәреп барғанда. Нәк Данир менән Лира – ух шуны! – Ҡашҡаҙанда һыу инеп ҡайтҡандың иртәгәһенә, күңеленә толка таппай юҡ ҡына һылтау табып, Светлана актерҙар ғаиләһенә ингәйне. Ятаҡҡа яҡын йәшәй улары, беҙ баҡсаға йыйынғайныҡ, әйҙә бергә, тип эйәртеп алдылар быны. Килештерә әртис «Марс ағай», Светлананы ҡармаҡлап маташҡан да кеүек.

– Юҡмы һаман Данир? – Марс Нәбиевич ҡатынынан улын белеште.

Миләүшә Ғәлиевна яуап урынына, Света күрмәгән арала, ҡулдарын йәйҙе. Атай кеше уратып-суратып торманы:

– Студенткаға китабын Данир үҙ ҡулы менән бирер, – тине лә кухняға ыңғайланы. Аптыранған хужабикә улының телефонын әйтте, тик ҡыҙ ниңәлер шылтыратманы.

Светлана итәғәтле хушлашып, һөмһөрө ҡойолмай ғына сыҡты Тайсиндарҙан...

Миләүшә кухняға инде. Сәй һемереп ултырған Марс:

– Вкусы бар малайҙың... – тип һөйләнеп ҡуйҙы. Иренең тел төбөн аңғармаған ҡатыны, маҡтай икән, тип көсәнгәндәй йылмайып ризалашты.

– Килмәгән ере юҡ.

– Ҡатын-ҡыҙ Хаҡ тәғәлә биргән ғүмеренең ике йылын көҙгө алдында биҙәнеп-яһанып сарыфлай, тиме... Кейенергә вкусы бар Снегурочканың. Аҡ ҡына салбар... – Ҡатынының кәйефен ҡырып, ире мыҫҡыллы көлөмһөрәне. – Ул салбар, ул итек, ул ҡайыш – все на месте, тимәксе инем.

– Һин инде главный модельер!

– ...Республики, тиң. Элек беҙ былай кейенһәк, стиляга, тип һүгерҙәр ине. И-и, йүнле кейем тәтенеме һуң беҙҙең кеүеккә?

– Эләккәненә эләкте, эләкмәгәненә юҡ. Күпселек бер ишерәк кейенә торғайны. Унификация бәләһе! Бөгөнгөләй үтә байҙар, үтә фәҡирҙәр күҙгә артыҡ бәрелеп барманы. Элек ил өсөн тип йәшәлһә, хәҙер һәр кем үҙе өсөн ҡырталаша.

Ошолай ваҡыт-ваҡыт иҫтәлектәргә бирелеп, фәлсәфәгә сумып алғылай ирле-ҡатынлы Тайсиндар.

* * *

Хәтерләһәң, Данирҙың был көнө уғата тығыҙ, уғата көсөргәнешле уҙҙы.

Милиция бүлегендә яҙма шаһитнамә биреп сыҡҡас, ихатала күршеһен көтәүләгәндә Данир телефонының «ултырған»ын тойҙо һәм быға бик тә көйҙө. Йә, Лира шылтыратһа, һөйләшә алмай ҙаһа. Өйҙәгеләр ҡасмаҫ... Мул ғына аҡса һалып алғайны, бер-бер Александр өсөн штраф-маҙар түләтһәләр тип. Түләтмәнеләр.

— Әйҙә, бик сарсаным, — Александр аҫҡа ҡараған килеш олораҡ урамға ынтылды. — Берәй кафеға инәйек, бурыска — за мой счет.

— Разговорчики! — тине Данир. — Әлегә мин һыйлайым.

Күп тә барманылар, машиналар һарыҡ урынына бәэлдәшеп эркелешкән урам сатына юлыҡтылар. Яҡында ғына асыҡ һауала аулаҡ кафе бар икән. Александрға ике кеше буйтым һыйланырлыҡ аҡса тотторҙо ла Данир, телефон өсөн аҡса түләй торған ерҙе эҙләп, проспектка күтәрелде. Кәрәк нөктәне тиҙ табып, үҙенә лә, Лираға ла мул ғына аҡса һалды. Ҡәнәғәт ҡалды: ҡайҙа барып түләп йөрөһөн ул меҫкен ярты яҡ бер Бурашта? Кәмә яллап сығалыр ҙа, аҙаҡ автобусы — йә йөрөй, йә юҡ.

Кире әйләнде Данир. Кафела музыка уйнай, мөйөштә аквариум бар, телевизор йылт-былт килә. Асығыуы еткәндер — Шуриктың тәрилкәләре лә, һыра шешәләре лә бушағайны. Үҙ порцияларын тегегә шылдырҙы ла Данир утә күренмәле өҫтәл быялаһына терһәкләнеп, һут һемерергә керешге.

Донъяға яңы тыуғандай хис итәлер үҙен Шурик. Әйтерең бармы, ҡараңғы камеранан һуң йәннәт баҡсаһылай кафела, зәпзәңгәр пластмасса креслоға лыпын терәлеп, ҡиммәтле сигарет борҡота-борҡота ҡунаҡ булһынсы! Данир уны тыңлаймы, юҡмы — лығырҙығы сыға, етмәһә.

— Донъяла иң әшәкеһе, минеңсә, кешенең кешене ирекһеҙләүе: сынйырлап ҡуйыуы, йоҙаҡлап ҡуйыуы... Кешелектеңояты юҡтыр — бер халыҡ икенсеһен ҡол итеп тота. Ә мине ун биш сәғәт буйы үҙебеҙҙең менттар һыу менән генә биктә тотто. Наркомандар, алкаштар менән ҡуша яптылар. Сығармаҫтар ине — баш етте. Мобилканы кемдән кем урлағанын үҙең генә асыҡла инде, братан, хәжәте бер тин миңә был телефондың, белгән булһам, урамда ҡулдан алмаҫ, фирмаһынан ғына алыр инем, тим капитанға. Ҡана, яҙайым: «отказываюсь в пользу следствия», тип тә ебәрәм. Теге әҙәмсә һөйләшә башланы. Кәрәкһә, тигән була, эшеңә «был свидетелем...» тигәнерәк яҙыу бирәм.

— Мә һуң, шылтырат фирмаңа. — Данир ҡайһы кеҫәһенәндер телефонын сығарып һондо. Александр уны усында бер аҙ тотто ла кире ҡайтарҙы.

– Оноткканмын шефтың номерын. Ярай, ҡайтышлай инеп, аванс алып, аңлатып китермен. Бөгөн гуляйть тек гуляйть. Мамуля Магнитта йөрөй, тетушка эргәһендә. Сеструхам Наталья өсөн мин бар ни, юк ни... Булмаһам, уға яҡшыраҡ – оло фатир ҡаласаҡ, – шымтайып, эсендә осланы һуңғы фекерен Александр. Юк, йәлләтергә тырышмай, уйҙары менән уртаҡлашырҙан ләпелдәй. – Наталка бик активно миңә разведенка подружкаһын – Варвараны димләй әле: ипотечный фатиры бар, йәмшәйгән иномаркаһы бар, хатта ки биш йәшлек крошкаһы бар. Дәтэпэнан тю-тю бизнесмен мужигы... Жалко, да что поделаешь!

Берәү үлмәй – берәү мандымай... Халыҡ һынамышын иҫенә төшөрҙө Данир, дуҫының «тю-тю» тигәндә бармаҡтарын өҫкә сөйөүен күреп. Наталья, ут күрше була тороп, ҡайҙа икән Шурик энем, тип тә һорашманы Данирҙан.

– Ә минең мобилка шәберәк ине! – тип әрнеүле йылмайҙы Александр берауыҡ тын ултырғас. – Һыуға ла сумырҙым, ҡомға ла күмдем мин уны. Әллә нисәмә генә файҙаландым... Музыка ҡуйҙырғайным.

– Яңыны алырһың, – Данирҙың тауышы етди. – Ун мең тора ундайҙар. Балыҡ тартып сығарғаныңды киноға төшөрһәң дә була. Тағы... Магнитофонлыһы яҡшы.

– О-һо-һо! – Александр көлдө. – Минең ише пролетарийҙың – айлыҡ хеҙмәт хаҡы. Давай, тағы аҡса бир әле, минең иҫәпкә.

Данир көлә-көлә кукиш күрһәтте: «Кабат каталажкаға теләйһеңме?» Тегеләй-былай ҡаранып ултырғас, Шурик ҡаршы стеналағы «450 йыл бергә!» тигән ҙур ғына панноға ымлап, ҡабат инәлде:

– Фараон, давай дуҫлыҡ хаҡына! Һин – башҡорт, мин – рус, икебеҙ ҙә – россиян. Тем более, дорогой, иртәгә ял – поехали куда надо.

Берсә йылмайып, берсә йәмерәйеп, Данир тегегә бер һыра, үҙенә сәй, вафли алып килде. Һы-ы, иртәгә үк барып әйләнергәме Бурашка? Ә Шуриктың бәғерен һаман каталажка мажаралары өйкәй ине. Ерәнһыу ҡыҫҡа сәстәрен һыйпаштырып алғылаған була.

– Да, сезонлы эштә йөрөгән айбартер менән таныштым. Русса алама аңлаша, төпкөл райондан негр һымаҡ бер башҡорт. Икенсегә эләккән. Эскән килеш төндә магазинға ингән – цап быны: пройдемте, ваши документы?.. Алып китәләр ҙә юбилейға төҙөлгән объекттарҙа ун биш тәүлек ер ҡаҙҙыралар, имеш.

– Эскән кеше алдаҡсы була. Туғандарына аҡланыр өсөн уйҙырма был!

– Алдашмағандыр, иртәнсәк иң тәүге итеп саҡырып алдылар үҙен. Эштән ҡурҡмайым да ул, түләмәүҙәре йәнгә тейә, йәнә ашатыуҙары хөрт, ти.

– Хөрт икән, төндә мажара эҙләп йөрөмәһен.

– Менттарҙы яклайһыңмы? Ә һин беләһеңме, Рәсәйҙә, тимәк, беҙҙә лә, силовиктар быуа быуырлык. Ҡырҙан килгән кешеләр аптырай, ти, хатта.

– Тимәк, республиканың силовиктарҙы аҫырарлык хәле бар. – Данир һығымтаны үҙенсә яһаны, Александр йәнә хәтәр хәтирәгә бирелде.

– Да-а, ярым иҫерек садоводты, эй, типкесләне бер молокосос лейтенант – ҡоланы мужичок таш иҙәнгә. Һейеп яткан, бахыр, следователь килеүгә. Ыҫпай ғына штормовкаһын систереп һөрттөрҙөләр иҙәнде...

– Ҡасан күреп өлгөрҙөң бындай ужасниктарҙы? – Данир тороп баҫты, киттек тигәндәй, ултырғысын өҫтәлгә шылдырҙы.

– Конвейер һымак икән дә милиция. Ике-өс следователь, прокуратура дежурныйҙары, берәм-һәрәм сакыртып, братваны сортка булә...

– Етте, юғалткандарҙыр беҙҙе өйҙә.

– Ҡайтайык һуң. Үлтереп йоко баҫа, юғиһә.

Данир менән килешһә лә, һүҙе бөтмәгәйне Александрҙың. Бәүелмәҫкә тырышып урынынан ҡалкынғас, ике ҡулын йәйеп һораны, әйтерһең, Данир уға яуапты усына һалып бирергә тейеш.

– Бына шулай, униформа кейгән Варвараға нисек өйләнмәк кәрәк?

– Өйләнерһең, бәй! – Данир аһ-зарлы лығырҙакка нөктә ҡуйырға ашыкты. Варвара тигәне эске эштәр хеҙмәтендә делопроизводитель – кесе лейтенант, буғай. Яңырак ҡына, торт тотоп, күршеләренең звоногына баҫып тора ине. Шул булғандыр әле. Кокардалы пилоткаһын ҡырын һалып алған, унығы ҡыҙғылтка буялған сәстәрен йәмһеҙләгән дә кеүек. Ә былай итәғәтле, һөймәлекле тойола. Буйға тәпәшерәк, ләкин йомшакай ук түгелдер.

Тышта ямғыр көсәйгән.

Лира ни эш ҡыралыр был мәлдә? Өфөлә ямғыр һибәләһә, беҙҙә ҡоя торған, тигән һынамышы ла бар ҙаһа уның. Яҡшы, иртәгә шылтыратыр әле үҙенә Данир.

Үтеп барыусылар юлайкан ышык эҙләп тә ингеләй кафеға. Бына бер пар – егет менән ҡыҙ пәйҙә булды. Таныш һымактар. Кем әле? Бәй, Лираларҙың һабакташы, хатта уның бүлмәһенә якын йәшәгән егеткәй бит. Акъярҙанмы шул. Бер сак ятакка инеп, ҡыҙ үҙе тыйһа ла, Лираны көтәүләп ары-бире йөрөгәндә, ошо егет бүлмәһенә сакырғайны. «Әйҙә, абзый, группаның буласак кейәүе бит әле һин, ҡыҙҙар магазинға һуғылып ҡайта торған, беҙҙә ултырып тор», – тигәйне, тыңланы «буласак кейәү». Мактансык бер нәмә икән. Һис моңо юк – ҡурай тар-

тып ебәргән булды, аҙаҡ Данирҙан шарап алдырырға маташты. Ризалашыр ҙа ине Данир, коридорҙан хихылдашҡан ҡыҙҙар араһында Лираның баҫалҡы ғына көлөүен абайлап ҡалмаһа. Илле һумлығын йүнләп йыйыштырылмаған койкаға ырғытып һыҙғайны Данир бүлмәнән. Әле нәк шул егет яҡынайҙы эргәһенә. Ике ҡуллап ҡулын ҡыҫа-ҡыҫа, ҡабалан-ҡарһалан, әммә эсбауырға инә яҙып йомошон теҙергә кереште:

– Абзый, каникулдан килдем дә «калым» йүнләп йөрөлә. Киләһе аҙнаға тиклем... ике мең биреп торсо! Үтескә! Алдағы аҙнала ҡайтарып бирәм... Нык кәрәк! – тип мул һөртөнгән ҡыҙыҡай яғына ымланы. Данир үҙенә ҡарағас, һаулыҡ һорашҡан була әле шикандағы.

Сентябрь баштарында былай ҙа вузға барасаҡ Данир. Бүлмәһен белә, үҙем дә инеп алырмын, тип тә, Лираның һабаҡташының үтенесен кире ҡағыу килешмәҫ, тип тә, Данир йоҡа курткаһы кеҫәһенә тығылды. Бар аҡсаһы, бар, Александр өсөн кәрәгеүе ихтимал, тип өйөнән махсус алып сыҡҡайны бишәр йөҙлөктән өс мең тирәһен. Барса болон күрһәтмәй, әле дүртәүһен һурҙы. Теге лә әрһеҙ: тағы берҙе теле менән юхалап, күҙҡарашы менән инәлеп алғас, күрешкәндәгесә ике ҡуллап һаубуллашты ла, тиҙ генә эргәһенә барып, әллә һөйгәнен, әллә һөйәркәһен кафе-барҙың эске залына әйҙәне.

Тышта ямғыр һаман тынмай. Йә, етте һеҙгә, йәй буйы аяҙҙа рәхәтләндегеҙ, тигән һымаҡ, йәнгә тейеп, тигеҙ генә яуыуын белә.

## 6

Лираны күпселек медперсонал, таный һалып, ярайһы ғымлы ҡаршыланы. Бығa һөйөндө әсә кеше – Фәнидә. Ана бит, бәғзе табиптар еңелсә уны-быны һораштырып, ҡәнәғәт кенә сырай менән үҙен йәһәт кенә зәхмәтләләр сафына ҡушмаҡсы.

Дауаханала үҙгәрештәр тойомлана: байтаҡ ремонт яһалған, әле лә яһала, элекке ауырыуҙар һирәгәйгән, яңылары ишәйгән. Аҡ халатлылар араһында ла ятыраҡтар күренештерә. Тәбиғи, бында ла көнитмеш туҡтап тормай.

«Килдең дә ҡабат яттың» тигәнсә үк булманы шул. Тора-бара Лираны танымағандар ҙа табылды. Ҡабул итеүҙәге ерән сәсле дежур – былтыр ғына эш башлаған йәш табип, эйе, үҙеңдеке үҙеңә яу – апаруҡ тупаҫ, имеш. Харап килештерә: быларҙың ауылдан икәнен тоҫмаллап, уны-быны таптырып, тегене-быны асыҡлап, кемлеген күрһәтеп, хатта екеренеп маташты. «Ҡайҙа направление, иптәш больная? Ҡайҙан ҡайтарҙылар? Ҡайҙа элек бында лечитьҫя иткәнегеҙ яҙылған медкарта?» Ултыртты урынына тегене Лира, юрамал үҙе һымаҡ уҫал ғына ы«ҫ»ылдап:

«Һин ҡыҫҡырма, ҡолаҡҡа ҡаты түгел мин, господин врачеватель. Әтеү нервыларым...» Әйтеп бөтмәне, бары тик өҫкө иренен ағарғансы ҡымтыны. Әҙәм йәнле икән егеткәй, ҡыҙарынып ҡуйҙы, баяғыса ауыҙында бутҡа бешерҙе. Лира ятҡан палатаны хеҙмәтләндергән һарыҡай табибә килгәс, оторо йомшарҙы, хатта шаяртып маташты: «Иптәш Кәримова, әлек бында ятҡанығыҙҙы онотайыҡ та, һеҙҙе ыҫвижый паҫиентка итеп... Паҫпыртығыҙ?» Үҙе барыбер ҙә телефонға йәбеште, ҙурыраҡ вазифалағы кемдер менән мәсьәләне яраштырырға тырышты.

Ҡабул итеү бүлмәһе, мөйөшкәрәк һыйынып, эреле-ваҡлы ҡағыҙҙарына тексәйеп ултырған йонсоу ҡиәфәтле бер һаҡалтай ҡартты күҙгә элмәһәң, буш тиерлек. Быяла өлгөләре аша төпкө бүлмәгә ингән-сыҡҡандар яҡшы күренә. Күбеһе – табиптар йә шәфҡәт туташтары. Эргәһенә Лира яҡынлашҡас, әсәһе һукранғандай итте:

– Ниңә улай әрләшәһең врач менән?

– Бәй, ерән шайтан ише, ниңә тауыш күтәрә? – Лира ҡапыл ғына йылмайып, ҡылансыҡлана биреп, икенсе фекергә күсте. – Ә һеҙ, иптәш Хамматовна, юҡты бушҡа ауҙарып йөрөмәһәгеҙ ине: өйҙә Тимурчик көтә, үҙеңде баҫыуҙарың һағына... Ысын, әнкәй, ҡайтып китһәң дә ярай, күрәһең дә: бында мин – үҙ кеше.

Ҡыҙының бәғзе саҡта еңмешләнеүен, ара-тирә кеше менән ҡырыҫыраҡ та һөйләшеүен яҡшы белгән әсә әкрен генә йыйынырға кереште. Ни хәл итәһең, атаһының да холҡо шулайыраҡ ине. Сетерекле мәсьәлә тыуҙыниһә, килешәме-килешмәйме, көлкөгә һабыштырырға тырышты Барыйы.

– Ярай һуң, ярай. Тик машина – төштән һуң... Тәүҙә магазиндарға һуғылабыҙ, тинеләр бит.

– Хәҙер, Григорий дорогой, хәҙер... – Лира кеҫә телефонын сығарғайны, әсәһе тыйҙы, шунан дәү сумкаһын аҡтарғылап, ауыр һулап, ниҙер ҡылырға баҙмағандай мөңгөрҙәне.

– Ҡуй, Лира, йәш семьяның йомоштары барҙыр – «Урожай» остановкаһына килешелгән ваҡытҡа барып көтөрмөн. Черниковкала магазиндар ҡарап, бер ыңғай Өммөгөлсөм инәйеңә хәйер индереп сығайым. Бер бал – һиңә, бер бал – күстәнәскә...

Белә әбейҙе Лира, белә. Элегерәк йәйҙәрен Бурашҡа килгеләй торғайны, һуңғы арала ҡайтыуын ныҡ һирәкләтте. Дәүатайының ике туғанымы, ауыр саҡта бергә үҫкәндәрме. Етмеште уҙған әбекәй иллене ҡыуған ҡыҙы Тәслимә, йәнә ейәнсәре менән иркен фатирҙа донъя көтә. Ейәнсәренең исеме Шәүрә, буғай, уныһы Лиранан өлкәнме, кесерәкме, – әсәһенең хәбәренә артыҡ диҡҡәт бирмәне...

Хәҙер бөтөнләй ят палатаға, ят табиптар ҡулына эләкте Кәримова. Урынлашып бөткәс тә, мөштөм уйҙарға бирелеп, бер

аҙ йөрөп әйләнде. Бөтәһе лә өр-яңынан башлана. Анализдар, процедуралар. Биҙрәткес таблеткалар, алйыткыс уколдар... Улары, ярай, баштан үткән, тәне бешеккән. Керешерҙәр инде ҡабат төпсөнөргә. Ҡайҙа, ҡасан, нисек тарының сиргә?

Йәтеш итте әле әсәһен иртәрәк ебәреп... Данир ни менән мәшғүл икән? Шылтыратырғамы? Эй ҙә... Үҙе шылтыратыр әле, «сеанс» мәле еткәс. Оҙаҡка һуҙылған ауырыу үҙенең тәкәтен ҡорота икән, башҡаларҙың һарыуын ҡайнатмай тиһеңме? Лира егетен ҡыҙыҡ итергә булды: шылтыратһа, ауылдан һөйләшәм, тиер. Мәҙәк булһын әйҙә. Көлөшөрҙәр аҙаҡ. «Тубик»тарға ла көлөү файҙалы, тип яҙған, ана, япон ғалимы бер журналда.

Бына-бына семестр башланыр. Их, сентябрь урталарына, исмаһам, аҙаҡтарына һауығып, ошо стационар ҡоршауынан имен-аман ҡотола алһа, һәүетемсә генә уҡып алыр ҙа китер. Үҙенә ышана ҡыҙый, һынатмаҫ. Бишенсе курс, әлбиттә, — бишенсе артылыш, бейегерәк тау, әммә буй етмәҫлек үрҙәре юҡ та кеүек, сөнки бер ынтылаһы ғына ҡалған. Күп йүгерҙегеҙ, һыуынып алығыҙ тигәндәй, практик занятиелар ҙа муйындан буласаҡ.

Уҡыуҙар башланыр... Анау салбары мәңге үтекһеҙ, дорфа телле йәшерәк, маҡтансығыраҡ профессорҙың лекциялары байтаҡ тәүге семестрҙа. «Ә ҡайҙа Кәримова?» — тиер әле, моғайын. Сөнки апаруҡ таный Лираны. Коридорҙа осратып, Чехияны «сэ-шэ-а (США)» тип яҙа-йоҙа ишетеүенсә, аңын-тоңон айырмай, Американа юллана типтерме, ике-өс әхирәте алдында аҡыл өйрәтеп торҙо. «Йәшәү өсөн иң комфорт дәүләт — Швейцария ул, ҡыҙҙар. Күрмәгәндең — күргеһе, күргәндең ҡоҫҡоһо килә, тигән һымаҡ, нимәгә ынтылаһығыҙҙыр АҠШ-ка? Иң һимеҙ, иң йәмһеҙ, иң паразит, иң ҡупыҡ, иң псих, иң ошаҡсы, иң сексуаль, иң наркоман кешеләр ҡайҙа йәшәй? Әлбиттә, унда фән ныҡ үҫешкән, сөнки улар донъялағы иң камил технологияларҙы, иң аҡыллы баштарҙы һатып ала ла, шуларҙы эшкә егә, шуларҙан табыш ала. Һинеке кеүек йәшкелт, минеке ише ҡуңыр күҙеләр кәрәкмәй американдарға, ә зәңгәр күҙҙәр кәрәк. Ни өсөн? Сөнки... Лира Кәримова кеүек йәшкелт күҙеләр бәхетле, ә зәңгәр күҙеләр аҡыллыраҡ була... — Шулай оҙон-оҙаҡ ләпелдәгәс, көлөп ҡуйған булды аҙаҡ. — Ярай, Кәримова, тимәк, һин бәхетле. Тик берәй негрға сығып, бөтөнләйгә ҡалып ҡуйма, йәме». Һсынлаймы, шаяртамы — белмәҫһең. Һәр хәлдә, ул куратор булған төркөмдән бер һәйбәт кенә уҡыған талибәнең былтырҙарымы, элекке йылмы АҠШ-ка киткән еренән ҡайтмай, тормошҡа сығып ҡалыуы, ифрат төшөмлө эшкә урынлашып, хәҙер ата-әсәһен «долларға күмеүе» хаҡында юҡ-бар хәбәр таралғайны таралыуын. Шуға ләпелдәгәндер профессор, бәлки,

ректоратта шелтә лә эләккәндер үҙенә. Һәр хәлдә, Лираның: «Юк, АҠШ-ҡа түгел, Чехияға барам», — тиеүенә: «Бар, ләкин ҡайтырға онотма», — тип көләмһерәүендә лә шуның шойҡаны ятҡандыр.

* * *

Өфөнән төш уҙыуға ҡуҙғалып, борамда катерҙы оҙаҡ көтәүләмәй, йылғаны йәһәт кенә аша сыҡҡанғамы, Сасынға сәғәт дүрттәрҙә үк ҡайтып инделәр. Гриша туй күлдәге һалынған ҡатырға ҡумтаны ҡултығына ҡыҫтырған кәләшен илтергә, унан бигерәк ҡалала йыйған хәтһеҙ әйберҙәрен бушатырға өйөнә боролдо, ә Фәнидә идара бинаһындағы эш бүлмәһенә инде. Ауыры беленмәһә лә, Гришаның буласаҡ хәләле тыуасаҡ сабыйы өсөн дә ул-был сепрәк алғанға оҡшай. Тимәк... Хәҙерге йәштәр ни, аптырамай инде. Туйҙары киләһе аҙнала ҡыҙ ауылында уҙғарыла, имеш. Гриша саҡырғайны ла, йөрөмәҫ Фәнидә. Бүләккә... Тыуаһы бәпәйҙәренә башлыҡ йә башалтай бәйләй һалыр.

Гриша әйләнеп килгәс тә Фәнидә Бурашка ашыҡманы, икәүләшеп ураҡ, малсылыҡ буйынса ағымдағы отчеттарын ҡараштырҙылар. Баҫыуҙарҙы айҡап ҡайтҡан Николай Тимерәйевич йә үҙе инеп сыҡты, йә берәм-һәрәм саҡыртып алды. Кәйефе эшлекле, күңеле көр кеүек. Хатта Лираның хәлдәрен белешергә лә форсат тапты. Фәнидә үҙ белдегенә ҡыҙының хәлен, шәбәйеүгә бара, тигәс, теге хатта «бирсен Худай» тип тә ыскындырҙы.

Кооператив рәйесе махсус саҡыртҡандырмы, ярым ҡыҫыҡ тәҙрә аша идара алдына тырылдап мотоцикл килеп туҡтағаны ишетелде. Умартасы икән. Татлы бал ялау менәнме ни, үҙе сәсеп үҫтергән әсе тәмәкегә ҡарлыҡҡан тауышы менән кемдәндер белеште: «Иванай үҙендәме?» Ыңғай яуап алыу менән, эшем әйәһеләй саңлы куртҡаһын сисеп, люлькаһына һалды ла һәңгәҙәп аҙымлап, күлдәксән генә килеп инде. Бының сәләмен дә йүнләп алмай, Фәнидәгә ултырырға ишаралап, мин кемдән кәм тигәндәй, Николай фырт тумбаға ҡуйылған компьютер экранына ара-тирә текәлеп, быны ҡыҫмаҡларға кереште.

— Кисә глава үткәргән кәңәшмәнән битем һинең танауың һымаҡ ҡыҙарып ҡайтты әле, товарищ Файрушин. Аҡшиҙеләр һәр күстән иллешәр килограмм нектар һурҙырғанда, һинең продукцияң умарталыҡ сығымдарын көскә ҡаплай. Ҡасан доход бирер пасекаң? Эшләүеңә нисәмә йыл... Бер үк район, йә?!

Аштырыбыраҡ һөйләһә лә, бәйләнеүе ғәҙел ине хужаның. Меҫкенләнеп, әйткән бер һүҙгә «дә-дә»ләп ултырғас, Файрушин аҡланып маташты.

– Район бер ҙә, ере бүтән шул. Беҙҙә – оло йылға, күлдәр күп, тегендә – йүкәле урман, болондары ҡалҡыуҙа...

– Плохому танцору... – Рәйес әйтеп бөтөрмәне, мәлендә тыйылды. – Давай әреғорт булмайыҡ!

Ирекһеҙҙән ете-һигеҙ йыл элек әлеге умарталыҡта колхоз рәйесе менән була яҙған мажараны хәтерләп, кооперативтың баш белгесе Фәнидә тәүҙә ытырғана биреп ҡуйғайны, шунан ҡапыл ғына тыуған яғын хәтерләне. Шул төйәктә ләһә элегерәк шифалы балды мул биргән эре-эре умарталыҡтар. Күрше районлыҡылар ҡупшы ҡалайға тултырылған «Башҡорт балы» өсөн алтын миҙал яулап, байтаҡ йылдар донъя шаулатҡайны. Бәй, Тимерәйевич ниңә ҡараҫҡы һымаҡ һөйәп ҡуйҙы әле үҙен? Ибәтәйһеҙ, яй ҡыбырлаусы, хәмер ҡоям тиһәләр, ҡуй тимәгән мужикты нисегерәк битәрләүенә шаһит булһын өсөнмө? Уға тиҙерәк ысҡынырға кәрәк: Тимуры йөрөй ҡарауһыҙ, көтөү ҡайтырына ла күп ваҡыт ҡалмай. Рәйестең «...Хамматовна» тип һүҙ ҡыҫтырыуы Фәнидәне айнытып ебәрҙе. Ҡай аралалыр бүлмәгә Григорий, баш бухгалтер менән экономист, плановик ҡатындар инеп тулған. Күҙ төптәренә күкшел буяу яҡҡан секретарша әңгәмәнең айышын теркәп ултырған була.

– Әле әйткәнемсә, «Аҡшиҙе» сельхозпредприятиеһы – Хамматовнаның тыуған ауылында. Машина бирәм, барығыҙ бушыраҡ арала – арзаныраҡтан утыҙ-ҡырҡ, даже илле күс дадан һайлап алығыҙ. Амантаев менән килешелгән. Иҫәп-хисаптар, договор варианттары аҙна эсендә әҙер булһын. По коням!

«Сасын» кооперативы рәйесе бына ошолай уйламағанда «пятиминутка» уҙғарырға ярата. «По коням!» тигәне, билдәле, таралығыҙ, унан бигерәк, хәҙерҙән эшкә тотоноғоҙ, тиеүе. Амантаевмы? «Аҡшиҙе» СПК-һы директоры ул, ә-һә, беләме әллә суҡынмыш Иванай уның Фәнидәгә ҡәрҙәш икәнлеген. Беләләр, район хакимиәте былтыр Сасында малсылыҡ буйынса күсмә семинар уҙғарғайны, шунда ике туған ҡустыһы Амантаев, мин мин әле тип тормай, Фәнидәләргә машинаһын махсус бороп, хәл белешеп, сәй-мәй эсеп сыҡҡайны. Ҡорт күстәрен һайлағанда аҡшиҙеләр сасындарҙы һемәйтеп ташламаһын тип тә Фәниdәнең ауылын телгә алғандыр бая Тимерәйевич, кем белә?

Григорий ихатала машинаһын ҡыҙҙырғансы, Фәнидә эш телефонынан Өфөнө йыйҙы. Лираның тауышында ул-был һиҙелмәне, һәйбәтләп бүтән палатаға урынлашҡан, шуға арыуын да һиҙмәй әсә кеше «Нива» яғына талпынды. Иҫенә төштө: аб-ба, ике ауыҙға бынау ат башындай ҡарбузды нисек йыпырмаҡ кәрәк? «Алгачтин, зо-ордан алиң, апакай, менә, тәмнәп кара – телеңне жота күрмә», – тип тә арбаны шул көндө Шаҡшаға етәрәк юл буйында ҡауын-ҡарбуз менән һатыу иткән мыйыҡлы үзбәк. Гришаның кәләшенә маҡтап-маҡтап ҡуш йоҙроҡтай

ҡауын үлсәне аҙаҡ. Ай-бай, ҡиммәт уныһы. Хәҙер бысаҡ йә бәке йүнләп, Гришанан уртаға телдереп, ярты ҡарбуҙын бухгалтерия бүлмәһенә индереү фарыҙ Фәнидәгә. Томра кистә һыуһынға танһыҡ таһа ҡыҙғылт һутлы Фирғәнә күстәнәсе. Тимерәйевичты һыйлайыҡ, тип һөйөнөшөп ҡалыр әхирәттәре. Бигерәк тә секретарша. Быйтанлап киткеләй түгелме шул хужа алдында? Ләкин Фәнидә уйынан тиҙ дүнде. Һуңғы осор идаралағылар уның менән мөкиббән аралашмаҫҡа тырышҡан кеүексе. Уҙған аҙнала экономистың тыуған көнө уңайынан төшкө сәй-мәйгә барып әйләнделәр. Дөрөҫ, Фәнидә – баҫыуға, ыңғайҙан өйөнә ашыға ине. Мәгәр ныҡлабыраҡ әйтһә, инәлтмәҫ тә ине. Ниңә килмәнең инде, күңелле ултырҙыҡ, тип тә иҫләмәнеләр бит әле аҙаҡ. Тимәк, сәбәп икенселә. Шикләнәләрҙер, ситһенәләрҙер – ауырыу ҡыҙынан үҙҙәренә лә зәхмәт йоҡтороп ҡуймаһын, тиҙәрме? Әллә инде, әллә... Их, бында китек күңел менән йөрөгәнсе, берәй аҡсалы кеше табып, элекке колхоз ҡоралдарын ямаштырып, ферма-маҙар асып ебәргәндә, үҙе лә бөтәйер, Бурашка ла ҡот өҫтәлер ине, исмаһам.

* * *

Иртәгәһенә ырҙын табағында, яҡындағы баҫыуҙа уңыштарҙы тикшереп, аҙналыҡ отчетын тултырғас, Фәнидә өйөнә көндәгенән иртәрәк ҡайтты. Йәйәүләп.

Ишектә – йоҙаҡ, тимәк, Тимур шылған. Самокаты ла күренмәй. Елғыуарлана, әллә ҡайҙарҙа баш бирмәйерәк хәрәпселәй...

Терпе тотто микән – әйтмәй үҙе. Бына быхылдап ҡайтып инде лә, һыуыткыстан алып, мышылдап ҡарбуз киҫеменә йомолдо. Әсәһе сәй яһап та өлгөрмәне.

– Әнкәй, Биргадир урамына «Газель» килде... Төрлө әйбер һата, кәнфите бар.

– Килгәндер. Күп хәҙер передвижной ҡыҙҡтартмасылар.

Фәнидәнең күҙе яҙҙан бирле яғылмаған мейес плитәһендәге ҡалай һауытка төштө. Ҡайһылай ҡупшы, ялтырап тора, малайы һыу йә һут алып эскәндер Лосмандарҙың кибетенән. Икмәктоҙлоҡ аҡса ҡалдырғылай ҙа үҙе улына. Ни ғәләмәт, «Ярпиво» тип яҙылған банка тышына! Шартлар хәлгә етте әсә кеше, аңҡауына һөйәк ҡаҙалғандай, ыҡыҡланды, ахырҙа, алъяпкыс осо менән күҙен һөрткөләп, түрбаштағы һөйәнмәһеҙ яҫы ултырғысты өйрөлтөп-сөйрөлтөп һыңҡылданы.

– Пивы тәмләй башланыңмы ошо йәштән? Вәт әткәйенең аҡыллы малайы! Мәктәпкә тотоп апарам үҙеңде иртәгә пивың менән! Бер йотомдан алкаш ярала.

«Аҡыллы малайы» тип әйтеүенең дә әтнәкәһе бар, бер уйлаһаң. Барыйы ике йәшлек Тимурҙы: «Матур-ур малай, ай матур ма-лай!» – тип һөйгәнендә, Фәнидә тыйып ҡуйғайны. Берәй ырым-маҙар иҫенә төшкәндерме, белмәҫһең. «Матур тип әйтмә, аҡыллы тип әйтһәң ярай...» Шунан ҡалған, хәҙер өйҙә үтә һирәк яңғыраған һүҙ инде. «Әткәһенең аҡыллы малайы» юғалып ҡалманы:

– Һуң, әнкәй, «безалкогольный» ҙа?! Бына, уҡып ҡара, – тине, йылмайырға тырышып.

– Булһа ни. Насар ғәҙәт шунан башлана. – Фәнидә ҡарбуз телеменән бер семтем ауыҙ итте. – Әсемәгән икән әле. Иптәштәреңә ашаттыңмы һуң? – Улының эйәк ҡаҡҡанын күргәс, һыуыткысты асып, Тимуры менән кәңәшләшкәндәй һөйләнде. – Көтөү ҡайтҡансы Сания инәкәсеңә барып әйләнһәм, сауап булыр, шәт.

«Газель» килгән... Бәлки, берәй нәмәһе оҡшар тип тә, кәртә артлап күстәнәсле сумкаһын тотоп, Биргадир урамына туранан һуктырҙы Фәнидә.

Борон ауыл ултырышы Бураш буйында, өҫтәрәк булған, тиҙәр. Туғайға яҙҙарын ташҡын баҫмай башлағас, колхозлашыу йылдарында ғына күсенә башлағандар. Улай ҙа яҡынса ун йыл араһында Ҡариҙелдән һыу сыға, ике-өс көн хатта тубыҡҡа еткән саҡтары булғылай. Хәҙер яңы өй һалған кеше бик-бик һирәк. Зыярат яғы үҙәк буйында, ана, унлап йорт-ҡура күренә. Тәҙрәләре, ҡапҡалары буяулы булыу менәнме ни, барыһы ла иҫке, ергә һеңешә барғандай. Әбекәйҙеке айырата ҡаҡшаған. Ултыра, ана, соланында байып барған ҡояшҡа ҡыҙынып. Хәтере насарайғанмы, йоҡомһорағанмы, Фәнидә үҙен көскә танытты. Барыйҙың ҡатыны, тигәс кенә уяуланды әбекәй. «Ә-ә, арыу әҙәм ине, йәшләй әрәм иттеләр...» Тимәк, бынан тиҫтә йылдар элеккене яҡшы хәтерләй, унан һуңғы ваҡиғаларҙы йүнләп абайламай, тигәндәре хаҡтыр. Төҫө-сырайына ҡарағанда, «туҡһанды ҡыуа» тиеүҙәре лә шикләндермәй. Боҙоҡ телле әҙәмдәр уның хаҡында «Ҫантыя» йә «Һаныя» тип тә ебәргеләй, йәнәһе, һантый ул, аҡылға бер төрлөрәк. Утһыҙ төтөн сыҡмай: элегерәк берәйһе менән әрләшһә, колхоздың бағана радиоһы менән бутай торғайнылар хатта.

– Әрәм иттеләр, тиһең, инәкәй, әллә берәй хәбәр ишеткәйнеңме?

– Ишетмәнем, уйлап ҡына ҡуйғайным. Барый инеме ни һыуға батыр кеше! Балыҡта йә һунарҙа, был – беҙҙең диләнкә, темеҫкенеп йөрөмә, тип эскән баштан атты-китте быркан-йырҙар. Һәр хәлдә, шул осор өс-дүрт мужик кәтерҙә бер түбән, бер үргә зыйлата ине. Култөбәк буйынан кешеләрҙе өркөтөп ҡайтарғылағандар, ти. – Әбекәй ялпаҡ ҡарбуз төштәрен ситкә

һалып, көйшәнеп ултырған еренән ҡапыл икенсе хәбәргә күсте. – Сара ауырып ятамы бер-бер? Был арала килгәне юҡ ниңәлер. Һөт, ҡаймаҡ ташый торғайны. Аҡсам бар... Пенсиәм етә, яңғыҙ ауыҙға ни. Әйт әле, килгеләһен.

– Ярай, – тине Фәнидә ышаныслыҙ ғына. «Тимәк, Расбиска Сара аҡсаға ташый аҙыҡты. Бушлай ярҙам итәбеҙ, тигән була үҙе, фәрештәләй ҡыланып...»

– Арыу кешеләр ине ҡайны-ҡәйнәң... Йәшәрлектәре бар ине лә, иртәрәк юлландылар... Әйттем микән, юҡ микән, белмәйем. Элек әле, Горбаш заманында, – бутала әбекәй, Горбачев заманынан ун ете йыл уҙҙы, буғай, – минең бынау келәттә йылы, аулаҡ тип, биш-алты абышка кәрт һуға торғайны ҡыштарын. Аҡса һалып, йәшенеберәк уйнар инеләр. Аралаш эсеп тә ебәрәләр, минән көмөшкә ташытып. Ҡолаҡҡынам ҡарп бер мәл: бығыр-мығыр Барыйҙың үлгәнен ҡыҫтырҙылар. Шунда ҡырҙан килгән, ҡырҙан тип, Динестән бер сирмеш: Барыйҙың кәмәһе дарҫлап катерға бәрелә. Ямғыр яуа, кәмәлә Барый йоҡомһорап килә була. Барый имгәнеп һыуға бата, ти. Юрыймы, ысынмы, этем белһен. Үлер сағында баселоктан бер мужик ошо хаҡта һөйләнеп ятҡан, имеш. Признауать итһәм, үҙемде ултыртып ҡуйырҙар, тип ҡурҡҡан, йәнәһе. Шунда йә ҡотҡарып, йә мәйетен ярға сығарһасы...

Барыйҙың һәләкәтенә ҡағылышлы байтаҡ имеш-мимештәр, уйҙырмалар ишеткеләне Фәнидә, әммә әлегеһе нисектер шаңҡыткыс вә ышандырғыс ине, һәм уға ирекһеҙҙән нисәмә йылдар интектергән һорауға яуап табылғандай тойолдо. Тәүге тапҡыр ишетеүгә ҡарамаҫтан, ҡарсыҡтың күңеле булһын өсөн: «Эйе, эйе... Ҡайтайым әле...» – тип шыбырланы. Ҡолағы насар, мәгәр кеше хәбәрен ирендәре ҡыбырлауҙан яҙлыҡмай «уҡый» белгән әбей ҙә болоҡһоно.

– Ҡороған ағаска ҡош ҡунмаҫ... Миңә хәҙер кеше һирәк инә. Туған да бит – күршене үҙем артыҡ эйәләштермәйем. Ярҙамсыл да бит, түлке ҡулы тик тормай ҡәһәр һукмағырҙың. Күрҙем бер: күкәй йыйып йөрөй. Уның өсөн оялып, өндәшмәнем дә. Ҡыш сиңнектән алғы бот һум итем ғәйеп булды. Кешенән берәй нәмә эшләтһәм тип әсе-мәсе алдырам запаска – юғала, эт менән дә таба алмаҫһың. Беҙҙең нәҫел оҙон ғүмерле шул, ни хәл итәһең. Оҙаҡ йәшәһәң дә ҡыйын...

Һиҙә Фәнидә әллә ҡасанғы уғры хаҡында һүҙ барғанын. Рәшиттәр өйөнәнме? Ҡуй, тотолмаған – бур түгел, гонаһ алмаһын әле тоҡтомалға. Килһәң дә ҡыйын әбейгә, килмәһәң дә. «Ҡороған ағаска ҡош ҡунмаҫ...» Иҫәр тип ҡара шундай тос мәҡәлде иҫендә тотҡан Хоҙай бәндәһенә.

– Әлегә хуш, Сания түтәй, иҫән-һау тор. Көтөү ҡайта – мин дә ҡайтам.

– Иртә алып ҡайталар хәҙер көтөүҙе. Мин улайтмай торғайным. Ярай һуң, кустәнәсеңә, хәл белешеүеңә рәхмәт. Һауыҡһын инде ҡыҙыҡайың, берүк. Эх, Мина әбей булһа, тиҙ үк шәбәйтер ине. Шәп ине им-томға бахырҡай.

Яманһыу хәтирәләргә бирелеп сыҡты донъяһы эстән дә, тыштан да таушалған йорттан Фәнидә. Мина әбей... Бәй, Николайҙың әсәһен әйтәме? Им-томға маһир ине, тип иҫләй уны хәҙер бураштар. «Үлгән һыйыр һөтлө була инде ул» тигәнерәк һынамыш та йылт итеп ҡалды ҡырындағы һукмаҡтан йүгерәатлай урләскә тартылған тол ҡатын зиһененән. Йә, Сания ҡортҡа һымаҡ,. Фәнидә лә яңғыҙ-яры ҡартайыр микән ни бынау һүнә барған ауылда? Нимә тота уны? Барыйының иҫтәлегеме? Амантаев та, ана, теге юлы аулаҡлап сәй-мәй эскәндә: «Кайтаһыңмы әллә, апай, үҙебеҙгә, эш-көш табылыр, холостяктар ҙа муйындан», – тип ипле генә күңеленә ойотҡо һалғайны.

Сания әбекәй һөйләгәнсәрәк харап булманы микән Барый меҫкенкәйе, йә Хоҙай... Әбекәйҙә экстрасенслыҡ көҙрәте уянамы әллә ҡартайғанда?..

Бер аҙҙан артынса гармун быҫҡылдағаны ҡолағына салынды. Рәшит уйнаштыра торған әҙерәк. Иҫеректең көйө лә иҫерек... Ярай, иртәгәләрҙә тетмәһен тетер, барыбер әле «Газель» тигәндәре күренмәй. Служагы тиме? Осратһа, унышының да кәрәген бирер. Табылған торғаш! Ниңә бында маңҡаһы кипмәгән малайына һыра тотторалар? Хәмерле ни, хәмерһеҙ ни, исеме ямаҡай ҙаһа! Барыбер ҙә саҡ-саҡ градусы була торған мал һыҡраһы кеүек күпереп торған әҙәм әүрәткес нәҫтәкәйҙә.

Верандаһы тәҙрәһенән хәҙер лесхозда эшләп йөрөгән Надирҙың киң арҡаһы яҙа-йоҙа күренеп ҡалды. Ҡорған ҡайырылыуын күҙенең сите менән генә саҡ-саҡ шәйләне лә Фәнидә, бер-бер ҡайырылып ҡарамаҫ өсөн, аяҡ осона ҡарап атлауын белде. Бына кем ысын бур! Солтан һыйырына айыу майы һөрткән өсөн төрмәлә йөрөп ҡайтҡан Надир ҙаһа. Элекке бригадир. Судтан һуң йыуынып, йыйынып китәм, ҡасмайым, тигән – кем тыңлаһын инде. Генералдарҙы ла суп шайы күрмәй ареска алған саҡтар ине бит. Үҙенә һиҙҙермәһә лә, һис тә генә һөйһөнмәй уны Фәнидә. Уғрылығы өсөн генә түгел.

...Бынһы ысынлап Горбаш илгә баш сағында булды. Туңға һөрөүҙе беренсе тамамланығыҙ тип, Бураш механизаторҙарына колхоз арлы-бирле премия яҙған, район вымпелмы биргән булды. Өҫтәүенә, Надир механизаторҙар өсөн йәш суска ите, ике литр араҡы теләнселәгән. Бирҙертә председатель. Әйҙә, аяғөҫтө генә инеш буйында кәгәйек, тигән Надир трактористарға. Зыяраттан бире әрәмәлектә шешлек өтәйек, тигән береһе ҡуштанланып. Тыңламай ҡара! Икенсеһе әйткән: кәләштәрҙе апсығайыҡ, закуска әпкилерҙәр... Өсөнсөһө, сәй ҡайнатабыҙ, ҡоромло дәү биҙрәм бар минең, тип йөпләгән. Гармунды йә бәләкәс ба-

янымды алам, тимәһенме Барый. Ҡыҫҡаһы, Бураш ярлауындағы эрәмәлектә табын ҡорҙолар. Бишме, алтымы ғаилә. Күңелле, дәртле саҡ, утыҙар-ҡырҡар йәшлек кенәләр бит. Ҡатындарҙың күбеһе ҡыяр, ҡорот, ҡаймаҡ, ҡоймаҡ тотоп килгән. Буйтым һыйландылар, йырлаштылар, бейештеләр. Табын хужаһы, әлбиттә, Надир ине. Иҫереп китте был бер заман, эләккәндә буш ҡалмайым тигән һымаҡ оңҡотланып һемергәс ни. Ул осор хәмере лә айына бер талон менән генә һатыла инеме... Эшкингән нәмә булһа бер асыу.

Усаҡ дөрләй геүелдәп, көҙгө көнө лә матур, әллә ни өшәндермәй. Ыҫыҡ. Хәҙер генә ул инеш эрәмәлеге һүтек селтәрҙәй үтәнән-үтә күренмәле.

Йәсе, өйө яҡын ғына ҡалғас, бормаслы мал һукмағынан биштәрле тоғо менән балан тәлгәштәре артмаҡлап ҡайтып барған Сания ҡарсыҡ бороддо былар эргәһенә. «Әллә ҡасанғы әбекәй... Һаман бирешмәй, үәт һыры!» – тип лығырланы ир-заттан бер ҡыҙмасарағы.

– Бәрәмәс, шайтан туйымы тиһәм, үҙебеҙҙекеләр икән, – тигән булды ҡарсыҡ. Эйе, шул осор уҡ ҡарсыҡ тиҙәр ине үҙенә.

– Әйҙә, сарсағанһыңдыр, урман сәйе эсеп кит, – тине Фәнидә ихлас ҡына. Бүтән бисәләр ҙә алсаҡ ҡыҫтаны Санияны. Ултырған булды теге ситкәрәк, аҫтына ямғыр-фәләндән һаҡланыр өсөн көпөһөнөң ҡуйынында йөрөткән иҫке клеенка йыртышы түшәп. Алдына сәй, ул-был ҡуйҙылар.

Ҡапыл... «Нимәштәп йөрөй әле бында был бисура? – тип ҡалҡынды ҡырын ятҡан еренән теле көрмәлгән, күҙе тонған Надир. – Атшаливай, сандыйка! Гәүнәгә эйәләгән себен кеүек ней...»

– Үҙең ҫантый, – тине ҡарсыҡ аяғына баҫышлай. – Үҙең аша сусҡаңды, ләғәнәт! Свинарка булып та эшләгән кеше әле мин заманында, затыу итен еҫкәп тә ҡарамаһым. – Тубығын, шунан билен тотҡолап, буйсан ғына кәүҙәһен турайтҡас, Сания әрләүен дауам итте. – Әйтер инем дә үгеҙ күҙең сыҡҡансы – зыярат яҡын. Мә, абжур, бирән ҡорсағыңды тыңҡыслап тултыр. Ике-өс аслыҡты үткәргән кеше әле мин!

Ғәр, үпкә тулы баҫынҡы тауышы менән шулай тигәс, һәлмәк тоғон бер яурынына ғына эләктерҙе лә әбекәй ҡайтыуға ыңғайланы. Ә юҡ, тәүҙә Надирҙың алдына ипләп кенә боҫрап торған сәйле бокалын ултыртып, тәмләп өлгөрмәгән ҡоймағын һалды бит әле. Бара биргәс, һинән ҡурҡмайым тигәндәй, боролоп тороп тағы әр яуҙырҙы:

– Эттән эт тыуа... Әтие шулай боҙоҡ ине, был бурҙайы унан да арттыра.

– Әтием сиңә ҡайнабыз түгел инеме ни? Өйөн үртәй яҙғанһың ҡыҙ сағыңда уҡ, эйеме? Шуға һине ҫантый тигәндәр түгелме? – Надир әллә ҡасанғыны ҡажый, иҫәүән.

– Не твоя дила, гәүнә! – тип китеп барҙы ҡарсыҡ, ҡулын асыулы һелтәп. – Этйығыш нәҫтәкәй...

Мәжлестең йәме-тәме һүрелде. Артыҡ төшөрмәгән Барый, бас яғын йәшәмеш баҡа тауыш биргәндәй быжыҡ иттереп, төймәле яғын шайлатып гармуны күреген йымланы ла ҡайтыуға йомолдо. Фәнидә лә ҡалаҡ-малаҡтарын барлай һалып, ире артынан юрғаланы. Ҡуштандар, туймаҫ тамаҡтар ғына ҡалды табын тирәләй.

## 7

Кеше аяғы һил булғас, ҡасаба йоҡоға талыр алдынан ғына ҡайтып төштө район башлығы Байрамов зональ кәңәшмәнән. Шоферы ҡеүәтле иномарканан күршеләрҙең мул ғына күстәнәстәрен йүгереп йөрөп бушатҡансы, ҡыҙыл кирбестән һалынған коттеджының икенсе ҡатына күтәрелде. Улы телевизорға уҡталған, ҡатыны йоҡламай көткән, кухняға еңелсә киске ризыҡ ҡуйған. Хужа кефир менән генә хушһынды ла лоджияға сыҡты.

Ямғыр тынған. Көҙгә тартым өшәнес ел иҫә. Парк төпкөлөндә ҡарғалар ҡарҡылдаша.

Күрше район малсылыҡ буйынса регионда мах бирмәй. Шөкөр, Байрамов биләмәһе насар йәшәмәй, әммә министр урынбаҫары миҫал өсөн ниңәлер бер позициянан да телгә алманы. Тиккә түгелдер был, һәр хәлдә, күңелде ҡытыҡлай торған факт.

Ҡарғалар тауышы тынмай ҙа тынмай.

...Көнөндә үк булмаһа ла, Бураштағы ғауғалы сход сигналдары район хакимиәте башлығына ла һирпелде. Ах, бураштар! Ни сыҡһа, шуларҙан сыға. Ни үҫтереп, ни бөтөрөп булмай шул бәрәкәтһеҙ төбәкте. Мә, тип кенә ҡуймағандар анау заманда, нефтселәр һорағанда. «Ере, ауылы, һыуы менән башкөллө бирегеҙ, рентабелле комплекс асабыҙ, юл һалабыҙ, мәсет төҙөйбөҙ» тигән вәғәҙәләре хәтерҙә. Ул осор Байрамов – йәш ир, ауыл хужалығы идаралығы начальнигы. Теше-тырнағы менән ҡаршы торҙо, һәм беренсе секретарь Урманшин – «Лесник»тың ҡуштандарына: «Нисек инде... Крепостной замандыр шул. Бер ҡулдан ысҡынһа, ерҙе кире алыуҙары ай-һай... Бураштағы тәүге ҡаҙыҡты беҙ ҡаҡманыҡ, значит, һурып алырға ла хаҡыбыҙ юҡ». Бураштар ҙа тик ятманы: йөҙләгән ҡултамға йыйып, Мәскәүгә ходатайство ебәргәндәр. Хаттары Кремлгә еткәнме-юҡмы, мәгәр Өфөнән ҡужғырышып килеп төштө ике-өс чиновник. Ул саҡта ла сход ғауғалы үткән... Байрамов отпускыла, дөрөҫө, Карелия курортында саҡта. Колхозды бөтөрһәгеҙ, күпер һалдырмаһағыҙ, бер ниндәй һайлауға бармайбыҙ, тигәстәре, күпер бу-

лыр, тик — киләсәктә, тигән түрәләр. Әйтеүе анһат. Халыҡ һүҙе хаҡ: өс тинлек ҡуян — биш тинлек зыян... Ярты яҡ ике-өс перспективаһыҙ ауыл өсөн күпер һалып булмаҫы көн кеүек асыҡ ине ул осорҙа. Хәҙер ҙә был, ах, сетерекле эш. Шунлыҡтан Бураш мәсьәләһе үҙ ағышына ҡуйылғайны. Ауыл таралып бөтһә, мәсьәлә үҙенән-үҙе хәл ителер ҙә ине. Әле, ана, тағы ҡултамға йыйырға ҡотортоусылар осрай. Булыр, һәр дәүерҙә табыла улары. Аҙмы ни эшһеҙ ҡалған патриот-уҡытыусылар, ветеран-производственниктар. Әйтмәне бер ни ҙә Солтан Хажиморатович хаҡында Олотүҙ муниципаль берәмек башлығы Айгөл ханым, әйтмәһә лә, һиҙеп-белеп тора район хакимы ҡырын эшләпәле, «Палкауадис» ҡушаматлы Солтанды. Полководец, йәнәһе, тарихтан уҡыта. Элегерәк район уҡытыусылары алдында ла тегене-быны тәнҡитләп, хужаларҙан юҡты-барҙы таптырып, йыйылышты алып барыусы ҡыңғырау зыңғырҙатып йә һыулы графинға ҡәләм менән сыңғылдатҡас ҡына туҡтар ине. Быға үҙе шаһит булғаны бар ҙаһа Байрамовтың, бар. Ә Солтанды ул күптән — СПТУ директоры булған сағынан уҡ белә: йәмғиәт фәндәренән уҡытырға саҡырғайны, фатир булмағас, Хажиморатович килмәне.

Ярай, хикмәт унда ла түгел. Хикмәт — йөктөң ҡуҙғалмауында, хатта ки бата барыуында. Исмаһам, берәй производство, әйтәйек, йәшелсә үҫтереү кәсебе ҡалдырылмаған шунда. Электр бағаналары ҡыйшайған, телефон һүнгән... Магазин, фельдшер пункты юҡ. Ә бит заманында йәшелсә звеноһы ла, ҡортсолоҡ тармағы ла, үҙҙәренең урмансылар бригадаһы ла ойошто. Былары — игенселәрҙән, малсыларҙан тыш. Мастерскойҙары, ырҙын табаҡтары, келәттәре, фермалары нығлы ине. Фермалары һаман бар, эйе, бар, сәсеүҙән алда үҙе күреп ҡайтты. Һәр хәлдә, ныҡ ҡына шөғөлләнеү фарыз Бураш мәсьәләһе менән. Ә урынбаҫары Айрат Сәмерханов, әллә йәшлегенә, әллә тәжрибәһеҙлегенә барып, мир алдына конвой саҡыртҡан. Артыҡ йәш тә түгел Айрат, бер уйлаһаң, ҡырҡ биштәр барҙыр. Тәжрибәһе лә ярайһы. Партия барҙа райкомда ураллы. Электр селтәрҙәре участкаһын етәкләне, тағы ҡайҙалыр начальник ине, элекке беренсе секретарь — «Лесник» нәҫеле тигәндәре юҡ-юҡта намыҫына тейгеләйҙер.

«Лесник»... Сетерекле, ҡапыл-ғара аңламаҫлыҡ ҡушамат. Дерелдәтмәһә лә, ҡаты тотто кадрҙарҙы Айрат Сәмерхановтың дәдкәһе. Хаттин ашҡан саҡтары ла булғыланы. Эшләне лә, эшләтә лә белде. Артыҡ принципиаль ине, буғай, Урманшин, әллә?..

...Йә, бер заман милицияла эшләгән өйҙәше, йән дуҫы уҡ булмаһа ла, бик яҡшы серҙәше менән ярты артында гәпләшеп ултырҙылар. Байрамовтың уртасараҡ түрә, район чиновниктары өсөн һалынған таш йортта йәшәгән сағы. Зарланып, илай яҙып

ҡайтҡан капитан. Баҡһаң, иртәнсәк дежурҙа ултырған еренән быны саҡыртып алып, погонын йолҡоп, эт урынына һүгеп сығарған «беренсе». Әйтеүе оят... Төндә ҡарғалар йоҡо бирмәгән икән... Ҡар-р ҙа ҡар-р... Ҡарғалар маҙаһына тейһә, уның «йәшерен күрһәтмә»һен үтәү өсөн... дежурҙағы милиция офицеры, винтовканан сарт-сорт атып, яуыз ҡоштарҙы туҙҙырырға тейеш, имеш. Ҡарғаларҙа ла аҡыл һай бит инде, тәбиғи имәндәр, ҡайындар үҫкән ярайһы киң паркка – ана, өйө шуға яҡын ине «беренсе»нең – килгәндә киләләр, килмәгәндә юҡ. Ҡыҫҡаһы, һиҙмәй ҡалған «йоҡосо капитан» ҡарғаларҙың паркка ҡара болот булып ябырылыуын, Урманшинды бимазалауын.

«Беренсе»мен тигәс тә, погон йолҡорға хаҡы юҡ таһа. Ҡабат погонға оронһа, бәрәм самодурҙың томшоғона, йә... киткән баш киткән... Культличносты ҡайыра! Местный радионы тыңлаһаң, досадаңдан ят та үл: «КПСС райкомының беренсе секретары иптәш Урманшин кәңәшмәлә сығыш яһаны». «...Беренсе секретарь пленумда ҡатнашып, Өфөнән ҡайтты...» Беләһеңме, Байрамов туған, уны халыҡ «Лесник» тип ололоҡлай хәҙер...» Шулай иламһырап ултырғайны күршеһе бынан күп йылдар элек. «Йә...» тигән үсәүен дә төшөнгәйне Байрамов. «Йә атам да йығам, киткән баш киткән» тигән мәғәнәлә ярһып әйткән капитан да юҡ фани донъяла. Бик ҡаты ауырып, иртәрәк инде гүргә. Ниндәйҙер зәхмәттән бөйөрөнә көс төшкән, тинеләр.

...Байрамов иртәгә үк һөйләшер Сәмерханов менән. Үҙенең әллә һаҡһыҙ, әллә һауалы ҡыланышы менән халыҡты администрацияға ҡаршы аяҡлата, суҡынсыҡ. Өндәшмәгәс тә... Фирма аса, тиҙәр, маңҡаһы кипмәгән малайы исеменә. Иртәгә ял... Булһа ни, аулаҡлап гәпләшерҙәр... Күп ҡаралты Бураштан Сасынға күсерелгән. Николайҙың сослоғомо? Мари ауылы бөтәйә, башҡорт ауылы таркала, тип милли тойғола уйнауҙары ла бар бәғзеләрҙең... Ә бит харап йәмле ултырған ере Бураштың. «Родина» тигән колхоз гөрләне унда элек... Тарҡалды. Тарҡалыу һиңә, өҙгөсләнеүендә, йолҡосланыуында бармы Байрамовтың ҡатнашлығы? Бар ҙа, юҡ та. «Райглава» булараҡ, белде ләһә малдарҙың тереләй килограмы 5–6 ғына һумдан, техниканың 20–30-ар меңгә генә таратылыуын. Кем өлгөр – шуныҡы. «Сасын» кооперативы рәйесе Николай Тимерәйевич өлгөрөрәк булып сыҡты – ҡалъяның һимеҙен һоғондо. Олотүз фермерҙары ла ҡул тыҡты, этем дә күрмәгән, әллә Өфөлә, әллә Силәбелә йәшәгән Гасан уғлы Гусейнов тигән алпауытка Динесовка тирәһендә арыу ғына ерҙәр арендаға бирелде. Кавказ «уғлы»лары, төрөк «бей»ҙәре – ҡара, күр – ҡылыс күтәрмәй генә ата-бабаларыбыҙ ерҙәрен ҡайыра, аҫаба вариҫтарынан ялсы яһай. Ҡатнашлығы бармы бында уның? Бар ҙа, юҡ та.

– Кофе яңыртайыммы? – Ҡатыны эргәһенә яҡынаймаһа, әллә күпме торор ине әле ире һалҡынса лоджияла. Әлдә бая

кәңәшмәнең «хушлашыу» мәжлесендә йәйелеп ултырманы, ике тауык ботон йыпырғас, шәкәрһеҙ әсегән шарап ҡына йотколаны ла алыҫ районлар вәкилдәре ыңғайына иртәрәк сығып һыҙҙы.

Ә бына замы Сәмерхановтың Бураш яҙмышына туранан-тура ҡатнашлығы бар: «Родина»ның һуңғы таяуҙарын ауҙарғанда ликвидация комиссияһы эшенә күҙәтеүсе итеп Айрат тәғәйенләнгәйне. Материалдары ҡул осондалыр, рәхим итһен иртәгә асыктан-асык әңгәмәгә. Һин бөтөрҙөң – һин тергеҙ... Ҡулыңдан килерме? Әтеү аҫтыртын ғына болғак хәбәр таратып ятыусылар бар район чиновниктары араһында. Йәнәһе, Байрамовты Өфөгә алһалар, Сәмерхановты глава итеүҙәре ихтимал. Итмәй торһондар әле. Нос не дорос! Әгәр Айратты берәй ергә ҡоҙалайҙар икән – ҡушкуллап димләйәсәк. Кемделер ҡайҙалыр үрләтеү ҙә бәғзе сак... кемдәндер ҡотолоу өсөн эшләнә. Ләстит булмаһа, тағы бер шик: хөкүмәткә үк булмаһа ла, агропром тирәһенә шылырға самаһы бар Сәмерхановтың. Рәхим итһен. Файҙаһы булмаһа ла, һис юғы зыяны теймәһен ул вазифалы кешенең, тиҙәр, буғай, халыкта. Күҙгә ҡапыл бәрелмәһә лә, зыяны тейгеләй башланы түгелме һонтор Саматовичтың?

...Төн. Урынбаҫары Сәмерханов та ике ҡатлы йортта донъя күрә. Әле ул йокларға әҙерләнә. Стенала үҙе йәйенке, үҙе йока япон телевизоры хаттар буйынса концерт тапшыра. «Боҙ булһам, боҙолмам» тип йырлаймы берәү?! Мәслихәт, боҙолмағас. Китте шунан «Шихан»ды ауыҙ һыуын ҡоротоп мактау: эсмәҫтең эскеһе килер. «Ә эскәндең... килер» тип үҙенең юрамышы табылғанына ҡыуанып ҡуйҙы Сәмерханов. Икенсе каналға борҙо – техника яңылыктарын мактайҙар.

Сәмерханов уйҙарынан арына алмайса атланы йоко булмәһенә. Ҡатыны уны-быны һорашмаһа ла, ире үҙе, бөгөн ниҙәр аткарғанын барлағандай, унан бигерәк эсен бушатырға ниәтләп, һөйләнеп алды.

– Шәп, однако, голланд техникаһы, но ҡиммәт.

– Америка тауык ботон кимертә, Төркиә кейендерә, Ҡытай уйынсык уйната – ҡасан Рәсәй үҙен үҙе аҫырар инде? Халыктың уйы шундайырак хәҙер, – тип ғәмһеҙ генә һүҙ ҡыҫтырҙы Зилә, әйтерһең, әле генә урамдан килеп ингән. Был ир кешене шикләндерҙе һәм ғәмләндерҙе. Кәйефе сәйер тойолғандай, әллә бербер...

– Нимә, визит яһанымы Мәрйәм йәки Клара? Әллә аҙашың Зиләгә индеңме?

– Юк та. – Әллә ни ҡылтайманы ҡатыны. – Оҫталарҙың хәбәрен ҡабатлайым.

– Оҫталар әйтер... Эсермәнеңме? Юк – якшы. Урал йоклайҙыр?

Ҡапыл ғына икеһенең дә сәйе тәмһеҙләнгән кеүек тойолдо.

Хикмәт шунда: Сәмерханов ярты йыл элек ҡатынын ауырымаған көйө... алкоголизмдан дауалатып алып ҡайтты. Шуға хәмер еҫенә, хатта ишараһына терт итеп ҡала. Ҡатыны Зилә лә, Айрат үҙе лә.

Хәлбүки, Байрамовтың, ялға ҡарамай, Сәмерханов менән күҙмә-күҙ әңгәмә уҙғарам тигән теләге бойомға ашманы. Иртәгәһенә һәр кем үҙ донъяһын ҡайғыртты: Бурашты икеһе лә бер аҙға онотоп торҙо.

* * *

Ирле-ҡатынлылар кухняға атланы. Һөйләһәң – һүҙ, төртһәң – күҙ... Икенсе балаға – әлеге нәҙек оҙон Урал улына уҙып, имен-аман ҡотолғас, эшкә сыҡмай оҙаҡ ҡына өйҙә ятты Зилә. Ире Айрат баллы-майлы эштә – юл төҙөү-ремонтлау идаралығы инженеры; инһә – ашарына, сыҡһа – кейеренә мул. Хәл белешергә әхирәттәре, күршеләре ингеләй башланы, әлбиттә, ире юҡта ғына. Бигерәк тә үҙенән олораҡ, тол ҡалған коллегаһы, элек бергә эшләгән шәфҡәт туташы Клара йышланы. Буш ҡул менән инмәҫ: пакетына шарап йә һыра һалып алыр. Ҡатырағын да һемерәләр ҡай саҡ. Иҫермәй итләс Клара, йәһәт кенә ҡапҡылап эсә лә һыпырта урам ашаһындағы әбшәүәтле өйөнә. Сәмерханова ни, ҡамыш билле нәҙекәй, яшыҡ нәмә, мөңөрәймөңөрәй аңҡы-тиңке ултырып ҡала, шунан әҙләп-әҙләп өҫтәй...

Ҡунаҡҡа ла апаруҡ йыш йөрөнө Зилә элегерәк Айраты менән. Кешелә һыйланғас, үҙҙәре лә бурыслы ҡалмаҫҡа, ҡайтармыш табын әҙерләргә тырыштылар. Әлеге лә баяғы Клара ҡалмай табындан, аш-һыуға ла оҫта шул ҡәһәрең. Мәжлестәрҙә Сәмерхановтарҙың парлашып бейеүен – «Буләк»тең ҡыҫҡартылған вариантын һорайҙар. Ҡыҙ – Зилә – юрғалай көйәнтәләп һыуалғыска. Егет – Айрат – төшә шишмә ярына. Һыу алалар, һыу һибешәләр; егет ҡыҙға йөҙөк бирә, тегеһе быға ҡулъяулыҡ һона. Әллә үбештеләр ҙә инде! Һай, килештерәләр! Һай, күҙ теймәгерҙәр! Типтергәндәр, теттергәндәр – Сәмерхановтар түгелме?

Эйе, маһирҙар, РДК-ның бейеү түңәрәгендә танышҡандар. Смотрҙарҙа ҡатнашалар. Ә сәнғәт түңәрәгенә тәүҙә Урманшин – Лесник дәдкәй әмере буйынса йөрөгән микән йәш йөрәктәр? «Беренсе» иһә үҙе район ветерандары хорына ла баҫҡылай, башлап йырламаһа ла, урыны – түрҙәрәк. Кеҫәһе таҡыр, мәгәр кәйефе көр хеҙмәтсән халыҡтың – ана бит, партияға дан йырлап йәшәйҙәр...

Райкомдың беренсе секретары Урманшин урынына ҡуйылған килмешәк номенклатурщик, нәфселе әҙәм, байлыҡ йыйырға кереште, үҙешмәкәрлеккә төкөрөп тә бирмәне, тиҙҙән күп түңәрәктәр үҙенән-үҙе тарҡалды, күп инициативалар һүнде.

Белгән һөнәр онотолмай, тигән һымак, Сәмерхановтар вакыт-вакыт түрә-ғара юбилейҙарында, якындарының туйҙарында бейештерҙе. Бра-во-о! Күҙ теймәһен, би-ис, аяктарығыҙ талмаһын; һыуһынығыҙ канһын, мәгеҙ, түңкәрегеҙ бокалдарҙы!

Әлбиттә, әҙ-мәҙ олпатланғас, етмәһә, Сәмерханов тәүҙә эштәр идарасыһы, тора-бара район башлығы урынбаҫары итеп үрләтелгәс, бейеүҙәре һирәкләнде. Зиләгә – нәҙекәй билгә яйлап ит үрҙе, оскор аяктар нәфислеген кәметте, улай ғына түгел, кыйыш-мыйышырак тыпырлай башланы. Юк-юк, эскән килеш кеше күҙенә салынып, рәшәткә һанап йөрөмәне хәләл ефете. Унынынан Хоҙай һакланы. Ире лә һакланы: приемдарға, мәжлестәргә һирәк эйәртте, иң мөһиме, Зилечка – Марьямочка – Кларочкалар менән араһын өҙҙө. Бер кис, эшенән һуң ғына кайтыуына, былар йылы өйҙә яланышып, күҙҙәре майланышып ултыралар... Кыҫылған тештәре араһынан һаркылған бер генә һүҙе етте Айраттың капка төбөндә Клараға – куркыштан күҙҙәре алакандаған шәфкәт туташына: «Айнытkысkа оҙатам! Икегеҙҙе лә...» Шөкөр, шунан бирле «инзерочка»ның бимазалағаны юк. Особняктарына якын көнө-төнө һыра-мыра менән сауҙа иткән киоскыны ипләп кенә йырын ярына күсертте. Илаған, карғаған тиме Зилә исемле киоскер аҙак. Илаһын!

Атак-атак, онотоп тора – Бөрөгә барыуҙары һуң?!

Имсе әбекәй хакында балалык дуҫы – хәҙер геология ғалимы ауыҙынан ишеткәйне. Һабантуйға кайтканында. Сакырыласак почетлы кунактар исемлегенә үҙе өҫтәгәйне тиңдәшенең исем-шәрифтәрен. Кайтты дуҫы хөрмәтле якташтары өсөн махсус ебәрелгән «Газель» микроавтобусында, башкалар менән ул да Каридел борамына якын эре тирәкле тугайҙа королған ак тирмәлә каршыланды. Байрам башланырҙан алда кырсын кыҙырып, ялпаш таллыктар эргәһендә сайынып килергә форсат табылды. Күргәс тә дуҫтарса әйтеп һалды кунағына Айрат:

– Ғәфү ит, һине таныуы ла кыйын.

– Проблема булып алды әле һаулык менән, Айрат Саматович, – тигәйне дуҫы, тыйыуға карамаҫтан, замдың исем-шәрифтәрен атап. – Хәҙер зарланмайым. Йәшәһен халык медицинаһы!

Элегерәк райондаштар йыйынында осраткылаған табак битле, йыуантык, кәүҙәгә килбәтһеҙ ауылдашы хәҙер... егеттәргә биргеһеҙ киәфәтле. «Тамам боҙолғайны миндә обмен веществ тигән ғәләмәт. Банан, рис, картуф... ауыҙыма ла алмайым – Фатима тигән ағинәйем кушмай. Силәбелә йәшәй ул әбекәй. Күпме знаменитый врачтарҙың файҙаһы теймәне, ә шунда бер аҙнала шәбәйеп кайттым. Һораштым әбекәйҙән: нисә төрлө ауырыуҙы имләй алаһың, тип. Үлемгә генә көс етмәй, балакай, тимәһенме. Вәт, оптимист! Вәт, философ!»

Иҫереү ҙә, айныу ҙа түләүле! ...Сәрхүш бисәһенең хәл-әхүәле, йәғни тағы йокомһорап, кыҙарып-бүртеп йөрөүе тамам теңкәһенә тейгәс, ипләп-йөпләп һөйләшеү ҙә, бармак янап әрләү ҙә, айырам тигән иҫкәртеү ҙә, атаң-әсәң, тотош туғандарың алкаш булған, туйҙа лаякыл иҫереп, нимә генә кыланманылар, тип мыҫкыллау ҙа файҙа бирмәгәс, көндәр яҙға тартылған аяҙ көндә тәүҙә Бөрөләге аноним наркологка алып барҙы. Һэ-э, йышылған катынкай тәүҙә мул ғына гонорар кайырҙы, шунан катынына бер сәғәттәй тегене-быны тукыны, алкоголиктар тормошонан кот осҡос фотоһүрәттәр, диаграммалар күрһәтте, диагнозды ярайһы бүрттереп – «икенсе стадия» сәпәп – Зилечка, туктамаһаң, бер-ике йылдан хроникка, унан инде мәйеткә әйләнәһең, тип тә куркытты. Үлемде һайлайһыңмы, йәшәүҙеме? Һайларға кушты: йә таблетка, йә лазер менән кодлау. Сәмерхановтар тәүгеһенә тукталды. Кара күн дипломаттары төрлө препараттар, инструкциялар, брошюралар менән тыңкысланды.

Март бурандары баҫылған саҡ. Юл ауырлығын һиҙмәй, елкен генә йөрөп кайттылар. Май аҙағына тиклем дауаланды арлы-бирле Зилә. Төҫө-сырайы яктырҙы, өйө лә балкып киткәндәй тойолдо. Һуңғы таблетканы йоткас, ат менгәндәй кыуанды бисара. Булдыра ул, арыулана ул! Ире лә ыңғайына ғына тора хәҙер.

...Йәй етте. Еләккә барайык, эй уңған, кеше Бурашка йөрөй, тигәс, үҙен генә ебәрҙе өс-дүрт түрә катындарына эйәртеп. Тегеләр ни калай банкылы һыра алғандар мул ғына итеп. Түҙмәй Зилә, әхирәттәре еләккә әүрәгәндә генә, берәүһен асып һемерә. Бәй, ул-был шаукым юк таһа! Варенье кайнатканда, капкас эҙләп, баҙарға сыкты. Шунда үҙен танымаған йәш кыҙҙан ике банка һыра һатып алды. Ҙурҙан, литрлынан, кеүәтлерәгенән. Өс көнгә еткерҙе ике һауытты. Хәләүәт донъя! Этем дә һиҙмәне эскәнен. Тора-бара катырағына күсте. Бәй, ауырымай ҙаһа. Какой мәйет? Буш һүҙ... Тик бына танау кыҙара, йөҙө карая, быуындары тәнтерәкләй. Ғәҙәтенсә, эштән һуң ғына кайткан ире хәләленең коҫоп торғанын күргәс, барыһын да аңланы. Командировкаға киткәндәрендә карауылға яңырак кына етмеште уҙған апаһын килтергеләне аҙак.

– Берәй шешәгә һейеп бир, эсһен шуны, – тип аҙарынды киленен электән һөйһөнмәгән кәйенбикәһе. – Медсестра башы менән битебеҙҙән көлә бит, кәнтәй. Беҙҙең мактаулы фамилйәнән көлә. Миңә эйәреп мәсеткә йөрөһә икән.

Ярай әле, апайы мәктәптә укып йөрөгән улы Урал, кыҙы Урания алдында артығын ыскындырманы. Юғиһә, апайы әйтеүенсә, Клараларҙа баксаламы, аласыктамы йырлап та ебәргеләгән өс әхирәт. «Три танкиста» тип битәрләгәне булды Сәмер-

хановтың: Зиләһе – экипаж командиры, Клара – тоҫкаусы, ә аптекарь Мәрйәм, йәнәһе, – механик-водитель. Ҡустыһы, ана, шул «экипаж»ды туҙҙырғанда, апайы әллә ни ҡолаҡҡа ятмаған, мәгәр шик-шөбһә уятырҙай һүҙ осорҙо ҡыҙара-бүртенеп:

– Йүнле ҡатын, Зиләңде әйтәм, икенсе балаға ун йылдан һуң ғына уҙамы? Тәүгеһен дә әллә кемдән тапҡандыр әле. Йөрөгән бит һиңә тиклем бер салдат менән...

Нишләп улай тип әйтте? Был һорау, тәбиғи, һәүетемсә генә бирелде хәләл ефетенә, һәүетемсә яуап алынды. «...Бураштанмы, бер егет военкоматҡа-маҙар килеп йөрөнө. Армиянан ҡайтҡан – мундиры во! Туғандары йәшәгән, имеш, беҙҙең урамда. Колонкала һыу ағыҙа алмай торғанымда ярҙам итте. Күҙ күнө гражданский формала осраттым, валлаһи, таныманым. Спецовка кейгәйне, запчаска килгәндерме... Өйләнгән, татыу йәшәгәндәр, аҙаҡ һыуға батып харап булған, тип ишеттем. Ә юҡ, гәзиттә уҡыным да, әй бахыр, тип йәлләнем. Бына шул ғына. Түтәйебеҙ юҡҡа психлана... Үлгән кешенең рухына ҡағылыу гонаһ икәнен әйтмәйҙәр микән ни мәсеттә? Берҙе биш итергә әҙер күрше әбей менән аралаша беҙҙең түтәй. Ғәйбәтте шунан ишеткәндер. Сәхнәлә һикерәндәп йөрөһәм дә, ЗАГС-ҡа барғанда бөтә ағзам... теүәл ине, әйеме? Вообще-то, лутсы һалдатҡа сыҡһам, нахаҡ ишетмәҫ инем!»

Эйе, эйе... Ләкин апаһына, «ниңә ...салдат менән» тип әйттең, тип бәйләнә алмай энеһе. Ней бит, йөҙгә етеп барған әсәләрен ҡарай һаман. Төпсөгө Айрат ҡарарға тейеш тә, ниңәлер оҙаҡ тормай улында оло кеше. Икенсе яғы ла барҙыр: пенсияһына әүрәп, апайы әсәләрен үҙенән ебәрмәҫкә тырыша. Икәүләшеп, ә юҡ, өсәүләшеп, – еҙнәһе лә түбәтәйен сисмәй хәҙер – ураҙа тоттолар былтыр ҡыш. Өйҙәре иркен, газлы, һыулы, мунсалары елле, баҡсаларында соҡоналар, кәзә, һарыҡ аҫырайҙар тыныс ерҙә, райүҙәк осонда.

Кеше алдында әйтмәнеме зәһәр телле апаҡайы анау сетерекле «әллә кемдән...» тигән ағыулы битәрләүен. Икенсегә ишеттерә! Элегерәк тә бер әйтеп һалғайны ла, килененең хәмергә әүәҫләнеүен һиҙенгәс. Ипләп һөйләшергә кәрәк әле үҙе менән. Ни тимә, етәксе кадрҙың ғаилә абруйына ҡағыла бит нахаҡ. Ә апайының ҡыҙған баштан юҡ-бар ыскындырғанына Айрат икеләнмәй ҙә, шикләнмәй ҙә. Ҡатынының «Һалдатҡа сыҡһам» тигәне лә сәйер, бер уйлаһаң. «Лесник»ка бер әйтеүе булды, дәдкәһенең военкомға бер шылтыратыуы етте, аҡ билет әтмәләне лә бирҙеләр: «Годен к нестроевой службе в военное время» – вәссәләм.

Ниндәйҙер яйы сыҡҡанда һыуға батҡан кеше хаҡында ла белеште Сәмерханов. Белешмәне, үҙенән-үҙе иҫенә төштө: «Родина»ны ликвидациялау буйынса уҙғарылған талашлы йыйы-

лыштан һуң «ғәйеп... Кәримов...» өйөндә сәй-мәй эсеп сыҡтылар. Төнгө балыҡта ғәйеп булған. Ҙурайтылған ҡуш фотонан йәйен-керәк иренле, ҡуңыр күҙле, тулҡынланып торған ҡарағусҡыл сәсле, тоҡос мыйыҡлы, ҡалын ҡашлы мәрхүм Барыйҙы ентекле күҙләгәйне Айрат, башҡаларҙан алда ҡул йыуып, Фәсхетдинов әҙерләткән өҫтәл артына ҡунаҡламаҫ борон. Сөсөләнеп һораштырҙы хәләле агроном Фәниҙәнән. «Йәл, иптәшегеҙ ваҡытһыҙ әрәм булған... Һеҙҙең сығыш Аҡшиҙе – Амантаевтың ауылынан, тиҙәр, пар күгәрсендәй нисек оя ҡорҙоғоҙ бынау ҡалҡыуға?» – «Практика үтеп йөрөгәндә үк Барый, мин эҙләгән кәләш үҙе килгән Бурашка тип, эште ҡыҙыу тотто». Аңлашылды. Артығы нимәгә? Кәрәкмәй. Салауаттың шунан аҙаҡ бүтән бирәүгә, тимәк, күҙ һалғыһы килмәгән. Бынауҙай ярайһы тос кәүҙәле, балтырҙары килбәтле, дымһыу ирендәре бүлтәйеберәк торған ханымға кем ымһынмаҫ! Йәшкелт күҙҙәренән наҙ, гәлсәр нур бөркөлә. Ә ҡасандыр көпләүле колонкала елбәҙәк кенә кейенеп, илгәҙәк йылмайыусан, буй-һыны ҡойоп ҡуйғандай икенсе бер сибәркәй – Зилә менән арлы-бирле танышҡан икән, ниңә быны ғәйепкә бөгөргә? Ҡултыҡлаһа ла, үпәсләһә лә бата – йәш саҡ, йүләр саҡ...

– Ҡыҙыбыҙ Өфөлә уҡый, исеме Лира... – Әсәһе маһайыбыраҡ, мәрхүм атаһына тартҡан, моңһоуыраҡ ҡарашлы ҡыҙҙың шул уҡ стеналағы фотоһына ымлап, вузын, факультетын әйтте. Оһо, перспективалы белгес булмаҡсы! Йәл, һөнәре буйынса ундайҙар гәзиттә районға ебәрелмәй.

...Сәмерханов баллап ҡына ҡапыл-ғара төҫөн аңғармаҫлыҡ Тибет-Ҡытай «йәшел» сәйҙәрен һемергән арала, ошондай күңелен китерерҙәй хәтирәләр бер сайраллы, бер ҡоршалды. Хәтирәләр хәтәр, хәтәр... Һи-и, бының менән генә бөтһә икән быйылғы ҡаңғырыҡтары! Хатта һаҡколаҡ, мәргәнкүҙ апаҡайы белмәгән мажаралар ҙа муйынынан бит.

## *Дүртенсе киҫәк*

*...Был гүмеркәйҙәрҙең үтеүенә төкөрөп бир, зиләйлүк,*
*Үтереп-үтереп кенә хараб итәрҫең.*

**Имаш карттың мәжлес йырынан.**

Мал йөрөмәгәс, элек һөрөлмәгән битләүҙәрҙә, һирәк ағаслы ҡыраҙдарҙа хәҙер турғай еләге уңыусан. Әлеге ише аяҙ йәкшәмбелә кеше бигерәк лығыр – кәмәселәргә эш етәһе. Ауылдыҡылар, арьяҡтағылар, райүҙәктекеләр... Техникала килгәндәре машиналарын таныш-тоноштары ихаталарына йә тегендә-бында берәй ҡарауылсы ҡуйып ҡалдырған – шулай кәрәк, бензин бур-

ҙары осраштыра, юғиһә. Һыртта ла ике-өс машина шәйләнә. Еләк йыйырға йыйбанғандар йә бер ыңғай күберәк емеш алып ҡайтырға теләгәндәр рәхим итһен – бураштар ошо арала йыйған еләктәрен күнәкләп һатырға әҙер. Уларҙыҡы эрерәк тә. Ана, ҡола бейәһен егеп тороп, кисә Надирҙың бер төркөм заты-бото алыҫыраҡ йөрөп ҡайтты. Йәш-елкенсәк иһә, Рәшиттең «Беларусь» арбаһына тейәлешеп, өҫкө үҙәк буйлап Ҡыуҡарағастан ары йылға сығанағына уҡ етә яҙғандар.

Йәшәһен йәй – хәләүәт миҙгел! Фәнидә лә шулай уйлай...

Лиралар яғына ҡарап-ҡарап, Фасил төшөп бара ине эңерҙә. Егет кеше булһа ла, өймәләм ике биҙрә таҙа ғына шартыйшартлауыҡ өҙгән. Иртәнсәк тә ҡарап-ҡарап уҙғайны. Кем белә, Лираны ла ебәрһәгеҙсе еләккә, тип тә әйткеһе килгәндер. Әйтерлеге бар, өйләнмәгән егет тәһә, холҡо ипле. Хәҙерге заманда баҫалҡы ир-атты табыуы ауыр... Өҫтөңә ырғырға, түшеңде әүәләргә, ауыҙ йырып көлөргә, шунан һин дә мин күҙеңә ҡарарға әҙер әҙәмдәр аҙым һайын. Әсәһе Сара ҡалай алама ғәйбәт сәскән! Юрамал ыскындырған Сара-Расбиска!

Донъяға һыймаған кешеләй ҡыланып, юҡҡа ғына сарбайлап, ҡыҙған баштан Фазылына тәғәйен хәбәренә ҡәҙимге һүҙ ҡыҫтыра, йәнәһе.

– Аталы-уллы ҡабаҡ башына ҡарай башланығыҙмы? – Бүтән фәлән-төгәнен ишетмәһә лә, Дилбәр апаһының баҡсаһында ҡуныҙ сүпләп йөрөгән Зәриәнең ҡолағы – ҡарп. Уға ни – көлкө, йылмаяҡланып, кискәрәк бетон күперҙән ситкәрәк әйҙәп, Фәниҙәнең үҙенә үк еткерҙе.

– Кешегә таратма, йәме, юҡты һөйләп сығарырҙар, – инәлгәндәй әйтте Фәнидә. Хәйер, үтескә аҡса индергән саҡта яҙайоҙа үҙе лә ишеткәйне Сара ауыҙынан. – Буш итмәм, Зәриә. Миңә, Рәшит әйтмешләй, – чуртым; Лирамдың баҙары төшмәһен – нервничать итмәһен берүк! Былай ҙа ауырый!

– Борсолма бушҡа. Яҡшылыҡ теләп ошаҡлайым да... Кискәрәк, ҡайтыр алдынан, берәй анекдот һөйләргә менеп төшөрмөн үҙеңә... ә юҡ, өйөңә. Харош, авансҡа берҙе тыңла. Ызначит, бер старик көлә лә көлә икән. Әбейүшкәһе, интересны, ниңә ауыҙ йыраң әле, тип һораған. Ҡарты әйткән: һинең... ҡыҙлығыңды һыҙлыҡ иткәндә хәтерләп көләм, тигән. Инде әбекәй ятып көлә, ти, бер заман. Тегене саҡ туҡтатып һораған, имеш, старигы: ниңә көләң? Старушка әтвишәйет: һиңә сыҡҡанда ҡыҙ түгел инем, шуға көләм, тигән.

Көлкөһө килмәһә лә көлгән булып, Фәнидә һыйырын ҡаршылап ҡалды, ә Зәриәнең, һалҡынса тип тормай, аулаҡ утрау тобаһына һыу инергә барышы, имеш.

Фәнидә көтәүләһә лә, ниңәлер кис килмәне Зәриә. Ышаныс

бар уға, ғәйбәт таратмаҫ. Зөлфиәһен эйәртеп, ике ҡауырһын буш биҙрә тотҡан Зәриә Биргадир урамына үтеп киткәс, Фәнидә: «Тукта, шылтыратайым әле Валя әхирәтемә. Килһен еләккә, сасындыҡылар ҙа күренештерә», – тип торғанында, ҡай араларыр ҡапҡаһы алдына ҡара «Волга» шып туҡтаны. Шым ғына бит әле, зыртлап ишеге асылғандан ғына белде. Руль артынан етенһыу сәсле оҙон аҡмас егет, йәнә өс ҡатын төштөләр. Бәй, берәүһе нык таныш – шәфҡәт туташы Клара Булатовна ла баһа.

– Сәләм, Фәнидә! Машинаға фатир кәрәк, – тип лауылдай үҙе. – Әйҙә еләккә!

– Була ул! – Ҡапыл ризалашты Фәнидә. – Ә ниңә ҡалдырырға, ти, машинағыҙҙы? Аҙ ғына барһаҡ нык уңабыҙ, тиҙ ҙә була. Юлды беләм. Тимурға урын табылырмы?

Шулай иттеләр ҙә. Һыртҡа менгәс, төпкөлгәрәк, исемһеҙ биләнгә үттеләр. Суғым булмаһа ла, тапалмаған ерҙә шартый эре генә. Тимур ҙа, Урал исемле йәш кенә шофер егет тә тырышты. Күңелле итеп термостан сәй, беше ҡағыҙ ҡаптан йөҙөм шарабы эстеләр.

Ҡайтышлай Фәнидә еләкселәрҙе өйөнә инергә ҡыҫтаны. «Мин дә һеҙҙе буш ҡайтармайым. Әҙәмгә һанап, соланда ғына әҙерәк ултырып сығығыҙ». «Командир ни әйтер бит?» – тине Клара, рулгә диҡҡәт менән йәбешкән йәш шоферға ымлап. Уныһы, бәй, Зиләнең улы икән дәһә.

Тимур «командир» менән машина эргәһендә уралды, Лира менән Клара, утынлыҡ күләгәһенә баҫып, ниҙер серләште. Фәнидә соланда сыуалған арала, урта ишек аша Зилә һалҡынса өйҙөң төпкө бүлмәһенә күҙ һалды. Бәсмиллә, ике тәҙрә араһындағы стенала – төҫлө фото: хужабикәнең йәш сағы, эргәһендә – сәстәре ыуылйып торған оҙонсараҡ танаулы, ирен ситтәре башҡорт йәйәһе һымаҡ ҡыйғас һыҙатлы, донъяға ғашиҡ ҡарашлы, тоҡос мыйыҡлы ирекәй. Сәмерханованың бәғерен ниҙер өтөп алғандай булды.

– Иптәшегеҙме? – Зиләнең ипле генә һорауына Фәнидә һағышлы һын менән яуап бирҙе.

– Ине... Барый ине исеме. Юғалды, Тимурыбыҙға ике йәш тулғанда...

Бөтәһе лә аңлашылды шул мәл. Ҡаҡса ҡатынҡай ҡалтыранып ҡуйҙы, гүйә, тәпәш рәшәткә менән уратылған колонкала улар... икәүҙән-икәү. Бына колонка һемәгенән ҡалай биҙрәгә бызмырлап һыу аға, һәм көтмәгәндә фотолағы кешегә оҡшаған күк беретлы сержант, һул усына рычагты ҡыҫҡан килеш... уң ҡулын Зиләнең биленә һала. Һығылмалы зифа буй ҡарышмай, ҡамыштай бөгөлөп, йөҙөн һалдаттың йөҙөнә яҡынайта һәм ситтәре йәй ише ҡалҡыу ирендәр уның сейәләй йомшаҡ ирен-

дәренә убыла. Үбелеүҙән ток һуккандай ауып китә яҙған ҡыҙый бер талай тик торҙо, аҙаҡ бары «аһ-аһ...» тип кенә шыбырҙай алды. Ҡаршылағы өйҙә кемдер тәҙрә ҡорғанын шылдырҙы түгелме? Шылдырһын да. Шаһит булмаһын, әйҙә, йәш йөрәктәрҙең илаһи мәленә. «Кеше күрә, ҡуй...» Десантсы егет тә, ай, сос, һай, мут: танышыуҙарына ни ара – үбеп тә алды. Үҙе лә һиҙмәй ҡалды, буғай, ни ҡыланғанын. Ә бит ҡабат берәү ҙә, бер ҡасан да уны әлеге ише иҫәңгерәткәнсе ҡосканы һәм үпкәне юҡ. Айраты тәүҙәрәк һурып-һурып үбештерә ине, хәләле ихлас яуап бирмәгәс, үбешмәй үк башланы. Хатта енси теләге ҡуҙғыған саҡтарҙа ла. Үбешеү... ике яҡлы саҡта ғына танһыҡтыр.

Зилә ҡыҙыҡһынғас ни, Фәнидә ҡунағына иренең фажиғәһен ҡыҫҡаса бәйән ҡылды. Тукта, «районка»лағы «Кәримов Барый... ҡайтмай... Күреүселәр, ниҙер белеүселәр – шылтыратығыҙ...» тигәнерәк белдереү ниңә салынманы Сәмерхановаҡың күҙенә? Ә-һә, нәк шул осор Зиләләр ай самаһы Ҡырым санаторийында йөрөгәйне. Икенсе балаға оҙаҡ уҙмағас... Бары тик китапханалағы гәзит төпләнмәһен былай ғына актарғанда күреп ҡалды, тик артыҡ әһәмиәт бирмәне.

Көңгөр-ҡаңғыр сәйле-мәйле табында байтаҡ ултырҙы еләксе ҡатындар. Малайҙар шул арала машинаны йыуыштырҙы, аҙаҡ, Лираны эйәртеп, тиҙ генә һыу буйына йөрөп әйләнделәр.

Студентка менән абитуриент икәү-ара үҙҙәренсә етди гәпләште. Уҡырға инер өсөн документтарын сәнғәт институтына тапшырып ҡайткан урта мәктәпте «алтын»ға тамамлаған аҡмас егет. Шулай укмы ни? Быны белгәс, хупламағандай, Лира яурындарын һелкетте, булмышын еңелсә ғәр ялмаған, намыҫланған егеттә... ҡапыл Лира укыған вузға, нәк Лираның факультетына ла экзаменға әҙерләгән документ копияларын тапшырыу теләге уянды. Иртәгә үк елдерәсәк Өфөгә. Кәнде атаһы Айрат көнөнә генә барып урап ҡайтмаҡсы. Ҡыҙыҡ, атаһы сәнғәт юлынан китеүен, ә сәхнә яратҡан әсәһе теүәл фәндәрҙән юғары белем алыуын теләй...

– Ни булты һиңә, ниңә Пугачева булып ҡыланаһың? Үткәнтә телевизорҙан Алла: дауна белмәгәнем, белһәм, гел балғалаҡ менән генә ашар инем тә һимермәҫ инем, ти. Шуңа оҡшап... – Зиләнең ашамай-эсмәй, бәләкәй ҡалаҡ менән генә сәпсенеп, моңһоу ултырыуына ғәжәпләнде лә Клара, маһайыбыраҡ һөйләнде: – Ә мин был горный сакляла икенсегә ҡунаҡ булам инте. Ҡунаҡ ашы – ҡара ҡаршы, давай, Фәнидә үҙең килеп сыҡ әле беҙгә берәй. Файҙабыҙ теймәһә лә, как говорится, зыяныбыҙ теймәҫ. Скромный ғына утырһа ла, бынау симпатичный бисура – замглавы Айрат Сәмерхановтың һөйөклө супругаһы әле.

– Килегеҙ, йәме, – тип ихлас йөпләне әхирәтен йөрәкһенгән Зилә Сәмерханова.

– Ярай һуң, – Фәнидә эйәк ҡакты. Хәтере яңырҙы. – Әйтәм «Волга»ғыҙ таныш та кеүек.

Бәрәмәс, Сәмерхановты һәр балиғ әҙәм таный районда. Төпкө бүлмәгә ултыртып, тамаҡ ялғаткайны үҙен Фәсхетдиновтар. Элекке йылмы... Сасындағы кәңәшмәләргә һирәк-мирәк килгеләй Айрат Саматович. Уҙған юлы Бураштағы сходтан һуң Николай менән умарталыҡҡа уҙҙылар. Гриша ла барҙы...

Ләкин Фәнидә был хаҡта өндәшмәүҙе хуп күрҙе.

Эңерҙә тамсылай башлаған ямғыр төнө буйы һибәләп, таңға ғына тымды. Ел выжлай, өшәнес. Ҡатыны Сәйҙә йәйге ыҙбала иртәнге тамаҡҡа яраштырғансы, Солтан верандала гәзит-журналдар ҡараштыра ине, ҡапҡа дөңгөлдәне. Күҙлеген һалып, хужа соландан ук әйҙүкләне, эйелеп, шул арала ойоған тубыҡтарын да ыуғыланы.

– Әйҙә, әйҙә, беҙ өйҙә.

– Ҡысҡырма, балалар йоҡлай бирһен. – Ҡатыны Сәйҙәнең ярты кәүҙәһе һарҡыуҙағы тәпәш ыҙба баҫлығынан һонолдо. – Кермәйсе... Бар үҙең, аса белмәйҙер ҡапҡаны. Ахырыһы, ят кешелер.

– Ниндәй тыйнаҡ килен килгән икән тиһәм, үҙебеҙҙең Әбдерәшит, имеш, – тип мәрәкәләне Солтан килеүсене, салт йәшелгә буялған ҡапҡаһын шар асып. – Әйҙә, әйҙә, үҙем барайым тигәйнем әле һеҙҙең тирәгә.

– Ней бит әле, абзый, оят булһа ла әйтәм, дәү йомош төштө: теге нәмәңде һат йә үтескә биреп тор. Зинһар өсөн...

– Тә-әк, ниндәй... теге нәмә?

– Эспирт, чуртым. Služак һатып йөрөнө бит, эшләпәле... великан алды, тине. Эшләпә ни, һиндә... ғәфү итегеҙ, һеҙҙә генә ләһә.

– Тәк, кер әле, кер, тупһа аша һөйләшмәйек. Йомош та бар.

Керҙе егет ихатаға. Күҙ ситтәре ҡыҙарған, ике бите ҡарайған. Бөгәсә әллә йыуынған, әллә юҡ.

– Ҡалдырманымы ни армейский другың?

– Ҡалдырыр ул һаран... Үҙенән һатып алып, үҙен ҡунаҡ итеп ебәрелде... Ҡайтыуына аҙна уҙҙы лаһа. Әле бына аръяҡтан ибдәшләр...

– Бая өсәү сыҡты кәмәлә, шул «ибдәшләр»еңдер. Үҙҙәре тотоп килһә ни булған?

– Һий, улар минән дә бедныйыраҡ батрак. Ней эштәре юҡ, ней аҡсалары. Ҡоткар, абзый, зинһар.

– Эш бар, ти ҙә инде Олотүҙдә... Тәк, тәк, тел арыһа, ҡолаҡҡа ял, тигән берәү. Хәҙер мине тыңла: яҡшы ғына өс арба бесән

кәрәк. Хакын килешербеҙ, тәк? Ярты аҙбар башы буш, шунда килеп ятырға тейеш. Студент малайҙы, Маратты әйтәм, ярҙамға ебәрәм. Тәк?..

Үҙ йомошон күберәк уйлаған Рәшит башын һелкkeләп торҙо ла һорарға мәжбүр булды.

– Ә пакусың йыракмы?

– Сабынлык юк тәғәйен генә, тәк. Хәҙер кайҙа ла үлән мул, тапалмаған болондар ҙа бар, тиҙәр.

– Ярай, абзый, тик бөгөн түгел. Дружоктар килгән, иш-шеү ер нык дымлы. Иртәгә! Марат артык булмаç. Миңә ни өс арба – бүстәк: ярты көн сабам, бер көн ташыйым, Эш... – Эскән баштан «Эшләпә» тиһә, Солтан ағайының үпкәләп куйыуы бар. «Эшләпә» тигән кушаматты кем яратһын? Кеймәç тә ине, пеләше бар, тиҙәр, ә пеләше йәмһеҙ, кан һауған, тиме шунда.

– Кәрәсин етеңкерәмәç, чуртым. Үҙең йүнләшерһең әле, абзый.

– Үҙемдә егерме литрҙай сәләркә ултыра.

– Ха-рош! Йомошто ғына үтә лә, абзый, зинһар, ғәфү ит.

Ир-аттың донъяуи хәбәрҙәре колағына салынғас, хужабикә һөйләнеп алды:

– Сәй артында һөйләшһәгеҙсе. Ашкабак кыҙҙырғайным, күкәй бутап...

– Куй-куй, – сакырыуға ихласлык етмәүен тойған егет үҙенсә һылтау тапты. – Дружоктар көтә. Теге нәмәне, зинһар, бесән хакына кушырһығыҙ, Эш-ш... – Ярай мәлендә тотлокто Рәшит, ә хужа кулын йәйеп, катынына караны. Сәйҙәһе нимә кәрәген кабатлап белешкәс кенә ризалашты.

– Сак кына башланган бер нәçтәкәй...

– Эйе, шуны. Ноль дә етмеш бишлек...

Ярты ярымлык һорғолт кауырһын һауытты йокка трикоһының әллә кай төшөнә кыçтырып, йәнә кеселекле ғәфү үтенеп, шул арала балаларса кыуанып, артынса этен койрок болғатып, һыҙҙы Рәшит. Элекке укытыусыһы кайғыртыусан иçкәртеп калды:

– Смотри, Әбдерәшит, артык мауығып, иртәгәне онотоп куйма. – Егет күҙҙән юғалғас, ауыҙы асылған һайын тештәренең теүәл түгеллеге беленгән катыны яғына ыңғайланы. – Юкка бирҙек... Хәмер өләшеп ята, тиһәләр?!

Өндәшмәне Сәйҙә. Әллә кайһы өләсәһенән монаят булып калған карагөмөш беләҙектәрен кояшка ялтлатып, өйгә ынтылды.

– Ат тип юкка которабыҙ түгелме? Бығаса атһыҙ ҙа йәшәнек.

Веранда соланынан сабый тауышы һаркылды.

– Бабуçка, мин уяндым. Марат абыкайым йоклай.

– И, бәпкәйемде! Абыкайым тигән була! – Өләсәйе өҙгөләнеп ейәнсәрен күтәреп алды. – Әйҙә, тәүҙә бес-бес итәбеҙ, шунан тәс-тәс йыуынабыҙ.

– Абыкайың иртәгә бесәндә йөрөйәсәк, Әлфирә кыҙым, – тине верандала гәзиттәрен өйөштөргән Солтан Хажиморатович.

Баяғы хәүефе өсөн ирен әле сак тынысландырҙы катыны:

– Чечендарға ундай ғына йомош бирәһең инде ул. Атыуса Рәшитте нисек тыңлатаһың?..

– Чечендарға? – Солтан аптыранды. Сәйҙә төшөндөрҙө:

– Рәшитте «Чечен» тип тә йөрөтә, имеш, йәштәр.

Иртәгәһенә ошо ук вакытта элекке баҫыу уртаһынан көн байыштарындағы һыртка табан, шалтор-шолтор косилка һөйрәтеп, «Беларусь» үрләгәне шәйләнде. Артынса, кисәге ише өйрөлөп-сөйрөлөп, һалпыш колак эт сабаулай. Иркенгә сыккан ға кыуаналыр әле мәхлүк.

* * *

Кафела сакта Данирҙың капыл үҙен ныклап белмәгән әпкәләй студентка уйһыҙ акса һуҙыуында әһәмиәтле генә сәбәп тә бар ине. Күршеһе Александр менән һин дә мин ирәүән ултырғанда, Данирҙың телефонына яҙыу төштө: «Спасибо за взнос. Я в лечебнице. К.Л.» Ур-ра, Лира бында, Өфөлә. Телефонына баярак кына һалған акса барып та яткан. Шуға рәхмәт йөҙөнән Лира хәбәр ебәргән. Шылтыратһасы... Барайыммы икән эргәһенә?

– Пока, Шурик. Кис гаражыңа инермен.

– Фараончик, кайҙа ашығаһың, шайтан баҫтырғандай?

– Һин бит фараон! Һин бит кармаксы!

Яуап та бирмәне Данир. Хатта бая ғына үҙенән акса теләнселәгән, хәҙер кафенан быяла ишек аша үҙенә йылмайып караған йәштәргә кул болғаны, әйтерһең, әлеге хәбәр остоғон нәк шулар ебәргән.

...Светлана иһә әлеге минуттарҙа Тайсиндар фатирынан кайтырға йыйынды. Күпме көтөргә мөмкин Данир атлы елғыуарҙы?

Сығырға йыйынған арала кыҙ егеттең әсәһенән һорай куйҙы:

– Йәйҙе кайҙа уҙғарҙығыҙ, Миләүшә Ғәлиевна? Ауылдамы?

– Юк, Һакмар яғында туғандарыбыҙ аҙ беҙҙең. Данир ни, Мәскәүгә генә барҙы ла кайтты. Яңырак балыкка йөрөп әйләнделәр. Күршеләге Саша менән...

Был яуап аҙмы-күпме кәнәғәтләндерҙе, буғай, Светлананы. «Тимәк, Лира эргәһенә бармаған...» Кыҙ ҙа ниҙер әйтеүҙе кәрәк тапты: «Ә мин Аркайым яктарында йөрөп кайттым. Күршем менән. Машинала кундык бер кис. – Әҙерәк хәйләләне кыҙ, ар-

табан үҙен замана балаһы, туғансыл кеше сүрәтендә күрһәтергә маташты.— Өйҙә төрлө варенье-соленье әҙерләштем. Права алырға уй бар — атайым ҡышҡы сессия бөтөүгә машина бүләк итмәксе. Ана шуға иртәрәк киленде каникулдан».

— Машина? Данир ҙа уҡырға теләй праваға... Бер курсҡа яҙылығыҙ.

— Әлбиттә, ул да уҡымағас... Фатирығыҙ бигерәк матур! — тип һалпы яғына һалам да ҡыҫтырғас — быны вкусы заманса ҡыҙ әйтә! — наҙлы, итәғәтле һөйләшкән студентҡаға ниндәйҙер изгелек ҡылғыһы килеп, Миләүшә уланҡайы номерын Светлананың һарап затлы телефонына яҙҙыртты.— Тота алһаң, әйт: әсәйең көтә, юғалтҡан, тиң.

— Мотлаҡ, Миләүшә Ғәлиевна, мотлаҡ. Иҫән генә тороғоҙ инде,— тип сөсөләнде саҡырылмаған ҡунаҡ.— Рәхмәт тәмле сәйегеҙгә, яҡты йөҙөгөҙгә. Бәлки, китап артынан...

— Тартынма, рәхим ит, һеңлем!

Светлана ҡараптай дәү йорт тротуарында бер былай, бер тегеләй уранғыланды. Ҡыуаҡлыҡтағы гараждар яғына ла барып әйләнде. Ярай ҙа танымай Александрҙы, таныһа, гаражының ике, машинаһының дүрт ишеген дә асып, доң-доңҡ килгән рок музыкаһына иләреп, кескәй генә поход өҫтәленә һыра, сохари ҡуйып, арыған, алйыған ҡиәфәттә йәйрәп ултырған егеттән: «Сашок, дорогой, ҡайҙа Данирчик?» — тип һораһа: «Данирчик ни... Лира эргәһенә һыпыртҡандыр»,— тигән үлтергес яуап ишетер ине, бәлки. Үҙенә алан-йолан ҡаранған майкасан Шуриктан ҡурҡыбыраҡ, ҡыҙ кирегә ҡырт боролдо һәм проспект яғына ыңғайланы. Ә-әй, ни булһа ла булыр, тип, балалар бәүелсегенә һөйәлеп, ҡупшы сумкаһынан телефонын алды ла төймәләренә тәүәккәл генә баҫты. Юғалтҡан даһа Миләүшә ханым Данир улын...

Кәнде был ваҡыт Данир менән Лира «үҙҙәренеке» һаналған эскәмйәлә ултыра ине. Ҡыҙ әллә ни үҙгәрмәгән, элекке көйө, ә юҡ, аҙ ғына итләсләнә төшкәндәй, егет, киреһенсә, һурыҡҡанға оҡшай. Нәҡ шул мәлдә яңғыраны гимн.

«Шурик тиһәң, уныҡы юҡ бит инде хәҙер. Әсәйем борсолалыр...» Таныш та, таныш түгел дә тауыш. Кем?

— Һеҙ кем әле? Светлана? Бәй...

Лира бер аҙ өндәшмәй ултырҙы ла тороп палатаһына йүнәлде.

Светлана менән арлы-бирле аңлашҡас, баҫып һөйләшкән Данир тиҙҙән... Лиранан бушаған урынға лыпын ултыра төштө. Һыпыртҡан һөйгәне. Үсеккән... Кәрәкмәгән саҡта һис кәрәкмәгәнгә шылтыратмаһа...

Ҡайтыу менән егет әсәһенән үҙен — өйҙә, өйөндә! — кем көтәүләп йөрөгәнен ишетеп, артына көсө етмәгәндәй, йәнә ди-

ванға терәлде. Әсәһе лә, һармаҡ, танымаған-белмәгән студентка ауыҙына ҡарап ултырһынсы! Элекке йылды уҡ юҡ-бар йомош менән өйҙәренә килгәнендә, әсәһе Светлананы күрмәне түгелме? Күрһәсе! Әллә кемдәре барҙыр әле ул йылан аяғы киҫкән йылмаяҡтың. Аферистка кеүегерәк күрә уны хәҙер Данир. Шомло шылтыратыуҙан һуң айырыуса шикләнә.

Әсә менән улдың тырт-мырт гәпләшеүенә атай кеше ҡыҫылманы. Хатта көндөҙ «быжғыртып алырға кәрәк әле үҙен» тигән уйы ла осҡайны Марс Нәбиевичтың ғилми фекерҙәр ҡайнашҡан башынан. Өләсәйе мәрхүмә әйтмешләй, «Данирҙың ояһы» — үҙ бүлмәһенән Лираға шылтыратыуы ла, «Ниңә телефоның ҡабынмай?» тигән яҙыу ебәреүе лә яуапһыҙ ҡалды. Туҡта, хат яҙып һалырға кәрәктер бештан-бешка кәзәһе төкөгән ҡыҙыйға. Тик нимә тип кенә яҙһын инде? Өйрөлмәк ултырғысында егет хәтһеҙ ваҡыт ҡолаҡ осон семтекләп борғоланды. Ярай, берәй көндән, һис юғы өс көндән шылтыратыр әле. Баҫылһын әҙерәк Лираның тоҡтомалға ярһыуы.

Светлана, Светлана... «Супер ҡыҙ» ҙа бит һин, тик үҙеңә берәүҙәр һоҡланып, икенселәр һағайып ҡарай. Уйланды егет: «Ундай һылыуҙар «һунарсы» була торған. Минән шәберәк, перспективалыраҡ берәйһен күрһә, төкөрөп тә бирмәйәсәк ундай зат. Иш итһен, әйҙә, берәй аҡса тоҡсайын. Хәҙер ундайҙар — аҙым һайын. Аҡылға бер төрлөрәк, аҡса һанау ауырыуы менән йонсоуҙарына ҡарамаҫтан, әллә кем булып кәпәренә торғанын...» Светлананы әҙәмгә һанамаҫҡа етди генә сәбәп тә баҫырылған даһа Данирҙың күңеле төбөндә.

...Йүнләп йөрөй ҙә башламағайнылар, дөрөҫөрәге, ике-өс осрашҡайнылар ғына, коридорҙа тап итеп, Светлана, Лиралар төркөмөнән Вәлиев фамилиялы уйсан ғына бер егет — армиянан ҡайтҡас уҡыған йәшкә олораҡ студент — иҫкәртте ләһә Данирҙы:

— Хаталанаһың, дуҫҡай... Светлана һин ҡайтып китеү менән уҡ, бүтән фырт кейеменә төрөнөп, тағы бер смена йөрөп килә икенсе берәй фрайер менән. Ышанмаһаң, комендантҡан һора. Ә юҡ, ул әйтмәҫ, ул ҡурка Светланананан, иң яҡшыһы — үҙең күҙәт!

— Мин шпион түгел! — тип күркәләй ҡабарынды Данир.

— Ауыртмаған ҡабырғаңа әйләнеп ят, улайһа. Яҡшылыҡ теләп әйтәм.

— Светик менән... үҙең йөрөмәнеңме, дуҫҡай? — Сәпәне һораузың ҡырҡыуын Данир, үҙе лә һиҙмәҫтән.

— Йөрөнөк, йәшермәйем. Минән шәберәкте тап иткәйне, «хуш, ауылым», тип ауыҙ асып торҙом да ҡалдым.

Егет кеше лә әллә ниҙәр һөйләр, сетерекле кәңәштәр бирер икән. Хәйер, ауыҙы бешкәндер ҙә өрөп ҡабалыр хәҙер. Шуныһы: аҙаҡ сәйер егеткәй күренмәне. Ике фәндән өлгәшмәйенсә

ҡыуылған, буғай, вуздан. Әллә Светланаға үсегеп ваз кискәнме уҡыуынан – этем генә белһен.

Ах, ах: урамдарҙы ҡараңғылыҡ һуңыраҡ ялмаған март кисендә Данирыбыҙ... шымсыға әйләнде! Үҙ күҙҙәре менән күрҙе: Данир китеү менән... күп тә тормай, икенсерәк кейенеп, ҡайҙалыр ашыҡты Света. Тимәк, нахаҡһыҙ иҫкәрткән Данирҙы теге Вәлиев – Лираның курсташы. Һы, хәйерлегә булһын.

...Бая һөйәнмәле эскәмйәлә Лираның урыны бушап ҡалыуын күргән Данир, кем менән һөйләшкәнен дә онотоп, телефонын һүндереп ҡуйғайны. Быны үҙен әҙәмгә һанамау, хатта мыҫҡыллау тип ҡабул иткән Света иһә йыйыштырыулы ятаҡ карауатында уртын сәйнәп, япа-яңғыҙы оҙаҡ борғоланды.

* * *

Рәшиттең былтырҙан бирле ҡушаматы барлығын күптәр белмәй. Баҡһаң, егет-елән үҙен Чечен тип осондорғолай икән. Эйе, былтыр йәй, бесәндән алда, Бураштан Фасил, Олотүҙдән тағы берәү, уныһы олораҡ, хатта ҡатын айырған буйҙаҡ – өсәүләшеп хәлле генә бер өфөләнең Дим биҫтәһендәге дача-баҡсаһында бура күтәрергә яллана. Шунда «бай ағай» хәмер ягын нығ ҡыҫҡанғамы, Бураш алкашы менән Олотүҙ алкашы дачниктарға ярап ала. Фәстерә икән былар тегеләргә: Чечняла булдыҡ, фәлән дә төгән... Ышаналар. Бигерәк тә Рәшиткә. Сөнки – ҡарасман, күҙҙәре осҡон сәсә, күпме эсә – иҫермәй.

Былар бураның хаҡын теүәлләп алып, ҡайтырға йыйынһалар, тағы өс көнлөк заказ табыла: мунса күтәрергә! Урыҫлашҡан немец икән баҡсасы әҙәм; көн дә яҡшылап ашата, душ ҡойондора, башҡорттар хәләл ит ярата икәнде ишеттем, бына һеҙгә «Халял» магазинынан гуляш, үпкә-бауыр алдым, тип тә әйткеләгән. Иң ҡыҙығы: өй бураһы күтәргән хаҡтан... мунса хужаһы ике тапҡырға күберәк түләй быларға. Раҫ, Рәшит айырыуса тилберлек күрһәтә: тегенең боҙолған электр нөктәләрен, душ-туалет крандарын, бүтән ваҡ-төйәктәрен һә тигәнсә, оло эш араһында, рәтләй ҙә ямай икән. Тырышыр ҙа. Ҡаршы дачалағы ярым яланғас ҡыҙ-ҡырҡын күҙен ҡыҙҙыра, етмәһә. Тик ирей тиме ҡупым заттар «арбайтер»ға? Ауылға ҡайтҡас, шуларҙы һөйләгәйне Рәшит өлкән Лосманға – Фазылға етә ҡалды: кәмәһенә ултырған бер кешегә: «Рәшиттең урам ҡушаматы хәҙер – Чечен... Шәп бит! Уфаларҙа нимес байҙары ла бар, ти, татарға ҡарағанда ике тапҡырға йомарт, имештәр», – тип, эй, сурыта икән. Әйтәгүр, ыңғайҙан улы менән дә маһаймаҡсы. Сурытһа ла, ниңәлер артыҡ нығ йәбешмәне яңы ҡушамат Рәшиткә. Шулай инде, ялҡытып бөткән, теңкәгә тейгән чечен ҡырылышына тормошсан бәйләнмәгән ҡушаматтың кемгә хәжәте бар?

Әшнәләрҙең кәйефтәре шәпкә оҡшай бөгәсә. Солтандыҡы ла. Студент малайы, ана, апаруҡ эшкинеп, Рәшит абзыйы менән үләне тығыҙ үҫкән киң болондо «йығып» ҡайтты. Еңелсә ашһыу әҙерләп ҡуйылған йәйге өйҙә көтһәләр ҙә, «йыуынам да киләм» тип ҡалған Рәшит ниңәлер килмәне. Елдереп барып әйләнде Марат. Трактористың күҙгә аламараҡ әсәһе – Камила ҡортҡа әйтеүенсә, Рәшитен «төнәгеләр»ҙән берәү йәнә яр буйына эйәртеп әпкиткән. Һи-и, аръяҡҡа сығарып, лаяҡыл ҡайтаралар икән былай булғас, тип ғәмләнде Хажиморатович. «Ярай әле, иртәгеләрҙә генә кипмәҫ, яумаһа, иртәнән һуң ташып алырбыҙ», – тигән Рәшит әнкәйенә. Яҡшы, Солтан үҙе лә барыр, бесәнгә әллә ни таһылы юҡ, мәгәр ҡара эштән өркмәй. Бәй, йыйғыстан ҡалған кипкән бесәнде тырмаштырып йөрөргә эшкинер әле. Фасил да тыңлар, бәлки. Каникулы бөтмәгән Мараты – ҡатҡыл малайы бар, ҡатыны ла ҡыбырҙар. Бер көндә үк теүәлләп ҡуйһалар, һуғым алдынан ғына һатып алынасаҡ дунәнгә ҡыш сығырлыҡ бесән әҙерләнер. Яумаһын ғына.

Тарыраҡ тирәсле эшләпәһен килешле генә ҡырын һалып, шундай уйҙар менән аҫҡа төшөп әйләнде Солтан. Өйҙәренә яҡын барманы – Фазыл да, Фасил да күренмәй. Әһә, тыз-быз киләләр, ниҙер шылдыралар лавка эсендә. Юҡ-бар әйбер һатһалар, халыҡҡа ла, үҙҙәренә лә файҙа. Солтан күҙҙәрен секерәйтеп арьяҡҡа баҡты. Тирәк тирәһендә төтөн быҫҡый, өсмөдүртме егет һүрән усаҡ эргәһендә ултыра. Ах, йәштәр, тыйыла белмәйҙәр. Хәйер, тыйыусы ла юҡ үҙҙәрен. Эсмәйек, тип ҡысҡыралар һәр яҡтан, ә ҡайҙа ла шайтан һыуы көнө-төнө һатыла. «Бюджетты ямарға ҡулай» тип тә телмәр тота Кремлдә яуаплы пост биләгән аҡһөйәк чиновниктар, Думалағы депутат әрәмтамаҡтар. Оялмайҙар ҙа!

Әһә, иртәгә Солтан «Москвич»ын борғослар. Машинаһы иҫке, әммә Бураш юлдары өсөн йәтеш. Ҙурҙан ҡубырлыҡ ремонт кәрәкмәй, мәгәр ҡараштырыу хәйерле. Тау юлы бит, һырт юлы...

Көндәр ҡабат аяҙға тартыла. Тәғәйен көндө Биргадир урамынан шағыр күсәрле трактор йәнә ҡыраз юлынан көнбайышҡа табан үрмәсләне. Тракторға арба тағылғайны, арбаһына күпте күргән бесән йыйғыс тейәлгәйне.

Бер аҙҙан бешкән балан төҫөндәге «Москвич», багажнигынан һәнәк-тырма һаптарын тырпайтып, Бураштың башҡа мөйөштәренә сағыштырғанда шаҡтай ныҡлы шәхси хужалыҡтар шәйләнгән Йәштәр урамынан ҡуҙғалды һәм баҫыу ситендә трактор эҙҙәре беленеп ҡалған юлға төшөп алды. Аҙ ғына хәрәкәт шәйләндеме, бураштарҙың күңеле йәшәргәндәй, дәртләнгәндәй: «Йәшәй әле Бураш. Гөрләй әле... Бирешмәй... Бер нәмә ҡыуандыра: эсеү бар-барлығын, әммә ауылда ҡуржыныс крими-

нал – үлтереш-һуйыш, көсләү-фәлән, наркомандар юк. Әлегә... Юкһа, ишет, бүтән якта...»

Тиҙ үк ҡыуып етте һыртта автомобиль йораты шаҡта тракторҙы. Һөйләштеләр ҙә, Солтандың аламаһы алға уҙҙы. Юл нисауа, барһындар ҙа, ут яғып, сәй ҡайната торһондар. Һыуһата ул бесән эше.

* * *

Солтан геүләтеп ут якты, Марат сығанаҡҡа барып әйләнде. Тәмәке тартамы сукынмыш, оҙағыраҡ йөрөнөсө. Фасил ҡалыныраҡ яҫмаларҙы теткеләргә, йоҡаларын йыйнаштырырға кереште. Кешегә, бигерәк тә элекке уҡытыусыңа, көнләккә ялланған икәнһең, мыҙылыу килешмәй. «Ул шулай ул, был тегеләй ул» тигән хәбәр таралдымы, һине ҡабат эшкә ҡушырға ашыҡмай торғандар ауыл еләндә. Рәшит, әлбиттә, ҡырҡ һөнәргә оҫта ҡул. Уға дәғүә юк. Эше-көшө өсөн аҡса бирһәләр – ала, бирмәһәләр – инәлмәй, чуртыма, ти. Күп ваҡыт әсе-мәсегә хушһына ла ҡуя.

Кемгә нисек, ә артыҡ аҡса Фасилдың эсен тишмәйәсәк. Күҙгәрәк, Алла бойорһа, берәй яры юлланыр. Һис юғы, эткәйенең һеңлеһе – яҡын тутәйе йәшәгән Әбйәлил яҡтарына. Унда эш муйындан, ти ҙәһә, дача-мачаларҙа. Магнит байҙары ҡунаҡханалар, тағы әллә ниҙәр һалдырта, тиме. Ул күл ярҙары, ул тау ҡуйындары тыңҡысланған, ти, ял, туризм базалары менән. Берәй ҡыш шунда эшләп ҡарарға иҫәбе бар кесе Лосмандың.

Тутәйенең туйында Фасил да буталды әрмегә алыныр йылдың йәйендә. Әлеге ише бесән бөткән саҡ ине. Өс-дүрт еңел машинаға тейәлешеп, туй төпләнмешенә ошонда, һыуалғыслы күләүек ярына – Иҙел буйы лыҡа батҡаҡ инеме, – килделәр шешлек ҡурырға. Эй, кәмитләнде-ҡыланды нәҫелдәге анау үҙе лә, исеме лә оҙон... Олотуҙдән Сәләхетдинрахман быуайы. Фасил әрмелә саҡта ерләгәндәр ҡартты, ауыр тупрағы еңел булғыр... Нимә тиҙәр әле ҡоҙалар яғынан килгән, түшенә ударник билдәләре таҡҡан ҡартласка. Юк, тәүҙә һораны, имеш, үҙе әйтмешләй, «тешһеҙ кешегә – йомшаҡ аш» ҡойолған сынаяҡ өҫтәрен сәкәштерер алдынан:

– Ҫин, кода, кай яктан тидең әле үҙеңне? Эчкән ҫыугыз кандый?

– Һаҡмарҙы һыулай беҙҙең ауыл, Баймаҡ менән Әбйәлил райондары сигендә.

– Башкыртмы ҫезләр?

– Кәнишне, беҙ инде ул ата башҡорт! – Быны ишетеп, туй костюмын сискән, ап-аҡ күлдәксән кейәү балаҡай ағаһына шыпырт ҡына бармаҡ янаны.

– Ә йо-ок, кода, безнекеләр ул төп башкырт! Без ғүмер бакый эшлибез: жә тугайда, жә буләктә (урманда). Ҫезнекеләр курай сызгыртып, биеп тик йөри, әйе, диң?

– Эйе, ҡоҙа, эйе, – тип көлөмһөрәгән булды ударник ҡартлас һәм ялан шаңғыртып еҙ ҡурайын тартып ебәрмәһенме! «Тәфтиләү» көйөнә... Моң тәьҫиренән Сәләхетдинрахмандың былай ҙа бысый күҙҙәренә әсе йәштәр эркелде, танауы мышкылданы.

Ниҙәлер ошо күренеш нык иҫендә Фасилдың. Былтырмы, Олотүзгә ике генә кискә килгәндәрендә, Фазылдарға ла һуғылып, хәл-әхүәл барлағанда, ҡунак еҙнәһе уға, оло сер сискәндәй, һеңдергәнсе әйтте: «Һин, Фасил ҡәйнеш, эсмәйһең дә, тартмайһың да – мактайым. Һиндәйҙән любый яктың любуй дамочкаһы янтаймаҫ... Так што, беҙгә разведкаға килеп кит. Эше лә, ашы ла, башкаһы ла табылыр...» Бәй, ундай әңгәмәне оноторға ярай тиме ни?! «Любуй... ҡараясак үҙеңә...» Юк шул, боролоп та ҡарамағандары бар «дамочка»ларҙың. Үҙе лә мәүеш, ҡыйыуһыҙ... Буй етмәҫтәй ботакка үрелмә, тип өйрәткән боронғолар. Етте, әлегә терпене ирекке ебәрер. Юкһа, башына ҡарғыш алып, кроликтарҙан ҡалған ситлектә кеше күҙенә күрһәтмәй, алам-һалам ҡаплап, бәҙрәф артындағы кесерткәнлектә аҫыраған була ла энәле мәхлүкте. Мырхылдай меҫкен, илаулай. Ябыға башланы. Әл дә эт ыҙалатмай үҙен. Ниндәй ҡыр йәнлеге хушһынһын, ти, ирекһеҙләүҙе. Ялбыр эттәре генә, ана, ас тотһалар ҙа, өйҙәренән алыҫ китмәй. Йәки киреһенсә... Кәнәри ҡошсоктар, ҡыуып сығарһаң да, кире ситлектәренә йылт сумырға ынтыла. Сөнки уларҙың йәнтөйәге – ситлек, ризығы – ситлектә.

Бер иҫенә төшкәс, Әбйәлил еҙнәһе ҡабат хәтерен яңыртты әле. Элегерәк бер килгәнендә уйынлы-ысынлы: «Бынау йәһәннәмдән апайыңды алмаһам, Һакмар буйында кәләш бөткәйнеме ни миңә?! Һапата, утыҙ туғыҙлы һапата...» – тип һөйләнгәйне. Әлеге лә баяғы Фасилдың сәменә тейер өсөндөр. «Өйлән, ҡәйнеш, өйлән, аҙак әтеү...» – тип әллә нәмәләргә ишаралай хатта.

Мәрәкәләһен, хакы бар – ияраткан еҙнәһе бит. Тура һүҙле, йомарт ҡуллы, фиғеле миһырбанлы. Кәнде Сәләхетдинрахман быуайы һымағырак. Ул да, һы, анау юлы, шешлек бешергәндә, тамъян ҡоҙаларым килгән тип тормай, көлә-көлә әрләп ташланы табын әҙерләшкән бер олорак киленен. Тегеһе лә инде, телен тыя белмәй, ир-ат һүҙенә ҡушылып маташа: «Башкырт түгел ич без. Бер тегели, бер былы укыткастын, телебеҙ боҙолоп бетте. Марыйлар да, шәт, беҙнеңсә сөйли... Баспыртыбыз башкырт ине элек...» «Әй, киленкәйем, баспырт нимәгә һиңә – лутсы битеңә ҡара: сабкауай көрәк тәһә битең», – тимәһенме. Мәгәр мәлендә тыйылып, мәрәкәһен етди генә ослап ҡуйҙы:

– Булған ул элек. Башкорт урамы, Татар осо ла булған. Уныçы туғайҙа, тау аçтындараҡ иде. Ҡуй инде, һуғыштан алда бажар çығып, биш-алты двурҙың көл-күмергә ҡалғанын хәтерләйем хаман. Ҡайһылары күсеп китте, ҡайһылары төрлө урынға яңы өй һалып инде. Уларына ике ауыл нык ярҙам итте...

– Ә беҙҙең Шәғәле Шаҡман олатай Мәскәүгә барған, Иван Грозныйҙы күреп, грамота алған, – тине ҡоҙаларҙан кемдер.

– Харап... – тине бураштарҙан кемдер.

– Харап, тимә. Уның уғаткыс йәйәһен аҙаҡ Салауат батыр йөрөткән, вәт!

– Палкауадис Салауат беҙгә лә йыраҡланмай, Нөрлө тирәһендә һуғышкан да! Зөләйханы яраткан...

## 2

Солтан ағалары дәртләнеп, ең һыҙғанып, өрә-өрә тоҡандырған усаҡ яғына күҙ һалып ала Фасил. Ашантыға йәнәш дәү һөт шешәһе лә ята ҡарҙай ағарып. Ятырлыҡ та... Хажиморатовичтың да һыйыры, Лираларҙыҡы һымаҡ, тиҙ әсемәй торған һөт бирә микән ни?! Хәҙер ҡояш алыçтаныраҡ йылыта ерҙе, шуға ҡыҙыуы һүрәнкерәк, көҙгә тартым аяҙлау һымаҡ тора көндәр. Әбейҙәр сыуағына йыраҡ әле шулай ҙа.

Алыçтараҡ элекке утар нигеҙҙәре шәйләнә. Ниңәлер халыҡ шул тирәне «Канакрад» ти ҙә ҡуя. Ҡасандыр утарҙа атаҡлы ат ҡарағы йәшәгән, ти, – шуғалыр.

Легендаһы ла бар, үҙенә күрә. Имештер, борон ошо утарҙа атаҡлы ат ҡарағы йәшәгән. Ҡайҙандыр, әллә сыуаштарҙың, әллә урыçтарҙың якшы атын урлап апкайткан был. Аҙбарына бикләп ҡуйған айғырҙы. Артынан һыбай юллап, килеп тә еткән хужалары. Бында ук... Атһөйәр тиҙ генә ишек алдына еләнен йәйеп, тубыкланa ла намаҙ укырға керешә. Тентеү менән йөрөгәндәр баҙап ҡала – мосолман намаҙын боҙорға ярамай. Ә теге аҙан әйткәндәй ҡысҡыра икән.

– Аллаһу әкбәр! Ғалиәкбәр, азбарда ат бар – шуны тиҙ генә аткар! Әжеренә, насип итçә, ефәк күлмәк кейҙерәм... Аллаһу әкбәр!

Быны ишетеп, энекәше Ғалиәкбәр аçыл атты әрәмәлектән алып ҡаса була. Ысындырмы, буштырмы – олораҡтар мәжлес һайын хәтерләп ала был тарихты.

Тәпәш алғы тәгәрмәстәре менән тигеҙ урындарҙы һайлабыраҡ килеп туктаны «Беларусь». Моторы һүнеп, ҡолаҡ тын, тирәйүн һил ҡалғас, алаңғыртка йәнә мотор геүләүе таралды. Динестәрҙең тракторылыр. Йырын аръяғында йыш-йыш, эре генә

күбәләр шәйләнә ине, шуны ташырғалыр ниәттәре. Икәү – кабинанан, өсәү арбанан һикерешеп төштө.

Тегеләр аҙ ғына кәңәш ҡорғандай иткәс, өсәүһе был яҡҡа йүнәлде. Фасил һәнәгеп ергә ҡаҙап, усаҡ эргәһенәрәк яҡынайҙы. Ниңәлер Рәшит үҙен тынысһыҙыраҡ тота, яртылаш ҡына тартылған тәмәкеһен ташлап, үксәһе менән иҙгесләгәс, сәсәй-сәсәй яңыһын тоҡандырҙы.

– Кемдәр ул? – Быны ҡырҙан насарыраҡ күргән Солтан һораны.

– Усендыҡкылар, – тине улы Марат, икеләнеп.

– Усен – үҙән... Монголса йылға тигән һүҙ ул. – Атаһы ыңғайҙан улына тамсылай һабаҡ бирҙе. Белһен, тамсынан күл йыйыла.

– Түгел... Динестән... – Быны Рәшит расланы.

Динестәр тәүҙә һаулыҡ һорашты, тора-бара дәғүәләшә башланы, кешегә һанламауҙарын күрһәтеп... Ни тиһәң дә, бынау йыйын этрәгәләм араһында оло башын кесе иткән Солтан ише ир ҡашҡаһы ла бар. Тора-бара бураштарға арлы-бирле генә таныш бесәнселәрҙең тауыштары оторо яһилланды.

– Рәшиткә өсөнсө көн, сабып йөрөгәнендә, әйттек: сабынлыҡ – арендаторҙыҡы, ҡабат был тирәлә уралма, тинек. Эйеме? – Тегеләрҙән олорағы бәхәскә бер юлы аныҡлыҡ индерергә тырышты. – Сапҡанһың – черт с ним, ну йыйырға сәвсим дә маташма, скандал булыр, тинек. Был яланға сығырға йырын ход бирмәне, ато саба инек бер ыңғай. Баҡкыл бигерәк, урауҙан – ун саҡрым. Бында хужа йылҡы көтөүен ебәрергә уйлай. Көҙгәрәк. Әйттем, Әбдрәшит, әйттем...

– Сабып бөткәс әйттегеҙ, чуртым... – Рәшит артыҡ үкенмәй генә аҡланды. – Былтыр ғына беҙ сапты҄ҡ, зинһар, тәмһеҙләшмәйек юҡ-барға.

– Былтыр ҡыҫтырғанға быйыл ҡыҫҡырмайҙар, – тине оло кеше.

– Ты, фраер, много не бери на себя! – Көтмәгәндә ҡыҙмасараҡ урыҫ әзмәүере – һайғауы һирәктер – тештәрен шығырлатып ҡуйҙы. – Гавнюк!

– А ты п...дюк! – Рәшит елләтеүгә асҡан кабинаһының һәндерәһе аҫтына ынтылып, ҡыҫҡараҡ монтировкаһын һәрмәштерҙе, ләкин тартып сығарманы, күрәһең, нисек тә үҙен үҙе тыйырға тырышты. Мәгәр сәмен ҡужғыртҡан ғәйрәтен ҡайҙа ҡуйырға белмәгәндәй, мәте һылашҡан, бейеклеге үҙенең буйына тиңләшә яҙған трактор тәгәрмәсен төйгөсләп алды. Әшкә ҡатҡыл, тарамыш егеттең «ҡарама беләккә, ҡара йөрәккә» тигәнде расларға самаһы бар, буғай. Быны һиҙеп, алама ғына көрән спорт формаһындағы Солтан солтандарса, ә юҡ, тренерҙарса, уң ҡулын күтәрә биреп:

— Стоп! Бында гладиаторҙар аренаһы түгел. Барығыҙ, тәмәке тартығыҙ, сәй эсегеҙ, мин ҡорҙаш менән гәпләшеп алам, — тине һәм ҡулын әкрен генә кире төшөрҙө. Малайын балаға һанапмы әллә аңғармаҫтанмы, һәммәһен дә битәрләгәндәй өҫтәп ҡуйҙы. — Бала-саға алдында ни...

Бергәләп тәмәке тарттың йә сәй эстең — килештең-яраштың бит инде. Юҡ, егет-елән икешәрләп суғырмаҡлы юл ишаратының ике яғына аҙымланы, ә өлкәнерәк ике тиңдәш өйкөм-өйкөм әлморон ҡаплаған ҡырмыҫҡа иләүе эргәһенә тартылды. Ҡапыл уйсанланған Марат иһә, яй ҡыбырлап, усаҡ тергеҙергә кереште. Янъял ҡупһа? Һәнәк, күҫәк күтәрелһә? Эх-ма, кик-боксинг хикмәттәрен нығыраҡ үҙләштерәһе булған. Былай ҙа баҙап ҡалмаҫ, ырғып-ырғып үксәләре менән тибәсәк. Иң тәүҙә — иң елеһенә. Рәшитте кеше буғына тиңләгәненә.

Динестекеләр ялпашып кипкән бесән яҫмаларын туҙҙырғылап, йырын аша трактор ҙа, хатта ат арбаһы ла сыға алмаҫы хаҡында гәп һата ине, шикелле.

Ә бесән өсөн генә түгел, бүтән сәбәптәр arҡаһында ла ыҙғыш ҡубыуы ихтималлығын һиҙенгәйне Фасил. Ваҡыт-ваҡыт уҫал ғына шаяртырға һәләтле икәнен был юлы бер генә һорауы менән раҫланы:

— Соперники, да?

Рәшит дуҫына гәҙәти генә ҡараны, быны йөпләгәнде аңғартып, «ы-һы-һа» тип көлөмһөрәү ҡатыш көрһөндө.

Усаҡ терелгәс, бар ине һеҙҙә ҡайғым тигәндәй, Марат еңел машиналарына кистән үҙе ялғап ҡуйған радионы ҡабыҙҙы һәм, көндөҙгө концерт тулҡындарына эләккәс, бер аҙ тауышын көсәйтте. Гүйә, мөхәббәт баҡсаһында моң сәсә пар һандуғас — атаһы һәм инәһе. Инә һандуғастың — билдәле йырсының тауышы хислерәк бәғерҙе айырыуса наҙлағандай. «Былбылдарҙың инәләре һайрамай» тигәнде ҡасан, ҡайҙан уҡыны егет йораты? Әллә ишеттеме берәйһенең ауыҙынан?

*Сибәрҙәрҙе сибәр яратыр,*
*Һөйөү урманына ҡаратыр...*

Дуэт моңлана, донъяға һоҡлана... Ә бында мужиктар... Ыжламай ҙа Марат. Мәгәр ыҙғыш йә ормош тоҡанһа — ә ул ҡоро бесән өҫтәлгән бынауы усаҡтай гөлт итергә тора — ҡатнашырмы? Гәрсә ҡарап-ҡарап ҡуя студент бая Фасил тотонған ике асалы ағас һәнәк яғына.

*Моңһоуланып ҡалған яңғыҙҙарға*
*Бәхет ебен кемдәр таратыр?..*

«Куй, уйламағанда уҫмаҡлашып китеүең, берәйһенең имгәнеүе бар. Унан, тә-әк һөрөлөр баштар ҡоштар осоп етмәҫ ерҙәргә...» Үҙен саҡ йүгәнләй ине был мәлдә Солтан да. Абау, ул ғүмере буйы, малай сағында күрше ауылдыҡылар менән сәкәләшкәнде иҫәпләмәһә, кешегә ҡул күтәрмәне, иллә үҙенә лә орондорманы. Әле бына, күр, сукмарҙай тос йоҙроҡтары төйнәлергә генә әҙер. Аяҡтарын кирә баҫып торған ер ҡулдан ысҡынырға торғанға микән? Әгәр тотош ауылыңдан, ҡалаңдан, илеңдән яҙһаң нишләрһең? Ҡаршы яҡ һөйләй, ул тыңлай.

– Был ялан да арендаланған. Хәсәнме, Гасан улымы, әкәме – ят кеше хужа. Законлы, ҡағыҙҙары мисәтле. Үткәндә үк уләнен үҙебеҙ саба инек, бөгөндәре йыйып та алыр инек – техника сыға алмай. – Ҡулын һуҙған кеше була тиңдәш кеше. – Шуға тажик хужа, ятып торһон, ҡар ныҡлап яуғансы йылҡы йөрөр, тигән. Ат ҡарау тәртибен белә килмешәк... Берәйһе өйрәтәлер ҙә. Таг што, үпкәләмәгеҙ: ҡушҡандар икән – һаҡлайһың, куда деваться? Беҙҙең дә ауыҙ бар, беҙгә лә әпәй кәрәк. Йылҡы өйөрөн бөгөн үк ошонда ҡыуырға тейештәр. Анауҙа, түмәләс аръяғында, үлән шәп – бейек, ҡуйы, – тал араларын прастой салғы менән һелтәгеҙ ҙә...

Әллә ниҙәр аңғарта, өйрәтә был, һөйләгәне Солтандың бер ҡолағынан инә, икенсеһенән сыға. Йәне ҡабарыуы, ҡаны ҡыҙыуы ҡолаҡтарын томалайҙыр инде. Һыуынырға кәрәк...

– Тәк, уңмағанды ҡыума, тиҙәр... Бигәйбә.

...Әзмәүер йыш-йыш һурып тартты осһоҙло сигаретын. Ғәҙәттә, һағайған, сабырлығын юя барған тәмәкеселәр шулай итә.

– С ними надо бы поосторожней, – тине әзмәүер яшыҡыраҡ әшнәһенә, Рәшит менән Фасил яғына ҡарамай ғына. – Кажется, оба отслужили в армии. Говорят, Рашид – танкист, у того прозвище – Чеченец.

– Ну и что?! Брехня! Наверное, стройбатовцы... Как бывший десантник, я их мигом уложу!

– Нет, нельзя! И я ни слабак, и ни трус, но не намерен лезть в драку. Помнишь Атамана?

Баҡһаң, бынау йолҡош ҡына Лосман (Фазылды беләләр!) малайын – Фасилды яҙатайым арлы-бирле ҡыйнағас, Атаман ҡушаматлы Зәбир тигән ағаһымы – эйе, эйе, элекке физруктары! – мотоцикл менән барып, бер үҙе сасындарҙы өркөтөп киткәнен, тегенән хатта тирә-яҡ ауылдарҙа атаҡлы хулигандарҙың да шөр ебәреүҙәрен хәтергә төшөргәс, икеһе лә өндәшмәне, икеһе лә тындарын үлсәберәк алдылар ҙа ололар яғын күҙ ҡырыйы менән генә ҡараштырҙылар: әһә, «дипломатик һөйләшеү» тамам.

– Эй, Солтан абый, шулай, беҙгә лә рәхәт түгел. Үҙең беләһең, кәсеп табыуҙары ҡыйын хәҙер. Әбдерәш... кисәткәйнем дә үҙен үткәндә... Эх-тә, подвел уважаемый кешене!

Ниндәйҙер «уғлы»ға арендаға беркетелгән, тимәк, яңы хужа файҙаһын күрһен, кесәһенә табыш өстәлһен өсөн ҡырк туғыҙ йылға (туғыҙ, ун туғыҙ ҙа түгел!) йылға һатылған киң алаңғырттың элекке аҫабалары – бураштар шаңҡыған, йәберләнгән халәттә ҡалды. Шаңҡыуҙары, ҡан ҡыҙҙырғыс ярһыуҙары тиҙ баҫылды, ә бына алданыу, дөрөҫөрәге, һемәйеү тойғоһо алҡымдарына тығылғандай булды. Һемәйеү тигәне әҙәм балаһын ғүмере буйы оҙатып барыуы, улай ғына түгел, атанан улға, әсәнән ҡыҙға күсеүе бар – ошоноһо айырыуса бәғер өткөс, хәтерҙе кимергес кисереш икән илһөйәр, ерһөйәр бәндәләр өсөн.

* * *

Хәлбуки, үҫмер студент, бер ни булмағандай йәһәт ҡыланып, табынға саҡырҙы. Ләм-мимһеҙ ҡуйы сәй һемереп, арлыбирле көйшәнеп ултырҙылар. Бүтән саҡта эсеп туйғыһыҙ сәй әле ниңәлер татһыҙ кеүек. Башҡа саҡта эргәләге ҡыуаҡлыҡта ҡоштарҙың һайрауы йәнгә рәхәт өҫтәр ине, әле – маҙаға тейгән һымаҡ. Өндәшмәй ултырыуы ла ҡыйын.

– Нимә ти, әтей? – Марат ике буйһыу ҡорҙаштың әлеңгә һүҙ айышын тиҙерәк белергә теләй. Хәҙер, бына хәҙер йә «Беларусь», йә бесән йыйғысҡа ултырасаҡ таһа. Махсус уҡып сыҡмаһа ла, ваҡ-төйәк техникаға барымлы бит. Бая бында әллә ҡасанғы «Москвич»ты ҡайһылай тигеҙ генә алып килде.

– Анауы йыл Динестә ҡунаҡ булдыҡ та, тәк, төнгә ҡалып, ошо тирәнән ҡайтып барһаҡ Сәйҙә Басировна менән, ана-ау яҡта... – Хажиморатович аяҡ бөкләп ултырған еренән касаһыҙ ҡулын баҫыуҙар, һирәк ағаслы яландар, ә төптәрәк ҡуйы урман һыҙаты һәм еңелсә тулҡынланып көнбайыштан көньяҡҡа арҡыры һуҙылған тәпәш һырт яғына ишараланы. – Ҡапыл аяҙҙа күк күкрәнеме, тә-әк, әйләнеп ҡараһаҡ, донъя яҡтырып, болотка ҡәҙәре утлы шар эленгән һымаҡ булды. Оло Теләктә поездар һәләкәтен ошонан күрҙек. – Иҫтәлеге ҡуйырманы, хәбәре икенсе юҫыҡҡа күсте. – Так што, ярайһы ҡалҡыуҙа ултырабыҙ беҙ, аҫаба бейҙәр кеүек. Һуңғы ултырыуыбыҙ булыр. Анауҙағы урмандарҙы ла, – инде Солтан эйәге менән көнсығышҡа ымланы, – тиҙҙән арендаға осорһалар, тә-әк, бәшмәк йә еләк йыйырға әллә рөхсәт, әллә юҡ... Яңы Урман кодексын әҙерләй Мәскәү.

Тай-тулаҡ өнһөҙ ҡалған. Сиңерткә сырлауы ғына боҙған кеүек тәбиғи тынлыҡты.

Төнгө ҡараңғыла поездар бәрелешен алыҫтан уҡ шәйләнгәнде махсус хәтерләгәндерме, тиҙҙән Солтандың фекер айышы үҙенән-үҙе аңлашылды:

– Ә беҙ көпә-көндөҙ бәрелешә яҙҙыҡ. Так што, хәйерле сәғәттә үксәбеҙҙе ялтыратайыҡ һатылған ерҙән, эйеме, Марат Солтанович? – Элекке уҡытыусы ҡай саҡ улын да, ҡатынын да исем-шәрифтәре менән телгә алғылай. – Яңы хужаларҙың бөртөк үләнен дә өҙҙөрмәҫкә хаҡы бар. Ниңәлер был хаҡта Рәшит туған белмәгән... – Солтандың «туған» тиеүе был юлы нисектер ҡоро әйтелде, туғансыл ишетелмәне.

– Кем уйлаған?.. Туҡтағыҙ әле, чуртым, барып киләйем...

Рәшит йырын аръяғына һәләт һәм тәүәккәл генә барып етте.

Һүҙҙең асығы кәрәк... Бая Солтан Хажиморатович менән ҡара-ҡаршы аяғөҫтө бәхәскә ингән ирҙең ҡарындашы менән... Рәшиттең буталғанын Фасил да әҙ-мәҙ белә. Исеме Мая, шикелле. «Йәшем дә үтеп бара, үҙ милләтемдән һоратыусы барҙа йәнә бәхетемде һынап, кейәүгә барып ҡалайым» тимәй унынһы. Ашханала буфетсымы шул. Ә бит уны Рәшит балалы көйө алмаҡсы. Биш йәшлек ҡыҙ үҫтерә, буғай. Чечняла аҙ-маҙ һуғышта ҡатнашып ҡайтҡан, тиҙәр ине сыуаш ирен. Һунарҙа ҡырҙан килгән кешеләр менән ыҙғышып, кемделер айыу бысағы менән яралап, төрмәгә эләгә, ә зонала «авторитеттар»ға баш бирмәгән өсөнмө, үҙен дә харап итәләр. Быныһы – сала-сарпы ғына хәбәрҙәр. Ни тиһәң дә, Динес ул тиклем яҡын да түгел Бурашҡа, өҫтәүсенә, бында Сасынға ҡарағанда ла күберәк милләт – ҡырҡ ата балаһы көн күрә. Һуңғы йылдары үҙенең йәмләнеп, ҙурайып барыуын әйт әле. Газ үткән, юлдары арыу, үҙҙәрендә ҡалас-малас бешә, балыҡ тоҙлау, колбаса ыҫлау цехтары бар, көнө-төнө пилорама эшләй. Йә, эргәлә генә урман була тороп, сасындар, бураштар ҡиммәткә төшөрөп такта-маҡта ташыһынсы шунан.

«Нисек кенә йәмле, йәшәүгә ҡулай булмаһын, таҙҙың да һауаһы бар тигәндәй, ярым һуҡыр әсәһен ташлап, Рәшит Динестәге балалы буфетсы йортона барып инергә теләмәйҙер. Йортка кергәнсе, утка кер – ана нисек тыя халыҡ аҡылы» Тәмәжник дуҫы эргәһенән һыр бирмәгән кешеләй уҙып киткәс, күңеленән ошо уйҙарҙы, ошо һынамыштарҙы елгәрҙе Фасил.

## 3

Бураштан Динескә йәшләй генә килен булып төшкән ике туған ҡәрҙәшенең алтмыш йәшен туйларға барғанда таныша Рәшит Мая менән. Юбилярҙың ут күршеһе булғанға, мәжлестә Мая ла ҡатнаша. Кейенеп, ҡырынып алһа, бәғзеләр үҙ күреп

әйтмешләй, ҡарас Әбдерәш тә ҡарар күҙгә апаруҡ шәп ул! Гармун тартып ебәрһә ишшеү...

«Ул-был була күрмәһен» тигән ҡиәфәттә, Фасил да дәррәү генә тейәү эше башланған яҡҡа һеңгәҙәберәк атланы. Бураштарҙан тик ул ғына күрҙе: тегеләрҙән баяғы олораҡ һонтор ирекәй ҡысҡырып әрләй-һүгә – кем аңлаһын, кем ишетһен аулаҡта, тиҙер – тимер һәнәгенең һабын арҡаһына терәп тигәндәй, Рәшитте элекке сәғәт гирендәй башаҡтары еңелсә бәүелгән екән ялмаған йырынға хәтлем оҙатып килде.

– Ҡабат беҙҙең урамға аяҡ баҫһаңмы?! Смотри, бестереп ҡайтарам. Итак минең биттән көләләр: родной сестренкаңды прокатка биреп ҡуйғанһың Бураш бурына, тиҙәр.

Фасил Динес кешеһенең туҙыныуын яҙа-йоҙа аңғарҙы. Бәндәнең әрләшеүе лә, янауы ла хаттин ашмағандай. Тимәк, Рәшиттең ике йыл буйы ауылдарына килеп-ҡуныш ҡына йөрөүе Маяның ағаһына һис оҡшамай. Оҡшамаҫ та. Ни алмай, ни ҡуймай ҡыяла шул Рәшит, бите ҡояшта уңған бынау ҡарасмандың күрекле генә һеңлеһен ләститкә батырып. Уныһы ла... тағы берәй бала табып арҡанлаһа ла бата бит инде. Күңеле бысраҡ түгел дә Рәшит әшнәһенең, түгел.

Эйе, эйе, ғәрлегендән ят та ул: «прокатка биргәнһең» тип мыҫҡыл иткәндәр ҙәһә баяғы әзмәүерҙәр абзыйҙы күмәк кеше араһында.

Бураш буры... Тимәк, тегеләргә электр сымының сәлдерелеүе лә мәғлүм. Быныһы – Фасилдың да зитына буйтым тейгән ләстит...

Рәшиттең Фасилдан әллә ни сере юҡ. Йә мотоциклда, йә һыбай, йә йәйәүләп ошо юлдан йөрөп ҡайтһа, маҡтанғандай итә: «Шунса таяҡ ташланы абыйың... Сәпсим алып ҡайтыр инем дә, ниңәлер ризалашмай. Йөрөмә, тиһә, күптән ташлар инем дә бүтән кәләш эҙләп алыр инем. Юҡ, әйтмәй...» «Местный егеттәр ҙә ымһына миңә», – тип тә йәнен үртәгеләй икән, етмәһә. Ә-һә... Ярым һуҡыр әсәһен ҡарау мәшәҡәтенән ҡурҡалыр сибәркәй. Исмаһам, пенсияһы мулыраҡ түгел, тип тә ыҫҡындырғанмы шул буфетчица. Харап ҡупырым, һауалы ғына, фырт кейенә, тиҙәр үҙен. Әлләсе... Кеше һүҙенә ышаныуы ла ҡыйын. Һо-о, күҙленән таҙараҡ ҡарай ҙаһа донъяһын Камила ҡортка.

Егеттәр мыштым ғына усаҡ янына әйләнеп килде.

– Солтан абзый, ғәфү ит... Көсөгөҙ еткәнсе бер рейс тейәп алып ҡайтығыҙ, тинеләр. Арбаға түгел, һөйрәткегә ҡутара һалып тарттырам аҙбарыңа саҡлы. Һарҡыуға ла ҡайтаһы юл... – тине тауышы нәҙекләнгән Рәшит.

– Бер рейс... Һөйрәтке... Әҙәм көлдөрөп! Тәк, Рәшит туғанҡай, талашлы бесәндең хәжәте бер тин! Әйҙә, Марат, йыйын...

Иртәгә мунса инәһең, иртәнән һуң – юлға. Ә миңә... – Улы карышкак үҫмерҙәй турһайып ризыктарҙы төйнәштерергә керешкәйне, атаһы яҫы козыреклы баскеткаһын батырыбырак кейҙе лә ниндәйҙер хәсрәтле лә, хәстәрле лә юҫыкта өҫтәп куйҙы: – Ашамлык калһын... абзыйҙарыңа.

«Ә миңә...» тигәндә, Хажиморатович үҙенең быйыл ни бары утыҙлап укыусы шөғөлләнәсәк мәктәптә, педагогик хеҙмәт ветераны буларак, әңгәмә уҙғарасағын күҙ уңында тотоп, беленербеленмәҫ кенә йылмайып куйҙы. Дипутат Дилбәр ҙә киләсәк, тигәйне директор катынкай.

Ләм-мим һүҙ әйтеүсе табылманы. Солтан машинаһына ыңғайланы.

– Ярар, егеттәр, бифәйбә. Укыуҙар башлана, тимәк, август бөтә. Көн иҫәбен дә оноттора Бураш тормошо...

Фасилдың үҙ ғәме быҫкый бәғер төбөндә: Лира һауығып өлгөрәме икән 1 сентябргә? Икенсе кайтканында, кыйыулык өсөн әҙ-мәҙ әсе-мәсе йотоштороп, мин һиңә тыныс карай алмайым, Лиракайым-гөлкәйем, тиергәме? Кит, ҫантый, тип кыҙый әсе мыҫкыллаһа, кабак башынан бетон күпергәсә тәкмәсләп тәгәрәргә тура килмәгәйе...

– Күпме сәләркә тәләфләп саптым, дауай, Фасил, буш кайтмайык...

– Бер кәнистер ултыра, касан теләй, шунда килеп алыр, тине бая Солтан абзый. Һин аръякка киткәстен...

Тракторҙан – арбаны, арбанан йыйғысты ыскындырып, тәүгеһенә һуңғыһын кушып алдылар ҙа йәшлек дәрте менән ярайһы кипкән, ярайһы төшөмлө бесәнде йыйырға керештеләр. Был арала арғы яландағылар бер йөктө оҙатып, икенсе рейска әҙерләнә ине. Әйтәгүр, теңкәгә теймәҫ, бәрәкәте кәмемәҫ борон нык кыбырлағанды ярата бесән эше.

Шулай уйлап та өлгөрмәне Фасил, аръяктан ҙур булмаған йылкы өйөрө елдереүен шәйләне. Өйөр йырын кыразында туктағас, ике һыбай көтөүсенең береһе кәүҙәгә харап калкыу күрән атын мышылар ғына үтеп-һүтеп йөрөгән кисеүгә йүнәлтте. Тубыктарына саклы убылған тояктарын баткаклап, урәпсеп-ынтылып бирегә көскә сыкты хайуан. Мин сыккас, һеҙгә лә мөмкин тигәндәй, моронон сөйөп кешнәп ебәргән булды әле. Эйәһе камсы һелтәгәйне, аръяктағы юлдашы һайтһайтлап өйөрҙө – урыҫсарак «табун»ға окшатып «табын» да тиҙәр был төйәктә – был якка борҙо. Бер-береһен тапай яҙып, эреле-ваклы йылкы малы кемуҙарҙан шар та шорт кисеүгә ырғылды, бер алашаһы, яшығы, яй ғына иң аҙак өҫтөрәлде. Егермеләп баш кына йылкы араһында әле сабылған ерҙә ирәүән уйнаклаған алмасыуар колон да, ике-өс кола байтал да, ерән тайҙар ҙа, янбаштарына «Р» келәймәһе – элекке «Родина» кол-

хозы тамғалары көйҙөрөлгән көр бейәләр ҙә бар – хас та Бураш конюшняһы утлауға һибелгән.

Бер-береһенә оҡшаған ағалы-ҡустылы етен сәсле көтөүселәрҙең олпатырағы, «Беларусь» эргәһенә яҡынайып, әҙәпле генә өндәште:

– Бог помощь, ребятки!

Килгәне бар бының Бурашҡа ла еҫкәнеп-темеҫкенеп.

– Ыспасибы, дарагой, взаимны! – тигән булды юрамал һүҙҙәрен боҙоборап кабинаһынан ырғып төшкән Әбдерәш.

Баҡһаң, егеттәргә тотош оло яланда – сабылған, сабылмаған өлөшөндә лә йылҡы көтөргә ҡушылған, имеш. Ләкин күрәләтә сук-сук ҡороған шартый еләктәре ҡатыш кипкән үләнде тапатыу килешмәҫ, өлгөргәнсе йыйығыҙ, тип нәк баяғы бесәнселәр һүҙен ҡабатлағас, ерәнсә егет кирегә боролдо. Тиҙҙән ул ялан ситләп юл ярырға кереште, артынса өйөр ҡуҙғалды: ялмап сығырҙан түгел, тапап сығыу ниәте менән. Йәнәһе, бындағы бесән быйылға һеҙгә лә, беҙгә лә тәтемәһен, сабынлыҡҡа кем хужа икәнен күреп ҡалығыҙ, тигән һымаҡ ине динестәрҙең ҡыланышы.

Оҙаҡҡа барманы Әбдерәштең сыҙамы. Тәмәкеһен тарта-тарта:

– Ашап туймағанды ялап туймабыҙ, ҡайттыҡ, дуҫтым, – тине, ҡыҙарған күҙен секерәйтеп. – Баш та зәңкей... Бар ине бая абзыйҙыҡы, бар ине кәрзиненд ә ялпаҡ эшкәлиге, ны-ы-у мин оялған булдым һорарға, чуртым.

Өндәшмәҫ Фасил, бармаҡ остары менән ҡымтып осһоҙло ҡытай футболкаһын һелккесләгәс, ни хәл итәһең тигәндәй, устарын яҙҙы.

* * *

Ҡайтышлай, юлда туҡтап, Солтан ҡыр сәскәләре йыйып апҡайтырға теләне. Шыпа буш ҡул ҡайтып инеү килешмәҫ. Ярай әле, ат алам тип, Фазылдан башҡаға шапырынманы. Дөрөҫ, ҡатыны белә, улы ла белә. Белмәһә, бына, һүҙ башлар инеме:

– Атты киләһе йыл аҫырарбыҙ, әткәй, – тип. – Идея! Быйыл тренажер алырға кәрәк. Бөтәбеҙгә лә файҙалы. Ат хаҡына табып була, Уфала йә Бирскиҙа...

Әйләнеп ҡараны Солтан улына! Вәт баш! Ейәнсәренә лә файҙалы. Үҙенә вә Сәйҙәһенә – айырыуса. Май бөрә башланы юғиһә икеһенең дә эс тирәһен быйылдары. Хәйер, ниңә аптырарға? Йылдар үтә, йәш үҙенекен итә.

Күкле-һарылы гөлләмә өҙөп алһа ла, Солтандың кәйефе төшөнкөрәк. Кибә башлаған балтырған, әрекмән япраҡтарын төмөҙ өҫтөнә йәйеп, ултырып ял алды хатта бер аҙ. Эргәһенә улы яҡынланы.

– Күңелем һиҙгәйне... Тәк, Марат, көндөҙ һин ҡуян юлды ҡыйып аша сыҡҡанын күргәнһең, эйеме?

– Йылп итеп ҡалды покоска етер алдынан ғына, – тине лә улы атаһының күҙенә ҡараны. – Солтан Хажиморатович, тарих уҡытҡанда һеҙ дәреслектә яҙылмаған ҡыҙыҡлы нәмәләр өҫтәп һөйләр инегеҙ. Әле иҫкә төштө: Пушкин Декабристар восстаниеһына ҡушылырға китеп барғанда, экипажының юлын ҡуян ҡыя – шағир кучерға аттарын кире борорға бойора...

– Дөп-дөрөҫ. Шунлыҡтан бөйөк шағир былай ҙа ҡыҫҡа ғүмерен бер аҙ оҙайтыуға өлгәшә. Фетнәгә юлыҡһа, аҫтырыр ине батша.

– Ә бая Әбдерәштең арҡаһына һәнәк һабы менән төртә яҙғандарын яҙа-йоҙа күреп ҡалдым да йәнә дәрестәме әллә экскурсияламы һөйләгәнеңде хәтерләнем. Колхоз ойоштороғанда Бурашта ла үлтереш булған, тигәйнең...

. – Контрҙар кеше яллап үлтертә тәүге колхоз председателен. Арҡаһына балыҡсылар боҙ тишә торған һөймән ҡаҙап ҡаса, тәэк, теге бахыр төнө буйы йән бирә алмай ыҙалай. Ер тип ашҡына ине, ер ашап ята хәҙер, тип үсәгән аҙаҡ синфи дошмандар. Сания апайҙың атаһын... Апай ун өс йәшендә генәме етем ҡала: әсәһе тифтан йығыла, ярай әле, үҙен атаһының энеһе аҫырауға алып, астан үлтермәй аяҡҡа баҫтыра. Сания апайҙа фатирҙа торҙом мин бер-ике йыл. Әнкәйеңә өйләнгәнсе...

– Һөйләгәйне әнкәй.

– Тарих факультетында уҡырға ине һиңә, улым, – тине атаһы тороп өҫ-башын ҡаҡҡылағанда. – Күҙәтеүсәнлегең бар... Йәл, беҙҙең башҡорт үҙ тарихын йомшаҡ белә.

– Инеп булманы бит.

Эйе, конкурстан үтә алманы Марат университетҡа һынау тотҡанда. Ни атаһы эйәреп килмәне: «Көсләп асҡан күҙҙең яҡтыһы юҡ. Мин хәләл көсөм менән уҡып сыҡтым. Арттан этеүсе лә, экзаменаторҙарға взятка төртөүсе лә булманы. Төр-төрлөк аҡсабыҙ ҙа юҡ ине. Беҙҙең иҫәрҙәр дәүләте элек бер һыйырҙан, дүрт һарыҡтан башҡа мал аҫыратманы... Вузға барырға теләүеңде хуплайым», – тип ҡалғайны ла, Маратты һөйөндөрөп ҡайтманы. Аптырағас, һыпыртты улы Стәрлетамаҡ педагогия колледжына, быйыл ана шуның өсөнсө курсына барасаҡ.

– Тә-әк, Стәрлене бөткәс, үҙеңә оҡшаған ғына мәктәптә эш башларһың да истфакты заочно бөтөрһөң. – Атаһы улының алдағы яҙмышын шулайыраҡ тоҫмаллап ҡуйҙы.

– Кәңәшегеҙҙе тоторға тырышырмын, Солтан Хажиморатович! – Студент машина яғына алданыраҡ тартылды. – Бигерәк тә әткәйҙең...

Харап, юмор ҙа юк түгел үҙендә. Унынсыла укып йөрөгәндәме, дәрестә сакта башкалар ыңғайына «ағай» йә «әткәй-әтей» тип өндәшергә уңайһыҙланып, «Солтан Хажиморатович» тип ҡул күтәрергә күнеккәйне Марат. Бер сак, ҡыҫталған, имеш, һөйөклө малайкаһы – «әткәй» тип ыскындырғас, көлкөгә һабыштырып, тәкәтен ҡоротто иптәштәре.

– Иртәгә 30-ы, август 31-нән бөтә, – тине улы. – Апайымдар алып ҡайта Әлфирәне. Мин дә ултырып китәм машиналарына. Бөгөн-иртәгә бесән эшләшермен тигәйнем – булманы, – оло кешеләрсә һөйләнде Марат. Атаһы өндәшмәне, бер аҙ барғас ҡына, дыңғырҙаған машина ыңғайына мөңгөрҙәп ҡуйҙы.

– Буш ҡул ҡайтканға өйҙәгеләр әрләмәҫ ул? – тип тә һөйләнде Марат.

– Тәк, тәк... Ҡарап бар, Марат, дәү таш ята ине элек ошонда. Рулгә йәбештеңме, гелән һаҡ бул. Уҡыған ереңдә лә абай йөрө. Ана бит, студентка Лира әллә укып бөтөрә, әллә юк. Би-ик тырыш, тәк, зирәк тә... Уфаға тағы киткән ти әле. Өйҙәгеләрме? Әрләмәҫ... Әлфирәгә сәскә тотторам, ҡуян ебәрҙе, тип. Эстәрлегә ҡайтҡыһы килмәй әле ул баланың... – Ҡайҙандыр Зәриә иҫенә төштө. – Зәриә апайың да шәп ине укыуға. Йәл, юғары белемгә ынтылманы. Шыма, ипле генә шиғырҙар яҙыр ине стенгәзиткә. Хәҙер төртмәс, әтәк-һәтәк сығарырға әүәҫ. Тәк...

«Москвич»тың (һәнәк-тырмалы көйө?!) иртәрәк ҡайтыуына Сәйҙә лә, тәнәй Әлфирәгә ҡот ҡойоп бөтөп кенә барған Дилбәр ҙә артыҡ аптыраманы. Бары тик ҡапка асҡанда ғына, Дилбәр ҡушканса, Сәйҙә Солтандан һораны.

– Нимә апкайттың?

– Апкайтманым, тәк, бесән үҫә торһон, тинем, – тип башваткыслы яуап бирҙе Солтан. «Кот апкайттым, тип әйт, йолаһы шулай», – тип шыбырланы ла Сәйҙә, маңлай сәстәрен ҡаплап бәйләгән яулығын төҙәткеләне.

– Нимә апкайттың? – Сәйҙәнең тауышы ипле.

– Ҡот апкайттым! – Солтандыкы ғәйрәтле.

Өс мәртәбә ҡабатланды әйтеш. Ҡара, Дипутат апай әллә ҡот ҡойорға ла маһирмы?

Яйлап тамаҡ ялғаған арала болондағы мажаралар хакында Солтан да, Марат та сиселмәне. Уның ҡарауы, ҡатындар алмаштилмәш һөйләнде. Үҙе ғүмерҙә бала бакмаған Дилбәрҙең дә хәбәре урынлы, татлы:

– Үҙ балаң – ер еләге, баландың балаһы – ҡурай еләге, ти торғайны әткәйем...

– Әлфирәбеҙ Эстәрлегә ҡайтырға ҡурҡа бит. Әсәһе яҙ ванна ремонтлап йөрөгән, противогаз кейеп. Әлфирә «мам!» тип керһә – сынаяҡ аҫтылай ике быяла күҙ тора аҡайып. Бәпкәйем ебәрә сарбайлап, ҡаса, шкаф эсенә инеп йәшенә...

Солтан менән Марат өндәшмәйерәк ултырҙы. Уның ҡарауы, Дилбәр һөйләнсекләнде.

– Ваннаһыҙ өйҙә йәшәгем килә, ти бит, әй, сабый. Хоҙайҙан һорайһың инде, тигәйнем, ҡалайтып ҡына һорарға икән, тигән була, вәт замана балаһы! Ҡото уңай ҡойолдо – ҡурғаш өс тапҡыр кәмәгә оҡшаны. Кәмә ней – ванны инде. Һаман йөрәк сыҡмаған, Сәйҙәне, бар, урамдан ҡот алҡайт тип, урамға ебәрһәм, үҙегеҙ ҡайтып индегеҙ. Кәнде шунда шартлап йөрәк төштө. Баш аҫтына һалып йоҡлатығыҙ йә муйынында йөрөтһөн әҙерәк.

...Ҡот ҡойоуы килешкәндерме, Әлфирә үҙен, Марат абыҡайын Эстәрлегә алып ҡайтыр өсөн килгән атаһының ыҡсым «Ока» машинаһына кистән яҡын да бармағайны, иртәгәһенә, өлкәндәр хушлашҡанда, Маратҡа әүрәп, артыҡ һыңҡырламай ғына кабинаға инеп урынлашты. «Эстәрлегә түгел, паромды күрергә баралар» ҙаһа. Күмәкләп.

Солтандың йылмайып «тәк»елдәүе күп мәғәнә аңлата торған.

4

Был көндәрҙә Лира, ябайыраҡ әйткәндә, эстән ҡайышты. Ҡайышыр ҙа... Уҡыу башланырға тора – һаман «һин ауырыйһың» тип тә өҙә һукмайҙар, ҡасан сығарасаҡтарын да тоҫмаллатмайҙар. Анауы яурыны тарыраҡ булғанға башы ҙурыраҡ күренгән, аҡһыл-йәшел күҙе ише йәшкелт халат кейгән йәш табип, хәленә кергән һымаҡ, һөйләнеп торғайны дежурҙа сағында. Коридорҙа тап булышҡайнылар. Ял көнө, аулағыраҡ кис ине. Ҡыҙыҡһынды: «Күпме ятаһың, Кәримова? «Дүрт ай» – тип арттырыбыраҡ яуапланы ҡыҙый. «Бәй, стаҫионар дауалауҙың ҫрогы...» – туктап ҡалды шунда егет. Моғайын, «срогы етә» тиергә теләгәндер. Теләгәндер ҙә, хәйләһеҙ дауаланған пациентканы бушҡа өмөтләндермәйем әле тип, әйтеп бөтөрмәгәндер. Һәр хәлдә Лираға рәхәт түгел. Курсташтары зыу килеп ятаҡҡа тула, уны-быны йыйыштыралыр бүлмәләрендә. Өҫтәүенә, тәүге семестрҙа хәтәр генә зачет тора. Ауыр ҙа фән түгел ул, тик әсбап етешмәүе бәкәлгә һуға. Ғәжәп заман! Матур тышлы шаҡы-шоҡо китаптар – аҙым һайын, ә кәрәк кенә студент әсбабына – ҡытлыҡ. Ни компьютер версияһын ҡиммәткә һаталар, тиме. Етмәһә, бик талапсан, үтә ваҡсыл доцент өҫтәлмә һорауҙары менән ыҙалата, ти, студенттарҙы. Тимәк, үҙенә шылтыраттымы, Данир аша ҡулға төшөрөү фарыҙдыр ул әсбапты. Башҡаса кемгә йомош ҡушаһың, өмөт тотаһың? Аһ-аһ... Нәҡ әлеге әсбапты юллап, Светлана «пипелдәне» микән анау ямғыр быҫҡаҡлаған көндө? Булыуы ихтимал, бик тә ихтимал. Светлананы уҡыуҙан шәп өлгәшә, тимәҫһең.

Беренсе сентябрь уҙҙы. Көндөң байрамса икәнлеген дауаланыусылар ҙа, дауалаусылар ҙа һиҙә. Уҡыуға төшкәндәр араһында кемдеңдер улы йә ҡыҙы, кемдеңдер ейәне йә ейәнсәре осраштырмай тиме.

Иртәгәһенә кисерәк шылтыратты Лира. Данир телефонын ҡарһаланып ҡабыҙған кеүек тойолдо ҡыҙға; диванынанмы, ҡәнәфиҙәнме һыпырылып аяғүрә баҫты, буғай. «Рыцарҙар ҡатын-ҡыҙ менән аяғөҫтө һөйләшергә тейеш!» – тигән йүгерек һынамыш уҙҙы ҡыҙ күңеленән.

Лира уға йомошон ҡоро ғына белгертте. Данир шунда уҡ аңланы – Светлана ла әлеге китап менән ҡаңғырып, хатта өйгә килеп йөрөгән! «Һин эҙләгән әсбап миндә бар, иртәгә үк, бик кәрәкһә, хәҙер үк барам», – тип уйынлы-ысынлы елкенде. Шулай ҙа егет аспирантура буйынса йыйылған мәшәкәттәрен иҫләгәс, ә Лира китапты артыҡ ҡабаландырмағас, шәмбе көн сәғәт биштәрҙә осрашырға һүҙ беркеттеләр. Ҡыҙыҡ: гүйә, тәүләп осрашалар. Бер-береңә һыр бирмәҫкә маташыу ана ниндәй әкәмәттәргә төртөлдөрә.

Тайсиндар ғаиләһе ҡунаҡлашып йәшәргә әллә ни ғәҙәтләнмәгән. Хужа хәмерҙе буйтым һемерҙе заманында – етте; булды – тәмһеҙләшеүе лә, башҡаһы ла. Насар ғәҙәттән арынғандар ҡәҙимге ҡунаҡҡа йөрөүҙән ҡабат эскегә һалыша торған, Аллам һаҡлаһын! Ике яҡлап та ҡәрҙәштәре, дуҫ-иштәре самаһыҙ күп түгел, «абитур»ҙарын етәкләп, фатирҙарына иң яҡындары ғына килеп төшкөләй – үҙҙәренең күстәнәсе менән күп осраҡта үҙҙәре һыйлана. Марс Нәбиевичмы һуң инде һәр бала артынан ах та ух сабаулап, экзаменаторҙарҙы яйлап-майлап, йөҙ һыуын түгеп йөрөр ир? Кәңәшен бирер, уңыш теләр – вәссәләм. Миләүшә Ғәлиевна яр һалмай ғына, барыбер ҙә ниндәйҙер ярҙам күрһәтергә тырыша. Шылтырата, уны-быны белешә, хатта ки физика-математика профилен һайлағандарға өйөндә бушлай консультациялар ойоштора.

Ҡасандыр Тайсиндарҙың тел ярҙамы менән вузды бөтөп, өйләнеп, арыу ғына төҙөлөш фирмаһында эшләп йөрөгән йәшерәк бер инженер, үҙе әйтмешләй, «бай мишәр ҡайныһы»нан ҡалған яландай фатиры бар өҫтөнә яйлап-яйлап ҡына Дим тамағына яҡын күл ярына коттедж һалдырған икән. Ана шул «яңы башҡорт» Тайсиндарҙы ҡунаҡҡа, хатта ҡунып ҡайтырға дачаларына саҡырған да, сәғәт биш тә утыҙ минутта үҙегеҙҙе машина менән алып китәбеҙ, спортивныйыраҡ кейенһәгеҙ ҙә ярай, тигән. Эйе, кисәме, өсөнсө көнмө, ҡайҙалыр уҙып барышлай, өйҙәренә махсус һуғылып, телефондарын ҡалдырып сыҡты лаһа. Данирҙы ла «ял итергә» өгөтләне, унылһы юҡ-бар һылтау табып, һыңғырлай башлағас, мәрәкәләп алды: «Ну смотри, минең эш – саҡырыу, һинең эш – отказ биреү. Сутәки һин

туйыңдан ҡалдырма, йәме. Олатайҙар бик дуҫ булған заманында, фәҡир генә башҡорт ауылында. Ниңә беҙгә лә бергә-бергә йәшәмәҫкә? Саҡырһаң да, саҡырмаһаң да барам туйыңа еңгәсәйең менән. Бабаҡайым әйтә торғайны: «Без — мишәр, первый сорт татар», — тип, так што, аптырама, йәме?!»

— Яҡшы, абзый, яҡшы, — тип ҡотолғанын һиҙмәй ҙә ҡалды Данир, гүйә, иртәгәләрҙә үк — туй. Быны ишетеп, әсәһенең дә йөҙөнә йылмайыу сатҡылары сәселде. «Әгәр шәмбе көнө Лира эргәһенә йыйынмаһам, дачағыҙға барыр ҙа инем, абзый. Усаҡ янында көйшәһәң, эсте тишмәҫ ине тауыҡ шешлеге. Сауна! Бассейның да бармы, буржуй? Эре сирттерһәң дә, атам-әсәмдең әллә ҡасанғы изгелеген онотмағаһың, хөрт әҙәм түгелһеңдер...»

...Шәмбелә атаһы үҙ бүлмәһендә тыз-быз ҡырынған, әсәһе дәү сумкаға простыня-маҙар, халаттарын тәҫләп һалған арала, Данир, һәләт кенә кейенеп-төҙәтенеп, ҡултығына гәзиткә төрөүле әсбапты ҡыҫтырып, тышҡа ыңғайланы.

— Ҡайҙа бараһың, Данир?

— Ә-ә-ә... — «Әл дә һораның» тигәндәй, улы күңелсәк ҡарашын һирпте лә йоҡа куртка кеҫәһенән ҡуш аҫҡыс бәйләмен сығарҙы. — Бына, өй аҫҡысын алдым, һеҙ ҙә алығыҙ.

— Әле ҡайҙа бараһың, тим?

— Бер учебник артынан...

— Тегенеһе лә, быныһы ла китап эҙләй, — Миләүшә баҫалҡы ғына мөңгөрләне. — Ҡара уны, теләһә кемдә йыйып ултырма ойгә. Оҙаҡ та йөрөмә тышта. «Домушник»тар юҡ-бар нәмәне урлап ҡасыр... Кәнде кеше баҡсала саҡта, шәмбе-йәкшәмбе топәләр, ти.

Ишек ябылғас, өйҙә кеше кәмеп, тынлыҡ урынлашыуға, Нәбиевич күренде. Футболка өҫтөнән ветровка, лампаслы спортивка кейгән — берәй тренер тип уйларһың.

— А-ба! — тип тел сартлатты ҡатыны, тик ире генә быға иғтибар итмәне.

— Ә ҡайҙа беҙҙең вундеркинд?

— Ниндәйҙер учебное пособие кәрәк тиме?

— Уға кәрәкме әллә үткәндәге модницағамы? Быныһы вопрос... — Аңлатма көтмәгән кешеләй, Марс лоджияға аҙымланы. — Күренмәйме земляктың иномаркаһы?

Ғөмүмән, аяҙҙарҙа Марс лоджияларында һауа һулап, унда-бында күҙ һалып, уйланып торорға ярата. Элегерәк йәшенеп эсе мәсе йотҡоларға ла, томра саҡта яланғас тән дә сыҡҡылай ине. Өсөнсө ҡаттағы ярым ябыҡ лоджияларының эсе өҫтән дә, аҫтан да бигүк күренмәй, киң немец тәҙрәләре менән көпләнгән.

Уҙған аҙналамы әле, танауы тымаулау сәбәпле эшкә бармаған көндө, иртәнсәк ошолай сығып торҙо тәҙрәнән муйынын һоноп. Беренсе ҡатта йәшәгән ярайһы теремек, якты сырайлы әбекәй – хохлушка, тиҙәр, – көн аша тиерлек таң һарыһынан картуфлы бируктәр бешереп, эҫеләй генә ҡалын сепрәккә төрә лә, сумкалы тачкаһына тейәп, якындағы төҙөлөштәргә һатырға юллана. Көйгән шыйыҡ май – һыҙлыҡ еҫе ҡай саҡ таңға тотош подъезды алғылай. Ана шул әбекәй китешләй мотлаҡ подъезд мөйөшөндә сыуалған берәҙәк бесәйҙәргә тауыҡ кимерсәктәрен, бешкән йә сей балыҡ баштарын ҡалдыра. Анауы көн теге ярты кәнсир һөт ҡуйҙы ла үҙ кәсебенә ашыҡты. Бесәйҙәр, үҙ сиратын бутамай, һөткәйгә ябырылғансы... бер босоҡтанау бомж кәнсирҙе һемерә һалып, кеше-ҡара шәйләмәҫ борон типме, ҡайҙалыр шылды. Бомж тиеүе лә ҡыйын әле үҙен. Өҫ-башы ул ҡәҙәре әрпеш, көлһыу сәсе, һаҡал-мыйығы етек түгел. Нисектер уйсан монахты ла хәтерләтеп ҡуя ҡиәфәте. Уныһы мөһим түгел. Мөһиме – мырылдыҡтар өлөшөнә икенсе тапҡыр тығылыуы.

Яңыраҡ булды быныһы. Әбекәйҙән күрмәксе, подъездан йәнә бер миһырбанлы тол ҡатын һанда-һаяҡ гәзит битенә услап-услап ҡипкән ит – рекламаға ышанһаң, мыяубайҙар өсөн иң татлы, иң туҡлыҡлы «Китэкэт» төйөрсөктәрен һибеп инә. Ауыҙына эт төкөргөр бәндә шуны кеҫәһенә ҡоя һалып алды ла киттесе! Һемәйешкән бесәйҙәр яланышып тор ҙа ҡал. Берәй ерҙән күҙәтеп тормағандыр-тороуын босоҡтанау асарбаҡ, иллә нәк шул уҙышлай ризыҡ һалыныуы, етмәһә, өҫтән Марстың күҙәтеп тороуы – бер түгел, икенсегә бит әле. Тәү тапҡыр Марс ирекһеҙҙән ҡуш услап битен баҫып, йәнәштәге тәпәш табуретҡаға терәлергә мәжбүр булды. Ил өсөн оялыштан, урамда ас йөрөгән замандашы өсөн ҡыҙарыныуҙан ҡапланы, буғай, йөҙөн.

Һәм... уйға ҡалды. Нәк ошондай темаға йәй башындараҡ үҙәк телевидение күрһәткән сюжет иҫенә төштө. Ундағы күренеш күпкә тетрәндергес, күпкә хәтәрерәк һәм фәлсәфи яҡтан да күпкә ғәмләндергес ине.

...Алама кейенгән, буйһыу, арҡаһы көмөрәйгән, сал сәсле, күндәм, мөләйем сырайлы ҡарсыҡ сүп-сар контейнерын таянып йөрөгән саңғы таяғы менән теткеләй, тулғандыра: ашарына эҙләй «баба-яга». Ниҙер тапты, моксаһына һалды. Уф Алла, һорай бит бынан тыҡ-тыҡ баҫып йөрөгән тележурналист ханым, уйларға ла форсат бирмәйенсә:

– Хөрмәтле кеше, һеҙ бәхет төшөнсәһен нисек аңлатыр инегеҙ?

– Бәхетме? Йәшәүең үҙе оло бәхет ул, балаҡай... – ошо булды бәлйерәгән бисараның яуабы.

Йәшәүең – үҙе бәхет!.. Ә ниңә меҫкен ҡарсыҡ «тереклек итеү» тимәй, ә «йәшәүең» ти? Аңламанымы ни һорауҙы? Аңла-

ғаңдыр. Унынса, улер сиккә етеп йән аҫырау ҙа – йәшәугә тиң. Тфү, әллә ниндәй уйҙарға төштөсө... Кем белә, әлеге сюжетты, бәлки, берәй сәхнә ветераны «уйнаған»дыр ҙа компьютерҙа әүеш-тәүеш ипләгәндәрҙер. Улай тиһәң, бигерәк ышандырғыс ине меҫкендең һыны-сырайы. Тештәре юк, арҡаһы көмөрө, сәстәре ап-аҡ... Юкты уйлап торам, тип үҙен эстән генә һүкте Марс Нәбиевич. Ә бит ул әле лоджияға яҙығыраҡ ниәт – Данирҙың ҡай яҡҡа тартылырын күҙләмәк өсөн сыҡҡайны. Проспект яғына атламаны. Уң яҡҡа ла ҡайырылманы, тура ыңғайланы. Трамвай-фәлән туҡталышы алыҫ – рельстарҙы аша сыҡтымы, ярайһы ҡалын, аҙ-маҙ тәрбиәле, күбеһенсә йүкәләр үҫкән урман паркы башлана. Төптәрәкме ниндәйҙер дауахана бар, тиҙәр. Күргәне юк уны Марс Нәбиевичтың. Күрергә лә яҙмаһын. Әгәр Данир һөйөклөһө менән паркта осрашһа, ни ғәйебе?

...Подъезд алдына танк һымаҡ ҙалҡыу, ҡеүәтле ҡара «джип» килеп туҡтамаһа, инженер-ғалим һаман һиңмайҙарса тора бирер ине.

– Киттек әле кеше дачаһына... – Нәбиевичтың тауышында үҙ дачаһы булмауға үкенес тә, тиҙҙән мунса төшәсәгенән кинәнес тә сағылды, шикелле. Кеше дачаһына, ти ҙәһә.

* * *

Данирҙан бигерәк китапты көтәүләгәндерме, Лира егетте оло ҡапҡа тирәһендә үк ҡаршыланы һәм сәләмләшкәс тә әсбаптың башын-аҙағын, авторы хаҡында белешмәне ҡараштырып алды. Нисауа, быныҥ буйынса ла имтиханды геүләтеп бирәсәк, әллә нимәһе юк кеүек. Лекцияларында ойпаланған салбар кейергә яратҡан йыуантыҡ профессор үҙе лә асыҡтан-асыҡ иҫкәрткеләй, имеш: «Был фәндән үҙем дә абсолютно «бишле»гә белмәйем. Сөнки уның асылып бөтмәгән положениелары – бихисап!»

Үткәндәге тыртандауы һаман бөтмәгәнме, Лира әле үҙен сәйер, хатта дорфа тотҡандай.

– Мин заниматься иткәс, Светланаға бирәһеңдер?.. – Китапты һыйпаштырып, тексәйә биреп көтөлмәгән һорау сәпәмәһенме! Ыҡ-мыҡ итте егет, аптырағас, яурындарын һелкетте.

– Вот так-то, Сара түтәй әйтмешләй, нишауа низнай, да? Һинең Света менән булған һәр аҙымың билдәле миңә. Ғәйепкә бокмәйем дә...

– Ниҙәр... билдәле? – Егет йылмайып маташты, хәлбүки, сабырлығы юйыла барғаны һиҙелде. – Только без фантазий!

– Бассейнда йөҙгәнегеҙ, аулаҡ квартирҙа икәүләп кенә Светочканың тыуған көнөн – егерме йәш, юбилей! – үткәреүегеҙ...

Танып буйҙарын шаулатҡан Салауат көндәренә барыуығыҙ ҙа, ҡиммәтле кәнфит тотоп, уның өйөгөҙгә килеп йөрөүе лә – все известно. Юк, ҡалай насар, ниңә улайттығыҙ, тип яманларға йә көнләшергә не хочу, бары...

– Ике кәмә ҡойроғо хаҡындағы башҡорт афоризмын күҙ уңында тотаһыңмы? – Ҡыҙҙы бүлдереп, егет үҙ фекерен мыҫҡыллабыраҡ ослап ҡуйҙы. – Слишком много знаешь, мадмеуазель. Больничный режимда көйө... Тыныслан – иртәгә килермен!

– Беләм: Светлананың һинән ауырлы икәне лә миңә мәғлүм!

«Иртәгә килермен» тип килбәтһеҙерәк баҫа-баҫа иркен ҡапҡаға табан ыңғайлаған Данир, ҡапыл туҡтап, кире боролдо һәм бер тынала ярһыулы асыуын тышҡа бөрктө:

– Это же шантаж!

Бераусыҡтан тынысланып, ҡабат ҡыҙ эргәһенә яҡынайғас, ҡәҙимге тауыш менән өҫтәп ҡуйҙы:

– Минең уны үпкәнем дә юҡ. Ә һине үпкәнем бар – һин ауырлыһыңмы?

Өндәшмәне Лира. Былай ҙа ҙур зәңгәрһыу йәшкелт күҙҙәрен шар асып, йылмайырға тырышты, ләкин булдыра алманы, бары ҡупшы ауыҙын берсә асты, берсә йомдо. Бынан файҙаланып, егет аҡланырға, булмышын нахаҡ ғәйбәт быҫрағынан һура бирергә өлгөрҙө.

– Танып буйында случайно күрештек, договориться итеп барманыҡ... Ә тыуған көнөндә бүләкләнем дә ҡайтып киттем. Ышанмаһаң, комендантығыҙҙан һора, ул да бар ине. Эйе, өйөбөҙгә визит яһаны. Килде лә китте. Ишеге бар өйгә кеше инмәйме? Әйт әле, кем юҡ-бар «деза» таратып йөрөй? Ух, мин уны – за моральный ущерб...

– Тыныслан, Данир, миңә низер аңлашылды!

Баҡһаң, кисә көпә-көндөҙ группа исеменән арлы-бирле йыуаса тотоп, Светлананың бүлмәләше, дөрөҫөрәге, ҡуштаны хәл белешеп киткән Лира эргәһенән. Сиселгән был, йәлләүҙәндер, меҫкен Лираға: мине Светик ебәрҙе, тигән. «По великому секрету передай Лирочке – я беременна...» Ах Светлана! Әле генә Данирға «ғәйеп» сүрәтендә тағыла яҙған уйҙырмаларҙы ла, күҙенә теклəп, Лираға еткерергә ҡушҡан. Йәнәһе, Лира һыуындыниһә, Данир – Светаныҡы...

– Шундай ҙа мәкер булыр икән кешелә! Үҙенең дә ғәйбәткә батырын аңламаймы ни Светик?

– Ярай, онотток... – Лира быны бик етди, ирендәрен ҡымтый-ҡымтый әйтте. – Һинең дә ҡолаҡҡа ятмаған ләститкә тарыуың мөмкин.

– Ләститтең ҡолаҡҡа ята торған ҡөҙрәте бар шул, бар, – тине Данир, тынын йышлап. – Тыңламаҫ инең...

– Нисек тыңламайһың, ти, реаль ваҡиғаларға оҡшатып, художестволы һөйләгәс. Светаның кисәңге фантазияһы хаҡында

бирәүгә лә өндәшмәм, тигәйнем дә... Әҙерәк йәл дә миңә Светочка. Яраталыр һине...

– Яраткан кеше провокатор буламы?!

Байтаҡ кешеләр, күстәнәстәрен ҡәрҙәштәренә ҡалдырып, еңел ҡул менән таралыша башланы. Эргәләренә өс-дүрт кеше яҡынлашҡас, йәштәр өндәшмәй генә газонлы ихатаның аулағыраҡ мөйөшөнә һырыҡты.

– Әйҙә беҙгә, мин үҙем генә өйҙә бөгөн! – Данир кеҫәһенән асҡыс сығарҙы. – Минекеләр гулянкаға китте, өй аулаҡ – я вас приглашаю!

– Ҫ-ҫантый! – Лира әсбапты киң халат кеҫәһенә тыға һалып, ашыҡ-бошоҡ хушлашты ла йылп күҙҙән юғалды.

5

Бураштаиһә Фәнидә шәмбе көн Тимурҙы мәктәпкә үҡ барып алды. Элекке урта мәктәп хәҙер «тулы булмаған... муниципаль...» тип ҡатлы-ҡатлы атала икән. Ремонт яһалған һымаҡ, тик мәктәп, уҡытыу бер сменала ғына барһа ла, элеккесә гөж килмәй – балаларҙың аҙлығы үҙен белгертә. Уҡыусылар, бына, дәрестән сыҡты: береһе оҙон, икенсеһе төпөш, кемелер ун биште уҙған, бәғзеһенә саҡ ун тула. Башланғыс кластарҙа өс йә дүрт кенә парта күренә. Шулай ҙа мәктәптең ҡаралтыһы шаҡтай икән әле. Биҙәлеше лә ярайһы. Ете генә уҡытыусы эшләй, имеш, быйыл. Былтырҙары ашхана ябылған, медсестра штаты ҡыҫҡартылған. Кисә, Тимурҙың һөйләүенсә, Солтан ағай һәм элекке һауынсы Дилбәр апай менән осрашыу уҙғарғандар. Ярай инде.

Дүртенсе класс етәксеһе, Лира төртмәсләгәнсә, «классная дамочка» – йәше буйынса Фәнидәгә тиңдәш ҡатынҡай. Аҫҡы урамда, Фәнидәнең ҡайны-ҡәйнәһенән етемһерәп ҡалған өйгә яҡын йәшәй. Ире – әллә ни мандый алмаған фермер. Әҙ-мәҙ ере, унлап тана-торпоһо, ыҡсымыраҡ йөк машиналары бар. Улдары армияла, ҡыҙҙары – Тимур менән парталаш, кинйәкәстәре Вәлит быйыл беренсегә төштө.

Һи, ханым педагогик эшмәкәрлегендә маҡталмай ҙа, яманланмай ҙа. Ыҫпай кейенә, балаларға ла, ата-әсәләргә лә талапсан булырға маташа, шуның менән хатта күптәрҙе үҙенән биҙҙертә лә ҡуя. Бына әле лә, Фәнидәне шәйләп ҡалыу менән, һил ҡалған класына саҡырҙы, ишекте япманы, – йәнәһе, күрһендәр уның ата-әсәләр менән нисегерәк эшләүен.

– Әйҙүк, Фәнидә Хамматовна, һеҙ йәтеш индегеҙ, – тине теге, ягымлы әйҙүкләп, «һеҙ»ҙән ололоҡлап.

Әсә улына ҡайта торорға ҡушты ла класҡа инде. Тәҙрә

төптәрендә, өҫтәлдәрҙә — 1 сентябргә бүләк ителгән һулыр-һулымаҫ сәскәләр.

— Һеҙҙең өйҙә ауырыу барлығын ишеткәйнем. Шуға берүк Тимурға йоға күрмәһен, санитария йәһәтенән бик һаҡ булығыҙ, тимәксемен. Тимур... минең ҡыҙ менән бер парта артында... — фекерен ослап бөтөртмәй, Фәнидә быны ҡоро ғына бүлдерҙе:

— Борсолмағыҙ, беҙ медиктар күҙәтеүе аҫтында. Яңыраҡ ҡына медсестралар...

— Күреп ҡалдым, элек ваҡытында йөрөнөләр ҙәһә.

— Айына бер инде уларҙың графигы.

— Шулайҙыр ҙа...

— Ай, Аллам, бик ҡурҡһағыҙ, Тимурҙы айырым ултыртығыҙ.

— Үпкәләмәгеҙ, профилактика йәһәтенән генә әйтәм, — тип арлы-бирле йөрөштөрҙө «дамочка». — Бик теләһәгеҙ, Тимурҙы үҙен генә башҡа ултыртам, буш парталар муйынынан.

— Бик теләйбеҙ!

Сасындағы конторщица ҡатын-ҡыҙҙарҙың да яр һалмай ғына үҙенән ятһырауын иҫләп, Фәниденең бәғерен рәнйеткес кәмһенеү, ғәрләнеүгә оҡшаш төңөлөү хисе телгеләне. Ғүмерҙә булмаҫтайҙы... бармаҡ тырпайтып «дамочка»ның шыма битен тырнаҡлағыһы, «унды бөтөп кенә учителька булғанһың, йүнле уҡытыусылар килмәгәнгә...» Ә юҡ, районүҙәктән бит — килмешәк тип әрләгеһе килде. Нервылары һыната, күрәһең. Килмешәк тиергә — үҙе кем һуң Фәнидә? Үҙе лә, берәй йыл эшләрмен дә тайырмын, тип килгәйне Бурашка. Килде лә — таш кеүек батты. Был да шулай итте. Арлы-бирле бер ҡыш уҡыттымы-юҡмы, кейәүгә сыҡты. Ярағын — Өфөгә курстарға барып ҡайтҡылай. Тиҙҙән класс етәксеһе әңгәмәне үҙе теләгән юҫыҡҡараҡ борҙо.

— Формаһы ҡыҫынҡы Тимурҙың, яңыны алһағыҙ ине. Ҡайһы бер дәреслектәр кәрәк. Мәҫәлән, яңы программа буйынса...

...А-ба-а, Лираға ҡағылған зәхмәт шауҡымы берәүҙе лә аямай: әсәһен дә, йәше саҡ ун беренсегә киткән энекәшен дә. Сикә тамырҙарының зыңлап тибеүен тойған Фәнидә, үҙен үҙе белештермәй, буяу еҫе аңҡыған иркен кластан оҙон коридорға сыҡты. Ян-яғынан бала-сағаның «Һаумыһығыҙ!» тип иҫәнләшеүенә лә иғтибар итмәй, төрлө гөлдәр баҙрап үҫкән палисадниктар араһында берауыҡ шаңҡыған кешеләй тапанды. Уҡытыусыға үпкәләргә сәбәп тә, хаҡы ла юҡ... Тырышып-тырмашып, кеше балаһы кеше булһын, тип йөрөгән көнө ләһә.

Ҡайҙа һуң Тимуры? Атаһына оҡшап, аяҡтарын ҡалҡыта биреп баҫа-баҫа, күпергә уҡ яҡынлаша. Бына туҡталды, ҡайырылып бирегә ҡараны. Әсәһен күрҙе, көтөп алырға булды. Көтһөн. Иртәгә районүҙәккә барып ҡайтырҙар. Һис алыҫ түгел. Кәмә менән сығаһың да силсәүит янында сәғәт ундағы автобуска ултыраһың. Олотүз буйлап ауылды уҙғас, кинәт һулға бо-

ролоп, шыйығырак урман эсенән ун-ун биш минут барҙыңмы, уң яклап ҡалҡыуҙа телевышка күренеп ҡала, ә артабан ҡырын-мырын битләүҙәрҙә иҫәпһеҙ йорт-ҡаралтылары, баҡсалары бытышкан райүҙәк инде. Элегерәк, автобус йөрөмәгән йылдарҙа, был араны сәғәттән ашыу тәпәйләй торғайны бураштар. Атлауға етеҙ ине мәрхүмкәйе Барый, һи-и, ҡырҡ минут – туда, ҡырҡ минут – сюда, тип маһайған саҡтары булғыланы.

* * *

Хәйерһеҙ, иртәгәһенә Олотүзгә автобус килмәне лә ҡуйҙы. Боҙолғанмы, водителе нишләгәнме – тексәйеп торорға уйы юк Фәниҙәнең Олотүз уртаһында: «Әйҙә, Тимур, атлайыҡ әле, берәй сәғәттә үҙырбыҙ микән?» Машина осрамай, китере китеп бөткән. Оло юлда машиналар күбәйҙе. Рулдәгеләр йүнләп танымай Фәнидә ханымды. Туктаны бер егет, Лираны белә икән – быларҙы баҙарға илтеп тә ташланы. Бәй, Зәриә тора лаһа тап-таҙа башлы һуған, һарымһаҡ, ҡаймаҡ һатып. Алалар, тисе. Таш өйҙә йәшәгәндәр алалыр. Йәйәү килгәндәрен белгәс, бергә ҡайтырбыҙ, өс сәғәттән, тип тә һөйөндөрҙө. Әсәле-уллы магазиндарҙы ҡарарға керештеләр. Ҡат-ҡат кейҙертеп, Фәнидә улына таман ғына мәктәп формаһы, беше генә спортивка алып бирҙе. Улбыл укыу әсбаптары ла табылды.

Фәнидә үҙенә йә Лираға берәй нәмә ҡарар өсөн универмаг яғына ыңғайларға торғанда, еңенән кемдер итәғәтһеҙ генә тартты. Бәй, шәфҡәт туташы Клара икән дә. Уны-быны һөйләштеләр. Өйөнә саҡырҙы буйһыу ханым. «Сәмерханова ла бөгөн ял итә, миңә яҡын торалар», – тип телефонын һәрмәкләй башлағайны, Фәнидә тыйып өлгөрҙө: рейсовый йөрөмәй, ҡайтыуға машина белешкәнбеҙ... Клара, Тимурҙың арҡаһынан һөйөп-һөйөп, үҙ юлын дауам итте.

Универмагтан әйбер алманы Фәнидә. Күҙен ҡыҙҙырған нәмәләр байтаҡ – тик кеҫә яғы һайыраҡ. Тағы ҡайҙа барырға? Әллә Тимурҙы уйын залына индереп, «дошман»дарын тыр-пыр аттырып йә берәй әкәмәттә һикерәндәтеп сығайыммы тип торғанда, күләүек ситенә туктата һалып, ҡара күҙлек кейгән кемдер «Нива»һынан төштө лә:

– Иҫәнме, апай, һаумы? Шәпме, ҡустым! – тип шат өндәште. Амантаев таһа! Еңелсә кәйефләнеп алғанға оҡшай. – А-ну садись, ҡайҙа теләйһегеҙ – елдертәм.

Әсәле-уллы «Аҡшиҙе» кооперативы рәйесе менән ҡул биреп, йылмайышып күрештеләр.

– Оһо, кем ҡустым, кәләш алырлыҡ булғанһың да!

– Тимур исемле, – тине Фәнидә. – Күҙең тейһен!

– Теймәҫ... Ултыр, Тимур, алып ҡайтам әбсәң ауылына. Ин-

тере-есно беҙҙә! – Уйынлы-ысынлы һөйләшкән ерҙән рәйес кабиналағы һөйәнмәне шылдыр-былдыр артка этәрҙе лә етди өҫтәп ҡуйҙы: – Фәнидә апай, ҡырҡ минутта (йәнә 40!) – зыйт и там! Тимур ҙа күптән күргәне юктыр әле туғандарын?

– Ике йыл ғына барҙыр, – тип әсә малайға һораулы ҡараны. – Әллә берәй сәғәткә генә барһаҡ... Автобус йөрөйҙөр бит ҡайтырға?

– Автобуска ышаныуы ҡыйын. Нет проблем – үҙем кис илтеп ҡуям, паром туктағансы. Апай, әле генә киленеңде күреп сыҡтым бальнистан. Аппендицит! Төнәгөн ярҙылар, оҙаҡламай выписка яҙалар.

– Шәбәйә күрһен инде берүк! Лира ла ҡыш тиҙ генә ятып алды һуҡыр эсәген ҡырҡтырып...

– Әйҙә, ҡустым, һыпыртайыҡ Шиҙегә.

Тимур ҡыуанып риза булды, кабинаға йырбанлап менә һалды.

– Шәбәйә, ҡатын-ҡыҙ һере була... – Амантаевтың хәбәре лә, үҙе һымаҡ, һауалыраҡ. – Маху не дадим!

Фәнидә ларектан күстәнәскә сәй-кәнфит алмаҡ булғанда ла энекәше: «Минең күстәнәс муйындан», – тип ҡәнәғәт ҡупайып алды.

– Хәйерле юлға, тиек тә... Баҙарҙа Зәриә... әй, ничауа, – таныштары елкенеп, күҙҙәре теремекләнде Фәниҙәнең.

Тиҙҙән асфальт өҙөлдө. Машина, әллә кемдәрҙе саңға борҡотоп уҙа-уҙа, ҡуйыра барған урман юлына ҡыҙыу ғына тартылды һәм оҙаҡламай кәкерсәк йылға ярына туктаалды. Шиҙе таҙа, төбө күренеп ята. Райүҙәк эргәһендәге ҡаҙ-өйрәк тиҙәгенән йәшкелтләнгән Олотүҙ башы түгел инде. Нисек шунда мал һуғармаҡ кәрәк, аптырарһың.

– Ҡырҡ минут тигәйнем, утыҙ биш минут та уҙманы. Перекур! – Амантаев машинаһын туктатып, боһораған капотын асты. «Анауҙағы ятыуҙа һыу инә торғайныҡ, – тип Тимурға һөйләй-күрһәтә, Фәнидә ҡырсынға атланы. – Бит-ҡулдарҙы сайып алайыҡ. Күпер өҫтәрәк...» Әле Акшиҙенең нык һай сағы, машиналар кистереп, тәгәрмәстәрен сайҙыртып сыға ҡырсын ярға. Шиҙе ашаһындағы кәртәле сабында ҡолонло бейә, һаҡауыраҡ ҡыңғырауын дыңғылдатып, ҡурпыла йөрөй, бирьякта тышаулы аттар, морон сөйөп аҙымдарын үлсәп кенә баҫып, айҡашкан була.

Бынау ғына ярлау ҙа бихисап иҫтәлектәр һаҡлай! Баҡыр ҡыңғырау һукканы күңелгә ҡалай танһыҡ!

Ағас күпергә килеп, аяҙ йәйге төндәрҙә ауыл йәштәре гармун, магнитофон көйҙәренә дөңгөр-дөңгөр бейешеп ҡайта торғайны. Аҫтараҡ, һыу ингестә, усаҡ ҡабыҙған саҡтары ла булды. Һүҙҙәрен үҙҙәре теләгәнсә борғолап, йырлап ебәрәләр ине:

*Онотолма-ай беренсе саф мөхәббәт,*
*Онотолмай Акшиҙе-е-е һылыуы!*

Ағас күпер, күп йылдар күптәрҙе хитландырған ағас күперҙең бүкән таштары ғына ята хәҙер һерәйешеп.

Мәслихәт, хәҙер кисеүҙә – бетон күпер. Уны «Амантай күпере» тип тә ебәрәләр. Үҙе етәкселек иткән бит төҙөлөшкә. Бер ҡайҙан бер тин бирмәгәндәр. Уның ҡарауы, «районка»лағы мәҡәләлә яҙғанса, күперҙе «тантаналы асыу»ға Сәмерханов килеп етә... Бастуй, туған, ашыкма, һин йөрөнөңмө бында тир түгеп, типтерме, Амантаев үҙе генә беренсе булып сыға. Иң ауыр, иҫке тракторға ултырып. Боронғо «ДТ»-ны күтәрҙеме – күпер нык, оҙаҡ, ышаныслы хеҙмәт итер.

Амантай күпере... Кешенән яҡшы исем ҡалыуы ҡалай һәйбәт!

Юлдаштары кире боролоуға, машина эсенән быяла сыңҡылдауы ҡолаҡҡа салынды. Аулаҡта, хозур тәбиғәт ҡосағында, берике йотом һелтәгән, күрәһең, рәйес. Аҡланғандай, лабырлап маташа үҙе.

– Бесәнде теүәлләгән ағай-энегә общий ужин вәғәҙәләгәйнем, кис һыйлармын тип... – Тимур һаман аттар яғына ҡаранғанға, аңлатма бирҙе. – Бүре баҫтырған ҡолондо. Шуға көндөҙ – кәртәлә, кис ҡурала тота эйәһе.

– Һаман элеккесә эшләтә икәнһең ир-атты. – Фәнидә быны энеһенең «ужин...» тиеүенә көләмһөрәгәндәй әйтте. – Эй, башҡорт!

– И, апай, элеккесә тип ни, яҡшы традициялар онотолмай ул, – тип яуабын таба белде мыҡты ир. Йәш түрәнең һөйләшергә әүәҫлеген тойған ҡатын үҙенә кәрәген һораштырҙы:

– Николай Тимерәйевичтың договоры бармы һеҙҙән бал күсе алыу тураһында? – Фәнидә әлегә Николайҙың үҙен Амантаев хужалығына ебәрергә теләгәнен әйтеүҙән тыйылып ҡалды һәм тиҙҙән дөрөҫ эшләгәненә эсенән генә ҡыуанды. Амантаев ғәйрәт бөркөп тамаҡ ҡырҙы.

– Фигушки! Бигерәк куркулит, бигерәк осһоҙға төҙөмәксе договорҙы. Буштың атаһы үлгән!

Ҡабат ләм-мим һөйләшмәнеләр. Ҡыңғырау тауышынан һағышлы моңдар бөркөлгән кеүек.

...Әсәһенең йортон әбшәүәтләп, хәҙер унда мәрхүм ағайының бала эйәртеп ирҙән ҡайтҡан ҡыҙы әл-юл йәшәүен белә Фәнидә, шуға, уны мәшәҡәтләмәҫ өсөн, тура ике туған апайының шаҡтай күркәм, ныҡлы, ҡоймаһына ҡояш энергияһын туплаусы дәү ҡалҡан һымаҡ ялтыр табаҡ беркетелгән ҡапҡа алдына туҡтаттырҙы ла машинаны, Амантаевҡа тура ҡараны. Һүҙһеҙ аңланы теге.

– Ней, борсолма, Фәнидә апай, шоферҙы ебәрәм. Кәнде өйҙә, берәр көн ял итһен тип, иртән рулгә үҙем ултырғайным. Грамм йотмай... Иренсәк тә түгел.

– Һин дә йотма! Килен өйҙә юк тигәс тә. Йәштәргә насар өлгө күрһәтергә ярамай. – Фәнидә һүҙенә нәсихәт өҫтәп өлгөрҙө. – Глава булырлык кешеһең...

– Нисә сәғәттән килһен? Әле ни сак ике тула... – Энеһе хәбәрҙе икенсегә һапланы.

– Ике сәғәттән...

– Ҡуйсәле, апай, илеңә ҡайтып, ике сәғәт кенә торһаң, тауык көләр ул. Туғандарҙы күрмәй ҡайтмаҫһығыҙ барыбер. Дүрт сәғәттән машина ошонда торор.

Уңарсы ҡаршы өйҙән, усын ҡаш тирәһенә ҡуйып, апакайы күренде, шунан күрше-күләндән берәм-һәрәм башкалар якынлашты. Күрештеләр, арка тапаштылар. Бигерәк тә Тимурҙы һөйөп туйманылар.

– Собханалла, Тимурың ҡандай ҙурайған!

– Абау, күҙ теймәгер!

– Иҫән-һау ғына килешме?

Ошо тирәлә көн иткән ҡәрҙәштәре элекке ауылдашын бер юлы өс өйгә әйҙүкләне.

– Ә мине, мине ниңә сакырмайһығыҙ?! – Мәлендә килештереп ебәрә Амантаев та. – Баҙарҙа осратмаһам...

– Һинһеҙ ни шагу инде, дауай, ҡәйнеш, дауай, – мәрйенле түбәтәй кейгән мөләйем ҡартлас ҡапка тирәһенән әллә ҡайҙан ук ҡыскырҙы. – Керегеҙ, дворға кереп күрешегеҙ.

– Тел аскысың бармы һуң? – Аңланы мут һорауҙы хужа, тырнанып та тормайса:

– Һинең өсөн табыла, шәт, – тине, ике усы араһына шешә ҡыҫтырғандай ҡыланып.

Көңгөр-каңғыр сәйләп-мәйләп, вакыт үткәне һиҙелмәй ҙә ҡалды. Машинаны тыуған йортонда көтөргә теләне Фәнидә. Ике туған апайын да үҙе менән эйәртте. Тол һеңлекәше йүгереп йөрөп өҫтәлгә самауыр ҡуйҙы, барынса тәм-том теҙҙе. Беренсе класка төшкән икән ҡыҙ ғынаһы быйыл. Зәриәнең зимагор Зәбире ише, бының да абышкаһы алимент та түләмәй, имеш. Балалар баксаһында йыйыштырыусының хеҙмәт хаҡы – ташка үлсәйем. Вакыт-вакыт самогон ҡыуып – әйтәгүр, апра еҫе сыға мейес яғынан – төндәрен шуны һатып, сак-сак осон оска ялғап, тамак аҫырап ята. Кейәүҙәрен судка бирергә кәңәш бирҙе апалары һеңелдәренә. Ҡыҙы – кан балаһы лаһа...

– Ҡоторған хәҙерге ирҙәр. Мынауҙай ҡатындан, шалкандай баланан, шактай йорттан ҡасып, үҙенән оло кәнтәйкәгә бар ҙа кер әле.

– Ҡайтыуын да ҡайтыр, һуң булыуы бар...

– Ҡайнатма ҡабат самауынкаңды, өйөңдө һаҫытып.

– Үткәндә килгән – лаякыл. Банан тоткан. Индермәнем.

– Дөрөҫ: ас тамағың – тыныс ҡолағың.

Байтаҡ сөкөрҙәште ҡәрҙәштәр. Туғандары Фәнидәнән һаҡ-һаҡ ҡына Лираның хәлен дә һорашты, сәләм күндерҙеләр, тиҙерәк һауығыуын теләнеләр.

Әйткән ваҡыт етте, тик Амантаев вәғәҙәләгән машина юк та юк. Фәнидәнең һеңлекәше, ҡыҙын, Тимурҙы эйәртеп, үҙе китте сөм күк «Нива»ны юллап. Шоферы иһә Амантаевтың әсәһе яклап якын ғына ҡоҙалары икән.

Аулаҡ өйҙә Фәнидә ҡапыл иҫәүән кешеләй йылмайып ебәрҙе.

– Бер ҡыҙыҡ иҫкә төштө әле, апай. Һөйләйемме?

– Йә һуң? – Ҡыҙыҡты ишетмәҫ борон ук көлөп ҡуйған булды апайы.

– Бәләкәй саҡ... Өйҙә мин, уртансы ағайым. Иң бәләкәсебеҙҙе санаға ултыртып, атайымдар ат егеп ҡунаҡҡа ысҡынды, лесорубтар поселогына. Декабрь башы ине шикелле.

– Конституция көнө булғандыр, бишенсе декабрь оло байрам ине элек.

– Нәнке итеп һине ҡалдырғандар. Ашатып-эсереп, йоҡларға һалдың беҙҙе. Мин бынауҙа ятам, диван ишараты бар ине элек. Ағайым һикелә ҡуна, ҡалын юрған ябынып. Ул хырлай. Һин... шым ғына әсәйҙәрҙең карауатына үҙең килтергән эре биҙәкле ебәк шаршау ҡорҙоң... урын йәйҙең. Мин тын да алмай ятам, йоҡлаған булып.

– Абау ятһыҙ! – Берсә ауыҙын, берсә күҙен баҫып көлгән булды ярайһы йәш сырайлы пенсионерка. – Шунан, шунан?..

– Шунан ни, ишек – тук та тук. Асып индерҙең. Килеп керҙе егетең. Бүркен ҡырын һалып. Сибәр генә. Һаман онотмайым: мине өрлөккә тиклем күтәреп-күтәреп һөйҙө.

– Әй, Әхмәй-Әхмәтдин бәғеркәйем ине бит.

– Ыҫыҡтар һымаҡ ҡыланып, ҡыҫыҡ шәм яҡтыһында – ул саҡта электр юк – сәй эстегеҙ түгелме шыш та быш? Картуф ҡыҙҙырғайның. Аҙаҡ икегеҙ ҙә күлдәксән генә ҡабарынҡы мендәргә арҡа терәнегеҙ. Артыҡ һыйынышмай ғына. Мин ҡыбырларға ла ҡурҡып ятам, бөркәнә биреп. Нык ҡыҫталһам да. Ҡыбырлаһам, һеҙҙең ҡотоғоҙ осор йә сығып ҡасырһығыҙ кеүек...

– Әйтәм иртәнсәк түшәгең еүеш ине. Һиңә биш булғандыр, ун етем тулғайны микән миңә?

– Һеҙҙең ҡосаҡлашҡанды, үбешкәнде күтәм, йәнәһе.

– Ҡайҙа, ти, үбешеү комсомолдарға! – тип күңелен нескәртте өлкән ҡатынкай. – Армиянан ҡайта алманы бахыркай. Төрмәнән ҡаскан бандиттарҙы өс сутҡы баҫтырып йөрөгәндәр тайғы-

ла, Әхмәй тоттом тигәндә, атамандары арттан бөйөрөнә осло беҙ ҡаҙап каса. Йә, ҡайтырына өс-дүрт ай ғына ҡалғайны. Уй, минеҙ көтөүҙәрем! Биҙәкле шаршауҙы оҙак һакланым, аҙак энеһенең туйында бүләккә һалдым. Әлеге иремдең друғы ине Әхмәй мәрхүм. Еҙнәң дә һаман йәлләй, һәйбәт егет ине, үкенес, ҡайта алманы, ти. Минең йәшләй яратканды, уның миңә матур хаттар яҙғанын да белде.

– Аулакта кыҙҙарға егет килгәнен тәнәйҙәр ололарға әләкләмәй, һин дә өндәшмә, тигән булдың. Эй, кыҙык...

– Кыҙык һиңә! Әллә үбешмәгәнбеҙ, үҙем дә ҡаты инем шул. Былай ғына яттык... Үбешһәм, сәпсим онота алмаҫ инем, мужыт, хыялый булыр инем, кем белә.

– Әлеге ҡартың зерә һәйбәт! Донъяғыҙ етеш, тормошоғоҙ татыу, һаулыкка зарланмаһағыҙ! – Фәнидә эскерһеҙ һокланды.

– Шайтан ҡолағы ишетмәһен – тфү-тфү тиң! Әгәр кунактан еҙнәм, атайың мәрхүмде әйтәм, алдан ҡайтып төшмәһә, тағы бер кис кунған булһак, кем белә... Юк, бер ни ҙә булмаҫ ине. Хәҙер уйлайым: беҙ, моғайын, киләсәктә симйаланыу буйынса «репетиция» яһап маташканбыҙҙыр.

– Һәр нәмәгә «репетиция» кәрәгәлер...

– Уй, Фәнидә, үҙең ниңә һаман яңғыҙ зарығаһың әле? Юкмы ни шунда берәй...

– Төшөп ҡалған берәй холостяк, тимәксеһеңме? Төшөп ҡалғандарҙың хәжәте бер тин. Әле төп ҡайғым – Лира, Лира... Бурыска батылды, ҡасан ғына түләп бөтөләр.

– Бына, дарыуға тотон. Иш янына куш булыр. – Йомарт, кеше йәнле апаҡайы бая Фәнидә килеүгә кейеп алған бәрхәт күлдәге кеҫәһенән сығарып, конверт тотторҙо. – Биш мең дә ярап ҡуйыр әле... Лираға сәләм дә яҙа һалдык еҙнәң менән. Район гәзитендә фотоһын күргәс, һөйөндөк әле. Беҙҙең аранан да башлы кеше сығасак, тип...

Фәниҙәнең намыҫсан күҙендә гәлсәр йәштәр йылкылданы. Нәк шул сак, ҡапканы төкөй яҙып, таныш «Нива» туктаалды. Амантаевтың шоферы икән рулдә.

– Председатель үҙе кайҙа? – Туғандары кыбырлашкансы алдан сығып, Фәнидә ыҫпай кейенгән, сабыр һөйләшкән йәш ирҙән иплә кенә уны-быны белеште.

– Эш менән йөрөй... – Тоғро эттәй, хужаһына һис һүҙ тейҙергеһе килмәй быныһының.

– Бесәнселәр эргәһендәме?

– Шулайырак.

– Тағы шешә менән шаярғанын күрһәм, колағын борам, тип әйтте Фәнидә апайың, тиерһең, йәме, йәш коҙа.

– Ярай, ярай. Әллә ни... Ҡай берҙә генә әҙ-мәҙ тондора.

– Һәр нәмә әҙҙән башлана.

– Шулайҙыр, ҡоҙаса. – Ҡайһылай бәйләнсеккә әйләнгән Фәнидә ҡоҙасаһы! Элек улай түгел инесе...

– Бына һине, сәпсим эсмәй, тип ишетәм.

– Сәпсим, тип... Тәмләштерәм былай, яңы этикетка күрҙеииһәм. – Теле асылғанға һөйөнгән төҫлө, водитель киң йылмайҙы.

– Нисек... тәме?

– Адна гауна, тиҙәрме.

– Маладис! Барый ҡоҙаң да самаһын белә торғайны.

– Их, иҫкә төшөрәбеҙ ул гармунсыны...

– Шөкөр, онотмағас... Паромға түгел, Олотүҙгә илтеп ташла әле беҙҙе, ҡоҙа.

## 6

Фара ҡабыҙырлыҡ булмаһа ла, Зәриә тапҡырына еткәндә донъя апаруҡ эңергә тартылғайны. Йола ҡыуып, туғандары ауылдан ауылға ҡаймаҡ, бал, балан ҡайнатмаһы һалып ебәрмәһә... Алмаҫ ине, Лираға, тиҙәр ҙә, әйҙә тыңҡыслайҙар һеңлеһе биргән алаптай кәрзинде. Кейәү балаҡай талдан кәрзин-мәрзинде, ҡаҙ ояларын күп үргән икән элек. Йә, һирәк һөнәрле була тороп, башына тай типкәндәй биҙһен әле әҙер донъянан. Баяғы ике туған апайы иҫкәрткәйне ҡасандыр һеңлеһен: «Айвай, ҡыҙыҡай, урмансылар паселугында эскеселәр күп, кейәү балаҡай ҙа ул яҡҡа йомшағыраҡ, тиҙәр, уйла...» Уйлап торамы һуң тиле йәшлек шауҡымына бирелгән еткән ҡыҙ?

Шаулатып уҙғарған туйҙың аҙағы шауламай ғына айырылышыуға бара... Кейәү балаҡай әсе-мәсе яратыуы арҡаһында төҫкә шаҡтай тол ҡатынҡайҙа тәүҙә һыйланып ултырғылаған, тора-бара ҡунып ҡалғылаған. Аҙағыраҡ аҙғын иренән тамам бүккән һеңлеһе, балаһын етәкләп, ҡасабанан яңғыҙ әсәһе эргәһенә ҡайтып һыйынғайны. Күп тә уҙмай, ҡарсыҡ йөрәк өйәнәгенән гүргә инде. Әлдә икмәк-тоҙлоҡ эш табылды йәш әсәгә балалар баҡсаһында. Әлеге апайҙары мөдирә ине шул саҡ баҡсала. Хәҙер ул да хаҡлы ялда, кеше араһында әллә ни һүҙе лә үтмәй.

Багажниктан кәрзин-маҙарҙарын алған арала ғына Фәнидә болоҡһоу уй-хәтирәләре менән ҡабат йәнтөйәгенә ҡайтып әйләнде. Фәнидә йәш ҡоҙаһына матурлап рәхмәт әйтергә лә өлгөрмәне, фараларын ҡабыҙып, әрһеҙ «Нива» әрһеҙ юлдан бәүелә-сайҡала кирегә һыпыртты.

Зәриә баҙарҙа бер аҙ көткән дә быларҙы, иптәшләшеп барған алыпһатарҙар менән ҡайтҡан икән Олотүҙгә. Бурашка сығып, ҡыҙын бирегә алҡайтырға ла өлгөргән хатта. Иртәгә «дошкольный» уҡыуға бараһы, имеш, Зөлфиәһенә. Бурашта күреп, Зәриә Фәнидәнең быҙауын уның урамына индергән. Көтөү

ҡайтҡас, эйәләрегеҙ байрам иткәндә, һеҙгә лә байрам булһын, тип зәбзәүен һәүкәшкә ҡушҡан да ҡуйған. «Правильны эшләгәнһең», – маҡтаны уны Фәнидә.

– Йоҡлағыҙ, һуң бит ваҡыт, – Зәриә быны ихлас әйтә.

– Ҡуй, кеше көлдөрөп... Мәктәпкә бит беҙгә лә, үҙең әйтмешләй.

Йыйыштырыуҙы ғына йәйге ыҙбаға инделәр. Сәйнүк аҫтына газ тоҡандырҙы ла Зәриә телефонға үрелде. Тиҫтәләгән номер өйрөлтөүенә ҡарағанда, кемдеңдер кәрәҙле телефонына шылтырата.

– Лосман, һинме был? Нисек, күренәме беҙҙең ауыл? Күренмәһә, теге, мин һөйләгән үгеҙ һымаҡ, ҡалҡыуҙан ҡара. Ә-ә, күренгәс ни, давай, алып сыҡ күршеңде арьяҡҡа.

Лосман тигәне Фасилымы, Фазылымы әле шунда?

– Сәй эсә торайыҡ, Фәнидә түтәй, мәй ҙә бар, хәҙер Фасил сығара кәмәһен...

– Юҡ, юҡ, Зәриә, былай ҙа эс күпкән. Лутсы яр башында көтөп торорбоҙ.

– Хуп мәйлең. Оҙата барам, күстәнәстәреӊ апаруҡ.

– Ҡуй, икебеҙгә йөкмө ни, Зөлфиәң ҡурҡыр йә...

– Ҡурҡһа, эйәрһен.

Һөйәнмәле ултырғыста ойой башлаған Тимурын төрткөләп алды әсәһе.

– Арыған бала. Көнө буйы аяҡһыныҡ бөгөн. Аҡшиҙене күреп ҡайтыу үҙе бер ғүмер кеүек булды.

Эт өрҙөрөп, ҡараңғыла әллә ҡайҙан өҫтө ағарып күренгән Ҡариҙел буйына дүрт шәүлә атланы.

* * *

Николай Тимерәйевичтың кәйефе күтәренке был арала. Район хакимиәтендә лә йөҙө ҡыҙармай. Бесән мул әҙерләнде, байтаҡ сенаж һалынды. Тапшырылған һөт, май, иген культуралары өсөн кассаға байтаҡ төшөм керәсәк. Малдары көр генә, имен-аман һуғымға оҙатһалар, һырттағы оло юлға, йәғни үҙҙәрен тейәп алып китергә килгән машиналарға хәтлем арттарына ла боролоп ҡарамай, артыҡ баҡырышмай ғына атларҙар инде... Ыжый, колбаса булып ҡайтырға. Көтөүле мал ҡайҙа, ниңә барғанын аңғармай ҙа ҡала. Ҡортсолоҡтан ғына уңмағас уңмай сасындар. Һәр хәлдә, быйыл уҡ Амантаевка инәлеү килешмәҫ, Сәмерханов аша «нажим» яһата торор. Күстәрен осһоҙғараҡ ыҫҡындырғыһы килмәй әле Аҡшиҙе тыңҡышының. Башҡорт ҡайҙа ла башҡорттор – уҙған ялда ҡыҙмаса килеш дауахана ихатаһында күргәндәр, баҙар алдынан Фанидушканы улы менән ултыртып, ҡайҙалыр елдергән. Елдерһендәр. Туғанлыҡтары бар,

ти, эш боҙмайҙарҙыр әле. Николай шымсы ла, ошаҡсы ла түгел, ундай бәндәне үҙе һөйһөнмәй, тик барыбер аръяҡтағы хәбәрҙәр бирьяҡҡа ла һарҡылғылай. Бер-береһенең хәл-әхүәлен бер-береһенә еткермәһә, кешеләр кеше лә булмайҙыр.

Аҡшиҙеләрҙең балы күп, уның ҡарауы, игендәре ҡайырылып уңманы. Юҡ, үсәмәй Николай, мәгәр эстән генә көнләшә, сәмләнә, ярыша. Сөнки... ҡолағына Сәмерхановтың шыпырт ҡына тишеүенсә, икеһе лә – район номенклатураһына дәғүәсе, ҡайҙалыр урын бушаһа, унда-бында директор-фәлән вазифаһына, администрацияла бүлек мөдирлегенә, хатта «сам»ға «зам» итеп тәғәйенләүҙәре ихтимал. Кемгә алданыраҡ кейҙерелер ундай ҡамыт? Әлбиттә, бындай бәхет яманаты сыҡмағандарға тәүҙәрәк йылмая.

Хакимиәттә иҫкәртеп ҡайтарҙылар әле: күршеләргә Рәсәй хөкүмәтенән министрҙарҙың визиты көтөлә: аң тороғоҙ, юлдарҙы, урамдарҙы тәртипкә килтерегеҙ, фәлән дә төгән. Ундай уҡ шөһрәтле делегацияның Сасынға юлығыуы икеле. Ә кем белә? Урау юлдан, һырт һымағыраҡ алаңғырттан йөрөһәләр, берәйһе: «Әйҙә әле, һыу буйында эре генә ауылдар күренә, төшөп ҡарайыҡ: ни эш ҡыралар, нисек йәшәйҙәр икән?» – тинеме, һуғылып та китеүҙәре ихтимал. Юҡта, булмаҫ. Хәлбуки, уяу тороу зыян итмәҫ. Бураштка, әлбиттә, этем дә килеп йөрөмәйәсәк. Сәмерханов әйтмешләй, һөргөслө бульдозер ебәреп, тотош ауыл йоратын Иҙелгә ауҙарырға мөмкин. Анау ваҡыт ер бүлеү сходынан йәне көйөп ҡайтышлай умартальгкка индереп һыйлағандан һуң паромға ҡәҙәр оҙатып барғайны үҙен Николай. Тау ҡыразындағы өй ҡыйыҡтарында, бейек бағаналарҙа ат башындай электр лампалары ҡабынған эңер ине. «Көт» тип, рулевойы иҫкәртеп ҡуйылған катер тулҡын ярып бирегә ынтылғансы, йылға ағышына ҡарап, йөрәкһеп, үсәгәндәй ыҫҡындырҙы ошо хәбәрен. Үсәрһең дә, мир алдында «лесник» тип рисуай итһендәр әле! Ә ул хикмәтле һүҙҙең мәғәнәһе Николай кимәлендәге түрә-ҡараға ла әҙ-мәҙ таныш. Бураштар ҙа хасланырға әҙер. Ҡасандыр үҙҙәренең зитына тейгән уполномоченныйҙың УАЗ-игына... гәзиткә төрөп, ат тиҙәге һалып ебәргәндәр. Теге бәндә бер ғәйепһеҙ шоферын эттән эткә һалып һүгә, ти, юлда...

Бәй, ауыл хакимиәте ни өсөн? Ни эш ҡырғандары бар әле ошо арала? Берәй нәмә көтөлһә, йән-яҡтан саҡ аяғына баҫып барған кооперативты йолҡҡосларға ғына торалар. Теләнселәүҙән бушамайҙар. Килгән кеше килер – Өфөнән дә, Мәскәүҙән дә, ете диңгеҙ аръяғынан да. Ярҙамдары тейһә, рәхим итһендәр. Халыҡты ҡужғыртып, хужалыҡтарҙы бөлдөрөп йөрөүселәр ҙә осраштыра. Табылып тороуын әйт байрамдарҙың! Ял көнө, ана, бөтән тараф районда мари ансамблдәренең «Рәсәй – Башҡорт-

остан: 450» юбилейына арналған смотры уҙғарыла. Автобус бирергә, юл ашантыһына акса бүлергә кәрәк. Әндрәй ҡаҙнаһымы ни «Сасын» кассаһы?

Шундайырак һынамыштарҙан иләҫләнеп, Николай ҡабул итеү бүлмәһендә тызылдай торған кнопкаға баҫты. Бары тик «шеф» алдында ғына ярамһак йылмайырға әүәҫ, ят күҙҙәр юкта килешле осаларын, йомрокас түштәрен уйнаткылап, ирендәренә өлгөр генә ҡыҙыл-мыҙыл өҫтәй һалып, секретаршаһы килеп инде.

— Тыңлайым һеҙҙе...

— Главбух менән Григорийҙы сакыр. Экономист отгулдамы әле... Плановик керһен.

Әйткән белгестәре ингәс, рәйес «пятиминутка»ла хәбәрен токос тотто.

— Мөһим персоналар көтөлә регионда. Әҙерлек башларға ҡушылды. Был хакта айырым гәпләшербеҙ, хакимиәттекеләр менән берлектә. Әле башка бер идея һукты: мөмкинлек барҙа һәр бүлек етәксеһенә, һәр белгескә, ферма, гараж мөдиренә кәрәҙле телефон алып бирергә бойорок яҙам. Юғиһә кемдеке — бар, кемдеке — юк, бәғзе иптәштәрҙе овчарка менән дә эҙләп тапмайбыҙ ҡай сак. Исемлек төҙөгөҙ ҙә, Благзаводка барып, алып ҡайтыр бирәйегеҙ...

Григорийҙар алданырак сыккайны, секретарша хужаһына юхаланды.

— Ә миңә лә тейешме, Николай... Тимерәйевич?

— Тейеш. Бөтә элемтә һинең аша буласак, — рәйес рәсмиерәк яуап бирҙе. — Смотр тураһында ишеткәнһеңдер? Ярай, ул хакта айырым һөйләшербеҙ.

Сығырға ынтылған секретаршаһын туктатып, серле мәғәнә һалып, Николай тағы бер фекерен өҫтәне:

— Файрушин ише тотона белмәгәндәрҙе өйрәтерһең мобилкаға. — Аңланы ҡыҙый. Файрушин — тимәк, һалбыр ауыҙ умартасы. «Эх-ма! Хорошо на пасеке!»

* * *

Өс-дүрт көндән һуң төш мәлендә өйҙән килтергән ризығын арлы-бирле ҡапкылап, сәй эсеп, өҫтәлен йыйыштырып йөрөгән Фәнидә эргәһендә, ишекте асыу менән һөйләнеп, Валентина пәйҙә булды.

— Контора алдында ветровкаңды күреп ҡалдым да йомошка килдем әле. Ял көнө смотрға барырға ине — кеше етмәй. «Путинский» 250 меңгә ҡыҙығыптыр, ике йырсым ауырлы йөрөй, бер солисткам аяғын шештереп ята. Һиңә инәләм инде, дорогуша.

«Дорогуша»һы тәүҙә сәй тәкдим итте, шунан һуң ғына, әлләсе тимәксе, күҙҙәрен акайтты.

– Ну-у, Фаечка, һин марийский «тыпырлык»ты беҙҙән дә уҙҙыраһың. Бейемәһәң, торорһоң шыкылдауык тотоп, ритм ыңғайына ирендәреңде ҡыбырлатып... Райондан үттекме, күҙгәрәк – деньги есть, Уфа гуляем; Мари-Элдан да саҡырыу ебәрергә могут, белдеңме? – Әхирәте тык-тык бейеп, зыр өйөрөлөп алды. – Мари булса да ярий, тиме әле башкырт?

Валя көләмһөрәне, ә Фәнидәнең зәңгәрһыу йәшкелт күҙе уйнаҡланы, аҡһыл ҡыҙғылт сырайы әҙ-мәҙ яҙылды. Эре тартҡылылған ҡәһүә онтағылай биш-алты бөртөк кенә һипкеле шундай сакта кәмегән төҫлө була уның.

– Тимур яңғыҙы...

– Көнөнә генә, дорогуша. Зәриәне генә ҡуш та һыйырыңды һауырға – шабаш, үҙенә марочный вино апкайтырбыҙ. Ирҙәрсә епфәрәм, ә?

Көнөнәме ни? Фәнидә өндәшмәй генә эйәк ҡаҡты. Өфөгә барғанда ла уңай буласаҡ: Лираны күреү форсаты тәтеүе ихтимал. Йә, Хоҙай, ҡыҙының йәнә бер хәлен белешер өсөн ғәзиз әсәһе, кәрәк икән, шайтан булып та бейергә әҙер. Әгәр уңарсы сығармаһалар Лираһын...

– Постой-ка, подружка, ә ниңә траур төҫө ингән әле һиңә? Лирочка нисек?

– Арыу... Арыулана. Имаш дәүәткәйе әйтер ине: шайтан ҡолағы ишетмәһен.

Валентина Григорийҙың буш ултырғысына терәлде.

– Йәшермә, иркәм, бушат эсеңде. Мөхәббәттән – йөрәк, рәнйештән үпкә һыҙлай... Ҡай ереӊ ауырта?

– Юҡ та. Мобильный тараттылар специалистарға. Миңә тейешен берәйһенә биргәндәрме, әллә етмәй ҡалғанмы, белмәйем. Уфаны еңел алып була, ти, ул телефондан.

Валентина урынынан ҡырт ҡалҡынды, маҡлашырға әҙерләнгән былағайҙай еңен түргән һымаҡ ҡыланды, урыҫтың киң таралған янауын ҡабатланы:

– Күрһәтәм, ей богу, һөмһөҙ Николайға ҡыҫалалар ҡышлаған урынды!

– Валюша, кәрәкмәҫ. Уф, ҡайҙан ғына иҫләнем! Николайҙың ғәйебе юҡтыр, бәлки.

– Кәнтәйкәһенең генә этлеге! – Йомшара төшкән Валентина кире урынына терәлде. – Секретуткаһы ғына болғата һыуҙы. Күпме киҫәттек үҙен – ыжлап та бирмәй. Йәшерәк сағында берәй мужик эләктереп ҡалырға тырышмай, әллә нимәгә өмөтләнә. Николаймы һуң бисә айырыр кеше?

– Был хаҡта хәбәр бөтһөн, Валюша. Әгәр мине ҡыҫтырып, ул-был ыҫҡындырһаң, «Шыпшык» менән бер ергә лә аяҡ баҫмайым. – Фәнидә иларға етеште. Ҡайҙан теленә килде ансамблдең турғаймы, сәпсек тигәндеме аңлатҡан исеме.

– Бөтһөн тиһәң, бөтһөн. Ләкин мин, кровинушка родная булараҡ, Николайҙың ҡырын аҙымын хупларға йыйынмайым. Ладны, ә телочкаһы һуң? Кеше белмәй ҙә күрмәй, тип уйлаған булалыр әле ҡыҙыл ауыҙ! – «Кәнтәйкә»не буйтым һуккәс, Валентина Фәнидәнең сәғәт биштәргә мәҙәниәт йортона килеүен һораны: репетицияға.

...Бер сәғәт кенә уралды унда Фәнидә. Монгол сардары шлемын хәтерләткән «кашпау»лы ҡыҙ-ҡырҡын, аҡ киндер салбар, тула ойоҡ, ҡыҫҡа кафтан, йоҡа кейеҙ эшләпә кейеп, билдәрен ҡайыш менән быуған егет-елән, яурынына «тастар» (һөлгө) һалып, муйындарын сылт-сылт иткән «кокрак тэнге» (күкрәк тәңкә) аҫып, тубыкка ғына етмәле «тувыр» балитәкле-күлдәкле ҡатын-ҡыҙ, шул иҫәптән Фәнидә, йырлап-бейеп, туктауһыҙ ҡағылған дөмбөр, өрөүҙән тыз-быз килгән ҡарындыҡ буҙ, шаҡылдаҡ һелкеү, ҡалаҡ һуғыу, гармун, скрипка тауыштары аҫтында «угинде (иген) пайрем» – уңыш байрамын кәүҙәләндерәсәк. Сыбыртҡы шартлатып, сыбағаш һуккан, көлтә бәйләгән булып...

...Ял көнө ансамбль имен-аман йөрөп ҡайтты көтөлмәгән сәфәрҙән. Динесте уҙғанда аҙ ғына туҡталыш яһап, магазинға, кафеға инеп сыҡтылар. Буфетсы ханым, әҙ-мәҙ танып, кешефәлән ишетмәгәндә Фәнидәгә инәнесле, хафалыраҡ тауышы менән йомош әйтте.

– Түтәй, зинһар, юлды байҡап барығыҙ әле: Рәшит ҡайтып киткәйне баяраҡ. Күрһәгеҙ, ултыртып алырһығыҙ. Мотоциклы боҙолған да... – Аңғарҙы Фәнидә йәш ҡатынҡайҙы. Төҫкә-башҡа һөймәлекле генә икән дә. Эрелеге, яһиллығы ла юҡ һымаҡ.

Динестән ҡайтышлай ярты юлды автобус водителе урмантуғай аша тура уҙырға йөрьәт итте, дөрөҫөрәге, уны Валентина күндерҙе: эңер яҡынлаша, Фәнидәне ауылында ҡалдырыу хәйерле, ә Бураштан Сасынға – һә тигәнсе.

Сабып та кипкән бесәне йыйылмаған, ат тиҙәгенә бысранып, тапалып тәләфләнгән яланға ғәжәпһенеп уҙҙылар. Яҙа-яҙа ишетеп ҡуйғайны был яланда булған мажараны Фәнидә. Хатта Гасан улының үҙе һымаҡ харап һауалы вәкиле елле генә машинала Сасынға елдереп килеп етте. Үҙе һерәндәмәҫ өсөн, шул ук машинаға ултырып, Тимерәйевич та ҡайҙалыр ашыҡты.

Һыуы күләүекләнеп ятҡан йырында тап иттеләр Рәшитте. Күҙ төбө күгәргән, танауы һыҙырылған. Сайынып торған була әле үҙе. Автобусты көтәүләп, бер алға иңкәйә, бер артка тәкмәсә яҙа.

– Иҫерек тәһә!

– Күҙ төбөнә фингал сәпәгәндәрме?

– Динесовкалар борондан бандюга ул...

– Бураштыҡы бит был егет.

– Пропадет парень! – Быны тубал һымаҡ барабанын түбығына ҡосоп килгән сәсе-ҡашы аҡһыл ҡартлас әйтте. – Притом хорошенький парень!

Иҫерек егет автобуска ултырмай маташты тәүҙә. Фәниҙәнең киҫәрәк әйтеүенә генә буйһондо:

– Әйҙә, Рәшит туғанкайым, әҙ булһа ла ултырып ҡайт. Өйөгөҙ эргәһенән уҙа бит машина.

Уңайһыҙлана беләмикән, автобуска инде лә Рәшит, буш урын булыуға ҡарамаҫтан, һырттан ауылға төшкәнсе урҙаға тотоноп, саңлы ишек яғына ҡарап барҙы. Күҙ төбөндәге күгән күрһәтмәҫ өсөндөр. Страус та, ана, ҡурҡыныс һиҙһә, башын-суҡышын ҡомға тыға һала, тиҙәр. Үҙе күрмәгәс, быҙау дәүмәле кәүҙәһен бүтәндәр ҙә күҙгә элмәҫ, тип уйлайҙыр мәхлүк.

Мәгәр егет автобустан әҙәмсә генә төшөп ҡалды. Ҡайҙа йөрөнөм әле бөгөн, нимә эшләнем әле, тип аңкы-тиңке торғас ҡына, ауылда берҙән-бер буялмаған ҡапҡаларына атланы. Ә Фәниҙә ансамблдекеләр менән күпергә етмәҫ борон ҡабалан хушлашты. Өйҙә хәлдәр нисек! Зәриә ҡалғайны ҡарауыл булып...

Ҡапҡа алдарына сығып, йә тәҙрәләренә ҡапланып күҙләне быларҙы Бураштар. Быҡаса йоҡомһорап килгән мариҙар өс тауышҡа йыр һуҙып, Бураштан сыҡҡансы – Сасынға еткәнсе йырлап-буҙлап барҙылар. Ай аҙағында Өфөгә лә бармаҡсылар! Бына ниндәй шәп ансамбль «Шыпшыҡ».

## 7

Зөлфиәһе теләгәнгәме, өҫтәүенә, Фәниҙәнең ҡыҫтауына күнде Зәриә, һәм йоҡлап, иртәнсәк ҡайтырға булдылар Иҙел ашаһындағы өйҙәренә. Бында ни тамаҡ һыйлы, балалар йә уйнай, йә телевизор ҡарай.

Бураштағы, Сасындағы һуңғы ваҡиғаларҙы, өйөңдәге хәлде күршеңдән һора, тигән һымаҡ, Зәриә Фәниҙәнән күберәк белә, имеш. Оҙаҡ гәпләшеп ултырҙылар, күберәген Зәриә ләпелдәне, Фәниҙә тыңланы. Шулай ҙа уға Зәбир менән ҡыҙыҡһынырға ла форсат сыҡты.

– Атаман һаман ҡайтмай, сабаҡы. Ней аҡса ебәрмәй башланы. Яңы кәләш алып ҡына яталыр, тим. Әле һеҙ барып ҡайтҡан районда кеше байтаҡ, ти, унда. Элек, һуғыш осоронда уҡ, аҡсалы барғандар. Бик серле генә шундайыраҡ хәбәр салынды ҡолаҡҡа. Уның, Фәниҙә түтәй, теге... нәмәһе һис арымай. Секс-маньяк, тиҙәрме, пашти шулай ул...

– Аптырарһың, – тип һүҙҙе икенсегә борҙо Фәниҙә. – Хәҙер ауылдыҡылар ҙа ҡушаматты урыҫтар һымаҡ сәпәй генә: Атаман, Барон...

– Чечен, Терминатор бар әле беҙҙә. Кинонан күрәләрҙер.

Бер аҙ шымтайып ултырҙылар. Көҙгө төндәр ҡараңғыраҡ була. Аръякта уттар емелдәшкәндәй. Күлбар һыртында етешкән ай юғарылана.

– Йөрөгәндә – яҡын һымаҡ, ҡараһаң, байтаҡ ара икән дә Олотүзгә... – Быны тәҙрәгә баҡҡан Зәриә әйтте.

– Һыу юлын күңел һанамайҙыр, – тип икеләнде Фәнидә. Зәриә лә шымтайып ҡуйҙы.

– Ҡуй, юҡҡа моңайып ни. Ҡайҙа, бер нәмә ләпелдәйем үҙеңә. Ошоноң ише кухняла бер ирекәй буктан сыҡмаған малайына, аша, улым, тигән була ти: «Беләгең йыуанайыр, тағы бер ҡалаҡ ҡапһаң, бөтә нәмәң оҙонайыр...» Төп яҡта иҙән йыуып йөрөгән ҡатыны ҡысҡырып ебәрмәһенме: «Балаң башын ҡатырма, үҙең күберәк аша».

Ҡапыл ғына көләсләнмәне Фәнидә, башына саҡ барып еткәс, Зәриәнең йырыҡ ауыҙын да күреп, эсен ыуғылап ихахайларға кереште. Шунан икәүләп тотондолар, хатта Тимур менән Зөлфиә йүгерешеп сыҡты эске өйҙән.

– Әни, әни, беҙҙе лә көлдөр, – тимәһенме ҡыҙыҡайы.

– Йоҡларға ваҡыт һеҙгә. Һеҙ тахтала ятығыҙ, Тимур – үҙ урынында, диванда, ә мин – Лира карауатында... – Фәнидә түшәк өләшеп тә ташланы.

– Берәй ҡыҙыҡ һөйләгеҙ, апай, – Тимур ҙа үтенгәс, Зәриә ҡабат инәлтмәне.

– Тыңлағыҙ. Элегерәк, беҙ бәләкәй саҡта городтарҙа һыу һата торған автоматтар булды.

– Күргәнебеҙ бар, кинола... – тине Зөлфиә, танауын сирып.

– Ә беҙ Уфа вокзалында эстек, эйеме? – Тимур әсәһенә баҡты, Фәнидә баш ҡаҡты.

– Вә-әт, Бүре һыуһаған, ти, бер заман, – Зәриә көләмәсен дауам итте. – Аҡса һала ана шул автоматҡа – тулы стакан эсә. Аҡса һала – ярты стакан. Тағы тәңкә тыға – бер йотом ғына һары шыйыҡса аға. Бүре – бүре инде, тотона автоматты дөмбәҫләргә. Шул саҡ Ҡуян ырғып сыҡҡан да: «Извини, Волк, я больше не могу!» – тип сыйылдаған.

Әсәһенә оҡшап мәрәкәне тиҙ төшөнә микән – Зөлфиә сәбәкәйләп көлөп ебәрҙе. Тимур һиңмайланып тора ине, ҡыҙыҡай уға сәйнәп ҡаптырырға мәжбүр булды: «Больше бес итергә не могу» тигән Ҡуян Бүрегә. Аңланыңмы?» Малай аңламамышҡа һалышты ла, артынса ике яҡҡа асмалы ишектәрҙе яба-яба, ярайһы бейек тупһа аша төпкә атланы. Миллионлаған баласағаны елкендергән тылсымға эйә малай – Гарри Поттер хаҡындағы фантастиканы ҡарап бөтөр өсөн.

* * *

Түрбаштағы һике һымаҡ тахтала урын йәйгәс, әсәһе йоҡомһораған Зөлфиәне шунда һалды. Унының шундуҡ сумды йоҡоға.

– Ҡай бер сабыйҙар ҡурҡыштан да тиҙ йоҡлай һала, – тине Фәнидә ғәмһеҙ генә.

– Барҙыр инде. Атаһының буштан мине сәпәкләгәнен күргәне бар. – Зәриә битендәге яра эҙен һыйпаҡланы. – Дилбәр апайҙан ҡот ҡойҙорткайны яңыраҡ Сәйҙә күршең. Зөлфиәгә йыл да ҡоя – ҡото төшмәй ҙә ҡуя. Әйҙә, йөрөп әйләнәйек тышта. Йоҡланымы Тимур?

– Эйе, телевизорын һүндерҙем. Теүәл ун берҙә ыҫҡына әүен баҙарына. Тик иртәнсәк ҡыйын уяна... – Баяғы көләмәстән күңеле һаман иләҫ-миләҫме, Фәнидә серҙәштәрсә ҡыҙыҡһынды. – Ҡалай күп беләң шурым-бурымды, кемдән отаһың? Зәбирҙәнме?..

– Отаң, тип, бер ишеттемме – һис онотмайым. Зәбир ҙә әүәҫ юҡ-бар ләпелдәргә. Күбеһен армиянан отоп ҡайтҡан. Действительныйы бөткәс, сверхсрочник булған да, «младший лейтенант» званиеһы алғас, сокращениеға эләгә. Бында военрук булды.

– Беләм, – тине Фәнидә, яманһыулап. – Оло мәктәп ябылмаһа, һаман йөрөр ине микән бала-сағаны айт-дваға баҫтырып?

– Йөрөр ине... Ней Олотүҙдә йүнле эш булманы, Айгөл Карамовна эш табышмай... туғаны була торон. Ысволыш, тип ҡыҙыу баштан бик дөрөҫ ыҫҡындырҙы Лосман анауы сходта. Бер ҡалдырмайҙар, ти, үҙен оло начальниктар гүләнкәһенән. Райглаваға ярап алған, ошаҡ ташып... Бер генә бала тапты, ире Фасил һымаҡ быҙау.

– Ҡуй, кеше тикшермәйек, яҙыҡ...

– Тикшереүҙәндер шул? Зәбиргә эш табыш, ҡайтһын, тип күпме инәлдем... СПК-лары Зәбиргә ҡырын ҡарай – лом да тоттормайҙар. СПК персиҙәтелен йәшерәк сағында танауын ҡаната сәпәгәнме Зәбир? Тегеһе кенә ҡыуа хәҙер. Ир кеше лә ваҡайланыр икән...

– Ҡайтһа, Зәбиреңде ҡабат ебәрмә, Зәриә, йәме? – Солан күтәрмәһендә апаруҡ лығырҙағас, һауа еҫкәргә ҡапҡа алдына ғына күлдәксән сыҡҡайнылар, урамда хәрәпселәп йөрөгән Рәшит пәйҙә булды.

– Хәйерле кис, Бураш мадамдары!

– Ә һин... – Зәриә артабан өндәшмәне.

– Фәнидә... Түтәй тимме, еңгәсәй тимме?.. Зинһар...

– Ҡалай ҙа ярай, – Фәнидә күңелсәк көлөмһөрәне.

– Ҡалай ҙа ярағас – берәй нәмәң ултырмаймы? Оҙаҡламай мал көтөү башлана, ваҡытың юҡта һинең өсөн сығыр инем. Ҡотҡар, баш зыңҡый.

– Әҙерәк эс, зыңҡымаç. – Кире өйөнә ыңғайланы Фәнидә. Шул арала элекке һабаҡташын Зәриә быжғыртып алды.

– Үҙем дә фәрештә түгел, ну әйтәм: һин, гадук, бигерәк шаша башланың! Шытаһың бит, әләйгәс.

– Шытам инде, шытам. Бер башлаһаң, ташлап булмай ҙа ҡуя, чуртым.

– Ташлауҙан башламауың хәйерлерәк, тигән берәү. Шул бер блин торгашка өсөн тукмалып ҡайтканһың түгелме? Үлтереп тә тығырҙар әле берәй шыршы төбөнә.

– Тыкһындар, былай ҙа йәшәгем килмәй. – Рәшит торған урынында сәбәләнде. – Их, берәй ҙу-ур түрәне һуйып, данға күмелге килә иногда. Исмаһам, әҙәмсә йәшәр инек...

– Совсем крыша поехала, да? – Зәриә бармаҡ янаны, гүйә, сабыйын тәрбиәләй. – Табылған террорист! Бар, ҡайтып ят лутсы. Белая горячкаң башланған бит.

– Зәриә, туғыҙынсы класта уҡығандамы, бынау күперҙә һиңә «Яратам!» – тиһәм, һин: «Докажи!» – тинең. Һикерәйем аҫҡа тиһәм, боҙ туңған, шөрләнем. Шунда «докажи» тимәһәң, с чем черт не шутит?

– Любуй нәмәне доказать надо, Әбдерәш. Ә һин тотор ҙа үбер инең йә яткырып... – Зәһәр көлдө Зәриә. – Һин мине алмаç, мин һиңә бармаç кеше түгел инек. Ва-абщы, һиңә хан-королдәр ҡыҙын бирер ине. Әгәр ауыҙыңды...

Тиçтерҙәрҙең әрепләшеүгә күсә барған әңгәмәһен зәңгәр ветровкаһын кейеп, пакет тотоп сыҡҡан Фәнидә бүлдерҙе.

– Әйҙәгеҙ, ҡыҙҙар, һыйлайым үҙегеҙҙе. – Ҡараңғы аралаш шешә башын тотколап та шараптың маркаһын таныған Рәшиттең тәкдиме эскерһеҙ. – Сухы ғына – винаграт суғы!

– Ярамаған һиңә бахмурҙан... Түлке балыҡ тотоп ятма, смотри, иртәнсәк тикшерербеҙ түшәгеңде.

– Ух, Зәриә, ух, телеңә сикан сыҡкыр!

Ҡатындар яр башына ыңғайланы. Әбдерәшит, һуңғы ҡат күргәндәй, ҡарап ҡалған булды арттарынан.

Өçтән аҫҡа тигеҙ генә дырылдап, моторлы кәмә үрләй ине. Тиҙҙән тотош Бураш мәрткә киткәндәй тын ҡалды.

## 8

Надир артыҡ иртәләмәй генә зыярат арьяғында тышаулы көйө төн сыҡҡан ҡолонло ҡолаһын етәкләп кенә ҡайтып килә ине, Камила ҡарсыҡ – Рәшиттең әсәһе – быны күрепме, әллә күрмәйсә, ҡул осондағы еңел генә аҡ ҡомғаны менән бояуһыҙ бурһыған ҡапкаһын гөпөрләтеп, иламһырап яр һалмаһынмы!

– Нә-эдир! Эрәшит ҡолаған, кил әле, кил тиҙерәк, ҡәйнеш.

Йүгәнен ат башына урай һалды, көрәшкә сыккан әзмәүерҙәй ҡулдарын йәйеп, етеҙ генә талпынды Надир тауыш килгән якка.

– Иҫке өй алдында. Һыуынып бара, ыһ, Аллам!

– Һыуынған бит!.. – тине Надир, соланһыҙ бәләкәс өйҙөң ике баҫкыслы ғына тупһаларын аймап, аяк яғы ҡырын, күкрәк тирәһе менән йөҙтүбән яткан мәйеттең бит-ҡулдарын тотоп ҡарау менән. Үҙе ҡай аралалыр быялалары кереккән бәләкәй тәҙрә аша баҫып, өҫтәлдә спирт һауытын күреп ажғырҙы Надир «һигеҙле» ҡалын күҙлеген бер аҫка, бер өҫкә шылдырғылап торған еңгәһенә, әйтерһең, улының үлемендә үҙенә ике туған еңгә тейеш ҡарсык гәйепле. – Бар, кеше сакыр. Ә юк, ошонда тор, үҙем саҡырам. Ни куда шагу! Әтеү үҙеңде гәйепләрҙәр. Хәҙер Айгөлгә, участковыйға борам!

Бураштың олораҡ уҙамандары элеккесә, бормалы стена телефондарын онотмай, йыш ҡына «шылтыратам» тимәй, «борам» тиер. Надир урамға ашыкты, үҙен көтәүләгән һымаҡ, бейәһе тора ине ҙур күҙҙәрен алаканлатып. Биш ботлок кәүҙәһе лә еңеләйә кәрәк сакта – эсе ауыртынһа ла, ырғыбыраҡ менде ҡолаһына, бейәһе хатта бәүелеп, өбөлдәп китте лә етеҙ генә түбәнләскә юртты, ҡолоно менән тайы өйө эргәһендәрәк ҡалды. Ана, аркаларына йәтеш кенә сумка аҫкан унынсыла, ун беренселә укыған биш-алты үҫмер Сасынға аҙымлай, улар артынса зәңгәр ветровкаһын беләгенә бөкләп һалған, яурынына көрәнһыу сепрәк редикулитын аҫкан, кәүҙәгә бәғзе укыусыларҙан да ҡайтышыраҡ Фәнидә юрғалай. «Эшкә ашығалыр, ярай, ҡул болғап тормайым, Рәшиткә зат-бот түгел ине Барыйы», – тип уйланы Надир.

Фасил йоконан яңы торғайны – ағарынып китһә лә, тиҙ үк аңғарҙы хәлде һәм кисә икәүһе ҡаҙып, аҙбарҙа еләтергә һалған картуфты токка тултырып ултырған атаһына якынлашты.

– Ишеттем, Аллаһу әкбәр!.. – тине лә Фазыл ике услап битен һыйпаны.

«Фасил, Фазыл! Уф Алла, Рәшит ҡусты кәнис бит! Барығыҙ әле, Камила еңгәм шаңкыған... Мин мәктәптән силсәүиткә, милитсәгә шылтыратам». Быны ҡарлыккан, мәгәр аһәңле тауышы менән, сәләм дә ҡушмайынса, бер тынала белдергәйне Надир.

Ҡола бейә бетон күперҙе дағалары менән тыңғылдатып уҙғанда, Фазыл уйсан ғына ҡулын сайған арала, Фасил нишләргә белмәй өңшәйеп тора ине.

– Бар, бар, йүгер. Дуҫың ине бит... – Әммә Надир «силсәүиткә, милитсәгә» тигәненә һағайыпмы, тыйғандай итте. – Ярай, ашыкма, бергә барырбыҙ. Мәшәкәте күп буласак... Өс көнлөк эшең ҡалыр, тигән һымаҡ. Фермерына әйтеп кил, анау учительканың мужигына. – Фермер тигәне Рәшитте ваҡыт-ваҡыт «Бе-

ларус»ы менән яллап, көнлөк эш-көшкә йөрөткән түбән ос укытыусының ире бит әле. Телефонын белә, ниңә мобилканан шылтыратмаçка?

– Абзый, һин ҡайҙа? Хәлдәр алама... Рәшит...

– Вәт маладис! – Атай кеше тәүҙә улын, аҙаҡ заманса бәйләнеште маҡтаны. – Бигерәк анһат... Пип-пип баç та – гауари да не загауаривай!

Атаһы башына тамъян ҡоҙалары бүләк иткән сөм генә ҡара йәшел түбәтәй кейеп алды: ясин-маҙар уҡыһалар, ҡатнашырға тура килер. Фасил аңлатып өлгөрҙөмө, әсәһе Сара һорамайынса ла улына, атайың да һалыр, тип бөтәрләнмәгән ике унарлыҡ тотторҙо, өй йыйыштырып, үҙенең һуңғараҡ барасағын иçкәртте.

Уңарсы егетте һиçкәндереп – һирәк шылтыраталар Фасилға – кеçә телефоны көйләп ебәрҙе. Тыңлап бөткәс:

– Эһе... – тигән булды Фасил.

Ауыл хакимиәтенән шылтыраткандар: кәмәне сығарырға әҙер торорғоҙ, райондан медэксперт, следователь Сасын аша машинала киләсәк, үҙе, йәғни, Айгөл Карамовна, Зәриә менән бара, аръякка сыға тора.

– Ана бит, килә торһон Айгөл, йомошом... – Сараны ире хупламаны:

– Йомош ҡайғыһы берәүҙә... Һин, Фасил, кәмәнән китмә, кискәрәк алмаштырырмын. – Фазыл ҡәҙимгесә кейенеп, һәңгәҙәк кенә аҙымдар менән сығып китте. Күперҙе үтеүгә эшләпәле Солтан берегә атланы. Тай-тулаҡ һымаҡ кәртә артлап йөрөмәç инде бынау көндө һиммәтле ир.

Солтан менән Фазыл, Надирҙың турһайып, ҡуйығыҙсы әле, теймәгеҙ, тиеүенә ҡарамаçтан, нык ҡатмаç борон тип, ҡулдарын күкрәгенә ҡаушарып, мәйетте йәмшек раскладушкаға яҙып һалдылар. Ҡиблаға турайтҡайнылар – башы аçта тойолдо. Әмәлен тапты Солтан: раскладушка аçтындағы ике әрәсәне кире ҡайтарғайны, үлек тигеҙләнеп ҡалды. Надир бил тапкырына ярылмаған имән бүкән ултыртып, бүкән өçтөнә ике литрлыҡ быяла банка ҡуйғас, тыйнаҡ ҡатыны сыптырлатып ялтыр тәңкәләр төшөрҙө. Артынса Фазыл таушалмаған ҡағыҙ унарлыктар, ә Солтан ике йөҙәрлек тыкты:

– Бурысым да бар ине, рәнйеп ятма инде, Рәшит ҡустым – элекке уҡыусым, – тине тере кешегә һүҙ ҡушкандай һәм йомартлығына ҡәнәғәт төçтә ир-ат яғына шылыңкыраны.

– Ана ултыра... бурысың. – Мәлендә тыйылып, «бурысың» тигәнде аңкауынан сығармаған Надир ҡарағускыл ҡуңыр күҙҙәрен секерәйтеп, бәләкәс өйҙөң ыксым тәҙрәһе ашаһында шәйләнгән пластмасса һауытка тәүҙә ҡырылмаған эйәге, аҙаҡ ырғактай кәкере, йыуантыҡ урта бармағы менән ымланы. Фа-

зыл был мәлдә, ясин-маҙар укыһалар, типме, раскладушкаға йәнәш баяғы ише ике тумар терәп, өҫтөнә яҫы такта йәйергә керешкәйне. Тиҙ үк һүҙ айышына төшөнгән Солтан яй ғына, һуҙып кына акланды:

– Мин уйлайым, Надир туған, ун биш көн элек минән алғанды кисә генә һемереп йөрөмәгәндер бит Рәшит кусты. – Һәр хәлдә яуабы акланған, үкенгән кеүегерәк килеп сыкты. – Лутсы һин миңә такта бир, полугроб кына торайым.

– Һин какмаһаң...

– Яҙмыштан һыҙмыш юк... Кемдең кемгә кағырын кем белә? – Нык кына кәмегән төпкө тештәре араһынан уртын кыҫып, һығып сығарҙы Солтан хәҙистәй яңғыраған фекерен. Уны кеүәтләгәндәй, өймәкләшеп торғандар араһынан былтыр ғына кырҙан күсеп килгән Пшилауат (умартасы) катынкайы – Кавалерист Хатип карттың килене аптыранып алды.

– Бәсәк, бәсәк, зыярат элек күренмәй торғайны, эйеме?

– Бураш буйында ағас һирәкләнде... – тине икенсеһе, йөпләгәндәй. – Ауыл бәләкәсләнә, зыярат дәүәйә.

– Әйтәгүр, йәштәр китә, йәштәр... Аръякта, ана, быйыл ғына ике егет аҫылынып үлде.

– Бөтәбеҙ ҙә шунда барабыҙ инде...

Ошоларҙы ишеткән Надир кайтымһак кыланды.

– Ярай, Хажиморатович. Оҫтаһы һин инде. Такта минән: двадцаткамы, тридцаткамы?

– Төбөнә – утыҙлы, егермелеһен кабырғаһына кағырбыҙ. – Әллә касанғы һыйыр мажараһынан бирле Надирҙың ихатаһына ла аяк баҫмаған Солтан үтенесен дә белдерҙе. – Фазыл менән ике рейс ташыһағыҙ, өйҙән инструмент алып киләм дә...

– Мең тәңкәлек... – тине Надир, шымтайып. – Лапаҫ башынан алһак, мәйет йыуырға бөтөн ишек ярай. Правление, детсад һүткәндә апарук ташыған, тыумастай. Әйтәм, «Әбдерәхим ағайҙан калған иҫке өйҙө эстән-тыштан әбшәүәтләп алам да яусы итеп ебәрәм үҙеңде берәйһенә» тип бытырлай ине. – Эргәләренә шым ғына килә яткан Фазылдың колағына ел еткерҙеме, былар ҙың «инструмент... рейс... мең тәңкә...» тигәндәрен шундук төшөндө һәм кыскырып ебәрә яҙҙы.

– Лапаҫ башында бөтә нәмәһе бар. Синнеге тулы инструмент. Бер-ике мадам өйҙө генә таҙалап сығарһын да.

– Йыуһындар, түлке өҫтәленә теймәһендәр. – Надир быны кырка белдерҙе. Тик ярайһы йәштәге «мадам»дар ең һыҙғанырға ашыкманы. Куркыштан... Кемелер һүрәнке аяҙлауҙа һыуы йылый торһон тип, ялғаштар, бактар ташыны, кемелер оло өй соланы артынан һуҙылған кыҫка шлангынан вакыт-вакыт көсәнмәй генә бык-бык һауа кыуыктары сығарып аккан саф, тонок һыу сөмбөрҙәтергә кереште. Бәләһенән баш аяк тигәндәй, Надир эргәһенән тиҙерәк шылып, Солтан корҙашы Фазыл

эргәһенә һылышты. Уныһы ике-өс теше һыныҡ ҡул быскыһы тотоп, бер-ике ботағын йәм өсөн килтерәйем әле, тип йәнәштәге әрәмәлектә алыҫтан ҡарағусҡылланып күренгән йәш шыршы яғына йүнәлде. Юл ыңғай туктай биреберәк, яңғыҙы ғына былайға табан атлаған ҡатынынан ниҙер һорашып китергә лә өлгөрҙө. Фасилды һорашкандыр. Шунан, ҡулын ҡаш өҫтөнә ҡуйып, өйө яғына баҡты: ярҙан өс-дүрт кеше күтәрелә, өҫкө туғай юлынан ҡыҙыл тәреле «буханка» елдерә ине.

...Оҙонса машина күперҙе сыҡҡас аҙға ғына туктаны, һәм унан Фәнидә төшөп ҡалды. Ашыҡманы, әле генә кәмәнән күтәрелгән Зәриәне һәм кескәй Зөлфиәне, бөҙрәкәй хакимиәт башлығы Айгөлдө көтөп алды. Ике ҡатын һөйләшкәнсе, «Скорый»ҙағы майор атлай торҙо, Фәнидә иһә сумкаһын өйөнә ҡалдырып, тиҙ генә башына ҡарараҡ яулыҡ ябынып сыҡты һәм былар артынан юрғаланы. Зөлфиә Дилбәр инәкәсенә киткәйне — өйөнә ингәндер, күренмәй урамда.

* * *

Рәшиттең вафатын Фәнидә эшендә ишетте. Лаборатория урынлашкан аҡбурға буяулы тәпәш иген келәте яғына ыңғайлағайны, секретарь ҡыҙ тупһа аша: «Николай Тимерәйевич саҡырта», — тип кенә оло эш ҡушҡандай өндәшкәс, үҙе шундуҡ ишекте ябып тороп кире эскә сумды. Саҡырған ергә бар, тигәндәр. Рәйес кабинетында участковый йәйелеп ултыра ине, Фәнидә инеү менән, тәртәләрен йыйыбыраҡ, баш ҡағып сәләм алды. Йәйләүгә һуҙылған электр сымының яртыһы тиерлек урланғаны бирле, ҡайҙалыр юридик институттан диплом алып йөрөгәнгәме, ике йыллыҡ отпускыһы тәтепме, Сасын йә Бураш тирәһендә күренгәне юҡ ине йөҙгә тупаҫыраҡ, кәүҙәгә итләс участковыйҙың, әле, моғайын, ферма мөдиренең аҙна самаһы элек кенә ҡулына секретарша тотторған телефондың юғалыуы буйынса килгәнгә оҡшай. Һерәнләтеп йөрөгәндер һауынсылар, көтөүселәр араһында әллә кем булып, шунан берәй ерҙә онотоп ҡалдырғандыр йә берәй көтөүсеһе, һинән бигерәк миңә кәрәк, тип айыу майы һөрткәндер. Ҡарасы, Фәнидә эстән генә һөйөнгәндәй итте быға. Ах, ҡатындарҙы үпкәләтһәң... Ә капитан? Бәй, майорҙы алған даһа — йондоҙо ҙурайған, берәү генә. Уны-быны ғына айыра Фәнидә.

— Тяжелый сигнал бар Бураштан... — Ашыҡмай ғына башҡортсараҡ һупаланы быны Тимерәйевич. Һуңғы осорҙа рәхимһеҙ сигналдарҙан зиһене шаңҡыған меҫкен ҡатынҡайҙың күҙ алдынан берсә Барыйы, берсә Лираһы уҙҙы, хатта ғәрипгөрәбә һынлы мәрхүм ҡайны-ҡәйнәһе лә йәлп-йөлп итеп ҡалды. Барыбер ҡыйын хәбәр: Әбдерәшит, Тимерәйевич әйтмеш-

ләй, «Рашид» вафат икән. Кооператив рәйесе, милиция офицеры алдында үҙен мәрхәмәтле, хәстәрлекле, хатта әҙәпле күрһәтергә тырышып, сейфын эшлекле генә асып, бер биш йөҙлөк, бер секунд торараҡ ишен сығарҙы, улай ҙа оҡшатмай, йәшкелт буяулы меңлек һондо.

– Хамматовна, участвуйте, пожалуйста, на похоронах как представитель «Сасын»а. Вот – хаир, пезнеке, то-есть от кооператива.

Баҡһаң, хәҙер бында районүҙәктән «Тиҙ ярҙам» туктап китәсәк, имеш. Милициянан шылтыраттылар участковыйҙы эҙләп, ә ул бында булғас, Бурашка етеп ҡайтырға бойорғандар. Ерләүҙә ҡатнашырға тигәс, тимәк, Фәнидәгә бында иртәгә килеп йөрөмәһә лә мөмкин. Иртәнән һуң – ял. Бәрәңге ҡаҙа башлар, мунса яғыр, кер йыуыр... Ниңәлер артыҡ алсаҡ һөйләшкән кеүексе Тимерәйевич.

– Недоразумение вышло... Лично приношу извинений...

Ана бит, уҙған аҙнала телефон таратҡанда аңлашылмаусанлыҡ килеп сыҡҡан, шуның аҡсаһын бирер бухгалтерия, теләгән телефонды, мәҫәлән, Бураштан Өфөнө тота алырҙайын Фәнидә үҙе һатып алыр, тик дүшәмбе «хәйер» өсөн дә, «мобилка» өсөн дә ведомоска ҡул ҡуйыр, тип аңғартты Николай, майор үҙҙәренә иғтибар итмәгәндә. Тимәк, Валентина «эшкәрткән» Николайҙы. Ғәфү үтенә бит хатта!

Фәнидә сыҡҡанда нәҙекәйбил секретарша, лимон телемдәре, сәй пакеттары һалынған үтә күренмәле ҡалын, суйын төҫлө ике быяла бокалды ыҡсым батмуста сайпылдырмай ғына тотоп, инергә өлгөрәй ине. Төрлө сорттан мәйен дә тәкдим итә торған Тимерәйевич власть эһелдәренә, әлбиттә, дәрәжәләренә ҡарап.

Валентинаның өйөндәге лә, мәҙәниәт йортондағы телефоны ла яуап бирмәне. Ханым аҙбар артындағы өс сутый бәрәңгеһен ҡаҙып йөрөүе лә ихтимал.

Ултырыр урын аҙ икән дә «Скорый» ҙа, киттеләр Бурашка ҡыҫылышып. Майор хатта яңы погонлы мундирының еҙ төймәләрен ыҫҡындырып, Фәнидә күпер аръяғында төшөп ҡалғансы носилканың резинкәле һаптары араһына баҫып барҙы.

– Әйҙә, рәхим итегеҙ. – Участковый хакимиәт башлығына, ҡыҙын етәкләгән Зәриәгә ихлас өндәшһә лә, тегеләр тыңлашмағас, үҙе лә төшөп, Биргадир урамынан йәйәүләне.

## *Бишенсе киҫәк*

*Ватанды һөйөү — ул имандың бер өлөшө.*

**Мөхәммәт пәйғәмбәр вәғәзе**

### 1

Судмедэксперт мәйет менән булашҡан арала прокуратура эҙбаҫары иплән кенә тәфтиш ойошторҙо, ә буй-һыны килешле шәфҡәт туташы мәрхүмдең артыҡ бөксәнләмәгән, бары тик үтә күрәшләнгән әсәһенә оло өйҙә тынысландырғыс укол ҡаҙаны, ыңғайҙан Камила апай тәфтишсенең һорауҙарына яуап биргеләне. Һуңғы тапҡыр ҡасан күргән Рәшитте?

— Ҡасан, тип ни, ятыр алдынан инеп сыҡты инде. Ике-өс кәртүк, ҡаймаҡ алды. Эскән сағында йә иптәштәре килһә, иҫке өйҙә йоҡлаштыра ине. Иртәнсәк сәй ҡайнатып эстем, бәләкәс йоҡлай бирһен, уятырмын аҙаҡ, тинем. Икенсе тәһәрәткә барып килгәнемдә күҙем төштө бит иҫке өйҙөң соланына. Тоноп-маҙар ята микән, тинем тәүҙә. Яҡынайһам, Рәшитем кеүек. Иҫереп ҡолағандыр, тип торғоҙорға маташам — көс етмәй. Ҡултыҡ аҫтына усымды тығам — йылыһы юҡ... Иҫтән яҙа ғына яҙҙым. Ғүмерлек йоҡоға талды балаҡайғынам, хәҙер уятыусы ла юҡ үҙен. Ней кәләш алып, бәпәй таптырып һөйөндөрмәне. Эсһә лә, әбижәт итмәне үҙемде, «жаб» тип тә әйтмәне. Утындан, йылы һыуҙан өҙмәне.

Йәнә шәфҡәт туташы Тимерханова ярым һукыр ҡарсыҡтың өйө ифрат таҙа, юҡ-бар ҡаралтыһы бөхтә икәнлеккә иғтибар итте. Сабыр, түҙем йән икән етмеш икеләге Камила ҡарсыҡ, баҫалҡы ғына сеңләп ала, бәғзеләр һымаҡ сарбайлап иламай, иҫе-аҡылы теүәл генә.

— Пыркарур, духтыр килгән, тиҙәр. Һин, ҡыҙым, инәлә күр шуларға: ярмаһындар улымды. Дәнен әхәзләп ни... Былай ҙа, эсеп кенә үлермен, әней, зинһар, ғәйепләмәҫһең, тип йәнгә тейә торғайны. Йоҡлай алмай ыҙаланам, тип тә һөйләнде һуңғы осор... Әтейе лә йәшләй генә китеп барҙы.

— Тағы бер яҡын туғаны һораһа, ярмаҫҡа ла ярайҙыр, шәт, — тине түрбаштағы өҫтәлдә ҡағыҙ тултырып ултырған тәфтишсе. — Ивановта тора эш башы.

Уңарсы ҡырынырак урамда тағы бер машина күренде, уныһы тырышып-тырмашып текәгә менде һәм иҫке өй менән бетон электр бағанаһы араһында туҡтаны. Шул микән Камила әбекәйҙең бер туған энекәше Әбдерәхим? Пенсияға тиклем эшләрлегем бар әле тип, «Родина» колхозы тарҡалғас, Таутөмән эргәһендәге разъезға, ҡатыны туғандарына, һырындылар. Тимер юл таҙартҡан булып, шпалдан һалынған ҡаҙна йортонда арыу ғына йәшәп яталар тиме.

Кеше килеп тора, китеп торһа ла, кәмемәгән кеүек. Ҡыҫкараҡ таяғы менән юлын төрткөләп, уҡына-уҡына, яурындарын киң кизе шәл менән ҡаплаған Сания ҡортка ла, ҡатаһын саҡ шылдырып, үҙ яйына килеп етте. Барыбер йүнләп күрмәйем, типтерме, күберәк ир-ат ҡайнашҡан, такта шыуҙыраған иҫке өй аръяғына бармайса, оло өйгә инде, дөрөҫөрәге, уртаҡ ҡапка төбөндәрәк үҙен ҡыуып еткән Фәниҙәнең етәгенә эйәрҙе.

– Әллә Фәнидә инде? Ҡулыңдан таныгандай итәмсе.

– Мин, Сания апай, яңылышманың...

Өйҙә йәтешләп кенә ултырып доға ҡылғас, Сания ҡарсыҡ үҙенә аҙмы-күпме килендәш тейеш хужабикәнең усына, нисә һум икәнен әйтеп тороп, бишкә бөкләүле биш йөҙлөк ҡыҙғылт хәйер йомдорҙо.

– Әҙәм балаһы эргәләй тукһан туғыҙ үлем әйләнә, тигәндәр. Сабыр итәйек. Әбдерәшиттең игелеген күп күрҙем. Утын ташыны, бәрәңге ҡаҙышты, мунсаға дәшкеләр ине...

– Әйтәгүр, ауыр тупрағы еңел булһын. – Форсат сыҡҡанға һөйөнгәндәй, Айгөл Карамовна барҙа Камилаға йәшел меңлек биргәндә, Фәнидә ниңәлер Тимерәйевичты телгә алманы. – «Сасып» правлениеһы ебәрҙе, Камила апай, бураштарҙың ҡайғыһын уртаҡлашабыҙ, тинеләр.

– Марыйҙар ҙа хәйергә йомарт, – тип һүҙ ҡыҫтырҙы ҡатындарҙан кемдер. Ҡарһаланмай, һәүетемсә һөйләшкәс, кеше күмәккә ҡарамай, һәр һүҙ аныҡ ишетелә булмәһеҙ иркен өйҙә.

Артыҡ битәрләмәй генә «һантый» тиһәләр ҙә, Сания ҡортҡаның сутырҙығы хатта ки доньяуи, ил инәләренеке һымаҡ.

– Кем ясин уҡый? Йыуып, кәфенләгәс, ясин фарыз.

– Әлләсе... Аръяҡ мулла, иҫерек үлеккә бармаһам да бәхил, тигәнме... – Түрбашта ҡашығаяҡ шылтыратырға керешкән йәшерәк ҡатындарҙың береһе, әллә Зәриә булдымы, шыбырлаңҡырап әйтһә лә, әбекәй ишетеп ҡалды ла зәһәр генә көлөмһөрәне.

– Һы, йәш сағында үҙе лә фәрештә түгел ине. Ярай, Деди... Дипутат Дилбәр уҡыр. Алла бирһә, алдан уҡ әйтеп ҡуям үҙенә, мине лә тәрбиәләр. Миңә зыярат яҡын, әл-хәмду лилләһи...

– Не спеши! – Быны ишеткәс, баҫалҡы ғына йылмайышып алды түрбаштағылар. Ярай ҙа, Фәнидә ауыҙын томалап өлгөрҙө. Көлмәҫ ереңдән көлдөрөр сукынсыҡ Зәриә.

Күңеле ипкә килгән Камила тороп уҡ һөйләнде:

– Йә Рабби, ауыр саҡта хәлгә керәһегеҙ. Әйтегеҙ Рәхим энемә, һарыҡты һуйһын.

– Ҡуй, юҡты ни, йәйләүес тәкәң беселгән, шәт, шуны ғына һуйҙырт. Кәҙә ите лә бата... – Сания ҡарсыҡ килендәшенең күпме мал аҫырағанын белеп һөйләгән кеүек.

– Ысын әле, берәү ҙә ас йөрөмәй. Районды꙼ылар ҡайтырға тора. Актларына ҡул ғына ҡуй ҙа. – Быны хакимиәт башлығы Айгөл өндәште.

– Разый булып ятыр – һарыҡ салдырам, – тип үҙенекен ныҡыны Камила.

Маҡтаулы ук булмаһа ла, тирә-яҡ ауылдарға ла танылы ине Рәшит. Ана, ярты яҡ Динестән дә килеп еткәндәр. Сасындан берәйһе шылтыраткандыр йә үткенсе һуғылғандыр. Мыйыҡлы, күҙҙәре янып торған әҙәм, Фәнидәнең тоҫмаллауынса, мәрхүмдең никахһыҙ ҡайнағаһы булыуы ихтимал. Таушалмаған күк спецовка кейеп алған. Нәҡ шулай: Рәшиттең мотоциклын менеп килгән – руленән эткеләп лапаҫ яғына һөйәне ләһә. Мул ғына хәйерен һалды, кәпәсен сисеп, инде оло өйҙән мәйет эргәһенә сыҡҡан формаһыҙ тәфтишсенең шым ғына һорауынан, йәнә таҡ-тоҡ табут ҡағып йөрөгән Солтандың шиксел ҡарашынан аҡланырға теләгәндәй, ҡысҡырыбыраҡ, «дастуйын» яуап бирҙе.

– Ағай-эне, Рәшит туған уҙған йәкшәмбелә Динестә булғайны. Ҡолаған ауыл осонда, понимаете, күҙен күгәрткән, мотоциклын боҙған. Әҙ-мәҙ йөрөнө лә төтәтеп йәйәү һыпыртты. Свидетелдәр күп. Матайын йүнәтеп алып килдем бына...

Әлеге мәғлүмәт формаһыҙ һонтор тәфтишсе менән һаҡалтай суд медигына, йәнә хакимиәт башлығына кәрәк ине. Улар ситкәрәк әйҙәп, Рәшиттең Таутөмән яғынан килгән абзыйы менән әңгәмәләште. Йәнәһе, «хәҙер Сасынға әпкитеп, фельдшерский пунктта мәйетте ярырға тейешбеҙ...»

– Мынау матур көндө нисек үлеп ятмаҡ кәрәк! Сабаҡы малай. – Энеһен яратыу ҙа, тормошҡа үпкә лә, юғалтыуға үкенес тә сағылды һүҙсән абышҡа теленд. Күҙҙәре майланған кеүек, әҙ-мәҙ йотҡолап килгәндер юлда. – Камила апайым риза икән, мин дә ярыуға ҡаршы. Мосолманды бысаҡламай ерләү фарыз. Бүтән туғандар ныҡ ҡырҙа. Үзбәкстандағы һеңлекәш, Рәшиттән олоһо, килә лә алмаҫ. Ҡырҡына ҡайтһа, бик хуш. Байҡыбаш яғындағы энем үҙе ауырып саҡ йөрөй, фәҡир тора... Яҡыныраҡ йәшәгәс, үҙем машина яллап килдем бына. Камила апай ҙа бирешкән. Айгөл һеңлекәш, ҡарттар йортона урынлаштырыуҙы юлламаҫһығыҙмы?

– Ул хаҡта һуңынан, абзый. – Хакимиәт башлығы иппле генә итеп Әбдерәхимдең һүҙ дилбегәһен ҡыҫҡартты. – Похоронный мәшәҡәттәр бөткәс уйлашырбыҙ.

Теге һаман үҙенекен һөйләп, мышҡылдаған танауын, ҡулъяулығы менән күҙ йәштәрен һөртә-һөртә, тауышын нескәртә-нескәртә, ситкәрәк тайшанды.

– Километрҙа тыҡ-тыҡ йәшәүе күңелһеҙ, туғандар. Балалар электричкала йөрөп уҡыған була. Ҡайтырмын да, бажалый...

– Ҡайт, ҡайт, был өйөң оҡшамаһа, буш өйҙәр күп Бураштта. Ете баламы әле һинең? – «Оһо» тине һонтор, ә һаҡалтайға урыҫса әйткәс, уныһы баш бармағын сөйөп ҡуйҙы. – Исмаһам, мәктәпте сәпсим бөтөрмәҫтәр. Отец-маладис тип кенә йөрөтөрбөҙ.

Мәгәр эксперт вазифаһын да онотмағайны: Айгөл менән Әбдерәхим оло өйгә инеп киткәс, тәмәкеһен ҡырын тешләп, гражданский кейемдәге тәфтишсегә һәм ҡара күн формалағы милиция майорына алмаш-тилмәш бағып, сетерекле генә икеләнеү белдерҙе.·

– Бурашты бик скандальный ауыл, кляузниктар күп, тиҙәр, берәйһе ялыу яҙып, ҡәберен ҡабат ҡутартып ҡаңғыртмаҫмы? Криминал юк былай...

– Кеше ерләү мәсьәләһенә халыҡ философияһы солидно ҡарарға ҡуша. – Фекеренә тәрән мәғәнә һалған тәфтишсе, сәғәтенә ҡарап, ваҡытты самаланы. – Ҙур ғына һымаҡ ауыл – мәсет юҡ, мулла юҡ...

– Хәҙер бер серьезный старушка киләсәк. Элекке областной депутат, ярый коммунистка. Шул өйрәтеп тора – мужиктар мәйетте йыуа, – тип асығыраҡ аңлатты майор. – Проблемалыраҡ егет ине Рәшит, барыбер йәл. Мастер ине. Костюм-күлдәген таҙартып, үтекләргә ҡуштым Надирҙың йәмәғәтенә. Мәктәптә венок әҙерләйҙәр. Эш бөткәс, һыуһатһа, Хажиморатовичка һуғылып, обед яһап ҡайтырбыҙ. Үҙе саҡырҙы. Все-таки ниндәй диагноз, ә?

– Токсикоз. Наркотическое отравление... – Үҙ терминдарын байтаҡ теҙҙе һаҡалтай.

– Сухой шешәһе күренә ине өҫтәл аҫтында. – Майор мәғлүмәт өҫтәне. – Хотя сухойҙан кем үлгән?

– Анау спирттанмы әтеү? Ҙур ҙа түгел һымаҡ. – Капитан чинындағы тәфтишсе ҡыҙыҡһынды.

– Эйе, һауыты түгел, бәләһе ҙур, – тип нөктә ҡуйҙы һаҡалтай. – Хикмәт хатта сифатта түгел, ә күләмдә. Көн дә һукмыш йөрөгән егет, августан бирле... М-да-а... Яңыраҡ леспромхоздан оҙаттыҡ Өфөгә утыҙ йәшлек кенә берәүҙе. Ни үле, ни тере түгел. Ҡот оскос! Ун етеһе лә тулмаған ҡустыһы, гелән самогонды миңә әҙ ҡояһың, тип, мейеһен сыркырата тондорған. Сей ҡайын ярҡаһы менән. Деградация!

– Эйе, деградация! Былтыр Б. ҡалаһы моргынан ауылға апҡайтып башҡорт әбейен ерләйҙәр, – тип йөпләне коллегаһын прокуратура вәкиле. – Иртәгәһенә ҡаланыҡылар мәйетте ҡутарып, кире алып китә: баҡһаң, бутап, башҡорт әбейе урынына үлек урыҫ әбейен биреп ебәргәндәр! Тимәк, моргтағылар ҙа, ҡәрҙәштәре лә айыҡ булмаған...

* * *

Староста әйткәнгә түгел, намыҫы теләгәнсә, йәнә Лираны һанға һуҡҡан, йәлләгән өс-дүрт группалашы исеменән дә барып ҡайтты Элина стационарға. Егеттәргә кеше ҡайғыһы төштән һуң микән, сәләм күндергәндән тыш, «минең исемдән берҙе әп ит» тип тоҙһоҙ ҡыланаларсы. Ауырыуҙы әп итергә ярайҙыр шул... Үҙҙәрен үбергә ҡушҡанда, нишләрҙәр ине икән? Тәүге йылдары төркөмдә иң йәше булғанға Вундеркинд ҡушаматы алған, хәҙер уныһына «баймакский» тигәне өҫтәлгән сәрхүш – стипендия өләшкән һайын танауы ҡыҙарғылай хәстрүштең, йөрөй шунан ҡаты-ҡото кимереп – мин дә барайыммы, тип уҡталғайны, Светлананың ни өсөндөр «үҙең генә бар» тигән сәйер иҫкәртеүен иҫләне. «Үпкәләмә, Вундеркинд баймакский, унда бер генә посетителде индерәләр. Ә-ә... мин ауырыһам, тфү, тфү, килерһеңме?» – тип мәрәкәләне. Яуабын тапты егет: «Юк, землячка, бармайым, сөнки ауырымаҫыңды беләм». Кәүҙәһе ҡалынайып, мыйығы беленеп барған була әле яҡташының. Төҫ тигәнең ҡойто инде, әрпешерәк тә. Ҡыҙҙар менән әллә ни буталмай, мәгәр Лираны юкһынған, йәлләгән кеүегерәк һөйләнеүен һиҙгәне бар Элинаның.

Светлана тәүҙә Элинаның Лира эргәһенә «әҙәп визиты» яһауына әллә ни әһәмиәт бирмәгәндәй ҡыланды. Торараҡ түҙмәне, былай ҙа таҙа, быяла ҡапҡаслы, буталлы табаһын йыуымаҡ өсөн кухняға барып әйләнде. Ашамһағыраҡ Элина кис һайын шунда урала торған.

– Элиночка, хәлдәр нисек?

Тегеһе, юрамал һымаҡ, тәтелдәп отчет бирергә керешмәһенме:

– Барҙым, күрҙем. Оҙаҡламай сығарырҙар ул, ти.

Йәшелсә әрсеп, вермишель ҡыҙҙырып торған бүтән ҡыҙҙар ишетеп ҡалмаһын тигәндәй, Светлана тыя һалды.

– Элиночка, миндә аулаҡ – заходи на минутку.

Барҙы бүлмәһенә. Ҡыҫтаһа ла, ултырманы, аяғөҫтө һөйләште. Һиҙҙермәһә лә, Элина Лира яҡлы ине эстән генә. Баймаҡтар ҡупырым, тиеүҙәре хаҡ микән, тау аҡтарған кешеләй тота үҙен.

– Үҙе менән дә күрештем, врачы менән дә аяҡ терәп серләштем. Үҙе ҙу-ур башлы, үҙе холостяк миякинский врачеватель, хатта солдафон кеүек. Мин әйтәм: сессия башланды, господин Авиценна, сығар подружканы тиҙерәк, тим. Һайрай теге: лечение аккурат бара, әгәр Чехов санаторийына ебәрмәһәк, тиҙҙән теләгегеҙ үтәләсәк, ти. Лирочкаһың настройы нисауа, күпдин күп сәләм күндерә. Теге Гиппократ упсы минең менән танышырға маташа.

– Авиценнамы, Гиппократмы? – Хәбәренең ҡойроғон тоттормаған Элинаға Светлана асыуын йәшермәне. – Заниматься итәме Кәримова?

– Итә. Һорашҡайның бит әле теге учебникты... Лирала бар. Ниндәйҙер аспирант биреп торған, вәт...

– Бацилла кәрәкмәй беҙгә!

– Ә ниңә «Элиночка» тип өҫтәмәйһең? – Элинаға ярһырлыҡ сәбәп табылды. – Знаешь, дорогая, исемең светлый ҙа, ны-у есемең темный һинең.

– Какая я тебе «дорогая»? – Светлана Элинаға тоҡтомалдан ҡаҙарынды.

– Ну, тогда дешевая! Вдобавок, мошенница!

– Дуй отсюда, кобылка учалинская!

– Дуям, дуям... Шлюха давлеканская!

Аһ ҡатын-ҡыҙ теле! Берсә таҫманан шыма, берсә ҡылыстан үткер. «Ниңә тыуған райондарығыҙҙы атап тәмһеҙләшәһегеҙ?» тигән һорауға, моғайын, ике ҡыҙ ҙа яуап бирә алмаҫ ине.

Элина китеп күп тә үтмәне, ниндәйҙер мәкерле ҡарарға килеп, Светлана комендант эргәһенә төштө.

* * *

Миләүшә Ғәлиевна, әсәһенең вафатына ун йыл яҡынлашҡанды хәтерләп, киске тамаҡ ахырына ошо хаҡта һүҙ ҡуҙғатты.

– Үткәрәйек, – тине Марс Нәбиевич. – Мәсеттән мулла саҡырайыҡ. Ә юҡ, эштә бик ипле вахтер ағай бар ине. Шул Ҡөрьәнде йөрәккә үтерлек көйләй. Аптырап ултырҙыҡ анау саҡ, завхозды ерләгәндә. «Ғәлиә» мәҙрәсәһендәге, дә-ә, ислам университетын бөтә быйыл. Алдан шылтыратам да, килер, тим...

– Бывший коммунисмы? – тип көлөмһөрәне Данир. Уңайы сыҡҡанда ата менән ул һүҙ көрәштереп тә алғылай.

– Ҡайҙан белдең? Зюганов әйттеме? Ул ни, Иисус Христос первый коммунист булған, тип туҡылдай ине яңыраҡ телевизорҙан. Ә мулла нужа һурпаһын алҡымға тиклем һемергән. Сабый сағында репрессияға эләгәләр – семьём алып китәләр Себергә. Бер төн нараға ҡуша туңып ятҡанмын, ти, бахыр. Атаәсәләре аҙаҡ вольный переселенец булып ҡала шунда, донъя ҡуялар, ә был Ҡырмыҫҡалыһына ҡайта. Колхозда оҙаҡ эшләй, Өфөгә күсә. Алтын ҡуллы ҡартлас! Ете йыллыҡ ҡына белеме... «Башҡорт-остан» һүҙен аңламайыраҡ, меҫкен башҡорт ҡара эштә гел остан егелеп эшләгәнгә әйткәндәрме, ти, беҙҙең республиканы? Аңлатып бирҙем үҙемсә: стан – урҙа, ставка, ил тигәнде аңлата, тинем. Ә һин, Данир... Марсович... коммунисмы тип мыҫҡыллайһың, аңын-тоңон белмәй. Партияның халыҡҡа

артык зыяны теймәне, минеңсә. Бына һин бер ниндәй партияға инмәйһең – бәлки, дөрөҫ эшләйһеңдер. Йәштәр союзына йөрөп ҡараның, маладис, да хәрәкәтегеҙ һүнә, шикелле. Вообщем-то, генийҙар бер партияға ла ҡатнашмаҫка тырыша. Үҙеңде һин дә генийға һанайһыңмы? – Әсе генә бәхәс ҡуйыртмаҡсы оло ғалим буласаҡ коллегаһы менән. Ә бәхәстәренең осо-ҡырыйы күренмәҫкә оҡшай.

– Йә, етте, – тип һыуындырҙы Миләүшә быларҙы. – Аш алдында бәхәсләшмәгеҙ.

– Мәсеткә барығыҙ, – тине Данир ахырҙа белдекле генә. – Хәйер һалығыҙ.

– Эйе шул. Һин эйәрһәң дә сауап булыр. – Әсәһенең тәҡдименә егет ҡаршы төшмәне. Ярата ла, юҡһына ла Данир өләсәһе мәрхүмәне.

– Бына һине тәрбиәләшкәндә, Тәслимә өләсәңдең һынамыштарын, мәҡәлдәрен, йырҙарын, хатта доғаларын, имләүҙәрен арлы-бирле теркәп барғайным.

Алдан әҙерләп ҡуйған, буғай, Миләүшә тәҙрә төбөнән тәүҙә күҙлеген, шунан ваҡ быжырмаҡлы тышы кипкән муйылға оҡшаған ҡалын дәфтәр алды.

– Аһ-аһ, юғалмаған да ҡәйнәмдең ҡомартҡыһы. Мин дә яҙғылағайным матур ғына йырҙарын, – тип һүҙ ҡыҫтырҙы Марс Нәбиевич.

– Бар, бар, тик таныуы ҡыйыныраҡ, – тине ҡатыны.

– Кәнишнә, – тип әсе генә көлдө ире. – Хәрефтәрҙең градусы сағы булғандыр.

Ҡул һелтәп, Миләүшә Ғәлиевна «әсәм нисек һөйләгән, өлгөргәнсә ошолай теркәлгән дәфтәр» тип, студенттарына дәрес биргәндәй, хисләнеп уҡырға кереште:

*Кеше өйөнә ингәс, ултырырға кәрәк, әтеү ҡот ҡунмай.*

*Сынаяҡҡа сәйнүктән тәүҙә үҙеңә (хужаға) яһарға кәрәк. Ҡымыҙ, бал, айран* һ.б. шулай.

Ярамай:

*Өҫтәлде ҡағыҙ менән һөртөргә...*

«Быны онотоп ебәргеләйем», – тип ауыҙ эсенән генә мығырлап алды Марс Нәбиевич. «Яҡшы санитария!» – Быныһы Данир ауыҙынан ысҡынды. Ғәлиевна бүленмәй генә дауам итте.

*Өҫтәлгә баш кейемен һалырға ярамай. Әтеү яҡын кешең төрмәгә ултырыр.*

*Үҙәкте тартырға; кешенең аяғына баҫырға; һыйыр ағын кис бирергә; тоҙҙо тышҡа ташларға; мендәргә ултырырға; йоҡо алдынан һағыҙ сәйнәргә...*

– Еттеме? Күп бында «ярамайҙар».

– Минән дә табу өҫтәргә мөмкин. Мәҫәлән: «*утҡа бес итергә ярамай — артың ҡуберсер. Һыуға төкөрһәң — ауыҙың...*»

Ҡатыны быға ла артыҡ иғтибар итмәне, әҙерәк битләгәс, дәфтәрен япҡан ерҙән кире асып, ашыҡмай ғына: «Һынамыштар», – тине:

*Мейестәге ҡуҙ уҡтыра төшһә, өйгә ҡунаҡ килә.*

*Ҡараңғыла аҡса бирһәң, ҡулға тоттормайҙар: йә ергә, йә иҙәнгә бәрәһең...*

– Вәт олигархтарға, бизнесмендарға шәп инструкция! – тип Марс Нәбиевич ауыҙын йәйҙе.

*Ырыуҙан ҡалған ҡатын-ҡыҙ мал алырға хаҡлы.*

Һайлаштырып, Миләүшә тағы берҙе уҡыны:

*Игеҙҙәрҙең береһе — йөрәк, икенсеһе — бауыр. Йөрәк үлһә, бауыры ла оҙаҡ тормай.*

– Моғайын, быныһы милли этнокультуралыр, – тине Марс Нәбиевич. Аҙ ғына паузанан һуң Миләүшә Ғәлиевна оҙонораҡ һөйләмгә күсте:

*Башҡортта тыуған кейемде эс яҡтан ямайҙар, ә урыҫта — тышҡы ямау.* Һуңғы барған ирҙе лә элек шуға тиңләй торғайнылар. Уның ирлеге лә шул «тыш ямау һымаҡ» инде, «тыш ямау ғына бит ул» тиерҙәр ине.

– Хәтәр бит, ә? Ирҙәргә, тимәк, тыш ямау булыу килешмәй. Вот халыҡ педагогикаһы! – Ниңәлер Марс Нәбиевич Данирға күҙ һирпеп, телен сартлатып ҡуйҙы. – Тағы сәй эсмәй булмаҫтыр. Миләүшә Ғәлиевна тәүҙә үҙенә, шунан беҙгә яһар, дәфтәрҙәге һабаҡ буйынса...

*Энәнс тотоуҙа ла айырма бар. Урыҫ энәне буйлата тота, ә башҡорт, ҡәләм һымаҡ, сәнсеп тота. Ә буйлата тотоп ҡәфен тегәһең...*

Миләүшә урынынан ҡалҡа-ҡалҡа уҡып бөттө лә күндәм генә газ плитәһенә ыңғайлағайны, ғаилә башлығы иһә дәфтәрҙе үҙ ҡулына алды. Әҙ-мәҙ күҙ йөрөткәс, ҡәйнәһенән – Тәслимә әбекәйҙән үҙе көйләтеп йырлатып яҙған куплетты һәр һүҙгә баҫым яһап ишеттерҙе. – Бына бит, нисек маҡтаған беҙҙең ырыуҙы ҡәйнәгенәм:

*Ҡарағай ғына миҫкә, муйыл ҡоршау,*
*Тулы микән уның дегете?*
*Яҫы ла ғына яурын, нәҙекәй бил,*
*«Ах, миленький» бөрйән егете.*

– Пап, ты не поешь, а говоришь, – улының йылмайыулы төртмәсенә атай кеше танауын сирҙы. Хәҙер иһә дәфтәр иплəп кенә Данир ҡулына күсте, һәм ҡабалан-ҡарһалан сыймаҡланған хәрефтәр ижекләнеп кенә өнгә килде.

*Абжыһол — мәсекәй; ипкенмәй — эшкинмәй; ҡыраяҡ — туң (ҡара) ер; һелтә — йоҡа ҡар; ҡыңғыл — ябыҡ мал; ҡыуал — ҡәбән үҙәге...*

— Ана нисек бай башкорт теле! — Марс уйсанланды, Данир артабан укыны:

*Ярты метрҙай сумыра яуһа, төлкө ҡары яуған, тип һыбай шарт та шорт һунарға елдерерҙәр ине. Шунан төлкөләрен аҫып, маһайышып ҡайтып инәләр. Әхмәтулла ҡарт аткайтҡанды әбейе йәһәт кенә тунай торғайны...*

— Этнографтарға шәп материал! — тип һокланды Данир. — Бына мәкәл дә бар: «Ағас башын ел бора, әҙәм башын һүҙ бора».

Сәйгүн еңелсә генә геүләргә кереште.

— Күп инде ул, Данир, үҙеңә ҡағылышлыһын да укып ҡара әле. — Әсәһе кәрәкле бит араһына открытка ҡыҫтырған икән. Егеттең күҙҙәре теремекләнде.

*Данирың тапырығынан шыйык. Мыжы булып китмәһен. Гелән тапырығынан өҫкә ҡарай һыйпап ултыр. Эс менән бот тоташкан урын тапырык тип йөрөтөлә, имеш. «Мыжы» — бил томмау мәғәнәһендә. 26.10.86 йыл.*

Миләүшә «шул йылы...» тип ҡеүәтләгәс, Данир етдиләнде.

— Миңә ике йәш тә тулмаған сакта яҙғанһың, эйеме, әсәй?..

— Эйе, өләсәң нисек өйрәткән, шулай яҙылған. Көләмәстәре лә, такмактары ла байтак. Магнитофон була тороп, яҙҙырып ҡалмағанбыҙ вакытында. Үкенес...

— Әрәм итмәҫ инең был материалдарҙы, әсәй. Берәй журналға баҫтыр. Хәҙер боронғоно сокоу модала.

— Мода, мода! Ә һин компьютерҙа үҙең йыйып бир. — Көтмәгәндә Марс ярһый төштө. — Башкортсаны тоҙлай башлаған кеүекһең... Бүстәктәре лә күп дәфтәрҙә. Бына бер миҫал: «*Бала тапмаған бисәгә бер атыуҙа ҡуш ҡош атып төшөргән һунарсының тырнағын ҡырып эсерһәң, ауырға ҡалыр*». Шаманизм! Скифтарҙың рецебылыр әле. Йәнә аңлашылмай: һунарсынан... ҡаламы?

Ҡатыны ипле генә ҡаршы төштө һәм дәфтәрҙе битенә якынайтып сөңкөлдәне:

— Ҡасандыр бүстәк булмаған былар. «*Ғәйепленең гәйебен һөйләмә, һөйләһәң, гонаһы юйыла*». Ана ниндәй этика!

— Философия, тиң, әсәй. — Данирҙың күңеле иләҫ-миләҫ ине был мәлдә.

* * *

Бер нисә көндән Данир әсәһенең хикмәтле дәфтәре хакында Лираға ла һөйләне. Дөрөҫөрәге, тәүҙә һүҙ икенсерәк юҫыктан сыккайны.

— Беҙҙә үлем бар икән, — тине Лира ғәмле генә. — Әсәйем

шылтыратты. Рәшит тигән ағайҙы ерләгәндәр. Холостой ине, мастер ине. Кеше күп булған зыяратта. Ә-ә, Данир, һин бит уны бер күргәнһең — балыҡ биреп ебәргәйнең уның аша.

Бүтән ерҙәге ваҡ-төйәк хәлде Данир күптән хәтеренә тоҙлар ине, ә бына Бурашта булған әһәмиәтһеҙ генә ваҡиғаны ла иҫләй, имеш.

— Эйе, эйе, сиған һымаҡ ҡарасман, еңһеҙ футболка кейгән...

— Һеҙҙе тукмарғараҡ йөрөгән бит улар Иҙел буйында.

— Ауыр тупрағы еңел булһын... «Мәйет йыуғанда беҙҙәне йылға ағышына төбө менән ҡаршы ҡуйып һыу алыу фарыз...»

— Нимәләр быгырҙайһың ул?

Данир үҙҙәрендә өләсәһе ауыҙынан яҙылған хикмәтле дәфтәр һаҡланыуын мауыҡтырғыс һөйләнеме — ҡомарткының йөкмәткеһе Лира күңелендә лә ҡыҙыҡһыныу уятты.

— Компьютерҙа баҫһағыҙ, миңә лә берәй экземпляр бирерһең, Данир, йәме.

Данир тәкдимгә һөйөндө генә:

— Әлбиттә, үҙемә баҫырға ҡушты атай. «Башҡорттоң аҡыл дәфтәре» тип исемләп ебәрә хатта.

Был юлы йәштәрҙең әңгәмәһе оҙаҡҡа һуҙылманы. Өшәнеслә ямғыр еле иҫә.

— Оҙаҡламай яуынға китә, ти, прогноз. Тәслимә өләсәйҙе күмгәндә йылы ине, ямғыр саҡ-саҡ ҡына быҫҡаҡлап торғайны.

— Күмгәндә, тимә, ерләгәндә, тиң.— Быныһы Лираның иҫкәрмәһе булды.

## 2

Зыяратка барып, ундағы кескәй генә таҡта келәттән мәйет йыуа торған ялғашты бер үҙе — күрегеҙ, мин бәлйерәгән абышка түгел әле — арҡаһына йөкмәп килтергән Надир ҡапҡа аша үткән «ментура» вәкилдәренә аҫтан ғына ҡырын ҡарап ҡуйҙымы, һәр хәлдә, тартынған кешеләй, участковый үҙе лә аҫҡа ҡараны. Быны хатта следователь дә һиҙенде, сөнки капитан-лейтенант ҡына сағында һыйыр «дело»һы буйынса тикшереүҙә ҡатнашыуын тәүге перекурҙа уҡ, йәғни, «эсерәләр ҙә...» тип ҡаҙаранып маташыуынан һуң Надирҙың кем икәнлеген өс-дүрт һүҙ менән, дөрөҫөрәге, статьяһы менән генә аңлатҡайны. Ултырып сыҡҡандарҙың бәғзеләре яр һалмай ғына донъя болғатырға яратыусан. Һаҡланғанды һаҡлармын, тигән... Следователь мунса менән бәҙрәф араһына — аулаҡҡа барышлай телефонын бер уңаҡай, бер һулаҡай ҡолағына терәп, кем менәндер кәңәшләште. Һүҙ араһында «есть», «так точно»ны ҡыҫтырыуҙарын ишәйтһәң, теге оста көс структураһындағы юғарыраҡ чин

икәнде генә төҫмөрләргә мөмкин ине. Киҫкен ишараһы буйынса участковый менән медик та быныҡ эргәһенә яҡынлашты. Инде өсәү-ара «оператив» гәпләштеләр. Эксперт ниҙәлер ҡулы менән типһәндәге ташландыҡ өйгә яҡыныраҡ ултырған «Беларусь» яғына ымланы.

Тиҙҙән барыһы ла аңлашылды. Участковый лапаҫ тирәһенән үҙе ҡаҡҡан ярым табутты алһыу сатин менән тышлап тороусы Солтандан һәм әле генә зыяраттан күтәренеп килгәндән һуң талсыҡҡан ҡул суктарын маймыл ише болғаштырып тын алған Надирҙан башҡаларға ситкәрәк китеп торорға ҡушты ла, оло ҡапҡаны шар астырып, баяғы «Беларусь» йәнәшенә «Ашығыс ярҙам»ды ултырттырҙы. Быны күреп, Фәнидә менән арлы-бирле әңгәмә башлаған шәфкәт туташы Зилә Тимерханова ла юлдаштары эргәһенә туйтанланы. Тиҙҙән һәлмәк кенә дүрткел ҡумта тотҡан эксперт мунсанан ҡыҙғылт, ә Зилә машинанан йәшкелт халат һәм ҡалпаҡ кейеп сыҡты. Шофер носилканы алып биргәйне, Солтан менән Надир, насармы-яҡшымы, кисә генә көпә-көндөҙ үҙ аяғы менән Фасил эргәһендә уранғыланыуын икеһенең дә ҡырҙан ғына күреүҙәрен бер-береһенә раҫлап, «шулай инде, йә, бөгөн – барһың, иртәгә – юҡһың» ҡиәфәтендә яманһыулап, артыҡ тос тартмаған мәйетте башы-аяғынан, участковый ас биленән маҡып, тәүҙә шунда күсерҙеләр, аҙаҡ носилканы «Ашығыс ярҙам»ға урынлаштырҙылар.

Эскә эҫе һыу бирҙеләр. Махсус ҡулайламаға йәһәт кенә берҡеткәс, медиктар ярайһы яҡты ут ҡабыҙып, эстән бикләнеп, операцияға кереште. Участковый оло өйгә инде, Солтан баяғы табутты тышлау эшенә тотондо. Надир, уның эргәһендә торғоһо килмәгәнлектән, Таутөмән яғынан килгән путеецты сәй эсергә алып ҡайтты. Оҙаҡ әхәзләрҙәр һымаҡ тойолдо уға мәйетте тәреле машинала.

– Әйҙә, энекәш, тамаҡ кипте, – тине ул бәләкәй өй соланына арҡа терәп тәмәке тартҡан Әбдерәхимгә. – Миндә сәй эсәйек, мужыт, әҙерәк ҡатырағын һелтәрбеҙ... Бында оҙаҡларҙар, шәт?

– Һарыҡ һуйырға ҡуштылар ҙа... Һинһеҙ булмаҫ ул, тим әле мин.

– Ә мин, ҡустым, усыңа с...м, теүәл егерме биш минутта салып, тиреһен һыҙырып, итен эләп тә ҡуям. Һарыҡтар ни зыярат аръяғында ғына ине иртәнсәк, мин атҡа барғанда. Әйткәндәй, ҡайҙа?.. Ҡайҙа әле Әбдрәшит мәрхүмдең, грубы әйткәндә, незаконный ҡайнағаһы?

– Ҡайтып киттесе...

– Эх, матти-ти... Атлы килгәнде, аһылдамға төшөрөп, йәйәү ҡайтармаҫҡа ине. Баяраҡ белһәм, атланма (эйәр) һалып бирә инем дәһә атымды. Апарып ҡына ташлар ине әле берәй малай Динескә.

– Күсеп ҡайтһам, тип уйлай башланым әле мин, Надир абзый. Пенсия килә башланы. Путеецтар иртәрәк ебәреләпенсияға... Тегендә туктауһыҙ рельстар шыҡылдай!

Бөтөнләй үк бөткән әҙәм түгел Надир, зат-ботона кәңәш бирерҙәй һимməте лә бар.

– Кәнишне. Йәшәрбеҙ әле ошонда бергә-бергә, Солтан ише разный килмешәктәргә махы бирмәй генә. Әбиүшкәгә, Камила еңгәмә, тим, хәҙер ни бәләкәй өй самай, олоһо – һеҙгә! Ә сыуаш килен ҡайтырмы һуң?

– Ҡайтыр, ҡайтмаһа, бескелдәп ҡалыр. Шаяртам... Тамара ни беҙҙеңсә лә һин дә мин һөйләшә. «Һеҙ» тиһең, өс бала ғына янда хәҙер. Ҡалғандары ҡырҙа, бер-бер артлы башлы-күҙле булып ҡына торалар.

– Оло улың военныйҙыр һаман?

– Майор. Чита һыуығында служить итә. Уның да сәвсимгә ҡайтҡыһы килә әле. Өфөгә ҡыярлай. Ну, киленкәйем хәтәр ауырый. Беҙ разъезда төпләнгәс, ике рәт кенә алҡайтҡайны малай. Жалкы, балаға ла уҙманы. Кәртинкә кеүек матур ҙа бит. Хәҙер врачтар ракты прәме яҙып бирә лә ҡуялар икән.

– Әлләсе. Барый мәрхүмдең дә ҡыҙы насар ауырый, ти.

– Теге Кәримовмы? Һыуға...

Ҡапҡанан ҡапҡаға тиклем гәпләшеп барған ирҙәр бер юлы ғына Сания әбей яғынан һарҡылған тауышҡа боролоп ҡаранылар. Надирҙың ҡыҙы менән кейәүе елле генә һарыҡты бирегә өҫтөрәйҙәр, тегеһе, сығынсы ат һымаҡ, атламаҫҡа маташа, имеш. Мәйетле йорт тирәһенә килгән-киткән кеше һирәгәйгән кеүек. Ә юҡ, йәшел венок тотҡан уҡытыусылар күренде. Тиҙ яһағандар. Солтан бисәһе Сәйҙә менән Фәнидә бер килеп, бер ҡайтты.

– Бында ғына салайыҡмы, абзый?

– Килешмәҫ, – тине ниҙер уйлап Надир. – Кәнишне, аҫҡаҡ, үткер бысаҡ – минән. Сәй генә эсәйек тә тиҙ генә ләхет һөйәүҙәрен бысайыҡ... Ҡалын таҡталары ла, «Дружба»һы ла бар Рәшиттең. Кеше тәнен телеүселәр ҡайтып киткәс, кинәнеп һарыҡҡа йәбешербеҙ.

– Гробы ла, ләхете лә, кәфене лә булыр. Мәктәптән тауар килтерҙеләр түгелме?

– Уныһын гробка ҡаҡтылар. Кәфенлегем улыма яҙған икән, тигән булды бит бая Камила апайым.

– Ба-а, иртәрәк әҙерләгән... Бисәләр затын белмәҫһең, шәт.

– Рәшитте әйтәм, нормально ғына йәшәп, нормально ғына үлмәне.

– Э-эй, аҫылынам да ҡуям, тип һөйләнә башлағайны инде.

* * *

Ҡулдарына көн бирсәткә кейгән эксперт «буханка»нан төшкәс, прокуратура вәкиле уның эргәһенә барҙы. Хәйерсегә ел ҡаршы, тигән һымаҡ, эстә лампа ла янмай икән. Тотош ғәләм алдында мәйетте тегендә-бында ташып, ҡайҙа етте шунда телгеләү, ай-һай. Өҫтәүенә, көнө лә болотло, ҡараңғы һымаҡ.

«Итәк аҫтынан алама эспирт һатып ятҡандар бар Бурашта. Мужывит, ағыулап биргәндәрҙер. Ниңә шуларҙы әҙерәк быжғыртмайһығыҙ? Кешене төрмәгә тығыу, үлгәс ергә күмеү анһат ул...» «Баҫлыҡҡа быуып һалғандарҙы, шутка что ли?» Надирҙың әллә кем булып һөйләшеүен иҫләп, советник сәғәтенә күҙ һалғас, йәнһеҙ йәндәрҙе телгеләү оҫтаһы – эксперт менән арлы-бирле гәпләшкәйне, тегеһе ярайһы еңел һөйәкле икән – шундуҡ йыуантыҡ, төпөш кәүҙәһен эйелтә-һығылта машинаға кире менде. Шәфҡәт туташы төшөп тә ыҙаламаны. Ни булды тигәндәй, эргәһенә яҡынлашҡансы, апаруҡ күпте күргән участковый ҙа, әлегә ике йыл ғына стажлы капитан-следователь менән «лейтенант»ҡа бәрәбәр дәрәжәләге юрист та шундуҡ өсәү-ара фекерҙәшкә әйләнделәр. Водитель күпте күргән моторын ҡабыҙғансы, майор ҙа кабинаға ҡунаҡланы һәм көн куртҡаһының уң иҙеүен ҡайырып, билендәге «портатив станция» тип йөрөтөлгән рацияһын түбығындағы папкаһы өҫтөнә һалды ла Сасындағы дауалау амбулаторияһына шылтыратты. Төшкә тиклем үк иҫкәртеп ҡуйылғанғамы, ундағыларҙан ыңғай яуап алынды. Борам аша машинаны бер тегеләй, бер былай сығарыу анһат та, арзан да түгел, мәгәр йәнде иң көйҙөргәне – ваҡыт сарыфланыуы.

«Һыйыр эше» менән шөғөлләнергә тура килмәһә лә – ул саҡта милицияның Иҙел буйы участкаһы асылмағайны, буласаҡ участковый ябай «гаишник» ҡына ине – майорға Надирҙың биографияһы таныш. Әлбиттә, яҙығына күрә яҙаһын алған, гражданин тәүбәгә килгән, мәртәбәләнгән, ҡабат унан боҙоҡлоҡ көтмәһәң дә ярай. Аҡҡа төшкәнсе буҡҡа төш, ти бит халыҡ, Надир ҙа хәҙер намыҫына үҙе тамыҙған, ә юҡ, услап һипкән бысраҡтан таҙарынырға, кемгәлер ожо һалырға, үҙе һөйһөнмәгәндәрҙән ҡон ҡайтарырға теләгәндәй, орҙо-бәрҙе һөйләнгеләп тә ҡуя. И, шулай ғына аҡланып-паҡланып булһа! Суд эскәмйәһе ҡаты шул. Шуны онота алмай Надир. Арлы-бирле закондар өйрәнеп сыҡты ситлектән... «Дело»ны судҡа еткермәҫ өсөн теге ваҡыт Солтандың бер генә һүҙе етә ине: «Мирауай килешәбеҙ». Ул сағында хатта ике һыйыр хаҡын уйһыҙ түләй ала ине Надир. Ә юҡ, Хажиморатович – партийный, принципиальный, йәнәһе. Һыйыр өсөн аҡсалата алды. Уны ла суд ҡарары менән

генә почта аша түләтеүен әйт әле! Шул аҡсаға Ишмай ҡарттың орғасы быҙауын, ә юҡ, башмағын етәкләп ҡайтҡан. Тоҡомо шәп, һөтө әсемәй, типме. Һаман аҫырайҙар, һарыуҙы ҡайнатып. Бына хәҙер, уҡытыусы, коммунист башы менән спирт һатҡан – Рәшит дөңкәйгән, тип ҡужғырырға зерә уңай. Әлләсе... «Баҙар заманы... Кем нәҫтәкәй һатмаҫ, нәҫтәкәй алмаҫ. Их, әгәр һаҫыҡ шешәһен тотоп, Рәшиттең өйөнә Солтан үҙе килеп, бесәнгә барайыҡ әле, ҡустым, тип һыйлап йөрөһә – вәт дә булыр ине». Аръяҡтан дружоктары килгәс, улының эҙләнеп әсе-мәсе табыуын, гармун быҫҡылдатып һыйлауын, аҙаҡ һыу буйына кәмәгә оҙата барыуын – бисәһенән, Надирҙың бисәһе Рәшиттең әсәһе Камиланан ишеткән генә хәбәр.

Әбдерәхимдең хәбәрен бер ҡолағынан үткәреп, икенсеһенән сығарып, һау тештәрен шығырлатмай ғына ҡыҫҡылап торған Надир яғына әле генә фуражкаһын бардачок өҫтөнә һалған капитан, «бына бит, һинеңсә буласаҡ, күр, энекәшеңде тиҙ генә ергә тыҡтырмайбыҙ әле» тиергә теләген һиҙгерткәндәй, ҡырын-мырын ҡарап уҙҙы шулай ҙа. Ярым асыҡ кабина тәҙрәһенән...

Халыҡ ни, һарыҡ ни – асығын бирәү ҙә аңғарманы. Хәлбүки, күптәр буйһыу, ыҫпай ғына галстуклы, яҙышҡанда күҙлек кейгеләгән сағыштырмаса йәш ирекәйгә өлкәнерәктәренең буйһоноуын шәйләне.

Ике диван, ике йомшаҡ кресло иркенләгән тарайта төшкән веранда уны-быны ҡапҡылап та өлгөрмәнеләр, әле генә таҡта ҡураға һарыҡ индереп бикләшкән ҡатын – Надирҙың йәш бала менән декрет отпускыһында ултырған ҡыҙы килеп инде.

– Әтей, һине килеп китмәҫ микән, ти, теге ...буйға оҙоно.

– Бәр-рәс, уныһы бында ҡалғанмы ни?

– Эйе, Рәшит... өйөндә яҙышып ултыра.

– Юстиция советнигы саҡырғас, бармай сараң юҡ... Ә машиналары ҡайҙа елдерҙе?

– Әйтмәнеләр. Сасынға ғыналыр.

– Барам, Эльза, ҡасмаҫ. Бына Әбдерәхим ағайың менән һыуһынды ҡандырабыҙ ҙа...

– Мин кире барам да, донъяларын йыйыштырышам.

Сирләшкәрәк бисәһен, оҙаҡ мыштырлайһың, тип битәрләгәс, ағайы, Әбдерәхимде ҡалдырып, тиҙ генә саҡырған ергә барып әйләнергә булды.

– Знамы нимәгә саҡыртҡанын... Һин туйына тор, мин килгәс, әҙ-мәҙ һелтәрбеҙ, мужыт.

– Кәстүмен тотоп бар бер ыңғай. Бәпәй йоҡлағанда таҙартҡан булдым хәлдән килгәнсә. – Ҡатыны Надирға Рәшиттең үтекләнгән кейемдәрен тотторҙо.

* * *

Рәшит иртә яҙҙан ҡара күҙгәсә йоҡлап йөрөгән кесе йорт эсе бигүк бола ла, артыҡ бысраҡ та түгел. Стенала әллә ҡасанғы фотолар эленгән. Рәшиттең атаһы бынан ун йылдар элек вафат булғайны, Әбдерәхим ике аҙнаға ялға килгәс, ялланмыш Надир, тағы ике ир көсө менән һалынып бөтмәгән йорт күсенерлек хәлгә етә яҙҙы. Сак алдағы йәйгә генә мейес сығартып, күҙ сырағы һүрәнләнә башлаған Камила күҙгә тиклем яйлап ташынып бөттө. Иҫке өйҙө келәт һымаҡ тотондолар тәүҙәрәк. Рәшит әрмегә тиклем үк гармун тартырға, тәмәке көйрәтергә, әсе-мәсе йоторға, «разведенка»лар менән сыуалырға әүәҫләнгәс, бындағы юҡ-бар ҡорамал, ул-был ҡаралты синнеккә, лапаҫ башына шылды, өй киренән аулаҡлап йоҡларлыҡ хәлгә килде. Тегегә-быға оҫта ине Рәшит, ана, ҡупшы ғына китап шкафы әтмәләп ҡуйғайны. Ике өҫтәл, береһендә – мәрхүмдең аҙ-маҙ китап-журналдары, рюмкалары, керләнгән кәрттәре, фишкалары, һыра баллондары борғостарынан йыйылған шашка таҡтаһы, иҫке кассеталар. Ашанты әҫәре юҡ, ғөмүмән, бында тамаҡ ялғамай, һыу ғына тотҡандыр. Мейес артында тун, пальтолар, һырма салбарҙар. Ҙур ғына аҡ-ҡара телевизор, өҙлөкһөҙ «Юлдаш» программаһына ғына тоташҡан ыҡсым радиомагнитофон.

Надир мәрхүмдең ағас яурынтыҡҡа бүҙәнә күкәйе һымаҡ төрткөлө пинжәген, ваҡ тишекле булғанғамы тиҙ үк кипкән тоноҡ ҡыҙыл ҡулдәген үҙе яҫы, үҙе бейек ялбыр башлы койка терәлгән стеналағы сөйгә элде лә буш өҫтәл артында ҡағыҙҙарын йәйеп ултырған советниктан ҡабатлап һаулыҡ һорашты. Алды сәләмен теге, мәрхүмдең пинжәген, үтекле ҡулдәген элгәнде күреп, әһем, әһем, тип хупланы, табуреткаға ымлап: «Ултырығыҙ, Надир ағай», – тине.

Бер аҙға ғына тынлыҡ урынлашты. Тәҙрәнән Солтан да күренмәй. Ныҡлап төш етте, бәлки, ҡабат килмәҫтәндер уйы таҙҙың. «Килер... Саҡырырҙар...» – тип уйланы Надир, тиреһе һөйәлдән сырышҡан йыуан бармаҡтарын ыуғылап.

– Ағай, спирт һаталармы ни ауылда? – Советниктың сығышы Фәнидә тыуған Аҡшиҙе буйынан, буғай, улар ғына «ағай» тип матурлап өндәшә.

– Кәнишне. Солтан да булаша, тиҙәр.

– Ә ниңә ауыл хакимиәте, милиция белмәй был хаҡта?

– Бәрәс, белмәҫкә лә мөмкин. Бер ай элекме Динес яғынан Рәшиттең служагы килеп төштө, «Нива» менән. Шул һатҡайны. (Әһә, Денисовка бураштар өсөн Динес икән.) Мин дә алдым. Осһоҙ, берәй кәрәге тейер әле, тинем. Ләкин мин, инәлеп һораһа ла, бывший «зэк» башым менән... үтескә лә бирмәнем, һатманым да Рәшиткә. Әрләнем иштеү. Күҙең бетләгән, малай,

тукта, ял бир ғорлаңа, тинем. – Бер аҙ өндәшмәгәс, Надир белеште:

– Ә-ә... Бында йыйыштырырға яраймы?

– Йыуырға, йыназа укырға, иртәгә тиклем күтәргә мөмкин, – ерләү йолаларын белә икән советник. – Ләкин рөхсәт иртәгә генә бирелер, моғайын. Ерләргә, тимәксемен.

Юстиция хеҙмәткәре, папкаһын сыртлата япкас, урынынан калкты, рамланған эре фотоларға бакты.

– Әрәм булған, застуйын егет... Үлгәнгә рәхәт ул – киттебарҙы, калғандарға кыйын, тигәйне олатайым ағайымды ерләгәндә.

– Бик тушныһын әйткән. – Протокол-маҙар тултырамы был-юкмы тип, Надир өҫтәл яғына карап алды.

– Ниңә әрәм булды икән егет?

– Асығын белмәйем, урманда эшләйем дәһә.

– Дөрөҫ, служагы килгән Рәшиткә, биҙәнеү әйберҙәре, суррогат елгәреп йөрөгән. Алғандар ауылдаштарың, шул иҫәптән Солтан ағай ҙа. Ай самаһы вакыт уҙған быға. Биш көн элек унан Рәшит, бесәнеңде сабышам тип, бер баллон алған. Уны дүртәү эскәндәр – өс другы сыккан аръяктан. Һыу кушһаң, дүрт моронға дүрт ярты – шытмаҫка ла мөмкин. Һәм берәү ҙә үлмәгән. Ә бына бөгәсә... энегеҙ аяк һуҙған. Ниңә? Сөнки кистән ул спиртты... кыҙығыҙҙан – Эльза Надировна кулынан алған. Нык шыйыкламай, йөҙ илле грамдайын һелтәгән.

– Һы-ы... Ләкин ауыҙына этем дә коймаған. – Надирҙың сырайы караңғыланды, күмһеү ирендәре дерелдәне. – Ызначит, кыҙымды наказать итергә не имеете права! Сабыйы бар! Нахаккка ултырып өйрәнгән беҙҙекеләр. Очень прошу, минең һымак ыҙалатып, эргәлә төрмәләр була тороп, Мордовияға ебәрмәгеҙ кыҙымды. Кәнишне, нык эшләнем мин унда. Ағас кәсебенә нисауа мин, шуға алдан сыктым. – Надир әллә закондарҙы белмәмешкә һалышып, әллә яҙмышының кара биттәренә үкенгәндәй әйтте. – Әшәкене лә күрелде...

– Оло кешегә куп һөйләү батмай. – Советник ручка төбө менән өҫтәл шыкылдатты. – Бөтәһен дә экспертиза күрһәтер. Ағыулы булғанғамы, юкмы, йөрәге туктағанмы, бөйөрө отказ биргәнме, быуылып ятканмы – барыһы ла асыкланыр. Пажалыста, авторитетный гражданин, мәрхүмгә нәҫелдәш буларак, дилбегәне кулығыҙға сырмағыҙ әле, ағай.

Надирға, гүйә, дарман өҫтәлде.

Ирҙәр ике өйгә уртак ихатаға сыкты. Надир өймәкләшкән катындарға бойорок бирергә кереште. Кыҙынан башланы.

– Һин, Эльза, берәйһе менән бәләкәй өйҙө арлы-бирле йыйыштыр. Ә һин, Әбдерәхим, ут як мейесенә, емшеһен – иҫке өйҙә көтәрбеҙ. Зәриә кайҙа әле?

– Эстә, инәйҙәргә сәй эсерә.

– Тә-әк, ауырыһа ла, Депутат кәрәгә, ясин уҡырға.

– Ауырыһам да барам, тигән. Зәриә үҙе ҡайтып әйләнде яңыраҡ, – тип яуапланы бер ҡатын.

– Килер, һин биргадир саҡта Камила еңгәсәйең менән ферма юлын әҙ тапаманылар, – тине икенсеһе.

– Һыуҙы күберәк йылытығыҙ. Мужывит врачтарҙың ҡулдарын сайырға кәрәгер. – Соланда Зәриәне күргәс, Надир оторо өтөкләнде. – Давай, давай, ҡайтҡанығыҙ ҡайтһын, ҡайтмағанығыҙ аяғөҫтө йоҡламағыҙ. За работу!

«Срогыңды тултырып ҡайтһаң, урыҫсаны сәпсим өйрәнер инең!» – тип кәзекләгеһе килһә лә, Зәриә телен тешләне: урыны бөгөн түгел. Яйы сығыр әле берәй. Етмәһә, Надирҙа ла тел тигәнең – беләк буйы. «Зорька – симпатичная телка», – тип әсе генә ҡаптырғанын онотмай ҙаһа Зәриә.

Биргадир саҡтарында Надир «давай-давай» тип хәтәр йөрөгән, тыңлашмаған егет-еләнде йыға һуҡҡылап та ебәргән, тиҙәр – ысындыр. Колхоздың бүтән түрәләренән ҡурҡмағанды, унан хатта ҡорҙаштары ла шөрләңкерәгән, имеш. Үҙе лә ялҡау түгел шул. Әле лә тик тормай.

3

Ауылда мулла юҡта муллалыҡ вазифаларын башҡарған Дилбәрҙе, оҙон көн йүгерекләп ярҙамлашҡан Зәриәне, ҡыҙы Зөлфиәне мәрхүм Рәшиттең әсәһе Камила оло өйҙә барынса яйлап ҡына һыйланы. Әлбиттә, Зәриә ҡулы менән. Үлгән артынан үлеп булмай, ашарға кәрәк, йәшәргә кәрәк. Ә бәләкәй өйҙә ират мәйет көтә.

Ҡараңғы төшкән, былай ҙа тыныс ауыл урамдары күптән һил.

– Ҡайтмағыҙ, бөтәгеҙгә лә түшәк етә.

Әхирәтенең инәлесенә тәүҙә Дилбәр икеләнде:

– Ҡалайыҡмы әллә?

– Әлләсе, – тине Зәриә ғәмһеҙ генә. Йонсоғайны, шикелле.

– Ҡайтайыҡ, – Зөлфиә генә, иҫнәй-иҫнәй, ҡарышмаҡсы. – Бында үлгән абый бар...

Зәриә ҡыҙы менән апаһы өйөнә барып йоҡларға булды. Быларҙы йыуатырҙан Дилбәр: «Килеште, шикелле, көндөҙгө укол...», – тип һөйләнеп Камила ҡарсыҡта ҡалды.

...Ауылда элек Өфө – Ҡариҙел һауа рейсында осҡан «кукурузник» тәҙрәһенән төҫмөрләгәндәрҙән «Бураш торна суҡышына оҡшаш» тигән хәбәр ҡалған. Йәнәһе, бөгөллө аҫҡы урам – торнаның муйыны, Фәнидәләр төйәкләгән ҡалҡыулыҡ – өҫкө суҡы-

шы, әленге Камила, Сания әбейҙәр йәшәгән, өйҙәре тарау урынлашкан оҙон ғына кырын урам – аҫкы сукышы. Мәктәп, нигеҙе һерәндәгән тимерлек тирәһе – эйәк менән муйын араһында бүлтәйгән ғорла була, йәнәһе. Әле, айҙы болот каплаған сакта, «торна сукышы»н өс ерҙә өс кенә лампа шәфәк яктыһындай бөләңгерт яктырта. Нисек яктыртһа ла, аяк аҫты күренә ләһә, тип аяғөҫтө йокомһорап атлаған Зөлфиәне эсенән яурынына көлтә һалғандай күтәреп алған Зәриә... күпергә етәрәк, шомланып куйҙы. Куркак түгел дә... Ә-ә, Олотүҙдең ярым иҫерек егеттәре – Рәшиттең шешәләштәре лабыр-лобор бирегә килә ята лаһа. Икәүме? Өсәү, буғай, өсәү. Фазылдарҙың верандаһында ғына ут бар һымак.

*Зәриә еңгәм һыуға бара,*
*Көйәнтәһен һалып иңенә...*

Көйләгән була әле кәйнеш йораты, Зәбирҙең ике туған энеһе.

– Бәрәмәс! Кайҙа барыш төнгә карай? – Зәриәнең кәрәк-кәрәкмәгән һорауына башкаларҙан айығырак кәйнеше яуапланы:

– Рәшит капут, тип ишеттек тә...

– Эскәндәр сукынғансы! «Капут»ка кайғырышып йөрөүме?

– Юк, калымда булдык тәүҙә.

– Бөгөн ерләнек тә Рәшитте, – Зәриә һемәйтергә маташты быларҙы. – Апаздали вит...

Бер-бер артлы дыңғырлап күпергә баҫкан егеттәр юлдарын дауам итте.

– Не может быть этого!

– Сирауна пайдем, паминкаға зайдем...

Зөлфиә уянып ергә баҫкас, Зәриәләр урамға инде. Ғәжәп, Фасил күренмәнесе. Кәмәһенән бушай алмағандыр. Төнөн мәйет көтөүгә Фазылы ла, Фасилы ла киләсәк, тигәйне бая Надир. Абышкаһы Зәбир, кырға сығып киткәне бирле, һирәк кайта, кайтһа ла һөйөндөрөп, аксаға йәлсетеп китмәй. Йә, апрелдән алып нисек кайтмаҫка мөмкин! Эйәләшкәндер, шәт, берәй йылы куйынға. Апрелдә үк, караштырып, файҙаланып тор, тип кәмәһен әле осраған кустыһына башкөллө биреп китеүендә лә ниндәйҙер ғиллә бар һымак... Вакытлыса ла, бөтөнләйгә лә, тимәгән. Былағайырак энеһе – кәләше касып кайткан күҙле бүкән файҙалана хәҙер һирәкләп, ләкин кәмәне караштырмай – һыу йыйыла шикелле төбөнә. Шуны күргәне бирле Зәриә, үҙенә кәмә кәрәк сакта, аталы-уллы Лосмандарға һалыша ла куя. Зәбире кырҙа ла атаманланып кыланһа, берәй хәлгә төкәлеп куймағайы. Көслөнән көслөрәктәр табыла торған. Бураш һымак

шып-шым ғына түгелдер әле йөрөгән ерҙәре... Һаман ҡайтмаһа, ниҙер ҡылырға кәрәк. Хакимиәт башлығына барыуҙан файҙа юк — Айгөл дә туғаны Зәбирҙең. Хәйер, Зәриәне яҡлашҡаныраҡ кеүек. Күҙ буяу өсөн генә булмаһа... Участковый менән кәңәшләшеү зыян итмәҫтер. Ошо арала ҡабат киләм, тигән кемгәлер. Килер, килһен... Электр сымын сәлдереү — Рәшит менән Фасилдың ғына кәсебе, тигәнерәк ғәйбәт таралғайны ла, буш хәбәр булып сыҡты. Һәр хәлдә, следователь икәүһенән дә һорау алып ҡаңғыртҡан, буғай. Рәшитенә — ауыр тупрағы еңел булғыр — ышаныс юғыраҡ ине, иллә Фасилмы һуң урлыҡҡа барырҙай йыбытҡы?! Нәҡ яҡшы хужа этен дә урамға сығармаҫ саҡта... Фасил менән Рәшит Сания әбейгә ҡоро-һары китермәк була. Утыны ла йыраҡая бара, ҡәһәрең, ҡараңғыға ҡалалар. Нәҡ шул томанһыу мәлдә электр сымын өҙәләр.

Күк йөҙөндә йөҙгән болоттар теткеләнеп таралғас, тулышҡан ай нурланды, бер аҙға ғына Бураштың өс дәү лампаһы хатта һүрәнкеләнә төшкәндәй тойолдо.

...Олотүз егеттәре берәйһенә инеп сыҡҡандырмы әллә уралып-суралып йөрөгәнме, Фасил уларҙан алдараҡ пәйҙә булды иҫке өйҙә. Унда Әбдерәхим менән Надир мәйет көтә ине, Фасилды күргәс, һуңғыһы бының атаһын һораштыы.

— Фазыл киләме һуң?

— Эйе, сәғәт икеләрҙә ҡайтырға ҡушты...

— Аҙаҡ үҙе килә инде. — Егеттең фекерен Надир ослап ҡуйҙы. — Әләйгәс, мин дә йоҡлаштырып алайым шуңарсы. Һин ултыр, Фасил, дуҫың эргәһендә. Әбдерәхим, ней, бисмилла уҡып, ят та ҡуй Рәшиттең түшәгенә. Арығанһың, йоҡлау зыян итмәҫ. Иртәрәк ҡуйырбыҙ, тим, Рәшитте. Пагоданың боҙолоуы бар. Тәҙрә быуағытамы шул? Чефир эсһәгеҙ, ана, плитәлә сәйнүк, эргәһендә заварка — море...

— Беләм. Ҡуйыны эсмәйем мин, йөрәк ҡаға, — тине Әбдерәхим мөштөм генә.

— Ә мин еффәрәм, елки-маталки! — Надирҙың соланда иҙән шығырлатыуы баҫылыу менән, өйҙә тынлыҡ урынлашты. Тик шүрлектәге совет заманынан бирле хеҙмәт иткән уяткыслы сәғәт кенә секундтарҙы һанап текелдәй. Уны туктаған ерәнән баяраҡ Әбдерәхим борғослап, дөрөҫләп ходка ебәргәйне. Рәшиттең йәне-рухы эргәлә генә һымаҡ, гүйә, Фасил дуҫы хаҡында уйламаҫка тырышһа ла.

Тырышыу менәнме ни! Һуңғы тапҡыр уны яңы лавкалары — «Аҡсарлаҡ» эргәһендә күрҙе. Эңерҙә. Кеше юк ине, атаһы ла, һуңғы тәмәкеһен бысҡытып, өйрәнешенсә, төпсөгөн усына төкөрөкләп һүндереп, Рәшиткә ҡырыныраҡ ҡарап, өй яғына ҡуҙғалғайны. «Тәмәкемде юныҫҡы араһына ташлап, төҙөп кенә

бөткән өйөмдә үртәй яҙҙым. Әл дә мискә тулы ямғыр һыуы эргәлә ине. Шунан ҡалды төкөрөкләү үртешем», – тип һирәк-мирәк аңлатып ташлай сәйерһенгәндәргә үҙенең сиркандырғыс ғәҙәтен өлкән Лосман.

Һоранырға килгән, имеш, күҙҙәре майланған Рәшиттең:

– Берәй нәмәң ултырмаймы? Етмәй ҡалды, чуртым, ҡалтырата...

– Юк миндә, кәрәге лә юк. Әтейҙән һорайҙар уны.

– Уңайһыҙ, малай. Һин лутсы миңә акса биреп тор үтескә. Ике-өс көнгә... Аласағым күп кешелә, беләһең.

– Бирмәйем, Рәшит, итәк норма тулған – йөҙ процент! Таба ла алмаҫһың.

– Бир әле, зинһар, бирһәң – табам мин. Бына, služактан кәләшкә һатып алып ҡалдым. – Рәшит усындағы шырпы ҡабындай ғына бәрхәт ҡумтаһын асып, әллә аҡык, әллә аҡһыл йәшмә ҡашлы көмөш йөҙөк һондо. Хәйер, дуҫы үҙенә барғанда ай элек үк маҡтанғандай күрһәткәйне инде бүләген. – Алып тор залогка ошоно, ышанмаһаң.

– Һаман бирмәнеңме ни Маяңа?

– Үткәндә алып барырға онотоп кит тә бар матайҙа. Мая ни, эсһәң, ҡабат килеп йөрөмә, тип ҡайтарҙы, малай. Өсөнсө көнмө әле?.. Так что, свидетель булырға ашыкма.

– Шуға һаман эсәһеңме?

– Эй ҙә... Запуй инде, запуй, һинең ишеләргә аңлауы ауыр. Мә, ал да һорағанды бир. Зинһар... Ал, тим, бүләк итерһең. Кемгәме? Беләм мин, һиҙәм мин, ыпыкк булып ҡыланһаң да. Әйтмәйем генә...

– Ахмак!

*Һин бит миңә үҙең, һөйәм, тинең...*

Фасилдың киҙеләнеү-киреләнеү холкон якшы белгән Рәшит ахмылдап, үҙҙәренең ҡырын урамына боролмайса, аҫка ҡайырылды: ҡәрҙәшенә, Надирҙың ҡыҙы Эльзаға, ингеләй торған ғәҙәте бар. Фасил тынысланып ҡалғайны. Һуңғы күрешеүҙәре булған икән. Бына хәҙер...

Йыр рәтен белгән Фасил да, бер аҙ моңһоуланып, эстән генә һыҙҙы.

*Һин бит миңә үҙең, һөйәм, тинең,*
*Ҡыш көнөндә бешкән сейәм, тинең...*

Их, әйтһә! Әйтһәме Лира берәй йылы һүҙ – йөҙөп кенә сығыр егет Иҙелде.

* * *

Ҡайҙа икән теге бәрхәт ҡумтасыҡ? Ҡайҙандыр сығарып күрһәткәс, кире тығып ҡуйғайны түгелме теге юлы Рәшит? Фасил шыпа-шым тороп, тәүҙә ҡыҫынҡы тойолған еңел курткаһын сисеп, яурынына һалды һәм ҡымшанмай ғына, бары башын еңелсә борғолап, ашыҡмай ғына өйҙәге барса ваҡ-төйәкте күҙенән үткәрҙе. Юҡ тек юҡ. Әһә, моғайын, тәҙрә башындалыр. Әле тәҙрә эргәһендә өҫтәл... ярым табут аҫтында, шуға иҫенә төшмәй ыҙалатҡандыр теге ҡумта. Йә Рәшит-үлек, йә үлектәй йоҡоға талған Әбдерәхим уянып ҡуймаһын тигәндәй, Фасил табуретканы шылт та иттермәйсә ситкәрәк шылдырҙы ла, тән яҙылдырған кешеләй ҡыланып, сигеүле ҡорған ҡаплаған тәҙрә яғының өҫкө өлөшөнә баҡты. Яҡтауҙан өҫкө тәҙрә тупһаһы төпкә шылған да, киртләс хасил булған... Эйе, һиҙемләүе аҡланды: төтөнгә һарғайған ҡорған осон аҙ ғына ҡайырыу менән, йофар һымаҡ ҡара йәшкелт ҡумтасыҡҡа тейҙе бармағы.

Ниндәйҙер ҡәнәғәтлек кисереп, кире урынына ултырҙы Фасил. Яманмы-яҡшымы, Маяға тәғәйен бүләк... Динескә юл һирәк төшкәнгәме, Маяны ҡырҙан ғына, бер тапҡыр ғына күрҙе. Ашхана эшләмәгән саҡ ине, ауыл өсөн таҡта ярыу цехына барышлай, атаһы, бер өй ихатаһында ең һыҙғанып ҡаҙҙарына ем һипкән ҡатынҡайға ымламай ғына, былай тине:

– Уң яғыңа ҡара әле. Бураш килене түгелме?

Бер ҡарауҙан кем хаҡында һүҙ барғанын, кемгә иғтибар иткәнен төшөнгәйне Фасил. Әйтерең бармы, килмәгән ере юҡ!

Әҙәмгә һанамай маташҡан инеме Рәшит Маяны бер килке? Үлгәнде яманлап иҫләргә ярамай ҙа... Бесән бөтөүгәрәк, мотоциклда елдергәйне Динескә кискә ҡарай. «Алып сыҡтым кәләште матайға менгәштереп үҙебеҙҙең аулаҡ яҡҡа. Зыңҡыттым ғына сирәмдә... Айлы төн... Саҡ менән Сук ҡысҡыра. Ярамай, ауырға ҡалам, тиһә лә. Ҡалһаң ни, алам бит үҙеңде көҙгә, тинем дә кире апарып ҡуйҙым».

Их, Саҡ менән Суктың бәғер өҙөрҙәй ауаздар сығарып һағышланыуын кем белмәҫ! Әле тышта иләмһеҙ итеп эт лауылдағандай. Теге «танкистар» килә ята микән? Төн бүреләре! Келә һалғанда? Килешмәҫ, тәҙрәне ярыуҙары ла ихтимал. Үҙе лә һиҙмәҫтән, Фасил аҡ кәфен өҫтөндә баҙрап ятҡан сәскәләрҙе бер тирәгәрәк өйөштөрҙө.

Әҙәп белгән әҙәмдәрҙәй, ипле генә сәләмләнеләр тәүҙәрәк. Береһе һыу, икенсеһе ҡаты сәй һемереп алғайны, баҙарға әйләнде одеколон, дымһыу еҫ аңҡыған лапаҡ өй ишараты, хатта Әбдерәхим, ыңрашып, икенсе ҡабырғаһына әйләнеп ятты.

* * *

– Лосман, ҡой берәй нәрҫәңде, жмутланма.

Фасил баш сайҡаны, сикәһенә ҡан бәргәнен тойҙо.

– Беҙ ҙә күтөшөргә килдек. Күткән саҡта мәрхүмдең яҡшы яҡтарын иҫләп ултырыу фарыз, тиҙәр.

– Шәп ине беҙҙең Танкист. Ә мин – Терминатор, матайҙа ҡыҙыу елдерәм. Лосман, ә Бароңды таныйһыңмы?

«Эйе, эйе» тигәндәй эйәк ҡаҡты Фасил. Тегеләр ҡайҡайышып һикегә ултырыштылар ҙа кемуҙарҙан ләпелдәргә керештеләр.

– Эх-ма, Рәшит, һинән дә йомарт кеше ҡабат тыумаҫтыр донъяға, – тип ярайһы ысын хәсрәтләнде Барон – Зәриәгә ҡәйнеш тейеш төпөш буйҙаҡ. – Яңыраҡ ҡына һыйлап ҡайтарҙы, эспирт...

– Ана шул спирт башына еткән дә инде. – Теңкәһенә тейгәстәрме, Әбдерәхим ҡалҡыныбыраҡ ятты. Тәмәке ҡабыҙырға теләгән өсөнсө сандыр егеткә замечание яһаны. – Тартма бында, энекәш, сығып тарт.

– Ярай, абзый, ярай, һин теге... Таутөмәндәге абзыймы әле? Мыйығың оҡшаған...

– Нәк үҙе.

– Биреп тор, абзый, взаймы палтинник.

– Әҙ алғайным, юлға ғына. Оят була ла, апайҙан һорарға...

– Вәт, вәт, һорап тор ҙа беҙгә хәйер өләш. Унарлыҡтан. Әйҙә, тартайыҡ тәүҙә күстәнәсеңде.

Тегеләр сыҡҡас, етек сәсле Барон көтөлмәгән мәшәкәт тапты.

– Бәр-рәс, Танкистың аяғын кирегә ҡаратып һалғандарсы! Әйҙә әле, Терминатор, әйләндереп, правильны йәтешләйек. – Фасил тыйып та, ҡаршылашып та өлгөрмәне, тәпәшерәк оҙонса өҫтәлдәге табут, саҡ-саҡ аумай, йөҙ һикһән градуска тыз-быз өйөрөлөп тә ятып, ҡабат ҡуҙғалмаҫ булды.

Мәрхүмгә ни барыбер...

Тәмәкеселәр инеп, тотҡаһыҙ бокалдарҙан сәй һөпөрләткән арала, Әбдерәхим Барондан армия тормошонан энеһенә ҡағылмыш ғәләмәт тарих ишетте. Фасил иһә был хаҡта белә ине.

– Отдельный танковый батальонда служить иттек беҙ. Һыуыҡ, ел. Чита яғында. Арлы-бирле генә учение һымаҡ бер нәмә булды, шунда Әлфәриттең битенә взрывпакеттың ҡалдығы сәсрәй. Эт бит инде солдат – «дед»тарҙан кемдер люктан бәргән, шәт.

– Әлфәрит тигәнең... анау торғашмы? Ялтыр-йолтор нәмәләр һатҡан була, араһында эспирт, пиво елгәрә, шулмы? Үҙе эсмәй, хитрый нәҫтәкәй.

– Шу-ул... Ай элекме, ошонда ултырҙык та йырлашып. Короче, ученьелә апарук көйә бите торгаштың. Ебәрҙеләр быны госпиталгә. Иртәгәһенә стройға теҙелдек. Комбат әйтә, иптәшегеҙҙең бәләкәй иленә, ғәзиз туғандары, һөйгән ҡыҙы эргәһенә бапаҡ булып ҡайтыуын теләмәйһегеҙ, молодцы, ти, тик быныңөсөн... ус ояһындай тере тире – лоскут кәрәк, тимәһенме. Кәнишне, тиреһен биргән боец та госпиталгә ебәреләсәк. Кем ҡаза күргән механик-водителгә ярҙам итергә теләй – три шага вперед, марш! Ҡарайым, берәү ҙә сыкмай. Баҡһаң, Әлфәритебеҙҙе служактар өнәп бөтмәй, имеш.

– Торгаш ҡайҙа ла торгаштыр, – быны Терминатор әйтте. – Һаран, Рәшиткә анау йөҙөгөн дә һатып биргәс...

– Бог с ним, ул да бушка алмайҙыр. Әйҙә, абый... – Тағы Әбдерәхимде тәмәке тартырға ҡыҫтаны яшык егеткәй, тик Әбдерәхим, тыңлап бөтәйек, тип кире һукты.

– Бер заман штаб начальнигы ҡыскырып ебәрҙе: «Ребята из Башкирии – три шага вперед, марш!» Шык-шык шеренга алдына сығып баҫтык беҙҙең призывтан унлаған старик, биш-алты салага. Оҙаттылар госпиталгә, унда тикшерҙеләр, бер Рәшиттең тиреһе яраны Әлфәриткә.

– Ҡан группаһы буйынсалыр... – тип һүҙ ҡыҫтырҙы Әбдерәхим.

– Барҙым ике көндән эргәләренә, юк-бар күстәнәс тотоп. Әлфәрит ята битен бәйләп, Рәшитем ята ботон киреп. Бот төбөнәнерәк һум ит тиреһен тунағандар бының. Тамаҡ туйып ҡалды, тип ҡайтты әллә ике, әллә өс аҙнанан. Вәт нисек була команда «Кто из Башкирии?» – Барон хәтирәһен осланы тигәндә, Терминатор телгә килде.

– Торгаш, ней, тағы киләм, тип ҡайтҡайны, һаман килмәй ҙәһә.

– Килмәһен дә, йөрөмәһен дә, килһә, бәргесләп ҡайтарығыҙ, – Әбдерәхимдең үсәүле ҡоткоһон кемдер:

– Акса бирһәң, бәргесләрбеҙ, – тип йөпләне. – Хыт Брынцаловты, хыт Абрамовичты. Ҡаҡшата әтеү аҡһөйәктәр ҡаҡһөйәктәрҙе.

Әбдерәхим шундук һүҙен кире алды:

– Ҡуй, улай заказной була. Хоҙай үҙе белер әле. Ҡайтышығыҙ, егеттәр.

– Юк, абзый, иртәгә поминкала гүләйт будем.

Үҙ-ара геүләшкән ир-ат көтмәгәндә пәйҙә булған Дилбәрҙең өндәшеүенә әҙерәк турайышып, шымтайып ҡалды. Ҡушамтһыҙ яшык егет хырлай башлаған, имеш.

– Ҡалай күмәкһегеҙ... Әллә ят әҙәмдәр инде?

– Беҙ әле, Дилбәр түтәй, мәрхүмдең друггары.

– Ыстағафирулла! Кем борҙо э-Рәшитте? Ҡәһәр һукмағырҙар, һыпыртығыҙ бынан. Эскәндәр ишшеү.

– Айыктык дауна, – тигән булды Терминатор, – Ҡайтайык, егеттәр, родной Олотүзгә. Ҡыуа бит әбей батша...

– Батшаны күрерһегеҙ әле! Дәвлинйемде күтәрһәгеҙ, иртәгә үк участкауайға яҙыу биреп, ун биш суткаға ебәртмәһәмме. Дуйығыҙ тиҙерәк.

– Ҡуйсәле, Дипутат ҡоҙағый, боҙоклашмайык бүстәүкәлгә. – Быны төпөш егет әйтте.

– Боҙоклокка тәһәрәт кәрәкмәй – һеҙ боҙоклашаһығыҙ. Нука, ипле генә итеп грубты кире бороғоҙ әле. Йә, йыуып, ясин укып, сөңкәһен ҡиблаға ҡаратып ҡына һалғайнык.

Фасил менән Әбдерәхим табутка йәбеште, олотүздәр, берберeһен өҫтөрәп, соланға шылышты.

– Камилаға былай ҙа ҡыйын, ә елғыуарҙар издеваться итә. Бар әле, Фасил, саҡыр хәзәйкәне.

– Лосман, саҡырма. – Асык ишектән Терминаторҙың тауышы һаркылды. – Әнкәйе Рәшитте тәҙрә шаҡып ҡына дәшер ине ашына. Кермәй ине бында.

– Тәмәке еҫенә ҡоҫһонмо, бында инеп. – Әбдерәхим баҫалҡы һөйләнде.

– Дуйығыҙ, тәмәкеләрен, махоркаһын алып китегеҙ. Боронғо китап «тәмәкесенең мәйетен... танау ярпыларын телеп йыуырға» ҡушкан. Тәһәрәт яңыртып, ҡабат ясин сығам инде. Ясин сүрәһе – иман шартылыр.

Фасил апарук айыҡкан егеттәрҙе урамғаса оҙата сыкты. Тегеләр инәлеп тә, ҡуркытып та тигәндәй, Фасилдың хәйергә инселәгән илле һумлығын шатлана-шатлана алды: «Первашка етә был палтинник! Ҡайтайык ай яктыһында...» Олотүздәрҙән ҡотолоуына эстән генә һөйөнгән егет иҫкәртеп ҡалды: «Ипләп кенә ишегеҙ тишек кәмәгеҙҙе, тәүҙә түңкәреп һыуын түгегеҙ, йәме?» Үткәндәге ише «три танкиста, три веселых друга...» тип оломай ғына, берсә эйәртенешеп, берсә ҡултыҡлашып, өс шәүлә томанһыу ҡараңғылыкка йырбанданы.

## 4

Фасил кире ингәс, тәҙрә шаҡып, Камила апайы Әбдерәхимде түйындырып сығарҙы, аҙаҡ, оло кешеләрҙең һүҙен йыҡмайым тип, Лосман егет тә бер аҙ көйшәнеп сыкты.

Кәңәшләшкән кеүек, тиҙҙән бер мәлдәрәк Надир менән Фазыл өй тултырып килеп инделәр. Тиҙҙән яурынына шәл һалған, ҡултығына доға күсеректәре ҡыҫтырған Дилбәр пәйҙә булды. Ваҡайланманы, Олотүз йән көйөктәрен телгә лә алманы.

– Ултырышығыҙ йәтешләп. Ана, ололар түбәтәй кейеп килгән, малатсы, ә һеҙ, Фасил менән Әбдерәхим, баштарығыҙҙы ҡулъяулык менән ҡаплағыҙ, исмаһам. – Әйткәндәре үтәлгәс,

әбекәй, ҡағыҙҙарын ҡараштырып-һыйпаштырып, вәғәзгә күсте. – Мәрхүмдән әхирәттә һорау алыуҙы еңеләйт, Раббым. Сүрәне тыңлап ултырыу ҙа сауаплы, тип тәғлимләй ислам. Ҡырҡына тиклем көн һайын уҡырмын, Аллаһы бойорһа.

Бисмиллаһир-рахмәнир-рәхим. Йасин. Үәл-Ҡөрьәнил-Хәкими. Иннәкә ләминәл-мүрсәлинә. Ғәлә сиратим-мустәким ин. Тәңзиләл-ғазизир-рахими...*

Ясин бөтөүгә... береһендә лә хәйерлек һум-тин булмауы асыҡланды. Дилбәр быға артыҡ әһәмиәт бирҙертмәне, мәгәр Әбдерәхимдең вәғәҙәһенә ҡолаҡ һалды.

– «Ҡырҡ көн уҡыйым» тигәнең өсөн дә, әлегеһе өсөн дә минән – ике йөҙ һум, түтәй. Ҡырҡына килгәндә бәхилләрмен.

– Бирһен Хоҙай, – тип битен һыпырҙы Дилбәр. – Әбдерәхимгә ике донъя рәхәтен күрһәт, Раббым.

Иртәгә кемдәр ҡәбер ҡаҙасағын һанап, уларҙы – ошо өйҙә, ололарҙы оло өйҙә ашатыу фарызлығын белеп – былары Камила әхирәтенә күберәк кәрәгәлер – Дилбәр солан күтәрмәһенән төшкәнсе яҡты булһын тип, тынсыған өйгә көҙгә тартым саф һауа елгәртеп, ишекте шар асыҡ тоттолар. Торараҡ һәр нәмәне өндәшмәй-нитмәй башҡарырға ғәҙәтләнгән Фасил да ҡыбырлашты.

– Ят та йоҡла ошонда, – тине Әбдерәхим. – Минең йоҡо ҡасты покаға...

– Ярай, ҡайтып ял ит, Фасил, иртәгә һин ҡәбер ҡаҙыу буйынса командир, – тип ҡалды атаһы улы артынса. Ә бит Фасилдың малай саҡтағыса ололар хәбәрен тыңлағыһы килгән дә кеүек ине. Ҡоро килгән йәйҙәрен бураштар звеноларға берләшеп, алыҫыраҡ сабынлыҡта ҡуна ятып колхозға бесән әҙерләй торғайнылар. Усаҡ яна елпелдәп, ир-ат гәп һата. Нимә генә тылҡымайҙар! Ул балыҡ, ул һунар, ул әллә кемдәрҙең әллә ниҙәр ҡылғаны – бер нәмә ҡалмай әңгәмәләрендә.

Ысынлап та, өс ир ашыҡмай ғына гәп һатты. Барыйҙы иҫкә алдылар. Ғәйеп инде, ғәйеп, ни хәл итәһең.

– Бахыр, малай сағында тимерлеккә инеп, урта бармағын өҙҙөргәйне... – тип башланы Фазыл.

– Эйе, Фазыл абый, өҙҙөрҙө... Үҙем күрҙем: аръяҡҡа Ишмай абзый кәмә менән сығарҙы ла, арба ектереп, һыпыртты район бальнисына, – тине Әбдерәхим. – Тәки тырнаҡ эргәһендәге быуындан ҡырҡтырып ҡайтты. Аҙаҡ һөйләне Барый үҙе беҙгә: «Укол еффәргәйнеләр, иҫ китте лә ҡуйҙы», – тип...

– Наркоздыр. – Инде Надир бирелде иҫтәлеккә:

– Һәй, братва, не так базарите. Мин һеҙҙән ҙурыраҡ инем, картуф күмешеп йөрөйөм. Бер саҡ ыбыр-сыбыр ҡысҡырыша

---

** Аллаһы исеменән һәм Уның илсеһе өйрәткәнсә...*

күзнис яғында: «Барыйҙың ҡулы ҡыҫылды! Бармағы ҡанай!» Барҙым йүгереп, ҡасты малайҙар ҡурҡыштарынан. Бәй, сынйырлы ишеген ҡайырып күзнискә инһәм – тора бәзерәйеп, бахыр, ап-аҡ булған. Дәү сар бар ине мөйөштә. Өйрөлтмәге шистернәле, ана, минең ҡойолағы һымаҡ, зерновеялканыҡы. Шуны берәүһе өйрөлтә, икенсеһе ағас ҡылысын үткерләй, йәнәһе. Бишмәтенең еңе ҡыҫыла тәүҙә Барыйҙың, керешә был аҡырырға! Аҙаҡ... лүлкәле «Урал» менән Фәниҙәне Аҡшиҙенән апкайтышҡан гадуғы кем ине әле Барыйҙың?

– Теге ней ҙәһә, Нуриман яғына күскән Хәсән... түгел, Хөснийәр, – тип дөрөҫләне Фазыл.

– Шул, шул! Сарҙы артҡа өйөрөлтәм дә ысҡындырам бармағын тип, яңылыш алға өйрөлтә. Короче, Барый иш-шо нығыраҡ аҡыра башлағас, вис тая былар. Кавалерис Хатип үтеп барған – шәп сағы, ул килеп инде күзнискә. Икәүләп ипләп кенә сығарҙыҡ та бармағын, әпкиттек өйҙәренә. Ҡаны сорлай ғына! Яҙатайым минән күрмәһендәр тип, үҙем дә шыртлайым. Түтәй итәген бөрмәһенә ҡыҫтырып, бәрәңге күмә, Ишмай абзый туғай осонда өмәлә инеме, әҙерәк под градусом, килеп етте лә был, үткер балтаһын биленән алып, давай, улым, сабып ҡына өҙәйек, әтеү зәрәженейе була, тисе. Кавалерис тыймаһа, сабыр ҙа ине. Йүде һөрткәйнеләр, тағы кәзә һымаҡ аҡыра Барый. Мин ҡайтып киттем, улар – кәмәгә... – Надир ултырған урынында билдән юғары кәүҙәһен борғослап алды.

– Әнкәйе илап ҡалған, тиме, Барыйым әрмеескә алынмаҫ микән, тип? – Әбдерәхим өҫтәне бынһын.

– Армиянан һин дә мин сержант булып ҡайтҡас, мәжлестә арҡаһынан һөйөп илағанын үҙем күрҙем, – әлеге хәтирәһе менән Фазыл уртаҡлашты. – Бер ҡара көҙ, фара яҡтыртып, ҡуян, төлкө баҫтырҙыҡ баҫыу ситләп. Төҙ сәпәй торғайны. Балыҡҡа ла дәртле булды. Фәниҙәнән яңыраҡ Лираһын һорашҡайным. Ҡабат апарҙы бит Уфаға. Һаман ныҡлы диагноз ҡуймайҙар, тиме.

– Ышан хәҙерге врачтарға... – Надир бүлә-бүлә иҫнәп алды... – Чифирлап еффәрәйекме? Әһә, сәғәт биш тә ун, хәҙер ҡысҡыра минең әтәс.

Тиҙҙән кесе өлгөһө китек тәҙрәнән кикирүкләгән тауыш салынды ҡолаҡҡа.

* * *

Көтмәгәндә шәмбе көн Клара Булатовна дауаханала оҙаҡ йылдар бергә эшләгән, йышыраҡ аралашҡан коллегаларын – ике табибәне, өс шәфҡәт туташын, бер санитарканы: «Көндөҙгө бергә... Бер сәғәткә генә, ирлеләр – ирҙәрегеҙ менән...» – тип өйө-

нә саҡырғайны, алты кешенән дүртәү – ваҡытында, ҡартласы менән ветеран табибә, йәнә Зилә бер аҙ һуңлабыраҡ килде. Юбилейы-фәлән түгел, ниңә саҡыра, тип тә аптыраманылар, сөнки бергә үҫкән ауылдашы килгәнен белгәйнеләр. Уныһының йәш сағында уҡ Кларары «үпәсләргә» маташыуын, өйләнгәс, ҡатынының имсәк бала менән юл фажиғәһендә һәләк булыуын, ҡабат өйләнмәүен, яңыраҡ яңғыҙ атаһы ла донъя ҡуйғас, ғәләмәт ҙур өйҙә япа-яңғыҙы йәшәүен, ат, һыйыр аҫырауын, артыҡ етдилеген, хатта һәүкәште үҙе һауыуын, элек экскаваторсы булған карьерҙамы, ҡайҙалыр ҡарауылда эшләүен, тағы күп кенә нәмәләрҙе һөйләнсегерәк Клара ауыҙынан йәй үк ишеткәйнеләр. Эсендәге тышында бит ханымдың. Мәгәр эҫе көндәрҙә атаҡлы санаторийға яҡын ауылына ялға ҡайтҡанында, ҡат-ҡат өс тәүлек аша төндәрен һаҡҡа баҫҡан абыштаның Клараны көпә-көндөҙ ҡунаҡҡа саҡырыуын, бер тапҡыр балыҡҡа, бер тапҡыр, үҙҙәренсә әйтмешләй, арба егеп, ағас еләге йыйырға эйәртеүен Зилә генә «вәт экзотика!» тип хуплап тыңлағайны, буғай. Йәнә ҡайтырға димләүен, әгәр ҡайтһа, санаторийҙамаҙар һөнәре буйынса эш табыласағын да белде. Хаҡлы ялға күп тә ҡалмаған уға. Теге ирекәйҙең уратмай-суратмай ғына, «загслап тороп» йәшәрбеҙ, бала-сағаңды үҙемдекеләй күрермен, «любуй яҡтан застуйын әле мин» тигәнен дә һүҙ йөрөтмәҫ Зилә менән генә уртаҡлашҡайны. «Буйға Сәмерханыңдан ҡайтыш түгел, һеҙҙең яҡта, особо Бураштa, һарылар күп, минеке хатта ҡыҙғылт һары» тиергә лә онотманы Клара коллегаһына.

Һәр хәлдә, буш ҡул менән инмәйек ҡырҙан килгән, бисмиллалап күрәһе кеше алдына, типме, Клараға әйтмәй генә аҡса йыйып, берәй бүләк алырға килешкәйнеләр. Нәҡ Зилә Бураш яғына барырға йыйынған арала. Зилә сумочкаһын аҡтара башлағас, – унда һерәндәтерлек аҡсаһы ла юҡ – кемдер, аҙаҡ бирерһең әле, бар, бар, көтәләр, машина ҡырында дарыу ҙа, укол да етерлек, тип ҡалғайны, нишләгәндәрҙер әхирәттәре. Нисәүһе килгән? Ниндәй бүләк алғандар?

– Начальство бисәһе опаздывает. Айратың килмәйҙер, әҙәмгә һанамағас...

Ҡунаҡтарынан ҡупшыраҡ кейенгән Клараны ун йылға йәшәргән тиерһең. Ишек төбөнән үк йәйелгән келәмдән атлап төпкә уҙҙы. Һукраныуы ла ҡоро һүҙ ханымдың, Зиләне яратып ҡына әйтеүе. Артабан тауышын күтәрә төштө.

– Көттөрмәһәң... шыштыратырға уңайһыҙ. Бынта беҙ ужы мәж! Ауылташым белән таныш бул. Секрет-микрет юҡ: еҙнә, тиң, бәкеме, фу-у, ҡыҙлар нәрҫә һорай әле?

– Ярты тин! Миңәргә дә бир, жизнәкәй, – тип хихылданы санитарка, Зилә бөтәһен дә – килмәһә лә, түрәгә урын түрҙәрәк – ым менән генә сәләмләне, ике кешегә тәғәйен буш урынға үтешләй. Булатовнаның ҡунағы күлдәк өҫтөнә йоҡа сви-

тер кейеп алған, ысынлап та, һарғылтырак әҙәм. Барыйҙың төҫө ниндәйерәк ине һуң әле? Ҡайҙан иҫләне? Сөнки алтын балдағын кейгәндә бая ғына шкатулкалағы фотоға күҙ һалды Зилә. Аҡһыл ҡара фотонан ни айырырһың?

– Штрафной! – тине кемдер, әммә быны Зилә ҡолағына ла элмәне.

Һый мул ғына әҙерләнгән. Әҙмәүерҙәй ир, аяғүрә баҫып, кемгә шарап, кемгә ҡатырағын ҡоя. Ҡыҙғылт йоморо йөҙлө, ҡашы-сәсе көлһыу балсыҡ төҫөндә. Аҡ яғалы ҡыҫҡа тун кейҙерһәң, хас Ҡыш бабайға әйләнер ине. Сәмерхановка етергә әле бығa! Яурыны тарырак Айраттың, нәҙегерәк. Кисә Бурашта табут ҡаҡҡан эшләпәле абзый ҙа кәүҙәгә елле. Тик уның бите аскаҡ, ҡорһағы бүлтәйгән, беләктәре оҙон. Ә был әзмәүергә йыуан муйыны ла харап килешә. Ашыҡмай ғына ашай. Сәмерханов... үҙенән дәрәжәһе кәмерәктәр араһында йыпыра ғына – хатта уңайһыҙ булып китә Зиләгә. Ашамһаҡлығына күрә, иҫереп тә бармай табындарҙа.

– Жизнәкәй ат пешергән, базардан үзе алган, – тип ләпелдәне санитарка, табаҡтағы йәшелсә ҡатыш өймәләм киҫәк-киҫәк иткә үрелеп. Хужабикә ләпелдәкте өйрәтеп алды:

– Йылҡы тиген, майы ағырак булған һайын мал да ҡарт булмай, эйе, тиң, – Клара, йөпләү һорағандай, никахһыҙ иренә баҡты.

– Ҡатынлар гелән дөрөҫөн әйтә инте, – ҡунаҡтың юк ҡына һүҙе дәррәү көлкө уятты, кешеләрҙең бер-береһенән тартыныуын кәметте. Тора-бара, ҡәҙимге туйҙағыса тостар әйтелде, электр самауыры тапшырылды. Йырлап та алдылар, магнитофон дрым-дрымына тыпырлаштылар. Ҡыҫтап маташтылар Зиләне: «Класс күрһәт!» Үҙенә йомолоп, инәлтеп ултыра биргәс, бейене «Бишбармак»ты. Ҡасандыр медучилищеның да, РДКның да хореографик ансамблендә шөғөлләнгәс ни... Клара ла тос кәүҙәһен еңел генә йөрөтөп бейеп ташланы. Ярай, уның да бәхеткә хаҡы бар. Зилә менән бер бүлексәлә эшләй генә башлағанда, Булатовна ләститкә муйындан батҡайны. Имеш, «ыздарауай нәмә» ирен гаражға бикләп, тонсоҡтороп үлтерә була...

...Йылдар үткәс, бер аулаҡта Клара иләмһеҙ ғәйбәткә асыҡлыҡ индерҙе үҙенән кесерәк, әммә серҙәш әхирәтенә:

– Дәү бысағын сарлап, һуғым һуйышырға китте морягым доротделда бергә эшләүсе бухгалтер эргәһенә. Яңғыҙ бисә, артыҡ яманаты таралмаған да кеүек ине. Имеш-мимеш ҡолаҡка салынғыланы аҙаҡ. Декретта инем ҡыҙыма. Туң ерҙе тыпылдатып барып инһәм... Лесхоз эргәһендәрәк ине доротдел элек, бухгалтерҙары шунда якын тора ине. Таптым өйөн, барып инһәм, ята мужигым тегенең түшәгендә. Артыҡ эсмәгән тә. Ҡайтып йөрөмә, тинем дә ишекте шап яптым... Ауырыма һы-

уык алдырып ҡуймайым, тип тә ашыҡтым. Теге шаҡшы әйткән була: ятып ҡына торам, тигәйне. Мин әйтәм, ятҡас ней, үҙеңә булһын...

Ҡайттым, ишекте келәләп, уклау әҙерләп, йоҡларға яттым. Туҡылдатһа, уяныр инем, на всякий случай мунсала йыуынып ин, тиергә ине план. Ә ул... туҡылдатманы. Гаражға инеп, машинаһын тоҡандырған та газына тонсоған... Әллә добровольно... Иртәнсәк ней, ҡарҙа гаражға ингән быйма эҙе беленә, сыҡҡаны – юк. Асып булмай, эстән бикләнгән. Телефон юк ине әле, ҡорҫағымды шәлгә урап, йүгерҙем ҡаршылағы телефонлы франтауик әбекәйгә. Ноль бер, ноль ике, ноль өскә шылтыратып бөттөм. Тәҡдире еткәс ни... Теге бисәне лә ғәйепләмәнем... Олотүзгә апарып ерләнек инте. Моторлы кәмәгә баҫып, өҫкө ауылдарға туғандарына барып әйләнгәйнек туй көнө, ҡуй инте. Үпкәләһә мәрхүм үпкәләһен, фотоһын элмәйем стенаға... Туғандары менән аралашмайым, бәрей һымаҡ күргәстәр ней. Ҡыҙым кейәү менән барғылай Олотүзгә, улым да ҡыр типмәй, отпускыға ҡайтһалар, көнөнә булһа ла барып әйләнәләр шунта...

Быға ышанмаҫҡа хаҡы юк Зиләнең. Хәйер, ни бысағыма уға таныш кешеләрҙең әллә ҡасанғы мөнәсәбәттәре?

* * *

– Перекур! – тине Зилә, ларылдаҡ кешеләй.

– Ҡайтайыҡтыр, бер сәғәткә генә тигәйнең...

– Ни шагу! Бер ҡаҙан билмән бешә ләһә! – Мул ҡуллы шул Клара аш-һыуға.

Ирҙәрҙең тартҡаны ла, тартмағаны ла тышҡа атлыҡты. Алъяпҡыстар быуып, өс-дүрт ҡатын өҫтәл яңыртҡан арала, Клара Зиләнән Бураш хәлдәрен һорашты.

– Исеме кем? Ниндәй чэпэ?

– Билдәле инде... Әле ерләйләрҙер – Әбдрәшме, Рәшитме... Әнкәйе күҙгә насар.

– Белә-әм, Сания әбейгә етмәҫ борон өйҙәре. Майҙа обходка барғайным. Соланы асыҡ ине, ҡараһам, малай, пивоның һауыттары – целый склад! Кәмә кеүек нәмәгә йыя, имеш. Ә теге, ы-ы-ы, Фәнидә Кәримова осраманымы? Нисек кенә икән Лираһы?

– Осраштыҡ. Тәүге диагнозды раҫлай алмайҙар, ти.

– Мәскәүҙәр ҡаҡырыҡтан аҙна эсендә билдәләй туберкулезды. Йыраҡ шул Мәскәү, юлы ҡиммәт.

– Клара Булатовна, ә һин... ысынлапмы? Иптәшләнеүеңде әйтәм.

– Ысынламайсы! Дүшәмбе увольнениеға ғариза бирәм. Мәкәл бар: «Уйнап ҡына барҙыниһәң, илап ҡайтырһың...» Уйын

йәшем уҙған – уйлап барам. Һөйөнөр әле главврач – ҡырын ҡарай торғайны. Ошаҡ ярата. Айратың мине эштән ҡыуырға ла ҡушҡандыр. Был өйҙә, Алла бойорһа, ҡыҙым торор, әтеү таш фатирҙа ҡыш дер-дер өшөйҙәр. Уныһын ремонтлап, квартирант индертәм. План наполеонский, тиҙәрме?..

– Бәхетле йәшәгеҙ! – Зиләнең тауышы йәлләүесерәк сыҡты. – Бахадир кеше ғәҙәттә добрый була.

– Ошомо тосың! – Клара сикәһен Зиләнекенә терәне. – Үҙекәйең бәхеттән яҙма! Ә минең абышҡаны, ғәзел кеше, тиҙәр. Ғәҙел, значит – камил кеше. Ҡалам бит әле, бер айҙан ғына килеп ала. Һөйләшербеҙ әле туйғанса. Курортҡа килдең – беҙгә килдең тигән һүҙ. Өй алдында ҡарағай үҫә, йыуанлығы өс ҡолас. Эргәлә Инйәр ағып ята, һыуы күпкә йылы. Ҡайтам, әсәйем дә ныҡ ҡартайған... Ней бынта килмәй...

Мәжлес дауам итте. «Еҙнә аҡсаһы» хаҡында һүҙ сыҡҡас, әзмәүер ике аҡ ҡына берәр тинлекте араҡыла сайҡап, ике шараплы бокалға һалды ла Зилә менән санитаркаға һондо. Санитарка инәлтмәне, ләпелдеген сығып ҡотлау әйтте лә бокалын бер тынала төп күтәрә һемерҙе һәм тинлекте тел осона яткырып ҡупайҙы. Зилә иһә икеләнде. Эсә ала, иҫермәҫ тә. Тик... сәрхуштең бите ҡыҙармай, танауы ҡыҙара, тигән һымаҡ, бәғзе шараптан сырайы ҡыҙарып ыҙалата. Ҡарағат ҡайнатмаһына ла ҡай саҡ аллергияһы ҡуҙғый. Етә ҡала Айратына, йәнә «вампирша» ҡәйенбикәһенә... Киң йылмайып, ҡылған һымаҡ ҡаштарын ырғырға әҙерләнгән һеләүһен арҡаһындай дуғаландырып, хөртәмеш кенә сәғәт таҡҡан, – вәт кемгә килешер ине Сәмерхановтың анау серле сәғәте! – тамырҙары бүртеп торған йөнтәфи беләген гелән тубыҡтарына һалған ир ихлас ҡыҫтамаһынмы! Герҙәй йоҙроғонда уймаҡтай күренгән бокалға нәфис бармаҡтары менән ынтылғанын һиҙмәй ҙә ҡалды Зилә. «Үҙең ҡара, ҡыҙыҡай, аҡ эттең бәләһе ҡара эткә япһарылмаһын, хәйер, миңә инде Сәмерханың ожо һалмаҫ» тигәндәй, Клара Булатовна ла өнһөҙ генә һынамсыл хуплағандай иткәйне, ике-өс уртланы. Ауыҙы бер сирҡаныс алғас ни, икенсе тоста тегене бөтөргәнсе һемерҙе.

## 5

Фәнидә бөгәсә һуңлабыраҡ, шыпа-шым эңерҙә һауып алды һыйырын. Һәукәше кинәндерә – тиҙ әсемәгән һөт бирә. Әлегә үҙен аҫырауы ла бигүк мәшәҡәт түгел. Эре мөгөҙлө мал элекке ише утлауға эркеү йөрөмәй хәҙер, етешәр-унар баш тупланып, иртән китәләр үрҙәге Һыуыҡйылға буйлап, кис ҡайталар. Унда үлән дә, күләгә лә етерлек. Йорт хайуандары белеп бөткән: урманға инергә ярамай; Бураш йырҙаһы батҡыл, сатырлы, ә Һыуыҡйылға үҙәге ҡырсынлы. Бураштар мал-тыуарын сиратлап

көткәндә көтә, көтмәгәндә – юк. Хәҙер айыуҙар һирәк, бүреләр әлегә алыҫ йөрөй. Сиратлап көтөү ойоштороЛһа, Рәшит тә ҡоткарғылай ине Фәниҙәне юк ҡына хаҡҡа.

Ҡуй инде, ҡуй, әрәм генә булды егет. «Йәшәгем килмәй, үләм дә ҡуям!» – тип тә һөйләнгәнме... Артығын эскән кеше донъянан биҙрәй торған.

Тимур өйҙә телевизорға теклән ултыра ине – әллә ниməһенә ярата «Ну, погоди!» йәнһүрәтен – ярым ҡыҫыҡ солан ишегенән муйынын һуҙып: «Әней, телефонға!» – тип яр һалды ла йәлп-йөлп кире эскә йомолдо.

Көслө зыңғырлауға көйләнгән телефонын Фәниҙә тыштан уҡ ишеткәйне ишетеүгә. Хатта тертләп ҡуйғайны. Ҡыҙыҡ бит ул әҙәм балаһы. Телефон өҙөк саҡта ниҙер етмәгән һымаҡ ине, аҙаҡ унһыҙ ҙа йәшәргә күнегәһең. Ә бит телефонды ҡасандыр яңы өйҙәренә, «Фәниҙәһе – агроном, Барыйы – механизатор» тип, инәлтмәй һуҙғайнылар. Тимур тыуған йылда.

Эйе, тертләп китер ине Барыйы зым-зыя юғалған көндәрҙә, уф Алла, һәр шылтыратыуҙан күңеленә өмөт саткылары һибелгәндәй тойолдо. Бәлки, Барыйҙыр? Амнезия хәлендә хәтерен юғалтып, үҙенең кем, ҡайҙан икәнен дә онотоусылар, аҙаҡ иҫенә килгәндәр хаҡында телесериалдарҙа йыш күрһәтәләр... Ваҡыт уҙа, хәтер туҙа – тоңола яҙған хәҙер Фәниҙә Барыйҙың яҡты донъяла барлығына.

Кем булыр? Лираҡайы шылтыратмай микән бер-бер?

Ҡулдарын алъяпҡысына һөртә-һөртә күтәргәйне трубканы, шундуҡ таныны – Валентина икән. Тауышы эшлекле, кәйефле генә сыға.

– Не забыла, завтра же у нас юбилейные мероприятия?

Нисек онотһон, ти. Иртәгә Иванайҙың – паспорт алғанда атаһының исемен фамилия итеп теркәткән Валентинаның илләһе уҙғарыла. Фәниҙәнең урам аша күршеһе Солтан Хажиморатович матур мәҡәлә баҫтырҙы яңыраҡ башҡортса сыҡҡан «районка»ла, «Сасын гүзәлкәйе» тип тороп. Микрофон тотоп йырлап төшкән фотоһын анау юлы им-томсо апаһы менән Лираның хәлен белешергә килгәнендә ҡалдырып киткәйне «селкор»ға. Валентина... гүзәлкәй ҙә бит, бара алмаҫ шул әхирәтенең йәш туйына Фәниҙә. Башлағас, ташламайҙар, тигән һымаҡ, ул бөгөн Рәшитте ерләүҙә, дөрөҫөрәге, мәрхүмдең өсөн-етеһен уҡытҡанда аш-һыу яраштырышырға вәғәҙә биргәйне. Надирҙың бисәһе сирләшкә генә, Зәриә лә Фәниҙә генә инде хәҙер тилбер ҡуллыларҙан Бураштың уңаҡай ярында.

– Понимаю и одобряю! – Әтнәкәһен әхирәтенә төшөндөргәс, әхирәте ҡыҫташманы. – Ладно, Фаечка, «заслуженный работник»ты бирһәләр, өйөмә йыйып алырмын әле подружкаларҙы. Бөгөн мәҙәниәт йортонда була вечер. Банкет та.

Был хаҡта ла белә Фәниҙә: мәҙәниәт йорто алдына, эре хә-

рефтәр менән яҙып, иғлан элгәндәр бит. Кисә үк эшенә инешләй иғтибар итте быға.

...Уйламағанда һүҙ икенсе юҫыкка күсте. Бакһаң, Валентина «Сасын» кооперативы рәйесе Николай Тимерәйевич менән арлы-бирле һүҙгә килешкән, имеш, яңырак.

– Киҫәттем КолькаНы: булашма ҡара бесәй менән...

– Ниндәй ҡара бесәй? – Фәнидә ғәжәпһенде.

– Прости, сейчас объясню. Беҙ бәләкәй сакта өйҙә хром итек ҡуныСыЛай ике ҡара бесәй аҫыраныҡ. Береһе тыумыштан тома һукыр ине, улай ҙа үтә һиҙгер, кешене танып, аш һалғанды белеп торҙо. Колька, тиктормаҫ малай, бер сак шуны типкеләргә керешкәс, эй, әрләнде әсәмдән. Күҙлеһе ҡаса, һукыры ҡасмай – ҡыҙыҡ күргәндер. Мәхлуктең күңеле былай ҙа китек: Барыйы юғалды, Лираһы зәхмәтле, ниңә уға «мобилка» бирҙертмәнең? Вообщем, һелкеттем чуть-чуть. Оказывается, Николай белмәгән, секретаршаһы наломала дров. Короче, дүшәмбелә телефоның була.

– Байтаҡ хәбәр... Николай миңә әйтте был хакта.

– Кисер, ҡара бесәй образына тиңләгәнгә... Хамматовнаның кредитына поручитель булғанһың, будь до конца молодчиной, тинем. Кәнтәйкәңде оҙат берәй яҡҡа, бәлә ҡуптармаҫ борон, тиһәм, молчит Колька. Оялды былай...

Ҡара бесәй... Секретарша...

Көнләшеп маташмайҙыр ҙа уныһы. Хәйер, ниңә аптырарға, хәҙерге йәштәр еңел-елперәк бит, кеше иренең аҫтына ятыу түгел, тартып алырға ла тартынмаҫ ышкандаҡтар осрай. Теләһә ни эшләһендәр, әйҙә, хатгин ашһындар, тик бында Фәниҙәнең ни ҡыҫылышы?

– Ҡайғыртканың өсөн... рәхмәтлемен, – тигән булды Фәнидә, ни әсенергә, ни ҡәнәғәтләнергә белмәй. – Мин эшемдәгеләргә һис тә кенә тотмайым.

Арғы оста Валентина хушлашты, Фәнидә иһә трубканы цифрҙары күмәк бесәй күҙҙәрен хәтерләткән аппаратка өнһөҙ генә һалды.

Ҡара бесәй... Һукыр бесәй... Әйткәне бар ине, үҙенән өлкәнерәк Валентинаның ул хакта. Ғәҙәттә, меңдәрҙән бер аҡ бесәйҙәр һукыр тыуғылай, ә беҙҙеке, ғәжәп шикелле, ҡара булды, тигәйне. Тимәк, Фәнидә – ҡара бесәй, һукыр бесәй: уны рәнйетеү – гонаһ. Тыумыштан «ҡара бесәй» түгел, хәлбуки, бәхетле көндәр кисерҙе Барый менән. Оҙон-оҙаҡка һуҙылманы ла бит ир ҡатыны булыу бәхете, нишләйһең... Насип итеп, тиҙҙән Лираһы һауығып сыкһа, шунан киләһе йәйгә диплом алып ҡайтһа, эһем, тиәсәк, әбей-һәбейҙе йыйып, хәйер өләшеп, доға ҡыласаҡ әле, Алла бойорһа.

* * *

Айгөл Карамовна көндергәндерме, йыназаға өҫтөнә сапан һымағыраҡ плащ, башына сөм түбәтәй кейгән Олотүз муллаһы ла килде. Ҡартлас, Иҙел ярында ҡырҡып алған йәшкелт һары тал сыбығы тотоп, зыяратҡа алдан атланы.

Әбдерәхимде мәктәп телефонына саҡыртып, участковый саҡ сәғәт ун икеләрҙә әйтә була: энегеҙҙе ерләргә рөхсәт, бауырында цирроз башланған, үлеменең диагнозы: «острая сердечная недостаточность», «похоронный» аҡсаны Лира Карамовна юллашыр, тигән. «Рөхсәт»тән башҡаһын Әбдерәхим күңеленә йомдо, тиергә лә булыр ине, бары тик Надирға ғына сиселде. Үлгән – үлгән, бер Хоҙай күргән, нимәнән үлгәне кемгә хәжәт? Кемдеке – шуныҡы, «эсеп дөңкәйгән» тигән ләстит таралмаһын өсөн, энекәштәренең йөрәк-бауырын ҡабат телгә алмаҫҡа килеште былар.

– Әссәләму ғәләйкүм йә әһләл – ҡубүр йәғируллаһ ләнә үә ләкүм. Әнтүм сәләфүнә үә тәхну бил-әсәр.*

...Бураш зыяратына ҡатын-ҡыҙҙарҙың, бала-сағаның инеүе афған һуғышынан цинк табуты ҡайтҡан һөләктәй егетте ерләүҙән башланды, буғай. Кавалерист ҡарттың төпсөгө ине яугир. Әсәһе лә шәһит улы хаҡына тәғәйен өҫтәмә пенсияны, кем әйтмешләй, оҙаҡ та ашамай донъя ҡуйҙы.

Харап, «Биргадир» үҙен элекке ишерәк тотасы. Ҡыҫыла, өйрәтә, ҡуша, хәлбуки, яҡташтары алдында яҡшатланырға теләй. Ҡәберҙе тәрән, таҙа ҡаҙытҡан, урыны ла матур һайланған. Кешеләрҙең артыҡ тауышланмай ғына лабыр-лобор һөйләшеүе, күк йөҙөнә шәмәргән болоттарҙың эркелеүе былай ҙа һил, шомло зыяратҡа моңһоулыҡ өҫтәп, фанилыҡ һәм мәңгелек хаҡында фәлсәфәүи, һағышлы уйҙарға тарыта. Бисә-сәсә ҡайҙа ла әүәҫтер сәйнәнергә. Хатта сиңгә һалып, үлекте яурындарында күтәреп барған ирҙәре артынан эйәргәндә лә.

– Әжәлең етһә, ҡайҙа ятһаң да барыберҙер ул.

– Әҙәмсә генә үлеп, әҙәмсә генә ошонда ятырға насип итһен бер үк, эй Раббым!

– Сания әбей үҙенә урын күрһәткән, дәү шыршыға яҡын ерҙән. Атайыма яҡын һалырһығыҙ, тип әйткәнме...

– Кемде һөйләйҙәр ине былтыр? Ней, анау... Һеңлеһе, атайыма яҡын ятырмын, тигәс, әйтә була ағайы: һин әсәйемә һыйынырһың, атайым эргәһе миңә тейеш, сөнки мин – ир кеше...

---

**Мәғәнәһе: «Сәләм һеҙгә, ҡәбер эйәләре! Аллаһ беҙгә һәм һеҙгә мәғрифәт итһен. Беҙ ҙә һеҙҙең артығыҙҙан китәсәкбеҙ».*

– Әйтһә әйткәндер, бикәйбә. Олотүз муллаһы ҡалай шаңғыртып һөйләй вәғәзде.

– Әйтәгүр, элек барткум сағында ла сурыта торғайны хәбәрен.

– Талашҡан булабыҙ донъяға һыймағандай, ыҙғышабыҙ, Аллаһты асыуландырып. Бер хәҙистә, әҙәм балаһы эргәһендә тукһан туғыҙ үлем әйләнә, тигәндәр.

– Бөгөн – барбыҙ, иртәгә – юкбыҙ. Әҙәмсә генә йәшәргә ине лә, ней ауыл мандыу түгел, бөтөүгә бара. Солтаның гәзиткә яҙһа ни була?

Тора-бара Сара ла дөйөм хәбәргә ҡушылды:

– Әллә ҡайҙарға яҙып ҡараны, яуап та алманы, – тип ире өсөн аҡланды Солтан бисәһе.

– Хәҙерге түрәләр төкөрөп тә бирмәйҙер гәзиткә.

– Кәнишнә, үҙҙәрен маҡтағанды ғына яраткас...

Ҡабат-ҡабат хәйер өләшкәндә, оҙон-оҙаҡ доға ҡылғанда бәғзеләр туғандарының ҡәберҙәренә күҙ һалырға ваҡыт тапты. Килде бит заманаһы! Ялға ҡайтҡан буйҙаҡ егет, Рәшит мәрхүмдең тиңдәше, өҫкәрәк менеп, әллә маҡтанырҙан, әллә үҙ белдегенән, телефон аша күрһәтмәләр бирергә кереште. Өфө ситендәге торлаҡ-коммуналь хужалығында мастер, буғай. «Фәләнский урамын яҡшылап һеперегеҙ, газондарҙа осток та сүп ҡалмаһын... Ҙур начальник килергә может! Да, торба шартлағайны, срочно ямағыҙ. Мин бөгөн совещаниела, иртәгә төштән һуң проверю, смотрите у меня!»

Тәмәкегә һыуһап шыршылар ышығына үрләгән Фазыл, быны ишетеп, көлөмһөрәп ҡуйҙы: «Үҙе начальник булыр был тыумастай. Ҡалай мут!»

Бөгөн генә эселгән «Шихан» шешәләре ята гөлйемеш төбөндә. Мәрхүм Рәшиттең кисә дөм, бөгөн апарук айныҡ служағы – Олотүз танкисы һемергәндер.

* * *

Иртәнсәк Фазыл мастерҙы бирегә мулла менән бергә алып сыҡҡайны. Баҡһаң, ҡартлас һыуҙан ҡурҡа, йөҙә лә белмәй, имеш. «Һыуға ҡарама, минең аяҡҡа ҡарап ҡына ултыр», – тине уға кәмәсе. Тыңланы теге, бөршәйеп кенә ултырып сыҡты.

Ҡартлас яй ғына Биргадир урамынан атлап киткәс, яр башында фильтрлы кустәнәсен тартып торғанда, коммунальщик апарук һынамсыл фекере менән дә бүлеште бит әле.

– Эй, Фазыл абзый, нисек тормош, тип һорайһың. Миңә күп өйҙәргә инеп сығырға тура килә. Серегән байҙар ҙа, саҡ-саҡ йән аҫырағандар ҙа байтаҡ. Простой пенсионерҙар, инвалидтар, эй, хитлана. К примеру, яңыраҡ барак тибындағы фатирҙарҙы

йөрөп сығылды. Бер әбекәйҙең ишеге фанерҙан, уныһы ла үтә күренеп тора, ашағаны ҡаты-ҡото меҫкендең. Икенсеһенең ишеге – броня, эскәйе евроремонтлы. Тәүгеһе ғүмер буйы заводта тир түккән, икенсеһе иҙән йыуған. Иҙән йыуғанының улы банкта эшләп байыған да киткән, хәҙер әсәһен ҡараша. Иң әкәмәте – бывшая полотерка әллә кем булып һөйләшә, миңә указаниелар биреп маташа.

– Бер эштең дә ояты юҡ, энем.

– Все это так... Үҙең нисек? Һаман безработныйһыңмы?

– Быны кем шапылданы һиңә? – Фазыл ят тәмәке төтөнөнә сәсәй-сәсәй бурылданы.

– Яҙ, кәмәңдә сығарғанда, үҙеңдән ишеттем дә. Әҙерәк тамаҡ сылаткайныҡ, – егет яртылаш ҡырсынға күмелгән тирәк олонона эйәк сәйҙө.

– Ә-ә... Биш-алты ай һигеҙ йөҙәр һум бирҙеләр, мыҫҡыл итеп. Йөҙ һыуын түгеп, артынан йөҙ ҡағыҙ йүнәтергә тура килде. Бына әле кәмә ишкәнгә, исмаһам, силсәүит биджутынан бүленгән мең тәңкә иту-у эсте тишмәй. Пенсияла инде бөтә өмөт. Кәкрәс яңы йылдан, Алла бирһә, тип торам.

– Әйҙә, абзый, йотайыҡмы? Миндә бар.

Ыуаланды Фазыл. Ахырҙа:

– Ҡорҙашыңды һалайыҡ әле тәүҙә ер ҡуйынына, аҙаҡ басмотрим, – тине.

– Их, дружок... Прәме жалко! Ә бит мин уны эшкә алырға риза инем. Мастер на все руки ине бит.

– Фасил да төрлө кәсепкә тәпей. Күр, нәк тәтәй бит! – Яңы лавкаға ымлап, атай кеше күбен үҙе башҡарған эште улыныҡы итеп ышандырҙы.

– Сутками пахать придется беҙҙең системала. Хәҙер даже ятаҡтап жилье табыуы ауыр... – Коммунальщик, берауыҡ шымып торғас, һораны: – Үҙе ҡайҙа һуң Лосман?

– Һы-ы, ҡәбер ҡаҙа. Похоронный командала бөгөн.

– Мин дә барайыммы, неудобно атыу?

– Ҡәбер дауна гатауай... Мулланы ғына көткәйнек.

Ошондайыраҡ әңгәмә ҡорғайнылар кәмәсе менән мастер Бураш ярлауында. Әле ҡабат осраштылар ҙа, өнһөҙ генә сәләмләшеп, ҡурпы хәтфәһен иҙмәҫкә тырышҡандай, урауҙан шыпырт ҡына атлап, ҡоңғорт тупраҡлы ҡәбер эргәһенә өймәкләшкән ярты ауыл халҡына барып ҡушылдылар.

Ярым табутты гүренә урынлаштырып, Надир ләхет таҡталарын һөйәгәндә, Фасил ирендәрен ҡыбырлатыр-ҡыбырлатмаҫ шабырланы: «Рәшит, кисер мине, кисә һиңә «ахмаҡ» тинем... Рәнйемә, йәме».

Өҫтә ыхмылдап алдылар. Надир трагикомик юҫыҡта әйткәнгә:

– Нығыраҡ биклә другыңды, Фасил. Ҡабат сығып йөрөмәһен...

...Йола буйынса, мулла һорау бирҙе:

– Ниндәй кеше ине, йәмәғәт, мәрхүм мөьмин?

– Әйвәт друг ине! – тип яуапланы беренсе булып баяғы Өфө егете. Уны кисә дөм, бөгөн апаруҡ айныҡ Олотүз танкисы ла йөпләне:

– Яҡшы солдат ине!

– Ауыр тупрағы мамыҡ булһын энекәстең, – тип өҫтәне Надир ихластан.

– Бисмилләһи үә аля милләти рәсүллил-ләһи...

Ғәҙәттә, ҡәбер ҡаҙылып бөткәндә аҫта берәй кеше ҡалдырыла. Бөгөн эсмәгән-тартмаған, өҫтәүенә, йән дуҫы уҡ булмаһа ла, мәрхүмдең әшнәһе һаналған Фасил ҡәбер һаҡсыһы ине. Уны ҡапҡасһыҙ табут төшөрөлөп, ләхет таҡталарын һөйәп бөткәс кенә өҫкә тартып сығарҙылар.

Тыптырлап та дөмбөрләп, табут өҫтөнә тупраҡ ишелде. «Гүрҙә ята» тигәнде ошо мәлдән – табутка көн яҡтыһының төшөүе туктағас әйтә башлайҙар микән? Ҡыҙыҡ та, ҡыҙғаныс та үлекте ерләү йолаһы. Ә крематорий ысулы менән ерләүҙең – ерләү тип әйтергә яраһа – хикмәттәре, йәғни рәте-сираты нисегерәк икән? Быңдай уйҙарҙан Фасилдың тәндәре зымбырҙап ҡуйҙы.

Быҫҡаҡлап ҡына ямғыр һибәләп алды.

Зыяраттан бала-саға уйнаҡлашып инде урамға, шунан өлкәндәр күренде, ә түбән яҡтан бирегә, ейәнсәрен етәкләп, нәҡ кисәгесә кейенгән Дипутат яҡыная ине. Сания әбей ерләүҙә ҡатнашҡандарға сығып өндәште:

– Йыназа ашынан һәр кем ауыҙ итергә тейеш, тип өйрәткән боронғолар. Ҡәбер ҡаҙыусылар, хәмер көҫәүселәр – бөләкәй өйгә, бүтәндәр оло өйгә инһен, тип әйтергә ҡушты Камила... – Артабан саҡ ҡуҙғалып, үҙ алдына хәтһеҙ һөйләнде: – Йә-хәүлә, үҙем дә барам... Шулпа эсәбеҙ, ҡоймаҡ ҡоя ине Фәнидәм... Ямғыр күҙе төшәме ул? Быуындарым һыҙлай, оҙаҡҡа китер, шәт, яуын. Зәриә йүрмә бешерә ине. Йөрөгән аяҡҡа – йүрмә, ти торғайнылар борон... Балаларға өләшә торғайнылар тәүҙә.

Солтан иһә, башҡаларҙы оло өйгә әйҙүкләп торған Надирҙы күргәс, бәҙрәф яғына атлаған булды ла туранан үҙҙәренә һыпыртты. Сәйҙәһе халыҡ йыназаға ултырышҡас ҡына һиҙенде уның юҡлығын, тиҡ сығып китергә йәпһеҙләнде. Улай ҙа оҙаҡ ултырманы.

Зыярат ҡапҡаһын тимер сыбығы менән сырмағас, иң арттан һәлпәндәгән Фазыл, түбәтәйен бер кейеп, бер сисеп, ҡайһы өйҙәге йыйынға инергә белмәй, баҙаңҡырап торҙо тәүҙә. Йәштәр эргәһендә оҡшамаҫ... Надир менән Әбдерәхимдән ни ере кәм Фазылдың? Солтан ҡайҙа икән?

Ул арала сигеүле аҡ алъяпҡыс быуған Зәриә ҡапҡа алдына сығып, бала-сағаға табаҡ тулы йылы ҡыҫтыбый – туралған эсәк-бауыр төрөп бешерелгән йүрмә өләште. Тегеләр ашана-ашана өйҙәренә таралышты. Вадимдан күреп, ситтәрәк сыуалған Тимур ҙа буш ҡалманы.

– Ҡәберен иртәгәләрҙә ййлап ҡына барып, Аллам ҡушһа, ҡарап ҡайтырмын, – тип торған ҡарсыҡты Зәриә етәккә алды.

## *Алтынсы киҫәк*

*Балаларының үҫкәнен күрмәгән*
*ата-әсәнең... күрәсәге алда.*

**Дилбәр ауыҙынан**

### 1

Балаһыҙ өй – ҡошһоҙ урман, тиһәң дә баталыр. Бына Рәшит мәрхүмде тәрбиәләшеп, аллы-артлы сауаплы ҡайтҡан ике элек-ке уҡытыусыны – Солтан менән Сәйҙәне бары тик бесәй мыяулаған, өс-дүрт тауыҡ ҡытҡылдаған алты мөйөшлө өй, ҡупшы аҙбар, эсенә инһәң тотош Иҙел панорамаһын күҙалларлыҡ ҡалҡыу ыҙбанан ғибәрәт донъялары ҡаршы алды. Йәй көнө, ярай, күңеллерәк. Улдары Марат ҡайта каникулға, ҡыҙы менән кейәүе, ейәнсәре Әлфирә ҡунаҡҡа килгеләй. Уныһы быйыл өс ай ятты ла ҡуйҙы. Бәғзе ваҡытта шау-гөргә күмелгән өйҙә әле, шым-шырыҡ уйынарға әҙерләнгәндәй, тынлыҡ, бушлыҡ хөкөм һөрә.

Һуң ғына, утыҙға яҡынлашҡанда өйләнешеп, икәүләшеп мәктәптә балалар уҡытҡанғамы, ҡатынына – илле биш, үҙенә алтмыш туласағын уйлаһа, Солтандың йөрәге ҡошсоҡтай талпына: йә быйыл, йә – бер ҡасан да... Быйыл, нәҡ быйыл! Ана, ишет: уйын ҡеүәтләгәндәй, радио «Бала һәм ғаилә» тигән тапшырыу башлап ебәрҙе. Хажиморатович верандала еңһеҙ биллек кейгән килеш ҡолағы менән дикторҙы тыңлап, күҙе менән журнал ҡараштырып ултырған ерҙән, ҡапыл тороп, радионың тауышын көсәйтте һәм веранда ишеген шар асты. Ыҙбала икән – Сәйҙәһе лә тыңлаһын әйҙә. Юҡ, ыҙба бикле, тимәк, ҡайтмаған әле. Хәйер, аҫырауға бала алыу зарурлығын тәү башлап, ҡыш урталарында уҡ, ыжғыр буран ҡотороуын тыңлап ятҡанда, нәҡ үҙе телгә алғайны: «Солтан, әллә детдомдан бала алып ебәрәбеҙме? Аҡсаһы ла килер, изгелек тә булыр. Пенсияға сыҡһаҡ, опекун итмәҫтәр...» Эйе лә, юҡ та тимәгәйне Солтан. Мәгәр шунан бирле төрлөһөн уйлай-уйлай, һығымта яһаны: ә бит Сәйҙәһе хаҡлы. Әлегә икеһе лә имен-аман, гәрип-ғөрәбә түгел,

тормоштары етеш, насар дандары таралмаған... Әммә бындай яуаплы аҙымды ете үлсәп, бер тапкыр киҫкәндәй, алдан яр һалмай ғына яһауың хәйерле. Ымһындырып йөрөрһөң берәй баланы, һиңә атай-әсәй булабыҙ, тип, тә-әк,ниндәй сәбәптән, опекунлык килеп сыкманиһә, сабый күңелен ғүмерлеккә китергә мөмкин, ул сакта үҙеңде эстән генә, әйҙә, һүк тә һүк, этем дә тыймаҫ.

Тәк-тәк, бына йәмғиәткә күптән кәрәк Закон, ниһайәт, ғәмәлгә ингән!

– Рәсәй Федерацияһының Ғаилә кодексы ата-әсә карауынан калған балаларҙы ғаиләлә тәрбиәләүҙең өҫтөнлөгөн билдәләй. Кодекс балаларҙы ғаиләгә урынлаштырыу төрҙәренә түбәндәгеләрҙе индерә: балалыкка, опекаға (попечителлеккә) йәки ғаиләләргә биреү.

«Ә беҙгә кайһыһы кулай?» – тигән уй елеп уҙҙы Солтандың зиһененән.

– Бала тәрбиәләүҙең был төрөн артабан үҫтереү максатында 2006 йылдың 6 июлендә Дәүләт Йыйылышы – Королтай «Башкортостан Республикаһында патронат тәрбиә тураһында» Закон кабул итте.

«Эх, диктор кыҙыкай, кырҡыу проблемаларҙан хасил, илдең киләсәгенә бәйле Законды, һинең урыныңда булһам, бәғерҙәрҙе телерлек итеп, тә-әк, эске елкенеү менән укыр инем, – тип тә уйланы элекке педагог. – Юғиһә, ауыҙыңда бытыр-бытыр бутка бешергәндәй, тәк, бер тынала укының да сыктың».

Ығылдак бәпес йә йәше ундан уҙған, детдомдың боҙоклоктарын күргән үҫмерҙәрҙе тәрбиәләү ауырға төшәсәк. Тимәк, дүрт-биш йәшлек бала кулай. Малаймы, кыҙмы? Катыны теләгәнсә, әйҙә, алһындар кыҙ. Милләте һуң? О-о, быныһы ла етди мәсьәлә. Һәр хәлдә, мосолман өммәтенән булғаны якшы. Брюнеткамы йә блондинкамы? Икеһе лә бата. Карасман икән – Солтанға, һарырағы осраһа – Сәйҙәгә окшатасактар.

Бына лаһа, кабатлап һөйләшмәйенсә лә риза Солтан катынының тәкдименә. Белгән һымак, Закон баҫылған гәзитте йәй үк йыйыңкырап куйғайны.

Кайҙан алырға баланы? Өфөлә электән үк балалар йорттары эшләүен белә Солтан, шулай ук якынлата Коҙғонтау приюты ла бар бит әле. Хәҙер шул приютка иғтибар көсәйгән, буғай. Төҙөкләндерәләр, нығыталар, йыһазландыралар, тип ишеткәйне шунда тәрбиәсе булып урынлашкан ауылдашынан. Былтыр яҙатайым районүҙәк баҙарында осрашкайнылар. Көсәйер ҙә иғтибар – тапкан сабыйҙарынан ваз кискән йәп-йәш «мамочка»лар йә балаларын ашатмай-эсермәй йонсотоп йә әхәзләп-тукмап үҫтергән ата-инәләр күбәйгәс ни илдә. Ундай илдең киләсәге өмөтлөмө йә халык-ара абруйы юғарымы? Ай-һай... Ярай әле, республикала үлем кәмей, тыуым арта.

Бәй, Рәшиттең өсөн-етеһен үткәрешеп, үҙенән аҙаҡ ҡайтҡан Сәйҙәһе шым ғына килеп ултырған даһа дивандың арғы осона.

– Беҙҙең башҡорт борон-борондан балаға аяулы булған, тип һөйләр ине дәүәтәй мәрхүм. Үҙе, тә-әк, һуғышта үлгән кейәүенең ике балаһын детдом-маҙарға тапшырмай, ҡаҡмай-һуҡмай, эшкә өйрәтеп, уҡытып, ал да гөл итеп үҫтерҙе. Быуайыбыҙ, беләһең, кандидат наук ине, былтыр донъя ҡуйҙы, инәкәсебеҙ иҫән, донъя көтә. Заслуженный врач! – Быны айырата ғорурлыҡ менән әйтте Солтан. – Аҡыллы уйлағансы, иҫәр эшен бөтөргән, тиҙәрме – тәүәккәлләйек!

– Киләһе аҙнала документтар йый ҙа Ололтүҙдә, Ҡоҙғонтауға барып ҡайт. Бәлки, икәүләп барырбыҙ. Ҡыҙыҡайыбыҙ икебеҙҙең дә күңеленә ятырға тейеш, эйеме?

Танауын тартып, баш һелккән ирен ҡатыны ыҙбаға әйҙәне. Һүндергән саҡта радио «Етем бала аҫыраған әсә – икеләтә әсә» тигән замана афоризмын әйтеп өлгөрҙө.

– Һиңә тип бешкән ит өлөшөн тотторop ҡайтарҙылар, әйҙә, избенкала лутсы йылы. Сәйгүн дә ҡайнай. Көндәр һыуытһа, өйҙә ризыҡлана башларбыҙ, тим.

Ыҙбала Сәйҙәнең хәбәр теҙгене икенсе яҡҡа тартылды:

– Ауылдың бисә-сәсәһе һиңә әйтергә ҡушты: ауыл бөтөп бара, кешеләребеҙ ҡырыла, ниңә Солтан гәзиткә яҙмай? Берәй эш асылһа, мужыт, Бураш мандып та китер, тиҙәр.

Солтан ыпыҡ кеше ише башын ғына һелккеләне лә ултырған еренән кисәле-бөгөнлө нагрузканан ярайһы талсыҡкан алаптай кәүҙәһен ҡалҡындырҙы. Ире һынын турайтҡайны, бил тиңенән генә тороп ҡалған ҡатыны:

– Тфү, тфү, майың һимеп бара, – тигән булды уйынлы-ысынлы. – Килешә...

– Беҙҙең өсөн иң-иң йәплеһе – патронат, Сәйҙә.

– Анау көн, һин бесәндә саҡта, опека буйынса телефильм ҡараным. Бер ҡыҙыҡай, ете йәштәме, кәрәкһә лә, кәрәкмәһә лә, яңы әңкәһенә «мама, мамочка» тип көнөнә йөҙ тапҡыр өндәшә.

– Тимәк, бала сағында өндәшә алмаған... Тормош компенсировать иттерә, – тип уйсанланды Солтан. – Бигерәк тә әсәйһеҙ үҫһә...

– Бар әсәһе, бар, әҙәм төҫөн юғалтҡан берәҙәк. Беҙгә ҡарабыраҡ алырға, ете түгел, ҡырҡ үлсәп...

Дәү ҡаҙан беркетелгән усаҡ аҫтында ялҡын гөпөрләй. Электә уҡытыусыларҙың әңгәмәһе лә зыялы.

– Иртәгә мунса яғам да машинаны ҡараштырам, һин өйҙө рәтләп, постель әҙерләрһең.

– Бәй, алып та ҡайтабыҙмы? Оҡшамаһа, кире илтеп була, тик, «отказник» тигән исем тағыла уларына, тиҙәр.

– Был мәсьәләлә минән күберәк беләһең – значит, оҡшағанын һайларбыҙ. Тәүҙә документ йүнләмәйекме?

– Юк, башта барайык, берәй бала һайлайык, ниндәй документация кәрәген өйрәтерҙәр.

– Һинеке лә дөрөҫ, Сәйҙә, өйөбөҙ йылы, ашарыбыҙға етә. Марат хуплай... Аталы бала һапалы (әҙәпле), ти торғайны нәнәйем.

– Атанан ҡалған – ярты аҡылдан ҡалған, тигәнде лә ишеткән бар, – тине Сәйҙә.

Һәр башланғыстың сәбәбе була. Аҫырау бала алыу дәртенә Эстәрленән Әлфирәне апкайтырға килгән ҡыҙы-кейәүе лә дарман өҫтәп ебәрҙе түгелме яңыраҡ?

...Йәй буйы үҙҙәрендә тәрбиәләнгән биш йәшлек ейәнсәрен күтәреп ирәбеләнде Солтан.

– Иртәгә Эстәрлегә ҡайтмай, беҙҙә генә ҡалаһыңмы, бәпәйем? Атыу гел һағынабыҙ һине.

– Лошадка әпирһәң, ҡалам, – тине алтыһын уҙған тәнәй, уйлап та тормай. Баланың әсәһе ишетеп торғанмы, ҙурҙан ҡубып әйтте лә һалды:

– Үҙегеҙ бәпәй алығыҙ, әткәй: условиеғыҙ арыу, зарплата бирәләр, льготалары ла бар... Әнкәй кәңәш иткәйне – беҙ «за»!

Иртәгәһенә балаларын оҙатҡас, нисектер һил, етемһерәп ҡалған эске өйҙә Солтан менән Сәйҙә оҙаҡ мөңгөрләшеп ултырҙы. Шул көнөмө, юҡ һылтау менән Иҙел ярына төшөп, Хажиморатович Фазылға ат һатып алырға теләге барлығын да белгерткәйне...

* * *

Рәшиттең йыназаһынан иң аҙаҡҡа ике-өс ҡатын ғына ҡашығаяҡ йыуырға ҡалғас, Сара менән Фазыл сыҡты ҡайтырға. Уларҙан алдараҡ Зәриә, әлеге шул аснәкәт сускаһын ҡараштырып кире әйләнер өсөн, муллаға тағылып, аръяҡҡа ашыҡты. Зәриә «кана, кәмәңдә үҙем генә ишеп апсығам, һине йонсотмайыҡ» тигәс, Фасил ризалашһа ла, ағын һыуҙан шөрләңкерәгән түбәтәйле ҡартлас һыңғырлап ебәрҙе:

– Ҡуй, киленкәйем, әрәйеп китмә әле ҫин, кәмәне аунаҡҫытып, Иҙелгә ҡолатырһың, йә ни... Ел дә шаулай...

– Хоҙай ҡушһа, уны ғына булдырабыҙ! – Асыуы ҡабарһа ла, Зәриә артыҡ телләшмәне, Фасилға боролдо. – Йылыраҡ кейен, ҡәйнеш, мин кире әйләнгәнсе көтөп торорһоң.

Олотүз ярынан мулла, бөгөнгө тос ҡына хәйер-төшөм менән абыстайын тиҙерәк һөйөндөрөргә теләпме, күстәнәсле шыптыр моксайын ҡабырғаһына ҡыҫыбыраҡ, турараҡ һукмаҡтан тыздыйтты.

Зәриә:

– Барһаң, әйҙә, берәү ҙә йәберләмәҫ үҙеңде. Торма йомоғауыҙланып.

Фасил:

– Бармайым. Тоғоң юк был юлы...

– Мәйлең, заяц... – Дымлы ҡырсындан токос күрәнле ярға күтәрелгәс, йылмаймай-нитмәй, Фасилға ла ҡарамай, Зәриә әҙмәҙ тәтелдәп торҙо:

– Турпутевка биргәстәре, Волк, Заяц һәм Хомяк Японияғамы йыйынған, ти. Волк, япондарҙың исеме ҡыҫҡа, мин Вуй булырмын, тигән. Заяц, белдем, Зуй буламдыр, тигәс, Хомяк вабщы бармаҫҡа булған...

– Һинең мәҙәгең гелән өс хәрефле!

Ниндәй мәғәнә һалып ләпелдәй икән быны шикандаҡ? Көлкө көнөмө ни бөгөн? Уҙғандағы шаталаҡ ҡылығы өсөн... Фасилдың ҡылын тартып ҡарамаҡсылыр.

– Төшөнмәһәң, кабат һөйләрмен, – тине лә йәш ҡатын табандарын лыскылдатып үҙ һукмағынан юрғаланы. Фасил теге саҡ «уфимский» балыҡсылар машина ҡуйған тирәгә барып әйләнгәнсе, ниндәйҙер кейем-һалым тотоп, Зәриә лә кире килеп етте, «поехали, ҡәйнеш» тип, күлдәк итәктәрен түбыҡтары асылғансы ялпылдатып, ҡунаҡлай ҙа һалды кәмәгә. «Әҙерәк ҡустылығың да бар, ну йыраҡ – унда ла прабабушкалар инә бер, ата башка булған, ти, Дилбәр инәйең».

– Шунан?.. – Фасил кәмәне тәрәнгәрәк этәгән арала ишкәктәргә Зәриә йәбеште.

– Ултырған да шыуған, – хихылдап алғас, Зәриә оторо күңелсәкләнде. – Тағы берҙе һөйләйемме?

– Хыт меңде һөйлә, миңә ни...

– Уй, шошоно! Меңде үк белмәһәм дә, йөҙҙө запрысты могу ла, ярай инде, мулла абый әйтмешләй, монафикланмайыҡ. Сүтәки иҫеңдә тот әле, теге... «һөт эскән көсөк»тө, йәме?

Таһыл ғына ишә, ҡоромағыр нәҫтәкәй. Өндәшмәй генә барһаң, алкын ағым әллә ниндәй уйҙарға тарыта, төбө күренмәгән күкшел урындарҙа күҙҙәр алаҡандай, йөрәк леперләй.

– Ҡасан килә э-э... Зәбиреӊ?

– Зимагурмы? Ана ҡайтам, бына ҡайтам тигән хатын алдыҡ, ә үҙе һаман юк. Бесәнгә лә көттөк, што-то не толыр... Ҡайтһа, айырылып ҡалыр инем, исмаһам, расхудланмай ғына. Иртәгә эңерҙә апсығырһың, йәме. – Кәмәгә алдан заявка биреп ҡуйҙы Зәриә. Тимәк, бөгәсә Бураштa ҡунасаҡ. Хәрәкәтсән ҡатын апарук текә ярҙан йылп итеп кенә ҡалды.

Һөт... көсөк... Ә-ә, һөт эсергән көсөк, тине, тимәк, тел төбөндә һаман этнәкәһе барҙыр. Фәниҙәнең өмәһендә һөйләнеме әле? Ә юк, ошоноң ише кәмәлә сыкканда, ҡайһылыр әхирәтенә ләпелдәгәйне. Тегеһе оялышынан ҡыҙарып китте хатта. Нисек әле? «Малай урамдан йүнһеҙ генә көсөктө эйәртеп апҡайткан

да һөт эсерә, ти. Әсәһе әйтә була: һөргөсләп ҡыу был уләкһәнде... Малайы, әнкәй, һөт эсеп кенә алһын – инәңде һөрөр әле был көсөк». Әтәк-һәтәккә теле кәлеп шул Зәриәнең.

Нимәгә ишаралай Зәриә? Фасилды... импотентка һанай ҙаһа. Баҫымсаҡҡа баҡа баш... Өндәшмәгән һайын... Рәшит мәрхүм әйтмешләй, «зыңҡытып» кәрле икәнен белгертергәме? Быға тиклем еңгә һанап, туған күреп, тартыныбыраҡ йөрөнө, бик аҙарынһа, тегеләй... Бейә кешнәмәһә, айғыр кешнәмәҫ, тиҙәр түгелме?

Фасилдың һаманғаса ҡатын-ҡыҙ менән сыуалғаны юҡ. Әллә ниңә ҡыйыуһыҙ үҙе лә. Армияла сағында бер көҙ «саперский» ярты взводты яҡындағы совхозға картуф сүпләшергә ебәрҙеләр. Станица казачкалары менән, әй, типтерҙе «дед»тар, Фасилдар – бер йыл хеҙмәт иткәндәр – шашынманы. Ямғырлы бер төндә япма аҫтында енси танһығын ҡандырған ике «дед» Фасилға ла сибәр генә ярым иҫерек шалҡыны «тәмләргә» ҡушты. Баҙманы егет. Өсәүләшеп, эйе, «не хочешь — заставим» тип, ростовчанка ла ҡушылып китте — әпәй шүрлегенә өсәүләшеп менеп төштөләр ефрейторҙың. Саҡ икенсе палатҡаға ҡасып ҡотолдо Фасил.

Иртәгә – йәкшәмбе. Аҙна башы – дүшәмбе... «Вторникта Уфаға килеп кит, эш табышырмын. Может, с жильем поможем. Тем паче, ты – непьющий товарищ...» тигәйне коммунальщик ҡорҙашы ҡәбер ҡаҙыусылар менән ашаған-эскәндәге перекурҙа. Кешегә һерәндәмәй генә барып әйләнһә? Окшаған эшкә һәм оса терәрҙәй ятаҡҡа урынлашып алһа, ҡайтып йөрөргә лә яҡын. Сантехниккә йә электрикка ҡытлыҡ була торған. Үҙенә мәңге ҡарамаҫ Лираға ымһынып, алтышауыҙ Зәриәнән мыҫҡылланып, атаһынан әрләнеп ғүмер буйы йәшәмәҫ Бураштa. Ҡурҡмауын әйт әле нишананың: Зәбире һиҙеп ҡалһа, иҙмәһен генә иҙәсәк бит. Икәүһенең дә.

Фасил ишкәктәрен һурып, тирәк киҫкәһенә һалды, кәмәһен сынйырға йоҙаҡлап ҡуйғас, берауыҡ елғыуар кешеләй тегеләйбылай йөрөштөрҙө. Мәгәр уйҙары елғыуар түгел ине.

...Баяғынаҡ кәмәлә бер килке өнһөҙ барҙылар. Зәриә лә кәрәк саҡта телен тыя белә. Түбәтәйле ҡартлас тәүҙә Фасилдың тубыҡтарына текәлеп килде, аҙаҡ күҙҙәренә баҡты.

– Фасил улым, һинең инсафлы икәнеңде күреп-ишетеп торам. Һиңә «Ғәлиә» мәҙрәсәһендәге Ислам университетына инеү фарыз. Шәкертлеккә – ошный йә заошный – үҙең һайла. Мин өс йыл ситтән тороп шөғөлләнәм, элегерәк инмәгәнемә үкенеп тә ҡуям. Әсбаптар донъя хәҙер... – Фасил өндәшмәй генә ишеүен белә. Зәриә лә ҡыҙыҡһынып тыңлаған кеүек. Мулла һүҙен дауам итте. – Нишләптер, башҡорт әҙерәк унда... Ә бит заманында Ҡазандың атаҡлы Ҡол-Шәриф мәктәбендә беҙҙекеләр иң дәррәү

укыған. Был – бер. Икенсенән, ҡатын-ҡыҙ күберәк. Өсөнсөнән, мәғлүм ки, Бураштa дин әҙәтен миңә тиңдәш мөслимә үтәй.

– Аптырағандың көнөнән йөрөй апайым, – тине Зәриә ҡәҙимге аҡылы менән. – Бүтән кеше булмағас...

– Разый, Дилбәр изге юлдан йөрөй. Ләкин шәриғәттең бары тик ир-ат ҡына аткарыр йолалары бихисап. Дилбәр ҙә фанилыктан киткәс, кемгә ҡалыр Хаҡ Тәғәләнең... – Кәмә сая тулҡын бәрелеүгә сайҡалып ҡуйғас, уҙамандың ҡасандыр колхоз бригадаларында политучеба уҙғарғандағы ише нәсихәте ҡапыл өҙөлдө. – Үә әғғүҙү бинә мин ғаҙабил-ҡәбр...

...Ана шулай Фасилдың күңеленә ойотко һалып китте уҙаман. Сауаплы кәңәшенә ҡолаҡ һалыу мәслихәт.

– Ҡайт, нимәгә уйлы кешеләй ҡырсын тапайһың унда? – Әсәһе өҫтән ҡыскыра лаһа. Тимәк, Сара ара-тирә күҙ һалғылап торған: Зәриәне өйөнәсә оҙатып барамы был, юкмы? Егет, тәүҙә яурынына курткаһын, шуның өҫтөнә ҡуш ишкәктәрен һалып, ата йортона күтәрелде. «Бүтәнсә пассажирҙар борсомаҫ, шәт». Ә элек?.. Элек каснуй кәмәнән төшкән кешеләр, ҡаҙ бәпкәләреләй теҙелешеп, Бураштың өс урамына талпыныр ине.

Кистән башланған бөрсөклө ямғыр төнө буйы берсә тымып, берсә әсе ел ыңғайына һибәләне.

* * *

Иртәгәһенә Надир Әбдерәхимде үҙ кәмәһендә оҙатып ҡалырға теләгәйне лә, ярҙа түңкәреүле яткан кәмәһенең эшкинерен юҫыклы белмәгәс, Фазылды ялларға булды. Ирҙәр тәүҙә уны-быны гәпләшеп, Рәшит өсөн ҡайғырышып торҙолар, яр ышығында күңел өсөн Надир фуфайкаһы кеҫәһенә тығып килтергән ялпаҡ шешәнән «юл сәмәй»ен кәктеләр.

– Һин, абзый, апайыма күҙ-ҡолаҡ булып тор инде, – тине хушлашканда Әбдерәхим Надирға. Уныһы:

– Жив будем – не помрем! Үҙең йышыраҡ ҡайт. Мин һораған запчастарҙы ҡараштыр. Тракторҙы үҙем йөрөтмәһәмме! Икенсе килеүеңә кәритәмдең төбөн гудронлап ҡуям, – тип яуапланы.

– Быйылға һылама, эрәттәш (тиңдәш), минеке лә етә, – тип һүҙ ҡыҫтырҙы Фазыл, кәмәһенә ымлап. – Күпме генә көн ҡалған боҙ ҡатырына...

Лавкаһын астырып, үҙе әйтмешләй, Сараның «балун бивы»һын ҡосаҡлап, коммунальщик пәйҙә булды.

– Өлгөрҙөм! Хәл белешәйем тиһәм, оҙаҡ тотто ебәрмәй дәүатай... – Үҙенә ятһыраған ҡараш ташлаған Әбдерәхимгә егет кем икәнлеген танытыуҙы кәрәк тапты. – Кавалеристың внугы бит мин. Элек йәй һайын йөрөлдө бында.

— Ә-ә... Әниеңдәр ҡайҙа һуң?
— Шишмәлә йәшәй.
— Әнкәйе маладис уның, энеләре ише түгел, — тине Надир, үҙенә һонолған ҡауырһын баллондың ҡапҡасын борошлай. — Ҡартты ай һайын күреп, тәрбиәләп китә.
— Әсәй үҙе картуф ҡаҙа. Бурашка ошо юлы килергә миңә ҡушты...
— Картуфын мул сәскән Рәшит. Уңыуын әйт! Яумаһа, киләһе аҙнала субботник ойошторам әле. — Надирҙы Фазыл ҡеүәтләне:
— Бәрәңгене лә күп сәсмәгәс! Динес яғынан перекупщиктар Камаз менән генә йыя, өй беренсә йөрөп. Ул Сверлауҙан, ул Шиләбенән. Силсәүит, һатмағыҙ, тип тыйып тора — тегеләр һыпырта. Тишек-тошокто ямарға ярап ҡала...
Үрмәксенән күрмәксе, етәгендә Зөлфиәһен елтерәтеп, яр баҫлығына Зәриә яҡынлашты. Әйткәйне кисә: иртәгә алып сығырһың әле, тип... Алдан иҫкәртеүе яҡшы ла... Фасил, уның яғына ҡарамаҫ өсөн, ишкәктәрен беркетергә кереште.
— Килең, Зәпүшкә, килең, бәпкәм. Инәкәсең, кәнфиттән бутҡа бешерәм, тигәйне, ашаттымы һуң?
— Асатты... — тип ауыҙ тирәһен бармағы менән тызыны Зөлфиә. Коммунальщик, кеҫәһенән сығарып, һағыҙ тотторҙо ҡыҙыҡайға.
— Ана вит! — тине Фазыл, нәзәкәтле йылмайып. — Буйғыҙ (еткән ҡыҙ) һымаҡ ҙурая Зәпүшкәбеҙ.
— Әткәле була тороп, йәтимәк зәп-зәү үҫтерәм шул, — Зәриә асырғанмай ғына ирештерҙе Фазылды, ә тегеһе, ишетмәмешкә һалышып, арҡаһын ҡуйҙы ла, күпте күргән көрөшкәһенән оңҡолдатып һыра һемергәс, бурылдап алды:
— Тамаҡты рәхәт кенә ҡыжмырлата, ажғыр ҡымыҙмы ни! Ыспасибы уфимский малайҙарға! — Үҙенә төбәлгән рәхмәттән ирәйгән мастер ғәҙәти генә белеште:
— Күтәрерме кәмәң күмәгебеҙҙе?
— Сара түтәйең ултырмаһа, тотош Бурашты күтәрә минең кәмә! Ә ваабщым, ауыр кәмә лутсы ҡыйшанламай.
Еңелсә көлөшкәс, ир-ат ҡәнәғәт кенә айырылышты.
— Иҫән-һау йөрөгөҙ, арлы-бирле ҡайтҡылап торорғоҙ. — Ошо булды Фазылдың хушлашыу һүҙе. — Мәтри, Фасил, хаҡ һорама зимләктәрҙән.
— Кәнишне, аҡмаһа ла, итәк тама бит жизнәкәй тамағына. — Быны Зәриә бытылданы. Ат дағалағанда баҡа ботон ҡыҫтырған...
— Әй, балдыҙкайым-яңғыҙкайым, быйтыҡас киленкәйем... — тип кенә көлөмһөрәне өлкән Лосман.
Кәмә һәлмәк ҡуҙғалғас, Фазыл менән Надир тирәк киҫкәһенең дөйә үркәсендәй ҡабарып торған төшөнә терәлде. Был

мәлдә көйәнтәле Фәнидә менән арҡаһына буш ялғаш көпләгән Тимур ҡырындан үрҙәге әйләнмәгә аҙымлай ине. Кер сайҡамаҡсылармы?

– Маладис бисә был Фәнидә, – тине Надир ғәмһеҙ генә. Фазыл өндәшмәгәс, өҫтәп ҡуйҙы. – Эшен дә апара, балаларын да ҡарай... Минең дә эш күбәйә, ә мин бызмырлай башланым.

– Әле ни эш ҡыраһығыҙ һуң?

– Йүкәбүләктә бура бөтөрәһе бар, динестәр парк кәртәһе һорай.

– Йүкәбүләк... Борон бауайҙар урманды бүләк тигән, ысын микән?

Иҙел өҫтөнән һары япраҡтар аға. Батҡандары ләмгә, таштарға эләгеп, ағарып-күгәреп ята. Ара-тирә ел иҫеп ҡуя. Һалҡын түгел әле шулай ҙа.

– Мин бер нәмәгә аптырайым: ниңә түҙбаш йыландар йәй уртаһында аръяҡтан бирьяҡҡа күсә икән? – тине Фазыл, ә үҙе шул арала нисәлер йыл элек Фәнидәгә ҡармаҡ һалырға маташҡан Олотүз ҡартласын хәтерләне. – Брәме йөҙөп сығалар, бере артынса бере...

Надир ҡайтыуға ыҡталған еренән аҙға ғына туҡталды.

– Күкәй һалырға йә парлашырға микән? Ҡыҙыҡ, бер ҙә ишеткәнем юҡ инесе. Ҡыш сыҡмайҙар микән тау ярығында.

## 2

Солтан Бурашка осраҡлы ғына килеп юлыҡҡайны. Уйламағайны ла ғүмерлеккә төпләнерен. Үҙҙәрендә унды тамамлағас, яҫы табанлығы арҡаһында армияға алынмаған егетте хеҙмәт дәресен уҡытырға ҡалдырҙылар. Ситтән тороп тарих факультетына инеп алғайны, мәктәптә тарих, география буйынса ла һабаҡтар бирә башланы. Директорҙары – үҙ кеҫәһен ҡайғыртҡан, коллективты бутарға яратҡан, хатта «ике лагер»ға бүлгән шылғаяҡ – мутлыҡтары өсөн ҡасандыр райсоветтың бүлек мөдирлегенән ҡыуылған әҙәм, имеш. Ул тиклеме Солтанға ҡараңғы ине, ләкин ул «лагер»ҙың директорға ҡаршы яғына ҡушылды. Шул арҡала ҡыҫымға, хатта тоҡтомалға «штат ҡыҫҡарыу»ға эләкте. Юғалып ҡалманы Солтан: тәүҙә ентекле ялыу яҙҙы районға, ахырҙа РОНО мөдиренең кәңәшен тотоп, үҙҙәренә күрше районның әлеге Бураш мәктәбенә урынлашты. Салауат педучилищеһын бөтөрөп, башланғыс кластарҙа Зәриә, Рәшит, Фасилдарҙы уҡытып йөрөгән, төҫкә-башҡа ямағыраҡ булһа ла, холҡо ипле, ярты етем үҫкән ҡыҙға – комсомол, ә юҡ, «ҡыҙыл туй» яһап – Сәйҙәгә өйләнеп ебәрҙе Хажиморатович, тора-бара партия сафына ҡабул ителде, лектор-агитатор, рабкор булып танылды. Ситтән тороп уҡып Башҡорт дәүләт университеты дипломын алғас, ауылда абруйы ифрат күтәрелде. Артыҡ

маһаймаһа ла, дипломына эсенән генә бик шат ине. Йә, башҡорт педагог-ғалимдары бөтөнләй тиерлек уҡытмаған, милли талиптар аҙ ҡабул ителгән факультетты алыҫ, төпкөл район вәкиле тамамлаһын әле! Төпкөл тигәндәй, республика тарихы буйынсамы зачет биргәндәре хәтеренә һеңгән. Әллә кем булып йөрөгән, шәп костюм кейгән профессор, заманында обкомда эшләгәнме шул, эй, аптыратты бер ҡатынҡайҙы.

– Ниндәй райондан әле һеҙ?

– Ғафуриҙа тыуҙым, Бөрйәндә эшләйем.

– Әһә, һуңғы районға характеристика бирегеҙ әле, хөрмәтле... дамочка.

Заочница ханым үҙе белгән кимәлдә түгел, түгел шул – гәзит биттәрендә, отчеттарҙа күпертеп һүрәтләнгәнсәрәк, апаруҡ мәғлүмәтле яуап сурытмаҡсы ине, теге тарихсы, олпат ҡына йәштәге студентҡаһын бүлдереп, үҙе бурылдарға керешмәһенме:

– Бөрйән – иң артта ҡалған, ҡырағай башҡорттар йәшәгән районд арҙың береһе. Унда юл да, газ да юҡ, электрһыҙ ауылдар ҙа байтаҡ. Бер ус иген сәсеп, ике ус урожай йыялар. Ашағандары – мышы ите лә айыу ите... Яуабың тулы һәм объектив түгел, «өс»лөгә генә тарта...

Һаман аңлай алмай Солтан «өслө»нөң әтнәкәһен. Районына күрә оҡшатманы микән «дамочка»ның яуабын шешмәк күҙле профессор йораты? Ай-һай, милләтебеҙҙе һөйһөнмәгәнгәлер, моғайын.

Ә бит барып күрҙе Солтан «Москвич»ы яңы сағында Бөрйән яҡтарын. Мараты шук малай ине... Атаҡлы Шүлгәнгәсә барып еттеләр. Бер ҙә «ҡырағай» йәшәмәйсе халыҡ. Юл ыңғай элекке һабаҡташына – мәктәп завучына һуғылды. Барынса һыйлап, ағастан ырылған мышы, айыу һындары бүләк иттеләр, Белорет яғындараҡ Ағиҙел буйына алып төштөләр.

– Ғәжәп бит тормош! Йә, ошо тарафтарҙа бер-береһен баҫтырып, үлтерергә ҡырсынып йөрөгән Блюхер менән Мортазин. Ике шәп полководец. Аҙаҡ икеһен дә атып, бер ҡәбергә ерләйҙәр. Вәт нисек ҡаҡшатҡан репрессия машинаһы бөйөк шәхестәрҙе...

...Ветеран һауынсы Дилбәр менән мәктәптә үткән фәһемле генә осрашыуҙан ҡайтҡас, таҡта аласыҡта эре-эре һуғандарҙы капрон ойоғона тултырыу менән мәшғүл Сәйҙә эргәһенә һуғылып тормайса, Солтан ҡәҙерлегә кейә торған костюмын сисер өсөн өйөнә инде. Өй һалҡынса, шылт иткән тауыш, ҡылт иткән хәрәкәт юҡ. Хатта электр иҫәпләгестең дискыһы әйләнмәй. Ә-ә, күгәүен, юҡ, оңҡот һағыҙаҡ менеп бара тәҙрә өлгөһөнән. Менә бирә лә кире ҡолап төшә, аптырайҙыр, мәхлүк: донъя күренә, ә ул – һис осоп китә алмай.

Китабы, төрлө журналдары харап күп Солтандың. Ул өйҙәге шкафта, ул верандалағы кәштәләрҙә – меңләп дана булыр.

Әле генә мәктәп китапханаһында сәй эсереп, Дилбәр апайға балалар сиккән салфетка, Солтанға йөрәк рәүешендә тегелгән энәкаҙағыс – сынаяк аҫтылай мендәрсек тотторол сығарҙылар. Һы, уның шәхси китапханаһы... мәктәптекенән байырак та тойола. Берәй көн барлап, өстән бер өлөшөн шунда ташытканда ла ярай. Китапка дәүләттең иғтибары арта барғандай. Улай тиһәң, шаҡы-шоҡо бигерәк күп нәшер ителә. Яҡшыға түгел был, түгел.

Тауышҡа өйрәнһәң, өйҙәге тынлыҡ та теңкәгә тейгән кеүекcе. Балаһыҙ өй хас та ҡошһоҙ урман ише, имеш. Тәтелдәп йәй үткәргән ейәнсәре Әлфирә лә юҡ. Ҡапыл ғына Солтан шкаф шүрлегендә патронат тәрбиә тураһындағы Закон баҫылған гәзитте күҙенә элде. Ғүмер бер килә. Үҙҙәре һәүетемсә бәхетле генә йәшәй... Ә ниңә бәхеттән мәхрүм берәй сабыйҙы, Сәйҙәһе теләгәнсә, ҡыҙыҡай алып тәрбиәләмәҫкә? Ҡараусыһыҙ, етем йә ярты етем хәсрәтле бала-саға ишәйә, тип матбуғатта көн-төн яҙалар, әлдән-әле телевизорҙан туҡыйҙар, хатта «исеме... йәше... холҡо...» аталып, теге йәки был баланы аҫырауға алырға өндәйҙәр. Дәүләттең закон сығарырға, сығымдар бүлергә ҡулынан килә, ә конкрет кем хәстәрләргә бурыслы һуң әле киләсәк быуынды? Ниңә Солтан ишеләр ылыҡмаҫҡа тейеш бындай дөйөм изге эшкә?

Солтан, Рәшитте ерләү мәшәкәттәренә бирелеп, һуңғы почтаны өҫтән-мөҫтән генә ҡараштырғайны, бына әле форсат тейҙе. Бураштa иң күп гәзит-журнал алдырған подписчик әле ул. Бәй, «Башҡортостан»да йәнә аңлатма биргәндәр әлеге Законға. Киләсәктә, моғайын, патронат тәрбиә йүнәлеше ҙур үҫеш алыр...

...«Баланы патронат тәрбиәсе ғаиләһенә биргәндә был балаға ҡарата опекун (попечитель) бурыстары патронат тәрбиәне ойоштороған учреждение ҡарамағында ҡала... Патронат тәрбиәсенән айырмалы буларак, опекундар баланың законлы вәкилдәре булып тора, ә баланы алған ата-әсә тәрбиәгә алынған балаға ҡарата опекун хоҡуҡтарына һәм бурыстарына эйә».

Ҡыйын уҡыла, мәгәр быны ғына төшөнмәҫлек кешеме ни педагогик хеҙмәт ветераны Солтан Хажиморатович?

...«Ҡабул ителгән Законға ярашлы, баланы патронат тәрбиәгә биргәндә учреждение баланың мәнфәғәттәренә һәм фекеренә таяна. Ун йәше тулған баланы патронат тәрбиәгә биреү уның ризалығы менән генә тормошҡа ашырыла. Бер туғандар, ҡағиҙә буларак, бер ғаиләгә бирелә».

Аңлашыла ки, Әлфирәгә тиңдәш, иптәш булырҙай биш-алты йәшлек сабый ҡулай буласаҡ.

...«Патронат тәрбиәгә бирелгән баланың, әгәр уның мәнфәғәттәренә, үҫешенә һәм тәрбиәһенә зыян килтерелмәһә, үҙ ата-әсәһе, туғандары менән шәхси бәйләнеш тоторға хоҡуғы

булыуы иҫәпкә алына. Ул тейешле алименттарҙы, пенсияны, башҡа социаль түләүҙәрҙе алырға, шулай уҡ етемдәр һәм ата-әсә ҡарауынан мәхрүм ҡалған балалар өсөн закондар менән ҡаралған социаль ярҙам сараларына хоҡуҡлы булып ҡала».

Бәй, ҡыҙлыҡҡа алған баланың туғандары, яҡындары бар икән – рәхим итһендәр, өй киң, күңеле лә тар түгел. Марат та ҡуй тимәгән әсәһенә, үҙе әсәй булған ҡыҙы ла.

...«Патронат тәрбиәсе хеҙмәткә түләүгә хоҡуҡлы (опекунға баланы аҫырау өсөн генә аҡса түләнә). Бынан тыш, баланы ҡарау өсөн ай һайын аҡса түләнә».

Рәшит мәрхүм әйтмешләй, аҡсаһы – «чуртым»! Хәйер, аҡса ла эстәрен тишмәҫ. Артығын һаҡлыҡҡа һалырҙар, ҡыҙ бала бәлиғ булғастын, туй-фәләнгә тотонорҙар. Аҡса тигәнең Рәсәй көнитмешендә оҙон-оҙаҡ йылдар хәл иткес роль уйнаясағы хәҙер бер кемде лә шикләндермәй, шәт.

Иҫәр уйлағансы, аҡыллы эшен бөтөргән... Етте күп баш ватыу. Солтандың уйлауынса, түләүле система үҙен аҡлаясаҡ, бәғзе сит илдәрҙәге ише, балалар йорттарының кәмеүенә килтерәсәк. Ҡурҡыныс яғы ла бар. Һин оҡшамайһың, тип баш тартыусылар ҙа осраштыра, имеш, әлүктән. Быныһы насар. «Отказник» итеү – баланың күңелен мәңгегә китеүгә бәрәбәрҙер. Етте күп баш ватыу. Ямғырҙар ыҙалатмаҫ, юлдарҙы иҙмәҫ борон Ҡоҙғонтауға барып әйләнеү фарыз. Мал һайларға түгел, хәйерле ниәттә – бала һайларға барасаҡтар. Машинаһы рәтле, бензинды ни паром ашаһындағы заправкаға еткәнсе генә ҡойоп алдымы – булды. Эх, бар ине «Родина»ның хәлле саҡтары! Рычагына баҫ – һемәгенән ағыҙа ла бирә ине ҡабырғаларына кәҫ өйөлгән яғыулыҡ цистернаһы. Йәшәлгән икән үҙенә күрә коммунизмда етмешенсе-һикһәненсе йылдары.

Тәүәккәлләргә! Хәҙер үк һөйләшәсәк Сәйҙәһе менән. Һуғаһын элешкән арала уҡ. Көнөнә урап ҡайтырға мөмкин Ҡоҙғонтауҙан. Солтанға юлды өйрәтәһе түгел. Ә-ә, справкалар кәрәгәсәк...

Әгәр тыуған ауылына боролоп, бер-бер энеһендә ҡуна ҡалһалар, һыйырын йә Сара, йә Фәнидә һауыр әле. Бер һыйырҙы ни... эт һарығансы. Ҡуй, Фәниҙәне борсомаҫтар. Сараны өнәп бөтмәй ҙә Сәйҙәһе, көнөң төшһә, ни хәл итмәк кәрәк? Киҫәткән бит бөйөктәрҙән кемдер: бөтә донъяны яратырға мөмкин, ә бына һин күршеңде яратып ҡара... Зәһәр әйткән! Бәй, зәһәр Зәриә ҡуныр Зәпәһе менән берәй кис. Буш итмәҫ Сәйҙәһе, кейем-һалым йә аҡса бирер.

Көндәр ҡабат аяҙға тартмаҡсы. Болоттар һирәкләнә, юғарылана.

Әлегә бала алыу ниәте хаҡында бураштарҙан бер кемгә лә әйткәне юҡ Солтандың, Сәйҙәһе лә был тәңгәлдә йомоҡ. Бары тик үткәндә, Рәшит мәрхүмде «ярырға» килгәндәрҙе аяғөҫтө

сәй-мәй эсергәндә, участковыйға ғына әҙ-мәҙ сиселде Хажиморатович. Кем белә, попечитель органдары «Баланың патронаттары ниндәй әҙәмдәр һуң?» тигән юҫыкта справка-фәлән һорарҙар, бәлки. Тиҙ үк аңғарҙы майор, Әлфирәнең ике тапкыр ғына якынайтып күрһәткән уйынсык кытай бинокленән кыҙык өсөн ыҙба тәҙрәһе аша Каризел ағымын күҙәткән еренән арынып, Солтанға бер тултырып караны ла саф башкортса һығымта яһаны:

– Дәртеңә дарман, Солтан ағай. Һеҙҙең кеүек ирҙәр күберәк булһа, тормош күпкә якшырыр ине. Иң мөһиме, аҫырау балаға бөтә условиелар бар өйөгөҙҙә. Кәрәкһә, справка яҙыуы кыйын түгел миңә. Биографияғыҙ таҙа...

Судмедэксперт участковыйҙан ул хеҙмәтләндергән биләмәгә нисә ауыл карауын белеште.

– Бер поселок, ете ауыл, өс утар, йәйге сезонда – дүрт йәйләү, бер лагерь... – тип хәрбиҙәрсә сатнатып әйткәс, майор хәбәрен кәҙимгесә дауам итте. – «Фәләнсә кеше йәшәй. Фәләнсә алкоголик, араларында фәләнсә спидмэн, токсикоман – күбеһе малайҙар, фәләнсә фәлән-фәсмәтән...» ишерәк мәғлүмәт еткерелде. Ләкин цифрҙар квартал һайын үҙгәреп тора, вәт шулай.

Шунда Солтан Хажиморатович үҙенең тарихта һай йөҙмәүен дә белгертте:

– Борон Дарий тигән властелин ғәскәрендә биш мең яугирҙың исемен, атаһының исемен һис яңылышмай әйтә алған. Фарсы батшаһынықынан кайтым түгел, буғай, участковыйыбыҙҙың хәтере.

Әңгәмә тиҙ өҙөлдө, сөнки юлдаштары – Сәмерханова Зилә каршылағы капка төбөнә сығып баҫкайны. Һыуһындары канып-канмаҫ ир-ат тышка ашыкты. Ни генә тимә, шәфкәт туташы – район башлығы урынбаҫарының хәләл ефете бит әле. Әләкләне куйҙы иренә: эсеп ултырҙылар, шуға оҙакланылар. Хәйер, Зилә вакай катынға окшамаған. Эре лә кыланмай. Инсафлы, мөләйем.

* * *

Фасил Олотүз баҫыуҙарында абзыйы менән биш тәүлек кенә уракта йөрөп кайтты. Мунса инеп, ял иткәс, шым-шым ғына коммунальщик сакырған ергә «разведка»ға барып әйләнмәккә әҙерләнде. Документтарын караштырҙы, өҫ кейемдәрен үтекләне; ыштан-ойоғон, ғәҙәтенсә, үҙе йыуҙы. Һиҙенде Сара, төпсөнә куйҙы:

– Берәй яры йыйынаһыңмы әллә?

– Уфаға...

Был хакта алдан ук һөйләшеү булғанғамы, әсә кеше фатиһаһын бирҙе.

– Барып ҡайт, оҡшамаһа, сразы кире әйлән. Мужывит, еҙнәң саҡырған Ғәбжәлилме әле, шул тирәгә барып килергә насип итер. Быйыл ҡайта алманылар, тәнәйҙәре ҙураялыр. Йөрөмәһәң, низнай – мәгәзин эшенә ныҡлап күс тә ҡуй. – Улы өндәшмәгәс, әсәһе тағы һүҙ өҫтәне. – Шырпы-тоҙҙан ғына башлағайныҡ, видыш, бакупателдәр: шуны апҡайтығыҙ, быны апҡайтығыҙ, тип яҙалар заяфкы дәфтәренә.

Белә Фасил «заяфкы»ларҙы, белә. Араҡы таптырғандар ҙа осрай. Ундайҙарҙан егет «эсмәйем, һиңә лә кәңәш итмәйем» тиеберәк ҡотола. Ә Фазыл белдекле кешеләй тәфсирле аңлата: «Әйтеүе генә анһат! Араҡы һаттыңмы – налогты бәрәләр генә. Элек, ана, артыҡ тауыҡ аҫыраған өсөн ҡаҡшата торғайнылар, шунан да хужы хәҙер. Ике-өс кеше эсә тип – үҙемде лә индерәм – дан сығарып булмаҫ. Яңы йылға «Шампанский» килтерәм, кәнишнә, бер-ике карубка».

Әсәһе әйткәнсә лә эшләргә мөмкин Фасилға. Уҙған юлы шылтыратыу менән базанан апарук әйбер ауҙарып киттеләр аръяҡтағы һыуалғыска. Өс тапҡыр сығып алды аталы-уллы шуны. Ул сәй, ул һыра, шаҡмаҡлы шәкәр, унлап ҡапсыҡ шәкәр йә макарон. Һынамаҡҡа байтаҡ икмәк-булка ла алдырғайнылар – көнөндә тиерлек һатылып бөттө. Ул тиклем үк бөлгән кешеләр йәшәмәй Бураштa. Пенсия, пособие-маҙар алыусылар, укытыусылар хәтһеҙ генә.

Кисә-бөгөн кәмә һорап йөрөгәндәр юҡ, рәхәт әле, тип тә өлгөрмәне, бер-бер артлы верандалағы телефон зыңғырланы.

– Һаумы, Фасил, Солтан быуаң әле был. Төштән һуң Олотүзгә сығып әйләнергә ине. Мөмкин булырмы?

– Кәнишне, Солтан Хажиморатович, пажалыста.

Күп тә тормай, Дипутат телефонынан Зәриә шылтыратты. Бирегә ҡасан, кем менән сыҡҡандыр, этем белһен. Фасилдың өйҙә икәнен тыҡрыҡ аша күҙләберәк тора әллә?

– Кәмәң эшкинәме?

– Кәнишне...

– Алып сығырһың, йәме.

– Төштән һуң, Солтан абзый менән.

– Эре шытаһың! Ҡара уны, Зәбир ҡайтһа, юҡ-бар ләпелдәп ҡуйма.

– Ҡайтһа ни...

– Договорились! Атаман шутки не любит.

«Ҡайтһа ни. Минең бер гонаһым да юҡ Зәбир абзый алдында» тиергә теләгәнен Фасил күңеленән генә үткәрҙе. Ни бысағыма инде өйөнә анау саҡ, һемәйткес тоғон күтәреп... Шуға ишаралай һымаҡ Зәриә йылмаяҡ. Зимагоры ни, ҡайтһын, ҡайтҡаны яҡшы. Йәлке ләһә ҡыҙыҡайҙары.

Зөлфиәһен етәкләп, Солтандан алдарак килде Зәриә. Кәмәне әҙерләгән арала Фасил орсоктай ҡыҙыҡайҙы еңелсә шаяртып алды.

– Исемең нисек әле һинең, бәпәй?

– Мин бәпәй түге-ел, – тине Зөлфиә ирәйеп.

– Исемең нисәү һуң?

– Атайым – Зөлфиә, әнкәйем, Зәпә, ти.

– Ә кем Зәпүшкә тип өндәшә?

– Фазыл быуай. Ише-еү э-э... дәү инәйем.

– Дипутатмы?

– Әлләсе. Дилбәр, шикелле, белмәйем.

Моңһоуыраҡ, уйсаныраҡ сырайлы Зәриәгә етә ҡалды.

– Ҡара, немуй тиһәм, баланың башын ҡатырырға апаруҡһың да.

– Апарук... – тигән булды Фасил ишкәк болттарын кәптергән арала.

– Ә һин, Зәпә, һора абыйыңдан: ниңә, тиң, һиңә донъяла булмаған исем ҡушкандар, тиң? – Зөлфиә аңламаны, аптырапды, ахырҙа уның өсөн Фасил яуап бирҙе:

– Әткәй ни үҙенең исеменә оҡшатып яҙҙырған да ҡайтҡан. Тәк-те «Факил» тип өргән ҡолаҡҡа мулла быуай...

– Фасил булып йөрө, әйҙә. Әтеү «Факел» тип ирештерер инем, – Зәриә һаман тел сарланы, шунан әллә аңғармаҫтан, әллә белә күрә, ҡыҙының йоҡа кәүҙәһен тубыҡтарына ашанан-аша арҡыры һалды.

– Длинный садись, ҡыҙым. «Длинный садись» тигәнде Лосман абыйың да белмәй. Кире сыҡҡанда һөйләрмен әле үҙенә.

Фасил әһәмиәт бирмәне Зәриәнең һүҙенә һәм, ҡул биреп күрешкәс, Солтанды кәмәгә алдан уҙҙырҙы.

– Оһо, тәкелдәк абзый ҙа күренде, – тип көләсләнде Зәриә ҡапыл ғына һәм, устарын сикәһенә терәп, ҡуян ҡолаҡтары һымаҡ ҡайсыланы. – «Лакатыр»ыңды ҡарпайт и слушай анекдот. Хажиморатович килеп еткәнсе... Ызначит, тәк. Бер ухажер подругаһының өйөнә барған да урамда йөрөгән малайҙан һорашҡан, ти: «Атаң өйҙәме?» «Өйҙә», – тигән малай. «Тә-әк», – тип мөштөм генә китеп барған мужик. Икенсе юлы һораған: «Папа дома?» Малай отвечает: «Он в командировке». «Тәк-тәк-тәк» тип һөйөнгән, ти, теге нәрҫә. Солтан абыйға ошоно ләпелдәһәм, оҡшатырмы?

– Сәвсим дура, да? – Баш сайҡаны Фасил етди генә. – Әтәкһәтәгеңде берәй дәфтәргә яҙып бараһыңмы әллә һин?

– Яҙмайым, «кампутыр»ға яҙам, – Зәриә бармаҡ осо менән маңлайына төрткөләне. – Әтәк-һәтәк һөйләр өсөн дә баш кәрәк, Фасил ҡустым.

– Харап... Килештерә берәү.

– Всирауны берәй нәмә ләпелдәйем абзыйға. Әтеү көлә лә белмәй шикелле ул. Үткән юлы мулла абзыйға һөйләргә теләгәнде, ә? Рәшит йыназаһы булғанға ғына һөйләмәнем. Көлкө түгел ул, булған хәл.

Һөйләне Зәриә. Кәмә ҡуҙғалып, үҙ яйына ыңғайлағас ук.

– Аръяктағы мулла абзый уҙған юлы, Рәшитте ерләгән көн була инде, әйткән бер һүҙгә «дөрөҫ» тип ултыра ине, былай тинем: «Борон Олотуз муллаһына спорлашкан әҙәмдәр күп барған. Бер симйа килгән, ти, быға. Ҡатын ире өҫтөнән жалыуын һөйләп бөткәс, быуай тегене «Һинеке дөрөҫ» тип ебәргән. Ирен дә «Һинеке дөрөҫ» тип оҙаткан. Тегеләр киткәс, абыстайы һораша: ниңә килгән бер кешегә «Һинеке дөрөҫ» тиһең ул? «Әбей, һинеке лә дөрөҫ» тигән мулла».

Кинәнеп, һыу өҫтәрен шаңғыртып көлдө Солтан. Бына һиңә көлә белмәгән кеше! Маҡтаны, етмәһә, Зәриәне.

– Һине, мәҙәккә маһир, тиҙәр ине, ысынлап оҫтаһың, һеңлекәш. Әбидне, беҙҙең эстрадаға ошондай халыҡсан юмор етешмәй.

Килештерә шул Зәриә. Ләм-мим әйтмәне ләһә Рәшитте ерләшеп ҡайткан мәхәллә муллаһына. Сәлләле абзый күберәк Фасил менән һөйләште, ислам дине буйынса укырға өгөтләне. Һыуҙан ҡурҡа, буғай, кәмә һәндерәһендә бөрөшөп кенә ултыра ине, бәзрәйеп. Шуға ла һирәк күренәләр әле Бураш яғында.

### 3

Солтан менән Сәйҙә Ҡоҙғонтауға имен-аман барып етте. Бына Закон нишләтә – көтөп торғандар, тиерһең, приют хеҙмәткәрҙәре – итәғәтле, теге-был һорауға яуап бирергә, бала бағыу буйынса инструктаж юҫығында әңгәмә уҙғарырға әҙерҙәр. Хажиморатович тәүҙә укытыусы сағынан әҙ-мәҙ таныш тәрбиәсене табып алды. Уныһы, исмаһам, бала һайлауҙа хәйләһеҙ ярҙамлашмаҡсы. Һәр баланың холоҡ-фиғелен, нисек бында юлыкканын биш бармағылай белә.

– Әмирә Фәләнова ҡулай, шәт, – тине тәрбиәсе ҡатынкай, Сәйҙәнең теләктәрен иҫәпкә алып. – Алтыһы тулып килә. Һаусәләмәт, уйнарға әүәҫ. Үҙен йәберләтмәй... Икенсе ҡатта тәрбиәләйбеҙ кескәйҙәр төркөмөн.

– Әмирә? Ундай исем бармы ни? – Сәйҙә иренә баҡты.

– Бар. Үзбәктәрҙә осрай, – тине ире. – Әнүәр – Әнүәрә, тәк, Әмир – Әмирә, хуп мәйле!

– Закон тигәс тә, попечительство практикаға ныҡлап инмәгән, ниңә ашығырға? – Өлкән тәрбиәсе баҙарын күтәреп, һүрелдереп маташкайны, директор вазифаһындағы тыныс, якты сырайлы ирекәй тегендә-бында шылтыратып, артыҡ волокита тыуҙыртманы.

– Беҙҙең райондыҡы икән дә тыумышығыҙ, Солтан Хажиморатович, – тине ул, патронат документтарына ҡабат күҙ йөрөткәс. Шунан ярҙамсыһына ҡушты: – Копияларын биреп, кәрәк ҡағыҙҙарҙы алып ҡалығыҙ, ниҙәр етмәй – өйрәтегеҙ... Өҫтәмә ғариза алып ҡалығыҙ: аҙнағамы, айғамы апҡайталар баланы? Берәй айғалыр...

Мал һайлау, йәр күҙләү, килен йә кейәү булаһы йәштәрҙе һынамсылау... Тукайҙы, ана, бесән баҙарында аҫырауға һатып алалар. Юҡ ҡына хаҡҡа. Буласаҡ бөйөк шағирҙы! Әле... Әллә нисек, ҡыйынһындыра. «Әмирә? Ундай исем бармы ни?» – «Бар...» Баяғы һөйләшеү ҙә ҡылт иҫенә төштө Солтандың. Бына әле Сәйҙәһе менән тәрбиәсе ҡатын бала һайларға йыйынғас, Солтан ҡатынына фатиха биргәндәй һөйләнде.

– Әмирә-ә. Исеме йәтеш. Есемен үҙең ҡарарһың. Мин, тә-әк, машинаны ҡараштырам. Ниңәлер ҡыҙып алғансы сөскөрә лә бышҡыра... Әллә бензин насар, әллә – чуртым, Рәшит әйтмешләй...

– Исеменә аптырамағыҙ. Бер документта – Әлмирә, икенсеһендә Әмирә йөрөй. Берәй алабарман бутағандыр, – тине әңгәмә айышына төшөнгән тәрбиәсе.

– Күңелгә көҙөк булмаһын: үзбәктәргә ҡыҫылышы юҡтыр бит? – Сәйҙә тартынмай төпсөндө.

– Осоҡ та юҡ – ул бала Солтан абыйға күрше генә ауылдан даһа. – Тәрбиәсе аңлатмаһынан Сәйҙә еңелерәк тын алды. Ире иһә тарихҡа ишараланы:

– Әмирҙәр күп булған элек. Әйтәйек, ҡанһыҙ Әмир – Аҡһаҡ Тимер... Минһеҙ генә һайлағыҙ баланы, йәме.

– Һайланыҡ... – Ҡатындарҙың кемелер тәүәккәл генә әйткәнде тыңҡа ыңғайлаған Хажиморатович ныҡлап абайламаны.

«...Әсәһе – бар, Әмирәнән былтыр баш тартҡан, дөрөҫө, баланы «...ҡарай алмай... амораль йәшәү...» типме, йәмәғәтселек юллауы буйынса ошонда тапшырғандар. Атаһы – билдәһеҙ... Быныһы – тфү, тфү, патронат өсөн хатта, ҡулай».

* * *

Бала тәүҙә бер кешегә – йә ата-әсәһенең береһенә, йә бүтән ҡәрҙәшенә нығыраҡ ылыға торған... Быны яҡшы белгән Хажиморатович кескәй Әмирәне «эйәләштереү», кейендереү-яратыу мәлендә ҡатнашманы. Машинаһын ҡараштырҙы, ләкин ҡәнәғәтлек кисермәгәнгә, күңеленә уй төйнәне: урауыраҡ булһа ла, Бурашҡа Ҡариҙелдең оло күпере аша Динес яғынан ҡайтып төшөргә, бер килгәнендә йәнтөйәгендәге энеһенә һуғылып уҙырға. Ни генә тимә, колхоз барҙа киң профилле механизатор

ине, шәхси машина алмаһа ла, техника буйынса Солтандан оһоллораҡ.

Бәхетенә, ярты ставкаға ғына электромонтер эшендә ҡыялған ҡустыһы өйөндә ине. Аталарынан ҡалған алты мөйөшлө йорт. Сайырлы бүрәнәләре ҡарайған, әммә бирешерҙәй түгел. Солтан уҡытыусылыҡ һөнәрен башлаған осор күсенгәйнеләр ылыҫ еҫе аңҡыған әлеге өйгә...

Ирҙәр көңгөр-ҡаңғыр машина ҡараштырғанда, килендәштәр өйҙә мәж килде: олоһо Әмирәһен әпәүләне, кесеһе кухняла ҡаңғырҙы. Нисектер электән борсаҡтары бешмәгән кеүек быларҙың. Бешмәҫ тә... Шаҡтай донъянан Солтан менән Сәйҙәгә ярыҡ ҡашыҡ та эләкмәне, хәйер, үҙҙәре лә ымһынманы. Теге-быны йолҡорға әүәҫ, мәктәп ашнаҡсыһы булып ҡына эшләгән килендәшенең тызыуы арҡаһында иҫәп-хисапҡа мәүеш кенә ҡайнеше... хатта утыҙ етелә Себер һөрөлгән дәүатайҙарының изба-читальняға әйләндерелгән, һуғыштан аҙаҡ мәктәп мастерскойы итеп һипләнгән ошоноң ише алты мөйөшлө оло өй аламаһы өсөн дә аҙмы-күпме компенсация юллап алғандар. Исем өсөн шул сумманан өлөш тәкдим итһәләр, алмаҫ ине Солтан, иллә күңел тигән нәмә лә бар бит әле... Ҡаҙандары, ҡаҙналары бергә булмағанда ла, әҙәмгә һанламау, ағай-еңгәгә һанамау ҙаһа был. Шуға Сәйҙә килендәше менән һөйләшкәндә артыҡ асылып барманы. Унның ҡарауы, бөрсә ише генә һыҡмыр ҡатынҡай бумпылдығын сыҡты. Педагогик терминдар ҡыҫтырып, иңле генә һөйләшкән дә кеүек үҙе.

— Развитиеһын, биографияһын белмәйсә, инкубаторҙан аҫырау алмаһағыҙ?! Эрәйгән берәүҙәр! Инкубатор тауығы, ана, көртләй ҙә белмәй, күкәй ҙә баҫмай. Детдом себештәре, родитель булғастын, күбеһе балаларын әпәт детдом воспитаниеһына сдавать итә. Әйтәгүр, бынауы безотцовщинаның әнкәйе кем? Шоферҙарға тағылып, тамаҡ байына шуларҙың аҫтына ятып йөрөгән нәҫтәкәй ҙә. Ҡуян һурпаһының һурпаһы ише, сыбыҡ осо ҡоҙаса...

— Һинең ҡоҙасаң миңә ҡоҙаса түгел, — тип ҡапыл ярһыны Сәйҙә. «Ҡайҙан ғына әйттем балаҡайымдың фамилияһын! Һыпыртыу хәйерле албаҫты эргәһенән. Әллә әрепләшә, әллә көнләшә. Көнләшеү ғәләмәтелер. Марат арыу уҡығанға ла, Әмирәне тәрбиәләгән өсөн ай һайын аҡса түләнәсәгенә лә...»

— Әйтмәһәң дә белеп ятабыҙ ул. Ҡырҙаныраҡ алһағыҙ... Бигәйбә, — килендәше тымды һәм мәктәп кухняһынан ташылған ваҡ-ваҡ кәтлиттәрҙе, макаронды микротулҡынлы мейестә ҡыҙҙыра һалып, оло табаһы менән өҫтәлгә ултыртырға йәтешләне. — Хажиморатовичка дәшәйем...

— Үҙем саҡырам, — Сәйҙә яй ғына ишеккә ыңғайлаған арала хужабикә хәбәрен өҙмәне:

– Килер ҙә бер көн, артынан юллап барып, ну-ка, ҡыҙымды кире бирегеҙ әле, тиһә, нишләрһегеҙ?

– Это уже наша проблема, – яуабын урыҫсаланы ла Сәйҙә, бер-бер тыштағылар сетерекле әңгәмәне ишетеп ҡуймаһындар типме, артынса ишеген этеңкерәп япты, килендәше иһә аулаҡта диванда йоҡомһорап ултырған Әмирәгә ҡаҙарынды.

– Әнкәйең тукмай торғайнымы әле һине? – «Эйе» тигәнде аңғартып, ҡыҙыҡай баш һелкте.

– Әткәйең кем әле һинең? – Яуап биреү урынына Әмирә йәнә алһыу бантиклы башын сайҡаны. – Кемдән ҡарыҡҡаныңды ерҙәгеләр түгел, күктәгеләр белмәйҙер. Һине аҫырауға биргән зарплатаны хөкүмәт шисный родителгә түләһә, ҡандай бала үҫтерер инек! Начальство бер ҙә балаһын детдомға йә әпикәгә бирмәй...

– Мин... Мине ошонда апҡайталармы? – Һаҡ ҡына һораны ла Әмирә, ишек яғына шыртлабыраҡ ҡараны. – Ней, малайҙар төрткөләй детдомда. Бында ҡаламмы?

– Кәрәгең бар ине! – Дорфа ҡатынҡай, эс бушатырҙанмы үҙ алдына һөйләнеп, ҙур тәрилкәгә ҡатып бөткәнлеге шыҡылдауҙарынан беленгән печенье-перәник өйөргә кереште. – Ҡалай телгә шәпһең... Ҡан балаларымды саҡ аҫырайым әле. Икәүһе хәҙер мәктәп кружогынан ҡайта, берәүһе пэтэушник, олоһо ҡырҙа... Бесталкауай кейәү менән айына бер килеп, быуынға төшөп һорана. Бирһәң дә ҡыйын, бирмәһәң дә. Яҙмыштан һыҙмыш юҡтыр – кеше һымаҡ рәхәт йәшәп булманы... – «Кеше һымаҡ...» тигәнсе, «Сәйҙә һымаҡ...» тиһәсе. Ләкин ишектән инеп, яңы ҡыҙы эргәһенә ашыҡҡан Сәйҙә быны ишетмәне һәм әле генә соланға саҡырып Солтанға әйткән фекерен ҡабатланы:

– Әҙер өйгә ҡайтабыҙ, Әмирә ҡыҙым. Юлда бәү-бәү итермен үҙеңде... – Бер һүҙ ҙә өндәшмәй килендәше, тимәк, улар был өйҙә көтөлгән ҡунаҡ түгел. Уның ҡарауы, үҙенә яҡлаусы килгәнен бар булмышы менән тойған ҡыҙыҡай шундуҡ кейемдәренә үрелде.

– Атаҡ-атаҡ, өтөкләнде лә киттеләрсе...

Сәйҙәһенең уй-теләген дөмһәйгән сырайынан уҡ ҡылыҡһырлаған Солтан әпен-сөпөн генә тамаҡ ялғаны ла, килене ыңғайына күҙ буяр өсөн генә ҡунып ҡайтырға ҡыҫтаған ҡустыһы менән һәуетемсә хушлашып, юлға елкенде.

– Көн алама... Үҙегеҙ килегеҙ, тәк, ярҙам итмәһә лә, ярҙан этмәҫ ағай кәрәк булыр әле. Оло улығыҙҙы, тә-әк, баштан-аяҡ кейендереп ҡайтарырлыҡ хәл бар. Егет кеше кәнде уҡыған сағында мохтаж булыусан.

– Солтан ағай, карбюратыңды ҡарат әле опытный хозяйствола. Күрерһең, юл сатында шиномонтаж да, запчасть магазины ла бар, – булды кәңәше бисәһенең һүҙенән сыға алмаған баҫалҡы ирҙең.

...Юл сатында әкиәттәгеләй ҡупшы кафе ла бар икән. Сәйҙә менән дә, үҙ алдына ла бытырлығын сығып, Әмирә манты йыпырҙы, туңдырма яланы. Белешмәне Сәйҙә: бәлки, тәүләп тәмләүелер был ризыҡтарҙы «социаль йәтимә»нең... Нисегерәк бәғер тырнағыс һүҙҙәр уйлап таба миһырбанһыҙ заман!

Баҫалҡы энекәшенең фаразын ремонтсылар ҙа раҫланы: ихтимал, карбюратор сығынлай, яңыға алыштырыуы анһат, хаҡы – шунса, таксаһы – фәләнсә. Иҫке менән ыҙалағансы тип, Солтан яңыны ҡуйҙыртырға килеште.

Ремонт теүәлләнеп кенә барғанда, кафеға йәнәш стоянкаға йәшкелт «Газель» килеп туҡтаны. Машина ла, водителе лә таныш кеүексе. Һ-м, Рәшит мәрхүмдең служаглы лаһа. Ҡалынырак кейенеп алған, көрәйгән дә кеүек. Һаман биҙәнеү шаҡы-шоқоһо, ауыҙға алғыһыҙ хәмер менән һатыу итеп, харам кәсеп менән мәшғүлдер. Эшләпәһен батырыңҡырап кейҙе Солтан – танытмауың хәйерле. Йә берәй нәмәһен ал да ал тип, эс-бауырға инә башлар. Ярай әле, кафеға инеп күҙҙән юғалды.

«Москвич»ын юл ыңғай ҡуйып, Солтан термостан сәй һемереп алғансы, Әмирәне етәкләгән Сәйҙә сығып баҫты һәм тирә-йүнгә ҡаранды. Гудокка баҫырға уйлаған Солтан туҡтап ҡалды, сөнки артынса сыҡҡан теге егет Сәйҙәгә ниҙер лабырлай ине. Әмирәнең аяҡтарына бармаҡ осо менән ымлауына ҡарағанда, итек димләйҙер. Алһа тиҙерәк алһын, көҙгө елдәр иҫә, ҡыҙыҡайҙың аяғында, ысынлап та, осһоҙло ғына ширпотреб, буғай. Машинаһының артҡы ишеген аса һалып, өлгөр егет тиҙ генә Әмирәгә ярарлыҡ ҡупшы ғына аяҡ кейеме һайлашты. Әмирә менән Сәйҙә бирегә ынтылғанда, сауҙагәр ҡай араладыр үҙенең эргәһенә килгән гаишник менән күреште. Йылмайып һөйләшеүҙәренә ҡарағанда, әлектән таныш кеүектәр.

– Тә-әк, йәтешләп кенә ултырышығыҙ, – тине Солтан ярым асыҡ кабина тәҙрәһенән. – Юл кешеһенең юлда булғаны яҡшы.

– Әмирәгә көҙгө итек алып ебәрҙек, – тигән булды Сәйҙә, ҙур эш башҡарғандай. Бурашта саҡта бынау һатыусыны күрмәгәндер. Күрмәһә лә бәхил.

– Бик мәслихәт, ҡарап торҙом, тәк, – Солтан моторын ҡабыҙырға ғына уҡталғайны, честь биреп, гаишник пәйҙә булды. Лейтенантты «Москвич»та баланы бәйләүгес мендәр булмауы ҡыҙыҡһындырған, имеш. Хажиморатовичка хатта машинаһының да, приюттан таныштыу-аралашыу өсөн алып ҡайтып барған йәтимәктең дә, үҙҙәренең дә танытма-фәләндәрен күрһәтергә тура килде. Кем балаһын аҫырауға аласаҡтарын тоҫмаллапмы, мыҫҡыл ҡатыш сәйерһенеп йылмайғандай ҙа итте, мәгәр машиналағылар быны һиҙмәне. Ғөмүмән, Сәйҙә бая килендәше менән әрепләшеүгә тартым һөйләшеүен Солтанға, ә Солтан бесәндән алдараҡ бынауы кәпәренке кәйефле алыпһатарҙан

ҡәһәрле суррогат алыуын белгертмәҫкә ҡарар иткәйне. Ана, күҙенә салынған бер кешене машинаһына әйҙәй, тегене-быны күрһәтә, мәгәр һатып алыусы бигүк табылмай һымаҡ.

Әҙәм рәтле булып сыҡты лейтенант. Бөтәһен дә аңланы, хәйерле юл теләне лә, ниҙер иҫенә төшөп, аҡлы-ҡаралы таяҡсаһын сауҙагәргә болғаны: кил әле бирегә, һүҙ бар. «Газель» будкаһын бикләмәй генә яба һалып, тегеһе килеп тә етте.

– Әлфәрит, быһа абзыҡайҙар Денисовка яғына китә. «Москвич» әҙ-мәҙ проблемалы икән, һиңә юл ыңғай, буғай, бергәрәк барырһығыҙ...

– Есть, иптәш лейтенант, бергәрәк барырға, если надо – буксирға алырға: буксирға ла такса бар, – тине алыпһатар ирәйеп, шунан, лейтенанттың «нежелательно!» тигәнен ҡолағына элмәгәндәй, ҡулдарын йәйҙе. – Бәрәс, абыйҙы таныйым да... эшләпәһенән. Бураштанмы? Нисек унда минең Рәшит служак? Инеп сығам иртәгәләрҙә, йомош та бар үҙендә.

Уртын ҡыҫып, ләм-мим өндәшмәйсә, Солтан моторын ҡабыҙҙы. Уңарсы гаишник честь биреп хушлашты ла бирегә елдергән өс-дүрт КамАз колоннаһын туктатырға ыңғайланы.

Эй, ҡыуҙы аулаҡ юлдан Солтан машинаһын! Рәхәт, Әмирә иҙерәп йоҡлай, Сәйҙәһе лә ойоп килә. «Буксирға...» тисе мөртәт, кем әле, Әлфәрит. Тағылып йөрөмәккә, төшөп ҡалғандарҙан түгел Хажиморатович. Тарих дәресендә легендар полководецтар биографияһын мауыҡтырғыс һөйләгәнгә, үҙенә бигүк әйтмәй генә, элегерәк Палкауадис тип тә йөрөткәндәр. Әйтәгүр, алама ҡушамат түгел дәһә.

Яҡты күҙҙә яҡынайыу хәйерле Бураҡҡа. Урлап алып ҡайтмай ҙаһа Әмирәне, изге ниәт менән апҡайта. Әҙ-мәҙ ләститкә сумырҙар инде, нисауа, унынына ғына түҙерҙәр.

Динестән Канакрад аша һуктырғанда нисек булыр икән? Турараҡ, ләкин ҡурҡынысыраҡ. Уҙғандағы ямғыр йырындарҙы буйтым шыйыҡлағандыр, ай-һай. Урау булһа ла юл яҡшы, тигәндәр, әҙәм йөрөрлөк Сасын аша имен-аман уҙырға яҙһын. Әмирә менән иң тәүҙә Зөлфиә танышыр. Баланы бала ҡаршылауын, моғайын, хәйерлегә генә юрарға кәрәктер.

*Көн күрмәгән көн күрһә —*
*Көндөҙ сыра яндырыр.*
*Ат күрмәгән ат күрһә —*
*Тауҙан тауға саптырыр.*

Ана ниндәй шиғри мәҡәлдәре лә бар башҡорттоң. Бала күрмәгән, бала баҡмаған кешеләрме ни Сәйҙә менән Солтан. Быһа тигән итеп тәрбиәләрҙәр «уҫалыраҡ» Әмирәне, Алла бойорһа!

Хужаһы Хажиморатовичтың үҙе һымаҡ, хаҡлы ял хаҡында «уйлаша» башлаған «Москвич» Сасынды имен-аман уҙып кит-

те. Динестә Сәйҙә пирожный-маҙар, йогурт ҡына алып сыҡҡас балаға, бөтөнләй һил һырт юлына төшөп алдылар. Байыуға иртәсел сентябрь ҡояшы шәфәҡҡә яҡынлай, һанда-һаяҡ ағаслыҡтар эргәһенән үткәндә йүкә, ҡайын, уҫаҡ сатыр-ботаҡтары сағыу нурҙарҙан ут ҡапҡандай гөлт яҡтырып ҡуя, ә бына ылыҫ йәйектәрен яҡтылыҡ көлтәләре бигүк тишә һалмай, һин дә мин күләгәләнеп, һелкенмәй ҙә ултырып ҡала шыршылар. Юл айырсаһында аҙға ғына туҡтап, Солтан Сәйҙә менән Әмирәгә таныш тауҙарҙы барланы, хатта бәғзе урындарҙы исеме менән атаны.

– Ана инде Күлбар һырты. Уң яғында – Сасын, һулаҡайҙа – Бураш...

4

Тап ошо минуттарҙа Лира Кәримова ығышып-бәүелеп барған трамвайҙа Өфө вокзалына юлланғайны. Бәғзе йорттарҙа, баҙар баштарында «Сәскә ат, Башҡортостан!», «Мәңге йәшә, баш ҡалам!» кеүек ҡасандыр идеология фронтын етәкләгән популистарҙың ижад емеше һаналған, кемгә нисектер, мәгәр тоҙһоҙ тойолған лозунгылар бисара студентканы сәләмләгәндәй түгел, киреһенсә, йәнен үртәгәндәй аҡырайышып ҡала. Вокзалда иһә, билдәле, «...450» һандары рәхимле ҡаршылай. Бында иҫһуштар китмәле реконструкция йәйелдерелгән.

Ғәҙәттә, вокзалда ҡайҙалыр китәләр, ҡайҙандыр ҡайталар. Ә ул китмәй ҙә, ҡайтмай ҙа – һыйыныу эҙләй. Ҡайҙан белә Лира вокзалда төн уҙғарырға мөмкинлекте? Китапта яҙалар, киноларҙа күрһәтәләр, юлаусылар һөйләй – станцияларҙа хәрәкәт тәүлек әйләнәһенә туҡталмай, сөнки вокзал ишектәре ябылмай. Кемдәндер ишетте: тимер юл вокзалында хәҙер ҡуналҡа асҡандар, хаҡы артыҡ тешләшмәй, постель бирелә...

Кескәйерәк казарма ише, имеш. Һәй, бер студентканың атаһы, Силәбе яғынан һуңлап килеп төшкән дә, төнө менән ҡайҙа бара беләм, такси ҡиммәт – яттым да йоҡланым вокзальный гостинкала, тип һөйләне ләһә ятаҡтың Лираларға ҡаршы бүлмәһендә.

Бәхетенә, буш урын бар ине. Ҡараңғы ныҡлап төшөүгә Лира койка алып ауғайны. Иртәрәк төнәп, иртәрәк тороу фарыз – иртәгә салбары әллә шундай, әллә үҙе үтекләмәй кейергә яратҡан профессор ауыр ғына фәндән ҡаты ғына һынау аласаҡ.

Иртүк ятыуҙан ни фәтүә? Йоҡо алмай ыҙалата. Ярай ҙа аяҡтарын ял алдыра. Гелән ҡыбырлап, гөмбөрләп торған кеүек вокзал. Асылда ла шулай инде. Эҫе лә, һыуыҡ та түгел. Бөтә кешеләр ҙә ят, бөтә кешеләргә лә бында уртаҡ исем – юлаусы. Ә ул... юлаусы түгел, ул – бары тик төн уҙғарыусы, ҡуныусы, ул – тубынан ситкә тибелгән ҡошсоҡ хәлендә.

Ауыр үтә ағымдағы көнө. Уғата шәфҡәтһеҙ, хатта стреслы уҙа. Йә, Хаҡ Тәғәлә ҡайһы өләсәһенең гонаһтары өсөн язалата әле Лираны?

...Яйы тура килгән һайын Лира һүҙе үтерҙәй табиптарға «касан ебәрәһегеҙ?» кеүегерәк һорау менән мыжыны, ә башҡаларҙан йәшерәк булғастын, «миякинский»ҙың теңкәһенә иркенләберәк тейҙе. Ниһайәт, уны сығарырға рөхсәт бирелде. Ул-был дауахана волокитаһы менән төш етте хатта. Әсәһен дә, Данирҙы ла, әхирәттәрен дә борсоп торманы, ятаҡҡа үҙе генә ҡайтып инергә булып, больничныйына нимә яҙғандарын да аңғарманы. Телдән иҫкәрттеләр: профком аша санаторийға ебәреүҙәре бар, дауалау курсы шунда бөтәсәк, көнөнә – өс шешә ҡымыҙ, фәлән дә фәсмәтән. Әллә ҡайҙарға сабырға әҙер ине Лира әлеге ерәткән урындан. Әллә ашығып ташланымы Лира? Ашыҡмаһа, хлорка еҫе аңҡыған простыняға төрөнөп, меҫкен генә ятмаҫ ине, бәлки. Һы-ы, тегенән иҫән-һау ҡотолоп сығыуы – яҙмыштағы үҙе бер ҡаҙаныш, үҙе бер еңеү, хәлбуки, бер үк һыуға ҡабат суммауың хәйерле. Иртәгә иртүк «отработка» бирер ҙә барып ҡайтыр дауаханаға, анығыраҡ яҙылған справка юллап. Кәрәкһә, декан урынбаҫары Сулпан Байрасовичҡа инер, Клара Булатовна, эй, бутала, Алия Ғазиевна әйтте бит Бурашҡа килгәнендә. Нимә тине? «Һәйбәт кеше икән замдеканығыҙ Сулпан Байрасович. Лира Кәримованың адресы кәрәк, тигәйнем, ҡыҙҙарын йүгертеп яҙып бирҙе, телефонына районнан Клара подружкамды тоташтырҙы...» Кеше һәйбәт икән, аҙағынаса һәйбәт булырға тейеш. Моғайын, Лираның хәлен аңлар һәм ярҙам ҡулын һуҙыр, йәғни, ордер тултырып тоттороп.

Юғиһә, ана, ятаҡта йәшәтмәҫкә итәләр. Төптө хаталаналар. Уның зәхмәте... булған да бөткән, «асыҡ формала» булмаған, ябыҡ формала... Әтеү ҡаж да ҡож ятыр ине әле йүткереп, йәғни «чахнуть» итеп... Уйламайым тиһә лә, ямаҡай уйҙар тығыла шул меҫкен башҡайына.

...Вахтала беренсе курс студенттары ултыра ине, ҙур пакет тотҡан Лиранан:

– Һеҙгә кем кәрәк? Кемгә? – тип һоранылар. Танымайҙар, бик әйбәт.

– Бишенсе курстан мин, – тине Лира, студбилетының ҡайҙалығын иҫләргә тырышып. Яуабын, ятаҡтан сығып барышлай аҙға ғына туҡталып, дүртенсе курс егете йөпләне:

– Үткәрегеҙ, ул бында йәшәй, бишенсе курстан...

Үтеп китте. Фойела ла, икенсе ҡатҡа күтәрелгәндә лә үҙенекеләр әллә ни осраманы. Зачетка әҙерләнәләрҙер, ҡала ҡыҙыраларҙыр. Башҡа курстан танығандар һаулыҡ һораша Лиранан, күҙгә лә элмәй маташҡандары бар. Әйтәгүр, биш ай самаһы аяҡ баҫҡаны юҡ бит бында.

Бүлмәһенең ишеген шаҡыны. «Да-да. Войдите!» Инде. Көтмәгәндер Элина – күҙе шар булды, сәләмде һалҡын ғына алды. Лираның койкаһында, бәй-бәй, өсөнсө курстанмы, Элинаға яҡташмы, белмәҫһең – аҙ ғына таныш ҡыҙ ҡуш мендәргә терәлеп, йога ҡиәфәтендәрәк дәрес ҡараштырып ултыра. Был ниндәй трагикомедия?! Күңеле ниҙер һиҙенгән Лира туҙынманы, киреһенсә, үҙен тыныс тоторға тырышты. Элина иһә, алыптай кәүҙәһен ҡайҡайтып, ниҙер аңлатырға маташты, сәсәне, кәрәкмәһә лә, тамаҡ ҡырҙы.

– Яҡшылап төшөндөр, мин бөтәһен дә аңлармын, – тине һирәк һипкелдәре саҡ-саҡ ҡыҙара төшкән Лира, тегенең ҡаршыһына уҡ ултырып.

– Ней бит әле, Кәримова, һине бүлмәгә... даже общагала йәшәтмәҫкә ҡушалар.

– Кемдәр? – Лираның ҡапыл шар асылған ике күҙенән, гүйә, йәшкелт осҡондар һибелде.

– Комендант... Профорг... – Элина ҡыйынһынып ҡына һанағас, әхирәте өсөн Лира өҫтәп ҡуйҙы:

– Староста, тиң. Һиңә лә... ҡушылармы? – Балауыҙ һығырға етешкән еренән Лира үҙен тиҙ үк ҡулға алды. – Кәримова тип кенә ебәрәһең, ә? Деловая стала!

Әллә ниндәй кисерештәр менән ултырғыста көйө елһәреп, Элина арҡаһы менән боролдо, өҫтәлдәге дәреслектәрҙе шылдырғыланы. Лираның койкаһын биләгән талибә иһә ҡымшанмай ҙа. Уны ҡыуыуҙан фәтүә юҡ. Урынды бушатмаҫҡа, ботонан һөйрәкләһәң, яр һалырға, теше-тырнағы менән ҡаршылашырға хаҡы бар, ҡара, хатта быға әҙер ҙә кеүек. Хәйер, уның ни ғәйебе?

– Мин ауырымайым, һеҙ ауырыйһығыҙ... – Кәримова быны әрнеү ҡатыш рәнйеш менән әйтте, үҙен йәберләгәндәрҙең сиренә лә ишара яһаны. – Әғүәсе, йәғни ҡотҡо таратыусы, тиҙәр беҙҙең ауылда һеҙҙең кеүектәрҙе, господа душевнобольныйы!

– Старостаға йә кураторға әйт был һүҙеңде! – Элинаның хәбәре битен ҡаплаған ике яҫы усы араһынан һарҡылды.

Өндәшмәне Лира. Ниҙер уйлап, дауаханала ҡулланған ваҡ-төйәк әйбер менән тыңҡысланған пакетынан сумочкаһын һурып алды, унда-бында ҡаранды, шунан стенаға ҡуша әтмәләнгән шифоньерҙың иң аҫҡы, әрһеҙ ҡаралты һаҡланған бүлкәйешенә тыҡҡас, йоҡа курткаһы төймәләрен арлы-бирле ҡаптырҙы ла, үҙен сабыр, тыныс, хатта ки эшлекле халәттә тоторға тырышыбыраҡ, коридорҙан атланы. Ни әйтер Светлана? Ишеге бикле. Кемдер сәләм бирәп уҙҙы, Лира быны ла һиҙмәне. «Автошколаға йөрөйҙөр» – быны ла ишетмәне. Ярым подвалдағы комендантты күреү фарыз. Һиңә кәрәк саҡта уныһы ла ғәйеп. Ниндәй йомош менән аҫҡа төшөүен белгән кеүек, уҙып барышлай эргәһенә оло йәштәрҙәге кастелянша мәрйә туҡталды.

– А-а, Каримова, почему-то не положено выдавать тебе постельные принадлежности...

– Лучше скажите прямо: положено, да не велено! Есть разница?

– Боже упаси, милая! Выздоравливай скорей и продолжай учебу.

– На здоровье не жалуюсь, спасибо, – Йомшарғанын һиҙмәй ҙә ҡалды ҡыҙ. – А где она, наша всемогущая?

– Какое-то совещание у проректора, вот и пошла, вряд ли сегодня появится. Приходи завтра пораньше – застанешь.

– С утра у нас серьезный зачет! – «Әл дә генә уҡыуыма зыян теймәй» тигән ҡиәфәттә Лира курткаһының башлығын күперем сәсенә ҡапланы ла, сумочкаһын беләгенә элеп, берәүгә лә ҡарамай-нитмәй, кире беренсе ҡатҡа күтәрелде.

Эсенә йылы йүгерҙе: вахтала райондашы Сәмерханов Урал ултыра. Эйе, Сәмерханов шул фамилияһы, исеме – Айрат, ә юк, юк, Урал бит. Маладис, уҡырға ингән, ҡотлағанда ла килешер, ни тиһәң дә, уның кәңәшен тотоп һайламаны микән был вузды? Бәй, бая Лира ятаҡҡа кергән сағында күренмәй ине ләһә дежурҙа. Беренсе курстағыларҙы дежурҙа саҡта тегендә-бында йомошҡа ла йүгертә торғандар – Лира бында уҙғанда берәй яры йөрөп ҡалған, буғай. Әле, ана, ҡалай эшем эйәһеләй ултырған була. Уның атаһы район хакимиәтендә ҙур чиновник, шикелле. Ғәҙәттә, түрә-ғара балалары ятаҡта түгел, «тәртиплерәк, туйыбыраҡ йәшәр өсөн», түләү хаҡына ҡарамай, квартираларҙа ятып, коллективизм тигәндәрен ситкәрәк ҡуйып уҡый торған. Бәғзе начальниктар, бигерәк тә киләсәктә шым ғына Өфөгә күсергә ынтылғандар, алдан уҡ хәстәрләп ҡуйғылай, имеш, «уфимский» торлаҡтарын. Ә Урал, тимәк, ятаҡҡа урынлашҡан. Күрешергәме, юҡмы? Килешмәҫ, бынауы имәнес хәлендә... Мин бында артыҡ кеше тип, ебеп төшөүе лә бар эскерһеҙ егеткәй алдында. Әл дә бая тап итмәгән. Яҡташ бит әле, йәмһеҙ хәбәрҙең райүҙәк, артабан Бураш тирәһенә лә аяҡланыуы бик мөмкин. Һәм Лира ашыҡҡан кешеләй урамға – билдәһеҙлеккә атланы. Аҙымдарын трамвай-троллейбус туҡталышына етәрәк кенә яйлатты.

Ҡайҙа барырға? Кемгә инеп ҡунырға? Черниковкалағы Өммөгөлсөм инәкәсенә барыр ине, адресын белмәй. Ауылға ҡайтҡанында, «килеп йөрөң, бәпкәм» тигәйне лә, әбекәй... Бурашҡа шылтыратһа? Ҡуйсы, күпме борсорға була әсәкәйен!

Вокзалға! «Ну, поехали!» тигән Гагарин йыһанға осҡанда, ә Лираға йыһан кәрәкмәй...

Бына нисек килеп юлыҡты ул вокзал ҡунаҡханына. Юҡ-бар уйҙарға тарымай тор әле, ҡыҙый, иртәгә лә көн бар. Иртәгә барыһы ла асыҡланыр. Деканат тигән дә структура бар, ундағылар, моғайын, хәленә инерҙәр.

...Себер вуздарының береһен бөтөргәс, шунда укытканда диссертация яклап, өйләнеп, ғаилә тормошонан уңмайса Өфөгә ҡайткан профессор атаклы ғына журналистың берҙән-бер улы ине. Атаһын ерләгәс, әсәһе менән яландай киң фатирҙы бүлешеп, бер үк кварталда айырым йәшәп яталар хәҙер. Сәсенә сал йүгерһә лә, тәҫкә-башка таушалмаған ғалим ниңәлер ҡабат өйләнергә ашыкмаған кеүек. Балалары булмаған, бәлки, шунлыктан айырылышкандыр ҙа. Ҡатыны тулһеҙме, үҙе биҙәүме — Хоҙай ғына белә. Улай тиһәң, ҡатын-ҡыҙға бөтөнләй битараф был, тип тә әйтмәҫһең, мут ҡына күҙ ата, шук ҡына һүҙ ҡата, хатта бәғзе талибәләргә тыныс ҡына ҡарай алмай. «Ниңә өйләнмәйһең, әллә..?» — Пикниктамы, субботниктамы аулаклап үтә шәхсән һорау сәпәгән Сулпан Байрасовичка, имеш, «статистик» яуап биргән: «Рәсәйҙә хәҙер балаһыҙ ирле-ҡатынлылар егерме миллиондан ашыу. Мин өйләндениһәм, ошо армия бары ҙураясак ҡына». Бер кем дә шаһит булмаған был һөйләшеүгә. Бәс, ә ниңә был хакта Светлана белә? Светлана Элинаға әйткән, Элина, ләститте ене һөймәһә лә, Лираға әйтеп ыскындырҙы. Сулпан Байрасович деканаттағы берәйһенә, мәҫәлән, методисына сиселгәндер, ә уныһы — Светиктың серҙәше. Йүкә телефон ошолай тоташа.

Данирға шылтыратһа? Кәрәкмәҫ. Ул да шылтыратмай торһон. Эше лә күп, буғай. Ярты ставкаға эшләп йөрөгән фирмаларында ҡаты тикшереү бара, тиме, шуға документацияларын әүеш-тәүеш итешәләр.

Йокоһо килмәгәс килмәй инде, ни хәл итәһең. И-х, былай ятырын белһә, Данир укырға биреп торған «Аҡыл дәфтәре»н ятакта ҡалдырмаҫ ине. Данирҙың өләсәйенән ҡалған һынамыштар, йырҙар, мәкәл-әйтемдәр ҡалай ҡыҙык, ҡалай фәһемле! Әле бына шуларҙы укыштырып ятыр ҙа ойор ҙа китер ине. Ойорға кәрәк. Ял кәрәк. Зачетта һынатмаҫка кәрәк.

* * *

Көндәр бигүк алама түгел. Ямғырҙар бер яуа ла бер тына, ер тиҙ үк кибә. Бөгәсә таңға бөрсөк-бөрсөк ҡар һибәләне, уныһы ла төшкә тиклем еләп-һеңеп бөттө. Тәүге ҡар ятманымы, ҡышка ҡырк көн ҡала торған, тиҙәр, әлләсе, был һынамыштың тура килмәгән миҙгелдәре лә осрай.

...Йокоһонан сак уянған Әмирә берауык ятһырап, өйгә инергә шыртлаңкырап торҙо. Ҡайҙа килтерҙеләр үҙен? Көндөҙгө ише «Кәрәгең бар ине!» тиеүсе булмаҫмы? Ә-һә, үҙе һымағырак ҡыҙыкай упайып тора тупһала, ул да аҫырау бала микән? Күренмәй ине ләһә приютта.

– Бына, Әмирә, һине Зөлфиә көтөп торған, аш һалып тороп. Танышырһығыҙ яйлап, бергә уйнарһығыҙ. – Бығаса йомоҡ һанаған Сәйҙәнең һөйләнеүе, Зәриәнән бигерәк, Солтанға танһыҡ тойолдо. – Әйҙүк, балам, ошо өйҙә ҙурайырға яҙһын. Баланы бала ҡаршылауы ҡалай йәтеш!

– Собханалла, Бурашта кеше арта! – тип елкенеүле сәләмләне быларҙы Зәриә.

Зәриә өҫтәл яраштырғансы, Солтан машинаһын ҡуйғансы, Әмирәнең яңы итеген, арлы-бирле әйберҙәрен ейәнсәре Әлфирә оҙон йәй йоҡлап йөрөгән кескәйерәк карауатка өйгәс, Сәйҙә тағы һөйләнде:

– Әмирә бәбкәм, бына, карауатың ошо булыр, мендәреңә ҡаҙ сепейе сигелгән, үҙең оло ҡаҙ булғансы беҙҙең менән йәшә, йәме.

Быны ишеткән Зәриә һүҙ ҡыҫтырҙы:

– Сания ҡортка йәшенә еткәнсе, тиң.

– Ә ниңә, етерһең дә, ивет, ҡыҙым, – тине лә Сәйҙә, шифоньерын асты. – Хәҙер түтәйҙәргә бүләк бирәйек. Өй ҡараштандары, тыңлаштандары өсөн. Бынауҙы бер ҙә кеймәнем, бирҡаһы ла бар, мә, йылы тәнеңдә туҙһын, – Сәйҙә Зәриәгә, еңен еңсә айырып, көлһыу төҫтәге яғаһыҙ свитерын тотторҙо. – Кейәү юбилейҙа бүләк иткәйне лә, тарырак – һиңә таман булыр.

– Бүләкте?.. – Зәриә әйтеп бөтөрмәне.

– Эй ҙә, ырымға ышанып, серетәйемме?

– Рәхмәт, түтәй, матур икән! Балет на льду күрһәтергә можно быныҡ менән ҡышҡы боҙҙа.

– Быныһын, Әмирә ҡыҙым, Зөлфиә апайыңа бир, – кәүҙәгә ҡайтыш булһа ла, Зөлфиә олорак икәнен Сәйҙә баярак, ҡыҙ өйгә ингәс тә, асыҡлағайны.

Әллә Сәйҙә үҙенә бирҙе тип уйланы, әллә уның «апайыңа бир» тигәнде аңғарманы – Әмирә өскә төрөүле бәз күлдәкте яҙып, түшенә терәп ҡараны ла итеге эргәһенә һалды ла ҡуйҙы. Аптырағас, Сәйҙә Зәриәгә шыбырланы:

– Аҡса бирәйем дә, үҙең алырһың әле Олотүҙҙән.

– Доға ҡылайыҡ, Зәпә, бүләктәре өсөн. Теләк әйтәйек: Әмирә Сәйҙә инәкәсеңде силсәүиткә саҡыртмай ғына ҙур үҫһен!

– Уныһы нимә тағы? Ишеткән дә һымаҡмын... – Сәйҙә аптыранды, Зәриәнең ирен сите менән генә йылмайыуына бармаҡ янаны. – Хажиморатович инмәҫ борон һөйләй һал!

– Ҡабатлағандан доға иҫкермәй... Зәбир мәктәптә үк хулиган була, тәмәке менән тотолған бер саҡ анауы-ы... татар абзый директор булған бит, строгий ғына.

– Бар ине, пенсия юллағас, күсеп китте Благзаводҡа. Деүләтеп йәшәйҙәр, ти әле, шунда. Фамилияһы ҡыҫҡаҡ ҡына...

– Чуртыма фамилияһы. Әллә кемдең танауын ҡанатканғамы, шул абзый кабинетына саҡыртҡан Зәбирҙе. Ингән был,

теге әрләй башлаған да: «Анаңды се... се...» тип тик тора икән. Зирәк бит Зәбир. «Әнкәйҙе силсәүиткә саҡыртаңмы?» — тип торам, ти, бәзерәйеп. «Себерәйем» тигәнде әйтергә тартынған шул абзыҡай, ә Зәбир, силсәүиткә саҡыртылғаны булғастын...

Уңарсы, һеңкетә баҫып, ишек бейеклеге Солтан инде өйгә.

— Ана, бәбкәм, эт... дәүатайың да ҡайтты. Әллә ҡыйыш әйттемме?

— Һис тә ҡыйыш түгел: мине дәүатай, һине әней тип йөрөтһөн әйҙә.

— По-бурашски гауарите! — тип йөпләне лә Зәриә, элекке укытыусыларын табынға әйҙүкләне. Аҙаҡ һауыт-һабаны егәрле генә йыуыштырып-йыйыштырғас, Әмирә эргәһендә баҙнатһыҙ ғына уралған ҡыҙына кейенергә ҡушты. Моғайын, атаһы иртәгә, шәмбелә, ҡайтып төшөр. Үткән аҙнала ук, ҡайтам, тип шылтыратҡан моңһоҙ Зәбир.

— Ярай, күрешербеҙ әле, баш-күҙ алайыҡ та, — тип әсәлеҡыҙлыны ҡапҡаға са оҙатып ҡалды хужабикә.

«Күрешербеҙ әле» — Сәйҙә быны бушҡа ғына әйтмәне. Ҡоҙғонтауҙа ук иғтибар итте: йәкшәмбе көн Әмирәнең алтыһы тула. Хатта тәрбиәсе ханым уйынлы-ысынлы мәрәкәләп ҡалды: өс көндән Әмирәнең юбилейын үткәрәһегеҙ инде... Ә ниңә үткәрмәҫкә? Аят уҡытыу ҙа зыян итмәҫ. Зәриәгә, Дилбәргә өндәшер, бәлки, Сара менән Фазылды саҡырыр. Тағы... Күрше Фәнидәгә тауыш итеү ҙә килешер. Етте — вәссәләм. Күрһендәр Әмирәне, белһендәр. Юҡ-бар хәбәр таралғансы. Һәр хәлдә, хәҙер үк кәңәшләшеү хәйерле Солтан менән.

Йәкшәмбелә бәләкәй генә мәжлес харап күңелле уҙҙы.

Телефон аша саҡырыуҙы килештермәй, Әмирәне дәүатайы менән өйҙә ҡалдырып, иртүк Сәйҙә үҙе йөрөп әйләнде саҡыраһы кешеләренә. Тәүҙә Фәнидәгә инеп сыҡты: «Ҡыҙымдың тыуған көнө, төшкөлөккә рәхим ит», — тине. Абруйлы күршеләреңә ник сыпраңламаҡ кәрәк? Баш һелкте Фәнидә. Ҡыҙ бала күренештерә ине ҡапҡа алдарында, Әлфирә тағы килгәндер, ҡалай ҙурайып, ҡалҡыуланып киткән, тип кенә уйлағайны бит әле кисә.

— Тимурыңды ла әйәрт, йәме. Ә Лира?..

— Лира, ней, Уфала инде һаман. Киләһе аҙнала лечениеһы бөтә.

— Вәт, быныһы якшы!

Фәнидәнән һуң Сәйҙә түтәрәк һуҡмаҡтан Дилбәр түтәйҙәренә һуҡтырҙы. Алдан уҡ ишеткәнгәме, бала урынына һөйөндө тегеһе. Зәриә юҡ, кисә бисталкауай зимагуры ҡайтҡан, үҙем генә барам, тип тә ыҫҡындырҙы.

Ҡайтышлай Сәйҙә «Аҡсарлаҡ»ҡа һуғылды. Харап, Надирҙың Эльзаһы, атаһына оҡшап, һаулыҡ та ҡушмаған була. Һаман

бәләле ала һыйырҙың шаукымы инде. Һыр бирмәй генә, бының алаһы әйберен алып сығып киткәс кенә иҫәнләшеп Сараға өндәште Сәйҙә.

– Сара түтәй, Фазыл абый менән беҙгә төшлөккә рәхим итегеҙсе...

Шүрлек менән сутланған стенаны айырған тар ғына араүыҡтан ҡабырғаһы менән сығышлай, Сара рыяһыҙ бумпылданы.

– Бәс-сәк, уҡытыусыларса еффәрәһең, әй! Кәк рәхим итмәҫкә, итәбеҙсе. Йүгереп барабыҙ бәпәй күрмәгә. Иҫән-һау балаларың өҫтөнә эсвижей бәпәй алырға йөрьәт... – Ишеткәндәр, тип уйланы Сәйҙә... «Бураш яңылыҡтары» иң тәүҙә ошо тирәлә өйөрөлөп ҡанатлана лаһа. Ишетһендәр ҙә, беҙ ҡапсыҡта ятмаҫ инде. – Түлке абыйың атруп (отруб, пай) ҡарарға киткәйне, һыуыҡта кеше кәмә һорамаҫ әле, тип. Ней Фасилым өйҙә юҡ. Бастуй, Биргадир урамына ҡунаҡ килгән. Ҡунаҡ тип, Камиланың әнеһе... теге, Рәшитте ерләшкән Әбдерәхим әфисер улы менән ҡайтҡан. Майур, тиме. Бастуй, һинең күҙең үткерерәк... Ы-һы, Эльза әле кәнфит алды – кәнде ағайҙарын ҡунаҡҡа дәшергә ҡыялалыр. Ирәйеп, упсы өндәшмәгән була. Әйҙә әле, әйҙә...

Сара лавка ишеген шар асыҡ ҡалдырып, бер ни аңламаған Сәйҙәне тупаҡ ярҙың ҡалҡыуыраҡ төшөнә эйәртте.

– Камиланың әфисәр блимәнниге Эльзаларҙан ярты хаҡҡа һарыҡ алған да Надирҙың а-анауҙа, ҡара әле, ҡара, түңкәреүле кәмәһе эргәһендә шашлыҡ өтәләр. Мужыт, абыйың шундалыр? Айыҡ ҡына йөрөй ошо арала, сабаҡы, темеҫкенеп, барҙыюлыҡты шуларға... Бригадиры дәшмәҫ, Әбдерахы дәштеме, атказ бирмәҫ майгүҙ нәрҫә, мәйтәм.

– Нисегерәк кейенгән Фазыл абый?

– Фасилдың салдатский нәҫтәһен әрһеҙгә кейә һаман.

Ағас рәтен белгән фуфайкалы Надирҙың усағы ҡыҙыу янғанға оҡшай. Плащ кейгәне, моғайын, Әбдерәхимдер, ҡышҡы хәрби формалағыһы, әлбиттә, – улы. Надир бабайы һымағыраҡ тыңҡыш, яурынтыҡ икән уныһы. Иҙел ағыштарын фотоға төшөрөп тә ала, шикелле. Ике ҡатын күҙгә салына, бала-саға ырғандаша.

– Лосманың унда һерәндәмәй... – тине Сараға Сәйҙә Фазылды һис битәрләмәгән ҡиәфәттә.

– Забиска эләйем әле лавкама. «Фазыл – урманда, Фасил – Уфала, Сара – ҡунаҡта» тип. Эй, кеше уҡып аптырар ине.

Тап шул саҡ – әллә шым ғына яҡынайып, ишетеп торған – ҡатындарҙы тертләтеп, Фазылдың тауышы көр вә кәмитле яңғыраны:

– Ыстарший Лосман Янбаев эргәгеҙҙә һерәндәй, – Фазыл әле генә урмандан ҡырҡып алып ҡайтҡан метрҙан ашыу ағасты

ҡапҡаһына һөйәне. — Миләштән һаплайым көрәкте, әтеү мәгәзинней йә һына, йә ярыла. Киптеме, был ғәләмәт бешегә әйләнә...

Йомошо хәл ителгән кешеләй, Сәйҙә, йәнә юлын турараҡ тарттырмаҡсы; ярҙары күп тапауҙан саңдауҙы хәтерләткән Бураш йырҙаһына ыңғайланы.

— Көттөрмәгеҙ...

— Әбизәтелне барабыҙ, шту һин, — Фазыл өсөн дә яуапланы Сара һәм кәңәшләшер өсөн иренә яҡынайҙы. — Нимә тотоп барайыҡ икән?

— Ҡайҙа?

Һорауға — һорау: Сәйҙәнең ниәтен кәмәсегә бәйнә-бәйнә аңлатырға тура килде лавкасыға.

— Тәки апҡайтҡандар, вәт, әй, тәүәккәл әҙәмдәр... буш ҡул инмәйек, йә торараҡ үҙҙәренә тауыш итербеҙ.

— Шулайтырбыҙ. Кейем-һалым да күп, — тип ризалашты ҡатыны.

— Иҫке-моҫҡоно тотторoу йәпһеҙ. Алырбыҙ аръяҡтан, — Фазыл асмаҡ өсөн ҡапҡа тотҡаһына үрелгән ерсәнән танауын сирҙы. — Төтөн еҫеме? Ә-ә... Әбдерәхим менән һаулашҡайныҡ ҡойма аша. Шашлыҡ ауыҙ итерһең, тип ҡалғайны.

— Менә ауыҙыңа! — Сара уҡлау йыуанлығы һалмаҡ киҫкәне ҡулына аймаңы. — Теүәтәй кейәһең хәҙер тәһәрәтләнеп тороп... Ҫуғып йығам мынау нәҫтә менән!

— Кәнде шуға әшкинә инде был һаплыҡ. Ҡыукарағаска етә яҙып апҡайтҡан булам бит әле. — Ирле-ҡатынлы, күңелсәк кенә атлап, донъяларына уҙҙылар. Ысындырмы, әлегерәк Сара, оҙаҡ ләх яттымы ире, таяҡ менән төйгөсләгән, тиҙәр.

— Зыярат яғында мәрәкәнең шаһиты булдым әле, — тине өҫтөн һалған арала Фазыл, көлөмһөрәп. — Надирҙың бейәһен Эльзаның быҙауы имеп тора. Эйәһе уҫал булһа ла, бейәһе зерә йыуаш икән.

— Кеше араһында юҡ-бар бытылдап ҡуйма, — тип киҫәтте Фазылын Сара. — Дасатлы нәрҫә Надир, имгәтә ҫуғып.

— Күмәк кешене йыялармы ни Солтандар?

— Низнай, һорашып торманым. Ә-ә, Дилбәр түтәй яғына уҙғайны бая Сәйҙә, Эльза лавканы асырғанда...

— Кисә пушты тараткан ҡатынҡай менән бергә апсыҡтым аръяҡҡа Зәриәне. Өндәшмәҫ кенә булып китқәнсе... Зөлфиәһе лә күренмәне.

— Зәбир ҡайтҡан. Мужыт, Дипутат алып ҡалғандыр Зәпәне. Бәпәй алдында һүгенәһегеҙ, тип. Бурыс аҡсаларын ҡайтарып бирһәләр ярар ине. Брасентлап тороп расбиска...

— Ах, шул расписканды! — Фазыл артыҡ ҡуҙғымай ғына, тыштағы һыуы һыуынған йыуынғысты хушһынмай, ҡырыныр-сайыныр өсөн мунса яғына ыңғайланы.

Түңәрәкләп ултырған мәжлестә тәүҙә «Әл-Фатиха» сүрәһе уҡылды, Әмирә хаҡына изге теләктәр тапшырылды, уға арлы-бирле бүләктәр тотторолдо. Балалар бәләкәй өҫтәлдә баллы-майлы ҡоймаҡты тиҙ генә ҡапҡылап, кейенешеп верандаға сыҡтылар ҙа Әлфирәнең етемһерәгән тәтәйҙәре менән уйнарға керештеләр. Ололар иһә ашана-көйшәнә ғәҙәти әңгәмә ҡорҙо. Тәүҙә ер бүлеү мәсьәләһен тылҡыныλар.

– Пай ҙа пай тип, эй, ҡужҡырҙыҡ та бер килке, тымдыҡ та ҡуйҙыҡ...

– Закондар хөрт үтәлә шул, ни хәл итмәк кәрәк.

Тора-бара Бураш яҙмышы ла уртаға һалынды.

– Берәй кәсеп асмаһалар, тәки кәнискә бара беҙҙең меҫкен ауыл, – тип көйәләнде Дипутат. – Һин, Солтан туған, халыҡтан наказ-фәлән, имза йыйып тапшырһаңсы юғары оргындарға.

– Ярар, Дилбәр Исхаҡовна, уйлармын.

– Һин уйлама, һин яҙ... – тине ҡорҙашына Фазыл, түбәһендәге түбәтәйен шылдырғылап.

– Фәрештәләрҙең амин тигән сағына тура килер, мужыт, яҙғаның. – Сара ла һиммәтле генә һүҙ ҡыҫтырмаҡсы. Фәнидә генә хәбәргә ҡыҫылмай, уйсан ғына ултырыуын белә.

– Ә ниңә, доға ҡылып ҡына яҙһаң?! – Дилбәрҙең хәбәренә Фазыл көлөмһөрәп ебәрҙе:

– Доға ҡылған камунислар аҙым һайын хәҙер, иллә толку мало. Бына мин, Дилбәр түтәйем, һин әпәр итмәгән сағыңда лутшыраҡ йәшәнек, шикелле, тип тә уйлайым әле ҡай ваҡыт. Элек сасындар...

Дилбәр яулыҡ остарын рәтләштереп, төҫһөҙ ирендәрен бөрөштөрөп һыҡраңғандай итте:

– Шакировты Рәхимов туған алыштырған заман эләкте дипутатлыҡ срогыма. Әлләсе... Дажы банкитларҙа әпәр иттем – берәү ҙә ҡырын ҡараманы.

– А-ба, нужәли бергә ашап-эскәнең булды?

– Юҡ та. Урманшин перауай сағында ултырҙаш иткеләне, шуны әйтәм дәһә.

– Быныһына ышанам. – Юҡҡа-барға бәйләнсегерәк Фазыл ҡулъяулығы менән ауыҙ-моронон һыпырғыланы. – Бигерәк ҙурайып киткәйне шул компартия. Эте лә, бете лә портфелгә талашты.

– Хәҙер талашмайҙармы? – тип баҫалҡы ғына йылмайҙы Хажиморатович.

– Эй шошоно! Айыҡ көйө ыспорлашмаһаң, исемең ҡаламы? – Сара сарылдамай ғына ирен битәрләне. – Һалмауыр етерлек ул ҡабаҡ башында ла!

– Үҙебеҙҙең камунисларҙы яманламайым да! – тип аҡланды урынһыҙ тәнҡите өсөн Фазыл һәм ҡапыл тәмәкегә һыуһағанын

тойҙо.—Биғәйбә... Ә бына бер ҡыҙыҡ: имеш, Дилбәр түтәй райкомда һорашҡан икән, туалет бармы, тип, депутаттарға айырым туалет юҡ әле, тигәндәр.

—Көлмә, Фазыл, эшләнем дә, почетын да күрелде,—тине Дилбәр, көрһөнөп.

Фәнидә хужаларға ипле генә рәхмәт күндереп, Сәйҙә Тимурына атап биргән күстәнәстәрҙән баш тартмайса, башҡаларҙан алдараҡ ҡайтырға йыйынды. Веранданан Әмирәгә лә, Зөлфиәгә лә берәр бөртөк ҡағыҙлы кәнфит тоттороп үтте агроном ҡатынҡай. Оло ҡапҡа дыңғырлап ябылғас, еңен киймәй генә яурынына пинжәген һалып, Фазыл яңғыҙ ғына, үҙе әйтмешләй, «перекур»ға йүнәлде.

Ҡыҙыҡҡайҙар эргәһенән үтешләй—хәйерлегә булһын, бөгөн икенсе тапҡырға!—мәрәкә, ә юҡ, мәрәкә үк түгел, бәлки, көлкө ҡатыш сәйер тамашаға шаһит булды: әле генә изге теләктәр күндерелгән, ошо арала ғына өр-яңынан кейендерелгән Әмирә, Ҡоҙғонтауҙағы өлкәнерәк ҡоҙғондарҙан күрмәксеме әллә былай ғынамы, кем белә, гәҙәте боҙоҡтормо, бәлки, үҙен дә шулай «һемәйткәндәрә» булғандыр, ҡыҫҡаһы, ҡыйыуһыҙ ғына, дивандың ситендә генә тауышы сыҡмаған уйынсыҡ пианино баҫҡыслап маташҡан Зөлфиәнең ауыҙынан ашалып бөтмәгән кәнфитте бармағы менән тартып сығарҙы ла... үҙенекенә тыҡты.

Уф, Аллам! Тәмәкенең ләззәтен юғалтып, ҡайҙан ғына ҡараны, ҡайҙан ғына күреп ҡалды. Бәлә генә, ыҙа ғына булмағайы етем быҙау күршеләренә. Ләкин Фазыл кире ингәс тә был хаҡта өндәшмәүҙе хуп күрҙе.

Өйҙәгеләр Биргадир урамындағы яңылыҡтарҙы барлай ине.

—Кисә Камиланың йорт-ҡураһын ныҡытышҡан, ти, әфисәре, Рәшит мәрхүмдең әрһеҙ эсписовкаларын кейеп тороп... Кем әле исеме, хәйерһеҙ...

—Руслан,—тине кемдер ҡыҫҡырыбыраҡ.

—Матур ҙаһа исеме, башҡортса,—тигәйне Сара белемле кешеләй, уны Солтан төҙәтте:

—Башҡортса түгел дә, Иран, Туран яҡтарынан таралған. Аталы-уллы шаһтарҙы Рөстәм, Руслан тип йөрөткәндәр.

—Год за полтора—һыуыҡ яҡта служить итә Руслан. Үҙен күрмәнем, атаһы әйтә. Стажы минимальный военный пенсийәгә етә, тиме.—Яңыртҡан сәйен һемерә-һемерә һөйләнде Фазыл.—Ҡайғыһы ҙур икән ул егеттең дә: өс аҙна элек кенә ҡатыны үлгән... Матурлап ерләгәндәр. Пашти ике айлыҡ быйылғы отпускыһын биргәндәр.

—Рәшит мәрхүмдең дә, ана, ҡырҡына ике аҙна ғына ҡала. Әбдерәхимдең үтенесе тиһәң дә була, үҙемдең дә ниәтем ҡушҡанса, шөкөр, яҙлыҡмай көн дә ясин сығам әле.

## 5

Лира үҙен йоко алмау сәбәптәрен тәфсирләп асыкланы. Берҙән... нисек сығып киткән дауахананан, шул килеш, тревогаға әҙер ғәскәриҙәй ята. Сисеү фарыз йоҡа, тәне күнекмәгән осһоҙло джинсыны. Өҫтәүенә, бер-берeңдән йәпһеҙләнер урыны түгел. Һәр кемдә – юл ҡайғыһы. Бәғзеләргә билет етмәгән, икенселәренең командировка мәшәҡәттәре теүәлләнмәгән. Сирләшкәлеге төҫөнә сыҡҡан мәрйә дауаханаға һуңлаған. Балаҡатай яғынан, буғай, мөйөштәге койкала кемгәлер һыкранып-һукранып зарын һөйләй: «Йә, иртәгә сентябрҙең утыҙы, шәмбе... Эшем бешһә ярар ине. Юлы киммәт, дарыуы ла. Дарыуҙы алдап һатҡан мафияның үҙенә ашатырға ине таблеткаларын. Сталин юҡ, э-эх... Һаулыҡты һатып алып булмай, тиҙәр. Була – аҡсаң булһа! Тишек ҡолағыңды ла ямайҙар, кәкере аяғыңды ла төҙәтәләр, бөкөрөңдө турайталар...» Туғандары ла, таныштары ла юҡ икән ҡалала. Ундайҙарға ҡолаҡ һалырға... Лира үҙе ялҡып бөткән сир-сор ғәләмәттәренән. Үҙенең дә миллионлы Өфөлә морон төртөр яҡыны юҡ әлегә.

Ҡытыршы одеялы аҫтында көйәләнде ҡыҙ. Мендәр аҫтынан сәғәтен ҡапшап алды – ҡараңғы, уктары йүнләп абайланмай. Телефонын ҡабыҙҙы – унынсы ярты ғына, имеш. Бүлмә тыштағынан ҡараңғыраҡ һымаҡ. Бына ҡайҙа әтнәкәһе: ул бит теүәл теүәл унда төнәргә ғәҙәтләнгән. Их, Данир биреп торған дәреслек ҡулы осонда түгел, исмаһам, формулалар менән ҡатырыр ине иҫәүән башҡайын. Башҡалар, Элина әйтмешләй, схемалары, таблицалары, ҡатлы-ҡотло формулалары ала-сола тоноҡ беленгән электрон версияның копияһы менән әҙерләнгән әле, Лира иһә Данирҙан алған ғилми әсбаптың таушалмаған-нитмәгән төп нөхсәһенән «тымыҡ сәғәт»тәрҙә йә процедуралар араһында бик етди әҙерләнде. Зачет та түгел инде ул, бер уйлаһаң. «Зачтено» Лираның кенәгәһендә сессия башында уҡ, башҡаларҙан ярты айға алда, теркәлгән. Быныһы – ана шул яҙҙан ҡалған «койроҡ»тарҙы өҙөү өсөн ойошторолған һынау.

Долой джинсы! Рәхәтерәк, еләҫерәк булып ҡалды лаһа. Үҙе утекһеҙ салбарға хушһынған «башковитый» – ысын булһа, утыҙ йәшендә генә геүләтеп докторлыҡ яҡлай, ике йылдан үҙ кафедраһын астырыуға өлгәшә; декан йә проректор бул, хатта, Мәскәүгә күс, тигән ымһындырғыс тәкдимдәрҙән баш тартҡан – профессор ҙа, ана, килде-киттерәк мәрәкәләгәне бар: «О, красавицалар, юкка күлдәк киймәйһегеҙ. Аҡыллы ир-ат күлдәкле ҡатын-ҡыҙҙы күберәк оҡшата ул. Джинсылы дамочкаларға еңел-елпеләрҙең генә ауыҙ һыуҙары ҡорой. Ысын мөхәббәт формулаһын сисергә теләһәгеҙ, фигурағыҙҙы ҡыҫҡан йә быуған сепрәк-сапраҡ киймәгеҙ: Хаҡ Тәғәлә лә яратмай,

йәннәт баҡсаһына индермәй. Оҡшатмай, ти, ирҙәрсә кейенеүҙе вә ҡыланыуҙы...» Етмәһә, өс-дүрт телдә иркен аралаша бит әле. Нисек кенә булмаһын, уның лекцияһына талибәләрҙең күбеһе ҡулдәк кейеп инергә ярата. Әйтәгүр, үҙе бер хөрмәт билгеһе.

Зачет биреүселәр исемлегендә биш-алты студент бар икәнен Лираға үткәндә дауахананың үҙенә үк хәл белешергә, дөрөҫөрәге, Светлананың ҡушыуы буйынса килгән Элина әйткәйне. Йәлләп тә ҡуйғандай итте Лира бая үҙенә арҡаһын ҡуйып ултырған әхирәтен. Яҡшы эттең эйәһе берәү була, ә ул ҡайҙа бәрелергә белмәгәндәй язалана. Һы, Элина урынында Лира үҙе булһа, нишләр ине икән?

Биш-алты кеше... Улары – йәйге сессиянан ҡалғандар, йәғни «башковитый»ға һынау бирә алмағандар. Ә ул ҡара исемлеккә Кәримова ник өҫтәлгән һуң? Әтнәкәһе ябай: профессор ай һайын тиерлек дәресенә йөрөй алмағандарҙы «капшап ҡарай» – һәр педагог, кем әйтмешләй, «үҙенсә яҙа аҡылдан». Лира Кәримова быйыл ете-һигеҙ лекция тыңламаны – рәхим ит, профессор белемеңде тикшерәсәк. Шул иҫәптән дәрес ҡалдырғылаған тағы бер егет. Вундеркинд түгелме унһы? Әлләсе... Бына шулай Лира иртәгә зачет һымағыраҡ имтихан тотасаҡ. Светлананың этлеге, тип тә уйларға йә профессорға үпкәләргә лә теләмәй Лира. Лекция ҡалдырғанмы? Раҫ, ҡалдырған. Ҡарамаҡҡа буш ҡыуыҡ һымағыраҡ күренһә лә, ғәләмәт талапсан, имеш, «башковитый». Бик дөрөҫ эшләй. Юғиһә, ниңә сабата туҙҙыра әле абруйлы вузда Лира, Элина, Вундеркинд?.. Улар урынына тәртиплерәк, зирәгерәк бүтән йәштәр уҡый алыр ине. Йәл, уларҙың яртыһы тәүге имтиханда уҡ «ҡырылды». Белеме һайыраҡ булһа ла, Светлана ла нисектер ҡабул итеү кәртәһен ырғып сыға алған, етмәһә, хәҙер йөрөгән була, ана, танау сөйөп.

Йәннәт баҡсаһына ашҡынмай әле Лира, моғайын, профессор һынауға индермәй тормаҫ. Ваҡай, эскерле әҙәмгә оҡшамаған. Асыҡтан-асыҡ киҫәтә ләһә: «Диплом өсөн ҡыҙыҡмағыҙ, ғилем өсөн тырышығыҙ. Мин уҡытҡан дисциплина – ул дәүләт имтиханына йә диплом проектына бараһы юлда тайғаҡ баҫма. Ошо бәүелсәк баҫманан абай, ҡоламай уҙһаң, оло юлға сығаһың...»

...Элина, Светлана, Лира тәүге курста бер бүлмәлә йәшәнеләр. Лира икеһенә лә имтихан-зачеттарға әҙерләнергә ярҙам иткеләне, уның тәҡдиме менән Светик профорг итеп һайланды. Икенсе курста Светлана быларҙы баҫымсаҡларға кереште, низағҡа кергеләй башланы. Һауыт-һаба, иҙән йыуырға йыбаныр ине, кистәрен кейенеп-яһанып ғәйеп булғыланы. Икенсе курста Лира башҡа бүлмәгә ордер алды, өсөнсө курста эргәһенә Элина күсенде... Ваҡыт тигәнең әҙәм балаһын үҙ урынына ҡуя шул. Ордер тигәндәй... Бәй, кастелянша, моғайын, һинең ордерың юҡ, тип әйтергә теләгәндер әле. Булмаҫ, уның ордеры де-

канатта яталыр. Сулпан Байрасовичтың сейфында. Кәримова үҙе теләп ауырығанмы ни? Закон уның яклы. Ана, тикшереү-маҙар килгәндә эре-эре түрәләр ҙә ауырыуға «һабыша», тиҙәр, ә Лира – бәләкәй кеше, ғәп-ғәҙәти талибә. Мәгәр халыктың «таҙҙың да һауаһы була» тигән ҡәҙимге һүҙе иҫкермәгән дәһә. Үҙен кәмһеттермәҫ! Бураш ҡыҙы әле Лира!

Ҡапыл ғына төҙ кәүҙәле, ыҫпай кейемле Сулпан Байрасовичтың да һыны пәйҙә булды. Игеҙәк малайҙар үҫтерә, тиҙәр. Осратканы юк уларын Лира. Шул ыңғай үҙенең үтенесе буйынса Данир кескәй брошюра рәүешендә тиҙ арала төпләп биргән «Аҡыл дәфтәре»ндәге юлдар һүҙмә-һүҙ иҫенә төштө: «Игеҙәктәрҙең береһе – йөрәк, икенсеһе бауыр була. Береһе үлдениһә, икенсеһе лә оҙаҡ йәшәй алмай». Абау, юкты юрап ятасы. Сәғәт ун тулалыр. Әүәй, әүәй...

* * *

Лира, ғәҙәтенсә, теүәл етелә уянды. Ҡуналҡала кешеләр яртылаш кәмегән. Кистән бүлмәне еңелсә һарымһаҡ еҫе ялмағайны – осоп бөткән. Маҡтана ине шул ҡара-ҡаршы ултырып тамаҡ ялғаған мәрйәләрҙең береһе, «салоны үҙем тоҙлайым мин, һарымһаҡ бүлкәттәрен ҡыҫтырғылайым» тип. Әле сирләшкә ханым күренмәй, әйберҙәре ята, моғайын, ҡоро-һары артынан буфетка киткәндер. Арлы-бирле йыуынып, тештәрен бармаҡтары менән ышҡыштырып, хатта сифаты шикле кран һыуын бер-ике ус уртлап сығышлай, ҡуналҡа хужабикәһен «бәлки, кисәге ваҡытка тағы килермен» тип иҫкәрткәс, тегеһе яурынын ғына һикертте. «Урын булһа, рәхим ит, тик минең смена оҙаҡламай бөтә...» «Рәхмәт, һау булып тороғоҙ!» Хужабикә эстән генә «аҙғын ҡыҙға окшамаған был...» тип кенә һынап ҡалды. Буфетка һуғылырғамы? Эй ҙә, тамаҡ ҡайғыһы түгел әле Лирала, берәй ерҙән «Сникерс» ҡына алыр ҙа... Алға – трамвайға!

«Ҡойроҡ»тарҙы ҡырҡыу һәм дәрес ҡалдырғандарҙың отработкаһы – сәғәт өстә генә. Быны Лира дәү расписание һәм иғландар таҡтаһынан һуңғы арала һирәк ҡулланған күҙлеген теклəп асыкланы. Һәм... сисмәҫкә булды. Ҡапылғара таныmaһындар, әйҙә. Тәүге пар дөйөм лекция икән. Өс-дүрт төркөм лыка тулды аудиторияға, сөнки һабаҡты декан урынбаҫары Сулпан Байрасович бирә. Уның менән араларын боҙмаҫка тырыша инде һәр талип. Факультетта ҡаланыҡылар ҙа байтаҡ, әлегә шулар күрешә-геүләшә коридорҙа һәм аудиторияла. Беләктәге ҡараһыу йоҡа куртканы кейеп, группалаштары килмәҫ борон арткарак боҫоу хәйерле. Бер уйлаһаң, вокзал менән вуз араһында окшашлыҡтар ҙа байтаҡ. Икеһендә лә – гөж дә мәж. Икеһендә лә бәғзеләр һуңлауҙан ахылдаша... Тәүгеһендә, билет тотоп, әҙәм балалары төрлө тарафтарға юл-

лана. Бында иһә биш йыл буйы йөҙҙән ашыу һынау тотоп, дипломлы белгес булып, әллә ҡайҙарға таралышалар. Биш йә ун йылдан һағынышлы осрашыу ойошторғолайҙар.

Лекция башланды. Таныҡандар Лира яғына ҡарап-ҡарап алды ла, шыш-быш килеп, конспекттарына йәбеште. Светлана профорг менән алдараҡ йәнәш ултырған була ҡуҡырайып.

Быҡаса Сулпан Байрасовичтың дөйөм лекцияһын тыңларға насип итмәгәйне Лираға, әйтәгүр, темаһын төплө, үтә күренмәле планшетындағы тезистарын һанда-һаяҡ ҡына күтәргеләп, аңлайышлы, лаңҡылдатып һөйләй. Күкәй баҫҡан һиҙгер бүҙәнәләй, аудитория ла артыҡ ҡыштырламай, артыҡ лығырламай. Әллә ни яңы мәғлүмәттәр ҙә тойолмай һабағында, үҙе яҙған брошюраларға уны-быны өҫтәгән генә. Алдағы өҫтәлдә егет менән ҡыҙ, алмаш-тилмәш эйелә һалып, ҡағыҙ ҡапҡа тығыулы көпшәнән персик һуты һемерә. Күҙҙе ҡыҙҙырмаһалар! Һы, Лираға «Сникерс» тәмләү зыян итмәҫ...

Звонок тызылдағас, Лираларҙың төркөмө, уралып-суралып, семинар булаһы кескәйерәк кабинетка йыйылды. Бында ла Лира арткараҡ урынлашты, берәүҙе лә баш күтәреп сәләмләмәне, Элина ише үҙенән ым-ишара менән хәл белешкәндәргә көсәнеүле йылмайып ҡына эйәк ҡаҡты. Светлана Лираны күҙенә лә элмәгәндәй ҡылана. Әйҙә, ҡылана бирһен, ә бына эргәһенә Вундеркинд килеп ҡунаҡлағайны, оторо рәхәт булып тойолдо. Яҡты уйлының йөҙө нурлы... Хуп мәйле, ятһырамағандар, ваз кисмәгәндәр, ҡыр типмәгәндәр ҙә бар әле төркөмдә. Педагог иһә «минең өсөн барыбер, уҡығанығыҙ ҙа, уҡымағанығыҙ ҙа үҙегеҙ өсөн» тигәнерәк ҡиәфәттә уҙғарҙы семинарын. Етмеште ҡыуған шалбайыраҡ ауыҙлы ханымды, тәмәке тарта, тиҙәр, әлләсе, күргәне юҡ Лираның.

Ятаҡҡа ордеры юҡлығын минутка ла онотмаған Кәримова оҙон тәнәфестә декан урынбаҫары ишеген һағаланы, ләкин унда сират ярайһы йыйылғайны. Ейәнсәрен эйәртеп, түшенә ярайһы яҫы һуғышсан наградалар планкаһын кәптергән ҡыҫҡа таяҡлы, кәзә һаҡаллы ҡарт инеп киткәйне Байрасович янына, батты ла ҡуйҙы, ҡоромағыр. Вазифаһы, ай-һай, мәшәҡәтле урынбаҫарҙың, Лира ла ҡаңғыртасаҡ әле. Ярай, күҙле бүкәндәй тағы бер парҙа булғастын, төштән һуң ҡабат килер, «отработка»һы ҡасмаҫ.

* * *

Ләкин Сулпан Байрасович, методисткаһы әйткәнсә, эше буйынса ҡайҙалыр һыҙған, «ҡабат әллә килә, әллә юҡ, ул докладывать итеп йөрөмәй» булып сыҡты. Бая өсөнсө парҙа файҙаһыҙ лекция тыңлағансы, ошо тирәлә уралырға кәрәк булған да бит.

Комендантка визит яһауҙан да өмөт юк. Кастеляншаһы ап-асык ишараланы лаһа. Ярай, «отработка»һынан ҡотолоу ҙа фарыз.

Профессорҙы үҙ кабинетына якын ғына аудиторияла көтөп алды дүрт студент. Исем өсөн генә билеттарын алдына йәйеп, шарт та шорт теленә килгән берәр һорау яуҙырҙы ла сығып китте. Урыҫса лөғәте акцентһыҙ «башковитый»ҙың, тик кейеменә иғтибар биреп етеңкерәмәүе генә аптырата.

– Күсерһәгеҙ ҙә ярай, исмаһам, әҙ-мәҙ ғилемегеҙ артыр. Ләкин мин укыткан фәндең логик эстәлеге шунда: бер һорауҙы белмәниһәгеҙ, тотош курсты ла... – Фекерен артынса ябылған ишек йотто.

Шуны ғына көткән кеүек, «койрок»тар берсә шпаргалкаларына һарылды, кешелер Лираға ябырылды: отличница иһә «отработка»һынан имен-аман ҡотоласағына инанғайны.

– Лирочка, выручай!

Кемдәргәлер ярҙамы тейеп тә өлгөрҙө ҡыҙыйҙың. Профессор оҙакламаны – ишек асылыуға бөтәһе лә һып-һылыу, шыпшым ҡаршыланы үҙен.

– Стоп, Кәримова, яҙмай ғына әҙерләндеңме? – Күҙлеген күтәреп, педагог танау буйынса текәлде.

– Фәлән Фәләнович, ғәфү итегеҙ...

– Онотканһыңмы? Юғалттыңмы? Ҡыҙҙарҙың хәтере үткер була, тигән булалар. Хәҙер, хәҙер... – Профессор һә тигәнсә бер ус авторучка тотоп кире инде. Оҙоно, ҡыҫкаһы, затлыһы, арзаны, йәмғеһә унлап булыр. – Ҡара әле, ошонда һинеке юкмы? Имтихан һайын, лекция һайын берме-икеме ручка ятып ҡала аудиторияла... Үҙеңдекен тапманыңмы? – «Профессорҙың күңеле көр бөгөн» тип уйланы Лира. – Бына, иң шәбен һыйлайым үҙеңә, тиҙ генә әҙерлән.

– Мин әҙер! – тине Кәримова тәүәккәл ышаныс менән.

– Замечательно! Тә-әк, иҫкә төштө: яҙ көнө зачетыңды якшы тапшырғайның, загранкаға барам, тип. Йә, нисек, окшанымы Чехия?

– Окшаманы, сөнки барып булманы. Ауырыным. Оҙак... Шул сәбәпле сентябрҙә занятиеларға йөрөй алманым. Яңы һауыктым.

– Это уже серьезно! Үҙ алдыма әҙерләндем, тимәксеһеңме? Ниндәй әсбаптарҙы файҙаландың?

Кәримова һанап сыкты. Данирҙан алып торған дәреслекте ишеткәс, «башковитый»ҙың сырайы яҙылды.

– Замечательно! Йә әле...

Һәм китте: һорау – яуап, һорау – яуап... Ҡайһы клавишаһын баҫһаң да, күп тулкынлы радионан Лира һөйләгән кеүек булып китте бер мәл.

– Етте, ҡәнәғәтмен, – тине профессор ғәмле генә. – Дөрөҫөн әйткәндә, һуңғы йылдарҙа факультеттың престижы ла, выпускниктарҙың белем кимәле лә кәмей. Кәмей, сөнки экономиканы бөтә вуздарҙа ла – дәүләттекендә лә, коммерческийҙарында ла – уҡыталар. Өҫтән-мөҫтән. Экономистар, юристар быуа быуырлыҡ хәҙер... Икенсе яҡтан ҡараһаң, башковитыйҙарҙың ҡәҙере лә арта. Конкуренция ла лидер булыу – үҙе бер романтика ул! Элегерәк беҙҙә Вахитов, Чарковская кеүектәр диплом алды. Былтыр Ивлев, Тайсин һөйөндөрҙө. Быйылғылар... Вундеркиндта һәм... ниндәйҙер дәрәжәлә һиндә өмөт бар, мадемаузель Кәримова. Аспирантура хаҡында уйлашырға кәңәш бирер инем...

– Рәхмәт, уйлап ҡарармын.

– Күп уйлама, ынтыл. Йә әле, эксперимент уҙғарайыҡ.

– Ниндәй.. эксперимент? – Лира уйҙары менән Сулпан Байрасович булмәһен байҡай ине инде.

– Мине Омскиҙа уҡытҡан доцент ише, былай итәбеҙ: хәҙер һин иптәштәреңдән яуап ал, ә мин тыңлап ҡына ултырам. Килештек! – Һуңғы тәҡдимен башҡалар ҙа ишетһен өсөн ҡыскырыбыраҡ әйтте профессор. – Ултыр минең урынға, Кәримова.

Килешмәй ҡайҙа барһын талиптар? Хәйләһеҙ донъя – файҙаһыҙ: иптәштәренә һорау биргәндә Лира бая улар «выручай» тип ҡыҙыҡһынған мәсьәләләрҙе күҙ уңында тотто.

– Башҡортостанда банк секторының бөгөнгө торошо хаҡында, ҡыҫҡаса... – Элинаның яҡташы тулы яуап бирҙе. Икенсе ҡыҙҙың тоҡос яуабын тыңлап бөткәс, профессорҙың ҡәнәғәт кенә баш һелкеүенән дәртләнеп, Кәримова өҫтәмә һорау сәпәне:

– Социаль-экономик үҫештә кредит ойошмаларының ҡатнашлығын нисек баһалар инегеҙ?

Өсөнсө һабаҡташы алғараҡ шылды.

– Рәсәйҙә йәшәү минимумы, доходтар, халыҡты социаль яҡлауҙың төп положениеларын һанап сығығыҙ. Конкрет миҫалдар менән...

Профессор өс студенттың да кенәгәләренә «зачтено» тип сыймаҡланы һәм тоҡос ҡына имзаһын һалды.

– Бына дүртенсе иптәшегеҙ – Шахмаев килмәгән. Киләһе аҙнала көтәм үҙен. Бишенсе курстан ҡыуылыуы оят булыр ҙаһа. Хәйер, белмәүҙең ояты юҡ, белергә теләмәү оят. Малай сағымда атайым мине Ҡырғыҙстандың ҡышлағында йәшәп ятҡан апайы эргәһенә эйәртеп барҙы. Һуғыштан алда уҡ ликбез буйынса уҡытыусы итеп ебәрелгән дә ҡалған шунда кейәүгә сығып, ҡартайған... Магазиндарына индек. Төйөлмәгән кофе һатып алды атай. Журналист бит инде, нимә эсергә белә. Ярты кило! Иртәгәһенә тағы барҙыҡ. Осһоҙ тип, беҙҙә дефицит тип, тағы ярты кило алды. Һатыусы әйтә: «Алың, ҡәрҙәш, алың, беҙҙекеләр алмай, шуға ярты хаҡҡа төшөрҙөм. Бешереп тә ашап

ҡараныҡ, әсе, тәмһеҙ, зәһәре телде өтә...» Баҡһаң, урындағы ча-бандар кофе бөртөктәрен, борсаҡтың бер төрө, тип уйлаған тәүҙә. Уны килелә төйөү кәрәклеген белмәгәндәр. Өйрәтеүсе булмағас. Өйрәтһәң дә әллә ни эсмәҫтәр ине, сөнки кофе эсеү уларҙың культураһына һеңмәгән. Бына ниндәй казустар була торғайны Эс-Эс-Эс-Эр осоро аҙыҡ-түлек разнарядкаһында... Хәҙер күмәкләшеп дискуссия уҙғарайыҡ та, һеҙ – минән, мин һеҙҙән азат тип иҫәпләргә мөмкин. Шулай итеп, һорау: Рәсәйҙә нилектән супербайҙар менән ярлыларҙың килеме араһындағы айырма егерме биш тапҡырҙан күберәк? Был тенденция киләсәктә һаҡланасаҡмы? Яуаптарҙа бер-берегеҙҙе ҡабатламаҫҡа тырышығыҙ.

Иң тәүҙә ҡулын Кәримова күтәрҙе. Уға бит тиҙерәк деканат тирәһенә ыҫҡынырға кәрәк, профессор әфәнде!

## 6

– Фасилым ҡайтыуға, Әмирәне етәкләп, беҙгә килерһегеҙ, – тине Сара үҙенә ҡустәнәскә өҫтө һары бәрәмес һоноп торған Сәйҙәгә.

– Ә ҡайҙа һуң Фасил? – Ҡунаҡтарын ишек төбөндә аяғүрә оҙатып торған Хажиморатович былай ғына ҡыҙыҡһынды. Фазыл өндәшмәгәс, Сараһы аңлатма бирҙе:

– Уфаларға киткәйне, нишләр... Биш көн үттеме. Шуға эс боша ла тора. Йомшаҡай бигерәк. Эшкә ҡушһалар, керешәлер хеҙмәтсе һымаҡ.

– Йомшаҡай, әнкәйе һымаҡ, – төртмәс кенә ҡыҫтырған Фазыл, тартай теленән табыр, тигәндәй, бисәһенән әрләнә яҙҙы:

– Уф шошоно! Һинең арҡаңда ғына сығып китмәнеме икән? Схудта мир көлдөрөп тыҙырайҙың. Үбшежитен оҙаҡлатһалар, ниңә ыҙалатырға, ти, баланы. Ней шылтыратып булмай.

– Оҙаҡламай Өфө менән запрысты һөйләшә башлайбыҙ. Ҡоҙғонтау яғында «Билайн» станцияһын көсәйткәндәр, беҙгә яҡын, ызначит.

– Бирһен Хоҙай. Яңы бәпәйегеҙ үҙегеҙгә терәк булһын, – Сара ҡыҫҡа ғына сыуаҡта урамда йүгерешеп ингән ҡыҙыҡайҙарҙы арҡаларынан һөйә-һөйә һыйлаған Дилбәр яғына күҙ һалды.

– Татыу ғына әхирәтләнеп китерҙәр әле.

– Шулай, – тип йөпләне ҡатынын Фазыл. – Әйтәгүр...

Лосмандар киткәс, самауыр ҡабат шыжлағансы, Дилбәр һүҙ ҡуйыртты.

– Бая күмәк кеше алдында бөтәһен дә һөйләп бөтмәнем. Төнәгөн Сасын аша ҡайтып төшкән Әбдерәхим. Машина яллап, майур улы белән. Кәнде Әбдерәшиттең ҡырҡына. Иртәгәһенә мине саҡырҙылар. Камила бахыр, ерләгән көнө иламағанды,

илап тик ултыра бәлшәйеп. Эльзалары, Надирҙары килде бала-сағалары менән ҡутарылып. Ясин уҡыным. Әбдерәхим үҙ ҡулы белән мең тәңкә тотторҙо. Әйтмәнем әле Зәриәгә, теләнселәр, тип. Майурҙары кем бар шуға иллешәрлек өләште. Урыҫлашҡан Себер татары булған икән бисәһе, уның рухына ла аят уҡыным, Марфаһын Мәрфуға тинем дә. Фурмаһы килешә, Шайгуға оҡшап тора уныһы. Тыңҡыш, ҡашы ҡалын...

– Хәрби автомобилист, тайгала юл һалалар, тигәйне атаһы үткәндә... – Хажиморатович ҡабат өндәшмәне. «Социаль опрос мәғлүмәттәре буйынса, күпселек халыҡ ил етәкселәренә ҡарағанда Пугачеваны, Максим Галкинды, Лолитаны, Шайгуны ныҒыраҡ таный. Элек урыҫ батшаларының бөтә ғаилә ағзаларын телевизорһыҙ-ниһеҙ яттан белгәндәр... Әкәмәт был донъя!»

Хажиморатович уйы менән уртаҡлашманы, бары шкафында ятҡан телефонограмманы алып, яңынан уҡыштырҙы. «Хөрмәтле... Һеҙҙе Олотүз муниципаль ауыл Советы сессияһына саҡырабыҙ». «Башҡортостандың Рәсәйгә берләшеүенә 450 йыл тулыу буйынсалыр. Тә-әк, «Шәжәрә байрамы»н уҙғарыу хаҡында ла кәңәш ҡороласаҡ», – тип үҙе шылтыратып та иҫкәрткәйне шул Айгөл Карамовна.

– Бына һиңә, Дилбәр түтәй, изге доғаларың өсөн... йөҙ тәңкә. Иртәгә Сания ҡортҡаға ла хәйер-мәйер индереп сығам әле, – Сәйҙәнең хәбәрен Дилбәр эләктереп тә алды:

– Бергә барайыҡ. Был арала хәлем арыу. Ул бахыр ҙа, айбай, аҙаулана (ҡартая). Хәлен белербеҙ, доға ҡылырбыҙ, Алла бойорһа...

Ҡыҙыҡ та инде күҙгә күн: әле генә өй ҡараңғы һымаҡ ине, ҡапыл көлтә-көлтә нурҙар йүгерҙе.

– Әллә Әмирәгә урам күрһәтеп киләңме, дәүәтай, аяҡ аҫты ҡоро сакта, – тине ҡатын иренә. – Мин түтәйҙән яурын тирәһен һылатҡансы ғына...

– Һылау фарыз, әтеү минең һымаҡ бөксәйә башлар. Атлағанда иңкәйтә лә ҡуя хәҙер. Курырыттарына йүнләп йөрөмәгән булдым бит, хәйерһеҙ... – Дилбәр әйтте быны.

– Була ул, тик һеҙләргә һис ауырырға ярамай, – Солтан өс кенә асалы ҡоралай мөгөҙөндәге эшләпәһенә үреләлә башланы. – Янтайып, йоҡлап килдең машина тәҙрәһенә. Ел һуҡҡандыр.

– Зөлфиәне лә эйәртегеҙ. Беседкаға барығыҙ, мәктәп тирәһенә етегеҙ. Солтан энем, һин элек бала-сағаны теҙеп кенә Күлбар һыртына әйҙәһәң, Имаш мәрхүм әйтеп ултырыр ине ҡапҡа алдарында: Солтан энекәш Бураш балаларын мал урынына өйөрмәй генә, палкауадис һымаҡ ыструйлап йөрөтә, тип...

– Бар ине аяҡтың палкауадис саҡтары, тәк! Хәҙер башты эшләпә генә эшләтә, – тип һаран ғына йылмайҙы Хажиморатович. – Бынан кире Әмирәгә, Әлфирәгә, Зөлфиәгә Бураш географияһын өйрәтәсәкмен.

– Камилаға әйткәйнем, Сәйҙәләр патронатка Ҡоҙғонтауҙан теремек ҡыҙыҡай апкайткандар, тип... Минән барыбер мәүешерәк әхирәтем: балаһы – ладны, ә патруны нәрҫәгә хәжәт, тигән була, бахыр...

«Кара, Әмирәне бисмилланан күреүе, иплән кенә хәбәр ташырға ла әүәҫ икән был, – тип һынамсыланы Солтан, Дипутат яғына ҡарамай ғына. – Хәйер, им-томсолар борондан урам хәрәпсеһе, тә-әк, урам хәбәрсеһе булған түгелме? Ана, ишет...»

– Әфисәрҙең исеме – Руслан. Себерҙә йүнле фатиры булмаған, комныта ғынаһын аҡсаға здавать итеп, сиртификат тигәнме нәҫтәкәй алып, Башкирияға ҡайтам, тигәнме. Ҡариҙел буйын окшатҡасһың, беҙгә яҡын берәй районды̣ң военкоматына кил дә ҡуй, биш йылың ғына ҡалған, тип кәңәш биргән Надир. Грамотный кәңәш, тигән атаһы Әбдерәхим...

– Курсант сағында ике-өс рәт килгеләне бит ул Бурашка. Ҡыҙҙар ҡыҙыға ине формаһына, ә уны сығармайҙар, – тип хәтерләне Сәйҙә. Балалар тызандамай ғына кейенеште. Кеҫәләренә тәм-том тығырға уйлаған бисәһен Солтан ипле генә тыйҙы:

– Яман өйрәтмә... Пикникка сыкмайбыҙ ҙа. Апайға һөт бир – үҙең ҡара, ҡәнәғәт иттер... – Шунан ҡапыл ғына ҡыскырыбыраҡ Дилбәргә аңлатма бирҙе, әйҙә, таратһын Бурашка! Ғәҙел хәбәр ләститтән күпкә яҡшы. – Әмирәне патронат буйынса оформить итһәк, ай һайын тикшерелеү-нитеү, тәк, отчет-фәлән, волокита була. Яҡын ер түгел Ҡоҙғонтау... Законный опека итәбеҙ, эйеме, Әмирә ҡыҙым?

Әмирә иһә һаман сабыйҙарса үҙ мөхитен аса:

– Зәпәне алмайыҡ, ул әйтә: минең ике өйөм бар, ти, ә беҙҙеке берәү генә...

Бала тиһәң дә, ҡай арала кемдән ишетә һалған «Зәпә» тигән ҡушаматты. Һи, Дилбәр инәкәсе лә гелән мөслимәләрсә генә һөйләшмәй торған. Элек фермала әрләшһә, һәр һыйырына ҡушамат тағып, ирҙәрҙән дә былайыраҡ һүгенгән, тиҙәр бит. Булыр.

Алаптай кәүҙәһен һиммәтле генә тотоп, эргәһендә өйрөлөп-сөйрөлөп уйнаҡлаған ҡыҙ балалар менән бетон күпер яғына атлаған Солтанды тонок күҙ ҡарашы менән оҙатып ҡалған Дилбәр, ҡулын сайған арала, үҙе әйтмешләй, «сикрет-микрет»кә күсте.

– Камила әхирәтте әйтәм, һеҙҙе лә, Фасилды ла, Фәнидә менән Зәриәне лә ҡатнаштырғыһы килгән Рәшитенең ҡыркына, нишләптер кире уйлаған. Надир әғүәселәнгәндер. Ә-ә, Динестән Рәшит мәрхүм алам тип йөрөгән ҡатынҡай ҙа, дүшәмбеләрҙә килеп китәм, ҡәберен күрәм, тип сәләм ебәргәнме Надир аша... Мая, ти, исеме.

– Буфетта кассир икән дә, үткәндә Ҡоҙғонтауҙан ҡайтышлай күреп киттем ҡырҙан ғына. Зерә матур, аҡыллы күренде.

– Ә-ә. Һис онотмайым, бәләкәй генә сағымда, күп булһа Әмирә һымаҡ булғанымдыр, әнкәй мәрхүмә, әллә кемгә эйәртеп, Динескә ебәргәйне. Ҡыяр-мыяр орлоғо алырға. Киҫәтеп ҡалған булды арттан: орлоҡ һатҡан әбейҙең өйөндә Аллаһтары төшкән һүрәт булыр, шул һүрәткә аслан ҡарама, тине. Фая булдымы исеме, Мая булдымы – онотҡанмын.

– Мина түгел инеме?

– Түгел, уныһы Иванайский ине лә.

– Күп нәмә ишеткәнең әтеү Камила түтәйҙән, – тип Сәйҙә яйлап ҡына сисенә башланы.

– Ишеттем, Әбдерәхимдән дә... Э-эй, аҡса тырайт иткән Руслан, ҡатынын шәбәйтәм тип. Дажы танкы кеүек машинаһын һатҡан, ти. Әжәлең етһә, ҡалайта беләң! Серегән байҙар ҙа, ана, ята ла үлә.

– Имаш абый йырлағанса инде. «Үтереп-үтереп харап итәрҫең» ти торғайны, мәрхүмкәй... Ерләшергә барған Әбдерәхим, юлға буш икән уға – өлгөрмәгән. Шунан өс көн торған әлеү, малайы отпускы алғансы. Путевкы ла биргәндәр, ти, Кавказға китә берәй аҙнанан. Вәт Руслан!

Биленә тиклем сисенеп, халат кейә һалып алған Сәйҙә йөҙ түбән ятыр өсөн карауатын йәтешләргә кереште.

– Ҡаҡта ятмаҫыңмы, ҡыҙыҡай? Мынауҙа, диваныңды йәйәйек тә... Шулай, эфисәр зерә оҡшаны әле. Артығын эсмәй генә ҡайтып инделәр Надирҙан, өндәшмәй генә кереп яттылар бәләкәй өйҙәренә, блитә тоҡандырып ҡына. Камила белән беҙ оҙон төн сәйхурланыҡ, буйтым лығырланыҡ.

– Зәпүшкә һуң?

– «Бутҡала – бер кис, өйрәлә – ике кис» нәҫтә мас булды инде ул да.

«Ниңә үзең йәш сағыңда берәй эфисәрҙең муйынына аҫылынманың һуң?» – тип һорарға ҡырсынған ерҙән үҙен тыйып ҡалды Сәйҙә. Ярамай. Оло кеше, өҫтәүенә, шыпа яңғыҙ көн итә. Иң ҡыйыны – яңғыҙлыҡ, тиҙәр... Үҙең һуң, үҙе! Кейәү сыҡмаҫ микән ни миңә, тип аптырай башлағайны, яҙмышы ир солтаны менән ҡауышырға насип итте.

– Ҡаты ғына араҡы белән ыуайым арҡаңды. Минең балиатритлы бармаҡҡа ла шифа булыр. Өс мең литрҙы чисный һауҙым бит мин, артыҡ һәүкәш йәслеһе тотоп харамлашманым. – Дилбәр им-томоноң рәтен дә иҫләне ҡапыл ғына. – Баҫырынып ятып тораң инде аҙаҡ. Өйөгөҙ йылы былай. Минең һыу торбаһы нәҙегерәк микән, өйөм ныҡ эҫемәй. Йә, газ үткәрәбеҙ, тип кенә хәбәр тараткайны анауы-ы здарауай персиҙәтель, әллә ҡайҙан ғына Фәсхетдиновты һайлатып ҡуйҙылар.

– Үҙен үҙе һайлатып, опытный хозяйствола директор булған шул әҙәм тәүҙә. Бер заман альтернатива, самовыдвижение тигән мода булып алды ла...

Ҡатындарҙың көңгөр-ҡаңғырын бүлдереп, телефон зыңғырланы:

— Алло, тыңлайым, — тине Сәйҙә әҙәпле етдилек менән. — Һинме ни, һин һөйләшәңме ни, Әмирә бәпкәйем? Фазыл быуайларыңдан шылтыратаһыңмы? Кәмә күрҙегеҙме? Вәт маладис, ҡыҙым. — Артабан Сәйҙә Хажиморатовичтың хәбәрен һүҙмә-һүҙ ҡабатланы: — Түтәйеңә әйт, тә-әк, Зөлфиәнең атаһы менән әсәһе әле генә бирьякка сыкҡандар, Зөлфиә шуларға эйәреп ҡайтҡан...

— Йәтеш булған... — тине Дилбәр ғәмһеҙ генә. — Былағайланһа, зимагурын арма-торма ҡыуып сығарам, үәт тәк!

## *Етенсе киҫәк*

*Кемдәндер һөйөлөргә теләһәң,*
*тәүҙә уны үҙең ярат!..*

**Ғашиҡтарға философ һабағы**

### 1

Лира йүгереп тигәндәй деканат яғына барһа, унда методистан башҡа һис кем юк ине. Ултырған була уныһы берсә ҡабыҙыулы компьютерына ҡаҙалып, берсә ултырғысында зыр әйләнеп, ҡағыҙҙарын ҡыштырҙатырға керешә. Лира больничныйын зачет кенәгәһе һыйырлыҡ ҡына сумочкаһынан һурып, ҡайҙа ҡуйырға, кемгә бирергә белмәйерәк аҙап ҡалғанын һиҙеп, башлап үҙе өндәште:

— Ҡана әле... — Оҙаҡ ҡына, зиһененә һеңдереп кенә укығас, ул тиклем үк илтифатһыҙ түгел икәнен дә раҫларға теләгәндәй, айырым һүҙҙәрҙә мөнәсәбәтен дә белгертте. — Вылечилась... Хорошо! Приступить к занятиям... Ладно! Ҡалдырып тор покаға...

Әлбиттә, кофе хаҡында мәҙәк һөйләгән профессорҙың яңыраҡ ҡына «зачет» һәм «отработка» ҡағыҙын индергәндә «...Кәримова һымаҡ укыһасы бөтәһе лә!» тип маҡтап телгә алғанын Лира белмәй ине. Көнсөллөгө ҡуҙғыған методистка — был хаҡта ләм-мим.

— Сулпан Байрасовичты күрергә мөмкинме?

— Докладывать итмәй миңә. Иртәнсәк лекцияһы булды — күрмәнеңме ни?

— Күрҙем дә, личный приемға инергә ине иҫәп. Ә декан?..

— Декан командировкала. Ятаҡ мәсьәләләре менән барыбер замы шөғөлләнә — быны яҡшы беләһең.

Деканаттан сығышлай Лира ҡайҙалыр, «Ағиҙел» журналындамы, баҫылған көләмәсте иҫенә төшөрҙө. Имеш, килгән бер

кешене секретарь: «Фәлән Фәләнович төштән һуң ҡабул итә», — тип кире борған. Төштән һуң килгәндәргә: «Фәлән Фәләнович төшкә тиклем булды, төштән һуң әллә була, әллә юҡ...» — тигән.

«Әллә була, әллә юҡ...» «Докладывать итмәй миңә» тиһә лә, белмәй буламы ҡайҙалығын бынау модница. Ҡай яғы менәндер Светлананы сырамыта бит әле үҙе.

Икенсе лекцияла йәнәшерәк ултырған Вундеркиндтың «стипендия алдыңмы? Беҙ алдыҡ... өс көн элек» тип белешкәне хәҙер килеп Лираны бухгалтерия яғына атлатты. «Беҙ алдыҡ...» тигәне үкенеслерәк әйткәндәй тойолдо.. «Алдым да тотоноп та бөттөм, һинән үтескә...» тиергә теләмәнеме Вундеркинд? Булыуы ихтимал, күп аҡсамы ни. Кемдәрҙер ул аҡсаны ҡыйбатыраҡ кафела бер ултырыуҙа туҙҙырып сыға йә хоккей ҡарауға тотона. Аһ, хөрмәтле хөкүмәттең буласаҡ ғәзиз белгестәрҙе әҙерләү мәсьәләһенә һәүетемсә ҡарамауы... Ана арттырабыҙ, шунса арттырабыҙ, тип төкөрөк сәсә торғас, быйыл өҫтәлә, буғай, стипендия. Йәйгеһе, әлбиттә, элекке миҡдарҙа көйө.

Төп корпуста урынлашҡан бухгалтерияла сират юҡ тиерлек. Техник персоналдан кемдер гел йөҙәрлектәрҙән отпускной-фәлән алып киткәс, тәҙрәсеккә студент билетын Лира һондо. Кассир тәүҙә баяғыса иллелек-йөҙәрлектәрҙән сентябрь стипендияһын тотторҙо, ҡыҙ «йәйге стипендияны ла алмағайным» тигәс, һукранған төҫ менән «ведомосты эҙләргә кәрәк... Дүшәмбе ошо мәлдәрҙә килерһең» тине лә төпкө бүлмәгә инеп сумды. Ярай, янып бармай, ала ҡарҙа аласағың булһын, тигән ҡиәфәттә Кәримова бик ныҡ асыҡҡанын һиҙенде. Барһын әле яҙ көнө генә асылған, Элина менән ҡапҡылап сыҡҡансы үҙен флюрографияға һуңлатҡан кафеға. Кеше күп түгел — яҡшы. Таныштары ла күренмәй — мәслихәт. Заказ бирҙертмәй генә туйыныу өсөн буфет та бар. Етмәгәнме уға кәбеҫтә салаты менән ҡыҫтыбый, һыуһынға — томат һуты.

Киң тәҙрәнән ҡаршы урам мөйөшөндәге «Уйын залы»ның былт-былт иткән хәрефтәре асыуға тейә. Кемдәрҙер шунда миңрәүләнгәнсе уйнап, харам отош көҫәп, хәләл аҡсаларын һыуға ташлай. Хаҡлы әсенә ләһә баяғы профессор: «Өс тинлек ҡуян, биш тинлек зыян йәмғиәткә «һыңар ҡуллы бандит»тарҙан! Шәп булғастары, чиновниктар үҙҙәре уйнаһын автоматтарҙа. Ҡуйһындар дачаларына, мэрияға, Думаға...»

Ятаҡҡа инергәме? Файҙаһы булмаҫтай. Вокзалда ҡунырғамы? Әллә нисек... Ауылға һыпыртҡанда? Эх, автобустар китеп бөткәндер — сәғәт уғы алтынсыға ауышҡан. Билеты ла юҡ. Райүҙәккә барып еткәндә лә, Олотүзгә әллә өлгәшә, әллә юҡ? Кәмәһе бер бәлә... Әһә, яҙ көнө дачник ағайға ултырып, Благзаводты күрә-күрә, елдереп кенә ҡайтҡайны лаһа. Попуткалар осрамаҫ микән ни? Осранымы, Денисовкаға етмәҫ борон һөрөлгән-

һөрөлмәгән баҫыуҙар аша тураға тәпәйләр. Ун биш сакрымды ни?! Кейеме йоҡа. Аяғында һуң? Сепрәк өҫлө нәҫтә – ярарлыҡ. Әйҙә, туҙһын. Байый ҙа һуң дүшәмбелә – яңыны алыр. Арыуыраҡтан. Һыуыҡ алдырырға ярамай, өҙлөгөп ҡуймағайы... Ни булһа ла була, тиҙ генә ҡапҡыларға кәрәк – дачниктар яғы өмөтлө кеүек. Ҡапҡылағас, туҡталышҡа һәлпәңләр ҙә «Старт» магазины»на ҡәҙәр маршруткала елдерер.

Лира уйлағанын атҡарҙы. Дүрт ҡатлы йорттоң беренсе ҡаттағы фатирын тиҙ тапты һәм звонокка баҫты. Ишекте ханым асты. Ул һирәгерәк ҡайта Бурашҡа, ире генә йышыраҡ барғылай. Баҡсаһында арлы-бирле соҡона ла һыпырта бамбук ҡыуалдарын күтәреп Ҡариҙелдең түбән яғына. Һирәк күренә ауылға яҡын утрау, әйләнмә тирәһендә.

– Һаумыһығыҙ, абыйҙан юлды һорашайым, тигәйнем.

– Иҫәнмеһегеҙ. Абзыймы, ул ни, сменам өс көндән генә тип, Бурашҡа киткәйне, баҡсаны ябып ҡайтам тип. Әбидтә генә китте, өлгөрмәнең... – Хужабикә ҡыҙға ҡараны – таныған дай ҙа итә, танымаған да кеүек. Йә, яҙ көнө әйберҙәрен тейәшеп, бер кабинала ҡайттылар бит әле Бурашҡа. Ә Лираның хәтер яғы хәтәр. Бер күрҙеме – иҫендә ҡала. – Кем тип әйтәйем, әйҙә, һылыу, кереп һөйләшәйек.

Өйгә инеү менән күҙгә ремонт ташланды, танауға елемфәлән еҫтәре бәрелде.

– Кәримова мин, Бураштан. Һеҙҙең баҡсағыҙ беҙҙең буш торған өйгә яҡын ғына. Яҙ көнө мин һеҙгә ултырып ҡайтҡайным. Кәрәк саҡта шылтырат, тип телефонығыҙҙы биргәйнегеҙ...

– Ә-ә, иҫкә төштөң. Благзаводҡа етәрең дә ул, затор ҙа юҡ бынан – аръяғына проблема булмаҫмы? Голосовать иткәндәр күп һымаҡ ул яҡҡа. Киҫкә ҡарай, етмәһә. Әнкәйең агроном, эйеме?

– Эйе, зоотехник та...

– Сасын яғына иртүк киткәнен күргәнем бар, бер мал өмә яһаны иҫке өйөгөҙгә. Танышҡайныҡ – шуға һораштым. Кухняға үт, ҡулым бысраҡ, әйҙә, үҙең ашан... Бураш картуфы харап тәмле.

– Рәхмәт, әле генә...

– Ярай, ял ит, улайһа, иртәгә сығырһың юлға. Эсем бошоборак ултырҙым-ултырҙым да тотондом спальныйҙы ремонтларға. Оҙаҡламай улыбыҙ ҡайта армиянан. Ханкала тигән ерҙә имен-аман теүәлләй инде службаһын. Нефтянойҙың вечерныйында уҡый башлағайны, алды ла киттеләр. Атаһы һымаҡ училище бөтөп, оператор булып эш башлағайны заводта. Ярай, һылыу, күҙ ҡурҡа, ҡул эшләй, тигәндәр...

Залдағы телевизорҙан йәнһүрәттәр оҙатыуында төрлө халыҡтарҙың биш йөҙ йыры яҙылған «Караокэ» дискыһын ҡарай-

тыңлай, хужабикә эшенә керешге. Нисек түҙһен инде йәш башы, ҡулы-аяғы иҫән-һау көйө Лира? Өҫтөн хужабикә биргән йоҡа спецовкаға алыштырҙы ла ярҙамлашырға тотондо. Кеше барҙа ремонты ыраһын типме, әй, тырышты йәшкә әнкәйе шайлы түтәйкә, Лира ла һыр бирмәне. Төнгө ун икегә вертолетсылар эргәһендә хеҙмәт иткән һалдат-гэсэмщиктың бүлмәһе яңы йәбештерелгән обойҙан балҡып китте. Обойға һибеп ҡатырылған бәллүр саткыларҙың күҙ ҡыҫҡандай емелдәшеүе! Бүлмәне томалағас, хужабикә бер минутта һоло буткаһы бешерҙе, Лира душ ҡойонған арала... ауыҙына йөҙ грамды ҡойған, буғай, – теле сиселеп, шыйыҡ томан ише төҫһөҙ күҙҙәре йылтандап киткәндәй. Ә ниңә ҡоймаҫҡа? Өйө аулаҡ, уйламағанда ауыр ғына мәшәҡәттән ҡотолдо.

– Һинең кеүектән кәләш тапһа улым, ыһым тиер инем. Хатлашҡаны урыҫмы әллә хохлушкамы... – Хужабикә биографияһын да тәфсирләне. – Ырымбурҙан мин, Соран буйынан. Нефтянойға конкурстан үтмәгәс, ПТУ-ға урынлаштым. Заводта оператор сакта таныштыҡ ирем менән. Утыҙ йыл бергә эшләүебеҙгә. Хәҙер мин сменалы эштә түгел, нормировщик-табельщица тиәйемме. Һин «абый» тиһең, мин «абзый» тимен – абзыкайың Бураштан аҫта утар һымаҡ ҡына ауылда тыуған. Зат-бото ҡалмаған унда. Ферма кеүегерәк ерекәй. Күргәнең барҙыр?

– Юҡ, ишетеп кенә беләм, – тине Лира. «Яҡын төбәкте лә белмәсе!»

– Электропроводты өҙгәндәр бит, шуны абзыйың күреп ҡайтҡан инде шырлыкта. Дальше – больше, ыстырам, ауылдаштары урлаған булып сыкты. Ҡайҙа әле, берәй рюмка ғына... Үҙем һинән оялам...

– Оялғас, эсмәгеҙ. Йөҙ мең башҡорт йәшәй Өфөлә, исмаһам, шулар эсмәһә...

– Дөр-рөҫ... Үҙеңде лә һөйләһәңсе әҙерәк, һылыу?

Лира ҡыҫҡа тотто һүҙен. Дауаланып сығыуын ишеткәс, бер аҙ шаңҡығандай ултырған хужабикә ҡул һелтәне:

– Открытый булмағас, пустәк ул. Беҙҙең ауылда, правда, бер апай үлде. Бахыр ғына, һиңә бала табырға ярамай, тиһәләр ҙә, ир бала тапкас, әҙерәк үҫтереп гүргә инде. Мыртыйҙы Пехота тип йөрөтәләр. Ҡайҙа служить итәрең ҙурайғас, тип һорағанға, малай ғына көйө «пехота, пехота» тигәнме... Сибәр мыртый! Минең улым һымаҡ...

«Харап, үҙе тоҙкүҙ, үҙе һөмһөҙ. Шкаф башында яткан ҙу-ур фотоһын күрҙем бит...» – тип уйланды Лира, арлы-бирле көйшәнеп. Һылыу – һеңлекәш, мыртый – энекәш... Быны ғына белә Лира. Йәнсуранан бер талибә шулайыраҡ һөйләшә ләһә. Йәнсура районы Ырымбурға сиктәш, буғай.

Күңеле киң менән аралашыуы ла күңелле. Үпкәләмәҫ әле, үҙебеҙҙең кеше тип, артығырағын да ысҡындырманы микән Лира:

— Мин — башҡорт, тиһегеҙ, өйөгөҙҙә башҡортса гәзит йә журнал күренмәй. Зарубежканы ғына уҡыштырған улығыҙ.

Ысынлап та, быялаһыҙ шкафта тиҫтәләгән детектив, эротик шаҡы-шоҡо күренештерә.

— Дөп-дөрөҫ, һылыу... «Алла» тигәнде лә үҙебеҙсә әйтмәйбеҙ шул, бик эс ҡайыша шуға. Бына һин килеп, күҙҙе астың әле. Рәхәтләнеп сөкөрләштек. — Исеме кем икәнен дә әйтмәгән хужабикә иҫнәп алды. — Көн һайын физически эшләмәһәң, арыта... — Артабан ҡатынҡай Лираның ҡолағы ҡарпайырлыҡ хәбәр өҫтәне.

— Урамда төнәгөн берәүҙе күреп ҡайтҡан әле абзыйың. Бурашевский лодочник, сантехника детале тотҡан, тиме.

— Лодочник? Лосман Фасил абыйҙыр.

— Ҡырҙан ҡына күргән, остановкала... Уф, умираю — спать хочу!

Ултырған ерҙән ойой башлаған хужабикәне Лира ипләп кенә етәкләп алып барып, түшәк йәйеп, диванға һалды. Үҙе бола коридорҙы йыйыштырып, һауыт-һабаны йыуыштырып, душта ҡат-ҡат ҡойонғас, саҡ сәғәт өстәрҙә иҙәнгә раскладушка ҡороп, өҫтөнә халатын ябынып йоҡоға сумды. Төш күрҙе: атаһы ҡул болғай, янына саҡыра.

А-ба, арыуҙары еткәндер — көндөҙ ун икелә уянды. Унда ла сумочкаһында гимн — эйе, эйе, «стационарҙан гимн зыңлатып, еңеүсе булып сығармын, скачай-ка музыкаңды минең мобилькаға» тигәйне шул егетенә һуңғы килеүендә — уйнай башлағас ҡына. Лира, һәләт тороп, телефонын ҡабыҙҙы: Данирҙың тауышы. Ҡорораҡ, эшлекле.

— Һаман выписка бирмәйҙәрме? — Хәл-әхүәл белешкәндә егет ошоно һораны, ҡыҙ алдашырға мәжбүр булды. Үҙен йәләткеһе килмәне, кисәле-бөгөнлө сетерекле хәләтен тәфсирләүҙән ни фәтүә?

— Дүшәмбегә ҡалдырҙылар... — Лира әкрен генә кейемдәренә үрелде.

— Барайыммы эргәңә? Сәғәт бишкә, элеккесә, күтәрмә эскәмйәлә.

— Кәрәкмәй... Йөрөмә! — Ҡарһаланып тыйҙы Лира, мобилькаһын сәсенә тызый-тызый.

— Ярай һуң, тик үпкәләштән булмаһын. Мин автошколаға яҙылдым. Бөгөн тәүге занятиелар.

— Светлана менән бер школаға яҙылдыңмы? — Лира ҡылтымбикәләнеүен һиҙмәй ҙә ҡалды, аҙ ғына паузанан Данир үсеккәндәй итте:

— Лира?!. Знать не знаю и знать не хочу...

– Низнай, низнай, ти Сара түтәй. Светлана ла автошколаға йөрөй, кажется. – Лира ла урыҫсараҡ әрепләште, гүйә, Светланаға асыуын ҡандырырға ҡырсынды. «Ә-һә, тағы күрһен әле староста ғали йәнәптәре... студентка Лира Кәримова менән аспирант Данир Тайсинды дөйөм ятаҡ буҫағаһында». – В понедельник... в три жду у парадной общаги. Килерһеңме?

– Тырышырмын... – Елкенеүһеҙ ризалашты егет.

Әлбиттә, ай элекме, Светлана шылтыраткайны Данирға: әйҙә, Лесотехникум урамындағы автомәктәптә бергә уҡыйыҡ, яҡташ инструктор по вождению эшләй унда, тип. Тик Данир уға эйе лә, юҡ та тимәне, бик һалҡын, үтә һаҡ һөйләште. Иҙеләгән автомәктәп ҡалала, береһе – эргәлә, йәйәү генә бармалы... Быны әйтеп торамы ни егет кеше һөйгәненә... Лираға.

* * *

Ни ғәжәптер, хужабикә кухняһына ишеген ябып сумған. Уның өсөн өйөндә кемдер бар ни, юҡ ни. Лира ванныйҙа йәһәт кенә сайынып, был юлы паста һылап, вокзалдағыса тештәрен ышҡығас, таранды-төҙәтенде. Коридорҙан үтешләй ярым ҡыҫыҡ йоҡо бүлмәһенә күҙ һалды: тигеҙ йәбешкән обойҙары. Ҡатынҡай мендәрле яғы көҙгөләнгән ике кешелек ағас карауатын да ипкә килтергән, тимәк, күптән аяҡ өҫтөндә. Курткаһын беләгенә бөкләп, аҫтына сумочка ҡайышын да элеп, саҡырылмаған ҡунаҡ үҙенә йән тыныслығы өҫтәгән фатир эйәһенә һис юғы рәхмәт күндермәгә... кухняның тоноҡ быялалы тар ғына ишеген әҙ-мәҙ үҙенә тартты. Хәйерле көн теләп сәләмләү түгел, әйләнеп тә ҡараманы төҫкә-башҡа һин дә мин ҡатынҡай. Бары тын көсәнеп, кефир һемерә-һемерә, ап-асыҡ, ап-айныҡ тауыш менән:

– Һеңлекәш, һин – мине, мин һине күрмәнем, – тине. – Дачалағы абзыйға сәләм тапшырып ыҙалама, йәме.

Тимәк, төнгө «...пүстәк ул» тигән фекеренән дүнгән. Ҡалай ҡәтғи, ҡырыҫ, бер-береһен аяған, киҫәткән дошман һымаҡ ҡылана. Хәйер, үпкәләргә ни хаҡы бар Лираның? Бары тик, бәлки, Өфөнән абзыйкай машинаһында ултыртып апкайтыр, тигән өмөтөнән генә бөтөнләй төңөлөп, «бикләнеп ҡал, апай, хуш...» тип сығыуға ыңғайланы, артынса «иҫән-һау йөрө» тигән битараф хәстәре генә салынды ҡолағына.

Тыштағы йылымыс сыуаҡ Лираның күңеленә һылашҡан ҡыраулы юшҡынды бик йәй иретте. Яйлап килә быйылғы көҙ. Ағастар, ҡыуаҡтар йәшел килдәген һалырға һаман ашыҡмай.

Туҡталышта кеше күп түгел. Һирәк йөрөйҙөр был тирәлә ҡала транспорты, уҙып киткәндәре лә ҡайҙандыр кире боролғанға оҡшай. Шунда барыу хәйерле – шунда беленәлер юл

айышы. Ҡыҙыу атланы. Дөрөҫ, ниндәйҙер тәпәш ҡоролма аръяғында трасса икегә айырыла. Шымараҡ, киңерәк шоссе уңға тартылған. Уңға барһаң уңырһың тигәндәй, юл күрһәткесе лә Кәримоваға кәрәк йүнәлешкә ишаралай. Ғәләмәт йөктәр тейәүле хикмәтле машиналар, төрлө ҙурлыҡтағы вахта-махта автобустары, кеше ташыусы маршрут йә ғәҙәти таксиҙар ары ла, бире лә ағыла. Лира ише яңғыҙаҡ юлаусының эҙәре лә юҡ бында. Ярай, эләгеп-һаҡып, Благзавод тирәһенә етте лә, ти, эреле-ваҡлы ауыл-ҡасабаларҙы, һул яҡтамы һалынып ятҡан полимер производствоны үҙҙы, ти. Онотмаған: артабан яртылаш дача тибындағы баҡса өйҙәренән торған ташландыҡ ауылдар, хатта ки этем дә йәшәмәгән «үлек» утарҙы үтәһе, бормалы-бормалы юлдарҙан ярайһы шыр урманды уҙаһы бар. Ул тарафтарҙа машиналар ағымы үтә шыйыҡлана. Танымаған әҙәмдәргә ултырып, бәләгә ҡалыуың да ихтимал. Ҡуй, Имаш дәүатайы ла, уңмағанды ҡыума, тигән юрамышын йыш ҡабатлай торғайны, өҫтәүенә, бөгәсә әтейе төшөнә керҙе. Ҡулын болғап... Һирәк, бик һирәк күрә уны төшөндә Лира.

Аръяҡтағы туҡталыштан сиған һымаҡ ҡарағусҡыл битле малай менән ҡыҙ йырбандап яҡынайҙы эргәһенә. Тажик та түгел, үзбәк тә түгел, әллә ниндәй үҙенә бер төрлө аҙ һанлы халыҡ, шикелле, шулар, аят уҡып, хәйер һорап, пассажирҙарҙың теңкәһенә тейә, хатта «маймыл», «ҡарағүтән» кеүек һүҙҙәр менән әрләнә торғандар. Ҡарасмандарҙан өлкәнерәк тойолған малайға «...әтейем ҡабат төшөмә инеп, үҙенә саҡырып ятмаһын» тигәнерәк юҫыҡта ике һумлыҡ ялбыр тәңкә һондо — доғалы рәхмәт ишетте; сәгер күҙле, сәс остарын үҙе ҡыҫҡа, үҙе ваҡ төҫлө ҡауырһын көпшәләргә ҡыҫтырған ҡыҙыҡайға берлек көмөш эләкте. Теләнсегә энә бирһәң, ямаулыҡ һорар — биш бармағын тырпайтып тик тора теге, барса баҡырҙарын тотторғас ҡына разый булды.

Ҡайтыу менәнме ни, иртәгә үк кире юлланырға тейеш. Занятиелар ҡала... Ҡоро ыҙалауы булыр. Ятаҡ мәсьәләһен хәл иткәс, яйлап тороп өс-дүрт көнгә һыпыртыр Бурашына. Әлегә өшөп-туңып йөрөмәй, көндәр ҙә алама түгел. Тик ҡайҙа барып морон терәр? Үҙенә нәҫел Өммөгөлсөм инәкәстең адресын белмәй. Ошо микрорайонда йәшәйҙәр. Ҡала-ара телефондан әсәһенә шылтыратып белешер ҙә ине, ниңә кәрәк, ниңә ҡайтмайһың, ҡайҙаһың, тип төпсөнә башлауы ихтимал. Әлегә Элинаның күрше факультетта уҡыған яҡташына барһа? Кәүҙәгә Элинанан да еллерәк ҡыҙ менән Чехияға барып, ер-һыу күреп, әҙ-мәҙ аҡса эшләп ҡайтырға йөрөгән ерҙән аймылыш булдылар ҙаһа... Бер ҡышҡа ҡуян тиреһе лә сыҙаған, тигән һымаҡ, нисек тә бер-ике кискә һыйындырыр әле. Иҙәндәрендә булһа ла йоҡлап алыр, хан ҡыҙы түгел Лира...

Светофорһыҙ урындан йүгерә-атлай трассаның икенсе яғына сыкты ла баяғы саклы кирегә атларға булды. Ашыкмаһа ла ярай. Теге ятакка эңерҙә морон төртөү уңайлырак. Тукта, ә ниңә Салауат һәйкәленә барып урамаҫка? Кире боролоп, туктаlыштан йомшағырак автобуска ултырып бер гиҙһен әле баш каланы остан оскаса.

Трассаға йәнәш тротуарҙан заманса йыһазландырылған уңдағы заправка яғынарак иләҫ-миләҫ китеп барғанда сумочкаһында телефон оркестр менән ғәйрәтле гимндың тәүге тактын башкарҙы. Кыҙык, кем икән, уға әсәһе, Данир һәм Элинанан башка бер кем шылтыратканы юк ошоғаса. Әсәһе йәкшәмбелә лә эшенә барғылай, унан килеп, бәйләнеште рәтләгәндәр — өйҙән дә «бороуы» ихтимал. Данир менән яңырак каты аңлашты — бимазаламаҫ. Һә, ҫыҫылдап һөйләшкән түмәрбаш табип менән дә номерҙарын алмашты. Үҙеңде бер-бер насар һиҙһәң, шылтыратырһың, тигәнгә. Һ-м, Элина, имеш! Әхирәтлектән бөтөнләй ваз кисмәгәнһеңдер, йә, ебәрһәнә һайрап.

— Лирочка, үҙекәйем борсой. Һин әле кайҙа?

— Үҙекәйем урынында. — Яуабы әкәмәт килеп сыкты Лираның. Артабан бүлмәләшенең кисәге кыланышы өсөн ғәфү үтенгәндәй акланыуын, ниндәйҙер кәңәштәр биреүенә диккәт итмәй ҙә башланы, сөнки эргәһендә генә бәләкәй литражлы иномарканан ике кыҙ төшөп калды ла, эргәһенән уҙып киткәс, кырағайланып үҫкән өйкөм генә кыуаклык эргәһенә тукталып, затлы сумкаларын сирәмгә куйып, нәҙек оҙон сигарет кабыҙҙылар. Үҙҙәре лә оҙон ботло, оҙон кунысло итек, ялтыр-йолторло кыҫка күн куртка кейеп алғандар.

— Лирочка, асыуланма, мин нимә генә кыра алам инде? Кайҙа һуң әле һин?

— Борсолма. Якташ олигархтың бассейнлы фатирында «Караокэ» карап кинәнәм.

— Шаяртма, мин шаяртмайым. Отбойға кил, әҙерәк грим як та битеңә, маңлайыңа косынка ура ла... — Лира, үҙенең ғәзиз койкаһында яшык осаһын кымшатмай ҙа ултырған «салажонка»ны күҙ алдына баҫтырып, кырт киҫте:

— Мин комедианттыр шул! Бер үтенес, Элина: һаклык камераһынан һары саквояжымды алып, шкаф тирәһенә куйып тор. «Л. Каримова» тип яҙыу йәбештергәнмен, бүлмәбеҙҙең номерын акбур менән сыймаклағанмын, йәме?

— Уныһын ғына... запросто. Лирочка, ней... — Үҙ исемен йәлләүсе тонда ишетеүгә Лира-Лирочка нык сәйерһенде.

Кайҙа китергә йыйындым әле, тип аҙабырак торған Кәримова эргәһенә баяғы карамакка сибәр генә кәпәренке кыҙҙар якынлашты.

– Новенькая что ли? Наш бойфренд про тебя ничего не говорил! – тип ҡаҙарынды көмһеү ирененә ялтырауыҡ һылағаны. Танау ситтәренә баҙлауыҡтай мәрйен йәбештергәне оторо таһырайҙы:

– Здесь же наша зона. Пошла отсюда, пока целочку не сломали! Мы работаем... вблизи заправки, понятно?

Ни ғәжәп, шыртламаны Лира, өндәшмәне лә, бары тик һирәк һипкел һибелгән сикәләренең сымырҙауын, яңаҡтары тартышыуын тойҙо. Ҡуңалтаҡ, йәмһеҙ, мәҙәниһеҙ әхлаҡ һаҙлығына сумыуымы? Үҙе лә һиҙмәҫтән, сепрәк туфлийы менән серек ҡапырыҡ араһында ятҡан ус аяһындай суғырмаҡлы бетон киҫәген ҡыштырлатып аҡтарҙы. Тағы кәмһеттеләрме – эйелеп кенә алыр ҙа... «Психанутая, да?» – Кикректәре шиңгән тиҫтерҙәре сигенә төштө. Уңарсы эргәләренә күрекле генә буш машина килеп туҡтағайны, оҙон ботло шаҡҡылар мыҙылмай кабинаға ултырышҡас ҡына, Кәримованың мейеһен йәшен тиҙлегендә һынамсыл асыш телгеләне: аҙғын юлбикәләр, йәғни... проститутҡалар ҙаһа былар! Аҙғын тип ни, «наша зона»лары – урманға терәтеп ҡоролған заправка тирәһе, тимәк, аҙғын кәсеп, «вахталы эш» биләмәләре; «бойфрэнд», йәнәһе лә – сутенер ғына тиһәләрсе.

* * *

Ҡәйенбикәһе Дилбәр битәрләгәнсә, Зәбир – «ике арала дилдалай», йәғни Бураш менән Олотүҙ араһын алъюҫыҡҡа күп тапаған елғыуар. Ике ауылда ла бер кем ҡолас йәйеп ҡаршы алманы үҙен. Ятһыраған, биҙгән кеүектәр. Ҡырҙа йоғонған гонаһтарын йыуырға теләгәндәй, ҡайтыу менән үрмәксе ауҙарын ҡора башлаған мунсаһын эҫе итеп яҡты. Хатта ир көҫәгән Зәриә лә йылы түшәген иренеп кенә йәйҙе. Сәйер, китәһеңме, ҡалаһыңмы, тип тә ҡыҙыҡһынманы, хәбәрендә мәҙәктәр ҙә бермә-бер кәмене. Зимагоры апҡайтҡан аҡса Сара түтәйенә бурысын ҡапларға, арлы-бирле Зөлфиәнең кейемен яңыртырға ғына етәһе. Хәйер, артыҡ аҡсаһын тишек-тошоҡҡа тығып та тороуы ихтимал.

Ҡойроғоңдо һыртҡа һалыуың бар тигәндәй, Зәриә йоҡа елкәрәк, үҙе белеп эштәргә ашҡынып тормаған Зәбиргә эш-көш табып ҡына торҙо. Аҡтамырҙарын сүпләп кенә ер ҡаҙ, тине, тыңланы теге. Буш аҙбарын, ихатаһын таҙарттырҙы; киләһе аҙнала ғөж сусканы һуйып, итен баҙарға әпкитербеҙ, тигәйне, әбизәтельне, тип ризалашты. Сауҙа итеүҙең ни ояты? Туҡһанынсы йылдарҙа, ана, илгиҙәр челноктар – ҡыштарын быйма, күпмә салбар кейгән баҙарсылар тотош Рәсәйҙе аслыҡ-яланғаслыҡтан ҡотҡарҙы лаһа. Ғүмере һатмаҫ әйберҙәрен баҙармаҙарға илтеүселәр аҙ булдымы ни?

Кәмәләренең тишегән сүбәк менән тыккылап, аръякка ынтылдылар. Яр буйы һил ине, аҫтарак кына усак ялпылдай, алыҫтан ук танауға шешлек, койка, гудрон еҫе бәрелгәндәй. Надирҙар нәсәбе баш-тояк өтә, кәмәләрен һылаштыра, ахырыһы.

— Кәмәңде рәтләрһең шулар һымак... — тине Зәриә ярға баҫканда.

— Әбизәтельне! — тип күңелен күрҙе ир генәһе.

Ярлауға күтәрелделәр. Фазыл донъяһында ларҫ-лорҫ эт кенә өрөштөрә.

— Ә-ә, Хажиморатовичтарға китмәнеләр микән? Әйтәм, кәмә белешәйем тиһәм, телефонды алманылар. Фасилдары Уфала эшкә кергән, шикелле, — тине Зәриә.

— Бытырҙак Сарочка тю-тю, Лосман Фасил Уфа гуляет, бабайщик Фазыл нету-у!

— Бабайщик? Унылы нимә тағы?

— Фазыл абый әҙерәк сплавта йөрөгән элек Каризел урендә. Һалдың арткы ишкәгендә бабайщик булғанмы... Бәй, элекке мунсалары урынына лавка һалғандар ҙаһа, — Зәбир мут кына йылмайҙы. — Помнишь, төртөкәй токандырып, йылы ғына ләүкәлә...

— Утыҙ туғыҙланма! — Тыйҙы ирен катын, мәгәр тауышынан батшаһыҙ йәшлеген һағыныу ҙа бөркөлдө. — Бында ла тик тормабыҙ. Утын яр, баҙлаған кәртүген түкмәгәнбеҙ, бакса кыйҙарын үртәйек.

— Ярай һуң! — тине Зәбир, иҫке кәмәне Фазылға еткермәй туктатып, тимер сыбык осо менән генә дымкыл батыктың (баткан ағас) комдан буйы һерәйгән тирәк ботағына урағас. — Тик... буштың атаһы үлгән, йәме?

Ниҙер уйлап, тоҙакты систе лә Зәбир, кәмәһен кырсынға тарта бирҙе һәм шыуҙыратып түңкәргәс — көс-кеүәте етерлек әлегә! — ниңә былай эшләүен аңлатты:

— Еңеләйеп ятһын. Киптениһә, бер иле гудрон һылайым.

Дипутат капкаһына еттеләр.

— Шыш та юк, быш та юк, — тип көлөмһөрәне Зәбир, түрбашка күҙ һалып. — Зәпүшкә белен ашаған, һөт эскән.

— Аҙым һайын һыйлай дәүинәйе Зөлфиәне. Бала һөйһәм — йәшәрәм, ти ҙә...

Төпкө бүлмәлә лә Зәбир елкенеүле мөңгөрләне:

— Бынау койкала — первый раз в первый класс... Кыш ине тышта. Ул сакта стенала доға юк ине: «Аятел көрси...»

— Шайтан колағына шыкырыклайһыңмы? Кәнишне, ун беренсе класс укыусыһынан любовница яһаған атаман укытыусыны... судка тарттыраһы булған да! Апайымдың Уфаға киткәнен белеп, баҫып индең түгелме? Ғәйептән бәпәйләргә шалкыла-

наһыңмы, тип беште генә, матрас елләтергә уйлағанда... Сүтәки ҡотоңдо алғайны түтәй.

— Ниндәй суд? Ҡарышманың да!

— Шундай суд! Ун ете йәш ярымда ЗАГС-ка барғанда... арҡыры баҫа башлағайным.

— Ладны, ладны, мин по совести женился, не переживай. Давай повторим семейный урок! Шунан — за уборку!

— Урыҫса йышылған бераү! — тине күңеле ирей төшкән ҡатын. — Кеше бәстилендә ярайҙыр шул?

— Ну, киттек... — Ир мунсаға ымланы.

— Оса өштөпмө?

— Йылыткыс при себе же!

...Дилбәр менән түшенә терәп гәзиткә төрөүле күстәнәс тотҡан Зөлфиә ҡайтҡанда, Зәбир кирелеп утын яра, Зәриә ике сутыйҙай ғына баҡсала ҡаулап тырмаштыра ине. Бүтән яҡта нисектер, бураштар аш-һыуҙан бераүҙе лә күстәнәсһеҙ сығармау йолаһын һаман онотмаҫҡа тырыша.

— Һаумы, ҡәйенбикә, һаумы, ҡыҙым? — Балтаһын түмәргә сабып, быларҙы ҡәҙимге ҡыуанғандай ҡаршыланы Зәбир. Кейәүенә ғүмерҙә ҡул бирмәгән һәм бирмәйәсәк Дилбәр, эйәге менән генә иҫәнләшеп, Зәриә янына баҡсаға уҙҙы, Зөлфиә иһә атаһына тыйнаҡ ҡына һырыҡты.

* * *

Байтаҡ эштәрҙе ул-был иткеләп, бешеренеп-төшөрөнөп, һуң ғына яттылар Дипутат өйөндә. Иртәгәһенә төшкә табан телефон шылтырағайны, трубканы Зөлфиә күтәрҙе.

— Да, да, я — Зөлфиә. Әмирә өйҙәме һуң? — Ҡыҙыҡай бер аҙ бәүелгеләп, көләсләнеп өнһөҙ торҙо, күрәһең, теге оста Әмирә ниҙер бытылдағандыр, шунан ҡабат етдиләнде. — Дилбәр түтәй... өйҙә. Дәүинәй, Сәйҙә түтәй һиндә йомош бар, ти.

— Сәйҙәме? Һауғынамы? Иҫәнгенәбеҙ әле... Зәриәләр ни, тышта, урам һеперәләр.

— Эй аллам, барам, ҡыҙыҡай, барам! Ярты сәғәттән, иркәм, йәме. Зөлфиәне лә алам. Летнигыңды йылыт — шунда ҡыйланырбыҙ.

Һөйләшеп бөткәс, Дилбәр мөйөштәге әсәһенән ҡалған тар карауатта ҡабат күҙен тызып ятҡан балаға өндәште. — Миңә эйәрәһеңме, бәпкәм, әллә ҡалаһыңмы?

— Эйәрәм, дәүинәй, йоҡонан уяныш ҡына бөтәм дә...

— Бөт, әйҙә, бөт... — инде һүҙен Дилбәр үҙе өсөн осланы. — Барайым, Алла бойорһа, Әмирәгә лә ҡот ҡайтарайым. Төндә тертләп уяна, тиме. Әлфирәләренә ҡот килешкән, ти, Эстәрленән шылтыратҡандар.

Йылыраҡ кейенеп, пенсионерка менән Зөлфиә ашыҡмай ғына урамға ыңғайланы. Ҡыҙыҡай ҡапҡа ябылыр алдынан атаһы яғына бер баҡты шулай ҙа.

Утын ярҡаларын өйөп йөрөгән Зәбир эргәһенән уҙып барыусы Зәриәгә бәйләнде:

– Зәпүшкә бар тип тә белмәй мине...

– Тағы ярты йыл йөрөһәң, ул да, мин дә сәвсим онотасаҡ һинең ише тере көйөктө. Ҡайтһаң – ҡайт, ҡайтмаһаң – тикай хыт йәһәннәмгә! Или тағы бер-ике бисә ал – ризамын, тик беҙҙе лә аҫыра. Йыйын шаҡы ояһында эшләйһең түгелме?

Китте йөҙ йыртыш, шунан ҡысҡырыш.

– Икенсе битеңә лә метка һалырмын! – тип ажарланды Зәбир. Зәриәнең дә үҙегенә үткәнен аңларға мөмкин:

– Папрубый, мине ташлап, иркенләп айғырланырға самалайһыңдыр Силәбе кәнтәйҙәре менән.

– Айғырға ҡайҙа ла өйөрө менән табыла кәнтәйҙәр, – Зәбир, турайып, юрамал бөйөрөнә таянды, Зәриә уға тел сартлатып тексәйҙе. Шул саҡ ҡапҡа асылды, һәм баланың аптырашлы йөҙө, артынса инәсенең асыулы сырайы төҫмөрләнде.

– Әллә ыҙғышаһығыҙ? Мәтри, кейәү! – тип Дилбәр соланына инеп сыҡты. – Сәйҙәнең ҡурғашы әҙәйгәнде хәтерләп, кире боролһам, урам яра ике дилдалай. Хәҙер участкауайға барам. Зөлфиәгеҙ үткәндә һеҙҙең сайма-сай талашҡанды күргән. Икегеҙҙән дә шөрләй. Раббым, ике яҡшы өйләнешһә – уңыш, ике яман өйләнешһә – һуғыш... Мин ҡайтыуға ыштубы зәйәвленйе ятһын өҫтәлдә. Первыйы – разводка, второйы – Зөлфиәнән отказға.

– Детдом өсөн тапҡанмы Зәриә... ун һигеҙ йәшендә генә?! – Зәриә кемгә ожо һалырға белмәй.

– Дитдумға бирмәм: дитдум һатып алмай баланы, һатып та бирмәй. Закунлап үҙемә яҙҙыртам, дастуйын әле мин. Опекунлыҡ аҡсаһын гасударствынан алырым да һиңә бирермен. Биссауысныйҙар, аҫырай алмағас, инәң... башына таптығыҙмы гонаһһыҙ сабыйҙы?!

– Мунса яғайыҡмы? – Зәриә әрепләшеүҙе икенсегә бормаҡсы.

– Ҡуй, төнәгән генә Камилала йыуынып ҡайттыҡ.

– Ә беҙ... кисә генә, – тигән булды Зәбир, еңелерәк тын алғандай.

Ҡапҡа ябылғас, Дилбәр ихатаһында ҡысҡырышмай ғына тәмһеҙләшеү байтаҡҡа һуҙылды.

## 2

Хажиморатович бөгәсә яҙыу өҫтәле артына иртүк ултырҙы: район хакимиәте башлығы Байрамов адресына ауылдаштары исеменән мөрәжәғәттең ҡараламаһы әҙер, шуны тағы бер

ҡарап сығып, акка күсерергә кәрәк ине уға. Тиҙҙән Әмирәне ҡыҙлыкка алыу мәсьәләләре буйынса участковыйға һуғылып, райүҙәктәге мәғариф, попечитель органдарына барғанында, Байрамовтың үҙенә үк инеп сығырға ниәте. «Родина» колхозының тарихы, ҡаҙаныштары хаҡында үҙенең утыҙ йыл дауамында гәзиттәрҙә донъя күргән мәҡәләләрен дә һайлаштырып, копияларын альбом һымағыраҡ итеп бергә туплау ҙа зыян итмәҫ. Башҡортса яҙҙы – дәүләт теле хөрмәткә лайыҡ түгелме ни?

Ҡарап сыҡты ҡараламаһын. Дәлилдәре ышандырғыс һәм уйландырғыс. Үтенес... Мөрәжәғәтнамә... Асыҡ хат... Ялыу... Ҡайһыһын һайларға? Мөрәжәғәт тиеү ҡулай. Ҡултамға йыйыу килешкән дә, килешмәгән дә кеүек. Әкәмәт ул бураштар. Табыла торған бузотеры: ни бысағыма кәрәк был? Бының өсөн миңә нимә тейеш? Фәлән дә төгән. Ҡуй, ауыл Советы депутаты, ҡоролтай һәм аҡһаҡалдар ҡоро ағзаһы булараҡ та Солтан хакимиәт башлығына инеп сығырға хаҡлы лаһа. КПРФ-тан төңөлдө... Байрамовтың замдарына инеүҙән фәтүә юҡ. Бигерәк тә Сәмерхановтан файҙа көтөргә ярамай. Колхозды тарҡатыуҙың уртаһында ҡайнаған чиновник таһа. Кем белә, бәлки, былтыр яҙған асыҡ хатты кәнде үҙе тоткарлағандыр. Яуап та бирмәнеләр бит. Ҡыҙыҡ, ә юк, ҡыҙғаныс... Сходтан һуң Рәшит мәрхүм, ҡырын тейәп, һөйләнеп йөрөгән: «Юкты-букты сәйнәп, Бураштың сәпсим бөтөрөргә йөрөй Сәмерханов. Тағы килһә, битенә һыйыр тиҙәген сәпәйем!» Һы-ы, ғилләле янау. Тупаҫ... Мәгәр үҙенә күрә патриотлыҡ таһа...

Әлеге яҙмаларында уйланыу ҙа ярылып ята. Бураш һаман ошо хәлендә ҡалһа, ҡайҙа барып төртөләр ҡалған ғына халҡы? Ғәҙел юлбашсылар һәм полководецтар борон-борондан иң тәүҙә үҙенән бигерәк ҡәүемен һәм ғәскәрен ҡайғыртҡан. Башҡортостан – Ер шарындағы ҡоро ер майҙанының меңдән беренә һыйынған республика. Ә Бураш кистәрен мәрткә киткән кеүегерәк тойолһа ла, Олотүз вә район биләмәһенең күпмелер өлөшсәһе икән, ниңә ауыл усағына һүнеү ҡурҡынысы янай һуң? Ә бит ата-бабаларыбыҙ уның тәүге ҡаҙағын урыҫ дәүләтенә берләшкән дәүерҙә үк ҡаҡҡан. Бураштар ил күргәнде күргән, ил кисергәнде кисергән, бында тыуып үҫкән кешеләрҙе Рәсәйҙең алыҫ-алыҫ тарафтарында ла осратырға мөмкин.

Әкәмәт замана түрәләре. Үҙен үҙе аҫыраған ауылға ник йөҙ менән боролмаҫҡа? Шағир революцияға тиклем үк әйткәнде хәҙер һәр мәктәп балаһы яттан һөйләй:

*Бер аҙым алға баҫам да*
*Әйләнәм мин артыма,*
*Ҡайҙа баҫкандар икән, тип*
*Күҙ һаламын халҡыма...*

Таныш микән был юлдар Байрамов иптәшкә? Юғарырак һәр кимәлдәге түрә «күҙ һаламын халкыма» тигән ғәм менән йәшәһәсе...

Ҡағыҙҙарын, гәзит ҡырҡындыларын барлап оҙаҡ ултырһа ла, яҙмаларына ниҙер өҫтәүҙе кәрәк тапманы Солтан. Почеркы асыҡ, тигеҙ ҙә бит, район хакимына тәғәйен хатты юғары сортлы ҡағыҙға эрерәк хәреф менән компьютерҙа йыйыу маҡсатка ярашлы, тигән фекер төйнәгәндә, үҙҙәренә ҡабаҡ үренә атлаған Дилбәр менән Зөлфиә күҙенә салынды. Ҡатындарҙың мәшәҡәтенә ҡамасауламаҫ өсөн Хажиморатович, еңелсә, мәгәр ыҫпай ғына кейенеп, мәктәп тирәһенә барып әйләнергә ниәтләне.

Бетон күперҙән өҫтәрәк һалынған йәйге баҫма аша сығышлай, туктап, тирә-йүнгә күҙ һалғылаған элекке уҡытыусының күҙенә Биргадир урамындағы «Газель» шәйләнде. Теге нәҫтәкәй бит, Рәшиттең служагы. Әттәгенәһе, исеме?.. Булһа була икән донъяла киҫәмәгән, оялмаған әҙәм! Ауылдарҙа ҡуна-ҡуна тәки килеп еткән! Хәйер, был тирәнеке түгел, хатта ки үҙенә ҡан, ә юк, битен ямарлыҡ тиреһен тунатып биргән Рәшиттең нисек, нилектән харап булыуын белмәгәндер ҙә. Ундай холҡо, бөйөрөндәге сире менән былай ҙа оҙаҡка бармаҫ ине, бәлкем, иллә бынауы алыпһатарға ла бәйләнергә сәбәп бар: һин ташыған суррогат Рәшиттең үлемен яҡынайтҡан түгелме?

Надир урман эшендәлер. Солтан йәйге ыҙбаһынан Иҙелгә күҙ һалғанда, Әбдерәхим менән офицер улы баяраҡ Надирҙың кәмәһендә – ишкәктә кейәүе – йөҙөп бара ине. Хикмәт шунда: Надир сөмөрәк кәмәһен Фазылдыҡынан ярты сакрымдай аҫтараҡ бәйләй. Ә аръяктағы кисеү, йәғни кәмә бәйләгес, өҫтәрәк, Бураш тамағына тапкырыраҡ. Шуға күрә Надирҙыҡылар, ғәҙәттә, тәүҙә кәмәләрен өҫкә үрләтәләр – бирге ярлауҙа ағым тынысыраҡ та, тәрәнерәк тә – шунан ғына ишкәктәрен ныҡлап эшкә егә. Бына шулай өйөнә апарук яҡынайған хәлдә күреп ҡалды уларҙы Солтан. Сөнки Әбдерәхимдең Фазыл менән күрешкеһе йә берәй һыраһын эскеһе, унан бигерәк, ҡорҙашына улы менән маҡтанғыһы ла килгәндер. Һәр хәлдә, ике тәмәке янып бөткәнсе гәпләшеп торҙолар. Майор улы, моғайын, Дилбәр әйтмешләй, юл ыңғай военкоматка инеп, эш белешергә теләйҙер. Ҡустыһының ҡырҡына төбәп килгән Әбдерәхим иһә бөтөнләйгә ҡайтып бара булыр.

...Шул саҡ быларға Зәриә килеп ҡушылды. Әреплəшеүҙәрен бөтөрөп, ҡабат әҙәмсә баҡса эшенә керешкәйнеләр, Зәбир Биргадир урамынан аҫка төшөп килгән кешеләргә оҙаҡ ҡына текләп торҙо, ләкин береһен дә йүнләп таныманы:

– Бер мужигы Эльзаның абыштаһы микән, ә курткалы военныйы кем? Зимний формала тиһәң, фуражка кейгән. Тағы берәүһе?

– Рәшиттең ҡырҡына ҡайтҡан Әбдерәхим абый, улы Руслан, тегеһе – Эльзаның абыштаһы.

– Майор улын беләһеңме ни? Минең күргән дә юҡ.

– Курсант сағында ошонда килеп, ҡыҙҙарҙы үҙенә ымһындырып киткәйне.

– Һинеләме? – Мыҫҡыл сағылды Зәбир һорауынан, Зәриә лә юғалып ҡалманы.

– Кәнишне, миңә – ете, уға ун ете тулһа, ниңә любовь крутить итмәҫкә? Надир абыйҙың кәмәһе Имаш ҡарт тапҡырында. По-пути ултырып сыҡҡанда, дуңғыҙбайҙы ҡарап киләм инде? Орлок та кәрәк, кишер сәсерлек түтәл әҙерлә. Уй, онотоп торам, Сара түтәйгә бурысымдан ҡотолайым әле тәүҙә. Үткәндә үк бытырҙай ине.

Теләһәң нишлә тигәндәй, Зәбир ҡул һелтәне, йомош ҡушты: «Теге нәрҫәнән берәй эшкәлик алып килең әле...» Өндәшмәне Зәриә, тимәк, риза.

Сара еңгәсәйе-түтәйе Зәриәне бигүк яҡын күрмәй, бигүк ҡырға ла типмәй. Бынан ете йылмы элек, эҫенешеп яратышып, аралары үбешеүҙән ашҡан, «мунсала эш боҙоп сыҡҡан» Зәриә менән Зәбирҙең араһын... хәл белешергә барғанында мәҙәк өсөн генә һөйләп, Сания әбейҙән әрләнеп тә ҡуйғайны:

– Күҙең күрмәгән, ботонан тотмағанһың, икеһенең дә үҙеңә ҡәрҙәшлеге бар, бәс, ник урам тултыраһың? Эсеңә йом да ҡуй. Ҡыҙыҡ өсөн генә сыҡҡан һүҙ ҡырҡ ауыҙға еттениһә, ғәйбәткә әйләнә ул. Аслан улай итмә. Һәр кем үҙ ишен эҙләй. Мужит, уларҙан да бәхетле кеше булмаҫ. Дилбәрҙән дә ишеттем, уны ла тыйҙым: Зәриәнең йәше етмәһә лә, загыска барһындар, тип өйрәттем. Туйға аҡса юҡ, тигәс, туйһыҙ ҙа ғәләмәт шәп йәшәп киткәндәр муйындан, тинем.

Сара гонаһын йомшарта һалды.

– Эш боҙғандар, тимәнемсе, өшөгәндәр ҙә, мунсаға инеп, йылынып сыҡҡандар, тинем. Буран ҡоторҙо ла яңыраҡ.

Сания әбейҙән башҡаға ла һөйләнгәндер Сара, юғиһә «ҡышҡы мунса» төтөнө тотош Бурашка таралмаҫ ине.

...«Аҡсарлаҡ»ка инеп, дәрестән иртәрәк сыҡҡан башланғыс синыфта уҡыусы ике малайҙың нимәлер алырға тинлек аҡсаларын һанауын көтөп тә тормай, Зәриә лавка шүрлегенә терһәкләнеп йоҡомһораған Сараға бишәр йөҙлөктәрҙе тәҫләп һалды.

– Нимә алаң?

– Һатыусыны алыр инем дә, һатыусыға бурысым бар, – тип көлмәй генә мәрәкәләне Зәриә. – Бишкә тиклем һанай беләңдер шәт?

– Низнай... Берәү, икәү, өсәү, дүртәү, бишәү... – Теүәлләп, үҙе тегеп алған күкшел халатының түш кеҫәһенә тыҡҡас, Сара ла

бер мәҙәкте иҫенә төшөрҙө. Ҡайҙа инде уға Зәриә ише килештереп һөйләү?!

– Элек аръяк колхозда Хәлекәй ҡарттың тутәйе: «Беҙҙең берсиҙәтель мине әбижәт итә, туғандарына куберәк яҙа...» тигәнме. Бәр-рәс, труддингә быға 1 килограмм тары эләккән, берсиҙәтелдең балдыҙына – 500 грамм ярма. «Биш йөҙ» тигәне куберәк куренгән бахырға... Зәбиреңдер тип уйлағайным утын ярып торған кешекәйҙе. Ярай, бурыслы йөрөмәгәнең яҡшы. Ҡунаҡ курһәтмәйһеңме?

– Какуй ҡунаҡ... Хәтә, үҙең әйткәнсә, низнай әле покаға. Ҡайҙа ҡайнтута?

– Фазыл ней, кәмәһенә төшкәйне, әллә нәрҫәһен баять итмәгә.

Зәриә лә ҡырсынға төштө. Лосман тәмәке быҫҡытып, аҫтан кәмә урләгәнен күҙәтә ине.

– Һаумы, ҡайнтута жизнәкәй!

– Арыу әле, киленкәйем, ниңә былай яңғыҙ?

– Аснәкәт дуңғыҙбайҙы ҡарап киләм тигәйнем. Орлоҡ та кәрәкте. Кәмәңде бир.

– Һарымһаҡ, кишер, һуған сәсергә дан инде мәле. Кәмә йонсотоп ней, ана килә ләһә фарватерҙан... йәй буйы бот күтәреп ятканы... Һапрый, ярҙанырак ишһә ней булған?

Ҡул болғаны – яңырак сөм-ҡара ялтыр гудрон һыланған кәмә ярғарак һырынды.

– Вәт тәк нады! – Фазыл да әкәмәт, Зәриә менән мәрәкәләшергә әүәҫ. – Һиндә, киленкәйем-балдыҙкайым, миңә ҡарата берәй таҡмаҡ юкмы?

– Уймы! – тине Зәриә артыҡ йылмаймай ғына, мәгәр күҙҙәре, куңеле уйнаклағанын белендереп, шаян осқондар сәсә. – Нисәү кәрәк?

– Берәү етә, бажалый. – Фазыл бейәләйҙәрен тоҡандырылмаған паяльник өҫтөнә быраҡтырҙы.

– Т-с-с, ҡана шыбырлайым кейеҙ ҡолағыңа:

*Уң ҡулымда аҡ бейәләй,*
*Һулында ла бейәләй.*
*Әллә ниңә Фазыл еҙнәм*
*Әбейҙәргә әйәләй...*

– Ысвулыш, быны бер әйткәйнең, яңыһы юкмы?

– Пажалыста:

*Арғы оста утын яра*
*Ирһеҙ ҡалған тол бисә.*
*Сер булмаһа, әйтеп ҡара:*
*Һөйәркәләрең нисә?*

– Вәт әйвәт, түлке көлмәйем, түҙәм. Әтеү, минән көлә былар тип, Әбдерәхим яҙа уйлар, Аллам һаҡлаһын. – Шунан Лосман, тауышын күтәреңкерәп, кәмәләгеләргә өндәште:

– Бәләкәс туҡтап китегеҙ. Зәриә киленде алырһығыҙ...

Әллә ни тамағы ҡызырыҡламаһа ла, Әбдерәхимдән бигерәк, курсант сағынан бирле осратмаған майор улын күргеһе килгәндер Фазылдың. Әбдерәхим дә, нәҡ бынан ҡырҡ көн элгәре ише, ҡулын ҡыҫып-ҡыҫып, арҡа тапап күреште йәшлектәге остазы менән. Улына кәмәлә үк ҡушҡандырмы, уныһы Фазыл менән ике ҡулын, Зәриә менән һыңар ҡуллап күрешкәс, – еңел һөйәкле! – егеттәрсә атлап лавкаға күтәрелде һәм Саранан, пакетка һалдырып, иң ҙур баллон һыра, шыптырға тултырылған тоҙло сохарый тотоп кире төштө. Фазылдың дежур көрөшкәһенән берәрҙе һемерҙеләр, йәне көйөп торғанғамы, Зәриә лә ҡуй тимәне. Иғтибар итте: Руслан һағыҙ сәйнәргә кереште. Дилбәр апайы «Шайгуға оҡшаған» тип ярайһы дөрөҫ төҫмөрләгән: ҡаштары оҡшаш, яҫы, мәгәр был суҡынмыш йәшерәк тә, сибәрерәк тә. Ҡараштары уйсан, ауыр юғалтыу телгеләйҙер һаман бәгеркәйен.

– Пивоның ҡалғаны һиңә, Фазыл абый, – тип оҙон ғына тар кәмәне сайҡалта биреп ҡойроҡҡа уҙҙы Әбдерәхим. Онотмай Әбдерәхим: малайлыҡта Фазыл уны аҫҡы урамдыҡыларҙан йәберләтмәне, үҫмерлектә үҙ звеноһына яҙҙырып, бесән эшенә өйрәтте, колхоздың бөтмәҫ йомоштарына иш итте.

Тиҙҙән завхоз кейәүҙәре ишкәгенә йәбеште. Руслан нәҙек баштағы һәндерәгә ултырғайны ла, әфисәрлеген иҫләпме, тора һалып, Зәриәне етәкләп мендерҙе, уныһы кәмә моронона ҡунаҡланы.

– Ҡомға күмеп ҡуям балунды – ҡайтыуығыҙға, – Фазылдың ауыҙы ҡолағына етте. – Хуш-һау!

– Ҡышҡа тиклем... – Әбдерәхимдең һаубуллашыуын йәпле генә тәләкә өҙҙө:

– Эсеңә күм, – Зәриә шундуҡ йомошон да өҫтәне. – Үҙең йыбанһаң, ҡайнтутай, сәғәт ярымдан шылтырат та Зәбиргә кәмәңде бир – мине сығып алыр.

– Тушнымы? Ике сәғәттән, әләйгәс. Ишкәк ывтулкаһы ҡупшыған, хәҙер ямайым уныһын. Соцработник киләрем тип өндәшкәйне әбей-һәбейгә, эйәртеп ал шул йоҡа елкәне, һиңә яҡын тора, шәт.

Тағы аҙ ғына үрләгәс, борттары ҡуйы һары кәмә ҡырҡа аръяҡҡа тартылды.

– Женщина, вам неудобно, да и не безопасно. Давайте меняться местами. – Майор бөршәйеңкерәп ултырған Зәриәгә иплe генә өндәште. Әбдерәхим эйәген тегендә-бында һонғолап,

кейәүе менән гәпләшә. Зәриәгә етә ҡалды – тел сарларға сәбәп табылды. Аҡты ҡаранан, йәғни әфисәрҙәрҙең чинын ярайһы айырһа ла, урыҫса Фәнидә, Сәйҙә ише Бураш бисәләренән ҡайтыш һупаламай.

– На ходу нельзя менять места, тауариш гинерал. – Артабан юрамал акцент менән ләпелдәне. – Адын армэн ысказал: «Жыншина, пажалыста, длин-ный садись». Оказывается, не умел говорить «ложись».

– Я не армянин, я – башкир, – Руслан күмһеү ирендәрен киреп йылмайҙымы, һирәк, ләкин теүәл тештәре асыҡ күренә. – Только вот родному языку не обучен...

– Не хочешь – заставим, – Зәриә лә йылмайҙы, сикәһендәге ҡаш осона яҡын йөйө, беленер-беленмәҫ сырыштары яҙылып киткәндәй тойолдо. – А все-таки здесь опасно...

Зәриә кәмә осондағы буш шәкәр тоҕон майорҙың һоро ботинка остарына йәйҙе лә сөңкәйеп кенә шунда шылышты, ирекһеҙҙән яурын баштары офицер тубығындағы лампаска терәлде. Ишкәктән сайпылған тулҡындар ҡыуыҡланып сылтсылт эркелешә, икеһенең дә тәне буйлап ләззәтле тулҡындар йүгерешә. «Кеше иренең тубығына терәлеп барыу ҡалай рәхәт». «Кемдең ҡатыны икән? Интересная особа...»

Йәнтөйәген һағышлы күҙләп барған Әбдерәхим елпенеп ҡуйҙы:

– Ҡара әле, кейәү!

Уға ҡаршы ултырған ирекәй аҙға ғына ишкәктәрен ҡалҡытып, өҫкә баҡты: егермеләп һуна өйрәк утрау тәңгәлендә, ике яҡта ла ауыл шәйләптерме, юғарыраҡ талпынып, быжҡылдашып Күлбар үңеренә йомолдо.

Төбө ҡырсынға һөжөрөлгәс, иң тәүҙә ҡойма итекле ирекәй төшөп, кәмәне йәйпәк таштар эргәһенә үк яҡынайтты. Баяғыса, майор Зәриәне, йоҡа бирсәткәһенә тотондороп, ярға баҫтырҙы. Зәриә ҡыҫҡа итектәрен сайыштырған арала ирҙәр көңгөр-ҡаңғыр бер тәмәке тарттылар ҙа, кәмә кирегә юлланды. Кейәүҙәренә Әбдерәхим эйәген һелккесләп, ә Руслан честь биргәндәй итте лә ҡул болғап ҡалды.

Шыйыҡ таллыҡтағы һукмаҡ айырсаһында алдан атлаған Зәриә лә хушлашты былар менән.

– А-на, минең өй... баҡса рәшәткәһе буяуһыҙ. Остановка – мәсет яғында... – «Минең» һүҙенә мәғәнәле баҫым яһап, майорға ҡарамаҫҡа тырышты һәм атаһына өндәште. – По-пути любуй мәл килең, рәхим итеп...

* * *

Хажиморатовичты мәктәп директоры әйҙүкләп ҡаршыланы, уҡыу барышы, хужалыҡ проблемалары менән таныштырҙы. Уҡытыусылар артығы менән етә, ә уҡыусылар һаны кәмегәндән-кәмей. «Ярай, киләһе йылдан Әмирә подкурска йөрөй башлар», – тип уйланы Солтан һәм йомошон йомошланы.

– Бер мәҡәлә яҙғайным, директриса туған, секретарың компьютерҙа баҫып бирмәҫме?

– Баҫырбыҙ, абый, мәҡәләне генә ни...

– Ҙур ғына ул, кәмендә ете бит тулаһы... Ә башҡортса хәрефтәре бармы?

– Юҡ шул, абый, ҡуйып бирермен, тип вәғәҙәләгәйне Марат Солтанович, август аҙағында. Мин Өлөтүҙдән программа алырға килешкәнмен. Ҡайтамы улығыҙ яҡын арала?

Улының исеме эшлекле тонда телгә алыныуы Хажиморатовичтың кәйефен күтәрҙе.

– Ошо аҙнала ҡайтыуы ихтимал. Күбенә түҙгәс, әҙенә түҙәрбеҙ...

Әлбиттә, ҡайтырҙар, хатта күмәкләшеп. «Әтей, Әмирәне Әлфирәнең күргеһе килә, аҙна аҙағына ҡайтабыҙ. Марат, кейәүең дә отгул ала...» тип шылтыраҡҡайны төнәгөн эстәрлеләр. Осһоҙ ҙа, тик әләгеүе лә анһат, әтейем ун икенән һуң ғына әүәй була торған, тип гелән ана шулай сәғәт беренселә борорға гәҙәтләнгән ҡыҙы.

– Улайһа, Хажиморатович, иртәгәләрҙә үк завхозды ебәрәйем Өлөтүҙгә программа артынан, – тине директор ханым илтифат менән. – Үҙегеҙ нисек, мәктәп һағындырмаймы?

– Хәҙер беҙ – домашний педагог... Әйҙә әле, һеңлекәш, китапхананы ҡарайыҡ әле. Ике йөҙләп китап бүләк итәм – урын бармы икән?

Директор белешә һалды: китапхана асыҡ.

– Әйҙәгеҙ... Һеҙҙәге һәр китап фәһемле. Сортировать иткәйнегеҙме һуң?

– Әлбиттә... Әҙер генә. Кәштәләрҙә урын етәһе...

– Үҙенә күрә меценатлыҡ был, Хажиморатович, гәзиткә яҙырлыҡ өлгө. Ҡаршы килмәһәгеҙ, иртәгә оҙон тәнәфестә уҡытыусылар... и-и, тотош коллектив менән барып алабыҙ, фотоға төшәбеҙ. Шәхсән мөһөрөгөҙ баҫылған өсәр китап тотоп ҡайтһалар ҙа, балалар ғүмерҙә онотмаясаҡ.

– Һо, кәмендә дүртәрҙе тотторам.

Ҡәнәғәт төҫ менән һәңгәҙәк аҙымлап өйөнә ҡайтышлай, Солтан бетон күпергә етәрәк туҡталған «Газел»гә иғтибар итте. Үҙен танып, һаулашҡан булды әле шоферы.

– Абый, иҫәнме? Анау көндө ну һыпырттығыҙ – ҡыуып та етеп булманы...

Хажиморатович эшләпәһен ҡалҡыта биреп кенә сәләмләне лә һуҡмаҡтан уҙҙы ла китте. «Депутат булараҡ, өшкөрөп ебәргәндә?..» Мәгәр ниәтенән тиҙ төңөлдө: «Аҡ эт бәләһен ҡара эткә һалып маташа, тиеүселәр табылыр». Эт тигәндәй, бә-әй, Рәшиттең алабайы һырпалана түгелме аяҡ аҫтында? Таныш машина, хужам ошонда ураламы, тигән уйҙа микән ни мәхлүк. Әйтәгүр, Рәшитте ерләгәндең иртәгәһенәме, моңһоу ғына еҫкәнеп, Солтандың ҡапҡа тирәһендә лә сыуалды бер аҙ. Ошо тирәнән бесәнлек яғына эйәреп барғайны лаһа...

– Берәй нәмә һатып ал, абый, хәҙер артҡы ишектәрҙе асам.

– Рәхмәт, мохтажлығым юҡ әле...

Солтан өйөнә еткәндә, бураштар берәм-һәрәм «Газель» тирәһенә килә-китә башланы. Полимер һауыт-һаба, пластмассанан ҡойолған ваҡ-төйәк, Әмирәнеке ише балалар итеген алғандар күренештерә. Ихатала Дилбәр менән Зөлфиә был юлы, ахырыһы, сәйләмәй генә ҡайтырға йыйынған.

...Утын ярҡаларын өйөп бөттөм, бер көйрәткәндән һуң ер ҡаҙа башлайым, тип яурынына курткаһын әйләндереп ябынған Зәбир түбәлек ышығында ултыра. Ҡапҡанан тәүҙә ике ҡулына ике ҡыҫҡа итек тотҡан ҡыҙы, артынса ҡултыҡ аҫтына ҙур ғына асыҡ йәшел тас тотҡан ҡәйенбикәһе күренгәс, ул, һалдаттарса ҡыҫҡараҡ алынған сәсен ҡағыштырып, урынынан ҡалҡынды. Буйтым биҙрәгәндер үҙенән ҡайынтүтәйе – күҙенә лә элмәй! Зөлфиәне етәкләп өйгә инде лә сумды. Солан ишеген шапылдата яба...

Зәбир баҡсала көрәк һабына йәбешеп тә өлгөрмәне, Зөлфиәһе йүгереп сыҡты ла, тартынғандай, бигүк яҡын килмәй генә өндәште:

– Әтей, Фазыл быуай тилифундан әйтте: әтиең әниеңде апсыҡһын аръяҡтан, тине.

– Э-һә, һин дә эйәр, ҡыҙым.

– Эй ҙә, мин яңы итегемде кейеп ҡарайым. Әмирәнеке кеүектән әпирҙе дәүинәй...

Бәрәңге баҡсалары аша тура һуҡтырыуҙы килештермәй, ҡабат тәмәкеһен быҫҡытып, Зәбир аҫҡы тыҡрыҡтан бармаҡсы булды. Бетон күпер аръяғындағы битләү артында «Газель» тора. Ике-өс кеше асыҡ артҡы ишегенән әйбер һайлаштыра. Бына ҡайҙан алған икән итек менән тасты ҡәйенбикәһе менән ҡыҙы. Музыка тауыштары ла ҡолағына шунан салынған, имеш. Ә ул һармаҡ, әллә элекке бағана радиоһын рәтләгәндәрме, тип уйлай яҙғайны.

Фазыл яр аҫтында ине. Бәй, һалҡын ғына күрешәсе.

– Отпускығамы, сәпсимгәме?

– Әллә инде, абый, аптыраганский.

– Донъя аптырата шул. Бар, хәҙер Зәриә менән теге... пристангә кем ҡатынҡай төшә, алып сығырһың. Йотаһыңмы пива?

– Әллә... бармы һуң? Яҡындан ҡатын алһаң, ҡолағың ҡаты булһын, тигәндәр. Әрләнеүҙән алйып барыла...

Тирәк киҫкәһе аҫтынан алып, өстән бергә бүҫкәргән бухый баллонды Лосмандың атаҡлы көрөшкәһе менән төпләп ҡуйҙылар.

– Киленең энзәһын әбишәйт итте, йыраҡ йөрөмәҫһең; тоҙло әгүрсә сәлдер, йәме, абый?

– Әллә ни желаныйым юҡ та, ладны... Ана, сәғәт икегә тигәйне – тушны күренде Зәриәләр...

Зәриәһе шыпырт ҡына Зәбиргә «энзә» ҡалдырып, соцработник ҡатынҡай менән Бураш йырҙаһынан сауҙа машинаһы яғына ыңғайлағас, Зәбир тирәккә терәлде лә ағын һыуға ҡарап, «Беренсе мөхәббәт»те һыҙғырып алды. Тиҙҙән ҡырсын шығырлауына йөҙөн борҙо. Фазыл, имеш. Эс серҙәрен уға бушатырғамы, юҡмы? Эй ҙә, оҡшамағанды. Әңгәмәлә Зәбир артығын сиселмәне, бары Бураш яңылыҡтары менән ҡыҙыҡһынды. Лираның хәле, Солтандың аҫырау ҡыҙы, Рәшиттең вафаты, ауыл сходы – байтаҡ яңылыҡтар уртаға һалынды.

Зәриәһенең элекке һымаҡ юҡ-барҙы сәйнәргә әүәҫлеге кәмегән кеүек. «Газель» шоферы – служагы хаҡында Танкист әнеһе Зәбиргә арлы-бирле генә ләпелдәгән дәһә! Алыпһатар, оялмай ҙа, ауыл уртаһында музыка уйнатып баҙар асҡан, Фазыл абзыйы әйтмешләй, ысволыш нәҫтәкәй!

Ҡабат кеше булмаҫтыр, соцработник Сания ҡортҡала йоҡларға ла ҡалғылай торған, тип Фазыл кәмәһен йоҙаҡлап ҡуйғас, Зәбир ишкәктәрен өҫкә мендереп, оло ҡапҡаға һөйәне лә сөптөрҙәп кенә аҡҡан, тал төптәре сүп-сарға сырмалған Бураш буйлап күпергә атланы. Сара еңгәһе генә арттырып һатырҙай алыр нәмәһен алып китһен дә, мөртәт сауҙагәр менән танышып ҡалыр. Мобилкаһының күн тышлығы эсенә бит йөҙлөк аҡса ҡыҫтырған, бәлки, гастролер торғаштың берәй яртыһы яталыр... Тәмәкеһе лә бөтә... Йәне үртәлеп торғанда, әсе-мәсе эсен тишмәҫ. Әртисләнеп ҡарағанда? Мәктәп сәхнәһендә унан, холоҡ-фиғелен белгәнгәме, хулиган малай ролен уйнатҡыланылар ҙаһа. Тик ул спектаклдәрҙең аҙағы гелән тиерлек геройҙың яҡшы яҡҡа үҙгәреше менән тамамлана торғайны. Әллә «Охрана...» тип яҙылған ҡыҙыл таныҡлыҡтарҙа ғына күрһәтеп, милиция хеҙмәткәремен, балыҡҡа килгәйнем, мәҫәлән, Благзаводтан йә Бөрөнән, тиергәме? Ай-һай, кәкере ҡайынға анһат ҡына терәлмәҫ йышылған бәндә.

– Чем торгуешь? Барышы күпме? – «Күпме?» тигәндән Әлфәрит Зәбирҙе үҙ кешегә һананы.

– Шором-бором тимәйҙәр былай. ...Үҙең ҡара, абый. – Кабинаһына гәзит йәйеп, баҫҡан килеш көйшәнеп торған Әлфәрит ауыҙ-моронон һыпырғылап, машинаһының ярым ҡыҫыҡ артҡы ишеген еткерә асты.

– Парфюмерия, полимер посуда, резиновый... – Шаҡышоҡоһон һанап бөтөргә Зәбир ирек бирмәне:

– Слушай, брат, как никак серьезный охранала служим, коллективный пикникка килгәйнек... Катер – анау перекатта... Местный мужиктар балыҡ һөҙөшә, сам понимаешь, өшөйҙәр. Спирт юҡ микән, тип ебәрҙе мине старший. Кстати, исемем – Руслан. Ә һинеке?

– Әлфәрит мин. Эх-ти, һораған нәрҫәң юҡ шул. Бар ине лә, өс-дүрт ерҙә туктағас ни, алып бөттө мужиктар. Ә бында үткән юлы служак бурыска ярты меңлек колечко алып ҡалғайны – жалкы, ...әкбәр! – Әлфәрит ниңәлер «Алла» һүҙен телгә алырға тартынды.

– Арзан йөҙөк йәлме, әллә дорогой другыңмы? – Зәбир быны ҡатыраҡ һораны.

– Икеһе лә... Аръякта ла служак бар, ул рәзгилдәй түләй алмаҫ, бында Фасил тигән общий знакомыйҙан түләтмәһәм? Уныһы Уфала, ти. Олотүҙгә сыҡһам, ҡунам инде бөгөн кис другта.

Сикә тамырҙары һулҡылдай башлаған Зәбир:

– Уныһы... бывший танкисмы? – тип тыныслығын юя барҙы.

– Во-о, ҡушаматы ич! Ә мин авариянан һуң ултырманым да танкыға... Рәшит другтың... тиреһе яраны. – Әлфәрит, битен һыйпай-һыйпай, операция хаҡында ҡыҫҡаса һөйләп бирҙе. – Ә аръяктағыһын бомж тиергә мөмкин. Беләһең әллә үҙен, Руслан абый?

– Белмәйем, – ҡустыһын бынау һимеҙ битле мөртәттең «бомж» тиеүенә йәне көйҙө Зәбирҙең. – Короче, гони бер флакон и пузырь... и бер банка «Шихан». Сигәритең нема, шикелле?

Әлфәрит елкәһен тызып торҙо ла:

– Ладно, серьезный охранникка заначканан – пчеловод Файрушин өлөшөнән әпирәм... Скидка менән, – тине. – С вас всего триста руб, абый.

Зәбир куртка кеҫәһенән алып биш йөҙлөк тотторҙо ла сдачаһын буш бумажнигына ҡыҫтырҙы. Хәмерҙәрен беше шыптырға һалып алғас та китергә ашыҡманы, хатта кабина яғына ыңғайлап, тәмәке тоҡандырҙы. Әлфәрит авто-аудиоһына сыртлатып кассета тыҡты, унан шым ғына йыр ағылды.

*Икәү яҡкан усаҡ һүнгән инде,*
*Көлгенәһен елдәр тарата...*

Бүтән һатып алыусылар килгәне күренмәгәс, Әлфәрит Зәбир менән уны-быны тылҡыны:

– Денисовкала, э-э, Сасын пчеловоды менән түтәйендә бергә ҡундыҡ. Кешенән иҫке ҡорт дадандары йыйып йөрөй Фәй-

рушин. Бөгөн киләм, тигәйне – юк, значит, бахмур. Вот так, мари ауылында – мариса, үҙебеҙнекеләргә йә башкирский, йә татарский музыка уйнатам.

– Толково! Ҡана әле, парень, стаканчик бир: аяк юллык елгәрәм дә таям. Сам понимаешь, уха бешә островокта. – Әлфәрит әпкәләйләнеп Зәбиргә ҡытай термосы ҡапкасын бороп һондо. – Понимаем. Мә, абый, эшләпәле депутат күрмәһен, тиҙ генә ҡылан.

– Бесәй генә тиҙ балалай, ти урыҫ... – Сауҙагәрҙе йәмерәйтеп, Зәбир ҡапкасты тултыра яҙғансы алама еҫле хәмер ҡойҙо ла өҫтөнә термостан йылымыс йәшел сәй өҫтәне һәм бойорғандай әйтте. – Ну, парень, тәүҙә – үҙең!

– Што һин, абый? За рулем ич, плюс – гастрит...

– Нәрсә, ятып торорһоң кабинаңда. Дорожный патруль нема, эч, тим, дөмдө буш хәбәр һөйләргә яратмайым мин. Служактарыңдан ни ерең кәм? – Зәбир колбаса телемдәре эргәһендә яткан бәкене асты ла, жонглер ише уйнаткылағас, һабын ҡағыҙ салфеткаға урап, усына ҡыҫты һәм үткер осон Әлфәриттең ҡатлана башлаған эйәк аҫтына терәне.

– Не шути, абый...

– Какие шутки? – Бәке осо тегенең тиреһен тартыштырып, төпкәрәк шылды. – Үҙеңдеке кеүек күреп һемер!

– Бер генә йотам – шабаш! – Бәке осо эйәк аҫтынан ҡалай ҡапкас аҫтына күсте һәм Әлфәритте сытайтып, күҙҙәре алаканланғансы суррогатты ғорлаһына түңкәрергә мәжбүр итте...

– Вот молодец! Хәҙер... дуй отсюда пасекаға или бынауҙан – напрямик Денисовкаға, – Зәбир тәүҙә Фәнидәләр өйө тапкырынан түмәләскә тартылған иҫке баҫыу юлына, аҙак күпер яғына ишараланы. – Һине «һыйлауым» хаҡында кишер сәйнәһәң, смотри туда!

Әлфәрит бетон күпер аҫтына бакты. Покрышка ята мукләнеп, тутык тимер-томор...

– Шунда ҡолауың бар, за рулем... Отраваңды үҙеңә ҡалдырам, понял, крохобор?

Ҡобараһы оскан Әлфәрит шарт та шорт машина ишектәрен ябып ҡалды, Зәбир иһә пакетка курткаһын ҡуша тотоп, ҡыраздағы оҙон йәй мал тояктары шымарткан һукмактан беседка яғына атланы. Йәнәһе, утрау тирәһенә ыңғайлаған берәү.

Шулай, бөгәсә Бураш ике әҙәмде ерһенмәне.

### 3

Уф, әллә береһе башкорт... Ҡып-ҡыҫка юбка кейгәнгә буйһыуырак тойолған ҡыҙ төҫкә-башка Зәриәне хәтерләткән кеүек әле. Бигерәк тә ҡыйғас ҡаштары, ҡуңыр сәстәре, янып торған шоморт күҙҙәре менән. Фәйләсуфтәрҙән кемдер уйынлы-ысын-

лы яҙып ҡалдырғанмы: «Фәхишәләре бар икән, ул халыҡ... милләт тип һаналырға хаҡлы». Әлләсе...

Юлбикәләр артыҡ ҡыйбатлы машинала түгел, үҙҙәре лә осһоҙораҡтыр... Ошолай уйлап та өлгөрмәне, юлдың заправкаға инеү өсөн киң генә киҫемендә, тәңгәленә етер-етмәҫ тормоздарын һыҙғыртып, «Лада» туҡтаны.

– Эй, красотка, сколько просишь? – Кабина ишеген асмай ғына өндәште бурһыҡ битле таҡыр баш. – Поехали с нами на дачу.

Инде тынычлана төшкән Кәримова бер-ике аҙымға сигенеп, баяғы бетон киҫәгенә эйелде: бәй, ҡупмай ҙа уныһы – ҡәләм йыуанлығы арматураға бәшмәк ҡалпағылай ҡатҡан, имеш. Уйынлы-ысынлы әйтелгән тәҡдимдең хәтәр отпор аласағын һиҙенгән егет «...банутая какая-то!» тип тә өлгөрмәне, машина ут ҡапҡандай алға һыпыртты. Күҙ менән ҡаш араһында «долбанутая», «...банутая» тип мыҫҡылланған Лира эсенән генә «сами вы такие!» тип әсенде лә туҡталышҡа ашыҡты һәм тәү осраған маршруткаға ырғып менде. Ҡайҙа булһа ла илтер әле.

Вәт, йәштәр... Баяғы ҡыҙҙарҙың береһенә ун һигеҙ тулған микән? Абау, әхирәттәренән кемдер ғибрәт итеп һөйләгәйне былтыр. Кемдер, тип, Светлана менән бүлмәләш талибә. Эйе, С. ҡалаһында эшсе егет еңел холоҡло ҡыҙға заказ бирә. Килтереп индерә әҙмәүер өс ҡыҙҙы: һайлап ал, хаҡын түлә. Устары менән битен ҡаплап, ҡыуа теге быларҙы: өс ҡыҙҙың береһе – ауылдыҡы, апайының ҡыҙы, имеш...

Әмәлгә таянғандай, маршрутка телеүҙәк яғына етәрәк туҡталды, ә бынан һәйкәлгә күп тә ҡалмай.

Кеше күп ине һәйкәл эргәһендәге майҙанда, ниндәйҙер викториналар, конкурстар бара, буфет эшләй.

Пирожный ғына алып, кофе эскәндә ҡылт итеп ошондай уҡ полимер ҡәнәфигә терәлеп, Н. ҡалаһында Данир менән ултырғанын хәтерләне. Ә-ә, кеше күп булғанғамы, эргәләренә пенсионер һыйынды ла, «Боржоми» йотҡолап, һыуһынын баҫырға ултырҙы. Уйсан ғына уҙаман йәштәр менән ҡыҙыҡһынды, Өфөнән икәнлектәрен белгәс, йәнләнә төштө: «Йәшел ҡала, ҡалҡыуҙағы балҡыу ҡала... Күргәнем бар... Ҡарағыҙ әле дамба аръяғындағы торбаларға. Ундағы ҡаласыҡта бөтөнләй икенсе тормош. Етеш тормош... Тап-таҙа, ни теләйһең, шуны һатып алырға мөмкин. Киләсәк мегаполисы! Унда ябай эшселәр ҙә бына тигән униформа кейеп йөрөй. Һүгенгән, талашҡан кеше юҡ. Квартиралары евротипный. Автобустары ла бындағынан айырыла. Әлбиттә, хеҙмәт хаҡтары ла, пенсиялары ла юғары – яҡынса ун тапҡырға... Һеҙгә, буласаҡ кадрҙарға, бәхет теләйем. Егермеләгән шундай нөктә бар Рәсәйҙә».

Ниңә ауыҙ һыуын ҡоротоп маҡтаны икән серле мегаполисты кафелағы ултырҙаш ҡартлас? Бәлки, заманында хиләүәт тормош

хөкөм һөргән супер-ҡаласыҡта йәшәгәндер. Үҙен интеллигенттарса тотҡан кеүек тә иҫендә ҡалған, элгәре пенсионерҙарҙың хәле үтә мөшкөл ине шул.

* * *

Лира сумочкаһында ҡаҙынып, күҙгөһөн алырға теләгәйне, аптырап ҡалды: ҡыштырлап торған купюралары шыма, тәҫле, өҫтәүенә, гелән иллешәрлек стипендия эргәһендә, бәй, уртаға бөкләүле йөҙлөк өс аҡса ятасы. Кемдеке? Ҡайҙан? Юллыҡ унарлыҡтарҙы кеҫәһендә йөрөтә, былары... кистән юҡ ине, иртәнсәк, әлбиттә, сумкаға тығылманы. Дачницаның этлегеме, әллә изгелегеме? Ә-ә, рәнйемәһен ҡыҙ, апаруҡ ярҙамлашты тип, Лира йоклағанда һалғандыр. Һы, эсте тишмәҫ... Йомарт кеше, ғәҙәттә, мәкерле булмай.

Тороп китергәрәк уҡталғанда, ҡаршыһына минералка менән ике егет килеп ултырҙы. Телдәре бөләк буйы быларҙың. Һөйләнеүҙәренә ҡарағанда, сәсәндәр бәйгеһенә әҙерләнеп йөрөйҙәр.

– Һин, әмүткә, әйтешеңдә урыҫ һүҙҙәрен ҡыҫтырмаҫҡа тырыш, йәме.

– Үҙең һуң, шомбай? Нимә аңлата «әмүткә»?

– Ә-ә, белмәйһең. А...ҙ була, Һаҡмарбаштың һармаҡ башы!

– Һүгенмә, Салауат эргәһендә буғауыҙланырға ярамай. Ишеттеңме, Сибайградта мат өсөн штраф сәпәйҙәр.

– Һо-о, штрафка бата икән минекеләр. Бисмилләнән һуң һәр хәбәргә «әмүткә»не ҡыҫтыра. Олоһо ла, кесеһе лә.

– Кәнишне, а...ҙ булғасһығыҙ.

Пырх итмәһенме Кәримова. Егеттәр аңланы: ултырҙаштары – милләттәш.

– Ҡай яҡтың гүзәле һин? – Төпөшөрәге, төймә танаулыһы көлмәй генә һораны. – Әйт, һылыуым, әйт: әсәйеңә кейәү кәрәкмәйме?

– Ҡариҙел буйынан мин. – Лира йылмайып ҡалҡынды, инде мыйыҡлы егет тел сарланы:

– Ҡариҙел ҡыҙы менән танышырымды белгән кеүек, иртәнсәк кенә кәләште айырып киткәйнем...

– Ә минең ошоғаса берәүгә лә ғашиҡ булғаным юҡ, – тигән булды төпөшө.

Өсәүләшеп һәйкәл яғына атланылар. Нисектер хәсрәттәре баҫылған һымаҡ хис итте үҙен Лира. Ҡайҙа уҡыуын әйттерҙеләр, үҙҙәре былтыр аграрныйҙы бөткәндәр икән. Колхоз-совхоз системаһының тарҡалыуы арҡаһында дипломдары буйынса эшләмәүҙәре йәл.

– Буранбай ағайҙың байтаҡ шиғырын беләм... – Мыйыҡлы сәсән, тимер юл күпере аша уҙып барған оҙон составҡа уйсан ҡарап, береһен ятларға кереште:

*Мин үҙғынсы түгел, –*
*Китеп барыусы.*
*Алғамы,*
*арткамы —*
*Барыбер.*
*Һеҙ диспетчер түгел, –*
*Тамашасы.*

Күпер ауыҙына етәрәк, бирегә елдергән оҙон пассажир поезы һүҙып ҡына, үкертмәй генә гудок бирҙе: сәләм, Салауат! Һаумы, Өфө!

*Йәшеме,*
*ҡартымы —*
*Барыбер...*

Ҡайһылай ҙа тура килә Лираның әлеге халәтенә!

*Һыҙғыраһығыҙмы,*
*Бис ҡысҡыраһығыҙмы, –*
*Барыбер:*
*Мин – китеп барыусы!*

Гүйә, сәсәндәрҙең оптимислыҡ хәсиәте талибәнең булмышына күсте... Шоколад тоттороп, Лираны туҡталышҡа хәтлем лабыр-лобор оҙатып ҡуйҙы егеттәр. Ни яғы менәндер, һәй, төртмәстәре менән былар Зәриәне йәнә хәтеренә төшөрҙөләр.

Вахтер ир бытовкаһына киткән сағында, исемдәрен белмәһә лә, әхирәтенә эйәргән Лираны йөҙгә таныш ҡыҙҙар күрше факультет ятағына һүҙһеҙ үткәрҙе. Буш койка ла табылды, өсөнсө тәүлек тигәндә саҡ туйғансы йоҡларға форсат тейҙе уға. Сәғәт туғыҙҙа Данир эсәмәска ебәрҙе, тимәк, өйөндә, өйөндә саҡта ҡысҡырып һөйләшергә ярамайҙыр. «3-тәге осрашыу үҙгәрешһеҙме?» Лира юрый киң билдәле кинофильм исеме менән яуап бирҙе: «Осрашыу урынын үҙгәртергә ярамай».

...Сулпан Байрасовичка ике занятие араһында инеүҙән фәтүә юҡ, шуға Кәримова уны сәғәт икелә, һуңғы пар бөтөү менән һағаларға булды. Ҡыҙыҡ, күпселек төркөмдәштәре уға ҡырын ҡарамаған да кеүек, мәгәр яҡын да килмәйҙәр, әңгәмә ҡормайҙар. Ә бына икенсе лекцияла яртылаш буш рәттә яңғыҙы тиерлек ултырған Лираны күреү менән, Светлананың төҫө боҙолдо. Аңлашыла, дәрескә йөрөмәй ҙә «Башковитый»ҙан маҡталған, уны профессор үҙ урынына экзаменатор рәүешендә файҙаланған, хатта ки аспирантура хаҡында һүҙ ҡуҙғатҡан. Ғәрлегенән түгел, көнләшеүҙән ятып ҡына уләрлек хәлдә икә-

нен һиҙҙермәҫкә тырышты. Хәйер, һуңғы курста староста-ларҙың абруйы ташҡа үлсәйем генә.

Деканатта ла Кәримованы һалҡын ҡаршыланылар. Бигерәк тә методистка. «Уҡып тик йөрө, ниңә борсолаһың?»

Байрасович иһә үҙен бюрократтарса тотто. «Ордер юҡ, бүлмәҫ та кеүек... Тотош группаң ҡаршы!» – «Ә ниңә Светланалар өс урынлыҡ бүлмәне... икәү генә биләй?»

Ҡапыл һыу уртлағандай өндәшмәҫкә әйләнде декан урынбаҫары. «Сәмерханов Уралдан... ҡайһылыр экзаменатор аҡса таптырған» тигәнме әсәһе Зилә. Бәлки, ул взяточник бәндә... әшнәһелер Сулпан Байрасовичтың. Бәлки, үҙелер ҙә?! Яҙғыһын Лираны яҡташҡа һанап һөйләнгән булды бит әле Алия Ғазиевна ҡаршыһында. Ҡариҙел буйынан, имештәр, Лира ла, үҙе лә.

– Мин шәбәйҙем... Справкала асыҡ күрһәтелгән.

– Справкаң булғаны яҡшы. Тик унда?.. Отчуждение тигән социаль-психологик термин, үкенескә күрә, хәҙерге көнитмешкә ныҡлап инә. Бындай осраҡта приказ элеп тә... бер ни ҡырып булмай. Академик отпуск хаҡында уйлап ҡара.

– Академ алмайса уҡып бөтөргә ине.

– Тырышлығыңды беләбеҙ. Фатир эҙлә. Матди ярҙамға, путевкаға ғариза һал.

– Санаторийғамы? Бирмәҫтәр, тим, сөнки сирем ябыҡ формала уҙҙы. Башланғыс стадияһында стационарға юлығыуым яҡшы булған. Эҙләнем: фатир ныҡ ҡиммәт, әнейем былай ҙа кредит түләй... – «Бөтә өмөт һеҙҙә инде» тимәксе Лира ирендәрен ҡымтыны.

– Алдың да, ти, ордер, ә иптәштәрең ятаҡтан эткеләп сығарһа?

– Ғәфү итегеҙ, «приступить к занятиям...» тигәндәр ҙә... – Бығаса ҡымшанмай ҙа торған Кәримова өҫтәлгә табан ярты аҙым яһаны. – Уҡырға йөрөйөм – йоҡларға урын табылмай. Нишләргә һуң миңә?

Декан урынбаҫары ҡабат туң йөрәккә әүерелде, Лираның: «Районға ҡайтып килергә рөхсәт итегеҙ. Ошонан башҡа кейемем дә юҡ...» – тиеүенә яуап бирмәне, теләһәң нишлә тигәндәй, эйәк кенә ҡаҡты.

Коридор ашаһында бүлмәсек биләгән методистҡаға ла әҙ-мәҙ зарланды Лира, баяғы үтенесен ҡабатлап. Лираның өс көн элек кенә талапсан профессорҙан маҡталыуын ишеткән ҡыҙ был юлы ифрат алсаҡланды. Киләһе йыл диплом яҡлай, киләсәктә уның да һис юғы соискатель сифатында берәй темаға тотоноуы ихтимал. Хәлбүки, кәпәс һалмағанда ла, Кәримоваға ла ҡырын ҡарарға ярамаҫтыр. Перспективалы...

* * *

Расписание таҡтаһына етмәҫ борон джинсы кеҫәһенән сыңғыр-саңғыр сәселде: Данирҙан хәбәр! Лекцияла ултыралыр тип, шылтыратмай, яҙыу ғына ебәргәндер. Нәҡ шулай. Яҫы тәҙрә тупһаһына һалып, эсэмэсканы уҡыны, сәғәткә баҡты – өсөнсө ярты. «Мин төп корпус алдында». Яй ғына атлай башлаған ҡыҙ тора-бара аҙымдарын ҡыҙыулатты. Ятаҡ алдында осрашмауҙары үкенесле. Теге саҡтағы һымаҡ бар ғәләмдең, айырата Светлананың, күҙ алдында һерәндәргә ине бераууыҡ!

Баҫалҡы йылмайып күрештеләр. Белһә лә, Лира ваҡыт белеште аҡһыл йәйге куртка кейгән егетенән, аҙаҡ көтмәгәндә Александрҙың хәл-әхүәлен һорашты. Данир күршеһенең мобилкаға бәйле йәйге мажараларын Лираға һөйләмәгәйне ләһә?

– Шәмбе баҡсаларынан әсәһе менән ҡайтып кергәнен күрҙем. Отгул алырға ине, балыҡҡа барғы килә, тип торҙо.

– Мине Бурашҡа алып ҡайтып килмәҫ микән? Бына... – Лира өҫ-башын күҙ ҡарашынан үткәрҙе. Данир етдиләнде, аҙ ғына паузанан һуң мобилкаһына тығылды. Тиҙ генә номерҙарына баҫты:

– Шурик, приветик! Махнем... Иртәгәме?

– Бөгөн уңай булыр ине. Көн һораным, – тигәс, Лира көләмһерәп өҫтәне:

– Ҡуныrға Тимурҙың өйө бар. Картуф, һөт – минән.

– Картуф, һөт... – тип ҡабатланы Данир. – Бензин да. Благзавод аша, ти, Лира.

Ҡарһалан тәкдимгә Шурик ризалашты, буғай.

– Бер сәғәттән, ти. Машинаһы рәтле, үҙе отгулда икән. Ә-ә... мине эйәртәһегеҙме һуң?

Лира кинәйәле генә яуапланы:

– Әсәйең ебәрһә...

– Миләүшә Ғәлиевна өйҙә, ул да, минең һымаҡ, ярты ставкаға эшләй. Марс Нәбиевич командировкала, әйткәндәй, беҙ күреп ҡайтҡан Н. ҡалаһына юлланды кисә. Аяғына йығылһам, әсәйем рөхсәт итер ул, нисек уйлайһың? – Данир, һаран йылмайып, Лираның күҙенә баҡты. Уныһы шаяртыуҙы оноткайны:

– Тиҙерәк... Магазинға инәһе бар.

Йәшәһен «Газель» – йәштәр яратҡан маршрутка. Елдерә лә, ҡоларға ла булдыра, тип яҙғайнылармы шул машина хаҡында. Тимер торналар бейешкән фонтан эргәһендә осрашырға һүҙ ҡуйышҡас, Лира – супермаркетҡа, Данир күп ҡатлы йорттар араһына йомолдо.

Балыҡҡа әүәҫ Александр ваҡытты теүәл самалайҙыр: спорт костюмы кейгән Данирҙы тейәп, көттөрмәй генә килеп етте һәм, Лира йылдам ғына алғы кабинаға ҡунаҡлағас, үҙе генә белгән, артыҡ тығын булмаған юлдарҙан ҡала ситенә ынтылды.

Заправкаға туктағас, Лира, бер тәүлек элек кенә ошо тирәлә уралыуын хәтерләп, күңелен болокһотто. Йә, Хоҙай, кисәге ҡыҙҙарҙың өлкәнерәге, буйһыуырағы теге... Лира бетон ярсығы ҡармаған биләмәһендә тора. Кесерәге күренмәй, «үтемле»рәктер уныһы. Эргәһенән үҙышлай, Шурик та мыҫҡыллы мығырланы: «Путана, путана...» Лира, әйләнә һалып, йәнәшендәге Данирға ҡараны. Алаҡанламаймы бер-бер? Ғәмһеҙ генә ултыра, һы, был урынды мәңге белмәүе хәйерле.

— Йөрөгәнең бармы, Данир, был яҡтарҙа?

— Юк тиһәм?.. Тимашево зыяратына барғылайбыҙ. Үҙең һуң? Һеҙгә бынан яҡын да.

— Яҙ көнө таныштарға ултырып ҡайтылды,— Лира обой йәбештергәндә талсыҡкан бармаҡтарын ыуғыланы ла сумочкаһынан ярайһы ҡупшы авторучка ҡаҙып сығарҙы.

— Бынау һинеке түгелме?

— «Никсон»...— Ручка ҡыҫтырғысындағы фирма яҙыуын укығас, Данир ҙа йылмайғандай итте.— Никсон миңә коллега түгел... АҠШ-ка ашкынмайым, Бурашка ашығам.

— О, профессорҙа «Коллега» тигән ручка ла бар ине. Кстати, ул һине иҫкә алды.

— Нисегерәк?

Ҡыҙ егетенә һуңғы зачеттағы барса хикмәттәрҙе тасуирлап бирҙе.

— Беҙҙең факультетта ла яраталар ине «Башковитый»ҙы. Аргументлы аңлата... Демократ! Ә теге... ҡурайҙа маташтырған группалашың укып йөрөймө?

— Күренеп ҡалды. Ә нимәгә ул һиңә?

— Былай ғына. Бурысын?..— Данирҙы бүлдереп, рулдәге Шурик йөҙөн Лира яғына бора һалып һораны ла ҡабат алға текәлде: «Дөрөҫ барабыҙмы?» Лира яурындарын һикертмәксе ине лә, тәҙрә аша шыҡһыҙ буш өйҙәр шәйләп, иҫкәртеүҙе кәрәк тапты:

— Асфальт бөткән урында туктарбыҙ...

Күпергә етәрәк туктаныЛар. Тәмәжник балыҡсы һыуға ҡарап сигарет быҫҡытты. Күренеп тора: күпер аръяғында трасса ҡырҡа һулға ҡайырыла, ҡырсын юл тура тартыла, инеш ярынан ҡыр юлы уңға бормаслана. Күпер ауыҙында Шурик бытырлаҡ мотороллерының дүрткел йәшнигенә ҡом тейәгән ҡартластың ҡаршыһына ыңғайланы. Туктатты теге, транспорты атланмаһынан төшөп, йәштәргә юлды йыбанмай аңлатты, хатта ҡом өҫтөндә өсмөйөш һыҙғыланы.

— Тәү тапҡырмы? Зәбкә һөргән баҫыуҙа аҙашырһығыҙ. Денисовкаға етегеҙ ҙә — кирегә һымаҡ тойолһа ла, электролиния һуҙылған урмандан «елдерегеҙ».

Денисовка урамына инмәй, кабина тәҙрәһенә сырт-сырт ваҡ ҡырсын бәрҙертеп, түтәгә һыпыртты Шурик. Ялтырап-кү-

гәреп Ҡаризел бөгөлдәре абайлана. Һырт юлында өсәүһенең дә күңеле елкенде. Бигерәк тә Лираның.

– Ана, беҙҙең тауҙар! Азимут буйынса ярыштарҙа ҡатнаштым әле туғыҙынсыла уҡығанда...

Ҡулбар һыртында урман тығыҙыраҡ. Тауыҡ кисмәле генә күләүек ярында эркет төҫөндәге будкалы машинаһын ҡырғыслап йыуып йөрөй берәү. Фу, йәй кимәлендә Лираға күҙен майландырып ҡараған алыпһатар ҙаһа. «Газел»енең фара тирәһенә әҙәм күргеһеҙ батҡаҡ ҡатҡан. Бынау аяҙҙа ҡайҙа батмаҡ кәрәк?

– Недочеловек! Урманда ГИБДД юҡ тигәс тә... – тип һукранды Шурик һәм газға нығыраҡ баҫты. Юлдашын Данир ҙа йөпләне:

– Урод! Шишмә күҙәүен бысрата!

– Ҡырҙан килгән торгаш, шикелле, – тине Лира. – Бураштайә Сасында таныштары барҙыр.

Тукта, әсәһе һуңғы өс көндә Лираның ниндәй кисерештәргә юлығыуын бөтөнләй белмәй. Ниңәлер үҙе лә шылтыратманы. Һис юғы кемдәр менән ҡайтып төшөрөн белергә тейеш тәһә бахырҡай.

«Сасын» кооперативында яуап бирмәнеләр. Өйҙә көттөрөп кенә трубканы Тимур күтәрҙе.

– Тимур, мин... Әней ҡайҙа?

– Гришка хәҙер Николай абый машинаһында йөрөй – йәйәү ҡайталыр әнкәй. Һиңә кәмә...

– Кәрәкмәй, энем. Лутсы картуф бешер, күберәк итеп...

Эх-ма, бая Денисовканан шылтыратһасы, хәйер, унан эләгеп була микән?

Лира Сасын урамында Валентина йәшәгән ҡупшы йортка ғына күҙ һирпеп уҙҙы. Нисектер ҡотайған кеүек таныш түтәйҙең ихатаһы. Баҡсаһында ер түтәлләп ҡаҙып йөрөй, буғай, Тимурҙан олораҡ ҡыҙы менән.

Ҡалҡыуҙағы өйҙәренә яҡынайып барған әсәһен Лира машинаны уңға ҡайыртып, дәүатайының ҡапҡаһын асҡанда күрҙе: йә, биш минутҡа ғына аймылышҡандар.

«Һыпыртығыҙ бынан, шайтандар...» Өйҙә асып, Лира Данирға ҡайҙа нимә барын күрһәтеп сығыуға, Шурик балыҡсы формаһын кейеп, сабаҡҡа оҡшаған бармаҡ буйы ялтырмаһын ҡуш уҫҡа һыймаҫ кәтүкле ҡыуалына тағып та алғайны.

Япраҡ төшөрөлгән хаки төҫөндәге комплект – беше салбаркуртка-баскеткаһы, йәшкелт ҡойма итеге лә таман үҙенә – тот та фотоға төшөр! Ҡанаты ғына юҡ, осоп китергә әҙер.

– Суртан ҡараңғы төшкәнсә ҡаба көҙгә табан. Лирочка, ҡай тирәлә тәрән тобалар бар?

– Әлләсе. Атайым өҫтә лә, аҫта ла тота торғайны. Аҫҡа бар, өҫтә... һөҙөп бөткәндәрҙер.

Ысын әле, утрау тирәһендә һерәндәмәһен, әҙәм күҙенә салынып. Барыбер ҙә үҙеңде һау-сәләмәт тойоу – иң оло бәхет. Бигерәк тә һауһаклығың дауахана мисәте менән раҫланғас.

Балыҡсы багажнигын, кабина ишектәрен асыҡ ҡалдырып, яурынына киндер мукса аҫты ла, ғүмере йөрөгән таныш ер күргәндәй, билсән, алабута баҫкан элекке бәрәңгелек аша эре өйәңкеләр араһына һыпыртты. Бер аҙ барғас, бороллдо ла әйтте:

– Йоҡо тоҡтарын, башҡаһын әҙерләрһең, фараон. – «Башҡаһын», тимәк, киске тамаҡты ла хәстәрләү – Данир елкәһендә. Быны, моғайын, Лира ла аңлағандыр – тиҙ үк соландан дыңлатып ике биҙрә тотоп сыҡты.

– Көйәнтә кәрәкмәйме? – тип шаяртты Данирҙы. – Өй ашаһында дачник таҙа һыу ағыҙып бирер шлангынан. Әйтеп үтәм.

Ҡыҙ яурынына сепрәк сумкаһын аҫып, ҡулына күстәнәсле пакет аймап, ә егет ике ҡулын ике биҙрә тотоп, шым, еләҫ ауыл урамына сыҡтылар. Бала-саға, мал-тыуар күренештерә. Черниковкала ҡатынының «һин – мине, мин һине күрмәнең» тиеүен хәтерләпме, иркен баҡсаһында ҡыймылдаған дачникка Лира һүҙ ҡатырға теләмәне.

– Бәрәңге бешереп килтерәм, тағы... лампочка кәрәк. Предохранитель табырһың, тартмаларҙы ҡара. Йылыткыс менән һыу эҫет, шунан өҫтәлде һөрт, тотонорҙай һауыт-һабаны йыу. – Ҡыҙҙың хәстәрле хужабикәләй йомош ҡушыуы ирмәк тә, рәхәт тә тойолдо егеткә.

– Бураштар өсөн һеҙ – Имаш ҡарттың туғандары, – тине Лира айырылыр саҡта.

– Улай ҙа ярай инде, кавалерың булмағас, – тип ҡалды Данир.

Саф башҡортса сәләмләп ингән ят егеткә һынамсыл ҡарап, мискәләрен соланына ташып йөрөгән беретлы дачник уны-быны ҡыҙыҡһынды.

– Абайламаным: Лирамы, Кирамы... шәбәйгән, шәт? Туғанығыҙҙыр...

– Эйе, ике туған. Шөкөр, күптән шәбәйгән, – тип кенә ҡотолдо егет, шунан соланда һөйәүле бамбук сыбыҡтарына ҡул иҙәп һораны: – Ҡабамы балыҡ? – Бер һорауға биш яуап яуҙырҙы ирекәй. Аралашырға кеше лә һирәктер.

– Ҡаптыра белгәнгә... Ну, дирәнгә төшә хәҙер, күберәген алабуға ала блесенкаға. Лодка-плоскодонкам юҡ – ун метрға якорь төшөрөүе, ой-һой. Кисә утрауға сыҡтым. Килеп сыҡты эргәмә мишайтлап Зәбирме, Забурмы. Элекке Атаман. Һыйланы ла мине, китте шунан балыҡ ҡайғыһы. Берәй нәҫтәгеҙ булһа? Поздний сорттан алма бирәм үҙегеҙгә.

– Берәй нәрҫә? – Данир шланг осон икенсе биҙрәгә тыҡты. – Нимә?

— Ну-у, йылыткыс... Эш күп тә, настрой юк. Ней Атаман күренмәй... Дачный сезонды ябып ҡайтырға ине Уфаға.

Һыңар бизрә менән ҡабат әйләнеп килгән Данир солан баҫлығына ҡалай банка — «Ярпиво» ултыртты, ә хужа «насар уйламағыҙ, любитель түгелмен дә, шулай килеп сыкты, нишләйһең... Имаш дәдәй шәп кеше ине, ну оҙак аралашманык, мин ошо хозяйствоны алған йылды вафат булды... Бушатып килтерерһең» тип үҙе шым, үҙе яй һөйләнеп, эре-эре һары алма тулы тасын шылдырҙы.

...Бетон күпергә якынлашканда Лира бәрәңге һабактары өйөмөнә үрт һалып торған Фасилды танып ҡалды. Сәләмләр ине — алыҫ. «Фасил күрше Өфөгә эшкә урынлашкан» тигәйнеме әсәһе уҙған аҙнала шылтыратканда? «Хәҙер унда бураштар ҙа күбәйә» тип тә өҫтәгәйне. Әле, бәлки, ялға ғына ҡайткандыр.

## 4

Эйе, Фасил кисә ҡайтып төшкәйне. Әлфәритте һыйлағас, Зәбир беседка — ашатламалы рәшәткә менән уратыулы түмәр бүкәндәргә ҡағылған ике такта эскәмйә генә инде — тапкыры текәнән ҡырсынға төштө. Бер кем күренмәй. Фазыл ағаһы ла. Ә-һә, һары ҡаулан ялмаған утрау тирәһендә оҙон ҡыуал һелтәне берәү. Кем ҡармаҡлай икән? Китте шунда. Имаш ҡарт өйөнә якын йәйләгән дачник, имеш. Былтыр, Рәшитте яллап, егерме соткаһын һөрҙөргәйне.

Арлы-бирле гәпләшкәс, баяғы ярһыуы баҫылып бөтмәгән Зәбир тал ышығына күп итеп күрән түшәп, йәтешләп ҡырын йәйелде. Дачник яйлап-яйлап Зәбирҙең атаманлығын, ҡатынының телгә зәһәрлеген иҫләп, ҡармағына тере селәү беркетте. Иҫләрһең дә. Яҙғы елдә ҡыҙыкайын етәкләп, баксаһына ҡарағат үрсеме теләнселәргә ингәйне. Шунда дачник күлдәксән генә ҡатынкайҙы йәлләп, әйтә ҡуйҙы: «Йока кейенгәнһең, өшөмәйһеңме ни?» «Өшөһәмсе, йылыткысың барҙыр...» «Йылыткыс» һүҙенә ниндәй мәғәнә һалды икән, тип ҡалғайны бит.

— Тешкә ҡыҫтырырлык нәрҫәң юкмы, абый?

— Якын, оҙакламам, тип ашанты алмағайным. Ә-ә, мә... — Зәбирҙең аяк осона дәү һары алма тәгәрәне.

— Бәт-тәс! — тип урынынан ҡалкынды ла Зәбир, кыштырлатып шыптырын күрән түшәккә шылдырҙы. Шул арала эргәһенә әйләнә-тулғана елле генә көмөрө алабуға килеп тә ятты, иҫәнгерәмәгәндер — йөҙәм тигән булып, комға буяла һалырға ла өлгөрҙө. — Бәтәс, Горбачев эләккән дәһә! Ельцин (елең — сабактың төрө) ҡапһа, утка һалам, валлаһы...

Күңеле күтәрелгәне һиҙелә Зәбирҙең. Шартына килтерҙе: ҡоро-һарынан ҡыҙыу ғына усак токандырып ебәрҙе лә балсык

ҡатыш ҡом өйөмө ашаһындағы Иҙелгә барып, алманы, алабуғаны сайып килтерҙе. Ыңғайында ҡалҡыуҙан Бураш тамағын күҙләне: күренмәйме Әлфәрит, алыпһатар бәндә? Ултырамы машинаһы, китһен, сукынып ҡына китһен, тик Бураш тирәһендә түгел.

Балыҡсының бәкеһе менән алманы уртаға бүлгәс, һауыт юҡлығын аңлап, кире китте, кире килде. Ташландыҡ кәнсир йыуып, каса яһап алған. Алабуғаны шешләп өтәҫләргә усаҡ өҫтөнә тал сыбығын иңкәйтте.

Уңарсы тағы бер алабуға ҡунаҡланы елпелдәп.

– Әйҙә, абый... экзотика!

– Рәхмәт, зимләк, үҙең генә булаштыр. – Күрән араһынан арҡаһы ғына шәйләнгән ирекәй икеләнгән кеүек.

– Яңғыҙ тамаҡҡа бармай, килең-килең. Отпускыла бит мин. Иртәгә суска сәнсәм, иртәнән һуңға – баҙарға. Ҡара күҙлек кейеп алам да ҡыскырам: «Кому дуңғызятина, налетай!» Шунан семьяны шашлыҡҡа алып сығам. Көн матурҙа...

– Ике-өс көндән ямғырға китә, ти радио.

– Ә ниңә транзистор йөрөтмәйһең?

– Һы, заводта былай ҙа ҡолаҡ тоноп бөткән. Баҡсала погода-маҙарҙы, йыр-музыканы тыңлаштырам былай.

Һүҙҙән һүҙ ялғанып, урландыҡ электр сымына барып тоташты.

– Свидетель булһаң да ҡыйын – таскать итәләр. Үткәндә машинамды райцентрға паром аша ҡыуҙым. Мотоктары табылғас ни, береһенә бик елле штраф, икенсеһенә срок грозит. Йә, армияға китергә торғанда...

– Армияһы ла шул инде. Сычевты, ана, Силәбе егетен, нишләттеләр? Шул тирәлә закрытый городта эшләп йөрөйөм дә мин. Ҡарабаш, Яманйылға – башҡорт атамалары күп унда.

– Ә-ә... Ҡуҙға һал быныһын да. Тоҙһоҙ ҙа бата икән... – тип дачник ҡалҡыуысын ҡарап килде. – Һелкенмәй ҙә поплавок. Ҡымтырлатҡанды ярата ул алабуға.

– Ҡыбырлатҡанды кем яратмай? – Зәбир ҡабат күрәнгә ятып, кирелеп алды. – Последний предколхоза әйтмешләй, «ҡыҙ-ҡатындар» менән шаярмайһыңмы бында, фитнес-клуб, сауна ойошторап?

– Һо-ой, бер ҡатындан бүккән мин! БАМ-да йөрөйөм күберәк.

– Унда... калым юҡ та хәҙер?

– Пенсионерский мәрәкә: «Ҡайҙа эшләйһең?» – «БАМ юлында». Б – больница, А – аптека, М – магазин.

– Туҡта әле, үҙебеҙҙең магазинға... – Зәбир билендәге күн ҡумтасыҡтан мобилкаһын алып, таҫма телләнергә кереште. «Добрый день, моя хорошая, это – Забур... Я на рыбалке: отды-

хаем – воду пьем. Как приеду, приглашу тебя на фитнес-клуб, затем – в суши-бар. Целую жарко».

Зәбирҙең ҡырҙағы һөйәркәһе менән серләшкәнен аңғарып, кеше хәбәренә ҡамасауламаҫ өсөн, дачник ҡармағы эргәһенә шылды. «Забур икәнһең, зимләк, сит яктарҙа... Бына тигән ҡатының, һөймәлекле ҡыҙыҡайың була тороп, аҙғанһың, парень». Дачник Зәбирҙең бүтән халәтенә лә аптыраны. «Яңғыҙ тиерлек төпләне шешәһен – ыһ та итмәй, һыры нәрҫә...»

Тәмәкеһен көйрәтеп, Зәбир балыҡсыға яҡынайҙы.

– Әүәҫ түгелмен, ә фарт бар минең. Бер йыл малайҙар менән ошо тирәлә ҡармаҡсыланыҡ. А-анау ҙур таш тирәһендә ҡапты бит ҡармағыма. Еңел генә һөйрәп сығарҙым. Шыуа икән теге, ҡарышмай. Ҡараһаҡ, терһәк буйы шамбы!

– Көндөҙ ҡапмай ҙа ул нәрҫә?

– Ҡапты, шуға һөйләйем дә... Кис инеме. Йәмһеҙ, хас крокодил балаһы!

– Булыр, миңә төндә икәү ҡабып яткан. Хәләүе (һурпа) нәйәт! М-да, шыуа тигәнең дөрөҫ.

– Алдашырға... мин балыҡсы түгел, – тип аусы аборигендай һаҡ баҫып, мускулдарын уйнатып, кирелеп-һуҙылып Зәбир инәнән тыума сисенде лә китте һыу инмәгә.

– Сумып ҡына сығам. Ә ваабщы эштә ике бассейн бар. Теләһәң – йылы һыу, сирҡанмаһаң – һыуығы.

Бер аҙҙан унық ыһылдаған тауыштары тонок ҡына ишетелде.

– У-ух... Һыуынған Иҙел...

– Һыуынмаҫҡа?! Көн аяҙ тигәс тә, таңға хәтәр һыуыта...

Кейенеп-йылынып, каратист кеүегерәк остандап, аяк-ҡулдарын һелккеләп алғас, Зәбир һүрәнке утты дөрләтте лә яртылыҡтың төбө беленгәнсе хәмер һемерҙе. «Пермь араҡыһы, имеш, торғаштар ҡайҙан нәрҫә ташымай...» тип ҡуйҙы эстән генә, этикеткаһына секерәйеп күҙ йөрөткәс. «Ох-хо!» – тигәнде ишетеп, балыҡсы эргәһенә йомолдо. «Тағы ҡаптымы? О, быныһы настоящий горбач! Ярты кило ғына тартыр».

– Әлләсе, үлсәгән юҡ...

– Юҡ, абый, бындай трофейҙы мәңгеләштереү фарыз! Әйҙә әле, һин – мине, мин – һине: төшәйек иҫтәлеккә...

Зәбир яктыраҡҡа, эргәләге ҡом өйөмөнә, менеп баҫты. «Мә, ошонда ҡара, ошонда баҫ». Кире мобилкаһын алып, күрһәтте дачникка: экранда тора үҙе бил тиңенән төҫлө рәсемдә. Уң ҡулында – шешә, һулында – айғолағынан асалы тал шешенә эленгән шешә шайым алабуға.

– Бәрәмәс, ишеткән дә, күргән юҡ ине. Аб-ба, карточкаға ла эшкинә.

– Шулай ул, – тине Зәбир. – Быны миңә шеф үҙе бүләк итте тыуған көнгә. Ҡана – үҙеңде, тор бынауҙа. Икенсе килгәндә, фотоға әйләндереп алпкайтырмын.

– Бындай балык менән, кәнишне, киноға ла төшөргә мөмкин, – тип кинәнде дачник. – Маладис, энекәй!

– Маладис... Мактанмайым, был тирәне дер һелкеттем элегерәк. Ауылдар эре, йәштәр күп ине, хотя, үҙең беләһең. Тегендә лә мах бирмәйем.

– Нисек барып эләктең һуң?

– Әней яклап бер быуай һуғыш йылдарында ФЗО бөтөп, эт күрмәгәнен күреп, закрытый городокта төпләнеп ҡалған. Якын булғастын, бер-ике хатлаштым да күрше өлкәләге стрелковый горный полктан шунда барып ҡайттым, ротный менән. Мин – сержант, ротный – капитан. Машина алдык та. Старик онотмаған, мин физрук сакта Олотүзгә килеп, аҙна ятып киткәйне. – Әңгәмәләштәр һыраға күсте, инде дачник та инәлтмәне. – Дә-ә, машинаһында барҙык ротныйҙың. Ҡунак иттеләр. Миңә тиңдәш улы менән дуҫлаштым. Ҡалғанын беләһең: колхоз бөттө, эш юк, булһа ла, хулиган тип, алмайҙар. Иҫкә төшә бит старик. Хат яҙҙым. Ерләгәндәр... Братан сакырҙы: килеп ҡайт, мин фирмач хәҙер, тип. Тукта, мәйтәм, барып ҡайтайым, может, акса биреп торор... Барҙым, стройкала калымға эләктем. Эске, разборки – хватит, мәйтәм. Троюродный чуть-чуть мафиозник, имеш. Кәнишне, беҙҙеңсә «әпәй» тип тә әйталмай...

Зәбир тәмәке токандырҙы, шымып ҡалды.

– Һөйләп бөтөр, бәрәмәс. Мафиозник нишләтте?

– Нитте, бер другына һатты. Дә, һатты тиһәң дә була. «Бына минең брат – башкир, потомок Салавата, нацмендар преданный була», – тип другының охранаһына димләне. Уныһы бизнесмен, крутойырак. Устроили экзамен былар, көрәштереп тә, аттырып та, йүгертеп тә тигәндәй. Иң аҙак өсәүҙе һөсләттеләр – все дозволено: үҙем генә белгән приемдар менән өсөһөн өс якка һуҙ ҙа һал. Бер амбалы бирешмәй маташкайны – һыңар күкәйен һыта яҙып һыктым. Теге крутой мине яп-яңы особнягына старший охранник итеп ҡуйҙы. Күлтөбәк һымағырак хозур урында. Унда ла устроили экзамен: то ун доллар тығып, йөрөгән юлға барсетка ырғытып китәләр. Күтәрәм дә ҡыскырам: «Кем юғалтты?» То юрамал сигнализацияны боҙалар – табам, төҙәтәм... Генералдар ҡарап торҙо полковой учениела: ды-ых – ике кирбес онтала, ды-ых – тәкмәсләгән килеш сәпәйем автоматтан мишендәрҙе.

– Малади-ис, – тине дачник, баш сайкап. Ышана бахыр, хәйер, Зәбир ҙә самаһын белеңкерәп шаштыра. – Ә зарплата, житье-бытье яғы нисегерәк һуң?

– Кәнде ашау байҙан, үлем Хоҙайҙан тигән һымак. Айырым комната, кухонный порциялар. Аксалата, кәнишне, әҙерәк эләгә

ҡулға. Ун мең тирәһе генә. Контракт буйынса спецохранаға ла ҡоҙалайҙар – ризалашҡы килмәй. Оружие бирелә, ответственность, о, арта, быны ише вольный казак булалмайһың...

– Вәт әй, ә туғаның килгәне бармы?

– Юк шул. Фирмач тигәс тә, харап делауай улар. Артығын эсмәйҙәр, иткә йәбешеп ятмайҙар. Фитнес-клуб, суши-бар, сауна... Налево ла ҡараштыралар. Все как положено.

– Троюроднигың Олотүзде күргәне бармы? – тип ҡабат һораны дачник, телен көрмәләндереп. Һыраға ла бәлшәйер икән.

– Мине килеп алырмын, тигәйне лә, нисек булыр? Рыболов-любитель ул да. Баяғы горбачлы кадрҙы мобилкаһына ебәрһәм, с чем черт не шутит – дәртләнде ҡуйҙы. Сүтәки күрмәгән туғандары йәшәй бит әле. Ғәлекәй быуай, силсәүит Айгөл Карамовна, комбайнер абый, башкалары... – Танкист энеһен һанламаны – кешегә һанамауылыр. – Фирмачтың иномаркаһына бишалты сәғәтлек расстояние.

Бураш тамағынан әһәүләгән тауыш салынды ҡолағына.

– Эт өрәме тиһәм, законный бисәм сайылдай... – Ауыл яғынан һөрәнләгән тауыш салынды Зәбирҙең ҡолағына. – Әҙәпле кешеһең, абый, йәтеш осраттым әле үҙеңде. Эс серҙәремде бушаттым – бирғәйбә.

– Зерә рисковать итмә унда, зимләк, шешә менән дә, китимити менән дә күп мауыкма. Икеһе лә алама нәрҫә. – Балыксы быҫҡыу усакты ҡом менән күмештерҙе. – Көс, һын биргән үҙеңә Хоҙай – бушка сарыф итәһең. Семьяңды уйла... Ҡайтып, берәй эш асып ебәр.

– Уй бар, абый, бар. Колхоздың аунап яткан кирбес заводын ходка ебәрергә дәртләнәм дә – покаға капитал нема. Хушһау!

...Зәбир тәүҙә йылғасык аша Зәриәһенә аңшайып ҡараны. Ҡара, ҡупшы свитер, һуҙмак салбар кейеп алған – саңғысымы ни.

– Шатун айыу ише таллыкта йөрөмәһәң... Йә, ҡасан сығып киткән әҙәм, әбидкә лә ҡайтмаған булдың. Бастуй, брат, күҙҙәрең ниңә ҡыҙарған? Ничево, ҡайттык, әйҙә, ҡайнтүтәң еҫте алыҫтан һиҙә, ҡапкаһын да астырмаҫ.

– Овчарканан хуже булғастын... – Зәбир быны шым әйтте, көйләгәндә тауышын күтәреңкерәне:

*Целуй меня сладко,*
*Целуй меня жарко...*

– Силәбе маржаларын целуй!

– Маржаның да бар жаны... – Зәбир түңкәреүле кәмәһенә уҡталды. – Әйттем дә, апарук кипкән, их, тырнак осондай ғына тишеген бер семтем гудрон менән һылағанда – ноу проблем.

– Бәй, Фазыл абыйыңдан һорап тор.

– Үҙең һора. Чево-то ҡырын ҡарай әле миңә жмуттар. Исмаһам, һөрһөгән иттәренә лә дәшмәйҙәр... Бегемот еңгәм һаранлана, лавочница булғастын.

Бындай хәл, ысынлап та, иҫтәрендә. Сара еңгәһе, эҫе көндө мунсалары янып киткәс, Фазылға көл-күмерен таҙартышкан Зәбирҙе ашҡа өндәшә. Хужаларҙан күрмәксе, бер-ике рюмка көмөшкә һелтәгәс, Зәбирҙең дә тамағына сак үтә башлай ит өлөшө.

– Кеше һыйын тикшермәһәң! Әллә өйөңдә ҡабым ит бар?

– Булыр, иртәгә махан будет.

– Ашарһың ташыңды! Баҙарға апсығам йә кафеға ыздам. – Зәриә яр өҫтөнә менгәнсе телләште. – Балтун... Үҙең жмут һин!

Намыҫына тейҙеме, Зәбир ҡалын күлдәгенең түш кеҫәһенә көндөҙ Әлфәрит тотторған сдачаны – ике йөҙәрлекте сығарып, эсенә таш тыҡты ла Бураш аръяғына ырғытты һәм әлеге йәмһеҙ һөйләшеүҙе этәк-һәтәккә һабыштырырға маташты.

– Балтун тигәсһең, слушай: бер мужик... – Зәриәһе меҫкенләнмәне, кире боролманы, ҡулын һелтәп юлын дауам иткәс, ир генәһе, белдекле кешеләй, кәмә төбөн, йөй һыҙыҡтарын бармаҡ осон йөрөтөп ҡапшарға тотондо. Алыр микән аҡсаһын Зәриә? Һы, Зәбир ише кешегә һуңғы күлдәген сисеп бирергә әҙер бүтән әҙәм бармы донъяла? Иҫәпһеҙҙең ҡуйы теүәл... Йомартлығы арҡаһында ғүмер баҡый мандый алмаҫ, ахырыһы.

Бер ҡулына паяльник, икенсеһенә аҡбур йоҡҡан йүкә бумала, иҫке табаға ҡара-һоро гудрон сатнағы һалып тотҡан Зәриә кире әйләнеп килде. Ҡыҫҡа итегенең өҫтөнә һуҙмаҡай салбарының балаҡтарын төрөп ебәргән. Кәмәгә гелән итек менән ултыра – өйрәнеп бөткән. Аҡсаға оронманы.

– Эткә ырғытҡан һымаҡ ней... Алмайым да, чуртым.

– Зөлфиәгә берәй сок әпиреҥ лавканан...

– Бикле... Сара мужигының арҡаһына банка ҡуйған. Кругом тымаулайҙар, әллә киҙеү йөрөй.

– Иммунитеты ослаб хәҙер әҙәм балаһының. Стерильный йәшәү бәләһе! Элек ишек тотҡаһы сайындыһын эсергәндәр дажы... – Зәбир затлы зажигалкаһы менән тәүҙә тәмәке, шунан паяльник ҡабыҙҙы. Гөпөрләгән ялҡыны табаны тиҙ эҫетте, ирене гудрон, бызмырлай ҙа башланы. Ире эш менән мәшғүл саҡта ҡатын, инеш аша сыға һалып, эйелеп аҡсаны алды шулай ҙа. «Аҡсарлаҡ»ҡа ҡатындар яҡынлашҡанды күргәс, Зәриә:

– Апайға сәй, цейлонский, Зәпәгә – мармелад... – тип мөңгөрҙәгәс, ҡабат өҫкә күтәрелде. Ул әйләнеп килеүгә Зәбир кәмәне ҡабырғаһы менән этеп һыуға төшөрҙө лә һурып алмаҫлыҡ итеп шөрөпләнгән тоҡос ишкәктәрен рәтләне.

– Бәрәмәс, табаларың?..

– Ырғытып китәм тирәк аҫтарына... Һин ултыр ҙа аҫка ак, баҫлыкка тиклем. Кроссовканы еүешләмәҫкә ине.

Тын Иҙел өҫтөндә кәмәлә йөҙөү – үҙе бер ғүмер. Шағирәнә хистәр уяна күңелдә, гүйә, йәшәү ҡәҙерен нығырак тояһың, тәбиғәттең мөғжизәһенә – тулышып аккан дарьяға хайран ҡалаһың. Сихри йәне бар кеүек йылғаның. Сылтыйҙар семтенә, яңғыҙ аксарлак кәйелә. Тауҙар, тирәктәр, йорттар тик тора, хатта яурынына ҡыуалын һалып ярлауҙан атлаған балыксы ла бер урында тапанғандай. Ә Иҙел мәңге хәрәкәтсән, мәңге айкала ла сайкала. Ауылдан алыҫлашаһың – ул ҙурая барған кеүек; арғы-бирге урамдар, кәртә-баксалар бергә тоташкандай.

* * *

Һәр ауылдың үҙ хәсиәте, үҙ көнитмеше. Бураштар, гәҙәттә, етди генә мәсьәләләрҙе асык һауала, әйтәйек, яр буйында, хатта кәмә өҫтөндә сисергә тырыша. Әле лә Зәриә менән Зәбир араһында уйламаған ерҙән әйтеш ҡупты.

– Был кәритә боҙ ҡыҫкансы эшкинер. Тағы бер ҡат һылаһам, киткәнсегә...

Гөлт токанды Зәриә, тороп ук баҫты:

– Һаман китерҙәнме ни уйың? Көл һибеп ҡалам – күрмәһәм дә бәхил.

– Ултыр! Яңы йылға тиклем выгодный заказ бар, төп эшемдән тыш. Вахта араһында хороманың канализацияһын рәтләргә кәрәк. Санитарҙар бәйләнә, кулде бысратмағыҙ, ти. Йөҙ мең смета вәғәҙәләй хужа. Байға ни, бер төкөрөк...

– Тауыктың һимергән һайын күтәне бөрөшә. Һемәйтер әле, көт тә тор.

– Договор буйынса... Уға ғына баш етә. Тик яңғыҙ булмай. Әрһеҙ генә иптәш тапһам...

– Низнай, Сара әйтмешләй, низнай. Утыҙ туғыҙланып тыңлап ултыра, ти, бер һапата, күтәмәйләнеп...

– Катамаран тигән нәрҫәһе лә бар әле шефтың. Капризный, ун йәшлек малайын әйтәм. Белмәгән нәрҫәһе юк, тәтәйҙәре заморский, уш китмәле.

– Бай балаһын кинәндерә берәү, Зөлфиәне бер кататься иттергәне юк. Халуй...

– Әле ниңә эйәртмәнең һуң? Әйҙә, кире сығып алайык. Һинән нығырак һағынам мин ҡыҙымды.

– Кит, ләпелдәмә бушты! Эсә дилдалайың, һүгенә, дуңғыҙ ашатмаға апсығағыҙмы, тиәсәк апам, – Зәриә ҡойроктағы һәндерәлә лыпын ултыра, сөнки Зәбир киреләңкерәп ишкәйне, ялғаш кәмә кәшкәнләп алды ла, тыныска сыккас, йәнә тигеҙләнде. – Хажиморатыштар ете ят тыума әпәүләй, ә беҙ...

– Һөйөклө ҡайнтутәкәйем алдында һүгенеү түгел, анекдот та травить иткәнем юҡсы... Ә-ә, теге әрмәнме, ғәрәпме... Быға общий мунсала бер мужик «ай-бай, ғәләмәт икән дә» тип ҡыҙыҡҡан. Бармаҡ янаған теге, «кешегә болтать нельзя», йәнәһе. Иртәгәһенә мужиктың өйөнән сығып килә ята, ти, теге супермен. «Һы, болтун» тигән дә үткән дә киткән эргәһенән.

Кәзекләшергә генә әҙер Зәриә был юлы ла түҙмәне.

– Үҙекәйең түгелме супермен?

Бурашка алды менән ултырған Зәбир, ишкәк остары ҡырсын тызый башлағанғамы, өндәшмәне. Тороп баҫты, тирә-йүнде байҡаны.

– Что за митингы? Беседка яғында...

Күҙгә үткерерәк Зәриә лә аныҡ ҡына әйтә алманы.

– Бала-саға... китап ҡосаҡлап... Хажиморатыш абзый тапҡырында теҙелеп торасы. Әлләсе...

Зәриә кәмә морононан һайға баҫты ла, Зәбирен аркаһына йөкмәп, ҡоро яр ситенә өс-дүрт аҙым яһаны.

– Сукынсыҡ, ауырайғанһың. Хәҙер ҡупшыған рәшәткәләрҙе ҡағып, әлифләрбеҙ. Әҙәмдән оят, бер беҙҙеке буяуһыҙ.

– Асыҡтырҙы әле...

Зәриә иһә тал төбөндәрәк торған әҙәмде танымай бер булды. Фасил тиһәң, уның көрәнһыу ветровкаһы юҡ, буғай. Ҡара күҙлекле, етмәһә. Ҡулдарын кендеге тапҡырына ҡаушырғайны, шиге бөттө: ундай ғәҙәте бар Фасилдың, бар.

Герман һуғышынан, бәлки, бынан быуат элек япон яуынан уҡ халыҡ теленә инеп, һаман онотолмаған мәрәкәне – заманында мәрәкә лә булмағандыр, бәлки, фажиғәле бәйет остоғолор – Зәриә һамаҡлап ебәрҙе:

*Бәтәс, ҡәйнеш, ҡайттыңмы ни?*
*Шинелеңде ҫаттыңмы ни?*

«Ҡәйнеш» урынына «балам» тип көйләргә тейеш Зәриә, әлбиттә, махсус хаталанды.

Быға тиклем дә «ике туған ярым» энеһенә малайһытып ҡараған Зәбир иһә үҙен эрерәк тотто, күрешергә һонолған ҡуш ҡулды сәпәп кенә ебәрҙе.

– Кого я вижу? Приветик, фраер! Пузырек есть?

– Эй, ошоно! – Зәриә ирен был төбәктә киң таралған, күп мәғәнә һыйҙырған һүҙ менән битәрләне лә Фасил менән һәүетемсә һөйләште.

– Әтей-әнейең һин ҡайтырҙы белмәйсе.

– Попутка осраны ла...

– Комбайнер абзыһы остановкала ғына йәшәй берәүҙең, шылтыратһаң ни була шуларҙан? Һуң, сотовый аппаратың бар түгелме?

– Ҡулъяулыҡ булғаһам да күрәләр өйҙән... – Фасил, йәне үртәлеп, ситкәрәк бороллдо. Хас та Ишәй менән Ҡушай кеүек Зәриә менән Зәбир ҡай саҡ. Инде Зәбире кереште, күрәһең, ярты сәғәт элек һемергәне башына яңы йүгерҙе.

– Аппараттарың боҙоҡмо ни? Ха-ха! – Зәбир мобилкаһын усына алды. – Давай һөйөнсөләйек Янбаевтарҙы!

– Ҡуйсәле! – Фасил кәмә яғына ымланы. – Ултырҙым-киттем.

– Ҡайҙа, ҡәйнештең кәмәһен этеп ҡалайым, – Зәриә атлаған еренән туҡталып ҡалды: Зәбир һорауһыҙ-ниһеҙ энеһенең ҙур ҡара күҙлеген бармаҡ араларына ҡыҫтырып ҡына систерҙе лә үҙенә кейҙерҙе.

– Не так уж модный, но пойдет. Баҙарға сыҡҡанда бирә торорһоң, йәме. – Кире кейҙергәндә төҫө лә, тауышы ла йәмһеҙләнде. – Все понятно! Тукмалған слабак. Күҙ төбөндә – фингал, значит, авансың, мобильнигың капут – ограбили, да? Позоришь фамилию, парень!

– Торбаға төртөлдөм... – Егет бүтәнсә ләм-мим. Сабырлығын юйып, Фасилға бер ҡарап баш сайҡағас, Зәриә ҡайтыуға, һуҡмағына ыңғайланы. Уның йырағайыуын көткән, тиерһең, – Лосман бошонҡо хәлкәйҙәрен ҡойто ғына төшөндөрҙө.

– Өҫтөнә баҫтың, абый. Слесарь-сантехник должносына урынлашҡайным, ваҡытлыса котельныйҙа йоҡлап йөрөлдө. Ошо арала ятаҡҡа күсергә тейеш инем. Төндә бер фатирҙа серек торба ысҡынған. Ярай әле, һыуыҡ һыуҙыҡы... Шуны йүнәтеп ҡайтып барам. Арылған. Аҡса давайланы өс хулиган. Нету, мәйтәм... Ике ҡулды артҡа шаҡарҙылар ҙа...

– Не хулиганье, а настоящие разбойники. – Ярты йыл эсендә ҡәрҙәшенең хәбәре апаруҡ урыҫлашҡанға сәйерһенгән ҡустыһы күҙлеген өҫкә шылдырып, ҡаш тирәһен һыйпаштырҙы.

– Ыштаныңды систермәгәс тә хорош. Күп инеме?.. – Зәбирҙе үҙенсә аңғарған Фасил:

– Өсәү... – тине мөштөм генә.

– Да, нету теперь мани-мани?

– Ы-ыһы... Янымда – меңдән ашыу инеме, авансынан әлдә ошо нәрҫәләрҙе алып өлгөрҙөм, – егет курткаһының ҡайһылыр ҡаптырмаһын сыртлатҡан, яурынына аҫҡан буш сумкаһын ҡыптырлатҡан булды.

– Не нравится мне все это. Пошли, братан, үҙем заначканан баксы бирә торам. Взаймы! Буш ҡул ҡайтып инмә, атыу әнкәң ҡабат бер ҡайҙа ебәрмәҫ. Әнкәңдә булмаған чурт-чураман алырһың. Хотя бы «Акбар» цейлонский что ли. Ҡалайы хәтәр ҡупшы, үҙе дә-әү.

Иҙел ашаһына бер баҡтылар ҙа Янбаевтар ауыл һуҡмағына тартылдылар. Юлда Зәбир, һуңғы тәмәкеһен тоҡандырып, Фа-

силға бая дачникка фәстергәндәрҙе ҡабатланы. Тик әле «спецохрана» тигәне ябай һаҡсы-хеҙмәтсегә әүерелде, «бассейн» берәүгә ҡалды, «срочный заказ» сметаһы ла яртылаш ҡыҫҡарҙы. Ҡапыл Зәбир усын уҫка ышҡыны, әйтерһең, грек сәтләүеген онтамаҡсы.

– Идея! Бергә китәбеҙ. Алдағы аҙна аҙағындараҡ. Как раз сантехниканың азбукаһын өйрәнгәнһең. Шап бер айҙа егермешәрҙе – баста и домой!

Буяуһыҙ рәшәткәгә етәрәк, Фасил сығынсы аттай туҡтаны.

– Штирлиц булып алайыҡ. – Зәбирҙең күҙҙәре теремекләнде. – Һин переулок осонда көтөп тор, мин өйҙән шым ғына... Тәмәке һылтауы менән эргәңә барам.

Айырылдылар. Һ-м, Силәбе яғында елләнеп йөрөү ҡыҙыҡ булыр, шәт. Кәзә майын сығара торған заказ микән? Булһа ни? Зәбир эргәһендә әҙерәк мәүешлеге бөтөр. Юғиһә, птэушниктарҙан шөр ебәрҙе... Төшөмлө генә булаһы ла слесарь-сантехник шөғөлө, тик бигерәк тынғыһыҙ. Ислам университетын да барып күрә алманы... Мастерынан ҡайтып килергә һораны. Эх-ти, эх-ти, может, ҡараҡтарҙы табырбыҙ, тигән була теге. Йыуатырҙан әйтә инде, өҫтәүенә, кәңәш бирҙе күҙлек кейергә. Әтеү кем йөрөр тиң күҙен ҡояштан һаҡлағыста? Ярай ҙа бөгөнгә сыуаҡ. Шылтыратыр ҙа трудовойын апҡайтыр берәйһе аша Кавалеристың оноғо, ә мастер-коммунальщикка – үҙе почта аша «по собственному» желанию тигән ғариза һалыр...

Тыҡрыҡта Зәбир ҡыҫтабыраҡ Фасилдың курткаһын, күҙләгеи кейеп, йәһәт кенә «Иҙел» ларегына йөрөп әйләнде. Көлә, имеш, һатыусы ҡатынҡай ҡарап-ҡарап та танымай ҡалған.

Зәбир, ҡалай банканан «Ярпиво» һемерә-һемерә, Фасилды ярға тиклем оҙатып килде.

– Һиңә тигән безалкогольныйы юҡ, – Зәбир һәләк ҡәнәғәт, Фасил да әҙ-мәҙ ҡәнәғәт.

Зәбирен юғалтҡан Зәриә пәйҙә булды тиҙҙән.

– Әпәт... Ай, дилдалай!

– Юҡ та... Серьезный разговор затеяли. – Зәриә иһә тынын үлсәберәк алды: былар бер-бер Фасил йөн тулы тоҡ күтәрешкән кисте сәйнәмәйҙәрме? Юҡ та, оҡшамаған. Ауыҙын төйһәң дә өндәшмәйәсәк ҡәйнеш йораты. – Пробуй, уфимский кустәнәс.

– Кустәнәстең сауабы оло, – тигән булып ҡатынҡай күперек шыйыҡсаны бер-ике йотто ла банканы ҡырсынға ултыртты. – Бар, ҡәйнеш, борҙом телефонды Фазыл ҡайнтутаның ҡолағына, мунса яҡ, тинем. Танкист ҡәйнеш килгәйне, сразы йомош ҡуштым: сусканы һабынлап йыуа уже. Жалкы түгелме, еңгә, ти әле ул.

– Бөгөн үк эш итәйек тиһеңме?

Зәриә ҡыҫҡа итеген сисеп Фасилға тотторҙо ла үҙе һарғылт сирәмгә ойоҡсан баҫты.

– Кәнишне. Ҡәйнеш тә айныҡ күренә.

– Ҡых итергә, тиреһен өтөргә зерә йәтеш, һы!

– Бөтә ирҙәр ҙә живодер инде, һы...

Зәбир иһә күңелсәк һөйләнде.

– Ике запасың – ҡәйнештәрең һинең өсөн ыҙғышмаймы, әй? Үлһәм... үкенмәҫмен, икенең бере еңгә-ҡатын* итер...

Зәриәме һуң һүҙгә аптырар ҡатын!

– Шайтан ишетмәһен! Ә ниңә... икенең бере? Икәүһен бер юлы жених итергә можны, ә кәләш алдыниһәләр, ҡушҡан еңгә (туйҙа кейәү менән кәләште тәүләп бергә ҡундырыусы) ролен үтәргә лә магу. Йөрөйҙәр әтеү... һәлберәтеп...

Фасил, ыпыҡ кешеләй туфлийын сисеп, ҡойма итекте кейгәс, һайға керҙе. Әйберҙәрен һәндерәгә һалыу менән тәрәнгәрәк этәрҙе лә уңайһыҙ урынға яғылған кәмәһенә һәләт ҡунаҡланы. Итектәрҙе берәм-һәрәм ярға быраҡтырғас, һәүетемсә үҙ хәсиәтенә сумды.

– Ана тора стерва еңгәм ярҙа сүмәлә һымаҡ! Бөйөрөнә таянған... Боярыня тиерһең!

– Кәнишне, мин меҫкен што ли?

Тәрәндәрәк Фасил кәмә бортынан һуйҙайып һыуға тексәйҙе. Быны шәйләгән Зәриә иренең ҡабырғаһына тотондо һәм итектәрен төҙләп баҫтырҙы.

– Стерлядка ҡаскандыр. Как телевизор, өс метрҙан төбө күренә әлеге аяҙҙа Иҙелдең. Красота, малай!

Зәриә итектәрен кейгән арала ирәбеләнеп һорай ҡуйҙы:

– Нисек атала һуң башҡортса?

– Уҡбалыҡ, кажется. Племянникты үҙем өйрәткәйнем дә һалдау төртөргә...

– Ә-ә, плимәник, тәк, пле-мән-ник? Ошо һүҙҙе Рәшит мәрхүм һорашҡайны дәрестә Сәйҙә апайҙан, башҡортсаһын аңлата алманы теге. Әбдерәхим абзыйы сыуаш еңгәйен алып ҡайтҡас, таныштырған икән «Рашид – мой племянник» тип.

– Племянник? Черт его знает? Белмәнек – и все!

...Михнәтләнеп Өфөнән кисә ҡайтып төшкән Фасилды бына шулай һирәк таҡта ҡойма аша күреп ҡалды Кәримова. Бәрәмәс, эңерҙә ҡара күҙлек кейеп алғансы. Ә-ә, оҙон керпектәренә осҡон ырғымаһын, төтөн әсеһе кермәһен өсөндөр. Иғтибар итеүенең ғиләһе шунда: бер-бер фатир эҙләш әле, абый, тип мөрәжәғәт итеүе ихтимал Лираның. Донъя хәлен белеп булмай... Ни генә тимә, коммуналь хеҙмәттәгеләр бихисап торлаҡтарға инеп-сығып йөрөй.

---

* *Еңгә-ҡатын* – иренең вафатынан һуң ҡәйнешенә сыҡҡан бисә. Онотолған туғанлыҡ термины.

## 5

Фәнидә өлтөрәп ҡаршыланы ҡыҙын. Ҡайҙан, нисек килдең, тип тә һорашманы, иң тәүҙә һаулығы, дауаханан ниндәй ҡағыҙҙар менән сығарыуҙарын белешкәс – агрозоотехник, уны-быны айыра – имен-аман бәпәй тапҡан әсәләй рәхәтлеккә сорналды. Аш-һыу яраштырғансы, Лира менән байтаҡ сөкөрләште.

– Валя тутәйең клубта сәй ойоштороҙо, заслуженный исем биргәстен. Бер ҙә генә ҡырын ҡараманы, башҡалар кеүек ҡыланманы. Тимурҙы, уф, хатта мәктәптә башҡа ултыртып ҡуйҙылар.

– Килештергәндәр!

– Һиңә диагноз ҡуя алмайҙар, тигәс, аҙаҡ аулаҡта ней тигәйне: әгәр врачтар хаталанһа, судҡа бир, сарыфлаған сумманды кире ҡайтарырҙар... Булмай торған хәл, тинем дә ҡуйҙым. Врачтарҙы кем еңгән?

– Юҡ, әсәй, ысынлап ауырыным, башланғыс стадия... менән. Бронхы төбөндә затемнение таптылар. Һуҡыр эсәк алдырған ерҙә минән алдараҡ Карамова тигән апай операция яһатып сыҡҡан. Уның тубиклығы аҙаҡ асыҡлана, срочно шешен ярыптегеп ебәргәстәре генә. Шуның койкаһында яткас, уҙемә йоҡҡандыр, тим. Ярты көнгә генә минән алдараҡ выписка ала. Бутәнсә – ҡайҙа? Фамилия оҡшашлығы арҡаһында мине лә ныҡлап эҙләгәндәр, хатта ауылдан әпкиттеләр, беләң.

– Уй, ул көндәр иҫкә төшһә...

– Так что, медперсоналға оло рәхмәт яҙҙым, журналдарына. Врач әйтте: тағы берәй ай һуңлаһаң, оҙаҡ ятыр инең, их, бөтә больнойҙар һинең ише мәлендә табылып ҡына торһа, проблема кәмер ине, ти.

– Ә теге... Карамова тигәндәре һуң?

– Анауы ҫыҫылдаҡ йәш доктор белеште телефондан. Әнкәйе илаған да ебәргән... Ҡыҙы, баҡтыһаң, операциянан һуң өс кенә көн тороп, ҡабат киткән дә барған Камчатский балыҡ промыслаһына. Алты айға төҙөшкән договоры, поезға билеты булған, приступка тиклем үк. Үлгән, ти, Дальневосточный диспансерҙа.

– Уй, Аллаҡайым, бахыр ғына... Хоҙай беҙгә, э-э, һиңә һынау ебәргәндер, ти, Дилбәр апа.

– Кемдең кем икәнен дә һыната, – тине ҡыҙы моңһоу ғына. – Сымылдыҡты һүтеп алайыҡ, тормаһын йән көйҙөрөп...

– Өлгөрөрбөҙ, – электр плитәһендә һыуы тандыр өйөрөлгән мискәгә картуф һалғас әсә кеше бер килке уйланып торҙо.

– Сирен йәшергән – бөлгән... Хәҙер һин шәбәйҙең, барыбер ҙә ауырыным, фәлән-төгән, тимәүҙең гонаһы булмаҫ. Шикләнеп ҡараусылар, берҙе биш итеүселәрҙең өндәре яйлап тығылыр. Бештеме бәрәңге? Ҡайҙа, мин шатлыҡтан нишләргә белмәйем,

һине сәләмәт күреү менән Сания әбейеңә хәйер бирермен тигәйнем. Тәм-томоңдан өлөш сығарайыҡ, ҡаймаҡ алайым. Һыйырҙың һөтө кәмене, ҡараңғыла һауырмын әле.

– Ә мин егеттәргә ауыл ризығы вәғәҙәләгәйнем. Аҫтағы өйҙә лампочка юҡ.

– Йәшергәйнем, кеше инеп, бер-бер ҡоҡандырмаһын тип. Тартмала яталыр... Әле Данир менән Сашамы унда?

– Әйе, онотмағанһың, әйе... – тип көлөмһөрәне Лира. – Тимурчик нишләр?

– Дәрес әҙерләр, ашай торор. Ынтырҙан яҡын – хәҙер үк ҡайтам Сания түтәйҙән.

– Миңә эйәрһә Тимур? Яңғыҙыма уңайһыҙ.

– Эйәрт әтеү. Нимә кәрәк – алығыҙ ҙа ишекте тыштан элеп китерһегеҙ. Мин – тиҙ... Әү, ҡыҙым, Сашалар бында ашанһын, ә ниңә?

– Әне-ей, үҙҙәренең паектары етерлек, – тип кире һуҡты ҡыҙы. – Һорашһалар, Имаш дәүатайҙың ҡырҙағы туғандары, тип әйтергә ҡуштым әле мин.

– Үҙең беләһең... – Фәнидә, өҫ кейемен дә алыштырмай, тиҙ генә төрлө ризыҡ төйнәштереп, кеҫәһендә хәйерлек аҡса барлығын ҡапшап, түтәнән Биргадир урамы осона ашыҡты.

* * *

Әбекәй түрбашта күскенсе күршеләре хәйерҙән ҡалдырып киткән Рәшиттеке ише бәләкәсерәк телевизор ҡараштырып, мөйөшөнә арҡа терәп, ойоп ултыра.

– Иҫәнме, Сания инәй? Фәнидә әле мин.

– Арыу, бәпкәм, шөкөр. Лираң ни хәлдә?

– Һау-сәләмәт уҡып йөрөй...

– Бирһен Хоҙай... Төнәгөнгө ҡырауҙа әҙ-мәҙ тымаулағайным, япраҡ сәйенең шифаһы тейҙе, шәт.

– Өйөң йылы ғына... Мейесеңә яға башланың әллә?

– Башланым, көн аша... Рәшит мәрхүмкәй свутларын рәтләгәйне былтыр, мейесем йылы тота, төтәмәй ҙә. Әбдерәхимдең әфисәр малайы хәйер бирмәгә инеп сыҡты, рәхмәт яуғыры.

– Минең дә нәҙерем бар ине... – Фәнидә күстәнәстәрен өҫтәлгә сәсте, үҙе яһап, элекке өйҙәше ыңғайына әҙ-мәҙ сәйләп алды.

– Балаларыңдың игелеген күреп йәшәргә яҙһын. Минең улым Надирҙарға тартҡан, быйыл да ҡайтманы. Үҙем дә ҫантый! «Ун йылға бер ҡайтаң, уйнаштан тыуғанһыңдыр» тип әрләнем өсөнсө йыл. – Әбей оҙон хәбәргә төштө. – Үпкәләгәндер: хат та яҙмай, ҡайтмай ҙа, переуад ҡына ебәргеләп ята, һөмһөҙ нәҫтәкәй. Ишембай киленем – типтәр, дәү начальник,

шуның һүҙенән сыкмай, йомшаҡай нәрҫә. Аумаҡайыраҡ ине бәләкәйҙән... Һөйәр балаңдан күрерһең, тигәндәре нәк миңә тура килде лә ҡуйҙы... Үлеп китһәм бер-бер, саҡырмағыҙ йыназаға.

– Үлгән ҡыҙыңдың... оноғоңдан да хәбәр юкмы? Украинала йәшәйме һаман? – Ҡолаҡка ҡатыраҡ ҡортка үҙ улын тылҡыуҙы дауам итте:

– Мәрхүм ирем Надирҙың әтиенә имсәктәш ине. Инә – бер, ата – башка... Һөйләгәйнем, һиңә генә һөйләгәйнем, шикелле, яуызлығын... Минеке һуғыштан инүәлид ҡайтты, оҙаҡ йәшәмәне аҙаҡ, ә имсәктәш абыйы фронтка эшкинмәне – ҡылый ине. Улай ҙа Еңеү көнө «Бабида!» тип һөрәнләп, шарт та шорт мылтык атып йөрөнө урамда. Лесник булғастын, мылтығы бар ине...

– Эскәйнеме?

– Берәү ҙә эске менән мауыкманы элек Бурашта, ана шул ҡылый ҡайнтута ғына тәҙрәһенә ҡорған тартып кәгә торғайны. – Әбекәй үҙенекен сурытты. – Рәшит мәрхүм ҡошап...

Көн яктыһы һүрәүләнә, әбейҙең хәбәре һуҙмаҡлана бара.

– Икенсе юлы тыңлармын, һәукәш көтә... – Фәнидә ҡайтыуға ҡабаланды, Сания йөҙйәшәр һөйләнеп ҡалды. – Лираңа сәләм күндер... Күреп китһен мине тереләй... Иллә быйылдары үлмәйем. Тамағым тук, утыным күп. Минән оло Кәвәлирис үлмәгәнде... Хоҙай ҡушкас, йәшәмәй сараң юк.

– Әлеңгә хуш... Сәләмеңде тапшырырмын ҡыҙыма, һау бул, инәй.

«Һиңә генә һөйләнем»ен күҙ алдына баҫтыра-баҫтыра һауҙы һыйырын Фәнидә.

...Урман аҡланы. Яңғыҙ ҡарағастың ҡыуармаған сағы. Һуғыш токанаһы йәйҙә ҡымыҙлык йыйырға яңғыҙ сыккан Сания Бураш үренәрәк уҙа, һыбай ҡайтып барған ҡыҙмаса лесник ҡыҙҙы күреп ҡала.

– Матурайып киткәнһең дә... Эмейҙәрең төйөрләнгән... Ун бишең тулдымы әле?

– Ун дурттә... – тип яуаплай уны-быны уйламаған Сания.

– Ҡымыҙлыкты мул йыйғанһың! Ҡана, атланмаға аҫып апкайтам. Үҙеңде лә менгәштерәйем. Алдан...

– Ҡуй, абый, – Сания ситкәрәк тайшана. Сөнки «...лесник әллә кемде юл ыңғай... эйәрҙә килеш...» тигән яҙа-йоҙа насар хәбәр ҡылт төшә иҫенә. Йән-фарман ҡаса Сания, ҡылый һыбай баҫтыра. Әл дә аты йыуаш икән, тапамай. Сатин күлдәге йыртылып бөтә. Төндә бисара ҡыҙ урам аша күршеләренең өйөн үртәргә маташа. Ғәрлегенә, нәфрәтенә сыҙашмай, шырпы эҙләй – таба алмай. Аптырағас, көл араһындағы ҡуҙға туҙ тетеп һала, шунан таяк башына кәрәсинле сепрәк урап, ут ала. Һиҙеп, ҡала быны ҡылый, өҫтөнә лә, факелына ла бер биҙрә эркет һы-

уын һирпә... Ана ҡасандан уҡ «сантый Сания» яманаты тарала биреп ҡуя.

Ниндәй хәтәр серҙе сискән Сания Фәнидәгә! Әйтәгүр, фашист пуляларынан бите быжырланып ҡайтҡан инвалид – ҡылыйҙың ҡустыһына кейәүгә барған бит әле. Әйтәгүр, Надирҙы үҙһенмәй. Бер мал, аҡман-тоҡман баҫылғас, тегене урам ярып әрләгәнен Фәнидә үҙе ишетте. Барыйға күсенеп йөрөгәндәме... Йоҡараҡ кейенгән Эльза дәү ағас көрәк менән ҡапҡа алдарын ҡарҙан таҙарта, атаһы тәмәке быҫҡытып тора ине.

– Биргадир, имеш, берәү! Ун йәшлек ҡыҙынан ҡар көрәтә. Балаң һыуыҡ алдырһын, ауырыһын, тиһеңдер, ҡап ҡорһаҡ! Әтиең дә күтәнсе ине, бәдбәхет...

Артыҡ әр-хәбәр ишетмәһен өсөн... йәмерәйгән Надир ҡулдары ҡыҙарған ҡыҙын шым ғына өйөнә индереп ебәрмәһенме.

...Лампочка тоҡандырырға ваҡыт, бәй, балалары оҙаҡлайсы. Арлы-бирле Лира сымылдығын йыйыштыра һалғас, Фәнидә, һөҙөлгән һаумал һөтлө бидон тотоп, аҫҡы урамға ыңғайланы. Утын һүндермәне, әйҙә, балҡып торһон ҡалҡыуҙағы өйө. Байрам бөгөн, күңел тантанаһы – Лираһы ауырымай! – ишетһендәр, күрһендәр...

Үҙе килеп булып төшкән ғәзиз иҫке өйҙә лә яҡты. Килештергән йәштәр – өҫтәл тулы ҡала һәм ауыл ризығы. Тимур тышына «Биг-ланч» тип яҙылған ҡуш устай ҡатырға һауыттан, йәмшек монаят ҡалағына урап, спагетти йыпыра.

– Йылы һөт ҡушып, бәрәңге эсең, әй, ашаң, – тине Фәнидә, аспирант егеттән тартыныңҡырап. Уныһы аяғүрә баҫты: «Апай, рәхим итегеҙ...» Быға тиклем урыҫса ләпелдәп ултырғандарҙыр: «Мама, с нами кушай әйҙә», – тигән булды ла Тимур, замоктарын тыз-быз тарткылап, иҙәндәге йоҡо тоғона кереп сумды. «Әнкәй, спальный мишук әпир миңә лә...»

– Әбизәтельне, тәртипле генә уҡыһаң, – тине Фәнидә. – Аҫтына кейеҙ түшә, абыйҙарыңа ҡаты була әтеү.

– Түшә һуң, мин бында әүәй хачу...

– Йоҡлаһын бында, әнкәй, – тигәс Лираһы, әсәләре соландан бер ҡосаҡ кейем-һалымды һелккеләп индерҙе.

Уңарсы Александр ишек шаҡыны, уны «Поймал, да?», «Нисәүҙе паймал?» тип Данир менән Тимур ҡаршыланы.

– Есть одна! – Ҡәнәғәт Шурик киндер тоҡсайында бәргесләнеп ятҡан дәү суртанды, Данир мейес эргәһенә иҫке гәзит йәйгәнсе, елкәһенән тотоп торҙо. – Одна сорвалась, примерно такая же... Осенний жор у них, азартно хватают блесну.

Фәнидә Тимурға ябай ғына үлсәгес табып бирҙе. Шурик уның ырғағын суртандың айғолағына кейҙергәндә:

– Ике кило ярым тартасаҡ, – тине лә, үлсәгәс, суртанды һыу

аҫтында йөҙгән кеүек ҡыландырып, маҡтанып алды.– Ярға һөйрәкләгәндә үк ауырлығын самалайым мин.

Эйәһен ҡеүәтләгәндәй, гәзиткә һуҙылып төшкәс тә йәне сыҡмаған суртан йөҙгөстәрен тырпайтып, яй ғына ауыҙын асып япты.

– Башковитая, вишь, читает...– Мейес артында ҡулын сайған Шуриктың мәрәкәһенә Лира менән Данир бер юлы һындары ҡата яҙғансы көлөштө.– А сорванца завтра с утра поймаю! У них память короткая.

Йәнәһе, кистән төшөп ысҡынып ҡалған суртан иртәгә ҡаба ул, балыҡтарҙың хәтере ҡыҫҡа... Кеше генә ул, ауыҙы бешһә, айранды өрөп ҡаба, тимәксе.

Баянан бирле үрле-ҡырлы һикерәндәгән Тимур әсәһенә өндәште:

– Әнкәй, иртәгә мәктәпкә бармайым, йәме. Дәдәйгә эйәрәм...– Яклау көтөп, малай апайына төбәлде.– Лира апай, йәме?

– Сукына...– тип һукранды Александрға матурлап өҫтәл яңырткан Фәнидә, Лира иһә икеләнде.– Иртәгә ҡайталар ҙа дәдәләрең.

## Һигеҙенсе киҫәк

*Салауат күпере йәшкелтем икән – ямғыр күп булыр,*
*Ҡыҙылһыу булһа – ҡаты ел ҡубыр.*

**Халыҡ һынамышы**

### 1

Бураштан Өфөгә ҡасаныраҡ ҡуҙғалыу хаҡында һүҙ сыҡҡас – эргәлә бер урыҫ бар тип Кәримовтар ҙа, Тайсин да урыҫса һалдыра – Александр үкенес белдерҙе:

– Всегда торопитесь... Возможно, завтра я изрядно устану. Порыбачу, отдохну – у меня же отгул. Не удобно ли выехать через день, рано утром?

– А я отпросилась...– тине Лира.– Мне удобно!

– Шеф позвонил с фирмы. Обещал, что обязательно прибуду, завтра после обеда. – Данир әйтте. – Компьютер, оказывается, забарахлил. А так бы...

– Безгә всирауна, ивет, улым?– тип Тимурҙың арҡаһынан һөйҙө әсәһе.– Төштән һуң ҡайтам да, мунса тоҡандырабыҙ.

– Дәдәйҙе иң шәп урындарға апарам балыҡҡа.

– Эй, еңмеш! Бар, бар, йоҡонан уятыусы булһа. Ярай, үҙем, эшкә китешләй, итек-фәләнеңде индереп китермен. Ә юҡ,

бөгөн – өйҙә, иртәгә бында әүәй булырың. Бөгөн буш мишук юк та.

Лира иһә Данирҙы төпкәрәк әйҙәп, тәҙрә ҡорғандарын рәтләй-рәтләй, шкаф шүрлегенә зарядкаға ҡуйылған мобилкаһына күҙ атты ла һораны:

– Уфанан эләктеме гендиректорың?

– Эйе, аптырап киттем үҙем дә.

– Әнкәйеңә лә әйт һуң, ҡайтам, тиң. – Ҡыҙ тауышында еңелсә төртмәс сағылды.

– Һөйләштем, ул да ҡайтырға ҡуша. Яңғыҙ бит. Дачалағы ағай ултыртып алмаҫ микән?

– Ихтимал... Тик үҙең генә ин, мин... – Баш сайҡаны.

Ни өсөн алғанын ҡыҫҡаса аңлатыуға Шурик ҡул ғына һелтәгәс, Данир бының рюкзагынан кәнсирле «Ярпиво» эләктерҙе лә тышҡа атлыҡты һәм, ҡулына ярты шыптыр алма тотоп, тиҙ генә кире әйләнде. Алмаларын ҡайтырға йыйынып, ишек төбөндә тапанған Фәнидәгә биргәс, Данир һәммәһен дә һөйөндөрҙө.

– Договорились: выезд в двенадцать ноль-ноль. Но я ему должен немного помочь.

– Вот и прекрасно! Возьми рыбину с собой. Мы обязательно поймаем, да, Тимур! – Александрҙың ҡыуанғаны тауышынан сағыла, йөҙөнә яғыла.

Урыҫса аламараҡ аралаша Тимур... «паймайым» тине һәм әсәһе-апаһы артынса ишекте лә япмай шылды. Соланда ныҡыраҡ ҡараңғы икән шул.

Кәримовтар өйөндә ут оҙаҡ һүнмәне, һәм Лираға яйлап-яйлап фатир мәсьәләһен күтәрергә тура килде. Әлбиттә, вокзалда, күрше ятаҡта ҡуныуҙарын йәшерҙе.

– Барып ожо һалайыммы деканға йә ректорға? Һәүетемсә уҡып бөтөргә ирек бирмәйһегеҙ... ярты йәтимә студентҡаға, тип. Үҙе юҡтың күҙе юҡ – ордер биргәндә мине ебәрәһең булған.

– Әней, борсолма. Бер айҙан – практика, шуңарсы Черниковкалағы инәкәс, кем әле... Һин заочно уҡығандамы, бер кис ҡунғайныҡ, онотҡанмын адрестарын. Һуңғы юлы бал апарғайның?

– Ҡыҙы Тәслимә, үҙе Мөгөс... Мөгөлсөм, внучкаһы – Шәүрә. Тимурға декрет алғас, тоҙланым шул уҡыуҙы. Иҫкә төштө: Өммөгөлсөм!

– Эйе, ваҡытлыса һыйындырһалар, шунан йөрөп уҡыр ҙа яҡыныраҡтан фатир эҙләр инем. Яңы йылдан барыбер ятаҡҡа күсәм. Үс итеп... – Ҡыҙының «Лира – Данир – Светлана» өсмөйөшөнә ишара яһауын һиҙгәндәй, Фәнидә һорай ҡуйҙы:

– Егетең... э-э, Данир беләме һуң? Ул да фатир эҙләшһә, тим инде.

– Ә-ә, хәҙер Уфаны ҡабаҡҡа менмәйсә лә сотовыйҙан тотоп була, ти. – Лира баш сайҡаны. – Кәрәкмәй, кеше мәшәҡәтләп...

– Хажиморатыш та әйткән кеүек ине шул. Әмирә тигән аҫырау бала алдылар, аят уҡытып тороп. Икенсе ҡайтыуыңа бешеренеп, ашҡа дәшербеҙ әле. Карманный алырға ҡушты әле Тимерәйеш. Бөтәбеҙгә лә.

– Минекен алып ҡал әнкәй, үҙемә яңы булыр.

– Юҡ, секретаршабыҙ пичәтле счет таптырасаҡ. Солтан абзый әйтмешләй, тә-әк, үҙем барам инде һиңә ултырып. Отгул алам да. Һыйындырыр ҙа, ул Өммөгөлсөм инәкәстең ҡыҙҙарын ризалатыр кәрәк. Бәрәс, бүтән зат-бот, таныш-тонош юҡ та Уфала. Бал-май, вәринйе-сәлинйе бирәм, аҡсаһы ла не жалкы – ярты кредитым ята әле кассала. Хоҙайым, уҡып ҡына бөтә күр.

– Мобилканы Данир һайлар, әнкәй, йәме.

– Ярар... Үҙебеҙҙең атас малай итәки школға бармаҫ микән?

– Барыр. Төштән һуң эйәртербеҙ Сашаға. Һин ҡайтыуға мунса ҡоҡандырам, кер йыуам. Эш муйындан.

...Ауыл үҙ яйына уяна. Ҡариҙел өҫтө быуҙан ыуылйый.

Фәнидә Сасынға китер саҡта балаларын торғоҙҙо. Әсәһе «балыҡ – төштән һуң» тигәнгә улы һыңғырлап ҡына мәктәпкә әҙерләнергә кереште. Апайы бәҙрәфкә йөрөп инеүгә – ғәйеп малай. Юрамал сумкаһын, формаһын түңәрәк өҫтәлгә өйгән, йәнәһе, тәүҙә рөхсәт ине ләһә уҡыуға бармаҫҡа. Әйтәгүр, соланда төнөн әҙерләгән итектәре, әрһеҙ кейемдәре лә күренмәй. Түҙмәне Лира, арлы-бирле йыуынды ла аҫҡа юрғаланы.

Велосипедын келәткә һөйәгән... Тып-тын өйгә инде – Сашаның иҙәндәге йоҡо тоғо буш, ә Данир тоғон баш аҫтына һалып, ҡалын иҫке юрған ябынған да ҡасандыр дәүәтәйы оҫталаған тупаҫыраҡ, мәгәр ныҡ ағас карауатта мышнап ята. Эргәһенә барғайны, егет, кирелгән-һуҙылған булып, юрған осон һирпте лә ипләп кенә һөйөклөһөн биленән аймап, түшен түшенә иңкәйтте.

Ирендәре убылды, йөрәктәре дарҫланы, зиһендәре йәйғорло нурҙарҙай балҡыны. Ы-ылдап, тыны ҡыҫылып саҡ айырылды ҡыҙ назлы ҡосаҡтан.

– Уф, дәүинәм күҙәтеп торған кеүексе... Тимурҙы күрҙеңме?

Данир түшәктән ырғып төштө. Тәҙрәнән Лираны шәйләгәс, юрый йоҡлағанға һалышҡан икән.

– Сашок иртүк һыпыртты. Тимур кергәйне, термос тотторҙом да ебәрҙем. Бер кинолағыса: «Суда не хади, туда хади, атыу сниг башка пападет» тигәйнем – шыйҙы мальчик.

– Үҙең мальчик. Мә... – Лира Данирға мобилкаһын һондо. Лира алма мырта-мырта өҫтәл йыйыштырғансы, ләпелдеген сыҡты Данир.

– Тимур барып етеүгә – «хап» бының ҡармағына өс килолыҡ шуҡә! Икәүләп һөйрәнек, ти, ярға. Вәт романтика! Термосты онотҡан булған, рәхмәт, ти, һиңә күп сәләм күндерә. Төштән һуң өҫкә менәбеҙ, тиме...

– Сыскан да тырнамаған башковитыйҙы. Апкайт, эсен яр ҙа... – тине Лира, мейес араһындағы төҫө уңған епле суртанға текләп. – Әнкәйеңә отчет өсөн...

Минут та тик торманы Лира кире өйҙәренә ҡайтҡас. Кейемдәрен барлағас, үтекләгән арала тәҙрә аша урамға, Иҙелгә күҙ һалғыланы, гүйә, кемделер көтә. Юҡ, көтмәй, бары һағынғандыр йәнтөйәген. Ана, беседка эргәһенән һиммәтле баҫып Солтан Хажиморатович төшөп бара. Эшләпәһен ҡырын һалған, ҡара күн плащын кейеп алған, галстук та таҡҡан, буғай. Аръяҡҡа сығырғалыр уйы.

Катер уҙып китте. Ниңәлер иҫенә бала сағы – туй кәмәһенә ҡул болғап ҡалғаны төштө Лираның...

Гимн гөрләне: Данир шылтыратты. Юлға әҙерләнәләр икән. Дачниктың прицебына мотоблок-фәләндәрен тейәшә лә – выжт. Берәйһенә ҡалдырһасы баҡсасы абзыҡай? Ышанып етмәйҙер бураштарға... Лира Данирҙан Александрҙың номерын үҙ мобилкаһына күсертте.

Бәй, оҙон көҙ аҙағында ла йәйғор йораты төшөр икән! Утрауға, гүйә, күк пәйғәмбәрс йәшкелтем Салауат күперенең бер осон элгән. Йәл, тиҙ үк томанһыуланы, моғайын, быйыл иң һуңғыһылыр.

* * *

Райүҙәк баҙарына иртүк яндаулы матайҙарында елдереп, ветеринарҙан келәймә һуктырғас, Зәриә менән Зәбир һә тигәнсе кистән һуйылған иттәрен ҡулын ҡулса, ботон ботса тигәндәй елгәрҙеләр ҙә, уны-быны баҙарлашып алғас, ҡайтырға сыҡтылар.

Зәриә мәсеттән ары Олотүз лавкаһына етәрәк төшөп ҡалды. Сессияға йыйылған депутаттар таралышамы, Хажиморатович мәхәллә алдында мулла хәҙрәт менән гәпләшә ине. Әһә, Солтан абыйға кәмә сығалыр, эйәреп барып, Зөлфиәне апкайтырға кәрәк, ҡасмаҫ лавка, тип уйлаған Зәриә өйөнә юрғаланы. Зәбире рәшәткә буяй торор, мотоциклын да ҡараштырыр, ҡырын тарта, тисе.

Өлгөрҙө кәмәгә. Мулла абзый ҙа арьяҡҡа юлланған, имеш.

– Бураштар мәсеткә йөрөмәй, эйе, күпер юҡ тип. Исмаһам, берәй буш өйҙә йома намаҙы ойоштормаҫмы Дилбәр эрәттәш тигән ниәттә һеҙгә китеп барған көн әле, Зәриә һеңлекәш. Донъялар харап! Дилбәр, ана, китап ҡушмаһа ла, Рәшит мәрхүмгә – ир мәйетенә йыназа уҡыны, – тигән булды. – Солтан абыҙың әйтә, ноябрҙән һине соцработник итергә ризалашҡан,

ти, Карам ҡыҙы. Ҡарт-ҡороға, мохтаждарға ярҙамлашыу, эйе, бик тә сауап, әйҙә, эшлә...

Уҙамандар Бурашта намаҙға йөрөрҙәй кешеләрҙе барларға керешкәс, Зәриә эстән генә Айгөл Карамовнаға рәхмәт уҡыны. Әйтәгүр, яҡын да юлатмай, ҡырға ла типмәй ике туған ҡайнтүтәһе. Заманында студентка көйө никахһыҙ бала табып – тормошланырға йөрөгәндә генә, бүтәнгә өйләнеп, һемәйткән, тиме, бер әртис йораты – исем күтәрһә лә, заочно уҡып бөтөп, силсәүиткә секретарша булып урынлашҡайны, хәҙер, күр, хакимиәт башлығы ҡамытын килештереп кейҙе. Үҙенән йәшерәк абышҡа табылды, уңған механизатор уныһы. Өфөлә тыуғанды үҙ фамилияһына яҙҙырып, йәнә бер малай таптырҙы. Уҡыуға шәптәр, ти, икеһе лә. Һапалы булһа ла, һауалы түгел Айгөл, шуға халыҡ тыңлай, хөрмәт итә үҙен. Егәрле лә шул, килде-китте ирҙәрендән былайыраҡ – алдына алғанды өтөп кенә алып бара.

Кәмә өҫтөндә Хажиморатович: «Олотүз менән Бураш шәжәрәһен төҙөү йөкмәтелде әле миңә. Киләһе йәйгә «Һаумыһығыҙ, ауылдаштар!» йыйынын әҙерләү фарыз. Уфаға барылыр, һеҙгә лә, хәҙрәт, мөрәжәғәт ителер...» – тине.

Тубыҡтарын ҡосоп, Фасилдың ҡара күҙлегенә текләп ултырған мулла ирәбеләнеп китте:

– Мәслихәт! Асыҡларһың архивтан: Бураш тигән батыр нигеҙләгән Бурашты, йәйләүе булған аласыҡ, ҡорған кәнде һеҙҙең ултырышта, тигәне хәтерҙә аҡһаҡалдарҙың. Янбаевтармы, Кәримовтармы нәсәбенән булырға тейеш. Бураштың ағасы Имаш мәрхүмгә хәтле тамырланыуы ихтимал. Үҙе барҙа һорашылмаған, хәйерһеҙ. Фазыл – аҫыл тигәнде аңлата. Ә Фасил – һирәк исем. Хәбәргә оҫта, шыма тел, шәт, мәғәнәһе...

– Уй, Аллам, – пырхылдап ебәреүҙән Зәриә үҙен көскә тыйҙы. – Көлөргә кешеһе юк...

– Көлмә, һеңлекәш, көлмә. Фасил туған, Алла бойороп, мәҙрәсә бөтһәме...

Уҙамандар өҫкә, үҙҙәрен Фазыл көтәүләгән ярлауға, ынтылды, Зәриә бераулыҡ Фасил эргәһендә тотҡарланды.

– Апсығаһыңмы Зәпә менән? Тиҙ үк кире әйләнәм. Апсыҡмаһаң... иҫке кәритәң эшкинер әле.

– Эйе, ҡабат һылаштырҙым, мин балыҡҡа төшәм. – Аскыс биргәстен Фасил биш бармағын һалдау һымаҡ тырпайтҡан булды. – Мулла ауылды урап сыҡҡансы...

– Ҡай төшөнә төртәң... балыҡтың? – тип наянланды ла Зәриә, китешләй иплe генә өҫтәне. – Ыспасибы, шыма... шымафый! Абай йөрөң, Иҙел бит ул...

*Иҙел бит ул, киң бит ул (да),*
*Даръяларға тиң бит ул...*

Тиҙҙән моңсол һыкрап (тауышланмай, һыҙғыртыу ҡатыш ауыҙ эсенән йырлау) тирәк олоно аҫтынан нәҙек оҙон тимер торбаға һаплы һалдауын ҡапшап алды һәм уткер тештәре иҫке бейәләйгә көпләнгән сырмауҙы тағатырға кереште.

* * *

Шәмбе Солтандың сағыштырмаса иркен өйө йәйге һымаҡ сыр-сыуға күмелде: көн быҫҡаҡлап тороуға ҡарамаҫтан, балалары бер машина тулып ҡайтып төштөләр. Маратына ҡатыҡ ҡына эсереп, атаһы мәктәпкә әйҙүкләне: көтәләр, компьютерҙарына башҡортса программа ҡуйып бир. Белгән кешегә уныһы биш минутлыҡ ҡына мәшәкәт, имеш, тик директор секретары, яй баҫам, өс-дүрт көндә генә өлгөртәм, тине. Ә бит Хажиморатович дүшәмбе, уҙа китһә шишәмбелә район башлығы Байрамовҡа шәхсән инеп, хат-мөрәжәғәтен өҫтәленә һалырға, ыңғайҙан опека документтарын теүәлләргә план ҡорҙо. Юғиһә, төнәгөн үкенде. «Лиранан ғына ҡуйҙыртмай... Шәбәйгәнме, ауырыймы – чуртым белһен». Хәйер, оҙаҡ торманы студентка ауылда. Сәйҙәгә – һыйырына, Фасилға Тимурына күҙ-ҡолаҡ булыуын үтенеп, Фәнидә лә бер кис Өфөгә йөрөп әйләнде.

Иртәнге яҡта приюттан шылтыраттылар: Әмирә оҡшанымы? Нимә уйлайһығыҙ? Кире килтермәйһегеҙме, фәлән-фәсмәтән... Кире илтергә аңҡайткандыр Әмирәне ике ветеран-уҡытыусы? Машина ҡыуып... Бала күңеле – быяла, ыуалдымы – оло бәлә. «Оҡшанымы?» Әйтәгүр, антипедагогик һорау... Бала оҡшарға тейешме, әллә балаға... опекундармы? Бына ҡайҙа хикмәт. Балаға уйынсыҡ ярата, тик үҙҙәре уйынсыҡ түгел!

Мараты эшен бөтөргәс, ҡайҙандыр күсереп алған белешмәне айырым баҫырға кәрәклеген иҫкәртеп, тағы бер уҡыны ла мәҡәләһенә өҫтәргә әҙерләнде. Күсөнә инһә лә, бәғзе чиновниктар яңы Закон айышын аңлап етмәй һис. Солтан үҙе лә икеләнә һаман. Икеләнерһең дә. «Өй, көнитмеш буйынса справкаларым әҙер... Ауырымайбыҙ, йоғошло сиребеҙ юҡ. Балаларым Әмирәгә риза – яҙма раҫмалары бар... Ғаиләмдә судҡа тартылған кеше юҡ: справка кәрәгә...»

...Баланы опекаға, ғәҙәттә, туғандары ала. Хөкүмәт баланы ҡараған өсөн опекунға ай һайын пособие түләй. Бер тапҡыр түләнә торған пособие ла бар.

...Патронат тәрбиәселәр балалар йорто штатында иҫәпләнә, уларҙың хеҙмәт стажы бара, эш хаҡы түләнә. Балалар мәнфәғәттәрен күҙәтеү өсөн яуаплылыҡ мәғариф, һаулыҡ һаҡлау йәки халыҡты социаль яҡлау учреждениеһы өҫтөндә.

...Статистика мәғлүмәттәренән күренеүенсә, быңдай ғаиләләрҙә наркомандар ҙа, эскеселәр ҙә, тәртип боҙоусылар ҙа күҙәтелмәй.

Стаж нимәгә уларға? Тәүге юлдың «ғәҙәттә» тигән һүҙе, унынса, иғтибарға лайык. Тимәк, балаға туған булмаған опекундар ҙа булғылай. Шулар иҫәбенә инәсәк Сәйҙә менән Солтан – вәссәләм.

– Әгәр?.. Директорҙан рөхсәт һора ла, үҙем набор яһармын. Эргәлә знактарын, төртөп хәрефтәрен әйтеп ултырһаң, ике сәғәттә, моғайын, нөктә ҡуйылыр.

Атай кеше, улының ҡулын ҡыҫырға теләп, үҙенекен һондо.

– Әткәй, эш бөткәс ҡыҫалар түгелме?

Солтан ҡәнәғәт кенә директор бүлмәһенә барып әйләнде.

– Занятие бөтөүгә килербеҙ, билмән ашағас, тәк...

Апарук тилбер бармаҡтары – Марат наборҙы өс сәғәттә теүәлләне. Бер кем ҡамасауламағас ни, бәхәсләшеп тә алдылар, сөнки улы мөрәжәғәттең оҡшамаған урындарына еттеме, йә ирендәрен бөрөштөрә, йә баш сайҡай. Ниңә русса яҙманың, тип тә ҡыҙыҡһынды тәүҙә. «Байрамов уҡый, аңлай, аңламаһа, берәй замы тәржемә итеп бирер, – тине Солтан. – Һәр глава – дәүләт вәкиле, тәк, дәүләт телдәрен белергә бурыслы. Ә башҡорт теле – дәүләт теле! Шулай уйлайым мин...»

Мәктәптән сыҡкас, аталы-уллы йәй көнө сход уҙғарылған майҙансыҡта туҡтап, ауылдың колхоз осорондағы тормошон, ҡайҙа тимерлек, ырҙын табағы, ҡайҙа мастерской, ашхана булғанлығын иҫләп торҙолар. Биргадир урамынан өҫкә китеп барған Фасилды танымайыраҡ:

– Көрән курткалы кешекәй Лосманмы? Болот көндө ҡара күҙлек кеймәһә... – тип һөйләнде Марат.

– Фасил абыйың, тәк, коммунальныйҙа ике аҙналай сантехник булған да, ялға ҡайтҡайны, эткәйе Фазыл, кире ебәрмәйбеҙ, ти. Ҡашын торба сыйған, шуға күҙлек кейгәндер.

– Главаға хатты фактически яҙғанһың, эткәй, эш юҡ шул ауылда...

– Кемгә – бар, кемгә – юҡ. Фасилға булыр, тәк: магазинда һатыу иттерәм, тауар ташырға машина әпирәм, һеҙ һатмайһығыҙмы, тип белешкән Сара түтәйең әнкәйеңдән.

– Ҡотол старомодный нәрҫәнән! Арыуыраҡты алырбыҙ, хундай-мундайҙан.

– Өйрәнгән ат яуға яҡшы ла, посмотрим. Олотүҙдән Зәбир браты, Фасилды Силәбегә әпкитәм, тигән, калымға. Бер айға, тә-әк, посмотрим, – тип ҡабатланы ла Солтан, мобильный элемтә хаҡында һүҙ ҡуйыртты. – Вәт һин ҡотолоп киттең старомодный телефоныңдан – һыйла миңә – үҙең яңыны алырһың. Хәҙер ни, бетон күперҙән дә тоталар Уфаны, тәк.

– Модныйы... двойной хаҡ. – Атаһына был юлы Марат һондо ҡулын. – Мин фотоаппаратлыһын, диктофонлыһын алам, во!

...Лавкаларына төшкәндә Эльза аулаҡлап Фасилға әйтеп ҡайтты.

– Камила әбекәй мине, һине, Зәриәне... сәйгә дәшә, вабшым, Рәшит мәрхүмдең дуҫ-иштәрен.

– Зәриә аръякта...

– Ярай, үҙең оҙаҡлама.

– Оҡшар микән? – Фасил икеләнде. – Һыуыҡһаякланып...

– Ҡупымлана ла китәсе! – Эльза элекке һабаҡташына ҡаты бәрелде. – Мин яңғыҙ бармайым, иптәш булыр һиңә.

Ярай, ире лә барғас... Фасил верандаға инеп һөйләшкән саҡырыусыны ҡапҡа аша оҙатып ҡалды ла өҫ-башын рәтләргә кереште.

Теге юлы Динестә ҡырҙан ғына күргән буфетсы ҡатынҡай йәш тә, матур ҙа икән. Ниндәй һөйкөмлө зат менән ҡауышмай әрәм китте Рәшит... Бер-ике сәғәт ултырып-күренеп ҡайтыр өсөн генә әллә күпме сәк-сәк бешергән, тауыҡ тултырған. Камила ҡарсыҡ уға «Мая килен» тип тә өндәшкеләй, теге ризалыҡ йөҙөнән моңһоу ғына йылмая, «кәйнәм» тиергә әллә баҙнаты етмәй, әллә кәрәккә һанамай. Бәй, никахһыҙ көйө ник әйтһен?

Беренсе тапҡыр үҙендә сәйер ҡыйыулыҡ тойған Фасил, өйҙә рәхмәтләп хушлашҡас, тышта гәпләшкән арала Эльзаның ире менән иҫке өйгә инеп сығырға булдылар. Рәшит барҙағынан өй йыйыштырыуылыраҡ күренә, ни тиһәң дә, әфисәр Руслан йоҡлап йөрөгән төнәгән. Ана, стенаға парад формаһында автоколоннаға теҙелгән күмәк машиналар араһында флажок тотоп тора. Һыны-кәүҙәһе ҡойоп ҡуйғандай. Атаһынығы кеүегерәк сәсеҡашы, йөҙө генә тулыраҡ, аҡмасыраҡ.

– Саҡыр әле Эльзаңды, Маяны ла, – тине лә Фасил, яңғыҙ ҡалғас, йөҙөк йәшереүле тәҙрә башына ынтылды. Урынында... бына хәҙер, хәҙер мәрхүмдең бойомға ашмаған теләген үтәйәсәк.

Йәштәр фото-мотоға әүрәмәҫ борон Фасил еңелсә тулҡынланып, ыҡ-мыҡ итеп һүҙ башланы.

– Мая туған, зинһар, ошо нәрҫәне... Рәшит һеҙгә тип алғайны ла... Ғәфү итегеҙ...

Эльза өрлөктәге абажурһыҙ лампаны тоҡандырҙы. Фасил усында йылҡылдаған ынйы ҡашлы йөҙөк иһә атаһы Надир ише әрһеҙерәк, өтөгөрәк Эльза ҡулына күсте – Мая ниҙер әйтергә лә өлгөрмәне, тегенең уң сәтәкәйен балдаҡлап та ҡуйҙы.

– Абау килешә! Абыйымдың төҫө итеп йөрөт. – Тере сағында үҙенән бер йәшкә олораҡ Рәшит ағаһына «абый»ҙы һирәк ҡулланған Эльза, тиҫтере Фасилды ла ирештергәндәй, өҫтәне: – Зинһар, кейәүгә сыҡҡан хәлдә лә килеп йөрөң Камила әбейемә. Оло кеше, яңғыҙ ғына йән аҫырай.

Мая йәнә әрнеүле йылмайыу менән сикләнде. Әллә әҙәп һаҡлай, әллә фиғылы шулай, белмәҫһең.

Фасил, урамға сыҡҡас, Надирҙар ҡапҡаһы алдында бая килешләй ниңәлер иғтибар итмәгән яндаулы «Урал» мотоциклын шәйләне. Маяны, тимәк, ағаһы ултыртып алып килгән, ултыртып алып ҡайтасаҡ. Ҡасан теләй, шунда эшенә йөрөр йә өйөндә ятыр Надирҙа ултыралыр әле һыйланып. Борсағы бешә уларҙың, Биргадир лесхозға башын тыҡҡаны бирле. Фасил ян-яғына ҡарамайса, яурындарын киреберәк һарҡыуға ынтылды... Бесән мәлендә күҙҙәре бәзерәйгән тракторсы бит әле Маяның бер туған ағаһы. Ҡалай ҡупым һөйләшеп маташты Солтан Хажиморатович менән ике йөклөк бесән шәрәмәтен йыйҙыртмаҫ өсөн. Гусенмы, Гусейновкамы арҡаланып...

Ямғыр һибәләгән йома көндө, һатып алыусылар бимазаламай башлағас, Сара өсөнсө көн Фасил көпә-көндөҙ тын ғына ағып барған кәмәнән шөңкәйгән килеш сәнсеп алған, терһәк буйы, тауыҡтың эс майылай һарғылт итле ике укбалыҡты, һыуыткысынан алып, иретте. Әлбиттә, алдан Сәйҙә менән һөйләшеп: килең шулпаға өсәүләшеп, Әмирәгә йомшаҡ шүбәк (табанса) бүләк итәбеҙ...

– Беҙ генәме? – тип белеште Сәйҙә.

– Дилбәр апаға дәшәм, – тине Сара. – Яңғыҙ ҙа күренә...

Тел осона нимә эләгә, шуны тылҡып ултырҙылар табында.

– Бигерәк тәмле шул стирләдке, – тип маҡтаны Дипутат, Фасилға күҙ һалғылап, аҙаҡ хәбәрен икенсегә һапланы: – Камила сакырҙы мине сәйхурланырға. Йәштәрҙе ҡайтарғас... Кеше өйөндә насар йоҡлаһам да, ҡалдым инде. Рәшит мәрхүмдең алам тип йөрөгәне йөклө икән. Табырға уйлай, ти, ғәйептән тапкан, тимәһендәр өсөн, абзыйы эписәльне эпкигән дә апҡайтҡан ҡарындашын.

– Бравильны, «путинка» аҡсаһы рәзе вәләйетсә... – тип хупланы яңылыҡты Сара. – Исеме Майкамы әлеү?

– Рәшиттең фамилияһына яҙҙырһа, эше бар, ашы бар... Тиҙ ҙурая инде бала-саға. – «Шулай, иртәгә беҙҙекеләр ҡайта. Әмирәне гелән бергә йәшәгән һымаҡ күрегеҙ, тип иҫкәртеү кәрәгер...» Солтан ипле генә һүҙ ҡыҫтырғас, уйынан өҙөп, ҡатыны Дилбәрҙе йөпләне:

– Бик аҡыллы, инсафлы икән... Бирһен Хоҙай.

– Ҡыҙ тапһа – Рәшиҙә, ул тапһа – Ришат... – Фазылдың «Ришат» тип әйтеүе булды, Әмирә бәлә һалды:

– Ришат обижает... – Күрәһең, приютты иҫләне бала.

– Үәт машенник малай, – тине лә Дилбәр артабан Олотүз муллаһы менән Бураштағы ҡарт-ҡороно өй беренсә йөрөп сығыуҙары хаҡында әңгәмә ҡуйыртты. Ни бары өс-дүрт мөьмин генә дөйөм намаҙға баҫырға теләк белдергән, сутәки.

– Бәсмиллә, мужыт, Фазыл менән беҙ ҙә доға кылырбыҙ әле. Бинсәгә сыкһаң, ивет? Фасил да... Ниңә, хәҙер, ана, бала-саға ла намаҙ укый. – Ире өндәшмәне, әммә сырайына етдилек өҫтәлде.

Был кисте Фасил Маяның һәр һүҙен, һәр хәрәкәтен хәтерләп, төйөрләнеп уңала башлаған каш яраһын һыйпаштырып оҙак кына ятты. Акмас битле, оҙон керпекле, зәңгәрһыу-йәшкелт күҙле нәҙекәйбил икән Мая һылыу... Әлегә ауыры беленмәй ҙә тиерлек. Августа «зыңкыһа?..», ы-ы...

Егеттең мөхәббәт көмбәҙендә, гүйә, тағы бер якты йондоҙ кабынды, бер килке хатта мейеһенең уң ярымшарын – Лира, һулын Мая биләгән төҫлө тойолдо. Әйтәгүр, икәүһенең күҙҙәрендә окшашлык та бар кеүек. Ә юк, кеше күҙҙәре бер-береһенекен сырамытыуы ғына ихтимал. Окшаш күҙҙәрҙе табыуы, ай-һай...

Егет хыялый төш күрҙе. Имеш, ул тамыры яртылаш актарыулы йыуан тирәктең ауыш олононда ята. Күкрәгенә Маяны сырамыткан һылыу зат капланған. Икеһе лә шыр яланғас. Кымшанмайҙар ҙа. Йылға аҫка аға, улар, гүйә, тирәк сатыры менән бергә әкрен генә өҫкә шыла. Ағас кайырына нисек аркаһы ауыртмайҙыр? Уянып китте бер заман Фасил – аркаһын массаж щеткаһы тызый ҙаһа. Биленә зарланған атаһы ятып торған да – онотҡандыр. Үҙенде яланғас төштә күреүҙе мактамайҙар. Ниндәй күренеш төшәндерҙе һуң әле? Ә-ә...? Өнөндә лә шуға окшаш хәл булғайны түгелме?

Булғайны. Мәктәпте бөтөргән йәйҙәме, Фасил әле Зәриәләр һанда-һаяк файҙаланған ыксым кәмәһендә ярайһы үргә күтәрелгәйне. Ажау уйнаған мәл. Ағып килә, уңлы-һуллы кармак һелтәй, балык инәлтеүһеҙ каба. Сеү! Бер заман нәк төшөндәге ише хәлгә ғәжәп кылды: ауыш тирәктә – ғашиктар ойоп ята. Ах, буй-һындары! Гүзәлкәйе сибәренең түшенә еҙһыу сәстәрен тағаткан, наҙлы беләктәрен атлетик кәүҙәнең муйынына ураған. Эргәләрендә күбәләктәр канат леперләтә, һайрар коштар сутылдай. Хас та антик картиналарҙағы һымак. Мөхәббәттең үҙе бер сәнғәти һынланышы! Гүйә, кеше менән тәбиғәттең иш-куш икәнлеген раҫлаусы хайран тамаша. Иҫтәренә килеп, һиҫкәнеп куймаһын былар, тигәндәй, Фасил, емгә тигән камыр төйөрөн иҙгеләгән булып, башын эйҙе. Кәмәһе – үҙағышта. Барыбер ҙә алакандаған мышы ише әрһеҙ уҫак япрактары ышыклағансы тегеләр яғына караштырҙы. Их, илереп-ишелеп ят инең һөйгән йәрең менән ана шул сихри тирәк сатырында... Әл дә әрмелә сакта «дед»тарға буйһоноп, ерәнгес аҙғын һөйөшкә, һөйөш һиңә, уйнашка кушылып китмәне. Силәбегә олакһа, ағаһы ыңғайына ул да, Зәриәһе Зәбирен әрләгәнсә, «айғырланыр» микән? Хоҙай һаклаһын.

Ата-әсәһе күптән аяк өҫтөндә. Уға ла торорға вакыт. Бөгөн тауар килә, кәмәне кәмәгә тағып кына ташыр ҙа алыр. Тағы...

Ер туңмаҫ борон, такта-макта барҙа лавка артынарак килгән-киткән өсөн купшылап айырым бәҙрәф ҡаҙыу зарур. Юғиһә, хәбәргә әүрәп, кесе яраулык йомошка оло ҡапка аша мунса яғындағы иҫке әбрәкәйгә уҙғандар осраштыра. Ҡыйын түгел, атаһы ла ҡатышһа, ике көндә әтмәләргә мөмкин. Кемдеке — шуныкы, әсәһе лә буяуын йәлләмәҫ.

Аръяк ярға «Аксарлак»ка тәғәйен тауарҙы төштән һуң ғына бушатып киттеләр. Ҡаптар, токтар тейәп, «тыңлаулырак» булһындар өсөн кәмә ҡойроктарын аллы-артлы тимер һалдау һабына сырмарға тотонған Фасил эргәһендә ҡапыл Танкист пәйҙә булды. Ҡыуак араһында ут быҫкытып бая ике-өс сәрхүш геүләшә ине, шәт. Сәләм дә бирмәне, теләнселәргә кереште был.

— Фасил ҡустым, усыңа с...стым, взаймыға бирәй палтиник?..

— Ҡуйсәле, ней иҫерек, ней айык шаңкып йөрөйһөң былай ҙа...

— Абый һыйлағайны сускаһын кых иткәндә, ыскыныллы... Ул йомарт та, бисураһы... — Зәриә еңгәм ҡапка асмай. Ҡана, другтар көтә...

— Бөтмәҫ другтарың. Юк палтиник, булһа ла — кукиш, патамушты алғаныңды ҡайтара белмәйһең.

— Ай-һай... Диловой, да? Еңгәмде эңерҙә ток тотоп оҙаткаtable ныңды күреп ҡалғайным ҡырҙан... Атаманға әләкләһәм — күтәнеңде орор! Ятырһың шунан служак... Рәшит ише. Гони лутсы мани, атыу-у...

Янауҙан бигерәк яман хәбәргә, үҙеңдеке үҙеңә яу булғанға гәре тулышкан Фасил, һалдауын һоноп, шаптор-шоптор ҡырсынға ырғылды. Ыжланы сәрхүш Танкист, ялпаш тал артына тайшанды ла еүеш танау малайҙарса ләпелдәне:

— Вәт психанул, маминт другтарҙы һөскөртәм...

Ни ғәләмәт ҡаныға әле Олотүз янбайҙары? Ул Зәриәһе, ул Зәбире, ул Танкисы?.. Өндәшмәҫ тигәс тә, эй, баҫымсаклайҙар. Фасил, киндер көпләмә үтә ук башағына окшаған һалдау тештәрен ҡапшай-ҡапшай:

— Хыт... унауығыҙға ун саты — бых! Килең, килең, хыт өйөрөгөҙ килең, — тигәс кенә, эскесе туғаны үҙенә һөрәнләгән шешәләштәре яғына һыпыртты. Фасил иһә һалдауынан бейәләйен сисеп, юрамал йөк өҫтөнә һерәндәтеп һалды ла, кәмәләрҙе берберенә тағып, бераулык көтәүләне: килерҙәрме? Юк, тауыштары ла ишетелмәй.

Бына ҡайҙа төштә үҙеңде инәнән тыума күреү ғиләһе...

## 2

Район хакимының иркен ҡабул итеү бүлмәһендә йылкылдак костюмлы, күрке баһалы секретарь-оператор Солтан Хажиморатовичты битараф ҡаршыланы.

— Һаумыһығыҙ, һеңлекәш, Байрамов үҙендәме?

— Фәлән Фәләнович төштән һуң була, әле объектта. Белмәйем, приемға алдан яҙылманығыҙ.

— Яҙылып китәйем әләйгәс...

— Ниндәй мәсьәлә буйынса? Замдарға...

Ҡатынҡайҙың һорауы «кеше бимазалап...» тигәнерәк юҫыкта бирелгәнгә, Солтан үҙен һимметлерәк тоторға тырышты.

— Местный депутат мин. Ауыл ходогы... Замдарға ингеләнем, уларҙың кәңәшен тотоп, Фәлән Фәләновичты күрергә ине. — Хажиморатович «кәңәшен тотоп» тигәнен әҙерәк хәйләләште, ә бына «ауыл ходогы» тип әйткәнендә ҡайһылыр осор, «беренсе» Урманшин кабинетындамы, тотош элекке Союзға билдәле «Ходоки у Ленина» картинаһының репродукцияһы элеүле торғанын хәтерләне. Йылҡылдаҡтың әлеге ҡиәфәте, гүйә, — «өрмәйем дә, ебәрмәйем дә». Беренсе ҡаттағы постовой ҙа, ана, депутат танытмаһын күрһәткәс кенә артыҡ бәйләнмәне. Хәйер, власть ҡасан да власть булып ҡала, һис юғы бюрократтар демократ булып уйнай, ҡылана ғына белә.

— Төштән һуң килермен, әләйгәс. — Хажиморатовичты ҡатынҡай ишетмәне лә, сөнки телефондан кемгәлер яғымлы рәсмилек менән яуап бирә ине.

— Фәләнов абый, Фәлән Фәләнович...

Бәлки, объектталыр. Ә-ә, районда 450 йыллыҡ алдынан бер нисә удар төҙөлөш иғлан ителгәйне бит. Мәҫәлән, Башҡорт гимназияһы асыу, паркты реконструкциялау, иҫке сиркәүҙе аяҡҡа баҫтырыу... Һуңғыһының хакимиәткә яҡын булыуы барыбер ҙә күңелде ҡытыҡлап ҡуя. Иҫкегә иҫ киткәнсе, бүтән урында һалһалар, кем оҡшатмаҫ ине. Юғиһә, дәүләт дин эштәренә ҡыҫылмай, тип лаф орған булалар. Бер йыл Сәйҙәһен Усолка санаторийына илткәйне. Ҡасандыр башҡорттар тоҙ ҡайнатҡан, мал дауалаған сығанаҡтарҙа йыйын әтрәгәләм бырхылдап шифалы һыу инә, христиандар, ярай, таш ҡыуышына майшәм ҡабыҙып сукына. Имеш, ҡасандыр бер монах шул инеш күҙәүендә иконаға юлыға. Бер генә түгел бит әле, икенсегә... ана шунан башланып китә лә икона, тәреләр күтәреп оҙон-оҙаҡ йәйәү йөрөштәр. Юҡ, юҡ, Хажиморатович томана түгел, аңлы, грамоталы кеше, дини мәсьәләләрҙә лә аҡты ҡаранан айыра. Йәш быуынды төрлө дингә ылыҡтырыуҙы ла хуплай. Ҡоҙғонтауҙан Әмирәне апҡайтышлай оҙайлы тын урман юлында борондан Әүлиә шишмәһе тип йөрөтөлгән хозур урында туҡталырға теләгәйне, һукмаҡ ситендә бронзаға буяулы христиан символикаһын — тәре күреп, кире боролдо. Ярай әле, иҙрәп йоҡлайҙар ине Сәйҙәһе менән Әмирә. Тағымы? Ҡайһылыр журнал Ирәмәл һыртына ҡайыры әрселгән һайғауҙарҙы арҡыры-торҡоро ҡағып — кипкән имән микән — тәре мендереп ҡуйыуҙарын маҡ-

тап яҙҙы, йәнәһе лә, элекке казачий төбәк варисҡтары изге ниәт менән бойомға ашырған быны. Бәхәсләшергә лә мөмкин: мәшһүр тау һыртына, барса ғәләм, төрлө милләт туристары диккәтенә шундай урынды һайлау... урынлымы? Ай-һай... Тау ҡайһы Хоҙайҙыкы, ниндәй халыктыкы, тигән сетерекле уйҙарға ла тарыуың ихтимал бит әле? Өҫтәүенә, казактарҙың нисәмә дәүерҙәр абаригендарҙы ҡан илатыуы, ер-һыуҙарҙы талауы бөгөнгө тарих әсбаптарына ентекле инмәһә лә, быуындар хәтирәһенән юйылырға ашыкмай ҙаһа.

*Башкорт илкәйҙәрен утка тоткас,*
*Алтынланды уның яурыны...*

Бер полковник Тевкелевтың йә иһә майор Мартаковтың ғына яурындарына алтын погон таҡҡанмы ни ҡуштан Европа колонизаторҙары мәнфәғәтен күҙәткән батшалар һәм императорҙар? Йә, руда ҡаҙҙыр, тимер, баҡыр ирет, шуны осһоҙға Европаға оҙат – аҙаҡ улар шунан ҡорал яһап, Рәсәйгә ябырыла. Ә бөгөн? Чечен ҡыҙын йыртҡыстарса көсләп-быуып үлтергән подполковник Бузановҡа һаман ғәҙел хөкөм сығармай маташалар, йәнәһе, герой...

Ике ҡатлы хакимиәт бинаһынан сыҡҡанда, үҙе һымаҡ кәүҙәгә һонтор ғына Сәмерханов осрамаһа ярар ине, тип тә уйланы Хажиморатович. Һуңғы сходтағы ҡыланышынан һуң уға мөнәсәбәте айырата һыуынды, ни хәл итәһең. «Төштән һуң тағы киләм, эшем бешмәне әле...» тип, Солтан милиционерҙы ла иҫкәртеүҙе кәрәк тапты. Мәрмәр баҫҡыстан тайып ҡуймайым тип атлаһа, уныһы, киреһенсә, табандарҙы артыҡ шыуҙыртмай, имеш.

Хажиморатович былтырҙан бирле кергәне юҡ хакимиәт бинаһына. Кабинет ишектәрендәге алъяҙмаларға ҡараниһәң, партия осорондағы таныш исем-шәрифтәр үтә һирәк осрай. Дилбәр Дипутат ләпелдәүендә лә хаҡлыҡ бар кеүек. «Элекке камунислар бер-береһен буклап, партиянан партияға сабыулап йөрөй... Дипутатлыкка әллә ниндәй машенниклар, ҡаҙнаҡарактар тик һайлана. Яманлаһалар ҙа, Урманшин до канса партийный булды, хаттин ашып байлыҡ та йыйманы. Бер сабыш аты ғына тотто Сасында. Шәп ине рысагы, һабантуйҙарҙа йылғыр елде...»

* * *

Үҙәк майҙанға яҡын ине элек баҙар – йәтеш, ситкәрәк күскән... Урамдар таҙа, йорттар бөхтә, ихаталары ҡараулы. Асфальт киңәйтелгән... Учреждениеларҙың алъяҙмалары «тә-әк» яңырған,

башкортсаһын да хатаһыҙ яҙырға тырышалар... Йәшеллек ишәйгән, сәскә газондары күбәйгән... Ленин һәйкәле – үҙ урынында, ян-яғындағы зәңгәр шыршылар ҡалҡа, ҡуйыра бара. Кинотеатр афишаһы боевик өгөтләй: «Тереләй йә...»

Ғәжәп, егерме беренсе быуатҡа кешелек хайуани инстинкттарын камиллаштырып аяҡ баҫа ла баһа. Атом көсәгенән тыш, химик, биологик, психологик, лазер ҡоралдары ҡулланырға әҙер йәки генцид маҡсатында әленән-әле ҡулланыла. Ана, йылмаяҡ секс-бомба рекламаһы ла һерәйгән, йәнде көйҙөрөп... Ошондай һынамсыл уйҙар менән ҡултыҡ аҫтына күпте күргән һоро папкаһын ҡыҫтырған Солтан оло урамдан универмаг яғына атланы. Эскә инде, эткәй, ҡара плащ-пальтоңа йәшел эшләпә килешмәй, тигәйнеме Мараты? Һатыусы йыбанмай муйылдай ҡаранан яңыны һайлашты – ковбойға оҡшабыраҡ китмәһенме. Һы-ы, киләһе йәйгә менге ат та алып ебәрһә... Әмирәгә балалар зонты, Сәйҙәһенә лә, үҙенә лә ҡупшы бирсәткә күҙләгәс, бөтәһен иҫке эшләпәһе менән бер пакетҡа һалдырып, сәғәттәр бүлегенә йүнәлде. Ниндәйе генә юҡ! Аҡсаң ғына булһын. Температура, һауа баҫымы, ваҡытты күрһәтә торғаны, ай-бай, нәфис, нисек ҡыҙыҡмаҫһың. Тик ҙурыраҡ шул, «ходок»мын тигәс тә, хакимиәт тирәһенә нисек тотоп инмәк кәрәк. Ҡайтышлай ҡабат һуғылыр – автовокзалға юлы ошонан. Әмирәне йондоҙнамәһе – үлсәү төшөрөлгән бокал, фломастер-фәлән менән дә һөйөндөрәсәк. Ейәнсәре Әлфирә менән аҫырауы Әмирә тиҙ үк дуҫлашҡан һымаҡ ине тәүҙә, тора-бара әйберҙәрен, өләсәһен ҡыҙғана, яйы сыҡҡанда өйрәткеләй башланы. «Мой мама эпирҙе...» тигәйнеме Әмирә, яңы итегенә маһайып, «надо говорить «моя мама» тип төҙәтеүен әйт әле Әлфирәһенең.

Бая күҙе төшкән сәғәт иҫкәрткән-көткән кеүек йөрөп ҡалды: икенсе ярты... Урамда Солтандың ҡаршыһына дипломат тотҡан «районка» мөхәррире – ҡәләмдәше осраны. «Ни хәл? Күрҙеңме свежий гәзитте? Ах, Иҙел аша... Яҙышмай башланың... Затыу үҙеңде яҙалар, – тип был Солтанға бөгөнгө һанды тоттторҙо. – Элекке фотоңды файҙаландыҡ, биғәйбә».

А-ба, әлеге лә баяғы йәшкелт эшләпә... Яҙған, әллә телефондан диктовать иткән Бураштан директор Солтандың шәхси китапханаһынан мәктәпкә тос ҡына өлөш сығарыуын. «Уҡытыусыбыҙ бүләге» тигән хәбәрҙең эре хәрефтәрен генә уҡыны ла Хажиморатович гәзитте папкаһына һалды. Ул арала мөхәррир: «Мәҙәниәт йортонда региональ кәңәшмә уҙғарыла. Үҫмерҙәр енәйәтселегe буйынса. Берәй Уфа представителенән интервью ойоштороорға ниәт», – тип хушлашып китте. «Бәй, Байрамовтың прием көнө, бушҡа сабата туҙҙырамы Солтан? Хәйер, инеш һүҙ менән... йыйынды асып, дилбегәне берәй замына тотторол та китә торған. Берәй мөйөштә ҡапҡылап алыр ҙа хакимиәттә

сиратка ултырыр, тәк...» Директор тигәндәй, уны кәңәшмәгә саҡырмағандар микән ни? Завхозы, Надирҙың кейәүе, паром аша килтереүе ихтимал юлдан. Кәңәшмә... Әйтәгүр, РДК тирәһендә милиция, суд-прокуратура вәкилдәре күренештерә.

Кафела кеше юк тиерлек. Участковыйҙары ғына аяғөҫтө томат һуты һемереп тора. Ғәләмәт, әй, ул да — папкалы, күн тужуркалы.

Ике ҡуллап, ололоклап күреште, йәлп-йөлп кенә хәл белеште. Инспектор мөһимерәк фекер әйтергә укталған да кеүек, тик ашыкты. Кәңәшмәлә ҡатнашалыр.

— Шәп урында осраштык та... Солтан ағай, ҡабаланмаһағыҙ, ике сәғәттән... ошо өҫтәлдә көтәм.

— Тә-әк, ағаңды осведомитель итмәксеһеңме? — Хажиморатовичтың мәрәкәһен аңлаған майор ҙа йылмайҙы.

— Борсолма, абзый, премьер биргән «Нива»ла пристангәсә илтеп ҡуйырмын. Һораған справкаң да әҙер.

— Әләйгәс, бишенсе яртыла, йәме, туған. Главаға ҙур йомош менән визит ҡылырға ине.

— Фәлән Фәләнович посетителдәрҙе оператив ҡабул итә. Уңыш теләйем... һәм көтәм, Солтан ағай.

— Юк, туған, ҡасан инәм, ҡасан сығам, лутсы көтмә. — Кире һукты Бураш илсеһе.

— Улайһа, иртәгә күрешербеҙ, ағай. Мәктәптә укыусылар менән профилактик беседа уҙғарырға барам. Завхоз кәмә менән ҡаршылар, тигәйне директриса.

— Тәк, өйҙә булам, килерһең, беҙҙең адрес: Бураш, Йәштәр урамы, — тип йыуаныслы йылмайҙы Солтан.

Фуражкаһында ҡуш башлы бөркөт һынын балкытып, постовой Солтанды был юлы хакимиәткә тикшереберәк үткәрҙе, мөмкин икән, өҫ-башын һалырға тәкдим яһаны — тәк, Байрамов граждандарҙы ҡабул итә. Бирһен Хоҙай...

Декольте һымағырак ярайһы киң иҙеүҙәре араһына йәшмәташ аҫып алған үҙе өтөк, үҙе уяу дамочка былай ҙа шыйык сиратты күҙ уңынан ыскындырмай. Эй ҙә, донъяла «чинопочитане»һыҙ берәй ил бар микән? Һәр кемдең үҙ йомошо, үҙ ғәме. Төҫө-һыны Камила түтәйҙе хәтерләтә ләһә аяктарын шылдырып-шылдырып атламаҫка тырышкан бынауы ҡортка. Пенсия буйынса микән хәсрәте? Дилбәр Әмирәне күрә килгәндә бушка ләпелдәшмәгәндер, шәт. «Ғүмер буйы колхозға бил бөктөк. Минеке, ладны, особый, ә Камиланың пенсийәһе кантур-мантурҙа ҡағыҙ әйләндергеләп, ыштан шымарткан бәндәләрҙекенән икеөс тапкыр кәм. Аптырак, шул нәрҫәләр ил елеген һаман имә, һаман хәләүәт йәшәй».

Байрамов үҙенең һүрәте тоҫмалланырҙай шыма өҫтәле артында ирәйеп ултыра ине, ишектән инеүсе үҙенә апарук таныш

ветеранды яртылаш ҡалҡынып ҡаршыланы, затлы авторучкаһы менән яҡынырак ултырырға ишәне.

— Бураштанмы әле һеҙ? Яңылышмаһам, заслуженный уҡытыусы, селькор...

— Эйе, Бураштан.— Яуабында уҡ тәүге һорауға баҫым яһағас, Солтан папкаһынан үтә күренмәле файлға тығылған, йоҡо-һоҙ төндәр емеше тип нарыҡлардыҡ мөрәжәғәтнамәне һурып, аяғүрә баҫты һәм, баскетболсыныҡылай оҙон ҡулын кесе өҫтәлдән оло өҫтәлгә һоноп, үҙенән буйға ҡайтым, мәгәр ярайһы тыңҡыш һәм яурынтаҡ Байрамов алдына һалды.— Ходок мин, тәк, ауылдаштар наказ биргәйне.

— Һеҙ, минеңсә, былай ҙа депутат... Ҡоролтай члены...— Секретаршаһы иҫкәрткәнде иҫләп, район хакимы үҙенә инселәнгән мөрәжәғәткә күҙ йүгертте:— Минең персонаға... Регистрация үтмәгән. «Копия»һы тигәс, һорау ҡуйғанһығыҙ, тимәк, уныһын — Өфөгә йә Мәскәүгә ебәрергә уйығыҙ юҡ түгел, эйеме?

— Һөҙөмтә булмаһа, әлбиттә. Унда аңлайышлы яҙылған...

Эсен кәпәйтеберәк торған Хажиморатович яңынан урынына ултырҙы, төп йомошонан ситләткән өҙөк-йыртыҡ хәтирәләрҙән арынырға тырышты. Йә, Бураштa коммунистар сафы үҫмәй, тип хәҙер мулла булып йөрөгән партойошма секретарын партияға инергә димләгәндә, Солтандың яңы өйләнгән сағы ине. Егерме ете йыл тирәһе уҙған быға. Йәп-йәш Байрамов «Сельхозхимия»ла ябай инженер инеме, икеһе бер исемлектән «кандидатлыҡ» наборына эләктеләр. Бюрола Урманшин — беренсе секретарь, «икенсе»һе, «өсөнсө»һө, исем өсөн, ә юҡ, юҡ, кәрәк сакта «коммунистик өгөт тукыр йә... дөмбәҫләр» өсөн фронтовиктар, наҙан ғына производство алдынғылары. Тәүҙә, төпкөлдән килгән тип, тай-тулаҡты, шунан Солтанды берәмһәрәм саҡыртып, идея-политик кимәлдәрен ҡапшап сығарҙылар. «Нимә һорайҙар, абый?» — тип ҡыҙыҡһынды бер һор костюмлы мөләйем егет. Белдекле киҫәтте Солтан: «Һинән, моғайын, Уставты, Брежнев хеҙмәттәрен, эшеңде һорарҙар...» Ҡаңғырталар ине, эйе. Күптәре «а»ны «б»ынан айырмаһа ла, большевизмда сыныҡҡан ҡарт-ҡоро, мин бында шәләй-вәләй түгел, тигәндәй, Ленин, Маркс, Энгельс цитаталарына һылтанма яһап ултырған булырҙар ине. Ни хәл итәһең, производство менән идеология йәнәш йөрөнө шул. Һәр хәлдә, халыҡтың хакимиәт даирәләренә өмөтө-ышанысы ҡаҡшай башлағайны ғына әле ул осор. Ә хәҙер был йәһәттән мәсьәлә күпкә ҡатмарлыраҡ, буғай. Министрҙар, политологтар, тә-әк, «Рәсәйҙә инфляция — 8—12 процент» тип тамаҡ яра, ә хәйләһеҙ аналитиктар аҙыҡ-түлеккә генә лә хаҡтарҙың йылына 30—40 процентка ҡиммәтләнеүен иҫбатлай. Ә идеологияның ниндәйе хөкөм һөрә? Америка, Европа илдәренә барып-күреп ҡайтыуыңдың хәжәте лә юҡ, тәк,

көнө-төнө шуларҙың хәшәрәт донъяһы – экранда. Имеш, үҙҙәре ундай кино-миноны күрһәтмәйҙәр ҙә. Башҡорт икмәген ашап үҫкән Мурдин кеүек дуриндар Дума трибунаһынан – ишет, күр – Мәскәү һынлы Мәскәүҙә гей-парад ойоштороу яғында, етмәһә, «...үҙем секста нормаль ориентациянан тайпылмайым да ул, ләкин мине Рәсәйҙә йәшәүселәрҙең биш проценты хуплай» тип фекерен халыҡ фекере тип осона. Гонаһ шомлоғо!

Ул арала мөрәжәғәтте еңелсә битләштергән Байрамов сал ҡунған ҡаштарын тотколағас, алтынһыу мөгөҙлө күҙлеге өҫтөнән теремек ҡараштарын Солтанға йүнәлтте. «Брежневтар, Шакировтар ҡаштарын ҡаралтып йөрөгән... Миллиондар, меңдәр алдына баҫҡан ундай ранглағы етәкселәргә, бәлки, шулай кәрәктер ҙә».

– Яҡшы, Солтан Хажиморатович, – Район башлығы әңгәмәләшен килде-киттеле уйҙарынан арындырҙы. – Бәйнә-бәйнә... Целый трактат! Копияһын ... һаҡлағыҙ.

– Фәлән Фәләнович, бер тәүарих та ҡалдырайым, тәк. – Солтан, баяғы ише бер һонолоуҙа, мөрәжәғәт эргәһенә «Родина» колхозы: кисә һәм бөгөн» тигән ябай ғына альбом һалды. – Регистрация үткәрәйек, юғиһә...

Мәгәр зирәк түрә Байрамов. «Тәүарих» мәғәнәһен дә, «юғиһә» ишараһын да аңланы.

– Ну-сь, укырмын, танышырмын. – Башлыҡ быны хушлашҡан һымағыраҡ әйтте лә приемныйҙан секретаршаһын саҡыртты. Тыҡ-таҡ баҫҡан ханым сап да үткәрмәҫлек ике ҡатлы ишектең тәүгеһен – үҙенә тартып, икенсеһен эскә этеп асҡансы, Солтан зиһенен туплап өлгөрҙө.

– Беҙ яуап көтмәйбеҙ, тә-әк, нәкәнис боҙ ҡуҙғалыр, тип ышанабыҙ. – Аңлымы, әллә аңһыҙмы рәүештә Хажиморатович «беҙ» тип ыскындырҙы. – Халыҡҡа бит кемдең башлыҡ булыуы мөһим түгел, ә баш була белеүе мөһимерәк. – Солтан, папкаһын аймап, секретарша артынан аҙымланы. «Кеше алдында әйтеп бөтөрмәнем, нисауа, мөрәжәғәттә бар ул шаңҡыткыс фекер, бар. Нисек әле... Әгәр тыуған район администрацияһы ауылды терегеҙеү хәстәрлеген күрмәһә, юллап йә үҙҙәренең муниципиаль бирәмегенә ҡушыуҙы һорап күрше районға мөрәжәғәт итергә мәжбүрбеҙ... Тә-әк, нәк бына ошо фекер главаның намыҫын уятасаҡ, сәменә тейәсәк...» Позор булаһы, тәк, әгәр йөҙ имза менән асыҡ хат яҙһаҡ. Бураш бузотерҙары быға ғына булдыҡлы!»

Байрамов приемныйға хәтлем үҙе оҙата сыҡты һәм өс-дүрт гражданға бер юлы «здравствуйте» тине лә мөрәжәғәтнамә авторын иҙәнгә бармаҡ төртөп туктатты.

– Солтан Хажиморатович, бер минутка ғына... Рәхмәт әйтергә онотканмын: мәктәпкә күп китап бүләк иткәнһегеҙ, ну, замечательный пример!

Байрамов – ҡоро кеше, үҙен һауалы, үтә рәсми тота, тигәндәре хәҡикәткә бигүк тап килмәйҙер. Гәзит тә уҡыштыра, ана. Иллә ике-өс йылдан дәүләт флагтары, президенттар портреттары, республика гербы менән биҙәлгән кабинетының һул стенаһындағы төҫлө схема-картанан Бураш тигән пункттың юйылаһағын уйлап та бирмәй, буғай. Уйлаһа, исем өсөн генә берәй килер йә юл ыңғай һуғылып китер ине. Бәлки, ярандары «Бурашта хәлдәр ал да гөл» тип өрәләрҙер ҡолағына. Ихтимал, бик тә ихтимал. Урманшинды, иҫләһәң, килгеләй, хатта дәрестәргә инә һәм төҙ бағана һымаҡ һерәйеп баҫҡан класс алдында уҡытыусы менән йылмайып, ҡул биреп күрешкәне булыр. Ә Байрамов туған һирәк, үтә һирәк аяҡ баҫа Бураш тупрағына. Сталин да, ана, ил буйлап йөрөргә әллә теләмәгән, әллә яратмаған. Иҫләһәң, Хрущев, Ельцин, Путиндар «кабинет ҡомағы» булманы, уларҙың хатта Башҡортостанды күргәне бар. Фәһем алһын шул шәхестәрҙән иптәш Байрамов.

Байрамов иһә, Урманшинға бәйле мәҙәкте хәтерләп, кабинетына ыңғайланы. Нисек әле... «Беренсе»не алыҫ ҡына ҡасабаға саҡыралар: Фәлән Фәләнович, тарихи-этнографик бүлек ойошторҙоҡ. Килегеҙ, ал таҫманы киҫерһегеҙ... Бара был, таҫманы киҫә, эскә иң алдан уҙа. Музей шәп! Интернациональ рухлы! Һикелә түбәтәйле башҡорт, аяҡ бөкләп, сәй һемерә, камзул кейгән ҡатыны самауыр эргәһендә аяғөҫтө тора. «Беренсе» яҡынлашҡас, быға буталлы каса һонғандай ҡыбырлап ҡуя. «Ыздырасти» тигәнен һиҙмәй ҙә ҡала Урманшин. Баҡһаң, музейщиктар әҙ-мәҙ ҡатырылған, ысын күлдәк кейҙерелгән һынскульптуралар әүәләгән, имеш. Халыҡ көлмәй, түҙә, түрә алдында – ярамай, артында – ярай.

* * *

Көндәр көҙгә ныҡлап тарта, көндәр боҙола. Ямғырҙар йышайҙы, сыуаҡтар һирәгәйҙе. Шыйыҡыраҡ урмандар үтәнән-үтә күренә, бары тик ылыҫлы ағастар ғына төҫ ташламай ғорур ултыра. Бураш ише ваҡ йылға-инештәр кәпәренеберәк аға хәҙер. Ҡариҙел дә һыуҙарын ҡаралтты, ағымын ҡеүәтләне.

Мәктәптә эшен бөтөргәс, йәйге баҫманан уҙырға ҡыймай, участковый бетон күперҙән өлгөр аҙымдар менән Йәштәр урамына күтәрелде. Ғөмүмән, ҡиәфәте лә гелән ҡайҙалыр ашыҡҡан кеүегерәк уның.

Вәғәҙәләнгәнсә, Солтан йылы өйөндә ине. Майор Әмирәгә мәктәп сәйендә үк тәғәйен алған ҡағыҙлы ике кәнфит тотторҙо һәм хужаның әйҙүкләүе буйынса төпкә уҙҙы.

Ҡәҙимге донъя хәлдәрен белешеү менән участковый төп йомошона күсте. Ҡапыл ғына түгел, уратып-суратып. Әммә Ха-

жиморатович һағайҙы: үткәндәге «Газель» менән ҡыҙыҡһына лаһа инспектор.

– Солтан ағай, кисә кафела кәнде һеҙҙән алда күрше райондан ГАИ буйынса элекке коллеганы осраткайным... Уға бер таныш... – Солтандың күҙ алдына Әмирәне алып ҡайтышлай машинаһында балалар мендәре булыу-булмауын тикшереп, честь биреп ҡалған патрульный, йәнә юхаланып «абый»ҙан ҡырҡкан алыпһатар – Әлфәритме исеме – килеп баҫты.

Әмирәне шыпырт ҡына кейендерә һалып, ҡулына ыксым зонтик тотторoп, Сәйҙә лавка яғына төшөп әйләнергә теләне. Аулаҡ типме, үҙ күрепме, инспектор буш ултырғыс һөйәнмәһенә яурындарын кейҙереп ҡуйылған күн курткаһы кеҫәһенә ынтылды ла хужаға ус аяһындай ғына көмөштәй ялтыр ҡуйын фләжкәһен тотторҙо.

– Эстәкән һыялыр быға? Тәки осведомитель итмәксеһең... Инструкцияла ҡаралғанмы һуң?

– Кәнишне, ҡаралған. – Участковый Солтан ишерәк көлөмһөрәне. – Бүтән йомош та бар, ағай.

Солтан фләжкә эргәһенә уймаҡтай ике рюмка, ике карамель ҡуйҙы, һәм протоколһыҙ әңгәмә дауам итте.

– Кемдер бәйләнгәнме, янағанмы торгашка, милицияла эшләйем, катерҙа пикникка киддек, тип. Устный сигнал – тоже сигнал. Погонлы оборотендәр осрай, телевизор ҡарайһығыҙ... – Һин дә мин һөйләшкән майор яуап көттө. Мәсьәләнең айышына төшөнмәгән Солтан һорауға тиҙ генә асыҡлыҡ индерә алманы.

– «Газель»гә үҙем яҡын барманым, тәк, кеше алғылай ине әйберен. Беҙҙән дә, Олотүҙдән дә. Благзавод яғында, ғәфү ит, туған, менттар эшләмәй. Тә-әк, иҫкә төштө: күрше Кәримова Фәнидә кереп сыҡты беҙгә ниндәйҙер йомошка. Кисләтеп Сасындан ҡайтышлай күргән: моронон ҡаҙағанмы «Газель» йырынға, иртәгәһенә студентка ҡыҙы Күлбар һыртында машинаһын йыуып торғанын күргәнме, чуртым белһен.

– Кәримова өйҙәме икән әле?

– Юҡтыр. Тимерәйевичтең агрономы бит. Тырыш ҡатын, суткы эсендә Уфаға барып та әйләнгән, бахыр. Эйе, өйөн ҡарарға Янбаев Фасилды ҡалдырҙы ла. Һыйырын үҙем һауам, тигән икән егет, түҙмәне, Сәйҙә барып һауҙы, тәк.

– Значит, берәү ҙә күрмәгән, берәү ҙә ишетмәгән.

– Күргәндәр, рәткә күргәндәр. Файрушин пасекаһында ҡунып сыҡкан, тәк, спирт эсереп. Үҙе лә иҫерек һымаҡ йөрөгән, шәт.

– Понятно... – Кем хаҡында һүҙ барғанын эстән генә икелемикеле тоҫмаллай башлаған Хажиморатович «Әллә... Зәбир бербер... Беседка эргәһенән уҙып барған һымаҡ ине. Әйтәгүр, Рәшит мәрхүм ауылдың бер йәме ине.... Хатта эте етемһерәгән.

Ә служагы Әлфәрит диддалай кәсепкә ҡупымланып йөрөй. Зәбир икән – йәтеш иткән... Кикерегә шиңер, исмаһам, был тирәгә юлды онотор бер аҙға. Глухомань тигәс тә...» – уйҙарын тағатмайыраҡ һаҡ ҡына һораны.

– Нимә ... понятно, туған?

– Беҙҙең территория кешеһе өркөтмәгәндер торгашты, тим.

– Өркөтһә ни? Телевизор ҡарайбыҙ... «Ворошиловский стрелок»ты, тә-әк, йылына ике-өс рәт сығаралар экранға. Теге, Михаил Ульянов уйнаған вояка, ейәнсәрен көсләгән шпананы оптическийҙан сәпәй генә. Сәптергестәренә! Участковый ҡартты яуапҡа тарттырмай, шәт, винтовкаһын ғына... йәшерә. Тә-әк, ундай этйығыштарға, минеңсә, шул кәрәк!

– Понятно... Фильмда уйнайҙар, ролгә инәләр... – Майор икенсе йомошона күсте. – Солтан Хажиморатович, минең өлкән ҡыҙ ун берҙә уҡый, тарих факультеты менән ҡыҙыҡһынған һымаҡ. Покаға өлгәше яҡшы. Әллә, мәйтәм, дәртләнһенме? – Участковый фләжкәһенең ҡапҡасын борғосланы.

– Тарих толпары хәҙер ҡыҙыу елә. – Участковыйҙың быжырыраҡ ҡоңғорт битенә күҙ һирпкәс, Солтан, фәлсәфәгә биреләбирелә, кәңәш бирҙе. – Бик мәслихәт теләге! Рәсәйҙең объектив йылъяҙмаһын байҡаһын. Программанан тыш. Башҡортостандыҡын, районды[ҡ]ын, тирә-яҡ ауылдарҙыҡын – ишеү ҙә нығыраҡ... Китаптар һайлап йә исемлеген төҙөп, үҙем консультировать итеп сығырмын. Беҙҙең бөгөнгө әңгәмәбеҙ – иртәгә үҙенә күрә тарихтың бер ҡыйпылсығы бит ул. Дәртенә дарман ҡыҙыңдың. Атыу аҙаҡ бер әйтмәһә, бер әйтер: эткәй, мине уҡытманың, тиер.

Инспектор стена сәғәтенә күҙ һалды: «Завхоз кәмәгә төшкәндер – ҡуҙғалырға ваҡыт». Солтан иһә, «Надирҙың үҙе лә, кейәүе лә минең өйгә телефон бормаҫ, аяҡ та баҫмаҫ...» тип, майорҙы лавка тирәһенә оҙатып барырға ниәтләне һәм яҫы эшләпәһенә үрелде. Майор, ниҙер иҫләп, мәғәнәле һорап ҡуйҙы:

– Байрамовка инә алдыңмы кисә, Солтан ағай?

– Уҫал тиһәләр ҙә, делауай тойолдо әле глава миңә. Олотүҙдә мәсет асканы бирле яҡындан күргәнем дә юҡ ине үҙен.

– Пустозвон түгел, понятно. Фәлән Фәләнович ни ҡул аҫтындағы начальниктарҙы ғына өтөп бара. Заманаһы шундай... – тип килеште инспектор опекун менән һәм тызлатып папкаһын асты. – Бәй, справка алып килдемсе... Бәпәйгә!

## 3

Берсә шыйырып, берсә баҫылып яуған ямғырҙар теңкәгә тейә башлауға ҡарамаҫтан, Солтан Хажиморатович ауыҙынан, бигерәк тә уның яҙма мөрәжәғәте менән ентекле танышҡандан һуң, Байрамов үҙендә тыуған фекерҙәрҙе «Шәмбе көнө – по ко-

нам! Оператив һәм афишаһыҙ десант – йәғни, күсмә кәңәшмә» юҫығында бойомға ашырырға ҡарар итте. Шәхсән исемлек төҙөнө: ауыл хужалығы, төҙөлөш, финанс, юл бүлеге етәкселәре, район гәзитенең баш мөхәррире, үҙенең ике урынбаҫары эргәһенә тора-бара «Аҡшиҙе», «Сасын», «Олотүз» кооператив-тары рәйестәрен... һәм Айгөл Карамовнаны өҫтәне. Һәр береһе машина ҡыумаһын, борамда ла уңайлы булһын, төркөм бергә генә йөрөһөн өсөн бөтәһенә бер микроавтобус әҙерләргә ҡушты. Әһә, Солтан да ҡатнашырға тейеш. Һ-м, юҡ, юҡ, кәрәкмәҫ...

Сәғәт ундарҙа уҡ автобус зыйлап Бурашҡа инде. Тәүҙә Байрамов ярандарын йәйәүләтеп – делегацияға кәмәлә сыҡҡан олотүздәр ҙә ҡушылды – ауылдың юғарынан торна сукышын хәтерләткән урамдарын байҡатырға теләгәйне лә, уйынан кире ҡайтты. Туктауһыҙ ямғыр һибәләй, өшәнес, шуға автобуста бер тегеләй, бер былай яй ғына уҙҙылар ҙа, башлыҡтың бойороғо буйынса, яртыһын ике фермер биләгән, яртыһы ташландыҡ хәлдәге фермаға һуғылдылар һәм уны ентекле ҡаранылар. Аҙаҡ десант кире Сасынға елдерҙе һәм Николай Тимерәйевич кабинетына йыйылды.

Кәңәшмәне Байрамов үҙ рәйеслегендә уҙғарҙы, ни ғәжәптер, яп-яңы блокнотына ниҙер яҙып, ниҙер һыҙғылап ултырҙы.

– Көн тәртибендә бер генә мәсьәлә: Бураш кисә, бөгөн һәм иртәгә...

Сәмерханов иһә, Байрамовтың үҙенә ҡырын-мырын ҡараштырып алыуынан бигерәк, башлыҡтың инеш һүҙенән үк таныш һандар, таныш фекерҙәр ишетеүенә һағайҙы. «Әллә... һонтор уҡытыусы, кем әле, Солтан, әйе, Солтан Хажиморатович ялыу яҙғанмы?» Бик булыр. Сходта ла аяҡ терәп бауылдағайны. М-да, хәлдәр алама икән Бурашта. Таяҡты нығыраҡ бөгөп ташлаған түгелме ликвидация комиссияһын етәкләгән сағында? Бөгөлмәгән таяҡ, ярсылған, һынған, хатта шырауланып өҙөлөргә тора. Әллә ниңә үҙ ағышына ҡуйҙы шул «Родина» яҙмышын. Апайының юҡ-бар хәбәренә әһәмиәт бирмәҫкә кәрәккәндер. Имеш, элек Зиләндең «Бураш салдаты» менән үбешкәнен күргәндәр. Аҙаҡ уныһы матур донъя ҡороп, ике балаһын етемһерәтеп Иҙел буйында ғәйеп булған... Апаҡайы ғәйбәтен Айрат өйләнмәҫ борон сәсһәсе! Егерме йыл йәшәгәс, Зиләнең ҡыҙарғанын-бүрткәнен күргеләгәс кенә энеһе менән килене араһын бутаған төҫлө ҡыланмаһа. Туғанына яҡшылыҡ теләй бирәү, йәнәһе. Тоҙһоҙ, иҫкергән ошағы тотош колхозға вайымһыҙ, аҫтыртын үсле итмәне микән Айратты? Бәлки... Эйе, нәҡ ул Бурашты әлеге ише үк кризиска батырырға тейеш түгел ине. Нәҡ ул! Хәҙер, ана, ни бары ете-һигеҙ кеше барлы-юҡлы утыҙ биш әрпеш һыйыр аҫырап маташҡан була. Гусейнов анһат ҡына нисәмә ғаны арендаға сумырҙы. Ну дела! Ә Сасынды ситләтмәне – ман-

дыны Николай... Бәлки, Айрат егет сағында Урманшин дәдәйе менән килгеләп, саптар юртакты иркәләгәнгәлер? Вәт күркле ат! Аркаһы йомшаҡ ине. Ҡартайғансы фермала ектеләр ҙә... һуғымға тотондолар.

– Әлбиттә, Бураштың никудышный хәлгә тарыуында бәғзе персоналар язаһын да алыр, тик бөгөн маҡсат ундай түгел, әлеге этапта конкрет маҡсат – нисек тә... – Байрамовтың «язаһын да...» тигәне Сәмерхановты тынын үлсәберәк алырға мәжбүр итте. – Кемдәниндәй фекерҙәр, тәкдимдәр тыуа? Ошо моментта – миңә тәү сиратта ҡағыла – үҙебеҙҙең профессионализмды, патриотлыкты, районды етәкләргә компетентлы икәнлегебеҙҙе раҫларға тейешбеҙ. Хеҙмәтсән халыкка кемдәрҙең баш булыуҙары мөһим түгел, ә кемдәрҙең баш була белеүе мөһимерәк, минеңсә. Ултырып ҡына, һәр аҙымдың срогын билдәләп фекерләшәйек. Проблема етди, бик тә етди!

Төрлө фекерҙәр һәм тәкдимдәр тыңланды, килде-киттерәктәре лә яңғыраны. Амантаевтың «Бураштa «Аҡшиҙе» кооперативының ҡортсолоҡ буйынса филиалын ойошторайыҡ», Николай Тимерәйевичтең «һарыҡсылыҡ фермаһын асайыҡ», Айгөл Карамовнаның «ҡаҙ йә өйрәк үрсетәйек...» тигәне ҡыҙыҡһыныу уятһа ла, күптәр традицион малсылыҡ йүнәлешен ҡайырҙы. Әйтәгүр, тана-торпа һимертеүгә Бураштан да ҡулай урынды эҙләп тә тораһы юҡ.

– Алдағы аҙна аҙағына тағы йыйылабыҙ. Һәр кемде аргументлы иҫәп-хисап менән көтәм. Бигерәк тә сасындарҙан һәм аҡшиҙеләрҙән. Эшлекле тойола Амантаевтың идеяһы... Ферма штатын 2007 йылдың март тирәһенән үк комплектларға, техника-фәлән булергә, ә завлыкка кандидатураны аҙна-ун көн эсендә табырға һәм уға ремонт мәшәкәттәрен йөкмәтергә... – Байрамов кәңәшмәлә ҡатнашыусыларҙың бер нисәһенә, айырата Сәмерханов яғына күҙ йөрөтөп, һүҙен осланы. – Бураш буйынса махсус комиссия төҙөүҙең хәжәте бармы? Һеҙҙең өндәшмәүҙән файҙаланып, комиссия рәйесе итеп лично... үҙемде тәғәйенләйем.

Әпкәләй хихылдыҡтар табылһа ла, Байрамов үҙе һаран ғына йылмайҙы:

– Бүтән тема буйынса сығыштарға – биш минут и – по коням!

«Бына кемдән отоп алған «по коням»ды Тимерәйевич» тип уйланы ишек төбөндәрәк Григорий менән йәнәшә ултырыусы Фәнидә. Әле Николай фекерен туплағансы, район башлығының социаль мәсьәләләр буйынса урынбаҫары һүҙ алды. Ғүмер баҡый партия, совет, инде хакимиәт тирәһендә папканан ауыр йөк күтәрмәгән, киләһе майҙа «служащая» категорияһынан

хаҡлы ялға сығырмын, тип эстән генә һөйөнгән-көйөнгән ҡатынҡай сәсен әллә буятҡан, әллә еҙһыу парик кейеп алған.

– Яңы йыл каникулында студенттар менән осрашыу уҙғарырға ине, Фәлән Фәләнович? Ваҡыт ҡыҫа...

– Перспектив планға ингәндер бит? – Ҡупшы кейенгән, килешле биҙәнгән урынбаҫарын башлыҡ ҡырыҫ ҡына бүлдерҙе. – Ингәне мәғлүм, тимәк, әҙерлекте башларға мөмкин. Тағы?

Тимерәйевич ҡалҡынды. Сасын менән Бураш араһындағы йырынды уҙғанда ул, автобустан төшөп, ҡыйыш-мыйыш тарау ятҡан бетон плитәләр аша шамбырҙап аҡҡан ямғыр һыуҙарын һикерәндәп сыҡты ла ярлауҙан дегәнәк япрағы менән водителгә юл ишараланы, йәнәһе, тура тартһаң да була. Быны күргәс, гәзит мөхәррире «Вот регулировщик!» тип мыҫҡыллы көлөмһөрәгәйне. Амантаевка нәк әле сасындар баҡсаһына таш ташлап үтергә форсат тәтене.

– Мин эш башлаған йыл инеме, Урманшинды Аҡшиҙенең серек күперендә ҡаршыланыҡ. Шиҙе ямғырҙан ташҡан саҡ. Абдулхаҡова Дилбәр апай менән – әлеге Бураштан, депутат булып һайланғайны ғына – килгән был. Председателебеҙ әйтә: «Беҙҙән наказ – ошо күперҙе яңыртыу». «Иҫән-һау сыҡһаҡ... – тигән була Урманшин, – әбизәтельне, Дилбәр, ивет?» Тегеләй ҙә, былай ҙа лә-хәүлә тип шатыр-шотор сыҡтылар, ныу аҙаҡ күпергә әйләнеп тә ҡараманылар. Минеңсә, Сасын – Бураш араһында юл әҙәмсә булырға тейеш. Бала-сағаны мәктәпкә ташыуға транспорт бүленеше лә хөрт...

Әйтәгүр, Байрамов ауыҙын асып тыңланы Амантаевты, юғиһә, көрәк тотторам мин һеҙгә, Тимерәйевич, тип йәмерәйә башлағайны иртәнсәк йырынды сығышлай.

Сәмерханов иһә уҙған аҙнала уҡ, оперативканан һуң Николайҙы кабинетына әйҙәп, кәңәшләшкән юҫыҡта ғына Урманшин мәрхүмдең – «сүтәки йәмәғәт эшмәкәре ине, район өсөн, Сасын өсөн байтаҡ көс түккән уҙаман» – һикһән йыллығын нисектер билдәләү зарурлығын шипкертте. Ҙурҙан ҡупмаҡсы Айрат. «Берәй урамға исемен биргәндә? РДК-ла хәтер һәм ҡәҙер кисәһе ойоштороорға мөмкин. Һуңынан – кафе... Вот так, Николай, мероприятиелар планын үҙем сыймаҡлармын. «Районка»ға иҫтәлектәр яҙҙыртырбыҙ. Ләкин миңә инициатива күрһәтеү уңайһыҙ һымаҡ, туғанын күтәрә, тиерҙәр. Берәй кәңәшмәлә һүҙ ҡуҙғатһаң, Тимерәйевич, изгелегең ерҙә ятып ҡалмаҫ, шәт». – «Шулай, ут һалмаһаң, утын да янмай – мотлаҡ, мотлаҡ... Ә минең үтенес водокачкаға капремонт буйынса...»

Эх, алданыраҡ, кистән түгел, һис юғы иртәнсәк иҫкәртмәне Сәмерханов күсмә кәңәшмәнең Бураш – Сасын төбәгендә уҙасағын. Йырыны – пүстәк, былай ҙа йыуан торбаһын, пли-

тәләрен тигеҙләп һалдыртырға, ике-өс самосвал ҡырсын түктерергә иҫәбе бар ине – ҡапыл интурист путевкаһына ҡыҙыҡты. Юғиһә...

Әҙер фекере бая ғына йырындағы күңелһеҙ хәл менән буталғанғамы, Николай Тимерәйевичтың сығышы «эт – ҡойроҡҡа, ҡойроҡ – һыртына» кеүегерәк тәьҫир ҡалдырҙы, һәм Урманшин юбилейы хаҡындағы тәҡдиме әллә ни яҡлау тапманы. «Нисек, иптәштәр?» – тигәйне Байрамов, гәзит мөхәррире лә, арала иң өлкәне булараҡ, ултырған килеш кенә иҫтәлеккә бирелеп алды.

– Урманшин иптәште мин дә, Амантаев автобуста әйтмешләй, мыйыҡһыҙ корреспондент сағымда тәүләп яҡындан күрҙем. Һабантуй, ат сабышы бара... Фәлән Фәләнович сыҙамай, трибунан төшөп, рупорлы судья эргәһендә рысагы өсөн көйәрмән булып сыуала. Блокнот тотоп: «Ҡайһы колхоздың юртағы алдан елә ул?» – тип һорағайным, теге: «Тай бынан! Күҙең сыҡҡанмы ни?» – тип ҡыуып ебәрҙе. Биғәйбә, ат яратты, совхозы орловский рысакты директор сағында уҡ бүләк иткән булған. Ҡыҫҡаһы, Урманшин эшләргә лә, эшләтергә лә тырышты. Мин уйлайым: урыҫса, башҡортса, мариса гәзиттәребеҙҙә уға бағышланған полоса урынлаштырыу зыян итмәҫ. Ниндәйҙер урамға исем биреү хаҡында... Ай-һай...

– Исеме бар ҙа инде Урманшиндың?! – Реплика ҡыҫтырмаҡсы еренән бөҙрәбаш Айгөл Карамовна кеҫәһендә музыка уйнаған мобилкаһын асыу менән һүндерә һалды.

Күптәрҙең, шул иҫәптән Байрамовтың, зиһенен бер секундҡа ғына «Лесников...» тигән яманат томаланы. Ләкин башлыҡ кәңәшмә дилбегәһен ҡабат усына шаҡарып өлгөрҙө.

– Редактор менән килешәйек. Әгәр... – Байрамов йәнә битараф ҡыланып ултырған Сәмерханов яғына күҙлеге өҫтөнән генә ҡарап алды, – Урманшин шәхсән нигеҙ ташын һалған объектта, миҫалға берәй мәктәптә йәиһә паркта мәрхүмдең ҡәрҙәштәре ниндәйҙер сара уҙғарырға теләй икән, һис ҡаршы килмәйек. Нисек кенә булмаһын, етмешенсе – туҡһанынсы йылдарҙа танылҡлы фигура ине ул. Регионда, хатта республикала...

– Ун өс кенә йәшендә колхозный бригадир должносында фронтҡа ылау-ылау иген оҙатҡан уҙаман булған! Уфала йәшәһә лә, абый йәйҙәрен районда уҙғарҙы, ветерандар советы ағзаһы һаналды, – тип башлыҡты йөпләне урынбаҫар ханым... – Вафаты ла, ҡәбере лә... үҙебеҙҙә.

Кәңәшмәнең ахыры яҡынлауын тойған Тимерәйевич, рөхсәт юллағандай, Байрамовҡа өндәште:

– Фәлән Фәләнович, коллегалар! Быйыл беҙҙә картуф уңды, ҡыҫтыбый по-марийски тәмләп ҡайтығыҙ. Рәхим итегеҙ спе-

циалистар булмаһенә. Григорий Петрович, Фәнидә Хамматовна, ҡулдарын сайһын ағай-эне...

— Аштан оло булмабыҙ инде, — тип эйәк ҡаҡты Байрамов.

— Башҡорт ҡыҫтыбыйы итле була, — тип мәрәкәләне Амантаев. — Тешкә ҡыҫылмай торған нәрҫәң дә барҙыр, шәт?

— Пар, шыйыҡ нәрсә пар...

Ярандары сыҡҡас, Байрамов берауыҡ ҡуҙғалманы. Уның да күңеле төбөндә Урманшинға бәйле хәтирәләр байтаҡ. «Бер һыҙғырһам...» тигәнен, мәҫәлән, онотмай, кадрҙар һайлағанда, үрмәксенән күрмәксе, үҙе лә ҡулланып ҡуйғылай.

...Имеш, Өфөгә яҡын эре совхоздарҙың береһендә тәүҙә партком, — үҙгәртеп ҡороу елдәре иҫә генә башлаған буталсыҡ, етәксе кадрҙарҙың яҙмышы ҡыл осона ҡалған осор — аҙаҡ директор йөгөн ныҡышмал тартҡан сағында уны Өлкә комитетҡа саҡыртып алалар. Иптәш Шакировҡа әңгәмәгә. Оҙаҡ сурытмай сәбәбен «беренсе»: «Һиңә — партия ышанысы! ...районына икенсе секретарь итеп ебәрәбеҙ. Бюроға әҙерлән». Икеләнә Урманшин, баҙап ҡала, ә Шакиров асыуланғандай итә, ҡалҡыуҙағы Иҫке Өфө шәйләнгән киң вә бейек тәҙрәһенә эйәк сөйә: «Балкондан бер һыҙғырайым — кандидатураң урынына йөҙ кеше тып-тып теҙеләсәк». «Яҡшы, Мизхәт Закирович!» тигәнен һиҙмәй ҙә ҡала Урманшин. Ике-өс айҙан коридорҙарына уҡ келәм түшәлгән Аҡ йортҡа йәнә саҡыртып алына: «Беренсе секретарлыҡҡа... нисек ҡарайһың?» — «Тыуған районым...» — «Урманшин, партия ҡайҙа ебәрә — шунда була коммунистың тыуған яғы. Игенселек, малсылыҡ — төп бурысың».

* * *

Шулай, Фәниҙәне ике аҙна ҡайҙалыр путевка буйынса ял итеп ҡайтҡан Тимерәйевич кистән үҙе саҡырғайны: «Глава ҡапыл ғына күсмә кәңәшмә уҙғарырға булған. На всякий случай фуршет әҙерләшергә...» Байрамов иһә Сасында кәңәшмәгә белгестәрҙе — Фәнидә менән Григорийҙы, экономисты, бухгалтерҙы ла индертә. Район башлығы, моғайын, үҙенең ни өсөн йөрөгәнен халыҡ белһен, халыҡ өмөтләнһен, тип тә уйлағандыр. Һәр хәлдә аш-һыу таман ғына әҙерләнгәйне, Байрамов рөхсәт итмәгәс, өҫтәлгә әсе-мәсе ҡуйылманы. «Идеялар тормошҡа ашҡас, Бурашта үҙем тамада булырмын», — тип тә ебәрҙе бит әле. Бөтәһенә лә аңлашылды башлыҡтың тел төбө. Һәр хәлдә, «десант»ты паромғаса оҙатып китер алдынан Николай Тимерәйевич кәйефле ҡиәфәттә Григорийға олотүҙдәрҙе һәм Фәниҙәне кәмәгә илтергә ҡушты.

— Әллә ниңә өндәшмәнем: үҙебеҙ ҙә филиал аса алыр инек Бурашта, — тине юлда «Олотүҙ» кооперативы рәйесе, алғы каби-

нала зонты менән папкаһын күкрәк тапкырына аймаған килеш. – Однакы... Эшләрҙәй әҙәм юк түгелме унда? Завфермой итәрлек тә...

– Унлап дастуйын кеше йыйыла. Әбдерәхим ағай күсеп килергә уйлай. Тағы... – тине ышаныс менән Айгөл Карамовна. Байрамов менән алдан ук кәңәшләшкәндер, бәлки, мәгәр уның ваҡыт-ваҡыт район башлығы эргәһендә оҙаҡ ҡына ултырып сығыуын һис кем белмәй. Хәлбуки, Сәмерханов ҡына һиҙенәлер. Бураштағы сходтың ғауғалы уҙыуын, Айраттың «бузотерҙар...» тип милиция саҡыртыуын иртәгәһенә үк Байрамов энәһенән ебенә тиклем ҡайҙан белеп өлгөргән һуң? Әлегә – телдән шелтә, тигән бит уға башлыҡ...

– Аты булһа, йүгәне табылыр. Завферма, ней, эргәмдә ултырасы. – Айгөл Фәнидәгә сикәһен эйҙе.

– Ысынлап та! Ҡырҙан эҙләгәнсе... – тип ҡуйҙы рәйес.

Фәнидә аптыраңды. Ул берсә Лираһын инәйҙәре фатирына урынлаштырыуына, юл хаҡына Александрға бер тоҡ эре картуф биреүен, Данирҙың Өфөлә һалбыр ауыҙ Файрушиндыҡынан, әллә остандаҡ секретаршаныҡынан да якшыраҡ мобилка һатып алып биреп китеүенә, Тимурҙың – вәт, белмәгән нәмәһе юк! – тиҙ үк тотонорға өйрәтеүенә, тағы... тағы энеһе Амантаевтың кәңәшмәлә лә, күмәк ашта ла үҙен һимм әтле тотоуына, галстук тағып, килбәтенә килешле костюм, ҡупшы ғына куртка кейеп йөрөүенә эстән генә һөйөнгәндәй, Айгөлгә йәнәш һеңкелдәп килә ята ине. – Ә-ә?.. Кит, Айгөл туғаным, булмаҫтайҙы...

– Булырһың, мин әйтте тиерһең... Бүтән кеше юк!

Бүтәнсә гәпләшеп тә өлгөрмәнеләр, «Нива» күпер ауыҙына етәрәк зыр боролоп туктаны: «Приехали... До свидания!»

Ямғыр һибәләй. Олотүҙдәр Лосмандарҙың верандаһына инде. Ирҙәр түбәлек аҫтына көйрәтергә сыҡкас, Фасил, йылыраҡ кейенеп, кәмәгә төшөргә әҙерләнде, әсәһе Сара бер тынала апарук хәбәргә етте.

– Айгөл ҡоҙаса, һөйөнсө! Һеҙҙә оло ҡунаҡ – Шиләвенән анауы... мәрхүмдең фирмаш тиме, улы килгән. Һеҙ сәвишәнйәгә киткәс, уй, минут һайын шылтыратып, Зәбир тәкәтте генә ҡоротто. Фасилды иртәгә джипка тейәп әпкитәм, бер айға ғына, оҙон аҡсаға, ти, бысый күҙләнеп алған да... Зәриәһенән белешкәйнем, уныһы, сукынып ҡына китмәйҙәрме, тисе. – Айгөл мобилкаһын усына алды һәм өй номерын йыйып, ҡолағына терәне. Сәйҙә уға тәҙрә тупһаһынан трубка эләктереп тоттор-ҙо. – Аҡса әрәм итеп ней, телефон мына лаһа... Комбайнер еҙнәң тауыш иткәндер Шиләве энеһенә.

Уңарсы Фасил еңе-терһәге, сабыуҙары ҡайышланған әрме көпөһөн сисеп, яңы көрән курткаһын кейеп алды. Ни тиһәң

дә, түрә-караны ташый аръякка. Артынса Айгөл дә ҡабаланды.

– Мин тауыш итһәм, килерһегеҙме? – Трубканы һалып, ҡабат кемгәлер пипелдәтте бөҙрәбаш ҡатын. – Ғүмерҙә күрмәгән зат-бот бит...

– Бажалый, бармайбыҙ. Фазылдың биле ебәрһә, тауыҡ, балыҡ тотоп оҙатып ҡалабыҙ Фасилды. Күрешербеҙ әле... Трудауайын Хатип абыйҙың Уфалағы оноғо биреп уҙҙы бая. Йәтеш, юғалтмаған...

– Нисек әле... Хатип быуай?

– Кәвәлерис быуайың урамға сыҡмай хәҙер. Ҡыукарағас ҡолағас ҡына ҡоларым мин дә, тигән була, тей әлеү... Ул ағас, баҡһаң, төбөнә химикат һибелеп ҡалғандан ҡорой, имеш. Тоҡ-тоҡ ултыртып торғанмы элек Надирҙар.

Кемеһенәлер, шулайтығыҙ, былайтығыҙ, тип мобилкаһынан бойора-һөйләшә, Айгөл ханым кәмәсе артынса елтерәтә баҫып ярлауға ҡабаланды.

...Өс-дүрт көнгә һуҙылған яуым-төшөм аҙна аҙағына саҡ баҫылды. Көҙ ҙә үтәр, ҡыш та етәр. Бурашта әҙ-мәҙ йәнлелек һиҙелә.

Хажиморатовичка район пенсия фондынан ҡағыҙ остоғо килеп төштө: фәлән-төгән документтарығыҙ менән инеп сығыуығыҙ һорала, шунса көн-сәғәттәрҙә эшләйбеҙ... Ул аҙбар тирәһен рәтләп булашҡанда приюттан Әмирәнең тәрбиәсеһе Сәйҙә менән һөйләшкән. «Йә, нимә уйлайһығыҙ? Нисек унда беҙҙең бала? Бәләһе юҡмы? Документацияғыҙ теүәлләнһә, әйҙә, тәүәккәлләгеҙ. Әсәһе һаман табылмай, эҙләгән кеше лә юҡ, буғай...» Хатта Әмирәнең тауышын ишетергә, унан бигерәк, донъяла барлығына инанырға теләпме, трубканы уға биреүен үтенгән. Сабый ни, Зөлфирә менән һөйләшәм икән тип, алдана яҙа һәм, арғы оста кем сутырҙауын аңлаптыр, трубканы һала ла ҡуя. Йәнәһе, ҡамасауламағыҙ әле, уға бында рәхәт... Аш та тәмлерәк, малайҙар ҙа йәберләмәй.

Бер сыҡҡанда үткәндәге ише ике районды байҡап ҡайтыу фарыз. Яңы эшләпәне ҡырын һалып тороп... Япа-яңғыҙ оҙон юлға сығыуы ла әллә нисек. Иптәшкә кемде алырға? «Фазылды эйәрт, – тине Сәйҙәһе, кәңәшләшкәндәй. – Биленән йонсой, ней врач килмәй, ней үҙе бармай, ти бит Сара. Бар, хәлен белешеп кил». «Ысынлап та, Фазылға ла пенсионныйҙан извещение оҙаҡламаҫ, шәт».

Ҡорҙашының тәкдименә ифрат һөйөндө Фазыл. Сараһы ғына, был икәүҙең бергә йөрөүенән фәтүә бармы, тигәндәй, уйланып торҙо. Башлы кешеләй... Кабинала ҡырын ятып ҡына, көнөнә, Ҡоҙғонтау аша, етмәһә, – бушҡа... Бушҡа икән – рәхим итһен. Бер көнгә ни, сыҙар. Тере ҡул ҡалынды... Фасил, ярай, шылтыратты: арыу ғына барып еткән, эш башлап та ебәргән.

Ыштобы көн аша шылтыратып тор, мә, юғалтҡан тилифуның урынына яңыны ал, тип «этдильне» аҡса биреүен дә сурытты ҡатынҡай, телефон алмағансы... Гүйә, элекке ҙур пластинка әйләнә лә әйләнә. Дилдалай Зәбирҙең яуын көндө Фасилды, ҡаңғыртып, балыҡҡа әйҙүкләүенә, Шиләве ҡунағын аръяҡҡа ҡурылған балыҡ, тултырылған тауыҡ сығарып үҙе һыйлауына маһайҙы.

* * *

Район дауаханаһында дежур медсестраларҙың береһе Зилә Сәмерханова бөгөн. Ул беренсе ҡаттағы тәҙрәнән үк күтәрмәлә аҙға ғына туҡтаған ике уҙаманға иғтибар итте. Бәй, эшләпәһе үҙен юлдашынан ике башҡа ҡалҡыуыраҡ күрһәткән ағай... Бураштан даһа. Мәскәү мэры Лужковтыҡы ише күн кәпәс кейгәне... Рәшит мәрхүмде һуңғы юлға оҙатҡандағы абыҡай, буғай. «Лесник нәҫеле» типме, Сәмерхановты ниндәйҙер сходта йөҙөнән алғас, ҡыйыуҙыр. Һи-и, радикулитик, атлауынан беленә. Былай, ҡарамаҡҡа, мәүеш кенә мужик. Маладис, йәтеш иткән Айратын. Ә-ә, өҫтәүенә, ошо кәмәсе йәнә Клара Булатовнаны «ҫин ҡытаймы, ҡатаймы?..» тип тә мәрәкәләгәйне, шикелле, еләккә барғандарында... Бөтмәҫ райүҙәктәге юҡ-барға бәлә һалыусылар. Ҡаршы сығып, «неотложно» һылтауы менән быларҙы сиратһыҙ үткәреү зыян итмәҫ. Ҡайҙалыр ҡабалананалар ҙа кеүек. Дөрөҫ, Айраты Бураш яғынан уҙған шәмбелә йәнә һөмһөрө ҡойолоп ҡайтты. Ниндәйҙер «бүгәй, бездельник уҡытыусы» Байрамовҡа ялыу яҙған, тиме. Яҙһа ни...

Мөләйем ҡатын ирҙәрҙең ҡаршыһына сыҡты, иплe һөйләште. Солтан китте үҙ йомошо менән, Фазыл ҡалды Зилә ҡарамағына. Үҙен танытмай ғына, шәфҡәт туташы:

– Кем әле, беләһегеҙҙер... Кәримовамы, студентка... Хәле нисек? – тине Фазылды невропатологҡа индермәҫ борон.

– Как белмәҫкә күршене! Шөкөрәнә ҡылабыҙ, деүләтеп уҡып йөрөй. – Фазыл эстән генә аптыраны: «Уфала ауырыған әҙәмде районныҡылар ҙа белеп-күреп тора микән ни?»

...Күңеле менән ураҙаға әҙерләнгән, ләкин тоторға йыйынмаған Өммөгөлсөм инәкәсенең ҡырыҫыраҡ рөхсәте менән Лира әбейҙең эргәһенә үк – ыуынғыс меновазин еҫе һеңгән ярайһы иркен бүлмәһенә фатирға урынлашты. Ҡыҫылмаһын ҡыҙы, ҡыҙының ҡыҙы! «Йәш сағымда этем-күтем колхоздан ҡасып, химзаводтан ирем-мәрхүмкәйем менән бил яҙмай эшләп алған квартир әле» тип тә ыҫҡындырҙы. Лира өсөн раскладушка, бәләкәсерәк өҫтәл ҡуйҙыртты. Аҡсаға һөйләште. Бураш балы-майы ла танһыҡ, тине. Яңы йылда кейәүгә сығырға

әҙерләнгән, йүнле-башлы эшләмәгән ейәнсәре Шәүрә генә турһайып маташкайны, уны смена араһында ял иткән әсәһе һылап-һыйпап күндерҙе. Лираға ни, төнәр урын ғына булһын. Иртүк китә, һуң ҡайта. Ҡай берҙә Данир оҙатып ҡуя.

Группалаштарының күпселеге яйлап ҡына «зараза»ға ҡараштарын үҙгәртте. Элина хатта «вузға яҡыныраҡ, осһоҙораҡ» фатир эҙләшергә вәғәҙә итте, тимәк, Лира менән кире бер бүлмәлә йәшәргә атлығып бармай ҡыҙый.

Лира үҙе тоҡтомалға ауылға йыш шылтыратырға теләмәй. Былай ҙа оҙон йәй сырхауы менән әсәһен ярты ҡартайтты, әҙерәк тынысланһын.

Эйе, Данир оҙатып ҡуйғылай. Бер кис ата-әсәһе Норбеков тигән табипмы, экстрасенсмы сеансына киткәстәр, фатирҙарының аулаҡлығын белгәнгә, ҡыҙға «гармошка»лы автобустан төшөргә тәкдим яһаны егет. Лираның һорауы буйынса, өләсәйенең «Аҡыл дәфтәре» тағы бер дана электрон версияла әҙер икән. Лира уны Өммөгөлсөм ҡарсыҡҡа тәкдим итәсәк. Әйҙә, уҡыһын, хәреф таный – күпме фәһем, нотоҡ тупланған хикмәтле яҙмаларҙа. Күбеһенең үҙенән-үҙе зиһенгә һеңеүен әйт әле. «Ярамай: Кешегә нахаҡ бәлә ягырға; Ямғыр яуғанда тәҙрәгә ҡарарға; Буш биҙрә менән әҙәм юлын ҡыйырға; Ярыҡ көҙгөгә ҡарарға; Самаһыҙ шатланырға йә ҡайғырырға; Юҡ-барға ант итергә; Ир кешене рәнйетергә...» Бәй, ир кеше генә кешелер шул? Шулай иләҫ-миләҫ күшеккән тимер торналарға бағып торғанында, егет яҡындағы магазинға инә һалып, һутлы ҡап тотоп сыҡты һәм, нәҙек көпшәһен тығып, ҡыҙға тотторҙо. Уныһы «Абрикосовый... бәләкәсен алмағанһың...», – тип йылмайҙы ла һәлп-һөлп бер-ике генә йотто.

– Бында быйыл таҙараҡ... – тип һөйләнде егет, ҡыҙының уйҙарын һиҙгәндәй. – Лира, әйҙә, беҙгә инеп сығайыҡ. «Караокә» бар.

Әйткәнде иғтибарға алмағандай, Лира Александр менән ҡыҙыҡһынды.

– Шурик ничево! Осраған һайын Бурашты иҫкә ала. Тимур менән перекаттан өҫкә күтәрелгәндә бер егеттең – Лосман тиме исеме – балыҡ сәнсеүенә иҫе киткән. Көпә-көндөҙ, ағас корыто һымаҡ ҡына кәмәнән, ти. Шул арала әллә кемдән белешеп ҡайтҡан: һеҙҙә март айында сабаҡ шәп ҡаба икән. Барам, тигән Шурик теге мужикка.

– Ноу мужик! Һеҙҙең ровесниктыр әле. Былтырмы, ә юҡ, элекке йыл армиянан ҡайтты... Шурикты әнкәм дә, энем дә яратып ҡалған әле...

– Ә мине?.. – Мәрәкәгә борҙо ла Данир, тиҙҙән автомәктәпте тамамлаясағына әҙ-мәҙ маҡтанырға, ыңғайҙан бөгөн иртәнсәк кенә «вождение»нан бигүк алдыра алмауына, тупа-

сыраҡ инструкторҙың «был – руль, ҡыҙҙар биле түгел. Ниңә уны шытырҙатҡансы ҡыҫып тотаһың?» тип уйынлы-ысынлы һукраныуына зарланырға уҡталған ерҙән мәлендә тыйылып өлгөрҙө. Автомәктәп тинеңме – бөттөң, бер-бер Светлананы хәтерләһә, ҡыҙый тырт-мырт килергә йә бөтөнләй һөйләшмәҫкә әҙер. Шулай ҙа баяғы тәкдимен урыҫса ҡабатларға йөрьәте етте Данирҙың: «Зайдем к нам... Учебники посмотрим». Лира өндәшмәгәс, егет уның ҡыҫҡабил курткаһының яһалма мех ҡайыулы капюшонын маңлайынан күтәрә бирҙе лә, йоҡа бирсәткә кейгән тыңлаусан, тәненә ләззәт бөркөгән ҡулдарын устарына аймап, арҡаһы менән артҡа, светофор яғына, бер-ике аҙымланы. Ҡыҙ ҡаршыманы. Диванда йәнәш «Аҡыл дәфтәре»н битләп ултырғанда, күркәләй ҡабарынып, үбергә ынтылғайны, Лира егетенең ике иренен нәзәкәтле бармаҡтары менән ҡыпһыуырлағандай ҡуша ҡыҫты.

– Ярамай. Бына, яҙылған: «Яратмайса үбешеү – яҙыҡ...»

– Ну фантазерка! – Данир кухняға ыңғайланы. Тиҙҙән Лираның көндәлек сумкаһынан гимн ҡолаҡҡа салынды, урынынан ҡалҡынып, ҡыҙ уны әптәләнмәй генә ҡолағына терәне.

– Иптәш Кәримова, Һеҙҙе Тайсин борсой. Он вас очень любит... и приглашает на скромный ужин.

– Любит? Что-то не верится...

– Не веришь? А я докажу!

Осоп-ҡунып Данир пәйҙә булды, һәм Лира серле лә, ярһыу ҙа ҡосаҡҡа сумғанын, тән зымбырлатҡыс ирендәрҙең ирендәрҙе эҙләүен, ә юҡ, бышылдап-мышылдап ҡушылыуын һиҙмәй ҙә ҡалды. Мобилка, инде минең кәрәгем юҡмы, тигәндәй, экрансығында былт-былт нурҙар уйнатып, иҙәнгә йәйеүле төрөк келәмендә оҙаҡ ҡына ятты.

## 4

Сәмерхановтың һуңғы арала кәйеф яғы ысынлап та хөртәмеш. Юҡ, юҡ, үҙе быны һис һиҙҙермәҫкә, хатта эшлекле, тыныс күренергә, әйткән һүҙенә хужа булырға тырыша, ләкин барыбер ҙә, «тымыҙыҡ күлдең төбө ҡорт» тигәнсәрәк, күңелен Байрамов уҙғарған күсмә кәңәшмәнең тәьҫораттары өйкәп-өйкәп ҡуя. Йомшаҡ түшәп, ныҡ ҡатыға ултырта торған башлыҡ та түгел, әммә йомшаҡ түшәмәй ҙә һеңгәҙәтә һуҙып һалыуы бар. Хәҙер Айратҡа нисектер ышанып етмәгән төҫлө, мисәүҙә ҡыйшандаған ҡушағын (атын) өнһөҙ генә сыбырҡыларға, хатта ки йырҙағыса «атаң дуҫы етер башыңа» тигәндәй, вазифаһынан бушатырға йыйынмаймы? Хәйер, ревизия-маҙар саҡыртмаҫ, саҡырттымы, үҙенең дә әүеш-тәүештәрҙә ҡултамғалары буйтым. Әллә... форсат сыҡҡанда, юл-төҙөлөш идаралығы начальнигы –

мутлыҡтары ла муйынлан, Байрамов та, Өфөләр ҙә үҙенә күптән теш ҡайрай – урынын баҫып алырғамы? Бына ҡайҙа ояланан ҡаҙнағараҡтар! Отчеттарҙа – ал да гөл, юлға сыҡ – аҙым һайын абынаһың...

Хакимиәттәге әшнәләре лә унан, Айраттан, ятһыраған һымаҡ. Эх, Өфөнән һаман саҡырырға ашыҡмайҙар... Шылтыратҡан-күрешкән һайын ауыҙына инә яҙып барған Тимерәйевич Николай ҙа шымыбыраҡ тора.

А-ба, араларынан ел уҙмаҫ дуҫтары юҡ түгелме урынбаҫарҙың? Амантаев – дуҫ та, дошман да кеүек. Әллә ниҙә тотош илдә барған хәрәкәт – ер бүлеү мәсьәләләренә орҙо-бәрҙе ҡарай шул Айрат үҙе лә.

Томана ғына апайының лығырҙағаны булыр: ер һатыу – оло гонаһ, ул иленде һатыуға бәрәбәр... Ер – тимәк, тупраҡ. Бер иле тупраҡ миллион йылдар оҙайлығында ярала... Бөтә дәүерҙәрҙә лә ыҙғыш-һуғыштар әҙәми заттың уңайлыраҡ, матурыраҡ ерҙә йәшәргә ынтылышынан башланған. Йәшәй-йәшәй, кеше ерҙе изгеләштерә, ер ырыу-милләттең тереклек терәгенә – йәнтөйәгенә әүерелә. Быны ғына аңлай ҙа Сәмерханов, аңламай ҙа. Бынағайыш, Ер, Урман кодекстары текстарын ул әҙерләгәнме лә, уларҙың үтәлешенә бер ул ғына яуаплымы? Байрамов иһә үҙен хужаларса тотоуын белә, һәр мәсьәләгә ентекле ҡыҫылырға, бөтәһенең дә контролләргә тырыша тырышыуын, ләкин өлгөрә алмай, ә, бәлки, урынбаҫарҙарына, тармаҡ етәкселәренә артығыраҡ ышаналыр – этем белһен, ярандарын үҙенә генә билдәле дистанцияла тота.

Бер йыл курортта бөйөк халыҡ йырсыһы Ғабдулла Солтановтың эс-бәгеркәйҙәрҙе көйҙөрөрлөк ғәйрәтле моңон алғы рәткә генә ултырып тыңлағанда, йырға ҡул сабырға кәрәкмеюкмы, тигән уйға сумманымы ни Айрат?

*...Йәмәлекәй тауын һатҡандарға*
*Әхирәттә ҡаты һорау бар.*

Ҡасан һатылған мәғрур, башҡорт илендәге иң бейек Ямантау, ә ҡарғышы мәңге юйылаһы түгел... Ямантау менән сағыштырғанда, Гусейнов арендалаған биләмәләр, әлбиттә, мең ҡарыш ҡына, мәгәр һәр ҡоро ер бер ҡарыштан башлана... Ә уның, килмешәк алпауыттың, нәфсеһе төпһөҙ. Ипләп-ипләп, яйлап-майлап Ҡыуҡарағас, Ҡулбар тип йөрөтәләрме – әкиәти хозур урындарға ымһынмаҡсы. Тауҙың һыртына эйәләшһә, аҙаҡ – аҫтына, ҡая аҫтындағы ҡасандыр аҡҡоштар, ҡыр ҡаҙҙары, аҡ торналар төйәкләгән һаҙыматлы күленә лә ҡул һонасаҡ. Яманға тарыма, тарыһаң – арыма... Ултырып иларлыҡ та ереһ ҡалмаҫ!

*Йәмәлскәй тауға менеп булмай —*
*Тирә-яғы уның ҡарауыл...*

Арендаға ер елгәргәндә, Айгөл Карамовнаны, ер төҙөлөшө комитетчиктарын ҡайтарып ебәргәстәре, Сасын умарталығында өсәүләп кенә – Николай, Айрат, Гусейнов – йәшел әрәмәлектә шараплы табын ҡорғайнылар. Сөмәкәйҙән ҡулсаланып дөрөлгән күҙәү ярында усаҡ ҡыҙа, ҡорос мангал аҫтына тере ҡуҙ өйөлә. Тимерәйевич ни йомош менәндер әзер алыпһатарының өйрәтеүе буйынса шешлек ҡурған шоферҙар эргәһенә атлауы булды, аулаҡтан файҙаланып, итләс йөҙлө, буйға апаруҡ арендатор ҡарасман кейсының ҡай еренәндер кескенә ҡыҙыл ҡумта сығарҙы һәм, сал ҡунған ҡыйғас мыйығы аҫтынан ҡупым йылмайып: «Достым, ҡырҡ бишең тулған яңыраҡ – иҫтәлеккә сәғәт бүләк итәм. Сәғәт мәңгелек әйбер түгел, боҙолоуы, онталыуы бар, ватылһа, яңыны әпирермен. Беҙҙең дуҫлыҡ онталмаһын берүк... Шөкөр ҡылайыҡ!» – тине лә бәрхәт тышлы дүрткел ҡумтаны ҡуш услап һондо, Айрат киҫәк-киҫәк баш сайҡағас: «Дост биргәндең тешенә ҡарамайҙар...» – тип бүләген бының аяҡ осондағы ярым асыҡ портфеленә төшөргәс, ҡағыҙҙарын ҡағыштырып, битен мосолманса һыпырып та ҡуйҙы. Уңарсы күҙәүҙә һыуытылған бухый шешәле шарап – Гусейнов ҡаты хәмерҙе өнәмәй – тотоп, Николай пәйҙә булды. Ят күҙ алдында Сәмерханов, нимә тыҡтың әле унда, «бай ағам», тип ҡаҙынаҡарана алмай ҙа инде. Япон сәғәте микән? Улай ғына бул.

...Ял көнө иртәнсәк Сәмерхановтарҙың палисадниктарына ғына инеп, Клара Булатовна «Ашка, бер сәғәткә генә...» саҡырып китте. Ҡупшынан йоп-йоҡа аҡбуҙ тиретун кейеп ебәргән. Өлкән әхирәтенең саҡырырын да, яҡын күргәндәрс менән хушлашып, кәрәк кенә әйберҙәрен тейәп, Инйәренә, әзмәүерҙәй яңы ире эргәһенә, бөтөнләйгә ҡайтырын да белә инс белеүгә Зилә. Әйтәгүр, үткәндә лә, ҡул осонда аҡсаһы булмау сәбәпле, коллегалары алдында уңайһыҙланыу кисерҙе, әле лә, Айраты танауын сирғас, ғәрлектән сырайына сабырсыҡ йүгерҙе һәм асыуы аҙмы-күпме тышҡа сайпылды:

– Ниңә дошман күрәһеңдер, ваҡайланып...

– ...Дуҫ та күрмәйем! Ваҡайланам икән – заманаһы шундай... Давай, Зилә, үҙең генә бар, минең эшем күп – администрацияға барамын.

Байрамов, әйе, шәмбе эшләгәндәрҙе тыймай, киреһенсә, хуплай, үҙе лә тәҙрәләре дәү, ике кондиционерлы кабинетына ут алғылай. Ә-ә, Зиләнең «ваҡайланып...» тиеүенең ғилләһе бөтөнләй икенсе. Ғилләһе шунда: былтырлы-быйыллы Айрат аҡсаһын шәхсән тота, ҡайҙалыр иҫәпкә күсерә. Дөрөҫ, шуға кәрәк, быға хәжәт, тиһәң, бирә, ләкин нимәгә тотонолғанын айырым дәфтәргә яҙып барырға ҡуша. Ғүмере бында йәшәмәҫтәр, ҡай-

ҙалыр, мәҫәлән, Өфөгә күсенһәләр, запас... йыйынтык кәрәгер, ти. Быныһы – бер һылтау, йәнә... Зиләнең ғәҙәти шәфҡәт туташтары, ҡәҙимге ауыл ҡатындары, бигерәк тә ларексы аҙашы менән шағараҡ ҡороп ултырғандарын үҙе лә күргеләне. Етте, үҙеңдең кем ҡатыны икәнде бел... Һинең йә Урал исеменә запчасть магазины асайык, тине – тыңламанылар. Ите-майы, оноярмаһы ҡапҡа төкөп инеп тора, баҡсаларында йәшелсә-емеш уңа, фәлән дә төгән. Һиңә тағы нимә етмәй? Һәр хәлдә, Зилә йәй үк әле нәк торжок танау Клараларҙан кәйефле ҡайтып ингәс, нәк ошо юҫыкта йәмһеҙ генә әрепләшеп алғайнылар.

– Һин яратмаһаң да, Клара түтәйҙе күп больнойҙар «юкбар врачтарың ары торһон» тип һағына әле.

– Тапкан бирәү түтәйен! – Сығырынан сыкмаҫҡа көсәнеп, Айрат кейенергә кереште. – Донъяңды онотма: оҙаҡламай Урал ҡайтып төшә Уфанан – ашарына әҙерлә. Ураниәне музшколаға оҙат – шунан ғына бар собутыльник түтәйеңә.

Ниндәй әҙәм Айрат? Мыжык, дорфа, һауалы, өҫтәүенә, иҫәпсел, ваксыл, утә йунсел... Аҙым һайын ҡыҫыла, өйрәтә, бойора. И-и, кәрәкмәгәнгә шикләнеп-ҡыҙғанып та теңкәһен ҡорота бит. Ҡыскырмай-нитмәй генә... Буштан-бушка кәмһеткәнсе, бер ғәйепһеҙгә тызыгансы, һалып ҡына осорһа, лутсы булыр, ир һуккан ер тамукта янмаҫ, тиер ҙә ҡуйыр ине. Бер уйлаһаң, һуйҙайын бейеуендә лә хис юк шул, юк. Ҡоро тигеҙ генә тыпылдау, килештереп остандау менәнме – моң булмағас, ихласлык етмәгәс. Әл дә балалары, бигерәк тә Уралы, ҡыр типмәй Зиләне. Тәртиплеләр, укыуға, эшкә-йомошка бөтмөрҙәр, юғиһә, ана, күршеләренең берҙән-бер улы харап шыйык муйын – ней эшкиндереп вуз бөтмәне, утыҙға етеп, өйләнмәй йөрөй шунда берәҙәкләнеп. Ни генә тимә, уның да атаһы урында эшләй – райпо түрәләренең береһе. «Яман йөрөшөңдән якшы улемең якшы...» тигәйне бит әле Барыйҙың хәләл ефете, кем әле, Фәниҙәме, Рәшит исемле буйҙак егет хакында. Әйтәгур, уҫал, мәгәр ғәҙел мәкәл. Эйе, Фәниҙәнән ишетте, төпкөл ауыл кешеләре мәғәнәле һөйләшә бит ул. Юкка нығыраҡ һорашмаған хәлкәйҙәрен анау юлы Бураштан дауаханаға биленә зарланып килгән кәмәсе ағайҙан.

Айраттың вакайлығы эшендә, бәлки, килешәлер, хакимиәт кешеһен, ябай мәкәлдәге ише, халык «ауыҙы ҡыйыш булһа ла, бай ҡыҙы һөйләһен» кеүегерәк ҡабул итергә өйрәнгән, нишләмәк кәрәк. Сәмерхановты әҙерәк урынына ултыртһа ине Байрамов ағай. Уҫал ғына, тиҙәр үҙен. Әлләсе, доклад-фәләне шыма, һыу буйы оҙон да түгел, йылмайып та ебәргеләй һөйләгәндә йә укығанда. Йылмайған кеше таш бәғерле булмай торған. Тағы... уның оҙон шәжәрә ағасында башҡорто ла, марийы ла, татары ла буталышкан, тиме. Буталһын, әйҙә, хәҙер берәүҙең дә паспор-

тына милләтен теркәп тормайҙар. Түрә-мүрәнең милләте халҡы өсөн эшендә күренергә тейеш. Дуҫ-иштәрен, ҡәрҙәштәрен эпәүләгәндә түгел. Милләт тигәндәй, күптәр, уғата йәш-елкенсәк, милләте менән ҡыҙыҡһын — әйтмәҫ, уның ҡарауы, рәхәтләнеп йондоҙнамәһен теүәл атап бирер.

Уй-гәмен таратырға теләп, Зилә холко ҡырыҫыраҡ «антамынта» әхирәтенә бүләк һайларға кереште. Затлы ғына француз хушбыйы күптән тотонолмай ултыра, әйҙә, олаҡһын да аңкыһын Инйәр буйҙарына.

Оҙайлы, ямғырлы һәм рашҡылы көҙ миҙгеле бөтөр-бөтмәҫтән, тәбиғәткә октябрь урталарында ҡапыл ғына ҡыш хаким булды ла ҡуйҙы. Берсә иреткән, берсә туңдырған көндәрҙән һуң ҡар мулыраҡ яуҙы. Яңы яткан ҡыш юрғаны, аҡ ҡуян тиреһеләй, йоҡа әле шулай ҙа.

Ошо арала Данир менән Лира ла йә күңел иреткес, йә йөрәк туңдырғыс ваҡиғалар өйөрмәһенә эләкте.

...Автомәктәптән һаман водитель танытмаһы алалмай йөрөүенә артыҡ уфтанманы Данир. Ыштанһыҙ билгә — ҡайыш бау, тигәндәй, Марс Нәбиевичтың әлегә үҙ туҡһаны туҡһан, фәнгә мөкиббән сағы — унда машина ҡайғыһы юк. Улы ла атаһының вәғәҙәһен иҫенә төшөрөргә ҡыймай. Ҡасмаҫ танытмаһы, алыр әле, машинаһы ла янып бармай. Әлбиттә, былтыр Салауат Юлаев йыйынына алып барған «интернатский» дуҫтары эленән-әле «Тиҙерәк тачка ал, Ирәмәлгә, Уҡлығаяға, Шүлгәнгә — ҡайҙа ла бергә сәйәхәт ҡылырбыҙ» тип ҡотортколай. Лираны йәнәш ултыртып, үҙе рулгә йәбешеп йөрөһә, шәп булыр ине, шәт.

Бына яңыраҡ тау саңғыһы менән мауыҡҡан ике дуҫы бер мобилканан алмаш-тилмәш һөйләште: «Әйҙә, һыпырттыҡ Абҙаҡҡа — яңы сезон асырға. Һинең «Лада»ла урын бар, беҙ, кәнишне, парлы...»

«Һеҙ — парлы йөрөһөн, мин — зарлы...» Данир өҙөп кенә яуап бирмәне.

Раҫтырмы, кешенең күҙе тыумыштан үҙгәрмәй, ҡарында нисек яралһа, ҙурлығы ғүмергә шулай ҡала. Тауышы ла бигүк үҙгәреп бармай торғандыр әҙәми заттың. Ишет, телефонға икенсе үҫмерлек дуҫы йәбеште: интернатта ла кәзә тауышлы ине, инде вуз бөтөп, стоматолог булды, өйләнергә йөрөй — мәэлдәүе шул көйө. «Сәләм, Тайсин! Әйҙә, бергә-бергә һыпыртайыҡ. Былтыр беҙ ҡырҙанырақ Путинды күреп ҡайттыҡ, әле Максим Галкин, Земфира автограф өләшә...» — «Уйлашырбыҙ». Ҡалаға таныҡлы чиновниктың төпсөгө, ни ғәжәптер, башҡортса Данирҙан да таҙараҡ һөйләшә. «Һу-у, уйлашһаң булмай ул, зирәк малай бит һин, Тайсин: иртәгә өҙә һук». — «Вариант бар, машина эҙләрмен. Но унда... Аммуниция, гостиница ягы?» —

«Кайғырма, трассаға яҡын ауылдарҙа, хатта Белоретта фатирға – ҡайҙа ла аҡса кәрәк! – индерәләр. Осһоҙға ла төшә. Саңғыны прокатка алырға мөмкин. Эскалаторҙан Урал битләүҙәре күренә, төрлө төҫтәге курткалар парадынан күҙ ҡамаша. Ух!»

Өҙә һук... Әйтеүе анһат та ул. Ярай, Лира риза булыр, моғайын, аҙна һайын ауылына ла ҡайтып йөрөй алмай. Александрға бөгөн кис үк, подъезға саҡырып, кәпәс һалғанда? Иҙел башында балыҡ барҙыр әле.

...Белмәгән йылға-күле юҡ Шуриктың. Ҡымшанманы ла. Кәнде Белорет металлургтары Ағиҙелдең үрен ағыулап ята. Ҡар ҙа күп, буран да ҡуба таулы регионда. Ғәфү ит, фараон, миңә «первый лед – святое дело», күтәп алған хобби. Татарияға йә Нефтекамаға елдерәм мин. Теләһәгеҙ – рәхим итегеҙ, хәҙер ҡатын-ҡыҙ ҙа балыҡҡа әүәҫ...»

## 5

Банкроттан теткеләнергә торған фирма йоратына Данир арлы-бирле генә йөрөштөрә. Асыуың килерме, юҡмы – штатта иҫәпләнде, былай ҙа ярты ставкала – уныһын да йүнләп түләмәй ыҙалаталар. Студент сағында уҡ әсәһе – Миләүшә Ғәлиевна ярҙамында уставтарын, программаһын әҙерләү, теркәү һәм башҡа мәшәкәттәрен ярайһы камил аткарышҡан өсөн генә лә, эшлекле кәңәштәре өсөн дә аҙым һайын рәхмәт уҡыр урынға, ҡырҡ һүҙгә етеп, башҡалар алдында малайһытып бер була башлығы, дөрөҫө, туңбашы. Ә башҡалары... директорға йә туған, йә балдыҙ, йә сурт-сураман.

«Бер аҙна эшләйем дә...» тип офисындағы секретарына ғариза ҡалдырып киткәйне Данир, бөгөн иртүк үҙе саҡыртып, үҙе ҡаршылап торған була кабинетында. Юхалай, вәғәҙәләй, уйынлы-ысынлы янай, эйе, эйе, «везде достану», беҙҙән китһәң, бер ергә лә урынлаша алмаҫһың, тип тә ҡарай. Һапата тик һапата, Тайсиндың аспирант икәнен һанға ла һукмай. Әңгәмә аҙағында ипкә килде шулай ҙа, «бер айҙан һуң ҡул ҡуйырмын» тип, ғаризаны сейфына һалып торҙо. Бынан күңеле үҫмәне, әлбиттә, Данирҙың, хатта һуңғы осор ул арбитражы, ул партнерҙары ҡаңғыртҡан етәксене – ҡасандыр әсәһенән техникумда аҙмыкүпме һабаҡ алған әҙәмде – йәлләй биреп тә ҡуйҙы. Бизнесмен булыуҙары ла ауырҙыр. Аҡсанан аҡса таптырсәле. Һөнәр микән ул, бизнесмен тигәндәре? Әллә нәфсе ҡоломо? Синыфтыр. Буржуа синыфылыр.

Иртәгәһенә аспирант төшкә табан үҙенең ғилми етәксеһе менән уны-быны һөйләшергә, форсат тейһә, Лираны күрмәгә вуз яғына барып әйләнергә теләне. Интернатташ дуҫтарының «өҙә һук...» тигәнен дә онотмағайны. Кураторын тап итмәне,

уның ҡарауы, фойела аңғармаҫтан апаруҡ таныш ир-ат менән йөҙгә-йөҙ осрашты. Бәй, Лиралар төркөмөнән ҡыуылған, әллә академик ялға ебәрелгән Вәлиев таһа. Кейеме-килбәте ярайһы ғына, тик үтә ғәмле, етди тойола. Ошо бит яҙ көнө Данирҙы «Светлананан һаҡ бул» тиеберәк киҫәткән мәжнүн. Әйтәгүр, Светлана үҙенең бысраҡ йән икәнлеген иҫбатланы. Бигерәк тә Данирҙан «бала табырға әҙерләнеп...» Бындай уҡ мәкерҙе егет ғүмере аңламаясаҡ һәм кисермәйәсәк. Хәйер, мөхәббәттә «өсмөйөш»төң өсөнсө осо барыбер ҙә икәүгә ҡала, һәм улары теге «ос»ҡа үпкәләргә тейеш түгел, киреһенсә... Шуның ише, хәҙер Тайсин – Кәримова өсөн өсмөйөштөң өсөнсө ҡупшаҡ терәүе ҡабат торғоҙолмаҫлыҡ ҡоланы.

Туктаны Тайсин, Вәлиев һөйөнгәндәй итте.

– Данир, минең ҡусты... Суицид! Телеграмма буйынса ҡайтып килергә ине, бол етеңкерәмәй. Бер штук, үтескә... Эшләйем мин, покаға столяркала. – Уйсан егет ҡуйын кеҫәһендәге уртаға бөкләнгән ҡағыҙ остоғон ҡапшаны. – Дүшәмбе Лира аша ҡайтарып бирермен. Биштәге автобуска өлгөрәм. Ышанмаһаң, залогка военный билетымды алып ҡал. Зинһар, дөрөҫ аңла мине...

Телеграмма... Лира аша... Зинһар... Һораусыны йыуатырҙанмы, Данир бының ыңғайына үҙе ҡарһаланды.

– Бына – биш йөҙ, янымда бүтәнсә юҡ. – Артабан аспирантты иблис ҡоторттомо, ул бер тынала тағы нисек аҡса табыу әмәлен өйрәтеп ташланы. – Ә-ә, арлы-бирле ҡурай быжғыртҡан, кем әле, Лираларға ҡаршыраҡ ине элек комнатаһы?

– Какой ҡурайсы, фарцовщик...

– Ана шул егеттең миңә йәйҙән үк икәүме, ике штук ярыммы бурысы бар. Ана бирәм, бына бирәм, ти ҙә «онота». Һорап ҡара, бирһә – ал, быныһы хәйерҙән булыр. Ҡайғыңды уртаҡлашам...

Еңел тын алып, расписание таҡтаһын байҡағас, аспирант Тайсин занятие аҙағында Лираны вестибюлдә ҡаршыланы. Бик һөйөндө бығаҡыҙый, егеткәйен барса ғәләм алдында үпәс итә генә яҙҙы. Гардеробта, юрамал быҙмырлаған һымаҡ, яй кейенде.

Автобуста Данир үҙе исемен дә йүнләп белмәгән ас яңаҡлы, кәүҙәһен текә тотҡан Лираның элекке группалашы менән осрашыуын, мохтажлығына күрә уға ярҙам ҡулы һуҙыуын тасуирлап торманы. Ҡыҙҙың оҡшатмауы ихтимал... Мәгәр, елкенеп, алдағы ялда тәүге ҡар сорнаған тәбиғәткә сәфәр ҡылырға тәкдим яһаны. Унда халыҡ эркелеүенән урман, тауҙар ҡыбырлағандай тойола башлай. Мәҫәлән, «Һаулыҡ» электричкаһында Әшә яғына елдерергә мөмкин. Ботинкалы саңғылары бар өйҙәрендә, әсәһенеке Лираға ярарға тейеш. Торналар эргәһендә осрашһалар, перрон да яҡын... Артабан тел осона ялғанырға торған «диспансер тирәһенән генә...» тигән фекерен дә өҫтәмәне.

– Ярай һуң... Практикаға бер аҙна ғына ҡалды. Өфөлә саҡта музейҙарҙы ныҡлап байҡау ҙа зыян итмәҫ ине, – тине маршрут-кала ҡара-ҡаршы ултырған Лира, моңһоулана биреп. – Ботаника баҡсаһын күптән күргән юҡ, уф!

Ғәҙәттә, көндөҙ юлдары киҫешкәндә, егет ҡыҙҙы «Кремлевская» туҡталышына ҡәҙәр оҙатып бармай, фонтан тапҡырында төшөп ҡалғылай. Әле пассажирҙар өҫтәп, туҡталыштан ҡыҙыу ғына ҡуҙғалғас, ҡыбырҙашҡан кеүегерәк тойолған торналарға Лираның наҙлы ҡул суғын аймай һалып, «Газель» тәҙрәһенән «ҡул болғатты» ла көйһөҙ генә тиҙәйткес мөңгөрҙәне:

*Хуш, Бурашым, сәләмдәр көт,*
*Мин Өфөлә... ҡаламын!*

– Үҙең сығарҙыңмы? – Ҡыҙ ирендәрен ослайтып ҡымтыны. – Куплетист икәнһең дә!

Үҙенә йәйҙән таныш, хәҙер тәүге ҡар ағартҡан дауахана, парк тирәләрен өндәшмәй генә уҙғас, Данир яғына аушая биреп, Лира бер-ике һөйләм менән Бураш хәлдәрен аңғартты.

– Ферманы ремонтларға ҡушалар, ти, әле беҙҙә. Субботник ойоштороп, Култөбәктәге йырынды рәтләгәндәр яңыраҡ. Ә Тимур икегеҙҙе лә һағына...

Тиҙҙән әсәһенең ферма мөдирлегенә тәғәйенләнәсәген өндәшмәне. Бәлки, ҡала егете өсөн ауыл тормошо булды ни ҙә, булманы ни, тип уйланы һәм ҡабат алдағы практиканы иҫенә төшөрҙө. «Рәхмәт инде Башковитый абыйға...»

Уҡыу отличниктарына, ғәҙәттә, бына тигән банктан йә финанска бәйле производство практикаһына заявка бирәләр. Лира тағы бер мәртәбә ятаҡ һорап Сулпан Байрасовичҡа ингәйне, ерҙәш-һыуҙаш ҡыҙыйҙы йыуатырҙанмы, теге: «Кәримова, ятаҡ – һуңғараҡ... Бәлки... Ә-ә, престижный банкта практика үтергә мөмкинлек бар», – тигәйне лә, ни ғәләмәттер, өс-дүрт көндән методискаһы... Лира урынына Светланының теркәлеүе менән аптыратты. Шундай түбәнселеккә, формализмға барыр кешеме декан урынбаҫары? Һаман Светиктың авантюраһымы? «Кәримова – зараза» тиеберәк ҡолаҡтарына тишһә, банк бәндәгә етә ҡала инде: исемлекте кәметегеҙ йә икенсе практикантты яҙығыҙ... Рәхмәт профессорға: «Кафедрағыҙға практикант кәрәкмәйме?» тигәйне Лира – тегенең иҫе лә китмәне, деканатҡа яҙыу тотторop ебәрҙе. Керпектәре бәлтерәгәндәй тойолдо методисканың – Светик әхирәтенең.

Ваҡытлыса үҙ ғәмдәренә сумып барған йәштәр «Кремлевская»ны уҙып барғандарын һуңлабыраҡ шәйләне. Гүйә, нәҡ бөгөн кеҫәһе таҡыр икәнде белгәндәй, Лира Данирҙы кафе-барға саҡырҙы. Үҙе йәтеш кенә көлә:

– Тайсин, һин йыш һыйлайһың, исмаһам, бер тапкыр мин дә... Өҫтәүенә, Башковитый бөгөн ҡулыңды ҡыҫып күреште.
– Рәхмәт! – тине Данир ҡәнәғәт кенә.

## *Туғыҙынсы киҫәк*

*Уттан – ут, устән ус үрсей.*

**Халыҡ әйтеме**

### 1

Кәнде был минуттарҙа бүлмәһендә яңғыҙ ғына биҙәнеп-төҙәнеп, сәсенә емелдәк һипкеләп ултырған старостаға, ишектән башын тығып, төркөмдәше мөрәжәғәт итте:
– Сәләм, Светлана, мөмкинме?
– Башың кергәс, артың да керһен – ишекте яп эстән. Башковитый лекцияһынан ниңә һыпырттың? – Эре сирттерә Светлана. – Ә мин КВН-ға ҡабаланам – вузовский жюриға индергәндәр. Ни йомош?
– Йомош тип... Паспортымды һерәндәткәйнем бер иптәшкә – әле табалмайым.
– Во-первых, мин воровка түгел, факт, во-вторых, не легавая, в-третьих, дуй ментовкаға... Ҡара әле, килешәме? – Сәсенә емелдәк һипкән Светлана, өңшәйгән егеттән һокланыу ишетмәгәс, иренен буярға кереште. – Эргәңдәге Клеопатраны күҙеңә лә элмәйһең, тоже мне Антонио!
– Ней, күрәм һәм маҡтайым! Ней, теге Вәлиевте, общий беләбеҙ...
– Ҡабатла әле, ултырып садись та.
Аяғөҫтө килеш егет әллә ни өҫтәмәһә лә, Светлана, ярһыған кешеләй үрһәләнеп, тегеләй-былай йөрөштөрҙө:
– Комендант ниңә чужойҙарҙы индергән?
– Чужой тип, киләһе йыл укыуын дауам итәсәк тә... Вахтала салажонок ҡына ултыра, Тимерхановмы...
– Вәт киләһе йыл инер Вәлиев ятаҡҡа! Күпме бирҙең? – Мәкерле ләззәт менән биреллде был һорау, хатта группалашы арткараҡ сикте.
– Ы-ы... Икәү ярым. Блин, үҙемә нык кәрәк саҡта. Киләһе аҙнала ҡайтарам үтесемде, ышанмаһаң, мә, паспорт, тигәйнем дә, әле тапмайым.
Данирҙың бая лекциянан Лираны ҡаршылауын, ҡулын профессор-лекторҙың ҡыҫыуын хәтерләп, Светлана аңшайған егеткә үҙенсә аҡыл һатты. Кәңәшкә ингән бит, етмәһә, старостаға.
– Тукта, дурик несчастный, паспорт менән шаярмайҙар. Ултыр, яҙ – заяви милицияға – только так! Генералдарын борсома

– участковыйы ла яраған. Әллә алған, әллә үҙең биреп ебәргәнһең.

– Биреүен бирмәнем дә... Уңайһыҙ... Тайсин да – нашенский... Столяр Вәлиев йәкшәмбе генә ҡайтасаҡ.

– Шулай ҙа мин ҡайтыуға яҙып ҡуй и бирәүгә лә укытма, и бирәүгә лә сиселмә, и... мин өйрәтте тимә. Жалобаңдан бот сабыр менттар, хотя, уларҙа ла һинең ише грамотейҙар быуа быуырлыҡ. Не сможешь – помогу, даже продиктую: пол-страницы – и готово!

Группалашы, елкәһен тызып, күҙҙән юғалды. Әйтәгүр, бер атыуҙа – ике ҡуянға һелтәнергә форсат. Тәүгеһе, Вәлиевы... Светлана беренсе курста уҡ үҙенә, төҫөнән бигерәк, кеҫәһенә ҡыҙығып, адвокат фатирында мөхәббәт кистәре, ләззәтле һөйөш хистәре буләк иткәнгә эсенән генә, әйҙә, һөйөнөп йөрөһөн теләһә, бер ҡаш һикертеүҙә ҡабат мәжнүнгә әйләнәсәк – күптән ноль, тик даның һатмаһын һәм ҡабат буталмаһын ятаҡта! Икенсеһе... Тайсины ла аяҡ аҫтында уралмаһын. Йәр һайлай белмәгән ҡупым зат! Әллә фатирына – Миләүшә Ғәлиевнаға шылтыратырғамы? Тәкмәсеп китһен, әйҙә. Ә-ә, атаһына һуң?! Бәлки, үҙе тауышын үҙгәртер йәки профоргты һөсләтер: «Хәйерле көн! Марс Нәбиевичмы һеҙ? Гражданин Тайсин Данир Марсович – һеҙҙең улығыҙ – милицияның участок инспекцияһына инеп сыкһын әле. Борсолмағыҙ, шаһит сифатында ғына...» Трагикомедия булһын, ха! Тукта, милиция шылтыратып саҡырта микән клиенттарын? Ә юҡ, иртәрәк әле, иртәрәк. Светлана иһә шәмбелә – «За рулем – курсант!», инструкторҙы йәнәш ултыртып, ауылына ҡайтып әйләнәсәк. Автомәктәп директорына, бохар бесәйеләй һырпаланып, мең һумлыҡ коньяк индергәйне, ирене лә ҡуйҙы теге. Олатайының «май сабата йоттора» тигәне һымаҡ. Иҫкәртте шулай ҙа: ҡасабаңдан ете сәғәттә етешәһегеҙме, йәғни урап ҡайтаһыҙмы? Инструкторға – мәй түгел, ҡоро сәй, машинаға – тулы бак, аңланыңмы, землячка?

Аңламаған ҡайҙа ул, һиңмайҙыр шул Светлана. Ҡыҙыҡ, үҙенән алдараҡ бүтән школда шөғөлләнә башлаған Тайсин танытма алды микән? Бергә уҡыйыҡ, тигәнгә ҡолаҡ һалмаған булды бит әле, аркыры нәрҫә... Ә Кәримова хаттин аша, ни яғы менәндер Башковитыйға ярап алған. Ят та ул – хатта ки практикаға үҙенә яҙҙырған профессор.

* * *

Егерме биш көндә егерме биш мең һум калым менән бер ҡат ҡышҡыса кейенеп, эңерҙән алдараҡ ҡайтып төшкән Фасилды әсәһе, лавкаһын бикләп тороп, өйөндә өрмәгән ергә ултыртманы; аулаҡлап тегене-быны төпсөнөргә, Силәбе тәм-томон оло өҫтәлгә теҙергә инде керешкәйне – атаһы килеп керҙе. Тыштан

һурыға, эстән сыныҡлана төшкән төпсөгө менән Фазыл беренсе мәртәбә ике ҡуллап күреште. Терһәк буйы мал бысағын йыуып-сайып, тут баҫмаһын өсөн эҫе торба өҫтөнә һалғас, иркенләп сәй табынына ҡушылды. Яңғыҙ укытыусыға ике ҡаҙын салып та биргән, имеш.

– Кем кәмәһендә сыҡтың, улым?

– Таң һарыһынан Уфаға пересадкалар яһап ҡайтылды, әткәй. Попуткала Динескә киленде. Сасынға тиклем знакомый мотоцикл осраны – бирегә түтәнән тәпәйләнем.

– Бәт-тәс, яңғыҙыңмы? Зәбир ҡайҙа һуң?

– Зәбир Яңы йылға ғына ҡайта. – Сара ла гәпләште. – Муллыҡкандыр аҡсаға... Ә теге джиплы ҡоҙа нисек ҡалды һуң?

– Күрмәнем, әнкәй, ул арыраҡ, икенсе бер городокта йәшәй.

– Айгөл ҡоҙасаға вәғәҙәләгән шул ҡоҙа: шәжәрә ағасын һыҙған кешегә биш мең бирәм, тигән. Вәт аҡса нишләтә кешене.

– Нишләтһен? Эшләтә лә, тешләтә лә... Әйтә лә Солтан: архивка заказ бирһәң, кәмендә ете мең һум кәрәк, үҙең соконоп ултырһаң, кәмендә ете көн кәрәк, ти.

Ире оторо кәзекләшмәҫ борон, ҡатыны көңгөр-каңғырҙы башка юҫыҡка күсерә һалмаһынмы:

– Ул-был күп әлеү үҙебеҙҙә лә. Һораш эткәйеңдән.

– Һораш-һорашма, маладис булып сыкты Байрамов – нәкәнис Бурашты ҡайғыртырға самаһы. Утыҙ ике тештән сыҡкан утыҙ ике ырыуға еткән ише, йүнле эш асылһа, ҡайтыр инек, тип яткандар бар. Әбдерәхим, пример, тушны ҡайта, Русланы военкоматка урынлаша, ти Надир. Районныйға.

– Уй, ямғырга ҡарамай, автобус тулып йөрөнө нәшәлестве! Әтейеңде ыштырафлаған Сәмерханов та... – Сарамы һуң кешегә һүҙ бирер әҙәм. – Марыйлар, әтиеңдәр бергәләшеп йырын йүнәттс. Әбей-һәбей йома намаҙына йөрөй. Өй беренсә...

Фазыл бисәһе хәбәрен мәрәкәгә һабыштырҙы:

– Ту Дилбәр, ту Камила апайға, ту бүтән түтәйгә йыйылып мәж киләләр. Әллә инәләр, әллә юк – туалетыңа ла доға ҡылалар былай. Әнкәйең дә йомаға бармаҡсы...

– Барамсы, как бармай. Үткән бәтнисе Фәнидә тауыш иткән, быныһында – Силәбе берәмнигә барҙа – үҙем, Алла бойорһа. Ҡай ерем кәм Фәнидәнән?

– Кеше менән шышылдап-бырылдап ярышмаһаң...

Фазыл түҙмәне, хуш итеп, бысағын ҡынына тыҡкас, яурынына көпө һалып, соланға ыңғайланы, Сара ла тороп ары-бире йөрөндө.

– Айыҡ ҡайтканға эсең ҡайышамы? Сәйҙәнеке ише алтын теш ҡуйҙырт – вәт шышылдамам!

Ҡыскырыбыраҡ өндәшеүенә улы әсә эргәһенә яҡынайҙы. «Әтиең мунса яҡһынмы, балам?» Аптырамалы: егет өйҙәгеләр, бигерәк тә әсәһе менән хәбәрен тултырыбыраҡ аралашырға күнеккән. «Кисә генә саунала сабындым, кәрәкмәҫ, әнкәй. Ниңә буштан-бушҡа тырт-мырт киләһегеҙ ул?»

– Байуктан эләгешәбеҙ... Тәк сибә генә... Завмирмыға Фасилды ҡуйҙырт, шәп булыр, тигәйнем, диплумы юҡ бит, тине. Машина әпирәйек һиңә, тиһәм, браваң юҡ, йәнәһе. Трактор браваһы бар ҙаһа, тиһәм, эй, мыҫҡыллап, шарт та шорт ҡаҙ салырға китте. Надир һине көтәүләй, эргәмә эшкә төшмәҫ микән, тиҙер. Мәйтәм, үҙе ҡарар...

– Эйе, үҙем... Әнкәй, зинһар, минең күпме калым апҡайтҡанды берәүгә лә әйтмә. Бынауы ун штукты Зәбир абый Зәриәгә бирергә ҡушты. Мә...

– Ана бит, яраған. Үгеҙ булмағайы шурт булһын, балаларға ҫөт булһын... Әтеү үҙем бирәйемме Зәриәгә? Йәлке, көтөңкөрәгән дә, төңөлөңкөрәгән дә һымаҡ.

– Әнкәй, мин әҙ генә ял алам, йәме.

– Ят, балам, аш өлгөргәнсе ят. Шәт, ябыҡтырған һине дилдалай. Тағы сиректәй ҡар яуҙыниһә, эрәткә һуғым башларға уйлашабыҙ.

Фасил, сисенер-сисенмәҫ, еҫе-ҡоҫо таныш түшәгенә һуйҙайып, мендәренә ҡапланды. Серем итер алдынан боронғо грек-тарса яурын аша билдән түбән тәнен простыня менән ҡаплаған Зәбирҙең, әсе-мәсе йотоштороп, саунала әйткәндәрен хәтерендә яңыртты: «Һин, Фасил туған, намыҫлыһың, алдаша ла, мутлаша ла белмәйһең. Өйләнгәс, киленгә лә измена яһамаҫһың, шәт. Һин армияға киткәстер, Зөлфирәбеҙ оҙаҡ ауырыны, еңгәң йәй буйы эргәһендә ауналы. Больницала... Мин дурак, матайҙы фарһыҙ бытырлатып, күрше ауылдан фигуристый ғына үгәй еңгәңде ҡараштырҙым. Ул көнбағыш араһында, ул таллыҡта, ул... Өйгә лә апҡайтҡыланым. Белмәйһеңдер, импотент чернобылецтың нәрҫәһе. Догадался, ну ләм-мим бахырҡай... Вәт шул: хәләл түшәгеңә хәрәм кәнтәйкәләрҙе эйәләтмә. Төшкә керә, ҫаташтыра башлайҙар. Әле бындағы красотка, бала табам, тип бәлә һала. Отечественный һуғыштан хатта фашист докторы ғәжәп ҡылған: Германияға ҡоллоҡҡа оҙатылған совет ҡыҙҙарының һикһән проценты ... теүәл булған. Ә хәҙер иҫәпләгән кеше лә юҡ. Енси ориентацияһын үҙгәрткәндәр ҡотора... Ну, ундайҙарҙы ҡырмыҫҡа иләүенә шыр яланғас ырғытаһы килә.

...Үҙем һиҙәм: берәй саҡ өйгә индермәҫтер Зәриә, туңҡайып та иlармын кеүек, ну никак тышаулай алмайым үҙемде. Һин арыу йөрөгәс, до конца арыу йөрө. Үткәндә ҡаҙарынған өсөн прости, брат...»

Тик Зәбир ниңәлер Зәриәгә адресын да, телефонын да бирмәҫкә кушты. Нишләмәк кәрәк, үтәр кушканын. Үҙең барып ҡайт, тиһә, моғайын, сыҡмаҫтыр оҙон юлға Зәриә еңгәсәйе.

Әсәһе диллалай тиһә лә, улай ук йоҡа елкә түгел Зәбир, түгел. Мөсһөҙ генә техника менән бына тигән канализация өлгөрттөләр. Особняктың эйәһе, хас Өфөләге баҡсасы немец һымаҡ, йомарт ҡына, оҙатканда хатта мобилка бүләк итте. Тотонолған – тиктормаҫ малайыныҡылыр. Яраған!

Ни хәлдә икән Динестәге Мая һылыу? Йылмайып ҡаршыланы бая буфетында. Мотоциклист үҫмергә кафе алдына сығып, үҙе әйтте: «Не подбросишь земляка в Сасыново?»

Йоҡо аралаш Фасил әсәһенең атаһына шыш-бышын ишетте: «Сеү, йоҡлаһын... Мунса яҡма, кисә генә сауында сабынған...»

* * *

«Һаумы, Лира...» Дүшәмбе оҙон тәнәфестә Вундеркинд аша Кәримованы аулаҡ мөйөшкә саҡырып алған Вәлиев, кеҫәһенән повестка ярпыһын сығарып, Тайсиндың номерын үҙ мобилкаһына күсертеп алғас, биш-алты аҙым ситкәрәк китеп, ҡауын емешенә оҡшаған төймәләренә баҫты, бәғзе һүҙҙәре сала-сарпы ҡыҙ ҡолағына салынды.

– Данир, борсоғанға мең тапкыр ғәфү үтенәм: сәғәт дүрткә... фәлән адрес буйынса... капитан, һәйбәт кенә татар абзый. Проблема юҡ, бәләкәс кенә очная ставка... Свидетелдәрең булһа, килһендәр, ти.

Лекцияға ашыҡкан Лира, эргәһенән үтешләй, Вәлиевкә һораулы ҡараш ташланы, теге, рәхмәт йөҙөнәнме, эше бешкәнгәме, әллә хушлашырҙанмы, ҡат-ҡат баш бармағын сөйөп ҡалды.

«Адресы... Капитан... Очная ставка... Йә, кисә генә ҡышҡы урман ҡыҙырып... үбешеп ҡайтҡайнылар. Юлда Шуриктың милициялағы мажараларын һөйләне Данир. Һы, фәлән адреста милиция участкаһы урынлашкан түгелме?»

Сулпан Байрасовичтың лекцияһында иң артта ултырған Лира аппаратында түләүе бөткәнсе Данир менән яҙма хәбәрләште. Тынысылан, ти ҙә егете, ай-һай... Һәм Лира, Данир сәғәт биштәргә төп корпуста көтөргә үтенһә лә, занятиелар бөтөү менән, үҙенә урын тапмайса, оңҡот мобилкаһына ҡутарғансы аҡса сумырып, шау-гөр килгән урамда йөрөштөрҙө, магазиндарға ингеләне. Тукта, бәләгә тарығанда Александрҙы Данир ҡотҡарышҡан даһа. Ә ниңә ул күршеһенә ярҙам итмәҫкә тейеш?

Шиномонтажкалағы сар-сор, геү-меүҙә мәсьәләнең айышына төшөнөп етмәһә лә, Саня кәрәк урынға кәрәк ваҡытка барасағын белдерҙе.

Капитан йәштәрҙе служебный кабинетында оҙаҡ тотманы. Баҡһаң, Вәлиев элекке һабаҡташының паспортына оронмаған да... мөртәт уны шүрлектәге кәрәге бер тинлек китап араһына ҡыҫтырған булып сыҡты. Нисектер иҫенә төшөргән дә хәҙер, әллә оялышынан, әллә ҡурҡышынан, паспортын капитандың алдына, портатив станцияһынан алыҫыраҡ, һалды.

– Тайсин, Фәләновка бурысҡа аҡса биреүегеҙҙе дәлилләрлек шаһиттар бармы?

– Есть, товарищ капитан, это – я, – тип һалдаттарса урынынан ҡалҡты Александр һәм ул да барсетҡаһынан паспортын һурып алды. – Тайсин менән ямғырҙан боҫоп кафеға ингәйнек, ошо г-ы-а... – Әллә «гражданин», әллә «гнида», әллә «гавно» тимәксе, Шурик әҙ генә эптәләнде. – ...взаймыға һораны, Тайсин, исемен белмәһә лә, тотторҙо ла ебәрҙе.

– Яҡшы, ул күршегеҙ икән. Ә һеҙ? – Уполномоченный Лираға текәлде.

– Паспорт кәрәкме? – Һорауға һорау сәпәлде. – Янымда студбилет ҡына.

– Яраған. – Капитан талибәнең беренсе курстағы портретына баҡты, ҡыҙыҡһынып үҙенә ҡарап алды: йәнәһе, үҙгәргәнме.

– Алдағы шаһитты раҫлайым, сөнки Тайсин миңә шул көнө үк үтескә аҡса биреүен әйтте, ҡайтарып бирһә, алырһың, тине.

– Ә һеҙ ниндәй мөнәсәбәттә һуң Тайсинға?

– Дундуктың... кәләше... – Данир танау осон тотҡоланы, Шурик ғәжәпләнде, капитан көләсләнде. – Дундуктар аспирант була аламы ни?

– Фән әһелдәрендә аномалиялар күҙәтелә. Ана бит, бынауы склероздан яфалана...

– Ну что же, молодежь, живите дружно, дерзайте. – Ҡыҫҡаса нотоғон йомғаҡларҙан алда капитан ҡурайсы йоратын ныҡ ҡына иҫкәртте. – Студент Фәләновтың «долг платежом красен» тигән афоризмды онотоуы оҡшамай миңә. Шундай яуапһыҙлыҡтан башлана кидало-вышибало кеүектәрҙең яҙмышы. Ярай, деканығыҙға хәбәр итеп тормайым. Бер юлға... Ә гражданин Вәлиевкә штраф сәпәргә тура килә. Ни генә тимәгеҙ, элекке однокашнигына психологик баҫым яһаған. Все свободны, кроме Валиева...

Кабинет ишеген иң аҙаҡ ябыусы Данир капитандың түҙыныуын аңғарҙы: «Синең кебек киртекбашны ҡыҙыҡ биш суткыға бикләргә күп сорамыйлар. Хәчрәтле чагың булмаса...» Коридорҙа иһә Кәримова ҡыҙыу һыпыртҡан төркөмдәшенең артынан бурашса сөңкөлдәп ҡалды: «Оятҫыҙ нәрҫә! Светик ҡоторттомо?»

Александр тротуарға һырынған «Жигули»йының моторын гөрөлдәтеп-йылытып ултырғанда, Вәлиев килеп етте һәм кабинаның артҡы ишеген туҡылдатты. Тәҙрә быялаһы аҫҡа төшә

биргәс, усындағы шырпы ҡабындай ҡағыҙ төргәкте Данирға тотторҙо ла ҡабаланып үҙ юлына ыңғайланы. Төргәктә «Ир икәнһең, Данир! Лираң менән бәхетле тормош теләйем» тигән теләкте уҡырға һәм меңәрлек өс купюраны күрергә мөмкин ине.

## 2

Профессор практикаға үҙ ҡанаты аҫтына юллап алған Кәримованы артыҡ эш менән күммәне тиерлек. Тәүҙә бер мәҡәләһен компьютерҙа «ашыҡмайса, ғилми редактураға ярашлы» йыйырға өйрәтте, һуңғараҡ кафедра преподавателдәренең төрлө семинар-конференцияларҙа яңғыраған докладтарын брошюра-верстка рәүешенә еткерергә ҡушты. Әйтәгүр, мауыҡтырғыс ҡына мәшәҡәт. Берҙән, Лираның мәғлүмәте байый, икенсенән, кафедра мөдиренең арҡыс-торҡос төҙәтмәләре ни тиклем урынлы икәнлеге, йәнә бәғзе педагогтарҙың интеллект кимәле тоҫмаллана. Һи, ҡай бер сығыштарҙы үҙе – сығарылыш курсы талибәһе – камилыраҡ та әҙерләй ала түгелме? Иң мөһиме, форсат сыҡҡанда мөдир практикант менән ипле мөғәләмәлә әңгәмәләр уҙғарҙы. Әллә... Лираның һуңғы осорҙағы хәлкәйҙәренә берәйһенән хәбәрҙармы? Алия Ғазиевна ниндәйҙер йомош менән инеп сыҡҡайны Сулпан Байрасовичҡа, шунан – кафедраға. Мәгәр шәфҡәт туташына Лира осточ та зарланманы. Һаумы – һау, уҡыуың арыумы – арыу... Вәссәләм. Ҡыҫҡаһы, «ҡыҙҙарға компьютерҙа дүрт сәғәттән артыҡ текләү зыянлы», «көн аша йөрөһәң дә рөхсәт, ыңғайҙан диплом эшеңде хәстәрлә, библиотекаға ингелә» тип тә һөйөндөрҙө Башковитый. Өҫтәне: «Мин, ҡаршы килмәһәң, рецензентың булырмын». Рәхмәт күндереүҙән башҡа ни әйтәһең үҙе талапсан, үҙе миһырбанлы ғалим-педагогҡа. Улай ғына ла түгел, ваҡытынан алда «бишле»гә баһалап, профессор Кәримованы практиканан бер аҙнаға алдараҡ азат итте. Ур-ра, Лира 2007 йылды Бурашта ҡаршылаясаҡ һәм икенсе ғинуарҙа тыуған көнөн билдәләйәсәк!

Өммөгөлсөм инәкәсе, йомоҡ ҡыҙы менән боҙоҡ ейәнсәре лә ҡыумағас, фатир эҙләү ыҙалары нисектер үҙенән-үҙе кисектерелә килде. Эйе, ситләтмәй инәйе вә апайы, ниңә ситләтһен, ти? Иренсәгерәк ҡыҙҙарына үрнәк күрһәткәндәй, Лира оло фатирҙың йә саңын һурҙырта, йә иҙәндәрен йыуып ала, ул өйҙәш булғаны бирле подъезда ла, балконда ла таҙалыҡ күҙәтелә. Өҫтәүенә, ауыл күстәнәстәре лә эстәрен тишмәй. Ярай әле, донъяға һыймай йөрөгән шар ҙа мар Шура-Шәүрәнең туйы Александровкаламы, Максимовкаламы уҙғарыласаҡ, тимәк, ялға саквояжына әйберҙәрен тыңҡыслап ҡайтһа ла ярай Лираға.

Икенсе ғинуарҙа Фәнидә Сара лавкаһынан «кырк шампандың һуңғыһын» алып, күптән ултырҙаш булған юк тип, Тимурҙан өлкәнерәк кыҙы менән Валентинаны Бурашка сакырҙы. Әхирәтенең кашнэ-бүләге лә, өс телдә моңло йырлауы ла хайран итте табынды.

Иҙел аша кешеләр артык калын туңмаған боҙ күтәртеп йөрөй. Барыбер ҙә ауылда элекке һымак гармун шайлатып, йырлап-бейеп кунак булғандар күренмәй. Хажиморатовичтың Мараты ғына, сиректәй яҫы табанлы һыңар саңғыһында тәкмәс атып, Тимур, Вәлит кеүек малайҙарҙы аптырата.

Яңырак кына тергеҙеләсәк ферма штатына әлегә яңғыҙы мөдир итеп беркетелгән Фәнидә әхирәтен, ыңғайҙан үҙ кыҙын, һөйләгән кешеләрен хурламай-нитмәй, ауылдағы һуңғы яңылыктар менән арлы-бирле таныштырҙы. Зәриә соцработник йөгөн тарта, ветерандар үҙенән кәнәғәт. Зәбире... кайтмай, тиҙәр, акса һалып кына ята. Мәрәкә! Йәй көнө лавкасы Саранан «эй, ошо бегемот еңгәмде әллә ниңә яратам» тип көлгән, тиҙәр: үҙе ишетмәне, Сәйҙә ишеткән. Фасилмы? Әлегә Надир менән лесхозда бутала, ул нисектер олпатланып, кыйыуланып киткән кеүексе... «Динестә Мая эргәһенә – йә буфетына, йә өйөнә ингеләп йөрөй. Февралдә киленебеҙ декретка сыға, тип һөйөнә Камила әбей» тигән уй-фекерен эсенә йомғас, Фәнидә телевизорҙың кай каналын асһаң да шоу-концерт барыуын кылыкһырланы.

– Никтер Мәскәүҙең быйылғы программалары әҙәплерәк. Былтыр ни, сак инәнән тыума сисенмәнеләр.

Валентина иһә Благовещенскиҙа йәшлек йылдары уҙыуын, етем генә үҫкән буласак ире менән шунда танышыуын хәтерләне һәм... көтмәгәндә һорай куйҙы:

– Подружка, минем Мишка, авыргачтын, Парыйга ружьишко подарить иткәйне, кажись, кая икән шул нәстәкәй?

Күпме көсәнһә лә, Фәнидә иҫләй алманы. Шул сак Лираның түрбаштағы мобилкаһы моңло көй сәсте. Лира, аптыраулы күҙҙәрен йылтаңлаткан Валя түтәйенән ғәфү үтенеп, илһамлы аҙымдар менән эске өйҙән сыкты һәм артынса ишектәрҙе ипле генә япты. Фәнидәгә кинәнес менән кунағына «Уфимский Данир» менән Александрҙың Имаштың шыр буш йортонда кунуыҙарын тасуирларға тура килде. «О, аспирант! Путин хәҙер фәнгә иғтибар бүлгән кеүек тә...» Данирҙың тыуған көнө менән котлауын тыңлап күңеле үҫкән Лираһы Валентинаның оялсан кыҙыкайы менән эйәртенешеп беседка яғына ыңғайлағас, Фәнидә һағышка бирелде.

– Эй, Барый... Бер генә эйәртте һунарға – унда ла куркытты! Шырлыкта ғәйеп был бер заман. Мылтығы, рюкзагы ерҙә ята – үҙе юк та юк. Эҙләйем – таба алмайым. Ултырып тороп илай

башлағайным, осаһын тумырайтып төшөп килә бер мужичок ялбыр ҡайындан. Көлә, йыуата... Һабантуйҙа һырғауылға менеп алған хром итектәрен кеймәгән булды, шуны һаман һаҡлаған булам. Әйҙә әле, Валя, ирҙәребеҙ рухына Сания әбекәйгә хәйер биреп, билмән апарып киләйек.

Әхирәттәр кейенешеп ихатаға сыҡҡас, ҡыҙҙарына өйгә ҡайтырға ҡул болғап, яңыраҡ Надир бесән тарттырған эҙ-юлдан Биргадир урамына ҡайырылды. Хәҙер йәйгеһе ише тутәнән үтер әмәл юҡ шул.

* * *

Тотош «ун көнлөк... ҡышҡы ил каникулы» бөтөүгә барғанда, Кәримовтарға урындағы хакимиәттән Айгөл Карамовна шылтыратты.

– Фәнидә Хамматовна, РДК-ла район студенттарының йыйыны уҙғарыла. Лираны ла, олотуҙдәр менән бергә, сәғәт ун берҙә тейәп ебәрәйексе...

Барырға булды Лира. «Их, бер ыңғай Аҡшиҙегә етеп ҡайтыр инең, мероприятиегыҙҙың көндөҙ булыуы хөрт...» – тип Фәнидә үкенес белдерҙе.

Студенттар балы күңелле уҙҙы. Бушлай кофе-бар ойоштороғандар. Байрамов матур ғына телмәр тотто, буласаҡ белгестәрҙе тыуған яҡҡа эшкә ҡайтырға димләне, урынбаҫары, еҙһыу сәсле сибәр генә ҡатынкай, уҡыу алдынғылары тип, етемсеһер, ярты етем тимәйсә, тиҫтәләгән студентҡа конверт тапшырҙы. Бындай күҙ буяуҙы Кәримова һуңынан, дискотека башланғас ҡына белде, юғиһә, сәхнәгә менеп тә тормаҫ ине. Былай ҙа китек күңелде мең һум менән генә бөтәштереп булһа, күптәр анһат еңеләйтер ине һағыштарын.

Тантаналы өлөштә Лира беренсе курс студенты Уралға йәнәш ултырғайны. Ә концерт барышында уны сәхнәлә күреп, сабыйҙарса ҡыуанды, устары зәңкегәнсе ҡул сапты. Егет бәхетлелер: алғы рәттән ата-әсәһе, һеңлеһе үҙен алҡышлай түгелме? Әйтәгүр, һул ҡулына скрипкаһын, уңына смычогын тотоп, ҡолас йәйгәндәй яҙылып баш эйҙе тәүҙә залға, аҙаҡтан да баш эйеп сыҡты сәхнәнән. Ҡалай ҡатмарлы көйҙө һайлаған, ҡалай бирелеп, аһәңле уйнай.

– Скрипкала соло. Башҡорт халыҡ көйө «Абдрахман». Башҡара Башҡорт дәүләт... студенты Урал Сәмерханов.

Эңерҙә әсәһе менән энеһе Лираны ярҙа, түңкәреүле кәмә эргәһендә, ҡаршыланы. Сөнки боҙ өҫтө шәреләнеп, һыуыҡтан быуланып ята ине. Кемдәрҙер боҙ һукмағына сыбыҡ-сабыҡ сәнскән – боҙ нығыраҡ туңа. Хәйер, бураштарҙың күбеһе ғүмер баҡый ҡыштарын боҙ ҡатламы аша юл ҡыҫҡартырға күнеккән. Өс-дүрт аҙна тирәһе ҡурҡыуҙы бар тип тә белмәйҙәр.

Хәйерсегә ел ҡаршы... Ҡасан ҡына халыҡ теленән юйылыр икән был шөкәтһеҙ әйтем?

...Ауылдан күтәренке генә кәйеф менән, барынса төйнәнеп, баш ҡалаға юлланған Лираны алыҫ туғандары һалҡын ҡаршыланы. Айырата Шура-Шәүрә. Турһайыуы етмәгән, саквояжында ҡаҙынған сукынмыш. Арыуыраҡ кейем-һалымын, Данир бүләк иткән «супермодный... һикһән процентлы», йәғни ҡояш нурҙарының егерме процентын ғына тотҡарлаған күҙлеген, профессорҙың иҫтәлеге итеп һаҡларға теләгән «Никсон» авторучкаһын, юҡ-бар парфюмерияһын тапманы. Киҫәткәйне лә инәкәсе... «Шәүрәнең ҡулы оҙон ул. Аҡсаларыңды йәшереп йөрө. Минең пенсияға әллә нисәмә рәт айыу майы һөрттө. Кейәүе лә алама. Әллә наркоман – этем белһен. Эсәләр...»

Әйберҙәре, Рәшит мәрхүмдән ишеткәнсә, чуртым, тик бына ҡыш уртаһында һәптәндәп фатир эҙләргә тура килмәгәйе.

Әсәһенең йыйыштырылмаған өйҙән сменалы эшкә ашығыуы, өләсәһенең ҡала мунсаһына туңғаҡлауы булды, шуны ғына көткән тиерһең, Шәүрә, кем фашлай – шул еңә, тип түгел, ә, кем башлай – шул еңә, тигән һынамыштан ҡуҙғыпмы, Лираға ғүмере ишетмәгән хәшәрәт яуҙырҙы:

– Я же предупредила тебя, болванка, что приютишься у меня (бәрәмәс, Шәүрә генә хужа икән дә өс бүлмәле фатирға!) только до новогодних праздников. Что зришь на меня косо, растяпа, думаешь я взяла твое барахло? До хрена народу побывало здесь после свадьбы! Короче, разрешаю переночевать всего три раза, поняла? – Шура-Шәүрә, алйыған күҙҙәрен йома-йома, бармаҡтарын «раз, два, три» тип бөктө. – Берись за уборку, чево уставилась как недо...ая? Я поехала к законному, смотри, шалава, если кому-нибудь что-нибудь да пикнешь – он у меня крутой, его дружки вмиг засадят тебя «на иглу».

«Завтра же о твоих угрозах будет заявлено куда надо!» – тип кенә шыбырлarлыҡ көс тапты шулай ҙа Лира үҙендә.

Әллә ниндәй еҫтәр һеңгән иркен фатир ҡапыл ғына тып-тын ҡалды. Зал уртаһына ҡуйылған ҡупшы ғына шыршы ла йәмһеҙ, ғәрләнгән төҫлө. «Әл дә үҙем шундай түгелмен... – тип йыуанды кухня яңағына һөйәлгән меҫкен талибә. – Йәлке Шәүрә, бата һаҙлыҡҡа».

Үҙенә күрә түгел кейеме Шура-Шәүрәнең. Әрһеҙләнгән, ойпаланған әйберҙе кейеп тә ҡарамай, буғай. Туны – шәшкенән, шәпкәһе – ҡара төлкөнән. Итеге һуң, итеге – торғаны бер кәртинкә!

«Атайҙан ҡалған – ярты аҡыл ҡалған... Кейәү тапалып харап булды поезға. Бигерәк иркәләнек бәләкәй сағында. Һөйәр балаңдан күрерһең...» – тип тә һөйләнгәне булыр Өммөгөлсөмдөң. Әбекәйҙең холҡонда ауылса ла, ҡаласа ла һыҙаттар ярылып ятһа ла, күңеле ҡатынҡы тойолһа ла, ҡыҙы Тәслимә мәүешерәк

һымак, гүйә, уға ике донъя – бер мөрйә. Исмаһам, Шәүрәһенә ауыҙ асып ҡаршы һүҙ әйткәне юҡ. Гелән ыңғайына тора, гелән ыңғайына һыпыра – һәм бына һөҙөмтә – «һөйәр баланды куреңһеңһ!» Башы ғына әле Шәүрәнең был ҡыланышы, ана, «минең фатирым» тип кенә ебәрә.

Шаңҡыны Лира, мәгәр шөйлә шауҙырап та төшмәне. Иң әсеһе – фатир эҙләү. Миллиондан ашыу халыҡ йәшәгән баш ҡалала уға һыйыныр мөйөш ҡапылда ҡайҙан ғына табылһын. Эҙләштерҙе, көҙ үк фатир ҡараштырҙы. Йә өлгөрмәй – кеше индергәндәр, йә алдан йыллыҡ хаҡын һорайҙар, йә айына биш меңдән кәм түгел. Быныӊ студентка икәнлеген белдеһә, үҙҙәре фатир биләгән коммерсанткалар, официанткалар өйҙәш булырға теләмәй, кире бороп сығара. Ике юл һайларға ҡала Лираға: нисек тә фатир эҙләп табырға һәм ... нисек тә кире ятаҡтан урын дауларға. Өсөнсөһө – юҡ, уныһы – упҡын. Туҡта, Данир эҙләшмәҫ микән? Ҡуй ҙа, уның үҙ мәшәҡәте муйынынан. Риэлторҙарға ышаныс юҡ, алдап-йолдап, битһеҙҙәре аҡтыҡ аҡсаңдан яҙҙырыуы ихтимал. Гәзиттәге, бағаналарҙағы телефондар, адрестар... күбеһенсә «приятный досуг»ҡа ишаралай.

Шура-Шәүрәнән өрккәнгә түгел, ә инәкәсе хаҡын уйлап, ең һыҙғанып өй таҙаларға ғына керешкәйне, Бураштан әсәһе шылтыратты:

– Нисек барып еттең, ҡыҙым?

– Һәйбәт, әнкәй, үҙегеҙ һуң?

– Беҙ арыу. Аҡшиҙеләге туғандар үпкәләп хат яҙған, ниңә каникулда Лираны алып килмәнең, тип.

– Диплом алғас, әнкәй, аҙна-ун көнгә барырбыҙ, йәме. Тимур ни эш бөтөрә?

– Мараттыҡы һымаҡ яҫы саңғы әтмәләп маташа. Ярай, инәкәйгә, Шәүрәгә күп сәләм беҙҙән. Һаман шунда торһаң, күп итеп продукты апарырбыҙ. Шылтыратып тор, ҡыҙыҡай, йәме?

– Ярай, әнкәй, бирешмәм...

– Тауышың нишләгән ул? Бошонҡо һымаҡ.

– Юҡ та, все нормально!

– Һаҡланып йөрө, һыуыҡ алдырып ҡуйма тағы.

И, әсәкәйенең хәстәре мәңге бөтмәҫ. Ҡыҙға, гүйә, илһам өҫтәлде.

* * *

Иртәгәһенә оҙата килгәнендә барыбер ҙә Данирға хәләхүәлен урыҡ-һурыҡ хикәйәләргә тура килде, егет кеше ни, оптимисланып, борсолма, бөтәһе лә яҡшы буласаҡ, тип йыуатты.

Өс көн, дөрөҫө, өс кис уҙҙы. Әбейе Өммөгөлсөм, бынау һыуыҡта ҡайҙа бараһың, тиһә лә, апайы һиңмайланып ләм-мим өндәшмәһә лә, Лира төнгө Өфө ҡосағына сумды.

Тәүге төндө нисек тә Элинаның әхирәте йәшәгән ятакта уҙғарҙы. Ләкин Лира хаҡында ниҙер ишеткән ҡыҙҙарҙың береһе уға асыҡтан-асыҡ ҡабат күҙҙәренә лә күренмәүен һораны.: «Америкала һинең кеүектәрҙе арестовать итәләр...» Итәләрҙер... Сирен йәшергәндәрҙе. Лира ауырымай ҙа һуң!

3

Вокзал ҡунаҡханаһында урын юҡ... Аптыраны тегеюлы, күҙ әле, Лираны төнәтеп сығарған горничная ханым. Йәлләнеме, таңғы биштә бер карауат бушай, килерһең, тине. Һи, сәғәт·алтыла трамвайҙар ҡуҙғала, кәрәкмәҫ... Эскәмйәлә ойоп ултырғанында, ике милиционер документтарын тикшереп китте.

– Ҡайҙа юл тотаһың, иптәш студентка?

– Абдуллиноға, сәғәт дүрттәге электричкаға. – Быны ғына белә Лира: Светлана ише Дим буйыныҡыларҙың – иң ҡулай маршруты.

– Яҡшы, йоҡлап ҡалма, йонсоғаның төҫөңдән беленә, – тигән була, «һин»дән ҡырҡып, буйға аскағыраҡ өс йондоҙлоһо. Бурһыҡ битле, ике йондоҙлоһо былағайлана, ашыҡмаһаң, әйҙә, бүлексәлә лә арҡа терәр бүлмә бар, тип ҡотһоҙлана. Ярай ҙа, рацияларынан ҡайҙалыр саҡыртып алдылар погонлы тәртип һаҡсыларын.

Бер пар лекция тыңлап, бер пар семинарҙа шөғөлләнгәс, Кәримовабыҙ Ибраһимов бульварына яҡын текә генә битләүҙәргә шыплап урынлашҡан ағас өйҙәргә байҡау яһаны. Берсә уҫал эт ырылдай, берсә хужаһы йә хужабикәһе баш сайҡай. Исмаһам, сырайҙарына миһырбанлыҡ саткылары яғылһасы. Тая-тая үҙәк башындағы тыҡрыҡҡа тартылғайны, өсмө, дүртме иҫерек үҫмер тотондо сәйнәнергә. «Беҙ – һине, һин беҙҙе эҙләйһең, эйеме?», «Секс-бомбаның аяҡтары төҙ генә...», «Давай беҙҙең гаражға. Унда йылы, топчан бар».

– Парни, отстаньте, пожалуйста, я больная – тубик! – тип кенә ҡотолдо Лира. Үҫмерҙәрҙең береһе, моғайын, диндар, иртәле-кисле икона алдына тубыкланған өләсәйенең онооғолор. Юғиһә, «о-о, убогая, боже упаси!» тип алдан тайшанмаҫ ине.

Уй Алла, ҡотолдо бәләнән. Ҡасан күрһәттеләр әле телевизорҙан ҡот оскос бер Мәскәү сюжетын?

...Баш ҡала сите. Таксист бәйләнә пассажиркаға салонында уҡ, теге меҫкен, кесе ярау итеп алайым тәүҙә, тигән булып, боҫа гараждар араһына. Туҡылдата, ҡысҡыра, ялына. Бүренән ҡасҡан – айыуға ҡапҡан: бисараны өс егет гараждарына һөйрәкләп индереп, төнө буйы көсләп, үлем хәленә еткерәләр.

Ә «Башҡортостан» гәзитен тотоп, былтыр йәйме, әсәһе йөрәген жыулатып ултырҙы: «Йә, Хоҙай, ауылдан Уфаға экза-

менға барған апалы-һеңлеле паркта ҡунған. Дөмөккөр шайка алып китеп, быларҙы төнө буйы этләгән, поселокта өҫтәлгә шыр яланғас баҫтырып бейеткән. Беруҡ һаҡ йөрө, ҡыҙым».

Нисек кенә түбәнһенмәһен, нисек кенә ҡыйын булмаһын, торт тотоп инеп, Өммөгөлсөм инәләрендә тағы бер кис ҡунырға яҙған икән Лираға. Әл дә генә Шәүрәләре өйҙә юк ине. Отпуск алып тороп, «баллы ай»ын кейәүҙәренең яртылаш ергә һеңешкән ағас өйөндә дауам итә, имеш.

Данир шылтыратты. Тауышы һөйөнөслө яңғырағандай. Тапкан фатир, Спорт һарайына якын «хрущевка»нан. Лира иртәгә үк урынлаша ала, үҙе төштән һуң эргәһенә инәсәк. Занятиеларға бөгәсә барып та торма, саквояжыңды онотма, тип тә өҫтәне.

...Бынан бер көн алда ғына Марс Нәбиевич менән Миләүшә Ғәлиевна, берейһе ғилми илһамынан, икенсеһе бәйләменән айырылып, телевизорҙы бокс чемпионатына көйләгәстәре, шым ғына пәйҙә булған Данирға аллы-артлы һорау бирҙеләр.

**Атаһы:**

– Кеше аптыратып, көн дә ундан һуң ҡайтырға өйрәндең!

**Әсәһе:**

– Асһыңмы? Ябығып киттең был арала...

Боксер-кумиры еңелеүгә лә йәне көйгән атаһы артабан нығыраҡ ҡаҙарынды. Урыҫса хәбәр ҡыҫтырҙымы, ярһый торған гәҙәтен нығыраҡ һиҙҙертә торған.

– Черт побери, шальной звоноктар, никудышный фирмала ыштан туҙҙырыу, турпоходтар... Аспирантураһы горит. Не хочешь учиться – пожалуста, женись или шинель кей. Башҡорттоң вульгарный, но бик образный мәҡәлен әйтәйемме? Әйтәм: кеше ҡулы менән артыңды һөртөргә ярамай. Һинең бөтә ҡыланышың, извини, шулайыраҡ тойола миңә.

Данирҙың ҡолағы – ҡарп. «Әллә милицияла булғанды беләме атайы? Шурик... Вәлиев... Участковый... Кем ошағы?» Миләүшә кухняға әйҙүкләһә лә, улы журнал өҫтәлендәге гәзиттәрҙе ҡараштырыр өсөн кун креслоға терәлде.

– Темаң актуальный, минеңсә. Экологияла экономикамы? Башҡортостан мөхите Рәсәйҙә нисәнсе урында – ошоно асыҡлау өсөн, иптәш аспирант, ике-өс эре предприятиены һайла – бар, күр, өйрән – и все! Ә һин... эт һуғараһың. Фән бит ул, фән! Усидчивость требуется. Рәсәй экономикаһы ниндәй юлды һайлай – шуға бәйле ил, республика ҡеүәте, тимәк, һинең менән минең яҙмыш. Бар, туйҙыр тамағыңды...

Бер аҙҙан, хикмәтле халатын кейеп, атаһы бая өҙөлгән фекерен кухняла дауам итте.

– Аспирантурала барымың юк икән, әйт: ағай-эне, минән булмай, тиң. Фән уңышһыҙлыктарҙы ла кисерә белә... Или же

һатып ал кандидатлык дипломын – улай ҙа мөмкин. Эйеме, әсәһе? Идеялар һатыла, идеялар, информациялар ҡиммәтләнә. Мин бер талантты иҫләйем: өс диссертация яклаҫы йыйын әтрәгәләм шуның үшәнлеге аркаһында. Яҙа ла ырғыта йә урлата теге тезистарын – талантһыҙҙар эләктерә һалып әтмәләй ҙә ташлай...

– МДУ бөткән ягтаҫшыңды әйтәһеңдер. Эйе, интернатта ук ғәжәп эрудит ине. Ярай, ашап алһын тәүҙә, аҙаҡ иркенләп һөйләшерһегеҙ. – Миләүшә икеһен дә йөпләгәндәй һүҙ ҡыҫтырҙы. – Эшләне быҒаса, темаһын да йүнләй... Права ала ошо арала. Әйҙә, һин дә берәй шәшке сәй эс.

– Эшләмәһен, Данирҙы ғына аҫырарлык хәлебеҙ бар. Прастуй ғына конюх – атбағар атай, аптырағандың көнөнән, детдомға бирә яҙҙы мине. – Марс Нәбиевич «кухня мөйөшө» тип аталған яңы мебелгә йәтешләп урынлашты. – Бөтә условие тыуҙырылған: интернет, айырым бүлмә, башкаһы, ә был... тыртандауҙан бушамай.

Бер килке өнһөҙ генә еңелсә тамаҡ ялғаҒас, Марс Нәбиевич Данирҙан автомәктәптән ҡасан таныҭма аласағын әйттерҙе.

– Ошо йәкшәмбелә «вождение»ны ҡабатлаталар... Киләһе аҙнала, атай.

– Быныһы якшы. Хәл барҙа машина алайык, готовыйҙан баҡса йә дача ҡараштырайык. Күҙ ҡыҙып та ҡуя инде кеше донъяһына. Теге фирмачтың иҫ китмәле бит коттеджы, иҫ китмәле. Кәнишне, артык роскошь та зыянлы, сүтәки...

Данирҙың ойоп барғанын күргән атаһы, баш сайҡап, һүҙен өҙҙө.

– Өшөп йөрөгән, йылыға иҙрәп бара... Данир, душ ҡойоноп ал да, теләһәң нишлә, – тине Миләүшә Ғәлиевна.

– Ана шулай «теләһәң нишлә» тип боҙоп бөттөң! – Марс Нәбиевич үҙен дә йоҡо баҫҡанды һиҙемләне. – Бәй, сәғәт беренсе ләһә!

* * *

Вәлиев иҫкәртеберәк – эйе, эйе, хужа эсеңкерәй, ләкин әҙәм ақтығы ук түгел, хәҙер нисектер, белмәйем, тине – биргән номер буйынса Данир кисә эштән ҡыуылғанмы әллә үҙе эшлектән сыкканмы... адвокатка шылтыраткайны. Фатирға индермәйһеңме? Бер-ике айға... Теге, эйе, Вәлиевте беләм, абитуриент сағында ике туған ҡустыһы менән ингеләп сыкты, тине... Ҡустыһы, туңбаш, вузға инә алмайса, кире районға ҡайтып китте, тип уйланды адвокат аҙаҡ. Уҡымауы, бәлки, якшыға ла булғандыр. Уңған ҡатынға өйләнеп, хәҙер ишле бала-саға тәрбиәләп, көтөүе менән һарык аҫырап ята. Үҙән буйында. Вәлиев

тигәне, армиянан ҡайтҡан һалдат булғанғамы, конкурстан үтте һәм һәүетемсә генә уҡый башланы. Танышлығын һаҡлап, шылтыраҡтыланы, бер мәл «Өфө» универмагына сибәркәй эйәртеп килгәнендә осратты ла, әйҙә миңә, тип саҡырҙы икәүһен дә. Ул сағында уҡ таҙараҡ, мебеле яңыраҡ әлеге бер бүлмәле фатирында йәшәгән адвокат ҡатыны менән айырылышҡайны инде. Аҙаҡ Вәлиев асҡысын биргеләне, теге – Светланамы исеме – сибәркәйе менән ҡунғылап йөрөнө. Аулаҡта, әлбиттә.

Эх, бар ине адвокаттың шәп саҡтары! Туҡһанынсы йылдар – түңкәрелеш, эт инәһен белмәгән осор... Клиенттар – аҙым һайын. Берәүгә – консультация, икенсеһен судта яҡлау кәрәк, өсөнсөһөнә – дөрөҫ тултырылған юридик документация. Яҡынтирә районындарҙан да килеп алғылайҙар быны, «эш»тәрен әүештәүешләһә, ришүәт тимәй генә, ул ите-майын, ул балығын, ул балын, ул ҡымыҙын тейәп лайыҡлы килтереп ташлайҙар. Түҙмәне ҡатыны, яңы тәпәй баҫҡан ҡыҙ ғынаһын эйәртеп, адвокат әле был, тип торманы, алимент юллатып, ҡайтты Сибайына. Икенсегә тормошланып, икенсегә бала табып, донъя көтөп алды ла китте.

Ҡатыны үҙенән байтаҡҡа йәшерәк тә ине. Ҡыҙы хәҙер студентка, килгеләп, хәл белешә унытһы. Беләлер, законный вариҫы булараҡ, бер-бер хәл булһа, фатир уға тейеш. Тейеш икән – кем ҡаршы, рәхим итһен.

Адвокат үҙенә пенсия юллағайны, унытһы ун көнгә саҡ етәрлек, ташҡа үлсәйем... Клиенттары әҙәйгәндән-әҙәйҙе, гаражын, ә юҡ, тәүҙә эсендәге машинаһын, шунан тимер көпләмәһен урыны менән һатып ебәрҙе. Белгән булһа ҡиммәтләнерен, ашыҡмаҫ ине лә... Ас торған саҡтары йышайҙы, фатирға кеше индерә башланы. Гелән ҡатын-ҡыҙ, гелән ауылдан, сөнки улар үҙҙәре таҙа, фатирҙы ла ал да гөл тота... Кустәнәстәр төшә.

Кавказ әрмәнеләй оҙонса танаулы, мыйыҡтары, ҡаштары салланһа ла, әлегә төҫкә-башҡа арыу ҡартлас, кәрәкме-кәрәкмәйме, тыңлаймы-юҡмы – тәүҙә Лираға тотош биографияһын энәһенән ебенәсә тәмләп-тәмләп һөйләргә кереште. Ҡарлыҡҡаныраҡ тауышы моңло, яғымлы һымаҡ әле үҙенең. Иҫкемоҫко фотографияларын, тәҙрә төбөндәге әрһеҙ китаптарын күрһәтә, элек «громкий эш»тәрҙә ҡатнашҡаны менән маҡтана, хыяллана.

Бығаса иҫерек әҙәм эргәһендә ултырып өйрәнмәгән Лира бахыр ышанырға, тыңларға тырыша.

– Документ-фәләнеңде ҡарап тормайым, теләһәң күпме йәшә. Артыҡ ҡиммәт һорамам. Софаға ҡуй әйбереңде, шаршауы тартыла... Үҙем диванда йоҡларға күнеккәнем. Йәй буйы баҡсала ятам...

«Бич» тағы яҙмышнамә сәйнәмәһен... ... Лира, «софаға ҡуй» тигәндән файҙаланып, оло ғына ят кешенән, өҫтәүенә, элекке

интеллигенттан тартыныу тойғоһо кәмей төшкәнгәме, ипләп кенә фатирҙы байҡаны. Бөтә нәмәһе уҙған быуаттыҡы... Заманында ҡото ла булғандыр, антиквар шифоньеры үҙенсә йәмле кеүек. Аҡһыл саған ағасынан, буғай, буялмаған, лакланған ғына. Келәменең сит-миттәре сукланған, уртаһына ниҙер түгелеп ҡатҡан. Эшкинә микән саң һурҙырғысы? Тояҡлы вентиляторы һәм яҡтырткысы күренә. Әллә нәмәләре мөйөшкә өйөп ҡуйылған, өҫтөнә пленка ябылған. Кухняла һауыт-һабаһы күп, төрлө былай, яңы урында тормошто билгә алъяпҡыс сырмауҙан башлау хәйерле. Иртәнсәк инәйҙәренән һыу ҙа эсмәй сыҡҡайны. Тиҙ табырһың, тигәйне кисә Данир, тиҙ генә тапманы әле был йортто. Ҡала уртаһында ла, иске урамдарҙа «хрущевка»лар байтаҡ, имеш тә.

– Фирамы әле һин?.. – Лира өндәшмәгәс, ҡартлас, дөрөҫ әйтәмдер типме, йомошона күсте. – Ней, Фира, йөҙ тәңкә генә биреп торһаңсы... Жилье хаҡына индерермен. Цыганский полянаға төшөп килергә ине. Ҡурҡма, яҙып барам мин.

Һа, бүстәк, иплә һорай, әҙ һорай – йөрөп килер ҡашығаяғын йыуғансы, саңын һөрткөләгәнсе.

– Бикләнеп ултыр, һеңлекәш.

Китте теге. Бәй, асҡыс ҡалдырманысы. Аҙаҡ бирергә уйлайҙыр. Лира, гүйә, егәрле хеҙмәтсегә әүерелде.

Эңер етте. Данир, киске яҡҡа килеп-күреп китермен, тиһә лә, ниңәлер оҙаҡлай. «Вождение»ны автомәктәбендә түгел, гаишниктарҙың үҙҙәренә бирә, шикелле.

Бер заман һорғолт күне алас-йолас сыйылған ишектә асҡыс осо оҙаҡ ҡына шылтыр-былтыр борғосланды, һәм, яй ғына өйрөлөп-сөйрөлөп, хужа килеп инде. Танауы ҡыҙарған, пакетында осһоҙло шарап шешәһе сурайған. Яй ғына капюшонлы курткаһын, ҡарагуян кәпәсен сискәйне, төпөшәйеп, кәүҙәгә сандырланып киткәндәй тойолдо. Иҫерек булһа ла, итектәрен иплә генә киптерергә ултырта белә әле үҙе. Йыуынып алды хатта, шым ғына стакан алып сыҡты кухнянан. Хәбәренә иғтибар ҙа итмәне Кәримова, сөнки бөтә ҡашығаяҡты йыуып, кәштәгә урынлаштырыу менән мәшғүл ине.

– Йәшәйбеҙ былай булғас. Экс-квартирантка минең менән сожительствоға инергә...

Бер заман теге бәндә диванында тамаҡ төбөнән көйләп ебәрҙе:

*Йән-би-кә-м, Йән-би-икәм...*

Эх, душ ҡойоноп өлгөрмәне... «Сәй ҡуяйым да быға, – тип уйланы Лира, – әйберҙәремде барлайым, ял алайым әле. Етте, дәрес ҡалдырыу ҙа уңайһыҙ. Башковитыйҙы ла күрәһе бар. Диплом эше буйынса...»

Кейемен төҫө уңған күк спорт костюмына алмаштырып, адвокат йораты, ғәрипкә оҡшаш кәүҙәм, тимәй, кухняға бер инә, бер сыға. «Һо-о, ялтлатып ебәргәнһең донъяны. Элек бында атаҡлы юрист Фәләнов йәшәне. Свердловский юридическийҙы очно бөтөрҙөм бит мин. Сразы эшкә алды, ошо фатирын да көттөртмәне. Шәп тә, икенсе ҡатта ғына...»

Күп тә үтмәне, бүтән хәбәре менән ҡыҙҙың теңкәһенә тейә, теңкәһенә түгел, намыҫына ҡағыла башланы.

– Ауылда шаян старик һөйләй: йәш сағымда, ти, ҡайтып инһәм, түрбашта законныйым тукмас ҡырҡып тора икән тип, осаһын һәрмәкләгәйнем, теге, кейәү, нишләйһең ул, тип боролғайны, йығылып китә яҙҙым, ти. Кәүҙәләре бер сама ҡәйнәһе, оказывается, бисәһенең күлдәген кейгән булған – бұталған мужик. Ә ниңә, половой гиганттар ауыл ерендә күберәк. Вот такие дела. Һине күргәс, йәшәреп киттем әле, Фира матурҡай. Асыуланма, кемделер кемдер оҡшатҡанда – судлашмайҙар, талашҡанда, айырылышҡан саҡта ғына...

Сара түтәйе әйтмешләй, низнай, был әҙәм эргәһендә күпмегә түҙер икән? Өсөнсө ингәнендә ығыш өҫтәлгә сәй яһап, тегенең ҡатҡан печенье-маҙарын ҡуйған Лира алъяпҡысын сисеп тә өлгөрмәне, адвокат, мышнай-мышнай, бының түшенә ынтылды. «Ағай, нишләүең был? Әй, хайуан!» Ҡыҙ йән асыуы менән, ослайып бөгөлгән тубығы менән әйләнеп тороп, аҙғын алашаның йән еренә – бых! Иҫен юғалта, ҡолап китә яҙҙы теге: «Вот те на! Прости, Фира, не хотел... Если не простишь...» Көрмәләнгән теленән ах-вах урғылған ҡартлас мүкәйләп кенә шымарып бөткән диванына барып ятмаһынмы. Берсә янай, берсә ыңрап ебәрә, ыхмылдап-көлөмһөрәп тә ала.

Был ни ғәләмәт! Аҙым һайын аҙғынлыҡ. Телевизорҙан да шул. Ана, «Дом-2»-ла ни генә ҡыландырмайҙар.

Кәримова шарт та шорт кейенеп торғанында, звонок зыңғырҙаны. Данир?! Нәҡ үҙе. Ҡыҫҡа туны, кәпәсе – диңгеҙ бесәйе – харап килешә. Һалҡындыр тышта, һүрән яҡтылы ишек төбөндә теремек күҙҙәре бешкән ҡарағат емешеләй йылтандай.

– Ниңә оҙаҡлайһың ул? Бында притон булған да...

– Саҡ килдем школдан. Төҫөң ҡаскан, әллә?..

– Бер ни ҙә юҡ, тот саквояжды.

Егет егетлеген итерҙән эскәрәк ынтылды, нәфрәтенән адвокаттың томшоғон төйгөсләргә самаһы.

– Бысранма шуның менән. Кәрәген алды бич!

– Ҡулың ҡысыймы? Момент наряд саҡыртам. – Бөршәйгән алкаш янап маташты.

Йәштәр тышҡа атлыҡты. Үҙен-үҙе белештермәй, егете артынса ҡалтыранып юрғаланы ҡыҙ. Аптырай: Тайсин такси туҡтатасы...

Өйҙәренә саквояж тотоп, ҡобараһы оскан ят ҡыҙ эйәртеп ҡайтҡан Данирҙы күргәс, Марс Нәбиевичтан бигерәк Миләүшә Ғәлиевна ни тиергә лә белмәне. Данир иһә Лираны үҙ бүлмәһенә етәкләп алды ла инде, ишеген шым ғына ябып ҡуйҙы хатта. Бер аҙҙан ғына залда аҡшайышып ултырған ата-әсәһенә, оҙонға сурытмай, күп нәмә аңлатып өлгөрҙө. Уҡымышлы кешеләр барыһына ла тиҙ төшөндө.

– Фатир тапкансы, торһон беҙҙә. Бүлмәңде бушатаһың, әләйгәс, – тине атаһы. Белмәгән-күрмәгән ҡыҙҙан бигерәк ҡәҙерле улы өсөн нығырак борсолған әсәһе, йәйге хафаларын иҫләпме, һорамайса түҙмәне:

– Ә-ә... бер-бер йоғошло ауырыуы юкмы һуң?

– Ну, мам! Абсолютно чистая, честная... Исеме – Лира, әле диплом яҙа.

– Диплом – был серьезно! Дә-ә, хәшәрәтизм баҫа донъяны. Декандарына лично визит яһарға микән торарак? Минең кабинетта төнәрһеңме, Данир, әллә... готовый килен эргәһендәме?

Иренең кинәйәһен ҡатыны улдарынан йәһәтерәк аңғарҙы.

– Кит, Марс, бушты...

– Ну, атай, кәңәшең шәп, тик әлегә иртәрәк...

4

Быйылғы февраль ҡаты һыуыҡтары менән буранһыҙ ғына үтеп бара. Биргадир урамындағы колонкаһыҙ, ҡойоһоҙ кешеләргә төбөнә тиклем ҡат-ҡат шәреләнеп туңған Бурашта мал һуғарыу уғата ауырлашкас, ҡасандыр концерт барышында клубта Өфө гастролерына ҡушылып әллә эҫәрләнеп, әллә сәмләнеп йырлап ултырған, быныҡ өсөн Надирҙан елкә төбөнә алған элекке колхоз көтөүсеһе иртә ҡаскан һыйыр ғынаһын, вак бәрәсле кәзә-һарыктарын Иҙелгә үк өйөрә башланы. Унда мәке уйыу анһатырак, малдар тубыкланмайса ла һыу эсә ала. Бер көн тарау көтөүе артынса һәлпәндәгән уҙаман күпер тирәһендәрәк Фәниҙәне тап итте. Хәлфетдин, төрткөсө шымарып ялтыраған һәлмәк ломын ҡарға ҡаҙап, хәбәр һатты.

– Иҫәнме-һаумы, Фәниҙә киленкәйем. Әхүәлдәр ҡандай?

Фәниҙә сак таныны үҙен: фуфайка өҫтөнән хан заманындағы брезент плащ, һырма салбар, калушлы быйма кейгән, аскак билен ҡайыш аркалык менән быуған. Ҡайныһы Имаш мәрхүмде хәтерләтеп ҡуя меҫкен.

– Рәхмәт, Хәлфетдин абый, эштән ҡайтыш әле.

– Барамы һуң? Эшеңде әйтәм.

– Барғандай. Ары һуғылам, бире бәреләм...

– Ферманы «иләнмәгән-һуғылмаған, ҡайным һиңә бер ыштан» ишерәктер. Эстән ямаштыра тороғоҙ, көндәр һыныкҡас

та, – китешләй боролоп, уҙаман йәнә, кеткелдәп алды, – әле туң навоз, ақтарыуы эпе-рәхәт. Тегене-быны һөйрәтмәгә Рәшиттең тракторын һөйләш. Тақта-мақтаны лесхоздан белеш. Берәй мискә самагон ҡыуҙырт та өмә яһа – мин дә эшкинермен, мужыт.

Әйтәгүр, кәңәштәре эшлекле. Хатта ки өмә тигәне лә. Энеһе Амантаевка йәй «һаман башкортса эшләтәһең икән кешеләреңде» тигәйне, үҙе лә шулайыраҡ ҡыланыр микән ни Фәнидә... Һәр хәлдә, һүҙе фәһемле Хәлфетдиндең. Алтмыш биштәргә етәлер.

Хажиморатович иһә яңыраҡ алтмышын ашатланы. Көндөҙ мәктәптә ҡотлағандар – ҡатнаша алманы, Сасында иҫәп-хисап менән булашты. Фәнидә приказда ғына ферма мөдире әлегә, ғәмәлдә ике кәмә ҡойроғон тотоп маташа. Ә-ә, юбилярға район башлығы телеграмма һуққан, гәзитселәр грамота ебәргән. Белмәй ҡалғанмы, әҙәмгә һанамауымы, Тимерәйевичтан сәләм дә күнмәне, буғай. Валентина ғына Фәнидә аша матур открытка оҙатты. Шуны индереп сыққанда, Сәйҙә түтәйе сәйгә ултыртты, март айында оло мәжлес йыйырға уйлауын әйтте. «Солтан абыйың, ҡуй, мәшәкәтләнмәйек, ти, мәйтәм, оҡшамаҫ ул». «Кәрәк, кәрәк, – тип дәртләндерҙе Фәнидә. – Кеше кругом тәүге пенсияһын йыуҙырта». Шунан опекун-әсә «Доктор Айболит» тәтәйҙәре менән илгәҙәк бесәйҙе сыйылдатҡан Әмирәнең мәҙәктәренә күсте. Йыбанмай тороп, трюмо яҫтығындағы ҡотлауҙарҙың иң ҙурын күрһәтте, музыкаһын тыңлатты.

– Ошо көҙгө аша – шиворот на выворот. Дәүатай, һиңә туҡһан тулдымы, тип һорашты бала. Апаруҡ хәреф таный, йөҙгә тиклем буталмай ғына цифр һанай. Солтан юрамал, эйе, Әмирә ҡыҙым, туҡһан тулды, тигәйне, йөрөнө-йөрөнө лә урыҫса төпсөндө: а до этого сколько было?

– Бәкәс сағында Лира ла тәтелдәк булды. Йоҡла, тиһәң, һөт эсәм, бес итәм, әпәк ашайым, тип хитрыйлана торғайны.

– Бишектәге бала бишкә төрләнә – хәҙер ҡандай сибәр, ҡандай сабыр!

...Ошо сабырлығы биш айға етһә, Лираһы мораҙына ирешәсәк. Ҡуй инде, тағы фатирын алмаштырған. Был юлы кеме йүнләшкәндер – Данир менән Александр йәшәгән йортҡа төшкән дәһә квартираға.

...Район хакимиәтендә лә юбилей-маҙар уҙғарылып тора. Эттең ҡойроғона баҫһаң, «еҙнә» ти... Бураштарҙың ҡуңалтаҡ көнитмеше өсөн Байрамов шелтә сәпәгәнгәме, бығаса түрә-ҡараның мәжлестәрендә күркәләнергә күнеккән Сәмерханов дәдәйе Урманшин – Лесниковтың парк дирекцияһында ҙурҙан ҡупмай уҙғарылған ҡәҙер кисәһендә үҙен әллә ни күрһәтергә тырышманы, һуңғараҡ коллегаһының – парик кейеүе һирәктәргә мәғ-

лүм, илле өсөндә лә төҫ ташламай, теләр-теләмәҫ кенә район башлығы урынбаҫары ҡамытын сисергә тейеш ханымдың особнягын гөрләткән мәжлесендә лә элекке ғәҙәтенсә осаҡланып бейемәне. Ғөмүмән, администрацияла сатраш таҡтаһындағы ише номенклатур шылдырыштар көтөлә, һәм уңайлы мәлендә кемдәргәлер «шах» йә «мат» иғлан ителәсәк.

Март баштарында иһә һауа торошо йыш үҙгәрҙе: йә буран болара, йә көрт өҫтәре шыҡырлай, йә туң донъя емшей төшә. Хас та Айраттың күңеле ише... Күрәҙәсегә күренергәме әллә? Хәҙер, имеш, биш йөҙ кешегә берәү тура килә шулар. Имеш, изге теләклеләре бар, боҙоҡлашҡандары донъя тулы; медиумдарҙың халыҡ-ара съезы уҙғарыла, ышанһаң – ҡара, ышанмаһаң – юҡ, Үҙәк телевидение «Экстрасенстар алышы» тапшырыуын ойошторған. Шылтыратты Өфөләге геолог ҡорҙашына: «Яҡташтар осрашыуында, әллә кемгә күрен, тип өгөтләгәйнең. Адресын таба алмайымсы?» Дуҫы иһә өс-дүрт адрес-телефон яҙҙырты. Әһә, яҡынлата Ҡариҙел үренә генә менгәндә? Фәлән район, фәлән ауыл. Ҡатын-ҡыҙҙар байрамынан һуң, мәҫәлән, унында, көнөнә урап ҡайтырға форсат уңай. Апайына ла өндәшмәҫ – сер сисмәҫ. Эйәртегеҙ, тиеүе лә бар.

Ураниәһе эргәһендә Уралы уралыр. Апаруҡ тырыш малайы. Уҙған аҙнала Өфөгә юл төшкәс, ятағына һуғылды – ярарлыҡ; деканатҡа инеп, Сулпан Байрасович шәрифтәре менән танышты. Шәхсән әллә белә, әллә юҡ – ямалламай, һеҙҙең районлыҡтылар уҡыуҙа һынатмай, тип тә өҫтәне. Бер-бер нервығыҙҙа уйнаниһә, Уралға скрипка тотторогоҙ, тигәс, шулаймы ни, үҙешмәкәрлек смотрына йөрөр, тип ҡыуанды. Йылғыр, «себе на уме», шәт, доцент. Һабантуйға саҡырыу ебәреп тороп ҡунаҡ итеү зыян итмәҫ. Күҙ күрер...

Айраттың күрәҙәсегә барыу тәҡдимен Зилә тыныс ҡына ҡабул итте. Ҡариҙелдең Павловка ГЭС-ы сөмәкәйенә сумдырмаймы! «Зам» дәрәжәле әҙәм дә хөрәфәтле тылсымға инаныр икән.

...Хәйер, күрәҙәсе үҙе лә «ышанһағыҙ ғына файҙаһы тейәсәк» тип башланы дауаһын. Эске өйөн ҡыҙҙырылған балыҡ төҫлө йоҡа таҡта менән бүлгән, стенаһына семәрле доғалыҡтар элгән. Хикмәтле китаптары, брошюралары хәтһеҙ – көндөҙ шәм яндырып эҙләһәң дә тапмаҫһың: «Диагноз... человек-рентген», «Психика...», «Энергоинформационная мыслиформа», «Секреты биолокационных рамок». Берәүһенең атамаһы, ыжый Аллаҡайым, ҡалай шөкәтһеҙ: «Загробный мир».

Ир-ат им-том хаҡын килешкән арала, Зилә йоҡа ишек башына бейеккә элеүле матрос бескозыркаһына иғтибар итте, тимәк, ағай флотта хеҙмәт иткән. Йәнәшендә – «Элитные целители России» тигән знактың төҫлө фотокопияһы алдағы символик өмөтөлөр. Ышанмай ҡара!

Бәсмилла, ғәрәп графикаһы менән семәрле доғалыҡтар араһына компьютерҙағы иң эре кириллица менән йыйылған әллә өгөтнамә, әллә шиғри өҙөккә күҙ йүгертте.

*Не зли других. И сам не злись.*
*Мы гости в этом бренном мире.*
*Коль что не так, будь поумнее —*
*Смирись и улыбнись!*
*Холодной думай головой...*
*Ведь в мире все закономерно.*
*Зло, излученное тобой,*
*К тебе вернется непременно!*

Боронғо нотоҡка ла оҡшаған... Авторы күрһәтелмәгән робағимы? Ғүмәр Хайям мираҫын маһир ғына урыҫсаға ауҙарғандыр урындағы берәй әҙәбиәтсе.

Халыҡ табибы яланғас тән Сәмерхановты ҡарағанда, маңлайын, яурындарын тотҡолап «арығанлыҡ бар... тойола» тип һөйләнгән арала, гәрсә, үҙенә бихисап пациенттарҙы ярым шәрә йә инәнән тыума күрергә насип итһә лә, «мине лә... сисендерер микән абыҡай?» тип хафаланған Зилә, магик процедура барышынан иғтибарын ситләтергә тырышты һәм ҡараштарын ҡабат мөғжизәле китаптарға йүнәлтте. Әһә, Л. Хэй яҙмаларын, Д. Самородовтың «Дети 6-ой расы» китаптарын кемдәлер күргәне бар... С. Лазаревтың ижад емешен – «Лечение кармических болезней» тигәнен ҡасандыр Клара Булатовнала битләштергәйне түгелме? Клара түтәйе шунда әсәле-ҡыҙлы ике сырхау ауылдашының Һаҡмар үрендәге атаҡлы муллаға күренеүҙәрен һөйләгәйне. Ҡуян һурпаһының һурпаһы ишерәк ваҡиға, әлбиттә, һөйләгәндәре Зилә өсөн, тик ниндәйҙер моменттары барыбер ҙә күңеленә һеңгән «Бин Ладенға оҡшаған тип, хаж сәфәрендә, Төркиәләме шул, полиция өс айғамы арестовать итә... Әсәле-ҡыҙлының арамйа (арлы-бирле) историяһы былайыраҡ. Ҡыҙын ҡарай ҙа ҡартлас «һы, ирең яңыраҡ йоҙроғо менән башыңа тондорған» тип точный диагноз ҡуйған. Ишеү әсәһе юҡта шыбырлай ҡыҙына: «Әбсәң бәлә һала – бук та ауырыуы юҡ. Уф, бынау ерем һыҙлай, уй, теге ерем ауырта, тип бәләсникләнгәнен вис ауыл белә. Күтәнселәп, бөтә эшен кешенән эшләтергә тырыша...»

...Айрат кейенгән арала Зиләнең ҡул суктарын тотҡолаған табип «өс бала тапҡанһығыҙ икән» тип ыҫҡындырмаһынмы?! Үҙенең дәрәжәһен онотмайса мыштырҙаған Сәмерханов, гүйә, майкаһына себәлде – бер систе, бер элде һәм, ашыҡмайса кейенеп бөткәс, рәнйетелгән ҡиәфәттә ихатаға сыҡты. Тәҙрә аша ҡайҙандыр «УАЗ» ҡыуып килеүселәрҙе шәйләне – берүк «Волга»һын төкөтөп ҡуймаһындар.

Иренең үтенесе буйынсамы, элекке диңгеҙсе уны-быны төпсөнөп, Зиләне тәфсиллерәк тикшерҙе. «Боҙомоң бар ҙаһа, һеңлекәш!» Керешге теге хикмәтле им-томона, укынып-өшкөрөп тә ала. «Нервың ҡаҡшаған...»

— Абый, һеҙ целительствоға нисек тотоноп киттегеҙ?

Мөләйем ҡатындың һорауына үҙенән өс-дүрт йәшкә генә өлкәнерәк ирекәй ихлас яуап бирҙе.

— Хоҙайҙан бирелгән һәләтемде флотта астым. Береговой охранда хеҙмәт иткәйнек. Һыуыҡ утрауҙа ятабыҙ асығышып — тукһанынсы йылдар. Ләж тәгәрәне ҡаты сиргә һабышып беребеҙ. Военврач юк, ҡасан килере лә билгеһеҙ, санинструктор — профан. Дуҫымды йәлләп, эй, йыуатам, бит-ҡулдарын, маңлайын һыйпаштырам, бер заман ... эске ағзалары күренгәндәй тойолдо. Һөйләһәң — һүҙ: ҡартәтәмдең әткәйе Николай батша армияһында полковой мулла булған.

— Терелдеме һуң... моряк иптәшегеҙ?

— Терелде. Ике-өс көндән һин дә мин стройға баҫты. Һине, һеңлекәш, яҡындарыңдың, айырыусы иреңдең экспрессив нажимы борсой. Бөтә ереңдә имен-һау, Аллаға шөкөр. Алкоголдән ауырымайһың, — тимәк, Айраты алдан һөйләшкән телефон аша, — юкка шикләнә ирең. Ниндәйҙер... ностальгия, тимме...

— Эйе, абыкай, бик дөрөҫ. Зинһар, ошо фотоны?... — Зилә, хәбәрен үтә шәхсән йомошка һабыштырып, Айрат кире инмәҫ борон типме, ҡупшы ҡул сумкаһынан алып, ҡағыҙ салфетка ҡатламына ҡыҫтырыулы шырпы ҡабындай ғына ярайһы асыҡ рәсем күрһәтте: Барый.

— Кемегеҙ һуң? Йәшермәйсә...

Ханыма ҡыҫҡаса ғына бәйән ҡылырға тура килде. Табип көсөргәнешле ҡараштарын фотонан шәфҡәт туташына күсерҙе.

— Үкенескә күрә, яуызлыҡ ҡорбаны, ахыры... Һеңлекәш, ҡайтҡас, өс көн тыныс ҡына йоҡларһың, шундай установка бирәм. Изге фәрештәләр бәлә-ҡазаларҙан аралаһын барсағыҙҙы ла. Иптәшегеҙ боҙок ауралар менән аралашмаһын... — Нәк шул секундта Зиләнең зиһененән ҡәйенбикәһе, Гусейновтың шәүләһе, сервантҭағы серле сәғәттең ҡара-ҡыҙыл бәрхәте йылпылдап уҙҙы, им-томсо иһә киң йылмайҙы.

— Жәй килең! Аҙналыҡ сеанс зыян итмәҫ. Һеҙләр палатка ҡороп ятыр Идел буйында. Балыҡ күп. Бәшмәк, еләк уңа. Кәнишне, йылына ҡарап. Беҙнең ҡартлар әйтә: алдағы яҙ Ҡариҙел хәтәр күтәреләсәк. Ҡырым яғында полковой мулла булған ҡартәй туғандарға хатын «Өпәле буйҙарын һағындыра...» тип яҙған. Хәҙер ней, то — Ҡариҙел, то — Уфимка. Беҙҙән өҫтәрәк Уфалей тип тә епфәрәләр.

— Э-э, ҡиммәтме һуң ... сеанстарығыҙ?

– Һорамайым. Кеше үҙе белеп бирә. Күпме бирер-бирмәҫен белеп торам бит. Үпкәләмәгеҙ, иптәшегеҙ...

Эйе, эйе, тимәксе ханым ике тапкыр яй ғына баш ҡаҡты.

## 5

Инде нисәнсегә төйнәнеп, инде нисәнсегә иләҫ-миләҫләнеп, Фәнидә тағы Өфөгә юлланды. Был юлы Солтан Хажиморатовичҡа тағылып. Депутаттар наказын үтәр өсөн ул Тарих, тел һәм әҙәбиәт институтына Олотүз, Бураш, хатта Сасын шәжәрәһе буйынса заказ бирәсәк икән.

Динес аша бармаҡсы, борамда оҙаҡ, мәшәҡәтле, имеш.

«Пенсияла ваҡытыбыҙ күбәйерме, тиһәк, киреһенсә... – тип оҙатып ҡалды үҙҙәрен ҡараңғы аралаш Сәйҙә. – Лираға сәләм күндер, Фәнидә. Ә һин, дәүәтай, Әмирәгә фломастер, маркерҙар апкайт, ҡиммәтлерәген ҡара».

Биш минут элек кенә һөйләшкәнсә, Өфөлә ҡанат аҫтарына ҡар һылашҡан ҡарағусҡыл торналарға етәрәк Лира менән Данир ҡаршыланы «Москвич»ты. Әҙ-мәҙ таныш туктальшка, яғалы куртка, тимгелле кәпәс кейгән егеткә сәйерһенгән Фәнидә, багажниктан һәлмәк кенә сумкаһын алған саҡта, ҡыҙына ла һораулы баҡты. «Ҡыҙ ғынаһы әллә никахһыҙ көйө? Әлләсе, улбыл тойолмай». Лираһы, хөрмәт менән ниҙер сутырлап, Хажиморатовичты егетенә таныштыра лаһа.

Данир тәүҙә баһадирҙай ауыл илсеһенә юл өйрәтте. Машина «...циркТан ары, дүртенсе остановкаға» ҡуҙғалғас, Фәнидә, мең төрлө уйҙарға сумып, ара-тирә туң миләш тәлгәштәрен күҙләй-күҙләй, күңелле генә гәпләшкән йәштәр артынан буш ҡул эйәрҙе. Лира подъезда әсәһен саҡ ҡына туктатып, Имаш дәүәтайы әйтмешләй, шифарылыу (еренә еткермәй) хәбәр һалды.

– Әнкәй, ваҡытлыса Данирҙың комнатаһын снимать итәм. Әнийе өйҙә, әткәйе эштә. Миләүшә Ғәлиевна, тиң, үҙеңде, Фәнидә Хамматовна, тиң, йәме.

«Харап, быны ғына белмәйҙер әнкәйе... Күрәһеләре бар икән, бынағайыш! Береһе – педагог, икенсеһе – ғалим, бик етеш торалар, ти. Миләүшә э-э... эре һөйләшмәҫ микән? Күстәнәс-фәләнен килештерһә әле. Мужыт, Данир өсөн алдан уҡ буш квартир тоталарҙыр. Эй Аллам, ҡалай йәпһеҙ...»

Бисәләрҙең икәү-ара тартыныуы сәй артында тиҙ һүрелде. Уңарсы Марс Нәбиевич ҡайтып инде. Бәй, үҙен ябай тота, ауыл, район хәлдәрен һораша. «Иҫке ауыҙға яңы аш, – тип, алдындағы йомшаҡ шарапҡа оронмай, ҡаҙыға йомолдо. – Ағайымдан посылка алғайным Армия көнөнә. Асһам, уҡлауҙай төргәк – эскелтем генә еләк ҡағы, билгә быумалы, правда, бының

ише ауыҙҙа ирерлек бешкән түгел, ә кипкән ҡаҙы. Һәүетемсә телеп кенә, спирт ҡуйып, биш-алты хеҙмәттәште, закусите, господа офицеры, лошадиной колбаской, тип һыйланым. Дә-ә, 23 февралдә...»

Марс Нәбиевич Фәниҙәне күрмәгә эшенән махсус ҡайтҡан, ахырыһы, әле кейенгән килеш хушлашҡандай итте. «Лом тотҡан Бураш Хәлфетдине – бының эргәһендә йолҡош башҡорт... Кеше менән кеше араһы ер менән күк араһылай шул. А-ба, Лира шаптыр-соптор ҡашығаяҡ йыуасы!»

– Килеп йөрөгөҙ, Фәниҙә Хамматовна. Квартира эҙләп йонсомағыҙ Лира өсөн, яйлап табылыр. Уның беҙгә ҡамасауы юҡ.

– Шулай, хаҡ түләйбеҙ, тип тә ҡайғырмағыҙ, – тип йөпләне уны Миләүшә. – Домработницамы, аҫыраумы, тип ҡыҙыҡһынғандарҙан, алыҫ туғаныбыҙ, тим дә ҡотолам.

Тиҙҙән Данир ҙа ҡайҙалыр олаҡты. «Әнкәйем барҙа... никуда ни шагу» типтер, Лира үҙ мәшәҡәттәренә сумды. Бисәләр иһә шыш-быш бүлмәнән бүлмәгә йөрөп, Тайсиндарҙың донъяһын күҙҙән үткәргәс, залға туҡтап, ҙур альбом ҡараштырҙылар. «Урамға сығып йөрөмә, звонок көт – Маратым мобилкаһын ике хаҡҡа елгәрҙе», – тип көлә Солтан ағай. Яҡты күҙҙә кире юлланырбыҙ, тигәйне лә иртәнсәк, Өфөгә инешләй үк, үҙе һаман шылтыратмай. Ваҡыт ҡалһа, центрға барып, краеведческий музейҙағы элекке однокашникты күреп сығам, тип тә өҫтәне, шунда тотҡарланалыр.

Фотолар күп... Миләүшәнең ҡыҙ сағы... «Аҡыл дәфтәре»н яҙған әсәһе... Марс Нәбиевич эфисәр формаһында... Данирҙары мәктәптә... Ә бынау күмәк кеше төшкән «Выпускники... 2000 г.» тигән фотола, бәсмилла, яланаяҡ Тимур Иҙел ярынан өйҙәренә «атай бул» тип эйәртеп алҡайтҡан ирекәй түгелме? Эрзинкә кәмәле балыҡсы инеме шул. Әллә оҡшаған ғынамы? Булыуы ла ихтимал. Был моләйем ағай ҙа бик уҡымышлы һөйләште, шәт. Фәниҙә Тимурҙы әрләгәс, «тиргәмәгеҙ баланы, Эйнштейн да малай сағында бик шуҡ малай булған» тинеме шул, баҫалҡы ғына көлөмһөрәп?

Мәне белгән хужабикәлер Миләүшә Ғәлиевна. Еңелсә генә кейенеп сығып та бара.

– Һин, Фәниҙә, үҙең генә ҡарай тор альбомды, мин улығыҙға фрукты ебәрәйем. Эргәлә генә супермаркет.

Фәниҙә түҙмәне, дипломын хәстәрләгән талибә эргәһенә инде.

**Әсәһе:**

– Һорайым әле... Үпкәләп ҡуйма: бер-бер... загсланмайса эш боҙа башламаныңмы?

**Ҡыҙы:**

– Әнкәй, бер әйттем: мин үҙемде беләм! Һин әтейгә тоғро

однолюб булғастын, мин дә шулай булам... Бар әле, ишек ас, Миләүшә Ғәлиевналыр – звонокка ике баҫтылар.

Тиҙҙән Солтан Хажиморатовичтан мобилка хәбәр ташыны: «эштәрем беште, ҡайтайыҡтыр».

Кисен Солтан Сәйҙәһенә Өфө тәьҫораттарын уртаҡлашты.

– Анау юлы Данир тигәндәрен ҡырҙан ғына күреп ҡалғайным, дастуйын егет икән дә. Һай, ҙурая Уфа, матурая. Элек барғанда ике кешенең бере, нишләргә белмәй, тегене-быны тотоп, торговаться иткән кеүек ине, әле – ике кешенең бере мобилка менән быҒырлыҒын сыға. Ул ҡолағына ҡуйып, ул шнурын ауыҙына терәп. Ҡайҙа ғына инмә – компьютер... Элек ҡатын-ҡыҙ күбемә салбар, быйма кейеп, өшөй-өшөй урамдарҙа лавка асһа, хәҙер аҙым һайын «Бистро», «Роза» йә заграничный яҙыулы кафелар, салондар, аптекалар... Аптырамалы!

## ЭПИЛОГ УРЫНЫНА

*Бармаҡ буйы ғына бер малай*
*Айыуҙы ла йыға, аямай.*

**Барыйҙан ҡалған йомаҡ**

Тәбиғәте менән электән кеше хәленә инә белеүсе соцработник Зәриә яңы эшендә тилбер, өлгөр булып сыҡты: Олотүҙдә һирәк ҡуна, бәрәңгеһе өшөмәҫ өсөн генә баҙын һыуытмаҫҡа тырыша. Әле ҡибла яҡтан һырғаҡ ел өргән иртәлә өймәләм ҡар шығырлатып Сания әбей яғына юрғаланы, сөнки бетон күпер аша барыусы Фасилды күреп ҡалды. Надирҙың санаһына ултырып, туранан эшенә китәләрҙер. Ашантылы рюкзагын һыңар яурынына ғына элеп алған. Фасил ашыкһа, Зәриә ҡабаланһын, бәй, уға Зәбир хаҡында уны-быны төпсөнөү фарыз. Ниҙер белә Лосман – өндәшмәй ҙә ҡуя ыҡы-быҡы нәҫтәкәй.

– Бегемотик, тукра бәкәс, өтөкләнмә.

Туктамаһа ла, аҙымдарын яйлатты егет.

Дилбәр апайының аҡ сүсенкәһен ҡыпандағыраҡ баҫып араларын яҡынайтҡан Зәриә, сәләм дә бирмәйсә, йомошон барланы.

– Ай буйы бергә буталып, Зәбирҙең шухыр-мухырын тәки йәшерәһең, әй, дуралей, әй, класташ? Ҡапаҡлап ҡайтарғандыр, шәт, Атаман!

– Белмәйем... Нәрҫә?

– Ҡара уны, кис тағы киләм Сания ҡорткаға. Динестән иртәрәк ыскын, ҡайтҡастын, һин дә һуғыл, утынын ярып кит. Чауа-ты әбекәйебеҙ бирешә башланы. Кәнишне, йәше шуткы түгел.

– Низнай, малай...

– Низнай дык знай! Ҡара, Хәлфетдин малдарын һыулауға ҡыуа. Хас Ишмай быуай. Ул да ҡара эшкә теләһә нәрҫә белән билен быуа торғайны, ивет, бегемотик.

«Шапаҡ ауыҙ! Дуралей, заяц... Импотент йә шымафый. Яңыны тапты: имеш, ул – бегемотик...» – тип намыҫланған Фасил ләм-мимһеҙ Биргадир йортона бороладо, бошонмаҫ Зәриә ары уҙҙы. Ҡапҡа төбөндә егет аҙ ғына тапаныр торҙо. «Әллә Зәбир абыйымдың саунала «наукой доказано: бисура бисәләрҙең интеллекты ирҙәрҙекенән ун коэффициентка ҡайтыш» тигәне дөрөҫмө? Зәбир абыйы ләпелдәй ҙәһә, дөрөҫө, саунала әллә кемдәрҙән ишеткәнен ҡабатлайҙыр: энзэлар – незаконнорожденныйҙар күбәйә. Россияның һәр дүртенсе балаһы – энзэ хәҙер. Алиментщиктар – ун миллион... Надир ҙа, сәсегеҙ оҙон, аҡылығыҙ ҡыҫка, тип бушка баҡырған тиңме колхозница меҫкенкәйҙәргә? Ай-һай, ә Мая һылыу... аҡыллы. Маянһылыу тип ҡушкан исемде олатайы, метрикаға әнкәйе ҡыҫкартып яҙҙырған. «Насип итһә, Олотүз муллаһынан фатиха алам да, Надир абыйҙы көҙгәрәк Динескә яусыға ебәрәм, Бәпәйҙән имен-аман бушанһын, Хоҙайымдан булып... Боҙоктар, кәнишне, ике ирҙән ике бала тапкан бисә алды, тиерҙәр... Нисауа, өсөнсөһөн Фасил үҙе таптырыр...» Быны ниндәй өмөт быҫкый баҫалҡы буйҙак күңелендә!

...Ысынлап та, хәле мөшкөл Санияның. Ойоп ҡына ята, һирәк ҡуҙғала, һирәк ая́клана. Мәгәр зиһене теүәл һымаҡ. Тамағына бармай, әҙ һөйләшә. Ҡәбер тынлығы хөкөм һөргәндәй һалкынса өйөндә.

– Зәриә ҡыҙым, ҫин сирканмай ғына түшәгемде алыштыр бөгәсә...

– Ярай, әбей, ярай... – Зәриәме һуң тәбиғи әҙәм тормошонан ерәнер ҡатын.

Бал болғаулы эҫе андыҙлы сәй йотоштороғас, Сания бер килке васыят әйткәндәй мығырланып ятты.

– Өйҙө еләт тә Дилбәр белән Фәнидә түтәңде, тағы депутат Солтанды, шунан – Фазылды, Сараһы, ней, кәрәкмәҫ, ишеү... ҫукыр Камиланы саҡыр. Төш мәленәрәк. Сәйҙәне лә әпкил, яңы бәпәйен күреп үләйем. Бутәндәргә дәшмә, ыһ, выраштарға ла. Кәрәкмәй укыл-мукылы, тәвлиткеләре дауна надайыл. Баҡыйлыкта рәхәт күрелер, мужыт, фаныйынан биҙрәлде... Үтә оҙаҡ йәшәһәң дә ҡыйын икән, балаҡай.

Күҙенә гәлсәр йәш эркелгән Зәриә тиҙ-тиҙ өй ҡаралтыһын рәтләп, солан, ҡапка, бәҙрәф тирәһен көрәштергәс, ҡабат самауыр бырлатты ла әбейенән белеште.

– Ысынлап... кеше саҡырайыммы?

— Әстәғим, остандак кыҙыкайҙыр мин ҫиңәргә? — Санияның мөс кенәһе самалы, гәрсә күңел генәһе айбарлы. — Тағы берәй аҙна караһаң, борсолма, алдан бәхилләрем үҙеңде. Сырхауға һуңғы калак ҫыу эсергән кешегә ожмах үҙе ишеген асалыр...

— Бер нәрҫә лә кәрәкмәй, үҙең борсолма, картый (кендек әбейе).

Әйткән кешеләр — Фәнидәнән башкаһы — ул Григорий менән Динес лесничествоһына киткән, тиме, — ел баҫылып, яҙғы кояш иренеп кенә баҙраған арала типһәндәге иң иҫке өйгә йыйналды. Әмирә менән Зөлфиәлә өлкәндәрҙең кайғыһы юк, иптәшләшеп йә телевизор шәрәмәте эргәһендә тыртандай, йә кәнфитле түрбашта тәтелдәй.

— Әссәләм, передауай даяркы! Таныйһыңдыр мине, Сания? — Дилбәрҙең тауышы кешегә дәрт өҫтәгес яңғырай.

— Кейеҙ колак Дилбәрме ҫин? — Сания быны апарук асык әйтте.

— Уй, ҫантый... — Рәнйешһеҙ көлгәндәй итте Дипутат. Үҙен Сания «ҫукыр...»ҙан кыркып кәмһетә күрмәһен типме, сәнсә күҙлеге бармағы калынлык Камила түшәктәге өлкән килендәшен сәләмләргә кыйманы. Мәрәкә-тәләкә кемгә килешә, кемгә юк.

Торарак һарык тунлы, бурһык колаксынлы Фазыл күренде, ул тышта һөйәлле усын шайыклап ике сигәритен һүндергәнсе, әжәл көткән, төпкә баткан күгелйем күҙ кабактарын, һирәк керпектәрен арамйа кыймылдатып, сырхау карсык үҙе телгә килде.

— Фәнидә юкмы ни? Изге ғәмәлдә — яңы эштәме?

— Эшендәлер, Сания түтәй... — Яңырак кына Солтандың юбилейында фотохәбәрсенән касыбырак йөрөгән Сәйҙә яуап бирҙе. Әле ул киң елкәһен йока ғына ак-пак шәлгә, быжыры куйырак яҫы маңлайын көмөштәй парсалы яулыкка ураған. — Бынауы хушбыуҙы кабул ит, — укытыусы-пенсионерка дарыу-маҙарҙы, флакончиктарҙы шылдырып, карауат башына терәтелгән табуреткаға «Гвоздика» одеколонын ултыртты. «Хушбыу»ти, Хажиморатович өйрәткәнсә. Имештер, «буй» түгел, һулышты тәмләткән гөл-япрак төнәтмәләрен, яндырғанда хуш еҫле быу бөрккән үҫемлектәрҙе кешелек беҙҙең эраға тиклем ук кулланған.

Дилбәрҙән янбаш тирәһенә бишкә бөкләүле туҙған одеялын йәтешләп өҫтәткәс, карсык йәмәғәткә кабат өндәште:

— Э-рәхмәт, туғандар, әҙәмгә һанап, сәғәҙәтле йөрөшөгөҙгә... Бәпкәм, әпир үлемтегемде... — Электән һөйләшкәндәрме, Зәриә, корһағына аймап, Солтан квартирант сағында оҫталаған ағас шкафтан һәлмәк кенә марля төйөнсөктө эргәһенә килтергәс, әбекәй, кукле-йәшелле сырыш йөҙөн бороп, корош әйәген һелккеләне. Соцработник төйөнсөктө швабра шыяһы яңы кипкән, әллә касанғы шалы-буяуы димгелләнеп купкан урҙа ялғауынан

ике якка салыш иҙәнгә куйғас, һыңар аяғына тубыкланып сос кына ҡаҙынды ла: «Бумажнигын һорай...» — тине, мыш-мыш көрһөнөп.

Төйөнсөк өҫтөнә тиҫтәләгән биш йөҙлөктәр, меңәрлектәр тәҫләнде, бер аялай унарлык, иллелек, йөҙәрлек башкаланды, буш бумажникты һеңдерә яҙып, тинлектәр тулы боронғо кисет һымағыраҡ бөрмә баулы тос токсай ҡунаҡланы.

— Ҡәберлеге, хәйерлеге, аш-һыулығы — вис бергә, — тигәйне Зәриә, апайы блокнотындағы сүрәһенән өҙөк мөңгөрләп, доға ҡылды.

— Аллаһүммә бикә әсбәхнә үә бикә әмсәйнә үә бикә нәхйә үә бикә нәмүтү үә иләйкән-нүшүн*.

— Шут белгәстен, шөкөр. — Камила ла ҡулға ҡашбираҡ битен һыйпаны. — Әйтәм, былтыр ук пошты ҡыҙыкай, Сания инәкәс гел эре акса бирҙертә, тигәйне.

Аңғарып яталыр, сырхау үҙе асыклык индерҙе:

— Әллә кем итмәй генә әҙәмсә ерләп, буралап ҡуйың. Әткәйем эргәһенә. Әнкәйҙең ҡәберен белеүсе юк. Өлөшлө ит, йүрмә бешереп, шайламай-нитмәй генә... Ясин укырың, Дилбәр.

— Шәбәйә торған да йола бар, — тигән булды уныһы.

— Эй, Хоҙайым, түҙем бирсе бәндәләреңә. — Сәйҙә Басировна бит һыпырмай ғына мөңгөрләне.

— Ашыкмаң, туғанлар.— Саниянның актык васыятын ишетһендәр, тигәндәй, бер килке тынлык урынлашты, гүйә, аклы-ҡаралы донъя тотош телдән яҙҙы.

— Дипутатлар ҡашында әйтәм: окшата-окшатмаймы... өйөмеремде Янбаева Зәриәгә инселәйем. Яҙыу бирһәгеҙ, бадпис һалам хәл барҙа.

— Ҡәрҙәшлеге йыраҡ таһа?.. — Камила баҫалкы ғына һүҙ кыҫтырҙы. — Мәйеле теләгәстен, хуп...

Төйөнсөктө кире төйнәгән Зәриә «куйығыҙсәле...» тигәс, апайы Дилбәр бит һыпырып әйтте: «Тәүбә-тәүбә, нәҙере сауаптан, доға ҡыл. Шайтан ишетмәһен — ҡартыйың бирә ләһә. Ишембайҙан улыма телефон бормағыҙ, тилиграм һукмағыҙ, тип ята, ана».

Инде ирҙәр йәнләнде.

**Солтан:**

— Аксаһы бар апайҙың. Нотариусһыҙ булмай. Килһә, боҙоң күтәрәме? Берәр меңен тотонорбоҙ...

---

*Мәғәнәһе: «Эй, Аллаһ! Һинең ҡөҙрәтең менән беҙ иртәнгә тиклем йәшәнек, һинең ҡөҙрәтең менән беҙ кискә тиклем йәшәрбеҙ. Иәшәү өсөн Һин беҙгә тормош бирәһең, Һин унан мәхрүм итәһең һәм хисап бирер өсөн яңынан терелтәһең».

**Фазыл:**

– Лапы һалғайным, шәреһе таңға туңаҙый. Давай, Солтан, икәү йөрөп әйләнәйек! Миңәргә пенсионныйҙан район түткәләре дәшкән әле.

* * *

Тышта ла буран, Сәмерхановтарҙың ҡаҙна төҙөткән йортонда ла...

Сихри күҙрәткә эйә күрәҙәсенең Зиләгә танышҡан-ҡапшаған арала «өс бала...» тиеүен төрлөсә юраған Айрат аҙна буйы кенәсел иҫендә йөрөттө. Шәмбе көнө хакимиәттән кәйефе һүрелеп ҡайтты. Ник һүрелмәһен, погонлы вә погонһыҙ органдар «Сасын» кооперативындағы припискалар, элекке «Родина» колхозынан унлап мөгөҙлө малдың «канатланыуы» менән ҡыҙыҡһынмаҡсы... Әгәр Байрамов фарманы-фатихаһы буйынсараҡ соҡонһалар, Фәсхетдиновка ла, Тимерәйевичка ла түләү һалыуҙары, шухыр-мухыр шойканының яҙатайым Сәмерхановка ла ҡаҡлығыуы мөмкин: ҡайтты ла был, оҙаҡ ҡына күңеленә толка тапманы. Ә бисәһе... ҡыҙы Ураниәне музыка мәктәбенә үҙаллы ебәргән дә, Айраттың былай ҙа киренке йәнен үртәп, фирменный дивандарында бөршәйеп кенә ике беләген яҫтыҡ иткән. Көпә-көндөҙ. Имеш, Ҡариҙел үрендәге самородок-парапсихолог абыҡайы уға өс тәүлек йоҡларға установка биргән. Бирһә ни, етенсегә әйләнә хәҙер Ер шары, хәлбүки, ҡабырғаһына әйләнергә һәм «өс бала...» ғилләһен хәләл иренә харамлашмай ғына аңлатырға күптән ваҡыт. Быйылдары ҡаршы ла әйтешкеләй.

Уяна һалды Зилә, артистик хәрәкәттәр менән атлап та китте.

– Еҙнәм лотерея откан, барабыҙ, тинек.

– Үҙең генә ... Аяҡ тартмай...

– Ниндәй характер: ете ят Клара ҡыпыш итһә – спринтер, родной ҡайнтүткәһе дәшһә – стайер.

– Марафонистка характерылыр миндә... – Зилә уйынға һабыштырмаҡсы, Айрат уйындан уҫмаҡ ҡуптармаҡсы.

– Марафонда дальше-больше не бывает: 42 километр плюс 137 метр – историяға билдәле дистанция. – Ҡасандыр вузда еңел атлетика менән мауыҡҡан Айрат артабан мәкерлерәк ныҡышты. – Ә бисәмдең гинекологик историяһын... Иҙел үрендә ишетәм. Беҙҙең бала икәү, эйеме?

– Үҙең көсләп апарҙың да, бына ғәләмәт. За перепись российский медаль алдың! Унда аборт мәғлүмәттәре...

– Прошу не издеваться! Ә ниңә әйтмәнең? Что за секрет?

– Айҙар Саматович академияларға, престижный курорттарға сапты, ә мин айҙар буйы баксала сокондом. Короче, Уралды тапкас... айырылырға теләнем. Әле лә... если хочешь знать правду!

Сәмерханов урттарын сәйнәп кейенә башланы. Ҡатыны тиҙ үк ҡайтымһаҡланды.

– Йәйәү генә бар. Еҙнәй ҡыҫтай тип, мулыкма.

Тыңлайҙыр көсө еткәнгә көсөктәй Сәмерханов: киҫәткәндең киреһен эшләне һәм...

Һуң ғына, бөләңгерт яктыртылған эске урамдан шәхси «Волга»һында коньяктан ҡыҙмаса ҡайтышлай, былтыр көҙ үҙе токтомалға төпкәрәк шылдыртҡан ларек тирәһендәрәк ней иҫерек, ней айык ҡатынкайҙы бәрҙереп уҙҙы. Выжданы етте Айраттың – һыпыртманы, шып туктаЛДы. Ҡорбаны... һис имгәнмәһә лә, ҡолаған еренән имгәкләп ҡалкынды, үҙен кем тапата яҙғанды таныған, сарбайларға кереште. «Күҙең тонғандыр, райзам тигәс тә... мунсанан ҡайтып барған кешене юрамал төртөп йыҡтыңмы? Скорый саҡыртмаһаң, знай, милицияға йүгерәм...»

Айрат та алама. «Сеү, үҙең төртөлдөң! Әйҙә, Зилә аҙашыңдың спирты бар...» Ыкка килә башлаған ларексы берике рюмка һелтәгәйне, яңы көс менән оторо һөжүмгә күсте һәм таң беленгәндә генә, Сәмерхановка «досты» Гусейнов бүләк иткән швейцар сәғәтен услаған ҡына, ҡайтып китте.

...Был аҡылды, фажиғәүи бәләнән ҡотолдом тип, аңкы-тиңке башын тотоп ултырған Айратка ҡатыны биргәйне. Ҡайҙан тапты икән серванттың аскысын, ә барҙа бәрхәт ҡумта ятканын? Айрат «секрет» аскысын Зиләнең буйы етмәҫлек ярыкка йәшерә ләһә. Һо, ҡиммәтле ине сәғәт. Елдән килгән – елгә киткән, ятмағаны яҡшы йән көйҙөрөп.

* * *

Әүлиә микән, тип аптыраны аҙна буйы иң ситке өйҙән сығышмаған Зәриә: әйткән көнө вафат булды тукһанды ҡыуған Сания әбекәйе. Тәрбиәле ерләнеләр үҙен. Зыяратка, үҙе Фазылдан йәй үк билдәләткән гүренә юл ярыуы ғына ауырға төштө. Надир ҡәйнеше, исмаһам, көр бейәһен менеп һукмаҡ тапатһа, укаһы ҡойолор инеме? Әллә оло еңгәйенең «...өйөмдө – Зәриәгә» тигән васыятына эсе ҡайышты, белмәҫһең, ҡәберен йәй имәндән буралармын, тип кенә вәғәҙәләне лә, йөрәге сәнсеүенә һылтанып, халәтенә күрә хөрмәтһеҙ атама тағылған Биргадир урамында бөтөнләй һерәндәмәне. Ир солтаны Хажиморатович бөтәһен дә һәүетемсә ойошторҙо: егет-елән айык баштан юлын да көрәне, ҡәберен дә тәрән ҡаҙҙы. Иллешәр тәңкәгә әүрәгәндән түгел...

Фәнидә, Сәйҙә, Сара түтәйҙәр ҙә маладистар – Дилбәр апайы ыңғайына мәйет йыуышырға ла, аш-һыу әҙерләргә лә өлгөрҙөләр. Фазыл «яңы кәмә ҡағам» тигән үҙе оҙон, үҙе ҡалын ике таҡтаһын йәлләмәне. Мәрәкәләне әле: «Боронғо дәүәтайҙар һымаҡ, йыуан өйәңкенән цельный, һелкәүес һымаҡ дәү кәмә соҡоп-юнып алам да, балдыҙкайым-яңғыҙкайым, һине Силәбегә тейәп ағыҙам». И, Ҡариҙел кирегә аға шул. Аҡһын... Еҙнәһе, биш йөҙ һум бирәбеҙ, йыназаға кил, тип тә шылтыратҡан Олотүҙ муллаһына. Боҙ алама бит, тигән теге. Ҡурҡалыр, бәләкәй сағында олораҡ малайҙар, шаярышып, һыу төбөндә тонсоҡтора яҙғанғалыр. Майор Руслан, ана, бер ҙә ҡурҡмаған, хатта хром итеген еүешләтмәгән дә. Руслан тыныс ҡына ҡарамаған кеүексе, ә был ҡараш бик оҡшай Зәриәгә. Ул да буйҙаҡ, Зәриә үҙе лә... пашти тол бисәкәй.

...Байрамов районға баш-түш икәнен етәксе кадрҙарҙы шахмат фигураһы һымаҡ шылдырышта ла эленән-әле раҫлап алғылай. Әлбиттә, Урманшинса «бер һыҙғырып» ҡына түгел. Социаль мәсьәләләр буйынса урынбаҫар ханымдың «ғаризаһына ярашлы» хаҡлы ялға китеү үтенесе кире ҡағылмағас, шуның өлгөһөндәме, Сәмерханов та Байрамовҡа инеп сыҡты һәм сам менән замдың икәү-ара бик етди әңгәмәһе булды, хатта приемныйҙағы секретаршаһы оҙаҡ аптырашҡа дусар ителде. Тәҡдим: ризалашһа, тиҙҙән Сәмерханов юл төҙөү идаралығына күсәсәк. Әлбиттә, начальник вазифаһына. Урынына кемде ҡоҙалауҙа... Айраттың ҡыҫылышы бәләкәй... Әҙме ни районда ханымды ханым, ирҙе ир алыштырырлыҡ кандидатуралар. Айгөл Карамовна, миҫалға, кемдән кәм? «Һин алдан тыуһаң, мин белеп тыуған» тигән холҡон әҙ-мәҙ үҙгәрттеме, Амантаев хаҡында ла уйлашырға мөмкин. Ваҡыт бар, орҙо-бәрҙе генә хәл итеүҙе яратмай кадрҙар политикаһы. Ә политиктар араһында көслө шахматсылар осрамай.

...Рәсәй Федерацияһының тәүге Президенты Борис Николаевичтың да йөрәге тибеүҙән туҡтаны. Нәҡ халыҡ-ара матәм көндәрендә Фәнидә Өфөгә – инде нисәнсегә! – юлланды. Нисек йәшәй әле Тайсиндарҙа ҡыҙы? «Юл төшһә, беҙгә инерһегеҙ әле, Фәнидә Хамматовна» тип саҡырған Миләүшә Ғәлиевна... хат яҙғансы, Лираның телефоны буйынса шылтыратып ҡына ебәрһә лә булған? Хәйер, хат аша саҡырыуҙың аты олораҡ. Әллә... түй мәшәҡәте көтәме Тайсиндарҙы? Ихтимал. Миләүшә әллә ни йомошһоҙ хат яҙып һалмаҫ, шәт.

Марс Нәбиевич бер килке Ельцинды «популист, теннисист... бер ҙә рельсҡа ятманы. «Кайһы ил бәхетле йәшәй?» тигән опроста маҡтаулы Федерациябыҙ... йөҙөнсө баҫҡыста. Зимбабвенан әҙ-мәҙ алдараҡ!!! Беҙҙең ише күпселек ун меңгә шөкөр итә, Чу-

байс ишеләр, министр-һинистрҙар миллион зарплатаға ла туймай; һәр беренең загранпаспорты бар: Күпме тармаҡты, нисәмә производство дилбегәһен олигархтарға тотторҙо... тимәк, лжепатриоттар, илдән ҡасырға әҙерҙәр», тиеберәк телгә алһа, Миләүшә Ғәлиевна «реформатор, «йота алырлыҡ» суверенитет өләште... ысын демократ» юҫығында маҡтаны. Бәй, ҡайныҡәйнәһе лә Ельцинды президентлыҡҡа һайлағанда берҙәм булманы. Марс Нәбиевичтың аргументы ҡалай көслө: «Райкин әйтмешләй, дико извиняюсь; 90-сы йылдан... 15 йыл үтте, ә Рәсәй әлекке рубеждарҙы һаман яуламай». Имаш ҡарт тәүҙән ямանланы Badisten Бористы, телевизорҙан йыуаныс тапҡан сирләшкә әбейе Зюгановты маҡтап бөтә алманы. Тик уҡымышлыларҙың хәбәре башҡасараҡ шул.

Кәңәш-төңәшкә Данир менән Лира ла ҡушылды.

Туйҙарын йәштәр Бураштa уҙғарырға дәртләнә, имеш. Моторлы кәмәлә Олотүзгә сығып, ЗАГС-ка инәсәктәр. Туйҙа кеше лыхыр йыйылмаһын...

Регистрацияла шаһиттарҙың булыу-булмауы шарт түгел, мәгәр күршеләге Александр туйҙарынан ҡалмаясаҡ. Ментовкала эшләгән Варвара ла, тип ебәрә аспирант Тайсин. Юғиһә, баш ҡалала, инкубатор конвейерымы ни, – Никах теркәү йорттары көнөнә 50–60 пар менән тула. Императрица Екатерина II каретаһы һымаҡ фонарлы экипаж яллаһаҡ, ти мәрәкәле итеп Лира, ике сәғәткә егерме мең кәрәгәсәк. Машиналарҙы таҫмашарҙар, балдаҡ менән биҙәтеү ҙә генә кәмендә шунса хаҡҡа төшә, имеш. Бер көндә ыштанһыҙ ҡаласаҡ Данир ише аспирант кейәүҙәр, әйеме.

* * *

Туй – ауыл менән, ел – дауыл менән: йәштәрҙең йәшел туйы Бураш – Сасын – Олотүз ауылдарының берлектәге Шәжәрә байрамына тура килде. Ғәләмәт! Машина юлынан машина ағылды, Ҡариҙелдә бер заман биш-алты кәмә сайҡалды, ярында үҙ шәжәрәләренә битараф маңҡорттар ут яҡты, табын ҡорҙо. Танкист дөм ята, ә Фасилдың ишкәге аҡса һуға! Кеше башына унарлыҡ һонһаң, ҡуй, тимәй башлаған да егет. Тиҙ үҙгәрә икән кеше.

Хакимиәттең социаль мәсьәләләр бүлегенә күсеп, әлегә үҙ машинаһы менән райүҙәккә иртәле-кисле елдергән Айгөл Карамовна барса халыҡты кисә генә тотош илдә байрам төҫөн алған Рәсәй көнө, яҡташтарын Шәжәрә йыйыны менән ҡотлағас, ҡоласлы тантанаға – Башҡортостан менән Рәсәй берләшеүенә 450 йыллыҡҡа әҙерлекте лә барларға онотманы. Артабан оратор бая ғына Олотүз ауыл Советында никахтарын теркәгән

ике йәш ғаиләгә, шул иҫәптән Тайсина-Кәримова Лира Барый ҡыҙы менән Тайсин Данир Марс улына мөхәббәт һәм бәхет теләне, сибәр кәләштәргә сәскә, халыҡты геү көлдөрөп, йәш ирҙәргә бәпәй ҡурсаҡ тотторҙо. «Әтис-герой булыр минең онОҒОм!» — тигәйне Ғәлекәй ҡарт, хатта ҡул сабып ебәрҙеләр. Фермер оноғона күрше ауылдан кәләш әйттерҙеләр бит, йыуанһыҡ ҡына һатыусы ҡыҙҙы. Харап, туй күлдәге Лиранықынан да затлыраҡ. Сибәр тигәндән, уғата матур тойолдо Айгөлгә Лира... Ир-ат, ғәҙәттә, бер-береһен матур тимәй, ә ҡатындар ҡыҙҙарҙың матурлығын маҡтанымы, алдашмай торған. Аҡ-пак туй күлдәге генә түгел, бәхет хисе матурлайҙыр, һөйгән йәренә ышаныс гүзәл яһайҙыр кешене. Ана, Аҡшиҙенән килгән туғандары, Өфөнән килгән урыҫ дуҫтары араһында ҡалай илһамлы йылмая атаһыҙ үҫкән ҡыҙ бала.

Амантаев иһә, Байрамовтың беренсе урынбаҫары, төштән һуң Фәнидә апайының ҡалҡыуҙағы өйөндә уҙасаҡ туй мәжлесенә мотлаҡ барасаҡ. Паром аша, служебный ҡара «Волга»ла. МЧС-тың зәңгәр катеры уның ҡушыуы буйынса эшләй бөгәсә, бер уйлаһаң. Никтер ҡапыл, һис көтмәгәндә замлыҡҡа тәғәйенләнде, тиҙәр Амантаев хаҡында элек Сәмерхановҡа арҡаланған төрлө ойошмаларҙағы түрә-ҡара. Хатта, һи, ҡамытын оҙаҡ кейер тиһеңме шул ата башҡорт, тип шикләнеүселәр ҙә осраштыра. Эшләр Амантаев, эшләрҙәй натура, Байрамов та, ошондай шик осҡоно осорон алдан күрепме, әйткән үҙенә: «Типһәң тимер өҙөр сағың. Партизанщинаңды ғына бөтөр». Нимәгә ишаралағандыр, Айгөл өсөн быныһы ҡараңғыраҡ. Дыуамаллыҡ төшөнсәһенә бәрәбәр түгелме? Әлләсе, һәр хәлдә, ҡай саҡ ирҙәрҙе биҙәй ҙәһә саялыҡ. Ошо арала Сәмерханов Сасын — Бураш араһындағы йырынды рәтләргә һоҫколо-һөргөслө «Беларусь» ебәрәсәк, аҙаҡ ул техника яңы фермаға бөтөнләйгә ҡалдырыласаҡ. Быға бик ҡыуанды Фәнидә!

Айгөл Карамовна урындағы яңы хакимиәт башлығы эргәһендә — уныһы коммерсант, нишләр яңы посында? — сәғәтенә ҡараны. Алыҫ ерҙе яҡын итеп, бына-бына Силәбенән фирмач ҡәрҙәшенең, Сара еңгәһе әйтмешләй, «джибы» күренәсәк. Юл аҙабы бит, тантаналы өлөшкә әҙ генә өлгәшмәй рәсми саҡырылған ҡунаҡ, мәгәр уға, спонсорҙарҙың береһе булараҡ, шәхсән әҙерләткән альбом-шәжәрәне тапшырасаҡ Айгөл. Микрофон аша Солтан Хажиморатович — полководецмы ни, ҡулына указка ла тотҡан — мәҙәниәт йортоноң рәшәткәле майҙанына лыҡа тулған олоһона-кесеһенә ҡыҙыҡлы мәғлүмәттәр еткерҙе. «Шәжәрә — тарихҡа тәрәҙә» тип башламаҫмы телмәрен. Баҡһаң, төбәктәге мең, өпәй, ғәйнә, мишәр, сыуаш һәм мари, казачий һ. б. башҡа зат-ырыу, киң Иҙел айырһа ла, өс быуат буйы самаһы бер төптән йәшәй, имеш. Тарбаҡлы тирәк олоно ише

«шәжәрә ағастары» – һөйәүле стендтарҙы ҡараһаң, Янбаевтар менән Кәримовтарҙың нәҫеле тамырҙаш икәнлеге күренеп тора. Тимәк, өйләнеү мәсьәләһендә ҡандаштарға абайыраҡ булыу фарыз... Кавалерист Илһамов Хатип нәҫеле революцияға тиклем Аҡшиҙе яғында йәшәгән – быны 85 йәшлек ветеран Хажиморатовичҡа үҙе һөйләп, дәфтәренә яҙҙыртҡан.

Халыҡты аптыратып, Хәлфетдин оҙон көйгә ҡалай мәғәнәле йыр һуҙып ебәрҙе:

*Мал кәрәкмәй, дан кәрәкмәй,*
*Дуҫтар, миңә ил кәрәк....*

Олотүз муллаһы микрофон шаңғыртып һуғышта баш һалған яҡташтар хөрмәтенә аят уҡыны.

...Бынан ары өлкән Тайсиндарға килендәре Лира, туй алдынан Өфөләге дөйөм килешеүҙе иҫтә тотоп, «ҡайным, ҡәйнәм» тип өндәшәсәк. Эйе, эйе, Фәнидә ҡоҙағыйҙарына Данир кейәүе иһә «мам» тимәйәсәк. Кешенең атаһы ла, әсәһе лә берҙән-бер генә була, ти ҙәһә Марс Нәбиевич. Уныңса, ҡайны, ҡәйнә, килен, кейәү, балдыҙ, ҡәйнеш кеүек терминдары мең йылдар элек үк башҡорттоң тел-лөғәтендә нығынған, ә ниңә йәштәр предки, пап, мам, бабуля, дедуля тип маймыллана. Ярамай улай.

И, тормош... Нәк был мәлдә иҫерек Зәбирҙең үҙ өйөндә ыхбых иламһырауын күптәр белмәне лә күрмәне. Арыу ғына донъяһы, етеш кенә ҡаралтыһы кемгә хәжәт хәҙер? Зәриәһе килешле гражданский кейемдәге майор Руслан менән Барый мәрхүм ҡыҙының өй тулаһы туйында бер-береһенә яҡын, ҡултыҡлашып тиерлек йөрөп яткас. Лира Уфала кейәү тапҡан, ти ҙә әнеһе. Һөмһөҙ әнеһе әлүктән: «Абый, өйөң пашти пустует – еңгәм аръяҡтан ҡайтышмай, бер әбейҙең иҫке ыҙбаһын рәтләгәнме. Һин был йортто һалғанда әнкәй – аҡсалата, мин ҡул көсө менән ярҙам иттем. Әллә... бәхилләп кенә китәһеңме?» – тип ҡыҙыша. Вәт, әй, былағай тиһәң дә, әҙергә бәҙер генә тора. Китә – китмәй, ни эше бар?!

Зәриә өйөн йыйыштырып ҡына ҡасҡан кисә. Силәбе ҡунағы менән ҡайтһа тип, һыуытҡысты хәленсә аҙыҡ-түлек менән тултырған. Тик үҙе – юҡ, ҡабат булмаҫ та кеүек. Запискаһы ята: «З! Минең ғаризам судта ята – яҡшы саҡта айырылышайыҡ. Һин дә яҙып ҡалдыр. Зәпүшкәгә алимент – үҙ намыҫыңда... Үпкәләштән булмаһын. З».

Зәбир, әлбиттә, осоп-ҡуныпп Бураштағы бөтә ир-атты яңғыҙы ла тәкмәстерер ине – әлегә уның тарамышы беше! – юҡ шул, беләк көсө менән генә йән яратҡан йәрҙәрҙе кире ҡайтарып булмай; тешләр ине – терһәге йыраҡ. Ә бит элек, Зәриәне һағынып, Иҙелде йөҙөп тә сыҡҡыланы. Их, ниңә генә үпте икән

слеттан ҡайтышлай Зәриәне – уҡыусыһын Ҡултөбәктә. Ниңәлер икәүләшеп артҡараҡ ҡалғайнылар, эх-ма!

Былтыр ғына Марат әтмәләгән беседка кеүегерәк ҡорама тирәһенә батмус-фәлән, таҫтамалға күперем икмәк төрөп тотҡан туйсылар йыйылған; өс-дүрт машина шәйләнә. Бик күпшыһы – фирмачтыҡы. Теге Марс Нәбиевичтың яҡташы татар еңгәсәй менән ирәбе генә йөрөп ятҡан көнө.

«Типтәрҙәр ҙә осрай, – тине тарихсы, шунан күҙлеген сисеп тороп өҫтәне. – Мин шәхсән «типтәр» терминын «дәфтәр» һүҙенән тип уйлайым, сөнки борон монгол ғәскәрендә «дэптәр» тигән халайыҡ та булған».

МЧС яҙғы ташҡында уҡ Олотүҙдә катерлы пост ойошторғайны. Штатный ҡотҡарыусыларҙың командиры менән һөйләшеп, рулгә Руслан йәбешкән. Ҡойроҡта – Зәриә менән Александр – шаһиттар. Асыҡ кабина тирәсенә тотоноп, Лира менән Данир арьяҡҡа – ата йортона ирле-ҡатынлы булып юллана. Күр, Иҙел һыуҙары ла йәйрәп яҡынайған кеүек.

Зәңгәр катер яра зәңгәрһыу Иҙел тулҡындарын. Яр башынан бала-саға ҡул болғай. Араларында – Тимур, Вәлит һәм, әлбиттә, Әмирә менән Зөлфиә. Эреле-ваҡлы шар тотҡандар, ә йәшел туй уҙаһы иң ҡалҡыу, янып торған йөрәкте хәтерләткәне өйөрөлөп-сөйөрөлөп баҙрай, уныһы хатта Олотүҙдән үк шәйләнә. Ҡалҡыуҙағы йортта шығрым тулып, гөрләп уҙҙы туй.

Эңер-меңер. Аҫҡы урам тулып, бер көтөү йәш-елкенсәк Тайсиндарҙы Имаш йортона оҙатып барҙы. Ҡушылырға, әлбиттә. Зәриә үҙе сығарған таҡмаҡтарҙы һүтә генә, ә фотоаппаратлы Марат өҙә баҫып бейеп алғылай.

*Сәғәт әле ун тулмаған,*
*Ун бергә ҡарамаған.*
*Әйҙә, киттек түбән оска,*
*Туйсылар йоҡламаған.*

Дилбәр менән Зөлфиә тора ҡапҡа алдында. Дипутаттың ҡушыуы буйынса, ҡыҙыҡай алаҡандан килеп, кәләш менән кейәүгә йөн башалтай тотторғайны, үҙе усын тултырып еҙнә аҡсаһы алды.

*Анау юлдан берәү килә,*
*Ҡыҙыл кәпәс, күк яға.*
*Тыҡырыҡта ят сиратка,*
*Туй үткәрәм покаға.*

Бәлеш, эргәләренән спининг тотҡан спорт костюмындағы Александр (Марс әйтмешләй, Александр Лексеевич) менән бик шәп «еҙнә бәкеле» Тимур, йәнә милиция пилоткаһын ҡырын һалған йәш мәрйә ҡыуып-уҙып китте... Шурик һөйәркәйе Вар-

вараһына үҙенең былтыр көҙ дәү суртандар һөйрәкләгән ятыу-ҙы күрһәтмәкселер. Март айында килә алманы бит, Тимур көтһә лә. Буран хәтәр булған, ҡар хәтәр яуған...

Барый һалған йортта гөрләп уҙҙы туй. Йәштәргә ҡулдан машина алырлыҡ аҡса төшкән, тинеләр аҙаҡ.

Беседкала Фазыл менән Марс, а-ба, килештереп «Шампанский» һемереп ултырмаһынмы! Эргәләренә барышлай, Миләүшә яҙа-йоҙа ишетеп ҡалды.

– Мин боксер инем дә ул! Бер ике мент вытрезвителгә әпкитмәксе ине, бәр ҙә осор тегеләрҙе – ҡас та кит шунан. Эй, эҙләйҙәр көтөүе менән. Мин момент туғыҙынсы ҡатка менеп өлгөргәйнем.

– Марс, ниңә юкты шаштыраһың ҡоҙаларға? Ҡайтыу менән система ҡуйҙыртам, валлаһы.

– Бөттө, бисәкәй, бөттө. Бына Фазыл ағай менән әҙерәк кенә кәгәбеҙ: танышлыҡ өсөн. Бынау бесәй бәхетле микән, тип баш ватабыҙ әле...

Уңарсы Фәнидә ҡоҙа-ҡоҙағыйын тәҙрә аша ҡайтырға димләне, Сара иһә туйҙа ҡайкайып бейегән Фазылына аҫтан ҡул болғаны. Өлкәндәрҙе Солтан Хажиморатович мәжлескә йыя, былағайланмағыҙ...

Өфөләр Амантаев менән йылы һаубуллашты. Шәп түрә, йомарт ағай. Яңы фермаға егерме күс күсерткән, әле йәш ғаиләгә шәхси умарталығынан ике иң көслө умартаһын вәғәҙәләне. Быға, йәштәрҙән бигерәк, Фәнидә апайы бик һөйөндө. Елдерҙе Амантаев борам юлына. Уға ял хәҙер һирәк тәтей, буғай. Түрә тиһәң дә, йүнле фатиры юк әлегә райүҙәктә. Үҙең ҡайғырт, ярты хаҡын ҡаплабыҙ, тигәнме Байрамов-түрә.

*Ҡара ерҙә тракторсы*
*Бураҙналарҙы йыра.*
*Бесплатно туй үткәрәм –*
*Шешәләп эсһәң һыра.*

Ни күрһә, шуға бәйле таҡмаҡ сығара Зәриә. Фасил яңы ферманың «Беларусь» тракторын дырылдатып, Биргадир урамына елдерҙе. Кабинаһында элекке көтөүсе Хәлфетдин дә китеп бара ҡукырайып. Фасил иртәгә Динескә йыйына, Надирҙың аты-арбаһын алып, Камила ҡарсыҡты ултыртып. Ай ярымлыҡ бәпес – Ришатты күрһәтә. Әсәһе Сара әйткәс, дөрөҫтөр.

*Таңғы әтәс ҡысҡырғанда,*
*Ауыҙ аса Хәлфетдин.*
*Туйҙа эсеп, туйҙан ҡайтҡас,*
*Бер сокорға һәлп иттем...*

«Никах та укыттығыҙмы ул?» – Шыпырт ҡына белеште Зәриә ҡапҡаны асҡанда Лиранан. Уныһы, «кушар еңгә» ролендәге ҡатынды ярайһы көнләштереп, әҙ-мәҙ болокһоулатып, ыңғай яуап бирҙе. «Бөгөн иртәнсәк Сипайловолағы мәсеткә һуғылдыҡ тәүҙә. Диплом алған көндө кескәй генә мәжлес ҡорам. Әнкәй менән килерһең, йәме, түтәй?» – «Куй, әнкәйең, бында йыуҙыртам, ти ҙә».

*Тау аҫтында, тау аҫтында*
*Һалҡын шишмә сылтырай,*
*Ҡоҙағыйым бейегәндә,*
*Балтырҙары ялтырай.*

Ҡыҙын етәкләгән Валентина, дачник тапҡырына еткәс, тәүҙә Лираны, шунан Данирҙы үпәсләне лә, ҡулдарын ҡыҫҡас, Сасын айырсаһына ҡайырылды.

*Умывальник, умывальник,*
*Умывальник һыу һорай.*
*Кисә генә таныштайныҡ*
*Бөгөн ҡульяулыҡ һорай.*

«Кушар еңгә» Зәриәнең таҡмағы бөттөмө, бер килке Бураш серле тынлыҡта күмелде. Имаш өйөнән сыҡҡас, Зәриә «Вояж, вояж...» тигән яратҡан көйөнә хисләнеп, берсә ай яҡтыртҡан, берсә ҡараңғыға сорналған һирәк шыршылар араһына ҡыпаңланы. Шаһиттар кәрәкмәй, ул ... Р. менән осрашасаҡ! Дилбәр апаһы уның был шымбаҫарлығын һиҙенә, тик әрләмәйсе... Хатта хуплағандай һымаҡ.

Руслан, нәҙек ҡайышы менән төрөп-быуып, яурынына аҫып алып сыҡһа ине «офицерский» плащ-накидкаһын. Сирәм еүешерәк әле, юғиһә. Яҡшы атҡа – ҡамсы, яҡшы йәргә яусы кәрәкмәй, тигән һымаҡ, улар бер-береһенә көндән-көн ныҡыраҡ эҫенә барғандай. Эҫенһендәр. Уларҙың да бәхеткә хаҡы барҙыр бит донъяла? Их, «длинный садись...»

...Бер бөртөк кенә ҙур ҡыҙыл сәскә аҡты Ҡариҙелдән. Уны катерҙан атаһы иҫтәлегенә һыуға Лира һалды, ярлау ситендә ҡоҙа-ҡоҙағыйы менән балаларын көтөп торған Фәнидә күҙенә йәш алды.

* * *

Оҙаҡ ҡайтты дарьялай йәйелгән һыу. Хатта балыҡ яратҡан дачниктың селтәрле баҡсаһына ярты метрлыҡ сурағай инеп ҡалған, тинеләр.

...Көҙгә табан хәтәр ҡойон аптыратты. Тимур Аҡшиҙелә ҡалғайны, ҡунаҡтан ҡайтып йәш бәрәңге ҡаҙып йөрөгән Фәнидә ҡурҡышынан беседка яғына йүгерҙе. Ҡараһа – өйөнөң башы ҡыйшайған. Иләп кенә менгәйне, саң, тупраҡ ялмаған чехоллы мылтыҡҡа юлыҡты. Уны участковыйға биреп ебәрер әле, ятмаһын әҙәм өркөтөп. Депутат Солтан Хажиморатович Сәйҙәһе менән йүгерешеп килеп еткән. «Беҙҙең йортҡа бер ҙә зыян ҡағылманысы. Ҡайғырма, Фәнидә, ауыл Советы, фермаң ярҙам итер...»

Күҙен ыуғылап, Әмирәләре килеп етте. Ул хәҙер бурашса ләпелдәй генә.

– Дауыл осорҙо дәүатайым эшләпәһен, ынтырҙан таптыҡ әнкәй белән...

– Бәрәңге соҡой ине Солтан. Ҡойон ҡапыл шаулап, әй, ҡоторҙо!

Бер аҙ иҫ-һуш йыйған Фәнидә:

– Уф, Аллам, килер ҡаза ошоноң менән бөтә күрһен берүк... – тине, ғәмләнеп. – Кешегә рәнйемә, уртаҡ төшә, тигән анауы дәфтәрҙә.

Оҙаҡ ҡына ары-бире йөрөштөрөп, Солтан монаят мылтыҡты үҙенә алырға ҡарар итте.

– Һаҡлайыҡ әле Барыйҙың төҫө итеп... Милицияла теркәтәм дә, был нәрҫәне тотонһам тотонормон, тотонмаһам... Тимур үҫә ләһә.

Милиция тигәндәй, Динескә барышлай, Солтанға кисә участковый һуғылып уҙҙы. Ҡыҙы уҡырға ингән, бик һөйөнә быға. Гәпләшеп ултырҙылар. Баҡһаң, Иҙел үрендәрәк лапы, ләм, ҡарағура баҫҡан ҡылыла... һөлдәле кәмә табылған. Селәү соҡоп йөрөгән малайҙар юлыға. Ҡурҡышып ҡайталар – аталары прокуратураға шылтырата... Баш һөлдәһендә пуля тишкән эҙ булғанға оҡшай. Эҙәрмәндәрҙең үҙ хәкикәте: хәтерләйҙәр – ҡасандыр ошо яҡта пистолет урлаған ике рецедивист тотола, шуларҙың енәйәте булыуы ла мөмкин. Берәүһе колонияла туберкулездан үлер алдынан тәүбәгә килә: «Ярлыҡаһын Хоҙай. Киң, алҡын йылға ярында бер ғәйепһеҙ балыҡсының башына еттек. Свидетель булмаһын тип ...»

Хоҙай ярлыҡай тиме ундай ҡәбәхәт яуызлыҡты?!

Тупыс бармаҡ ҡалдығы буйынса ентекле тикшерһендәр, шәһит киткәндең криминалдың сәбәбе юғалыуы... Кәримов Барый Имаш улы булыуы ихтимал. Бармаҡ буйы... Айыуҙы ла йыға... Тимәк, пуля. Тимәк, Барыйҙың ҡасандыр: «Бәләкәй генә бер малай, айыуҙы ла йыға, аямай», тип Маратка (Марат – Солтанға) ҡыҙыҡ өсөн генә өйгән йомаҡтың сиселеүе мөмкин дәһә. Тик Хажиморатович әлегә был хаҡта сиселмәне. Уның был фажиғәлә ҡыҫылышы юҡ. Махсус органдар килер, тәфтишселәр

төпсөнөр. «Ихтимал...» тигән ойотко һалды лаһа Солтан инспектор күңеленә.

...Хәтәр проблема икән ил өсөн хәҙер кеше юғалыуы. Йылына йөҙ меңләп ватандаш ғәйеп булһын әле... – сәсең үрә торорлок факт.

Әсә Өфөгә шылтыратты: Лира Тайсина атаклы банкта хеҙмәт кенәгәһен астырған. Ҡәйнәһе Миләүшә Ғәлиевна йәш ғаиләгә фатир бүлеүгә ризалашкан кеүек, тисе. Ә Данир кейәүкәйе аҙ ғына эш хакына эргәләрендәге балалар баксаһына ҡағыҙ-мағыҙҙарын компьютерҙа йыйып бирә икән. Уның ҡарауы аспирантураһына мөкиббән сумған. Бирһен Хоҙай!

Киҫкә табан ел-дауылдың бүтән яктарҙа оло зыянлы, хатта аяуһыҙ бәлә-каза ҡуптарыуы асыкланды – радионан һөйләнеләр, телевизорҙан күрһәттеләр. Ҡайҙалыр бер сабый нык имгәнгән – ҡыйыкмы, ҡапкамы баҫкан. Мәғлүм ки, ҡороғор ҡойон бәғзе тарафтарҙа мәғрур урмандарҙы ишеп кенә һалған.

Ауылға оло хәбәр: Ҡыукарағас ҡолаған! Ҡолаһын, аҫыл ағас ана шулай баҫкан килеш үлә. Оҙонмо, ҡыҫкамы – ағастарҙың да ғүмере һанаулы.

...Йәй уртаһына тиклем йәйрәп-күпсеп яткан Ҡариҙел әле үтә йыуашайған кеүек, ә һыуҙары тонокланa, зәңгәрләнә барғандай.

Эй, Иҙел ағыштары! Эй, донъя барыштары!

*Май, 2006 – март, 2008*





# Хикәйәләр

## ӘПӘҮ

Байтаҡ яҡташтарым хәтерләйҙер: Өтәләм тигән йылғасыҡ баш алған тау-урман төпкөлөндә егермеләп мөрйәле ауыл бар ине. Өтәләм тип тә, Шпалорезка тип тә йөрөттөләр, буғай. Һуғыш осоронда бараҡтар һалына, дәртлерәктәр айырым өй күтәрә, таҡта ярыу, шпал юныу, әлбиттә, мул итеп утын, рәшәткә-маҙар әҙерләү ойошторола бында. Эше лә, ашы ла бу-ла, башланғыс мәктәп, үҙенә күрә контора, тимерлек, фельдшер, телефон эшләй. Ярыштар, «даешь»тар... Ҡайһы бер ир-атты, бронь биреп, фронтҡа ебәрмәйҙәр – дошманды еңергә ағас та, айырыуса ҡарағас, күп кәрәккәндер – аҙаҡ стахановса эшләгән-дәргә миҙал-фәлән дә тағалар. Илле йыл самаһы элек...

Урман ҡырҡыусылар, ни хәл итәһең, ғәҙәти ултыраҡ тормошта йәшәмәй: йығыр ағасы кәмеһә йә алыҫайһа, уларҙың яңы урындарға күсенеүҙәре ихтимал. Еҙем буйҙарындағы, Елмәрҙән битләүҙәрендәге мин күреп белгән генә тиҫтәләгән ауыл-утар нигеҙе ана шунлыҡтан ҡороно.

Бәй, тарала башлаған әлеге аулаҡ ауылда, биш-алты йәшлек малай, ниңә йөрөйөм әле ҡаңғырып? Сөнки мин – сатан. Эй ҙә, ваҡытлыса ғына. Әлеге шул тиктормаҫлығым: үҙем ише ыбыр-сыбыр менән еҙнәмдәрҙең һүтелгән өйө нигеҙендә йәшенмәк уйнай инек – яланаяҡ сөйө һурылмаған таҡта ярсығына баҫтым. Ҡыскырып ебәрҙем, ҡурҡыштандыр инде, артыҡ иламайым, ба-ры һыңҡылдайым. Ҡурҡырһың да – атлайым тиһәм, табандағы таҡта киҫәге ҡалтағай һымаҡ күтәрелмәһенме! Ҡайын дегетеме, йодмы һөртөп, юл япрағы бәйләнеләр шунда. Үксәне йә ҡал-ҡытып, ҡырын-яры терәштереп, атлаған йә һикерәндәгән булам хәҙер.

Өйҙә беҙ дүртәүбеҙ. Минән олораҡ ике ҡыҙ, йәнә Әпәү ағайым. Төҫө уңған камзулын кейеп, бер йыуантыҡ апай иртә-

ле-кисле «күҙ-колак» булып йөрөй, тамак яраштыра, өй йыйыштырта – беҙҙе караша. Әпәү тигәнем – кушамат ул, әпә, ыпык тигәндән, имеш. Бының айышына аҙағырак, үҫә төшкәс, төшөнәсәкмен. Атам-әсәм, олатам-өләсәм тимер күсәрле арбаға тейәлешеп, бынан ун сакрымдағы рудникка киткәйне, һаман кайтмайҙар әле. Беләм, унда өйҙәр – меңләгән, эшләпә һымак радиолар һөйләй. Паровоздар йөрөй рудалы вагондар һөйрәп, гудок кыскыра, шартлатып тау-таш актаралар. Бында ла иртәле-кисле шаңкыуы ишетелә, хатта тәҙрә өлгөләре сыңғырлап куя.

Шулай, үҙем теләп, ат карармын тигән һылтау менән калғайным, аякты иҫәпкә алмағанда, харап күңелле, тамак һыйлы. Макарон тигән көпшәле тукмас та тәмле икән. Патефон борорға өйрәнеп алдым. Йырлай теге төрлө көйгә, төрлө теллдә. Йәнә уяткыслы өҫтәл сәғәте окшай – колакка куйһаң, тигеҙ генә моңло зыңкылдай. Тағымы? Ауыл бәләкәс кенә булһа ла, һуғыштан һуң тыуып, иркәрәк үҫкән бала-саға байтак. Бигерәк тә шишмә аръяғындағы иҫке бараклар тирәһендә. Бер урыҫ малайы ла кушылып китке‌ләй уйын-фәләнгә.

Кыҙык ул, әй, элек такта ярған ерҙә. Локомобиль тигәндәре әкәмәт икән. Йәл, эшләмәй, тут баҫып бөткән үҙен.

Малайҙар өйөрөнә Әпәү килтереп куша мине, ул алып кайта. Югиһә, олорактарҙың мине кыйырһытыуы мөмкин. Үҙе уйынға катышмай, Әпәү тигәнгә лә үсекмәй, бары тик йөҙөн һытып, мыхырлап кына куя. Хәйер, бөтөнләй телһеҙ ҙә түгел, уның хәбәрен хатта аңлағандар ҙа осрай. Бигерәк тә Мансур, үҙенә тиңерәк яшык үҫмер. Ике туған, имеш, улар, ә мин, исемдәребеҙ окшашырак яңғырағанғамы, кустыһы Басир менән дуҫлашып алдым. Бүрәнә ташығыс ике тәгәрмәсле «таратайка»ла кәлтәйеп бөткән рельстарҙан тегеләй-былай шыуып арыйбыҙ ҙа, ярым серек бысҡы онтағы өйөмөн, тауык һымак сапсып, таҙарак еренә аунаклайбыҙ. Әллә сайыр еҫе, әллә кемдеңдер, атам әйтмешләй, «бәрәңге ашай белмәгән ауыҙы менән» папирос көйрәтеүе танауҙы кытыклай.

Һүҙ сыға – кемдең тыумышы кайҙан. Әһә, минең ауылды ла күргән-белгәндәр бар икән! Мансур, ана, беҙҙең якка яңы ғына кайтып килгән. Алатау битләүендәге матур ауылға. Уны мин дә беләм: элек өләсәйем килен булып төшкән, әсәйем шунда тыуған. Ахырҙа кемдер бысҡы вағын йырмаслай: бына – беҙ һыуын эскән Әтәләм, әле ул бөгәрҙән, ташканда – муйындан. Әтәләм «завод»тан өҫтәрәк Егәҙегә коя, тау аръяғында Егәҙе үҙе, ҙурайыбырак, Еҙемгә кушыла. Бынnetwork һы – Мансур үркәс-үркәс һырт өйә – Елмәрҙәк. Ай-һай бейек тау! Артабан – Олоғор...

«Пугач»тарҙан атыш башлана. Иң еллеһе – Мансурҙа. Шырпы башын кырып, көкөртөн һаҫык көбәккә тултыра ла,

ҡарағускыл еҫ көпшәнең остоҡ ҡына уйымына ялҡын төртә – ур-ра! – арыу шартланы. Һуғыш уйыны, тимәк, хәтәр буласаҡ.

Әпәү миңә ымлай – етте, тайҙыҡ бынан. Кемдер уға бәйләнмәк: үҙең ҡайт, фәлән дә төгән. Ағай ҙа бирешмәй, уң бармағын һул усына бәке һымаҡ «ҡайрай»: ҡара уны, сөннәткә ултыртырмын, тимәксе. Олораҡтар кесерәктәрҙе шулайыраҡ өркөтә торғайны әлек.

Ҡайтышлай иңрәүле моң ишетеп һағаябыҙ. Әпәү әҫәрләнеп ҡылана: ерҙән сыбыҡ алып беләген тызый – йәнәһе, скрипкасы. Баҡтиһәң, яҡындағы барак керелсәһенә һөйәлеп, мыҡты бер ирекәй һыҙҙырта икән скрипкаһын.

Типһәндәге ситке өйҙәргә етәрәк, ыҡсым ғына таҡыяһын түбәһенә текә һалған ҡыҙғылт йөҙлө, йәшкелт зәңгәр күҙле ир, рәшәткә буйындағы яҫы таҡтала ултырған килеш мине үҙенә саҡырып алды. Әпәү ары атлай, күрше ихатала өләсәйҙең әрһеҙ бишмәтен кейгән «күҙ-ҡолаҡ» апайҙың һыйыр һауырға керешкәне шәйләнә.

Үтә күренмәле ҡапҡа алдына аҡ яулыҡ ябынған мөләйем ҡатыны ла сыға һәм, итәктәрен ҡымтып, иренә йәнәш таҡтаға терәлә. Үҙ ауылымдағы атай яҡлап һаҡалтай олатайҙың ҡустыһын бына шулай әллә тәүләп күреүем, әллә сабый аңым менән туғанлығын саҡ таный башлауым. Шул осор эш ябылып, улар һәм башҡа туғандар бер-бер артлы йәнтөйәккә ҡире күсенгәс, оҙаҡ йылдар ут күрше йәшәйәсәкбеҙ. Дәртле һунарсы, ипле мулла тигән даны таралыр бабайҙың, әбейенә «Герой-әсә» ордены бирерҙәр. Былары – аҙаҡ, әлегә ҡартлас мине:

– Кәсептән ҡайтып килешме? – тип мәрәкәләй. – Үәт, хуттый, әйттем бит һиңә: әләкләмә мине, үҙең сатанларһың тинем. Әйҙә, ултырып-сәдис эргәмә.

Шулай «хуттый» тигәне тел осонда булды уҙамандың. Һораштым бер саҡ: нимәне аңлата һуң? Асыҡламаны, дин һүҙе тип кенә ҡуйҙы. Үҙенә лә аҙаҡ йыш ҡына «Хуттый ҡарт» тип өндәшерҙәр ине, быға үпкәләмәҫ, киреһенсә, ирәйеп китер ине.

– Әләкләмәйсе, сөйгә баҫҡан бит. Беҙҙекеләр менән кисә анауҙа шар ҙа мар килделәр, – инәкәй мине яҡлаша, теге ҡурҡыныс баҙ яғына ҡул иҙәй, ә ҡартлас, тубығына ултыртып, аяғымды ҡарай, кеткелдәп өшкөрә-төкөрә.

– Һай, атас, Шәрип олатай һымаҡ елле булырһың микән? Кискәрәк сәйгә ин, йәме. Хәҙер Биларittан ағайың ҡайтып керер ҡустәнәс менән, Алла бойорһа...

– Бетәү яра һымаҡ аҙып ҡуймаһын... – Итәғәтле әбейе мине тоткарлай. – Ҡайҙа әле, улым, яңыртып бәйләйек аяҡҡынаңды.

– Бәйләһәң бәйлә, әбсәләре ҡайтмаҫ, моғайын, иртәгә лә. Ҡунаҡ-мунаҡтың көнө өсәү була торған... Әйҙә, бал эсерәм, хуттый. Эскәнең бармы һуң?

— Бар, — тим эре генә. Әбейе күңелсәк тыя.

— Кит, һармак...

Һалкынса өйгә инәбеҙ. Оҙон һике, ябыуһыҙ-буяуһыҙ оҙонса өҫтәл. Сутналған стеналағы грамота ҡағыҙҙарына бағам.

— Ыстaлин бит, — тием ҡыҙыл байраҡ уртаһындағы тос мыйыҡлы иргә бағып. — Үлде ләһә... Ҡыш көнө.

— Юк, яҙ үлде, — картлас эйәк ҡаға, шунан маһайыбыраҡ өҫтәй. — Көнөнә һигеҙ-ун сажин әрҙәнә өйгәнгә бирҙеләр. Балта менән генә... Килоға яҡын икмәк ала инем.

— Ә-ә... ниңә, бауый, һинең һүрәтеңде ҡуймағандар һуң?

Бер ҡатлы, мәгәр хәтәрҙән сәпәгәнмен икән һорауҙы. Йә, һылтаҡлап йөрөп, балта менән генә көнөнә һигеҙ-ун сажинды — үҙең йыҡ, үҙең тура, үҙең яр, үҙең өй...

Тышта инәкәй «йәшел» дарыу һөртөп, таҙа сепрәк менән ҡабатлап бәйләгәс, йәрәхәткә рәхәт булып ҡалды. Ул арала һайғау кәртә аша Әпәүҙең бөҙрә башы ялпылдай, ҡулын һыу яғына болғай теге. Ҡасып ҡайтыр, йәш мал бит тип, ололар беҙгә ҡолатты ҡулда тоторға ҡушты шул. Үҙҙәре ҡунаҡҡа олатайҙың көр генә тыу бейәһен егеп киттеләр. Эйе, еҙнәм мотоциклында елдереп кенә килеп сакырып ҡайтты. Уларҙа — өй туйы, йәнә әллә ҡайһы зат-боттоң бәпәй сәйе... Әсәйҙәрҙең баҙар тирәһендә лә йомоштары күбәйгән.

Йөрөһөндәр әйҙә. Ә беҙгә ҡолатты әҙ-мәҙ ашатып, төнгөлөккә йәш үлән алып ҡайтаһы бар. Әпәү салғыһын яурынына һала, ҡулына ашалып нәҙегәйгән яныуыс тота. Ә мин атка үннек һалып, арбанан ырғылам. Һыбай аптайтабыҙ бесәнде, эйе, септәгә тыңҡыслап... Текә, әммә ҡыҫҡа үҙәктән тапкыр һыу буйына ыңғайлайбыҙ.

* * *

Иртәгәһенә көн эҫеткәнгәме, әлһерәп, олоғайған ялбыр этә күләгә ыңғайына арба аҫтынан әкренләп шыла барҙы. Әпәү был юлы ҡолатты беҙҙең һай күрепле арбаға егеп, бесәнгә әйҙәне. Айран, икмәк алды. «Әпилкә» өйөмдәре ситенән уҙабыҙ. Бөгөн бында малай-һалай күренмәй, һыу буйынан һаркыла тауыштары.

Эргәләренә бармайбыҙ, бәләләренән баш-аяк. Кисә, ана, бер ҡыҙырасы минең маңлайға сиртте. Нык итеп. Һуғыр ҙа ине — Әпәү күреп ҡалды, йәмерәйҙе. Ҡурҡты теге. Телһеҙ булһа ла, беләккә ҡаткыл ғына ағай.

Бәй, кисәге урынға етәбеҙ, ана бит алас-йолас сабылған яр ситтәре. Әпәү әрәмәлектән кисә йәшергән бәләкәй салғыһын алып сыҡкас, аҫкараҡ төшәбеҙ — бына ҡайҙа уләндең ояһы. Күгәүен бешә генә! Емештәре йәшелләнеп төйөрләнгән ялбыр

муйыл төбөндә сөрөк-сарыктан төтөнлөк токандырабыҙ, эргәһенә туғармай ғына колатты тышап, алдына йәш бесән өйәбеҙ.

Төтөнлөк быҫкый, Әпәү бесән саба, мин әҙләп арбаға ташыйым. Ул ялға туктаһа, һыу буйына ыңғайлайым, балыктарҙы күҙәтәм. Сабактарҙы, бәрҙесәктәрҙе таныйым, һи, Еҙемдә улар буйтым эрерәк. Әрәмәлә коштар бытылдаша, аҫтағы сөмәкәйҙә оя-оя каҙҙар каңғылдаша. Таш бәрәм – түбәнгәрәк йөҙәләр ҙә тағы үрләйҙәр йырбанлап.

Айран эсеп алғас, Әпәү мул ғына итеп һутлы дегәнәк япрактарын да йыйып һала. Ғыршлата ғына шуны йылкы малы. Кемдән кәм беҙ – баяғы сөмөкәйҙә шыр сисенешеп һыу инмәһәк. Бәй, бите-кулы ғына карағускыл, бүтән ере ап-ак икән дәһә Әпәүҙең. Йөҙә лә белмәй бахыр, ә мин, бәйле аякка ла карамай, сыптырлығын сығарып маташам.

Кайтып атты туғарғас, апайҙар аҫка күрһәтә, төпсөнә – ниңә төтөн йәйелгән.

– Пожар сығарҙығыҙмы әрәмәлә?

– Юк та, төтөн һалғайнык, – тип аңлата белгән булам бит әле.

– Һүндермәй киткәнһегеҙ...

Эйәртенешеп, Мансур менән Басир хәл белешеп китә. Уларҙың да бөгөн уйынға әүәҫлеге юк. Патефон тыңларға ла теләмәйҙәр. Иртәгә беҙ уларҙы – бесәнгә, улар беҙҙе ослобаш еләккә эйәртергә һүҙ куйыштык. Ләкин...

Уятыусы булмағас, ул-был тауышка һуң ғына торолдо. Әһә, кайткан даһа өлкәндәр. Әсәй миңә сандали тоттора. Таман икән берәүһе, икенсеһе тығыҙ, яраның бәйләүесе яраттырмай. Тышка сығам. Нилектән акһағанды белгәс, катындар йәлләне, ирҙәр, күп һикерәндәйһең, йәтеш, тип үсәгәндәй көлөштө. Шулай ҙа кайтышлай Егәҙе дауаханаһына һуғылып, минең табанды күрһәтеп сығырға кәңәш корола. Иртәгә. Мотлак...

Сибек кенә апайҙарым бәрәңгелекте утап йөрөй. Ситтәрәк Әпәү ҙә тубыкланып алған. Көн еләҫ кенә. Атайҙар утынлыкта беҙгә күсәрле арба йүнләү хакында гәп һата.

Тәм-томдан ауыҙ иткәс, мин дә утаусылар эргәһенә барам. Бала-сага ни, эшенән уйыны күберәктер – эй шаярышабыҙ. Тиҙҙән мине өләсәй баксанан алып сыға. Аяғыңа тупрак керер, һин кунакһың, күп ер түгел, һинән башка ла өлгөрөрҙәр, ти.

– Аяғын йыуып, кабат бәйлә әле баланың. – Быныһын өйҙә теген машинаһын рәтләгән әсәйемә әйтә. Бәйләгәндәрме, юктырмы, иҫтә калмаған. Иҫтә калғаны...

Бәй, капка алдына байтак кеше йыйылып киткән дәһә. Тәҙрәне асыбырак куям. Сайма-сай иреш купкандай тышта.

– Кисә малайҙарың муйынын бороп, беҙҙең каҙҙы өтөп ашаған! – Миңә ят катын һүҙе был. – Этебеҙ сос, шул алып кайтты бая канатын һыу буйынан.

– Ҡуйсәле, бәләкәй ҙәһә улар. – Әсәйҙең тауышы аптырауҙы. – Сос булғас, этең талағандыр. Ай-һай...

– Юҡ та, бешкән һөйәк-мөйәге ята былар ут яҡҡан ерҙә.

– Әллә үҙ малайың атып ашаған? Наган тотоп йөрөй гелән...

– Буктан сыҡмаһалар ҙа, боҙоҡлоҡҡа баштары етә! Әпәүегеҙ ялсы урынына көс түгә. – Баяғы ҡатын ярһый. – Үгәй тигәс тә...

– Эйәрсән тәк эйәрсән – инесле (ҡатлы) кейеме лә юҡ. Бер грамм уҡыу эләкмәне бахырға! – Быныһы – әллә кемдең йәлләп маташыуы.

– Вәт әй, ҡаҙ бурҙары! Ыштандарын сисеп, шыйырырға кәрәк осаларын! – Ирҙәрҙән йәнә кемдер аҙарына.

– Ярай, күп сәйнәнмәгеҙ. Әгәр шаһитың бар икән – себеш урынына оло ҡаҙымды бирәм! – Быныһын өләсәй нык үртәлеп әйтә. – Нимәгә ул тиклем ҡырҡ һүҙгә етәһегеҙ? Харап, һинең балларың артыҡ кейенәме? Эшкә ни, атаһы ҡуша бит...

– Оноттоғоҙмо, бандиттар күпме ыҙалатты! Һаман берәйһе ҡасып йөрөйҙөр. Мужыт, горыдтан ҡайтҡан зимагурҙар хаслашҡандыр, – тип аҡланғандай итә олатай. – Ярай, асығын беләйек әле. Хәҙер...

Мин соланға сығам. Ҡапҡаны шар асып, олатай йәшел сирәмле ихатаға ярһып уҙа, боржиналы ҡапҡа үҙе ябыла. Ул көрәктәй ҡулын, аймап алырға теләгәндәй болғап, ҡарлыҡҡанырак ҡалын тауышы менән: «Йәһәт кенә шый бында!» – тип Әпәүгә екерә, ә мин солан тупһаһына бөршәйеп кенә сүгәм. Янына килгәс, атаҡайы тешләнеп, өҫтән аҫҡа ажарлы ҡарап низер төпсөнгәйне, улыҡайы бәлтерәп ҡуйҙы, иллә башын ҡәтғи сайҡаны.

– Ҡаҙ буры! – зәһәр ғәйеп ҡолаҡҡа сағыла урыҫ ҡапҡаһы аша, ҡәһәр яуа.

– Һөйәге тамағына торһа, теле асылыр ине, исмаһам.

– Ҡарғама бушҡа, ғейверәт!

Ҡаҙ буры... Ҡаҙҙы кем белмәй. «Бур» тигән һүҙгә зиһен етеңкерәмәй, ниндәйерәк була икән ундай әҙәм?

– Әйт дөрөҫөн! – Уҫал, һиҫкәндергес бойороҡ ишетелгән арба яғына ҡайырылам һәм күрәм: сәсе тырпайып, күҙе-ҡашы тызырайған олатай ҡулында – ике метрҙай һәлмәк сыбыртҡы. Суктар ҡыҫтырып, төбө биштән үрелгән, йылтандағансы майланған, элмәк кейҙерелгән тоҡос һаплы сыбыртҡыһы соланда ағас сөйгә элеүле ине. Бына әле шул яуыз ҡайыш йыландай һыҙғырып, Әпәү яғына уктай йомолдо; үҫмер йәмһеҙ сырылды ла терһәге менән битен ҡаплап, зур ҡуңыр күҙҙәрен ҡото осҡан ҡолонсаҡтай алаҡанлатып, арба аҫтынараҡ тайшанып өлгөрҙө, мәгәр аяу белмәҫ, осаһына эләкһә, атың-һыйырыңды үрәпсетерлек беше сыбыртҡы осо әллә арҡаһын, әллә яурын башын көйҙөрөп алғандай итте.

– Йәнеңде алам! – Сыбыртҡы бөгәләп-һынып хужаһының усына йәтешләп йыйылды һәм ҡабат һөжүмгә әҙерләнде, хатта йөнтәфи ғәмһеҙ эт тә бер-ике өрөп ҡуйҙы. – Ысволочь!

Сыбыртҡы осо, еңелсә бәрлегеп, эткә булһа ла асыуын төшөрҙө. Кем йәберләгәнен белә мәхлүк, сыйылдап һыпыртты хәүефһеҙерәк мөйөшкә.

Әпәү арба күребенә терәлгән килеш турайып баҫты. Шарылдап иламаны ла, тотлоға-тотлоға аҡланырға ла тырышманы, бары тик шул арала бөткөһөҙ рәнйеше төҫө-күҙенә сыҡты: ниңә инде, атай, оторо ҡыҙаһың, шул тиклем кәмһетәһең, тик-томалға бит әле, гонаһым булһа – бер асыу... Уға иң ҡыйыны – минең алда рисуай ителеү, минең алда тукмалыу ине, шикелле. Етмәһә, бөтә ғәләмгә хур итеп, ана лаһа, дөңгөлдәп ҡапҡа асыла...

Эйе, асылды. Әсәйҙәр бирегә талпына, ят кешеләр таралыша, ә олатай ҡулындағы сыбыртҡы дереддәп ҡуя – хәҙер, хәҙер һауаларҙы ярып-телеп барып, Әпәүҙең арҡаһын ҡабат һеңгәҙәтә ҡайыҙлар йә осо менән генә ҡағылыр. Шул етә – осонда бит үсе лә, көсө лә сыбыртҡы тигән ғәләмәттең. Кешегә һуғырһың тип үрмәгәндер ҙә уны оҫтаһы – «франтауик» Атау?

– Тей-мә... – Уңалыр-уңалмаҫ аяҡ зәхмәтен дә тоймай, икеөс ынтылыуҙа ата менән ул, дөрөҫөрәге, ғәҙеллек менән ғәҙелһеҙлек араһына ырғылам. «Теймә!» – тип ҡабатлайым да иламһырап өҫтәп ҡуям: «...Минең ағайға». Олатай аҙап ҡала, өләсәй сыбыртҡыһын тартып ала, һуҡрана:

– Менә һин аны, баланың (йәнәһе, минекен) ҡотон осораң да! Шайлы кеше ҡошап ни...

Олатай ҙа тиҙ һыуынмай, тәртә араһынан йәмшек козероклы дәү кепкаһын эҙләп маташҡан Әпәүгә янай:

– Аттым-ҡуйҙым, барыңдан юғың яҡшы!

Атмаҫ, әйтә генә. Хәйер, мылтығы бар уның, синнектә күрҙем. Яңы ҡорал, йүнләп тотонолмаған да. Ә ауылдағы олатайҙыҡы шымарып бөткән, йәнә уның ялтыр-йолтор сыныйырлы яҫы хәнйәре бар. Ысындырмы, Сталин биргән, тиҙәр, һуғыш осоронда айыуҙарҙы, мышыларҙы, ҡыр кәзәләрен (илек, ҡоралай) иткә йыҡҡан, йәнлек тиреләрен мул тапшырған өсөн. Сталин ҡартты әйтәм, электр уты булмаған төпкөл ауылға ла юлды белгән микән ни...

Хөкөм әлегә тамам. Мин аңҡы-тиңке атайҙы эҙләйем, уға: «Әйҙә, ҡайтайыҡ үҙебеҙгә», – тип ожо һалып инәлергә теләйем. Ә-һә, ҡунаҡҡа алдан һыпыртҡандыр, моғайын. Күршеләргә, ана, скрипкаһын, ҡурайын тотоп, кисә күреп ҡалған йоморо битле, көләсерәк сырайлы ир яҡынлашты. Бәй, беҙгә тау ашаһында ятҡан утарҙан күп һөнәргә оҫта Атау бит. Сыбыртҡы үреп

һатырға ла маһир. Әлеге скрипкаһын үҙе әтмәләп алған, тиҙәр. Шулайҙыр, буялмаған-нитмәгән, ә ниндәй көйҙәр һыҙҙырта! Скрипкасыны бабай өйөнә әйҙүкләй, ыңғайҙан мине күреп ҡала.

– Йә, улым, ниңә мыҙылаһығыҙ? Әйт әле әбсәңдәргә – инһендәр мәжлескә.

Ҡушылғанды кинәнеп үтәйем. Өлкәндәр киткәс, синнектәге алғы бүлмәгә инәм. Шунда оҙон йәй ағас карауатта йоклай Әпәү. Әле уның мышылдап, бөтә донъяға үпкәләп, йәне-тәне әрнеп ятҡан көнө. Төпкәрәк шылғайны, эргәһенә аркалаш һырыҡтым, гүйә хәлен еңеләйтергә иҫәбем. Әсәйем, ике өләсәйем бар, эйе, минән бәхетлерәкте табып ҡарағыҙ. Әпәүҙең дә ике әсәһе бар түгелме ни? Ә ул эстән буҙлай – һиҙәм... Алыҫтағы әсәһенә – олатайҙың тәүге бисәһенә үпкәләйме? Ниңә мине бында, өс кенә йәшемдә, килтереп ташланың тип. Ниңә?.. Уныһы миңә ҡараңғы. Ҡасан телдән яҙыуын дә белмәйем, белергә лә теләмәйем.

Һөйләшер һүҙе күп тә, юк та һымаҡ «ҡаҙ бурҙарының», әмәлдәре генә юк шул.

...Мансурҙың яҙмышы үтә аянысды осланды. Шул уҡ йәйҙәме, әллә киләһенәме, уның Һаралыға йәйәүләп барғанын ишеттем. Үҙем дә күргән һымаҡмын, тик яҙа-йоҙа ғына хәтерләйем.

Иртәгәһенә ул йоконан тора ла, йыуынып-сайынып алғас, кемгәлер һарай башына йәшергән «пугачы»н күрһәтеп маҡтана. «Кара, эрзинкәле, ниндәй елле, дары ҡатыштырып төйһәң, ғәләмәт шартлай!» Һәм шартлата... «Уятайым әле ауылды!» – ти ҙә... Белһәсе ҡуйынында газраил йөрөткәнен!

Йә, Хоҙай, бер иләләй генә ҡырынырак тоҫкаһаңсы... Бәлки, яһауы гөлтләп атылған ыңғай... йоҡа ҡалай телеме менән генә һап-төйҙәгә беркетелгән еҙ ҡатыш тимер көпшә, ыскынып китеп, башына ҡаҙалмаҫ ине?

Еңелерәк арбаға аһ та уһ ат егә һалып, үҙенде Егәҙе дауаханаһына илтмәксе юлға сығалар ҙа бит. Беҙҙең түбәнге зыяратка етәрәк, йән бирәһең, ҡуй инде был донъяны... Ер-һыу илап, кире борола туғандарың. Быны Өтәләмдән күсеп ҡайтҡан такыялы күрше бабай әйтте. Әйтте генәме, ай-һай, нык киҫәтте. Йәнәһе, шарт та шорт киләһегеҙ ул әрәмәлектә, ул үҙәк буйында. Күрҙегеҙме, уйын бер була... Әрәм генә булды, илгәҙәк малай ине Мансур. Ҡарағыҙ уны: күрһәм, йә ишетһәм, үҙем атып йығырмын... (Бигәйбә, беҙҙең тирәлә «атам да йығам» тип янау – ҡоро һүҙ! – әле лә йыш әйтелә.)



* * *

Инде асыҡ хәтерләйем: күҙ бәйләнер алдынан ғына беҙгә Әпәү килеп инә. Өҫтөнә спецовка һымағыраҡ нәмә, аяғына кирза итек кейеп алған. Нимә һөйләшкәндәрҙер әсәйем менән (беҙ бесәндән ҡараңғыла ҡайтҡайныҡ, буғай), аласыҡта, белмәйем, төртөкәй (ҡыуыҡһыҙ шәм) яҡтыһында сәй һемереп ултыралар ине. Иртәнсәк юлаусы Һаралы яғына ыңғайлаған, шунан – артабан, Таҡаты һырттары аръяғындағы әсәһе йәшәгән ауылға. Ҡырклап саҡрымдағы шул ауылдан әсәһе өс йәшендә генә сакта килтереп ташлап китә Әпәүҙе айырылышҡан элекке ире ҡулына. Юлын белер-белмәҫ көйө телһеҙ малайҙы һикһән саҡрым араны уҙырға ысын әсәһен һағыныу хисе лә әйҙәгәндер тип уйлайым. Ярай, беҙҙең тирәлә ҡыйыш-мыйыш телефон бағаналарынан яҙлыҡмай атлағандыр, ә артабан нисек аҙашмай барып еткәндер – ғәжәп!

Байтаҡ йылдар уҙғас, инде Өфөлә вуз бөтөп, гәзиттә эшләй башлағас, командировканан ҡайтышлай әлеге ауылда (Ғафури районы) тап итмәмме Әпәүҙе. Ул төҙ, ул кәүҙә – застуйын абышка. Ҡырылмаған сикә сәстәре лә килешә үҙенә.

Ул мине танымаңы. Ғәйеп түгел: егерме йыл ғүмер уҙғайны, ир уртаһы инем. Тәүҙә сырамытты, аҙаҡ әсәм-өләсәмде, олатайҙы иҫенә төшөргәс, йылмайҙы, әлеге лә баяғы мыхырлап ҡуйҙы. Леспромхоз биргән өйө яғына ымланы, әйҙә, йәнәһе, сәйгә. Өйләнеп, арыу ғына донъя көтөп ятыуын ишеткәйнем инде ошо яҡтағы таныш-тоноштарҙан. Ашығыс инек, оло юлға сыҡҡансы бензин етмәҫ тип, урман хужалығы заправкаһын һораштыҡ. Ә юҡ, үҙен ултыртып алдыҡ имеш әле. Әпәү беҙҙе ауыл осона сығып, оҙатып ҡалды. Миңә ул һаман шунда баҫып торған һымаҡ иҫкә төшкөләй. Әллә оҙатып, әллә көтөп торғандай.

Олатайҙар Әтәләмдән оҙаҡҡа һуҙылмай рудникка күсенде. Өйҙәре ҡасаба ситендә, йәнә йәш ҡарағайҙарға яҡын ине, ине тип ни, әле лә шунда – ейәндәре йәшәй. Был йорт миңә хәҙер ҙә туҡтап китеү өсөн бигерәк йәтеш.

Бер саҡ сәй-мәй эскәндә Әтәләм, ундағы «ҡаҙ», «сыбыртҡы» ваҡиғаһын телгә алдым. Һүҙсән түгел ине олатай, уйсан ине.

– Ҡуй инде, булғандыр, – тип кенә ҡуйҙы. – Нервы хөрт, плиндә йонсорға тура килде бит. Ун кешегә – бер винтовка, бар, һуғышып ҡара! Яралы көйө элэктерҙеләр ҡырҡ беренсе йылдың көҙөндә. Эт күрмәгәнен күрҙек... – Керпектәре йәштән дымланды. – Дошман беҙҙе лагерыбыҙ менән юҡ итергә йыйынғанын һиҙеп, бер-ике иптәш менән прожекторҙарҙы таш бәргесләп һүндерҙек; прожекторҙарға ҡарап, танкыларҙан атып-атып ҡасырға икән тегеләрҙең планы. Ярай әле үҙебеҙҙекеләр ҡотҡарҙы!

Алдамай ине ул. Ғөмүмән, ялғанлай белмәгәндер. Хаҡлы ялға сыҡҡас та байтаҡ йылдар ихлас эшләне. Һыу менән йыуҙыртылған руда ҡалдыҡтарын түгеү урынында, йәғни, отвалда. Премиялар, бүләктәр бирҙеләр, исемен «Улар Еңеү менән ҡайтты» китабына яҙып ҡуйҙылар. Ә бит «теге» әсирлектән ыңғай «совет» әсирлегенә юлығыуы ихтимал булған бит.

Һуғыштан, ғәҙәттә, бөтөнләй ҡайтмайҙар, күптәр йә ғәрип, йә нервыһын боҙоп, хатта аҡылға миктәп ҡайта. Шулай булмаһа, күрше ауылда минең тиҫтерҙе яуҙан сулаҡ ҡайтҡан атаһы... ҡолаҡ япрағынан келәт бүрәнәһенә сөйләп ҡуйыр инеме ни? Фронттан нисектер алып ҡайтҡан трофей ҡылысын болғап, өй тулы бала-сағаһын баҫтырған ауылдаш ағай ҙа хәтерҙән сыҡмай... Бер мәл күрше ауылдыҡылар менән бесәндә ҡуна ятҡайныҡ. Йәнә миңә тиңдәшерәк сатан «франтауик»тың тал сыбығы менән шыптырып, баҡуй саптырғаны иҫтә. Шуға күрә олатайҙың аңын-тоңон тикшермәйсә, Әпәүгә ҡаты иркен, хатта артыҡ уҫал бәрелгәнен нисектер аңлай ҙа, аҡлай ҙа алам һымаҡ. Һәр хәлдә, аҡларға теләйем. Хәлбүки, үҙен дә әсирлектә ай-һай ыҙалатҡандар! «Икмәк ҡыйырсыҡтарын һибәләр ҙә, асплинныйҙар шуға ябырыла, тотона шунан тегеләр сыбыртҡы менән ярырға...» Бына олатайға анау саҡта ҡаҙ ваҡиғаһын иҫенә төшөрөп, үҙ ауыҙынан ишеткәндәрем.

— Ҡырҡ өстә, эйе, тикшереп-нитеп, саҡ ҡайтарҙылар...

Эйе, мин уға балалыҡтан олатай тинем, хәҙер ҙә шулай өндәшер инем. Ҡырыҫырaҡ, әммә ярҙамсыл, туғансыл булды уҙаман. Ауылдаштарҙан кемдер үсмер саҡта иҫкәрткәйне: үгәй ҙә ул һиңә, ысын олатайыңды 37-лә атҡандар бит... Быны ла һиҙә инем. Сөнки өйҙәге ҙурайтылған фотонан тоҡос мыйыҡлы, ҡыйғасыраҡ ҡара ҡашлы, ҡуңыр сәсле һылыу ир ҡарар ине гелән. Әсәйем уны бигерәк йыш иҫкә алды: «12 декабрҙә Егәҙенән алып киттеләр. Төндә, ҡашауайға ултыртып. Йә, леспромхозда кассир ине, баракта торҙоҡ. Миңә 12 генә йәш...» Бына бит, ятлап алғанмын хатта. «Берия ғына ғәйепле, ҡәһәр һуҡҡыр!» Хәйер, ябай ауыл ҡатыны ул йылдары репрессияларға Берия түгел, ә Ежов етәкселек иткәнен ҡайҙан белһен инде. Тағы шуныһы: гүргә ингәнсе Сталинды яманламай йәшәне.

Ә бер ҡартластың, шинелен кейеп, ҡуйынына осло тупаҡ штык тығып, йәйге селләлә: «Ут яҡмағыҙ, кем яға — сәнсәм дә ҡуям», — тип ҡысҡырғаны һуң урамда?!

Хәҙер бая телгә алғандарҙан күптәр донъяла юҡтар. Атай-әсәй ҙә, олатай-өләсәйҙәр ҙә, Әтәләмдән тыуған яҡҡа күсеп ҡайтҡан һунарсы һәм скрипкасы бабайҙарым да, ҡаҙ «юғалтҡан» уҙамандар ҙа... Әхирәттә ятҡырҙар!

Ишетеп beләм: олатайҙың етмешенә Әпәү һикһән саҡрым араны йәйәүләп барған, хәленсә бүләкләгән. Ул ғынамы, ҡай-

тышлай олатайҙың Әтәләмдәге ҡыуышында туктап, ике-өс көн булһа ла бесән әҙерләшеп киткән. Нимә һөйләштеләр икән аталы-уллы? Айлы-ҡояшлы хәтирәләргә тулышты микән күңелдәре? Хәйер, ауыҙ тултырып һөйләшмәҫтәре билдәле. Атайы таякланмай ғына һикһәнгә етеп гүргә ингәндә лә һикһән сакрымды бер көндә атлап уҙған һәм ерләүҙә ҡатнашкан. Ә мин аҙ ғына алдарак, түшәккә йығылғас, юл ыңғай бәхилләшеп киткәйнем инде олатай менән...

Ә бит теге юлы – ун йәштәр тирәһендә Әпәү, йәғни Әхмәҙулла, Әтәләмдән төңөлөп, әсәһенә ҡасырға йыйынғанда, салғыһын һелтәпме, барыбер ҙә бер ҡаҙҙың (бәлки, теге сак үҙен юктан тукматкан кешеләрҙең ҡаҙын) муйынын ҡыйған. Юлда ҡурып тамак ялғармын тимәнеме икән бер-бер? Ысындырмы, буштырмы – белмәйем...

Һәр хәлдә ниңәлер башта яҙык уй ярала: дөрөҫ эшләгән! Тағымы, Әпәү утарҙа бөтөнләй күренмәй башлағас, бер ҡыҙыкай әҙ-мәҙ бойоғорак йөрөгән. Раҫ икән, әлеге лә баяғы ямаҡай сыбырткыны ут тамағына ырғытырҙай булам да – юк бит әмәле.

Эйе, теге тутык сөйҙөң тәндә эҙе-йөйө ҡалмаған, мәгәр бәғер итенең ҡай ерендәлер һурылмаған шына остоғо йөрөгән кеүек.

Әтәләмдәге һуңғы баракты былтыр ғына һүтеп, унда-бында ташығандар кәрәк-яракка, тип ишеттем әле яңырак. Шапшактай, муртаймаған да ти бүрәнәләре. Ҡарағайҙарҙың да төрлөһө була шул...

*2004 йыл*

## ҠЫЙПЫЛСЫК

Нисәлер йыл элек командировкала йөрөгән районда мине тыуған яғыма «хадауай» машинала илтеп ташларға дәртләнделәр. Тура юлдан, тау һырттарынан. Бындай бәхет, дуҫ-иштәрең булмаһа, ай-һай, һирәк эләгә.

Ҡыҫкаһы, тиҙ генә йыйын да һыпырт беҙ уртасарак йөк машинаһында. Төштән һуң ғына бит әле. Уйынлы-ысынлы, әйҙә әле, бер әкәмәт донъя күреп ҡайт, тип димләүем булды – колхоз рәйесе вазифаһындағы буйһыу кәүҙәле, ауанырак холоклo дуҫкайым, бәй, руль артына үҙе ултырып алмаһынмы!

Күрше ауылда кабинаға йәнә бер өлкән йәштәге юлаусы ҡунаҡланы. Алдан һөйләшкәндәрҙер: ҡапкаһы төбөндә көтөп кенә тора ине – йәһәт кенә кузовка туҙ ҡынлы балтаһын, плащтарын ырғытты, ветеринар сумкаһын, тағы бәләкәйерәк фляганы аяк осона урынлаштырҙы. Бара биргәс:

– Уфаларҙа бер осор укыған журналист әшнәң ошомо? – тип белеште был ҡарағускыл күҙҙәрен секерәйтеп. – Ҡыҙҙар баҫтырып, эйе, тиң...

– Нәк үҙе, ҡайнаға, – тип йылмайҙы рәйес, ыңғайҙа ветеринарҙың үҙенә ҡәрҙәшлеген танытып. – Кисә райцентрҙа тап иттем дә үҙебеҙгә алып ҡайттым. Алып барып ташлайбыҙ бына хәҙер.

– Һоу-у, йыраҡ әле «хәҙер» тиергә... Йөҙ саҡрым ғына барҙыр, – тип һүҙ ҡыҫтырам.

– Йөҙ саҡрым нимә генә ул! Ҡандай машина, эйе, тиң, ҡандай шуфир! – Мәрәкәсел икән ҡартлас, тауышы ла көләкәсерәк. – УАЗ-ың ремонтка ҡалғандыр... Арба һымаҡ дыңғырҙай ине шул.

– Элек алтын йыуған ерҙәргә етәбеҙ. Артабан юлды белмәйем. – Машина ҡырсын ташлы йылғасыҡ ярында барышын кәметте. – Һин беләһеңдер? – тип төшөргә ынтылды «шуфир».

Баш һелктем, тик кабина ишеген нисек асырға белмәй аҙапландым. «Ошолай бор, ошолай, – тип көлөмһөрәне ағай. – Хәҙер ҡымыҙҙы пышылдатып алам әле. Шартлар йә. Әйҙә, һемерегеҙ. Бахмурығыҙ ҙа бар кеүек... Бына көрөшкә».

– Ҡымыҙ ғына шул...

– Һыу инеп алайыҡ, берәй сөмәкәйе юкмы икән? – Тегеләрҙе ишетмәмеш ҡыланам. – Урыны ла аулаҡ ҡына...

– Кәнишне, эҫергәнеп килгәнсе! – Дуҫым малайҙарса дәрт менән сисенеп тә алды. – Әйҙә, ҡайнаға, сисен һин дә инәнән тыума. Шулай, кеше юкта «ҡайнаға»нан һалдырам, былай, Рәхмәтуллин иптәш, тим гелән.

Арка күмерлек ятыуҙа, өшөй-өшөй, сәпелдәп сыҡкан булдыҡ. Йәнгә-тәнгә рәхәт – ураҡ бөтөп барһа ла, сыуағырак мәл ине. Тирә-йүндә уҫаҡтар буҙара, сағандар ҡыҙара, ҡайындар һарғая.

– Бар, ҡайнаға, өҫкәрәк мен дә сум, – әле ләпелдәп ҡыҫтаны ағайҙы һүҙгә һаранырак рәйес. – Бәлйерәмә, элекке десантсы лаһа һин! Ҡара уны, берәй ереңдә ҡыҫала тешләп ҡуймаһын – аптырар үгәй апайкалар.

– Ҡурҡмайым да, – китте Рәхмәтуллин әллә уң, әллә һул аяғына һылтаҡлап. Тәмәке көйрәткән арала ишетәм: «Етмеште уҙһа ла, һөнәрен һаман ташламай. Ике туған ҡайнағам. Колхоз малын да, өс ауылдыҡын да яңғыҙы тиерлек карай. Стажы илле йылға яҡын! Йышылып бөткән. Һораған әҙәмде лә дауалап ебәрә шунда... Ваҡ-төйәк үгеҙҙе яңғыҙ-яры йыға ла бесә». Ағайыбыҙ, артыҡ ағармаған, һирәгерәк сәсен бармаҡтары менән тарай-тарай, тиҙ үк әйләнеп тә килде – биленә тиклем генә сайынғанға оҡшай.

Ҡымыҙ менән һыуһын ҡандырғанда юлдаштарымдың беҙҙең якта арлы-бирле йомоштары ла барлығы асыҡланды. Һуғым-ит планы үтәлмәһә, килә һалып, йәнәһе, тейәп алырға — токомло мал, ағас, бал хаҡтары, арба-сана оҫталары менән ҡыҙыҡһынмаҡсылар. Был хаҡта дуҫым кисә өйөндә үк һорашҡайны. Леспромхозға ҡараған ауылдар байтаҡ, һин уларҙы бер көндә генә йөрөп тә сыға алмаҫһың, тигәйнем дә...

Ҡуҙғалдыҡ. Рәйес ҡайнағаһының урынын алмаштыртты: рычагтарға йәбешһә, минең тубыҡтарға ҡулы тейгеләп, йәнен көйҙөрә, имеш.

— Ике ыздарауай араһына, эйе, тиң, эре генә һыйынайым әле, — тигән булды ҡарт, сит-миттәре томанһыуланған күҙ алмаларын йылтандатып. Шул арала күпте күргән йәшкелт пинжәгенең уң яғаһы ҡайтармаһында ниндәйҙер награда шәйләнем.

Бер-ике ауылды елдереп уҙып киттек, руль хужаһы «магазин... күстәнәс» тип һөйләнһә лә, яҡын туғандарым йәшәһә лә, алыҫтан тауҙай һарғайып күренгән йыуынты руда өйөмдәре яғына ла борҙорманым. «Шунда инде рудник ҡасабаһы», тип кенә аңғарттым да лавкалары ябылмаҫ борон леспромхоз үҙәгенә етергә кәрәклеген иҫкәрттем.

Өлгөрҙөк. Уны-быны мул ғына алып, йәнә егермеләп ҡул салғыһы тейәнек тә, машинала ағайҙы ҡалдырып, леспромхоз конторaһына барып әйләндек. Әҙәм заты юҡ, һуң да ине шул. Таныштар осраны быуа ярында, сәйгә саҡырҙылар — юлыбыҙ ҡабалан, машина иртәгә кире борола тип, тәпәшерәк түмәләс ашаһынан үркәсләнеп күренгән, һыртына һырығып аҡһыл болоттар йөҙгән Елмәрҙәк тауына ымлайым.

Машинабыҙ артылышҡа зыйлап, артыҡ ҡыҙмай ғына менеп етте. Һыртта инде алдан һикереп төштөм, мәйтәм, ошо урында тегеләй үткәндә лә, былай уҙғанда ла туҡтамау — гонаһ. Аяҙҙа бынан йыраҡ-йыраҡ ауыл-ҡасабаларҙы төҫмөрләп була.

Минекеләр ул йылы Елмәрҙәк битләүендәге утарҙа йәшәй ине әле. Тиҙ үк шунда төшөп еттек. Әсәй аптыраны ла, шатланды ла. Самауырға ҡуҙ өҫтәп, тоҙланған ит сайғас, ярайһы әсегән бал һаркытырға кереште. Бесән теүәлләнгән икән. Ҡояш байыуғарак елле алмасыуар ат менеп, ялда ятҡан ҡустыларҙың иң кесеһе балыҡтан ҡайтып инде. Ветеринарҙың — эре генә бәрҙеләрҙе, һалдау эҙҙәре беленгән шамбыларҙы, ә дуҫымдың алмасыуарҙы күреп күҙҙәре аҡайҙы.

— Ни хаҡ тора? Һатмайһығыҙмы? — тине әсе-мәсенән ҡыҙара төшкән рәйес.

— Ни хаҡ тора, тиһеңме? Беселгән хайуан нимәгә хәжәт, йә? — Кейәүенә битәрләгәндәй ҡаҙарынды ветеринар. Тегеһе лә юғалып ҡалманы:

– Атты һорамайым, балыкты... – тип ауыҙын йырҙы.

– Шулай тиң... Ана, нәйәт сана аҫылған бездәлаға. – Бая хәл-әхүәл һорашып, кәртә-кураны карпштырып әйләнгәнсе, аҙбар стенаһына табандарынан эленгән шактай ҡупшы, сөм ҡараға буялған кашауайға иғтибар иткән. – Шуны апкайтырға йәтешләйек... Бурандарҙа фермаға үтә алмай йонсойбоҙ әтеү...

* * *

Ҡыуыҡлы шәмдәрҙе ҡабыҙып, ҡыҙҙырылған балыҡ еҫе таралғас, мәжлес ҡыҙа төштө. Шулай, тарау ултырған унлаған ғына өйлө ауыл йоратынан миңә электән таныш ике ғаилә – Харрас еҙнә менән Яҡшыбай ағайҙар саҡырылғайны ҡунаҡ күрмәгә. Хәлдәренсә кейенеп, ҡарсыҡтары менән эйәртенешеп килеп ингәйнеләр. Эй, башҡорттоң нәҫел тамыры! Мал «духтыры» менән – йә, йәһәннәмдә бит ауылы – беҙҙекеләрҙең уртаҡ таныш-тоноштары, сыбыҡ осо туғандары йә ҡоҙалары булыуына хайран ҡалырһың. Яҡшыбай боронғоса көйләп ебәрҙе, ерәнерәк мыйығын әлегә ҡырмай йөрөгән ҡустым шактай ғына гармунын зыңғырлатты. Хуш-рәхмәт әйтеп, ҡайтырҙан алда еҙнәбеҙ – ул да ғәжәп төртмәс телле – ветеринарға ҡулдарын болғай-болғай өндәште:

– Иртәнсәк кәзә тәкәһен бесербеҙ, йәме, абзый? – Ҡунаҡҡа саҡырыуы ине Харрастың. – Ә һиңә, Яшка, тауыш итмәйем – барыбер үҙең киләһең.

– Саҡырған ергә бар, ҡыуған ерҙән кит. – Сәсен тотош ҡырҙырған Яҡшыбай, тотлоға-тотлоға, миңә текләне. – Беҙгә лә һуғылырһығыҙ, әҙәмгә һанап...

– Мин һеҙҙең тирәгә малай сағымда ат эҙләп юлыҡҡайным, ағай мәрхүмгә эйәреп. Көскә табып апкайттыҡ биш-алты атты, вәт. Ох, көрәйгәйнеләр! – Соланда аяғына эҙләп маташҡан Харрас ветеринарға мыңғырҙай. – Ыштобы килегеҙ иртәнге сәйгә. Тәңгәл генә!

Дуҫтарымдың иртәгә үк кире юлланасағын кем тиште икән ҡолағына? Күреп китһендәр, утарҙа ла бөтөнләй үк икмәкһеҙ, зат-ырыуһыҙ йәшәмәйбеҙ, йоланы онотмағанбыҙ, тимәксе инде үҙенә күрә.

* * *

Эй, йоҡосомон да инде – сәғәт ун! Юл йөрөү ҙә йонсотҡандыр. Ярым серегән таҡта башлы оло өйҙән сығып, һалҡынса утынлыҡҡа ыңғайланым. Шунда, арбалағы муйыл күрепкә, йәшкелт бесән өҫтөнә кейеҙ түшәттереп, төнәүгә яткайны юлдаш-

тарым. Юк, бер әҙәм күренмәй, тиер инем, йәнәштәге йыуан бүрәнәле йәйге өй тәҙрәһенән ҡустының башы һоноллдо:

– Кисәгеләр вис Харрастарҙа... – Тфү, хәҙерге йәштәр үҙенән егерме йәшкә олоно ла һанға һукмай. Еҙнә тиһәсе, исмаһам, өс туған апайҙың ире ләһә. – Һине көтәләр.

Ҡулйыуғыста ауыҙыма теш таҙартҡыс һытып, ҡулыма һабын еүешләп, ике-өс һүтек өй нигеҙе-ҡалдығы ашаһында кесерткән, киндер-маҙар араһынан аҡкан бәләкәс кенә шишмәгә ыңғайлайым. Бәй, алан-йолан ҡаранһам, берәү һәнәк болғап йөрөйсө зыярат тапкырында. Танығандай ҙа итәм. Булмаç!..

Ҡайтып инеүгә ҡаҙ үләне ялмаған бушлыктан Харрас һөрәнләп ебәрҙе:

– Әйҙә, ҡәйнеш, бигерәк инәлтәһең. Бая апайың уятырға йәлләгән, ну мин йәлләп тормам! – Йоҙрок күрһәтә теге. Йүгерекләп сығам да сак ҡыуып етәм үҙен. Тәнтерәгерәк булһа ла, харап йырбандай.

– Һый барҙа – давай. Һыйлау түгел, тупһама ла баçтырмаç инем дә, һинең хакың дарага. Малай сакта, һуғыш бөткән йыл... Йонсой-йонсой ат эҙләп, ауылдарына һуғылғайнык – һыу ҙа эсермәнеләр.

– Ниндәй ауыл ине һуң?

– Анау-теге... Ҡайынөй, шикелле.

– Ул ауылдан түгел былар, яңылышаһың.

– Булмаһа ни, бер колхоз, ти бит.

– Ауылдарҙың да холко бер-береһенән айырыла ул. Кешеләрҙеке һымак.

Яҡынаябыҙ. Туктап ҡалам: атак, дуçым кәбән таратып йөрөй, ҡайнағаһы апайҙарҙың келәтен ҡараштыра. Бәйләнәм еҙнә кешегә:

– Ә һин, шайлы хужа, ниңә ҡунағыңды мәғәнәһеҙ эшкә ҡуштың әле?

– Һис ҡушманым. Үҙе бакса артына йөрөп килде лә, абзый, кәбәнең йылый башлаған, ҡулды тығып ҡарағайным, ти. Бер ике ыстакан эсергәйнем, түҙмәнеме, ләм-мим өндәшмәй, китте-барҙы күбә һәнәген тотоп. Кәбәнде яуын көндө һалдырғайным оло малайҙан. Ҡыҙалыр, хәл юк... – Малай тигәне – утыҙҙы уҙған баш балаһы, быныһы миңә мәғлүм. – Олакты шул Беларитына, отпускаһы бөттө лә. Яҡын ара-ерме, килә һалып эш итер ине.

– Үҙең һуң? Бер кәбәнде ни...

– Үҙем ни, апайыңа кәр етһә лә, һәнәк ауырая башланы бит әле. – Һаман мәрәкәләп маташа, төкөрәйем холкона. Теләндә ятырак, дөрөçөрәге, онотола барған, беҙҙең быуын бигүк ҡулланмаған һүҙ-әйтемдәр йыш осрай. – Бәсәк, бухый дуçың кәбәнде арма-торма итеп тә бара! – Бухый тип бүлтәйеп торған

ҡорһаҡты әйтеүе. Ауыры беленгән бисәләрҙе лә шулайыраҡ атайҙар был төбәктә.

– Яуып ебәрһә?..

– Яумаһын инде ул, әй. Һатлыҡ кәбән был, яҙға табан бесән ҡиммәтләнә. Бер башланымы, шыйыра ғына бит бында, үҙең беләһең.

Бейек тауҙар әллә болоттарҙы үҙенә тартамы, эйе, ямғырҙар харап ыҙалата торған. Былтыр, ана, үрләй алмай, Елмәрҙәк текә-һенән лысма һыу бороларҡ мотоциклда. Эшкә бер көн һуң-ларға тура килде шул сәбәпле.

– Яумай әле бөгөн-иртәгә, – ти ел ҡапҡаһын асышлай Хар-рас. – Ташморонға томан һарылмай, минең тубыҡ һыҙламай... Әйҙүк, ҡәйнеш, әйҙүк.

Төҫө уңған уҫаҡ өйҙөң ҡорғаны тартылған тәҙрәһенән та-бын өҫтәле шәйләнә: шим бал, ҡорот, ҡаймаҡ, ҡыяр... «Ауылда беҙҙең шул ғына һый инде», – тип ебәрәләр бит әле үҙҙәре. Ҡабыҡтан ҡыҫылған аласыҡтан һурпа еҫе аңҡый. Унда ба-литәкле күлдәгенә оҙон алъяпҡыс быуған хужабикә әсәмә, йәнә Яҡшығолдоң китек тешле әбейенә шыпырт ҡына күрәгәһен тәмләтә, шикелле. Мине күргәс, маңлайын уратып бәйләгән яу-лығын рәтләй-рәтләй, өлтөрәргә керешге апай.

– Хәҙер, энем, хәҙер, иптәштәреңде үҙең саҡыр.

– Ярай, – тинем дә, арбаларында яткан тимер һәнәкте эләк-тереп, картуф баҡсаһы аша инде тағандары сурая башлаған кәбән яғына һыпырттым.

– Тапканһың кәсеп! Колхозыңда кәбән туҙҙырып йөрөмәй-һеңдер әле... – Еңелсә һукранып, ярҙамлашырға тотондом. – Үҙеңә бесән еткерҙеңме һуң?

– Мин бесән ашамайым! – Көлөшәбеҙ. Ҡустым яҡынлаша урман яҡлап.

– Туҙҙырыуы – өс тин бер аҡса! Ә кем кире өйөп ҡуя?

* * *

Һалҡынса өйҙә яңы картуф менән өйрәк итен йыпырабыҙ, әсе-мәсе лә эләккеләй. Ветеринар, тәҙрәгә ҡайырылып:

– Әллә бынау шарламанан һоҫоп ҡына алаһығыҙмы һары балды? – тине.

– Ҡалдыҡ ҡына ҡурға ҡойғайным, килерегеҙҙе белһәм... – Һуаланғандай итә хужабикә. – Беҙҙә өйрәк, ҡаҙ әллә ни һимеҙ булмай. Иген үҫмәгәс...

Ире лә йөпләмәксе:

– Бал эстә әсеп етлегә ул. Икенсе юлы фураж тейәп ки-лерҙәр – вәт булыр ҡуры ла, ҡурмыһы ла...

– Алла бойорһа! – тине ветеринар ирәбе генә. – Ябыҡ ит файҙалыраҡ, эйе, тиң, хәҙерге уҡымышлылар әйтеүенсә.

– Беҙгә генә уҡыу эләкмәне, эх, – тип зарланды күңеле йомшарған Харрас һәм, вареньеға сумған һағыҙаҡты сәнске менән һуған һабағына йәбештереп, бисәһенә һондо: ҡабып ебәр, йәнәһе.

– Эй ошоноң! – Апайыбыҙ үпкәсел түгел. – Үҙең аша, шәп булғасһың!

– Һин, ярай, дүрт класс бөткәнһең, Харрас, ә минеке гәзит тә уҡый алмай. – Ауыҙын сипылдатып, Яҡшыбайҙың ҡарсығы лығырҙай, башы әйләнеп бара, буғай, бисараның. – Белдеш, кемгә сәпсим уҡыу эләкмәгән?..

Йәнәштәге дуҫыма: «Әлек... беҙҙә грамотаһыҙ кеше юк, тип бөтә донъяға яр һалалар ине», – тигәнерәк фекерҙе еткергәндә, ветеринар, берсә ышанмағандай, берсә маһайғандай, һөйләнеп алды:

– Ә мин етене бөтөп, колхозда ат егеп эшләп йөрөнөм, эйе, тиң. Йәшемде ярты йылға ҙурайтып, һыҙҙым фронтҡа, ҡырҡ икенсе йылдың ҡышында. Ҡайтҡас, веткурста уҡыным, дә-ә...

– Яҡшыбай, уҡымаһа ни, пинсейә алырға имзаһын ҡыла белә! – Үҙенсә көлдөрөргә маташа әсәйем. – Йәгеҙ әле, көйләп ебәрегеҙ, бер ултырыуың – бер ғүмер, ти торғайны ололар.

– Шулай, шулай...

– Көйлә, ялтас, көйләмәһәң, ҡабат башыңды ҡырмайым.

*Алыҫтарҙан, э-һей, күгәреп күренәү,*
*Бәштин генә тауҙың дай үңсре...*

Ләкин йыр өҙөлөп ҡалды, аҡланғандай, Яҡшыбай баяғы әңгәмәгә аңлатма бирергә тотонмаһынмы.

– Атай кулак һымаҡ эләкте. Өс ат, байтаҡ бүтән мал тота инек. Ауылда мәктәп юк, йөрөп уҡырға көс-мөс етмәне. Леспром артеленән кит тә бар мин фронтҡа – өс ай ғына йөрөп ҡайтылды...

– Дабраволис булып зәйәвлинйе яҙҙырған бер энеһенән, – тип рыяһыҙ һүҙ ҡыҫтыра ҡарсығы. – Йә, ярар, күп һүҙ – бук һүҙ, йырлап бөтөр баяғы нәмәңде. Һинең шул ике-өс кенә көйөң бар инте.

– Бәштин, Бәштин... Бәй-бәй, ул тауҙың теге осо, эйе, тиң, беҙҙең тирәлә ләһә. – Быныһын ветеринар әйтте, Харрас та, телен көрмәләндереп, бытылдай. – Ә һин, таҡыр баш, һуғышҡа сәпсим бармағанһың! Барһаң, мулыраҡ пинсейә алыр инең йә ялтыр ҡалай тағырҙар ине түшеңә. Франтауиктар, ана, фарсит итә, ашарға* бутевка ала...

---

* *Ял йортона барыу мәғәнәһендә*

Әммә ул-был хәбәрҙе йәнә һағышлы моң басты, гүйә, күңелдәр халыҡ фәһеменә арбалды: кемдер мышҡылданы, кемдер йәшкәҙәне.

*Киләһе йыл был ваҡытта —*
*Әллә ҡайһыбыҙҙың ғүмере...*

– Һа-ай, афарин! – БыҒаса ләм-мим ултырған колхоз рәйесе, өҫтәл артынан ынтылып, йыраусының ҡулын ҡыҫты. Тегенең дә, күрәм, ҡиәфәте ҡәнәғәт, эйәген кәүшәйтеберәк йылмайған булып, бокалын оңҡолдатып түңкәреп ҡуйҙы.

Бераулыҡ табын шымып ҡалды, хатта себен тыҙлағаны ла ҡолаҡҡа салынғандай. Аҡһыл йөҙөн сырыштырып, уфтанып, тынлыҡты апай боҙҙо.

– Һуғыш тигәнен беренк ҡабат күрергә яҙмаһын. Йәшләй ир-ат ыңғайына диләнкә ҡырҡтым, сплавта йөрөнөм...

– Нурмыһы һуң, нурмыһы! Әҙ генә әпәкәй өсөн... – тип ҡеүәтләне уны әсәй. – Әлдә генә еңдек дошманды!

Әлбиттә, апай үҙенең тәүге ире менән ике ай ғына йәшәп ҡалыуын, хәләленең ҡәһәрле ҡырҡ берҙә үк хәбәрһеҙ юғалыуын сурытманы. Бешәле тамағындағы урмансылар барагында кашауар булып эшләгән осорҙа үҙенән ете-һигеҙ йәшкә кесерәк Харраска кейәүгә сығыуын да телгә алманы һәм былай ук сиселеүҙең әле, сит-яттар алдында, хәжәте лә юҡ ине. Ә аулағыраҡ мәжлестәрҙә ул барыһын да һөйләй, барыһын да хәтерләй. Сабыр ғына, теүәл генә, тәмләп кенә – тыңлап ялҡмаҫһың.

Мәжлес ҡыҙҙы, лабыр-лобор көсәйҙе. Ҡапыл Харрас эскәмйәнең арғы осонда көйшәнеп ултырған ҡустыма, гармун тартҡан хәрәкәт яһап:

– Ҡайҙа әле тыҙылдағың? Йырлап-бейеп алырбыҙ, бар, йәһәт кенә килтер, – тине.

– Т-с-с, бында бейерлек кем бар һуң? Бөтәгеҙ ҙә инвалид!.. – Раҫ: ветеринар – бөгәрҙән, Харрас – тубыҡтан, Яҡшыбай янбаштан һылтаҡлай. Әбей-һәбейҙең йә ҡулы, йә биле һыҙлай... Бейеһә, хужабикә бейер. Ойотоп, бармаҡтарын шартлатып, буй-һынын текә генә тотоп. Һүҙе бөтмәгән икән әле ҡустының, үҙе Харрас менән харап ҡаты иркен:

– Тегендә көтә һине гармун. – Егет асыҡ ишек аша ҡараған була, йәнәһе, күрсе кәбәненде. – Хәҙер яуып ебәрһә, вот бейерһең! Гладиатор!

– Кемдәр ҡутарған, шулар өйөргә тейеш! Кәбәнем тәмәке тартмай ине...

Әрепләшеүҙе күңеленә һалғандырмы, намыҫланғандай, дуҫым урынынан ҡалҡынды.

– Әйҙә әле, яр буйын ҡарап киләйек, – тигәс, һамаҡлап өҫтәне: – Ауылдары – Бешәлек, эскән һыуы – Бешәле...

– Барығыҙ, бар, самауырҙы яңыртҡансы йөрөп әйләнегеҙ, – тип ҡалды кемдер артыбыҙҙан. Тик дуҫым һыу буйына түгел, ә кәбән яғына тартылды. Барып етеү менән йолҡҡолап-тотҡолап бесәндең кибеүен тикшерҙе лә, тотондо бәҫәргәнерәк өйөмдәрҙе теткеләп туҙғандырырға: һалғанда уҡ еләп-кибеп барасаҡ.

Оҙаҡламай баяғы ултырҙаштар тотош йыйылды һайғау менән кәртәләп алынған дүрткел сабынға. Береһе – айран, икенсеһе – бал, өсөнсөһө ҡорот тотҡан.

– Тә-әк, малайҙар, һеҙҙең кеүек саҡта мин ун күбәне бер сәғәттә ҡоя торғайным, – тип ләпелдәй хужа. – Тапарға менәйемме?

Ҡусты шырпы ҡабын сиртеп өҫкә сөйҙө – «орел» яғы өҫкә ятҡайны, кәбәнгә үрмәләне:

– Кит, эскән кеше иҫерек кеше менән бер була – ҡолап төшһәң, кем ғәйепле?! Үҙем торам, ә һин, ана, гладиатор булып уйна Яшҡаң менән.

Егет һаһылдай, Харрас йәмерәйә:

– Нимә ул гил... гылдатыр? Көлһәң, бажалый, бал тәтемәҫ һиңә.

– Айраның ни, балың ни. Бар, бер-ике ҡап тоҙ эпкил... Һиберем әҙләп.

– Айран эсегеҙ, бал быуынға төшә бит ул. Ярай, мин өйгә атлайым әле. – Әсәй яй ғына урам яғына шылды. – Мунса өлгөртәм...

– Бәсәк, бабай, ҡайтайыҡ беҙ ҙә. Һарыҡтың өтөлгән баш-тояғын ҡаҙанға һалайыҡ...

– Бравильны, мин әҙерәк һөйләшеп ултырам әле ҡорҙаш менән. – Яҡшыбай ҡалды, ҡарсығы эсәйҙе ҡыуа төштө.

Беҙ кәбән һалабыҙ, ә өс уҙаман кәртә буйында гәп һата. Бер заман ветеринар түшенә ятып та, тубыҡланып та тоҫҡанды, граната һелтәгәндәй киҙәнде.

– Парашюттан ырғыныҡ, эйе, тиң, чех еренә. Еүеш, томан! Разведка с боем, тип сабаулап йөрөйбөҙ. Засадаға эләктек. Инеш аръяғында инеләр, яҡын ебәрмәйҙәр. Улар ҙа утыҙлап ҡына, беҙ ҙә. Командирҙан һораным да шылдым үргә. Һыуҙы шым ғына кисеп, төлкө һымаҡ яҡынаям шырлыҡтан. Шунан – бәр очередлап. Атам-атам да урынды алыштыра һалам, граната ла ырғытам... Полная паника! Арҡаларына, аяҡтарына тейеп ҡолай меҫкендәр... Киттек ҡыуып йән-фарман. Һанағандар аҙаҡ – ун ике мәйет...

– Алдамай, – тине дуҫым, минең ҡолаҡ һалғанды һиҙеп. – Командиры гәзиттә яҙып сыҡты. Былтырмы, элекке йылмы...

– А как же, бывший десантник мин! – Рәхмәтуллин яға ҡайтармаһындағы билдәне түш кеҫәһенән өҫкәрәк беркетеп тә ҡуйҙы.

– Үрдиндәрең барҙыр, әләйгәс? – Харрас сабыйҙарса төпсөнә.

– Байтаҡ ул, әй. Өс орден, биш миҙал, тә-әк, Сталиндың ете рәхмәте, ишеү – отпуск... Ҡырҡ дүртенсе йылда бирҙеләр, балтырға ярсыҡ ингәс. Шуны алдырҙым да лазаретта, ялға ҡайтып, өйләнеп, фронтҡа кире һыпырттым. Эйе, тиң, кейәү?

– Шулайҙыр, тик ул саҡта мин бар инемме?

– Һәй, юҡ инең шул, – яугир бот сабып көлөмһөрәне лә етдиләнде. – Әһ-һә, һин Еңеүҙең илле йыллығын байрам иткәндә зампред инең бит әле. Һый ойошторҙоғоҙ, эйе, тиң?

– Эйе, эйе, – тигән булды дуҫым, маңлай тирен һыпырып.

– Яҡыныраҡ килеп тыңлағыҙ оло кешене, – Харрас быны ярамһаҡланыуһыҙ, бойоробораҡ әйтте. – Килештерә берәүҙәр – күлдәкһеҙ кәбән һала тиме кеше? Тәнегеҙ сыйылып, әүрәүҙән ҡысынып, йоҡлай алмай ятырһығыҙ әле бөгәсә.

Эргәләренә яҡынлаштыҡ. Ветеринар аяҡ салып ултырған ерәнән үрә баҫып, хәтирәһен барланы.

– Йыйналдыҡ клубҡа, эйе, тиң, өс-дүрт ауылдан. Ун бишләп ветеран... Кемгә күлдәк, кемгә ыштан тигәндәй, миңә галстук – ғүмере муйынға бәйләмәҫ бүләк тотторҙолар мир алдында. Түштәребеҙгә миҙал өҫтәп таҡтылар, юбилейныйҙы. Ыҫталауайҙа һый мул! Ҡайынөйҙән, анау һин һыу ҙа эсмәгән ауылдан инде, Харрас туған, Ғилметдин ағай бар. Әле ауыр хәлдә ята бахыр. Әйттем яңыраҡ агранум ҡыҙына: бер-бер атаң тегендә ашыҡһа, миңә әйт, әбизәтельне әйт, Алла бойорһа, ерләшергә барам, тинем. – Рәхмәтуллин тамағына тығылған төйөрҙән ыңҡылдап алды. – Шул ағайыбыҙ тотто ла бәйләнде, эйе, тиң, анау-у торжоҡ танау Насрыйға. Һин нишләп аяҡ аҫтында сыуалаһың, ҡупайып, фронтты ла күрмәгән көйө? Тай бынан, ти бит. Насрый ҙа насар – ҡарышҡан һымаҡ ултыра, эйе, тиң. Бында – фронтовиктар, тыловиктарға урын юҡ, миҙалыңды йә өҫтәлгә һал, йә йолҡабыҙ, тип тағы бер ҡарт ҡырсынды тегеңә. Юҡ, ыжламай ҙа...

– Арҡаһы ныҡтыр, – тигән булды Харрас, тубығын ышҡыйышҡый. – Әтеүсә...

– Өҫтөнә баҫтың, туған. Райсоветта бутала бесталкауай энекәше, шул яҙҙырған миҙалға. Ярты йыл Магниттамы трудармияла йөрөп, шунан да ауырығанға һалышып ҡайтҡан бәндәне.

– Һин, ҡайнаға, районда һөйләмәҫ инең бындай нәмәне, – дуҫым ветеринарҙы үсекләберәк өҫтәп ҡуйҙы. – Эйе, тиң?

– Бажалый... – Көттөрөп кенә ишетелде яуап. – Әллә ни мах биргән юҡ та ул ундайҙарға ғына.

– Туҡта әле, тәртәңде бүтән яҡҡа ҡайырмай тор, – ни сәбәптәндер Харрасты һуғышҡа ҡағылышлы әңгәмә ҡыҙыҡтыра ине. – Насрыйығыҙҙы нишәттегеҙ?

– Үҙең әйтмешләй, арҡаһы нығ булғас, күптәр шыртлаңҡырай шул. Ғилметдин ағай былай тине аптырағас: Насрый таймаһа, мин таям. Ул һалдаткаларҙы баҫтырғанда, немецтәрҙе баҫтырған старшина әле мин, ти...

– Юҡсы, – тип бүлдерҙе дуҫым. Ҡайнағаһы аныҡлабыраҡ осланы.

– Эй, тәүҙә көрөшкә бирҙеләр бүләккә, әле лә юлға йөрөтәм. Ағай шуға араҡы һалдырҙы, имеш. Шунан, фронтта наградаларҙы ошолай йыуа торғайныҡ, тинеме, түшендәге яңы миҙалын әлүмин көрөшкәгә сумырып, былт-былт йөңкәйтте лә ҡуҙғала башланы. Артынса – мин, шунан «миҙалыңды йолҡабыҙ» тигән ҡарт, йәнә берәү ҡыбырлаштыҡ. Бынауы әзмәүер юлға арҡыры төшөп, юхалап ҡына Насрыйҙы бер тоҡсай һый менән өйөнә апармаһа, бик йәмһеҙ бөтә ине мәжлес.

– Йөрәкле икән ул абзый! – тип ҡуйҙы был юлы Харрас ғәмле генә.

– Йөрәкле, кәнишнә, немец формаһын кейеп, немецтәрҙе тереләй алҡайтыр, штабтарын яндырыр, складтарын шартлатыр инеме әтеү? Кәләшенә ты-у «похоронка», ты-у «без вести пропал» килә икән. Терһәге нығ зәғифләнгәс кенә ҡайта ауылына. Гелән завферма йөгөн тартты.

– Кукашканан нәҡ шулай һуғышҡан даһа, теге... – Харрас йөпләү көтөп, Яҡшыбайға баҡты.

– Аҙашың ине. Ул да, немец формаһын кейеп, ғәләмәт һуғышҡан. Урыҫ яңғайына Кукашка тимәһәң, Күккашка лаһа ул ауыл...

– Бәй, ул ҡартты осратҡан барсы. Ауыл һайын йөрөй торғайны тире-мире, һөйәк, сепрәкме йыйып... – Мин дә, айран һемерә-һемерә, бала саҡтың хәтер һандығын аҡтарҙым. – Аты дан ине!

– Ҡарт һиңә!.. Ҡырынмай йөрөгәнгә шулай күренгән. – Харрастың бытылдығы сыға. – Өйө янып китте, бисәһе үлеп әрәм булды. Рудник баҙарында немец теленән уҡытҡан берәүгә нимессә өндәшә икән был. Теге ғәжәп иткән, ҡалай шәп беләһең, тигән.

– Уҡытыусы, мужыт, үҙе лә нимессә икмәк-тоҙлоҡ ҡына белгәндер, – быны кем әйткәнен аңғарманым.

Ҡапыл Харрас күкрәге ҡабарып, нәҙегәйә башлаған кәбәнгә ҡарап ҡысҡырҙы:

– Эй, мортой, йоҡлап ятыш әллә?

– Юҡ, тыңлап ятам, күгәргән еләк мыртам.

– Һыуһынға берәй нәмә әпирәйемме, тырмаға элеп?

– Кәрәкмәй. – Егет телләшергә теләмәне.

– Маладис, йә ни бес итеп ҡуйырһың ут йәшел бесәнемә.

Бәғер һыҙлатҡыс әлеге әңгәмәләрҙән күңел болоҡһоғандыр-

мы, аулак сабынды яңғыратып һаһылдаштык. Окшатманы быны кустыкай, үҙенсәрәк аңланы, буғай.

– Ф-у, һөйләйем әтеү гладиаторлығыңды ағайҙарға, – тип баяғы янауын кабатланы. Мин хәбәрҙе икенсегә һаплай һалам.

– Был тирәлә кәләш алмаған егетте «мортой» тип мыҫкыллайҙар.

Әрепләшеүгә тиҙҙән нөктә куйылды – кәбән тапаусы иғтибарҙы урманға йәнәш һукмактан бирегә якынайған үҙе тәбәнәк, үҙе йыуантак ханымға йүнәлтте: «Кеше килә – артык сәйнәнмәгеҙ».

– Һаумыһығыҙ әле.

Һайғау араһынан һаркылған тыйнак сәләмде бөтәбеҙ исеменән Харрас алды:

– Һау әле, һау. Ни йомош?

– Йомош тип... Һеҙгә мал врачы килгән, тип ишеткәйнем. – Йәш катын мине таныйҙыр, карашын шундук һәнәккә йәбешкән дуҫыма төбәне, Харрас иһә ветеринарҙың яурынына кағылды.

– Уныһы түгел, быныһы. Шәп духтыр! Колоноғоҙҙо бүре сыймаклап кайтарған, тигәйнеләр, ысынмы?

– Ысын, ысын, ней ирем өйҙә юк...

– Бармайбыҙ, – тип юрамал этләшә Харрас. – Ирең өйҙә булмағас...

Йәнә көләш... Эс бошоуҙан сарланалыр инде ул тел тигәнең. Юғиһә, бер-ике транзисторҙан, пенсия-фәлән менән бергә һанда-һаяк почтальон ташыған өс-дүрт дана гәзит-журналдан башка әлеге төпкөл төйәктең оло донъя менән ниндәй бәйләнеше бар һуң? Ярай, йәйҙәрен гөрләп ала әлеге ауыл йораты. Йәштәр, бала-саға өйөрө менән бәрәңге күмешә, бесән эшләшә. Кистәрен йә әүһәләй тағылған карағай төбөндә, йә кырсында геүләткәнсе усак яғып, шағарак коралар.

– Бармаҫтыр ул. Укыл каҙарға эспирт кәрәгә, ти бабайың, белдеш?

– Юк бит әле. – Йомошсоноң тауышы мөштөмөрәк сыкты. – Самауынка бар әҙ-мәҙ.

– Барам, һеңлекәш, кайғырма... Малдың рәнйеүе ихтимал. Кәнде ярай «самай» тигәнең. Сумкам соланыңдамы әле? – Ветеринарҙың мут кына күҙ кыҫыуына Харрас эйәк какты ла Якшыбайға өндәште. – Һин, ялтас, эйәрмә беҙгә. Әбейеңә ярҙамлаш, ана, төтөнөгөҙ йүнләп сыкмай. – Беҙҙе лә онотманы. – Эй, кәйнештәр, ыштобы каҙ күкәйе һымак ослағыҙ минең кәбәнде! – Бисәһенә лә кул иҙәп һөрәнләне. – Алып кил әле абзыйҙың күн сумкаһын...

Өс ҡыҙмаса баш, өҫкө һайғауы һүтелгән кәртә аша бер-береһенә тотоношоп сыҡты һәм тыштан ярайһы арыу күренгән йорт яғына йүнәлде.

Кәбән осланып, эргә-тирәһен тырмаштырып ҡуйыуға, апайыбыҙ өйөнә әйҙәне. – Йәшергән нәмәм бар әҙерәк, әйҙәгеҙ, энекәштәр, ҡалай ҙур ярҙам күрһәттегеҙ. – Инәлеүенә ҡарамаҫтан, ҡайтырға булдыҡ. – Улайһа, оҙатҡанда һыйлармын, – тип аҡыл да өйрәтеп ҡалды хужабикә: – Һыуыҡ һыуҙа сайынмағыҙ берүк, лутсы мунсағыҙға инеп кенә ғосол ҡойоноғоҙ.

* * *

Шулай иттек тә. Әсәй кесе өйгә сәйгә саҡырҙы ла, оло ҡунаҡты алып ҡайтайым әле тип, үрге оска юрғаланы. Ҡустынан Харрасты ниңә «гладиатор» тип мыҫҡыллауының сәбәбен белештек. Тиктомалға ыҙғышып алалар икән бәғзе саҡ.

Ҡаурыйҙарын елпеүес һымаҡ тарбайтып, тәҙрәнең ике яғына ҡыҫтырыулы һуйыр ҡанаттарын күргәс, күңелдәрҙә һунар ҡомары елкенде. Ҡустым да шапырынырға апаруҡ:

– Яҙғы уйында алдыҡ. Элекке класташ менән. Лесник ул, бесәнен ташып бөтмәйҙер, килергә тейеш ине бөгөн поселоктан. Эргәләге анау-у ағастарға килеп ҡуна ҡорҙар. Беҙ уларына теймәйбеҙ – кеше алама, ошаҡ яҙып ебәреүҙәре бар тип, мотоциклда элекке диләнкәләрҙе урап ҡайтабыҙ. Бер мылтыҡтан алмаш-тилмәш атҡылайбыҙ, балыҡҡа ла йөрөштөрәбеҙ. Хәҙер һуйырҙар кәнде ваҡ таш сүпләргә юлға сыҡҡылай. Эх-те-и!

– Мотоциклың яҡшымы? – Дуҫым устарын ыуғыланы.

– Иҫкерәк, ну тарта! – Егет баш бармағын сөйҙө. – Белореттан ҡайтҡылап йөрөйөм: йөҙ илле кымы-ны – выжт!

Мин гәзит ҡараштырған арала был икәү шыш-быш килде. «Кабинала мылтыҡ бар...» «Бензин етеңкерәмәҫ...» «Кузовтағы кәнистерҙән өҫтә лә...» Дәрттәренә дарман өҫтәнем:

– Бер сәғәт ваҡыт һеҙгә! Ташморон яғына барһағыҙ, уңырһығыҙ, моғайын.

– Кәбән һалыуға – бер сәғәт, һуйыр эҙләүгә лә... Ярай, ағайҙарҙың бәхетен һынап ҡарайыҡ әле.

Ҡустының беҙҙе «һеҙ»ҙән ҡырҡып тороуына йән ирей, мәгәр үҙемдекен ныҡыйым:

– Ҡор осраһа – икәү, һуйыр насип итһә – берәүгә лә шөкөр. Инәләренә теймәгеҙ!

Тиҙҙән танымаҫлыҡ инеләр: ҡустым һалдат хеҙмәтенән ҡалған күлдәк-салбарын, дуҫым минең иҫке-моҫҡоно кейгән, баштарында – шлем, аяҡтарында – ҡыҫҡа ҡуныслы ҡойма итек. Әммә артҡы тәгәрмәскә тын өҫтәргә кәңәш бирҙем, сөнки ҡу-

наҡтың тослоғонан ялпаша яҙҙы. Машина насосынан йәһәт кенә өрҙөрөп, әүернә юлдан төрлө ағасы төрлө төҫкә мансылған хозур урманға инеп тә юғалды былар.

Күп тә үтмәне, аһылдап, йөрәк тирәһен ышҡый-ышҡый, әсәм пәйҙә булды.

– Төтәтеп кенә барып әйлән, улым: Харрас Яҡшыбай менән болара! Бәйеле аҙған ғәләмәттең... Эсеүе еттеме, бышҡырырға керешә, кем етте шуның менән кәзекләшә. Уф, Аллам, әҙәм көлдөрөп... – Сутырлай меҫкенкәй, арттан иҫкәртеүе ҡолаҡҡа яғыла. – Ҡаты бәрелеп ҡуйма, ипле генә тый!

Зиһендә әллә ниндәй уйҙар ҡуҙғый. Тәҙрәнән мине күреп, һауыт-һаба йыуыштырған апай аласыҡ яғына ишаралағас ҡына эскә йылы инде.

Көлөрһөңмө, иларһыңмы? Аласыҡ күләгәһендә ләһә теге өсәү: Яҡшыбай менән Рәхмәтуллин йыуан имән киҫкәлә ойой, ә Харрас ерҙә ҡырын ята, үҙе берсә шыңшый, берсә һүгенә, берсә янай. Алдарында – түңкәрелгән тимер ялғаш. Ҡалтайған, урыны менән тишкеләнгән унһы, әммә өҫтәл хеҙмәтен үтәрлек: яртылаш бүҫкәргән шешә, остары ҡыуарған һуған һабаҡтары, кәкре-бөкрө ҡыярҙар, ҡаты ҡорот киҫәктәре күренә.

– Яшка, хәҙер өйөңдө йә үртәйем, йә йырынға күҫәкләп ауҙарам. Ниңә һуктың миңә, ә? Бандит һин! – Танауынан аҡҡан ҡан ҡатыш лайлаһын да һөртмәй, үҙ алдыша һөйләнеүен, һыҡтауын белә Харрас.

Әһә, былар уйындан уҫмаҡ ҡуптырмаҡсы. Һүҙ көрәштереүҙән көс һынашыуға күп ҡалмай торған баш ҡыҙған мәлдә. Уларға аҡыл өйрәтеүҙән, оялтыуҙан фәтүә юҡтыр, киреһенсә, һөсләп ҡарағанда?

– Әрләшеп ятҡансы, давай, ғәҙел һуғышығыҙ. Гладиатор булып. Бына һин, еҙнә кеше, кәритә менән көпләнеп, һәнәк тот та ҡапҡа төбөнә баҫ.

– Ә мин? – тине Яҡшыбай, төҙәйә биреп. – Баҫырау күтәрәм...

– Тә-к? Һин дә һәнәк ал – ҡорал бер иш булырға тейеш. Ҡаҙан ҡапҡасын ҡалҡан итеп бәҙрәф яғына баҫ. Шунан, мин һыҙғырғас ҡына, һәнәктәрегеҙҙе алға һоноп, ҡапма-ҡаршы йүгерешәһегеҙ йәнтәслим. Кем кемде сәнсеп йыға – шул еңеүсе була. Бисәләр һымаҡ тәмһеҙләшеп ултырғансы...

Аңланы Яҡшыбай уҫал шаяртыуҙы, бармаҡ янап ҡуйған булды. Ә мин юрамал утҡа кәрәсин һибәм:

– Әҙерһегеҙме?

...Былтыр 9 майҙы Яҡшыбай өйөндә билдәләйҙәр. Харрас, нәк бөгөнгө ише тызырайып, Яҡшыбайҙы кәмһетә: һин һуғышта ҡатнашмағанһың, фәлән дә төгән. Яҡшыбай асыуынан Харрасты артына тибеп ҡыуалай. Ҡайтҡан да тегеһе, ни ҡыланғанын белмәй, яурынына ялғаш элеп, күҫәк һөйрәп, ҡабат

килгән. Шунда көн һорап ҡына һунарға ҡайтҡан ҡустым көскә айыра былдарҙы. Борон күҫәк менән һуғышмаған гладиаторҙар, һәнәк менән алышҡандар, тип баштарын ҡатыра ла асыуҙарын һүндерә, хатта яраштырып ҡуя...

Был юлы ла улар тиҙ һыуынды. Харрас ҡына һаман үҙенекен тылҡый: – Мин дә йәтимәк үҫтем. Ат типте бит тубыҡҡа, әрмиселеккә яраманым, әтеү әфисер булыр инем әле... Эх, Яшка! Бәзерәйеп ултырған булаң, ҡытай күҙ!

– Бырылдама, былағай, хыуатит һиңә! Ауылда ирҙәр күберәк булһа, холҡоңа күрә, көн дә тукмалыр инең, шәт. – Апай ҡыҙмай ғына, ҡысҡырмай ғына тетмәкәйен тетә еҙнәнең. Миңә лә арҡаланалыр. – Күпкә китһә, күткә китә, тигәндәре ошолор. Имеш тә, ҡолон тәрбиәләп ҡайтты бирәүҙәр. Эсергән, ишеү үтескә бер ярты тотторол ебәргән теге бисураһы ла. Элекке уҡытыусы үҙе... Һин дә мин ҡосаҡлашып ултыралар ине, ҡунаҡ йоҡлап киттеме, бынау һөмһөҙө эләктергән... Сорлап аҡты бая ҡаны. Сепрәк һыулап, саҡ тымыҙҙым!

– Ниңә ғауғалаштылар икән?

– Ишетмәй ҡалдыҡ. Еңкәм килгәйне ҡунаҡтың хәлен белешергә, өйҙә инек. – Апай өҫтәмә хәбәрен ҡолаҡҡа шыбырланы: «Ҡунаҡ та иҫереп алды. Һөйләгәне – һуғыш та муғыш. Маҡтансығыраҡ әллә?» Һәм тауышын күтәрҙе. – Һин фронтта булмағанһың, фәлән дә төгән, тигәнме минеке, Яҡшыбайы, сикәһенә сабам тип, ҡанатҡансы танауына ҡыялатҡан. Ярай, ике туған һуғыша – атҡа менһә, яраша, бирғәйбә.

Беҙҙе тыңлап ятҡандармы, Яҡшыбай тәүҙә мүкәйләне, шунан тубыҡланды, ахырҙа, көсәнеп, аяғүрә баҫты. Берауыҡ бәүелеп-сайҡалып торғас:

– Ҡабат сәйнәнһә, ауыҙына йымыра тибәм, валлаһи! Нервым алама минең! – тип ҡапҡаға табан аҙымланы. Ә Харрас асыуын ҡартайған һалпыш ҡолаҡ ала этенә төшөрҙө. – Севә, ысволочь, яҡлашмайһың да... Немуй!

Ҡапҡанан кире боролдо Яҡшыбай.

– Әйҙә, гадук, беҙгә... – Ветеринар ҙа уянды, бик яй ҡуҙғалды, әммә сәсен тарап, йоҡа сепрәк кепкаһын кейергә, өҫ-башын ҡаҡҡыларға онотманы.

– Сумка ғәйепле, алмайым тип торҙом шуны... Рәхмәт һыйығыҙ өсөн. Юл төшһә, миңә рәхим итегеҙ, йәме?

– Әйтеүеңә рәхмәт. Хуш-һау! – «Биҙрәнем инде һеҙҙән», тип тә ыҫҡындыра яҙҙы хужабикә, мәгәр мәлендә тыйыла белде.

Бер аҙҙан һил урамда «Катюша» яңғыраны. Ҡултыҡлашып, тайшан-тойшан атлаған, дөрөҫө, арлы-бирле аяҡ шылдырған уҙамандарға эйәрҙем. Яурыныма ветсумканы аҫҡанмын. Аҫтағы мөйөштә, тәпәш кенә түмәләстә Яҡшыбайҙың хөртәмеш кенә донъяһы.

Арбаһын кисеүгә туғарған, тәртәләре ҡырсынташта килелеп ята. Өй алды рәшәткәһеҙ, ҡойма эргәләрен кесерткән, дегәнәк баҫҡан, аҙбары, утынлығы ҡаҡшаған, урыҫ ҡапҡаһы ҡупшаған, мунса ҡыйығы лапашҡан. Минекеләр, ана, быйылдан ҡалаға күсергә йыйынһа ла, донъялары ҡараулы, Харрастыҡы ла түҙерлек.

Эх-х, Яҡшыбай... Өйөнөң эсе лә, беләм, үтә кәҙимге, хатта ки фәҡир генә. Ҡуй, кемдеке – шуныҡы, быңдай ҡуңалтаҡ тормошто ете яттарға күрһәтмәүең хәйерле. Шулай уйланыммы, юҡмы, әммә ветеринар йәйге өйөбөҙ тәҙрәһен төкөй яҙып туктаған зәңгәр машиналарын шәйләү менән, ҡайтырға ваҡыт, Ғилметдин ағай төшкә керҙе, тип мығырланы. Яҡшыбай, шепшә, ебәрмәй тегене, еңенән тартҡылай. Ҡапҡа алдына ҡарсығы сыҡты, ҡул иҙәп эскә әйҙүкләне. «Бабайың ятып торһон әҙерәк, килербеҙ әле», – тип уҙҙыҡ та киттек.

* * *

Һунарсылар ҡайтмағайны. Һәптән ветеранды, ай-вайына ҡуймай, сисендермәй генә бөгәсә төнәгән күребенә һуҙып һалғайным, ых-бых йоҡлап китте.

– Аш бәһлеүән, – тигән булды ҡош-ҡортона ем һибеп йөрөгән әсәм. – Тегеләрең нишләп оҙаҡлай һуң? Балыҡҡа ҡыҙыштылар, ахыры... Бар, төҫөң ҡасҡан, йыуынып ал. Мунсаның ҡыҙыуы һүрелмәгәндер.

– Ярай, егеттәрҙе әҙерәк көтәм дә, ҡарармын...

– Әләйһәң, йомошка йөрөп әйләнәм. Малдар ҡайтһа, индер ҙә ебәр ялан кәртәгә.

Йомошо һылтау ғыналыр: утарҙағы һуңғы яңылыҡтарҙы күреп-ишетеп ҡайтырға ниәте.

Ҡояш Елмәрҙәктең көн битләүҙәренән уңға, тәпәшерәк армыттарға һалыулай. Ара-тирә һалҡынса ел иҫкеләй, тимәк, тәүге ҡыраулар ҙа көттөрмәҫ.

Эт өрөп, тоноҡ тырылдау ишетелгәс, оло ҡапҡаны шар астым. Ҡайттылар. Йөҙҙәре шат, берәй нәмә атҡандарҙыр.

– Үҙең ҡушҡанса, ике этәс: береһе – йәш һуйыр, икенсеһе – елле ҡор. Снайпер икән ҡустың!

– Бик хуп! Мунсаға сап, битеңә батҡаҡ сәсрәгән. – Дуҫ шундуҡ ризалашты.

– Зыян итмәҫ. Иртәгә – ике оперативка: тәүҙә үҙем үткәрәм, шунан районға елдерәм.

– Балыҡ бирһәң, баулап бир, ти торғайны олатай мәрхүм, – тинем ҡустыға мотоциклын аҙбарға этешкәндә.

– Аңланым, – ти ул. – Уны ни, эҫе һыуға батырҙыңмы, йөнөҡанаты анһат ҡына йолҡола. Еңелсә тоҙлап, кесерткәнгә урайһың да сепрәккә төрәһең – аҙна буйы боҙолмай.

– Белгәсең, маладис. Һуйыры – миңә, ҡоро – ?..

– Шыбаға тотторам әле тәүҙә, ә, юк... – Ҡусты, ғәҙәтенсә, шырпыһын сиртеп-сөйөп ебәрҙе. – Һүрәтле яғы төшһә, һуйыр һинеке булыр... Оттоң әй!

Ҡай арала айныҒандыр, ихатаға ҡулына ҡапҡаслы биҙрә тотоп, Яҡшыбай килеп инде. Артынса – ҡарсығы, уныһы ҡултығына таҫтамал менән көпләүле табаҡ ҡыҫтырған.

– Әҙәмгә һанамаған, килмәгән булдығыҙ, – тине үпкәләберәк Яҡшыбай. Ҡатыны ла өндәште:

– Йомшаҡ ҡына бешкән баш-тояҡ... Хәзәйкә ҡайҙа һуң? – Тура йәйге өйгә инделәр ҙә һауыт-һаба шалтыратырға керештеләр.

Эйәртенешеп, тиҙҙән әсәй, апай менән еҙнә бәләкәй ҡапҡа аша үҙҙылар. Харрастың танауы шешмәк, етмәһә, сөгөлдөрҙәй сейләнгән. Ул арба янына барып, ветеринарҙы уятырға тотондо.

– Тор әле, абзый, тор! Аҫтың ҡоромо? Ана, персидәтель шелтә сәпәйем, ти үҙеңә.

– Ярамай, гвардееҫ таһа мин! – тип егеттәрсә ҡалҡынды урынынан ветеран. Яурынына таҫтамал һалып, эргәләренән үтеп барған дуҫ та юлдашын мәрәкәләне. – Ял көнө шелтә йә иҫкәртеү ҙә таман! Эйе, тиң, иптәш Рәхмәтуллин?

Әллә кисәге көн ҡабатланамы? Шул уҡ кешеләр, шул уҡ ихласлыҡ, ябайлыҡ, тәбиғилек. Гәрсә ғүмер баҡый ошонда йәшәгәнбеҙ, ошо тормошҡа күнеккәнбеҙ. Айырма бары шул: кисә – көрәшеү, әле – оҙатыу. Шуғамы, күңелдәрҙә моңһоу тулҡындар ҙа тирбәлгәндәй.

Харрас менән Яҡшыбай ҡабат бәрлегешерҙәрме? Әлегә уныбыны белгертмәйҙәр, бары ятһыраған кеүек ҡыланыштары. Бәлки, көндөҙгө ыҙғыш онотолғандыр. Икеһе лә кенәсел заттан түгел былай. Ветеринар ҙа нилектән ғауға ҡупҡанын төшөнмәҫлек ине, шикелле.

Түшкәләрҙе тәрбиәләп, һуйырҙы – оло өйҙөң һалҡынса баҙына, ҡорҙо ҡул осона – синнеккә ҡуйғансы, асыҡ ишектән кисәгенән дә хислерәк йыр-моң ағылды:

*Ҡалды ғына тауы, ай, ҡалд(ы) инде,*
*Һары ла сәскә-үлән алд(ы) инде.*
*Аталарҙан бала, ай ҡалд(ы) инде –*
*Бәхеткәйен бирһен Алл(а) инде.*

Өйгә яҡынайыбыраҡ тыңлайым, әҫәрләнеп, бер мәлгә өнһөҙ ҡалған табын яйлап үҙ ибенә инә.

– Рәхмәт, тиңдәш, булдыраһың! – Ветеринар тауышы.

Быныһы Харрастыҡы:

– Бәй, был көйөңдө урманда ғына мөңрәй торғайның элек. Айыуҙарҙы аптыратып!

– Ана шул ҡалды тирәһендә һуғыш осоро төрлө йыныс халыҡты плинный һымаҡ эшләткәндәр. Ас тотоп, һыуыҡ бараҡтарҙа яткырып... – Әсәй ҙә ишеткәндәре менән уртаклаша, ә апай, абайлап, тоҙлап туралған оҫкондоң ҡырҡыу, танһыҡ еҫе тыштка уҡ бөркөлгән өйгә әйҙәй. – Бәсмилла, ниңә кермәйһең ул? Ҡунаҡтарыңды һыйла әйҙә.

– Сипарат айыртамы унда ҡәйнеш? – Әлеге лә баяғы Харрас. – Ин әйҙә, тәмәкесе! Шул зәхмәттән тәки ҡотолдом үҙем!

Күп тә үтмәй, дуҫым аяғүрә баҫты, хушлашыу ҙаһа ниәте. Ваҡыт ҡыҫа шул, яктыла ҡуҙғалыу фарыз. Ҡыҫка, ләкин яғымлы әйтте. Халыҡ алдында сығыш яһауға шымарып баралыр.

– ...Башҡорт индеецтары ошонда йәшәй икән. Боронғо кәсептәрҙе, йолаларҙы, йырҙарҙы, хатта ризыҡтарҙы онотмайһығыҙ. Йә, бынау оҫкон йыуаһы – иҫке ауыҙға яңы аш бит. Сакырылмай килһәк тә, онотолғоһоҙ ҡәҙер-хөрмәт күрһәттегеҙ. Иҫән-һау тороғоҙ, Хоҙай һәммәгеҙгә лә оҙон ғүмер бирһен. Рәхмәт, туғандар.

– Үҙегеҙгә рәхмәт, юлайкан улымды апкайтып, ҡымыҙ тәмләтеп китеүегеҙгә, – тине әсәй. – Күңел бөтәйеп ҡалды әле һеҙ килгәс...

– Совет власы Елмәрҙәк аша уҙа алмаған, тиҙәр ине элек, әле лә шул тормош... – Ҡустым быныһын үртәлеберәк ыҫкындырҙы, буғай.

– Аптырағандың көнөнән йәшәлә инде. – Фекерҙе ҡеүәтләп ебәрҙе апай.

– Ниндәй тупик... төбәк һуң был? Бешәлекме әле? – Ҡыҙмаса ветеринар, әйтеш ойошторған кешеләй, һүҙҙе әле бер, әле икенсе якка һаплай.

– Ҡарағайҙың бер төрө бешә була. Сайырһыҙырағы. Ағыраҡ шыршыны шыжы тибеҙ. – Харрас белгәнен ышаныслы аңлата.

– Ҡайтмағыҙ төнгә ҡарай... – Якшыбай ҙа мыңғырлап ҡуя. – Һарыҡ салам.

– Мин риза ла ул, командирым бар бит әле, эйе, тиң, кейәү? Вперед, тип йүгерһә, ятып ҡалыу килешмәҫ. Кем апарып ташлай мине аҙаҡ?

– Ауылдарға йөрөһәң, сумкаңды аҫып, вис булыр. – Харрас һаман мәҙәк эҙләргә тырыша. – Тәкә-мәкә бестереп...

– Йә, леспромхоз йылкыһын күп көттөк, исмаһам, ҡымыҙ ҙа бешмәгәнбеҙ. Кәбән ҡойған өсөн, ошоно ҡабул ит, энекәш. – Апай ҙа рәхмәтле: дуҫыма үҙе бәйләгән йөн ойоҡбаш, ә ветеринарға бейәләй тотторҙо. – Аяҡ-ҡулың һыҙлауһыҙ булһын, тәкә бескәндең әжере, мә.

Ниҙер иҫенә төшкәндәй, әсәй соланға сыҡты ла яртылыҡ банкалар индерҙе.

– Бигәйбә, аҙаккы ай эшләйем, эйе, тиң. Бестем дә мин, эстем дә мин! – Шаңкыбырак ултырған Яҡшыбайҙың ҡабат күңеле ирене.

– Ҡайтмағыҙ, һарык һуям таң һарыһынан.

– Һуям да фуям. – Түҙмәне, ирештерҙе киҫекһеҙ Харрас, тик апай осаһын семтенеме, тиҙ шымды. Хужабикә арлы-бирле йырлап, хуш аяғын тәкдим итте.

*Нисек килдегеҙ һеҙ беҙгә*
*Төшмәйенсә Иҙелгә?*
*Ҡәҙерле ҡунаҡ һеҙ беҙгә,*
*Ней хөрмәт күрһәтергә...*

– Йәлке, күрмәнегеҙ хәзәйенде: Беларитка киткәйне һатлыҡ өй һайларға. Күсәбеҙ балалар эргәһенә. Бальнис яҡын була... Ғәфү итегеҙ, маҡтағасһығыҙ, кустәнәскә оҫкон булһа ла бирәм... Улдарым яҙ күп апкайтҡайны...

Харис та йомартланмаксы – ҡустыма ипле генә йомош ҡушты.

– Бар әле, ҡәйнеш, минең музыйҙан... – Биш бармағын тырпайтып, маңлайына терәне. – Ун өс саталыһын...

Нимәһен килтереүҙе үтенә? Музей тигәнен күргәйнем былтыр: һабан төрәне, әллә ҡасанғы ҡул тирмәне, ағас сығыр, кирәм, балға кеүектәре, моғайын, нәҫелдән ҡалған монаят. Үҙе йыйғаны ла бихисап. Һунар саңғылары, ат ҡыңғырауҙары, багор кеүек шором-боромо – үҙе йылкы көткән, диләнкә ҡарауыллаған сактан йыйынтыҡтыр. Шунда уҡ тал ҡайыры, селек һепертке, ағас көрәк бәйләмдәре һаҡлана. Ана шул шаҡы-шоҡо келәте өсөн ейәне, каникулдан ҡайтҡас, дедушканың музейы бар, тип маһайған мәктәптәрендә. Уҡытыусылары, ҡыҙыҡһынып, малайҙың әсәһенә барып, белешеп тә йөрөгән, ти.

Булыр... Әлегә минең хәтергә дуҫымдың «Башкорт индеецтары...» тигән шаяртыбырак, мәгәр ярайһы тапҡыр сағыштырыуы һеңергә ынтыла. Үткән-һүткәнде ҡәҙер итә белә бешәлектәр. Гелән өс-дүрт ғаилә генә үҙ-ара аралашыуҙан екһенеп тә бөтәләрҙер... Һынамсыл уй-хистәремде уртаклашкан ише, ҡапыл ғына бәләкәй өй моңһоу һиллеккә сорналды, Харрас та ылбырап бешкән тояк мөнйөүҙән туктаны.

Колхоз башлығы тәҙрә төбөнә ҡуйып торған барсеткаһын алып асып ҡараны ла, кәңәшләшкәндәй, күршеһенә шыбырланы. Ветеринар эйәк ҡакты, ниҙер әйтте лә кеүек.

– Үпкәләштән булмаһын, юл хәйере таратайым әле, туғандар. – Дуҫым уң ҡулынан уң ҡулға шыптырлап торған унарлыҡтар тотторҙо.

– Ярай, һуң, хәйерле юл. Иҫән-һау ҡайтып, сәләм тапшырығыҙ. Доға ҡылайыҡ... – Юлаусыларҙың һорауы буйынса, ашка амин тоттоҡ.

Без сығыуға, ҡустым оло өй соланында ултыра ине. Егәрле генә шул – кәртә артлап елеп кенә йөрөгәндер. Эргәһендә бик күрмәлекле мышы мөгөҙө – бая Харрастың йомаҡ ҡойғандай «ун өс саталы» тигәне ята. Тимәк, бүләк итмәксе еҙнәкәй дуҫыма. Бер ҡараһаң, әрһеҙ, тупаҫ кеүек ул, әммә, бешәлектәр әйтмешләй, эре, дөрөҫ, ваҡай түгел. Ана бит, кәрәк саҡта былағайланмай. Әйбер-фәләнегеҙҙе онотмағыҙ, юлға аҙыҡ алығыҙ, ти. Өҫтәп тә ҡуйҙы әле:

– Ашыҡмағыҙ. Машинаны Яшка кисеүенә терәгеҙ, урауҙан күпергә барып йөрөгәнсе...

Ҡасан, кемдәр генә оҙатылмағандыр әлеге кисеүҙән. Ошонда кешеләр айырылыша: йә ваҡытлыса, йә ғүмерлеккә. Бешәле лә, ана, яҙҙарын ярһып-тулап, йәйҙәрен наҙлы сылтырап, тауҙарҙағы ғәзиз сығанағы менән мәңгегә хушлаша ла даръяларға ашҡына.

Машина артыҡ геүләмәй генә ҡабаҡ иңкеүенә туҡтаalmost. Кабинала ауыр мөгөҙҙөң йәйенке саталарына үңәсен терәп, ауыҙ йырып, Харрас та килә. Төштөләр. Көндөҙ ҡолонон дауалатҡан ханым, йәнә арҡаһына мәктәп сумкаһы артмаҡлаған һонтор малай ҡайҙалыр бармаҡсы, шикелле.

Оҙатыусылар ҡамауында уны-быны тыңлап, уңға-һулға ҡаранып, ветеринар ҙа килеп етте. Таныйғандыр йоморо҇ас ҡатынҡайҙы, юғиһә һорашыр инеме:

– Ҡолоноң ни хәлдә, һеңлекәш? – тип.

– Арыулана, рәхмәт инде. Һеҙгә ултырып рудник яғына барырға ине. Иремә ашанты-маҙар илтәм.

– Ярай, ярай. Ә ҡолондо кем ҡарай һуң? Яраһын таҙартып, дарыуын яңыртып һортөр кәрәк тә...

– Килештем Харрас ағайҙар менән.

Ҡустым һонтор малай ярҙамында кисеүҙәге арбаны ситкәрәк һөйрәне.

– Арба, сана... Сана, арба... Бәй, кашауайығыҙҙы колхозға алырбыҙ тип һөйләшкәйнек тә. – Ветеринар аңшайып дуҫҡа, әсәй миңә төбәлде.

– Горыдта кашауай нимәгә хәжәт? – тинем дә, ҡустыны саҡырып, хәлде аңлаттым, ул шундуҡ ризалашты. – Алыусы барҙа, елгәрәйек.

– Ни хаҡ? – Дуҫым барсетҡаһынан йөҙәрлектәр һурып ҡыштырлатты. – Тә-әк, тәүҙә... быныһы ағайға – мөгөҙ өсөн. Быныһы – гармунсыға... Һ-м, бензин өсөн. – Харрас та, ҡустым да, әҙәп һаҡлап, алмай маташты, ҡатындарҙан берәү, алығыҙ, хәләл бит, тигәс, ҡустым аҡсаны түш кеҫәһенә, Харрас, юрамалдыр, ойоғона ҡыҫтырҙы һәм, кабинанан мөгөҙҙө аймап, рәйескә тоттторҙо.

– Оһо-һо, һәлмәк!

– Мөгөҙлө өйҙә ыҙғыш ҡуба... – Яҡшыбайҙың йәмәғәте бытылданы быны.

– Боронғо ырым даһа, – тине апайым. – Хәҙер ни...

– Быныһы – сана өсөн. – Дуҫым биш йөҙ һум тотторғас, әсәйҙән буш бланкыға имзаһын сыймаҡлатты. – Йә, туғандар, йыуайыҡ та алыш-биреште, һыпыртайыҡ үҙебеҙҙең илдәргә.

– Бәй, санағыҙ ҡайҙа?

– Кире боролмағыҙ, юлығыҙ уңмаҫ, йә ни... Хәҙер үҙем тыҙдыйтып килтерәм. Әйҙә, малай. – Ҡустыбыҙ уҡыусы балаға өндәште. – Сумкаңды һерәндәтмә, ҡалдырып тор.

– Гармуныңды әпкил, мортой! – Ҡысҡырып ҡала Харрас. – Әтеү яусыға бармам!

Бер-ике һүҙ һөйләшкән арала тутығыраҡ табанлы кашауайҙы һарғылт йәшкелт сирәмдән һөйрәп тә килтерҙеләр. Гармун да ята эсендә эшем эйәһеләй.

– Риза булып ҡына ҡалығыҙ, йәме? – Ветеринар һәр береһе менән ике ҡуллап хушлашырға тотондо. Беҙ ситтәрәк гәпләшәбеҙ. Дуҫыма иртәгә төштән һуң ҡустының мотоциклына менгәшеп Инйәр тирәһендә оло юлға сыҡҡас, нисек тә Өфөгә ҡайтасағымды аңғарттым.

– Бына шулай: һеҙгә – һулға, беҙгә – уңға. Башҡортостан уртаһында ятҡан ошо тирәгә Елмәрҙәкте ике төрә артылып килер-ҡайтыр кәрәк. Тәүҙә – кисә беҙ уҙған тапҡырҙан, икенселәй – урыҫ «Кәйнә теле» тигән яманатлы бөгөлдән. – Дуҫым, эйе, эйе, тип йөпләй, ә мин, хискә бирелеп, боронғо йырҙы ҡыҫҡартып ҡына көйләйем: «Елмәрҙәкәй тауы артта ҡалды – менгән атым боролоп ҡарайҙыр...» – Рәхмәт егетлегеңә! Әсәйҙәр күсенһә, бигүк юл төшмәҫ әле был тирәгә.

– Тыуған ауылың ҡай тәңгәлдәрәк? Ун ике саҡрым, тигәйне кемдер...

Ҡулымды уңғараҡ, көнбайышына табан, һелтәйем:

– Аҙым һайын кисеү, аҙым һайын тау ҙа таш – әлеге машинаң да, ай-һай, уҙа алмаҫ. Олоғор һырты, Бәләкәй Ҡалыу. Артабан – Оло Ҡалыу, Алатау...

Бер килке шымып ҡалдыҡ. Кашауай кузлаһында гармунсы «Етегән шишмә» көйөн апаруҡ еренә еткереп уйнай, үҙе әкрен генә мөңөрәй.

*Етегән шишмәләргә йөҙөк һалдым...*

Ни ғәжәптер – берәү ҙә ҡушылмайсы йырға. Хәйер, бешәлектәргә берәй ҡасан шишмәләргә йөҙөк һалып йөрөү форсаты тейҙе микән? Шуға күтәреп алмайҙарҙыр атаҡлы ғына йырҙы, тип һығымта яһайым эстән генә.

Бына Рәхмәтуллин Харрастың тарамышлы ҡулдарын һелкетеп-һелкетеп ҡыҫты ла, юл аяғын сытайыбыраҡ һелтәп ҡуйғас, ауыҙ-моронон бармаҡ остары менән һыйпай-һыйпай, Яҡшы-

байға ынтылды. Тегеһе быны ләм-мимһеҙ киң ҡосағына алды, яурынынан һөйҙө. Рәхмәтуллин да яшыҡ, оҙонсараҡ ҡулын ҡорҙашының арҡаһына ҡуйҙы, һыйпарға уйлап, усын шылдырғайны... ҡапыл һиҫкәнеп, Яҡшыбайҙы этеп ебәргәндәй итте лә, ҡабат үҙенә тартып, ҡукрәгенә ҡыҫты:

– Фронтовик?!

Барыбыҙ ҙа ветерандың был сәйер ҡыланышына аптырап, өнһөҙ ҡалдыҡ. Ул да өнһөҙ-һүҙһеҙ Яҡшыбайҙы әйләндереп, рөхсәтһеҙ-ниһеҙ ҡулдәген өҫкә һыпырып ебәрҙе:

– Ҡайһы фронтта, эйе, тиң, яраландың?

Тыңлаусан алаша ҡиәфәтендәге Яҡшыбай аҙап ҡалғайны, шулай ҙа оҙаҡ көттөрмәне, асыҡ итеп, хәрбиҙәрсә:

– Третий Украинский, – тип яуапланы.

– Ну-ка, ну-ка... – Ветеринар бының яраһын һыйпап, имсе кешеләй һығымта яһай. – Тә-әк, минамы? Эйе, тиң, уң яҡтан, ҡабырғанан бәргән...

Гармундың ҡапыл сыйылдап-тызылдап туктап ҡалыуына аптырап, ҡустыма баҡтым. Ул, иҫәңгерәгән кешеләй, Яҡшыбайҙың арҡаһына текләгәйне. Дуҫым да: «А-ба, хәтәр ҙәһә йәрәхәте!» – тип ҡарашын ситкә алды. Бешәлектәр генә, аптырамағандай, таҡмазалап бейешергә самалаған кеүек тыпырсына.

...Ҡалаҡ һөйәге әллә ниндәй төҫтәргә кереп, өңөрәйеп уңалған. Яра йөйҙәрен күргәс, ытырғаныл китәм: гүйә, мина ярсыҡтары үҙемдең бәгер иттәрен телгеләй. Ирекһеҙҙән күҙгә йәш эркелде, ирекһеҙҙән башым түбән эйелде. Ветеринар иһә үҙ мәшәҡәтенән һаман төңөлмәй.

– Дәү ҡыйпылсыҡ, гәзиттәр яҙғанса, ярсыҡ ҡаҙалған икән. Нисек үтә сыҡмаған – дөңкәйер инең минутында уҡ. Шунлыҡтан уң күҙең яйыраҡ асыла, аҫҡы иренең тартышыбыраҡ тора. Обшым, уң кәүҙәңә...

Харрас яҡынайҙы эргәләренә. Һаман моронон тығып килә. Ә юҡ, был юлы мәсьәләгә һәүетемсә, тоҙһоҙ мәрәкә-тәләкәләрен ҡуйыбыраҡ ҡыҫылмаҡсы.

– Юрамал бәйләнәм бит Яшкаға, никакой һуғышты күрмәгәнһең, яурыныңды ботаҡҡа тишкәнһең, тип. Дасадым килгәнгә бәйләнәм – осток та дукәминте юҡ, түшендә ялтыр-йолторо юҡ, пинсейәһе бәләкәй... Әйт, булдыңмы һуғышта? Әйт, әллә үтә брастуй һин, әллә инте бер һиңмай...

Яҡшыбай ни асыуланырға, ни йылмайырға белмәй:

– Өс көн генә булдым. Ҡоланым... Беренсе атакала уҡ.

– Фронтовик һаналырға, эйе, тиң, передавуйҙа өс тәүлек айҡашыу – закон буйынса таман... – Ветеринар Яҡшыбайҙың кулдәген ыскындырҙы, Харрас иһә аҫҡа тиклем төшөрөп, ипләберәк ҡуйҙы.

– Юрамал бәйләнәм бит мин һиңә, ә һин, һармаҡ...

Апайҙың: «Хыуатит! Тағы бешелергә ҡырсынаһыңмы?» – тиеүенә ыжлап та бирмәне Харрас, барыбер иҫтәлегенең осона сыҡты.

– Ыстансанан саҡ-саҡ атлап ҡайтҡаныңды хәтерләйем. Йондоҙло бәрәс бүрек, яғаһыҙ һырма, март һыуығында итек кейгәйнең. Арҡаңда – вишмишок... Берәй миҙәле юҡмы бының, тип ымһынғайныҡ әле малай-һалай. Брастуй кәмфит өләштең – шуның тәме һаман тел осомда.

– Биғәйбә... – Колхоз башлығы бешәлектәр менән хушлашҡан арала Рәхмәтуллин түшенән 1941–1945 йылдар һуғышында каскалы һалдат кәүҙәләнгән еҙһыу-ҡыҙғылт билдәһен ысҡындырып юғары күтәрҙе лә бойороҡ биргәндәй һөрән һалды:

– Ағай-эне, шым ғына ҡарап тороғоҙ. – Бешәле буйында йорт өйрәктәре быжҡылдағанын, арьяҡ кисеүҙәге турғайҙар фырылдашҡанын иҫәпкә алмағанда, тирә-йүн бер аҙға тып-тын ҡалды.

– Рядовой... Яшка, ә, юҡ, Яҡшыбай Яҡшығолов тәүге бойҙа уҡ батырлыҡ күрһәткәне өсөн ошо знак менән наградлана. – Ветеринар Яҡшыбайға яҡынлашты. Тегеһе ҡарышты, билдәнең аҫты-өҫкә тәңкәләй ялпылдаған ҡулды ситкәрәк этәрҙе.

– Бер батырлыҡ та күрһәтмәнем мин. Үҙеңә кәрәгер...

– Ил өсөн ҡолау – ҙур батырлыҡ! Ә һуғышта ғүмер тигәнең – ҡыйылсыҡ ҡына ул! – Рәхмәтуллин йәштәшенең күлдәк кеҫәһе тирәһенә билдә беркеткәндә, әҙерәк ҡупайырға ла, бешәлектәрҙе битәрләргә лә онотманы. – Минең өсөн борсолма, гадук. Түшем тулы орден, тик ошоғаса участник удаставиренйәһе алмағаныңа кем ғәйепле? Бөтәгеҙ ҙә ғәйепле, тип уйлайым. Мынау уҡытыусы ҡәрендәш ниңә юллашмай яталыр? Мынау журналист энекәш тә... – Әллә «бошонмаҫ», әллә «эшкинмәҫ» тиеберәк бумпылданы ветеран. Һөрәнләп әйтһә лә, үпкәләмәҫ инем. – Яҙмаһағыҙ, үҙем яҙам, валлаһи. Рәхимовка яҙам, эш сыҡмаһа, Мәскәүгә яҙам, эйе, тиң... Таҡта элегеҙ, элегеҙ өйөнә, «бында ветеран йәшәй» тип...

Билдә тағылғас, ҡатын-ҡыҙ сәпәкәй итте, дуҫым, шунан мин таш һындай баҫып торған Яҡшыбайҙың ҡулын ҡыҫтыҡ.

– Мынан кире әйтмәм теге һүҙҙе, йәме. Иртәгә үк ҡапҡа бағанаңа фанир йондоҙ ҡағам... – Әҙәмсә ҡыуана белә икән Харрас та.

– Яҙыр кәрәк. – Бынылһын дуҫ әйтте.

* * *

Яҡшыбайҙың китек тешле әбейкәйе туйтаңлап аласығынан тиҙ генә алъяпҡысын төрөп тотҡан көйө кире әйләнде һәм юлаусыларға ла, ҡустым менән миңә лә түтәндә ыҫланған,

төбөндә ылаш эҙҙәре һыҙатланып, тышы еңелсә ҡарайып ҡатҡан эре генә берәр баш ҡорот тотторҙо.

– Рәхмәтуллиндән рәхмәт, – тине ветеран бөтәбеҙ исеменән. – Йәш ҡорот бар ул беҙҙә, бар, ә быңдай ҙа таш ҡоротто онотттоҡ ниңәлер.

– Мал бескәндә кесәңдә генә йөрөт, йәме. – Харрас йәнә көләкәсләнә бара. – Шәп закуска бит!

Дусым сәғәтенә күҙ һалды:

– Әйҙәгеҙ, кашауайҙы кузовка ырғытайыҡ. Өҫтөнә апай менән малай ултырыр...

Ике-өс эт машинаны арьяктағы алаңғырткаса лау-лау өрөп оҙатып барҙы.

...Журналист... Утлы йәшлегендә яу ҡайтарған, аҡһап-туҡһап әлегәсә ауыл ерендә иң кәрәкле кәсебен ташламаған ветеринарҙың сетерекле баһаһы сәмемә тейҙеме, әллә Яҡшыбайҙың, ҡан ҡойоп та, ветеран исәпләнмәй, тыштан ҡырыҫ, меҫкен – бәлки, миңә генә шулай тойолалыр – әрнеүле йәшәп ятыуының сәбәбе, ғөмүмән, яҙмышы-булмышы ғәмләндерҙеме, асығын иҫләмәйем, әммә башкалар таралышкас, ҡабаҡ башында бер аҙ торҙоҡ. Харрас эргәбеҙҙән иң аҙаҡ китте, ә юҡ, тәүҙә танау тирәһен ыуғылап, үпкәләгәндәй итте:

– Әбидне, ну ладны... Йыуҙырмайһыңмы ни урдинеңде?

– Пинсейә алғас, ат егеп барып киләм – шунда ҡарарбыҙ, – ялтас яугирҙың бая Рәхмәтуллин элгән билдәне сәбәләнмәй генә күкшел күлдәгенән ыҫкындырып, киң генә салбар кесәһенә тыҡҡанын һиҙҙем.

– Ладны тиң, миңә лә берәй тоҡ шәкәр апкайтырһың, йәме? – Ауылдаштарҙың кесерәге көтөү ҡаршыларға ашыҡты, өлкәне башын һелкте.

– Әйҙә әле. – Әңгәмәнең маҡсатын әҙ-мәҙ тоҫмаллап, кисеүҙән аҫтағы бүкән таш яғына ынтылам. – Ҡыйынһынмай, бер генә һорауға йәшерен-батырынһыҙ яуап бир: нилектән?..

– Етмешенсе йылдарҙа микән, лесхозда эшләп йөрөнөм. Посадка сәсәбеҙ, бесән сабабыҙ, көрәк юнабыҙ, дуға бөгәбеҙ... Калхузниктар килгеләне элек мал һимертергә. Еҙем буйында яттылар. Кәртә ҡороштом, өй һалыштым он-фәлән, быҙау хаҡына. Лавка бар ине ул саҡта, ара-тирә кәгәбеҙ.

Бер яуын көн урмандан ауа-ауа утын тейәп ҡайтыуыма, көтөүселәрҙең старшийы минең иҫәр бисә менән йырлашып ултыра, әй. Ҡыҙғаныып, бисәне ҡамсы менән жар, калхузнигын, к...тенә тибеп, ҡыу мин...

– Уныһын булдыраһың! – тинем һуҙыбыраҡ, ә яугир үкенгән төҫлө дауам итте:

– Махорка тарта инем ул саҡта, соланға сығып инеүемә, үсегеп, бисә вис кенә дукәмиттәрҙе ут тамағына – һо-оп! Ғәйе-

бе лә юк ине, бер уйлаһаң. Көтөүсе мине һыйларға тип ингән. Аҙаҡ яраштыҡ, кешегә белгертмәй генә...

Ҡартлас бер килке өнһөҙ ултырҙы, мин дә йылғасыҡ йырҙаһына уҡталдым: гәлсәр һыуҙарҙың тулҡын ҡағышы һис тә генә ҡабатланмай. Кеше яҙмыштары ла шулай.

– Элегерәк франтауиктар быуа быуырлыҡ ине. Күбеһе танау сөймәне, юҡ-барға зарланманы. Хөкүмәт ҡәҙер күрһәтә башлағас, һуғышҡаны ла, йүнләп һуғышмағаны ла кәпәренә хәҙӗр. Мин дә таныҭма юллап ҡараным – юҡ шул!.. Алтмыштан пинсейә генә сығарттым; мәтрикә юҡ, паспырт юҡ, ваянный билет тә, прафсаюзы ла. Өфөләге архивтан ҡағыҙ килгәс кенә пинсейәле булдым. Йыл үткәсме, вайынкаматка барып әйләндем. Аҙаҡ өйгә аңлатма килеп төштө: яткан госпиталемдең бер нумеры тура килмәй – яңылыш яҙғандыр берәйһе. Биш-алты йыл элек Билариттағы ҡыҙым ҡабат етәкләп алып барҙы. Собис тигәне – вайынкаматка, вайынкаматы әллә ҡайҙа ебәрә – төңөлөп ҡайт та кит. Әле лә әйтәм: кәрәкмәй, юкка маташмайыҡ. Инһәм – бар, сыҡһам – юҡ, шулайыраҡ үтер инде ғүмер...

– Рәхмәтуллин нимә ҡушты, ә? Әллә һаман ыҙалатамы контузияң?

– Уң ҡолаҡҡа ҡатыраҡ мин, һ-м, әйткәндәрен тотош ишеттем. Ярай, яҙып ҡарайыҡ, бер-бер дуҫың да һорашыр.

Дөрөҫ ине фекере. Иртәнсәккә ниндәй рәсми ҡағыҙҙары бар, шуларҙы барлап ҡуйыуын үтенеп, элекке оло урам осондағы сук баланлы йорт яғына йүнәлдем. Бензинын сәлдермәһендәр тип, тәүлек буйы урамдағы машина күсәренә бәйле торған һоро эт һырпаланып ҡаршылады мине.

* * *

Иртәнсәк һалҡынса, тау айырсаларын томан ялмағайны. Атаҡ-атаҡ, өйрәктәр йомолоп оса! Үрләскә, Бешәлек баш алған тошҡа бит әле. Тау үңерендәге шырлыкта күрәнле ҡылы бар, шунда оя ҡорғандарҙыр.

Көтәүләгән ағай. Эргәмә сығып күрешкәс, кисәге һымаҡ ҡабаҡ түшендә байтаҡ торҙоҡ. Бала-сағаһы ни хәлдә, утын-бесән еткергәнме, һыуҙарҙа балыҡ, ҡырҙарҙа йәнлек бармы, юл һалмайҙармы бында – байтаҡ гәпләштек тә ихатаға индек. Бөтә ҡаралтыһы иҫке, өйҙәге күренеш тә шыҡһыҙыраҡ. Гүйә, көнитмештәре уҙған быуат урталарында шып туктаған. Һынамышымды ҡеүәтләгәндәй, ҡола ялан стенала герле сәғәт текелдәй. Осратырһың хәҙер бындай ҡомарткыны!

Өҫтәлдә беҙгә тип ҡуйылған ул-был ризыҡ күренештерә. Ағай барлы-юҡлы ҡағыҙҙарын дәү ағас һандыҡ өҫтөнә теҙгәйне.

Ай-һай, ҡойто, ләкин чиновниктарҙың кеше яҙмышына вайымһыҙлығына шаһит ине улар. Ете ҡат үлсәп, бер тапҡыр ғына киҫеү фарыз – ялыу түгел, үтенес хатын кәмендә республика хәрби комиссарына ебәрергә ҡарар итәбеҙ. Мөрәжәғәт урмансылар почтаһынан китергә тейеш – төштән һуң шуны һалып уҙасаҡбыҙ ҡусты менән.

Яҡшыбайҙан һөйләтәм, үҙем кәрәк кенә фекерҙәрҙе ҡаралағаға теркәп барам.

«Мин, Яҡшығолов Яҡшыбай... 1926 йылда... тыуғанмын. Башҡорт, фирҡәһеҙ, грамотаһыҙ, рядовой, пехотинец... – былары кәрәкмәҫтер тип, аҫтына һыҙып ҡуям. – 1944 йылдың ҡара көҙөндә 3-сө Украина фронтына эләктем. Айҙан ашыу резервта йөрөгәс, ғинуар баштарында Будапештҡа яҡынлаштыҡ. Ротаға фашистарҙың ДЗОТ-ына флаг ҡаҙарға приказ бирелде. Ләкин тәүге атакала уҡ ҡоланым: эргәмдә мина шартланы, ҡыйпылсығы янбашты өҙөп керҙе. Санитар табып, аңыма килһәм – гимнастерканы ҡаным арҡама йәбештергән. Ике аҙна полевой госпиталдә, ике айҙан ашау Куйбышевҡа яҡын ҡаласыҡта – атамаһын онотҡанмын, контузия ла бар ине – дауаландым. Март аҙағындараҡ өйгә ҡайттым. 9 майҙы артелдә ҡаршыланыҡ, икеләтә паек бирҙеләр... Һуңғы ике һөйләмдә лә фәтүә юҡтыр.

Минең менән йәнәш атакаға барған сержант Захаров – Белоретта, ә рядовой Хәсәншин Инйәрҙә йәшәй. Тик һуңғы осор улар менән күрешергә насип итмәне...»

Былай ғына теҙеп сығыу килешмәҫтер. Нимә яҙыр инем, мәҫәлән, үҙем, Яҡшыбай урынында булһам. Ә ул шыпа томана түгел, илдәге үҙгәрештәрҙе үҙ елкәһендә татып йәшәгән әҙәм дәһә. Тимәк, тән йәрәхәтенә... күңел йәрәхәтен өҫтәргә!

«Мине һорана был, меҫкенләнә, тип уйламағыҙ. Хикмәт шунда: «Һуғышта ҡатнашыусы» тигән танытмам юҡ, бер ниндәй ҙә льготалар менән файҙаланмайым. Һаулығым арыу, инвалидлыҡ алырға теләмәйем. Дөрөҫ аңлағыҙ мине – яҡындарым, ауылдаштарым алдында үҙемде уңайһыҙыраҡ тоям...»

Кәрәгенсә ҡыҫҡартып, йомғаҡлап, таҙа дәфтәр битенә күсереп яҙғас, ҡысҡырып урыҫса уҡыным яугиргә. Бөтәһен дә төшөнә: берсә тештәрен ҡыҫты, берсә йылмайып маташты; «гимнастерка ... ҡан...» тигәнде алып ташла, минән дә хәтәрерәк яралылар бар ине, тип үтенде.

Хушлашырҙан алда Яҡшыбай шкаф тартмаһындағы ҡалай сәй һауытынан йөҙөк соҡоп сығарҙы. Аҡ көмөштән һуғылған ҡәҙимге йөҙөк, элек ундайҙарҙы ҡырҡтартмасылар һатып йөрөгән. Урта бармағыма кейҙереп ҡарайым – тормай, бушаҡ. Ниндәй баһадир булған эйәһе, тип һығымта яһайым.

– Атайымдың йөҙөгө. Яҙыуы ғәрәпсә, шикелле. Ареска алғанда, атай бармағынан һурып, әсәйгә ҡалдырған. Урыҫ алып

китер һине лә, тип ҡурҡытып, мине өләсәйемдәргә индергәйнеләр... Аҙаҡ белдем: үҙебеҙҙең кешеләр ҙә йөрөгән, наган тағып.

– Ҡайҙа әле, ҡайҙа? Биҙәктер, тиһәм... Йөҙөктө алыҫҡараҡ тотоп, ҡабырғаһына ырылған яҙманы танырға тырышам, сөнки иҫкесәне әҙ-мәҙ беләм – хәрефләп, көскә уҡыйым: – Лә и-ла-һә ил-лал-лаһ.

* * *

Быйыл яҙ телевизорҙан Рәхмәтуллин ағайҙы күреп ҡыуандым. Ике байрамды бер юлы билдәләгән: Еңеү көнөн һәм үҙенең һикһән йәшен. Бына һиңә ветеринар, бына һиңә ветеран! Теге дуҫҡайым, йәғни кейәүе – район үҙәгендә уртасараҡ түрә хәҙер. Осрашҡылайбыҙ.

Белешеүемсә, Бешәлектә һаман өс-дүрт мөрйәнән төтөн сыға әле. Харрас менән апай һәүетемсә йәшәп ята. Тик эсе йәйҙә Яҡшыбай ҡарт ҡына, етмеш туғыҙы тула тигәндә, гүргә ингән. Яҡындағы кәбәнен кәртәләп, тар һуҡмаҡтан ҡайтып килешләй... ауған. Инфаркт тигән зәхмәттең тәүге һөжүменән үк.

Тәҙрәһенән күренеп торған зыяратҡа ерләп, уҙамандың ҡәберенә яҫы, ҡалҡыу таш һөйәгәндәр. Ҡасандыр Рәхмәтуллин биргән билдәне, касаба хакимиәтендә ололап тапшырылған алтмыш йыллыҡ юбилей миҙалын, йәнә атаһынан ҡалған аҡ йөҙөктө, ҡыҙыл бәрхәт йыртышына беркетеп, ҙурайтылған фотоһы аҫтына элгән, ти, әбейгенәһе...

*2005 йыл*

## САҠЫРЫУ

Машина геүләйме?

Ҡалҡыуҙан йәйенке генә күренгән туғайҙа выжлаған зәңгәр автоклубты бер һирпелеп ҡарауҙа таныны Әхтәм. Өс көн элек тә килеп киткәйне әле шул уҡ дүрткел машина. Өфөнән ниндәйҙер түрәне көтәләр, шуға алдан уҡ күстәнәскә кәрәҙле бал әҙерләп ҡуялар, йәнәһе. Иртәрәк бит әле быйылғы балға. Былтырғыһы ҡышты хәлһеҙ сыҡҡан күстәрҙе емләүгә тотоноллдо. Булған хәлдә лә йомартланып, мәгеҙ тип, бирә һалып бармаҫ ине Әхтәм балын. Эйе, эйе, бөтмәҫ килгән-киткән начальство. Теләнселәп, юхалап, былтыр ике рам шау йүкә генә балын алып киттеләр, «колхоз кассаһынан түләтербеҙ», тигән булдылар – тот хәҙер ҡойроғон.

Һуғылырҙармы, әллә тура һуҡтырырҙармы? Уҙһалар, машинала йылғаны кистереп сығыр кәрәк, күпер ауыҙын ташҡын

нык кына йыуған. Аша сыкһаң, үҙәк буйлап бер генә һил юл тартыла үҙәккә. Һыртта күл бар, ҙур ҙа түгел.

Иллә урыны йәмле инде, тирә-яғы таллык та карағайлык. Кырҙан килгән кунак-мунакты шунда ла алып барғылайҙар.

Боролдолар. Ярай, күҙ күрер, әллә кемдәр түгелдер әле. Котһоҙ өйөнә инмәһендәр ине, себен ояһына. Юнып ултырған дүрт саталы кайын һәнәген ситкәрәк һөйәне лә, өҫ-башын һыпырғылап, Әхтәм өс һайғауҙан тотолған ел капка аша көтөлмәгән юлаусыларҙың каршыларына сыкты.

Күмәк тәһә былар. Кулдарында фото-видео төшөргөстәре бар. Әһә, берәүһен таный – «эрдэка»нан, район мәҙәниәт йорто директоры. Йәш көйөнә һимеҙ, йыуантак ир, арыу ғына йырлай, тиҙәр, үҙен. Әллә инде, Әхтәмдең күптән кәнсерт-мәнсерт караған юк. Форсаты ла тәтемәй, үҙе лә ашкынып тормай. Ә бит заманында һабантуйҙарҙа, смотр-фәләндәрҙә бүләктәр ҙә алғыланы. Йырлап түгел, бейеп! Бейеп караһын мискә ише кәүҙәһе менән бынау әҙәм.

Әхтәм аптыраулы карашын оҙонса танаулы һонтор ирекәйгә күсерҙе. Уныһы ҙур кара күҙлеген шылдырғылап, аңлайышһыҙ телдә ләпелдеге сыға, эргәһендәге һары сәсле, нәҙек билле кыҙ тутыйғош һымак һәр хәбәрен тәржемәләй. Вәт сукынғырҙар, донъяһын тикшерәләр түгелме Әхтәмдең?

– Еңгәй кайҙа һуң, абзый? – Директор үҙенә шулай якынайтып өндәшкәс, Әхтәм ирәбеләнеп яуапланы уға:

– Еңгәң ни, күсеп килмәгән покаға. Кисә балыксы малайға атты егеп ебәргәйнем дә, бөгөн нишләр... Ә-ә, был ағай-эне кемдәр һуң?

– Абзый, алдыңдағы кәҙерле кунактар – алыҫ Венгрия Халык Республикаһынан! – Колакка сос икән кәүҙәгә йоморокас кына кыйғас кашлы теремек башкорт катыны. Шул яуап бирҙе Әхтәмгә һәм рәсмиерәк юҫыкта юлдаштарын барлап сыкты. Лаңкыңдағырак тауышы менән «абзый»ҙан кырка, ә үҙе, буянһа-һыланһа ла, йәшкә Әхтәмгә тиңдәшерәктер ҙә. Хәйер, һакал-мыйык баҫкан шул Әхтәмде, «бабай» тиһәләр ҙә таман.

– Таныш булығыҙ: пан Йозиф Иштван, Сегед университеты магистры, – һонтор ирекәй, видеоһын уң кулынан һулына күсереп, оҙонса танауын һелкә-һелкә умарталык хужаһы менән күреште.

– Иштван Иозиф, башкурдса – Иосуф, – шулай ләпелдәгәйне һонтор, Әхтәм хатта «Иштуғанов Йосоп»ка окшап тора икән, тип тә һеңдерә яҙҙы күңеленә.

– Торма Бела, – үҙ исемен атауға һарыбаш кыҙ, буйһыу кәүҙәһен аҙ ғына аҫка эйеп, кире турайтты. – Буласак тәржемәсе башкорт телен дә махсус өйрәнә.

– Фамилиям – Торма, – тине сибек ҡыҙ үҙе хаҡында, – башҡортта әсе торма бар, венгрҙа ла шулай...

Ҡыҙыҡ, ҡыҙыҡ. Ә былары кем? Һи-и, үҙебеҙҙекеләр – «эрдэка» директоры таныш, ә фотоаппаратлы ҡыҙыҡай район гәзитенән, имеш. «Кара һин уны, беҙҙекеләр ҙә хәтәр кейенә хәҙер». Ышаныслы, хатта бер аҙ тәкәббер һөйләшкән ханым үҙе менән һауалы ғына таныштырҙы:

– Мине беләһегеҙҙер, тием... Баш ҡаланан мин!

– Вәсимә Ғәлиевна – беҙҙең элекке депутатыбыҙ, заманында обкомдарҙа ла эшләгәйне. – Ялағайланып ялғай һалды директор, – хәҙер...

Теге ҡатынҡай «элекке...» тигәнгә турһайыбыраҡ торғандай итте лә, ете яттар алдында әрепләшергә теләмәне. Һәр хәлдә аңғармайыраҡ ҡалды Әхтәм. Ҡайһылыр министрлыҡта эшләй, тинеме. Төҫкә-башҡа күркәм генә былай. «Тотор ерҙәре бар...» тигән юҫыҡта көфөр уй ҙа үтеп китте Әхтәмдең зиһененән.

– Абзый, өйөң-фәләнде, умарталыҡты фотоға төшөрөргә теләй ҡунаҡтар, – яуапты ла көтмәйенсә, Вәсимә тәүәккәл командир ише, ҡулдарын тегеләй-былай иҙәп, ниҙер аңлатып, Иозифҡа яҡынлашты. Ризалығын белдереп, башын ғына һелкте Әхтәм. Белмәгән, ҡыҫылмаған нәмәһе юҡ икән Вәсимә тигәндәренең:

– Яҡын бармағыҙ умарталарға. Әле әсе саға ҡорт, һарыны ҡуйҙы....

– Мужыт, кермәйсә, кәртә тышынан ғына йөрөрбөҙ. – Быныһын директор әйтте. Фотограф ҡыҙ ҙа йөпләне. – Эйе, эйе, ҡорттан сағылып, шешенеп ҡуймаһындар.

Типһәндән, бармаҡ йыуанлығындағы тимерсыбыҡтан тотолған кәртәгә һырынып ҡына атлап, тегеләр үрләскәрәк тартылды. Бер мәлгә умартальтҡ тынып ҡалды.

Ә Әхтәм саҡ ҡына албырғап, бер аҙ аҡһыл һаҡал осмотон һыйпаҡлап торҙо. Бәләкәй генә таҡта аласыҡ, ҡабырғаһында – утынлыҡ. Алты мөйөшлө өйөнөң бүрәнәләре ай-бай йыуан былай. Өйөнөң бирге бүлкәтендә Әхтәм үҙе донъя көтә, дөрөҫө, йәйләй, төпкөһөндә – мастерской, йәнәһе. Унда йәшник-рам, ул-был ҡорамал һаҡлана. Ны-у, өйө ҡалҡыу ултыра, туғай яҡлап – дәү мөгәрәп, лапаҡ ишеге кейеҙ менән көпләүле. Шунда ҡышланы утыҙлап колхоз күсе. Үҙенекеләрҙе, әлегә дүртәүҙе, аласығынан алыҫ түгел бер тирәләрәк тота.

Эйе лә, өйгә инеп тормаһалар ярар ине. Бөтәүләй бешкән бәрәңгеһе, сөсө күмәсе, ҡатҡан ҡорото, тоҙло майы, мәтрүшкәле сәйе – һәммәһе өҫтәлендә. Тик иҙәне һеперелмәгән, йыйыштыра һалыу хәйерле – фәҡир икән Әхтәм, әрпеш икән, тимәһендәр ҡырҙан килгән әҙәмдәр.

Арах-марах йыйыштырып өлгөрҙө. Тегеләр умартальҡ ситләп әйләнеп килеүгә яҡындағы шишмәнән ҡоромға ҡарайған

ҙур биҙрәһе менән һыу килтереп ҡуйҙы, ҡаҙан аҫтына ҡоро утын тығыштырҙы. Ә шофер егет, кисеү ҡарайым тип, тәмәкеһен борҡотоп, күпер тирәһенән йөрөп әйләнде.

– Әхтәм абзый, һин венгрҙарға үҙеңде ысын башҡорт итеп күрһәт, йәме! – Вәсимә Ғәлиевнаның бер ҡулында – ялан сәскәләре, икенсеһендә – йәйенке эшләпәһе. И-и, һөйләшеүе, батшабикә тиерһең.

– Әлләсе... Баспыртым башҡорт таһа. – Йәне ургәлһә лә, Әхтәм сабыр ғына көләмһөрәне. «Әллә кем булып ҡыланмаһа... Ни яғы менәндер был кеше хәләле Таңһылыуҙың холҡон сырамыта түгелме?»

Венгрҙы түбәһе ҡат-ҡат ҡарағусҡыл туҙ менән ябылған тумар умарта – «Фатимушка» ныҡ ҡыҙыҡһындырҙы: баҫып та, тубыҡланып та, хатта ятып та фотоға төшөрөп алды. Әлеге умартаһы әллә ҡасанғы шул Әхтәмдең. Олатаһы мәрхүм, элек әле, нык ҡартайған йыуан бер солоҡто йығып, умарта яһаған – шуны ауылға күсереп килтергән атаһы, Әхтәм иһә – бында. Серемәй әле, йыл да бал бирә. «Фатимушка» тип ҡыҙының исемен ҡушҡайны әсәһе, һаман шулай атап йөрөтәләр.

– Хәҙер үҙеңде кәртешкәгә төшөрәбеҙ, баяғы һәнәгеңде юнып ултырған бул, – тип, ҡунаҡтарҙың мәшәҡәтенә лупыш директор ҙа ҡыҫылып киткеләй. – Һин, Әхтәм абзый, артыҡ борсолма, оҙаҡ мәшәҡәтләмәбеҙ...

– Бәй, әйтмәнеме ни әбей батша? – Директор, яңылыштан ысҡындырҙым тигәндәй, шикләнеп, шымыраҡ өҫтәне. – Бейеүеңде киноға төшөрәләр ҙә – вәссәләм. Үҙеңде Венгрияла телевизорҙан ҡарарҙар. Һыра һемерә-һемерә.

– Сәй эсеп тә тормайһығыҙмы? – Әхтәм әллә ҡайҙағы һыранан тиҙ үк сәйгә күсте.

– Әлләсе. Ҡуналҡала бөтә нәмә әҙер былар өсөн. Машинаға запас та тейәп алғанбыҙ. Өфөнән шылтыраткандар главаға: йөрөтөгөҙ, күрһәтегеҙ...

– Ташлыгүлгә бараһығыҙҙыр күп булһа?

– Шунда инде, бүтәнсә ҡайҙа йөрөтә беләһең. Турбазыға алып барырға ниәтләнгәйнек тә, ремонт бөтмәгән икән унда.

Ни тиһәң дә, арыу ғына урында эшләйҙер һонтор венгр. Эйе, ана шул венгрҙарҙың ата-бабалары борон ошо тирәлә йәшәп, көнбайышҡа күсеп китеүҙәре хаҡында яҙалар бит гәзиттә. Китһәләр ни, китә бирһендәр, хәҙер бүтән килмешәктәр әҙҙер шул башҡорт иләндә.

...Һонтор иһә башҡасараҡ уйланды. Һ-м-м, алыҫ ҡәрҙәштәр, ысынлап та, тәбиғәттең күркәм ерендә көн күрәләр ҙәһә. Йылға, урман, үркәс-үркәс тауҙар, бәрхәт туғайҙар... Бынау көлһыу ҡара мыйыҡтың бейеүен киноға төшөрөү фарыз, шунһыҙ башҡорттар хаҡында фильмы тулы, сағыу сыҡмаҫ. Әлбиттә,

Өфөлә лә, райүҙәктә лә, европаса кейенеп, заманса шоу-музыка аҫтында бейегәндәр байтаҡ, әммә нәҡ ошо уҙамандың бейеүе күпте бирер төҫлө. Күренеп тора: ул — ҡырағайыраҡ тәбиғәт балаһы, хикмәтле ҡыр сәскәһе; моғайын, бейеүгә махсус уҡымағандыр ҙа әле. Ҡыр сәскәһе матурыраҡ та, серлерәк тә була. Иң мөһиме, боронғолоҡ еҫе аңҡый ҡыр сәскәһенән. «Халыҡ таланттарын сәнғәткә махсус уҡытыу дөрөҫ түгел», тигәйне бит әле бер уҡымышлы дуҫы. Хаҡтыр, бәлки, уның фекере. Осрай ҙаһа операларға бирерҙәй тауыштар, балетка тиңләрҙәй бейеүҙәр. Осрай! Ҡайҙа ла осрай!

— Йә, абзый, әҙерлән һөнәреңде күрһәтергә, — тине Вәсимә Ғәлиевна, бойороҡ биргәндәй. — Бейеү буйынса.

— Бейе тигәс тә, бынау әҫелә, тик торғандан. — Әхтәм икеләнде. «Ысын әле, бер көтөү әтрәгәләмдәрҙең күңелен асам тип, йөрөсәле диуана һымаҡ һалпандап. Бынау әллә ҡайҙан килгән әҙәмдәрҙең һүҙен йыҡмаҫ өсөн генә бейемәһәм?!»

Вәсимә Ғәлиевна йыуантаҡ «эрдэка» етәксеһенә шелтәле ҡарап ҡуйҙы, йәнәһе, ниңә эшкәртмәнең, абзыйың кәзәләнә, ҡара уны...

— Әллә, мәйтәм, сәй эсеп... — Директорҙың тәкдиме мәжлесфәләнде яратҡан Вәсимә тарафынан хупланды: эйе ләһә, табында килешерҙәр, табында көйләп тә, бейеп тә ебәрә торған йола бар. Ғәлиевна хатта елкенеп ҡуйҙы: «Еңелсә фуршет әҙерләргә. Шашлыгын тегендә, хозур күл ярында... Көн оҙон. Бейегәс бейеһен инде бынау албаҫты».

Ғәлиевна һонторға ларылдағыраҡ тауышы менән урыҫса ниҙер ләпелдәне, тегегә тәржемәсе Торма еткерҙе — Иозиф ике-өс рәт баш ҡағып, ирендәрен бөрөштөрөп йылмайған булды:

— О, экзотик!

Ике дадан ҡапҡасын йәнәш ҡуйып, тәпәш, әммә йәтеш өҫтәл әтмәләнде. Табын мул да, ярлы ла түгел. Берәр бутерброд, әҙ-мәҙ печенье, газлы һыу, емеш һуттары, шешәле һыра. Уныһын директор һәм ҡунаҡтар, хатта өндәшмәҫ шофер егет ихлас һемерҙе.

Һыуыткыстан яңы алғас ни, йылынып та өлгөрмәгән.

— Самаһын үҙең ҡара инде, ағай, — директор бер шешәне күбеген бышҡыртып асты ла Әхтәм яғына этәрҙе. Ә ул ап-аҡ ҡауырһын стаканға ашыҡмай ғына һыу ҡойҙо, башҡа тәғәмгә оронманы ла.

— Ратһағыҙ, ҡаҙы бар ине миндә. — Бер аҙҙан әҙәпле генә тәкдим яһаны Әхтәм. — Телеп ултыртайыммы?

Быны ишетеп, Ғәлиевнаның боландыҡылай ҙур күҙҙәре ныҡыраҡ таһырайғандай итте һәм ул, тамшанып, юлдаштарына ҡаҙы, ҡымыҙ хаҡында мәғлүмәт бирергә кереште. Ҡунаҡтарҙың Өфөлә үк ҡымыҙҙан ауыҙ иткәндәре беленде, ә бына ҡаҙыны

тәмләгәндәре юк икән. Һонтор ғалим сабыр ғына ниҙер өндәште, Ғәлиевна иһә уның фекерен оло фарман итеп һәммәһенә еткерҙе.

– Эш бөткәс, ҡабат сәйләп-мәйләп, ҡаҙы һоғондорошорбоҙ.

«Әл-лә-лә» тип ҡуйҙы эстән генә Әхтәм, һоғондорош тигән боронғо йоланы белгәс, был бисәнең белмәгәне Бохаралағы таҙҙыр!

...Әхтәм эргәһенә Торма яҡынланы. Йылмая. Һа-ай билкәйе, һары сәскәйе! Бейегәнен фотоға сыртлатмаҡсы икән, рөхсәт һорай. Ишеткәне бар Әхтәмдең: сит илдәрҙә фото-мотоны рөхсәт менән генә төшөрәләр, аҡса ла бирәләр тиме кәрәк сағында. Төкөрҙө ул аҡсаһына, бейеп кенә байымаһа... Мәгәр кәртинкә кеүек ҡунаҡ ҡыҙға инәлтеү килешмәҫ. Әйҙә, бер һелкенһен әле, моғайын, уҡаһы ҡойолмаҫ.

Бейергә урынды мадъяр ниңәлер шишмәгә яҡын ҡарағай төбөн һайланы. Ваҡыт-ваҡыт күләгәһендә умарталыҡтың ҡола бейәһе юшап торғанлыҡтан, был тирә аҙ ғына саңдауыраҡ ине. Ағастың буй етмәле ҡоро ботағына иҫке йүкә тышау, һыныҡ даға эленгән. Серек бәрәңге һымаҡ ат тиҙәктәрен кемдеңдер фарманы буйынса «эрдэка» шоферы көрәге менән йәһәт кенә тал араһына елгәрҙе.

– Егеттәрски бейе, йәме. Нимәне бейейһең? – Ғәлиевна бейеү өлкәһендә лә томана булмауын аңғартырға ашыҡты, буғай. Урынлы-урынһыҙға кәңәштәр бирергә керешкәйне лә, Әхтәм аяҡ кейемен алыштырыу һылтауы менән өйөнә урләне. Әҙ-мәҙ кирелеп-һуҙылып, тәнен яҙылдырып алыу хәйерле. Аулаҡта, һалҡынса өйөндә. Юғиһә, аяҡтары тыңламаҫ та ҡуйыр.

– Ҡара уны, – тип ҡалды артынан бәйләнсек Ғәлиевна. Быға яуап рәүешендә танауын ғына сирҙы Әхтәм.

* * *

Әхтәм кире әйләнеп килде. Кәйефе тәүәккәл генә, өҫтөндә көнгә уңған еңһеҙ күлдәк, көрәнһыу йоҡа салбар, балаҡтары бисәһенең сөм-ҡара калушын ҡаплап тора. Алдан килешкәндәрҙер: Вәсимә Ғәлиевна күкһел буяулы күмһеү ирендәренә ҡумыҙ терәне, ә «эрдэка» етәксеһе ағас ҡурайын һыҙғыртып маташа ине. Ҡыҫҡа икән ҡурайы, тартыуы ла арлы-бирле генәләр.

Әхтәм йөрәкһеп китте, бейеүенең тоҙон тапмайыраҡ аҙапланды, әммә тиҙ үк көй ыңғайына тынысланып, осоп-ҡуныып бейене лә ташланы. Бер алдына, бер артына сығып, Һонтор Иозиф аппаратын тоҫҡаны, район гәзитенән ебәрелгән баҫалҡы ҡыҙ бейеүсене фотоға бер генә сыртлатты ла артыҡ шапылдатмай ғына усын уска һуғып торҙо, ә Вәсимә, ауыҙын бөрөштөрөп, бәүелә-бәүелә ҡумыҙын апарук оҫта, зыңғыртып сиртте, ҡурайсы ла тырыштырҙы шунда. Әхтәм бейегән мәлендә тәрже-

мәсе Торманың да тубыкланған килеш фотоаппарат менән мәж килеүен шәйләне.

Бөтәһе лә ҡәнәғәт ине, тимәк, булдыра әле Әхтәм, һаман булдыра. Тын алыштары ауырыраҡ, быуындары тыңлауһыҙыраҡ та бит, ни хәл итәһең. Көн дә бейемәй, ысын артистәр ише репетицияларҙа күнекмәй шул.

...Әхтәм колхоздың игенен дә сәсте, ашлығын да урҙы, урманын да ҡырҡты, кирбесен дә һуҡты, шундай ялҡытҡыс, ҡара эштәрҙән аяҡ-ҡулдары тартышһа ла, үҙешмәкәрҙәр бәйгеләрендә ҡатнашып, ауыл, район сәхнәләрендә дөңгөләтеп бейей ине. Хатта бер йыл Өфөгә лә саҡырҙылар бит әле. Шунда бер оло ғына артист уға һоҡланып та, һыҡранып та: «Эх, ҡустым, йәштән үк бейеүгә тыҡһаң икән башыңды...» тигәйне бит. Ҡайҙа ул бейеүҙе кәсеп итеү! Тормош бейетте Әхтәмде, ай-һай бейетте. Атаһы, һуғыштан зәғиф ҡайтҡан яугир, гүргә иртәрәк инде. Әсәһен, һеңлекәштәрен ҡарар өсөн Әхтәм ни йүнләп уҡый, ни рәтле һөнәр һайлай алманы. Һуң ғына өйләнде, үҙенең донъяһын бөтәйтеп, ике балаһын аяҡҡа баҫтырғансы, ана, һаҡалмыйыҡтары ағарҙы. Ҡуй инде, ҡуй, танымаған кешеләр уға хәҙер «бабай» тип кенә һүҙ ҡуша. Уныһына аптырамай Әхтәм. Төҫөң-башың бабайҙарса, күрше ауылда донъя ҡорған улының ике сабыйына олатай ҙа икән, көҙгөгә үпкәләүҙән фәтүә юҡ. Икенсе нәмә борсой уны: ни ғәләмәттер, ҡатыны менән аралары әллә нисегерәк хәҙер. Һыуыныштылар, боҙолоштолар тиер инең, артыҡ сәбәбе юҡ та кеүек. Әллә нишләне һуңғы осор Таңһылыуы. Буштан ғына ҡыҙа ла китә, эт еңгәнен талай, тигән һымаҡ, керешә сарбайлап. Әйтмәгән һүҙе ҡалмай. Әллә ҡасанғы ҡыйыш аҙымдарын да онотмай, теленә сиҡан сыҡҡыры бисә...

Сәбәптәреме? Бар инде, бар. Моғайын, етешһеҙерәк донъялыр бер сәбәбе. Эйе, күрше-күләне, бисәһенең бәғзе туғандары теттереп йәшәй. Йәшәмәҫкә?! Берәүһе – фермер, икенсеһе – колхозда баш бухгалтер, өсөнсөһө – мәктәптә, дүртенсеһе кирбес заводында директор. Кемдең ҡулында, шуның ауыҙында, тигәндәй, йәшәй беләләр. Ә колхоз бөлә бара, йылдан-йылға эш кәмей, ана шуға Әхтәм, исмаһам, йәйҙәрем маҙаһыҙ үҙыр тип, уны-быны табып, тегене-быны төҙәтеп, ошо умарталыҡҡа урынлашты. Олатаһы, атаһынан күрмәксе, Әхтәмдең дә был юҫыҡта ҡулы тәпей. Эйе, заманында маҡтаулы ғына ине колхоз умарталығы, йүнсел хужа булмағас, исеме генә тороп ҡала яҙҙы. Хәҙер нишләр...

Былтыр йәй бал өсөн арыу килде, умарталыҡ байтаҡ төшөм бирҙе колхозға, йәнә үҙенә, аҡмаһа ла, тамды. Шуның тәмен белеп, Таңһылыу ҙа йышайҙы умарталыҡҡа. «Үҙебеҙгә лә өс-дүрт күс ултыртайыҡ. Фатимабыҙ вузға инергә ниәтләй бит», ти. Уныһы ғына бүстәк инде, бер уйлаһаң. Уҡыһын ғына илгәҙәк кинйәбикәстәре, хәлдәренсә тырыштырырҙар.

* * *

Саҡырылмаған ҡунаҡтар мәж килгәндә, утынлыҡ ҡүләгәһенә ултырып, ошо хаҡта уйланды умартасы. Эйе, етешмәгән донъя малы хаҡында һүҙ ҡупһа, аптырап, ҡулын йәйеп:

– Бәй, Таңһылыу, аҡса етмәй тип, ошо ҡулдарым менән кеше талар йә урлашыр хәлем юҡ! Ас ултырмайбыҙ ҙаһа! Бар бит сәй-шәкәрһеҙ, хатта икмәкһеҙ йән аҫырағандар. Беҙҙең тормош, бер уйлаһаң, шөкөр әлегә, артыҡ бай булмаһаҡ та, түҙерлек. Байлыҡ – бер айлыҡ, фәҡирлек – мәңгелек, – тип тә ебәргеләй бисәһенә.

Таңһылыуы килмәһә ярар ине бөгөн. Ят кешеләр алдында йөҙөңдө йыртмаҫ тимә. Әллә нишләп тиктомалдан ҡыҙып ҡына бара шул. Ни үҙе яҡшылап духтырҙарҙан ҡаралмай. Сәбәбе... Сәбәбе... Эйе, Әхтәм дә ирҙең солтаны түгел. Эстеме әлегерәк? Эсте. Боларып, тауыш ҡуптарғаны булмаһа ла, апаруҡ алҡаш ине ләһә. «Үҙ теләге менән» ғариза яҙып, китте бит хәмер арҡаһында механизаторлыҡтан. Эйе, эйе... Иҫерек баштан комбайнын саҡ онтаманы. Шуға ныҡ йәне көйҙө бисәһенең. Хатта бер саҡ аҙ ғына әрләшкәнде лә күтәрә алмай, нисәйҙер эш менән ауылда йөрөгән милиционерҙарҙы саҡырып, шуларға: «Алып китегеҙ!» – тип инәлде. Тегеләрҙең береһе: «Ҡуй, апай, өйҙән алып китеү килешмәҫ, артыҡ иҫермәгән дә», – тигәс кенә тынысланды. Иң ғәрләндергәне шул: капитандары таныш, ҡорҙаш ине. Уныһы бармаҡ янап китте Әхтәмгә:

– Смотри, гадук... Икенсе юлы – ун биш суткыға, запрысты!

Ярай, үткән эштән төш яҡшы, бынау әҙәмдәрҙе, йәғни венгрҙарҙы, һәүетемсә оҙатып ебәрһә, эш-көш муйындан уға бында. Уҡытыусылыҡҡа уҡыйым тип, документтарын тапшырырға Эстәрлегә юлланғайны Фатималары, иртәгәләрҙә ҡайта, шикелле. Ә Таңһылыуы бында аҙыҡ-түлек, йүнлерәк һауытһаба, түшәк-мүшәк, транзистор килтерәм әле, тип һөйләнгәйне.

Кисә ауылдаш малай балыҡтан ҡайтып бара ине. Ҡола бейәһен егеп, арбаға йәш бесән һалып, дилбегәне тотторғас, иҫкәртеп ебәрҙе: инәйең атты ҡулға ҡуйһын, иртәнсәк һуғарһын... Колхоз малы тигәс тә, тәрбиәләмәй ҙә ярамай. Шул ат менән быйыл ошонан бер һыйырлыҡ бесән ташып аласағын да уйлап, Әхтәмдең күңеле ирәйеп ҡуйҙы. Әйҙә, һелтә генә, әрәмә буйҙарында үлән ҡалҡыу быйыл. Сабып, киптереп ташыһаң да, сейләй ташыһаң да бата. Нимә генә инде ул атлы арбаға биш саҡрым ара.

Ай-бай, шул арала йәнә өҫтәл әҙерләгәндәр. Был юлы шоколад, бухый шешәлә коньяк, биш-алты әфлисун да шәйләнә. Һыйларға итә ләһә былар көпә-көндөҙ Әхтәмде, тау аҡтарған кешеләй күреп. Рәхмәт инде, тиҡ уға эсергә... ярамай тигәс яра-

май. Берәй йотом зәм-зәм ҡаптымы, «запой» тигән зәхмәт оҙаҡ көттөрмәй торған. Һеләгәйен йотоп, Әхтәм утынлыҡ мөйөшөндәге ҡулйыуғыс яғына шымафый ғына атланы.

Эй, хәйерһеҙ, таҫтамалы ла юҡ, керле сепрәк торған була шунда һерәйеп. Ярай, тире ҡатты, барһын әле эргәләренә.

Әллә нисәмә телдә лабыр-лобор киләләр. Һонтор кәйефле, блокнотына ниҙер яҙа, һаман ниҙер төпсөнә. Вәсимә лә ҡәнәғәт кеүек.

— Ҡайҙа, абзый, ҡаҙыңдан ауыҙ итәйек.

— Хәҙер, хәҙер. Ә-ә-ә...

— Нимә ә-ә-ә? Әллә һыуытҡан балым да бар, тимәксеһеңме? Һитәле булһа, прополис инде! — Ер аҫтында йылан көйшәгәнен дә беләлер был шайтан бисә. Әйтерең бармы, йөрөгән таш шымара инде ул. Әллә ҡайһы райондарҙағы умартальҡтарҙы ла телгә алып ултырҙы лаһа бая.

— Һыуһынға ярарлыҡ... бар.

Ике литрлыҡ банка тотоп, Әхтәм умарталыҡҡа ыңғайланы. Көлөшөп ҡалды башҡорттар: «Еңгәбеҙ белмәгән берәй дадан эсендә әсетәлер дәдәбеҙ балын». Хужа әйләнеп килгәс, мадъяр ғалимы уға үҙ ҡулы менән шарап ҡойоп һондо, Әхтәм иһә һарғылт бал ҡойолған стаканын тәҡдим итте. «Oho-ho! За дружбу! Экзотика! Башҡорт бейеүе өсөн! Прополис»... тигәнерәк һүҙҙәр ишетелде аяғөҫтө табында. Вәсимә ҡаҙы телемен ҡунаҡтың ауыҙына тығып ҡына бара. Һонтор һоғондо, сытыйманы ла, Торма ғына, күҙен йомоп, көсләберәк йотто.

Маладис, Әхтәм, үҙен еңде, йотоп та ҡараманы, юғиһә, бөттө баш — бушҡа үтте йәй! Һиҙмәнеләр ҙә уның эсмәүен, ҡыҫтаманылар ҙа. Табын ахырында Вәсимә Ғәлиевна һүҙ алды, башҡортса юҫыҡ белмәһәләр ҙә, сит ил ҡунаҡтары баш ҡағып, йөпләп ултырған булалар үҙен.

— Ҡәҙерле Әхтәм ағай! Ҡунаҡтар һиңә оло рәхмәтен белдерә. Ҡолағыңа киртеп ҡуй: иртәгә кис һин усаҡ яҡтыһында бейергә тейешһең. Милли кейемдә! Мин бөгөн уларҙы турбазыға алып барам, шунда ҡунабыҙ. Унда көндөҙ леспромхоздың фольклор ансамблен киноға төшөрәбеҙ. Әйткәнемсә, ҡайтышлай ошонда һуғылабыҙ. Әҙер тор, йәме.

Аңлашылды. Әҙер торор. Усаҡ яҡтыһында бейергә тиме?

— Ә усаҡты Кәзәташ башында яҡһаҡ, нисек булыр? Бынан биш йөҙ метр ғына... — Әхтәм умарталыҡтың уң мөйөшөнән үрләскә, ҡаялы морон яғына, ҡул иҙәне. Тиҙ үк аңлаштылар, хупланылар. Хатта кинәнестән Иозиф баш бармағын сөйҙө. Ҡара, венгрҙарҙа ла баш бармаҡты сөйөү ғәҙәте лә бар икән. Бая ғына Вәсимә табында, улар ҙа беҙҙең ише йәтәс айырыша, «алма», «балта» кеүек һүҙҙәрҙе ҡуллана, тип һөйләп ултырғайны.

«Урмандарға инһәң...» тип көйләй-көйләй, Вәсимә урынынан ҡуҙғалды. Башҡалар ҙа ҡыбырлашып, ҡыҫҡа мәжлес таралышырға ғына торғанда, автоклубка йәнәш кенә бышҡырынып яшығыраҡ ҡола бейә килеп туктаны. Йә хоҙай, Таңһылыуы килде, килде бит инә ғазраил. Арбаңды яйыраҡ тартһаң йә берәй ерҙә сығынлаһаң ни була, эй, ҡола малҡай!

– Сукынсыҡтар! Ниндәй шағараҡ бында? Уттай ваҡытта! Эсеп ултыраһыңмы? – Әйтерһең, умарталыкта ул да Әхтәм генә.

– Юк та, алыҫтан килгән... иптәштәр, – тауышы мөшкөл сыкты хужаның... Ҡатын, үҙенә ҡаршы килгән ирен күҙенә лә элмәй, ихатаға инде. Ҡулындағы ат ҡыуа торған брезент ҡамсыһы берәйһенең арҡаһын һыйпамаҫ тимә.

– Эй, кем әле, апай, кил әле яҡыныраҡ, бында ҡунаҡтар бар ине. – Вәсимә ҡайҙа ла, ҡасан да Вәсимәлер. – Зинһар, ипләберәк һөйләш, йәме.

– Кем әле, имеш... Таңһылыу мин, белдеш? Ә кем саҡырған һеҙҙе? – Таңһылыу уға аҫтан ғына бер һөҙөп ҡараны ла, асыуын бушата һалды. – Алкаштар, йыйын кәнтәйкәләр буталмаһа бында, тамаҡ ҡужғыртып...

Нимәгәлер һағайып, Иозиф та урынынан ҡалҡты һәм Ғәлиевнанан ниҙер белеште.

– Һаулыҡ һораша, – уныһы аптырап ҡалманы. – Әхтәмдең ҡатыны ул.

– О-о, яхши, яхши, – Иозиф өс лөғәттә ләпелдәй. – Добрый ди-инь, пани!

– Кит, ҡолаға! Әгәр Әхтәмгә араҡы эсерһәгеҙ, валлаһи, бөтәгеҙҙе лә эттән талатам! – Шулай тиеүенә быға са ҡойроҡ болғап ҡына йөрөгән алабай өрөп ҡуйған булды, хәстрүш. – Һеҙгә рәхәт, хөкүмәт елкәһен ҡырҡып, ашап-эсеп йөрөйһөгөҙ, ә был елғыуар... – Мәлендә тыйылып, Таңһылыу өйөнә инеп батты. «Эрдэка» директоры артынса ишек туҡылдатты. Вәсимә ҡушҡандыр: аңлат, кемдәр, ҡайҙан килгәндәр. Кәзәһе төкөмәһен бушҡа.

Булды, тигәндәй, директор өйҙән көлә-көлә сыҡты. Эше бешкән... Быға һөйөнгән һымаҡ, Әхтәм телгә килде:

– Иртәгә кискә инде, әләйгәс.

Баяғы бейеүҙең репетиция ғына булғанлығын һиҙенгәйне инде Әхтәм һәм юрауы дөрөҫләнде. Саҡырылмаған ҡунаҡтар, тиҙ генә йыйынып, юлдарын дауам иттеләр.

Ҡола бейәне туғарып, тышап ебәреүгә генә сыҡты өйҙән Таңһылыу. Әхмәт уны-быны йыйыштырып, һөт, ҡатыҡтарҙы һалҡынға ҡуйғас, ҡаҙан аҫтына ут яғып ебәрҙе лә ҡабат һәнәгенә йәбеште.

Өндәшмәй генә тамаҡ ялғанылар. Икеһенә лә уңайһыҙ

кеүек... Нисектер башлап Әхтәм һүҙ катты, кыҙын һорашты. Кайткан кисә Фатима документтарын тапшырып, бөгәсә өйҙә калған карауыл булып.

– Һин хәҙер берәй күбәлек бесән сап, иртәгә бушатырһың да ауылда, кырынып, кәстүм-фәлән кейеп, килерһең. Киноға маймыл һымак төшмәсһең бит. Мин был өйҙө әҙерәк таҙартып алам әле. Тәҙрәгә корған, ишеккә шаршауҙар эләм. – Их, гелән шулай ипле һөйләшһә икән Таңһылыу. – Кемдәр ине һуң баяғы әҙәмдәр? Ысынмы шул, дуллыр бирәм бейегән өсөн, тинеме анау колға һиңә?

– Әлләсе, – Әхтәм белгәненсә аңлатып бирҙе, тик бисәһе һаман төпсөндө:

– Анау йырлап маташкан кәнтәйкә нимәһен карап йөрөй бында?

– Оҙатып йөрөй, Өфөнән үк. – Әхтәм асыуланғандай итте. – Йә колға, йә кәнтәй... Тотаһың да кәмһетәһең белмәгән-күрмәгән кешене.

– Белмәç... Өсөнсө йылмы, ошонда еләккә килгәйнем, Фатиманы эйәртеп. Һауыттар тулғас, Кәзәташка менеп киттек. Аçта, йылға аръяғында, йырлайҙар бит «урман...» тип. Кәйеф-сафа короп ултыралар: ошо бисә, тағы бер ир, анауы, кем әле, райсоветтан. Кармак һалып йөрөгән була, шоферын әйтәм. Аулаклап гүләйт итәләр икән берәүҙәр. Тфү, кәнтәй нәстәйәшей!

– Куйсәле, башыңа яҙык алма. Ышпион һымак таш башынан күҙәтеп ятмаһаң, үәт әй.

– Күҙәтмәнем дә... Күреп тә калдым – кастым. Фатиманы етәкләп, айыу ботак һындырҙы, тигән булып. Әлләсе, ғүмер буйы фермала эшләп тә, дан сығарған юк, аптырарһың хәҙерге бисә-сәсәгә. Ул кыҙ-кыркын аҙа...

– Кайҙан беләһең ят кешене? Әллә бисә, әллә кейәүгә лә сыкмаған кыҙ кеше. Урында эшләгәндәр иргә сығып бармай торған.

– Ниңә ят булһын ул? Һин эсеп ятканыңда депутат иттек шуны. Теле телгә йокмай, вәғәҙәләр биреп китте. Яңы мәктәп һалдырам тине – һалдырҙымы? Һаман ыҙдават итмәйҙәр. Шул йылмаякты һайлаған беҙ иçәрҙе әйт! Шул йәштә булыр һиңә кыҙ!

– Ярай, бисмилла әйтеп, бесәнгә төшәйем әле. – Хәбәр бөттө тигәндәй, кул һелтәне Әхмәт.

– Һыйырҙы ла килтерһәк?

– Бажалыста. Фатима ҙурайған хәҙер, килгеләп, аулакта имтиханға әҙерләнер.

– Укыуына инһә генә ярар ине, балакайымды, Хоҙай ризалығынан.

* * *

Иртәгәһенә ҡояш байыр алдынан автоклуб яңынан килде. Вәсимә умартасы өйөндә ҡот-йәм өҫтәлгәнен шундук һиҙҙе, хатта маҡтап ташланы Таңһылыуҙы.

– Ҡалай йәтеш булып ҡалған. Колхозығыҙға әйтерем әле: бирһендәр һеҙгә мебель, радио, һауыт-һаба, яҙҙырһындар гәзит-журнал. Ә ҡайҙа һуң Әхтәм Вәлиевич?

– Аласыҡта, шикелле.

Вәсимә ихатаға сыҡты. Ул арала галстугын төҙәтә-төҙәтә, аласыҡтан «Вәлиевич» – Әхтәм күренде. Умартасыны байҡап, түрәбикәнең күңеле йәнә күтәрелде, ҡырынған тегe, сәсен ҡыҫҡартҡан, костюмы ла килешле.

– Замечательно! Кеше күҙенә күренерлек...

Йәштәр, кисәге ығы-зығыны хәтерләпме, машина эргәһендә тапана. Иозиф иһә ҡапылда таныманы Әхтәмде. Бер аҙ текләп торғас, ҡапыл оҙон ҡулдары менән башын аймап мығырланы.

– Ноу замечателен! Ноу хакал! Пропал хакал! Пропал колорит! Образ, образ?!

Бәй, һаҡалды «хакал» тип әйтәлер әле был мадъяр. Пропал, имеш, һаҡал бейейҙер шул. Хәҙер, хәҙер Кәзәташ башында елән, ҡамсат кейеп тороп бейер әле Әхтәм!

– Әйҙәгеҙ, унда ҡоро-һары күп. Бейермен, алла бирһә!

Һәм бейене Әхтәм. Ялпылдап усаҡ яна, тонйорап ҡояш бата – ул бейей. Туғайҙарға томан йәйелә – ул бейей. Урманда ҡоштар илереп сырҡылдаша – ул бейей. Үҙе лә һиҙмәҫтән, ярһып, хыялланып, өр-яңы бейеү һалған һымаҡ бөгәсә Әхтәм. Гүйә һарҡауға аяҡ-ҡулдары, яурыны-башы менән «күрегеҙ, мин – башҡорт, мин – ирекле кеше, мин – тәбиғәт балаһы» тип, үҙенең булмышын, үҙенең яҙмышын раҫланы. Уны фотоға ла, киноға ла кинәнеп төшөрҙөләр. Бигерәк тә ҡамсат бүркен һауаға сөйөп, ҡабат матҡып алыуын оҡшаттылар.

– Ҡасан, кемдән өйрәндең бейеүгә? – тип һораны унан ҡайтыу юлында Иозиф. Ниңәлер Кәзәташ башында үҙен моңһоуыраҡ, уңайһыҙыраҡ тотҡан Вәсимә үҙенән дә уны-быны өҫтәп, урыҫсаға, ә нәҙекәй бил Торма венгрсаға ауҙарҙы Әхтәмдең яуабын.

– Берәү ҙә өйрәтмәне. Олатайым һабантуйҙарҙа, мәжлестәрҙә кешене һоҡландырып бейегән, тиҙәр. Бейегәс, аяғың менән генә тыпырҙама, тотош йәнең-тәнең, ҡиәфәтең менән бейеү фарыз ул, ти торғайны мәрхүм.

Кире умарталыҡҡа ҡайтыуҙарына ҡараңғы төшкәйне инде. Ҡуйы сәйе, ҡайнар һурпаһы әҙер булһа ла, үҙе бөгөн алсаҡ һөйләшһә лә, ҡунаҡтарҙы артыҡ ҡыҫтаманы Таңһылыу, тегеләр ҙә тиҙерәк районҙаҡҡа ҡайтыу яғын ҡараны. Иллә-мәгәр маши-

нағa менерҙән алда бирәр стакан һары балдан баш тартманылар. Эй замана, эй йәштәр! Матур-матур йоҡа куртка кейеп алғандар. Һаҡынса шул кистәрен Кәзәташ буйҙарында.

Ике ҡуллап ихлас көрештә айырылырҙан алда Иштван. Көҙгә, сентябрь аҙаҡтарына, Әхтәмде Мәскәүҙә, Венгрия илселегендә ҡаршы аласаҡтары хаҡында яңынан иҫкәртте. Бәлки, пани Торма ла шунда булыр, тип өҫтәне. Бик хуп. Саҡырған ергә бар, ҡыуған ерҙән кит, тигән боронғолар. Сукынмыш Иозиф «хакал кәрәк!» тип тә ләпелдәй бит әле. «Уныһы мәсьәлә түгел, сәсеп үҫтермәйем әле!» — Быны тәржемә иткәс, һонтор ҡунаҡ, көлә-көлә, ҡабатлап ҡыҫты ҡулын умартасының. Таңһылыу «Колға» венгрға аҫтан ынтылыбыраҡ ҡараны ла, алъяпкысы менән ҡаплап торғандырмы, бер литр быяла банкалы шим бал тотторҙо. «Фатимушка» умартаһынан, тине.

— О, пани Фатима дала! Спаси-бо-о!

...Әхтәмдең юҡты-бушты алдан ҡапаҡлай торған гәҙәте юҡ. Шуға ла Фатимаһын уҡырға оҙатыр өсөн ауылға ҡайтҡанында: «Әхтәм, һине әллә ҡайһы илгә бейергә саҡырғандар, имеш, ысынмы шул?» — тиеүҙәренә, «мужыт, ысындыр» тип ҡотолдо. Баҡһаң, эрдэкалар ураҡ мәле ялан концерттары ҡуйып йөрөгәндә, анау лупыш директор: «Беҙҙекеләр үҙешмәкәр сәнғәттә маһир ул. Мәҫәлән, ауылдашығыҙ, то есть Әхтәм ағайыбыҙ, быйыл көҙ Венгрияла бейеү бәйгеһендә ҡатнашасаҡ», — тип маһая биребераҡ һалған икән хәбәрҙе. Ә юҡ, район гәзитендә лә шул хаҡта аҙ-маҙ яҙҙылар бит әле. Фотола баҫҡайнылар: Әхтәм зыйлатып саңдауҙа бейеп йөрөй, Таңһылыу әйтмешләй, мосафир «Колға» уның умарталығында йөрөп ята. Эйе, эйе, «Умарталыҡта» тигән мәҡәлә баҫылған гәзитте колхоз рәйесе үҙе килтереп бирҙе. Рәхмәт инде, бер уйлаһаң, Вәсимә Ғәлиевнаға — әҙәм рәтле һауыт-һаба, «списать» ителгән булһа ла, шапшаҡтай өҫтәл, карауат-маҙар килтерҙеләр колхоздан. Өс-дүрт гәзит-журнал да алдырта хәҙер умарталыҡ. Өҫтәүенә, киләһе йылға бәләкәй генә движок, йәнә электр балһурҙырткыс ултыртырға вәғәҙәләне рәйес. Улай икән, эштәре көйләнәсәк Әхтәмдең.

Эйе, бал планын арттырып тултырҙы, күсен дә ишәйтте быйыл «пан Ахтам»; шулай тип өндәшкәйне түгелме әле айырылышҡанда үҙенә Иозиф? «Вилла... коктейль» тип тә ләпелдәгәйне шикелле. Аңғартты Вәсимә: иленә барһаң, ул һине хатта виллаһына, йәгни өйөнә, саҡырып һыйларға ниәтләй.

Бына шулай, юҡ-юҡта Иозиф, Торма, Вәсимәләрҙең килеп китеүе, Кәзәташ ҡаяһының мүк ялмаған алаңғырт типһәнендә осоп-ҡунып бейегәне лә Әхтәмдең иҫенә төшкөләй. И-и, табылып тора шул иҫенә төшөрөүселәр ҙә! Үткән аҙналамы әле, күсле йәшниктәрҙе ҡышҡылыҡҡа аранға ташыр өсөн колхоздан

ике елғыуар ебәрелгәйне. Берәүһе, һаман өйләнмәй йөрөгән былағайыраҡ буйҙағы – Әхтәмгә ике туған ҡәйнеш. Үҙенә күрә түгел, харап әсе генә мыҫҡылламаҡсы. Нимә ти әле...

– Һин, еҙнәкәйем, аңғарып йөрө унда. Службала саҡта күрҙем мин... Мадъяркаларҙың сиған һымаҡтары ла осрай. У-ух, сибәр була сукынмыштар! Кабы эйәртеп ҡайта күрмә берәйһен. Былай ҙа мыжыҡ Таңтый апайым Кәзәташ башынан төртөп осорор үҙеңде.– Энеһенең тәләкәһенә көлгәндәй итә бит әле Таңһылыуы ла, ике-өс тешһеҙ ауыҙын ҡымтып.

Шулай, ҡәйнеше заманында Карпат яғында әрме хеҙмәтен үтәп ҡайтты. Танкист, имеш, берәү танкыға ултырып та ҡарамаған. Икмәк бешергән. Ярай инде, иҫән-һау ҡайтҡас. Ә Әхтәмгә һалдат буткаһын ашарға насип итмәне. Йөрәк өйәнәге бар унда. Тыумыштан, ҡәһәрең. Бик ҡыйын булды, әрмегә оҙатылып та, Өфөнән кире ҡайтыуҙары.

...Ошоларҙы аласығында япа-яңғыҙ тамаҡ ялғап ултырғанда, эте өрмәй, тышҡа һыпыртты. Яҡында мотоцикл тырылдап туҡтаны. Хужа тышҡа сыҡты. Саҡ таныны эрдэка директоры менән тәмәкесе шоферын. Өҫтәрендә штормовка, баштарында әллә ни яҙылған ярым ай һымаҡ оҙонса козыреклы каскетка. Яндаулы икән матайҙары.

– Әс-сәләм, Әхтәм ағай! – Күрешер өсөн итләс ҡулын көҙрәйтеберәк һуҙҙы йыуан директор.

– Вәғәләйкүм әссәләм! – Тегеләрҙе Әхтәм олпат ҡына аласығына әйҙүкләне. Әллә кемдәр түгел, хушһынырҙар, моғайын, баллы сәйен. Райүҙәктәгеләргә ҡаймаҡ та бигүк тәтеп бармай торған.

– Сәйләп тормабыҙ, рәхмәт. Баланға китеп барыш әле, анау саҡ күреп киткәйнек. Ташлыгүл лапылығында, – тигәс кенә директор төп хәбәренә күсте. – Юл ыңғай һөйөнсө алырға һуғылдыҡ та...

– Һөйөнсөһөнә ни, бер самауыр сәй инде, – Әхтәмдең кәйефе күтәрелде. – Юҡ, бер ярты бал!

– Әсеһеме, абзый, сөсөһөмө? – Теге саҡ шымтайып ҡына ситтәрәк буталған шофер әле ҡаты иркен һөйләшмәксе. Ҡыҙмасараҡ та кеүек үҙе. – Әсеһе килешер ине шундай матур һөйөнсөгә. Кемгә тәтей Венгрияға махсус саҡырыу! Ә еңгәбеҙ ҡайҙа?

– Ҡайҙа булһын, өйҙә. Хәҙер үҙемә лә артыҡ мәшәҡәт юҡ бында. Апарук муйыл тирҙем әле үткән аҙнала. Бүтән ерҙә упсы юҡ, Кәзәташтан ары шыр үҙәктә ике ағаска ғына ҡырау теймәгән икән яҙ. Ҡаяға һырынып ҡына ултыралар. Бына, ауыҙ итегеҙ кипкән муйылдан.

Юлаусыларҙы икешәр стакан һары бал менән һыйланы Әхтәм. Бисәһе, уның эсмәй йөрөгәненә ышанып, ыңғайына ҡуйғайны. Самаһын белеп кенә ҡой балыңды, этенә-бетенә

эсермә, кәрәк кенә кешеләргә тәмләтерһең, тигәйне. Бына әле былар менән һөйөнсөнө арлы-бирле йыуырға яҙған икән. Нисәһендә Өфөлә булырға, Мәскәүҙә ҡайҙа инергә – директор белгәненсә аңлатты, форсат тейһә, Өфөгә йә Мәскәүгә тиклем үҙенең дә барырға теләүен өҫтәне, күстәнәскә кәрәҙле бал әҙерләүен һораны. Вәсимә Ғәлиевнаның да Венгрияға сәфәр ҡылырға теләге барлығын Әхтәмгә әйтмәйерәк торҙо. Күҙ күрер, Вәсимә бармаһа, үҙе ныҡышасаҡ.

Йәнә венгрҙарҙы телгә алдылар.

– Һыйланығыҙмы ҡунаҡтарығыҙҙы Ташлыгүлдә? – тип һорағайны Әхтәм, шофер егет тубығына шапылдатып һуҡты.

– Булды инде, Бәләбәй араҡыһын бик оҡшатты Йософ абзый, – тине һәм, ниҙер иҫенә төшкәндәй, өҫтәне. – Һине маҡтап телгә алды, хәтәр бейей, тине.

– Баланға иртәрәк тәһә, – тине айырылышҡан саҡта Әхтәм эрдэка уҙамандарына.

– Иртәрәк тип ни, кешенән алдараҡ йыяһың инде уны.

– Һи-и, тәлгәшләй элеп ҡуйһаң, ҡырау бешерә ул. Иртәгәләрҙә ҡырау бәрәсәк, ти, радио, – директор әле мотоциклдың эйәренә атланды, ә бая яндауынан уфылдап саҡ сыҡҡайны.

– Ярай, этеүһә, лүлкәгеҙ тулы балан ҡайтһын. Иҫән-һау йөрөгөҙ!

– Тырышырбыҙ, абзый. Сматри, бер-бер ҡабат күрешмәһәк, Тормаға минән ку-уп привет!

– Һаҡал-мыйығыңды үҫтерә башла, йәме.

Әхтәм көлөмһөрәп баш һелкте. Арыу егеттәр, әйтерең бармы.

* * *

Әхтәмдең ауылдағы көнитмеше бүтәндәрҙекенән әллә ни кәм-хур түгел. Тик башы зәңкеп йөрөгән мәлдәрендә ул-был эштәре лә өйөлгөләй торғайны шул. Шөкөр, быйылғы йәйҙе һәүетемсә генә үткәреп бара лаһа. Бәрәңгеһе уңды, мал-тыуары теүәл, балы ла хәтһеҙ. Таңһылыуы ла артыҡ игәмәй хәҙер, ул да донъя бөтәйтергә тырыша. Теш ҡуйҙырам тип, иртүк тау һыртындағы юлға сығып, үткенсе машина менән күрше поселоктағы дауаханаға киткәйне. Ҡуйҙырһын, юғиһә, асыуланһа, ыржайған ирлән һымаҡ, көлдөниһә, хас кишер кимергән ҡуян инде, ана, теге «Һәнәк» журналына төшөрәләр ҙәһә...

Өй алдындағы ҡойманы яңыртырға кәрәк. Рәшәткәләре күптән әҙер, күгәреп ята һарайҙа. Осталау ҡорамалдарын барлап, Әхтәм тәүҙә урамға сығып әйләнергә булды. Нәҡ шул саҡ эргәһенә бер ҡыҙ килде. Әҙ-мәҙ таный уны Әхтәм – Мәҙәниәт йортонда эшләй, исемен генә оноткан.

– Әхтәм ағай, районДан шылтыраттылар: сәғәт ун икеләрҙә ҡабат борам телефонды, тине эрдэка директоры. Килерһегеҙ, йәме?

Сакырыу буйынсамы?! Әхтәм еңелсә тулҡынланды, әллә ниҙәр уҙҙы зиһененән.

– Ярай, һеңлекәш, ярай. Саҡырыуҙың аты оло, тигәндәр...

Килде ун икегә Мәҙәниәт йортона. Телефон мәлендә зырланы, теге остағы тауыш эргәлә кеүек тә, тик борсоулыраҡ тойола.

– Ағай, үпкәләштән булмаһын, ней бит әле... Ней, һиңә юллыҡ акса таба алмайбыҙ. Беҙҙәге фәкирлекте үҙең беләһең...

– И-и, ҡустым, ниндәй үпкәләш ти ул! – Әммә Әхтәм ҡара баулы телефон трубкаһын, ағыулы йыландан ҡотолорға теләгәндәй, кырыныраҡ һалды ла урамға атлыкты. Әлдә әлеге һөйләшеүҙе бер кем дә ишетмәне.

Ҡыҙыу атланы. Уйламаҫтан анау алабарман ҡәйнеше тап булып ҡуймаһын. Йә рисуай итер: «Нимә, еҙнәкәйем, хәҙер бейеп кенә акса һуғырға ниәтләйһеңме?» Ят та ул ғәрлегеңдән! Дуҫ бар, дошман бар тигәндәй, күҙҙе лә астырмаҫтар... Ҡапыл ғына кәзә һакаллы олатаһы иҫенә төштө. Ҡартайған көнөндә «Ҡара тауыҡ» көйөнә үҙе сығарған таҡмаҡҡа һалпандар ине ҡунаҡ-фәләндә:

*Алла бирһә, мин байыкһам,*
*Таштан һарай һалдырам.*
*Әллә һалдырам, әллә юк,*
*Әллә шулай ҡалдырам...*

Мәғәнәһеҙ, аңлайышһыҙ ине был таҡмаҡ элегерәк, бәй, хәҙер ғилләһе апаруҡ төҫмөрләнә яҙҙы. «Һалдырам» ти ҙә, «шулай ҡалдырам» тип ослай. Кемдәр уны ҡалдырҙы, йәғни һемәйтте?

Курткаһының иҙеүҙәрен ыскындырып ебәрҙе, сөнки йөрәге ташып китте, быуындары йомшарғандай итте, әрнеүле ярһыуынан тыны кыҫылды.

Әхтәм һис бирәүгә ләм-мим өндәшмәне. Нимә тип кенә һүҙ кузғатаһың инде? Күҙ буяр өсөн халыҡ-ара хәлдәрҙән генә сәбәп эҙләмәһәң... Хәйер, юллыҡ аксаны йә һыйырын тотоноп, зат-ырыуҙан иғәнә йыйып та... Хатта бер-бер алыҫ сәфәргә китә ҡалһа тип, яңы кейемгә айырым һалынған аксаны ла исраф итергә мөмкин ине бит.

Ҡуй, оҡшамағанды!..

Көҙ үҙенекен ныҡый, ҡырауҙар ҡатылана бара, ара-тирә өшәнес ямғырҙар һибәләй. Таңһылыу бөгөн дә теше артынан юлланды, ҡуйҙыртып ҡайтыр, ахыры. Ҡуйҙыртһын әйҙә, ул да ата балаһы, ул да бисә-сәсә араһында әҙәмсәрәк йөрөр, ис-

маһам. Фатимаһын баштан-аяҡ кейендереп ебәрҙеләр былай. Ҡиммәт икән хәҙер йәш-елкенсәктең сепрәк-сапрағы, иҫ китмәле ҡиммәт.

Өйөнә йәнәш баҡсалағы сүп-сарҙы үртәп маташҡанда, ҡапҡа ярығы аша ыҡсым йәшниккә почта төшөрөүҙәрен күреп ҡалды. Ҡыҙынан хат-маҙар тойолмай, ике гәзит кенә килгән. Тәүҙә район гәзитен ҡараштырҙы, шунан иғтибар итте «Башҡортостан»ға. Бәй, «Таланттарҙы Венгрия көтә»... Үҙе лә һиҙмәҫтән, укырға кереште. Күрше райондан Фәлән Фәләнов тигән бейеүсе, Ҡыҙыл буйҙарынан әбейҙәр ансамбле — ҡумыҙ сиртеп, үҙҙәренең таҡмағына бейергә оҫталар икән — йәмғеһе ете кеше юллана икән мадъяр иленә. Барһындар, әбей-һәбей менән йөрөргә Әхтәмдең башына тай типмәгән әле... Шулай тынысландырып маташты үҙен умартасы. Ләкин шул саҡ гәзиттә яҙылған бейеүсенең фамилияһына иғтибар итте. Аһ-аһ, Ғәли улы... Ағайым да бейештерә, «Перовский»ҙы оҫта башҡара, тигәйне ләһә Вәсимә Ғәлиевна. «Бейештерә... һүтә икән донъяны! Бейештереү түгел, бейеү кәрәк, бейеү», — тип үртәлде Әхтәм һәм баҡсаһына ыңғайланы.

Быҫҡып яткан сүп өйөмө эргәһенә килде лә, ҡулындағы гәзитте йыртҡылап, утты ҡыҙыулатып ебәрҙе. Ҡыҙыҡ, саҡырыуы Әхтәмгә, ә барыуы — бүтәнгә... Вәсимәнең ағаһымы, ҡустыһымы — этем белә. Шул йылмаяҡ терәгән икән Әхтәмде кәкре ҡайынға. Үәт шаҡы! Әхтәм ҡапыл ғына Кәзәташ һыртынан Вәсимәнең һағайыулы ҡараш менән йылға буйҙарын, һыу арьяғындағы йәшел туғайҙы күҙәтеп торғанын хәтерләне. Әллә бөтөнләй юк бушты һөйләмәгән микән Таңһылыуы уның хаҡында?

Көтмәгәндә көндәр хозурланды. Йылы, тәбиғәт һил, йәмле, алтынға, ҡәнәфергә мансыла кеүек ағас япрактары. Умарталыҡҡа барып ҡайтыу зыян итмәҫ ине. Уны-быны ямаштырырға, якшылап бикләргә лә кәрәк. Ҡышлауға...

Әхтәм Таңһылыуына:

— Әйҙә әле, пани Таңтый, йылы ҡулда умарталыҡҡа барып әйләнәйек, — тип мут ҡына өндәште. — Йәш саҡтарҙы иҫләп, аҙаҡ үҙеңде... йомшаҡ мукҡә һалырым...

— Абау, һармаҡ, — көмөш тешен ялтыратып йылмайҙы Таңһылыу. — Йәйәү барабыҙмы?

— Юксы, мин Ҡола бейәне егеп киләм, һин ризыҡ йүнәт. Әллә, мәйтәм, берәй литр...

Ҡатын иренә турһайып бармаҡ яныны.

Умарталыҡта эштәрен теүәлләгәс, аласыҡ алдына йәшниктәй күс ҡапҡасы һалып, ашыҡмай ғына сәй эстеләр. Әхтәм, һүҙгә һараныраҡ булһа ла, мәрәкәсел генә.

— Ошолайтып тәпәш өҫтәлдә һыйланыуҙы фуршыт тип атайҙар, ти, сит илдә. Теге саҡ һин фуршылдап тәмен ебәрә ге-

нә яҙҙың мәжлестең. Һин эттән эткә һалып әрләйһең, Йозоф, ә нимә ти ул, тип белешкәйне, Вәсимә, һаулыҡ һораша, тине лә ҡуйҙы.

– Әрләшерһең дә, эсеүең үҙәккә утә башлағайны, табылып ҡына тора бит эсәм тигән кешегә әшнәләре.

Әхтәм етдиләнде, уйсан ҡарашын Кәзәташ яғына күсерҙе.

– Әйҙә әле, менеп төшәйек тау башына, бөтмәҫ эш!

– Әйҙә һуң. Анау ваҡыттан алып аяҡ баҫҡан юҡ шунда.

Ир менән ҡатын, бер-береһенә ярҙамлаша-ярҙамлаша, Кәзәташҡа күтәрелде. Бынан бигерәк йәмле күренә тирә-яҡ! Ана шул матурлыҡҡа һоҡланырға, хозур йәнтөйәген тағы ла юғарыраҡтан күҙәтергә теләгәндәй, умартасы бөркөттәй талпынып ҡуйҙы. Әллә бар ғаләмде ҡосорға, әллә сәләмләргә уйлағандай, ҡоласын киң итеп йәйҙе, күкрәген тултырып тын алды. Зәңгәр күкте байҡаған күҙҙәре осҡонланды, гүзәл күренештән күңеле тулышты, гүйә, рухы яңырҙы Әхтәмдең. Һәм ул, яурындарын киреп, ата ҡоралайҙай ташҡа сатната баҫып, башҡорт ҡына булдыра алғанса тыпырланы.

– Абау, берәү әллә бейергә самалай, – инде Таңһылыу көлөмһөрәне, нимәгәлер ҡыуанған кеүек тә үҙе. – Тауҙы емереп ҡуйма.

– Емерелмәҫ, үҙебеҙ генә иҫән булайыҡ!

*2004 йыл*

## ХИКМӘТЛЕ БАУ

Дүрт ҡатлы таш йорттан «яңы»ларса кейенгән мыҡты ир сыҡты ла бер аҙ тапанып торҙо, ара-тирә өҫкә, икенсе ҡат тураһына, текләне. Ниңәлер шунда көрән тирәсле, ҡалын быялалы күҙлек кейгән ябыҡ-төпөш һынды күреп ҡалһа, күтәрелеп китер кеүек күңеле. Ә бит элегерәк әсәһе, кем генә килеп китмәһен, кухня тәҙрәһе ҡорғанын ҡайырып, мотлаҡ ҡул болғап, ҡыпысыраҡ күҙен тағы ла ҡыҫыбыраҡ, һүрәнке, моңһоу ҡараштары менән оҙатып ҡалыр ине.

Тыңламаны уны әсәһе... Ҡарыша... Үсексән бала ише.

Фәнис скверҙан машинаһына ҡарай аҙымлағанда, тирә-йүндәге ярайһы таҙалыҡты шәйләне. Тимәк, яңыраҡ «Ҡыҙыл өмә» уҙғарғандар. Ҡасандыр юрғалап ҡына йөрөгән әсәһе дөйөм эшкә быйыл тәүләп ҡатнашмағандыр, ни хәл итәһең.

Затлы япон машинаһына ла ултырырға ашыҡманы ирекәй. Эй, тукта әле, һеңлеһе менән һөйләшеү фарыз, хатта мотлаҡ. Яҡында ғына йәшәй... Бөгөн ял, өйҙәләр. Кейәү кеше вахта ысулы менән Себерҙә эшләй. Бер аҙнанан ҡайта, буғай.

Фәнис ҡуйынынан кеҫә телефонын сығарып, төймәләрен пипелдәтте һәм кәрәк кешеһенә эләкте. Хуш, Фәниҙә Фәнисте өйөнә саҡырҙы һәм ризалатты. Сәй эстеләр, ғәҙәттәгесә, ярым урыҫса, ярым башҡортса аралашты туғандар. Ағайы һеңлеһенә әсәһенең күҙ дауаханаһына барыуҙан ҡырҡа баш тартыуын, шуға әле генә өйөнән бик борсолоп сығыуын аңғартты.

Бер аҙ һүҙһеҙ ултырҙылар. Ағайы проспект яғында кафе түбәһендә йәйғор нурҙары сәсеп торған яҙыуға иғтибар итте һәм тәҙрәнән киреһенсә күренгән хәрефтәрҙе ижекләп уҡыны:

– «Ар-ле-ки-но»... Бәй, элекке «Мороженое» кафеһы лаһа.

– Эйе. Хәтерләйһеңме, шунда әсәй беҙҙе морожный менән һыйлай торғайны байрамдарҙа? – Мөләйем ҡатындың тауышы һағышлы сыҡты. Ағаһы баш һелкеп, ҡиммәт йөҙөклө бармаҡтарын еңелсә бейетеп ултырҙы ла уфтанып ҡуйҙы. – Йәл, үҙенә байрам яһай алмайбыҙ...

– Хәҙер ресторан кәүегерәк, ти, унда.

Бер аҙҙан һеңлеһенең хәбәр тоҡсайы нығыраҡ сиселде:

– Үткәндә баҙарҙан тотоп йөҙөм индергәйнем. Килограмы күпме тора, тип быуынға төштө. Йөҙ һум тигәйнем, ҡуй, үзбәктәрҙән алдыңмы, ниңә алдың, бигерәк ҡиммәт, кем һораған, тип мыжыны. Шунан, өйөңә апҡайт йә хаҡын ал, тип йәнгә тейҙе. Яртыһын көскә ҡалдырып сыҡтым...

Күп һөйләргә кереште Фәниҙә, телгә ярлыраҡ Фәнис әллә тыңлай, әллә юҡ: былай ҙа һыуынған сәйен балғалағы менән болғаштырып ултыра бирҙе лә, маңлайын ыуғылап, бөтә әңгәмәне әсәһенең күҙе насарайыуына йүнәлтте.

– Операцияға бармайым, ҡарт кешегә нимәгә ул, ти. Йә, икенсегә һөйләшкән операцияға бармай! Йәнәһе, йәшәрен йәшәгән, беҙ һау булһаҡ, шул еткән... Әллә ҡурҡа, әллә... Шуға үртәлеп сыҡтым да һиңә шылтыраттым. Өс көндән бит операция, эйеме?

– Эйе, эйе. Оноткан тиһеңме әллә?

Шулай, ағалы-һеңлеле ҡыш уҡ, күҙе томанлыраҡ күрә башлағас та, әсәләрен атаҡлы табибтарға күрһәтеп, операция яһатырға килешкәйнеләр. Тәүҙә риза һымаҡ ине ҡарсыҡ, аҙаҡ, түләүле икәнен белепме, юҡ-бар һылтау табып, һуҙа килде, хәҙер – бөтөнләй баш тарта.

– Сестричка, һин хәҙер, бына хәҙер үк мамочкаға сираттан тыш визит яһа әле!.. – Фәнис бейек һыуыткыс яғына эйәк ҡаҡты. – Руллә булмаһам, йотор инем берәй шарап!

– Кәрәкмәй, – тине һеңлеһе. – Эсеү хәҙер модала түгел... Тышта йылымы? – Фәниҙә ағаһына оҙаҡ ҡына ҡарап торҙо ла баш сайҡаны. – Хәҙер түгел, әсәйгә һуңғараҡ барам. Былай ҙа йыйына инем, ҡоймаҡ ҡоям да. Һин ҡайт, борсолма, һөйләшермен – килештерермен.

Әсәһе колакка һак әле. Звонокка баҫкан кыҙының: «Мин!» — тип әйтеүе булды, сылбырҙарын сылтыратып, асып та ебәрҙе ишеген, һорай ҙа һалды:

– Әйҙүк, әйҙүк. Ни булды? Әле генә ағайың килеп киткәйне. Әйтмәнеме ни бер-бер.

– Юк та. Бергәләп сәй эске килеп китте әле үҙең менән. Сөкөрҙәшеп кенә!

Фәниҙә кухняға ук үтеп, коймағын йылытырға куйҙы. Сәй әҙерләп, капма-каршы ултырҙылар.

– Атайың да һәләк коймак ярата ине, майы лыскылдап торһон, тиер ине мәрхүмкәйем.

– Ә мин – каймак менән... Иҫеңдәме?

Әсәһенең фатирын да йыйыштырырға ниәтләнгәйне Фәниҙә. Күҙ йүгертте: барлык йыһаз тәртиптә, таҙа. Бер туҙан юк, кейем-һалымы магазин кәштәһендәге шикелле бөкләп-төкләп рәткә һалынған. Әсәһе электән үк шулай бөхтәлекте ярата. Ә был юлы, ғәҙәттән тыш, тәртип. Фәниҙә әсәһенә әйләнеп:

– Ярҙам итәйем тиһәм, әллә үҙең дә әҙерләнеп бөткәнһең инде? – Әсәһе тертләгәндәй итте:

– Кайҙа? Бәй...

– Кайҙа, тип ни, больницаға. Күҙеңә операция көнө етә лә баһа.

– Һин дә шуны тылкыйһыңмы? Бер әйттем бит, бармайым тип.

– Как бармай? Врачтар аптырай, күршеләрең көлөр: ике бала үҫтерҙе, береһе – гендиректор, икенсеһе завдетсадом була тороп, һукырайып барған әсәһен әҙәмсә карамай, тиерҙәр.

– Әйтмәҫтәр, кеше белә лә инде кемдең кемлеген.

Фәниҙә нисек өгөтләргә белмәй әсәһен.

– Һуң, Фәнисте уйла, исмаһам. Нисәмә тапкыр врачтар менән һөйләшеп килеште, вакытын да, аксаһын да әрәм итеп.

Акса һүҙен ишеткәс, әбейҙең асыуы купты, хатта тауышынан һиҙелде был.

– Кем һеҙҙән һорай! Ниңә бушка түгәһегеҙ һуң аксағыҙҙы! Бынан һуң әрәм итмәҫһегеҙ...

Кыҙы өндәшмәй генә урынынан торҙо. Һис юғында, ванна тирәһен таҙалап китәйем, тип уйланы ла биҙрә, сепрәк эҙләй башланы. Күҙе капыл торбала эленеп торған оҙон бер бауға төштө. Әллә ниндәй ят бау, боланды мөгөҙөнән һөйрәтерлек беше күренә. Кулына алып оҙак кына карап торҙо: нимәгә кәрәк икән һуң был ғәләмәт әсәһенә?

Бау болғап килеп сыкканын арлы-бирле тойомлағас, карсык үтә кырыҫ төҫ менән йолкоп тигәндәй тартып алды бауҙы Фәниҙәнән:

– Үҙеңдең өйөңдөр шул, темеҫкенеп йөрөмәһәң? Бар кайт,

кейәүҙе ҡара... Үҙеңдең ауырлы икәнеңде белмәй тиһеңме әллә? Әйтмәгән була бит әле.

– Бөгөн әйтәм тигәйнем.

Ҡыҙы киткәс, ишеген бикләп тә ҡуйҙы әсә. Фәниҙә әсәһенең ҡырҡа үҙгәрешенә иҫе китеп, бер ауыҙ һүҙ ҙә әйтеп өлгөрмәне. Юҡ, әсәһенең былдай сағын ошоғаса бер ҙә белмәне-күрмәне бит. Әллә...

Ауыр уйҙар менән әйләнеп ҡайтты Фәниҙә. Шундуҡ ағаһына шылтыратырға теләне, ләкин трубканы күтәргәс, әйтәйемме, юҡмы тигәндәй, бер аҙ уртын сәйнәп торҙо ла ҡапыл телгә килде.

– Өйөн йыйыштырырға ла түгел инде былай. Тап-таҙа, керҙәре йыуыулы, тамағына етерлек. Ваннаға инһәм, әллә ниндәй бау элеүле тора. Ниндәй бау тип һорағайным, әрләне лә ташланы. Йөрөмә соҡоноп, ҡайт бар, әлегә кәрәгең юҡ, тип ҡыуҙы хатта.

– Ниндәй бау һуң ул?

– Быға тиклем күрмәгән оҙон бау. Ныҡлы, яһалма сүстән. Мәйтәм, әллә бер-бер...

Фәнис тертләп ҡуйҙы, ағарынды, ә Фәниҙәнең хәбәре һаман бер тирәлә өйрөлдө.

– Мамочка алйый башлаған, минеңсә. Психиатрҙан ҡаратайыҡмы әллә? Бер-бер донъя ҡуйһам, һис ҡайғырмағыҙ, ти. Дауаханаға ят, айырым палата алырбыҙ, эргәңдә булырмын тиһәм, ауырымайым, һап-һаумын, тип өҙә һуға.

– Дөрөҫ, бер нәмәгә ҡарамай, күҙен дә, күңелен дә дауаларға кәрәк. – Быны Фәнис уйсан, етди әйтте. – Ярай, борсолма, медицинскийға барам әле. Бер шәп профессорҙы беләм. Эшләйҙәр шикелле шәмбе көнө лә...

«Тойота» ашығыс ҡуҙғалды.

Ысынлап та, профессор психиатрия кафедраһында ине һәм ҡартлас Фәнисте бик һәйбәт ҡабул итте, йомошон иғтибар менән тыңланы. Кәңәш бирҙе: психиатр – ул дауалаусы, хаталаныуы ихтимал; әсәйегеҙ бит нормаль һөйләшә, тик һеҙҙең менән генә ҡырыҫ, шуға иң башта психологка мөрәжәғәт итеү хәйерлерәк. Әлбиттә, әбейҙәр донъяһын, йәнә милли ғөрөф-ғәҙәтте, телде белгән, мосолман диненә хөрмәт менән ҡараған тәжрибәле белгес табылһа, бигерәк яҡшы, тип тә өҫтәне табип.

* * *

Һеңлеһен иҫкәртеп тә тормаҫтан, ағаһы иртәгәһенә үк ныҡлап психолог эҙләргә кереште. Байтаҡ икән улар баш ҡалала, күбеһе йәштәр, тик ҡулайын табыу ауырғараҡ төштө, әммә юлыҡты барыбер берәүгә. Пенсияға сығып, ейәнсәрен ҡара-

шып, күберәк өйҙә ултырған, китап яҙған сағы икән тегенең, йәғни Тамара Сираевнаның. Кемдер – әллә дуҫы, әллә дошманы – уның хаҡында: «Алтын» бит ул» – тип ыскындырыуы ла өркөтмәне Фәнисте. «Алтын», тимәк, киммәт тигән һүҙ. «Алтын адвокат» тигәндәрен ишеткәне бар ҙаһа. Әсәй берәү була... Шөкөр, Фәнистең фирмаһы бизнеста кәм-хур түгел, һорағанын тотторор. Бөлмәҫ, моғайын, машина хаҡы һорамаҫ, уҙа китһә, ат хаҡы һорар. Улай тиһәң, аттарҙың да, ай-һай, ҡыйбаттары осрай. Һәр хәлдә, әсәһе өсөн һаранлана торған заттыр шул Фәнис. Уҡыһын улым, кеше булһын тип, бер нәмәһен дә ҡыҙғанманы бит әсәһе заманында. Мәскәү вузын бөтөрттө хатта.

...Фәнис бала саҡтарын – ауыл тормошон иҫенә төшөрҙө. Бәләкәй генә ауыл, бәләкәй генә өй. Сәсрәп ауырыны ла китте бер заман. Фельдшер пункты күрше ауылда, етмәһә, Дим аръяғында, уныһы күпсеп ташҡан көҙгө ямғырҙан. Кәмә яллап сыға әсәһе, ай-вайына ҡуймай, йәш кенә бер ҡыҙҙы етәкләп тигәндәй алып ҡайтты. Шәбәйҙе Фәнис, тик көҙгө әсе ел һуғыуҙан өҙлөгөп, әсәкәйе байтаҡ сырхап ятты. Хәҙер инде фельдшер артынан Фәнис юлланды, сөнки атаһы колхоз баҫыуын туңға һөрә ине. Малайы бер кемгә лә әйтмәй, йоҡа ғына боҙ аша ныҡкышып барып, әйҙүкләне шәфҡәт туташын. Килеште әсәгә тегенең дауаһы. Фәниҙә һеңлеһе өҫтәл аҫтында шыуышып ҡына йөрөй ине, буғай. Имсәк тә ташламағайны, былай ҙа сирле әсәһен ыҙалатып, имергә була өҫтөнә ятып шыңшый, үрһәләнә... Хәҙер, ана, үҙе бала табырға йыйына. «Практикующий психолог» менән әңгәмә өсөн Фәнис «Арлекино»ны һайланы. Аулаҡ, талғын музыка. Шаштырмай ғына һыйланырға ла мөмкин: төрлө төҫтәге туңдырма, кофе, емеш-еләк, теләһәң, әсе-мәсе...

Дүшәмбе Тамара Сираевнаға ҡабат шылтыратып, машина ебәрәсәген һәм сәғәт биштә ҡайҙа көтәсәген белдергәс, үҙе етәкләгән фирмала транспорт табыу ҡыйын булмаһа ла, Фәнис кафеға трамвайҙа барырға ниәтләне. Әйҙә, бер елдереп уҙһын әле трамвайҙа проспектты, юғиһә, ана рельстарын һүтә башлағандар. Дөрөҫөрәге, уның яңғыҙы ғына уйланғыһы, белмәгән-күрмәгән ханыма ниҙәр әйтерен барлағыһы ла килә ине. Университеттағы таныш профессоры хаҡлылыр: аңын-төңөн белмәй, дауалайым тип, ғәзиз кешеңде исеменән генә әҙәм ҡурҡырлыҡ «психбольница»ға нисек һалмаҡ кәрәк? Эх, әсәй, әллә яңғыҙлыҡтан эсең бошамы? Тыңламайһың бит, күпме әйтәм: әйҙә, тор беҙҙең менән, фатир ҙа, күңел дә иркен. Юҡ...

Кис яҡынлашҡанғамы, еләҫ кафела кеше байтаҡ. Өҫтәл алып, урынлашты ла Фәнис хужаларса көтә башланы. Ниндәйерәк икән төҫкә-башҡа психолог? Әһә, машинаһы боролоп туҡталды. Водителе белдекле – кабина ишеген асып, йыуантыҡ ҡына, әммә еңел һөйәкле ханымды ҡулынан тотоп ергә баҫты-

рышты. Дәү күҙлекле, ала-ҡола буялған бөҙрә сәсле, йылы көнгә ҡарамаҫтан, осһоҙло плащ-пальто кейеп алған ҡатынды, бә-әй, тәү ҡарауҙа һис тә интеллигент тимәҫһең. Етмәһә, тәмәке ҡабыҙып ебәрҙе... Ярай, кейемен күреп ҡаршыла, аҡылына ҡарап оҙат, ти бит урыҫ, әлегә йыбанмай сығып, сытаймай ғына болдорҙан уҡ ҡаршылау зарур. Шулай итте лә Фәнис. Хатта күрешкәс-танышҡас, тартҡыһы килмәһә лә, ҡиммәтле сигарет тоҡандырып ебәрҙе һәм урамдарҙың тәре һымаҡ киҫешкән сатында транспорттың себен урынына мыжғыуын бер аҙ күҙәтеп торҙо.

— Бына шундай беҙҙең тормош! — Тамара Сираевна быны фирмачтың кисерештәрен үтә күргәндәй әйтте. — Йә, Фәнис Харисович, артабан ни эшләйбеҙ?

— Ғәфү итегеҙ, Тамара Сираевна, зинһар... Ҡаршы килмәһәгеҙ, кофе артында... — Фәнис уң ҡулын ишеккә иҙәп, эргәһенән ханымды үткәреп ебәрҙе лә ҡулы менән водителенә ишараланы: көт машинаңда.

Байтаҡ ултырҙылар. Шарап та тәҡдим ителгәйне, ҡунағы: «Аҙаҡ, бәлки, баш тартмам», — тине йылмайып. Фәнискә ваҡтөйәк тойолһа ла, Тамара ханым уға тәғәйен һорауҙарын бирҙе һәм кәрәкле яуаптарҙы күңеленә һеңдерә барҙы. Ахырҙа әйтеп һалды:

— Аллаға тапшырҙыҡ. Мин хәҙер үк барам. Хәҙер, өйгә генә шылтыратам да.

— Рәхим итегеҙ. — Фәнис ҡунағына телефонын һондо. Ҡатын тәүҙә ҡыҙы, шунан ейәнсәре менән һөйләшеп алды. Аҙаҡ көлөмһөрәне:

— Өс йәшлек кенә бала — телевизорҙы тоҡандырһаҡ, «хочу плохое кино!» тип йөҙәтә — көнбайыш «порнуха»һын ҡарарға теләй. Бына ниндәй заманалар килде!

Баш сайҡап көлөштөләр ҙә бер аҙға шымтайып ҡалдылар. Бизнесмендың һорарын һиҙгәндәй, Тамара ханым йәнә ни уйлауын иҫкәртте:

— Ә һеҙ, йәш кеше, борсолмағыҙ. Үҙем генә инәм.

— Асмай ыҙалатыр, тим. Һеҙҙе индерәм дә... ошонда көтөрмөн. Ризаһығыҙмы?

— Ай-һай. — Психолог икеләнде. — Көтмә, туған, транспорт күп йөрөй Сипайловаға. Бисәләрҙең теле бер сиселһә, ҡырҡ сынаяҡ сәй кәрәгә.

— Борсолмағыҙ, сәй, торт — минән.

— Юҡ та. Тик һеҙ мине, беләһегеҙме, пенсиялар бүлегенән, йә берәй ветерандар советынан тип таныштырырһығыҙ. Төшөндөгөҙмө?

— Яҡшы, — тигән булды Фәнис, әллә ни аңғарып етмәһә лә. — Һеҙҙеңсә булыр.

Әсәһе улына ишеген ҡабаланмай ғына асты.

– Нишләп йөрөйһөң ул? Миңә бер ни ҙә кәрәкмәй. Үткәндә генә килеп киттең түгелме ни? Әллә килен менән боҙолоштоғоҙмо?

Уның ҡарауы, Фәнис «ветерандар советы» вәкиле менән хуплап-йөпләп таныштырғас, әбекәй ирәйеп китте, үҙен онотмауҙарына рәхмәт уҡыны. Эштәренең көйләнә барыуын һиҙемләп, психолог Фәнискә ишара яһаны: ҡамасауламауың яҡшы.

Хушлашыр алдынан Фәнис әсәһен маҡтап телгә алды, йәнәһе, хуш еҫле, эсеп туйғыһыҙ була уның сәйе.

– Ниңә, ҡунаҡҡа сәй ҡуя алмаҫ, тип уйлайһыңмы әллә? Һин дә ултыр, – хужабикә улын еңелсә битәрләгәндәй итте. Фәнис шуны ғына көткәндәй, психологҡа ҡарап, гүйә, ауыҙ тирәһендә кеҫә телефонын терәгәндәй, һөйләшербеҙ әле, тип шыбырланы: сәғәт ундарҙа шылтыратасаҡ... Тегеһе баш ҡаҡты, ымы менән ҡыуғандай итте.

Фәнисте оҙатҡастары, психолог хужабикәгә бик яғымлы өндәште.

– Бына, апай, профком күстәнәскә торт, цейлон сәйе ебәрҙе.

Тамара Сираевна тәүҙә әбекәйҙең ышанысын яулау маҡсатын ҡуйҙы. Бының өсөн күберәк хужабикәне тыңларға – ғәҙәттә, өлкәндәр нимәне һағына, ниҙәргә борсола, шуны тылҡый торған – ғөмүмән, эс-бауырын «капшарға» ниәтләне. Әбекәй үҙенә серҙәш табылыуына, килгән кешегә һый-хөрмәт күрһәтә алыуына шат ине. Иҫке, әммә ныҡлы шкафының ҡай тартмаһынандыр аҙ ғына кәмегән бер ҡап шоколад һөйрәп сығарҙы. Ҡатып бөткән уныһы, хужабикәнең күңеле булһын тип, саҡырылмаған ҡунағы кәнфитте лә, ҡуйы яһалған сәйҙе лә маҡтаны.

– 8 Мартҡа килтергәйне... Фәнисемдең баш балаһы – Әлиә исемле ҡыҙым. Доктор була, Хоҙай бойорһа. Шөкөр, үҙемде үҙем ҡарайым әле, артыҡ бер нәмә лә кәрәкмәй. Керемде кешенән йыуҙырмайым, газдың да, ваннаның да рәхәтен күрәм. Тик бына күҙҙәрем генә... аҡ һалырға уйлай, шикелле.

– Ҡуй, апай, Горький тигән яҙыусы әйткән: донъяны күрмәү – иң ҙур бәхетһеҙлек, тигән. – Үкенеп тә ҡуйҙы психолог. Наҙан ғына апаҡай ҡайҙан белһен инде Горькийҙы?

– Дөрөҫ әйткән дә бит. Тома һуҡырҙар ҙа күп бит донъяла...

– Уныһы шулай...

– Балаларым күҙемде биш мең һумғамы, дауаларға теләй. Әстәғим, машина хаҡына! Лутсы мин һуҡыр көйө генә ятам да үләм. Нимәгә хәжәт ул күҙ дөм ҡара ҡәберҙә?

Өндәшмәй генә сәй эсә биргәс, хужабикәгә яҙмышына ҡағылышлы һорауҙар бирҙе. Яуаптарҙан шул асыҡланды: Дим буйындағы бәләкәйерәк ауылда тыуған, ярлы, ярты етем үҫкән, башланғыс ҡына белем алған. Йәшләй генә тракторсы Хариска

тормошка сыккан, ике бала тапкандар. Колхозда йәшәү ауырлашкас, өйҙәрен һатып, Өфөгә күсәләр. Бер заводка ире лә, үҙе лә иң ҡара, иң түбән хаклы эшкә инәләр. Тәүҙә кеше өйөндә түләп торалар, аҙак ятак тупһаһын тапайҙар, уф-ф... Торараҡ бәхет йылмая – бер бүлмәле ошо фатир бирелә, тик ир генәһе ярты йылдан һуң ҡапыл яман шештән гүргә ингән. Утыҙ йылдан ашыу резина, елем еҫе аңҡып торған заводта иҙән йыуа, аҙаҡ ялланмыш рәүештә ике-өс өйҙөң подъездарын таҙарта.

– Фәнисем үҙе эшләп алды фатирҙы, хәҙер ҙу-ур өйө. Фәниҙә ҡыҙым кейәүгә сыккайны, үҙем һымаҡ яңғыҙ ҡоҙағыйым туйҙарында ук өй аскысы бирҙе. Әлдә балаларым ипле үҫте, икеһе лә вуз бөттө. Ана бит, йөҙ һум тип тормай, килолап баҙар йөҙөмөн ташыйҙар. Ә мин йөҙ һумға ай буйы бил яҙмай дә-әү цехты таҙарта торғайным...

Былары Фәнис ауыҙынан мәғлүм ине Тамара Сираевнаға. Әммә психолог әбекәйҙе бүлдермәй тыңланы, әйткәндәрен йөпләп-хуплап ултырыуын белде.

– Балаларың бигерәк уңған, үҙеңә окшағандарҙыр! Хәҙер ундай балалар аҙым һайын осрамай... – Ваҡыт-ваҡыт ханым йүкә шына ҡағырға ла онотманы. Йөрәгенә май булып яғыла был һүҙҙәр, йөҙө-сырайы яктырып китә меҫкенкәйҙең.

– Эйе, ҡарттарға бәхет килде бит. Хәҙер инде ололарға йәшәү бик рәхәт! Рәхмәт инде Йәлсингә, кем уйлаған ете йөҙ һум пенсия бирерҙәр тип...

Тамара Сираевна ялт итеп әбейҙең йөҙөнә бакты: шаян ғына икән үҙе, ҡайһылай әсе тешләшә. Әммә ҡарсык бик тыныс, хатта йылмайып маташа. Ах-ах, һис тә мәрәкәләп-мыҫкыллап һөйләмәй ҙә баһа!

– Балалар тип йәшәлә инде, и туғанкайым. Хәҙер йәштәргә бик ҡыйын, тиҙәр бит, эшләргә эше, эшләһә, аксаһы юк. Зарплатаһын бирмәйҙәр. – Тынлык. Әбекәй дауам итә. – Минең балалар үҙҙәре ас йөрөһә йөрөр, һис һиҙҙермәҫ, һәйбәт йәшәйбеҙҙән һалдыралар. Әле юк аксаларын бар итеп, операцияға әйҙүкләйҙәр. Нисек уларҙы бурыска батыраһың?!

Эй әсә! Бына ҡайҙа ята көйәләнеүҙәренең зилләһе! Балаларына бер тинлек тә ауырлык килтерергә теләмәй, шуға ла уларҙың ярҙамынан бөтөнләй баш тарта икән был бахыр! Улының көн дә кеҫәһе шығырлап торған «йәшел» аксалар менән алыш-биреш иткәнлеген белһә, ни кылыр ине икән был изге йән? Ул сакта, балам насар юлға баҫманымы икән тип, хәсрәткә сумыр ҙа ине, моғайын.

Әбекәй күңелен төбөнә тиклем бушатырға уйланы, ахыры.

– Балаларыма йөк итмә, итер булһаң, лутсы йәнемде ал, тип Хоҙайға ла ялбарам, әллә үҙем генә... Китап ҡушмай ҙа бит, нишләйһең.

Әбей үҙ һүҙҙәренән үҙе курккандай тынып калды. Тамара Сираевна ла башын баҫып, ни тиергә лә белмәй, шаңкып ултыра бирҙе. Балаларына ауырлык төшөрмәйем тип, үҙен шул рәүешле корбан итерлек хәлгә еткән әсәләрҙе осратырға тура килмәне уға әлегәсә. Балалары бөтөнләй карамағандар илдә бихисап, ундай ата-әсәнең кайғыһы аңлашыла, ә был бахыр... балалары хәстәрләгән һайын нықышыбырак ярҙамдарынан баш тарта!

Тынлыкты боҙоп, хужабикә һорай һалды:

– Нимә, кыҙыкай, әллә башың ауыртамы? Кешене һирәк күргәс, гәзит-мәзит укымағас, күп лығырҙайым шул... Башың ауыртһа, ана, тартма тулы тәблиткә. Һайлап ал. Мин үҙем әллә ни яратмайым, кайһы берҙә йоко дарыуы ғына капкылайым. – Әбекәй тороп, әкрен генә баҫып тәҙрә яғына ыңғайланы, үҙ алдына һөйләнеп алды. – Кем белә, туғанкай, мужывит, кәрәге тейер... Туған-тыумаса юк тиерлек минең. Ике туған ағайым ғына йәшәй ауылда. Һикһәнде кыуа, минән ун йәшкә олорак...

Рөхсәт һорап, Тамара Сираевна балконға сыкты һәм, тирәйүнде күҙәткән булып, тәмәке тартып инде.

– Аһ-аһ, кайҙан тәмәке еҫе сыкты әле? – тип аптыранды хужабикә.

Өндәшмәне Тамара Сираевна, оялды дөрөҫөн әйтергә. Бары тик ваннаға инеп, ауыҙ-моронон сайкап сыкты. Өйҙә йәнә тынлык урынлашты. Кухня яғынан сак-сак асылған радионан ғына һағышлы көй ағыла. Мөйөштә дүрт тояклы иҫкерәк телевизоры булһа ла, әбейҙең уны карамауы һиҙелеп тора – өҫтөнә бәрхәт тукыма ябылған.

– Юк, апай, һеҙгә йәшәргә лә әле йәшәргә! – Йөрәкһеп урынынан калкты психолог. – Завод һеҙҙе хөрмәт итә. Әлбиттә, унда хәҙер күберәген йәштәр эшләй, үҙеңде белгәндәр юк тиерлек. Ә бына ветерандар бар, шулар һеҙҙе һис онотмай, – тип баяғы алдак фекерен кабатлай-кабатлай әбекәй эргәһенә якынлашты. – Ызначит, былай: оҙак йылдар эшләүегеҙҙе иҫәпкә алып, завод, эйе, күҙегеҙгә операция хакын үҙе түләргә карар сығарҙы. Мине, хөрмәтле пенсионер апакай, шуны әйтергә ебәрҙеләр. Күҙегеҙ утыҙ процентка якшырак күрәсәк. Намыҫлы эшегеҙ өсөн рәхмәт әйтергә, һаулык теләргә куштылар.

– Шулаймы ни? Рәхмәт ишетеүе рәхәт инде ул, – карсык тағы ниҙер бышылданы, юлаклап йәше акты микән, халат кеҫәһенән кулъяулык алып, күҙ төптәрен, танау аҫтарын һөрткөләне.. – Рәхмәт инде онотмағастары... Квартирға ла ярты хак кына түләтәләр. Иҫән-һау йәшәһендәр, бала-сағаларының изгелеген күреп!

– Кана, апай, сәйеңде тағы эсәйек әле. Балың да якшы.

– Әйҙә, һеңлем, әйҙә. Рәхәт әле һинең менән. Фәниҙә кыҙым, ул укып-сукып, ул эшләп-эшләп, утыҙҙа ғына сыкты бит

кейәүгә. Матурлап көттө инде мине, рәхмәт яуғыры. Шуны бел: ҙур ҡайғы икән ул ҡыҙың оҙаҡ тормошланмаһа. Башҡаланғайны – әпәт ҡыйын.

Ҡабатлап сәй эскән арала «завод вәкиле» завод ветеранын күҙенә операция яһатырға тамам күндерҙе. Әбей бөгөн таҙа кейемдәрен барлап, йыуынып-сайынып алырға булды, хатта уйынлы-ысынлы һораштырҙы:

– Әйт әле, ҡыҙым, күҙем үткерләнһә, мине берәй ергә эшкә алырҙар микән?

– Әлләсе... Ә балаларың – Фәнис тә, Фәниҙә лә бигерәк шәп һинең! Әйтәм бит: хәҙер ундайҙарҙы осратыуы ифрат ҡыйын... Оҡшағандар бит әле бер-береһенә. Йомро битле, һарғылт сәсле икеһе лә. – Тамара Сираевнаның ҡапыл үҙ әсәһе иҫенә төштө.

– Һуғыш башланғас, ярты тоҡ бойҙай менән генә тороп ҡала әсәйем. Һуғыш башланыр, тип уйламаған, запас йыймаған бит инде. Беренән-бере бәләкәй күмәк бала менән ныҡ яфалана бахырым. Урманға бер мәл һыйыр эҙләп сыҡҡан да илай икән түгелеп. Былай ыҙаланғансы, аҫыланайым да ҡуяйым, балаларҙы һис юғында детдомға алырҙар, тип уйлай икән үҙе. Бер ҡайынға тотоноуы була, бүре олоп ебәргән. «Ауылға табан шыҡыйып йүгереүем шул саҡта, – тиер ине, – бер ҙә үлге килмәгән икән дә! Үҙем илайым, үҙ-үҙемдән көләм ҡайтып килгәндә, Хоҙай биргән йәнем-тәнемде бүреләргә ашатып тормаға...» – Был мәлдә әбей күҙҙәрен ҙур асып Тамара Сираевнаға томанлы ҡараштарын төбәгәйне.

– Һорамаһағыҙ ҙа беләм: әсәйҙең нишләгәнен белгегеҙ килә. Итәғәт менән, оҙон ғүмер кисерҙе, биш йыл элек яңыраҡ китте. Һуңғы ике тиҫтә йылдан ашыу миндә йәшәне. Һуғыш кинолары күрһә, бик йәлләр ине, беҙҙең ыҙалар былар менән сағыштырғанда суп шайы ла булмаған икән тип...

Әбей менән бик йылы хушлаштылар. Балаларын шатландырайым әле, тип күңеле елкенде Тамара Сираевнаның. Әсәләренең хәстәренең һәм мөхәббәтенең сикһеҙлеген аңлай алырлыҡ таһа улы менән ҡыҙы!

– Ярай, ҡыҙым, күндерҙең. Барам күҙ духтырына.

* * *

Операцияға тәрбиәләп-оҙатып ебәргәс, Фәниҙә әсәһенең өйөн йыйыштырып ҡалғайны, шкафтың өҫкө бүлкәтенә тәҫләп һалынған сепрәк-фәләнгә иғтибарын йүнәлтте: дини дәфтәрҙәр, таҫтамалдар, ҡулъяулыҡтар, ярты төргәк аҡ тауар, ҡуш устай көмөш аҡса – күбеһе бишлектәр, осһоҙло хушбыйҙар... – Тимәк, йыназа өсөн һәммәһе әҙер. Ярай, ғәжәп түгел, өлкәндәр, ғәҙәттә, үлемтеген алдан хәстәрләй.

Бер ыңғайҙан ванна-туалет крандарын да тикшереп китмәк булды. Бында ла тәртип, «сәвсим порядок», тиер ине атаһы булһа. Бәй, бәй, шикле бау ҙа юкка сыккан, рәхмәт яуғыры.

Фәниҙә үҙенә йән тынысдығы кайткандай хис итте. Ағаһын да кыуандырыр был сетерекле хәбәре менән.

Әүлиә икән дә Тамара Сираевна! Күҙе дауахананан «утыҙ процентка» үткерләнеп сыккайны, бер аҙҙан әбекәй үҙҙәренең подъезын юк-бар аксаға көн дә кис ал да гөл таҙартырға керешмәһенме!

Йәй үтте. Әбекәйебеҙ көҙгө сыуакта улы менән машинала елдереп кенә Дим буйындағы тыуып үҫкән ауылына барып, бәхилләшкән һымағырак йөрөп кайткайны, уйламағанда тымаулап түшәккә ятты. Кан баҫымы ла күтәрелгән икән. Үҙен тиҙ генә өйөнә якын дауаханаға һалдылар. Мәрәкәләп алған әле дауаханала ауырыуҙарҙы.

– Күрше ауылда бер боронғо әбей Дим буйынан бесәндән сирләп кайткан да фельдшерға барған, ти. Инәй, һиндә нервы насарайған бит, тигән. Әйткән ти әбей шул сак: аһ-аһ, Дим буйында ла нервы булыр икән...

Әмәлгә тарығандай, шул көндәрҙә Фәниҙә бала табыу йортона оҙатылды һәм сабый тапты. Ауырлығы етеңкерәмәй тыуған тиме... Быны ишеткәс, түҙмәне өләсәйе, табибтарҙан үҙен тиҙерәк сығарыуҙарын үтенде һәм теләгенә иреште.

– Хәҙерге йәштәр бала карай беләләр шул. Ейәнемдең йүгереп йөрөгәнен күрһәм, Хоҙайға рәхмәттәр әйтеп үлһәм дә үкенмәм, – тип мөңгөрләгән ти әбекәйебеҙ шул мәлдәрҙе.

*2006 йыл*

## ЙҮНСЕЛ ЕГЕТ

Киң туғайҙар аша елгән поезд Урал итәктәренә якынлай. Вагон тәҙрәһенән кышкы тәбиғәтте күҙәтәм. Юл тирәһендәге һирәк кауландар состав еленә сәстәрен сайкалтып ялпаша бирә кала. Кар тәрән түгел, шулай ҙа йырындарҙа, кыуак төптәрендә тулкын-тулкын булып һырынтылар өйөлгән. Әйтерһең, ап-ак диңгеҙ бер мәлгә генә хәрәкәтһеҙ катып калған. Ә мыкты тауҙар алыҫтан ук караштарҙы үҙенә тарта, йөрәкте хисләндерә.

Арылғайны, шулай ҙа командировка мәшәкәттәре кәрәгенсә теүәлләнгәс, күңел тыныс, кәйеф күтәренке ине. Разъездарҙың береһендә купеға буш кул менән бер кыҙ килеп инде, артынса портфель тоткан егет күренде. Уларға күҙ һирпеп кенә алдым да тубығымдағы журналға текәлдем.

Хәҙер беҙ дүртәү. Урта йәштәрҙәге бер ағай Магнитогорскиҙа ук ултырғайны. Ул апаһын ерләшеп кайтып килә, кайғы-

һы йөҙөнә бәреп сыҡҡан. Яңы юлдаштар – йәштәр. Ҡыҙыҡ, бер ғаиләме икән? Түгелдер, егеттең төҫ-ҡиәфәтендә бер ҙә ирлек олпатлығы һиҙелмәй. Ҡупшы, хатта затлы кейем: бер аҙ һауалыраҡ, үҙ-үҙенән ҡәнәғәтлек сатҡылары һибелгән һоймәлекһеҙ генә сырай. Ниңә быларҙы һөйләйем әле? Сөнки егет юҡ-бар кинәйәләре, ҡолаҡҡа яҡмаған мәҙәктәре менән үҙенә ҡараткайны инде. Бына ул портфеленән шаҡмаҡлы ҡумта – ыҡсым ғына шахмат таҡтаһы тартып алды. Беләм, фигуралары һөйәктән, ғөмүмән, сәфәр-юлға йөрөтөүгә йәтеш әйбер.

Егет ҡаршыһындағы ағайға, ике телде бутап, былай тип өндәште:

– Ну, разок-два көс һынашайыҡмы, юл да шәберәк тойолор. Эх, яратам поезда «шах!» та «мат!» тип барырға, – харап, тауышында мин-минлек ярылып ята.

– Пешкаларын да күсерә белмәйем бит әле, ҡустым, – тине тегеһе, ғәфү үтенгәндәй. – Өйрәнергә лә маташтым, булманы.

Егет, ғәжәпкә ҡаршы, минең яҡҡа ҡарамай ҙа. Олораҡты белмәгәс, йәшерәге күптән томаналыр, тиме икән. Күңелем сәмләнгәндәй итһә лә, үҙемде тыйып ҡалдым.

– Ярай, Лялечка, бында рәт юҡ – 10-сыға инәм. Не скучай! – Шулай тине лә егет шахматын тотоп купенан сыҡты. Ҡыҙ уны, һағыҙлы кәнфитен сәйнәй-сәйнәй, уңыш теләйем тигәндәй ҡул болғап, оҙатып ҡалды. Ләкин һуңғараҡ ул да ғәйеп булды.

Поезд яңы магистралгә төшөп алды. Мин тағы тышҡа бағам. Кеше рухы, ҡеүәте ҡар-урмандар ярып үткән, тау-таштарҙы буйһондорған. Быуаттар буйы һил ятҡан ҡырыҫ, әммә ҡотло, тиңдәшһеҙ матурлыҡ һаҡлаған ерҙәр әле икенсе йәшлеген кисерә...

– Фарт минеке бөгөн. Һә тигәнсе биш партия оттом, – һөйләшә-һөйләшә баяғы пар килеп инде. Хәҙер уларҙың исемдәре таныш: егет ҡыҙға Лялечка, ти, ҡыҙ егетҡә Рудик тә Рудик тип кенә тора. Ниндәй фарт хаҡында һөйләп осона әле ул? – Йыуып алһаҡ, эсте тишмәҫ ине, безобразие, – ресторан ябыҡ.

Рудиктың һүҙен ҡыҙ үҙ зары менән ҡеүәтләне:

– Асыҡтырҙы... Һиңә ышанып юлға бер нәмә лә алмағайным. Исмаһам, буфетчица ла юҡ.

Сумкамда күстәнәс итеп алған алмалар ятыуын иҫләнем дә иң ҙурҙарын тиҙ генә йыуып килтереп йәштәргә бирәрҙе һондом, бигүк яратмаһам да, үҙем дә береһен ашай башланым.

Йәш йөрәктә асыу йә көйһеҙлек тиҙ баҫылыусан. Күп тә үтмәй, Рудик менән Ләләнең йөҙө айҙай балҡый ине. Кеше кәйефе йәйғор һымаҡ, ҡырҡҡа төрләнергә әҙер. Миңә лә рәхәт булып ҡалды. Ләкин оҙаҡламай Рудик йәнә әҙәпһеҙлек күрһәтте.

– Һеҙ шахмат буйынса тоже бум-бум, да?! – Һәм ул сикәһенә ике рәт һук бармағын төртөп алды. «Һеҙ» тип аса бит әле ауыҙын. – Шулай, старик, бөтәһенә лә тел осон танауға еткереү бәхете бирелмәгән кеүек, шахмат һөнәре лә күптәргә тәтемәй...

Рудик, шәп әйтемме тигәндәй, Ләләгә боролоп ҡараны: Ләлә иһә ҡарашы менән уны хупламауын белдерҙе.

Вәт, әй, кешенең хәтере ҡалыр, тип уйламай. Ярай, «старик» тигәне бата, бәлки, үҙ күреп тә ыскындырғандыр. Оҫталыҡ тәтемәй тиме?

Кәмһетмәксеме? Асыуҙан хатта «бум-бум»ымды томан сорнағандай булды. Ҡайҙа, кемдән өйрәнгәнһең һин, тәтәй егет, бындай әҙәпһеҙлеккә? Боронғолар әйтмешләй, ололар алдында олонан бәйелһеҙләнеү – яҙыҡ эш...

– Ярай, ҡустым, бик ҡыҫтаның, самалап ҡарайыҡ улайһа, – мин, әлбиттә, мөмкин тиклем сабырлығымды юймаҫҡа тырышам.

Егетем тоҡанып уҡ китте һәм шундуҡ шартын белдерҙе.

– Давай. Но уговор: һәр партия өсөн – 5 һум, – тине һәм фигураларҙы теҙә башланы.

Аптырап ҡалдым. Әйтәм бая фарт та фарт тип ҡупая ине... Мин биргән алманы һаман көйшәп ултырған Ләлә ғәмһеҙ генә:

– Рудик, нахаллашма, – тигән булды. Ләкин тауышы өҙә һуғырлыҡ яңғырамай ине. Шуға уның һүҙен Рудик ҡолағына ла элмәне.

– Еңәм икән – миңә һеҙҙең кеҫәнән биш «рә» күсә, еңелһәм – минеке оса. Вот так.

– Ҡустым, мине дөрөҫ аңла, шахматты аҡсаға уйнағандарын ишеткәнем дә, күргәнем дә юҡ.

– Тормош ғилләһен һанға һукмайһығыҙ, дорогой. Хәҙер аҡсаһыҙ – ни шагу... – Рудик, теләмәһәң үҙ иркең тигәндәй, көсәнеп йылмайҙы ла төпкәрәк шылып ултырҙы. – Минең папа, аҡсанан еҫ сыҡмай, уны ниндәй ысул менән тапһаң да хәләл, тип туҡый.

Атаң аҡыл эйәһе икән, тип әйтмәксе булғайным да тыйылдым. Кеҫәмдән ҡара көнгә тип һаҡлаған аҙаҡкы өслөктәрҙе сығарҙым да уларҙы шахмат таҡтаһы аҫтына бер яҡ остарын көпләтмәй ҡыҫтырҙым. Сигенергә һуң ине, унан бая уҡ көрәш дәрте уянғайны.

– Һе, мин дә банкка алтыны ҡуям, – тип Рудик берәр һумлыҡтар әҙерләп ҡуйҙы.

Мин аҡса өсөн түгел, ә намыҫ өсөн алышам. Һәр хәлдә үҙемде ана шулай йыуатам. Ниәтем – аҡса ҡолоң хур итеү, унан нахаҡҡа мыҫҡылланыуым өсөн рухи үс алыу. Йәш кенә булһа ла, ҡара, ас ҡандала кеүек йәбешеп ята бит, йүләр...

Башланыҡ. Рудик хәйләкәр, апаруҡ шыма уйнай, һүҙ аралаш теория миҫалдарын, донъяға танылған шахмат йондоҙҙарын телгә ала.

Тәүге юлы мин ун өс йөрөштән һуң биреләем. Ә миңә отолмаҫҡа ла мөмкин ине, тик бер килке үҙемдә сысканды әүрәткән бесәйҙәй хис иттем, сөнки Рудиктың минән йомшағыраҡ уйнауын шәйләгәйнем инде.

— Бына нисек мал таба йүнсел егеттәр. — Рудик шулай эре сирттереп бөтә аҡсаны усына һыпырып төшөрҙө. — Һеҙҙең братты һемәйткән бар...

Тимәк, ул бая башҡа купеларҙа асыҡ ауыҙҙарҙы һауып йөрөгән. Табылып тора бит кешеһе лә!

Икенсе уйында еңеп, баяғы өсләктәрҙе кире алдым. Юрамал «кыйынлыҡ менән» еңдем. Рудик, аптырап, уфтана; шулай ҙа дәртен һүндермәй. Давай яңынан, тип өгөтләй. Мин иһә килештерәм: беләгемдән сәғәтемде ыскындырып алам. Әйтерһең, нәфсеһенә баш була алмай: Рудик уны әйләндереп-әйләндереп ҡараған була, тыңлап ҡарай. Күренеп тора, сәғәт уға оҡшаны. Ул ихласлап фигураларҙы ҡабат теҙмәксе:

— Ашыҡма, дуҫ, килешәйек — утыҙ һум, — тип туҡтаттым.

«Дошман»ым яуап урынына «оһо» тип кенә ҡуйҙы ла, тәфсилләп һанай-һанай, утыҙ һумды таҡта аҫтына ҡыҫтырҙы. Ләлә уға таһырайып ҡараны һәм өндәшмәй генә купенан сығып китте.

Ныҡ ҡаршылыҡ күрһәтте Рудик, тик барыбер яңылышты. Үтә һаҡ, ләкин эҙмә-эҙлеклелек етмәй. Бәлки, ҡаныҡып аҡса тураһында уйлауы ҡамасаулайҙыр. Мин дә бирелеп уйнайым, хатта купела пассажирҙарҙың күбәйеүен дә шәйләмәй ҡалғанмын. Берәүҙәр мине ҡеүәтләй, икенселәре Рудикты бирешмәҫкә өгөтләй. Ә таҡтала, шахмат телендә әйткәнсә, Рудик өсөн цейтнот — бик ҡатмарлы хәл тыуҙы. Уға бирелеүҙән башҡа әмәл юҡ ине.

Поезд барышын аҡрынайтты. Олоһо ла, кесеһе лә вагондан төшөргә йыйынды. Мин сәғәтемде кире беләгемә таҡтым һәм кейенә башланым. Рудик бөгөнгө бар табышын теләр-теләмәҫ кенә миңә һондо. Күрмәмешкә һалыштым, бөтөнләй иғтибар итмәгән кеше булдым. Йүнсел егетем ниҙер мығырлап купела ултырып ҡалды.

...Күптән яҙылғайны был хикәйә. Ә бөгөн аҡса менән «уйнау»ҙар — аҙым һайын. Уйландыра, борсолдора.

*1980—2008 йылдар*

## ЯҘМЫШ МЕНӘН АЛЫШ

Әссәләмәғәләйкүм, диңгеҙ! Таныйһың һин мине, Юлай улы Салауатты, таныйһың.

Ярыңдағы сағыр бүкән-ташҡа һөйәлеп гәпләшәйемсе үҙең менән бер аҙ... Бөгәсә төшөмдә ситлектә зарыҡҡан шоңҡар ҡош,

бәпкәләй сипелдәп, сукышын аҫка эйҙе. Ҡанаткайҙарын яҙып йән бирҙе, мәхлүк. Ярлыҡаһын бәндәһен Хоҙай тәғәлә берүк — ниңәләр үҙемә лә шундайыраҡ яҙмыш юраным...

Ана, бәғер итен өҙөрҙәй ҡаңғылдашып, уйҙарға тарытып, ҡыр ҡаҙҙары осоп бара. Уралтау һырттарын уҙышлай, ихтимал, бөртөк кенә ҡаурый төшөрөп китерҙәр — шул булыр ҡәүемемә ете ят тарафтан сәләмем. Әй ҡаҙҙар, ғәмһеҙ ҡаҙҙар! Эйәртһәгеҙ икән мин мәсбүхте лә... Тоҙһаған болан таныш шишмәһен юкһынған ише генә түгел бит ҡыурап ҡурай үҫкән, туғайҙарына ҡымыҙ еҫе һеңгән атайсалды һағыныуҙарым! Эйәртегеҙ — һауаларҙан бер генә байкармын тыуған еремде. Үҙ иленә үҙе баш микән ғорур башҡортом — күрәйемсе шуны, беләйемсе.

Тый әле ғәйрәтле тулҡындарыңды, дуҫҡайым. Юғиһә, дөмһәйгән болоттай бирегә ырғылып, улар, гүйә, мине ирекә әйҙәмәк. Беләктәремде ҡорос беләҙек ҡыҫкан ише, тулҡындарыңдың да кәрен таш ҡойма ҡайтара ла баһа. Ысынмы шул: йәш кенә Питыр падишаһ әлеге күбекле ҡултығыңа ғәләмәт елле ташты тәүләп үҙе ырғытҡан, тиҙәр? Аҙаҡ нисәмә йылдар буйы, нисәмә яҡтан һөрөлгән, нисәмә ристан өйгәндер ҡәһәрле ҡоймаһын — шайтанға ғына мәғлүм. Арҡалары беҙҙеке ише ҡамсыланған, сикәләре келәймәләнгән башҡорт егеттәре — Батырша яуы азаматтарының бында хитланғанын ишетеп, хайран ҡалдыҡ беҙ.

Аслыҡҡа тилмереп, зәхмәттән вә золомдан интегеп ауған әхирәттәге ағайҙар. Ун етеһен дә тултырмай үлгән күбеһе... Меңбәлә менән һорашып, зыяраттарын эҙләп таптыҡ; һин шаһит, диңгеҙ, атай мәрхүм ясин уҡыны. Аяҙ бер көндө. Бынан егерме биш йыл элек... Ирекtә лә, ситлектә лә, тәхеттә лә үтә шул ғүмерҙәр. Әбей батшанан аҙағыраҡ гүргә инде атам. «Һүҙендә торманы, бәдбәхет», — тип һукранған булды батшабикәне ерләү хәбәрен ишеткәс. Вәғәҙәһен елгә осорҙо шул ғали йәнәптәре. Йә, боласыларҙың ғаиләләрен ярлыҡайым, тип фарман тарата үҙе... Бүгәсәү уҙамандың көллө туған-тыумасаһын сиркәүгә яптырып, минең ҡан балаларымды әфисәрҙәргә өләшеп, оло гонаһҡа батманы микән әбей батша, тип уйлайым. Ярабби, ҡайҙа, кем икән хәҙер бисара нәҫелдәрем?..

*Күҙ нурымдай ҡыҙым,*
*Миңлеязам,*
*Үкенескә икән, иркә ине...*

Янараллар судта Аҙналы улы Юлайҙы «баш боласы», ә мине «баш бирмәҫ беренсе башҡорт» тип әллә хурланы, әллә ҙурланы, шуға әле лә күңелем тулап-тулап ҡуя. Ҙурлаһалар ни ғиллә... Васыятын боҙмай, атай мәрхүмде Ҡәнзәфәр абыз менән мо-

солманса тәрбиәләнек. Быгауҙарын һалдырып. Ҡалҡыуҙағы ике ҡоймалы төрмәнән арыраҡ ҡыҙғылт ҡомлоҡта уның ҡәбере... Төнәгөн зинданда шаяртып алды әле абыз: Салауат, ти, Иван, ти, мин һеҙҙән бәхетлерәк – иректә баструкка ҡарағанда оҙағыраҡ йәшәп өлгөрҙөм... Йылмайышҡан булдыҡ... Илар өсөн тыумағанбыҙ шул. Ҡайһы Иван тиһеңме? Почиталин Иван, башҡортҡа ер, һыу, һауа биреләсәк, тип, Бүгәстең ымһындырғыс өндәмәләрен һырлап яҙған уҡымышлы казак. Олоғайҙы ул да, харап олоғайҙы. Ҡыҙыҡ та, ҡыҙғаныс та: Бүгәсте тотторған хаиндарҙың күбеһе, тәкәтһеҙ диңгеҙ, ҡайҙалыр һинең ярыңа һөрөлгән, тигән хәбәр раҫтыр. Илеңдән ҡыуылғас, ас йәшәнең ни, туҡ йәшәнең ни. Ҡай саҡ һатлыҡ йәндәр ҙә нәфрәтләндерә хакимдарҙы. Ә башыма еткән старшиналарҙың аҡсалата бүләк алғанын йәшермәйем үҙеңдән, дуҫҡайым. Йәшерәк сағында шул уҡ аумаҡай шөһрәтле Батыршаны ла... илле тәңкәгә тоҙаҡҡа эләктерешкән. Үҙеңә мәғлүмдер: изге имам һинең бер улаҡ утрауындағы төрмәлә пәйғәмбәрҙәй алышып йомған күҙҙәрен.

Үкенмәйем шулай ҙа. Үкенеүҙән ни фәтүә. Әкиәттәге һымаҡ, тере һыу уртлап, ҡабат егеткә әйләнһәм, атай-олатай өйрәткәнсә уҡ юныр, йыйындарҙа көрәшкә сығыр, ҡурай тартыр валлаһи. Мәгәр сабыштарҙа арғымағым бәйге алмаҫтай тойолһа, теҙгенен тайҙанға инмәҫ борон уҡ кирегә ҡайырыр инем. Балаларға ҡушылыр-ҡушылмаҫым ҡыҙыҡһындырамы? Һинең дә бит тулҡындарың ишелеп-ҡушылып геүләй, шулай икән, ҡуй, ғәййәр диңгеҙ, көфөр һорау бирмә: батшалар, әмирҙәр, мөртәттәр лөғәтенән бит ул бола тигәндәре. Аҫыл ирҙәр, тәүәккәл ирҙәр улай тимәй, яу, ти, дау, ти. Әгәр Йәмәлкә йәнә Яйыҡ буйҙарын шаулатһа, нәҡ беренсе тапҡыр көрешкәндәгесә, бер-береһе өсөн йәнен фиҙа ҡылырға әҙер меңдәрсә азаматтарымды, эйәрҙәренә һөңгөләй баҫтырып, үҙем уң усымды түшемә терәп, ҡаршылар инем государҙы. Йәл, ҡайтмаҫ тик ул көндәр кире – яуыздар Мәскәүҙә Бүгәстең башын ҡырҡҡандар. Миңә лә насип булды күрергә ул хәйерһеҙ олуғ ҡаланы. Ғөмүмән, Әрәсәйҙең байтаҡ ҡала-ауылдарын рәшәткәле арбанан күҙәтеп үҙҙыҡ. Башҡортостандан бында тиклем ике ай тирәһе килде ылау – ярай, еңеүсегә лә хөкөм бар, тиҙәр.

...Ярһыма, сал диңгеҙ, дауыллап, уңалыр-уңалмаҫ яраларыма тоҙло тамсыңды бөркмәсе. Бәүелеп тә ыуылйып аҙаштырма толҡа тапмаҫ уйҙарымды. Хат ебәрәһем бар ҙаһа кейек ҡаҙҙар аша алыҫҡа, алыҫҡа... Һин дә бер, мин дә бер түгелме ни әлеге мәлдә? Мине – ҡатҡыл тимер, һине ҡырсын яр ебәрмәй... Исмаһам, мин ярыңда саҡта ҡояш битен асһын, аҡсарлаҡтар тынысыраҡ кәйелһен. Тыңламайһыңмы, һаман ҡотораһыңмы? Әллә мине йоторғамы самаң? Әгәр анау шөкәтһеҙ ҡыразда

кәртәһеҙ ҡәберҙәр ҡалҡмаһа, ошоғаса янымда ҡоралдаш атайым, тоғро юлдаштарым булмаһа, үҙем үк күптән сумыр инем, моғайын, төпһөҙ, һалҡын ҡуйыныңа. О юҡ, юҡ! Ә һиңә рәхәт — Алла ла юҡ, мулла юҡ, тигәндәй. Барыбер ҙә йәтеш иңрәйһеҙ әле аяҡ аҫтымда, имәнес аждаһа кеүек. Гөлбәзиргә сисмәҫ серҙәремде үҙең менән уртаҡлашам, юғиһә. Ҡатын-ҡыҙға көлләһөн дә һөйләү килешеп тә бөтмәй, эйеме? Улар бит, мәғрур диңгеҙ, аҡ донъяға тормош өсөн тыумай, тормош өсөн, матурлыҡ өсөн, мөхәббәт өсөн тыуа...

Тыңла, улайһа, киҫекһеҙ диңгеҙ. Ғәскәребеҙҙең яу тыуы ҡолағас, һыу һөләгөләй йөҙҙәрсә ир-ат тән яҙаһына дусар ителде. Беҙҙе, аҫаба ике башҡортто, ҡасандыр үҙебеҙ иң сая алышҡан ҡәлғә-ауылдарҙа «ҡайыҙларға» тигән фарман сығарылды. Атайға — дүрт урында йөҙ ҙә һикһән, миңә — бер йөҙ ҙә етмеш биш ҡамсы. Ҡайҙа ла мә үсле байбетсә менән ҡараттар өркөтөп өйөргән ярлы-ябаға тамаша ҡыла. Урыҫы ла, башҡорто ла, олоһо ла, кесеһе лә шунда. Осона ҡурғаш ҡойоп, етенән үрелгән ҡамсыны яҫы арҡаң татығаны бармы, әү, диңгеҙ? Тәүҙә ул һауала сыбар йыландай ыҫылдай, шунан арҡа мейеләрен аяуһыҙ һыҙыра — дөңк!..

Эҫем зауытында миңә — 25, атайға 45 ҡамсы тәғәйен ине.

— Йә, кемегеҙ беренсе? — тип һораны зобаный һуктырыуы бүрәнәһенә билдән өҫкә яланғас кәүҙәләрҙе шыҡырайтып бәйләмәҫ борон.

— Бисмилла, үҙем, — тигән булды атай.

— Мин! — Күкрәк киреп алғараҡ шылдым. — Йә, минән башлағыҙ!

Дөңк!..

Дөңк!..

Тештәрем шығырланы. Ҡото осоп, шул саҡ берәү шайлап иларға керешмәһенме. Орсоктай ғына ҡыҙ бала ине, шикелле.

Дөңк!..

Бынһына түҙмәнем, ызғырып яр һалдым, хатта аяҡ-ҡулды сырмаған беше бауҙар бушаған төҫлө тойолдо.

— А-й... тай!!!

Мәгәр айбарлы иҫкәртеү айнытты, сыҙам өҫтәне:

— Салауат!!!

Дөңк!

Йәлләп ҡыскырғандыр, тиһеңме? Киреһенсә, бирешмә, һынатма, тигән сүрәттә яңғыраны исемем. Аҙаҡ хатта сикә-маңлайҙарға утлы мөһөр баҫҡанда ла ыңғырашмаҫлыҡ көс-түҙем таптым. Йәлләдтәр араһында ла миһырбанлылар осрай икән, осрай. Йәнәһе, танауҙарыбыҙҙы тейешенсә йырмаған тип, Өфө төрмәһендә ерән мыйыҡлы урыҫ һалдатын үкертеп сей ҡайыш



менән ярҙылар. Ҡыҙғандым бахырҙы. Ә танауҙы ҡабат ҡыҫҡарттылар, маңлайҙарға өтөп өс хәреф баҫтылар: «яуыз», «хаин», «янъялсы» икәнмен дә...

Иҫеңдәме, Балтик, бынан ун йыл сит мәмләкәттең ике карабы дер һелкеткәйне Рогервикты. Ярты йөҙ генә әҙәм кинәнеп таланы ҡәлғәне, хатта тоткондарҙың да сыуҙан талаҡтары ташты. Баҫҡынсыларҙың хәмерҙән тилергән башлығына, имеш, быңдағы хәсрәт палкауник шыбырлай була: «Миндәге баструкта Пугачевтың ышаныслы ярандары ята. Шуларҙан Салаватка тигәнен алып китегеҙ иленә, тоҡ-тоҡ аҡсаға һатырһығыҙ...»

Ай һармаҡ! Үлемдән оят көслө – үҙ иләмә һатылып ҡайтырға башыма тай типмәгән. Дөрөҫ, монафиктар тотторҙо. Ә тотолоу һәр яугир өсөн үлем менән бер. Шайтан ғына өмөтһөҙ. Көтмәнек түгел көттөк беҙ ҡоткарыусыларҙы, иллә сит-ят ярҙарҙан түгел. Көттөк, башҡорт иленән Кинйә абызды. Йырлағылар килә, иҫкә төшһә үҙебеҙҙең тәуарих.

*Урал ғына тауҙың, ай, бешәһе*
*Арҡаһына һис көн*
*төшөрмәҫ.*
*Был ни ғәжәп, был ни хикмәт —*
*Башҡорт иленән яуҙар китешмәҫ.*

Сеү, диңгеҙ, сеү, һөмһөҙ, ял бир йүгәнһеҙ тулҡындарыңа. Әһә, йыуашланаһыңмы? Хуп, бик хуп. Ҡояш та ялтларға ниәтләй, зәһәр ел дә баҫылғандай. Бәй, баяғы ҡаҙҙар йәнә шәйләнә ләһә дымһыу офоҡта.

Атайсалға минән моңһоу сәләм алып китмәкселәр, моғайын. Әйттем бит, хәбәр-хәтер ҙә ебәрәһем бар һөйгән йәремә.

«Гөлбәзирем, сабыр күҙле һылыуым!» – тип башлайыммы хатты? Хәл-әхүәлде белдергәс, барса нәҫелгә аманлыҡ теләгәс, васыят та күндерермен. Олатайым Аҙналы, атайым Юлай рухына аҡ ҡорбандар салдырыуын үтенермен. И, әүлиәләргә биргеһеҙ әсәкәйем... Бөткөһөҙ ҡайғы-хәсрәт кенә микән уға алышта уҙған яҙмышым? Тере икән – кисерһен дыуамал уланын, тип тә өҫтәрмен. Бишектә саҡта икебеҙ ҡолаҡтарҙы тешләшкән тирмә урынына, йәнә... һине – ҡатын, мине ир иткән саука төбөнә туғай сәскәләре һал, тиһәм, килешер микән? Шағәле Шаҡмандыҡына торошло уҡ-һаҙағым, күпте күргән күн эйәрем, һабына бүре башы боролған ҡылысым йәшерелгән мәмерйәгә һукмаҡты юлбашсы булырҙай батырға өйрәтергә рөхсәт, тигәс, толом сулпыларың сыңлап сакыра төҫлө, йәргенәм, йәшел еләнең кейеп төштәремә инәһең, тип осрармын хатты.

Диуана тулҡындарыңды, даусыл диңгеҙ, ҡарагир арғымағымдың елгә туҙған ялына оҡшатам әле. Малай саҡта тәү баш-

лап һыбай елгәндә, һеңгәзәгәнсе ҡолағайным, иллә ҡабат үрмәләнем атҡа. Олатайым әйткән: бәрәкәт, был ейәнем киләсәктә йөз ҡаһарманға биргеһез булыр, тигән. Аҡланым микән ҡылған эштәрем менән олатайзың юрауын? Һласындар үз себештәрен осорға һис өйрәтмәй, ә ҡанаттары ҡатҡылланыу менән бейек, аулаҡ ҡая ышығындағы ояһынан тибеп төшөрә. Бар, ос, эшкинһәң – һауала ҡалырһың, юҡ икән – бәхилләш. Олатай – уғланын, атам мине шулай тәрбиәләгән, күрәһең. Улдарыма ошондай һабаҡ бирә алмауым үкенес.

Бәхетлеме мин, бәхетһеҙме? Бәхетлемен – ҡаршы яуҙарҙы елем менән ҡағыр, диңгеҙҙәй ғәскәрҙәрҙе әйҙәр, һөйә-һөйөлә белгән ир инем; бәхетһеҙмен – ысын ирен тәмен аҙ татыным, һай, донъяңды онотоп дошманыңа һеләүһендәй ырғылыу! Фиғеле менән ысын батыр дошманының йәнен генә ҡыйыр ғазраил булмаҫҡа тейеш. Ил ағалары, ырыу башлыҡтары борон-борондан иң әүәл азатлыҡ көҫәгән, милләте йәберләнмәһен, халҡының намыҫы, рухиәте кәмһенмәһен өсөн ҡырталашҡан. Ҡоралға йәбешеү – аҙаҡҡы һәм хәтәр сара, был сараның даръялай ҡан ҡойҙорған саҡтары ла булған, булыр. Ни хәл итәһең, ҡорбанһыҙ яуҙы кем күргән?

Бихисап кеше ҡырылды минең арҡала... Нисәмә ҡышлау, нисәмә йәйләү үртәлде. Йә Хоҙай, үтәлмәне антым – шул йөрәкте өтә, өтә, өтә...

*Ҡараһаҡал, Кусемдәр,*
*Аҡай, Батырша, Килмәк,*
*Йәнә башҡа батырҙар,*
*Быуат-быуат яу асып*
*Сапҡан юлды һайланым,*
*Ҡан илаған байғошто –*
*Мишәр, сыуаш, башҡортто*
*Татар, урыҫ – берәүһен*
*Динен, ҡанын айырмай,*
*Азат итәм, тигәйнем...*

Әхирәттә ни көтәлер мине – ожмахҡамы юлым, тамуҡҡамы? Хөкөмдарҙар ете ай һорау алғанда ла яуапты таба алманым. Ғәҙел яуапты фәрештәләрҙән түгел, бәлки, беҙҙең арттан айбарлы көрәшкә ҡубарылған халайыҡтарҙан ишетһәм икән. Данлап, алғышҡа күмһәләр ҙә, ҡарғап, ләғнәт уҡыһалар ҙа, разыймын – халыҡ хөкөмө хаҡ булыр.

Бына бит, шайлы диңгеҙ, ҡайһылай ғына шашынһаң да, ярҙарыңдан аша һикерә алманың. Ятаһың хәҙер биләүҙә буҫылҡҡан бала шикелле, талғын елгә йөҙөңдө сирылтып. Еңешмәйем,

алышмайым мин һинең менән. Бәхәсләшмәйем дә, сөнки һин өндәшмәйһең. Ғәҙәттә, бәхәсте өнһөҙҙәр ота. Мәгәр рухым һинекенән ҡөҙрәтлерәк икәненә иманым камил. Күрсе, баяғы ҡаҙҙар ҡабат бороддо. Йомошом бар ирәүән ҡошҡайҙарға, йомошом бар.

Ауырға алма: бер-бер ят ярында әжәл быуған тәҡдирҙә, һөйәктәрем генә бында ҡалыр, ә күбәләктәй йәнем илемә осоп ҡайтыр. Ярай, дуҫҡай, килгеләрмен әле эргәңә форсат тейгәндә – күңел бушатырға.

...Хушығыҙ, ҡаҙҙар, әйтегеҙ башҡорт еренә: Салауат – тере, ул бик тә, бик тә өҙөлә һағыштан, тиегеҙ.

Күрешергә яҙһын, әү, диңгеҙ!

*2001 йыл*





## Юл хикмәттәре

*Әҙәм балаһы икмәкһеҙ, йырһыҙ һәм... юлһыҙ йәшәй алмай... Сәфәрҙә ниндәй генә күренештәр күҙәтелмәй! Ҡапыл кәйеф күтәрелә, йә иһә күңел ҡырыла, мәҙәк аймылыштың, хатта көтөлмәгән фажиғәнең шаһиты булғылайһың. Юлда шатлыҡ та, хәсрәт тә, һағыш та һағалай... Әҙиптең түбәндәге яҙмалары юл һынамыштары шауҡымында тыуған.*

# ОЛО ДОНЪЯҒА – ТӨПКӨЛДӘН

Тәүҙә Белоретта, аҙаҡ Өфөлә уҡып йөрөгән осор, ауылым бик төпкөлдә булғанлыҡтан, юлдарҙы төрлөсә үтелә торғайны. Мәҫәлән, Белорет яғына күберәген йәйәүләйһең, аты-санаһы ла ҡулай, һирәкләп матай йә машинала, һыбай йә саңғыла елдерәһең. Быныһы ауылдан станцияға тиклем генә әле. Артабан – тар колеялы тимер юлдан тынсыу вагонда һелкенәһең. Ҡай саҡ «товарняк»тың тамбурында йә руда өйөмөнә ултырып, «ҡуян» баҫтыраһың.

Ә инде Өфөлә уҡығанда күберәк Ғафури ерендәге әҙәм аяғы һирәк баҫҡан Таҡаты һыртын артылып, Мәндем буйлап йөрөлдө. Яҙҙарын хәтәр был тау йылғаһы! Йәйҙәрен – ямғырҙан таша, көҙҙәрен дә сыйҙымдан күтәрелгән саҡтары була – этләтә инде кисеү бирмәй.

Шулай, төпкөл генә ауылда көн күрә минең нәҫел-нәсәп. Мәгәр дүрт-биш тарафҡа юлланып була: Маҡар, Белорет, Красноусол яҡтарына. Дәрт иткәндәр хатта Инйәр һәм Бөрйән яҡтарына ла тартыла ала.

## ҺЫНАМЫШ

Олатай мәрхүм хәтерҙә, һунарға-балыкка йә солок карарға барырға йыйынһа, тәүҙә урамға күҙ һалыр ине: юллыкһыҙ бәндә осрамаҫмы? Һынамышы буйынса «юллыкһыҙ» әҙәм осраһа, ул хатта һыбай хәлдә лә кире боролған.

Мәйтәм, тере булып, калалағы караптай ҙур йортта йәшәһә, ни эшләр ине карт?

## АТЫҢДЫ ЙӘЛЛӘНЕҢМЕ?

Ауылыма бәйле йәнә бер хәтирә. (Мәгәр яҙмамда кемделер үпкәләтергә йыйынмайым.) Шулай, гармун тауышына урамға атлыктым. Каршылағы өй алдында ике туған М. ағай күлдәксән генә тальян тыскылдатып ултыра. Бәй, яңы ғына атын туғарып, тышап ебәргәйнесе. Эргәһенә минең ише малай-шалай йыйылып та киткән.

Бер мәл коробоҙға кәүҙәгә мыктырак Н.-отпускник егет якынлашты. Заманына күрә фыртауай, каласа пинжәк, кепка, кирза итек, үҙенән һитәле «хушбуй» еҫтәре аңкый. Н. (аҙак якын еҙнәм булды) килеп тә етте, М.-дың гармунын тибеп тә осорҙо, етмәһә, йоҙрок төйнәп киҙәнә. Вәт зимагор!

– Һин, сәпләк, ниңә мин кыскырғас, тукталманың? Ултыртып алкайтһаң, атыңдың б...ғы койолор инеме?

Бакһаң, Елмерҙәк һыртындағы айырсала тура һукмактан Н. йөкмәнеп кайтып килгән, ә урауырак юлдан – арба еккән М. Йәйәүле арбалыға, тукта, мине ал, тип һөрәнләгән, М. һыпырып уҙған да киткән.

– Ишетмәнем, ағас араһында ярты сакрымдан нисек аңғармак кәрәк? – тип акланды М.

Әллә ишеткән, әллә ишетмәгәнгә һалышкан... Йыш кына иҫкә төшә күреге йәмшәйгәнсе тибелгән гармун. Хәйер, кунактамаҙарҙа бергә осрағанда икеһенән дә юрый төпсөнгәнем булыр. Йәнәһе, һин кыскырҙыңмы? Ә һин ысынлап ишетмәнеңме?

Ағам да, еҙнәм дә һаман үҙенекен кайыра.

## КӘЙЕФ

Мәскәү яғына юл төштө: фестивалдә күңел асып йөрөлдө. Самолетта осам Өфөгә тип, аэропортка юлландым, сөнки телефондан белешкәйнем, билеттар бар, тигәйнеләр.

Был ни хикмәт, бер кассаға башты һонам – юк билет, тиҙәр, икенсеһенә мөрәжәғәт итәм – юк тик юк. Кәйефһеҙ генә торғанда, бер егет һырынды эргәмә. Билет кәрәкме? Кайҙа? Хәҙер

алып бирәм, кассала апайым эшләй. Кәрәкмәй тип, арырак атлағайным, икенсе егет өҫкә менеп кенә килә: билет булыр, кассала танышым эшләй, фәлән дә төгән. Ҡул һелтәп, ситкәрәк атланым. Өсөнсөһө һағыҙак кеүек йәбеште: хәҙер була билет, ике йөҙ өҫтәү түләһәң, һеңлемдән алып бирәм.

Бәй, баяғы егеттәр бүтәндәргә лә бәйләнепме бәйләнә. «Билет кәрәкме? Ҡайҙа?»

Кеҫәләрҙе ҡырып-һепереп, билет хаҡынан тыш, көскә таптым йөҙ илле һум тирәһе. Инәлә теге, бир инде тағы илле һум, юғиһә «дядя» кәрәкте бирәсәк. Юк, мәйтәм, тәмәкелек тә ҡалманы, што һин! Сәсрәп китһен Мәскәүегеҙ, тип ҡыҙып киттем. Ни сыкмаһа, Мәскәүҙән сыға. Әшәкелек тә, йүнһеҙлек тә...

Шул саҡ егеттең «дядя»һы пәйҙә булды, «хәлемә инде».

— Тәмәкелек бир ҙә, тиҙ генә билет алыш... Кеше киске тамаҡты өйөнә ҡайтып ашаһын...

Әйтте — эшләнде. Һә тигәнсә билетлы булдым.

...Самолетта буш урындарҙы күргәс, кәйефем йәнә төштө. Эй һүгәм Мәскәүҙе эстән — түҙһен генә! Ә ул, шәп һәм әшәке баш ҡала, ыжламаны ла, миллионлаған уттарын ҡабыҙып йәйрәп ятып ҡалды.

## ЭХ ТЫ, УРАЗБАЙ!..

Элек беҙҙең тирәнән, дәү баҙҙарҙа ағас үртәп, суйын заводына күмер ташығандар. Муйылдан үрелгән күректәр, яҡшы аштар, ныҡлы ысбруй, урыҫы ла, башҡорто ла сәмсел көнлөксө...

Бер саҡ Уразбай бабай күмер тейәп заводҡа китеп бара икән. Тар үҙәктә каршыһына йөкһөҙ урыҫ осрай.

Ҡышҡы бурандарҙа бер-береңә юл тиреүҙәре ай-һай ауыр. Сыбыртҡыһын шартлатып, яғалашырға әҙерләнгән был икәү.

— Эх ты, р...й, ладно... — Урыҫ юл бирмәк була. Шул саҡ Уразбай бахыр, һөйөнөп, үҙе ҡайтымһаҡлана. «Был минең исемде белә, таныйҙыр», — тип уйлай ҙа атын тәрән көрткә ҡайыра.

## ҠАТАҺЫ ҠУПҠАН ҠАНҺЫРАП

Әлеге юлдан кемдер — ҡомһоҙлоктанмы, бөлгөнлөктәнме — аты менән ыңғайҙан ике сана күмер ташып маташҡан. Яҙғы юл шығырҙап тора, сөнки ҡырсын ҡатыш боҙлауыкка әйләнгән. Һығылып-үрәпсеп тарта малҡайҙар. Йә Хоҙай, ниңә туктаңды әле берәүһе? Артыҡ көсәнеүҙән... ҡатаһы ҡубып төшкән дәһә. Ултырып илай шунда ылаусы.

Ошо урындан уҙған һайын, хужаһынан бигерәк, уның меҫкен атын йәлләп ытырғанам.

## ХӘТӘР ҺӘМ ХӘТЕР

Бер танышым Себерҙә бейек һырттан уралып-уралып ятҡан юлдан һарҡыуға елдерә икән. Бәлә аяҡ аҫтында ята бит – тормозы ыскына ла ҡуя. Ауыр машинаһы ҡыҙа бара, ҡыҙа бара, әжәл ауыҙына үҙе ашҡына, тиерһең. Кабинаһының ишеген асып ҡуя, юғиһә, кем йыйыр һөйәктәрен? Әмәлгә таянғандай, буш машинаға яҡынлаша, хатта уны уҙып та китә. Ымишара менән мөшкөл хәлен аңлата ят шоферға был.

Йөкһөҙ машина ҡабат алға сыға ла осаһын һәләкәткә ашыҡҡан ауыр машинаның алдына терәй һәм әҙләп-әҙләп хәрәкәтен кәметә. Бына упҡынлы боролош та артта, яй ғына машиналарҙың тиҙлеге баҫыла. Дуҫым ырғып төшә лә тәгәрмәстәр аҫтына ҡалыптар ҡыҫтыра һала. Тик теге шоферға рәхмәт әйтергә генә өлгөрмәй, етмәһә, автомобилдең номер-фәләнен дә абайламай ҡала.

Ике-өс йыл эҙләй хәтәрҙән ҡотҡарыусыны. Рәхмәте бар, изгелеге өсөн бурысы бар ҙаһа. Хатта ҡолаҡтан ҡолаҡҡа тотош трассаға хәбәр тарата. Өфөгә ҡайтҡас, йыш иҫенә алды дуҫым билдәһеҙ изге бәндәне.

Табышалар! Яңыраҡ шылтыратты әле дуҫым: «Килеп сыҡ әле, миндә Себерҙән ҡунаҡ бар». Ҡунаҡтың кем икәнлеген шундуҡ абайланым.

## ИШЕЛЕП ҮҪКӘН АҒАСТАР

Оло юлдан аҙ ғына ситтәрәк арҡандай ишелеп үҫкән пар уҫаҡты күргәнегеҙ бармы? Әлеге ағастарҙы үҫенте генә сағында егет менән ҡыҙ ишкән, имеш. Хәйер, ул ағай-апайҙы беләм, шөкөр, әле лә иҫәндәр. Ә бит тәүге ғашиҡ ойотҡоһо бәғеремде әрнеткән осор үҙем дә аулаҡ һукмаҡ ситендә йәнәш үҫкән бәләкәй генә ҡарағай менән сауҡаны ишеп-бороп киткәйнем.

Барам әле, күрәм әле – юл ғына төшһөн.

## АЙЫУ ҘА ТӘКМӘСӘ

Әрмелә саҡта ротабыҙҙы тайгаға олаҡтырҙылар. Тирә-яҡта сопкалар, сопкалар. Егетләнепме әллә бәхәсләшепме, ҡаялы бер түмәләскә үрмәләнем. Йәнәһе, башҡорт әле мин, Уралдан. Көсхәлгә еттем ҡая түбәһенә.

Ләкин менгән ерҙән кире төшөргә йөрәк етмәне, урауҙан һөҙәгерәк урын һайларға тура килде. Шунда ирекһеҙҙән олатайҙың әйткәндәрен иҫләмәмме: «Текә тауға менеүгә ҡарағанда, төшөүе ҡыйыныраҡ. Айыу ҙа, ана, түбәнләскә ҡасһа, тәкмәсләп китә».

## ЯҘМЫШ УҘАМАНДАРЫ

Һеҙҙә нисектер, беҙҙә егеттәрҙе тотош халыҡ тиерлек ауыл осона сығып оҙатып ҡала һалдатҡа.

Өс йөҙ йыл самаһына яҡынлай тыуған төйәгемдең шәжәрәһе. Нисәмә һуғышҡа нисәмә яугир киткән, күпмеһе ҡайҙарҙа баш һалған, күпмеһе ҡайтҡан?.. Аяҡһыҙы, ҡулһыҙы... Быйыл, ана, Еңеү байрамынан һуң түшенә миҙал таҡҡан берҙән-бер уҙаман моңайып ҡына йөрөгән, тиҙәр, ауыл осондағы берләм юлда. Әллә яҙмыш һикәлтәләрендә ғәзиз ғүмерҙәрҙең ҡыйылыуында юл тигән ғәләмәттең дә билдәһе бар микән.

## ТЕҮӘЛЛЕК

– Һеҙҙән станцаға тиклем нисә саҡрым? – тип ҡыҙыҡһынғандар икән минең ауылдаштан турист йәштәр.

– Һуҡмаҡтан – ун һигеҙ саҡрым да биш йөҙ метр, – тип яуаплаған ҡартлас, үҙе йылмаймай ҙа ти. – Арба юлы биш метр өс километрға оҙонораҡ.

Юлаусылар ғәжәпһенеп бер-береһенә ҡарашып ҡуйған: аҡылға зәғиф түгелме, йәнәһе.

Беҙ иһә өйрәнеп бөткәйнек тегенең мут теленә. Һандыҡ семәрләп һатһа, алты һум да утыҙ тин, ҡалтағай юнһа – ике һум да егерме тин, тип һорай. Артығын алмай, кәменә бирмәй. Валлаһи, хаҡтарҙы мутлашыуһыҙ билдәләй ине, шикелле. Бары тик бала-сағаны йыш ҡына: «Кисә урманда ҡуян баҫтырҙым әле. Ҡойроғона йәбешергә ярты метр ғына ҡалды», – тигәнерәк юҫыҡта мәрәкәләр ине мәрхүмең.

## ХАКИМДАРҘАН АМАНАТ

Тау-ташлы төпкөлдә Батша юлы бар. Килер-килмәҫ батшаға борон урманын ботап, ҡырсын түшәп, көрәк-кәйлә менән генә иркен, матур юл һалғандарына аптырап ҡуяһың. Тик ниңәлер ул юлдан батша түгел, этем дә йөрөмәгән, тиҙәр. Хәҙер инде уны лапы баҫҡан.

Өфөгә яҡын бер совхозға ҡасандыр һәйбәтләп асфальт йәйгәндәр: имеш, Мәскәүҙән киләсәк генсекка күрһәтергә тейеш булғандар «шәп» хужалыҡты. Ҙур түрә форсат тапмағандырмы – үҙен дүрт күҙ менән көткән ергә барып та урамаған. Шуныһы, хужалыҡтың бүтән ауылдарына, Батша юлына яҡын тарафтарҙағы ише ауылдарға, һаман да ипле юл юҡ.

Хакимдарҙан изгелектәр ҙә, яуызлыҡтар ҙа ҡала. Үҙҙәре аяҡ баҫмаһа ла, һәйбәт юлдар ҙа ҡала икән.

## ТАҠЫР БАШ + БӨҘРӘ БАШ

Ала-ҡола кейенгән егет-елән баш ҡалаға – хәрби йыйылыу урынына юлланған. Унан инде – кем ҡайҙа, ҡайһы ғәскәргә, һауағамы, диңгеҙгәме, йә танкыға, йә окопҡа тигәндәй.

Ошо төбәктең йолаһымылыр, автобус эрерәк ауылдарҙа, әгәр унда берәй азаматты оҙатыусылар көтөп торһа, аҙ ғына ял ала.

Йәнә бер ауыл уртаһында туҡталыш. Военкомат әфисәренең бойороғо буйынса егеттәр халыҡ араһына сумды: биш минутка, эт менән эҙләрлек таралмаҫҡа! Айырылышыусылары ла, көтөүҙәре лә анһат түгел әҙәм балаһына.

Башҡаларҙан ғәмлерәк, хатта борсоулыраҡ ҡарасман һалдат ниңәлер урынынан ҡуҙғалманы. Шул саҡ елләтеүгә шар асылған автобус тәҙрәһенән һарҡылған өндәшеүгә тертләп ҡуйҙы:

– Мине ошондай хәлгә ҡалдырып китәһеңме инде, таҡыр баш?

«Таҡыр баш» үҙе лә һиҙмәҫтән ырғып баҫты ла ҡатып ҡалды: наҙ ҙа, әрнеү ҙә, өмөт тә, үтенес тә, хатта хужабикәләрсә фарман да сағылды һөйгәне тауышында. Һынсыл командир тәүҙә тәмәкеһенә үрелде: «Эштәре ҙурға киткән әллә бөҙрә баштың?..» – Шунда сәғәтенә баҡты.

Эй халҡымдың әҙәплеге, әүҙемлеге! Кемдер телефонға сапты, кемдер клубты асты, йәштәр бейешеп, ололар илашып шашты – ни бары ярты сәғәткә һуҙылды ғәҙәти булмаған туйниках.

Ауыл осона һәммәһе лә йәйәүләне. «Таҡыр баш» менән «бөҙрә баш» – алдан, етәкләшеп, сәскәләр тотоп...

## АЙЫРСАЛА

Ҡоҙалар тамырлы икән: өс-дүрт дуға килгән ҡыҙ һоратырға. Әле йырлап-шайлап ҡайтып барыуҙары – туй көнөн билдәләнеләр, мәһәр-маҙарын килештеләр.

Үрләҫ башланды. Иң алдағы ҡупшы кашауайҙа – йәрәшелгән пар, йәнә кейәү көсөгө (егете). Айғыры һуң, айғыры! Башҡалар арттараҡ ҡалды. Әллә аттары бышлыҡты, әллә нығыраҡ тейәгән берәйһе ләжәнкәнән ҡоланы. Һыртта, айырсала, туйлашырға әҙ-мәҙ «өҫтәргә» һөйләшкәйнеләр ҙәһә. Шулай булыр ҙа. Оҙатыусылар кире боролор, ике-өс сана тураға – кейәү ауылына, «көсөк» уңға, посёлокка ҡайырылыр. Иртәгә уға ашҡа түгел, эшкә. Шулай, кашауайҙан ләжәнкәгә күсеп ултырыр ҙа нимәнелер, кемделер юғалтҡандай болоҡһоп ҡайтып китер.

Ғәҙәтелер, айырсала айғыр үҙенән-үҙе туҡтаны. Хәйер, күп-

тәр бынан тын-ял алып, тамаҡ ялғап уҙа. Ана, кемдәрҙер ҡар ҡайнатып эскән. Ялан яғына бура сығарғандар.

Кейәү кәләшенең биленә тиклем толоп япты ла, балта алып:

– Тегеләр килеүгә бынау усаҡты геүләтеп ебәрәйек, – тине һәм ҡоро-һары килтерер өсөн трактор юлынан бешәлеккә сумды.

Күсер ҙә ултырмаһынан төштө, атын һыйпаштырҙы ла ниңәлер дилбегәһенә яңынан йәбеште. Ҡыҙыҡ, табындарҙа еңгә лә еңгә, ҡулъяулыҡ бир, тип йөҙәткән йылмаяҡ әле, нәҡ бына әле үтә етди, тәүәккәл ине. Был уның бәғер төбөнән һарҡылған тауышында ла, ут-һағыш сәскән ҡарашында ла һиҙемләнде.

– Минең үҙеңде яратып йөрөгәнде беләһеңме?

– Юксы, ниңә уны элегерәк әйтмәнең? – Ҡыҙ шаяртып яуапланы, шулай ҙа һағая төштө.

– Әле лә һуң түгел... – Егет ҡулын уңға ҡайырылған иркенерәк юлға иҙәне, йәнәһе, эйәк кенә ҡаҡ – һин минеке, мин һинеке, урлайым да ҡуям...

Өшәнсе булмаһа ла сибәркәйҙең биттәре алһыуланды, ул сабыр ғына, ҡырыҫ ҡына, ғорур ғына өҙә һуҡты:

– Бөгөн үҙеңә ағай тейеш дуҫыңды һатырға ниәтең бар икән, иртәгә урландыҡ ҡатыныңа хыянат итмәҫеңә кем ышанһын?! Атыңа бесән бир лутсы.

– Ярай, бигәйбә. – Егет тештәрен ҡыҫып йылмайырға маташты.

...Кеше кәләше менән кейәү көсөгөнөң әлеге аңлашыуын мин ишетмәнем. Һеҙ ҙә...

## ҠАСЫП-БОҪОП ҠЫНА...

Элекке һабаҡташ бер ҡатындың ғаиләһенә әйтмәйенсә, йә ҡасып-боҫоп, йә берәй һылтауын табып, ҡаланан ҡалаға барғылап йөрөгәне мәғлүм миңә. Юҡ, юҡ, уны, оҙаҡ йәшәгерҙе, ғәйепләргә йә битәрләргә йыйынмайым.

Ғилләһе былай: ул, тупаҫыраҡ әйткәндә, уйнаштан тапҡан (үҙе һәм Хоҙай ғына белә) малайын күрер өсөн сыға икән ваҡыт-ваҡыт оҙон юлға. Ҡасандыр сабыйын, ғүмерлеккә баш тартам, тип ғариза тултырып, етемдәр йортона тапшырған бисара. Хәҙер инде малайы һигеҙ йәштә, үҙен һәйбәт интернаттан уллыҡҡа алғандар, һәйбәт тәрбиәләйҙәр икән.

– Кемде әсәй ти һуң ҡан балаң? – тип һораным элекке яҡын, хәҙер ниңәлер күңел ятһыраған танышымдан.

– Әлбиттә, әсәһен. Донъяға тапҡанын түгел... Мин бит улым менән һөйләшкәнем юҡ. Күстәнәстәр тейәп барған булам – юлда әбей-һәбейгә өләшеп кит әле. Ҡурҡам мин улымдан...

Баҡһаң, меҫкен ҡатын, хәйер, меҫкен түгел, тормошта, матур ғына йәшәп яталар, ҡыҙ үҫтерәләр – улын ҡасып-боҫоп ҡына күҙәтә лә тәртәләрен кирегә бора, имеш, тәүҙәрәк – балалар баҡсаһында, хәҙер – мәктәптә, тәнәфескә ҡыңғырау шылтырағас.

– Әле һигеҙ йәшлек баланан ыжлайһың. Улың ун һигеҙгә еткәс, нишләрһең? – тигән булдым.

– Әлләсе... – Хикмәтле «әлләсе» тигән һүҙ ҡатынды гүргә ингәнсе ғазаплар һымаҡ тойолдо миңә.

## ҠАПТЫ... КРОКОДИЛ БАЛАҺЫ!

Йәш саҡ. Баҡса мәле, электричкала кеше күп. Беҙ – балыҡҡа! Ялтырмамдың өс йәпле ҡармағы кәтүктән ыскыныр ҙа бер ҡыҙҙың салбар балағына ҡаҙалыр, ә теге ҡыҙ бер ни һиҙмәй вагондан сыға башлар тип кем уйлаһын инде. Ҡыҫыла-төртөлә, кәтүкте дырлатып, эйәрҙем артынан – ялтырмам зәһәр инде! Халыҡ ыңғайына тамбурҙан төштөм.

– Ай-һай, «балыҡ»тың еллеһен эләктергәнһең, – тине юлдашым. Бер йыуантыҡ ҡатын иһә:

– Ҡармағыңды йыйыбыраҡ йөрөһәң ни була? – тип башланы ла эй әрләргә керешмәһенме. Ауыҙы крокодилдыҡы кеүек бит әле. Ҡыҙ ни көлөргә, ни иларға белмәй. Ошо туҡталышта ҡалыр инем – рюкзагым вагонда.

– Ғәфү итегеҙ, хәҙер... Хәҙер ыскындырам, – тигән булам.

Һин ҡабаланһаң, ул ашыға тигәндәй, ҡарһаланған саҡта ҡулдың йүне буламы ни – ыскынмай ҙа ҡуя ҡармаҡ. Етмәһә, беше салбарға ике сатаһы ҡаҙалһын әле. «Ай-һай» тигән баяғы ағай тағы мәрәкәләгән булды:

– Икәүләшеп кенә ултырығыҙ ҙа китегеҙ инде. Балыҡ торһоғоҙ...

Ҡыҙҙың әсәһе йәнде алып бара, әрләй! Мат менән бәрә, ят та ул. Эх-ма, хәҙер, хәҙер, берәү таҡта-маҡтаһын бушатһа, вагон ишектәре пыф-пыф итеп ябыласаҡ.

Ни эшләргә? Кеҫәмдән бәке сығара һалып, епте ҡырҡырға ынтылдым. «Балыҡ» ҡурҡып китте, хатта ситкәрәк тайшанды: балағын телә, тип уйлағандыр, бисара. Ә мин, бәғер итемде ҡырҡҡандай, зәңгәрһыу ҡармаҡ ебен бер тартыуҙа өҙөп, тамбурға ырғыным.

– Эх, ҡустым, ялтырма ла шәп ине, ҡыҙ ҙа, – тип ҡабат мәрәкәләне юлдаш ағай, баш бармағын ике тапҡыр сөйөп.

– Крокодил балаһымы?! – Үсегештән ҡапыл ғына шулай тигән булдым.

# ЭТЛЕК

Хәбәрсе йөгөн тартып йөрөгән осор командировканан имгәнеп ҡайтҡаным онотолмай.

...Ҡалала эшем бөткәс, юл айҡан яҡындағы колхозға барып, ҡасандыр бер мәктәптә уҡыған яҡташымды күреп ҡайтырға ниәтләндем. Бригадир икән ул мин бараһы ауылда. Ураҡ ваҡыты ине, урамда әҙәм заты күренмәй. Яҡташымдың ғәләмәт ҙур, күренекле өйөн күрһәттеләр. Машинанан төштөм дә, тәүәккәлләп кенә бәләкәй ҡапҡаларын асып, таҡта түшәлгән киң ихаталарына уҙҙым. Әҙерәк кенә атлауым булды – күҙҙәрен ларатып ике яҡтан ике башмаҡтай эт ырғымаһынмы! Һөйләшкән һымаҡ бер ыңғай һикергән ерҙән былар һауала, яурыным тапҡырында, сынйырҙарынан быуылып туҡталып ҡалдылар, мин иһә ергә сүгәләнем дә ҡаҡлыҡҡан туп һымаҡ артҡа һикерҙем. Ҡотом осҡандыр – һикергән ыңғай кәүҙәм ҡапҡа яғына ҡайырылды. Нисек ҡапҡа келәһенә үрелгәнемде лә белмәйем. Ҡабырға араларым шырт-мырт килгәнен дә һиҙмәнем. Ә ят әҙәмде әжәл тотҡаһына йәбештерә яҙған уҫал эттәр, тимер сынйырҙарын һөйрәп, ҡапыл-ғара күренмәгән ояларына сумдылар. Ырылдайҙар, ярһып өрәләр, гүйә, мин уларға – ҡан дошман. Аңланым: тешләүен тешләй алмаҫтар ине, сөнки хужа ике этен, араларынан тере йән имен үтерлек «коридор» ҡалдырып бәйләгән, имеш.

Кәйеф ҡырылды, хужа ла ҡайҙалыр киткәйне. Ҡул һелтәп, килгән юлымдан кирегә, станцияға һыпырттым. Биртенгән билем ара-тирә һыҙлаштыра хәҙер ҙә.

Был ауылдан тегеләй-былай уҙып киткән саҡтар булғылай. Мәгәр һис тә туҡталғым килмәй. Ҡурҡҡанға түгел, әйләнеп «коридор»ҙан сыҡҡыһыҙ донъяһына тарауыл итеп бер түгел, ике этте ҡуйған яҡташымдың күҙҙәренә ҡарауҙан уңайһыҙланам. Кем белә, нәфсеһен, этен өс башҡа еткермәнеме икән?

# ОҘАҠ ЙӘШӘГЕРҘӘР!

Әлһерәткес ине. Балыҡтан ҡайтып киләбеҙ. Аулаҡ бер ауыл осона етеү менән иң тәүге өйгә инеп, һыумы, айранмы эсеп сығырға һүҙ ҡуйыштыҡ.

– Һаумыһығыҙ, инәйҙәр, – тип бәләкәйерәк, бик иҫкергән өй алдында бәйләм тотоп ултырған ике әбейгә сәләм бирҙек. – Һыу эсереп ебәрмәҫһегеҙме?

– Шөкөр, һыуҙы һатып алмайбыҙ. Аласыҡҡа инегеҙ, әсәйем айран бирер, – тине әбейҙәрҙең төҫкә-башҡа олораҡы. Баҡһаң, быларҙың картуф баҡсаһынан шишмә сыға икән.

Һыуһынды ҡандырып, рәхмәттәр уҡып, юлыбыҙҙы дауам иттек. Шунда ғына «әсәйем айран бирер» тигәндең айышына төшөнөргә тырыштыҡ. Тимәк, һикһән йәштәр тирәһендәге был әбейҙең әсәһе бар, ул, моғайын, йөҙгә етеп баралыр.

Бишме, алтымы йыл үткәс, ошо яҡтарға йәнә юлландыҡ. Әллә ҡасан эскән айранды иҫләнек тә ауыл осонда туҡталырға булдыҡ. Һыу, әлбиттә, һылтау ғына ине. Шул уҡ өй, тик ергә һеңешә биргән кеүегерәк. Ҡапҡа күләгәһендә бер әбей ойоҡ бәйләп ултыра.

– Һаумы, инәй, хәлегеҙҙе белеп, һыу эсеп китәйек әле тигәйнек.

– Апайым бирер, – тип ымланы әбей аласыҡтары янына. – Үтегеҙ.

– Әсәйегеҙ әллә бер-бер... – тинем дә, тик үкенеп ҡуйҙым эстән генә.

– Бер-бер шытманымы тимәксеһең инде. Суртым булһынмы ни уға? Йөрөй ана һыу буйында, ҡаҙ көтөп.

Һай, оҙаҡ йәшәгерҙәр. Оҙон ғүмеркәйҙәренең сере үҙҙәренә генә мәғлүмдер, күрәһең.

## ҒӘҘӘТЕ НАСАРМЫ?

«Баҙарға барһам, юлымда осраған һәр беренән – танышмы, таныш түгелме – һаулыҡ һорашам да йөрөйөмсө. Әллә ниндәй алама ғәҙәт... Өйрәнелгән ауылда...» – Сәйер ғәҙәтенә шулай зарланған, ти, бер ҡатын.

Быны ишетеп, ҡәйнәһе уға:

– Бик дөрөҫ эшләйһең, килен. Ғәҙәтең бер ҙә алама түгел. Мәйеткә генә сәләм бирмәйҙәр, – тигән.

## ҺӘШ, ФАТИМА!

Инйәр буйына ялға барғайныҡ. Иҫке урман юлынан бәшмәк йыйып ҡайтып киләбеҙ. Ҡапыл дуҫым: «Сеү әле!» – тине.

– Берәй йәнлекме әллә? – Мин дә хафаланып ҡуйҙым.

– Тыңла әле, тыңла... – ти юлдашым, көләмһерәп.

Киске аяҙлауҙа тауыш әллә ҡайҙан һаркылыусан: ауыл көтөүе ҡайтып килә икән. Малдар һаман туйып бөтмәгәндәрҙер, әрәмәгә инеп, ялманырға самалары.

– Һәш, баҡа аяҡ Фатима, һәш! – Шунан сыбыртҡы шарт итеп ҡалды.

Бер аҙҙан көтөүсе бүтән һыйырҙы әрләргә кереште:

– Ҡайҙа ҡайырылаһың, һа-ай, был әрпеш Ғәйшәне! Был тиклем дә эйәһенә оҡшар икән хайуан!

– Һәш, бумпылдаҡ Зөбәржәт!

Кисеүгә еткәнсе ауылдағы байтаҡ бисә-сәсәнең исемен тоҙлап-борослап телгә алды көтөүсе: «Һаран Сара», «Йыуан Дилбәр», «Йылмаяҡ Гөлсөм»дәр – береһе лә ҡалманы.

## ҺИН КЕМ БАЛАҺЫ?

Диләнкә юлы йүнле буламы ни! Мәгәр «Уазик»ты сөскөртә-бышҡырта ынтылған ергә барып етергә тырышабыҙ. Ни күрәбеҙ – эт йөрөмәҫ юлдан орсоҡтай ғына малай тәпәй турат һыпырта ғына.

– Ҡайҙа бараһың, ҡустым?

– Утарға.

– Беҙ ҙә шунда. Әйҙә, ултыр эргәмә.

– Белдем, – тине малай машинаға менгәс. – Һеҙ һайлау үткәрергә китеп бараһығыҙ.

– Нәк шулай. Ә һин, ҡурҡмайынса, ниңә сыҡтың юлға?

– Өләсәйемә китеп барыш.

– Кем һуң өләсәйең? – Малай менән мәрәкәсел әңгәмәгә шофер ҙа ҡушылды.

– Өләсәй инде...

– Исеме кем һуң?

– Өләсәй-й и все! – тине малай ҡаты ғына. Хәйер, үҙем дә бәләкәй сағымда өләсәйҙәремдең исемен белә инемме ни? Ә һеҙ белдегеҙме? Өләсәй и все!

## ОНОТОЛМАЙ ИКӘН

Күршебеҙ Н. ағай менән атайым бергәрәк эшләне: бесәнен дә саптылар, ағасын да ҡырҡтылар, һалға баҫтылар. Тәбиғи, юл-йомошҡа эшкингәс, ваҡыт-ваҡыт мин уның, йәғни Н. ағайҙың арба-санаһына ла ултырғылап йөрөнөм. Уларҙы нисектер оното-ла төшкән хәҙер.

Ә бына уның мине кәүҙәле ҡолаһы егелгән оҙонбил ар-баһына ултыртып, юл ыңғай станцияға тиклем алып барыуы онотолмай. Онотолмай, сөнки минең һигеҙенсе класты тамам-лап, тәү башлап ҡырға – уҡырға китеүем ине шул. Шул ки-теүемдән күңелем менән ауылдан һыуынмаһам да, гелән ҡырҙа уҡырға һәм эшләргә насип итте.

Рәхмәт әйттем микән уға теге саҡта. Хәтерләмәйем. Ә бына уның, уҡы, ҡустым, кеше бул, тиеүе онотолмаған.

Әйтермен рәхмәтте. Алда ғүмер барҙыр әле.

## КӨСӨКЛӨ ҠАТЫН

Львов аэропорты. Әсе ел иҫә. Трапка тәүҙә бала-сағалы пассажирҙар сағырылды. Көләс, сиғанды хәтерләткән урта йәштәрҙәге бер ир стюардессаға ниҙер аңлатты ла имсәк сабыйын күтәргән, атларҙайын етәкләгән ҡатынын өҫкәрәк баҫырға ҡушты. Шунан өлкәнерәк ҡыҙҙарына һәм улдарына бәләкәйерәк ҡусты-һеңелдәрен етәкләтеп оҙатып торҙо. Бер, ике, өс пар... Тимәк, ғаиләһендә һигеҙ бала. Юҡ, туғыҙ! Сират бер аҙға тотҡарланған кеүек тойолдо, ләкин ләм-мим өндәшмәнек. Тик салбар кейгән бер ханым ғына:

– Өшөйһөң инде, һөйөклөм, өшөйһөң. Әллә ниңә бынауҙар оҙаҡ мыштырҙаны, – тип, ҡыҙылға буялған ирендәрен бөрөштөрөп, ҡосағындағы сәүегеп һыйпай-һыйпай һөйләнде.

Шул саҡ бер теремек ҡарт уға ҡолас яҙып юл асты ла:

– Рәхим итегеҙ. «Һөйөклөң» бер үк һалҡын алдырып ҡуймаһын, – тип бөтә кеше ишетерлек итеп өндәште.

Сабырһыҙлыҡ ана шулай язаһын алды. Ниңәлер һауа сафланып ҡалғандай тойолдо.

## «БАҺАДИР»

Коллектив баҡса туҡталышына етәрәк, мыйыҡлы бер ир трамвайҙан коляскаһын алып төшөргә йыйынды. Шунда ҡаҡса егет уға ярҙамға ашыҡты.

– Оһо, тос икән был баһадир!

«Баһадир» урынында... кирбестәр ятҡанын белһә, ни әйтер инең, егетем?!

## АНА ЛАҺА АТАЙЫМ!

Проспект. Бер килке параллель юлдан ике автобус ярышҡан төҫлө йәнәш барҙы. Теле яңы сыҡҡан ҡыҙыҡай сырайын һытып, берсә әсәһенә, берсә үҙен һөйөп килгән атаһына баҡты. Ҡаршылағы автобуста... «Касандыр ул мине күтәреп йөрөй, бәпесем, тип һөйә ине».

– Атай! Ана лаһа атайым, – тип ҡыскырҙы гонаһһыҙ сабый.

Эйе, уҙып барған автобуста уның ҡан атаһы – күптән түгел генә әсәһе ситкә типкән уйсан ир ултыра ине.

Баланың хәтере отҡор, күҙе оскор була шул.

## ҺЕҘ НИНДӘЙ СИБӘР!

Троллейбуста юктан ғына ыҙғыш ҡупты. «Ғәйеплеһе» ғәфү үтенә, «ғәйепһеҙҙе» тыйып ҡарай, ләкин һис тынысланмай, әйҙә тел сарлай йыуантыҡ ҡатын.

Шул саҡ ир-ат араһынан теле менән йылан арбар әҙәм әйтеп һалды.

— Һеҙ ниндәй сибәр! Әрепләшеүегеҙ генә йәмһеҙ.

Дорфа пассажирка ауыҙына йөҙөк ҡапҡандай шымып ҡалды. Йүкә шына ҡай саҡ имәнде лә яра икән.

## КҮРГӘНЕ БАР, ШИКЕЛЛЕ...

Купела ике ҡатын ләстит һатып килә. Бына кемдең ҡайҙа эшләгәне лә асыҡланды.

— Ә һин Н.-ды беләһеңдер әле? Гаражда механик, буғай,— тине берәүһе ҡапыл ғына.

— Күргәнем бар, шикелле,— тип яуапланы икенсеһе.— Ә ниңә һорашаһың әле?

— Былай ғына. Шул әҙәм шофер сағында миңә ҡармаҡ һалып маташҡайны. Арыу егет ине былай.

— Вәт ҡыҙыҡ! Йә һөйлә, йә...

Телдәр ҡатын юлдашының Н.-дың хәләл ефете икәнлеген башына ла килтермәй ине.

Эй ҡатын-ҡыҙ!

## КҮҘЕГЕҘҘЕ ДАУАЛАҺАҒЫҘ...

Күҙлекле ҡартлас «йәшел ут» менән килгән таксиҙы туҡтатты ла бараһы ерен әйтте. Таксист, сменам бөтә, тип һылтау тапты. Яңы микрорайонға, юл алама булғанлыҡтан, таксомоторҙар теләр-теләмәҫ кенә йөрөй ине.

Ғәжәпкә күрә, бер аҙҙан әлеге «Волга» уралып-боролоп кире килде.

— Ғәфү итегеҙ, доктор... Һеҙ элек минең күҙҙе дауалағайнығыҙ.

— Шулаймы ни? Булғандыр. Күҙҙе зәғифләргә ярамай.

— Әйҙүк, рәхим итегеҙ. «Һә» тигәнсә...

— Рәхмәт. Күңел күҙегеҙҙе дауалап өлгөрмәгәнмен, бәлки, ултырырмын.

Доктор икенсе таксиға ҡул күтәрҙе һәм үҙе теләгән ергә елдерҙе.

## БАШ ЕТМӘЙ

Перронда фильтрлы «Опал» сигаретын көйрәтеп торған егет янына икенсе тәмәкесе килде лә тартырға һораны.

Тегеһе ғәмһеҙ генә осһоҙло «Прима» тәҡдим итте, быныһы иһә уны һындырып аяҡ аҫтына ташланы.

– Үҙең тарт, мөртәт!

Әле булһа баш етмәй: кем яғындалыр хаҡлыҡ?

## АҠСА СҮП БИТ

Төньяҡтағы ҙур төҙөлөшкә берәү эшкә килә ята. Поездан төшкәс, шоссеға ыңғайланы. Уны – бер микроавтобус ултыртып алды. Буран уйнатып, һалҡын томанға сорналған поселокка килеп еттеләр.

– Ошонда инде, ҡустым, һинең икмәгең, – тине күңелсәк шофер.

Йәш юлаусы уға «өслөк» һуҙҙы, рәхмәттәр уҡыны.

– Һин нимә, ҡустым? Беҙҙә ундай тәртип юҡ? Аҡса сүп бит ул бында. Өйрәнгәнһегеҙ унда, көнбайышта, ары баҫҡанда ла, бире баҫҡанда ла хәйер өләшеп...

Йыл үтте. Инде яҡташыбыҙ отпускыла йөрөп ҡайтырға ниәтләне. Йөрәкһеп автобусты ла көтмәй, оло юл ситенә сығып баҫты. Әмәлгә таянғандай, эргәһендә автобус туҡталмаһынмы.

Таныны егет: былтырғы шофер. Аҡсаны сүп тигәйне, шикелле.

Станцияға етәрәк, егетебеҙ аптырай төштө: «Аҡса тәҡдим итһәм, үпкәләмәҫме?»

– Тартынма, дуҫкай, давай... Ҡайырып алаһыңдыр әле эш хаҡын.

Юлдар ҙа, йылдар һымаҡ, үҙгәртә икән бәндәләрҙе.

## ҠАТЫ БӘҒЕРЛЕ

Троллейбуста аулаҡ, тынлыҡ. Арттараҡ ултырған малай ғына ҡапыл ләпелдәргә тотондо.

– Әсәй, мин кашманавт бит. Шулаймы?

– Космонавт түгел, «шволочь» һин, – тине әсәһе, үртәнеп.

«Ниндәй ҡаты бәғерле әсә!» Ирекһеҙҙән артка баҡтым.

Әстәғәфирулла – малайҙың башында әллә тубал, әллә гөл һауыты...

– Травмпунктка бармай әмәл юҡ. Гагарин мин тип башына ни етте, шуны ҡаплай ҙа уйнай торғайны, төнгө көршәген кейгән – упкан инде. Һалдырып булмай.

Иларһыңмы, көлөрһөңмө...

## ЕЙӘНЕН УЛТЫРТТЫ...

Автобуста кеше күп тә түгел, әммә буш урындар ҙа юк. Яңы ингән сал сәсле ветеран ипле генә өндәште:

– Урын бирһәңсе, ҡыҙым.

– Рәхим итегеҙ, – мөләйем ҡыҙ ихлас ҡалҡынды.

Ләкин... ҡарт ете-һигеҙ йәштәрҙәге ейәнен ултыртмаһынмы! Был бала киләсәктә өлкәндәргә хөрмәт күрһәтерме икән?

## АУЛАҠ ТАУ ЮЛЫНАН

Аулаҡ тау юлынан рюкзагын аҫҡан берәү бара. Арттан йәш пар ултырған еңел машина ҡыуып етте. Юлсы өмөтләнеп ҡул күтәрҙе. Юкка ғына...

Шишмә янында машина ултыра. Һөҙәк кенә ҡыраздан менә алмай. Эргәләренән, ер һеңкетә баҫып, баяғы елле егет уҙып китте.

## ТЫУЫМ ДА, ҮЛЕМ ДӘ БАР

Бер танышымдың поезда тыуғанлығын беләинем. Быйыл ғына вафат булғанын ишеттем – машина аҫтына ҡалып йән биргән.

Тыуым да бар, үлем дә бар юл тигән ҡөҙрәтле нәмәлә.

## ҺӨЙӨКЛӨҺӨНӘН ЕЛДӘР ИҪКӘЙНЕ

– Мин һине усымда ғына йөрөтөрмөн, – ти егете, иркенләп ултырғас, һөйөклөһөнә. Бына ул кеше аркыры билетка ун тин аҡса ебәрҙе лә иҫкәртеп ҡуйҙы. – Сдачаһын онотмағыҙ.

– Бер нәмәгә лә мохтаж булмаҫһың. «Жигули» алам әле ошо арала... – Кассаға тинлектәрҙең зыңлап төшөүе мөхәббәт һүҙҙәрен бүлдерҙе. – Әйттем дәһә, сдача ебәрегеҙ, тип. Үҙем бармаһам, булмаҫ.

Трамвай туктаны. Егет дүрт тин артынан кассаға табан атланы. Кире боролғанда, һөйөклөһөнән елдәр иҫкәйне.

## ЭТТЕҢ ЭТЕНӘ ҠӘҘЕРЛЕ

Өфө – Стәрлетамаҡ тракты. Ялға туктаған пассажирҙарҙы аҡланда бер көсөк ҡаршыланы. Хужаһынан айырылып ҡалғандыр, мәхлүк, һәр береһен еҫкәй, йәлләтеп сыйылдай. Бер ҡатын уны төрлөсә әүрәтеп маташты, эйәләштерергә теләне, шикелле.

Көсөк ҡасып икенсе кешеләргә һырылды. Бер ир юхалап ҡараны – тотторманы. Кемдер «Шарик» тип, икенсе берәү «Тузик» тип саҡырҙы.

Бер малай, «Джульбарс» тип наҙлап маһмайлағайны, көсөгөбөҙ уға яҡынлашты һәм эргәһенән китмәҫ булды. Малай уға теленә килгән тәүге исемде генә әйткәйне бит.

Эттең этенә ҡәҙерле икән дәһә исем.

## ЭТЛӘНЕҮ

– Э-эх, малай, этләнеүҙәрем былтыр ошонда, – тип хәтирәгә бирелде рулдә ултырған юлдашым. – Ҡаршыға бер йүнһеҙ осраны, шунан тайпылам тигәйнем – бар ҙа ҡаҙал машинам менән а-анауҙағы йырынға. Ни туды, ни суды! Таң аттырҙым. Аҙаҡ ярай ҙа трактор һөйрәп сығарҙы. Асыҡтырҙы, иң ҡыйыны, тәмәке бөттө. Осраны берәү – ун хаҡына «Прима» һатып китте.

– Артына тибеп ҡалһаңсы шул мөртәттең! – тигән булдым кеше бәләгә осрағанда ла кеҫәһен уйлаған алыпһатарҙы ҡәһәрләп. – Үҙе шундай хәлгә тарыһа, нишләр ине икән, сволочь!..

– Типһәмме? – тип мыҫҡыллы көлөмһөрәне ағай. – Тағы ун һум һорамаҫ ине микән?

## ЭЛЕККЕ ТУҒАЙҘА

Ағайҙың ауылына һуғылып китергә булдыҡ. Барып етеретмәҫтән ул туғайға боролдо.

– Ошонда элек, мин малай саҡта, тигеҙ генә ялан ине. Хәҙер, ана, бура артынса бура күтәрелә.

Баҡһаң, юлдашымдың тел төбөндә бөтөнләй икенсе ваҡиға ятҡан икән.

...Ярты етем үҫә Ф. ағай, сөнки атаһы һуғыштың тәүге йылында уҡ башын һала. Илленсе йылдамы, Өфөнән ике малай – туғандары килә ҡунаҡҡа. Ф. улар менән нәҡ ошо яланда уйнап йөрөгәндә, нәҫел тейешерәк һыбайлы осрай. Атынан төшмәй генә был ҡала малайҙарын, берәм-һәрәм эйәренә менгәштереп, туғай иңләп юрттырып кинәндерә. Эй ҡыуана тегеләр! Ниңәлер Ф. исемле ауыл малайына ғына «сират» етмәй. Етем булғанғамы? Әлләсе.

Ҡырҡ йыл элекке иҫтәлек ҡартластың йөрәген әле лә өтөп алғандай тойолдо миңә. Эргәмдә ат булһа, мә, тиер инем.

## ХЫЯНАТСЫМЫ?

Йор телле үзбәк шағиры Яхъя менән юғары әҙәби курстарҙа бик дуҫ, серҙәш йәшәнек. Ташкент яғына ул йә поезда, йә самолетта йыш ҡайтып йөрөнө, сөнки йәш булһа ла, ғаиләһендә дүртме, бишме бала үҫә ине. Зарланғаны хәтерҙә: өйөнә инер-инмәҫтән ҡатыны ҡыҙғаныуын белдерә лә башлай икән быға. Мәскәүҙә сибәркәйҙәрең күптер инде һинең, фәлән дә төгән...

Бер ҡайтып килеүендә һорай ҡуйҙым һабаҡташтан:

– Йә, нисек ҡаршыланы айылың?

– Ғәҙәтенсә... – тип мыйығын һыйпаны был. – Тик мин дә аптырап торманым, әйттем: әле генә самолетта стюардесса менән эй үбештек, ҡыҙылы йоҡҡандыр, йылы һыу бир сайҡарға, тинем.

Икенсе юлы һабаҡташым поезда ҡайтып әйләнде. Мәҙәк күреп, ҡыҙыҡһындым:

– Йә, был юлы нимә тинең?

– Проводница менән ҡуна-ҡуна килдем, тинем. Шуның өсөн уға эш хаҡы түләйҙәр, тинем.

...Уҡыуҙар бөткәс, йәмле йәйҙә мин Яхъяға Өфөнө, Белорет, Бөрйән яҡтарын күрһәттем. Атаҡлы Шүлгәнгә лә сәфәр ҡылдыҡ.

– Инде лә ҡыҙғанһа, гүзәл һыуһылыуҙар мәмерйәлә йәшәй икән, тик башҡорттар гүзәлдәрен сит-ят күҙҙәргә күрһәтмәҫкә тырыша, тиәсәкмен, – шулай мәрәкәләне шағир ҡараңғы мәмерйәнән яҡтыға сыҡҡас.

## КҮҘЕҢДЕ ЙОМ!

Шүлгән тигәндәй, элегерәк әле, атаҡлы мәмерйәгә бер төркөм әҙиптәр менән барғайныҡ. Шулай, боронғо таш өй эсендә айҡалып-сайҡалып йөрөгәндә, һүнмәһенме берҙән-бер фонарыбыҙ. Дөм ҡараңғы тип әйтеү генә ай-һай...

– Бер ни күрмәйем, нишләргә инде? – тине кемдер хафаланып. Рауил Бикбаевтың шул саҡта егеттәрсә «кәңәше» хәтергә уйылған:

– Күҙегеҙҙе йомоғоҙ – бөтә нәмә күренә...

## ӘРЛӘШЕҮ

Бәләкәйерәк ҡаланан ҙур ғына ауылға көнөнә бер йөрөгән автобустың шоферына күптәр зарлана ине: аҡса һонһаң, йыш ҡына билет бирергә «онота», давайлаштыңмы, ҡырҡ һүҙгә етеп мыҫҡыллай, хатта ямаҡай итеп һүгенә.

Бына бөгөн дә бер ҡатын менән кинәнеп әрепләште, етмәһә, тегенән үҙенсә үс алды: һораған ерҙә төшөрөп ҡалдырманы. Ҡатын да сая, әсе тел булып сыҡты. Эттән эткә һалып әрләне шоферҙы. Тартынып торманы, матын да ҡыҫтырҙы, өҫтөңдән ялыу яҙасаҡмын тип тә янаны.

Яҙғандырмы, юҡтырмы, мәгәр тиҙҙән тәмһеҙ ауыҙ водитель был яҡтарҙа күренмәҫ булды. Кешегә баҙ ҡаҙма, тигәндәре шулдыр инде.

## ҺЫЙЫРЫ ҺАУЫЛМАҒАН

Бер саҡ урауҙан ҡайтырға тура килде, эңергә ҡалдыҡ. Бәй, юл күрһәткесен әллә яңыртҡандар, әллә элек иғтибар итмәгәнмен: «Швейцария» тип яҙылған даһа. Беҙҙең яҡта ундай ауыл барлығын ишетеп белә инем белеүгә, туҡта, мәйтәм, бисәм дә күреп китһен. Иҫнәй-иҫнәй килә ине, әле бөтөнләй сумған, имеш, йоҡоға.

– Кәләш, – тигән булам, – уян әле, Швейцарияға етәбеҙ. Ана, ҡара, юлда полиция тора. Бир әле егерме һум, пошлина һорайҙар.

Бисәм йоҡо аралаш берәй яртылыҡ бирмәҫме тиһәм, ҡайҙа ул:

– Шведтар араҡы эсмәй! Шәберәк ҡыу – һыйырым һауылмаған...

Бына ошондай ваҡиғаны һөйләгәйне миңә Бәләбәйҙә йәшәгән һабаҡташ дуҫым.

## ФАЖИҒӘ

Балҡарстандың халыҡ шағиры Мөғәмит Моҡаев ауыҙынан ишеттем мин быны.

...Нальчикка етәрәк, йәшкелт баҫыуҙар баш алған иңкеүлектә, ике яҡтан да ағылған машиналар туҡтарға мәжбүр: юл уртаһында күркәм ат тора бойоғоп. Бейә малы, данлыҡлы ҡарасай тоҡомонан. Баҡһаң, ғәзиз ҡолоно асфальтта ята. Ҡымшанмай, «иномарка» бәрҙереп ҡасҡан икән. Ен һымаҡ йөрөй хәҙер «яңы»лар, Алла ла, мулла ла юҡ уларға.

Күп кеше уратып ала бисара бейәне. Илай меҫкен хайуан, өнһөҙ генә илай. Кинәт ялдарын туҙғытып башын сөйә, гүйә, көтөлмәгән бәлә-ҡаза күктән килгән, гүйә, сабыйының һәләкәтенә бар ғаләм ғәйепле. Ярҙам һорағандай, кешеләргә лә төбәй йәшкәҙәгән күҙҙәрен.

Уйсан ирҙәр башын аҫҡа эйә. Бына бейә еңелсә ҡалтыранып, әкрен генә тубыҡлана, шунан йәшен һуҡҡандай дөрһөлдәп

ҡаҡ юлға, гонаһһыҙ сабыйына йәнәш ауа...

Юлаусы ир-ат, шул иҫәптән халыҡ шағиры, баш кейемен һала. Һуңынан белешә: йөрәге ярылған бейәнең...

## ҠУПШЫРАҠ КЕЙЕН

– Ярамаған, тиме, юлға...

Әрһеҙерәк кейенеп сәфәр сығырға әҙерләнгән улының был һүҙен ишетеп, өләсәһе шелтәле ҡарашын ташланы:

– Аслан улай тимә. Киреһенсә, ҡупшыраҡ кейен: юлға – кеше араһына сығаһың бит. Әҙәм күрке – сепрәк, тигән боронғолар.

## СӘҒӘТ НИСӘ

Бер апайға эйәртеп, «дәү лавкалы» алыҫ ҡасабаға ебәрҙеләр. Туғандарҙа йоҡлап, йомоштарҙы теүәлләгәс, ҡайтыуға сыҡтыҡ. Ауыл-утарҙарҙа айран, сәй эскеләп атлайбыҙ. Арымайым былай, сөнки кәйеф шәп – беләктә сәғәт. Өр-яңы, сыҡылдап ҡына йөрөй. Йәһәтерәк ҡайтып, малайҙарға маһайғы килә. Иртәгә күҙҙәрен шар итәм, йәнәһе.

Инде апайым йышыраҡ туҡтай. Әйҙә, тигән булам, сәғәтһеҙ юлдашыма, ваҡыт шунса, яҡтыла етәйек... Етербеҙ сәғәт 11-ҙә, ти был.

Бара-бара йәнә иҫкәртәм, ваҡытты күрһәтәм, мыжыйым. Асыулана теге, сәғәт алған (үҙе һайлашты), имеш, берәү, ти.

Әйтәгүр, ҡараңғыла индек ауылға. Хәйерһеҙ, сәғәттең уғы күренмәй. Апай шаярта, ваҡыт нисә? Ҡайтҡас, ҡара – ун берҙе күрһәтер, тине лә был үҙ өйөнә, мин үҙебеҙгә ыңғайланым.

Өйгә инеү менән етеле шәм яҡтыһына беләгемде һонам. Сәғәт... 3 минуттан 11 ине.

## ҠЫРАҘДАҒЫ ҺУҠМАҠТА

Мәндем буйынан уҙғанда, юлдаштарыма ҡар ятмаҫ бер текә ҡыразға һырынып үҫкән бейек ағасты күрһәтмәйсә уҙмайым. Маҡтанырҙан түгел, күңелдә хәтәр иҫтәлек һаҡланған өсөн.

...Ҡарамалылағы туғандарым, йөрөмә ыҙалап, һыу нығ ташҡан, Таҡатыла көрт тәрән, тиһәләр ҙә, өңөнә ятмаған айыу осрар, тип ҡурҡытһалар ҙа, Октябрь (ноябрҙең етеһе – демонстрациянан һуң) байрамына үҙ яғыма сығып киттем. Йылға күпсеп аға, ярҙарына боҙлауыҡ ҡатҡан.

Йә бирьяҡлап, йә аръяҡлап байтаҡ күтәрелдем өҫкә. Бер бөгөл кисеү бирмәгәс, ҡаяға мендем дә ҡырын һикәлтәнән ат-

ланым. Хәтһеҙ барылды ҡыр кәзәһе генә үтерлек урындарҙан. Төртөлдөм таш ҡыуышына – аҫта йылға шарлауы ғына ишетелә, өҫкә лә, алға ла барыр әмәл юҡ. Кире төшөргә, боҙло һыу аша сығырға, бөгөлдәге шаршыны урап атлағас, ҡабат бирегә сығырға... Ваҡыт йәл, өшәнес тә буласаҡ.

Селектәргә йәбешә-йәбешә сигенәм. Күрәм: һомғол тирәк осо таш киртләсенә яҡын даһа. Ырғығанда?.. Ағай юлға биргән ҡойма итектәрҙе, сумкамды аҫҡа елгәргәс, алас-йолас спорт кейемендә генә ҡалам.

Бер, ике – һо-оп! Тирәктең осо бәүелә, шомло сытырҙап эйелә, гүйә, өҫтөнә ауған «маймыл»дан ҡотолорға самалай, ә мин аҫтағы сатаға йәбешәм. Уныһы ҡатҡылыраҡ икән.

Төшөп еттем. Еңдем тауҙы, сигенмәнем. Мин иҫән!

...Иҫән ҡалғанға, бер уйлаһаң, ошоларҙы яҙып ултырам бит.

## ӘЖӘЛ ЙӘНӘШӘ САПТЫ

Атайымдың үҙ ғүмерендә нисә ат аҫрағанын яҡшы хәтерләйем. Ҡола ҡонан һатып алды – тәүге аты. Егә башлағайныҡ, тегенең тау тота белмәүе асыҡланды. Өйрәтмәгәндер инде атай ҙа еренә еткереп....

Алыш-бирешкә әүәҫерәк Ф. апай «етәкселегендә», туғантыумасаның һатлыҡ балын тейәп, баҙарлы ҡасабаға ебәрҙеләр. Күсерҙә – мин. Арба йөгө һәлмәк – әллә нисәмә фләгә шим бал.

Олоғор аръяғына төшкәндә китте ҡолабыҙ баш бирмәй – ҡуш аяҡлап саба, үҙе ҡыҙа бара. Йә, артҡы ике тәгәрмәс араһына ҡатҡыл күҫәк тыҡһаҡ та! Шайтан урынына һыпырта ҡола. Хәтәр!!! Алда – текә һарҡыу, боролмалы тар юл. Бер алаңғыртта, баш етеп, һулға ҡайырҙым. Ҡапылыраҡ булдымы, кәйелеп бара бирҙе лә түңкәрелде арбабыҙ: апай бер яҡҡа, мин икенсе яҡҡа, фләгәләр унда-бында осоп ҡалдыҡ. Ҡола ат тәртәһе менән шырҙағы имәнгә төртөлөп туҡталғайны.

Юлды көскә дауам иттек. Утарҙа апайҙың мейеһен үлсәп төйҙөләр.

Ошо ҡыраздан уҙған һайын йөрәк жыуылап ҡуя. Әжәл эргәлә булған... Ҡоламы? Көҙгә салды һуғымға атайым. Үҙен дә аҙ толландырманы шул.

## УБЫЛДЫ СЫҠҠАНДА

Атайым, мин, йәнә тиҫтерем Р. – өсәүләп бесән сабып-тейәп, бер ыңғай бәрҙе ҡармаҡлап ҡайтыр өсөн Бәләкәй Шишәнәк буйынан үрләп барабыҙ. Юлда дәү ялғашты хәтерләткән тәрән убыл осраны.

Әлеге лә баяғы ҡола атыбыҙ көскә шәп тә, тыңлауһыҙырак, алабарман. Йырҙаны йылдам сығам тип, ҡапыл ынтылғайны, алғы тәгәрмәстәр мәтегә батты – дилбегә тотоп ултырған Р. йәлп итеп ҡалды. Тәүҙә аттың осаһына бәрлекте, шунан йомарланып кендек аҫтына ук һеңеште. Тотондо холокһоҙ атыбыҙ тибенергә – шак та шок килә үрәсәгә бәрлеккән дағалары. Атам ҡыскырып һүгенгәс кенә сабырланды. (Ни хәл итәһең, һүгенеү телен нығырак аңлай ине мәхлук.)

Шулай, үлемдән сак ҡалды Р. Ҡуркыныс убылдың иҫтәлеге булып, маңлай ситендә даға сыйған йөй ҡалды.

Был вакиғаны атайым оҙак онотманы, ят, сибек ҡулға дилбегә тотторғанға гелән үҙен битәрләне.

## КИСЕҮҘӘР АША

Өйләнеүем үҙенә күрә иҫтәлекле генә минең. Ауылды күрһәтәйем әле тип, буласак кәләште тәү башлап май байрамына тәғәйен тыуған якка әйҙәнем.

Юл-вакыт ҡыҫкартып, Мәндем һукмағын һайланык. Йылғалар күтәрелгән сак, урыны менән күперҙәрҙең бағаналары ғына һерәйеп ҡалған, бүрәнә баҫмалар ҙа аккан. Йә күтәреп, йә йөкмәп алып сығам юлдашты кисеүҙәр аша.

Бәхәсләшеп киткән сактар булғылаңы аҙак ҡатын менән: «Ун ете ерҙә кистек...» «Юк, егерме ете ине!»

## МИСКӘ ӨҪТӨНДӘ БЕЙЕҮ

Бер генә вагон һөйрәгән тепловоз һуңғы туктальшына етте. Тиҙҙән ул, яңы юлаусыларҙы тейәп, кире елдерәсәк.

Ситтәрәк бер төркөм ауылдаштарҙы осраттым. Араларында туғандарым да байтак. Бөтәһе лә ҡыҙмаса, бөтәһе лә күңелсәк. Туй булған икән, әле аяк өҫтө генә һыйланалар – ҡоҙалар менән хушлашалар. Берәүҙәре йырлай, берәүҙәре такмакка бейей. Күҙе тонған ағай гармун тыскылдаткан була, «хромка»һын ҡыҫтап-көсләп миңә тотторҙолар. Геүләтеп уйнап ебәрҙем. Китте бер заман күмәк бейеү – урыҫы ла, татары ла килеп ҡушылды. Ә бер һеңлекәшем дәү дуңғырҙак мискә өҫтөнә менеп, өйрөлөп-сөйрөлөп, бармак шартлатып бейергә керешмәһенме. Килештерә лә һуң! Ул кәүҙә, ул төҫ – ҡарлуғас елкенә тиерһең. Тиҙҙән бар ғәләм уға һокланып тамаша ҡылды.

Юл ыңғай ғына күргән ошо бейеү ғүмергә һеңде хәтергә. Ә бит ҙур-ҙур сәхнәләрҙә атаклы оҫталарҙы күргән кеше мин.

## ЕҪЛЕ ҺАБЫН

Ҡәһәрле утыҙ етелә беҙҙең тирәнән тиҫтәләгән аҫыл ир-егет йә атыла, йә билдәһеҙ тарафтарға һөрөлә. Һөргөндә ҡаты сиргә һабышҡан бер уҙаман ете-һигеҙ йылдан һуң иреккә ебәрелә.

Илгә ҡайтмаҡ була. Ауылға етәрәк бер артылышта йән бирә меҫкен. Юл тоғонан ни бары еҫле һабын – ҡыҙына тип ҡайҙан ҡайҙа алып ҡайтып килгән бүләге табыла.

Үткән-һүткән һайын шул артылышты, Таубатырҙай ғәйрәтләнеп, урынынан ауылыма яҡыныраҡ шылдырғым килә.

## ҺЫРТТА ЛА ҺЫР БИРМӘ

Р. менән ауылға ҡайтып барабыҙ. Юл Елмәрҙәктең иң бейек үркәсе аша уҙа. Һыртта гелән елһерәй, аяҙҙа бар ғәләм алыҫтарҙан күренә. Бында һәр кем – ары китһенме, бире килһенме – туҡтап хәл ала, тамаҡ ялғай, бышлығып йөк тартҡан атын һыуындыра.

Өсөнсө көн генә ҡалала «ҡайтырға аҡса юҡ әле» тип йөрөгән дуҫым аҫмалы сумкаһынан ризыҡтар сығармаһынмы... Колбаса, ыҫланған балыҡ, перәниктәр... Тамшанып керештек! Һүҙ араһында һорай ҡуйҙым: ҡайҙан был тиклем байлыҡ, кесәң таҡыр ине ләһә?

Сиселде был. Велосипедын һатҡан икән. Күҙем ҡыҙғайны самокатына. Ҡайҙан алдың, тигәс, еҙнәм бүләк итте, тигәйне. Алдашырға яратҡанын белһәм дә, ышанған булғайным, әле бына тотолдо: паркта аунап ятҡан бер иҫеректең велосипедына айыу майы һөртҡән.

– Урлап «велик» һатҡан аҡсаға мине һыйлап ултыраһыңмы?

Туймаһам да, ҡабат тамаҡҡа аш үтмәне. Ауылға еткәнсе йүнләп һөйләшмәнек тә шикелле.

## ҒӘҘӘТ

Күрше ауылдан Р. менән дүрт йыл бергә һабаҡ алдыҡ педучилищела. Байрам мәлдәре поезда ғәләмәт тығын була, аптырап тормай әҙәм аяғы араһынан вагон һәндерәһе аҫтына ла ингеләп ята торғайныҡ хатта.

Хәтерҙә, тегеләй ҙә, былай ҙа поезға билетты дуҫымдан алдырырға (һонтайып сиратҡа баҫҡым килмәй, йәнәһе) ғәҙәтләндем.

...Яңыраҡ станцияла осраштыҡ, юлыбыҙ бер яҡҡа ине. Әллә ҡасанғы ғәҙәт буйынса, ҡорҙашҡа аҡса һонғанды һиҙмәй ҙә ҡалғанмын.

– Һаман күтәнсе икәнһең! – тип үсал ғына шаяртты Р.

– Һәр кемдең холҡо эйәр ҡашағаһында йөрөй инде ул. Бына бит, һин дә ғәзәтеңде ташламағанһың, – тинем ҡулынан билетты алғанда.

## РӘХМӘТЛЕ БАЛТА

Байтаҡ йылдар элек ҡара көззә ауыл яғына тартылдыҡ. Өфөлә ҡарҙың әсәре лә юҡ. Ә Таҡаты битләүзәрен ап-аҡ көрт басҡайны. Етмәһә, быиаса тау юлдарын йүнләп күрмәгән шоферыбыҙ ни балта, ни көрәк алмаған.

Ҡарурман юлында бульдозер осраны. Эйәһе баш сайҡай, ай-һай, ти. Юлға ағас йығылған, шишмәләр туңған, тип ишеткән. Балтабыҙ юҡлығын белгәс, үзенең елле балтаһын бирҙе. Ҡайтышлай ер һөргөстө ҡайҙа күрһәк, шунда ҡалдырырға вәғәҙәләнек.

Ҡыйынлыҡ менән бараһы ергә еттек, йомоштарҙы теүәлләнек. Ләкин кирегә, урау булһа ла, бүтән юлды һайланыҡ, сөнки йылғаларға ҡалын шәре туңғайны.

Шунан бирле балта миндә. Машинаға һалып алғылайым: хужаһына бирергә йыйынам – исемен дә, ауылын да белмәйем.

## «ЭСВИНЙӘ»ЛӘР

Малай саҡта өлкәндәрҙән күрмәксе, оҙон юлға сыҡһаҡ, кеҫәгә мотлаҡ шырпы, уҙа китһә, бәке лә һалып ала торғайныҡ. Шулай күңелгә ышаныслыраҡ, тынысыраҡ булғандай. Ҡош-ҡорт яҡынлашҡанын һиҙһәң, йә өшәнһәң, ут яҡ – донъяң теүәлләнер.

Былтыр өс-дүрт малайҙы тап иттем йәнтөйәгем юлында. «Эсвинйә»ләр, олатайым әйтмешләй: өстәрендә – ете диңгеҙ аръяғынан килтерелгән «каскет»та «баскет», ауыҙҙарында – һағыҙ, кеҫәләрендә – зажигалка.

## БУШТЫҢ АТАҺЫ ҮЛГӘН

Был мәҡәлдең дөрөҫлөгөн әлеге баҙарлы заман әйләнгән һайын раҫлай.

...Күмәк кеше төштө машинанан – һәммәһе лә «Һаумыһығыҙ, ауылдаштар!» байрамына йыйыла ян-яҡтан. Шофер сос, кемдең кемлегенә ҡарамай, ярты юлда уҡ: «Бензин ҡиммәт, — тине, — давай аҡсағыҙҙы...»

Анау ҡартлас нишләр икән? Малай саҡтарында шоферҙың үзен тегеләй ҙә былай арба-санаһына ултыртып йөрөй торғай-

ны. Хәҙер ҡырҙа йәшәй, әллә ниҙә бер генә ҡайтып китә ауылға. Шул кешенән дә, өс туған ағайынан да, хаҡ алырмы шофер йөраты? Алды...

Ниңәлер икеһенә лә асыуым ҡабарҙы шул саҡ...

## АЯҒЫҢ ҠЫҪҠАРҒАН

Көн дә фермаға инеш аша тура һуҡтыра икән берәү.

Көндәрҙең береһендә инеште аша ырғыйым тигәндә, тубығынан мәтегә бата был. Сәмләнеп, ҡабат ырғый – йәнә «шап» бысраҡҡа.

Ҡайтҡас, бисәһенә зарлана:

– Нисәмә йыл һикереп кенә аша йөрөгән инеш юлынан бысранып ҡайттым бына. Әллә аяғым ҡыҫҡара инде...

– Эй, ҡартлас, ғүмер юлы ҡыҫҡара тиһәңсе... Иҫлә әле, егерме йыл элек һин шул инешеңде йүгермәй ҙә һикереп сыға инең бит.

## ТҮРӘЛӘР НИШЛӘР?

Биш-алты йыл элек гәзиттә баҫылған ус аяһындай ғына хәбәргә аптырағайным. Кавказ яғында оҙон-оҙаҡ елгән автобуста мосолман ҡыҙ ныҡ ҡыҫтала... инсафлығы харап итә – бәүеле шартлай. Автотрассаларҙа дөйөм бәҙрәфтәрҙең һирәк булыуы арҡаһында килеп тыуған был фажиғә.

Башҡорт илендә лә юлдар оҙон, уларҙан оҙаҡ ҡына уҙырға, кәрәк саҡта түҙергә тура килә. Тәбиғи хәжәт урындары бәғзеләрендә бар, бәғзеләрендә юҡ. Юҡтарына, мәйтәм, бер көтөү түрә-ғараны автобусҡа тейәп ебәргәндә, ә? Улар ҡай тирәлә туҡтала, шунда, әлбиттә, тейешле ҡаралтыны төҙөү йәтеш булаһы.

## УҒРЫЛЫҠҠА ТИҢ МУТЛЫҠ

– Кейәүҙе әрләп ташланым әле, – тигәне хәтерҙә бер ағайҙың. – Таксист, сабаҡы! Вокзалға төшә лә, тейәп ала кешеләрҙе. Ауылдан простактар ултырғанын һиҙһә, «счетчик работает на каждого» тип, мутлаша.

– Кейәүең ауылда тыуып үҫкән түгелме ни?

– Ана шуға талағым таша ла инде...

## КИНДЕР ЫШТАН

Бер сак, эленгерәк әле, алыҫ тау уяһындағы утарҙа йәшәгән туғандар килеп төштө. Поезд менән. Ҡунаҡтарҙы ҡайтырына алдан ук самолетка билет алдык. Бер мәл ағайыбыҙ ҡатынына етди генә һорау бирмәһенме:

– Ә киндер ыштан әҙерләнеңме һуң?

– Шул Харистың һүҙенә һаман ышанаһыңмы? – Юл йөрөп өйрәнгән хужабикәнең яуабы мәрәкәсел дә, шелтәле лә ине.

Баҡһаң, Өфөнән Белоретка самолет менән ҡайтасаҡтарын белгәс, ағайыбыҙға күршеһе, киндер ыштан тектереп ал, тигән икән. Йәнәһе, самолетка тәүләп ултырған кеше йә ҡоҫа, йә кәк итә, нишләһәң дә киндергә етмәй инде ул, фәлән-фәсмәтән...

Ҡартая ағайҙар... Самолет та осмай хәҙер. «Киндер» ваҡиғаһын көлөшә-көлөшә хәтерләйбеҙ осрашҡанда.

## ТАУҘАҒЫ ҺЫЙ

Элек каникулға йә отпускыға ҡайтҡанымда йыш ҡына дуҫтарым да эйәргеләне миңә. Минән бигерәк, Еҙемдең бәрҙеле шаршылары әйҙәй уларҙы йәнтөйәгемә. Рәхмәт ауылдаштарыма – әҙәмсә ҡабул итәләр, кәрәк саҡта атын да, ашын да йәлләмәйҙәр.

...Бер сак шулай, ялды бөтөрөп, юлға сыҡтыҡ. Кистән оҙатыу мәжлесендә уны-быны эсеп ятҡандарҙың, тәбиғи, башы зәңкей. (Аптырамаҫ инек тә – лавкала хәмерҙең бөткән сағы.) Йөктәр арбала, йонсоған кешеләй Сумған тауына артылабыҙ.

Ҡаршыға һыбайлы осраны. Баҡыйҙар әйтмешләй, шыптырып килә. Күптән күрешмәгән, ҡырҙа эшләп йөрөгән ҡусты икән. Егет булған!.. Күп уйлап торманы был, юлдаштарымдың хәлен аңлағандай, станциянан үҙен ҡаршы алып, менгәштереп килгән малайҙан атын уләнгә ҡуштырҙы ла юл тоғон систе һәм «литр»ы менән күстәнәстәрен сәсте. Минекеләргә, әлбиттә, бирәм тигән ҡолона, сығарып ҡуйыр юлына һымағырак булды. Аҙаҡ мактап әллә нисә иҫләне улар егеттең йомартлығын. Мин ҡупаям – шулай инде беҙҙекеләр!

Кем белә, еңгәбеҙ улына аҙаҡ һукранғандыр ҙа, бәлки. Мәгәр ҡустыҡай ауылыбыҙҙың намыҫын, нәҫелебеҙҙең һиммәтен күтәрҙе ләһә. Шуға микән, ихлас егетте нәк шул тауҙа ҡабат осраткым, ҡулын ҡыҫкым килә....

Юл бит, осраштыра торған ҡөҙрәте бар уның, тип өмөтләнеп, яҙышып ултырған булам әле бына.

## ШУЛАЙ ЫРАМЛЫРАҠ

Олатайым һунарсы, солоҡсо, балыҡсы кәсебен хуп күрҙе. Әлбиттә, һөнәренә күрә атын да һайлап алды, уны үҙенсә ҡарай белде. Мин белгән бейәһе, мәҫәлән, эйәрҙән мылтыҡ атҡанда ҡымшанмаҫ ине, ауыр йөктәрҙе үрәпсеп тартманы, хужаһының ҡапҡан ҡарарға йөрөгәнен сабыр ғына көтөп торор ине.

Иғтибар иткәнегеҙ бармы, оҙон-урау тау юлдарынан йөклө арба-сана тартып менгәндә күптәр аттарын ыңғайҙарына ҡуйырға ғәҙәтләнгән. Йәнәһе, кәрәк ерҙә үҙе туҡтап хәл алыр әле. Олатайым, киреһенсә, уңай ерҙә үҙе туҡтата ла атын, тәгәрмәс аҫтына таш йә киҫкә тыға һала ине. Һөҙәгерәк урындарҙы иһә бер тынала ҡыуа. Тау тотмау ғәҙәтен булдырмаҫ өсөн, йәш аттарҙы әҙ-мәҙ һарҡыуҙарҙа ла тыр ҙа тыр туҡтатҡанын хәтерләйем.

## УТҺЫҘ УТАРҘА

Аулаҡ утарҙа ишле генә ғаилә ике-өс йыл ҡышланы, шикелле. Юлаусылар һуғылыр ине алаңғырттағы елле генә өйгә. Бәғзеләренә тәҙрә асып, хужа үҙе өндәшкеләй: «Әйҙә инеп сығығыҙ, берәйҙе көйрәтәйек, берәй ыстаҡан әсе-мәсе кәгәйек».

Тәмәке тоҡандырыла. Сарсағандар йә сәй, йә бал уртлай, уны-быны һөйләшкәс, йомарттары фәлән-төгәндән өлөш ҡалдырып, ары ҡуҙғала.

Тәмәкегә ҡытлыҡ булып алды бит әле, шул осор бында һуғылыусылар күҙгә күренеп кубәйә. Сөнки ҡартластың йыйынтығы – төрлө сорт тәмәкеһе мул ғына, имеш.

## ҮҘЕНЕКЕН ҺАҠЛАМАНЫ

М. ағайым ҡырҡ йыл ғүмерен юлда уҙғарҙы. Шофер ҙа, механик та ине. Боҙоҡ ерен билдәләү өсөн уға машина гөрләүенә бер генә ҡолаҡ һалыу ҙа етә ине.

Йәл, үҙ «моторын» аяманы, уны тыңламаны, шуға ла гүр юлына иртәрәк атланы.

## КЕМ ҺАЛДЫРҒАН?

Ағиҙел буйындағы артылыштарҙы, иҫәпһеҙ йылғаинештәрҙе сүп шайы ла күрмәй, Бөрйән яғына күҙ ҡамаштырғыс шыма, өр-яңы асфальт юл бына-бына түшәлеп бөтәсәк. Шуға иғтибар иттем: айырыуса шофер халҡы маҡтап туя алмай

уны, өҫтәүенә: «Рәхимов үҙе һалдыра, тыуған яғы булғас ни, юлдарын да нығыраҡ карайҙыр», – тигәндәрен дә ишеткән бар.

Президентыбыҙҙың йәнтөйәген белмәүселәр осрай икән, ғәйеп түгел, тип уйландым мин шул саҡ. Ә бына оло шәп юлдың барлыкка килеүен илебеҙ башлығы эшмәкәрлегенә бәйләп һөйләүҙәренә хатта ки ғорурландым, бер үк ваҡытта «их, Мортаза ағай миңә лә яҡташ булһасы», тип тә ғәмләндем.

## АЛҒА ҠАРАП

Ни ғәжәптер инде, бала-саға ниндәй ҙә булһа хәрәкәт итеүсе нәмәгә ултырһа, артҡа ҡарап барырға ярата, тиҙәр. Сабыйҙарҙың был ҡылығы фән әһелдәре өсөн дә сер икән әлегә.

Ярай, бала-саға, ғалим-фәләндәр теләһәләр нишләһен, ә беҙ юлға сығайыҡ. Алға ҡарап!

## ЫЛАУ САПҠАН АТАЙҘАР

Бер ҡартлас маҡтана биреберәк былай тип һөйләгәйне:

– Борон ауыл-ауыл булып ылау йөрөгәндәр бит. Ҡойма ямғырҙа ла, ыҙғыр буранда ла. Ҡыш көндәре ылауҙар ҡара-ҡаршы осраһа, кемгәлер көрт йырып, юл биреү кәрәк бит инде. Иң алғы санала гелән олатайым ултырған. Икенсе ылау тап булдымы, олатайым санаһынан ырғып төшә лә йүгерә, ти, алғараҡ. Теге яҡтан да берәй әзмәүер сыға икән тызырайып. Кем кемде тәкмәстерә һуға – шуның ылауы юл биреп ыҙаламай, талаштартышһыҙ ғына артабан елдерә. Олатайым һис бирешмәгән. Йоҙроғо улай-былай инеме!

Ҡарт һөйләй, ә мин уйлап ҡуям: үҙенә күрә ғәҙел, бәйгегә тартым, йолаһы шулай ҡушҡандыр. Юл йолаһы.

## ТАРТАЙ

Электричкала киләбеҙ. Юлаусыларҙан берәү үҙ алдына әтәсләнепме әтәсләнә. Ҡырын тейәгәнгә оҡшай.

– Хәҙер ыстоп-кранды тартам! Әллә тәүҙә... милисейәне йүгертәйемме?! – тине лә «милицияны саҡырыу» тигән ҡыҙғылт төймәгә үрелеп-үрелеп ҡуйҙы.

Ҡаршыһында ултырған оло кеше тыйып та маташты быны.

– Ҡуйсәле, ҡустым, тыртандама. Хәҙер килһәләр, ни тип әйтерһең?

Мин дә ҡалҡынып, бармаҡ янаным. Шаярма, тинем. Ҡыҙмаса баш ыжламай ҙа. Килһендәр, йәнәһе, һөйләшә белер. Бына баҫа төймәгә, хәҙер баҫа.

Баҫты, киҫекһеҙ. Күп тә үтмәй, тәртип һаҡсылары пәйҙә булды. Ни әйтһен «тартай»? Айный төштө лә бит – һуң инде ин-де. Алдағы туҡталышта ҡултыҡлап алды ла төштөләр үҙен. Штраф сәпәрҙәр, моғайын, тип юраны вагондағылар. Тартай тик тартай инде...

## БАШЫМА ЕТМӘ!..

Юлда ҡул күтәргән берәүҙе ултыртып алдыҡ.

– Ағай, Абдулланың башына еткәс, машинағыҙҙы туҡта-тырһығыҙ әле, – тине был күпмелер барғас.

Тотондо шофер мәрәкәләргә. Йәнәһе, йәш кенәһең, үҙең шундай сибәрһең, бигерәк яуыз икәнһең, хатта минең башыма етергә самаң бар! Ышанып, һине машинаға ултыртып алған мин дүрәк, тип тә өҫтәне.

Ҡыҙыҡай берсә ҡыҙарынды, берсә ағарынды. Йәлләй биреп ҡуйҙым үҙен хатта.

– Һин, Абдулла, артыҡ шаштырма әле. Һинең дүрәк башың кемгә хәжәт инде?

Тиҙҙән юл ситендә «Абдулла ауылы. Рәхим итегеҙ!» тип яҙыулы таҡта күҙгә салынды.

## ТӘҮБӘ

Автобус ҡалаға табан елдерә. Эсе тулы – ирҙәр. Баҡһаң, колхозмы, совхозмы шунда, эскеселәрҙе дауаханаға илтә икән. Кем хәмерҙе ташлай – шуға премия, фәлән-төгән, имеш.

Ҡаршыға икенсе машина осрай. Кузовы тулы араҡы. Шыл-тыр-мылтыр килә шешәләр, гүйә, иблис телендә һөйләшәләр.

Машиналар туҡтаны, шоферҙары үҙ-ара таныш икән – күрештеләр. «Алкаш»тар иһә мөлдөрәшеп берсә зәм-зәм һы-уына, берсә араларындағы йәш кенә түрәгә мөлдөрәшеп ҡарай, бер-береһен кәзекләп маташа. Йәнәһе, былдай араҡыны тәм-ләгәнең булдымы? Һи-и, ауыҙҙан кире килгәнсе... Кемдер, давай, берәр стакан, тип тә ыҫҡындырҙы.

Шул саҡ өсөнсөһө – ныҡ эсеүҙән әҙәм төҫөн юғалтҡаны ҡайҙандыр ҡулына һалмауыр эләктереп, араҡылы йөккә яҡын-лашты.

– Ҡабат йөрөмә беҙҙең ауылға! Онтайым хәҙер йәшниктә-реңде лә, үҙеңде лә.

Шаяртамы? Тәүбәгә килеүеме?

– Ҡайҙан килгәнһең, шунда ыҫҡын, – тип йөпләне уны автобустағы түрә.

Ни хикмәт – араҡылы машина кире боролдо.

## ҠОМ ҺӘМ ҠОМАР

Бер районҙаҡ автовокзалында күргәнем һаман иҫтә. Төҫкә-башҡа күркәм генә ир уйынсыҡ машинаға ҡом тейәй ҙә, ауыҙын бөрөштөрөп, «тыр» ҙа «мыр» килә, йә бипелдәй, шунан йөгөн ситкәрәк шылдырып түгә. Ҡабат тейәй, ҡабат түгә. Тәүҙә көлкө килгәйне лә, мәлендә тыйылдым: Хоҙай бәндәһе... аҡылға зәғиф икән. Уйнап туйғас, ул бер машина эргәһенә барҙы. Шофер быны кабинаға ултыртып алды ла ҡайҙалыр елдерҙе.

Баҡһаң, уны шоферҙар белеп бөткән. Ҡайҙалыр, күпмелер араға алып барғас, юлда төшөрөп ҡалдыралар, ә ҡайтыу яғына бүтән машинаға үҙе ҡул күтәрә икән. Хас та өс-дүрт йәшлек бала ишерәк ҡыланыштары. Тимәк, ул – бала, ә бала саҡ – хыялға бай саҡ, ҡомарланыр саҡ.

...Хоҙай аҡылын теүәл бирһә, шофер булыр инеме икән был меҫкен?

## ҺЫУҘЫҢ БЕР ТИН САҒЫ

Эҫе йәй. Вокзалда ике малай автоматтан газлы һыу эсә. Ҡиәфәттәре етди, эшлекле. (Әскелтем һыуҙың бер тин сағы!) Бына береһе эсте лә стаканды иптәшенә һуҙҙы, униһы ла саҡ-саҡ һемергәс, күпме һыу ҡалғанын тәфсилләп тикшерҙеләр, әрепләшеп тә алдылар. Артабан бармаҡ менән илеләп кереш-теләр...

Тиҙҙән һыуһындары ҡаныр-ҡанмаҫ көйө вагонға күтәрел-деләр. Кейемдәренә, ҡыланыштарына ҡарағанда, яҡын-тирә ауылдан йә разъездан билетһыҙ-ниһеҙ, бары тик газлы һыу өсөн генә Өфөгә килгәйнеләр, шикелле.

Ваҡлыҡмы? Фәҡирлекме? Ғәҙеллек бизмәнен боҙмаймы кисәге малаҡайҙар бөгөн? Һыуҙар ҙа ҡиммәтләнә...

## ҠОСАҠТАҒЫ КИҪКӘ

Оло донъяға ауылымдан дүрт яҡҡа һуҡтырырға мөмкин, тинем дә бит, һыу юлы барлығын онотоп ебәргәнем дәһә. Эйе, һыу юлынан – Еҙем буйлап һал ағыҙыуҙар, меңәр-меңәр бүрәнә ҡыуыуҙар яңыраҡ, етмешенсе йылдарҙа ғына, туҡталды. Йөҙ әллә ике йөҙ йыл буйы атай-олатайҙарым, ағайҙарым ауыр ҙа, хәтәр ҙә кәсептә көстәрен, ғүмерҙәрен аямаған. Ғөмүмән, һал-сылар таһыллы, ғәйрәтле, тәүәккәл була – ысын ирҙәр ул.

Ана шул ирҙәрҙең иртә яҙҙан китеп, йәй үтеүгә әйләнеп ҡайтҡан саҡтарын да хәтерләйем. Тоҡтарын йөкмәп, киң яу-рындарына балталарын һалып, төркөм-төркөм булып ҡай-

тырҙар ине. Ни хәл итәһең, эшкә булдырғастар, «һыуык алдырмаҫ» хәмер йоторға ла застуйындар ине.

...Ете-һигеҙ һалсы ҡайта икән йәйәү. Юлға тип бирәр шешә алалар. Шишмә һайын туҡтап, кемелер ярты аса икән. Һыртта инде буйтым һыйланалар, бәғзеләре атлай ҙа алмай, ҡайҙа етте, шунда аунаша башлай хатта. Бәй, бер ағайыбыҙ серек киҫкәне ҡосаҡлаған килеш: «Ыслушай, бисәкәй...» — тип ята икән иркәләнеп.

Шул урындан көлә-көлә уҙа был тарихты белгәндәр.

## СЕҮ ӘЛЕ, СЕҮ!

Һыу, әлбиттә, батшаһыҙ, ҡай йылдары бөтә халыҡ 1 майҙы байрам иткәндә матурлап таша ла ҡуя. Мәлен белгән һалсының, әлбиттә, кәшмәктәре әҙер.

...Н. ағай, ана, хатта туй һынлы туйҙы ҡалдырып китмәксе. Иптәштәре көтә, ишкәге көтә! Ҡунаҡтан уҡ пристангә оҙаталар быны. Галстук таҡҡан, фырт кейенгән — яр башында өҫтөн алмаштырыр әле, рюкзагы ҡанъяғала. Эйе, эйәрендә саҡ ултыра бәүелеп. Малайы елле атты теҙгендән етәкләп, ҡатыны, ҡолап ҡалмаһын ирем, типтерме, өҙәңгегә йәбешеп юрғалай.

Һеҙҙә нисектер, беҙҙең яҡта ағай-эне урыҫсалап һөйләндеме, эсеүе еткән тип уйлағыҙ — хаталанмаҫһығыҙ. Н. ағайыбыҙ ҙа бер заман хискә бирелде шикелле:

— Миңлис, за мной — люблю...

— Сеү әле, сеү! Кеше көлдөрөп, юҡты ләпелдәгәнсе, исмаһам, йырлап бар, — тип үртәлде еңгәбеҙ һәм һыбайлының балтыр итен бороп-бороп семтекләне.

Тыңлаусан шул ире — баяғы һүҙҙәрҙе мәжлес көйөнә һалдырырға керешмәһенме: «Миң-лис, за мно-ой, һа-ай...»

Бигәйбә, кешенең юлға сыҡҡанда ҡәҙерле нәмәләрен барлай торған ғәҙәте бар инде, бар.

## АЙМЫЛЫШТАР

Яңыраҡ таныштарым ҡунаҡҡа килгән ҡарт әбейҙе — әсәләрен күмәкләп, шартына килтереп, бик ҡәҙерләп оҙаталар. Поезд ҡуҙғалып китә, бала-саға ҡул болғай. Ҡайтыуға боролалар, ҡараналар. Бәй... Йәш әсәнең шул саҡ йөрәге өҙөлөп төшә яҙа:

— Әсәмдең поезы — бына лаһа. Посадка саҡ бөтөп тора... Уф Аллам!

Сабалар дежурныйға.

— Ниндәй поезд? — тип һорай уныһы — белмәй оҙатыусылар.

— Ҡайһы вагонда, нисәнсе урында? — Станция начальнигында иһә шул һорауҙарға ғына яуап бирәләр.

– Үҙе атлаймы? Һәйбәт һөйләшәме? Ҡайһылайыраҡ килбәте? – Милициянығыҙылар үҙҙәренсә ҡыҙыҡһына. – Ике-өс поезд үткән, асыҡлағансы, байтаҡ ваҡыт үҙасаҡ.

Туғандарына телеграмма һуғалар. Төн йоҡламай, илашып бөтәләр. Ике көндән һуң ғына күрше өлкәләге өйөнә ҡайтып инә «сәйәхәтсе» әбей.

Юлда әҙәм балаһын хәтәр-хәүеф тә, хата-аймылыштар ҙа һағалай шул.

## ТИҘЕРӘК ӘЙЛӘН!

Малай сағында бер танышым атын егә лә ваҡ-төйәге менән оло ғына ҡатынды тейәп, ҡайҙалыр оҙатмаҡ була. Эре генә килә икән ханым арбала! Ауыл урамынан уҙғанда гәп һатып ултырған әхирәттәре һүҙ ҡуша уға:

– Ҡайҙа юлландың әле көн ҡаҙағында?

– Кейәүгә китеп барам әле... – тигән була ханым.

– Иҫән-һау ғына йөрөп ҡайт, – ти кемдер быға.

– Тиҙерәк әйлән кейәүеңдән, йомош бар ине үҙеңдә, – ти икенсеһе.

– Әллә... – ти ҡатын.

Баҡһаң, ҡатынҡай ат ектереп, күрше ауылда ҡыҙы менән йәшәгән кейәүенә түгел, бәлки, уларҙан арыраҡ ятҡан ауылға – үҙен һораҡан иргә китеп барышы икән.

## ҠАЙЫНДАР ОҘАТА

Әллә нисегерәк булһа ла, юлға ҡағылышлы йәнә бер-ике ваҡиғаны тасуирламаҡсымын.

...Әрмелә оҙағыраҡ хеҙмәт иткәндәрҙең йәш һалдаттарҙы төрлөсә мыҫҡыл итеүе күптәргә мәғлүм.

Н. ҡалаһында хәрби сборҙа саҡта ниңәлер кис казармалар араһынан уҙырға тура килде. Ни ғилла – бер төркөм «салага», ҡулдарына япраҡлы ҡайын ботаҡтары тотоп, тегеләй ҙә, былай ҙа йүгерешә. Ә тәҙрәнән шау-гөр тәмәке көйрәтеп, «стариктар» ҡарап тора (?!).

Аңлаттылар аҙаҡ. Миндек тотоп йүгерешкән һалдаттар – ҡайындар, ә тәҙрәләгеләре – вагонда ултырған дембелдәр. Йәнәһе, улар – юлда, өйҙәренә ҡайтып бара, уларҙы ҡайындар оҙатып ҡала.

Һәр этлектең дә уйлап табыусыһы була. Әрменән ҡайтышлай ысын ҡайындарҙы күргәс, нишләне икән шул мөртәт?

## БЕҘҘЕКЕЛӘР ҘӘ ТИПТЕРӘ!

Бер ҡәләмдәште оҙатып вокзалға төшкәйнем, ул, ваҡыт уҙғарайыҡ әле тип, ресторанға саҡырҙы. Кеше күп ине, уртағараҡ ике өҫтәлде төкәтеп, йәштәр эсеп-тартып, ирәүән ултыра. Оркестр йораты эт талашҡан көйгә рок-поп уйнап ебәргәс, маймыл кеүек борғолана башланы былағай йәш-елкенсәк.

— Анау ҡараҡаш ҡыҙыҡай ваҡыт-ваҡыт «Бишбармаҡ»ҡа баҫҡанын һиҙмәй ҙә ҡала. Вәт әй, беҙҙекеләр ҙә типтерә — килде бит заманаһы! Тфү, хәшәрәт!

Баҡһаң, кешенең милләтен уның бейеү хәрәкәттәренән дә тоҫмаллап була икән. Ағай, йәне көйөп, шуны аңлатты, мин, асыуым ҡабарып, йылмаяҡ ҡыҙҙың ҡылансыҡланып бейеүен күҙәттем. Эх, үҙе сибәр генә бит әле, ҡәһәрең.

## АЙМЫЛЫШ

Хәбәрсе сүрәтендә башҡорт илендә байтаҡ юлдар гиҙергә яҙҙы миңә. Бер мәл алыҫ райүҙәктә урындағы түрә менән оло урамда йөрөп ятабыҙ. Уны-быны һөйләшеп торғанда, ҡапыл эргәнән уҙып барған ҡатын етәгенән ысҡынып, бер бала миңә уҡталды. Йүгереп килеп: «Папа! Па-па!» — тип, тубығымдан ҡосаҡлап уҡ алды был. Әсәһе ҡыҙарынды, ни эшләргә белмәйенсә, берсә миңә, берсә түрәгә ҡараны. Аймылышты аңлаған малайҡай иһә кире сигенде.

Тиҙҙән автовокзалға индек. Ҡараһам, баяғы ҡатын менән мине атаһына оҡшатҡан малай сиратта тора. Ул арала беҙҙе оҙатып килгән түрә, төпкә инеп, ике билет тотоп сыҡты — миңә һәм фотоаппарат аҫҡан юлдашыма. Фотохәбәрсенең күҙе үткер — мут ҡына малай яғына ымламаһынмы. Йәнәһе, ана бит улың. Ситкәрәк киттек. «Улыма» был рейста билет етмәҫ кеүек. Унан килеп, билет еткән хәлдә лә бер автобуста барыуы ла әллә нисек буласаҡ.

Билетты тегеләргә биреп, икенсе рейсты көтөргә булдыҡ. Түрә ағай шаяртҡан булды.

— Бына хәҙер ышандыҡ инде па-па икәнлегеңә.

## ЭЙӘР БУРЫ

Баш ҡалала уҡыған осорҙа күберәген ҡарурман ярып, Ҡалыу, Таҡаты һырттары аша йөрөгәнде әйтҡәйнем инде.

Шулай, Өфөлә уҡырға урынлашып ҡайтышлай күрше райондағы ауылда бер атлыны тап иттем. Таныш кеше. Тегенең ымлауы буйынса магазиндан ярты алып сыҡтым. Юл оҙон, ағай

үҙ ауылында ҡаласаҡ, мин артабан йәнә ете саҡрым атларға тейешмен.

Күңелле киләбеҙ. Күсер шишмә һайын туктап, шешәгә күҙ һала, шар ҙа мар хәбәр һөйләй.

Ниндәйҙер сабынлыҡҡа еттек. Усаҡ тирәһендә бесәнселәрҙең әйберҙәре ята, үҙҙәре күренмәй – бакуй йыялар таллыҡ аръяғында.

Арбанан төшөп, ат хужаһы ҡараштары менән ҡайын сатаһына эленгән эйәргә уҡталды. Затлы эйәр, берәй малай-шалай тай менеп килгәндер. Шуны ҡапшай башланы юлдашым. Һиҙеп торам: сәлдерергә самаһы. Ауылдашының әйберенә айыу майы һөртмәксе.

– Атың тик тормай, әйҙә, – тип ҡысҡырған булдым, аптырағас.

– Тукта әле, тукта...

– Юҡ, әйҙә, әйҙә... Күҙең ҡыҙмаһын кеше әйберенә.

Гонаһтан ҡотҡарҙым тегене. Мәгәр үҙенә хөрмәтем дә ғүмергә бөттө.

## УРЫН БИРӘЛӘР

Автобуска урта йәштәрҙәге мыҡты ир килеп инде. Тиҙҙән үҙенә ҡорҙаш булырҙай, юҡ, хатта өлкәнерәк икенсе бер ир уға үҙ урынын бушатты. Ниңә? Әҙәплелекме, хөрмәтме?

Мыҡты ир, баҡһаң, көлһыу сәсле икән. Ағарған, ләкин ағарып бөтмәгәнгә шулай көл төҫөнә ингәндер. Ултырырмы? Юҡ. Уң ҡулы һыртында «Кандагар» тигән һүҙ яҙылған әлеге ир, сабыр ғына йылмайып, былай тине:

– Ултырығыҙ, һеҙ минән күпкә олораҡ...

## ҺАУАЛАРҘА ДОНЪЯ ҒӘҘЕЛ

Самолет тигәндән, бер мәл йәнәштәге һөйәнмәлә ирәбе ултырған малайҙың ләпелдәүе күңелгә һеңгән.

– И-и-х, әгәр беҙҙең самолет өләсәйемдәрҙең ауылы өҫтөнән осһа, яҡшы булыр ине! Иптәш малайҙарға жвачка, ҡыҙыҡайҙарға шоколод ташлар инем! – Кескәй пассажир хыялында йомартлана бара. – Апайымдарҙың телевизоры ватыҡ – парашютҡа бәйләп, яңыны ырғытырға кәрәк. Ә-ә-ә, өләсәйем яңғыҙ ғына йәшәй, уға... матур ғына бабай төшөрөр инем, ул бабай миңә һәйбәт олатай булыр ине.

...Һауа ҡосағында эскерһеҙ сабый ғәҙеллек өләшкән һымаҡ тойолдо миңә. Һауаларҙа донъя шулай ғәҙел микән ни?

# АҢЛАЙЫШҺЫҘ ҠӨҘРӘТ

Баҡса кейемендә автобуста китеп барабыҙ. Өфөлә йәшәүсе һеңлекәш тә беҙҙең менән. Ҡатын-ҡыҙ уны-быны һөйләшеп килә, һеңлекәш телдәр генә өҫтәүенә. Бер заман быларҙы өс-дүрт егет мыҫҡыл итергә тотонмаһынмы. Урыҫ булһалар, ни әйтерһең, юҡ, яңы быуын «телһеҙ» башҡорт егеттәре, буғай.

– Был мадамдар французса һөйләшә түгелме? – тип көлә берәүһе. Икенсеһе мыҫҡыллап йылмая:

– Марей Матье йырлай ҙаһа, шуларға туғандыр әле былар, кем белә.

– Наҙан, Марей Матье түгел, ә Мирей Митье! – тип белемен күрһәтмәксе һеңлекәш.

Мин иһә асыуымды йәшермәйенсә:

– Хватит! Сейчас уделаю всех! – тип ярһыным да, штормовкамдың төймәләрен ҡаптырып, өс әллә дүрт һөмһөҙ күҙгә һөҙөп ҡараным. «Шөр» тегеләр. Тауыш-тын сыҡманы, юғиһә...

Әллә ҡасанғы ошо ваҡиға иҫкә төшһә, автобусты күтәрерҙәй ҡөҙрәт тулышҡан һымаҡ һеңерҙәремә. Телдән көлдөрөү битеңдән көлдөрөүгә бәрәбәр икән ул.

# СУДҠА БИРӘМ!

Туҡталышта ауылсараҡ кейенгән бер ҡатын ҡала ҡыҙынан республика дауаханаһына юлды төпсөндө. Башҡортса һораны, тегеһе әллә ҡыйынһынды, әллә аңламамышҡа һалышты – танауын ғына сирҙы.

– Мин һеҙгә ит-һөт ебәреп ятам ауылдан, ферма батҡағын тапап, ауырыуға һабышып бөттөм, ә һеҙ бальниска юл өйрәтергә лә йыбанаһығыҙ. Тфү, дармайыд! – Ҡатындың йәне үртәлде, күҙҙәренән осҡон сәселде.

– Мин башкирса плохо знаю, – тигән булды ҡыҙ аҙауҙан ағарынып.

– Бел, уҡы – кем тыя һине! Давай, өйрәт юлды, өйрәтмәһәң, судҡа бирәм мин һине.

Туҡталыштағыларҙан кемдер көлдө, кемдер йәмерәйҙе. Мин иһә апаҡайға ярҙамлашырға уҡталған ерҙән туҡталып ҡалдым, сөнки ҡала ҡыҙы башҡортсаны вата-емерә, башы-ҡулы менән ымлап, ныҡыш һауынсыға юлды төшөндөрә ине.

## ЮЛДАН ӘҘЛӘРҺЕҢ...

Түбәндәге лакапты ишеткәнегеҙ бармы? ...Имеш, эсеүенән буйтым ялыккан сабырһыҙ бисә иҫерек ирен ауыл осондағы юл сатына сығарып һала. Йәнәһе, күҙенә лә күренмәһен, эт урынына эйәртеп алып китһәләр ҙә риза...

Әмәлгә таянғандай, йүнсел генә бер тол ҡатын һөйрәкләп алып ҡайта «алкаш»ты. Ашатып-эсереп, йыуындырып-кейендереп, тиҙ арала әҙәм төҫөнә индерә «эт»те һәм һәүетемсә йәшәй ҙә китә былар. Тәүге ҡатыны кире ҡайтарырға маташа ла бит, юк шул, яңы йәмәғәте якын да килмәй, тиҙәр, өҫтәүенә, әмәлен дә өйрәткән әле көндәшенә.

– Юлдан эҙләйһең инде, юлдан...

## АТАҺЫ КИТКӘН ЯККА...

Ошо юҫыкта йәнә бер вакиға онотолмай. Ауыл яғынан ете йәшлек ҡыҙын эйәртеп, ҡустым килгәйне. Иртәгәһенә өйҙәгеләрҙән кемдер, ҡунаҡ ҡыҙыкайҙы ла эйәртеп, атаһын тукталышка тиклем оҙатып ҡуя.

Ҡыҫкә табан бала – тукталышты белә бит инде – үҙ алдына урамға уйнарға сыккан ерҙән атаһын ҡаршылау максатында әлеге тукталышка йүнәлә. Эй сабый, атайы ошонан ултырып киткәйне, автобустан ошо ерҙә төшөргә тейеш, йәнәһе. Кирегә юлды онота – ҡәһәр һукмағыр, бөтә өйҙәр бер иш тәһә Өфө тигәндәрендә.

Кис... Ғәйеп ҡыҙыкай! Күмәкләп ах та ух эҙләйбеҙ, милицияға ла хәбәр иттек. Төн уртаһында шылтыраны телефон.

...Ҡоралай бәрәсендәй тукталышта алаҡандап йөрөгән ҡыҙыкайға күптәр иғтибар итә. Кем? Ҡайҙан? Кемдәргә килдең? Яуап юк. Урыҫса белмәй шул утарҙа ғына үҫкән бала. Әйҙә, беҙгә барып йокла, тиҙәр миһырбанлы әҙәмдәр.

– Кем башкортса белә? – тип ҡыскыра берәү ғиләнең низә икәнлеген аңлап.

Көскә икмәк-тоҙлоҡ белгән берәүҙәр баланы урам аша ятаҡтағы йәмәғәтселек тәртибе бүлмәһенә әйҙәй. Ятаҡтағы бер эшсе ҡыҙ ғына уртаҡ тел таба бала менән. Йоклаткас, шул хәбәр итә милицияға, милиция – беҙгә. Таңғы биштә барып уяттык баланы – йән түҙәме ни ундай саҡта.

Иртәгәһенә төнгө мажараларҙы урыҡ-һурыҡ һөйләгәс, бала һығымта яһап ҡуйҙы: «Өфөлә һис башкортса белмәйҙәр икән!»

«Ә хәҙер нисек? Һөйләшәләрме?» – тип һорарға ниәтләйем әле инде буй еткергән ҡыҙымдан.

## ТӨТӘП ҠАЛДЫ ТРАКТОР

Сыуаҡ бер йәйҙә миңә Мостай ағай менән аҙна буйы Белорет ауылдарын гиҙеү бәхете тейҙе. Шулай, көн эҫеһе һүрелеүгә Инйәр яҡтарына тартылдыҡ. Ассыға юл яңы түшәлгән икән, елдерә генә «Волга», гүйә, тиҙҙән үҙен күмәк халыҡ ҡаршыларын белә. Мәгәр ҡапыл туҡтарға мәжбүр булдыҡ: алда, ҡырсын юл тар үҙәккә һалыулаған ерҙә ут ялпылдай, ҡуйы төтөн бөркөлә. Баҡһаң, трелевка тракторының дәү йөгөн – ҡоро бесән эҫкертен ут ялмаған икән. Двигатель осконона тоҡанды, тип күрһөндө йыуан ағаска ышыҡланып торған егеттәр. Солярка һалынған мискәләрҙең шартлауы ихтимал, уҙмай тороғоҙ, тип тә иҫкәрттеләр.

Машиналар ишәйә башланы. Береһе, тәүәккәлләп, алға йомолдо, хәтәр йөк эргәһенән имен-аман уҙып, күҙҙән юғалды. Инде ҡалын көл өйөмө генә баҙлай – кабина арҡаһына бәйләнгән мискәләр шартламай ҙа шартламай.

– Әйҙә, утәбеҙ ҙә китәбеҙ, – тием, дыуамалланып.

– Әйҙә һуң, – Мостай Кәрим риза, хатта үҙен ултырғыска һаҡлыҡ ҡайышы менән нығытырға кереште. – Фронтта аҙ күрелмәне быңдай ғына янғынды.

– Ярамай! – тине район хакимы И. ағай шым, ләкин ҡәтғи генә. Уның тауышында халыҡ шағирына ҡәҙер ҙә, уның мәртәбәһе, фани ғүмере өсөн яуаплылыҡ та сағылды.

Тиҙҙән машиналар алға уҡталды. Аҙаҡ белештем: мискәләр шартламаған шартлауын. Ә минең күңелгә иҫтәлек һеңде: «Әйҙә...» – «Ярамай...»

## ЮШҠЫНЫ ҠАЛҒАН

Оҙон юлды, бигерәк тә тау-ташлы, ҡарурманлы юлды күмәгерәк үтеүгә ни етә!

Белоретта эшләгән-уҡыған йәш-елкенсәк, 1 Майға, бер төнәр өсөн генә булһа ла, ауылға ҡайтырға һөйләштек. Поездан төшкәс, ҙур поселок ситендә йәшәгән өләсәйҙәрҙә сәй эсеп алдыҡ. Алдан һүҙ ҡуйышҡанса, утыҙ өс саҡрымды төндә тәпәйләп, таңға ҡайтып етергә, көндөҙ тауға менеп, байрамда ҡатнашырға елкенәбеҙ. Ә мине ағай – әсәмдең энеһе туҡтатты. «Йөрөмә бер кис өсөн. Иртәгә-фәлән туғандарҙың туйында гармун уйнарһың...»

Уңайһыҙ булһа ла, айырылып ҡалдым дуҫтарҙан. Ләкин аҙаҡ хыянатсы кеүек (хәйер, хыянат инде) хис иттем үҙемде. Тиҫтерҙәрем Елмерҙәк һыртында минһеҙ генә усаҡ яғып йылынған, Еҙем буйында утлы шар күргән – мин юҡ. Олоғор шырлығында айыу тауышланған – мин булманым.

Осраштыҡ аҙаҡ. Егеттәр үпкәләмәне, артыҡ битәрләмәне, шулай ҙа ҡыҙҙар күңелендә ниндәйҙер төйөнсөк яралды, буғай. Үҙемә иһә юшҡын булып үкенес тойғоһо яғылды.

Саҡырһалар икән ҡабат юлға! Иң алдан, уйһыҙ ырғылыр инем йәшлегем юлына.

## ҠУЛ БИРМӘЙЕМ

Р. дуҫымды көллө туған-тыумасаһы урамға сығып, күңелдәре иләҫ-миләҫ саҡта хатта ауыл осонаса оҙата ине. Бәй, бергә уҡыйбыҙ, ике-өс айҙа бер ҡайтып китергә тырышабыҙ ҙа инде. Айырма шунда ғына: минең ауылым алыҫтараҡ, төпкөлдәрәк. Ҡалаға кире ҡайтышлай һуғылам быларға, сөсөләнеп хушлашыуын сабырлыҡ һаҡлап күҙәткән булам.

Нишләйһең, һәр төйәктең, һәр заттың үҙ йолаһы. Ә бына беҙҙекеләр айырылышҡанда ҡул бирмәҫкә тырыша. Айышы ябай: йылы ҡулдарыңды айырылышҡанда түгел, бәлки, ҡабат осрашҡанда ҡыҫырға яҙһын.

...Мин дә һиңә, хөрмәтле уҡыусым, ҡул бирмәйем. Осрашырбыҙ әле, шунда ҡыҫышырбыҙ йылы ҡулдарҙы.

## ҒӘҘӘТ

Малай саҡтан атайға эйәреп урманға күп йөрөлдө. Ул утынға, ул бесәнгә, һунарға йә балығына. Иғтибар итә инем: ҡәҙимге юлда, бигерәк тә кисеү-маҙарҙа, соҡор-саҡырҙа эре таш осраһа, атай арбанан төшә һалып шуларҙы ситкә бырактырыр, юлға ауған йә эйелгән ағасты ҡырҡып, ваҡ йырындарға тегенебыны түшәп уҙыр ине. Барырыңдан алда ҡайтырыңды уйла, тип кенә түгел, юл йәмле, мәшәҡәтһеҙ булһын, тип тә тырышҡандыр. Уйлап та ҡуям: юл таҙалығынан бигерәк, күңел таҙалығы өсөн дә йыбанмағандыр. Атайымдың был ғәҙәте тора-бара миңә лә, ҡустыларыма ла күсте.

Хәҙер юлдарҙа ул-был йәмһеҙ нәмәгә тап булһам, йәнем көйә минең һәм атайымдың матур әҙәп-ғәҙәте иҫкә төшә.

## КӨЛГӘН БУЛАБЫҘ, ЙӘ...

Алабейә битләүендә мәж килеп уйнап йөрөйбөҙ. Эргәләге һуҡмаҡтан еңелсә кейенгән бер әбей уҙып бара, артынса сибек кенә ҡыҙыҡай юрғалай.

Алыҫта, тау-урмандар аша һында, бәләкәйерәк ауыл бар, тиҙәр, шундалыр тотҡан юлдары.

Әбейебеҙ бер заман туктаалды, артка боролдо, һаубуллашып, төйөнсөкһеҙ кулын иҙәне, ә кабак башындағы иң ситке өй тупһаһында икенсе бер әбей – касандыр беҙҙең ауылға килен булып төшкәне, башынан яулығын сисеп болғаны ла, бәғер телерҙәй тауышы менән ниҙер һөрәнләп маташты. Быныһы иламһырап торҙо ла йән әрнеүе менән әһәүләп ебәрҙе. Торналар китәме ни – әһәүләү тауҙан тауға шаңкыны.

Беҙ, уйһыҙ малайҙар, көлөшкән булабыҙ...

Әгәр юлаусы әбейҙең, тиҙҙән әхирәткә китермен инде, бәхил бул, тигәнерәк киәфәттә әлеге карындашы менән мәңгегә хушлашыуын белһәк, валлаһи, хихылдашмаҫ инек. Хәйер, бала сакка ни үпкә?

Йылдар үҙғас, өләсәйе менән йәнәш атлаған сибек кыҙыкайҙы – хәҙер инде олпат катынды осраткан һайын әллә касанғы аһәң колакка салынғандай.

## ХӘҘЕР АЙЫУҘАН КУРКМАЙ

Кустым И. менән көҙгө аулак урман юлынан ауылға кайтып барабыҙ. Арттан «Нива» кыуып та етте, уҙып та китте. Урындары юк ине, булһа ла ултырмаҫ инек – якын инде йәнтөйәк.

– Бәй, алғы сиденйәлә кукырайып барғаны Фәлән-Фәләнович тәһә... Һунар кейемендә үҙе.

– Анау йыуантағымы? Сырамыткайным да. Күрше ауылға ебәргәндәр үҙен элек, укытыусы итеп. Аҙна-ун көн йөрөгән дә тайған теге. Йәнәһе, электр ҙа юк, куркыныс, кайҙа барма – айыу ҙа бүре...

– Хәҙер горыдта, мэрияла эшләй, тиҙәр, – кустым үҙенсә һығымтаны яһаны. Ә мин – үҙемсә:

– Түрә булғас ни, айыуҙан куркмай башлағандыр.

## ТАЯК ХӘЙЛӘҺЕ

Бөрйән районына заманса юл яңырак түшәлде. Шунда тигеҙ бер алаңғыртта уйламаған ерҙән юл кәкерсәкләнеп уҙа. Ғилләһен, имеш, бер картлас былайырак аңлаткан.

– Яландың уртаһынан таяк кағып сыккан бит зимләмирҙәр. Тукта, мәйтәм, һис юғы берәй саналык сабынлыкты коткарайым тип, эңерҙә шым ғына бар ҙа таяктарҙы шылдыр ҙа кит мин. Итәки юл өҫтәнерәк уҙмаһынмы!

Әлеге шул таяк!

Ярай ҙа картлас таяғын шылдырып, сабынлығын һаклап калған, ә элек шул таякты башкалар «шылдырыу» аркаһында күпме башкорт ерһеҙ-һыуһыҙ тороп калған?!

## КЕМ МЕҪКЕН?

Бер мәл ҡатыным ипле генә һүҙ башланы.

– Был арала ҡайҙа барҙың әле балыҡҡа?

– Тә-әк, Ҡандрагүлгә барылды... – тигән булдым.

– Шулайҙыр тигәйнем дә, – көләмһерәй хәләл ефетем.

– Ә ниңә төпсөнәһең? – Асыулы ғына сыҡты тауышым.

Аңлатты. Бәкһаң, уртаҡ танышыбыҙ мине таң һарыһынан автобуста күргән. Уңайһыҙланып, миңә сәләм дә бирмәгән теге. Алас-йолас кейенгәнмен: өҫтөмдә – төҫө уңған бушлат, аяҡта – төплө быйма, башта – күпте күргән кәпәс. Уйлаған теге ханым: «Яҙыусы башы менән ниндәй хәлгә төшкән, эй меҫкен. Ошолай ҡиәфәттә эшкә китеп бармаһа... Эскегә һалышты микән ни? Бисәһе ни ҡарайҙыр? Әрләйем әле үҙен бер тотоп...»

Осраша ике әхирәт. Теге ханымдың мине ҡасан, ҡайҙа күреүе асыҡланғас, рәхәтләнеп көлөшәләр, ҡатыным үҙенсә аҡлана:

– Ул ни, яңы кейемдән балыҡ ҡурҡа, ти ҙә, иҫкерәк кейемдәрен ташламай шул.

## ХӘТӘР ҮӘ МӘКЕР

Әҙәм балаһын машина имгәтеп үткәнен йә һәләк иткәнен күргән баш... Хәтәр! Күҙ алдында юрамал машина аҫтына ҡалырға маташҡан бәндәне осратҡан бар. Хәйер...

...Светофорға етмәҫтән автобус туҡтап ҡалды. Һөйләнде кемдер.

– Ошонда берәү йөрөй. Элекке «афғансы»... «Йәшел ут» ҡабынһа, ҡуҙғала ғына башлаған арыуыраҡ машина алдына ырғыла икән был. Йәнәһе, ул таяҡлы көйө «йәшел»гә сығып барған, ә машина уны бәреп йыға яҙған. Төшә бахыр шофер, теге сатан аҡса таптыра: биреп ҡотол бер-ике шешәлек, юғиһә эш ҙурға китәсәк, ана тора патруль...

Нисек тә йән аҫрарға тырышҡан «ҡыйыу» ғәриптән бигерәк, мәкер тоҙағына эләгеүсе шоферҙар йәлерәк түгелме?

## ҮҘЕБЕҘҘЕҢ БАШҠОРТ БИТ!

Ҡыҙыу мәлдә мәшәҡәтләмәҫ өсөн, иртәгә автовокзалға илтерһегеҙ тип, кистән иҫкәртмәгәйнек дуҫ-иштәрҙе. Иртәнсәк күтәренеп йәйәүләргә тура килде. Йөк ауыр – ул балыҡ ҡорамалдары, ул күстәнәс, ул башҡаһы – беләктәр өҙөлөп бара, утыҙ аҙым һайын ял алам.

Ярты юлды уҙғас, билетлы көйө Өфө автобусына һуңлап ҡуймайыҡ тип, тегеләй-былай елдергән машиналарға ҡатыным ҡул күтәреп тә ҡараны – туҡталыусы юҡ, көн эҫеләнмәҫ борон һәр кемдең бесәнгә ашыҡҡаны һиҙелеп тора.

Шулай ҙа бер «Жигули» уҙа бирҙе лә выжлап кире боролдо.

– Һин, атай, йәйәү ҡайт та салғыларҙы бәйләй тор, – тине рулдәге егет. – Мин хәҙер...

– Кемдәр һуң, таныштарыңмы? – тигән булды оло кеше.

– Юҡ та, үҙебеҙҙең башҡорттар бит, – тине улы күңелсәк кенә.

Автобусҡа өлгөрҙөк. Таныш булмаған игелекле милләттәшемә ошо яҙғаным рәхмәт булһын әйҙә.

## ХӘЙЕРСЕНЕКЕН ҺОРАМА?

Камилға, ейәнемә, ике йәш тирәһе, теле лә йүнләп асылмағайны шикелле. Сығып киттек урамға. Юлыбыҙ магазин тупһаһына тартылды, унда бер ҡарсыҡ ҡулын һоноп ултыра, усында – ваҡ тәңкәләр, йәнә – йомортҡа. Күреп ҡалды бит малайым, ымһынды – йәнәһе, әбей үҙенә мәмәй бирә. Алып ашарҙай була – мин тыям, ебәрмәйем. Иларға кереште был, аптырағас, күтәреп алдым да ашхана яғына ыңғайландыҡ. Алып бирҙем үҙенә бешкән йомортҡа, аңламаһа ла битәрләгән булдым:

– Аша, ашамаһаң, әбейгә бирәм. Хәйергә...

## КЕСКӘЙ ДЖЕНТЛЬМЕН

Өсәүләшеп – кескәй ҡыҙын күтәргән әсәһе, әсәһенең итәгенә йәбешкән тиктормаҫ Камил ҡайҙалыр китеп баралар икән. Автобуста тығыҙ, шулай ҙа йәш балалы әсәгә урын табыла. Арыуы еткәндерме, үҙен кешегә һанаптырмы, һырпалана Камил, сабырһыҙлана.

– Мам, һин нисек урын таптың? – тип һорай малай. Әсәһе аҡыл һатыбыраҡ яуаплай:

– Әҙәпле генә, урын бирегеҙсе, зинһар, тип үтенгәйнем, бына бит, урын бушаттылар.

Автобус елдерә, халыҡ шымтайған. Камил әсәһенә һаман инеп бара.

– Кит, нишләп һырышаһың ул тиклем?

Зирәк әллә хәйләкәр талабы ишетелә:

– Мин бит һинән урын һорайым даһа, мам!

Быны ишеткән халыҡ пырх-пырх көлөшмәһенме.

## АҠСАРЛАҠ САҢҠЫУЫ

Автобустың яртыһы тиерлек балыҡсылар. Ғ. ағай кеше менән таныша һалырға әүәҫ ине. Бер һаҡалтай менән һөйләшеп китте мәрхүмең. Тегеһе рәссам икән, уртаҡ таныштары ла табылды.

Йомшаҡ көҙ. Ҡултыҡ ситендә аҡсарлаҡтар кәйелеп-кәйелеп оса – ятыуҙа селбәрә уйнай, тимәк, суртан да бар. Спиннинг менән киҙәнеп-киҙәнеп һелтәйбеҙ – ҡаба сукынмыштар.

Бер аҡсарлаҡтың йәлләткес саңҡыуы һиҫкәндерҙе – яҙатайым ҡабырғаһына өс йәпле ҡармаҡ ҡаҙалған икән. Бер аҫҡа, бер өҫкә осоп ҡарай – ҡайҙа ул ысҡыныу! Ҡоланы һыуға меҫкен.

Берәүҙәр көлә, берәүҙәр баш сайҡай. Була икән дә шундай хәл.

Ярға «табышын» һөйрәтеп сығарғас, иртән беҙ танышҡан рәссам-балыҡсы, муйынын аймап, аҡсарлаҡты әхәзләй-әхәзләй ҡармағын һурып сығарҙы, шунан ҡанһыраған ҡошто шапылдатҡансы ҡамышлыҡҡа быраҡтырҙы. Ҡанаттарын дерелдәтеп, томшоҡтарын һәлендереп саҡ-саҡ осоп китте нахаҡҡа йәберләнгән мәхлүк. Ярай ҙа, мандып китә алһа...

Берәм-һәрәм ҡайтырға йыйындыҡ.

Бына автобус килде, ишектәрен шар асты. Күҙәтәм: рәссам алғыһына ыңғайланы.

– Әйҙә, артҡа ултырайыҡ, – тинем Ғ. ағайға. – Ғазраил ул, рәссам түгел!

## ИПТӘШКӘ – ТИМЕР «БАШ»

«Китап» нәшриәтендә эшләй башлаған ғына көндәр ине, шикелле.

Яңы сыҡҡан китаптарҙы ҡорһағын ҡабартҡансы портфелгә тултырып, бер төркөм яҙыусылар менән әҙәби осрашыуға ашыҡтым. Юлда Рәшит ағай Солтангәрәев йөгөмдө күтәреп ҡараны ла үҙенсәрәк мәрәкәләне:

– Бигерәк ауыр... Ҡана, мырҙам, ятмаймы шунда берәй нәмәң бүлпелдәп? Ҡой әле.

– Китаптар, – тим етди генә. – Мәктәпкә бүләк итеп бирәбеҙ.

Ҡайтышлай абзый «стоянка»ға инеп сығырға ҡызырыҡланы. Сиратҡа баҫтым, ул өҫтәл һайлап ҡалды.

– Ай-һай, мырҙа, портфелең һаман ауыр, – тимәһенме был.

Мин ни, ас та ҡара. Бәй, редакцияның тәҙрә яҫтығында ултырған бюстарҙың береһе – Лев Толстойҙың тимер башы лаһа. Ун кило ярым булыр!

– Һөйләй алмай торһа, иптәш булыр тигәндер берәйһе. Шә-әп.

Барларға керештек: кемдең эше? Ҡол-Дәүләттең генә этлегелер, тинек.

Иртәнсәк бер ни булмағандай ҡараға буялған суйын һынды урынына ҡуйҙым.

Күпмелер ваҡыт уҙғас, Ҡол-Дәүләтте лә ҡайҙалыр саҡырҙылар. «Толстой»ға ымлап, әйтәм үҙенә:

– Ал иптәшкә. Аҡыллы баш!

Мут йылмая егет, бармағын шкаф кәштәһенә тоҫҡай, унда – Пушкиндың ҙурыраҡ, әммә еңелерәк аҡ бюсы.

– Миңә а-а-науһы ярай, – тип көлә шағир.

Һағынам үҙҙәрен. Ысын әҙип инеләр. Иртәрәк киттеләр, шуныһы йәл.

## УЛ ХАҠЛЫ!

Юғары әҙәби курстарҙа уҡығанда, айына бер автобус яллап, Мәскәү тирәһендәге ҡалаларға экскурсияларға йөрөтә торғайнылар.

Калуга яғына елдерә автобусыбыҙ. Аҡланда ялға туҡтаныҡ. Шәп кеше булып, ҡуян тубығы, ҡаҡы, монар көпшәһе өҙгөсләп алдым да, ашарға ярай, һеҙҙә үҫәме былар, тип, ҡаҙаҡ, үзбәк егеттәренә һонам, үҙем дә мыртам. Ишетәбеҙ:

– Өҙмәгеҙ үләндәрҙе! Мең машина туҡтап, мең кеше йолҡа башлаһа?! – Быны шофер үҫал ғына әйтте.

Курсташтар, хатта куратор ханым да мине аҡлап-яҡлап, әрепләшеп маташа.

– Ә һин, браток, Уралға кил, автобусыңа өймәләп тейәп ҡайтарырмын, – тип эре сирттергән булам, аптырағас.

Әле бына башҡа уй һуҡты: ә бит Мәскәү шоферы раҫ әйткән.

Үлән-сәскәләрҙең кәмей барыуы иң яманы түгелме ни хәҙер?

## БОШОНМА ЮҠҠА, АКӘ!

Мең дә тұғыҙ йөҙ туҡһандың ҡышы ине, Мәскәүҙә булды был хәл.

Әлеге Яхъя менән баҙарҙа фәлән-төгән алып, автобуста ҡайтып киләбеҙ, Йәш булараҡ, Яхъя әйберҙәрҙе гелән үҙе күтәреп алған була. Ятағыбыҙға етәрәк, төшөргә йыйындыҡ.

– Ҡайҙа төйөнсөгөң? – Турһайып тегенең буш ҡулдарына ымлайым. Һиҙҙем: юғалтҡан был, ураҙа тота ине, йокоһо туймайыраҡ йөрөгән мәле. – Төш күреп килә инең шул. Һиңә ышанған мин...

– Юкка көймә, акә, – Яхъя тиҙ тапты яуабын. – Әллә кем түгел, үҙебеҙҙең совет кешеһе сәлдергән бит. Рәхмәт укыр әле...
Совет кешеләре инек шул заманында.

## ХАС ӘКИӘТТӘГЕСӘ...

Ауылда М. ағайыбыҙ кәүҙәгә елле, мут телле әҙәм ине. «Лауылдак» тигән кушаматы ла булды, буғай.

Аяҙ көҙ. Бесән тейәп кайтып килә был эңерҙәрәк. Тәмәкеһен кырын тешләп, йөгөнә һуҙылып яткан көйө кыскыра капка эргәһендә уйнап йөрөгән кустыларыма:

– Ислам, Рәмил! Атайыңдың арбаһы ауҙы Йосоп каранында...

Сапты тегеләр сакрымдай арағa – баткыл шишмә тамағына. Бер ни булмаған – малайҙарҙы бесән өҫтөнә ултыртып кайтты атай.

Тағы бер мәртәбә һемәйтте шикелле Лауылдак. Кустыларға кыҙык – йүгерешеп баралар ҙа кайталар йөк өҫтөндә кайкандашып.

Икенсе юлы тағы шул ук хәбәр... Малайҙар барманы, үҙем киттем. Ауған икән шул атайҙың бесәнле санаһы кырында.

Бер ҙә асыуланмай торғайным М. ағайға. Бары тик үҙе иҫкә төшһә, башкорттоң әкиәтен хәтерләп куям. Теге, йәйләү халкын берәү ике тапкыр «Янғын!» тип алдай, өсөнсөгә – ышанмайҙар, ти. Ысын иҫкәртеүгә лә.

## САНА ҺӘМ БАЛА

Кыш. Бәләкәйерәк ағас санала юрғанға төрөүле ятам. Елмерҙәк тауы текәһендә ыскынды бит сана атай кулынан. Күрше ауылдан кунактан кайтып килгәс ни, кулайһыҙырак сағы булғандыр. Сана елә, кыҙа бара, ярай әле, боролошта йомшак көрткә каҙалды. Колар ине, юғиһә, арырак тәрән йырынға.

Шуны һөйләһәм, атам-әсәм ғәжәп кыла ине: кайҙан иҫләйһең, бәләкәй инең дә... Куркыштан хәтергә һеңгәндер, ти торғайным тегеләргә.

* * *

Өфө. Икенсе кыҙыбыҙҙы ла алмаш-тилмәш баксаға йөрөтәбеҙ. Бер кис йомшак буран ине, одеялға төргәндәй итеп, бәләкәй санаһына ултырттым да елдерҙем кайтыуға.

Өйгә якынайһам, йөрәк жыу – сана буш. Төшөп калған са-

бый! Ярай әле, тар һукмактан уҙа юлыбыҙ, машина-фәлән йөрөмәй. Ята ҡыҙыҡай ғынам, көсөк ише шыңшып.

Әсәһенән, әлбиттә, эләкте. Хәҙер көлөбөрәк хәтерләйбеҙ, уй Алла, тигән булабыҙ. Мин иһә, донъяла ундай хәлдәр ҡабатлана ул, тип бала сакта үҙемдең Елмерҙәк һыртынан «шыуғанды» өҫтәп ебәрәм.

## КИРЕ БОРОЛҒАН

Педучилище тамамлаған бер ҡыҙҙы беҙҙең якка укытырға ебәрәләр. Ағаһы мотоциклда илтеп ҡуйырға була. Август уртаһы, ҡойма ямғырҙан һуң юл үтә батҡыл, һырттан китә былар. Юлдары ҡаялы тау һыртында өҙөлә. Аҫта ыҡсым ғына ауыл, өйҙәре төҙөк тә, электр бағаналары күренмәй.

— Ҡуй, һеңлем, — ти ағаһы. — Ҡайтайыҡ кире, бынау йәһәннәм соҡоронда укытмаған өсөн башыңды ҡырҡмаҫтар әле.

Яҙмышындағы ошо «боролош» хаҡында һөйләгәйне бер таныш ханым, минең ҡайҙа тыуып үҫкәнемде һиҙемләгәс.

## ҘУР ТҮРӘЛЕР!

Ҡеүәтле генә ике машина, элегерәк, заманса юлһыҙ саҡтарҙа әле, Бөрйәндән Моракка һуктыра — тура ла бит, аҙашырлыҡ урындары ла байтаҡ.

УАЗ-дарҙың алдағыһы бата, уныһын сығарам тип, арттағыһы... Әмәлгә таянғандай, «Беларусь» тауышы ишетелә. Алыҫ диләнкәлә икән йомошо ике башҡорттоң.

— Һин, туған, беҙҙе сығарып ебәр инде, — шулай мөрәжәғәт итә юлаусылар.

Тракторсы хаҡ ҡуя: бер ярты. Шунһыҙ, ай-һай, тип йөпләй әшнәһе.

Машиналарҙы һөйрәткән саҡта тегеләрҙең берәүһе тракторсыны әкрен генә шелтәләмәксе икән.

— Һин нимә, туған, кемдәргә ярҙамлашканыңды беләһеңме? — Анығын әйтмәй, әммә мәғәнәле генә өҫтәй. — Бик ҙур... түрә, унан да ҙуры әлегә юк...

— Булһасы... Батмаҫка кәрәк ине, — тракторсы һис йомшармай, имеш.

Машиналары сыҡкас, түрәләрҙән берәү тракторсыға затлы коньяк тоттора.

Ысынлап та ҙур түрә икән — һүҙендә торҙо, тип һығымта яһай урмансылар аҙаҡ икәү-ара.

## ЯРҘАМ... БУШЛАЙ ТҮГЕЛ

Асылыкүлгә барғайнык яҙ. Иреү мал, машиналар бер түмәләстә эй «сығынлай». Өс-дүрт егет этешеп ебәргеләй балыксыларҙы. Үрләскә менә алмағас, тегеләр әйтмәй-нитмәй беҙгә лә ярҙамға килде. Ҡалҡыуға сыккас, акса һораны былар. Юғиһә, кире этеп төшөрәбеҙ, тип тә өркөтмәкселәр.

— Төшөрөгөҙ һуң, бер үҙем сығарам. — Шулай тинем йәнем көйөп тә, сәмләнеп тә, сөнки янда акса бөткәйне.

— Ҡуйсәле, абзый, бысранмайык, миндә бар әҙерәк, — тине шағир Н.

Бирҙе бер «сәкүшкә»лек, тегеләр (балыксылар бит әле, хәстрүштәр) ҡәнәғәт, беҙ ҙә...

Хәҙер шикләнәм: яңғыҙ сығара алыр инемме «Жигули»ҙы шул юлы?

Кем белә, сәмләнһәң, көс тә өҫтәлә бит ҡай сак.

## ЭШЛӘПӘ МЕНӘН БҮРЕК

Ике ир вагонда гәпләшергә керешә.

— Ҡустым яңы фатирға күскән, үҙен эҙләп йөрөргә ваҡыт тар ине, шуға өңрәнгән өйҙә — ҡыҙы менән кейәүендә ҡундым әле, — ти икән яңы эшләпә кейгәне. — Белорет яғынан мин. Ә һин, туған, ҡайҙан?

Бүрек кейгәне: «Ә мин...» — тип һүҙ башлай ҙа тыйылып ҡала. Эшләпәнең ашанып алыуы, ашанған һайын йәшереп кенә хәмер йотоуы оҡшамаған, имеш, быға.

Был хаҡта миңә аҙаҡ Бүрек — ҡайнағаларымдың береһе әйтте, сөнки нәк шул көндө ул беҙҙә ҡунып киткәйне. «Һыптағай түгелмен дә... Берәйҙе һин дә йот тиһә, исмаһам, баш йүнәлер ине», — тине ул асыу менән бөрйән һөйләшенсә. Йәнәһе, бушка һыйлана торған кешеме ни ул? Шуға, имеш, йүнләп танышмаған да. Эшләпә, йәғни үҙенә ҡоҙа тейеш әҙәм менән.

Эшләпә өсөн ҡыҙарырға тура килде миңә шулай элегерәк.

*1995 — 2007 йылдар*



## ЙӨКМӘТКЕҺЕ


Тауҙарҙағы шаңдау (*Б. Байымов*) . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 5
Зәңгәр катер. *Роман* . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 9
Хикәйәләр
Әпәү . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 424
Ҡыйпылсыҡ . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 435
Сакырыу . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 461
Хикмәтле бау . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 478
Йүнсел егет . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 488
Яҙмыш менән алыш . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 491
Юл хикмәттәре . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 499



*Литературно-художественное издание*

**ШАРИПОВ Сабир Нагимович**

**ГОЛУБОЙ КАТЕР**

**Роман, рассказы**

(*на башкирском языке*)

Мөхәррире *Гөлназ Фазлиәхмәтова*
Рәссамы *Ләйлә Ғаянова*
Биҙәлеш мөхәррире *Азат Мөхтәруллин*
Техник мөхәррире *Надия Пятаева*
Корректорҙары *Альбина Баязитова, Лилиә Морсалова*

Баҫырға ҡул ҡуйылды 28.08.08. Ҡағыҙ форматы 84x108 $^1/_{32}$ Офсет ҡағыҙы. Лазурская гарнитураһы. Офсет ысулы менән баҫылды. Шартлы баҫма таб. 28,56+0,21 форзацы. Шартлы буяу отт. 29,82. Иҫәп-баҫма таб. 29,74+0,38 форзацы. Тиражы 2000 дана. Заказ № 1.0130.08.

Башҡортостан Республикаһының «Зәйнәб Биишева исемендәге Башҡортостан «Китап» нәшриәте» дәүләт унитар предприятиеһы.
450001, Өфө, Левченко урамы, 4а.

Башҡортостан Республикаһының
«Өфө полиграфкомбинаты» дәүләт унитар предприятиеһы.
450001, Өфө, Октябрь проспекты, 2.



Әҙиптең китаптары:

«Тауҙарҙағы эҙ» (БКН, 1982); «Ҡайынлы артылыш» (БКН, 1985); «Хушлашмайым» (БКН, 1992); «Старозимовье» (БКН, 1995); «Аҡ ҡулсатыр» («Китап», 1998); «Костер на снегу» (Чебоксары, 2001); «Приглашение на чужбину» («Китап», 2003); «Хушлашмыйм...» (Казан, 2003); «Зәңгәр катер» («Китап», 2008). Айырым әҫәрҙәре тиҫтәләгән йыйынтыҡтарҙа, альманахтарҙа донъя күрҙе, әҙип тарафынан байтаҡ китаптар төҙәлдә һәм тәржемә ителде.

Ҡаҙаныштары:

«Башҡортостандың атҡаҙанған мәҙәниәт хеҙмәткәре» (1998). «Байкал – Амур магистрале төҙәлешә өсөн» миҙалы (1977), бик күп маҡтау грамоталары менән бүләкләнгән. Белорет ҡала-район хакимиәтенең Я. Хамматов исемендәге премия лауреаты.

Яҙыусының фекере:

Иң борсоғаны – «үҙгәртеүҙәр». Буш вәғәҙәләр. Күпселектең бөлә барыуы, әҙселектең кеҫә ҡалынайтыуы, әхлаҡи ҡиммәттәрҙең осһоҙланыуы... Әҙәбиәттең бурысы ана шул социаль тетрәнеүҙәрҙе, болғауыр реформаларҙы ғәҙел һүрәтләүҙән ғибәрәт, тип уйлайым. Дәүер картинаһы итеп тә, идеологик биҙәктәрҙә лә. Донъяуи мәсьәләләрҙе хәл итеү сәйәсәт иңендә ятһа ла, әҙәбиәт, мәҙәниәт һәм сәнғәт был өлкәлә ярҙамсы һәм кәңәшсе, кәрәк икән, көрәшсе вазифаһын үтәргә бурыслы.

Әҙәбиәт – фәндәр тупланмаһы, серҙәр уҡмашмаһы, ул кешенең асылын өйрәнеү ролен мәңге үтәһен ине.

Зәйнәб
Биишева
исемендәге
"КИТАП"
нәшриәте